БАШКОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
СОЦИАЛЬ-ГУМАНИТАР ФӘНДӘР ҺӘМ ТЕХНОЛОГИЯЛАР БҮЛЕГЕ

РАУИЛ БИКБАЕВ

Көндәлектәр

Өсөнсө китап

(6.01.2010—30.12.2016)

Өфө

2018

УДК 821.512.141-94
ББК 84(2Рәс.Баш)
Б 60

Баҫма БР ФА ғилми тикшеренеүҙәрҙе яҡлау
Фонды булышлығы менән тормошҡа ашырыла

Рецензенттар:
М. Х. Нәҙерғолов, филология фәндәре докторы
Ғ. С. Кунафин, филология фәндәре докторы

Бикбаев, Р. Т.
Көндәлектәр. Өсөнсө китап. – Өфө : Башҡ. энцикл., 2018. – 560 бит.
ISBN 978-5-88185-408-9

Р. Т. Бикбаев көндәлектәренең өсөнсө китабына 2010–16 йй. ҡуйын дәфтәренә теркәлгәндәр ингән. Автор Башҡортостанда, Рәсәйҙә, бөтә донъяла ошо дәүер эсендә булып үткән хәл-ваҡиғаларға дәүләт эшмәкәре, әҙип, ғалим, гражданин һәм ғаилә башлығы булараҡ баһа бирә. Үҙәк темалар булып ил һәм тел яҙмышы, заман һәм әҙип, заман һәм әҙәбиәт, әҙәп һәм әхлаҡ, көндәлек тормош мәсьәләләре тора.

УДК 821.512.141-94
ББК 84(2Рәс.Баш)

ISBN 978-5-88185-408-9

© Бикбаев Р. Т., 2018
© «Башҡорт энциклопедияһы», 2018

2010

6 ғинуар, 2010 йыл. Шаршамбы.

Яңы йылды Артурҙарҙа ҡаршы алдыҡ. Асҡарҙың беренсе яңы йылы. Ҡоҙағыйҙар булды. Мәскәүсә ҡаршылайбыҙ тип ҡайтып килһәк, засадаға эләктек. Вилмир Аҙнаев ҡунаҡтары менән (Уйылдан Сәйетов, Тимерхан Биккинин) ишек алдында торалар. Ай-вайға ҡуймай, алып кереп киттеләр. Алдан әйткәйнеләр. Шулай итеп, Яңы йылды ике табында ҡотларға яҙған. Матур күңел асып, һөйләшеп-көлөшөп ултырҙыҡ.

Был 10 көндө иркенләп эшләп ултырырмын тигәйнем. Бөгөнгә тиклем әллә нәмә ҡыйратып булманы. Мөхтәр Шаханов кеше артынан Сыңғыҙ Айтматов менән яҙған китабын ебәргәйне: «Диалог на исходе века». Шуны уҡып сыҡтым. Ҡыҙыҡ урындары байтаҡ. Әммә хайран ҡалдырманы. Шахановтың шиғырҙарында ысын табыштар тапманым, рифмалашҡан, шиғыр формаһында теҙелгән мәҡәлә. Әллә мин артыҡ талапсанмын инде, белмәйем.

Был диалогта төрлө осорҙарға, төрлө шәхестәргә, төрлө мәсьәләләргә бәйле төрлө сығанаҡтарҙан бик күп мәғлүмәттәр килтерелә. Фәһемләре байтаҡ. Тик был алым менән һөйләшеүҙе әллә күпме дауам итергә мөмкин. Быны күп кеше эшләй ала. Сыңғыҙ Айтматов тигән аҡыл эйәһе кимәлендә түгел, һәр хәлдә. Иң ныҡ иҫтә ҡалғаны – гундарҙың ҡытайға әйләнеү тарихы, бик нескә һәм шул уҡ ваҡытта тормошсан ассимиляция сәйәсәте. Был пьесаны бәлки беҙҙең театрҙарҙың берәйһенә тәҡдим итеп ҡарарға кәрәктер. Бик актуаль тамаша булыр ине.

Яңы йыл алдынан йәштәр хаҡында «И дольше века длится год» тигән мәҡәләне яҙып бөтөрҙөм. Йылды үҙенсә йомғаҡлау, йәштәр тураһында уйланыу. Каникулдар үткәс, матбуғатҡа илтәм. Йыл аҙағында бирергә аҙыраҡ өлгөрмәй ҡалдым.

Декабрь аҙағында ҡабул итеү көнө үткәрҙем. Ул көндәрҙе һағышхәсрәт көндәре тиергә мөмкин. Күпме кеше өмөттәр бағлап килә, ләкин уларға ярҙам итә алмау – иң ҡыйыны. Бисараларға ярҙам итерлек сараң булмауҙан үҙеңде меҫкен бисара итеп тояһың. Йөрәк яна.

Аттың да затлы нәҫел-нәсәбе, тоҡомо яҙылған паспорты бар. Ә бына Кешенең, йәғни Ватандың гражданины булған шәхестең паспортынан милләте күрһәтелгән юлды алып ташланылар. Әҙәм балаларынан һорап та торманылар. Кешенең ат хоҡуғы хәтле лә хоҡуғы юҡ, тимәк, беҙҙә.

Уйын ҡоралына әйләнгән үҫемлектәр бар. Ләкин уларҙың береһе лә моң байлығын биреү һәләтенән башҡорт ҡурайына тиңләшә алмай. Ҡурай – донъяла тиңдәше булмаған ябай бөйөклөк, һәр милләтте хайран ҡалдырырлыҡ мөғжизә.

Мостай Кәрим тапҡыр һүҙле, мәрәкәсел кеше ине. Ҡатмарлы хәлдәргә лә юмор менән ҡарай белде. Ләкин уның күңелле һүҙҙәренең, мәргән шаярыуҙарының төбөндә күпме һағыш, бөтмәҫ һыҙланыу йәшерелгәйне бит.

Тарҡатыуы еңелерәк,
Ҡатмарлы – берләштереү.
Татыулаштырыуы – оҙаҡ,
Бик йәһәт – әрләштереү.
Тиҙ ул ситкә бураҡтырыу,
Һай ҡыйын – ылыҡтырыу.

Баҡсалағы күршем Леонид Михайлович Васьков «Йәшел сауҡалыҡ»та ял итә. Һөйләшеп йөрөнөк. Һөйләгәнен «жуткая история» ти. Ысынлап та, жуткий.

Ваҡытты еткерә алмағанда мин ял, йоҡо сәғәттәрен эш өсөн файҙаланам. Тәүлек ағышын үҙемсә боҙам, кешенең ғәҙәти йәшәү ритмын емерәм булып сыға. Уйлап ҡараһаң, мин ул сәғәттәрҙе киләсәктән алып торам һәм асылда алда йәшәйәсәк ғүмеремде аңлы рәүештә үҙем теләп ҡыҫҡартам тигән һүҙ. Эш, маҡсат өсөн ваҡытты шулай сарыф итеү, аяуһыҙ тотоноу йәшәүҙең һуҙымын бәлки сикләйҙер, тормош юлын ҡыҫҡарталыр. Ләкин, икенсе яҡтан байҡаһаң, нәҡ ошолай хеҙмәт рәүеше һәр саҡ алға ынтылып, үҙеңде фиҙа ҡылыу шәхесте киләсәк менән тығыҙыраҡ бәйләйҙер. Кеше үҙе киткәс тә уның эштәрен алдағы йылдарҙа нығыраҡ раҫлайҙыр.

Парадокс, әммә шулай: киләсәктәге мәлдәреңде киләсәктән йолҡоп алып эштәрең өсөн бөгөн яндырыу һинең киләсәгеңде оҙонораҡ, ышаныслыраҡ итә.

18 ғинуар, 2010 йыл. Дүшәмбе.

Факиһа Туғызбаеваның кисәһе яҡынлаша – 1 февралдә була. Һөйләйәсәк һүҙемдең тезистарын теркәп ҡуяйым тиһәм, ҡызып китеп, ҙур мәҡәлә яҙып ташланым. 20 бит булған да ҡуйған. 1995 йылда «Фатихамды бирәм һиңә» тигән китабы сыҡҡас, мәҡәлә яҙырға йыйынып, башлап та ҡуйғайным. Шул көйө торҙо ла ҡалды. Әле яҙып ҡуйыуым һәйбәт булды.

Шул уҡ осорҙа Тамара Ғәниеваның «Ҡыпсаҡтар» китабы сыҡҡас һүҙ әйтергә ниәтләгәйнем. Факиһа менән икәһе хаҡында бергә яҙмаҡсы инем. Бәлки туҡталып ҡалыу дөрөҫ тә булғандыр. Тәкә булмаһалар ҙа, ике башты бер ҡаҙанға һыйҙырыуы ҡыйын.

Тамара Ғәниева тураһында яҙаһым бар. Рәйес Түләков тураһында яҙаһым бар. Хисмәт тураһында яҙаһым бар. Яҙаһыларым күп…

Әле Дәрдмәнд хаҡында уйланып йөрөнөм. Мәҡәлә яҙырға, китабын башҡортса сығарырға ине.

11-дә Эльвира Юнысованы Толкачев ҡотланы. Кисен ашханала мәжлес. Президенттың Почет грамотаһы.

14-дә «Айвенго»ла (элекке «Ҡыҫтыбый») Зөфәр Сафин, Михаил Бугера, Римма Үтәшеваларҙың тыуған көндәрен ҡотлау. Ике хоҡуҡ әһеленә ошо хәҙисте уҡыным:

Имам өсөн иң изге эш – иман илтеү,
Мөъминдәргә ғәҙел хөкөм таба алыу.
Яҙа биреп яңылышыуға ҡарағанда,
Хәйерлерәк ғәйебен кисереп хаталанығ.

Вера – имаму судьба и
Путь утвержденья добра.
Лучше простить, ошибаясь,
Чем по ошибке карать.

Риммаға мөхәббәт шиғыры уҡынығ.

Унан һуң К. Маркс урамындағы «Рио» тигән кафегә киттем. Унда А.Н. Дегтярев менән уның яңы (дүртенсе микән) ҡатыны Ленара Фәйзуллина «Шиғри ҡунаҡхана» («Поэтическая гостиная») астылар. Дегтяревтың 2008 йылдың июлендә үлгән ҡатыны Светлананың иҫтәлегенә арналды. Миңә лә һүҙ әйтергә тура килде.

Донъяла ГЭС-тар емерелгәндә, поездар ҡыйралғанда, газ үткәргестәр шартлағанда, берәүҙәр янғында йөҙәрләп ҡурылғанда, икенселәр меңәрләп утһыҙ-газһыҙ йорттарҙа туңғанда шиғри ҡунаҡхана асабыҙ икән, был үҙе бер мөғжизә, быларҙың ҡәҙерен беләйек, дуҫтар, тинем.

Яҙыусыларҙан Ирек Кинйәбулатов, Алла Докучаева, Юрий Горюхин, Светлана Чураева, Лариса Абдуллина, Лариса Керчина булды.

16-да Союзда Альбина Кирәеваның 35 йәшен билдәләнек. Мул табын әҙерләгән. Уңғанлығы, маҡсатҡа ынтылып йәшәүе хаҡында әйттем. Банк менән Союз араһындағы юлды һыуындырмаһын, уҡыуын уңышлы бөтөрһөн, яңы өйҙәренә иҫән-һау инһендәр, тинем.

Оҙаҡ итеп, иркенләп ултырып булманы, ОПЦ-ға академик Әнәс Мәхмүтовты ҡотларға киттем. Ҡоролтайҙың Маҡтау грамотаһын, Толкачевтың сәләм хатын, Ҡоролтай сәғәтен, Союздың 75 йыллығына сығарған китапты бүләк иттем. Банкетында аҙаҡҡа тиклем ҡалып булманы. 80-ләп кешегә әҙерләгәндәр, байтаҡ урын буш ҡалды.

19 ғинуар, 2010 йыл. Шишәмбе.

Бөгөн Ҡоролтайҙа Президиум ултырышы үтте. Мин өс мәсьәлә буйынса белешмә бирҙем.

Төштән һуң «Бельские просторы»ның редколлегия ултырышы. Ун йылдан ашыу – тәүге һанынан редколлегия ағзаһы булһам да, фекер алышыуҙа ҡатнашҡан юҡ тиерлек. Былтырғы 4–5 һанын аҡтарып сыҡтым. Ентекләп уҡырға ваҡыт юҡ, әммә байтаҡ нәмәләр күҙ алдына килә.

Яҙылыусылар, тираж, тәржемә – актуаль һорауҙар күтәрелде. Билдәле хәлдәр, әммә сисеү юлдарын табыуы ҡатмарлы.

Үҙемдең сығышымда иң төп талап – әҫәрҙәрҙең сифаты һәм редакцияның халыҡ һәм етәкселәр араһында ойошторoу эштәре, тинем. Ярай беҙҙә матбуғатты дәүләт ҡарай. Ә бына хөкүмәттән бер тин алмаған «Наш современник»тың хәлен күҙ алдына килтерегеҙ. Рәсәйҙәге ҡалын журналдар араһында иң ҙур тиражлыһы. Халыҡ уҡый, сөнки баҫма ил яҙмышын, рус милләтенең, Рәсәй дәүләтенең киләсәген хәстәрләп йәшәй. Иң көслө яғы – үткер публицистика. «Бельские просторы»ға бына шул етмәй, тинем.

Һөйләшеп ултырғанда тағы ла бер үҙенсәлеккә иғтибар иттем: межнациональная современная литература. Журналда мосолман исемле авторҙар күп баҫыла. Уларҙы башҡорт әҙәбиәтенә индереп булмай. Рәс әҙәбиәтенә лә бәйләнештәре юҡ дәрәжәлә. Русса яҙһалар

ҙа, Айтматов – ҡырғыҙ, Олжас – ҡаҙаҡ, Ғәзим – башҡорт һ.б. Ә хәҙерге тулҡын бөтөнләй башҡаса. Создается русскоязычная, но не русская литература. Формируется русскоязычная, но не русская философия, эстетика, филологическая наука и т.п. И этот процесс усиливается с каждым годом.

Теряется народная основа образования, общественных наук, литератур – и русской, и национальных. Интервенция Интернета разрушает вековые традиции. Глобализация расширяет связи с миром, но обрывает связи новых поколений с духовным наследием этноса. Технические достижения и урбанизация ускоряют процессы ассимиляции.

У шәжәрә большинства городских башкир в дальнейшем развитии в сохранении родного языка и этнической идентичности – тупиковая ситуация. В современной ситуации этническую принадлежность нельзя определять только по языку. Надо считаться со сложившимися реалиями.

29 ғинуар, 2010 йыл. Йома.

Аяҡҡынам әле ергә теймәй,
Әле ерҙән алам саҡ-саҡ һурып.
Әллә нисек йыртҡыланды тормош,
Йәшәлә бит бигерәк урыҡ-һурыҡ.

Әле һауаларға һыймай осоу,
Әле түбәнлектәр, үкенес, тәүбә.
Йыр-алҡышлы балҡышымды ҡаплап,
Ябырыла йәнгә ҡоро шәүлә.

Һуңғы ваҡытта йәнгә бигерәк тынғы юҡ, эштәр төрлө яҡҡа йолҡҡолай. Төрлө көндәлек эштәр тураһында туҡтауһыҙ борсолоуҙар төплө уйланыуҙарға ваҡыт ҡалдырмай. Ысынлап та, Пушкин әйтмешләй, «на свете счастья нет, есть покой и воля». Йән тыныслығы менән күңел азатлығы – илһамлы саҡтарыңда ижад итер өсөн төп шарттар бына шулар. Тик бындай мәлдәр хаҡында һуңғы ваҡытта хыялланырға ғына ҡала.

Өлөшөмә төшкән көмөш түгел,
Тик төшөмә төшкән көмөшөм һин.

20 ғинуарҙа Ибраһимов бульварында яҙыусыға барельеф – таҡтаташ астыҡ. Һәйбәт эшләнгән. Ҡала, Совет районы, Ауырғазы администрацияһынан сығыштар. Тәүге һүҙҙе мин әйттем:

«В Уфе особо уважительное отношение к поэтам и писателям. Приезжающих в нашу прекрасную столицу дорогих гостей на высокой скале встречает величественный, уникальный во всем мире памятник поэту и полководцу Салавату Юлаеву. Одна из самых красивых улиц Уфы названа именем Пушкина. Эту улицу параллельно пересекают улицы Гоголя, Аксакова и Гафури. Вот как все взаимосвязано и переплетено.

Вы когда-нибудь задумывались о том, сколько улиц нашего города носит имена поэтов и писателей? Кто-то скажет – десять, кто-то – двадцать. Вы будете приятно удивлены, если я назову другую, более точную цифру: свыше 60 улиц города Уфы носят имена писателей и поэтов.

Башкирская земля дала многим литературам выдающихся мастеров слова. В татарской литературе таких классиков – целое созвездие.

Улица с прекрасной липовой аллеей, где в свое время любил отдыхать Тукай – носит его имя. В Уфе есть улица имени Мусы Джалиля.

Сегодня мы открываем мемориальную доску с барельефом Галимьяна Ибрагимова на бульваре, носящем его имя.

Галимьян Ибрагимов – славный сын Башкортостана и корни его творчества в его родной башкирской земле. У нас свято чтят его память. Создан музей, выходят его книги. Башкирский писатель Суфиян Поварисов создал трилогию о жизненном и творческом пути Галимьяна Ибрагимова. Есть романы о писателях, о поэтах, но трилогия – явление редкое, если не единственное.

Произведения Галимьяна Ибрагимова изучаются в школах и вузах. Спасибо администрации города Уфы и Советского района за внимание и уважение к писателю. Я не сомневаюсь в том, что эти традиции продолжатся и в будущем?

Шул уҡ көндө идара ултырышы. 2010 йылға план ҡабул итеү булды. Башта К. Кинйәбулатоваға, Б. Ноғомановҡа, С. Әлибаевҡа, Ғ. Хисамовҡа Президенттың рәхмәт хаттарын (СП – 75 уңайы менән) тапшырҙыҡ. Йыһат Солтанов килмәне. Аҙаҡ Мостай Кәримдең «Һорайҙар: “Бәхетлеһеңме?”» тигән шиғырын руссаға тәржемә итеү буйынса «Бельские просторы» журналы иғлан иткән конкурс

йомғаҡтары буйынса ете еңеүсене ҡотланыҡ. Жюри рәйесе иткәндәр, диплом-бүләктәрен тапшырғанда һүҙ әйттем. 19-да «Бельские просторы» журналының редколлегия ултырышы булғайны. Шундағы һөйләшеү бында дауам итте, аҙаҡ мәжлес ойошторғайнылар Союзда, унда ла уртаҡ мәсьәләләр тураһында һөйләшеү барҙы. Ҡайһы бер һүҙҙәремде теркәп ҡуям:

«На своем пути развития человечество преодолело много препятствий. Сблизило расстояния, развивало огромные скорости. Человек преодолел даже звуковой барьер – т.е. достиг сверхзвуковой скорости.

И все же даже в наш век невиданных скоростей остается вечный барьер. Это – языковой барьер между народами.

Главным средством в борьбе с этим барьером является перевод. Перевод всегда находится в первых рядах прогресса. Великие путешественники – открыватели новых земель – волей-неволей становились переводчиками.

Всемирная литература как грандиозная система, как общечеловеческий храм духовности была создана благодаря переводу. Запад и Восток сблизились через перевод. Через перевод мы выходим в большой мир, большой мир входит в наши дома. Можно долго говорить о переводческих традициях советской школы, о переводах в Башкортостане.

Великие свершения начинаются с маленьких дел, с перевода отдельных произведений. Инициатива журнала “Бельские просторы” в этом плане – очень доброе начинание».

«Бельские просторы» редколлегияһына әҙерләнгәндә журналдың һуңғы һандарын ҡарап сыҡтым. Тышлығын алыштырыуҙары бик үк оҡшаманы. Журнал үҙ йөҙөн әйләнгән һайын алыштырырға тейеш түгел. «Новый мир» журналы нисәмә тиҫтә йылдар бер формалағы иң популяр журнал булды. Йөкмәткеһенә ҡарап, әлбиттә. Әммә һүҙем был хаҡта түгел. Хәҙер Башҡортостанда, шулай уҡ башҡа республикаларҙа, тотош Рәсәйҙә милләттәре рус булмаған, әммә русса яҙған авторҙар артҡандан-арта. Мәҫәлән, Башҡортостандағы яңы быуын русса авторҙар араһында рус булмағандар бәлки күберәктер ҙә әле. Әҫәрҙәрендәге материал, фекерләү үҙенсәлеге (милли мифология һ.б.) буйынса уларҙы икеләнмәйенсә рус әҙәбиәтенә индереүе лә ҡыйын. Улар аша ниндәйҙер милли-ара – межнациональная йәки ике әҙәбиәт бәйләнешендәге әҙәбиәт формалашып килгән һымаҡ. Был хаҡта махсус тикшеренеү яҙғы килә, ләкин ҡайҙа ваҡыт?..

Аллаһы тәғәлә кешегә ул эшләй алмаҫтай эштәрҙе ҡушмай тип өйрәтә динебеҙ. Был эш ҡулымдан килмәй тип туҡтап ҡалырға ярамай, тимәк. Тотонғанһың икән, юҡтан түгел. Еңеп сығырға тейешһең.

Олег Архангельский,
Олигарх ангельский.

Воры ведут переговоры.

Какое издевательское слово – оптимизация. Точнее было бы: пессимизация. Или: оптимизация, ведущая к пессимизации.

Башҡортостанда бер 2009 йылда – 486 мәктәп ябылған. Һуңғы ике йылда – 959 мәктәп юҡҡа сыҡҡан.

1997 й. – 3301 мәктәп;

2008 й. – 2205 мәктәп;

2009 й. – 1990 мәктәп. Шул арала 1331 мәктәп ябылған. Шуның 959-ы – һуңғы ике йылда.

Уҡытыусылар һаны:

1997 – 697700;

2007 – 487633;

2008 – 450011;

2009 – 442942.

Кәмеү – 254758 уҡытыусыға.

Был һандар хаҡында тетрәндергес тиһәң дә арттырыу булмаҫ. Бында аҡылһыҙ үҙгәртеүҙәрҙең дә һөҙөмтәһе бар. Ләкин чиновниктар балаларҙың һанын кәметә йәки арттыра алмай. Замандың объектив күренештәре. Әммә уларҙың да сәбәптәре бар, әлбиттә.

Беҙ үҙебеҙ ҡыпсаҡтар,
Ҡайнар беҙҙең ҡосаҡтар,
Үткер беҙҙең бысаҡтар,
Һүнмәҫ беҙҙең усаҡтар.

Ике тергеҙеү (восстановление) осоро!

1) 1945 йылдан башланған. 7–8 йылда атом бомбаһы, 15–16 йылда йыһанға үтеп инеү, тиҙ арала емеректәрҙе бөтөрөү, яңы ҡалалар, ГЭС-тар төҙөү, сиҙәм ерҙәрҙе күтәреү һ.б.

2) 1985 йылдан һуңғы үҙгәртеп ҡороу осоро. Асылда емереү, ҡырыу. 25 йыл – сирек быуат! Тотош дәүер бит! 90-сы йылдарҙағы ҡыйратыуҙар яңы быуатта туҡтаны, тип раҫламаҡсылар. Асылда халыҡтыҡкын урлау, талау дауам итә.

Совет халҡы ни тиклем байлыҡтар тыуҙырып өлгөргән: һаман талап бөтөрә алмайҙар.

Общество потребителей, а не производителей. Новый класс алчных потребителей, пожирателей. Во имя обогащения они готовы переступить все моральные нормы.

Ошо шарттарҙа Башҡортостандың һуңғы 20 йылдағы ҡаҙаныштары – Президент Рәхимовтың һәм республика халҡының тарихи ҡаһарманлығы!

Тыуған йылын тулыһынса йәшәүселәр бар – ғинуарҙа тыуғандар. Мин – декабрь балаһы тыуған йылымдың остоғон ғына йәшәп ҡалам.

Мәкерлек миңә бала саҡтан мәке образы аша килеп инде. Әкиәттә кешенең юлына мәке уйып, өҫтөн юрый ҡаплап ҡуйыу йәки кешене абайламаҫтан тәрән соҡорға осороу хәлдәре булған. Бындай мәкерлек мине дейеүҙәрҙең асыҡтан-асыҡ эшләнгән яуызлыҡтарынан нығыраҡ аптырата торғайны. Мәкерлек менән мәке – ниндәй тап килгән яңғыраш.

31 ғинуар, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Ғинуарҙың һуңғы көнө килеп тә етте. Февралдең тәүге көнө аҙнаның тәүге көнөнән башлана. Март та шулай буласаҡ – һирәк тура килеү. Һыуыҡтар булды, донъяның күп илдәре ҡарға күмелде. Бөгөн иртән сәғәттән артыҡ йөрөп индем. 8–9 градус.

28-дә дәүләт йыйылышы. Ильяс Абдрахманов (Учалы, ГОК) менән Сибайҙа (уға ҡарай) семинар үткәреү, профилакторийҙа йәшәү тураһында һөйләштем, хат бирҙем. Минең алда Сибай-ГОК-ҡа шылтыратып, фарманын бирҙе. Оперативлыҡ ошолай булалыр.

29-да, йома, «Нефтяник»та Бөтә донъя ҡоролтайының башҡарма ултырышы булды. Буласаҡ йыйындың документтарын ҡараныҡ. Мине мәғариф секцияһына индергәндәр. Март-апрель ғилми конференция үткәрергә кәрәк. Йыл бик мәшәҡәтле булмаҡсы: перепись.

Камил Йыһаншиндың «Золото Алдана» тигән яңы романын ҡарайым. Ваҡыт юҡ, шуға диагональ буйынсараҡ уҡырға тура килә. Бик үҙенсәлекле материал, күптәр өсөн өр-яңы тормош, ят тәбиғәт. Ваҡиғалар, тәбиғәт күренештәре ташҡын һымаҡ килә, характерҙар асылып бөтмәй, подтекст, фәлсәфә етмәй. Бындай жанрҙағы әҫәрҙең маҡсаты ла бәлки унда түгелдер.

Русса яҙыусы йәштәр рәсми матбуғатты, «Китап» дәүләт нәшриәтен тәнҡитләргә, хатта кәмһетеберәк һөйләргә яраталар. Улар өсөн «Вагант» тигән нәшриәт (С. Вахитов ойоштороған) әллә ниндәй мөғжизә һымаҡ. Ләкин был нәшриәт сығарған китаптарҙың һатыла алмауын, уҡыусыларҙа ихтыяж (запрос) булмауын үҙҙәре лә әйтә.

Эйе, республикала рус телендә йәштәр әҙәбиәте ныҡ ҡына йәнләнә һуңғы ваҡытта. Был хаҡта беҙҙең оло быуын яҙыусылары ла, хатта йәштәр ҙә белмәй тиерлек. Бәлки күреүселәр барҙыр, әммә бының мөһим тенденция икәнен аңлаусылар юҡ дәрәжәһендә. Мин дә был мөхиттең үҙенсә бер донъя икәнлегенә һуңғы ваҡытта шул ағымдағы баҫмаларҙы йышыраҡ күҙәтә барғанда юлыҡтым.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бында төплө нигеҙ етмәй, буш мауығыуҙар, күбек күп. Эксперименттар, яҙыусылар, дөрөҫөрәге, бер төркөм авторҙар даирәһенең иғтибарынан ситкә сыҡмаған әҙәбиәт. Ҡыланыу, эйәреү, көнбайышҡа оҡшарға тырышыу.

«У нас не было химической промышленности – у нас есть химическая промышленность» – Игорь Савельев («Бельские просторы», 2009, № 12, с. 190–192).

Авторҙың ирониһы үҙе ирония уята. Әгәр донъя ошолай барһа, бик тиҙҙән Сталин әйткәндең киреһен әйтергә тура килмәгәйе: «У нас была химическая промышленность, у нас нет химической промышленности». Әгәр шулай дауам итһә, «у нас был журнал, у нас нет журнала», «у нас было издательство, у нас нет издательства» һ.б. Бына нисек тора мәсьәлә. Ул саҡта инде ирония түгел, фантасгармония тыуасаҡ.

Медведев модернизацияның бер юлын энергияны экономиялауҙа, яңы шәмдәр – «энергосберегающие лампочки» индереүҙә күрә. ГЭС-тарҙа авариялар, дәүләт ҡулынан киткән производствола анархия, матди байлыҡ, яңы мөлкәт тыуҙырыусы хеҙмәт һүнгәндән-һүнә. Ҡараңғылыҡты яңы лампочкалар менән генә таратып булмаясаҡ. Урыҫ әйтмешләй, бындай саралар «как мертвому припарка».

Фрагментарность публикуемых в «Бельских просторах» материалов, случайные публикации. Нет принципиальной позиции журнала, последовательной концепции.

Споры о создании музея С. Довлатова в Уфе – разве можно об этом серьезно говорить? Ради пиара?

6 февраль, 2010 йыл. Шәмбе.

3-дә иртә менән Санкт-Петербургҡа остоҡ. ЯК-40 чартер рейсы: К. Толкачев, В. Аҙнағолов, Ф. Сәйфуллин, М. Бугера, Р. Үтәшева,

Н. Фаррахов, Ф. Ғәлләмов («Башкомснаббанк» директоры, сәфәрҙең спонсоры), Ришат Мөхөтдинов (ГТРК). Питерҙа вәкил Сәхәбутдинов Риф Рәйес улы ҡаршы алды. «Смольнинская» ҡунаҡханаһында урынлаштыҡ (Тверская, 22, бүлмәм – 304).

Башта Йосопов һарайында. Дворец 1837 йылдың 16 февралендә асылған. 2 мең ҡунаҡ булған. Йорт уларҙы хайран иткән. Бындағы матурлыҡтар, ысынлап та, һоҡландырғыс. Залдарҙы шул замандың балҡыштары, музыкаһы, затлы кейемдәрҙәге аҡ һөйәктәре, серле ҡараштар, ҡайнар һүҙҙәр, нәзәкәтле хәрәкәттәр менән тултырһаң, шул дәүерҙе яңынан терелтеп күҙ алдына килтерһәң, бындағы гүзәллектәр күҙҙең яуын алырлыҡ. Ниндәй аҫыл күренештәр тарихҡа инеп юғалған.

16 февралдә тәүге бал-һарайҙы асыу тантанаһы булған тигәс, мин ҡапыл нәҡ ошо ваҡытта – 1837 йылдың 10 февралендә бөйөк Пушкиндың һәләк булыуы тураһында уйланым. Ниндәй фажиғәнән һуң ниндәй тантана! Пир во время чумы тигән һүҙ хәтергә килә. Ошо һарайҙы асҡандағы балҡып торған кисәлә Пушкин тураһында ҡайғырыусылар күп булдымы икән? Ай-һай, күплегенә шикләнәм. Бөйөк шағирҙы юғалтыу ҡайғыһын кисереүсе был тантанаға килер инеме икән?

Экскурсоводҡа ошо көндәрҙә Пушкин да вафат булған, тинем. Һис бер комментарийһыҙ ғына әйттем. Нимә уйлағанымды һиҙгер тойҙо. Был һарайҙы асырға бер йыл буйы әҙерләнгәндәр бит, ни хәл итәһең, тигәнерәк һүҙ әйтте.

Ысынлап та, ни хәл итәһең… Тормоштоң фажиғәһе менән тантаналары бергә бара. Шул уҡ 1837 йылда атаҡлы Ҡышҡы һарай – Зимний дворец тулыһынса янып бөткән икән. Экскурсовод шул хаҡта ла информация бирҙе. Ҡышҡы һарайҙы яңынан тергеҙгәндәр, Пушкинды ғына мәңгелеккә юғалтҡандар. Ләкин шағирҙың бөйөклөгө был аҫыл һарайҙың бөйөклөгө ише генә түгел.

Ошо һарайҙа Распутинды нисек үлтергәндәре тураһында һөйләнеләр. Балауыҙҙан эшләнгән һындар: Феликс Йосопов, Распутин һ.б. Йосоповтың фамилияһына бәрәбәр булмышы, йәғни төрки асылы, уйлап ҡараһаң, нисә генә процент, ниндәй генә миҡдарҙа ҡалды икән?

Шул уҡ һүҙҙе рус батшаларына – Рәсәй императорҙарына ҡарата ла әйтеп була бит. Уларҙа, бигерәк тә һуңғыларында, рус ҡанына ҡарағанда сит ил ҡаны, бигерәк тә немецтыҡы күберәк түгелме икән?

Мариин һарайында. Санкт-Петербург. Законодательное Собрание менән беҙҙең Ҡоролтай араһында ҡул ҡуйыу церемонияһы үтте. Уға тиклем йыйылыштарында бер аҙ ултырҙыҡ. 4 фракция – «Единая Россия», «Справедливая Россия», ЛДПР, КПРФ – береһенең дә күпселек тауышы юҡ. Бөтәһе 55 буғай. Йыйылыш ваҡытында иркен йөрөп яталар. Зал бик мөһабәт, әммә акустика насар.

Церемонияға тиклем Мариинский дворец менән таныштырҙылар. Батшаның яратҡан ҡыҙына төҙөткән бүләге. Сиркәүе лә бар, ул иң юғары ҡатта. Сиркәү барыһынан да өҫтөн булырға тейеш икән.

Был һарайҙа төшкө аш. Рәйестәре Тюльпанов Вадим Альбертович аҙаҡҡа хәтле ултырманы.

Шунан һуң яҡташтар менән осрашырға киттек. «Босфор» ресторанына оҙаҡ ҡына барҙыҡ. Осрашыуҙы мәжлес итеп ойоштороғандар. Мин берәй залда халыҡ менән осрашыу булыр тигәйнем.

Бында Башҡортостандан 2 мең студент уҡый тинеләр. Ысын булһа, бик күп, ҙур көс. Йәштәр был табында ла булды. Тик уҡығандарҙың күпмеһе әйләнеп ҡайтыр. Миниәхмәт ағай Моталовтың Шамил тигән туғаны геолог булырға уҡып йөрөй икән. Ҡайтырға уйлайһыңмы, тип табында һүҙ әйткәндә һоранылар. Әле уйлайһы бар, тигәнерәк яуап бирҙе. Ситкә уҡырға киткән йәштәрҙең байтағы бына шундай уй менән йәшәй бит.

Санкт-Петербургта Исмәғил Тасимовҡа таҡтаташ, Вәлидигә бюст ҡуйылған. Бюст тағы ла Конфуцийға ғына бар икән.

Мариин һарайында ҡаланың почетлы граждандарының һүрәттәре. Яҙыусыларҙан Д. Лихачев, Д. Гранинды күрҙем.

4-дә Павловский дворец буйлап йөрөнөк. Бер залда хайран ҡалып тораһың, ошонан да байырағы, сағыуырағы, нәфисерәге артабан булмаҫ, тип уйлайһың. Әммә яңы залға ингәс, яңы матурлыҡтар арбай.

Был гүзәллектәрҙә күпме кешеләрҙең ҡара тире, күҙ йәштәре, ашар ризыҡтары, кейер кейемдәре инеп киткәндер. Был матурлыҡтар быуаттар буйына Рәсәй крәҫтиәненең, Рәсәй эшсеһенең, зыялыһының хәләл өлөштәрен яҙмыштарынан йолҡоп алып тупланғандыр. Ул ҡайғылар, фажиғәләр күпме яҙмыштарҙы иңрәткән, күпме кешеләрҙе һыҙландырып үтеп киткән, ә был матурлыҡтар тороп ҡалған, халыҡтың ғорурлығына, дәүләт хазинаһына әйләнгән. «Искусство требует жертв» тигән һүҙҙәр бындай осраҡтарҙа ниндәйҙер дәрәжәлә аҡлана ла торғандыр.

Ә бөгөн илдең күпме байлыҡтары урланып, таланып сит илдәргә ағыла. Был аҡсаларға ниндәй сәнғәт гәүһәрҙәре, ниндәй бөйөк ҡомартҡылар ижад итергә мөмкин булыр ине! Ҡайҙа ул Рәсәйҙә Яңы хазиналар тыуҙырыу, иҫкеләре ҡыйратыла.

Йосопов һарайындағы бер каминды Урал малахитынан төҙөлгән, тинеләр. Барлай башлаһаң, нисәмә йылдар Рәсәйҙең тажы булған Питерҙың балҡышында беҙҙең ерҙән килтерелгән бик ҡиммәтле биҙәктәр бик күп инде ул.

Бар ҡаңғырған, аҙашҡаным,
Ашыптан тыш ташҡаным.
Ярлыҡай күрсе уларын.
Тик беләм, ғәфү ителмәҫ
Алдашҡаным…
Просил должность, дали работу.
Алкаш – һалҡаш.

Нанотехнология арта, производство кәмей. Матбуғат, китап арта – уҡыусы кәмей.

Кеше ҡабул иткән һәр аҙыҡтың молекула кимәлендә үҙләштерелеүе.

И дольше века длится день. Музейҙар. Үҙенә быуаттарҙы һыйҙырған көндәр.

Век потока информации и глобального наступления порывов. Век глобализации, ассимиляции и роста национального самосознания.

Двадцать лет развития РБ и консолидации народа.

Жить в центре РБ, говорить и думать по-башкирски и не думать о своем народе, быть в стороне от судеб республики.

Народ начинается с личности. Познай самого себя – үҙеңде бел тәүҙә, үҙеңде!

Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, булырбыҙ!

Иң ныҡ етмәгәне – берҙәмлек, уңғанлыҡ, уяулыҡ, айныҡлыҡ.

14 февраль, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

8 февралдә оперативка булманы. В.В. Путин Конгресс-холда РФ Хөкүмәте ултырышын үткәрҙе. Информацион технология.

Был, әлбиттә, заман талабы. Әммә илдең күпселеге компьютерҙан, бигерәк тә Интернеттан ситтә бит.

10-да Комитет ултырышы. Х.Х. Баймурзинды ҡотланыҡ – 55.

12-дә Конгресс-холда 6 республика гимназиялары, лицейҙары уҡыусылары менән осрашыу. Икенсе ҡат үткәрелә икән. Берәй уҡыу йорто төп ойоштороусы итеп ҡуйыла. Был юлы Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге республика музыкаль гимназия-интернат үткәрҙе. Тынлы оркестрҙары уйнап ҡаршы ала. Сәхнәлә лә улар башлап ебәрҙе.

Минең «Хазина», Ҡ. Аралбаевтың «Рух яҙыуы» буйынса һөйләшеү. Аҙаҡ берәр шиғыр уҡыныҡ, бер ни тиклем һүҙ ҙә әйттек.

Бик кәрәкле башланғыс. Һәйбәт традицияға әйләндерергә кәрәк. Беҙҙә йыш ҡына матур башлана ла һүнеп ҡала.

Осрашыу алдынан һәйкәл тирәһендә байтаҡ йөрөнөм, Салауат һәм уның бөгөнгө вариҫтары тураһында уйландым. Салауат исемен ҡала, урамдар йөрөтә. Салауат хоккей командаһы ил чемпионы булды. Иң шәп спортсыларҙы ситтән һатып алып, Салауат командаһын көсәйтергә була. Әммә Салауаттың рухи вариҫтарының сафтарын ситтән көслө егеттәрҙе саҡырып көсәйтеүе мөмкин түгел. Быны аҡсаға һатылған ялсылар түгел, тик үҙебеҙҙең тоғро, ҡаһарман шәхестәр генә башҡара, дөрөҫөрәге, ғүмерҙәрен шуға арнағандар ғына булдыра ала. Иң аҙаҡтан «Башҡортостан бында башлана» шиғырын уҡыр алдынан: «Һеҙ – Башҡортостандың киләсәге» тип, ошолар хаҡында әйттем.

Йөрөмәһен йәштәребеҙ
Хәсрәт даръяһын кисеп,
Вуздарҙан ваздар кисеп,
Ҡаңғыртҡыс ағыу эсеп.
Терелһен ҡыйралған өмөт,
Яңынан ҡанат үҫеп.
Сапмаһын баҙар балтаһы
Йәш тармаҡтарҙы киҫеп.
Ҡағылмаһын илгә афәт,
Янъял елдәре иҫеп...

Йәштәргә ҡарата:

– Беҙ ҙә һеҙҙең кеүек инек. Һеҙгә лә беҙҙең һымаҡ булырға, беҙ еткәндәргә етергә, уҙып китергә яҙһын, Алла бирһә!

В режиме реального времени – бик мәғәнәле һүҙҙәр. Күптәре – беҙгә бына ошо етмәй, үҙенең ҡәтғи шарттары менән ураҡкан бөгөнгө

ысынбарлыҡта түгел, әллә ниндәй абстракт донъяларҙа йәшәүселәр күп. Замандан айырылғандар халыҡтан бөтөнләй айырылмаған, әлбиттә. Улар халыҡтың бер өлөшө, уның көсөн бик ныҡ кәметеүсе, хәлен алыусы өлөшө.

12-й номер «Бельских просторов» почти полностью посвящен молодым авторам. К сожалению, это, в основном, дебюты дилетантов.

Биғылый. Өләсәйҙең (беҙҙеңсә әсәйемдең) ошо һүҙе иҫтә ҡалған. Ошолай әрләй торғайны.

«Беглый» һүҙенәндер инде.
Хоть беглым не стал, но очень много бегал по свету.

В современном мире неожиданных катастроф и крушений, социальных разграблений и мировых кризисов только деньги, только финансовая независимость могут послужить «подушкой безопасности». К сожалению, у народа нет такого средства спасения. Поэтому при постоянных экономических авариях гибнет намного больше людей (не защищены денежной подушкой безопасности), чем во время дорожных происшествий.

Мы живем в век дикого рынка, разнузданного базара. Тогда кем является первое лицо страны: главой государства или начальником рынка?

Слово закон у россиян вызывает неприязнь. Хотя во всем цивилизованном обществе закон является гарантом для всех граждан.

У россиян о законе отрицательное представление, ибо большинство законов не работает, принято формально или направлено против народа.

Камил Зиганшиндың «Золото Алдана» тигән романын уҡып сыҡтым. Бәләкәй генә мәҡәлә лә яҙып ҡуйҙым. Роман «Скитник»тың дауамы. Ҙур эш эшләнгән. Яңынан ҡарайһы бар. Бик ентекләп уҡырға ваҡыт булмаһа ла, ҡайһы бер төҙәтмәләрҙең кәрәклеген осрашҡанда телдән әйтермен.

Булыр илдең балаһы бер-береһенә батыр тир,
Бөлөр илдең балаһы бер-береһенә бахыр тир.

Ошо һүҙҙәр халҡыбыҙҙың девизы булырға тейеш. Йәш быуынды ҡулынан ҙур эштәр килә тигән ышаныс менән үҫтерергә кәрәк.

«Булдыҡлы» тигән һүҙ борондан ҙур баһа, хуплау, дәртләндереү һаналған. Ә беҙҙә бала «йүнһеҙ», «булдыҡһыҙ» һымаҡ һүҙҙәрҙе йышыраҡ ишетә.

«Хазина»ла Азатты ниңә үлтерҙегеҙ, тигән һорау бирәләр. Минең яҙыуымса, ул үлмәгәйне, шәжәрәне ут эсенән алып сығып ауғайны. Әммә үлмәгәйне. Ләкин текстан башҡаса аңлашыла икән. Союзда уҡығанымда хатта Ҡәҙим Аралбаев та шулай аңлап һөйләгәйне.

Кисә поэмалағы «Ауҙы шәжәрәне ҡосаҡлап» тигән юлда «ауҙы»ны «сыҡты» тип үҙгәрттем, шунан һуң бер строфа өҫтәнем.

22 февраль, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

15-дә Ҡоролтайҙа Президиум ултырышы үтте. Парламент делегацияһы Кореяға осто. Бөгөн ҡайттылар, тип әйттеләр. Шул яҡтарҙа йөрөгән саҡтар иҫкә төштө.

18–19 Мәскәүҙә Госдумала мәғариф комитетында семинар-кәңәшмә. Утыҙлап субъекттан килгәндәр. Беренсе көн 11-ҙән өҫкә тиклем ике доклад тыңланыҡ. Күп кенә һорауҙар бирҙеләр. Профиль комитеттары етәкселәре бик тәжрибәле педагогтар, ул системаның нескәлектәрен, закондарҙы, проблемаларҙы яҡшы беләләр, практиктар. Шуға һорауҙарының күбеһе компетентлы. Улар менән сағыштырғанда минең педагогик наҙанлығым көслө, шуға ситуацияның нескәлектәрен белмәйем. Һорау биреүселәр араһында тел сарларға, үҙен күрһәтергә тырышыусылар ҙа бар. Өҫтәүенә, комитет етәксеһе Григорий Артемович Балыхин күп һөйләргә ярата, һуҙа.

Ырымбурҙан килгән Геннадий Михайлович мәғариф нескәлектәрен ныҡ белгәнгә оҡшай. Докладсыларға үткер һорауҙар бирә. Күп сығыштар финанстарға бәйле.

Икенсе көн бер доклад буйынса һорау-яуаптар төшкә тиклем барҙы. Мин аэропортҡа ашығам тип ҡыҫҡартып булһа ла һүҙ әйтеп киттем: дәреслектәр, региональ-милли компонент, динде уҡытыу, рус телен мәсхәрәләү һ.б.

Билетты һуңғараҡ алырға кәрәк булған. Иркенләберәк сығыш яһар инем.

Думаның бер төркөм депутаттары туған тел буйынса ЕГЭ, дәреслектәргә бәйле мәғариф законына төҙәтмәләр индереү тураһында закон проекты әҙерләгән. Уны ҡабул итеүҙәрен хупларға, талап итергә кәрәк.

Метрола «Город – единство непохожих» тигәнерәк һүҙҙе күреп ҡалдым, аҫтына Аристотель тип ҡуйылған. Ҡыҙыҡ фекер. Ләкин һәр ҡала кешеләрҙе үҙ ҡалыптарына яйлай.

Кисә-бөгөн Сибайҙағы семинарҙа тикшерәләсәк ҡулъяҙмаларҙы уҡыным. Ете авторҙың берәр әҫәре. Шаҡ ҡатырғыс асыштар булмаһа ла, иғтибарға лайыҡлы үҙенсәлекле авторҙар бар. Етеһенең бишеһе ҡатын-ҡыҙ. Бөтәһе 8 кешенең әҫәрҙәре тикшереләсәк. Әле уҡығандарым:

Линиза Шакирова «Тәҡдир», повесть;

Рәсүл Сәғитов «Уй туйы»;

Рәмилә Торомтаева «Аҡҡа ғына төшһөн исемдәр»;

Мәҙинә Йәғәфәрова «Ҡарағаш»;

Гөлдәр Әхмәҙишина «Ер ҡорто», «Бауыр ите»;

Нияз Алсынбаев «Яңы йыл кейәүе», пьеса;

Гөлнара Мостафина «Бармаҡ буйы бер балыҡ»;

Һигеҙенсеһе – Әнисә Янбаева. Бер әҫәрен дә бирмәнеләр.

Р. Сәғитов менән Г. Мостафинаның хикәйәһен матбуғатта уҡыған булып сыҡтым. Рәмилә Торомтаеваның оҙон хикәйәһен повесть тип тә булалыр. Теле бай, бик халыҡсан характерҙар, яҡты донъя. Бер генә насар кеше лә юҡ. Хатта эскесеһе лә, ҡарағы ла әҙәмсә булып сыға.

Уҡылған әйберҙәрҙә заман һыҙаттары күп: ауыл менән ҡала араһындағы кешеләр, ҡалалағылары ла ауылса уйлай. Яңы һөнәр эҙләүселәр – теплица һ.б. схематизм. Ҡала ҡыҙының сит яҡтарҙағы яҙмышы, тажик һ.б. «Ғилмияза»ны йырлаусы ҡатын.

Һүҙгә талапсанлыҡ мәсьәләһе. Тәү ҡарашҡа элементар һымаҡ. Әммә ғүмерлек талап. Хатта даһиҙар өсөн дә. Пушкиндың да һүҙгә иғтибарһыҙ мәлдәрен табалар. Дөйөм алғанда һүҙ менән эш итә беләләр. Әммә еңел генә төҙәтәһе урындар ҙа эшләнеп етмәгән.

Яҙыусыларҙың XII съезында (1996) мин «Йәшәһен шиғриәтебеҙ!» тигән һоҡланыуымды белдергәйнем. Шул уҡ ҡыуанысымды мин XIII съезыбыҙҙа ла (2001) әйттем. Боронда килгән бындай юғары баһаға шиғриәтебеҙ әле лә лайыҡ.

Ләкин был хәл ни тиклем генә шатлыҡлы булмаһын, әҙәбиәттең төп көсөн, әлбиттә, проза билдәләй. Һәр хәлдә, ныҡлы үҫешкән әҙәбиәттә шулай булырға тейеш.

Яңыбай Хамматов, Динис Бүләков, Әхиәр Хәким, Рәшит Солтангәрәев, Булат Рафиҡов, Шакир Янбаев, Ибраһим Абдуллин һымаҡ оло әҙиптәр арабыҙҙан киткәс, прозабыҙҙың киләсәге өсөн борсолоу артты. Юғалтыуҙар, ысынлап та, ҙур ине шул.

Әммә прозабыҙ бөтөнләй үк бушап ҡалманы. Талха Ғиниәтуллин, Ноғман Мусин, Ғайса Хөсәйенов, Азат Мағазов, Суфиян Поварисов,

Роберт Байымов, Таңсулпан Ғарипова, Сабир Шәрипов, Гөлнур Яҡупова, Ғәлим Хисамов, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Әмир Әминев, Хәйҙәр Тапаҡов, Флүр Ғәлимов, Фәрзәнә Аҡбулатова, Азамат Юлдашбаев, Мөнир Ҡунафин – барлай башлаһаң, көстәр байтаҡ икән. Был исемлек тулы түгел, әлбиттә.

Шулай ҙа прозабыҙҙың киләсәге шиғриәт менән сағыштырғанда хәүефлерәк. Әле авторҙарҙың бәғзеләрен бергә туплабыраҡ танышҡас, иртәгәһе көнөбөҙгә өмөт һәм ышаныс артҡандай булды.

Заман темаһы һәр дәүер өсөн иң актуаль булып ҡаласаҡ. Тарихыбыҙҙы барлау кәрәк, бөгөнгө хаҡлы хоҡуҡтарыбыҙҙы һәм талаптарыбыҙҙы нығыраҡ раҫлар өсөн кәрәк. Сәйәси хәҡиҡәттәрҙе тәрәндәнерәк, дәлиллерәк иҫбатлау өсөн кәрәк.

Шулай ҙа хәҙерге хәүефле яҙмышыбыҙ тураһында ватандаштарыбыҙҙы әҙәбиәт йышыраҡ һиҫкәндерергә, көслөрәк уйландырырға, тетрәндерергә, физаҡәр эштәргә, ҡаһарманлыҡҡа, ҡыйыулыҡҡа рухландырырға тейеш.

Мөнир Ҡунафиндың «Шоңҡар»ҙағы «Артта Мәскәү» тигән хикәйәһен (повесть тип атау дөрөҫөрәк булыр) уҡып сыҡтым. Һәйбәт, тормошсан, ҡыйыу, үткер әҫәр. Хәҙерге замандағы матди һәм рухи ҡыйралыштар тураһында Рәшит Солтангәрәев ярып әйткән һүҙҙе Әмир Әминев дауам иткәйне, әле шул йүнәлеште Мөнир Ҡунафин үҫтерә.

Был өлкәлә Флүр Ғәлимовтың «Яңы башҡорт»о яңы һүҙ булды. Азамат Юлдашбаевтың хикәйәләре бик үҙенсәлекле. Рәсәй күләмендә баһа алған күренеш.

Бында актуаллеккә генә һуҡтырырға ярамай. Фәлсәфә, кинәйә, подтекст – йыш ҡына бына ошо сифаттар етмәй.

«Первое сентября» тигән газета сыға икән. «Газета основана Симоном Соловейчиком» тиелгән. Айына ике сыға, шәмбе көнө. Әле баш мөхәррир Артем Соловейчик. Тираж 15.444.

Ҡыҙыҡ ҡына баҫма. Терминдар менән башты бутау бында ла бар.

Элек яҙыусылар ваҡиғаларға баһа биргән, тенденцияларҙың үҫешен алдан күргән. Күренештәрҙе дөйөмләштереүсе яңы һүҙ һәм һүҙбәйләнештәр тыуған: герой нашего времени, лишние люди, маниловщина, обломовщина, нигилисты (Базаров) һ.б. Әҫәрҙәр нигеҙендә заманды анализлау: «Темное царство», «Луч света в темном царстве» һ.б. Белинский, Чернышевский, Добролюбов, Писарев...

Әҙәбиәт һорауҙар ҡуйған: «Что делать?», «Кто виноват?»

Хәҙерге иҫкәртеү, киҫәтеүҙәр. Распутин, Белов.

Фәлсәфә, подтекст.
Айтматов, манкуртизм.
Тарих һәм бөгөнгө.
Яңы тормош, яңы яҙмыштар.
Элекке ауыл прозаһы.
Хәҙер ауыл менән ҡала араһындағы кешеләр.
Әҙип һүҙе ғалим һүҙенән алда булған. Мәҫәлән, тарихи тема.
Күтәрелеш һәм һынылыш.
Төҙөлөш һәм һынылыш.
Р. Солтангәрәев, Т. Ғиниәтуллин, Ә. Әминев, Ф. Ғәлимов, А. Юлдашбаев, М. Ҡунафин. Заман темаһындағы үҙенсә эстафета.
Тел ярлылана бара.

Х. Тапаҡовтың «Ҡурсаҡ» хикәйәһендә («Ағиҙел», 2010, №1) Гөлкәй – ҡала ҡыҙы, русса һөйләшә. Әҫәрҙә шул көйө бирелә. Улай булғас, хәҙерге башҡорттарҙың байтағы хаҡында хәҙер русса яҙырға кәрәк, улар һөйләшкәнсә биргән хәлдә.

Бәндәләрҙе әжәл ҡыумай арттан,
Әжәл алда аңдып тора көтөп.
Һаҡтағы был ауҙан, был тоҙаҡтан
Сыҡҡаны юҡ бер кем урап үтеп.

Күп ашаһаң, аҙ ашарһың,
Аҙ ашаһаң, күп ашарһың.

1 март, 2010 йыл. Дүшәмбе.

23-дә көндөҙ бер тулыр алдынан Сибайға юлландыҡ. Биш сәғәттән элек торған люкста.

24-дә хакимиәт башлығы Айдарбәков Наил Фәтҡулла улында. Ялда булһа ла, осрашып алды. Тапаҡов, Гөлназ Аҡназарова булдыҡ. Унан һуң БДУ-ның Сибай институтында Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовта.

Көндәр буранлап тора. КП-ла өфөләрҙе – яҙыусыларҙы, йәштәрҙе ҡаршы алдыҡ. Театрҙа пленар ултырышты асып сығыш яһаным. Аҡназарова, Ғәзилә Бүләкова (институт), Хәйҙәр һөйләне. Артабанғы эштәрҙә ҡатнашып булманы. Хәйҙәрҙә аҙыраҡ ултырғас, юлға сыҡтыҡ. Төнгә ҡалһаҡ та, барғандағынан да тиҙерәк ҡайтып еттек.

25-дә Дәүләт йыйылышы. Президенттың мөрәжәғәте. Башҡортса, русса минең интервью.

Образлы, тапҡыр һүҙҙең көсөнә тағы ла инандым. Сығышын М.Ғ. Рәхимов «Хәрәкәттә бәрәкәт» тигән һүҙҙе ике ҡат ҡабатлап йомғаҡланы. Шул әйтем телмәрҙе ныҡ йәнләндереп ебәрҙе. Интервьюмды шул һүҙҙәрҙән башланым.

Шул уҡ көндө икелә аграр университетта мәғариф министрлығының йыйылышы үтте. Ошондай саҡтарҙа Ғамзатовтың «Сижу в Президиуме, а счастья нет» тигән һүҙҙәрен нисек иҫкә төшөрмәйһең. Һай елгә осҡан ваҡыттар...

2009 г. – концепция народного образования.

3-й год – обеспечение школьных библиотек.

Сентябрь 2011 г. – вводится новый образовательный стандарт.

27-дә театрҙың бәләкәй залында американ драматург Аллен Вудиҙың «Хәйерле иртә, Энид» тигән әҫәре буйынса спектакль. Мәскәүҙә эшләүсе Нәркәс Искәндәрова тигән йәш режиссер ҡуйған. Төп ролде Эльвира Юнысова уйнаны.

7 март, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

2–3 мартта Әбйәлилдә. Тәүге көн һайлаусыларҙы ҡабул итеү, китапханала осрашыу. Мәғариф, мәҙәниәт бүлектәре мөдирҙәре, уҡытыусылар, клуб хеҙмәткәрҙәре менән уҡыу залында осрашыу. Һүҙ әйткәндән һуң шиғырҙар уҡыным («Үҙеңде бел...», «Башҡорт йорто, башҡорт китабы», «Френд»). Зөһрә исемле пенсионер уҡытыусы «Хазина» тураһында бик һоҡланып һөйләне, дәрестәрҙә файҙаланығыҙ, тине. Күбеһе йәш уҡытыусылар, бик үк талпынмайҙар был поэмаға ҡарата. Бик шаулатмағыҙ тип, мәктәптәргә әйтеп ҡуйылғанға оҡшай.

3-дә III Ҡоролтайға 18 делегат һайлау үтте. 30%, тимәк 6 кеше йәштәрҙән. Аҙаҡ концерт. «Йәшлек» бейеү ансамбле Төркиәгә йыйына икән.

Һайлау ваҡытында йәштәр исеменән ғауға күтәрергә тырышыусылар һағайта. Ихлас ынтылыштары бик һәйбәт, әммә шуның менән уйнаусылар ҙа бар һымаҡ.

Иртәгәһенә, 4-дә, хакимиәт башлығы Рим Сыңғыҙов шылтырата. Уға Президент шылтырата икән. Уға йәштәр залды ташлап сығып китте, һайлауҙар дөрөҫ үтмәне, имеш, тип еткергәндәр икән. Тимәк, Президенттың башын бутарға тырышыусы мәғлүмәт системаһы ныҡ көйләнгән.

5-дә Ҡоролтай етәксеһе Ғәлин шылтырата. Кисә «Майҙан» үтте, унда Күсимова Азия һайлау дөрөҫ булманы, тип сығыш яһаны, ти. Мин әйтәм, ниңә һуң ул Асҡарҙағы йыйында шуларҙы һөйләмәне, үҙе президиумда ултырҙы бит, тинем. «Майҙан»да һөйләнгән һәр һүҙгә ышанырғамы ни, тинем.

Бөгөн мәсьәләләрҙе «Майҙан»да ғына хәл итеп булмаясаҡ. «Майҙан»дың Украинаны нимәгә килтергәнен донъя күрҙе бит.

4-дә БДУ-ла Айгөл Фәйзуллинаның кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлауҙа оппонент булдым. («XIX–XX быуат башындағы шиғриәтендә шәрек традициялары»). Унан һуң Союзда ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡотлау. 5-дә Дәүләт йыйылышында шундай уҡ тантана.

Кисә 18-дәге ғилми-ғәмәли конференцияға сығышымды әҙерләнем. Бөгөн тағы ла ҡарайым әле, өҫтәйһе фекерҙәр бар.

Кисә Артурҙар килде. Асҡар әүрәтә, матур булып ҙурая. Хәҙер минең ике Асҡарым бар: өйҙә лә, Әбйәлилдә лә. Асҡарҙа ошо хаҡта ла әйттем.

Күтәрелеш һәм һынылыш.
Төҙөлөш һәм ҡыйралыш.

Әбйәлилдә булғанда былар тураһында айырыуса уйландыра.

Мәскәүҙән «Селена» тигән ойошма урмандарҙы 49 йылға арендаға алған. 20 ауыл эшһеҙ ҡалған. 18 пилорама тик тора. Халыҡҡа йылына төҙөлөшкә 30 мең куб. ағас кәрәк. Хәҙер ул юҡ.

4 мәктәп ябылған, 2 урта мәктәп 9 йыллыҡҡа әйләндерелгән.

Районда 41 мең башҡорт, халыҡтың 88%. Милли генофонд. Бындай процент Баймаҡта ла юҡтыр. Булһа, Бөрйәндә булыр.

Ҡоролтай тик башҡортса барҙы. Шунда Әсхәл Әхмәт-Хужа – башҡорт шағиры – бер үҙе русса һөйләп тора. Бына ҡайҙа ул Хужа Насретдин!

Әбйәлил тураһында китаптың яҙмышы һаман да хәл ителмәй. Сыңғыҙов ныҡлап тотонам тигән булды инде.

Яҡтыкүл санаторийында ҡундым. Директоры Яппаров Ғәли Самат улы Хоҙайбирҙенән (Күгәрсен). Бындағы ял йорттарының 80 %-на магниттар хужа, беҙ 20%, тип һөйләне. Бына ҡайҙа илемдә илемде һағынам. Үҙ еремдә башҡалар хужа.

Иҫкә төшә иҫке һүҙҙәр:
Ҡунаҡ – хужаның ишәге.

Бәғзе ҡунаҡ күрһәтә шул
Ысынлап ишәк икәнен.
Бәғзе хужа күрһәткеләй
Үҙенең ишәк икәнен.

Кешегә ҡағылһа китап ене генә ҡағылһын!

Мәктәптәрҙәге ашханаларҙа күңел асыу, туй үткәреү тураһында бик асыуланып һөйләнеләр. Ысын булһа, әйтмәҫлекме ни?

Еребеҙ ҙә, телебеҙ ҙә ҡыҫылды.

20 йыллыҡ тормошобоҙ «Рәхимов – төҙөүсе!» тип әйткән һүҙҙәремде һәр яҡлап раҫланы. Әйтелгәйне 90-сы йылдар уртаһында.

III ҡоролтай делегаттарының 30% йәштәр булырға тейеш – дөрөҫ ҡарар. 1917–1919 йылдарҙа Башҡортостан республикаһын йәштәр төҙөгән: Вәлидигә – 27, Бабичҡа – 22 йәш һ.б. Шулар халыҡты күтәргән, шулар үҙәк менән тиң дәрәжәлә – достойно һөйләшкән.

Ул саҡтағы йәштәр менән бөгөнгө йәштәр төрлө шарттарҙа. Элек юғары мәғлүмәт тәрән тамырҙар менән берләшкән. Хәҙер йыш ҡына мәғлүмәт бар, тамырҙар самалы. Милли матбуғаттан, туған телдән, халыҡсан традицияларҙан айырылған йәштәр күп. Ерлеккә ҡайтырға тырышыу.

Башҡорт милләтенең нигеҙе башҡорт ғаиләһендә. Был һәр халыҡ өсөн уртаҡ хәҡиҡәт.

Халыҡты һиҫкәндереүсе, тертләтеүсе, ҡуҙғатыусы, уятыусы фажиғәле хәлдәр, аяныслы ваҡиғалар.

Икмәк ҡәҙерен, ҡот ҡәҙерен
Белһендәр тип, йот килер.
Йылы ҡәҙерен белһендәр тип,
Ҡаты һыуыҡтар килер.
Именлек ҡәҙерен белһендәр тип,
Туфан баҫыр, ерҙәр тетрәр.
Ҡарҙың ҡәҙерен, белһендәр тип,
Баҫыуҙың йылы юрғанын
Буран һыҙырып алып китер.
Бәндәләр байып шашынһа,
Донъяны кризис

Дер һелкетер,
Иман ҡаҡшаһа, инҡилаптар
Тормоштоң аҫтын өҫкә килтерер,
Донъя түңкәрелер.
Беҙҙең уяу аң ҡайҙа?
Аңына килмәйме бәндә
Һуҡмайса, шаңғымайса?

Тотош сәнғәт булған аҫыл һарайҙары вәхшиҙәрсә нисек емергәндәр, тип аптырайбыҙ. Ә бит иң бөйөк ижад – кеше. Уны нисек үлтерергә, хатта нисәмә миллиондарса ҡырырға мөмкин? Ул хаҡта сағыштырып уйламайбыҙ ҙа.

Питерға барғанда Павловский дворецының һуғыш осорондағы харабаларын һүрәттә күреп, әлеге балҡышы менән сағыштырып, шул турала уйланғайным. Әҙәм балаһы емерер өсөн ижад итәме, ватыр өсөн төҙөйме? Мәҫәлән, Чечняны тупҡа тотоп емерт тә шунан халыҡ тир түгеп йыйған ил ҡаҙнаһын, шунда тығып, яңынан төҙәт, имеш.

Быть или не быть российской школе означает быть или не быть самой России.

Быть или не быть, бить или не бить, пить или не пить, ныть или не ныть, будь или не будь…

Год Республики – суть ситуации определена этими словами. 20-летний путь нового Башкортостана – это два десятилетия созидательной деятельности нашего народа и нашего Президента. Это – целая эпоха, уникальный этап развития.

В истории башкирского народа, в истории Башкортостана не было такого длительного этапа развития, не было по масштабам такой личности как Рахимов, не было руководителя, который такое длительное время оставался на посту.

В своей созидательной деятельности М.Г. Рахимов многое совершил не только благодаря, а во многом вопреки сложившимся обстоятельствам, в упорной борьбе с противодействиями, в атмосфере не только поддержки, но и разнузданной клеветы, подстрекательства и предательства. Забота о народе, опора на народ – вот главный источник силы и вдохновения М.Г. Рахимова.

Во время гражданской войны войска Фрунзе теснили войска Валиди. Теперь Валиди вытеснил Фрунзе. Из домов в Уфе сняли

надписи с фамилией Фрунзе, заменили на Валиди. Донъя ҡуласа, әйләндереп килтереп бер баҫа.

Юҡ яҡшы үҙгәрештәр,
Эштәр һаман кәрештәр.

Кеше тыуыу мәленән үк үлеменә табан юл башлай. Һәр көн, һәр аҙым уны әжәленә яҡыныраҡ итә. Ләкин тормош дауам итә.

Икмәгем бөтә тип,
Ашамай тормайһың.
Аҡсам кәмей тип,
Тотонмай тормайһың.
Ғүмерем үтә тип,
Атламай тормайһың.

Туҡтап торһаң да,
Ваҡыт үҙе менән
Һөйрәп алып бара.

Шәберәк атлаһаң,
Күберәк үтәһең.

Халыҡтыҡын – ҡараҡтан.
Ҡараҡтыҡын – халыҡтан.

Элекке закондар халыҡ мөлкәтен ҡараҡтарҙан һаҡлай-ҡурсалай ине, хәҙерге закондар ҡараҡ олигархтарҙың урлап-талап йыйғанын халыҡтан һаҡлай.

Әбйәлилдәге күпме күлдәрҙә хәҙер халыҡ һыу инә алмай, балыҡ тота алмай.

Миңә Садыҡова Вәсилә биргән шиғырҙар:

Эй баш эймәҫ ғорур башҡортом,
Йөрәгеңдә һүнмәҫ ут ҡото.
Тере һыуҙай бөркөр бар ҡотоң,
Үҙенә ҡалмаҫ эсер бер йотом.

Ник боҫтоғоҙ, аҫыл егеттәр,
Сәхнәлә һеҙ сая бөркөттәр.
Иң изге һүҙ утлы йәшен кеүек,
Сәпкә алығыҙ, дошман өркөтөр.

Сал Уралда минең сал башҡортом,
Мал үрсетеп, хәләл көн күргән.
Изге ерҙе ситтәр йолҡколай бит,
Табайыҡсы тиҙерәк һәр әмәл.

Ерҙе, урманды һатып бөттөләр бит. Ә беҙ ни эшләргә тейеш?

2010 йыл. Март.

Тағы ла бер шиғыры бар, Палангинға төбәлгән. Бәләкәй генә инеш һүҙ яҙып, матбуғатҡа бирергә кәрәк, тип уйлап ҡуйҙым әле.

12 март, 2010 йыл. Йома.

Кисә комитет ултырышы үтте. Китапхана тураһында закон проектын беҙ әҙерләгәйнек (14 йәштән), ул Думанан үтте. Хәҙер шуға беҙ яңынан төҙәтмә индерәбеҙ иҫке законға.

Ултырышты төшкә тиклем үткәреүҙе һораусылар бар. Бәлки шулай уңайлыраҡ булыр.

Аймылыша тағы һай был яҙмыш,
Биреп бармай һәр саҡ тейешен.
Һин өлөшкә төшкән көмөш түгел
Һин төшөмә төшкән көмөшөм.

Он иләгән һымаҡ матур ғына ҡарҙар яуа. Көрттәр ҡабара.

Ашыҡмайса ғына Һауа
Ҡар иләй ҙә ҡар иләй.
Әйтерһең өҫтәл тултырып
Ап-аҡ он иләй инәй.
Эй яуа ҡарҙар, эй яуа!
Донъяны күмеп китмәк.
Ҡабарһын көрттәр!
Күпереп
Йыл буйы бешер икмәк!

Шамонинола йортто барып ҡараныҡ, нисегерәк бүлеү, ниндәй материал һ.б. тураһында һөйләштек. Был мәсьәлә әллә ни борсомай ине, кисә барып килгәс, егеттәрҙе күреп һөйләшкәс, нисектер дәртләнеп кителде әле. Төҙөмәй ҡалыу ярамаҫ һымаҡ.

Дәрдмәнд тураһында ҡағыҙҙарым өҫтәлдә ята. Мәҡәлә яҙырға уҡталам да туҡталам. Был ялда бәлки тотонормон.

Уҡталам да туҡталам,
Ҡаңғырып туҡтап ҡалам.

Берәүҙәр – шаһит,
Берәүҙәр – шәһит.

Берәүҙәр – тибә!
Берәүҙәр – кибә.

Кемгә – тантана,
Кемдәр – тапала.

Нимәләр генә
Кисермәй кеше –
Йыһандан оло,
Туҙандан кесе.

19 март, 2010 йыл. Йома.

16-да Президиум булды. Ҡоролтайҙа ҡараласаҡ мәсьәләләр буйынса докладтар. Льготаны (ветерандар) туҡтатыу тураһында мәсьәләне хөкүмәт индергән, социаль комитет ҡараған һәм ҡабул иткән. Беҙҙә лә закондарҙы туҡтатып тороу тураһында мәсьәлә (мәҙәниәт ҡомартҡылары, спорт буйынса паспорттар) ҡаралғайны. Хәҙер льготалар тураһындағы һүҙҙе ҡуйыртмаҫ өсөн минең комитетҡа ялғап, мин әйтәсәк һүҙ һуңғы пункт итеп өҫтәп ҡуйҙылар. Тәжрибәһеҙлегем арҡаһында һиҙмәй ҡалдым. Һорауҙар булыуы бар. Толкачевҡа инеп сығырға кәрәк.

18-дә ҙур залда (ОПЦ) ғилми-ғәмәли конференция үтте – Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтайҙың 15 йыллығына арналды. Толкачевтың доклады, Лаврентьевтан, Ямалетдиновтан һуң минең сығыш. Аҙаҡ телмәремде маҡтаусылар байтаҡ булды.

Ҡаҙаҡбаев йәштәрҙе эҙәрлекләүгә ҡаршы коллектив һүҙ әйтеүҙе һораны. Уфагубтың бысраҡ эштәре хаҡында бик урынлы һүҙ ҡуҙғатып була, ә йәштәр? Кемде нисек эҙәрлекләйҙәр һуң? Ниңә улар судҡа бирмәйҙәр? Һүҙ әйтер өсөн конкрет ерлек кәрәк бит.

Бишенсе яртыларҙа Ләлә Биишева, Тимерғәле Килмөхәмәтов Дамир менән Күгәрсенгә киттек. Өс сәғәт үтеүгә яҡты күҙҙә килеп еттек. Бында һуңғы ике йылда булмағайным. Таныш ҡунаҡхана, яландай номер. Егеттәр менән оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Бөтә донъя ҡоролтайында борсолорлоҡ хәлдәр етерлек.

Зәйнәп Биишеваға арналған альбомдың икенсе баҫмаһы элеккеһенән дә матурыраҡ булып сыҡты. Минең мәҡәлә менән башлана. Бөгөн бында килгәндәрҙең һәр береһенең был китапты тыуҙырыуҙа өлөштәре бар.

Зәйнәп Биишева менән күреп аралашыусылар күп булһа ла, һәр замандашына ул мөмкин булманы, әлбиттә. Әммә әҙибә барыһының да яҙмыштары тураһында борсолоп, тотош халҡын уйлап йәшәгән.

Зәйнәп Биишеваға һәр кем килә ала, аралаша ала. Уның китаптары аша.

2 апрель, 2010 йыл. Йома.

Зәйнәп апайҙан ҡайтҡас, теҙгенде бушатыбыраҡ йәшәп алынды. Фәриҙә Мәскәүгә китте, мин – иркен тибенгә. Ул саҡтарҙа күңелле лә ул, аҙаҡ тәртәгә инеп, йөктө тартып алып китеүе бик ҡыйынға төшә.

Ҡайһы саҡта гороскоптағы һүҙҙәр ысынға сығып ҡуя. Унда миңә – уҡсыға ҡарата әйтелгән: үткән аҙнала яуаплылыҡтан ҡасып йөрөй алдың, был аҙнала улай килеп сыҡмаясаҡ, тиелгән. Ысынлап та, 22–28 март араһында награда тапшырыу, Госсобрание, уҡытыусылар съезы һ.б. Барыһында ла мин ҡатнашырға тейеш инем, ауырып ҡалынды. Уның ҡарауы был аҙнала тын алырға ла ваҡыт юҡ. 30-да идара. Әле көнө буйы 5-дәге кисәгә әҙерлек менән сабыу. Өҫтәүенә башҡа эштәр ҙә табылып ҡына тора.

Яңыраҡ гәзиттә уҡыным: йылға боҙонда балыҡ тотор өсөн уйылған тишек арҡаһында (уны мәке тип булмай бит инде) бер балыҡсы икенсеһен сәнсеп үлтергән! Үҙгәрә ирҙәр! Элек башҡа өсөн үлтерештәр булған бит!

Ҡот осҡос шартлауҙар: Мәскәү метроһының ике станцияһында, Кизлярда бер-бер артлы.

Донъяны тротил һ.б. матдәләр генә шартлатмай, иң элек яман һүҙ, насар ҡотҡо шартлата. Башта иман емерелә, шунан ил емерелә. Башта рух тарҡала, шунан ватан, халыҡ тарҡала.

80-се йылдарҙың икенсе яртыһын иҫкә төшөрөгөҙ: ул ваҡытта TV хәҙерге һымаҡ бысраҡ булмағайны, әммә һатлыҡ матбуғат ни тиклем оятын юғалтып ҡоторона ине. Һатлыҡ яҙыусылар, һатлыҡ журналистар… Бөйөк дәүләттең юҡҡа сығыуын иң элек шуларҙың емерткес һүҙе ярҙамында эшләнеләр.

Һүҙҙән һаҡ булырға, рухты һаҡларға.

Башҡортостанға бер ваҡытта ла еңел булмаған. Бөгөнгө ҡатмарлыҡтар – үҙенсә ауыр. Йәштәргә һөжүм көсәйә. Был шулай уҡ бик мәкерле эш. Тимәк, милләттең хыялын емерергә, ҡанатын ҡайырырға тырышыу, киләсәген юҡ итергә киҙәнеү.

Һүҙҙең яуаплылығы һәр ваҡыт бөйөк ул. Тағы ла анау балыҡсыларҙы уйлайым:

Егеттәр һуғышыр булған
Ҡыҙҙар өсөн.
Ирҙәр бөгөн үлтерешә
Боҙҙар өсөн.

3 апрель, 2010 йыл. Шәмбе.

Беренсе апрель шаярыу көнөндә шаярырға ла ваҡыт булманы. Эштең бик тығыҙ саҡтары. Төп мәшәҡәт – «Хазина» кисәһенә әҙерлек. 1-дә опера театрында гимн авторы Фәрит Изрисовтың ижад юлына 30 йыллығы айҡанлы Госсобрание – Ҡоролтайҙың Почет грамотаһын тапшырҙым. Бөгөн – Эльвира Юнысованың 50 йәшлек кисәһе, уны ҡотларға кәрәк.

Төп ваҡиға кисә булды. Бик иҫтәлекле, тарихи көн. Өсөнсө яртыла торолдо. «Сәләм»дә «Хазина» кисәһе тураһында һөйләнем. Унан һуң кисә буйынса ойоштороу эштәре. Байтаҡ араны йәйәү үтергә тырыштым. Көтөлгән осрашыу. Госсобраниела билеттар. Кисен Сәнғәт академияһының театрындағы репетицияға барып етә алмам тип ҡурҡҡайным, хәлдән тайғайным. Тамашаны ҡарағас, яңынан тыуған һымаҡ булдым. Поэмаға ҡоролған был кисә ныҡ ялҡытып китмәҫме, тип ҡурҡҡайным. Мин көткәндән күпкә көслөрәк килеп сыҡты. Таңсулпан Бабичеваға рәхмәт, бик зур көс һалған, тотош шиғри спектакль тыуҙырған. Был тамашаны ҡоролтай алдынан ғына түгел,

халыҡ иҫәбен алырға әҙерләнгәндә лә барлыҡ Башҡортостан буйлап йөрөтөргә ине! Юғары етәкселекте лә кисәгә саҡырғы килә лә, ваҡыттары нисектер. Унан һуң йәш артистарҙың – студенттарҙың ҡаушап ҡалыуҙары ла бар.

Был тамашаны ҡарау ышаныстарымды арттырҙы, бик зур көс өҫтәгәндәй булды. Эшләргә эштәр бар әле. Яуаплылыҡты ла оноторға ярамай.

Аллаһ ҡоло, әҙәм балаһын аңлай алмайһың. Тулыһынса аңлай алмаясаҡһың да! Аллаһтың бөйөкләгән аңлап бөтөрә алмауыңа ниңә аптырайһың? Исмаһам, аңларға тырышыуың һәйбәт, үҫештең башы ла, рухи нығыныуҙың барышы шунда.

5 апрель, 2010 йыл. Дүшәмбе.

На финишной прямой – бөгөн әҙерлектәрҙең осо, иң яуаплы көн. Шуныһы сәйер: башҡа көндәр бик борсола инем, бөгөн тынысыраҡмын. Ашап туймағанды, ялап туймаҫһың, тиҙәр. Эшләнәһе инде эшләнгән, яҙғаны булыр. Таңсулпан Бабичева йәштәре менән кисә лә репетиция үткәрҙе. Мин барманым, минән унда әллә ни файҙа ла булмаҫ.

Тамаша бөткәс, миңә рәхмәттән башҡа әллә ни әйтер һүҙ ҙә ҡалмай һымаҡ, шулай ҙа һүҙ әйтеп, бер нисә шиғыр уҡып, йомғаҡларға кәрәк булыр.

Аҙаҡ Союзда фуршет ойоштормаҡсымын. Кисә көнө буйы Фәриҙә бешеренде, ике ҡаҙ әҙерләне. Альбина магазиндарҙа йөрөнө.

Шәмбе көн Академтеатрҙа Эльвира Юнысованың кисәһе һәйбәт үтте. Сценарий һәйбәт эшләнгән, интерьер ҙа уңышлы. Ғәҙәттәгесә, аҙаҡ һуҙылыбыраҡ китте. Банкетҡа ҡалманыҡ.

Көндәр йылы, ҡояшлы. Һуңғы ике көн ҡояшта йөрөп, битем ҡып-ҡыҙыл булып киткән. Был загар артығыраҡ ахыры.

Дәрдмәнд тураһында һәйбәт кенә мәҡәлә килеп сыҡмаҡсы. Яйлап ҡына яҙыштырам, әммә, бөтәһен онотоп, уға тотоноп булмай. Кисәгә әҙерлек мәшәҡәттәре бүлә. Кисәнән һуң комитетҡа әҙерләнергә кәрәк. Унан һуң Ағиҙел ҡалаһындағы, Ырымбурҙағы ҡоролтайҙар. Унан һуң – больница, диспансеризация. Шунда бәлки эшләп булыр.

7 апрель, 2010 йыл. Шаршамбы.

5-дә «Нефтяник»та «Аҡ тирмә»лә минең «Хазина» поэмаһы буйынса шиғри спектакль бик оло тантанаға әйләнде. Халыҡ һоҡланыуын әйтеп бөтә алмай. Сәғәт ярым барғандыр. Башта Ләлә

Биишева, унан һуң Ҡәҙим Аралбаев һүҙ әйттеләр. Иң элек минең «Бер һүҙ» шиғырына йыр йырланды.

Спектакль бик йәнле, етеҙ, йөкмәткеле барҙы. Йәштәр бер генә урында ла төртөлөп торманылар, һүҙҙәрҙе күңелдәренә ныҡ һеңдергәндәр. Йомғаҡлағанда, «Почтальон малай», «Тел осомда сай-сай…», «Башҡортостан бында башлана» шиғырҙарын уҡыным.

Зал шығрым тулы булды. Тышта лицейҙың тынлы оркестры уйнап ҡаршы алды. Аҙаҡ Союзда фуршет ойоштороҙоҡ.

Ошо спектаклде күберәк халыҡҡа күрһәтергә, район һәм ҡалалар буйлап үткәрергә ине. Ҡоролтай алдынан да, халыҡ иҫәбен алыу буйынса ла файҙаһы тейер ине, моғайын.

Бөгөн Президент эҙләй тип Толкачев приемныйынан шылтыраттылар. Ағай менән һөйләшеп алдыҡ. Матбуғат идараһы етәксеһен алдырам, ти. Унда милиционерҙың ултырыуы ғәйре тәбиғи хәл, әлбиттә.

13 апрель, 2010 йыл. Шишәмбе.

9–10 Ырымбурҙа өлкә башҡорттарының IV ҡоролтайында. Йыйын 10-да үтте, 130 делегат ҡатнашты. III Бөтә донъя ҡоролтайына 18 делегат һайланды. Сибайҙан концерт бригадаһы килде. «Китап» китап һатыу ойоштороҙо. Халыҡ дәррәү генә алды. Автограф биреүҙән бушап булманы. Яҡташтарым һәйбәт аралашып ҡалды.

9-да башта Зәйтүнә еңгәләрҙә булдыҡ. Илъяс, Зәкиә, Нәфисә Ҡарғалы осонда ҡаршы алдылар. Еңгәнең тыуған көнө икән. Нәҡҡәр апайым да унда ине. Беҙ Фәриҙә, Хисмәт, Дамир барҙыҡ. Ҡоролтайҙа Өфөнән Вильмир Аҙнаев, Нурислам Ҡалмантаев ҡатнашты. Беҙ Нәфисәнең өйөндә ҡундыҡ.

Кисә Союзда, Илишевтә оперативкала ҡатнаштым, дәүләт йыйылышында Президиум материалдарын ҡараным. «Китап»ҡа ҡулъяҙманы алып барҙым.

Бөгөн Президиум төштән һуң Мәскәүҙән Дәүләт Думаһы Мәғариф комитетының ултырышын бирәсәктәр, шунда бер нисә сәғәт әрәмгә китәсәк. Иртәгә Ағиҙел ҡалаһына ҡоролтай үткәрергә барырға.

Ырымбурҙа көндәр беҙҙәгенән һыуығыраҡ булды. Ул яҡтарҙа яландар ҙа ап-аҡ тиерлек ята.

Ҡаруанһарай тураһындағы талаптар Ырымбурҙағы башҡорт йорто-үҙәге тураһындағы һүҙҙәр – был хаҡта талаптар инде нисәнсе ҡуйыла. Был юлы ла резолюцияға индерелде.

15 апрель, 2010 йыл. Кесаҙна.

Кисә көнөнә Ағиҙел ҡалаһына барып әйләндек: Фәриҙә, Зөфәр Вәлитов, Дамир.

Был арала күңел тетрәнеүҙәре, ҡанатланыуҙары бик йышайып китте әле: 5-дә «Нефтяник»та «Хазина» кисәһе, 10-да Ырымбур башҡорттары ҡоролтайы, кисә Ағиҙел ҡалаһындағы осрашыуҙар.

Башта ҡаланың башҡорт гимназияһы менән танышыу. Президент инициативаһы менән төҙөлгән. Был региондағы тәүге башҡорт гимназияһы икән. 300-гә яҡын бала уҡый. 2003 йылдан Асҡын башҡорто Гөлфиә Әлфәтовна директор. Асылғанына 10 йыл. Балалар йырлап-бейеп, бал-бауырһаҡ менән ҡаршы алдылар. Ҡоролтай ошонда үтте. 75 делегат. Оло ҡоролтайға өс делегат һайланды. Халыҡ үҙенсә тупланған һымаҡ.

Иң ныҡ тетрәндергәне концерт булды. Президент эшмәкәрлегенә һәм минең ижадҡа арнап бик үҙесәлекле программа әҙерләгәндәр. Шиғырҙарҙан, поэмаларҙан, мәҡәләләрҙән, сығыштарҙан өҙөктәр бик уңышлы һайланған, бер-береһенә мәғәнәле, урынлы үрелгән.

Ҡала балаларының шул тиклем илһамланып башҡортса һөйләүҙәре, «Халҡыма хат», башҡа әҫәрҙәрҙән берәм-берәм өҙөктәр уҡыуҙары оноторлоҡ түгел, әлбиттә. Ҙур көс һалыныуы бер, бик яратып эшләнгән. Ниндәй уҡытыусыларыбыҙ бар, ниндәй йәштәр үҫә – быларҙы белмәйбеҙ. Күргәс, танышҡас, ышаныс арта, күңел күтәрелә, яуаплылыҡ һәм яуап тураһында нығыраҡ уйланаһың. Сценарийҙы директор үҙе эшләгән.

Ҡала етәксеһе Федоров Валерий Яковлевич бындағы эшһеҙлек, халыҡтың кәмеүе тураһында һөйләне. Уҡырға киткән йәштәрҙең ҡайтмауы айырыуса үкенесле, ти. Ҡайтырға эш юҡ.

Йәшелдәр хәрәкәтен заманында көнбайыш финансланы, беҙҙәге атом энергетикаһын үҫтермәҫ өсөн. Францияла әле 80% АЭС-тарҙан, беҙҙә 8% икән. Заманында мин дә бындағы төҙөлөшкә ҡаты ғына ҡаршы сыҡҡайным («Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһының һуңғы өлөштәре).

Милли сәйәсәттәге ыңғай үҙгәрештәр һәм һәйбәт ҡаҙаныштар. Федоров һөйләүенсә, бында башта ситуация бик ҡатмарлы булған. Әгәр совет йылдарында уҡ туған телдә уҡытыуға эҙмә-эҙлекле иғтибар бирелһә, был өлкәлә күпме эштәр эшләнер, күпме башҡорттар үҙҙәренең милли асылын аңлар ине.

Һуңғы егерме йылда ни тиклем эштәр эшләнде. Бер көн килеп шулар ҡыйралмаһын ине.

17 апрель, 2010 йыл. Шәмбе.

Көндәр һәүетемсә генә үтә. Әллә ни эш ҡыйратҡан юҡ. Яҙышыу түгел, әллә ни уҡығы ла килмәй. Хистәр ҡосағында бәүелеү. Күңелдә нимәлер туплана. Бөгөн Стәрлетамаҡҡа барабыҙ, «Хазина» спектаклен педакадемияла ҡуялар. Киләһе аҙнала больницаға ятырға йыйынам. Әле кеше бик күп тиҙәр, ә миңә айырым палата кәрәк. Бәлки аҙыраҡ яҙышып булыр.

Дәрдмәнд тураһындағы мәҡәләгә яңынан тәки тотоноп булмай бит. Ниндәйҙер көс әллә яҙыуҙы хупламай, әллә бик шәп итеп яҙырға ҡуша. Яңынан тотона алмайым, әммә ниндәйҙер эске әҙерлек һаман да барған һымаҡ. Иртәгә ултырып ҡарамаҡсымын әле.

Алда ҙур эш тора: V томға тотонорға кәрәк. Союзда саҡта өлгөрөргә тейешмен.

Шаһит та булдым,
Шәһит тә булдым.

Шәһитлектән шаһитлыҡҡа күсеү, шәһит булып янғандың инде шаһит ҡына булып ҡала барыуы еңел түгел шул ул.

Йыһандан оломон,
Туҙандан кесемен.
Йыһандың есеме –
Исемем кеше.
Йыһан күтәрмәҫте,
Йыһан кисермәҫте
Күтәрә кеше,
Кисерә кеше,
Үткәрә кеше.

Аймылыша һай тағы был яҙмыш,
Биреп бармай хәлəл-тейешен.
Өлөшөмә төшкән көмөш түгел,
Һин төшөмә төшкән көмөшөм.
Кем өсөн был донъя, кем өсөн?

18 апрель, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә Фәриҙә менән Стәрлегә барып ҡайттыҡ. Педакадемияла «Хазина» буйынса тамаша үтте. 550 кешелек зал шығырым тулы.

Күбеһе, әлбиттә, студенттар. Йөҙләп уҡытыусы саҡырылды, тинеләр. Тамаша һәйбәт үтте. Һәр хәлдә, Өфөләгенән ҡайтыш түгел. Егеттәрҙең, ҡыҙҙарҙың оҫталығы шымара барыр, тип уйлайым. Иртәгә спектакль БДПУ-ла була. Инеш һүҙ кәрәк булыр. Һис бер инешһеҙ башлап ебәргәнгә Стәрлелә тамашасы башта аптырабыраҡ ҡалды һымаҡ.

20 апрель, 2010 йыл. Шишәмбе.

Бөгөн, Аллаһ бирһә, больницаға ятамын. Кеше күп булыу сәбәпле һуҙылып килде. Кисә баш врач Азат Салауат улы менән ныҡлап һөйләштек, ас ҡарынлай килергә, тине. Айырым ятырға ине, аҙыраҡ яҙышып булмаҫмы тигән өмөт. IV томды ла тиҙләтәһе бар.

Бик матур ямғырҙар яуып тора. Ҡар ireп бөттө тиерлек. Көн ун градустан артһа ла, еле һыуыҡ.

Кисә БДПУ-ла «Хазина» кисәһе үтте. Башта сәғәт 5-кә ҡуйғайнылар, аҙаҡ 3-кә күсерҙеләр. Шуға ҡайһы бер егеттәр ритмдан сыҡҡылап китте. Аудитория ла сыбарыраҡ ине. Бынһы – өсөнсө кисә. Ҡайтышыраҡ үткән һымаҡ күренде. Тамашасыларҙың ихласлығынан да күп нәмә тора.

Ҡәҙим Аралбай инеш һүҙ әйтте. Ирек Кинйәбулатов булды. Хөкүмәттән Ф. Сыңғыҙов булды. Мәҙәниәт министрлығынан Заһир килгәйне. Бик шикарно, күрше өлкәләрҙә лә күрһәтергә кәрәк, ти.

Уяныу һәм яныу.

Талант бейеклеген аҡса менән яулап булһа, унда күптән олигархтар менеп ултырған булыр ине. Әл дә ул урынға Аллаһ үҙе тәғәйенләй, дәрәжәне үҙе бирә.

Төрлө хәйлә-йылғырлыҡ менән ул бейеклеккә үрләгәндәр ҙә аҙ түгел, әлбиттә. Ләкин һуңғы хөкөмдө барыбер ваҡыт үҙе сығарасаҡ, тигән булам мин, бер ҡатлы әҙәм.

Әле кис. Хәлдән тайып, койкала ятып, хәбәрҙәрҙе ҡараным. Һигеҙ тулмаҫ борон больницаға килеп урынлаштым. 519 палатала бер үҙем. Килеү менән ҡыҙыу ритмда эш башланды: ҡан биреүҙәр, УЗИ, ФГС, кардиограмма, ЛОР, теш, массаж тағы ла нимәлер. Бик күп тейешле ҡаратыуҙарҙы бер көндә ҡаралып өлгөрҙөм. Осрашыу ҙа әтәс тиҙлегендә булды. Урамда ла йөрөп өлгөрҙөм. Тик яҙышырға тотоноп булманы. Өмөт иртәгәһе көнгә.

Әмир Әминевтың «Бер кәмәлә» тигән повесын уҡып сыҡтым. Бөгөнгө прозала үҙенсә яңылыҡ, күренеш. Подтекст, символика. Тик Әмирҙең әйберҙәрендә символикаға ынтылыу образды ҡоротоп

ебәрә, уның эмоциональ тәьсире, әҙәмсә күңелде тетрәндереүе ныҡ кәмей. Образ формулаға әйләнмәҫкә тейеш.

Әминевтың телендә лә һут, һығылмалылыҡ, халыҡсанлыҡ етмәй. Ҡайһы саҡта бөтөнләй мәғәнәһеҙ, урынһыҙ һүҙҙәр. Повестың башында уҡ Аллаһы тәғәлә Нухҡа кәмә төҙөргә ҡуша, оҙонлоғо йөҙ илле, киңлеге егерме, бейеклеге ун биш метр булһын, ти. Нух заманында ниндәй метр ти ул? Исмаһам ҡолас тип алһын ине, 35-се биттә «роль уйнағандыр» тигән һүҙҙәр ҡолаҡты яра. Проза телеме ни? Повеста өләсәй бөтөнләй китапса, хатта гәзитсә һөйләшеп китә. Күп уҡыған, күп белгән кеше булһа ла, былай һөйләшеү тәбиғи түгел.

27 апрель, 2010 йыл. Шишәмбе.

Был дәфтәргә тотонорға форсат булманы. Больницаға ингәнгә бер аҙна ваҡыт үтеп тә китте. Йүгереп йөрөп, байтаҡ процедуралар үтелде. Бында мин дауаланыуҙан да бигерәк яҙышырға мөмкинлек булмаҫмы тигән өмөт менән киләм. Әле лә һәр буш ваҡытты файҙаланырға тырышып, Дәрдмәнд тураһында мәҡәлә яҙҙым. Кисә осона сыҡтым һымаҡ. Бөгөн дүрттән тороп, яңынан ҡарап сыҡтым. Өйгә ҡайтҡас, ҡайһы бер деталдәрҙе, фактҡарҙы тулыландыраһы бар. Тырышлығым бушҡа китмәне кеүек: үҙенсәлекле мәҡәлә килеп сыҡмаҡсы, Дәрдмәнд ижадына берәү ҙә былай ентекле төпсөнөү үткәргәне, бындай күҙлектән ҡарағаны юҡ ине. Ваҡыт күберәк булһа, тағы ла яҙаһы урындар бар ине. Мәҫәлән, Дәрдмәнд менән Туҡай параллелдәре… Ләкин былай ҙа ярайһы уҡ киң байҡалды. «Ҡазан уттары»нда сыҡһа, шәп булыр ине лә бит, улар баҫмаясаҡ, әлбиттә. «Ағиҙел»гә бирәм. «Ҡыҙыл таң»ға ла тәҡдим итмәксемен.

Талант бейеклектәрен аҡса менән яулап алып булһа, унда күптән олигархтар ултырыр ине. Дәрдмәнд ижадының алтын тамырҙары уның байлығында, капиталында түгел, халыҡтың рухи хазиналарына барып тоташҡан алтын тамырҙарында.

22-дә Дәүләт йыйылышында, 23-дә Яҙыусылар союзында ҡабул итеү Комиссияһы һәм идара ултырыштарында булдым. 8 яңы ағза ҡабул иттек. Балҡыштар юҡ тиерлек. Әҙәбиәт тип янып йәшәүселәр булһалар ҙа, ижад өсөн был ғына етмәй бит. Йәштәре лә оло.

Кисә Союзда иртән һөйләшеп алдыҡ. Унан һуң Илишевтә оперативка. Ярты сәғәткә һуңлап башланды. Үткәндә «Хазина» тураһында хат ҡалдырғайным, уҡыған оҡшамаған. Таңсулпан менән смета һымағыраҡ ҡағыҙҙар әҙерләгәйнек, йүнләп ҡарап та торманы. Иҫәпләп килтерегеҙ, премьер расходтарҙы ныҡ сикләргә ҡуша, ти.

Мәсьәләнең үҙәгенә үтеп, асылын аңлаһа, улай һөйләмәҫ ине. Ләкин был етәксебеҙ йыш ҡына дөйөм һүҙҙәр һөйләй.

Беҙ бит күп сығымдар талап итмәгән конкрет программа тәҡдим итәбеҙ. Шуны ла тормошҡа ашыра алмағас, Ҡоролтайға ниндәй әҙерлек була ти ул. Беҙҙең программа – халыҡ иҫәбен алыу алдынан да бик кәрәкле эш булыр ине. Минең үҙем өсөн кәрәкмәй бит, халыҡ өсөн кәрәк. Мин шуны етәкселәргә аңлатып йөрөргә тейеш буламмы?

Йәнде тентей тағы йоҡоһоҙ төн,
Юрғанымды йолҡа-һыҙыра.
Уянмаған хатта берәҙәк этмәр,
Бер яңғыҙым ҡала ҡыҙырам.

Яңыраҡ бер тапшырыуҙа һуғыштағы фашистарҙы соперник тип атайҙар. Тапҡандар сопернИктарҙы…

Һәр битарафлыҡты толерантлыҡ һүҙе менән аңлатырға, дөрөҫөрәге, аҡларға тырышыу иҫкә төштө.

Упҡын упты.
Дәүерҙәр даһиҙарҙы ла убалар.
Күбеһенән ҡалмай хатта убалар.

2 май, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

30-да таң менән больницала сотовыйға Ирек Кинйәбулатов шылтырата: төндә Роберт Баимов үлгән. Һәр үлем хәбәрен ишетеүе ауыр. Әммә Роберттың китеп барыуы бөтөнләй көтөлмәгән хәл булды. Бер ҙә зарланмай торғайны бит, тим. Ирек әйтә, көҙөн йөрәк менән больницала оҙаҡ ҡына ятып сыҡҡайны, ти. Әле лә йөрәк менән 18-се больницаға алып киткәндәр. Врач-фәлән ҡарамаған. Шул көйө үтеп киткән.

30-да больницанан сыҡтым. 20-нән 11 көн булдым. Көн дә капельница ҡуйҙылар. Бер услап дарыу. Массаждың рәте булманы, 2–3 тапҡыр ғына алдым.

Больницаға Флүр Ғәлимов ысын ҡылыс тотоп килгән. Таштар менән биҙәлгән. Юбилейыңа өлгөртә алманым, оҫтаһына сират, ти.

М.А. Зайцев та больницала ине. Хәҙистәрҙе бүләк иткәйнем (303 хадиса), бик оҡшатҡан. Шул китап өсөн генә лә халыҡ шағиры исемен бирерлек тип ебәрә. Китап яратҡан кеше икән.

Кисә университеттан Р. Баимовты оҙаттыҡ. Хушлашыу йыйынын яңы ректор Әхәт Ғәзизйән улы Мостафин алып барҙы. Зәйнуллиндан һуң мин һүҙ әйттем.

Бик мәғәнәле тап килеү: 30-да «Башҡортостан»да Р. Баимовтың ҙур интервьюһы сыҡты. Ә был ваҡытта уның йөрәге туҡтаған. Әҙиптең, ғалимдың йөрәге типмәһә лә, туҡтаһа ла, һүҙе халыҡҡа барыуын дауам итә.

Интервью «Һәр милләт бөйөк яҙмышҡа лайыҡ» тип атала. Бәлки дөрөҫтөр ҙә. Әммә ысын шәхестәре булғанда һәм дә улар күп булғанда ғына халыҡ бөйөк яҙмышҡа лайыҡ була ала. Роберт Баимов халҡыбыҙға көс өҫтәүсе шәхестәрҙән булды.

БДУ-ға былтыр 100 йыл тулды. Шул быуаттың яртыһын Р. Баимов БДУ менән бергә йәшәне: уҡыны, эшләне, ғалим һәм әҙип булып танылды. 30 йылға яҡын кафедра мөдире. Бындай яҙмыш һирәктәргә насип була.

Бер етди ғилми хеҙмәт яҙыу – ҙур уңыш. Әгәр ҙә ундай эштәрҙе ғалим күп тыуҙырған икән, ул оло хөрмәттәргә лайыҡ. Ә үҙеңдең мәктәбеңде, үҙ йүнәлешеңде булдырыу фәндә һирәк ваҡиға. Р. Баимов был йүнәлештә байтаҡ эштәр башҡарҙы, күп йәш ғалимдарҙы тәрбиәләгән остаз булды. Уның әҙәбиәтенең боронғо тамырҙарын барлауҙа үҙ концепцияһын раҫларға тырышыуы йыш ҡына бәхәсле һәм бик үк нигеҙле лә түгел ине. Хушлашҡанда уны «шәрҡиәтсе» тигән һүҙҙәр ҡабатланды. Әммә көнсығыш телдәренең һис юғында береһен белмәй, ғәрәп яҙыуын танымай, боронғо сығанаҡтарҙа йөҙөп эшләмәй тороп шәрҡиәтсе булыу мөмкин түгел.

Беҙҙең халыҡтың рухи үҫешендә шундай үҙенсәлек бар: беҙ күп түгелбеҙ, шуға төрлө эштәрҙе бер юлы йөкмәргә тура килә. Яҙыусыларыбыҙ – ғалим, ғалимдарыбыҙ – әҙип йәки шағир. Был Өмөтбаевтар, Риза Фәхретдиновтар заманынан килә. Амантай ҙа шағир һәм ғалим. Кейекбай, Харис, Чаныш, К. Мәргән, Ғ. Рамазанов, Ә. Хәкимов, Ә. Вахитов, В. Әхмәҙиев шулай. Әле лә Ғ. Хөсәйенов, Т. Килмөхәмәтов, М. Иҙелбаев, Р. Әхмәҙиев шул традицияларҙы дауам итә. Р. Баимов та ғалимлыҡ һәм яҙыусылыҡ эшен берҙәй яуаплылыҡ менән алып барҙы. Ижадтағы иң ҙур хеҙмәте – Зәки Вәлиди тураһында «Сыбар шоңҡар» романы.

Роберттың мыжығанын хәтерләмәйем. Башын баҫып эшләне. Зарланғаны шул ине: ваҡыт етмәй! Әҙәм балаһына бер ваҡытта ла

ваҡыт етмәй. Уның эшләгән эштәре, яҡшы хеҙмәттәре иһә ваҡыт сиген үтеп, киләсәккә күсә.

Кадрҙарға ҡытлыҡты танылған белгестәрҙе, тәжрибәле етәкселәрҙе һуңғы юлға оҙатҡанда нығыраҡ беләһең. Роберт Баимов 30 йылға яҡын етәкләгән кафедраны артабан кем алып китер? Йәшерәктәрҙән берәүҙе лә атап ҡына әйтә алмайым.

3 май, 2010 йыл. Дүшәмбе.

Бөгөн ял дауам итә. Бер-ике көн генә иректә йәшәп алһаң да кәйефтәр башҡаса.

Баҡсаға йыйына инек, Робертты оҙатып, барып булманы. Уның ҡарауы, кисә Дәрдмәнд тураһындағы мәҡәләмдең, ниһәйәт, эшен бөтөрҙөм. Больницала уҡ бөткәйне инде, ҡайһы бер факттарҙы өйҙәге китаптарҙан өҫтәйһе бар ине. Кисә бишенсе яртыла тороп, шулар менән булдым. Төшкә һуңғы нөктәне ҡуйҙым. Мәҡәлә ҙур ғына килеп сыҡты, 1 табаҡ самаһы. Әйтелгән фекерҙәр, күҙәтеүҙәр ҙә ҡыҙыҡлы һымаҡ.

Кисә яҡындағы урман-баҡсала оҙаҡ ҡына йөрөнөк. Асҡар арбаһында йоҡлай. Көн матур. Өйҙә лә Асҡар менән байтаҡ әүрәнем. Бүләреңде-правнугыңды күреү бәхеттең иң ололарынан түгелме ни?

Башҡорт ете быуынын белергә тейеш тигән ҡағиҙә, талап бар. Ә уның ҙур өлөшө кеше үҙе тере саҡта уҡ хасил була икән. Атайым яғынан Шәрәфетдин – Төхфәт – Рауил – Айҙар – Асҡар. Инәйем яғынан Латип – Рәҡиә – мин һ.б. Бына һиңә алты быуын. Быға тиклем ете быуынымды белә инем: Төхфәтулла – Шәрәфетдин – Хәсән – Мөхәмәтша – Ҡотлоәхмәт – Бикбай – Аҫылгәрәй. Быға тағы минән башланған дүрт быуын ялғанды. Бына һиңә 11 быуын. Шуның алтыһы – минең күҙ алдында.

«Советская Россия»ла Лениндың ҙур һүрәте аҫтында Зюгановтың «Курс в никуда» тигән мәҡәләһе баҫылған. «Полный текст выступления Председателя ЦК КПРФ в Госдуме по отчету председателя правительства РФ» тиелгән. Бик үткер телмәр. «Все громче звучит призыв: выразить недоверие этому курсу и этому правительству».

Дөрөҫ һүҙҙәр күп әйтелә лә ул… Бында ла бик урынлы, уҫал тәнҡит һәм хаҡлы талаптар. Әммә… Васька слушает да ест… Ҡайҙа үҙгәртеү юлдары? Ҡайҙа үҙгәртер көстәр?

«ЛГ»ла уҡыным: ҡаҙаҡтар 10 томлыҡ әҙәбиәт тарихын, өс томлыҡ сәнғәт тарихын һ.б. капиталь хеҙмәттәр сығарған. Фундаменталь баҫмалар дауам итә: 100 томлыҡ фольклорҙың 58 томы,

ҡаҙаҡ музыкаһы антологияһының 5 томы (бөтәһе 8 том буласаҡ), Мөхтәр Ауэзовтың әҫәрҙәренең 50 томлыҡ тулы баҫмаһының 42 томы донъя күргән. Бына ниндәй ҡолас менән бара ҡаҙаҡ ҡәрҙәштәребеҙҙең эштәре!!! («ЛГ», 21–27.04.10.)

Интервью с директором Института литературы и фольклора М.О. Ауэзова Сентом Каскабасовым.

8 май, 2010 йыл. Шәмбе.

6-да бик тығыҙ көн булды. Ике таҡтаташ астыҡ: Ленин урамында Нур Зариповҡа, Пушкин урамында Миҙхәт Ғәйнуллинға. Ике яугир, ике ғалим. Ҡорҙаштар. Икеһе лә йәшләй ут эсенә ингән. Миҙхәт ағай Европаның биш илен азат итеүҙә ҡатнашҡан, өс тапҡыр ҡаты яраланған, контузияланған. Икеһе лә Мәскәүҙә аспирантура бөтөрә, партия эшендә була. Нур Талип улы КПСС ҮК-да эшләй, Ғәйнуллин – обкомда. Артабан Нур Зарипов 1964 йылдан ИИЯЛ-да, Миҙхәт Ғәйнуллин 1961 йылдан БДУ-ла.

Муйыл, ҡырағай алмағастар сәскә ата. Көн йылы, хатта эҫе – 30 градустан артты. Өфөлә 29–30. Тик баҡсаға барып булманы. Ваҡыт етмәй.

6-да Дәүләт йыйылышында Комитет ултырышы үткәрҙем. Кисен Гостиный дворҙа «Пражский пивовар» тигән ресторанда ветерандарҙы ҡотланыҡ. Яугирҙәрҙең бөгөн иҫәндәре республикала 12 меңдән ашыуыраҡ. Беҙҙең Союзда алтау: Нәжип Асанбай, Суфиян Поварисов, Ғәбит Садиҡов, Әхәт Ниғмәтуллин, Азат Мағазов, Таһир Ахунйәнов. Таһир ағай килә алманы.

Телевидение тапшырыу өсөн ағайҙарҙы өс сәғәт яфаланы. Фондҡа индереп ҡалдырыу өсөн кәрәк, әлбиттә. Аҙаҡ бик оҙаҡ күңел асҡандар. Миңә алдан китергә тура килде, һыйҙарын ауыҙ итеп тә булманы.

Кисә Шамонинола биш сәғәт тиерлек йөрөнөк. Зөфәр Вәлитов Мәләүездән оҫталарҙы килтергәйне. Йорттан бик күп дефекттар таптылар. Ныҡлап талап ҡуйып, күп нәмәне яңынан эшләтергә кәрәк. Ярай әле ул егеттәр булды. Башта уҡ шундай оҫта ҡарамаған шул! Брус, мунса һөйләштем.

Кеше ғүмере сикләнгән. Ҡасан китерен алдан белмәһәң дә, йөҙгә еткәндәр һирәк. Ә ысын ижадтың, талантлы китаптарҙың йәшәү сиктәрен билдәләүе ҡыйын. Пушкин 200 йылдан ашыу йәшәй һәм йәшәйәсәк әле. Гомерҙар, Фирҙәүестәр меңәр йылдар йәшәй. Кешелек йәшәгәндә улар ҙа йәшәйәсәк.

Кеше булдыҡһыҙ була башлаһа, эштән телгә күскән, тиҙәр. Йәғни һүҙ һөйләүҙән артығын булдыра алмай.

Кеше үҙе был донъянан киткәс, исеме телгә күсә. Исеме халыҡ теленда, ил хәтерендә күпме йәшәһә, ул шул ваҡытта һаман да тере.

Кеше фәлән ваҡыттан фәлән ваҡытҡа тиклем шундай эштә эшләгән, шундай урындарҙы биләгән тип аныҡ әйтеп була. Ә бына яҙыусыны шул йылдан шул йылға тиклем яҙыусы булған тип атауы мөмкин түгел. Хәйер, улай тимә әле. Тере көйө үлгән яҙыусылар юҡмы ни?

12 май, 2010 йыл. Шаршамбы.

Кисә Зөфәр баҡсанан Шамониноға кәрәк әйберҙәрҙе Дәүләт йыйылышы машинаһында баҡсаға алып барҙы. Ришат, Дамир, Данис менән. Юлда гравий, цемент та алғандар. Ҡом килтерткән. Ут үткәргәндәр. Кесаҙна Мәләүездән оҫталар килә.

Бөгөн – президиум. Унан Конгресс-холға сабырға. «Российское педагогическое собрание» тигән ойошманың беҙҙә региональ бүлеген төҙөйҙәр. Сығыш әҙерләнем.

Байрам көндәрендә, 8-дә, Конгресс-холда тантаналы концертты, 9-да парадты ҡараным. Ныҡ әҙерләнгәндәр, тик барыбер элекке һымаҡ тамаҡҡа килеп тығылмай, күҙгә йәш килмәй. Әллә ул осорҙан алыҫлашабыҙ, әллә олоғайыу ғәләмәте, әллә был тантаналарға өйрәндек, әллә тейешле оҫталыҡ менән концертты ойоштора белмәйҙәр – барыһы ла барҙыр инде… Былтыр нығыраҡ тәьҫир иткәйне, әйтәгүр.

Байрамдағы өс көндә һәйбәт эшләнем. Дәрдмәнде, баҫылғас, төҙәтеп уҡып сыҡтым. Бик тоноҡ сыҡҡан, күреүе ауыр, саҡ осона еттем. Балҡандағы үҙемдең тәьҫораттарҙы, Фәриҙәләрҙең тормошон өҫтәнем.

«Ҡыҙыл таң»ға интервью яҙҙым, байтаҡҡа һуҙылып китте. Әлеге сығышты әҙерләнем.

Кисә тиҙ генә гараждан машинаға Аҙнағоловтан рөхсәт алып, Президиумға әҙерләнгән ҡағыҙҙарҙы алып, Союзда оперативка үткәреп, ун беренсе яртыла өйгә ҡайттым. Ун берҙә баҡсаға ҡуҙғалып киттеләр.

Аҙ ғына булһа ла ял итеү миҙгеле. Рәхмәт һүҙҙәре. Матурлыҡтар нығыраҡ арбай бара.

Көндәр эҫе. Ҡапыл ғына йәй булды ла ҡуйҙы. 10-да Тимерҙәрҙе саҡырҙыҡ. Артур беҙҙең өй янында (урам аша) күпереп сәскә атҡан

алмағас янында Асҡар менән фотоға төшөрҙө. Алмағастың сәскәләре ҡойолмаҫ борон төшөп ҡалайыҡ тип үҙем саҡырып килтерҙем.

Машинистка хаталары ҡыҙыҡ табыштар бирә. Дәрдмәнд тураһындағы мәҡәләләге «ҡанунлашҡан» һүҙен Рита «ҡарунлашҡан» тип баҫҡан. Ҡарунлашҡан ҡанундар – һәйбәт тә инде.

Элек тәүге китабыма ингән, студент саҡта яҙылған «Донъя бигерәк сәйер…» (туҙан тураһында) тигән шиғырҙағы «Елдәр туҙан йыйып узғанға…» тигән юлда «йотоп» тип хата ебәргәйне машинистка. Китапҡа шулай индерҙем. Аҡыллы, һәйбәт хаталар ҙа була ул.

Туғызынсы майҙа – Еңеү көнөндә – беҙҙең яндағы баҡсала беренсе һандуғас һайраганын ишеттем. Ҡош ҡотланы шулай көн башланғанда.

Юлда шым юлдашым.

Бөйөк йырҙар төрлөсә тыуа. «Священная война» бер көндә барлыҡҡа килгән – һуғыш башланыу менән үк. Хәҙер байрамдарҙа иң йыш яңғырағаны Тухмановтың «День Победы» йыры. Ысынлап та, бөйөк йыр. Әммә ул еңеүҙән һуң оҙаҡ йылдар үткәс тыуҙы. Еңеү нисек кенә ҡыуаныслы булһа ла, яраларҙан иңрәгән ил ҡапыл ғына әлеге йырҙағы күтәренке рухҡа бөтә күңеле менән килә алмағандыр. Гәрсә тиҙ арала тәүге Еңеү парады үткәрелһә лә. Аҙаҡ оҙаҡ йылдар буйына был традиция онотола. Аҙаҡ яңыса баһалар башлана. Шул тулҡында тыуа әлеге атаҡлы йыр.

7-дә Толкачев йыйып ҡотланы. Шунда әйткәндәренән хәтерҙә ныҡ ҡалды: беҙгә ҡаршы һуғыш асҡанда Гитлер ҡулында бөтә Европа илдәренең промышленность ҡеүәте булған, әллә 283 млн. кеше буйһонған. Беҙҙә 190 млн. самаһы кеше. Етмәһә, ярты ил дошман ҡулында ҡалған.

Элек беҙҙең үҙебеҙҙә РБ-лар бар, тип шаяртып була ине: РБ – Раил Байбулатов, РБ – Роберт Байымов. Инде бер РБ – Рауил Бикбаев ҡалды. Беҙ китербеҙ, әммә изге РБ – Республика Башҡортостан ғына йәшәһен! Башҡортостан иҫән булһа, беҙҙең һымаҡ РБ-лар тыуыр ул.

Шамонинола айныҡ йәшәүсе һәйбәт кенә башҡорт егеттәре оҫрай. Әммә йорттарҙы бик ашығып һалғандар. Күп нәмәне яңынан көйләргә кәрәк.

Һандуғасты күреүе ҡыйын, ә һайрауы барыһын арбай. Ҡарға күҙгә күренеп ҡарҡылдаһа ла, уны тыңлап моңайған кеше юҡтыр.

Ысын шағирҙың һүҙе бик күптәргә етһә лә, үҙен күрә алыусылар һирәк.

Ләкин әҙиптәр, шағирҙар халыҡ менән мөмкин тиклем йышыраҡ аралашырға тейеш. Бигерәк тә тираждар ныҡ кәмегән бөгөнгө заманда, китап һатыуҙың дәүләт системаһы емерелгән дәүерҙә.

17 май, 2010 йыл. Дүшәмбе.

Венер Аҙнағоловтың әсәһе үлгән. Ҡоролтайҙан бер төркөм Хоҙайбирҙегә апайҙың йыназаһына барырға йыйынып бөткәндә, мине Толкачев саҡыртып алды. Үҙе Күгәрсенгә китә. Миңә Президент администрацияһына барырға кәрәк, ти. Тороп ҡалдым.

Президент параолимпия спортсыларына ордендар, премиялар тапшырҙы. Ирек Зариповҡа БР-ҙың иң юғары ордены менән 7 млн. һум премия. Тағы ла ике кешегә 6,5 млн. һ.б. Бүләкләүҙәр күп. Ил башлығына рәхмәттәр яуһын! Бик изге эш булды.

Зәғиф спортсыларҙың ихтыяр көсө, маҡсатҡа ынтылышы үҙе ҙур ҡаһарманлыҡ. Һап-һау кеше әллә ни ҙур булмаған ауырлыҡтар алдында ҡаушап ҡала, ҡайһы саҡта хатта юлдан яҙа. Ә был зәғиф кешеләр ни тиклем ҙур йәшәү көсө күрһәтә. Ирек Зарипов ике аяҡһыҙ ҡалған. Ошондай хәлдә хәйер һорашып ултырыусылар, эскегә һабышҡандар бар. Уның өсөн ғәйепләп тә булмай. Ә был егет ни тиклем ныҡышмалылыҡ, ысын батырлыҡ күрһәткән. Бер юлы нисәмә алтын миҙал! Башҡортостан спортсыларының донъя күләмендәге был еңеүҙәре булмаһа, Рәсәй командаһы еңә алмаҫ ине, әлбиттә. Мәскәү вәкиле шундайыраҡ һүҙ әйтте.

Ләкин ҡайҙа һуң һап-һау егеттәрҙең, ҡыҙҙарҙың еңеүҙәре? Һуңғы олимпиадала Рәсәй командаһының хурлыҡлы ҡыйралышы! Мәсхәрә бит.

Беҙҙең илдә әллә ағзалары теүәл кешеләр зәғиф, ә зәғифтәр уларҙан һауыраҡмы?

Әмир Юлдашбаев шылтырата, Ҡоролтайҙа әйтеләсәк «Башҡорт халҡына мөрәжәғәт»те яҙыу миңә йөкмәтелә, ти. Мин бит икенсе ҡоролтайға ла яҙғайным, башҡа кешегә ҡушығыҙ, тип ҡараным – тыңламай. Бөгөн инеп сығырға кәрәк.

Көндәлектәрҙе барыһын бергә туплап, баҫтырып алырға кәрәк тә бит, йыя башлаһаң, бик күп килеп сығасаҡ. Аныҡ ҡына әйтеүе лә ҡыйын. Нисәмә блокнот, һанын да белмәйем. Әммә барыбер баҫтырып алырға кәрәк. Үҙем өсөн дә, башҡалар өсөн дә тупланып тороуы мөһим.

Дәфтәрҙәр һаны буйынса төркөмләргәме әллә йылдарға бүлеп бирергәме? Уныһын күҙ күрер. Баҫтырып алыуы бик ҡатмарлы буласаҡ.

Әллә олоғайыу ғәләмәте, әллә хис-хәтер һүрелә, әллә ул ваҡиғаларҙан алыҫлаша барабыҙ – әммә йылдар үткән һайын Еңеү көнө тантаналары элекке һымаҡ өтөп алмай. Элек был көнгә арналған концерттарҙа тамаҡҡа төйөр тығыла, күҙгә йәш килә торғайны. Хәҙер башҡасараҡ.

Хәйер, был хәл бөгөн генә башланмағандыр. Әле 1995 йылда «уҙғанды саң баҫа, ҡар күмә» тигән шиғырымда «мин һеҙҙе онота башланым», тип яҙғайным бит.

Хәҙер атайымды йышыраҡ уйлайым. Инәйем иҫән саҡта башҡасараҡ ине. Инәйем минең өсөн иң изгеһе булды. Ул беҙҙе аяҡҡа баҫтырҙы, иң юғары абруй ул булды. Атайым үлгәс, мин уны минут һайын һөйләгәнмен, ныҡ юҡһынғанмын. Беҙҙең өйҙәнме, яҡындағы ерҙәнме уның зыяраттағы ҡәбере ҡарайып күренеп торған. Гел шуға ҡарағанмын.

Аҙаҡ онотола барҙы. Инәйемдең абруйы ла бәлки атайымдың иҫтәлеген үҙенсә тоноҡландырғандыр. Ә хәҙер атайым нығыраҡ хәтергә килә.

20 май, 2010 йыл. Кесаҙна.

Бөгөн Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтай ултырышы. Беҙҙең комитеттың 4 мәсьәләһе.

II Бөтә донъя ҡоролтайындағы «Башҡорт халҡына мөрәжәғәт»те мин яҙғайным. Хәҙер тағы шул эште миңә йөкмәткәндәр. Һөйләшеп, кәңәшләшеп тороу юҡ.

Мөрәжәғәт өсөн күп мәсьәләләр шул көйө ҡала. Иң төп талаптар ғүмерлек булып ҡаласаҡ. Ләкин улар хаҡында яңыса әйтергә кәрәк бит. Яңы ҡараш, башҡа кешенең күҙлегенән байҡау. Шулай тип аңлатып ҡарайым да бит, һин яҙырға тейеш, тиҙәр ҙә ҡуялар.

Бюджетниктарҙы ҡыҫырыҡлаусы яңы закон. Дума ҡабул иткән, әммә иғлан итергә ҡурҡа күрәһең.

Образовательные услуги. Учитель – обслуга. Статус педагога.

Автономные учреждения – бик хәйләкәр, мәкерле яңылыҡ. Барыһын да дәүләт иңенән төшөрөү. Платные услуги. Халыҡты нығыраҡ талау, былай ҙа бөлгәнде нығыраҡ бөлдөрөү.

Не оптимизация, а пессимизация.

Яҡутстан тураһындағы шиғри шәлкемемде «Аҡ һәм ҡара төндәр» тип атағайным. Хәҙер яҙған булһам, «Аҡ төндәр, ҡара көндәр» тиер инем. Бында һөрөлгән башҡорттар араларҙы ниндәй ғазаптар күреп үткән. Бәлки аҡ төндәр миҙгелендә килеп еткәндәрҙер, ләкин көндәре ҡара булған.

Эй йәшлектең иҫәрлектәре!
Һағынып иҫләрлек иҫәрлек!
Иҫереп китерлек иҫтәлек!
Иҫтәрең китерлек иҫәрлек!
Ҡанаттар үҫтерер иҫәрлектәр…
Әлеге алтын аҡылыңдан
Аҡыллыраҡ иҫәрлектәр…
Эй аҡыллы иҫәрлектәр…
Эй ауан йәшлегем,
Иҫ киткес иҫәрлек.
Шул иҫәр саҡтарҙы
Һағынып иҫләрлек.

Төҙөлөш тип төрлө ергә сабам, аҙым һайын алдаҡ менән бәрелешәм. Элек кешеләр улай уҡ түгел һымаҡ ине. Әллә тәжрибәһеҙлек арҡаһында элегерәк аңлап еткермәгәнмен, алдауҙың алдау икәнлеген белмәй ҙә ҡалғанмын. Алдағандарын аңлаған һайын ҡыйыныраҡ.

Кешеләр нығыраҡ алдай,
Мин нығыраҡ ышанам.

23 май, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Йома «Ватандаш»ҡа Дәрдмәнд тураһында мәҡәләмде алып барҙым. Уны «Ҡыҙыл таң»дың баш мөхәррирә лә ҡалдырҙым, татар уҡыусыларына ла еткерге килә. Ләйсән Кәшфиева ошо гәзиткә интервью һорағайны. Яҙылды, тапшырылды.

Баҡсала Ҡоролтайҙың башҡорт халҡына мөрәжәғәтен яҙҙым. Баҫтырып алғас, ныҡ ҡына ҡарарға кәрәк.

Инде Комитеттың күсмә ултырышын доклад менән йомғаҡлауҙы, тел, мәғариф комиссияларында сығышымды, Ҡоролтайға телмәремде әҙерләргә кәрәк. Илешкә, Сибайға, Әбйәлилгә командировкалар көтә. Шырлыҡтарҙы йырып сығырға кәрәк, бик ҡуйы булмаҡсылар.

Йома көн мәғариф министры Аллаяров, юристар, беҙҙең ике Эльвира мәғариф тураһында законға үҙгәрештәр индереү проектын ҡарап, фекер алыштыҡ. Президент вәкиле Воробьева рәсми фатихаһын бирмәйенсә хәл итеү ашығыс булыр. Өҫтәүенә, Думала милли–региональ компонентты яҡлау буйынса беҙҙең һәм

Татарстандың Законопроекты һаман ҡаралмаған. Наил Йыһаншин да ашыҡмаҫҡа кәрәк, ти.

Татарстан стандарт буйынса үҙенең вариантын әҙерләгән. Танышырға кәрәк.

Бөгөн Шамонинонан Альбина аша оҫталар хәбәр итә: брустар етмәй икән. Йома баҡсаға барышлай Силәбе юлында материалдар ҡарап үткәйнем. Бик дөрөҫ булған. Бөгөн төштән һуң 12 брус, сороковка 75 таҡта, тридцатка 75 таҡта тейәтеп алып барҙым. 31 мең 50 һум. Аҡса ҡулдан аға ғына.

22 майҙа баҡса янында быйыл беренсе ҡат кәкүк тауышын ишеттем. Оҙаҡ саҡыра, сама белмәй һанай ҙа һанай. Әллә алтмышҡа етте инде. Ул тиклем йәшәү ҡайҙа инде ул…

Быуындар бәйләнеше үҫештең нигеҙе. Ләкин бәйләнештең мәғәнәһе ике төрлө: 1) ялғаныу, тоташыу, быуынға быуын үрелеү. Бынығы бик һәйбәт. 2) Ләкин бәйләнеү яман мәғәнәлә лә бар. Һуғышырға саҡырыу һ.б. Хәҙер быуындың быуынға бәйләнеүе йыш ҡына нәҡ шулай килеп сыға ла инде.

Толерантность Талейрана. Коварные дела под прикрытием толерантности.

Таңһаң ине шундай аулаҡ ауыл –
Ҡаҙ үләнле, йәшел хәтфәле…
Уйсан малай сағым!
Тынлыҡ булып,
Тик бер генә мәлгә ҡайт әле!

Ҡайҙа инде ундай тын аулаҡтар?! Донъяны сүп-сар баҫып бара. Иртән Лекаревка яғындағы тау битләүе буйлап үттем. Хозур сәхрәләр – ситтән ҡарап торғанда. Яҡын килһәң, соҡорҙар, үҙәктәр сүп менән тулған. Тау итәгендә еләк сәскә ата.

Гөл-сәскәле тау итәге,
Еләклектәр уйым-уйым.
Һағынып был хозурлыҡты,
Ҡайтыр инде ҡат-ҡат уйым.

Күңелем һынды, ҡанатым һынды…
Тик бер күҙ һирптең,

Кил тип ҡул һондоң –
Ҡанат кирелде, күңел талпынды.

29 май, 2010 йыл. Шәмбе.

Бик тығыҙ аҙна. Оперативкала 24-дә Илишев Төркиәлә Башҡортостан көндәре тураһында һөйләне. Кәрәк саралыр, мин дә ике ҡабат ҡатнаштым. Ләкин күрше өлкәләрҙәге башҡорттарҙы нығыраҡ хәстәрләргә ине. Төркиәгә киткән аҡсаға өлкәләрҙәге милләттәштәребеҙгә әллә күпме ҡыуаныс килтереп булыр ине.

25-дә TV осрашыу. Йән рәхәте тигән һүҙҙәр онотолмай ул.

26–27 Илештә башҡорт әҙәбиәте көндәре. Минең төркөмдә – Гүзәл Ситдиҡова, Мөнир Ҡунафин. Азамат Юлдашбаев төркөмөндә – Хәсән Назар, Таңсулпан Ғарипова. Беҙ тәүге көн Үҙәк китапханала, Ҡарабашта (мәктәптә), Рсайҙа (клубта) булдыҡ. Азаматтар – йәштәр үҙәгендә, Иҫке Күктауҙа, Бишҡурайҙа. 27-дә беҙ 86-сы профлицейҙа, Йонос ауыл клубында, район үҙәгендә ауыл хужалығы идаралығы, пенсия фонды, социаль яҡлау, информцентр һ.б. хеҙмәткәрҙәр менән осрашыу. 2-се төркөм район больницаһында, Сереккүл ауылында. Йәркәйҙә булды.

Шул уҡ көндө РДК-ла йомғаҡлау киҫәһе. Илештә ҡаршылау, ойоштороу, оҙатыу, ҡунаҡ итеү традицияларының элеккесә һаҡланған әле. Тик осрашыуҙарҙа ололар аҙыраҡ, күбеһе бала-саға.

Тәьҫораттар айырым мәҡәләләргә яҙылыр. «Башҡортостан»ға разворот бирергә уйлайбыҙ, фотолар менән.

30 май, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә көнө буйы ямғыр яуҙы. Бөгөн аяҙ. Көндәр һыуыҡ. Иртән йөрөгәндә хатта ҡул өшөнө. Ҡырау төшкән ерҙәр булғандыр.

Бөгөн таңдан Илеш битенә мәҡәлә яҙа башланым. Төшкә бөтөрҙөм. 6-сы биткә сыҡты. Баҫтырғанда бәлки артып та китер.

Китапханала һәр ауыл-ҡаланың төп байлығы тупланған. Банктар бөлөргә, аҡсалары янырға йәки хаҡтары төшөргә мөмкин. Китапхананың төп хазинаһы арзаная белмәй, ҡиммәттәре мәңгелек. Илештәге осрашыу шул изге урында башланды.

Халыҡтың ҡанундары, фәлсәфәһе – мәҡәлдәрендә.

Мосолман дине кеше рәсемен төшөрөүҙе тыйған. Биҙәктәр, орнаменттар, каллиграфия өлгөләре генә биҙәү өсөн рөхсәт ителгән. Һүрәттәге кеше рәсеме йән һорай, тигәндәр. Рәссам бит былай ҙа үҙенең әҫәрҙәренә үҙенең йәнен бирә. Шунда ғына уның ижад иткәндәре йәшәй, картиналары тере була.

Асылда һәр ижадсының яҙмышы шулай инде ул.

Аллаһ яҡшы ла, яман да түгел. Ул – абсолют көс, иң юғары хәҡиҡәт. Ул беҙ белгән төрлө сифаттарҙан азат. Уның өсөн ваҡыт менән ара сиктәре лә юҡ. Кеше аҡылы етмәҫлек.

Бер кәңәшмәлә рус теле уҡытыусыһы сығыш яһай. Әллә ниндәй эксперименттар тураһында һүҙ бутҡаһы. Әммә рус теленең бөгөнгө аяныслы яҙмышы, уны имгәтеүҙәр тураһында бер һүҙ ҙә юҡ. Әгәр рус теле уҡытыусыһы шул хаҡта саң ҡағып һүҙ әйтмәгәс, башҡаларҙан ни көтәһең…

Илештә ишетелгән бер һүҙ иҫтә ҡалды. Тормоштағы етеш-неҙлектәрҙе төҙәтә алырлыҡ хәл иткес эштәр эшләй алмауҙарына берәү: «Янғынды ҡарап тороусылар ғына беҙ», тип бик тапҡыр әйтте. Янғынды һүндерерлек сара таба алмау бик аяныслы. Ләкин ҡарап тороусылар ғына түгел, янғынды тоҡандырыусылар, уға ялҡын өҫтәүселәр ҙә бар бит әле.

8 июнь, 2010 йыл. Шишәмбе.

1–3 июндә Сибайҙа, Әбйәлилдә. 1-дә Сибайҙа беҙҙең Комитеттың күсмә ултырышы. Тема: «Хәҙерге Башкортостан Республикаһында мәҙәниәт үҫешенең ҡануни нигеҙҙәре».

Башланыр алдынан Вәлиди һәйкәленә сәскәләр һалыу, балаларҙың художество мәктәбенә, ижад үҙәгендә булыу, төҙөлөп ятҡан ябыҡ катокты ҡарау. Оло ваҡиға: Сибай институты алдында Зәйнәб Биишеваға һәйкәл-бюст асыу. Быға тиклем Ш. Бабич менән Р. Ғарипов тора ине. Тағы ла Һәҙиә Дәүләтшина өҫтәләсәк, тине Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов. Шул тиклем шағирҙар, әҙиптәр ҡаршы алған башҡа уҡыу йорто, моғайын, донъяла юҡтыр.

Беҙҙең эш А. Мөбәрәков исемендәге Сибай драма театрында башланды. Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре йыйылған. Хакимиәт башлығы Фәим Фәтҡулла улы Айҙарбәковтың сәләмләүе, минең, министр урынбаҫары И.И. Мәхмүтованың, администрация башлығы урынбаҫары Илгиз Рәхимйән улы Хәйруллиндың доклады, театр директоры Д.М. Ғәлимовтың, филармония директоры Вәкил Йосоповтың, балалар театры директоры Гөлнара Вәлитованың сығыштары, һорауҙар-яуаптар.

Артистарҙың эш хаҡы бигерәк түбән тип әсенәләр. Йәштәр 4 меңгә нисек йәшәргә, сит квартирала торорға, ғаилә ҡоророға тейеш? Китапханалар, клубтар автономиялы учреждениелар системаһына күсһә, үҙҙәре аҡса табырға тейеш була.

Халыкты мәҙәниәттән айырыу, мәҙәниәт усаҡтарын һүндереү йәки шәхси ҡулдарҙа аҙғынлыҡ ояһына әйләндереү.

18 июнь, 2010 йыл. Шәмбе.

Сәфәрҙәрҙән тәьҫораттарҙы ҡайтҡас та яҙып ҡуйырға кәрәк. Ләкин ваҡыт еткереүе ҡыйын. Сибай, Әбйәлил яҡтарында тәьҫораттар бик күп булды. 2-дә Арҡайымға алып барҙылар. Тирмә ҡорғандар, һарыҡ һуйғандар. Бишбармаҡ. Шаман тауында ялан аяҡ йөрөү. Ваҡ үткер таштар. Аҙаҡ табан яна, баҫыуы ҡыйын.

Шул уҡ көндө театрҙа минең «Хазина» буйынса шиғри спектакль аншлаг менән үтте.

Ҡолтабанда (Яугул) һыу өҫтөндәге ҡоролмала ял, глава Айдарбәков Фаим Фәткулла улы үҙе алып барҙы. Унан һуң Хәйҙәр Тапаков менән «Шифа» балалар лагерында.

Әбйәлилдә һабантуйына ҡал, тиҙәр ине. Ваҡыт тығыҙ. Бөтә донъя ҡоролтайына әҙерләнергә кәрәк.

Ҡоролтай «Нефтселәр» һарайында 10-да 2.30-ҙа асылды. Уны асып ебәреү бурысын миңә йөкмәттеләр. 11-дә ике секцияла – тел, мәғариф – ике доклад һөйләнем. 12-дә Торатауҙағы Салауат йыйынына барманым. Баҡсала.

Әҙерлектәр бик арытҡайны, 17-дә Госсобраниела ла ҡатнашып булманы. Бөгөн В.Ғ. Аҙнағоловҡа индем, телефондан эҙләп таба алмағандарына шелтәләп алды, әлбиттә. Ауырыным тигәс, ауырыу кеше дауаланырға тейеш, ти. Шунда уҡ РКБ-2-нең баш врачы Х. Мостафинаға шылтыратты. Бына 523-сө палатала бер көн үтеп тә бара. Капельницалар, дарыуҙар.

Бында бер нисә көн эшләп алғанда ла насар булмаҫ ине. Нисек килеп сығыр

22 июнь, 2010 йыл. Шишәмбе.

Ҡайһы берәүҙәр хәҙер йыш ҡабатларға яратҡанса, дауаланыу әүҙем бара. Ике тапҡыр система, һәр һалғанда 3-4 шешә тамыҙалар. Панкреатитҡа көс төшкән. Килгән көндө кис ныҡ ауыртып алды. Өсдүрт көн ас тоттолар: сәй ҙә сохарий. Панкреатитты дауалау алымы шулай. Әкренләп нормаға ҡайтып киләм. Шәмбе-йәкшәмбе эшкә барып әйләндем. Бөгөн дә йөрөп килергә кәрәк.

24-дә бик тығыҙ көн. Иң ныҡ борсоғаны – мәғариф тураһында законға үҙгәртеүҙәр комитетта ҡараласаҡ. Милли-региональ компонентты юҡ итеүгә ҡоролған. Бөтөн тырышлыҡтар бушҡа булып сығамы?

Яҡуттарҙың үҙгәртеүҙәре бер ҙә улай түгел. Татарҙарҙыҡы буталсыҡ, аңлап еткермәнем.

Был дәфтәрҙәге шиғри яҙмаларҙы ҡарап ултырҙым, айырым биттәргә күсереп ҡуйҙым. Арыу ғына юлдар ҙа бар, әммә тетрәнеү самалы.

Эшкә нығытып тотоноп китке килмәй. Ҡоролтайға әҙерлектәр ныҡ арытҡан.

Кисә Твардовский тураһында 100 йыллығына арналған оҙон ғына тапшырыу ҡараным («Культура»), капельница алып ятҡанда. Бик ныҡ тәьҫир итмәне, шулай ҙа информация бар. Уның да уңыштары менән ҡыйралыштары аралаш килгән икән. Исмаһам, иҫкә алыуҙары һәйбәт булды. TV-ла (үҙәк) әҙип тураһында һүҙ бөтөнләй юҡ бит.

Шылтыратып торалар. Ҡәҙим килеп китте. 24-дә идара. Ишек алдындағы сәскә түтәлдәре иҫ киткес матур. Хәҙер эшләй беләләр. Көндәр ҙә матур (беҙҙең өсөн), ә илдә ҡоролоҡ.

26 июнь, 2010 йыл. Шәмбе.

35 градус эҫе көндәрҙең хәлдән тайҙырғанына түҙер ҙә инең, донъяны көйҙөрөп бөтөрөп бара – шуныһы яман. Утыҙлап районда ҡоролоҡ, иген бөтөнләй юҡ. Бесәне лә юҡ тиерлек. 1975 йылғы ҡоролоҡ һымаҡ. Бигерәк тә көнъяҡ-көнсығыш райондарҙа хәлдәр үтә ауыр. Хатта малға эсер һыу ҡалмаған, ташып эсерәләр. Еткереп ҡара, хаҡы күпмегә төшәлер.

Бында яңғыҙ йәшәһәм дә, ваҡыт булһа ла, әллә ни эш ҡыйратҡан юҡ. Беренсенән, арытҡан. Икенсенән, 22–23 әллә ниндәй тымау хәлде алды. Эшкә йөрөштөргәйнем, шунда кондиционер һуҡты, ахыры. Быуындар һыҙлай, хәл бөтөп, сөскөрөп-бышҡырып саҡ йөрөнөм. 23-дә кис укол яһатҡас, шыбыр тир булып уянып киттем. Шунан күҙ асылды, быуын да яҙылды. Кәңәшмәләргә барырлыҡ хәлгә килдем.

24-дә сәғәт өстә комитет ултырышында һигеҙ мәсьәлә ҡаралды. Иң сетереклеһе – мәғариф тураһындағы закон проекты. Ошоноң менән милли-региональ компонент аҙаҡҡаса юҡҡа сығыр, ахыры. Мин ҡаршы һөйләп ҡараным, эш төркөмө төҙөргә тәҡдим иттем. Әммә һәйбәт һөҙөмтәгә өмөт юҡ.

Маяковский писал, что наступил на горло собственной песни, когда в угоду политики жертвовал поэтикой. Когда Госдума принимает некоторые антинародные законы, мне вспоминаются эти горь-

кие слова поэта. Такие законы наступают на горло собственного народа. Закон №309 от 1 декабря 2007 года наступает на горло родных языков, душит их. И такие разрушительные документы появляются в стране, политическое устройство которой основано не на земельных, а национально-территориальных принципах федерализма.

Конституционные права граждан на обучение на родном языке теперь остаются лишь на уровне ведомственных инструкций и стандартов, которые сегодня дают какой-то просвет, а завтра окончательно закроют пути. А принятые Законы всегда останутся Законами.

Сколько было споров в Госдуме, на совещании в Казани, принципиальные возражения Президентов РБ и РТ, митинги, письма, протесты и др. И все безрезультатно.

Вопрос политический, вопрос о политических правах. В Госдуме в течение двух лет не рассматриваются законопроекты Парламентов РБ и РТ о компонентах. Бесправие субъектов.

Мин ошолайыраҡ һөйләнем. Яҡуттар бик үзенсәлекле Закон ҡабул иткәндәр, ул хаҡта ла әйттем.

Сәғәт 5-тә Яҙыусылар союзында идара ултырышы үтте. Ярты йылдағы эштәр хаҡында һөйләнем. Салауат премияһына кандидаттар Әсхәл Әхмәтҡужин, Муса Сиражи, Ринат Камал, Барый Ноғоманов, Риф Мифтахов, Йыһат Солтановтарға йәшерен тауыш менән һайлау үткәрҙек. Камал – 11, Йыһат – 6, ҡалған 4 тауыш бүленгән, Мифтахҡа – ноль. Йыһат Солтановҡа күпселек тауыш булыр, тип уйлағайным. Камал «Китап»та мөдир булмаһа, бәлки шулай килеп тә сығыр ине. Күбеһе үҙенең китабын уйлай шул. Был мөхиттән күңелем тағы ла нығыраҡ һүрелде.

Ямай өҫтөнә ямау,
Ҡамау өҫтөнә ҡамау.

Темеҫкенеп йөрөй меҫкенең…

Кемгә – икмәк, кемгә – ирмәк.
Икмәк юҡта ирмәк тә юҡ.

Уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк.
Һәнәк-көрәк. Һоҫоп-көрәп.
Уяу-зирәк. Зирәк аҡыл, уяу йөрәк.

Уйһыҙ башым кешеһеҙ өй, ташландыҡ йорт һымаҡ. Тонған күҙҙәрем ҡаҙаҡланған тәҙрәләр һымаҡ.

Тәрән тамырҙар ауыр саҡтарҙа ла ҡотҡарып ҡала шул. Баҫыуҙар, бәләкәй генә тамырлы игендәр һарғайып кибеп бөттө, ә ерҙең тәрән ҡатламдарынан һут һурыусы ағастар йәшел көйө тора.

«Оноторлоҡ булдымы ни?» тигән китабымды (Ҡазан) ҡараштырып ултырҙым. Үҙеңде үҙең уҡып алыу ҙа кәрәк ул. Үҙеңдән дә өйрәнә белергә.

27 июнь, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Көндәр һаман да бик эҫе. Көндөҙ тын алырлыҡ түгел. Иртәнге матур еләҫ һауала бер сәғәт йөрөп, һелкенеп керәм. Ҡаршылағы элекке Луначарский баҡсаһында рәхәтләнеп ҡаҙ үләнендә ялан аяҡ йөрөнөм. Аҙ ғына ысыҡ бар. Башҡа үләндәр һарғайғанда, ҡаҙ үләне йәм-йәшел көйө. Быға иғтибар иткәнем юҡ ине: ҡоролоҡҡа бирешеп бармай, күрәһең. Баҡсаға газон үләне сәскәнсә ошо ҡаҙ үләне түшәлеп үҫһен ине.

«Берәр шиғыр» тигән баҫма әҙерләү күңелдә күптән тыуғайны, тик, нисектер, онотолғайны. Әле шул фекер яңынан тынғы бирмәй башланы. Хәҙер структураһы ла нығыраҡ асыҡлана барғандай. Һәр шиғырға бәләкәй генә комментарий һәм ике телдә әҙерләргә. Нисә шағир йыйылыр, әлегә әйтеүе ҡыйын. Һәр хәлдә, һәр шиғыр яҙған автор түгел, күңелемә яҡындары ғына. Бәлки шундай талап та ҡуйырға кәрәктер: һәр шиғыр берәр биттән артмаһын. Ул сағында һәр шағирға өс бит бирелә: ике телдә ике бит шиғыр, ике телдә ярты-шар бит аңлатма һүҙ. Әгәр ҙә 100 шағир икән – өс йөҙ битлек күләм, 12 табаҡ. Ошо күләм бәлки самаға тура килерлектер.

Һуғышҡа тиклемге дәүерҙе барлап ҡарайыҡ: «Урал» йыры, Салауат, суфыйҙар, Аҡмулла, Ғафури, Бабич, Ниғмәти, М. Хәй, М. Харис, Х. Кәрим, Ә. Вәли, С. Кулибай, Ғ. Әмири, Ҡ. Даян, З. Биишева, М. Кәрим – егерменән артып китә. Исеме: «Йөҙ шағир – берәр шиғыр» – «Сто поэтов – по одному стихотворению».

Һәр хәлдә, уҡымлы ла, мәктәптәр өсөн кәрәкле лә китап килеп сығыр ине.

Ҡайһы бер күренештәргә, әйберҙәргә һ.б. ҡыҫҡаһы, айырым һүҙҙәргә «башкирский» тигән сифат аҡтарып алмаҫлыҡ итеп ҡушылған: башкирский курай, башкирский эпос, башкирский узун кюй, башкирская пчела, башкирский мед, башкирский кумыс, башкирский курут, башкирская лошадь, башкирский танец, башкирская

буза һ.б. Быларҙың барыһын башкирская земля, башкирский язык, башкирский народ, башкирская государственность тигән нигеҙҙәр берләштерә. Рәхимовтар күп, башкирский Рәхимов берәү генә. Дивизиялар күп, Башкирская кавалерийская дивизия берәү генә.

Был һүҙҙәр милли маһайыу йәки кәпәренеү түгел, барҙы атап китеү генә.

Халыҡ эҫенән әлһерәйҙер, баҡсаларға киткәндер. Тынғы бирмәгән кеҫә телефоны тын тора. Хат та, шылтыратыу ҙа юҡ. Бындай тынлыҡ сәйер икән. Гел һөйләшеп өйрәнгәс, телефондың өндәшмәүе бисәңдең үпкәләп өндәшмәгәне һымаҡ. Элек ошолайыраҡ яҙғайным: «Һағыш менән мөлдөрәмә тулған кәрәҙ телефоным кәрәҙҙәре». Әле лә шулай.

29 июнь, 2010 йыл. Шишәмбе.

Ҙур афәт. Ҡырҡлап райондың игене, үләне көйөп бөттө тиерлек. Яңы ғына 6,5 млрд. һумлыҡ зыян тиҙәр ине, кисә 7 млрд., тип әйтәләр. Мал ныҡ ҡыҫҡарыр инде. Ғәҙәттән тыш хәл. Халыҡ эҫелектән әлһерәй, әммә бәндә түҙер. Ҡоролоҡ килтергән бәләләрҙе нисек еңеп сығырға?

Кисә көтмәгәндә аритмия башланды. Ике рәт кордарон системаһын да ҡуйып ҡаранылар, үҙем дә врачтарҙан йәшереп 4 төймә кордарон ашап ҡараным – үтмәй. Өс тапҡыр ЭКГ килтерҙеләр – аритмия күрһәтә. Үҙем уны торғас та һиҙгәйнем, тик иғтибар итмәгәйнем, үтеп китер тип уйлағайным. Иртән уянып китһәм, ритмға ингән.

Кисә иртән рәхәтләнеп ҡаҙ үләнендә ялан аяҡ йөрөнөм. Ныҡ булмаһа ла ысыҡлы. Баҡсала ишек алдында шундай үлән үҫкән ерең булһын ине.

Баҡсалағы аҡҡоштарға күл ситендә кескәй генә өй бурағандар. Шунда ҡуналар. Юғиһә былтыр эт үлтергәйне. Ҡоштарҙы кисен унда индерәләрҙер инде – ашарға өйрәткәндәр микән?

Иртән мин йөрөгәндә аҡҡоштар ярҙа ине. Туйтаҡлап атлап һыуға килделәр. Ҡоро ерҙә улар бер ҙә матур, зифа түгел. Һыуға төшкәйнеләр, ысын матур аҡҡоштар булдылар.

Һәр кем, һәр нәмә үҙ урынында матур, үҙ урынында балҡый. Унан айырып алдыңмы – төҫһөҙләнә, хатта йәмһеҙләнә.

Ҡайһы сағта ҡыҙыҡ булып китә
Уҡыуҙары хатта үҙеңде:

Аптырайһың ҡайсаҡ ҡылғанына,
Тапмағанға ҡайсаҡ түҙемде
Йә булғанға артыҡ түҙемле.

Тик уҙғанға ҡабат ҡайтып булмай,
Нисек үткән – шуға түҙәһең.
Бер йылғаны йөҙ ҡат һөҙөп була,
Бер йылғала йөҙ ҡат йөҙөп була,
Тик тормошто бер ҡат һөҙәһең,
Тик тормошта бер ҡат йөҙәһең.

2 июль, 2010 йыл. Йома.

Бына көндәр ҡыҫҡарыу яғына тәгәрләне. Йәйҙе йүнләп күреп тә булманы. Көндөҙ тышҡа сыҡмаҫлыҡ эҫе көндәр торҙо. 36 районда ғәҙәттән тыш хәлдәр тиҙәр ине, ҡоролоҡ хәҙер иллеләп районды ҡырып һуға.

Бөгөн больницала 15-се көн. Алла бирһә, бөгөн сығырмын тим. Эшкә барып йөрөлдө, идара, комитет ултырыштарын үткәрҙем. Аҙыраҡ шиғыр сыймаҡланды. Байтаҡ матбуғат уҡылды. Телевизорҙы бөтөнләй тиерлек ҡарамаған миңә ҡайһы бер тапшырыуҙарҙы (Ҡазандыҡын да) ҡарау ҙа үҙенсә мәғлүмәт бирҙе. Үҙебеҙҙең йәш артистар өсөн ҡыуандым: бик күптәре матурҙар ҙа, һәләтлеләр ҙә. Беҙҙең заманда бит 3-4 артист ине бөтә филармонияға. Хәҙер йәштәрҙе танып бөтөп булмай.

Киләһе съезда һөйләйәсәк докладыма бер ни тиклем тезистар яҙҙым, структураһын күҙ алдыма килтерҙем, үҙенсә планын, бүлектәрен дә төҙөгән һымаҡ булдым.

Кисә лә, бөгөн дә иртәнге алтыла аҡҡоштарҙы бәләкәй генә йорттан сығаралар. Ярҙа йолҡош ине, һыуҙа – аҡҡош.

Кисә биш бәләкәй генә өйрәк балаларын аҡҡоштар һыуҙан ҡыуып сығарҙылар. Бисараларҙың инәләре ҡайҙа булғандыр? Бөгөн сепейҙәр күренмәйҙәр, берәй бесәйҙең тырнағына эләкте микән, бахырҙар.

Грандиоз аҡҡоштар ҙа агрессор була ала икән, күлгә башҡаларҙы һыйҙырмай, ҡыуып сығара.

5 июль, 2010 йыл. Дүшәмбе.

2-дә йома көн больницанан сығып, баҡсаға киттек. Бөгөн эшкә ошонан тура барам.

Өс көн рәттән һыу индек. Кисә – мунса. Аҙыраҡ хәл ингәндәй.

Шиғырҙар яҙыштырҙым. Съездан һуңғы көндәлектәрҙе аҡтарам. Күп нәмәләр яңынан күҙ алдына килә. Докладтың йөкмәткеһе асыҡлана бара.

Был көндәлектәр үҙе бер донъя. Фекерҙәр, күҙәтеүҙәр, хәлваҡиғалар… Халыҡҡа еткерге килә, тик ни формала? Күләм бик ҙурайып китәсәк бит. Блокноттарҙың байтағы һәр береһе өс йөҙ биттән ашыу. Ә улар бит бер тиҫтә генә түгел. Аптыраҡ. Әллә бер блокнотты компьютерҙан үткәреп ҡарарғамы? Шул саҡта дөйөм күләмде билдәләүе лә еңелерәк булыр ине.

1994–2004 йылдарҙа Рәсәйҙән сит илгә 45 мең бала һатылған. Хәҙер күберәктер. Демография тураһында һөрән һалыуҙар нимәгә? Илдең киләсәге һатыла. Уның ҡарауы илгә ситтәр тула, хәйерселәре лә, илталарҙары ла ябырыла.

Даһиҙар тик һүҙ һөйләү менән мәшғүл. Һүҙ эшкә әйләнмәй.

Иҫке ҡағыҙҙарҙы яндырғандай,
Иҫтәлекте булмай яндырып.
Хәтирәләр һине яндыралар,
Күшектерә ҡайсаҡ ямғыры.

Музей – ҡомартҡылар тупланған боронғо донъя, уҙған иҫке дәүерҙәр генә түгел. Музей киләсәк өсөн йәшәй, киләсәккә әйҙәй, хәҙергенең ҡәҙерен белергә өйрәтә.

Птицеферма им. М. Гафури (Мелеузовский район) – шағир исемен бирер урын тапҡандар! Ризыҡ әҙерләү изге эш, ләкин бында шағирҙың ни ҡыҫылышы бар. Туҡайҙың «тауыҡтары йырлай тиҙәр» тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөргәндәрме?

Донъяға донъя һоҡлана:
Болот та күсмәй туҡтаған.

День защиты детей, год защиты детей, век защиты детей. Вечная проблема и забота.

15 июль, 2010 йыл. Кесаҙна.

Фәриҙә баҡсаға 10-да шәмбе көн күрше Рәлиә менән киткәйне. Мин йәкшәмбе барырға уйлағайным. Көн әрәм була тип, шул көндө – шәмбе киске етеләрҙә киттем. Автобустарҙа мәшәкәтһеҙ барып еттем.

Шул көндө һыу индек. 11-дә кис ямғыр яуҙы. Мин әл дә иртән һыу инеп килгәйнем. 13-нән 14-нә төнгө өсөнсө яртыла бик дауыллап, күк күкрәп, туҡтауһыҙ йәшен йәшнәп, борсаҡлап яуып үтте. Ҡабаҡ япраҡтарын тишеп, лилиә сәскәһен тетеп бөткән.

Быйыл ҡот осҡос ҡоролоҡ. Беҙҙә генә түгел, тотош ил буйынса түҙеп торғоһоҙ эҫе. Ер ярыла, шишмәләр кибә, һыуҙар һайыға.

Байтаҡ шиғырҙар яҙылды. Элек төрткөләп барған урындар көндәлектәрҙә күп кенә йыйылып киткән. Съезға доклад өсөн шуларҙы барлағанда уларға ла яңынан әйләнеп ҡайттым. Айырым юлдар, строфалар шиғырҙарға әйләнде. Әле матбуғатҡа бирелмәгән шиғырҙар элеккесә бәләкәй бер китаплыҡ булып киләлер.

Бөгөн Дәүләт йыйылышының ғәҙәттән тыш ултырышы үтте. Ҡоролоҡҡа бәйле эштәр тураһында Сарбаев хөкүмәт докладын яһаны.

Рәхимовҡа Үҙәк TV-нан Бигновтар, Назаровтар һ.б. тағы ла бысраҡ өйәләр. Был битһеҙҙәрҙең әшәкелектәрен әйтеп бирерлек һүҙ табыуы ла ҡыйын.

Президентты иң күбе элек янында булғандар һата. Заместители – мстители.

Шиғырҙар ҡайһы саҡта балыҡ һымаҡ көтөүе менән килә. Ҡайһы саҡта илһам ҡалҡыуысы күпме көтһәң дә сиртмәй ҙә ҡуя.

12-дә йәйге ял башланды. Шиғырҙар һөжүме менән башланды.

Йәшенле, дауыллы төндә 80-се йылдарҙа яҙылған «Йәшендәрҙә балҡып киткән йөҙөң» тигән юлдар, шуға бәйле ваҡиғалар күҙ алдына килде.

Эҫе көндәрҙә халыҡтың «Ҡара кешенең тире сыҡҡансы һары кешенең йәне сығыр» тигән һүҙҙәре иҫкә төштө. Элек аңлап бөтмәй инем. Көнъяҡ һәм төнъяҡ кешеләре араһындағы айырма тураһында әйтелгәндер.

«Ҡазан уттары»ның май һаны Фатих Кәримдең «Ант» шиғыры менән асылған. Мостай Кәримдең был шиғырға тиклем бер ай алда яҙылған «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» тигән билдәле шиғыры хәтергә килде. Шул тиклем дә тап килеү була икән! Интонация, стиль, хатта һөйләм төҙөлөштәре…

Нәҡ 4 йыл элек Ырымбурҙа Урал аръяғында башҡорт йыйынында ошондай эҫе булғайны: күләгәлә 38 градус ине.

Киске ямғырҙан һуң иртән һыу инеп ялан аяҡ ташлы юлдан ҡайттым. Быйыл ялан аяҡ күп йөрөйөм, табандар сыныҡҡан. Ямғырҙан һуң осло таштар ҙа йомшарған һымаҡ.

22 июль, 2010 йыл. Кесаҙна.

Бына өсөнсө көн «Танып»та башлана. Былай танып ҡаршы алдылар. 511-се бүлмәгә (2 бүлмәле) урынлаштырғайнылар, уныһы көнъяҡҡа ҡарай, кондиционеры ла юҡ. Унынсы яртыла килеп урынлашһаҡ та, иртүк ҡыҙҙыра башланы. Сәй эсеп алғас, директорға индем. Электән белә инем – Ямалетдинов Кашшаф Сәйфетдин улы. Силәбе башҡорто. Ҡосаҡлашып күрештек. Хәлде һөйләп биргәс, 504-кә күсерҙеләр. Быныһы төнъяҡҡа ҡарай, кондиционеры ла бар. Матурыраҡ йыһазландырылған. Әл дә мәсьәләне ваҡытында хәл итеп ҡуйҙыҡ, юғиһә эҫелә яфа сигер инек.

Кисә иртән алтынан етегә тиклем йөрөп килдем. Урындар матур. Иртән дә, көндөҙ ҙә ялан аяҡ йөрөнөм. Санаторий янында сәскәләрҙе күп үҫтерәләр. Эске биҙәлеш тә, тышҡы биҙәлеш тә бик матур. Ике тапҡыр – иртән, кис бассейнда булдыҡ.

Килеү менән шиғырҙарға, доклад, мәҡәлә тезистарына тотонормон тигәйнем, әлегә барып сыҡмай. Дауаланыуҙар байтаҡ, ритмға инеп китеп булмай.

Бигерәген дә 19-да үткән Госсобраниенан һуң нисектер шаңғып йөрөлә. Рәхимов хушлашыу һымаҡ һүҙен әйткәндә, тамаҡҡа төйөр ултырҙы. Әлбиттә, бер көн ағай был эштән барыбер китер ине, әммә унһыҙ Башҡортостанды күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Һәр ауылды тиерлек белә, Башҡортостандың һулышын, хәлен энәһенән ебенә тиклем белә ине бит.

Үҙемдең фекерҙәремде, кисерештәремде Дәүләт йыйылышындағы сығышымда әйтергә тырыштым. Аҙаҡ күптәр рәхмәт әйттеләр, ҡулды ҡыҫыусылар, шылтыратыусылар күп кенә булды. Шул уҡ көндө TV-нан тулыһынса бирҙеләр. Программала булмағас, күп кеше белмәй ҡалды. «Яңылыҡтар»ҙа рәсми өлөштән һуңғы һөйләүселәрҙе күрһәтмәнеләр.

Рәсми өлөш, беренсе һәм яңы президенттарҙың телмәрҙәренән, Рапотаның һүҙҙәренән, анттан, байраҡтарҙы сығарыуҙан һуң халыҡтан сығыш яһанылар: Салауат Ғайсин, мин, Рәшиҙә Солтанова, Хәйҙәр Шаһиев, «Рустарҙың Соборы»нан Владимир Самородов, Тажетдин хәҙрәт, БДПУ студенткаһы.

Конгресс-холда ҡабул итеү, 60-лап кеше. Беҙҙең 7-се өҫтәлдә руханиҙар. Хәмитов Р.З. килеп күрешеп сыҡты. Минең менән дә һөйләшеп, күп уҡыуы, алда осрашыу кәрәклеге хаҡында һөйләп торҙо. Бынан ҡайтҡас, инеп сығыу тураһында хәстәрләргә кәрәк.

Рәхимов дәүере һымаҡ дәүер Башҡортостан тарихында башҡаса булмаҫ, республика егерме йылда үткән үҫеш ҡабатланмаҫ. Тик ошо алға китеш, ошо иркенлек һаҡланһын ине. Күңел урынына ултыра алмай.

24 июль, 2010 йыл. Шәмбе.

Ял һәйбәт үтә. Көнөнә ике тапҡыр бассейнда йөҙәбеҙ. Иртәнге ете-ләлә һалҡын ҡойола – шишмәлә ҡойоноп сығабыҙ. Өс тапҡыр сумыуы тәнде өтә, бигерәк тә балтырҙарҙы. Массаж, ялан аяҡ йөрөүҙәр, саф һауа, бөтә ерҙә сәскәләр ултыртылған.

Ләкин күңел урынында түгел. Әллә ниндәй хафа. Дәрдмәндең «Ҡарап» шиғыры хәтергә килә. «Ниндәй упҡын тарта беҙҙе йән һорап?..»

Егерме йыллыҡ бөйөк эштәр, хәрәкәттәр һәләкәттәр менән емерелмәһен ине.

Һуңғы ваҡытта байтаҡ шиғырҙар яҙылғайны. Шуларҙы яңынан ҡарап, төймәле дәфтәргә күсереп ҡуйҙым. Бында әлегә яңылары килмәй. Килгәндәрен дә ниңәлер яҙғы килмәй.

Кисә «Башҡортостан»да минең Дәүләт йыйылышындағы сығышым баҫылған. Рәлиф шунда уҡ алып ҡалғайны. Бында матбуғат киоскыһы юҡ. Китапханаға гәзит әлегә килеп етмәгән.

Бындағы ялдарҙан һуң съезд докладына ныҡлап тотонорға кәрәк булыр. Август кәңәшмәһе тураһында ла уйлайым. Ҡапыл ғына сығыш яһарға тип, Мортаза Ғөбәйҙулла улынан фарман килеп ҡуя торғайны. Был юлы республика педсоветы нисегерәк үтер?

Мәҡәлә булһа ла әҙерләп ҡуйырға кәрәк. Нимә хаҡында – уныһын уйлағаным. Тик әлегә асҡысы табылмаған.

27 июль, 2010 йыл. Шишәмбе.

«Если мы заглянем в среду людей обеспеченных, образованных, то здесь точно так же увидим картину упадка, принижения умственных интересов и всеобщего измельчания личности. Современное общество заражено американизмом; есть что-то дикое в той алчности к золоту, которая характеризует современных американцев и все в большей степени заражает современную Европу. Все чаще начинает встречаться тип человека, поглощенного всецело денежными делами; в погоне за наживой он не знает покоя, он стыдится отдыха, испытывает угрызения совести, когда мысль отвлекает его от текущих забот дня. Мы постепенно привыкаем думать с часами в руках; мы завтракаем с биржевым листком перед глазами; мы живем, как

будто боимся упустить минуту для какого-либо важного дела». (Фридрих Ницше и русская философия. Минск, 1996, т. 1, с.262).

Китапхананан Фридрих Ницшеның. «По ту сторону добра и зла» (М., 2009) тигән китапты алғайным. Был һүҙҙәрҙе ул томда таба алманым, ентекләп эҙләмәнем, М.А. Блюменкранцтың «Рождение философии из духа трагедии» тигән инеш һүҙенән килтерҙем.

Ницшене уҡып-уҡып алдым. Ҡалын китап. Оригиналь фекерҙәр күп, әлбиттә. Әммә ялҡыта башлай. Инҡар итеү мыжыуға әйләнгән һымаҡ. Ябай кешеләрҙе йәлләү, гонаһтарҙы ярлыҡау урынына ул артыҡ нәфрәтләнә. Кешене барыбер яратмай.

«Сверхчеловек» тигән принцибы ла, бер уйлаһаң, оригиналь түгел бит, ҡайһылыр яғы менән хатта иблислеккә барып тоташа. Ғазазиллыҡ, ғисъянсылыҡ, демонизм һ.б. – бөтәһе лә бер тамырҙан, Ницшегә хәтле күп тапҡырҙар ҡабатланған. Аллаға ҡаршы баш күтәреү.

«Сверхчеловек» идеялары Гитлерҙың «сверхнация», арийҙарҙың бөтәһенән өҫтөнлөгөн раҫлап бөтә донъяны утҡа тотоуына илһам бирмәне микән? Оҡшашлыҡтар күп.

Теләктәре лә изге һымаҡ – донъяны сүп-сарҙан, кешенең ваҡсыллығынан, ығы-зығы батҡағынан таҙартыу, тынсыу тормошто сафландырыу. Ләкин даһи фекерҙәрҙә лә яуызлыҡ өҫтөнлөк алып китмәйме? Ницшены ентекләп өйрәнмәйсә, бындай һығымталар яһарға ярамай, әлбиттә. Аллаһҡа ҡаршы баш күтәреп, уны үлде тип раҫларға тырышып ҡына кешене төҙәтеп булмай. Нисек кенә камиллаша, үҫеш юлында яңы һәйбәт сифаттар өҫтәлә барһа ла, кешенең асылы тулы камиллыҡҡа мәңге лә ирешә алмаясаҡ. Әҙәм балаһының тәбиғәте шулай. Ләкин быға ҡарап ҡына донъяны ҡәһәрләргә бер кемдең дә хаҡы юҡ. Кешенең мәңгелек йәшәүгә ирешә алмаясағы инде күптән көн кеүек асыҡ, әммә быға ынтылыш аңдан алып ташланмаған бит.

Ницшеның аҡылдан яҙыуы ла маңлайына яҙылып ҡуйылғандыр. Был тиклем фекерҙәр ҡайнаған баштың маңлайына шундай тәҡдирҙең яҙылыуы ғәжәпме ни?

1 августа митингҡа саҡырып телефонға яҙыу килде. Белешмә өсөн номер ҙа биргәндәр. Беҙҙең бындағы ял 2-дә генә бөтә. Кәрәк икән, алдан да ҡайтып булыр ине. Ләкин мин үҙемдең талап-тәҡдимдәремде Дәүләт йыйылышына Президент һайлағанда әйттем. Газетала ла баҫылып сыҡты. Уға нимәләрҙер өҫтәй алмайым.

Митингтағын бер майҙан ишетер, ә минең әйткәндәрем, уйым бик күп кешеләргә барып етте, улар тарафынан хупланды.

Әлбиттә, ваҡиғалар ҡатмарлы һәм бик хәүефле. Бигерәк тә билдәләнәсәк стратегик программа һәм юғары етәкселеккә раҫланасаҡ кадрҙар мәсьәләһе. Хаҡлы талаптарҙы тейешле, лайыҡлы кадрҙар табыу менән нисек нығытырға, нисек раҫларға?

23 июлдә «Башҡортостан»да Октябрь Вәлитовтың мәҡәләһе менән минең Дәүләт йыйылышындағы сығыш баҫылған. Һүрәттәребеҙ беренсе биттә йәнәшә тора. Октябрь рухиәткә бәйле дөрөҫ һүҙҙәр әйтә, әммә улар хаҡында мин быға тиклем ҡат-ҡат яҙып сыҡҡайным. Сығыштар ҙа яһағайным. Фекерҙәшең булыуы һәйбәт, ләкин уртаҡ мәсьәләләрҙе һәр кем үҙенсә аһа һәйбәтерәк.

1 август, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Август башланды. Йәй буйына ҡот осҡос эҫелек. Беҙҙең Башҡортостанда ла, башҡа өлкәләрҙә лә урмандар яна. Нижегород яғында бер нисә ауыл утта һәләк булған. Путиндың барғанын күрһәттеләр.

Әле көндәр һаман да эҫе торасаҡ, тиҙәр. Һәр хәлдә, августың беренсе яртыһында үҙгәреш вәғәҙә итмәйҙәр.

«Быйылғы йәй» тигән шиғыр яҙҙым. Элек башлаған ҡайһы бер һыҙмаларҙың аҙағына сыҡтым. Бында килгәс яҙышырға махсус ниәтләнмәһәм дә, биш-алты шиғыр яҙылды. Уҡылды. Бигерәк тә ваҡытлы матбуғатты даими ҡарап барҙым. Катапхананан килтереп торҙолар.

Варлам Шаламовтың бер китабын алып ҡарап сыҡтым. Бында Колыма хикәйәләре инмәгән. Әҙәбиәт тураһында төрлө йылдарҙа теркәп барған күҙәтеүҙәре ҡыҙыҡлы.

Шаламовты уҡығанда әҙәбиәт донъяһына бәйле бер һорау тағы ла нығыраҡ борсой: яҙыусының әҫәрҙәре, уның ижады, ошоларҙың эстетик кимәле, ҡиммәте һәм яҙыусының шәхси яҙмышы, биографияһындағы үҙенсәлектәр. Әгәр сәйәси репрессия ҡорбаны булмаһа, Шаламов һис шикһеҙ ул тиклем резонанс ала алмаҫ ине. Уның ижадын оҫталыҡтан, художество кимәленән бигерәк темаһы билдәләй. Был – үҙенсә конъюнктура. Фажиғәле яҙмыш нигеҙендә популярлыҡ тыуа.

Әгәр Солженицын һуғыштан һуң лагерҙарҙа, һөргөндәрҙә йәшәмәгән булһа, нимә хаҡында яҙыр ине икән? Бәлки ул яҙыусы булып та китер ине, әммә әлеге дан-шөһрәт уға килмәҫ ине. Һис

шикһеҙ, килмәҫ ине. Сит ил өсөн, СССР-ҙың дошмандары өсөн уның кәрәге лә булмаҫ ине. Ундай шәхестәрҙең ижадын оҫталыҡтан бигерәк яҙмыш фажиғәләре бар итә.

Ниндәйҙер дәрәжәлә был момент Зәки Вәлидигә лә ҡағыла. Уның фәнни эшмәкәрлегенең, ғилми хеҙмәттәренең ҡиммәте, тарих фәненә индергән өлөшө бәхәсһеҙ. Ләкин уның исеме тирәһендә сәйәси ореол тыуҙырыу хаҡында ла әйтергә кәрәк. 1917–1919 йылғы башҡорт милли хәрәкәтендә башҡа күренекле шәхестәр ҙә аҙ булмаған бит. Ләкин улар, Вәлиди Башҡортостандан ҡасып киткәндән һуң вәлидовсылар мөһөрө һуғылып, ҡырылған йәки ҡаты эҙәрлекләүҙәргә дусар ителгән.

Көрәштәштәренең, тотош халҡын ташлап ҡасҡан юлбашсы – был проблема, минеңсә, донъя әҙәбиәтендә етерлек яҡтыртылмаған.

Хатта аҙаҡ тотҡонлоҡта ҡаһармандарса һәләк булған Батыршаның да халыҡтың баш күтәреүенә төп сәбәпселәрҙең береһе булып та, көрәш ҡыҙған саҡта урманда ҡасып йөрөүе уның дәрәжәһен бик нык төшөрә.

Академик Әнәс Мәхмүтовтың «Республика Башҡортостан»да (30.07.10.) «Власть и реальность» (необходима консолидация усилий общества, власти, бизнеса и науки) тигән зур мәҡәләһе баҫылған. Ғалим хәҙерге Башҡортостандың үҫешендәге байтаҡ етешһеҙлектәр хаҡында «асыштар яһай». Улар хаҡында ниңә алданыраҡ әйтмәне икән? Әлегә тиклем башҡасараҡ һөйләй ине түгелме һуң? «Батырмын тип кем әйтмәй, яу килгәндә өнө юҡ» тигәндәре шул булалыр инде.

Өйҙәге яҙыу өҫтәлендә ике һауытта байтаҡ ручкалар тора. Ғәҙәт буйынса йыйылып китә. Ләкин күбеһе яҙмай булып сыға. Уларҙың байтағы иҫәпкә бар, һанға юҡ.

Ручкалар нимә! Милләттәштәрем араһында иҫәпкә бар, һанға юҡ әҙәмдәр күпме.

Берәй яуаплы эште тапшырырға кеше эҙләй башлаһалар, кадрҙар мәсьәләһе бик шыйыҡ булып сыға. Уларҙы, әлбиттә, эҙмә-эҙлекле әҙерләргә кәрәк. Ләкин халҡы өсөн янған шәхес быны көтөп кенә ултыра алмай. Ундайҙар иҫәпкә лә бар, һанда ла бар.

2 август, 2010 йыл. Дүшәмбе.

«Танып»та һуңғы көнөбөҙ. Бик күптән был тиклем тәртипле ял иткәнем юҡ ине. Ял да ялҡыта икән, бер төрлөгә әйләнә башлай. Бөгөн барыбер быуаға барып һыу инеп ҡайтырға кәрәк.

«Мы – дети страшных лет России» – Блоктың был һүҙҙәре ил яҙмышы тураһында уйлағанда йыш ҡына иҫкә төшә. Блок заманында ла ҡот осҡос хәлдәр күп булған. Ләкин бөгөнгө һымаҡ булмаған. Илдең еңелгән саҡтарын күреү бер нәмә, ә бына бөйөк Ватандың тарҡалғанын кисереү – бөтөнләй башҡаса фажиғә. Әле шул хәлдәр бара. Беҙ Рәсәйҙең ботарланып бөткәнен, сеймал сығанағы булған колонияға әйләнгәнен күрмәйбеҙ. Ә бына беҙҙең ейәндәрҙең шул дәүерҙә йәшәүҙәре мөмкин. Ләкин улар беҙҙең Рәсәйҙең, ҡеүәтле мәмләкәттең, дәһшәтле дәүләттең нисек булғанын белмәйәсәк, донъя ғүмер буйы улар күргәнсә булған тигән сикләнгән ҡараш менән йәшәйәсәк.

3 август, 2010 йыл. Шишәмбе.

Сәғәт өс тулмаҫ борон «Танып»тан ҡуҙғалып киттек, алты тулыр алдынан Өфөгә килеп еттек. Дамир ваҡытында килде. Ҡайтып килгәндә Өфөгә етәрәк машиналағы термометр 39 күрһәтә ине, был арттырмай микән, тип ҡурҡып ҡуйғайным. Нисек инде 39? «Танып»та иң күбе 35 булды, шул ваҡытта түҙеп торғоһоҙ ине.

Кондиционер эшләгән машинанан төшһәк, Өфөлә тын алғыһыҙ. Мунса һымаҡ. 40 градустан артыҡтыр. Шыбыр тир булып, өйҙө елләтергә тырышабыҙ – ҡайҙа ул, өйҙә лә тыштағы һымаҡ тиерлек.

«Танып»та ожмахтағы һымаҡ йәшәгәнбеҙ икән: номер төнъяҡҡа ҡарай, кондиционерҙы теләгән ваҡытыңда эшләтеп ебәрәһең – йән рәхәте!

Был эҫелә нисек эшкә йөрөргә? Етмәһә, Данис аяғын ауырттырған – машина юҡ тигән һүҙ. Шулай ҙа бөгөн иртәнге һалҡында эшкә барырға кәрәк.

Артурҙар килде. Кисә Асҡарға һигеҙ ай тулды. Ике теше сыҡҡан. Ҙурайып киткән. Байтаҡтан күрмәгәс, ныҡ һағындырған.

7 август, 2010 йыл. Шәмбе.

Кисә көнө буйы эҫелә сабып йөрөлдө. Чесноковканан Шамониноға ике юлланыҡ, бүлмәләр бүлергә таҡталар, стеналарға евровагонка, каркасҡа брустар, кирбес килтерҙек, һыу үткәрергә түләнек һ.б. – бер көндә 160 мең китте. Бик ҡыйбатҡа төшә был йорт. Пристрой, мунса, бүлмәләр бүлеү һ.б. йорттоң үҙ хаҡынан артып бара.

Яңы хөкүмәт етәкселәре баҫылып сыҡты. Яңылар бар, күпселек түгел.

Рәсәй яна. «Башҡортостан»да «Быйылғы йәй» шиғыры менән башланған шәлкемем баҫылып сыҡты. Ҡотлап шылтыраталар.

Кеше өсөн иң рәхәте – тере сағыңда рәхмәт һүҙҙәре ишетеү.

Кеше өсөн иң хурлыҡлыһы – үҙең үлгәс, һиңә ләғнәт, нәфрәт һүҙҙәре яуыу.

Көндәр түҙеп торғоһоҙ эҫе. Фәриҙә баҡсаға киткәйне, телефондан һөйләштек. Тышҡа сығырлыҡ түгел.

Бында өйҙә лә эҫе. Август кәңәшмәһенә берәй нәмә яҙырмын тип ҡалғайным да, эш бармай. Башланым да артабан китеп булмай. Әллә эҫелә мейе ирегән – баш эшләмәй. Әллә һүҙ һөйләү туйҙырҙы. Мәғариф тураһында Мәскәүҙең емерткес эштәрен тәнҡитләп күпме һүҙ әйттем, яҙҙым. Ә шунан?.. Васька слушает да ест. Ест не что-нибудь, а душу народа, сердце России – ее духовность, ее образование и культуру.

Ожмахтарға инмәй ҡалмағандыр
Милләтемдең изге йәндәре.
Ниндәй телдә икән башҡорттарҙың
Йәннәттәрҙә һөйләшкәндәре.

Ишетелмәҫ булһа башҡортса һүҙ,
Моңаймаһа ҡурай ул яҡта,
Ошоларҙы һағынып,
Башҡорттарым
Һарғаялар микән ожмахта?

8 август, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә Фәриҙә баҡсанан хәлдән тайып ҡайтты. Әле төнгө дүртенсе яртыла тороп ултырҙым. Бөтә тәҙәрәләрҙе астым, һауа ҡымшанмай ҙа. Көндөҙ ҡыҙған һауа, хатта әйберҙәр һыуынып та өлгөрмәй.

Кисә белем менән тәрбиәнең хәҙерге нисбәте тураһында бәләкәй генә мәҡәлә башлағайным, ыратып булманы. Әле дауам итәм, бөгөн бөтөрөргә кәрәк.

Инде таң атыр ваҡытта яҡында музыка гөрһөлдәй. Йәштәр шашамы тиһәм, Фәриҙә әйтә, ҡайҙалыр туй бара, ти. Шулай тигәс, нервым бер аҙ тынысланды. Әйҙә күңел асһындар, йәш ғаилә бәхетле, ныҡлы, тарҡалмаҫ булһын. Юғиһә, хәҙер айырылышыуҙар өйләнешеүҙәрҙән артып бара, тигән мәғлүмәттәр күңелгә шом һала.

12 август, 2010 йыл. Кесаҙна.

Мәғариф, тәрбиә тураһында мәҡәлә яҙҙым. Башҡортсаһын 7–9 августа эшләгәйнем, руссаһын 10–11 бөтөрҙөм. Әле матбуғатҡа бирмәнем, ҡайҙа – хәл итмәгәнмен.

Ҡыҙыҡ тап килеүҙәр була. Беҙгә шәмбе көн газеталар килмәй, дүшәмбе генә алабыҙ. 9-да эштән ҡайтҡас газеталарҙы ҡараһам, «Киске Өфө»лә тап минең мәҡәләлә күтәрелгән мәсьәлә буйынса һөйләшеү баҫылған: «Уҡытып тәрбиәләйекме әллә тәрбиәләп уҡытайыҡмы?»

Уларҙың һөйләшеүенән һуң мин дә яҙғанмын тип уйлауҙары бар. Ярар датаһын ҡуйғанмын: 7–9.08.10.

Былай тап килеү булғас, бәлки шул «Киске Өфө»гә бирергә кәрәк булыр.

9-да яңы вице-премьер Зөһрә Рәхмәтуллина оперативка үткәрҙе. Министрлыҡта оҙаҡ ултыра алмағайны, бында ниндәйерәк эш күрһәтер?

Кисә ураҙа башланды. Фәриҙә тоторға булды. Көн оҙон, етмәһә, һаман да бик эҫе. Ураҙа тотоусыларға ауыр буласаҡ.

Рәсәй урмандары һаман да яна. Күп ерҙә кәметһәләр ҙә, яңылары тоҡанып тора. Мәскәү тын ала алмай сәсәй.

10-да Зөлхизә туғанымдың улы Рөстәмде ғаиләһе менән саҡырып алдыҡ. Ҡатыны Оля, ҡыҙҙары Мишель, Юлия менән килде. Ҙур ҡыҙы ҡайтмаған, уҡырға инергә әҙерләнә икән. Германияла йәшәйҙәр. Балалары русса белмәй тиерлек.

Илгиз Бикбаев та Наташа менән булды.

Ай башланды. Уның бөтөп башланғанын тәки күреп булмай. Әлеләй (айҙың ошо форманан бындайға) әйләнгәнен ҡармын тип күпме ҡарауылланым, килеп сыҡманы. Ҡараңғыла тиерлек сығам бит инде, түбәлә торған ай көн дә һуңлабыраҡ ҡалҡа башлай. Тыуған көнөндә күтәрелеп өлгәрмәне, етмәһә, урман офоҡто ҡаплай. Һәр хәлдә, был юлы ла ошондай аяҙ мәлдә күрә алманым.

«Алтын ҡойроҡ, көмөш ял» тигән әкиәттә һ.б. фольклор әҫәрҙәрендә бейә барыһынан йәшенеп ҡолонлай. Ай ҙа үҙенең тыуғанын серлелек менән сорнай.

Кискә табан бөтөнләй тын ала алмаҫлыҡ була башлай. Хатта япраҡ һелкенмәй. Асфальттан эҫе бәрелә.

Кисә поляк режиссеры Аджей Вайданы күрһәтәләр. Беҙҙекеләр уға «Дуҫлыҡ» ордены биргәндәр икән. Ағай әле теремек күренә, киләһе йыл 85 йәш тула.

Нобель премияһы алғанда ул инглизсә һөйләргә теләмәгән, поляк телендә сығыш яһаған.

«Я говорю то, что думаю. А думаю я по-польски», тигән. Бик фәһемле һүҙҙәр бит.

15 август, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә Саҡмағоштоң яңы мәҙәниәт һарайында педагогтарҙың республика кәңәшмәһе үтте. Элек бик тантаналы ойошторола торғайны. Бина алдындағы майҙанда элекке байрам төҫтәре балҡып тормай. Күргәҙмә лә наҡыҫ ҡына.

Артыҡ шау-шыу, помпа кәрәкмәй, әлбиттә. Иң мөһиме – эшсән мөхит, фекер алышыу, етди, профессиональ һөйлшеү. Ләкин йылына бер тапҡыр республика күләмендәге осрашыу үҙенсә байрамға әйләнә икән, быныңминеңсә, артыҡ нәмәһе юҡ. Байрам итерлек уңыштар булһа, әлбиттә. Ә уңыштар етерлек бит. Элегерәк бигерәк тә. Хәҙер был ҡаҙаныштарҙы бик күп проблемалар күмеп китте. Шулай ҙа һөйләшеү күтәренкерәк рухта барһа, барыбер күңеллерәк бит.

Алып барыу тәртибе лә быйыл башҡаса ойоштороlған. Президиумда Президент, мәғариф министры, вице-премьер Рәхмәтуллина, Мәскәү ҡунағы, Саҡмағош хакимиәте башлығы Йосопов. Башта Аллаяров һөйләне, шунан Мәскәү, Йосопов, артабан фекер алышыуҙар. Рәхмәтуллина алып барҙы. Аҙаҡ Президент Хәмитов Р.З. йомғаҡлап ҡуйҙы. Ошо тәртип дөрөҫөрәк, сөнки тәүге һүҙҙе мәғариф етәксеһе әйтергә тейеш.

Йомғаҡлау һүҙендә Президент һорауҙарға яуап бирҙе, алдағы мәсьәләләр хаҡында конкрет туҡталып һөйләне. Мәктәптәр күп төҙөлә, балалар һаны кәмей. Мәғарифкә 30 млрд. һум – бюджеттың өстән бер өлөшө бүленә. Башҡа региондарҙа кәмерәк, беҙҙә эш хаҡы түбән – 10 мең. Ҡайһы бер урындарҙа уҡытыусылар 18-20 мең ала икән. Уҡытыусылар һанын ҡыҫҡартырға кәрәк буласаҡ. Был бик ауыр мәсьәлә. Яңы президент кисерештәрен йөҙөнә сығармай, уйлап, ашыҡмай һөйләй. Август кәңәшмәләренең был рәүештә һуңғы үткәрелеүе, киләсәктә форматы үҙгәрәсәге тураһында әйтте.

Түңәрәк өҫтәлдәр, фекер алышыуҙар формаһы, Мәскәүҙән ғалимдар саҡырыу кәрәклеге тураһында һөйләне. Тәҡдимдәр урынлы һымаҡ, ләкин Мәскәү ғалимдарының нимә һөйләгәнен беҙ беләбеҙ инде. Шул аҡыллы баштар арҡаһында Рәсәйҙең донъяла хөрмәт яулаған мәғариф системаһы бөгөн емерелер сиккә етте.

Бөгөн иртән торғас та көн яҡтырғансы тәрбиә һәм белем тураһындағы мәҡәләмә әлеге август кәңәшмәһе тәбҫирендә бер киҫәк өҫтәп ҡуйҙым.

Саҡмағошҡа барышлай Фәриҙәне баҡсаға ҡалдырып киткәйнек. Кәңәшмә оҙаҡ барманы, бишенсе яртыларҙа мин баҡсала булдым. Димгә барып һыу инеп килдек.

Төндә күк күкрәгәйне. Һәйбәт кенә яуып үткән. Саң баҫылды, һауалар асыҡланып ҡалды, монар бөттө. Иртән һыу инергә барҙыҡ. Бөгөн Фәриҙәнең тыуған көнө. Уға Димде бүләк иттем, ваҡланып торманым.

13-дә йома көн Шамониноға ламинат, линолеум, фанера, душ-кабина, умывальник, унитаз, ике ишек алып барҙыҡ – 75 мең. Рәхмәт «Китап»тың директоры З.М. Тимербулатовҡа – «Газел»ен бирҙе. Бер юлы күберәк әйбер алып барырға тырыштым.

20 август, 2010 йыл. Йома.

А. Филиппов (Леонидовты) яңынан эшкә алдым. Элек алты йыллап эшләгәйне, унан һуң килгәндәрҙән уңманыҡ. Сәйәсәт менән булмайһың тип киҫәтеп ҡуйҙым.

18-дә Президент Хәмитов Р.З. TV-нан «Президент сәғәте»ндә бер сәғәт һорауҙарға яуап бирҙе. Икенсе эш стиле буласағы нығыраҡ асыҡлана. Компетентлы, һалмаҡ.

Шаршамбы – өсөнсө көн Кураповта булдым. Хәлдәрҙе аңлатып сыҡтым. Дихинды бюджет буйынса уҡытыу (БАГСУ) ғаризаһына ҡултамғаһын ҡуйҙы. Әбйәлил китабы тураһында ла һөйләнем. Хат яҙһындар, табырға тырышырбыҙ, тине. Главалары ҡурҡмаһа.

Көндәр һыуына башланы. Хәҙер тын алырлыҡ. Үләндәр, исмаһам, күтәрелер – яуған урындар бар.

«Хазина» менән район-ҡалаларҙа самый йөрөр саҡ та бит. Нимә килеп сығыр? Хәҙер күптәр бик ҡырҡа үҙгәрә.

Ырымбурҙа ла күрһәтке килә.

Киләһе аҙна 24-нән Әбйәлил, Белорет райондарында август кәңәшмәһендә ҡатнашам. Алла бирһә, 26–29 – Ырымбур яҡтарына.

29 август, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Дәүләт йыйылышындағы йәйге ялдың бөгөн һуңғы көнө. Минең өсөн ике айға яҡын отпускының ысын ялы ҡыҫҡа ғына ваҡыт – «Таныпп» санаторийында үткән ике аҙна ғына булды. Унда, ысынлап та донъянан айырылып тигәндәй тыныс йәшәп алынды. Эҫенән йәшенер өсөн дә йәтеш ине унда.

Йәй буйы Рәсәй урмандары янды, ил янды. Дәүләттең мәғәнәһеҙ фармандары бына нимәгә килтерә. Урман кодексы буйынса урмандар арендаға бирелде, асылда бесхозный булып ҡалды. Янғындарҙың

төп сәбәбе ҡоролоҡтан да бигерәк тәртипһеҙлектә, ил мөлкәтенең ҡарауһыҙ ҡалыуындалыр.

Башҡорт урмандары хәҙер Мәскәүҙең «Селена» тигән ойошмаһына арендаға бирелгән. Нефть тә шуларҙың ҡулында. Барлыҡ Башҡортостанды Мәскәү мәскәйҙәре баҫып алып бөтөп бара. Башҡа яҡтарҙа ла шул хәлдәр. Бына ҡайҙа неоколонизация, башҡорт ерҙәрен яңынан талау.

Эш башлар алдынан һуңғы аҙна юл йөрөүҙәр менән үтте. 26 августа Белорет районының педагогтарының август кәңәшмәһендә сығыш, Сермәндә граждандарҙы ҡабул итеү, 27-дә шул уҡ эштәр Әбйәлил районында.

Бигерәк тә Әбйәлилдә был йыйын элеккесә бай күргәҙмә ойошторoп, бик күп уҡыусыларға бүләктәр биреп, эшлекле тантана рәүешендә уҙғарылды. Белореттәр ҡороҡаҡ алып барҙылар, эште сәғәт ярымда бөтөрҙөләр.

Донъялар нисек кенә үҙгәрһә лә, уҡытыусыларҙың август осрашыуын түңәрәк өҫтәлдәргә, Мәскәү ғалимдарын саҡырып, уларҙың докладтарын тыңлауға ғына ҡайтарып ҡалдырырға ярамай. Саҡмағоштағы сығышында президент киләсәктә бына шундайыраҡ форматта үткәреләсәк был саралар тине.

Улай тарайтырға ярамай. Был йыйында уҡытыусылар йылына бер тапҡыр тигәндәй үҙ-ара осрашып ҡала, аралашыуға һыуһап, һағынышып килә. Эштәренә бар халыҡ алдында баһа ала. Эшлекле байрам.

28-дә иртәнге етелә, тыуған яҡтарға ҡуҙғалдыҡ. Ҡорбан салырға тип һөйләшкәйнек. Әҙерләп ҡуйғандар. Бер юлы өс мулла – Ғафур, Әнүр, Фәрит хәҙрәттәр уҡыны. Элек тә бер шулай булғайны. Егеттәр афарин, матур уҡыйҙар. Беҙ бәләкәй саҡта дин эштәрендә һирәк-һаяҡ булһа ла тик ололарҙы, ҡарттарҙы күрә торғайныҡ. Хәҙер үҙебеҙҙән йәштәр ошо изге эштәргә тотонғанын күреп нисек ҡыуанмайһың? Әнүр, Фәрит хажда булғандар, хажиҙар. Фәрит шунан алып ҡайтҡан намаҙлығын бүләк итте. Мин китаптар тараттым («Хазина», «303 хәҙис», минең 5 августа шифырҙар баҫылған гәзиттәр). Таҡыялар бүләк иттек.

Юлдарҙан ҡанатланып ҡайтҡан саҡтар ҡайҙа?! Хәҙер халыҡ араһында йөрөгәндән һуң йөрәк ауыртып, бер нисә йылға ҡартайып ҡайтаһың. Белорет районында Сермәндә, Әбйәлилдә, Асҡарҙа халыҡты ҡабул иттем. Ҡайҙа бара милләтебеҙ, ҡайҙа бара был Рәсәй

халҡы, нимәләр көтә илебеҙҙе? Мәғариф системаһы емерелә, халыҡсан рухиәт нигеҙҙәре бөткәндән-бөтә, бөтәһен Америка ҡалыбына ҡыуып индерәләр. Һәләкәт ябырыла, һәләкәт... Был хаҡта инде мәҡәләләремдә, шиғырҙарымда ла, поэмаларымда ла күпме яҙам. Хәҙер инде өндәшке лә килмәй. Ни мәғәнә, ни файҙа?

Ҡабул итеүгә килеүселәр араһында күпме ауыр яҙмышлы, бик-бик ҡыйын көн күреүсе кешеләр. Уларға ярҙам итә алмағас, уларҙы ҡабул итеүҙән нимә үҙгәрә? Ә кешеләр һаман өмөт итәләр. Депутаттың ҡабул итеүҙәре тураһында әҫәр яҙырлыҡ.

Әбйәлил яҡтарында июль аҙағындағы ямғырҙарҙан һуң донъя йәшәреберәк киткән, яҙҙы хәтерләтә.

Ә бына Ырымбур далалары буйлап үткәндә күпме яланғас тауҙар, һарғайған яландар, социализмды ҡыйратҡандан һуң ҡалған күпме харабалар. Сит ил яуы үтмәгән бынан, үҙ иленә, халҡына хыянат иткән юлбашсылар Ватаныбыҙҙы шул хәлгә килтергән. Алда әле ҙурыраҡ һәләкәттәр көтә. Был көндәлектәрҙе хәҙер яҙғы ла килмәй. Киләсәктә кәрәге булыр тип теркәп бара инем инде нисәмә йылдар! Хәҙер кәрәгенә лә шикләнәм: бармы һуң ул киләсәк?

Киләсәк, әлбиттә, һәр ваҡыт килеп етәсәк. Тик унда беҙҙең рухиәттең кәрәге булмаясаҡ – бына шундай уйҙарҙан баш сатнап һыҙлай.

Бөгөн барыһы һатыла,
Был донъялар – аптыраҡ!
Миллион-миллион долларҙарға,
Миллион-миллион евроларға
Һатыла бит хоккейсылар.
Футболсылар һатыла.
Ер һөргәндең ҡәҙере юҡ,
Туп типкән – ҡыйбатыраҡ!

Атаһы улын һата, улы атаһын һата, ире ҡатынын һата, ҡатыны ирен һата.

Ғүмергә кеше кешене
Һатҡан, һата, һатасаҡ.
Хәкикәттең хаҡы ҡалмай,
Ялғандыҡы артасаҡ!

Коллоҡ дәүере булған, имеш:
Кешелектең бөтмәгән ул дәүер,
Бар тарихын, бөтә донъяһын
Биләп тора тик бер формация –
Кеше һатыу формацияһы!
Әлмисаҡтан булған кеше һатыу,
Айырмаһы бары шул ғына:
Элек ҡолдар баш күтәрер булған,
Хәҙер ҡолдар өнһөҙ ҡол ғына.

30 август, 2010. Дүшәмбе.

Бөгөн Дәүләт йыйылышында эшкә. Өсөнсө көҙөм шулай башлана. Яҙыусылар союзындағы эшкә күнеккән һымаҡ барыбер күнегеп китеп булмай. Закон ижад итеү мөмкинлектәре бик сикләнгән. Федераль ҡанундарға ҡулайлаштырыу – төп эшмәкәрлегебеҙ. Бында «көйләү» менән булыу эшкә илһам, дәрт өҫтәмәй.

Иҫкеләрҙе уҡып, ҡарап ал,
Хәтерҙе яңыртып, барлап ал.

Блокноттарҙы аҡтара башлаһаң, күп нәмәләр яңыра. 1997 йылда яҙылған шәлкемде – «Хыянатнамә»не – анау көндө Союзда эҙләп табып, яңынан уҡыным. Хәтәр кисерештәр булған шул. Әммә матбуғатҡа бирергә тәүәкәлләй алмайым. Бәлки бишенсе томға индерермен. Барыбер ташҡа баҫтырып ҡуйырға кәрәк.

Еңел шарап һымаҡ
яҡты һағыш...

Бейектәмен тиеп һауаланма,
Һауаларҙан ергә инерһең,
Мөхәбәттең ҡайнар ҡуйынынан
Кәбер ҡуйынына инерһең.
Күңелемде хәҙер
Таң атыуы
Һирәк елкендерә,
Нығыраҡ сорнай
Уйсанлығы моңһоу эңерҙең.

Тәндең нығыраҡ ауырайыуы нимә?
Ғәйеп – гонаһтарҙан,
Иҫтәлек – аһтарҙан
Көндән-көнгә йән ауырая бара...
Тәндең ауырайыуын еңеп була,
Йәндең ауырайыуын еңеп ҡара!
Йәндең һыҙлауҙарын баҫып ҡара!
Юҡ һис сара...
Баҫып булмай йәндең көйрәүен.
Яҡты ерҙән йәнем осҡанда ла
Ғәйеп – гонаһтарҙың ауырлығы
Йәнгә тағылып барыр һөйрәлеп...

Тәнде лә, йәнде лә тыймай
Ҡанатланып осһаң икән!

«Прозрачность» кәрәк, тип таптыралар. Елек майы һурылған ил, бөлгән дә төҙөлгән халыҡ былай ҙа үтә күренеп бара бит инде! Тағы ла ниндәй «прозрачность» кәрәк? Дәүләт серҙәре күптән Америкаға һатылғанда тағы ла ниндәй «прозрачность» кәрәк?

5 сентябрь, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

31 августа «Башҡортостан»да «Тәрбиәле лә, белемле лә» тигән мәҡәләм сыҡты. Руссаһын «Республика Башкортостан»да ныҡ ҡыҫҡартып биргәндәр. Уҡып, һәйбәт баһалаусылар бар.

31 августан 3 сентябргә тиклем Фәриҙә менән Нәҡҡәр апайым баҡсала булдылар. Яңғыҙ йәшәп алдым. Бөтөнләй яңғыҙ ҡалып булмай инде.

Мәҡәләмдә «Кто владеет информацией, тот владеет всем» тигән һүҙ менән бәхәсләшкәйнем. Минеңсә, «Воспитанный человек, владеющий информацией, владеет ситуацией». К сожалению, вырастают эрудированные циники, рвачи.

Матбуғатты күберәк уҡыған һайын, шик-шөбһәләр арта, ышаныс ҡаҡшай. Күңел интуитив һиҙгәнде уҡығандағы мәғлүмәттәр көндән-көн нығыраҡ раҫлай. Мәғариф буйынса уйланыуҙарҙан бер диссертация эшләп булыр ине.

Ил мөлкәтенең дәүләт ҡулынан китеүе, араҡы һатыуҙа дәүләт монополияһының бөтөүе, һалым йыйыу буйынса ярлыларҙы талау, байҙарҙы яҡлау, сит ил күрһәтмәләре буйынса, яңы ҡағиҙәләр –

халыҡты артабан бөлдөрөү, тышаулау – уйлай башлаһаң, уйҙарҙың осона сығырлыҡ түгел.

Күберәк белгән һайын йәшәүе ҡыйыныраҡ. Белмәгәндең беләге тыныс тигәндәре дөрөҫ шул. Шуға ла «Кто не владеет информацией, тот владеет всем» тип әйтергә ҡала инде.

«Иҫереккә диңгеҙ тубыҡтан» тиҙәр. «Иҫһеҙгә диңгеҙ тубыҡтан» тиһәң дөрөҫөрәк булалыр. «Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл» тигәндәре лә бөгөнгөгә бик тә тап килә.

Наше Госсобрание в основном работает над приведением законов республики в соответствие с федеральными законами. Госдума РФ работает над приведением федеральных законов, стандартов и норм в соответствие с указаниями и директивами США и Израиля.

Яңыраҡ уҡыным: Пушкин да, Лермонтов та әсәләре тураһында шиғыр яҙмаған. Ул заманда күкрәк һөтөн имеҙеп үҫтермәгән балалары әсәләр тураһында шулайыраҡ уйлаған, күрәһең.

Ә беҙҙең башҡорт менән татарҙа шағирҙарҙың иң күп яҙғаны әсәләр хаҡындағы шиғырҙар түгелме икән? Хатта әсәһеҙ үҫкән Туҡай ҙа әсәһе хаҡында ни тиклем һыҙланып шиғыр яҙған.

Был үҙенсәлек халыҡтың менталитетынан, уның йәшәү рәүешенән, әхлаҡ тәрбиәһенән дә киләлер.

Пушкинға уны тәрбиәләп үҫтергән няняһы Арина Родионовна әсәһенән яҡыныраҡ булманымы икән? Яңғыҙлыҡтан күңеле болоҡһоғанда шул бағыусыһына йөрәк һүҙҙәре менән өндәшкән бит.

Дәүләт эштәрендә, хөкүмәт структураһында һ.б. тармаҡтарҙың хеҙмәтендә «прозрачность» тураһында талаптар ҡуйыла хәҙер. Олигархтарҙың килемдәренә ҡарата был хаҡта бер нәмә лә әйтелмәй. Унда «прозрачность» түгел, «призрачность»: шомдар, алдауҙар, енәйәттәр...

Халыҡтың тормошо иһә йылдан-йыл үтә күренмәлерәк була бара. Бөлгән бәндәләрҙең бар булғаны үтә күренеп тора.

9 сентябрь, 2010 йыл. Кесаҙна.

Бөгөн Ураҙа ғәйете. Быйылғы эҫелә ураҙа тотоусыларға бик ҡыйын булды. Йылдан-йыл оҙонораҡ көндәргә табан күсә барасаҡ.

Фәризә башта өс, уртала өс, аҙаҡ өс көн тотто.

Шишәмбе көн Аксаков премияһы буйынса комиссия ултырышы үтте. Чванов һаман да барыһын да аҫтыртын эшләй. Ике резюме буйынса фекер йөрөтөргә тейешбеҙ килеп сыға. Мин алдан Мырҙағоловҡа кереп, Рахимкулов («Башкирия в русской литературе»,

изд. в 5, II – в 6 т.) тураһында белешмә ҡалдырғайным. Уның исеме лә индерелде. Константин Скворцов лауреат булды. Киләһе юлы Рахимкуловтан башларға һөйләштек.

Кисә Комитет ултырышы үтте. Нефтекамскиҙа күсмә ултырыш тураһында һөйләштек. Ректорҙар Дәүләт йыйылышын 23-дә түгел, һуңғы кесаҙнала – 30-да үткәреү тураһында һорайҙар. Барыһы ла алдан планлаштырылған, тиҙәр.

Шамонинолағы йортҡа ут үткәрәләр. Түбә таҡталары ҡағылмаған бөтә өйҙәрҙә лә – бына эшләйҙәр! Оҫталар...

Өфөгә Степашин (иҫәп палатаһы) килде. Мәғариф министрлығында 60 млн. һумдың мәктәп төҙөлгәндә дөрөҫ тотонолмауы тураһында һөйләйҙәр, Аллаяров менән Тимербулатовтың исемен атап әйтәләр. Ә һуңғыһы яңы министр булып киткәйне.

Степашин хөкүмәт йыйылышында бик күп ғәҙәлһеҙлектәр, республика милкенең бушҡа тиерлек һатып бөтөлөүе, мәктәптәрҙең һ.б. көтәсәккә төҙөлөүе, бурыстары буйынса илдә Башҡортостан барыһын да уҙып китеүе тураһында һөйләй.

Хәҙер кемдең һүҙенә ышанырға ла белмәйһең...

Күрмәгәнеңде күрһәтә,
Тормай шул яҙмыш һорап.
Күрешер көндө һанайым,
Яҡшыға ғына юрап.

Юлдар урау, юлдар йыраҡ,
Ҡайтам донъяны урап.
Оҙаҡ-оҙаҡ күрешмәгәс,
Осрашыу шатлыҡлыраҡ.
Өҙөлөп һағынғандан һуң
Ҡауышыуҙар татлыраҡ.

Уҡытыусы эше йылдан-йыл ауырыраҡ. Белем биреүҙең яңы саралары һаман артһа ла, тәрбиәләүе ҡатмарлыраҡ була бара. Борон кешенең әхлағы нығыраҡ, күңеле сафыраҡ, кеше кешелеклерәк булған. Бынығы бәхәсһеҙ. Әммә шул үҙенсәлекте лә иҫтән сығармайыҡ: элек сабый үҙенең ата-әсәһенең, ололарҙың һүҙенән башҡа тағы ла нимә ишетеп үҫкән? Күбеһенсә тик дөрөҫ һүҙҙәр, матур үрнәктәр булған. Хәҙергесә әйткәндә, күпселеге – позитив.

Ә хәҙер ни тиклем күп алама әүрәткестәр: телевидение, урам, аҙғынлыҡ, наркомания, насар экология, боҙоҡ ғаилә, ауыр стрестар һ.б., һ.б. Һанап бөтөрөрлөкме ни?

Ошондай шарттарҙа рухы камил шәхесте тәрбиәләп ҡара! «Тәрбиәле лә, белемле лә» тигән мәҡәләмдә бына ошолар хаҡында ла әйтергә кәрәк булған. Был уйҙар аҙаҡ килде. Киләсәк яҙмаларымда быға ентекләберәк туҡталырмын.

Ташландыҡ юл тышаулай аяҡты.
Башландыҡ юл үҫтерә ҡанатты, ташлата таяҡты.

12 сентябрь, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Возникнет новая черная дыра в России – Сколково. Как ЕЭС, как нанотехнология Чубайса. Сколько склоков вокруг этого Сколкова.

Бар ерҙе, тотош баҫыуҙы бер юлы һөрөп булмай. Буразнаға яңы буразна өҫтәлә. Йортто ла бит ҡапыл төҙөп булмай: кирбескә кирбес өҫтәлә бара, ҡат-ҡат булып күтәрелә.

Ә беҙҙә – планов громадье! Проект артынан проект... Ә ул грандиоз пландар бик тиҙ шиңә.

Һәр кешегә, һәр гражданға иғтибар артырға, уның яҙмышының именлеге гарантияланырға тейеш.

Ул яҡтан тереклек донъяһы, ундағы һәр организм, һәр үҫенте ни тиклем ғәҙел һәм камил ҡоролған: распределение на молекулярном уровне. Бар ағзалар ҙа бәлки тигеҙ эшләмәйҙер, бәғзеләренә көс күберәк төшәлер. Мәҫәлән, мейенең йәки мускулдарҙың эшмәкәрлеге менән сағыштырғанда тырнаҡтыҡы юҡ дәрәжәһендә тиерлек. Ләкин үҙенә тейешле матдәләрҙе ул да ғәҙел кимәлдә ала. Кешелек йәмғиәтендә был гармония бер ваҡытта ла булмаясаҡ. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, кеше ашыҡ-бошоҡ барлыҡҡа килтерелгән – человек создан в поспешности.

Кисә Юлай еҙнә Һөйөндөковтың 80 йәшен байрам иттек. Хәрби формаһын кейеп алған, уны Фәнүзә апай 35 йыл элек теккән икән, ҡуйы күк төҫтә. Әле лә кәүҙәһенә тап-таман. Һуңғы ваҡытта бик ҡаты һалғылаһа ла, 80 йәшкә ошолай төҙ баҫып килеп еткән. Йәштән үк хәрби дисциплина менән йәшәүҙең дә йоғонтоһо барҙыр, әлбиттә.

Урмандар хәҙер халыҡтыҡы түгел. Хужаһыҙ, ҡарауһыҙ.

Ғәрлегенәнме яна урмандар?

Тулҡын ярып,
Ишкәк ишмәнегеҙ,
Телегеҙҙе ниңә тешләнегеҙ?
Ҡасан ғына әле әтәсләнеп,
Трибуналарҙан төшмәнегеҙ.

«Хазина» менән яңынан халыҡ араһына перепись алдынан сығырға ине. График та төҙөгәйнек, тик төрлө сәбәптәр табылып тора, һәр кемдең ваҡытын тура килтереүе ҡыйын.

23 сентябрь, 2010 йыл. Кесаҙна.

Халыҡ араһына «Хазина» әле генә сыға алмаҫ. 15 сентябрҙә Ҡырмыҫҡалы менән Архангель райондары ҡаршы алырға тейеш ине. Артабанғы маршрут та төҙөлгәйне: Бөрө, Мишкә, Дүртөйлө, Илеш, Дәүләкән, Әлшәй, Туймазы...

14-дә кис «тревога» һуҡтылар: туҡтатырға! Командировкалағы З.Й. Рәхмәтуллинаға шылтыратҡандар хатта. Зөһрә Йыһанур ҡыҙы минең хатҡа һәйбәт резолюция һуғып, район етәкселәренә фарман ебәргәйне. Инде отбой! «Тревога» Земфира Тимерхановна Әбделмәнованан башланған.

Хәниф Кәримдең 100 йыллығы Йәштәр театрында матур үтте. 17-дә Кәтибә апай Кинйәбулатованы Яҙыусылар союзында 90 йәше менән ихлас ҡотланыҡ. 14-дә Президиум булды. Кисә мәғариф законы буйынса «рабочая группа»ла төҙәтмәләр буйынса һөйләшеү уҙғарҙыҡ. Бөгөн – госсобрание.

20-дә Президент Госсобраниела даими эшләүсе депутаттар менән осрашты. Үҙе сәғәт ярым йөкмәткеле, информацияға бай сығыш яһаны. Депутаттарҙан Наил Ҡотлогилдин һөйләне. Мин дә һүҙ әйттем: мәғариф мәсьәләләре, телевидениеға талаптар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең бик аҙ эш хаҡы алыуы, йәш интеллигенция өсөн махсус йорт төҙөү. Китаптар бүләк иттем. Президент әйтә: «Һеҙ минең атайыма бик оҡшағанһығыҙ!» – ти. «Я был бы счастлив иметь такого сына», – тип яуап бирҙем.

Ошо осрашыуҙан һуң, Рәхмәтуллинала «Хазина» тураһында һөйләштек. Уға ҡайһы бер үткер урындарҙы, Мәскәү сәйәсәтенә ҡаршы һүҙҙәрҙе һайлап әҙерләп биргәндәр. Дискты ҡарай башлағайныҡ, өйҙә яйлап ҡарармын, тине.

21-дә Мостай Кәримдең зыяраты янында бик ихлас хәтергә алыу осрашыуы үтте. Рәхмәтуллинаға тәүге һүҙҙе бирҙем. Шишмә

хакимиәтенән вәкил, Ҡ. Аралбай, Мостай ағайҙың ҡыҙы Әлфиә һөйләне, Фәрдүнә Ҡасимова алып килгән студенттар шиғыр уҡыны.

Ошо йыйында булғанда Рәхмәтуллина менән биштән һуң «Хазина» тураһында һөйләшергә тигәйнек. Телефондан шылтыратҡам, был көйө бармай, йырҙар өҫтәйем, ти һ.б.

Президент менән осрашҡанда дискты («Хазина» буйынса шиғри театр спектакле) Рөстәм Зәки улына ла бүләк иткәйнем. Ҡараған икән. Аҙаҡ нимә һөйләшкәндәрен алла үҙе белә. Һәр хәлдә, әлегә а ля финита!

Таңсулпан Бабичеваға инеп, хәлдәрҙе аңлатып сыҡтым.

Ниһәйәт – нәйәт! «Хазина»ның спектакленән һуң шундай һүҙҙәр әйтерлек ине. Ә хәҙер: ниһәйәт – һәләкәт, хыянат. Шулай ҙа текст менән яңынан ултырам әле.

Әсәйең алдында йөҙөң ҡыҙарырлыҡ эштәр эшләмәһәң, илең алдында йөҙөң бер ҡасан ҡыҙармаҫ.

28 сентябрь, 2010 йыл.

Кисә оперативкала Рәхмәтуллина «Хазина»ны Йәштәр театры репертуарына индереү тураһында әйтте.

Үткән аҙнала саралар күп булды: Өфө, Ҡыйғы – Х. Кәримдең 100 йыллығы; Баймаҡ – С. Кулибай, 100; Өфө – К. Кинйәбулатова, 90; Шаран – И. Абдуллин, 90; Тартыш – Ә. Кәшфуллин, 80.

Һәм иң зур осрашыуҙар: 24-дә Илеш, Аҡтаныш. Ошо хаҡта оперативкала һөйләнем. Бер көндә – ике республикала. Алмаш китаптарҙың сығыуына – 5 йыл. 30-ар китап сыҡҡан. Бик юғары кимәлдә үтте. Беҙҙән Ҡ. Аралбаев, И. Кинйәбулатов, Р. Камал, С. Шәрипов, Ф. Туғызбаева, Ә. Таһирова, Г. Юнысова, мин, нәшриәт директоры З. Тимербулатов, Ғәлиә Ғәлимова, Олия, китап һатыусы, ҡурайсы Азат Биксурин. Татарстандан И. Ибраһимов, Р. Миңнуллин, Р. Фәйзуллин, Р. Ғаташ, М. Ғәлиев, Ф. Садриев, М. Хәбибуллин, ике артист, китап һатыусылар.

3 октябрь, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Беҙ ҡартаймай кем ҡартайһын инде? Әле ҡасан ғына аралашып йөрөгән ағайҙарҙың – Х. Кәримдең (Йәштәр театры, Ҡыйғы), С. Кулибайҙың (Таһир) 100 йыллығы үтте. Союзда Кәтибә Кинйәбулатова апайҙың 90 йәшенә йыйылып алдыҡ. Апайҙың хәтере юғалыбыраҡ китһә лә, күҙлекһеҙ уҡый, яҡшы ишетә, теремек.

28-дә Волга буйы регионда рының парламенттары етәкселәренең Ассоциацияһы үтте, Конгресс-холда. Беҙ Ырымбурҙан Кулагин Дмитрий Владимировичты ҡаршы барып алып, оҙатып ҡалдыҡ. Президент

аҙаҡ мәжлес йыйҙы. Толкачев алып барҙы. Беҙҙең депутаттарҙан миңә тост әйтергә һүҙ бирҙе. Уның үҙенең доклады БР-ҙағы санаторий-курорттарҙа дауалау тураһында ине. Мин дә һаулыҡ тураһында, Башҡортостандың Рәсәй халҡының һаулығын һаҡлауға һәм нығытыуға индергән өлөшө хаҡында әйттем. Кешенең көнө «һаумыһығыҙ» тигән һүҙҙән, һаулыҡ һорашыуҙан башлана, «һау булығыҙ» тип, һаулыҡ теләп тамамлана тинем. «Соседство» шиғыры менән тамамлап ҡуйҙым. Аҙаҡ рәхмәт әйтеп ҡул ҡыҫыусы ҡунаҡтар ҙа, үҙебеҙҙекеләр ҙә байтаҡ булды.

30-да «Нефтяник»та муниципалитеттар съезы. Президент телмәренән һуң тәнәфес, кире инеп торманым.

«Өфө» ресторанында бәләкәй генә табын.

1 октябрҙә Курапов сәғәт 11-ҙә Һ. Дәүләтшина премияһына конкурс иғлан итеү тураһында һөйләшергә йыйҙы.

Сәғәт өстә С. Юлаев премияһы буйынса комиссияның йомғаҡлау ултырышын үткәрҙе. Р. Камал, Р. Килмәмәтов, Р. Сабитов лауреат булды. Бына шулай ул донъя...

Шул уҡ көндө сәғәт 1-ҙә Яҙыусылар союзында эшләп киткән ветерандарҙы йыйҙыҡ. Сәғәт 4-тә Толкачев президиум уҙғарҙы. Унан һуң Фәриҙә менән баҡсала кишер, сөгөлдөрҙө алдыҡ, Данис менән емкосте индерҙек. Шамониноға мөгәрәпкә тимер баҫҡыс алып барҙыҡ. Зөфәр мунса менән пристройҙы буяп, верандаға, һарайға өйҙән алып барған рейкаларҙы ҡағып сыҡҡан! Рифҡәт бәләкәй улы менән нигеҙ эштәренә – откосҡа тотонған. Көн бына шулай ырамлы үтте.

Уның ҡарауы кисә йоҡоно туйҙырҙым. Бөгөн Нефтекамскиҙағы күсмә ултырыш өсөн сығышты әҙерләп ҡуйҙым.

«Интернационал» менән рухланған олатайҙар, интернет менән баштары әйләнгән ейәндәр. Тәүгеләрендә ихлас инаныу, хәҙергеләрҙә информация байлығы менән бергә цинизм, иманһыҙ белем.

Нәйәт – ниһәйәт тигәндәрем ашығыбыраҡ әйтелә. Эш өйөлгәндән өйөлә.

Ел тик беҙҙә шулай наҙлап иҫә.

Ҡаза килмәһен Ҡазанға
Уфтанмаһын ғәзиз Уфа.

«Легко любить все человечество» (К. Кулиев).

23 октябрь, 2010 йыл. Шәмбе.

Көндәр ҡыҙыу үтте, был дәфтәргә тотонорға ла ваҡыт булманы. 11-дә Нефтселәр һарайында Республика көнө, 20 йыллыҡҡа арналған тантаналы йыйылыш үтте. Элеккесә күтәренке булманы, гәрсә 20 йыллыҡ юлды данлап әйтерлек, Рәхимовтың хеҙмәттәрен атап баһаларлыҡ сәбәптәр етерлек. Хәмитов Р.З. йыйнаҡ ҡына һүҙ әйтте. Аҙаҡ Конгресс-холда табынға йыйҙы. Дәүләт йыйылышы комитет рәйестәрен ҡатындары менән. Мәжлестә Президенттан һуң (сразу тип әйтәйек) һүҙ бирҙеләр.

Филармонияла сезон асыу тантанаһында Президент менән күрештек.

6-да Нефтекамскиҙа беҙҙең комитеттың күсмә ултырышы мәғарифҡа арналды. Балалар баҡсаһында, художество мәктәбендә, БДУ филиалында, нефть колледжында булдыҡ.

Төп сара 1-се лицейҙа үтте. Директоры беҙҙең комитет ағзаһы Гәрәев Вячеслав Юрьевич. Бынан тағы ла бер ағзабыҙ Ғәлин Илһам Илюсович.

Материалдарҙы брошюра итеп әҙерләйбеҙ.

12-дә идара ултырышы үтте. 19–20 октябрҙә Белорет яҡтарында йөрөп ҡайттыҡ. (Тимер Йосопов, Гүзәл Хамматова, Зөфәр Вәлит, Зөлфиә Ханнанова, Дамир Шәрәфетдинов, мин). Программаны һәйбәт төҙөгәндәр. Хакимиәт башлығы Миронов Вячеслав Геннадьевич ҡабул итте.

Тәүге урын – Яныбай Хамматов исемендәге башҡорт гимназияһы. Унан һуң лицей-интернат, педколледж, Шығай ауылында осрашыуҙар. 20-дә Сермән мәҙәниәт йорто, Межгорье, Инйәрҙә осрашыуҙар. Инйәрҙәге йорт мәҙәниәт үҙәге тип атала. Был яҡтарҙа Байдәүләтов ныҡ төҙөп ҡалдырған. Шулай ҙа проблемалар күп. Лицейҙың ятағы ныҡ иҫкергән, бер бүлмәлә 15-әр бала йәшәй.

Халыҡ Президенттың ҙур сараларын хуплай. Бындағылар өсөн бигерәк тә Ирәмәлдә милли парк асыу мөһим. Торатауҙы яҡлауы ла һәйбәт.

Тик халыҡ иҫәбен алыу ниндәй һөҙөмтәләр бирер. Бөтөнләй үҙағышына ҡуйылды. Нәҡ ошо көндәрҙә Нефтселәр һарайында Татарстандың Ғ. Камал исемендәге театры спектаклдәре бара. Ҡотҡо таратыу ояһына әйләнде. Быға нисек юл ҡуйырға мөмкин? Күрәләтә мәсхәрә итеү түгелме ни?

21-дә Дәүләт йыйылышы ултырышы. Шул уҡ көндө Хәмитов менән Медведев осрашты. Ололарҙы сит илдәргә йөрөтөү тураһында һөйләшкәндәр.

Хәҙер оло быуын кешеләрен яңы технологияларға – компьютерға өйрәтеү, интернетҡа сығарыу буйынса курстар асыла. 20–30-сы йылдарҙағы наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәш кампаниялары иҫкә төштө.

Яҙыусының совет осорондағы мөмкинлектәре менән хәҙергене сағыштырырлыҡмы ни? Элек китап яҙырға материал туплар өсөн сит илдәргә йөрөп ҡайта торғайнылар. Мәҫәлән, Я. Хамматовтың, Н. Мусиндың сәйәхәттәре хәтерҙә. Хәҙер быны күҙ алдына ла килтерерлек түгел. Сит илгә түгел, яҙыусыларҙы Мәскәүгә, хатта күрше өлкәләргә лә ебәрә алмайбыҙ.

16-да «Мир» бинаһындағы кинозалда «Ел ҡыуыусы»мы, «Елғыуармы» – башҡортса нисек алғандарҙыр – руссаһы «Ловец ветров» тигән тулы форматлы башҡорт художестволы фильмын ҡараныҡ. Режиссеры – Айсыуаҡ Йомағолов, сценарийы – Айҙар Аҡмановтыҡы. Төп ролде Мәүлетбай Ғәйнетдинов һәйбәт уйнай. Мөмкинлек, финанс булғанда, булдырырлыҡ егеттәр бар. Аҡса етмәү арҡаһында был фильм нисәмә йыл сыға алмай ятҡан!

Октябрь уртаһында TV-нан (БСТ) киске унда тура эфирҙан ярты сәғәт интервью бирҙем. Ҡотлап шылтыратыусылар булды. Кемдәрҙер һорауҙар бирҙе. Берәүһе этләшмәксе ине, ахыры, аҙағына еткермәне.

Белорет сәйәхәтен матур итеп «Башҡортостан»да бирергә кәрәк. Дамир Шәрәфетдинов әҙерләргә тейеш. Мин инеш һүҙ яҙырмын.

Илке-һалҡыраҡ кәйеф. Ҡырҡ эш ҡырылып ята. Любойына тотонорға әҙерлек бар, тик ярһып ҡуҙғалып китеп булмай.

29 октябрь, 2010 йыл. Йома.

25-дә дүшәмбе хөкүмәт больницаһына килеп яттым. Иртән анализдар бирҙем. 26-да бүлмәнән бүлмәгә йөрөттөләр. Ҡарамаған ерҙәре ҡалманы. Гемоглобин төшкән, шуның сәбәбен эҙләйҙәр. Ул көндө хәл бөттө.

27-дә төшкә тиклем Яҙыусылар союзында булдым. «Ватандаш»ҡа Фәрит Әхмәҙиевкә Рәшит Солтангәрәев тураһында мәҡәлә ҡалдырҙым. «Истоки»ға инеп гонорар алып сыҡтым. «Ағизел»гә шиғырҙар ҡалдырҙым. Нәшриәткә ингәйнем, унда оперативка бара. Шулай ҙа күрер кешеләремде күрҙем. Госсобрaниела Наил Ҡотлогилдинда булдым. Ул бюджетҡа мәғарифҡа ла ҡағылышлы төҙәтмәләр биргән. Шуларҙы ҡараныҡ.

28-дә бер дарыу йотоп (30 мең тора тинеләр) теркәп барыусы аппарат аҫып йөрөнөм. Биш тулыр алдынан алдылар. Бик урынлы булды, һуңлаһалар кәрәк эшкә ҡамасаулар ине.

Көн дә кис Дәүләт йыйылышына барып, газеталар алып ҡайтам. Уҡымай ҙа булмай, уҡыһаң, ваҡытты күп ала.

Ришат Дихин Президент блогынан материалдар биреп тора. Яңы ғына интервьюһы ҡыҙыҡлы ғына булды. Тәбиғәткә, телгә, халыҡтың йәшәү кимәленә иғтибар. Эш, эш хаҡы, торлаҡ – бына ошо өс мәсьәләне үҙәккә ҡуя. Ысынлап та, матди тормоштоң нигеҙҙәре. Унһыҙ рухи тормош та юҡ. Ләкин рухи тормош әһәмиәтлерәк һәм принциптары ла техник яңылыҡтар һымаҡ туҡтауһыҙ үҙгәреп тормай.

Чацкийҙың «Служить бы рад, да прислуживаться тошно» тигән һүҙҙәрен ҡабатлауҙар. «Работа» раб һүҙенән, «служение» иһә слуганан. Слуга рабтан шәберәк, юғарыраҡ, йәнәһе.

Минеңсә, урынһыҙ ҡаршы ҡуйыуҙар. Береһе икенсеһенән һис кенә лә кәм түгел. Мәҫәлән, мин үҙем хаҡында әле шулай тип әйтә алам: «Я всю жизнь служу литературе, сейчас работаю над новой книгой! Тружусь всю жизнь».

Работодатель службодателгә әйләнергә тейешме ни? Кешене работящий тип маҡтайҙар, служащий иһә сословие мәғәнәһендә.

Заработок, зарплата һүҙҙәрен ҡайҙа ҡуйырға? Службоплата что ли? Соҡона башлаһаң, тап килмәгән урындар күп инде ул.

Ҡатын-ҡыҙ заты ғүмерен ҡурсаҡ менән уйнап башлай, ҡурсаҡ менән уйнауын олоғайғас та дауам итә.

Фәриҙә Асҡар менән уйнап туймай, үҙе сабыйға әйләнеп киткән һымаҡ.

Ир-егеттең ҡурсағы – ҡатын-ҡыҙ.

25-дә, дүшәмбе, Рәхмәтуллинала оперативка башланырын көтөп коридор башында Ағиҙелгә ҡарап торҙом. Ап-аҡ томан, йылға күренмәй. Н. Нәжмиҙең «Ағиҙелдә аҡ томан, пароход тауыштары» тигән юлдары иҫкә төштө. Реаль тәбиғәт күренеше һәм һағышлы серлелек: «Дымлы керпектәр шикелле ярында ҡамыштары».

Быны Иҙел буйында үҫкән кеше генә яҙа алалыр.

30 октябрь, 2010 йыл. Шәмбе.

Дарыу (төйөр) йотоп, аппарат аҫып йөрөү 8 сәғәт яҙылып барғайны – 28-дә. Бөтә процедура 40 мең тора икән. Аллаға шөкөр, яҙылып барған мәғлүмәттәр хәүефле нәмәләр күрһәтмәгән.

28-дә сумка аçып йөрөгән көндә иртәнге дүрттә Белорет юлъяҙмаларын яҙа башлап, сәғәт икеләргә бөтөрөп тә ҡуйҙым. Данис менән «Башҡортостан»ға ебәргәйнем, кисә номерға әҙерләп тә яталар. Бөгөн сығырға тейеш ине, Фәризә киоскыларҙан таба алмаған.

Ашығыбыраҡ яҙылды. Ҡайһы бер теркәлгән уйҙарым инмәй ҡалған, аҙаҡ ҡына китапҡа тулыландырып эшләп сығырмын тим.

Белорет ерендә Башҡортостандың иң бейек ике тауы – Ямантау менән Ирәмәл. Белорет ерендә милләтебеҙҙең ике бейеклеге, рухи ғорурлығы тыуған – Арыҫлан Мөбәрәков менән Заһир Исмәғилев.

Больницала ла тыныс ҡына ятып булмай. Кисә Дәүләт йыйылышында булдым, матбуғат йортона барып әйләндем. Фәризә, Зөфәр Шамониноға барҙыҡ. Унда Рәфкәт ашыҡмай, яй эшләһә лә, аҡсаны йәһәт һура.

Тәҙрәләргә тимер селтәрҙәр ҡуйҙыртҡайным. Матур булған.

Күңелдә һағыш ҡайһы саҡта шул тиклем ныҡ тулыша – түҙеп торорлоҡ түгел. Һағышты ла бушатып торорға кәрәк. Сатнауың, хатта ярылыуың, емерелеүең бар. Минең күңелемдәге һағыш башҡаларҙың күңелендәге һағыш-һағыныуҙарҙан тулышалыр ул.

Күңелем тулышҡан һағышҡа,
Һағыныуҙар өҙә үҙәгемде.
Һағышымды бүлешергә ҡурҡам,
Кешеләргә әйтмәй түҙәм инде.

Бүлешер ҙә инем һағышымды
Һинең менән, йәнем, һинең менән.
Тик һин үҙең – мөлдөрәмә һағыш,
Хәлдәреңде үҙем генә беләм.

Пенсияға 62 йәштән сығарыуға ҡаршы Францияла халыҡ баш күтәрә. Беҙҙә лә ундай проекттар тураһында ишетелеп ҡала.

Минеңсә, бында арифметика бик үк ҡатмарлы түгел. Мәсьәлә иң элек ил халҡының, иренең, ҡатынының уртаса күпме ғүмер йәшәүенә бәйләнгән. Уртаса ғүмер оҙонлоғо, мәҫәлән, 85 йәш икән, пенсияға 70 йәштән дә сығырға мөмкиндер. Әгәр кеше ғүмере (бигерәк тә ир-ат) Рәсәйҙәге һымаҡ 60-ҡа ла етмәй өҙөлә икән, күптәр пенсия йәшенә лә етмәй икән, был хаҡта нисек һүҙ ҡуҙғатып була?

6 ноябрь, 2010 йыл. Шәмбе.

Иртәгә больницаға ингәнгә ике аҙна тула. Ни арала үтеп тә киткән. Ваҡытты әрәм итмәҫкә тырыштым. 28-дә сумка аҫып йөрөгәндә аптырап (Эшһеҙ йөрөй алмайым) Белорет мәҡәләһен яҙып ташлағайным. «Башҡортостан»да сығып та китте. Аҙаҡ тулыландырып сығытым, дискеты менән китапҡа әҙерләп ҡуйҙым.

Докладҡа байтаҡ заготовкалар әҙерләнем, нәшриәттең, журналдарҙың йыллыҡ йөкмәткеләрен алдырттым. Дөйөм алғанда һуңғы биш йылдағы әҙәби мөхит күҙ алдына килә. Тик был юлы элекке өс съездағы докладтарҙағы һымаҡ ул тиклем ентекләп һөйләмәҫкә ине. Жанрҙар буйынса докладтарҙа төп һүҙ әйтелергә тейеш. Мин инеш һүҙ һымаҡ итеп әҙерләйәсәкмен. Ойоштороу эштәренә күберәк туҡталып, үҙенсә хисап биреү ҙә булыр. Байтаҡ өлөшөн ошо 4 көнлөк (4–7.11.) ялда яҙып ултырам. Әле байтағы әҙер. Был юлы сәйерерәк килеп сыҡты: докладтың буласаҡ тәүге өлөшөн яҙмаҫ борон эшкә тотоноп киттем. Бөгөн-иртәгә инеште яҙырға ине.

Время – бремя.

Ҡала тынған.
Йорттарҙа ут һүнгән.
Һүрелгәндәй донъя ҡоттары.
Яна бары урам уттары,
Осрай бары урам эттәре.
Ҡайҙа ғына барып һуғылайым?
Яңғыҙлыҡтан кемдәр ҡотҡарыр?

Өс машина
Ҡорт һымаҡ үрсей бит
Ҡалала машина.
Кем эшкә, төҙөлөшкә,
Кем талаш-үлтерешкә,
Төртөшә, бәрелешә
Йән-фарман ашыға.

Өс изге машина ҡалала:
Береһе икмәк, һөт тейәгән,
Икенсеһендә

Балалар ҡайҙалыр баралар.
Өсөнсөһөндә
Кемделер үлемдән
Араларға сабалар.
Өс изге машина ҡалала.

8 ноябрь, 2010 йыл. Дүшәмбе.

Больницаға ингәнгә ике аҙна тулды. Бөгөн анализдар бирәм дә сығам.

Һәйбәт эш ритмында булдым. Баштағы көндәрҙә докладҡа әҙерлек барҙы, 4 көн ял ваҡытында баш күтәрмәй эшләп, ҡараламала яҙып бөттөм. 15-ләп бит текст әҙерләрмен тигәйнем, яҙғаным бер табаҡ самаһы булды. 4 көндә йырып сыҡтым, ошолай оҙаҡ ялға тура килеүем һәйбәт булды әле. Өйгә бер тапҡыр ҙа ҡайтып йөрөмәнем.

Кисә Рифкәт менән Шамонинолағы йортҡа материалдар алдыҡ – 5 меңлек.

Өйҙә булһам, былай бүленмәй эшләй алмаҫ инем. Артурҙар күсенгән, Асҡар беҙҙә булған.

Өйҙә яҙышҡанда кешеләр ҡамасауламағанда ла йыш ҡына китаптар эште бүлдерә. Берәй нәмәне асыҡлайым тип әле берәй китапҡа, әле икенсеһенә тотонаһың да кәрәк мәғлүмәтте асыҡлағас та һаман онотолоп уҡыуыңды ҡуймайһың. Байтаҡ ваҡытың үтә лә китә.

Бына шулай китаптар ярҙамсы ғына түгел, эшеңде бүлеүсегә лә әйләнә ул.

Больницала янымда тик ҡағыҙҙар, элек теркәп килгән уйфекерҙәр генә. Нимәлер эҙләп, бүленәһе юҡ.

Аксаков баҡсаһындағы күлдә ике өйрәк. Йылы яҡҡа ҡасан осорҙар? Әллә Өфөлә ҡалыр урындары бармы?

Кеше ҡайһы саҡта күленә ҡуша туңған өйрәк хәлендә ҡала. Мин дә шуға оҡшап ҡуймаммы, тип уйлап ҡуйҙым.

Хәҙер барыһы күренекле,
Һәләтлеләр хәҙер күп.
Әшнәләр янында – гений!
Пушкиндар янында – сүп!

Бәғзе күренеклеләрҙе
Күрмәүең хәйерлерәк.

Илдең ҡытлыҡ йылдары –
Кемгәлер ҡотлоҡ йылдары.

Шағирҙарға ҡасан еңел булған?
Ундай хәлде мәңге көтмәгеҙ,
Өмөт итмәгеҙ!

Элек больницала бер бүлмәлә әллә нисә кеше ята торғайныҡ. Хәҙер бында кем менәндер йәшәй алмаҫ инем.

Я стал слишком индивидуальным. Но не индивидуалистом.

Врачтарым бик һәйбәт. Дауалаусыһы – Светлана Фәритовна Кадырова, бүлек мөдире – Әнүзә Әмировна Шоңҡарова.

5-дә минең бүлмәлә ике академик – Фәнил Фәйзуллин һәм Миңлеәхмәт Моталов менән – ҡымыҙ эсеп, йылҡы итенән ауыҙ итеп, әңгәмәләшеп ултырҙыҡ. Моталов ағай һикһәнде үтһә лә хәтере иҫ киткес. Көнөн-сәғәтен атап һөйләй.

Докладта жанрҙарҙы байҡамаҫҡа булғас, нисектер дөйөмөрәк, пафослыраҡ килеп сыҡты һымаҡ. Публицистикаға бирелеп китмәҫкә ине. Ике-өс көн һыуындырырға ла был аҙнала эшен бөтөрөргә кәрәк. Ваҡыт ҡыҫа. Съезға материалдарҙы йыл бөткәнсе мотлаҡ әҙерләп өлгөрөргә, берәй нәшриәткә тапшырырға. Киләһе йыл финанслауҙың ҡасан башланырын кем белә? Быйыл бер квартал буйына союз аҡсаһыҙ ултырҙы бит.

Эштәрҙе бер рәүешкә килтерергә лә «Хазина»ға тотонорға кәрәк. Йәштәр театрының быйылғы репертуарына индерергә ине.

Пушкиндың ғорур баҡыр һыбайлыһы («Куда ты скачешь, гордый конь?»), Гоголдең ярһыу тройкаһы һәм бөгөн ут эсендә янып юҡҡа сыҡҡан «Хромая лошадь» – Россия бына ниндәй «үҫеш» юлы үтте...

Һәр эштең нәтижәһе өсөн иң аяныслыһы – «невостребованность». Эшләгән әйбереңдең бер кемгә лә кәрәк булмауы. Тимәк, ҡара тиреңде түгеп, бушҡа тырышҡанһың, күпме хеҙмәтең әрәмгә киткән тигән һүҙ.

Аяныслы ғына түгел, уйлап ҡараһаң, фажиғәле хәл.

Яҙыусы өсөн «невостребованность» бигерәк тә фажиғәле.

12 ноябрь, 2010 йыл. Йома.

8-дә иртән, анализдар биргәндән һуң, больницанан сыҡтым. Уға тиклем аҙыраҡ ошо дәфтәр менән ултырҙым. Съезға мәғлүмәттәр

йыйынтығы төҙөү буйынса эштәр әкренләп алға бара. Докладты Луиза кисә баҫа башланы, бөгөн бөтөрөргә тейеш. Ял көндәре тағы ла ныҡлап ултырып, һуңғы нөктәне ҡуйырға кәрәк.

Кисә Ринат Камал бәләкәй генә мәжлес ойоштороҙо. Лауреат булыу уңайы менән. Нәжип ағай, Тимер, Хәсән, Рәдиф Тимершин, Рәлиф Кинйәбаев, Зөфәр Тимербулатов, мин, үҙе – һигеҙ кешелек табын.

Ике съезд араһында Р. Камал өс роман яҙған. Бөтәһе – әлегә туғыҙ. Бөгөн иң күп яҙыусы прозаик. Һан сифатҡа әйләнһен ине.

Шамонинолағы эштәрҙе ҡарап ҡайттыҡ. Түбәгә панелдәр йәбештереп бөттө, Рифкәт менән иҫәпләштем. Хәҙер АГВ бүлмәһенә тотона.

2006 йылдың апрель-майында яҙған бәләкәй генә көндәлек дәфтәре ҡулға эләкте лә шуны уҡып ултырҙым. Үҙем өсөн генә түгел, башҡаларға ла ҡыҙыҡлы булыр ине. Көндәлектәрҙе йыйып, китап итеп баҫтырырға кәрәктер. Тик бер китапҡа ғына һыйырлыҡ күләмдә түгел улар. Ике-өс том килеп сығырға мөмкин. Ләкин нисек кенә булһа ла өлгөрөргә ине. Мин булмағас, уларҙың яҙмышын кем генә хәстәрләһен...

Урлатмауы ҡыйын.
Урламаҫҡа була.

Тел хикмәттәре. Ситтән алынған һүҙҙәр телгә көсләп тағылмаһын, алмаштырмай ҙа мөмкин булған осраҡтарҙа кәрәкһеҙгә алмаштырылмаһын ине. Унда сүп һүҙҙәр хәҙерге рус телендә ҙур бәләгә әйләнде. «Встреча» түгел, «саммит», имеш. Ундай миҫалдар – аҙым һайын.

Телгә тәбиғи үрелеп киткән сит тел һүҙҙәре уның үҙенеке һымаҡ ниндәй тәбиғи, шифри янғырай бит. Мәҫәлән, «Гранатовый браслет» – береһе лә рус һүҙе түгел, әммә Куприндың таланты уларға ниндәй моң, гармония бирҙе. Йәки «Бахчисарайский фонтан», йәки «Демон», «Мцыри», артабан «Шинель», «Идиот», «Персидские мотивы» һ.б.

13 ноябрь, 2010 йыл. Шәмбе.

12 ноябрҙә ике сара: 1) йәштәргә фән һәм техника өлкәһендә дәүләт премиялары тапшырыу. 2) Марат Ҙәйнуллиндың БДУ-ла 75 йәшлек киҫәһе. Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай һәм Яҙыусылар союзы исеменән ҡотланым.

Аҙ йоҡлау арҡаһындамы – ҡан баҫымы кисә бик нығ төшөп китте. Иртә ятып төнгө икелә тороп ултырҙым. Нәшриәттән шылтыратҡанға Ғ. Сәләмдең томын ҡарап, баштан-аяҡ тиерлек байҡап сығтым. 100 йыллығына китабын әҙерләйҙәр икән, шуға һайлап алырҙайҙарын билдәләнем. Уны уҡығанда, бик моңһоу уйҙар хәтергә килде. Иң элек йәшлек хәтирәләре, әлбиттә. «Һайланма әҫәрҙәр» 1962 йылда сыҡҡан, Ким Әхмәтйәнов төҙөгән, уның баш һүҙе, аңлатмалары.

Был китапты ни тиклем тулҡынланып уҡығаным, уны ҙур яңылыҡ, ваҡиға күреп ҡыуанғаным әле лә хәтерҙә. Былай тулы килеш Сәләмде күргәнебеҙ юҡ ине, гәрсә мәктәптән үк уны ятлап үҫһәк тә, Сәләм кумирыбыҙ булһа ла...

Барыһы ла ни тиклем шартлы һәм ваҡытлы. Хәҙер Сәләмдең күп әйберҙәрен ҡабул итерлек түгел. Шул уҡ ваҡытта ни тиклем бер ҡатлы инаныуҙар – святая наивность. Шулар хаҡында уйлап, хатта күңел тулып китә. Нисәмә йылдар буйы шулай ихлас инанып йәшәлгән бит! Табынмаҫтай нәмәләргә табынһаҡ та, күпме ихлас ышаныуҙар, ни тиклем йәшәү, төҙөү дәрте.

«Минең йөрәктә бит асыу түгел,

Шатлыҡҡа ла урын етешмәй!» – шул йылдарҙағы тормошҡа ошондай мөнәсәбәт һис юғында аҙ ғына миҡдарҙа бөгөн булһын ине!

Бишенсе яртыға тиклем ултырғандан һуң бер сәғәт йоҡлап алғайным – хәлдәрем бөтөнләй башҡаса – һәйбәт, зиһен ап-асыҡ, кәйеф яҡшы. Йоҡосоларҙан көлһәк тә, минең һымаҡ йоҡламаусы булып йәшәүе лә нормаль түгел, әлбиттә. Ләкин нормаль ритмға күсеүе бик ҡыйын.

15 ноябрь, 2010 йыл. Дүшәмбе.

Ял көнөндә лә докладтан айырылып булманы. Баҫҡандан һуң төҙәтеп сығырмын тип тотонғайным, өҫтәлмәләр индерҙем. Алдан әҙерләнгән яҙмаларҙың докладҡа барыһын да барыбер һыйҙырып булмай. Уларҙың ҡайһы берҙәрен йомғаҡлау һүҙендә әйтермен. Материалдарҙы бер папкаға туплап ҡуйҙым. Доклад менән эш әлегә тамам. Уны тәржемәгә тотонорға кәрәк.

Был аҙна бик тығыҙ: Ҡорбан байрамы, Президиум, ИИЯЛ – Ураҡсин, Стәрле, «Китап» һ.б. Бөгөн оперативкалар төшкә тиклем ваҡытты аласаҡ. Покой нам даже не снится.

4 декабрь, 2010 йыл. Шәмбе.

Бөгөн Татарстан дәүләт советы делегацияһы килеп китте. Фәрит Мөхәмәтшин етәкселегендә 17 кеше. Үҙебеҙҙең профиль комитеты рәйесе Рәзил Вәлиев менән минең кабинетта булдыҡ, шунан

Протоколға ҡул ҡуйыуҙа ҡатнашыу, ҡунаҡтарға экскурсиялар, Ҡоролтайҙың ҙур йортонда ҡабул итеү.

Рәзил Вәлиев Ғабдулла Туҡайҙың уникаль баҫмаһын килтергән. Бик затлы бүләк: кәҙә тиреһенән эшләнгән күн ҡумтала ошондай уҡ тышлыҡлы китап, алтын төҫөндәге яҙыуҙар, матур ҡағыҙ һәм бай иллюстрациялар...

Беҙ ҡунаҡтарға өс телдә сыҡҡан «Урал батыр»ҙы бүләк иттек, мин Союздың 75 йыллығына сығарылған томды, үҙемдең хәҙистәрҙе, «Хазина»ны, Ҡазанда сыҡҡан мөхәббәт китабын, үҙебеҙҙең комитет, мәғариф буйынса баҫмаларҙы бүләк иттем. Артабан аралашыуҙы дауам итеү өсөн эшсе төркөмөнә мине лә индергәндәр. 22-дә Президенттар осраша.

17 ноябрҙә Президиум ИИЯЛ-да З. Ураҡсиндың 75 йыллығына арналған ултырышта сығыш. 18 – күңел асып алыу, 18 – парламент тыңлауҙары (һыу мәсьәләһе), 19-да «Китап»тың йортон презентациялау, Стәрле академияһының (пединститут) 70 йыллығы (байрам итеүҙәр менән), 24-дә музколледжда минең ижад кисәһе, 25 – Госсобрание, 26 – тағы ла күңел асыу...

Көндәр бына шулай елдереп үтә. 30-да «Урал батыр»ҙың яҙып алыныуына арналған конференция үтте. Шуға сығыш әҙерләнем. Пленар ултырышта тәүге булып һөйләнем.

29-да Йәштәр театрында Рәсимә Ураҡсинаның 60 йыллығында Союз исеменән Ҡәҙим Аралбаев ҡотланы. Минең барырға ваҡыт етмәне. 30-да «Урал батыр»ҙағы секцияла Розалия Солтангәрәеваны Дәүләт Йыйылышы һәм Союз исеменән ҡотлап, йола тураһындағы шиғырымды уҡыным.

3 декабрҙә «Нефтселәр» һарайында Киров районының 75 йыллығына арналған кисә үтте. Концертта бер-бер артлы бейеүҙәр балалар утреннигына оҡшап китте.

Ошондай ритмда йәшәп ижадҡа нисек ваҡыт тапмаҡ кәрәк – шуға йән көйә. 4-се томға материалдар туплағанмын, улар өйөлөп ята. Тиҙерәк эшен бөтөп тапшырырға, 5-се томға тотонорға кәрәк.

«Хазина»ның шиғри театр өсөн яңы вариантын эшләтәһе бар әле. Уға ҡул етмәй.

Ултырыш та ултырыш,
Күпме ултырышта
Буш һүҙҙәр бушатып,
Буш һүҙҙәр тултырмыш,

Ниндәй аҫыл ваҡыттарҙы
Әрәм итеп ултырмыш!..

5 декабрь, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Ҡаҙанға Хәсән Туфандың 110 йыллығына арналған кисәләргә саҡырғайнылар. Хәсән ағай менән аҙ булһа ла аралашып ҡалдыҡ. Уның тураһында яҙғаным да, өҫтәп әйтер һүҙҙәрем дә бар ине. Үкенесле, барырға форсат юҡ. Ирек Кинйәбулатовты ебәрәбеҙ.

Исмаһам, матбуғатыбыҙҙа билдәләйек тип, «Башҡортостан» менән «Кызыл таң»ға материал әҙерләнем. Эшкә Луизаны саҡырып, баҫтырып алдым. Иртәгә редакцияларға ебәрәм.

4-се томға материалдар әҙерләнеп бөткән һымаҡ ине. Әле бер өлөшөнөң компьютерҙан үткәрелмәгәне генә бар. Баҫтырып алған һымаҡ инем бит, таба алмайым. Был ҡағыҙҙар менән шул тиклем баш әйләнгән. Биш томымды әҙерләп бөтһәм, архивты яңынан ҡарап сығыр, әллә күпме артыҡ ҡағыҙҙарҙан ҡотолор инем.

«Йәшлек» гәзитенең 20 йыллығына саҡыралар. Сыға башлауын ҡотлап яҙған минең шиғырҙы тапҡандар, гәзиттә сыҡҡайны. Үҙемдә һаҡланмағайны, шуны факс менән ебәрҙеләр. Арыу ғына булған икән. Дәфтәремә күсереп ҡуйҙым.

9 декабрь, 2010 йыл. Кесаҙна.

Көндәр йылы тора. Шулай булһа ла Айрат менән иртәгә һуғым һуйыу тураһында һөйләштек.

Кисә «Берҙәм Рәсәй» фирҡәһенең йыйылышы булды. Президент сығыш яһаны. Маҡсаттар тураһында бик киҫкен һөйләне.

Бөгөн комитет ултырышы була. Башҡорт телен һәм башҡа телдәрҙе ирекле йәки үҙ теләге буйынса уҡытыу тураһында Дәүләт Йыйылышына сайт аша туғыҙ хат килде. Бөтәһе лә бер сығанаҡтан, текстар һүҙмә-һүҙ ҡабатлана.

Яуап әҙерләнек. Бөгөн депутаттарҙы таныштырырға кәрәк.

«Мәғариф» милли проекты буйынса комиссияһы отчеты. Ул артабан кәрәкме икән?

Күлдәргә юл ҡамала –
Кабала!
Кисә Президент ошо хаҡта ла әйтеп китте.

Теләгәнем – тере телем!

«Идеология должна быть!» – тигән һүҙҙәре лә Хәмитовтың хәтерҙә ҡалды.

Был нисәнсе ултырышта икән
Ваҡыт әрәм итеп ултырмыш.

30 ноябрҙәге «Урал батыр» буйынса конференцияла уйлап ултырҙым:

Сәсәнһеҙ халыҡ – әсәһеҙ.

Йәки: Сәсәнһеҙ башҡорт – әсәһеҙ етем.

Сәсән нур сәсәр,

Сәсәнһеҙ ҡалһа, һауаһыҙ сәсәр.

«Урал батыр»ҙа Ҡәһҡәһә һ.б. исемдәр ғәрәптәнме әллә боронғо фарсы ҡатламынанмы йәки Һомай һымаҡ бөтә донъя күренештәренәнме?

Иң тәүгеһе – һүҙ. Иң һуңғы нәтижә лә – һүҙ. Һүҙҙән башлана, һүҙ менән тамамлана.

«Күңел» һүҙенең руссаһын табыуы ҡыйын. “Душа” бирep еткермәй. Душа йәнгә нығыраҡ тура килә. Күңел йәндән киңерәк, гәрсә йәшәү өсөн иң мөһиме йән булһа ла.

12 декабрь, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

Көн ҡояшлы, йылы булды. Тыуған көнөм менән күптәр ҡотланылар. Рәйлә Бүләкова килде. Уға тиклем – Зөфәр Вәлитов. Артур, Сабина, Асҡар матур ғына ултырҙыҡ.

Кисә Дәүләкәндән һуғым – йәш тай итен алып ҡайтҡайныҡ. Ҡаҙы ла тултырғандар. Тик тоҙлораҡ булған.

Тыуған көнөмдә иң ҙур бүләк – Асҡар атлап йөрөй. Минән башланған дүртенсе быуын башҡорт был ерҙә ныҡлап атлап китте.

Инде етмеш ике йәшемдә –

Мөхәббәттә һаман – йәшенмәк.

Съезға докладымды Айҙар Хөсәйенов руссаға тәржемә иткәйне. Бөгөн иртән туғыҙ битен бик ныҡ төҙәтеп сыҡтым. Бик ашығып эшләгән. Бөгөн бөтөрөрмөн тигәйнем, килеп сыҡманы. Ярар, батырға ла ял кәрәк, бигерәк тә тыуған көнөндә.

17 декабрь, 2010 йыл. Йома.

Кисә опера театрында Фәриҙә Ҡудашеваның 90 йыллығы үтте. Бер көн ҡалғас сығыш яһарға тип әйткәйнеләр, кисә төндән әҙерләнергә тура килде. Шиғыр ҙа яҙылды хатта.

Кисәне яңы министр Асҡар Абдразаков асты. Министр вазифаһында әле мин тәү күргән сығышы. Өйрәнер.

Кисәне матур ойошторғандар. Ике сәғәт барҙы. Татарстандан да килгәйнеләр. Яҡташтарыбыҙ Роберт Миңнуллин, Зилә Сөнәғәтованың сығыштары матур булды. Илһам Шакировты аяғүрә тороп ҡул сабып ҡаршылаһалар ҙа «Йыраҡ араларҙан килдек беҙ»ҙе йырлауы күберәк олоуға әйләнде! Ни хәл итәһең, ғүмер үтә.

Мин грипп һымаҡ нәмә менән ауырыҡһынып йөрөнөм. Шуға тамаҡ ҡарлыҡҡан. Сығышым һәйбәт тинеләр.

Беҙҙең йырсыларҙан Флүрә Килдейәрова һәйбәт йырланы, бигерәк тә Римма Амангилдинаның «Элмәлеге» көмөш һымаҡ яңғырап торҙо. Йырын залға төшөп дауам итте, мыйыҡлы Роберт Миңнуллинға туҡтабыраҡ үтте. Робертҡа әйтәм, мыйығың бик көҙрәтле икән, ниндәй йырсыны сәхнәнән тартып төшөрҙө, тим.

Аллаға шөкөр, ошо аҙнала дүртенсе томдың осона сыҡмаҡсымын. Ғинуар каникулдарында бишенсе том менән булыр инем.

13-дә – тыуған көнөмдә – эштә булдым. Бер ҡосаҡ телеграммалар килде – әле уҡып сыға алғаным юҡ. Президент та ҡотланы. Хөкүмәт исеменән – Тажетдинов.

14-дә Ҡоролтайҙа президиум, Яҙыусылар союзында – идара ултырышы. Рус һәм татар секцияларының отчеты. Һәҙиә Дәүләтшина премияһына Кәтибә апайҙы тәҡдим иттек. 15-дә осрашыу, ҡотлау, күстәнәс биреү.

Асҡар хәҙер өйҙә батша булып йөрөй. Теләгәнен аса, теләгәнен ала. Теләгән урынға атлап бара.

Правнук всегда прав.

14-дә яман тайғаҡ булды, атлап йөрөрлөк түгел. Салауат проспектында ғына 40 авария булған, республикала 200-ҙән артыҡ. 15-дә Рәшит Солтангәрәевтең юбилейына Көйөргәҙегә барыуҙы йәйгә ҡалдырҙыҡ. Юл бигерәк ҡурҡыныс.

Бөгөн Союздағы коллектив Ишембайға китә. Вәлидиҙең 120 йыллығына арналған сәфәр. Көҙәндәге музейҙы күрге килгәйне. Фәриҙә менән барырға тейеш инек. Ауырыҡһынғас, булмай инде.

Ут күршеләр,

Ут төртөүсе күршеләр.

Элек ут бүлешеп йәшәгәндәр. Хәҙер тырыштарҙың уңыштарына көнләшеп, уларҙың донъяһына ялҡауҙар, булдыҡһыҙҙар, ҡара эсле көнсөлдәр ут төртә, юлына соҡор ҡаҙа.

Президентҡа инер өсөн фекерҙәремде туплап, докладной һымаҡ нәмә әҙерләнем. Осона сығып киләм.

20 декабрь, 2010 йыл. Дүшәмбе.

Ниһайәт, был ялда ике көндө эш менән үткәреү мөмкинлеге булды. Юғиһә, һуңғы аҙналарҙа шәмбе лә, йәкшәмбе лә төрлө мәшәҡәттәр менән үтә торғайны.

Рәшит Солтангәрәевтең бөгөн үткәреләсәк 75 йыллығына телмәр әҙерләп ҡуйҙым. Президентҡа бирер докладной һымаҡ яҙмаларға фекерҙәр өҫтәнем.

Саша Леониловты саҡырҙым. Ошо яҙмаларҙы, Альбина Аҙнабаеваның авторефератын бирҙем.

«О внесении изменений в отдельные законодательные акты Российской Федерации в связи с совершенствованием правого положения государственных (муниципальных) учреждений» тигән Федераль закон (№83-ФЗ, 8.05.2010) менән дөйөм планда булһа ла таныштым.

«Государственные (муниципальные) учреждения разделены на бюджетные и казенные, первым из которых предоставлено больше преимущественной самостоятельности».

Закон вступает в силу с 1 января 2011г. «Автономное учреждение... не является получателем бюджетных средств. Финансовое обеспечение осуществляется в виде субсидий...»

«Финансирование бюджетных учреждений осуществляется в виде субсидий. Бюджетная смета не предусмотрена».

«Казенное учреждение осуществляется в порядке, предусмотренном в настоящее время для бюджетных учреждений... Присутствует бюджетная смета».

«Общественные организации». Ошо өсәүҙең тәүгеһенәме, икенсеһенәме ҡарай йәки бөтөнләй алып ырғытыламы?

Рухи эштәр, һаулыҡ һаҡлау һ.б. тармаҡтарға сығымдарҙы хөкүмәт үҙ елкәһенән алып, халыҡҡа йөкмәтә булып сыға. Ә халыҡ былай ҙа хоҡуҡһыҙ, былай ҙа талана.

Президент «Россия, вперед!» ти ҙә бит, ниндәй Рәсәй алға бара икән һуң? Олигархтарҙың, миллиардерҙарҙың үрсеүеме, төп халыҡтың бөлгөнләнеүеме был алға китеш?

Хәҙер ике Рәсәй тураһында йыш һөйләйҙәр, яҙалар. Күптәр был күренештең тәрәнәйә барыуын раҫлай, икенселәр юҡ ундай хәлдәр, Рәсәй һәр саҡ берҙәм ул, тип әйтмәксе.

Мин быға мөнәсәбәтемде күптән билдәләгәнмен:

Рәсәй, Рәсәй!
Әллә үгәй, әллә иҫерек әсәй.
Иҫерек әсәй ҡуйынында
Балалары сәсәй.
(«Башһыҙ һыбайлы», 1995)

26 декабрь, 2010 йыл. Йәкшәмбе.

20-дә йәштәр театрында Р. Солтангәрәевтең 75 йыллығын үҙенсәлекле билдәләнек. Тәүҙә минең инеш һүҙ, шунан Ирек Кинйәбулатов шиғыр уҡыны, яҡташтары, Хәҙисә апаһы һөйләне. Былары инеш булды. Шунан «Татар менән башҡорт» тигән спектакль күрһәтелде. Рәлиф Кинйәбаев эшләгән. Һәйбәт килеп сыҡты.

Рәшит Солтангәрәев менән Заһир Вәлитов эшләгән сәхнә варианты бар ине, тиҙәр. Рәлиф был турала өндәшмәгәйне.

22-дә Татарстан Президенты Рөстәм Нурғәли улы Миңнеханов етәкселегендәге делегация килде. 25-ләп кеше. Рәсми делегацияһы һымаҡ төркөмдә беҙҙән дә шул сама. Дәүләт Йыйылышынан Толкачев, Зиннуров, мин.

Хөкүмәт йортонда ике республика араһындағы килешеүгә ҡул ҡуйыу. Уның тексын әлегә күргән юҡ. Быға тиклемгеһенә 17 йыл үткән.

Конгресс-холда Президент ҡабул итеүе – төшкө аш. Байтаҡ рәсми кешеләр тост әйткәндән һуң миңә лә һүҙ бирҙеләр. Бик алыҫтан башланым: «Имя Рустэм было знаменито на Востоке с древнейших времен. В своем грандиозном своде поэм «Шахнаме» великий Фирдоуси в дастане «Семь подвигов Рустэма» описал великие дела легендарного Рустэма.

Работу над «Шахнахе», которая длилась более 30 лет, Фирдоуси завершил в 1010 году. Удивительные совпадения. И вот спустя ровно тысячу лет два Рустэма – два Президента завершили работу над новым документом – подписали соглашение между Башкортостаном и Татарстаном.»

Һүҙем шулай башланды. Әҙәби бәйләнештәр, быйыл Илеш менән Аҡтаныштағы шиғри осрашыуҙар, алмаш китаптар сығарыу традицияһы тураһында әйттем, «Күрше» шиғырын ике телдә уҡыным.

Минән һуң Роберт Миңнуллинға һүҙ бирҙеләр. Рәзил Вәлиев «Аҡбуҙат»тағы мәжлестә һөйләне. Мин һүҙемдә Татарстан делегацияһына талантлы ике шағир – яҡташыбыҙ Роберт Миңнуллин менән минең коллегам Рәзил Вәлиевтең ингәне өсөн рәхмәт әйттем.

Ҡунаҡтарға Археология музейын, Биатлон үҙәген күрһәттеләр, «Нур» татар театрында ике Президент байтаҡ исемдәр, бүләктәр биргән, татарҙар концерт алып килгән. Президент елкаһында ла ике етәксе булған.

«Аҡбуҙат»тағы яңы ресторанда булған юҡ ине. Тотош комплекс икән. Халыҡ саҡ йыйылды. Президенттар булманы. Ҡунаҡтарҙанмы берәү әйтә, ике делегация ла һеҙҙең тосты һөйләй, ти. Бәлки бының күңеле булһын, тиҙер.

«Аҡбуҙат»та Азат Зиятдинов тост әйткәндә күп һүҙ әйтеп тормаңы, авторын атамай ғына Назар Нәжмиҙең Рәсүл Ғамзатовҡа арналған (исеме «Дуҫты саҡырыу» шикелле) шиғырын матур итеп уҡыны.

Байтаҡ эштәрҙең осона сығып киләм. Президентҡа докладной һымаҡ яҙыу әҙер. Ҙур ғына булды, тығыҙ баҫылған һигеҙ бит. Леонидов менән Аралбаев уҡып сыҡты, һәйбәт тиҙәр.

Дүртенсе томдың текстары туплап бөтөлдө. Әле бергә ҡушып флешкаға һалаһы ҡалды. Секретарь Луиза съезға әҙерләнгән йыйынтыҡ менән була.

БДУ-ла 22-дә шиғыр кисәһе үтте. Татарстан делегацияһы килгән көн. Шуға барып булманы шиғыр байрамына. Университеттағы икенсе шиғыр кисәһенә бара алмайым.

23-дә Дәүләт Йыйылышы ултырышы. Утыҙлап судъяны раҫлау. Шуға көн тәртибендәге һорауҙар 60-тан артып китте.

24-дә «Ағиҙел» йыл лауреаттарын йыйып ҡотланы: Спартак Ильясов, Сибайҙан Ғарифулла хәҙрәт, мин. Учалынан Мәүлит Ямалетдинов килмәне. Булам, тигән. Әмир шылтыратһа, өйөндә ултыра.

Күңелле һөйләшеп ултырҙыҡ.

Ғәжәп тап килеүҙәр күп инде ул. Тағы ла Фирҙәүес тураһында. «Шаһнамә»не ул ил менән идара итеүселәргә төбәп яҙа, идеаль хакимдәр тураһында хыяллана. Ләкин хеҙмәтен шаһ баһаламай, бик һуңлап аңлай һәм каруан менән бүләктәр ебәрә. Ләкин был каруан Фирҙәүсиҙе зыяратҡа алып китеп барыусыларға ҡаршы осрай. Бына шундай һуңлап баһалауҙар...

Тағы ла бер риүәйәт. Пушкиндың Мәскәүҙәге атаҡлы һәйкәлен ҡуйыр урынына алып китеп барғанда уға табут тейәлгән ылау,

оҙатыусы кешеләр ҡаршы тап була. Шул табутта Анна Кернды һуңғы юлына оҙатҡандар, имеш.

Һиңә ауыр, һиңә ҡыйын
Ауылым, ауылҡайым!
Ярҙам итә алмай көйә
Һинең бойоҡ улҡайың...
Аҡһаҡал бабайҡайың.

Газеталар йыйылып китә лә ял көндәрендә ҡарап сығырға тырышам. Уҡыған һайын кәйеф нығыраҡ ҡырыла. Ауылдар тарҡала, производство емерелә. Былай барһа, Рәсәйҙең юҡҡа сығыр мәле лә алыҫ ҡалмай. Ауыл хужалығына бюджеттың 1% – бер проценты! – бүленә икән, тағы нимә хаҡында һөйләргә? Совет заманында – 17%. Ауыл хужалығының башында – врач, ҡораллы көстәр менән был эштән бөтөнләй алыҫ торған кеше командалыҡ итә. Педагогтың остоғо ла булмаған Фурсенко мәғариф системаһын нисек емерә! Был ҡот осҡос башбашлыҡтарҙы ил хужалары күрмәйме ни?! Күрә, әлбиттә. Ҡайҙа аҡса – шунда Чубайс. ГЭС-тарҙы емерҙе. Хәҙер нанотехнология. Беҙҙең зирәк зиһенлеләр ситкә ағыла, ә Рәсәйҙә элекке фәнни үҙәктәрҙе бөлгөнлөккә төшөрөп, Сколковоға сит ил ғалимдарын саҡыралар. Был емерткес эштәр башҡа һыйырлыҡ түгел. Етәкселеккә шундай емерткес көстәр махсус ҡуйыла.

Шунан һуң эшкә ҡул барырлыҡмы ни? Беҙҙең депутат булып йөрөүебеҙҙән ни фәтүә? Балыҡ башынан серей. Рәсәй тигән имәнес ғифритте хәлдән тайҙыралар, башын ғына түгел, бөтә булмышын серетәләр.

Декабрҙә үткән саралар:

1.12. – Литературный четверг в СП, встреча с учителями татарского языка и литературы;

3.12. – «Нефтяник» – 75-летие Кировского района г. Уфы;

8.12. – Встреча со студентами СГПА им. З. Биишевой и БГПУ им. М. Акмуллы – членами литературных кружков;

9.12. – Заседание Комитета Госсобрания,

– выступление на вечере 20-летия «Йэшлек» (Конгресс-холл),

– 100-летие С. Кулибая (Национальная библиотека);

10.12. – Выступление на Ученом совете БГУ – официальный оппонент на защите докторской диссертации Г. Гареевой,

– Госсобрание – круглый стол,

– 75-летие Р. Низамова в СП;

12.12. – 80-летие М. Каримова (филармония);

13.12. – Круглый стол,

– мой день рождения в Госсобрании;

14.12. – Заседание Президиума Госсобрания,

– Заседание Правления СП;

16.12. – Выступление на вечере 90-летия Ф. Кудашевой в театре оперы и балета;

17.12. – Мероприятие, посвященное 120-летию З. Валиди, поездка в Ишимбайский район;

20.12. – Молодежный театр, выступление на вечере 75-летия Р. Султангареева перед спектаклем «Татар менән башҡорт»;

22.12. – Участие на мероприятиях, посвященных приезду делегации из РТ во главе с Президентом Минниханом Р.Н.;

– «Белая песнь зимы», литературный вечер в БГУ, посвященый Новому году;

23.12. – Заседание Госсобрания;

24.12. – Встреча лауреатов журнала «Агидель».

Бында мероприятиеларҙың барыһы ла инеп бөтмәгән. Эштәр саманан артыҡ, тик ижадҡа ҡайҙа ваҡыт? Шулай ҙа сығыштар әҙерләнем, Фәриҙә Ҡудашеваға шиғыр яҙҙым, Президентҡа тапшырырға 8 битлек текст әҙерләнем, съезға сығыш менән, шулай уҡ 4-се томға материал туплау менән эште бөтөрҙөм.

«Рус түгелмен, ләкин россиянмын» – «не русский я, но россиянин» – был ҡанатлы һүҙҙәрҙе башҡорт шағиры әйткән. Шуның өсөн Мостай Кәрим маҡтау һүҙҙәре генә түгел, яманлауҙы ла аҙ ишетмәне. Бигерәк тә рус булмағандар ауыҙынан. Хәйер, рустар ҙа хәҙер россиян һүҙен бер тауыштан хупламайҙар. Россиян һүҙе күп кенә рустарҙың асыуын ҡабарта. Ләкин хәҡиҡәтте күрәләтә кире ҡағыуҙан ни мәғәнә? Русь дәүләтенең Россия булып киңәйеүе ошо мәмләкәттең тарихи яҙмышы, үҫеш, күтәрелеш юлы. Русь көйөнсә генә ҡалһа, россиян тигән төшөнсә лә тыумаҫ ине. Илдең Россияға әйләнеүе күпме милләттәрҙең яҙмыштары берләшеүен, уларҙың россиян булыуы аша барған. Ил Русь сиктәренән сыҡмаһа, бары тик рустар ғына булыр ине. Россия, Рәсәй икән, тимәк, уның граждандарының

рус булмағандары ла россияндар, рәсәйлеләр. Был бит ике икең дүрт булған һымаҡ бәхәсһеҙ. Шуны ҡабул итергә теләмәү Рәсәйҙәге рус булмаған халыҡтарҙың үҙ Ватанындағы гражданлыҡ хоҡуҡтарын танымау, тупаҫ рәүештә инҡар итеү, тигән һүҙ.

2011

6 ғинуар, 2011 йыл. Кесаҙна.

Үтеп бара яңы йылдың тәүге тулы аҙнаһы. Өйҙә ҡаршыланыҡ. Яңы йылдың эшкә йөрөмәй торған тәүге ун көнөн ни тиклем ҙур өмөттәр менән көтөп йөрөнөм. Тик тәүге көндәренән үк эшкә тотоноп булманы.

Кисә Союзға барып, 4-се том менән ултырҙым. Эше бөттө тиерлек. 5-се томдың да йөкмәткеһен күҙ алдына килтерә башланым: докладтар, сығыштар, аҙағында шиғри өлөш. Ә, бәлки, шиғырҙарҙы башта бирергәлер...

Бөгөн дүртенсе көн эргәләге санаторийҙың бассейнына барабыҙ. Сәғәт 1-ҙән 2-гә тиклем йөҙәбеҙ. Төштән һуң ҡыйбатыраҡ – сауна менән. Уныһы миңә барыбер ярамай.

Иртәгә тағы ла эшкә – Союзға барып ултырырға ине. Шуға бассейндың ике көнөн күсерергә тура килер. Йөҙөүҙе ял көндәрендә булһа ла дауам итергә кәрәк.

Яңы йыл алдынан ҡапыл Дмитрий Николаевич Купцов вафат булды. Афганец, беҙҙең депутат. 23-дә генә бергә Яңы йылды ҡаршылау мәжлесендә булғайныҡ. ОПЦ-нан оҙатҡанда Президент һөйләне. Авиационныйҙа бергә эшләгәндәр икән.

30 декабрҙә сәғәт 11-ҙә Президент мине ҡабул итергә тейеш ине. Тажетдинов аша һөйләшкәйнем. Барһам, сәғәт өскә күсерелгән. Президент үҙенең яғынан күскән.

Ваҡытында ҡабул итте. Бер сәғәт тә биш минут кәңәшләштек. Нәшриәт, матбуғат, рухиәт мәсьәләләре тураһында күберәк һүҙ барҙы. Бюджетҡа аҡса туплауҙа ҙур ҡыйынлыҡтар. Төп сығанаҡ – ТЭК республика ҡулынан киткән. Күпме байлыҡтарынан Башҡортостан ҡолаҡ ҡаҡҡан.

Нисектер Әбйәлил китабы тураһында ла һүҙ сыҡты. Мин күперҙәр, юлдар төҙөй алмайым, өйҙәр һала алмайым, әммә район тураһында китапты әҙерләүҙе ойоштора алам. Ошоғаса төп башҡорт районы Әбйәлил районының үҙе хаҡында китабы булмауы мәсхәрә хәл бит, тип башта уҡ һөйләгәйнем. Китап әҙер, тик сығарып булмай.

Ошолар хаҡында әйткәс, Президент ярҙам итермен, тине. Кисә ул Әбйәлил яҡтарында йөрөнө. 5-дә унда булам, был мәсьәләне лә онотмам, тигәйне. Иртәгә Сыңғызовҡа шылтыратырға кәрәк.

Президент конкрет фекер һәм аныҡ эштәр кешеһе тигән тәьҫир ҡалды. Һәр фекерен ҡағыҙ киҫәктәренә (дүрттән бер бит) һандар яҙып нығытып ҡуя.

Сәғәт етелә Конгресс-холл ресторанында (30.12.) Президент Яңы йыл менән ҡотлау мәжлесе үткәрҙе. Беҙҙең өҫтәлдә Бакусовтар, Буранғолова ире менән, Тимерхан Биккинин, Фәриҙә менән мин. Ҡатындары менән премьер-министр урынбаҫары, министрҙар, беҙҙең даими эшләүсе депутаттар, республика күләмендәге етәкселәр саҡырылған. Миңә лә тост әйтергә тура килде. Тарихи йыл тураһында әйттем, ике телдә дүрт юллыҡ Яңы йыл ҡотлауын уҡыным. Мәжлесте Р.З. Хәмитов асты, аҙаҡ йомғаҡланы. Халыҡ менән бергә бейеп тә йөрөнө. Кисә өс сәғәт барҙы. Бындай форматта Яңы йылды ҡаршы алғаныбыҙ юҡ ине әле.

TV тураһында ла Президент мине ҡабул иткәндә һүҙ булды. Әйҙә һуң етәксеһен алыштырайыҡ, кешеһен табығыҙ, ти.

Һигеҙ битлек докладной һымаҡ тәҡдим – фекерҙәремде әҙерләгәйнем. Һөйләшеп ултырып онотоп сығып киткәнмен. Ғәфү үтенеп, кире инеп, ҡалдырып киттем.

Башҡортостан!
Һин тип күпме ирҙәр янған,
Күпме аҫыл баштар осҡан.

Башҡортостан! Күктәреңдә
Күпме ҡыйыу ҡоштар осҡан.

Башҡортостан!
Әйткән һүҙең
Хаҡ та, тос та.

«Мәҙәни йомға»ла Ирек Кинйәбулатовтың ике Рөстәм, ике Рауил тураһында шиғыры сыҡҡайны. Шуны Президентҡа уҡыным, гәзитте бирҙем. Фәриҙә Ҡудашеваға арналған шиғырымды ла уҡыным. Ҡулды ҡыҫты.

Тағы шуныһы: мин һөйләшеү русса барыр тип уйлағайным. Тик башҡортса һөйләште. Башҡортса ошолай иркен фекер йөрөтә алы-

уын көтмәгәйнем. Күрәһең, был мәсьәләгә етди иғтибар итә. Башҡортлоҡ, Башҡортостан – башҡорт иле тураһында һүҙҙәре эштәр менән раҫланһын ине.

Статус депутатской неприкосновенности – был бит бик шартлы хоҡуҡ. Депутатҡа хөкөм ваҡытлыса ҡағыла алмаһа ла, Аллаһ хөкөмө һәр кемгә етә. Барыһы ла Аллаһ хөкөмөндә.

Торатауҙарҙы һаҡлай алмаһаҡ,
Үҙебеҙҙе лә ер менән тигеҙләрҙәр.
Шишмәләребеҙҙе ҡоротторһаҡ,
Рухыбыҙҙы ла ҡороторҙар.

19 ғинуар, 2011 йыл. Шаршамбы.

13-дә Комитет, кисә Президиум ултырышы үтте. Кисә, Аллаға шөкөр, 4-се томдың икенсе өлөшөн дә нәшриәткә илтеп тапшырҙым. Бик ҙур эштең осона сыҡтым. Бишенсе томға тотонам, уныһына материал бай, әммә туплауы еңел булмаясаҡ.

Съезға арналған «Писатель и время» тигән китапты ла баҫырға тапшырыр хәлгә еткерҙек. Уныһы менән дә эш ҡатмарлы ғына булды. Йырып сыҡтыҡ. Инде съезға әҙерлекте нығлап башларға ваҡыт. Кисә нәшриәттә темплан буйынса худсовет ултырышы үтте. Шуның алдынан Азамат Юлдашбаев менән урамда бер сәғәт һөйләшеп йөрөнөк. Рәйеслекте уға алып китергә кәрәк. Шундай ҡарар иң дөрөҫө булыр, тип уйлайым.

3–6 ғинуар бассейнға йөрөнөк. 7-дә рождествоны, 13-дә иҫкесә Яңы йылды ҡаршылау, 14-дә яңыса дауамы. Күңел асыуҙар юғары кимәлдә барҙы. 16-да тағы ла бассейнда йөҙҙөк, саунаһы ла булды. Был ялда, Алла бирһә, ике көн рәттән барабыҙ. Артабан даими йөрөргә иҫәп.

Миңлеәхмәт Моталов ағайҙың китабын 2011 йыл планына индереү мәсьәләһен хәл иттем.

Әбйәлилдән Йәнъегетов Фәнил Вәлиәхмәт улы шиғырҙарын күптән ҡалдырғайны. Уҡырға тәки ваҡыт булманы. Күсем ауылынан, Таһир Күсимовтың яҡын туғаны. Генерал тураһындағы шиғри бәйәне ҡыҙыҡ ҡына. Шиғри һәләтле кеше, тик ошоға тиклем ниңә күренмәгән. Хәҙер йәше байтаҡ, етмәһә быйылғы эҫе йәйҙә уға инфаркт булған. Әле Өфө янындағы Алексеевкала йәшәй. Әрәм булып, әҙәбиәттән ситтә йөрөгән.

20 ғинуар, 2011 йыл. Кесаҙна.

Гольфстрим – донъяға йылы биреүсе ғәйәт ҡөҙрәтле ағым Мексика ҡултығындағы нефть аварияһы арҡаһында ағыуҙан туҡтаған, тип яҙалар. Шуның арҡаһында, имеш, Евразияның төнъяҡ өлөшө, әллә күпме илдәр боҙ аҫтында ҡаласаҡ, Себерҙең атаҡлы йылғалары киреге ағып, әллә күпме ерҙәрҙе һыу баҫасаҡ – туфан күтәреләсәк, тиҙәр. Бындай хәлдәр булмаҫ тип хәҙерге кеше үҙе тыуҙырған һәләкәттәр заманында кем әйтә ала?

Ләкин бынан да ҡурҡынысыраҡ һәләкәт – кешелек мөхитендәге йылылыҡтың, ихласлыҡтың, үҙенсә шифалы рухи Гольфстримдың юғалыуы, күңелдәрҙең туңыуы, боҙ менән ҡапланыуы. Былар хаҡында фараз итергә кәрәкмәй, имеш, тип булмай. Барыһы ла күҙ алдында бара. Булмышыбыҙҙағы бындай хәлдәр быйылғы боҙло ямғырҙарҙан яманыраҡ, ҡурҡынысыраҡ.

Современное книгоиздание, печать, ТВ и радио почти полностью подвержены желтухе. Болезнь прогрессирует.

31 ғинуар, 2011 йыл. Дүшәмбе.

Ял көндәрендә бассейнға йөрөйбөҙ. Саунала ҡыҙыныу килешмәне, ахыры: аритмия башланды. Төндә лә үтмәгән.

Шәмбе, йәкшәмбе «Единая Россия»ға мәҡәлә яҙҙым. 26-да Өфөлә ПФО-лағы мәғариф етәкселәренең осрашыуы үткәйне. Конгресс-холда түңәрәк өҫтәл дә үткәрелгәйне. Көн тәртибендә – һәләтле балалар менән эшләү. Регламент бик ҡаты булыр, беҙгә сығыш яһарға мөмкинлек ҡалмаҫ, тип уйлағайным. Тик килгәндәр генә һөйләйәсәк тигәйнеләр, шуға әҙерләнмәгәйнем. Әммә уйлаған фекерҙәр бар ине. Шуларҙы мәҡәлә итеп яҙып ҡуяйым, тинем.

Таланттарҙы кем өсөн үҫтерәбеҙ? Сит ил өсөнмө? Мәҡәләмдә ошо һорауҙы ла ҡуйҙым. Мәсьәләгә Рәсәй кимәлендә, тотош ил күләмендә ҡарарға тырыштым. Мәҡәлә “Ответственность таланта” тип атала. Һәләтле йәштәрҙең рухи донъяһы, тыуған ерлек менән бәйләнеше бик мөһим бит.

Тағы ла бер фекер бар ине, уныһы был мәҡәләгә йәбешмәй. Шундай һорау: беҙ Башҡортостандағы сәнғәт, мәҙәниәт уҡыу йорттарында йәш таланттарҙы кем өсөн уҡытабыҙ? Уларҙан күпме сағыу һәләттәр ситкә, бигерәк тә Ҡазанға китә. Быға хәҙерге хәлдәрҙән генә түгел, элекке ижади тормоштан да миҫалдар етерлек.

Ижади яҙмыштарҙа көтөлмәгән боролоштар була, әлбиттә. Күпме таланттар тыуған ерлегенән айырыла. Улар ауыр, хатта

үлемесле шарттарҙа шундай аҙымды яһарға мәжбүр була. Зәки Вәлиди кеүектәрҙең фажиғәһе.

Ләкин Башҡортостан етәкселәренең вайымһыҙлығы, күберәген ғәҙелһеҙлеге арҡаһында ситкә сығып олаҡҡан таланттарыбыҙ аҙмы ни? Дауыт Юлтыйҙың ҡыҙы Нинель Юлтыева Ленинградта уҡып ҡайтҡас беҙҙең опера һәм балет театрында эшләй башлай. Ләкин ауыр тормош шарттарында етәкселәрҙән һис бер ярҙам күрмәгәс, Ҡазанға китә һәм татар сәхнәһенең, Татарстан сәнғәтенең йондоҙо булып балҡый.

Атаһы башҡорт әҙәбиәтенең классигы, ҡыҙы – Башҡортостандан киттә.

Йәки Абрек Абызгилдин менән Рәшит Имашевтың ижади яҙмыштары. Улар ҙа бит уҡып сыҡҡандан һуң, Өфөлә һис бер таяныс тапмағас, Ҡазанға сығып олаға, унда ихтирамлы, мәшһүр рәссамдар булып дан ҡаҙана. Абрек нисә йылдар Союз рәйесе.

Шул уҡ парадоксаль хәл: Булат Имашев башҡорт сәнғәтенең ғорурлығы, ҡустыһы Рәшит Имашев татар сәнғәтенә йәм өҫтәй. Ғәшиә Абызгилдина башҡорт сәхнәһендә ғүмерен үткәрә, уның улы Абрек Абызгилдин иң талантлы татар рәссамы булып таныла, Татарстан сәнғәтен үҫтереү өсөн ниндәй оло эштәр башҡара, күренекле әҫәрҙәр тыуҙыра. Әгәр үҙ ваҡытында тейешле ярҙам күрһәтелһә, бындай таланттар Башҡортостан сәнғәтенә, үҙҙәренең тыуған халҡына күпме дан өҫтәрҙәр ине!

Ләкин етәкселәребеҙ бындай «юғалтыуҙарҙан» һабаҡ алған тиһегеҙме? Юҡ шул. Бөгөн дә күпме йырсыларыбыҙ Ҡазанға барып тамырлана.

Заманында Туҡай «Тарта Ҡазандың йәштәрен Рәмиевтар алтыны», тигән. Рәмиевтар Ырымбурҙа йәшәгән һәм башҡорт еренән алынған алтынға «Ваҡыт» гәзитен, «Шура» журналын сығарған.

Бөгөн Өфөнөң йәштәрен Ҡазан тарта. Беҙҙә былтыр Татарстандың парламент делегацияһы булғайны. Шунда спикер Фәрит Мөхәмәтшин ғорурланып әйтеп торҙо, һеҙҙең йәш таланттарығыҙ беҙгә килә, сөнки беҙ уларға квартира бирәбеҙ, ә һеҙ бирмәйһегеҙ, тине. Хаҡ һүҙгә нимә тиһең? Әлбиттә, зур таланттар үҙ ерлеге менән генә сикләнмәй. Әгәр улар донъя күләмендәге ваҡиғаға әйләнә икән, әммә үҙ ерлеге менән бәйләнешен өҙмәй икән, быныҡ менән ғорурланырға ғына кәрәк. Асҡар һәм Илдар Абдразаковтар донъяла Рәсәй сәнғәтен данлай, әммә улар иң элек Башҡортостандың ғорурлығы.

Ләкин тыуған Башҡортостаны менән бәйләнештәре өҙөлгән таланттар ҙа аҙ түгел шул, ҡызғанысҡа ҡаршы.

11 февраль, 2011 йыл. Йома.

Кисә «Единая Россия – Башҡортостан» гәзитендә «Ответственность таланта» тигән мәҡәләм сыҡҡан. Ашығыбыраҡ яҙылды, нығыраҡ әйтәһе урындары ҡалған.

«Башҡортостан»дың беренсе битендә БДПУ-ла милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылына арналған шиғыр кисәһе тураһында хәбәр фотолар менән баҫылған.

8-дә кисә ыҡсым үтте.

9-да комитет үткәрҙем. Беҙҙәге сектор отдел булды. Бүлек мөдире булып Ҡорманов Альберт Сафуатович эшләй башланы. Элек хөкүмәттә мәғариф бүлеген алып бара ине.

Хроника китабы төпләнеп килде. Хаталары бик күп, стиле ҡытыршы. БИРО-нан махсус редакторға бирҙек.

Марсель Ғафуров тайып йығылып янбашын һындырған.

Тайып йығылыр өсөн әҙәм балаһына тотош Төнъяҡ океандың боҙҙарын үтеү кәрәкмәй, бейәләй хәтле генә тайғаҡ боҙ ҙа етә.

Тормошта ла шулай бит. Кескәй генә хата күңеленде емерерлек итеп һөрлөктөрөргә мөмкин.

Бөгөн Медведев килә. Госсовет президиумының күсмә ултырышы милли мәсьәләгә арналып Өфөлә үтә. Беҙҙең Президент Госсовет ултырышында үҙе саҡырғайны.

Веры разные, верность одна. Веры могут разделить, но верность всегда объединяет.

Ельцинға 80 йыллығына Екатеринбургта һәйкәл астылар. Медведев телмәр тотто.

Тотоп аҫыр хаиндарға,
Һәйкәлдәр асҡан саҡта,
Намыҫ тип лаф ороусылар
Намыҫтан ҡасҡан саҡта,
Сорнап алғанда хафалар,
Ил сатнап, күңел сатнап,
Тотонмаҫ тимә кешеләр,
Түҙем бөтөп, бысаҡҡа.

29 ғинуарҙа «Йәшлек»тә минең тура бәйләнештәге һөйләшеү тотош ҡуш бит булып сыҡҡан, минең ижад буйынса Илдар Ғәбитов төҙөгән кроссворд сыҡҡан.

Иң ғәжәбе шул: шул кроссвордҡа төрлө район-ҡалаларҙан 24 яуап килгән. Халыҡ барыбер уҡый бит әле, тип ҡыуандым. Барыһына ла китаптарымды бүләккә яҙҙым. Илдар таратасаҡ.

2-дә ТВ-ға интервью, кисен «Неслучайные люди» тапшырыуында быйылғы йылдың исеменә бәйле 25 минутлыҡ һөйләшеү.

Бөтә донъя Ҡоролтайы башҡарма комитетында ике идара ултырышында булдым. Тәүгеһе Ватан һуғышының 200 йыллығына әҙерлек тураһында барҙы. РФ, РБ Президенттарының указы, хөкүмәт ҡарары, 55 пункттан торған эш программаһы бар. Әммә әҙерлек әлегә тиклем юҡ тиерлек. Ул ҙур программалағы бик күп сараларҙы үткәреп булыр, әммә ике мәсьәлә иң ауыры буласаҡ. Беренсе – һәйкәл ҡуйыу, икенсеһе – нәфис фильм эшләү. Техник яғынан да бигерәк финанс мәсьәләләре бик ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырасаҡ. Шул турала әйттем.

Кисә Мәскәү күрһәтә: тарихи яу урыны булған Бородино яланында, Рәсәйҙең изге урынында байҙар дачалар төҙөй башлаған. Дәүләт кимәлендә үҙеңде үҙең шулай мәсхәрә итеү Рәсәйҙә генә булырға мөмкин! Шунан һуң йәштәрҙән милли ғорурлыҡ эҙлә! Ғәзиз тарихыңа төкөрөү.

Бөтә донъя ҡоролтайының идара ултырышының икенсеһе бик йәмһеҙ башланды. Медведевҡа мөрәжәғәт ҡабул ителергә тейеш ине. Ғауға ҡупты.

Был тарҡаулыҡ күңелде ныҡ ҡырҙы.

Һөйләшеү, кәңәшләшеү бик кәрәк. Ләкин һәр кем үҙен күрһәтергә, башҡаларҙы кәмһетергә теләгән һүҙ бутҡаһы түгел.

Һәр кем үҙенең яуаплылығын тойоп, үҙенең эшен еренә еткереп эшләһен – бына шунда халыҡҡа ниндәйҙер файҙа буласаҡ. Әлегә ҡоролтай үҙенең эшен бик тарҡау башлай.

Ҡайғыларым арта тип ҡайғырма –
Күрер ҡайғылар ҙа кәмей бара.
Тағы бер һүҙ әйттем.
Бер һүҙ яҙҙым.
Әйтер һүҙҙәр, яҙыр юлдар кәмей,
Бер саҡ иң һуңғыһы тороп ҡала.

Дини экстремизм Башҡортостанға ла үтеп инмәксе. Октябрь-скиҙағы хәлдәр. Быуаттар буйына беҙҙә мосолман йәмәғәте берҙәм

булған, дини ҡаршылыҡтар тыумаған. Хәҙер динебеҙ эсендә, милләтебеҙ эсендә ҡаршылыҡтар тыуҙы, улар ҡайһы саҡта бәрелешкә әйләнер дәрәжәлә киҫкенләшә.

Милләттең тарҡалыуы Рәсәй иленең ярылыуынан кәм бәләтүгел.

Гиппократтың актындағы һүҙҙәрҙе ҡабатлап, Фурсенко ла «не навреди» тигән була.

Табиптың хатаһы бер кешенең һаулығына зыян килтерегә мөмкин. Фурсенколар тотош дәүләттең, уның киләсәгенең рухи һаулығын ҡаҡшата, хатта юҡҡа сығара.

Көнө-төнө ҡағыҙҙәләр
Тора юлымды быуып.
Гиҙергә ине донъяһын
Ишкәкһеҙ кәмә булып...

Ҡамап ала ҡағыҙҙәләр
Таңдан юлымды быуып.
Гиҙергә ине донъяһын
Һис юғында тик бер көнгә
Ишкәкһеҙ кәмә булып.

Ирек-хыял! Атлар юлым
Уңдан, һулдан ҡамалған.
Төшөп булмай рельстарҙан,
Сығып булмай каналдан.

19 февраль, 2011 йыл. Шәмбе.

15-дә Конгресс-холда З. Вәлидиҙең 120 йыллығына арналған кисә. Төркиәнән ҙур делегация. Тюрксой етәксеһе Касеинов. З. Рәхмәтуллинаның доклады. Һүҙ ғалим тураһында ғына. Сәйәси эшмәкәрлеге тураһында ләм-мим. Әйтерһең, ул республиканы ойоштороусы түгел. Әгәр Вәлидиҙең сәйәси эштәре булмаһа, шул Конгресс-холда ошондай тантаналар үтер инеме һуң? Юҡ, әлбиттә.

Президент булманы, Саратов өлкәһе губернаторы килгән.

16-да Башҡорт академия театрында Н. Асанбаевтың Вәлиди тураһында пьесаһы. Бында ла тик ғалим ғына тиерлек.

Нәжип ағайҙың 90 йәшен ҡаршылағанда ошондай пьеса яҙып, сәхнәгә күтәрелеүе – яҙмыш бүләге генә түгел, яулап алынған, хеҙмәт түгеп күтәрелгән ижади бейеклек ул. Бындай ғәжәп хәлдәр әҙәбиәттә, ғөмүмән, тормошта һирәк була.

Ул кисәләге алҡыштар ижади асыштар өсөн дә түгелдер, әммә ижадҡа тоғролоҡ өсөн алҡыштар бик урынлы, бик хаҡлы.

Бишенсе том менән булам, материалдар бик күп тупланды, 35 табаҡ бирһәләр ҙә һыйҙырыуы ҡыйын буласаҡ.

Бер юлы «Ғилем»гә русса ҡалын том әҙерләмәксемен, 75 йәшемә. Шуны ла күҙ алдына килтерәм, йыям.

17-дә өсөнсө яртыла Учалыға юлландыҡ. Юл асыҡ. Дүрт сәғәттә барып та еттек.

Бында тағы ла яңы хаким: Иҙрисов Азамат Риза улы. Тәүҙә уның менән һөйләшеп ултырҙыҡ.

Бындағы яҙыусылар ойошмаһын муниципаль структураға индереү мәсьәләһен күтәрҙем. Глава хупланы, хәл итеү ҡыйын булмаҫ, ти.

Сәғәт 10-дан граждандарҙы ҡабул иттем. Башта йыр яҙыусы ҡатын инде, йырын йырлап күрһәтте, шунан үҙешмәкәр рәссам булды. Өс рәсемен йөкмәп килгән, натюрморттар, берәй әлифбаға индерергә ине, ти. Өфөлә Гостиный дворҙа үҙе 10 мең түләп, шәхси күргәҙмәһен ойоштырған, 51 эш ҡуйған. Бына шулай инанып йәшәүселәр.

Аҙаҡ пресса, ТВ менән осрашыу оҙаҡ ҡына барҙы. Ике шиғыр ҙа уҡыным.

Мин халыҡты ҡабул иткәндә Ҡәҙим Аралбаев БДУ филиалында сығыш яһаны, Ришат Дихин Яҙыусылар ойошмаһында булды.

Сәғәт алтыла филармониялағы кисә алдынан ҡала музейында булдыҡ. Ғаиләһе менән Рәүеф Насыров та килде. Уның бик күп график эштәре ҡуйылған, тотош залда әҙипкә арналған күргәҙмә.

Музейҙа матур тәьҫораттар. Халыҡ таланттары, сәнғәт училищеһы уҡыусыларының бик оҫта эштәре.

Ныҡ уйланылған күренештәр ҙә бар. Мәҫәлән, шахтала күмер соҡоусы ҡатын. Хәҙерге тормошҡа зарланыусылар бына ошоно ҡараһындар ине.

Филармония залы шығрым тулы. Хакимиәт башлығы урынбаҫары Фазлаев Шамил Зыяевич кеше килерме, тип, бик борсола ине, халыҡты һәйбәт йыйғандар. Кешеләр дәррәү килгән тип әйтмәйем, хәҙер бындай

кисәләргә үҙҙәре ағылып килмәйҙәр тиерлек. Әммә зал тулған икән, юбилярға ла, сығыш яһаусыларға ла күңелле.

Рәүеф Насыровтың 75 йәшен бик ҙурлап үткәрҙе яҡташтары. Табын да матур булды. Ә көндәр бик һыуыҡ. Беҙ ике кис ҡунған Өргөн ауылы янындағы затлы резиденцияла һалҡынса.

24 февраль, 2011 йыл. Шәмбе.

Аҙна елеп үтеп китте. 21-дә, дүшәмбе, Стәрлелә: башта яҙыусыларҙың йыйылышы. Шунан һуң «Кышҡы балҡыш» тигән шиғри кисә. Икеһе лә башҡорт театрында. Кисәнең аҙағына тиклем ҡалып булманы, эш аҙағына Госсобраниеға ҡайттым. Ҡәҙим Аралбаев менән барҙыҡ.

Яуаплы сәркәтип булып Хәмит Ирғәлин эшләп йөрөй. Нисегерәк булыр, урындағы хужалар менән дә, ҡәләмдәштәр менән дә уртаҡ һүҙ таба алырмы?

24-дә Дәүләт Йыйылышы ултырышы үтте. Союзда ҡабул итеү комиссияһында кандидатуралар ҡараныҡ. Күпме генә йәшәртергә тырышһаң да, уртаса йәштәре барыбер 50 тирәһе килеп сыға.

Кисә Ҡоролтайҙың башҡарма ағзалары менән ОПЦ-ның бәләкәй залында Президент осрашты. Был сара бик кәрәкле ине, Президент республиканың мөлкәте бөтөнләй тиерлек ҡалмауы, ерҙең о,ооо... проценты ғына республика ҡулында булыуы, телдең, матбуғаттың һ.б. һаҡланасағы, БСТ-лағы хәлдәрҙе төҙәтәсәге һ.б. тураһында халыҡтың күҙен асырлыҡ, ышанысын арттырырлыҡ һүҙҙәр әйтте.

Шәкүр, Хисаметдинова Солтанморатовты ныҡ тәнҡит итте. Мин дә сығыш яһаным, рәйестәрҙе туҡтауһыҙ алыштырып, әҙәм көлкөһөнә ҡалдыҡ, тинем. Ҡоролтай, ҡороу – бер тамырҙан, төҙөү, берләштереү, консолидация. Тәүге ҡоролтайға 16 йыл элек килгәндә беҙ берҙәмерәк булманыҡмы икән?

Бөлөр илдең балаһы
Бер-береһенә бахыр тир,
Булыр илдең балаһы
Бер-береһенә батыр тир, – тинем.

Интернет Ҡоролтай тураһында бысраҡ һүҙҙәр менән тулы. Бөгөн тағы йыйылабыҙ, ҙур ғауғалар буласаҡ.

Бөтә донъя Ҡоролтай рәйесен ауыл көтөүсеһен алыштырған һымаҡ алыштырыу.

Ҡараржар сығарабыҙ ҙа үтәмәйбеҙ. I, II ҡоролтайҙарҙың стенографик яҙмаларын ҡарағыҙ – күпме актуаль тәҡдимдәр әйтелгән, үткер мәсьәләләр күтәрелгән. Тормошҡа ашҡандары байтаҡ, ә күпмеләренә әйләнеп тә ҡаралмаған. Аныҡ, талапсан эш стиле етмәй. Ошо хаҡта ла әйттем.

Удмуртия парламенты делегацияһы менән киске мәжлескә барманым. Ҡайтып сәй эсеп ултырһаҡ, ишеккә звонок. Асығыҙ, угрозысканан тиҙәр. Фәриҙә һөйләште. Асманы, әлбиттә. Әллә ниндәй партия, митинг тураһында әйтәләр, ти. Аҙаҡ телефондан хужаларын эҙләп таптым, ҡаты һөйләштем. Ғәфү үтенгән булалар. Бөгөн эшкә барғас, Совет администрацияһы башлығына шылтыратам. Эҙәрлекләү, тыңлау, шымсылыҡ системаһы.

Алдамаҫтар бары ағастарым,
Ҡыуаҡтарым ғына һатмаҫтар.

Ғәйепһеҙҙән ғәйеп табырға,
Ябырға, башын сабырға...

Шымған донъя
Шомланып шымсынан.

Белемһеҙ булған,
Белекһеҙ булмаған.
Бөгөн – белемлеләр,
Ләкин белекһеҙҙәр.

Ата-әсәләре тере көйө
Күпме сабыйҙар
Етем-үкһеҙҙәр.

Сәғәт берҙә ВКБ-ның башҡарма ултырышы башланды. Ситтәр бутап йөрөмәһен өсөндөр ОПЦ-ға күсергәндәр. Ултырыш ябыҡ тип иғлан ителде, СМИ-ҙа, ағза түгелдәр ҙә сығып киттеләр.

Артур Иҙелбаевты ҡулға алғандар, Фәнзил Әхмәтшин допроста, БДУ-нан Башҡорт йәштәре иттифағы етәксеһе Багаев тигән егет, тағы ла берәү ҡыуылған, имеш. Кисен милиция Н. Мәжитовтың, Л. Биишеваның өйөнә килеп йөрөгән. Минең квартирға ла керергә

ныҡышҡайнылар, Фәриҙә индермәне. Уголовный розыскҡа, тиҙәр икән. Шылтыратып, хужаларына барып еттем. Митинг булдырмаҡсылар, шуны белешәләр, имеш. Мин бындай эштәр менән йөрөүҙәренә бик ныҡ ризаһыҙлыҡ күрһәткәс, ғәфү үтенгән булдылар.

Көн тәртибе тикшерелгәнсе, Зөфәр Еникеев Президентҡа барып килде. Хәмитов Р.З. шулай уҡ бындай башбаштаҡһыҙларға ныҡ асыулана, саралар күреләсәк, тигән.

Ултырышта төп һүҙ И.З. Солтанморатовҡа ышаныс белдереү-белдермәү хаҡында булды. Мәжитов та, Шәкүр ҙә ҡаты тәнҡитләп, ышанмауҙарын әйттеләр. Марс Юлдашев рәйеслеккә Марат Ҡолшәриповты тәҡдим итеп сығыш яһаны. Мин шундай һорау ҡуйҙым: Солтанморатов арабыҙға күктән килеп төшмәне. Уны айырым кешеләр Президент администрацияһы алдында ошо вазифаға тәҡдим итеп, күтәреп йөрөгән. Ә хәҙер килеп шулар үҙҙәре егетте туҡмай. Ул күптән эшләгән, хаталар ҙа ебәргән икән, был ағайҙар ҡайҙа булған, ниңә үҙҙәре күтәреп йөрөгән йәш етәксегә тәүҙән үк кәңәштәре менән ярҙам итмәгән, тинем. Инициатива төркөмөндә шул уҡ Мәжитовтар, Ҡолшәриповтар, Румил Аҙнабаевтар булған бит. Шулар бөгөн килеп егетте дөмбәҫләйҙәр. Ҡайҙа бында логика? Ул бит әле ярты йыл да эшләмәгән. Ышанып ҡарайыҡ.

Минең был һорауҙың йыйынға үҙенсә тәьҫире булды һымаҡ. Ғәбитов, Рим Вәлиәхмәтов, Г. Ҡолһарина һ.б. ышаныс белдереү, үҙен эштә күрһәтеү тураһында әйттеләр.

Гәрсә егет әлегә ысынлап та тәжрибәһеҙ. Кешене тыңлау ҙа етмәй һымаҡ. Әммә кисә Президент халыҡҡа ҡулын һуҙып, хеҙмәттәшлеккә саҡырып торғандан һуң бөгөн ул хуплаған, ярҙам итергә тырышҡан, башҡарма тарафынан раҫланған, халыҡҡа исеме еткерелгән егетте йыға һуғыу аҡыллы ир-егет ҡарары булмаҫ ине. Ваҡыт бирергә кәрәк.

6 март, 2011 йыл. Йәкшәмбе.

26-да Донъя ҡоролтайы ултырышынан һуң Ҡәзим Аралбаев менән киттек Сафуан Әлибайҙың 70 йәшлек юбилейына. Фәриҙә унда ине. Табынға Сафуандың туғандары, Октябрьскийҙан ҡоҙа-ҡоҙағыйы йыйылған, Венер Сәхәүетдиновтар килгәйне. Салауат Юлаев ордены тапшырҙым. Юллап йөрөп, көнөнән алда өлгөрттөм. Бик күңеле булды. Элек барғанда бик насар ине, әле бөтә көсөн йыйған, күрәһең. Арыуыраҡ күренде.

27-дә бөтә тәнем ауыртып уяндым. 28-дә лә шул уҡ хәл. Шулай ҙа эшкә барҙым. Рәхмәтуллинала оперативкала булдым. 1-дә өйҙә аунаным, температура 39,5. Шулай ҙа 2 мартта больницаға анализдар бирергә барһам, улар һалырға, тиҙәр. Төшкә тиклем Госсобраниела булып, 3-дәге комитет ултырышын Эльвира Юнысова үткәрһен тип һөйләшеп, Яҙыусылар союзында ултырһам, Президент администрацияһынан шылтыраталар: нәҡ сәғәт 12-лә – һеҙ 12-лә Р.З. Хәмитов менән осрашырға тейешһегеҙ, тип. Мин әйтәм, ниңә алдан хәбәр итмәнегеҙ, тим. Ғәфү үтенәләр, хата уларҙыҡы.

Биш минуттан барып еттем, 12.15-тә Рөстәм Зәки улы кабинетында инем. Ғәфү үтендем, ҡабул итеүе өсөн рәхмәт әйттем. Өс көн инде мониторҙа эленеп тора исемегеҙ, ти.

Ҡоролтай башҡарма комитеты ултырышы барғанда ҡабул итеүен һорап яҙыу биргәйнем президиумға. Һәйбәт булды, осрашыуға тиҙ саҡырҙы.

26-да Президент менән осрашыуҙан һуң угрозысканан тип ишеккә шылтыраталар, Фәриҙә асманы. Ләлә Биишева апайҙың, Нияз Мәжитовтың да йортонда булғандар. Артур Иҙелбаевты ҡулға алғандар, Фәнзил Әхмәтшинды допросҡа саҡырғандар, БДУ-нан Багаев һәм тағы ла бер студентты уҡыуҙан сығарғандар һ.б. Президент менән халыҡ араһында бәйләнеш нығынмаһын өсөн тырышалар.

Президент һүҙҙе ошо ваҡиғаларҙан башланы, ғәҙелһеҙлектәргә юл ҡуймаясағын әйтте.

Минең осрашыу һорауҙың төп маҡсаты апрелдә уҙасаҡ яҙыусылар съезы тураһында һөйләшеү, Президентты шунда саҡырыу ине. Киләсәкмен мотлаҡ, тине.

Үҙемдең 17-се йыл эшләүем, яңы етәксе кәрәклеген дә аңлаттым. Ул минең ҡалыу тураһында әйтһә лә, хәлде аңланы. Йәштәр ҡулына тапшырырға ваҡыт тип, Азамат Юлдашбаев исемен атап әйттем. Уны беләм, яҡшы егет, ти.

Әбйәлил тураһындағы китапты Президент үҙе яңынан иҫкә төшөрҙө.

4-дә Зөфәр Еникеевтың 60 йәшлегенә ОПЦ-ла мәжлес үтте. Президент килде. Верховный Совет заманынан бергә эшләгәндәр. Тост әйтте. Миңә лә һүҙ бирҙеләр. Больницаға тип, иртәрәк ҡайтып киттем. Ҡайтышлай Дәүләт Йыйылышына инеп сыҡтым, киске 9-ҙа больницала булдым.

5-дә Президиумда Толкачев Зөфәргә Салауат орденын тапшырҙы. Альберт Сафуан улы Ҡорбанов менән бүлектә ҡатындарҙы ҡотланыҡ. Өс Эльвира, бер Татьяна. Яңыраҡ телевизорҙан «йүгерек юл»дан уҡығайным, Эльвира защитница тигән һүҙ имеш. Татьяна һүҙе мөхәббәткә бәйле – Татьянин день. Тимәк, наш отдел крепко защищенный и одаренный любовью. Альберт шиғыр уҡыны, үҙе яҙа икән.

Ҡотлау дауам итте.

Аҡ ҡағыҙҙан шиғырҙар яҙылырҙан алда
Яҙмышыма улар яҙылған.
Тиҙерәк баҫылһын тип яҙылмаған,
Йөрәк баҫылһын тип яҙылған.

Һәҙиә Дәүләтшина премияһы буйынса комиссияла 4 кандидат ҡаралды. 14 тауыштан 10 тауыш алып, Кәтибә Кинйәбулатова лауреат булды.

7 март, 2011 йыл. Дүшәмбе.

Бына алтынсы көн больницала. Килгән көндө төштән һуң КТ-ға тыҡтылар, мейескә икмәк һалған кеүек. Үпкәне тыңлағанда Светлана Фәритовна шикләнә ине. Юҡҡа булмаған, бәләкәй генә пневмония таптылар. Ауырыуҙарым гөлләмәһенә тағы ла бер биҙәк өҫтәлде. Хәйерлегә булһын.

Больницаның ашханаһынан ҡарап торҙом: аҫтағы ҡыйыҡта (янындағы ағас өй) ҡар көрәйҙәр. Ике кеше монтажниктар һымаҡ наҡланып бәйләнгән. Быға тиклем был эште өҫтән күргән юҡ ине. Аҫтан ҡарайһың, таныш күренеш: көрәйҙәрме – көрәйҙәр! Бының ни тиклем хәүефле эш икәнен өҫтән ҡарағанда ғына нығыраҡ аңлайһың икән. Кешеләрҙең именлеген һаҡлайҙар бит. Аҫта атлап йөрөүселәр был хаҡта уйлап та ҡарамай, юлды бау тартып быуып ҡуйғандар тип мыжый хатта.

Ҡатын-ҡыҙҙар көнө алдынан шағирәләребеҙгә, әҙибәләребеҙгә теләгем шул: Кәтибә апай йәшенә етегеҙ, ул йәштә яңы бүләк, дәрәжә-исемдәр алмаһағыҙ ҙа, апай һымаҡ етеҙ атлап йөрөгөҙ.

Шахматсы шаһ. Уйында мәкер юҡ, ул намыҫҡа ҡоролған. Шахматсы шаһ барыһын еңә, уға тиңдәр юҡ. Ләкин тормош күпкә ҡатмарлыраҡ! Һин пешка һанаған кешенең ферзь булып сығыуы бар. Ферзь тип ышанғаның да, баҡһаң, бер буш ҡыуыҡ икән. Офицерың тоғро яугир түгел, һатлыҡ йән. Фил тигәнең дә ҡоро кәүҙә икән. Тормоштағы алыш, яу яланы шахмат тәҡтаһы түгел.

Шахматсы шаһҡа тормошта шах һәм мат тиҙәр. Бәләкәй генә сюжет күҙ алдына килә.

Ваҡ-ваҡ ҡына 2–3 шиғыр яҙылды. «Хазина»ны яңынан ҡараным, ләкин нимәнелер төҙәтеүе, яңыртыуы ҡыйын. Бирер ялҡын, бирер һыҙланыу уға бирелгән инде, өҫтәйһе ҡалмаған. Спектаклде ошо көйө театрға тәҡдим итеү тураһында һүҙ алып барырға кәрәк. Ҡарауыл тауы, Торатау тураһында әйтәһе һүҙҙәрем бар, улар хаҡында уйлап ҡарарға кәрәк.

Йәштәрҙе тәрбиәләүгә, рухи, әхлаҡи традицияларҙы һаҡлауға иғтибарҙың етмәүе тураһында мин нисәмә йыл мәҡәләләремдә, сығыштарымда әйтәм. Хәҙер шул хаҡта үҙәк матбуғатта ла йыш һөйләйҙәр.

Манеждағы фажиғәле бәрелештәрҙең сәбәбе бына шул етеш-неҙлектәрҙә – тәрбиәһеҙлектә бит. Үҙеңдең һәм башҡаларҙың изге милли тойғоларын һанға һуҡмау, ул хаҡта уйламау, хатта белмәү.

Мостай Кәримдең юбилейҙарының береһендә Келәштәге мәжлестә Сергей Михалков: «Я столько выпивал за здоровье друзей, что потерял свое здоровье», – тигәнерәк һүҙ әйткәйне. Шулай ҙа йөҙ йәшкә етә яҙҙы. Дуҫтарыңдың һаулығына ҡыуанып йәшәү кешенең үҙенә лә һаулыҡ өҫтәйҙер.

Быны мин Михалковҡа ҡарата әйтмәйем, ғөмүмән, шулай булыуы ихтимал тим.

Кешенең ҡарашын, тауышын, йылмайыуын, һөйләшеүен һ.б. сифаттарын оҡшатырға мөмкин, матурлығы, буй-һыны, ихласлығы, аҡылы үҙенә тартырға мөмкин.

Ә бына ғашиҡ булыуҙы улай деталдәргә бүлеп йыш ҡына аңлатып та булмай. Кеше һине бар булмышы менән биләп ала. Бәлки яҙмыш тигәнең шулдыр. Әммә ғашиҡ булыу тойғоноң башы ғына, ул яратыуға әйләнгәндә генә күңелеңә ныҡлап тамырлана.

Әҙәбиәттең, ижадтың эске стихияһына тәбиғи ҡушылып, шуның менән һулыш алып йәшәү – быныһы иң тәбиғи, иң илһамлы, хисле йәшәйеш. Ләкин ғүмер үтеү, ижад тәжрибәһе, тормош аҡылы артыу менән ижади эшеңә, ғөмүмән, әҙәби мөхиткә ситтән ҡарау, уны тәнҡит күҙенән үткәреп баһалау нығыраҡ арта бара һәм баһалаусан ҡараштың көсәйеүе ижад эшен ҡатмарлыраҡ итә, тоҡанырға торған илһам утын тыйып, һүрелдереп ҡуя.

Ташландыҡ өй.

Больницаға ҡаршы элекке Луначарский баҡсаһының ситендә ике ҡатлы ҙур ғына ағас йорт бар. Ҡап-ҡара, ҡасан ҡараһаң да тәҙрәләрендә ут юҡ, кеше йәшәмәй һымаҡ. Уға гел хәүефләнеп, шомланып ҡарайым. Бында кеше бөтөнләй йәшәмәй микән ни? Бөгөн иртәнге сәфәремдә йортҡа Цюрупа яғынан барып ҡараным. Ике ерҙә икешәр тәҙрәлә ут бар! Күңелле булып китте.

Минең өсөн иҫке, ташландыҡ өйҙән дә күңелһеҙерәк күренеш юҡ һымаҡ.

Йәшәү сиге, ғүмер оҙонлоғо. Йәнлектәр донъяһында был сиктәр аныҡ ҡуйылған. Улар уртаса йәшәү сигенән күпселектә бик үк үтеп китә алмай. Ғүмер оҙонлоғо буйынса кешеләр араһында айырма бик ҙур. Берәү үтә йәшләй үлә, икенселәр ныҡ ҡартайып яфалана. Асылда күп кешеләрҙең оло йәштәрҙә оҙаҡ йәшәүенән йәмғиәт, халыҡ, ил өсөн файҙа, ниндәйҙер өлөш индереү юҡ дәрәжәһендә. Улар яңы кешеләр өҫтәмәй, халыҡтың һанын арттырыуҙа артабан ҡатнашмай, улар матди һәм рухи байлыҡ тыуҙырмай. Күпселеге тик үҙе өсөн йәшәй. Уйлап ҡараһаң, ҡарттары артҡандан-арта барған халыҡтың һан яғынан ҙур булыуын ҡеүәтле потенциал тип булмай.

19 март, 2011 йыл. Шәмбе.

Башы эшләй, йөрәге эшләмәй.

Башы бар, йөрәге юҡ.

Киреһенсә лә була. Тик хис менән йәшәүсе, йәғни: йөрәге эшләй, башы эшләмәй.

Хәҙерге Рәсәй етәкселәренең башы ла юҡ, йөрәге лә юҡ. Хәҙерге тигәнем 1985 йылдан башланған башбаштаҡлыҡ дәүере – смутное время.

6, 7, 8 март бер яңғыҙым больницала үткәрҙем. Яңғыҙлыҡты һағынғайным. Әллә нәмә яҙмаһам да, бер үҙең ҡалып, аулаҡта уйланыуҙар күңелгә тыныслыҡ биргән һымаҡ.

15-дә Дәүләт Йыйылышы ултырышы, Хөкүмәт отчеты, Президенттың мөрәжәғәтнамәһе. Премьер-министр урынбаҫарҙарының телмәрҙәре бик төҫһөҙ булды. Мөрәжәғәтнамә халыҡтың власҡа ышаныуы, властың асыҡ булырға тейешлеге тураһында.

Төштән һуң Союзда Ғилман Ишкининдың 40-на арналған хәтер кисәһе. Мин астым, Азамат Юлдашбаев алып барҙы. Яртыһында ғына булып, Кәҙим менән минкультураға киттем. Награднойҙар тураһында Асҡар Абдразаков менән һөйләштек.

16-да Шишмә районында мәктәптәрҙә булдыҡ: мин, Эльвира Марсовна, минобрҙан Гөлсәсәк Мөхәмәтйәнова.

Ябалаҡлы клубына ауыл халҡы йыйылған. Балалары менән килгән әсәләр ҙә бар. 2005–2008 йылдарҙа 20–25 бала уҡыған.

2008 йылдың йәйендә мәктәп бинаһының яраҡһыҙлығы тураһында суд ҡарары.

Мәктәп һикһәненсе йылда һалынған, әле тәҙрә-ишектәре нығ иҫкергән. 4 млн. һумға түбәһен япҡандар, электропроводканы алмаштырғандар. Тағы ла 12–15 млн. кәрәк икән бында эште бөтөрөп, һауыҡтырыу үҙәге һәм башланғыс мәктәп асырға.

Уҡытыусылар үҙ-ара талашып, мәктәпте ошо хәлгә килтерҙеләр, тиеүселәр булды.

Ҡатындар эш юҡҡа зарлана. Һөт йыйыу ҙа ойошторолмаған. Район етәксеһе әйтә, бынан 3 км-ҙағы Шөңгәккүлдә 6 механизатор, 4 шофер кәрәк, ти. Халыҡта реакция булманы. Нимә генә тиһәң дә, ауыл дәртле етәкселәргә, ойоштороусыларға мохтаж.

Район етәксеһе Уразмәтов Флюр Зиннур улы бик шыма һөйләй. Былай тырыша ла һымаҡ. Тик Ябалаҡлы мәсьәләһен 2014 йылда хәл итергә планлаштыра. Нисек тә 2012 йылда өлгөртөргә, тип һөйләштек. Әлегә юлдары күренмәй.

18-дә Аҡ йортта Мырҙағолов Ростиславта булдым. Награднойҙар менән барғайным. Абдуллинды саҡырып, үҙем бирермен, тине.

Съезд тураһында һүҙ башлаһам, ваҡытын күсерәйек, етәксе аҡһаҡал йәшендәрәк булһын, үҙегеҙ ҡалһағыҙ, бигерәк тә һәйбәт, тип аптыратты. Президент менән һөйләшелгән, съезда буласағын графигына индереп, яҙып ҡуйҙы, мотлаҡ булам, тине. Шулар хаҡында әйтһәм, Мырҙағолов донъя тынысланһын, бер-ике ай булһа ла ваҡыт үтһен инде, тип ныҡыша.

Ризалашманым. Күсереү төрлө һүҙҙәр тыуҙырасаҡ, Азамат Юлдашбаевтан башҡа тәҡдим итер яҙыусым юҡ, тинем. Азамат тураһында фекере һәйбәт, тик уны дәүләт системаһы буйынса үҫтереү уйы ла бар ине, ти.

Белмәйем, нимәнелер бутайҙар. Съезды күсерерлек һис бер сәбәп күрмәйем.

Төштән һуң Союзда ҡабул итеү комиссияһы, идара ултырышы үтте. Яңы ун ағза ҡабул иттек. Мәжлестәренә ҡалманым, ваҡытты еткереп булмай.

17-дә осрашыу. Аритмия. 18-дә көнө буйы шул хәлдә йөрөнөм. Төндә үткән. 19-да төнгө икенсе яртыла торһам, хәлем бик һәйбәт.

Илһамланып эшкә тотондом. «Башҡортостан»ға интервью яҙып ташланым. 8 бит булды. Л. Абдуллинаның һорауҙары.

23 март, 2011 йыл. Шаршамбы.

Дүшәмбе көн Рәхмәтуллинала оперативка булманы. Интервьюны баҫтырып алдым – 8 бит.

Бөгөн «ЛГ»-ның милли бите башҡорт әҙәбиәтенә арналып сыға. Киоскынан алырға кәрәк. Союздыҡы үҙемдә булһын.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, минең мәкәлә был һанға инмәй. 6 апрелдә Поляковтың мәкәләһенә откликтарҙа ҡыҫҡартып бирәбеҙ, тинеләр.

Буласаҡ идараның, шулай уҡ яңы ойошторолоасаҡ Аҡһаҡалдар ҡороноң (Совет старейшин) исемлеген ҡарап сыҡтыҡ.

Тарая ижади даирә. Яҙыусылар һаны яғынан арта, киңәйә. Уҡыусылар һаны яғынан кәмей, ҡыҫыла, тарая.

Күп осраҡта үҙебеҙҙе үҙебеҙ генә тиерлек уҡыйбыҙ, үҙебеҙҙең мөхиттә күңелебеҙҙе йыуатабыҙ, шуның менән сикләнәбеҙ: «Әҙәбиәт әҙәбиәт өсөн» тигән күренеш башҡорт ерлегенә бер ҡасан да хас булмаған! Нимә генә тиһәң дә, беҙҙең әҙәбиәт халыҡ яҙмышын хәстәрләп йәшәгән. Ә бына халҡыбыҙҙың хәҙерге үҙгәрештәре дәүерендә «Әҙәбиәт әҙәбиәт өсөн» тигән сикләнгән донъяла ҡалып килмәйбеҙме?

Сүп-сарҙарҙан ҡышын ҡарҙар ҡаплай,
Йәшеллектәр йәйен йәшерә.

7 апрель, 2011 йыл. Кесаҙна.

Дәфтәргә тотонорға ваҡыт юҡ. Съезд алды һайлау ығы-зығылары көсәйә бара. Халыҡ араһында тулы берҙәмлекте көтөүе лә мөмкин түгел. Бигерәк тә ижад донъяһында.

Асыҡ ҡараш, төплө аҡыл еңер, тип уйлайым.

«ЛГ»ла башҡорт әҙәбиәте бите мин көткәнсә тулы бит булып сыҡманы. Шулай ҙа ярап торор.

Минең мәкәләне ҡыҫҡартып кисә бирергә тейештәр ине, нисек булғандыр.

«Башҡортостан»да Лариса Абдуллина менән һөйләшеүем сыҡты. Исемен «Ҡарашыбыҙ киләсәккә төбәлгән» тип атаныҡ. Быуаттар бәйләнеше, йәштәргә эштәрҙең күсергә тейешлеге тураһында күберәк әйтергә тырыштым. «Истоки»ҙа 13-дә съезд номерында сыға.

Әле «Яҡтыкүл» санаторийында ошоларҙы яҙып ултырам. Кисә туғызынсы яртыла ҡуҙғалдыҡ. Өс сәғәт тә 45 минутта Асҡарҙа

булдыҡ. Сәғәт 2-лә граждандарҙы ҡабул итеү үткәрҙем. 12 кеше булды. Һәр ваҡыттағыса, бындай осрашыуҙарҙа кешеләрҙең ауыр тормоштарын күреп, йөрәк һыҙлай. Ярҙам итерлек мөмкинлектәрҙең бик аҙ булыуы бигерәк тә ғәрләндерә.

Асҡарҙың 1-се мәктәбендә булдыҡ. 6 башҡорт уҡытыусыһы, 6 кабинет.

XIX быуат уртаһында уҡ ойоштороlған уҡыу йорто. Райондың бик күп арҙаҡлы шәхестәренең – ошонда уҡығандарҙың рәсеме. Бик күптәре менән яҙмышым бәйләнгән – атап күрһәттем.

Ҡайһы бер башҡорт кластарында рустар ҙа уҡый икән. Әммә районда 88% башҡорт йәшәһә лә, бындағы кластарҙың күбеһе рус кластары.

Ашханалары бик тар икән. Дүрт поток ашайҙар, ҡайһы берҙәре – аяҡ өҫтө, тиҙәр. «Ярар, аяҡ өҫтө булһа ла, ашарға булһын!» – тинем. Көлөштөләр.

Асҡар тирәһендә ҡар ныҡ ирегән. Ныҡ елле-дауыллы көндәр булған.

19 апрель, 2011 йыл. Шишәмбе.

Бына XV съезд үтеп тә китте. Кисәнән больницала диспансеризацияла. Рәхмәт, айырым палатаға урынлаштырҙылар. Аҙыраҡ эшләп алырға ниәт. Бик үк эш ҡыйратып булмаһа ла, аулаҡта уйланырға форсат булыр.

Ә уйланаһы нәмәләр съездан һуң етерлек. Әле хәтерләп ултырам: бынығы мин үткәргән дүртенсе съезд булды. Тәүге өсәүе йырлап тиерлек үткәйне. Унда ла, бигерәк тә һуңғы икенсеһендә, әҙерлек ваҡытында борсоулы мәлдәр ҙә булды. Әммә бынығына әҙерлек барышында ла, йыйын үткәндә лә бәҙге бәндәләрҙең битһеҙлеге ашыптан ашты. Рәми ағайҙың көндәлегендәге һүҙҙәр ирекһеҙҙән иҫкә төшә. Әле яттан белмәйем, һәр хәлдә Рауил был Тойғон менән йөрөһә, күрһәтер әле ул, тигәйне. Бына күрҙек.

Ләкин съезд барыбер һәйбәт кимәлдә үтте. Президент аҡыллы һөйләне. Минең отчет сығышымды яҡшы тинеләр. Докладымдың аҙағында мин Азамат Юлдашбаевты рәйеслеккә тәҡдим иткәйнем. Тәҡдим тормошҡа ашты: Күзбәковкә – 25, Ғәйетбайға – 60, Азаматҡа 75 тауыш.

Башҡортостан Республикаһын юҡ итеп, Өфө губернаһын төҙөү хаҡында хыялланыусы «Уфагуб»та сығыш яһауы ғына ла Тойғондоң республикабыҙға мөнәсәбәтен күрһәтә.

Нәжип Асанбаев ниңә съезд алдынан өс кешегә халыҡ шағиры, яҙыусыһы исемен бирмәҫкә тигән ризаһыҙлығын белдереп сығыш яһай. Яңы ғына Игебай менән Ғиниәтуллинға бирелде. Талха ағайға Президент съезда тапшырҙы.

Йомғаҡлау һүҙемдә әйттем: 1997 йылға тиклем – 75 йылда 8 халыҡ шағиры, 1997–2011–14 йылда 10 халыҡ яҙыусыһы һәм шағиры бирелгән. Йыл һайын берәү тиерлек. Был исем артыҡ күп бирелә тип әйтеүселәр аҙ булдымы ни? Аҡһаҡал шуны белергә тейеш бит!

Йомғаҡлау һүҙемдә әле яңы ижад иткән ике мәҡәлемде лә әйттем:

1) Ауыл алйотһоҙ булмаҫ!
2) Иҫәүәнһеҙ ил булмаҫ!

Әле өҫтәп ҡуяйым әле: күпме генә тултырһа ла (тығынһа ла), ҡоҙғонға әйләнгән бәндәнең ҡорһағы тулмаҫ, нәфсене туймаҫ.

Разве бывает деревня без собаки? Даже в самом мудром обществе встречается нехороший человек. Но выводы делают не на основе его клеветы, а исходя из обоснованных рассуждений хороших людей.

«Съездан һуң уйланыуҙар» тигән бер мәҡәлә күҙ алдына килә. Ваҡланмайынса, принципиаль һүҙ.

Халыҡ бар, кеше юҡ. Халыҡ ҡына түгел, кешеләр ҙә артһын ине!

Аҫҡар яҡтарына барһам,
Аҫҡар ейәнемде (бүләмде) һағынам.
Аҫҡар бүләм янында
Аҫҡар яҡтары иҫкә төшә.

Йәмле яҙҙың да йәмһеҙ яҡтары етерлек. Яҙын сүплектәр асыла, юлда соҡорҙар күбәйә. Яҙғы елдәр иркәләп кенә иҫмәй, сүп-сарҙы ла осороп йөрөтә.

12 апрелдә Гагариндың йыһанға осҡанына 50 йыл тулды. Әйтеүе генә аныһат – ярты быуат! Ул көн әлегеләй хәтеремдә. Елкенеп йәшәгән йәш саҡтар!

Иртән радионы ҡуйһам (иртәнге алты тулыр алдынан), русса бер шиғырҙың осон – ике юлын ғына ишетеп ҡалдым. Яттан белмәйем, мәғәнәһе шулайыраҡ:

Бог не лишил меня всего,
Я потерял только царство.

Берәй батша ауыҙынан әйтелгәндер.

Съезда йомғаҡлау һүҙемдә ошо ике юллыҡты ла иҫкә төшөрҙөм: «Да, как и любого человека, бог лишил меня многого, но не всего.

Цари теряют свое царство, но у меня есть царство, которое я никогда не потеряю, оно всегда будет со мной. Это царство литературы, это волшебный мир творчества, мир поэзии. Нам посчастливилось до конца своей жизни жить в этом царстве, дорогие друзья!»

20 апрель, 2011 йыл. Шаршамбы.

Кисә Путиндың ҡабул итеү бүлмәһендә сәғәт өстән кешеләр килә башланы. Етәү яҙылғайны, алтауы булды. Шулай ҙа ваҡыт етмәй ҡалды, алтынсы ярты булып киткән.

Интернетҡа эленгән ғәйбәттәрҙе уҡыу, нахаҡ һүҙҙәрҙе ишетеү һәр кем өсөн дә күңелле хәл түгел. Төрлө кеше төрлөсә кисерә, әлбиттә. Әммә барыбер күңелгә ауыр.

Ә бына граждандарҙы ҡабул иткәндәге кисерештәр күпкә ауырыраҡ. Күпме кешеләр ғазаплы тормошта йәшәй. Яҙа башлаһаң, тетрәндererлек әҫәр булырлыҡ яҙмыштар. Ауырлыҡтарын күреп бер һыҙланһаң, шуға ярҙам итә алмауыңа ғәрләнеп ун һыҙланаһың.

Ә бит уларҙың барыһы ла Рауил Бикбаевҡа ышаныс-өмөттәр бағлап килә. Депутат тип килә, шағир тип килә.

Тормош аяуһыҙ, әлбиттә. Шулай булған, шулай буласаҡ. Аҙ ғына ярҙам итә алһам да оло ҡыуаныс кисерәм. Ләкин ундай мөмкинлектәр үтә һирәк, ундай берәү-икәү булһа, бик һәйбәт.

21 апрель, 2011 йыл. Кесаҙна.

Көндәр һаман һыуыҡ тора. Ямғырҙар ҙа яуғылап ала. Былтырғы яман ҡоролоҡтан һуң ерҙең ошолай яйлап дым һеңдереүе һәйбәт.

Съездан һуң осрашыу. Тағы нисә йыл ҡалғандыр.

Тормош ағышында әкренләп, күҙгә ҡапыл күренмәйенсә генә үҙгәреү кешене һыныуҙан һаҡлаусы мөғжизә бит ул.

Ҡартлыҡ килә, көн һайын ғүмер ресурсы кәмей бара. Ләкин улар ҡапыл ғына һиҙелмәй.

Ҡалын ҡарҙар иреп бөтмәҫ һымаҡ ине, әммә улар һиҙҙерәмй генә бөттө лә ҡуйҙы.

Өйрәнелгән, көн дә күргән мөхиттә күп нәмәләр һаман бер көйө, белгән кешеләрең дә шул көйө һымаҡ. Әммә берәйһен оҙаҡ күрмәй осратһаң, нисек ҡартайғанына аптырап ҡарайһың, шунан үҙеңде лә ентекләберәк барлайһың.

Кешенең төп ризығы – һауа. Йәшәүҙең төп шарты – кислород. Һыуһыҙ, ризыҡһыҙ әллә нисәмә көндәр тороп була, ә һауаһыҙ иң күбе бер-ике минут. Ашарға булмағанда, «воздухом что ли питаться?», тиҙәр. Дөрөҫ дәғүә. Әммә – прежде всего воздухом питаться. Таҙа, саф һауа таҙалыҡтың, сафлыҡтың төп шарттарынан.

«Если звезды зажигают, значит, это кому-то нужно», – Маяковскийҙың ошондайыраҡ һүҙҙәрен йыш ҡабатлайҙар. Яңы йондоҙҙоң тоҡаныуы – изге күренеш.

Ләкин йондоҙҙо һүндерергә тырышыусылар, үҙе йондоҙ була алмағас, унан көнләшеүселәр ҙә етерлек бит.

Если звезды гасят, стараются погасить, значит, это тоже кому-то нужно.

22 апрель, 2011 йыл. Йома.

Кисә съездан һуң тәүге идара ултырышы булды.

Азаматҡа был идара менән эшләүе еңел булмаясаҡ. Ләкин таянып эшләрлек көстәр ҙә бар, тупларға кәрәк.

Минең 16 йыл эшләүем өсөн съезда рәхмәт әйтеп, сәскә биргәйне Зөһрә Рәхмәтуллина. Идарала бер һүҙ әйтһәләрсе... Ярар аҙаҡ Гөлфиә ҡулды ҡыҫып тора. Ә «Бикбайҙың ҡуштандары» ауыҙҙарына һыу йомоп ултырҙы.

Бөгөн Конгресс-холда Чубайс менән кәңәшмә. Президент алып барҙы. Ҡайҙа аҡса – шунда Чубайс. Илде бөлгөнлөккә килтереүсе төп көстәрҙең береһе. Хәҙер нанотехнологияның башлығы. Бик ҙур аҡсалар шунда тупланған.

«Йома» тапшырыуын ҡараным. Уның алдынан бысраҡ яҙмалар уҡығайным. «Йома»лағы ихлас һүҙҙәрҙән һуң күңелем таҙарынып ҡалды.

Чубайс менән осрашыу бер нимә лә өҫтәмәне, әлбиттә. Иң ҙур бурҙы яҡындан күрәйем тип кенә барғайным.

Уның ҡарауы, иҫ киткес матур күргәҙмәне кинәнеп ҡарап йөрөнөм. Донъялағы иң атаҡлы мәсеттәрҙең һүрәттәре ҡуйылған. Мин нисә тапҡыр һоҡланған Солтанәхмәт мәсете лә (Стамбул) бар. Әл дә барғанмын, шул мәсеттәрҙән күңелемә нур өҫтәлде.

Йәйге ялға тиклем бөтөрәһе эштәр байтаҡ. Инде Союз эштәренән ҡотолдом, унан һуң – съездан һуң больницала (522 палата) диспансеризация үтәм. Күңел тынысланып килә. Тауҙай эштәр (бишенсе том) өйөлөп ята. Шуларҙы рәткә килтерәйем. «Ғилем» өсөн русса китап әҙерләргә кәрәк. Йәйге ялға тиклем яңы өйҙөң осона сығырға,

иҫкеһен һатырға кәрәк. Дәүләт Йыйылышы буйынса ла ҙур мероприятиелар тора.

«Хазина»ға яңынан әйләнеп ҡайтырға кәрәк. Бәғзе берәүҙәр уны хурларға тырышһа ла, күпме кешеләрҙән рәхмәт һүҙҙәре ишеттем. Шиғри спектаклдә илап ултырыусылар ҙа аҙ булманы, тинеләр. Үҙем сәхнәнән күрә алманым. Телевидение яҙып алған тапшырыуҙы күрһәткәндәрендә генә бер күренеш айырыуса иҫтә: хатта Тимерғәле Килмөхәмәтовтың күҙенән йәш аға ине. Ир кешенең күҙенән йәш сығырлыҡ булғас, поэманың тәьҫир көсө аңлатыуға мохтаж түгел. Халыҡтың уны нисек яратып, йөрәктән кисереп ҡабул иткәндәрен үҙем БДПУ-ла, Стәрленең педакадемияһында, Сибайҙа шығрым тулы залдарҙа шаһит булдым. Ә «Нефтяник»тағы тәүге премьера шиғри әҫәрҙең сәхнәлә әлегә тиклем күрелмәгән ҙур тантана икәнлеген зал тулы халыҡтың, телевизорҙан ҡараған йөҙәр мең кешеләрҙең алҡыштары, кисерештәре үҙҙәре һис бер һүҙһеҙ раҫлай. Ғәйбәтселәр шул поэманың ике-өс битен яҙып ҡараһын әле.

Раил Байбулатов ағай тураһында, минең уны эштән ебәреүе тураһында ниндәй ялған һүҙҙәр.

Раил ағайҙы китмә тип үҙем өгөтләнем, ярар инде, арыным, тине. Аҙаҡ хеҙмәттәштәремдән белдем: Риф уға һин, пенсионер, нишләп йөрөйһөң бында, тип аҡырған. Раил ағайҙы бер ни тиклем ваҡыттан һуң кире эшкә алдым. Уның менән ғүмер буйы татыу йәшәнек, иҫ киткес кеше ине. Вафаты алдынан улы Илдарға фатир мәсьәләһен дә хәл иттек.

Антологияны һатып, мин 50 мең аҡса урлағанмын булып сыға. Был хаҡта әллә ниндәй ялған документтар ҙа килтерә. Антологияны сығарыр өсөн республика буйлап күпме предприятиеларҙан хөкүмәт төҙөгән исемлек буйынса аҡса һорап, йыйып йөрөнөм. Райондарға ҡайтҡандарының бер тиненә лә ҡыҫылышым юҡ. Был ялған документтарҙы тикшереп йөрөргә ғәрләнәм, шулай ҙа төбөнә төшөргә кәрәк.

Бындағы алдаҡ-уйҙырмаларҙы уйлаһаң, уйылып китерлек.

Ғәйбәттәренең аҙағында «мәҙәни жомға»нан килтергән көләмәсенең минең шиғырҙан килтерелгәнен ниңә әйтмәй:

Ҡасан ғына, муйыныма һарылып,
Тубығымда ҡыҙҙар ултырҙы.
Күңелдәрҙе хәҙер боҙ ҡапланы,
Быуындарға тоҙҙар ултырҙы (1993).

Шулайтып та әйтә алмағас, шағир шағир буламы ни?

27 апрель, 2011 йыл. Шаршамбы.

Ял көндәре өйҙә булдым, 5-се томға йыйылған материалдарҙы тәртипкә килтереп туплап бөтөрә яҙҙым. Күп ҡалманы инде! Ҙур ҡумта һымаҡ ике ҡалын күк папкаға саҡ-саҡ һыйҙы, бауҙарын бәйләүе лә ҡыйын. Бишенсе томға 35 табаҡ һорағайным, уға һыйҙырыуы ла ҡатмарлы.

Кисә төшкә тиклем эштә булдым. Хәҙер инде ҡайһы эштә – союздамы, ҡоролтайҙамы тип асыҡлау кәрәкмәй. Аллаға шөкөр, союз ҡамыты муйындан төштө. Ун алты йылдан артыҡ һөйрәһәм дә, рәхмәт әйтеүсе һирәк. Ләкин эшләнгән эштәрҙең әҙәбиәтебеҙ тарихында, ижади мөхитебеҙ тарихында, үҫешебеҙ юлында барыбер ҙур-ҙур ваҡиғалар булып ҡаласағын уйлаһаң, күңелемдә яҡты кисерештәр, рухымда көс, ышаныс арта.

Ниндәй ҙур-ҙур саралар, нисәмә съездар, йәштәрҙең күсмә семинарҙары үткәрелгән, ниндәй фундаменталь антологиялар сығарылған, Башҡортостандан ситтә күпме бәйләнештәр булдырылған, әллә нисәмә тиҫтә яҙыусыларға фатир юллап алынған – уларҙы күрер һәм баһалар өсөн киң ҡараш, күҙаңда ерҙәге сүп-сарҙан, аяҡ аҫтындағы батҡаҡтан айыра алырлыҡ мөмкинлектәр кәрәк бит. Әгәр бәндә был бәхеттән мәхрүм икән, ғүмере буйына донъяны сусҡа ҡарашы менән генә күреп йәшәү мәсхәрәһенә хөкөм ителгән икән, ул бисараны йәлләргә генә ҡала. Меҫкендәр хатта ҡәһәрләүгә, ләғнәткә, ҡарғышҡа ла лайыҡ түгел, ул бахырҙарҙы бары тик ҡыҙғанырға, йәлләргә кәрәк.

Улар нимә генә ҡылһын, яҙмыш шулай яратҡас...

Дуңғыҙҙарҙың ашы тиреҫтәге ҡуңғыҙ, бысраҡтағы ҡорттар. Улар алманы үрелеп өҙә алмай, йондоҙҙарға хайран ҡалып ҡарай алмай шул. Мәхлүктәр инде.

Мин дәрәжәләр, ордендар алғанмын, член-корр.һ.б. исемдәргә ирешкәнмен, имеш. Уларға ирешеү юлдары бер кем өсөн дә бикле түгел, тыйылмаған бит. Ундай бейеклектәр тау-тау хеҙмәттәр аша яулана. Әммә дуңғыҙ тауҙарҙы күрә алмай, уға соҡор-саҡырҙарҙы күреү, бысраҡта ҡазыныу, томшоғо менән ер аҡтарыу мөмкинлеге генә бирелгән.

Шиғыр менән генә мөһөр һуғырға мөмкин. Бер нәмә яҙылмай ҡалмаҫ һымаҡ. Теге ваҡыт «Дошмандарым» тигән шиғырҙың яҙылыуына ла шундай яла яғыуҙар сәбәп булғайны бит.

21-дә Госсобраниела Конституцияға төҙәтмә индереү – милли-региональ компонентты алып ташлау тураһында законопроект тәүге ҡарауҙа ҡабул ителде. Президент тәҡдиме менән ҡабул ителгән. Беҙҙең комитет был хаҡта бер нәмә лә белмәне. Кем менән кәңәшләшеп эшләгәндер – беҙгә билдәһеҙ.

Ниңә ҡабаланырға, Мәскәү алдында ниңә ул тиклем ҡуштанланырға?

Улар бер ҙә ашыҡмай. Ысынлап та, алда Дума һайлауҙары, Президент һайлауҙары – донъя был көйө генә тормаҫ. Конституцияға бындай принципиаль үҙгәреш индереү, бик ҙур хоҡуҡтарыбыҙҙы юғалтыу халыҡта әллә ниндәй ризаһыҙлыҡтар тыуҙырыуы ла мөмкин бит әле.

Ир бала ҡыҙыҡмаҫ ҡурсаҡҡа,
Һин уға башҡаса тәтәй һуҙ.
Ҡурсаҡҡа ул аҙаҡ тотонор –
Ир-аттың ҡурсағы – ҡатын-ҡыҙ.

Если человек – талант, то он талантлив во всем. С идиотами такая же ситуация... («КП», 27.04.11.)

«Если допустить свободные выборы, к власти могут прийти воры и негодяи!

А если не допустить, они могут у власти остаться!» («АиФ», 27.04.–03.05.2011.)

30 апрель, 2011 йыл. Шәмбе.

28-дә больницанан сыҡтым. Эштә булдым.

29-да Айһылыу Билал ҡыҙы Юнысованы 60 йәше менән Госсобрание исеменән ҡотланым. Маҡтау грамотаһы, ҡоролтайҙың сәғәте. Беҙҙең бүләк иткән букет иң матуры булды. Һүҙемде «Атанан күргән – уҡ юнған, әсәнән күргән – тун бескән» тигән мәҡәлдән башланым. Дөрөҫөрәге, иң элек бөгөнгө матур байрамда Айһылыу һылыу тип һылыу һүҙен ике рәт ҡабатлай алыуыма шатмын, тинем.

Атай юлын ҡыуыусы ҡыҙ бала. Өфөләге иң бай ҡатын-ҡыҙ. Унда сармат алтыны булған өсөн түгел, ғүмерен халыҡтың иң ҙур хазинаһы – рухи байлығын өйрәнергә бағышлаған өсөн.

Ай нәҙек кенә ҡалды, бөтөп бара. Яңы тыуғанын тағы ла күреп булмаясаҡ – болотланы.

Ҡояш йылыһында ай ирене.
Мин иренем, тойоп иренеңде.

Ниңәлер быйыл яҙ ҡоштар юҡ. Сыйырсыҡ тауышы ишетелмәй!

Беҙҙекеләр (Азамат Юлдашбаев, Марат Кәримов, Ирек Кинйәбулатов) Ҡазанға Туҡайҙың 125 йыллығына барып ҡайттылар. Бик матур үткән. Күп ерҙәрҙән килгәндәр. Мәскәүҙә Туҡайға һәйкәл асылған, тинеләр. Тик был хаҡта үҙәк СМИ өндәшмәй.

Көндәлектәремдең ҡалын бер блокнотын Рәйлә Бүләкова баҫҡайны. 127 бит булған. Больницала ҡарап сыҡтым, хаталарын төҙәттем. Булған бөтә көндәлек блокноттарын баҫтырып алырға ниәт бар. Күләме бик күп йыйылып китер, әлбиттә. Шулай ҙа шулар нигеҙендә «Көндәлек яҙмаларҙан» тигәнерәк китап әҙерләргә ине. Тулы көйө архивымда һаҡланһын, ҡыҫҡартып – матбуғатҡа. Башҡорт әҙәбиәтендә бындай тәжрибәнең әле булғаны юҡ.

Халыҡ был ялдарҙа (ике тапҡыр өсәр көн) баҡсаларға ябырыла инде. Беҙ генә ике арала бүлгеләнеп торабыҙ. Иҫкәһе һатылмаған, яңыһы алынмаған.

Кеше кермәҫ кеше гүренә,
Кеше менер кеше түренә.

29 май, 2011 йыл. Йәкшәмбе.

Бер ай был дәфтәрҙе ҡулға алған юҡ – бындай хәлдәр һирәк була. Ваҡиғаларға бай был май. Иң мөһиме беҙҙең өсөн – өйләнгәнгә 50 йыл. Яҙылышыу көнөндә – 13 май – өйҙә бәләкәй генә табын. Туй көнөндә – 27 май – «Йәшел сауҡа» санаторийының Центр досуга залында алтын туйға 50 кешене йыйҙыҡ. Күбәһе туғандар. Яҙыусыларҙан Ҡәҙим Аралбаев, Азамат Юлдашбаев, Зөфәр Вәлит, Хәсән Назар, Мөнир Ҡунафин. Артыҡ шау-шыуһыҙ, матур йырҙар менән күңелле үтте.

19-да Госсобраниела Конституцияға үҙгәреш индереүҙә беҙҙең ныҡышмалылыҡ менән «Гарантируется... изучение государственных языков РБ и языков народов РБ» тигән юлдар өҫтәлде. Бик мөһим өҫтәлмә, тип уйлайым.

Эргәләге баҡсала һандуғас һайраһаны ишетелгеләй башланы. Юғиһә, яҙ бөтөнләй сыйырсыҡһыҙ, һандуғасһыҙ, кәкүкһеҙ үтеп бара ине.

Әнүр ҡустым Вахитовтың «Бөйөк хаж сәфәре» тигән юлъяҙмаларын баҫтырып алдым, 60 биттән артығыраҡ. Улар шәжәрә байрамы үткәрергә әҙерләнәләр. 8 июлгә, йома көнгә, һөйләштек. Шуға тиклем берәй брошюра итеп булһа ла сығарып өлгөрөргә ине.

Күп ваҡытым 5-се том менән үтте. Материал бик күп тупланды, бер китапҡа һыймаҫ, ахыры. «Хазина» менән шиғырҙарҙы бәлки индермәй торорға тура килер. Шулай ҙа бик ҙур эштең осона сыҡтым һымаҡ. Бөгөн барып алам, Союзда Луиза әҙерләште.

Һинең тулышып бешкән сағың,
Минең аттан төшкән сағым.

Быйыл май һыуыҡ. Ямғырҙар яуып тора. Йыл бәрәкәтле килһен ине, халыҡҡа ауырлыҡтарҙан сығырға ярҙам булыр ине.

Иглин районында Урман ауылы янындағы хәрби складтарҙа снарядтар шартлап, ҙур ҡазалар килтерҙе. Ярар кешеләр һәләк булманы.

Һағындым мин һине, һағындым.
Табындым мин һиңә, табындым.
Ҡабындым ялҡынға, ҡабындым,
Осорға ҡанатым ҡағындым...

Яҙыусы һөйләүсе түгел,
Яҙыусы – яҙыусы.
Һөйләүең оҫта булмаһа ла, яҙыуың оҫта булһын.

Шәһит билбауы ураған әллә ҡаһарман, әллә зомбиға әйләндерелгән кешеләр.

Биленә шәһит билбауы һымаҡ күпме һәләкәттәргә илтерлек дәһшәттәр ураған кешелектең үҙен һуң ниндәй яҙмыштар көтәлер?

Союзда эшләгән нисәмә йылдар буйына дүшәмбеләрем хөкүмәттәге оперативка, союздың үҙендәге һөйләшеү һ.б. рәсми эштәр менән үтә, аҙнаның тәүге көнөндә үк ритм аҡһай ине. Хәҙер аллаға шөкөр, улай түгел. Иркенерәк булып ҡалды.

6 июнь, 2011 йыл. Дүшәмбе.

Баҡсаға йома көн килгәйнек, бөгөн ҡайтабыҙ. Инде бер ай эшләйһе ҡалып бара.

Июнь тыуғас ҡына кәкүкте ишеттем. Бағаналағы сымдарға ҡунып, янда ғына саҡыра. Тәү ишеткәнемдә ун бергә тиклем һананы. Һанағаны тап килһә, тағы ла 11 йыл ғүмер бирһә, бик шат булыр инем. Икенсе юлы һанай ҙа һанай, әллә алтмыштан артып китте.

Донъяның йәм-йәшел сағы. Ямғырҙар килә лә яуа, килә лә яуа. Көндәр һаман да һалҡынса. Былтырғы ҡоролоҡтан һуң йәшел донъяға ҡарап туймаҫлыҡ. Ике көн ялан-тауҙарҙы урап әйләндем. Кисә мунса индек. Һуңғы ваҡыт ныҡ арытҡайны, аҙыраҡ ял булды.

Бында күптәр баҡсаһын һата икән. Төҙөүселәр ҙә бар. Беҙ һаман да алыусы таба алмайбыҙ әле.

Өҫтәлемдә Шәриф Әхмәтовтың китабы ятҡан. Баш һүҙ яҙғайным. Шиғырҙарының байтағын яңынан уҡып сыҡтым. Барыбер шағир булған шул. Аралашҡан ваҡыттар, хәрәкәттәре, тауышы, әллә күпме шиғырҙарын яттан уҡыуҙары, Кларағa ғашиҡ булып янып йөрөүҙәре, мөхәббәтенең инҡар ителеүенә ғазапланып йөрөүҙәре күҙ алдымдан үтте.

Зыяратына ни ҡатыны, ни ҡыҙы барып йөрөмәйҙер инде бахырҙың.

«Йәшләй һөйгән йәрҙәр ятҡа ҡала, йәр һөйһәгеҙ йәшләй һөймәгеҙ», тип йырлай торғайныҡ. Йәшләй һөйгән йәрҙәр ятҡа ҡалмаҫҡа ла мөмкин. Ә бына «ҡартлай һөйгән йәрҙәр ятҡа ҡала, йәр һөйһәгеҙ ҡартлай һөймәгеҙ» тип әйтһәң, бынығы йөҙ процентлыҡ хәҡиҡәт инде. Шулай буласағы шикһеҙ, ҡартлыҡтың да сиге бар. Йәшлектең дә сиге бар, әммә алда ул саҡтарҙан да матурыраҡ мәлдәр көтә. Ә ҡартлыҡтан һуң нимә көткәне билдәле. Күңелемдә һағышюҡһыныуҙар. Донъям моңһоу.

Китап – уҙып китһә лә кире ҡайтарылған донъя. Үткән ваҡытты әҙәбиәт, сәнғәт яңынан терелтә, кире ҡайтара ала. Уйлап ҡараһаң, кеше яҙмыштары тик Аллаһ ҡулында бит. Ә бына яҙыусы геройҙарын теләһә йәшәтә, теләһә үлтерә. Бик хәтәр, бик яуаплы, үҙе һауаплы, үҙе гонаһлы вазифа бит.

Йәнлектәр (животный мир) донъяһында бер төрҙән икенсе төргә әйләнгән хәлдәр юҡ. Ат ат булып, һыйыр һыйыр булып ҡала. Ғәҙәттәрен, асылдарын юғалтмай. Мин миллион йылдар барған оҙайлы эволюция тураһында әйтмәйем. Хайуандар донъяһында һәр тереклек тәнеҡиәфәте менән дә, булмышы-ҡылыҡтары менән дә үҙе булып ҡала.

Әҙәм балаларының да физик тәне, барса ағзалар тыуғандан алып үлгәнгә тиклем кешесә, бары кеше рәүешендә ҡала. Ә бына ошо

ғүмер эсендә кеше яҙмыштары, уның булмышы, рухи асылы ниндәй генә рәүештәргә инмәй! Ҡаһарманлыҡҡа ла, ҡәбәхәтлеккә лә бара әҙәми зат. Хатта бер кешелә ошо ҡапма-ҡаршы сифаттар сәйер симбиоз булып бергә йәшәй.

Баҡсала һәйбәт кенә эшләп ултырҙым. Аксаков көндәрендәге сығыштарымды яңынан ҡарап, ҡыҫҡартып-төҙәтеп, «Слово об Аксакове» тигән яҙмаларға берләштерҙем.

Байтаҡ шиғыр яҙылды – элек теркәп барғандарымды яңынан эшләнем. Һәйбәт кенә килеп сыҡҡандары ла бар һымаҡ.

Әнүр Вахитов ҡустымдың «Бөйөк хаж сәфәре»нең ҡулъяҙмаһы минең уҡыуымды көтөп оҙаҡ ҡына ятты. Күптән уҡып сыҡһам да, май айында компьютерҙа баҫтырып алдым. Хаталарын төҙәтеп, дискетҡа һалып, БДПУ-ның «Вагант» баҫмаһына алып барҙым. Уның директоры Салауат Вахитов үҙе лә бик үҙенсәлекле яҙыусы. Съезд алдынан Союзға алдыҡ. Сәйәхәтнамәне бер көндә китап итеп әҙерләп, сигнал экземплярын ҡулға тотторҙолар. Хәҙерге технологиялар тиҙлекте бына нисек үҙгәртә. Тышына Каруанһарайҙы ҡуйығыҙ тигәйнем, уныһын да матур итеп эшләгәндәр.

Сипайловалағы «Хәмзә» мәсетенең хужаһы Ғәлләмов Хәмзә хажи әкбәр спонсор булмаҡсы. 500 экземпляр 100 битлек китаптың хаҡы 29 мең һум.

Ниһайәт, 5-се томымды төҙөп бөттөм, баҫтырып алдым, күләме 800 бит, ике зур папка. Пландағы күләмгә һыймаҫ күрәһең. Әллә поэма («Хазина») менән шиғырҙарҙы индермәй тороргә микән? Улары ла йәл бит әле. Бөгөн 4-се томдың корректураһын барып алам.

11 июнь, 2011 йыл. Шәмбе.

Кисә баҡсаға килдек. Ямғырҙар һаман да яуып-үткеләп тора. Донъя йәшел, тик йылы етмәй.

9-да Әбйәлилгә көнөнә барып әйләндек. Тарихи һабантуй, бындайҙар һирәк була. «Берҙәмлек» («Содружество») фестивале менән ҡушылып барҙы был байрам. 14 илдең халыҡ таланттары ҡатнашты. Үҙебеҙҙең һәләтле көстәребеҙҙең сығыштары күпкә сағыуыраҡ.

Шуны уйлап ултырҙым: әллә ниндәй оло ҡунаҡтар алдында ла ғорурланып күрһәтә алырлыҡ йәннәттәй еребеҙ бар. Иң һынсыл сит баһалаусылар алдында ла таланттары менән балҡып күренерлек халҡыбыҙҙың рухи хазиналары бар. Әллә кемдәреңде хайран итерлек беҙҙең тәбиғәтебеҙ, беҙҙең халҡыбыҙ, ҡурайсыларыбыҙ,

йырсыларыбыҙ, бейеүселәребеҙ, аш-һыуыбыҙ, балыбыҙ, ҡымыҙыбыҙ, аҫыл ғәзиз Башҡортостаныбыҙ!

Әбйәлил һабантуйы грандиоз ҡолас менән үтте. Ысынлап та, таланттарыбыҙ ниндәй сағыу. Сит илдәрҙән килгәндәрҙең сығыштары ныҡ ҡайтыш, беҙҙеке менән сағыштырырлыҡ түгел.

Бындай матур һабантуйҙы ойоштороу өсөн бик күп көс һалынған, әлбиттә. Таланттар ни тиклем күп булмаһын, уларҙы ойоштороу, тәрбиәләү, өйрәтеү, матур итеп кейендереү, берәмләп туплау етмәһә, бындай байрам-тамашалар үҙенән-үҙе генә тыумаясаҡ.

Беҙгә ҡунаҡтар килерен
Ер-һыуҙар зирәк тойған.
Юлдарҙы елдәр һепергән,
Ямғырҙар йыуып ҡуйған.

Һине юҡһынған донъяма
Был ниндәй хәүеф тулды?
Һинең һағышың булдымы?
Әллә ҡарғышың булды?

Матбуғатҡа бирмәгән шиғырҙарым бик күп йыйылған. Йәш саҡтарҙа яңы шиғырҙарҙы тотоп редакцияға йүгерә торғайныҡ. Хәҙер мин шиғырҙарымды бер нисә йылдан һуң ғына баҫтырам. Яңы поэма булһа, улай түгел, яҙып бөтөү менән «Ағиҙел»гә илтәм. Минең барлыҡ поэмаларым – «Вокзал»дан алып «Хазина»ға тиклем – ошо журналда сыҡты. Бер-икәүенән башҡаһы («Каруанһарай», «Йыр», «Тамғалы уҡ»).

Шиғырҙарҙы иһә яҙам да һуңғы ваҡыттарҙа оҙаҡҡа һалып ҡуям.

23 июнь. 2011 йыл. Кесаҙна.

Кисә һуғыш башланғанға 70 йыл тулды. Һуғыш йырҙарын бирҙеләр: ни тиклем инанғанлыҡ, тоғролоҡ. «Священная война» кеүектәренең көнөндә үк – һуғыш башланыу менән үк тыуыуы хайран ҡалырлыҡ бит! Халыҡтың шул бөйөк ҡаһарманлығын матбуғатта боҙоп күрһәтергә тырышыуҙар, алдаҡсы фильмдар, яла яғыусы «ғилми хеҙмәттәр» һуңғы ваҡытта йышайғандан-йышая ғына түгел, тотош сәйәсәткә әйләнеп, ҡурҡыныс дәрәжәлә көсәйә. Эштәр шулай барһа, был фальсификациялар киләһе быуындарҙа Бөйөк Ватан һуғышы тураһында бөтөнләй яңылыш фекер нығытасаҡ.

БИРО-ның «Образование» журналында август кәңәшмәһенә бәйле һанға мәҡәлә һорап шылтыратты Р.Ғ. Мәжитов. Баш тартыуы ла ҡыйын, яҙырға ла талпынып торолмай. Һуңғы өс йылда был хаҡта байтаҡ сығыштарым телдән дә, матбуғатта ла булды. Күпме генә һөйләһәк тә, бик урынлы һүҙҙәр, уҫал-уҫал тәнҡиттәр булһа ла, мәсьәләләр ыңғай яҡҡа үҙгәрмәй, халыҡ өсөн, киреһенсә, насарая бара. Илгә бурҙар хужа булғанда ватандың мәғариф системаһын модернизация оран-һөрәндәре менән емереү дауам итәсәк, көнбайыш сценарийы буйынса ҡуйылған тамашалар яңы фажиғәләргә килтерәсәк.

Һиңә көндәш булыр тыуғанда ла,
Һиңә тиңдәш булыр тыумаған
Һин битеңде йыуған шишмәләрҙең
Һыуы менән битен йыумаған.

Артурҙар бәләкәй Асҡарҙы алып Төркиәгә диңгеҙ буйына киттеләр. Асҡар бассейнда йөҙә, диңгеҙҙән ҡурҡа, тип шылтыраталар. Исмаһам, диңгеҙ һыуы менән ҡойондорһондар ине.

Һис кенә лә Мортаза ағайҙың янына барып булмай. Әле ауырый, тиҙәр.

Кисә артын ялаған ялағайҙарҙың күпмеләре бөгөн битенә төкөрә. Уның менән генә Рәхимов тигән тарихи шәхестең бөйөкләгән бөтөрә алмаҫтар. Тарих үҙенең хаҡлы баһаһын барыбер бирә ул.

Йән-фарман, йәнтәслим – ниндәй етеҙ һүҙҙәр!

Йәнеңде биреп, бөтә йәнеңдән мөһим фарманды үтәргә ашығыу. Был һүҙҙең шул мәғәнәлерәк булыуы аңлашылып тора. Ә бына йәнтәслимдең этимологияһын белеп еткермәй инем. Нимә ул тәслим? Әле ғәрәп һүҙлегенән ҡараным: тәслим 1) ҡулдан ҡулға тапшырыу, биреү 2) бирелеү, тапшырылыу 3) таныу, ҡаршылыҡһыҙ таныу, иғтираф итеү (йәғни ғәйебеңде таныу) 4) сәләмләү. Тимәк, бында ла мөһим эште ашығыс дауам итеү, үҙенсә өҙөлмәҫкә тейешле эстафета.

Ике һүҙҙә лә хәрби тәртипкә бәйле ҡәтғилек, башҡорттоң тарихи яҙмышындағы үҙенсәлек күренә.

Барыһы ла сағыштырыуҙа беленә. Мәҫәлән, тау – дөйөм атама. Бейек тау, тәпәш тау – былары айырым тауҙарҙы нарыҡлау. Тәпәше булмаһа, бейеклегенең бейеклеге беленмәҫ ине. Тормошта ла шулай.

27 июнь, 2011 йыл. Дүшәмбе.

Шәмбе, йәкшәмбе һәйбәт барҙы эштәрем. «Образование» журналынан мәҡәлә һорағайнылар. Август кәңәшмәһенә әҙерләнәләр. Ике көндә шуны яҙҙым: «Светлый образ народа». Ярты табаҡ самаһы булыр. Нисектер илһамлы яҙылды.

Йома көн иҫке баҡсанан яңыһына бер «Газель» әйбер күсерҙек. Ярай яумай торҙо, юғиһә, үтеп булмаҫ ине. Шәмбе, йәкшәмбе төшкә тиклем яуа ла яуа. Көҙгө ямғыр һымаҡ. Бөгөн нисек булыр?

Артурҙар шәмбе көн Төркиәнән ҡайттылар. Анталияла һәйбәт ял иткәндәр. Асҡар ҡарайып киткән.

Бедность от слова беда. Хотя и говорят, что «бедность – не порок», все же бедность это беда в жизни человека.

Образ и образование – однокоренные слова. В доме христианина самое дорогое – это образ бога. Когда забывается образ бога, начинаются безобразия. Образование – это наполнение человека светом святого образа, просветление, обладание знаниями. Отсюда – сообразительность, т.е. совершать добрые дела в соответствии с образом.

Литературный образ, образ героя, мыслить образно – все это из того же источника.

Интересное слово «преобразование». Когда люди нарушают заветные принципы, когда образ выводится из нормы, начинает не соответствовать своему высокому назначению, когда жизнь людей по вине самих людей приходит в упадок, тогда появляется необходимость преобразований. И добрые намерения не всегда дают добрые результаты. Есть великие преобразования, но есть и великие разрушительные перестройки.

Образ – явление божественное и все, что связано с ним (образование, преобразования, соображения и др.) должно быть светлым, добрым, нести людям счастье.

5 июль, 2011 йыл. Шишәмбе.

Көндәр бик тығыҙ. «Автомобилист»ағы баҡса йортона документ эшләнмәгән, шуның артынан йөрөлә.

1-дә йома көн ялға оҙатыу ҡаты, юғары кимәлдә уҙғарылды. «Ирәмәл».

Кисә егеттәр эштәрҙе бөтөрҙө. Иҫке баҡсанан әйберҙәрҙе күсерҙек. Ҙур мәсьәлә булып ҡурҡытып тора ине, аллаға шөкөр, осона сығып ҡуйҙыҡ. Эштәр ҙә бара, аҡсалар ҙа аға.

Ауыл яғына шәжәрә байрамына (Ғәбдрәфиҡтә), мәсет асыуға (Ҡунаҡбайҙа) ҡайтырға йыйынабыҙ. Китаптар, бүләктәр, күстәнәстәр әҙерләйбеҙ.

Тик көндәр бик эҫе, 34 градус. Тағы ла эҫерәк була, тиҙәр. Нисек йөрөп килербеҙ?..

Ҡайһы берәү тураһында легенда уҡыу үҙенең асылынан, булмышынан ҙурыраҡ була. Минең хаҡтағы имеш-мимештәр ҙә шулайыраҡ. Уларҙы ысынға килтерер өсөн бик нығ тырышырға кәрәк.

Әнүр ҡусты «Бөйөк Хаж сәфәре» тигән китабында Ырымбур үҙәк архивынан алынған ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә. 1908 йылғы документ, мәсеттәр исемлеге:

1) В д. Ахмеровой соборная мечеть, построена в 1897 г. Муж. – 289, жен. – 267.

2) д. В.-Кунакбаево, построена в 1849 г. Муж. – 170, жен. – 159.

3) д. Н.-Кунакбаево, построена в 1730 г. Муж.–332, жен.– 280.

4) д. Габдрафиково – 1898 г. Муж. – 227, жен. – 224.

5) д. Кутлумбетово – 1857 г. Муж. – 251, жен.– 233.

Араларында Түбәнге Ҡунаҡбай, хәҙер Ҡалҡаман тип йөрөтөлә, иң ҙур ауыл булған, 612 кеше йәшәгән, мәсете лә 1730 йылда уҡ төҙөлгән. Был һан 1830 түгелме икән?

Биш ауылда бөтәһе 1279 ир, 1163 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Халыҡ иҫәбе 2442 кеше.

Сағыштырып ҡарарға ине, хәҙер күпме кеше йәшәй икән? Ул ауылдарҙа әле йәшәгәндәрҙән ситкә таралғандар күберәктер, әлбиттә.

10 июль, 2011 йыл. Йәкшәмбе.

Оло сәфәрҙә йөрөп ҡайттыҡ. 7-дә Ҡоролтайҙың 40-сы ултырышы үтте. Унан һуң Альбина Буранғолованың мәжлесе, 50 йәше менән ҡотлау. Унан һуң тағы ла осрашыу.

Сәғәт дүрттә ҡузғалдыҡ. Октябрьский-Алмалы аша ҡайттыҡ. Биш сәғәттән артыҡ ваҡыт үтте. Ялан юлдарында шәп барып булмай. Переволоцкий аша тағы ла ураурыраҡ булыр ине.

Уның ҡарауы, кисә Дамир өс сәғәт ярымда ҡайтарып еткерҙе. Яңылыш Федоровка юлына боролғайныҡ (Шарлыҡтан һуң). Яңылыш булмаған, иң тура юлды Аллаһы тәғәлә үҙе күрһәткән һымаҡ. Был юлдан үткән юҡ ине, алла бирһә, киләсәктә тыуған яҡҡа ошо юлдан ҡайтып йөрөргә кәрәк.

8-дә Ҡунаҡбайҙа мәсет асыуға байтаҡ халыҡ йыйылғайны. Ырымбурҙан мөфтәй Барый хәзрәт, Переволоцк мөхтәсибе Әхмәт

хәҙрәт булды. Урындағы етәкселәр, район хакимиәте башлығы Тевстың урынбаҫары һ.б.

Элекке мөһабәт мәсет менән сағыштырғанда яңыһы бәләкәй, хатта ҙтә бәләкәй. Ни хәл итәһең, оло йорттоң да донъяһы тар, бәләкәй йорттоң да күңеле киң, донъяһы ҙур булырға мөмкин. Изге ғибәҙәтхананың асылыуы ҡыуаныслы.

Мәсеткә келәм, байтаҡ китаптар («Ҡөрьән», Хәмзә хәҙрәт бүләк иткән Ҡөръән тәфсире һ.б., шулай уҡ үҙемдең ҡайһы бер китаптарым) алып ҡайттым. Бүләктәр байтаҡ булды, келәмдәр ул бәләкәй өйгә һыйырлыҡ та түгел.

Эргәләге магазин бинаһын да мәсеткә биргәндәр. Шуны йыһазландырып алырҙар, ғәйет, никах мәжлестәрен шунда үткәрерҙәр. Әле лә табынды шунда йыйҙылар. Әле бик матур әҙерләнгәндәр, иттәрҙе, ҡурҙаҡтарҙы тәмле итеп, мул итеп бешергәндәр.

Асия апайымдар ныҡ олоғайған. Мәғәлим еҙнәм ҡултыҡ таяғы менән йөрөй. Тиҙҙән Ҡунаҡбайға тыуған ауылыма ҡайтып йөрөр яҡын туғаным да ҡалмаҫ микән? 1970 йылда «Күк әрем» поэмаһында «Ҡайһы ишегеңде ҡағайым һуң тыуған өйһөҙ тыуған ауылым?» тип яҙғайным. Ул ваҡытта ишектәрен ҡағыр туғандарым күп ине әле. Хәҙер уларҙың балалары – бөтөнләй башҡа быуын. Килеп күрешкән кешеләрҙең күбеһен танымайым.

9-да Ғәбдрәфиҡтә (Яңауыл) «Вахитовтар шәжәрәһе» байрамына йыйылдыҡ. Башта ундағы мәсетте ҡарап сыҡтым. Бик иркен, байтаҡ бүлмәләр – элекке балалар баҡсаһы. Клуб, һәләк булғандарға обелиск янында.

Минең ҡусты, Әнүр хәҙрәт Вахитов, бында мулла. Мәсет асыу өсөн күп тырышты. 2006–2007 йылдарҙа хажға барып ҡайтҡайны. Шунда бик ентекләп көндәлек яҙған, «Бөйөк Хаж сәфәре» тип атаған ҡулъяҙмаһын алып ҡайтҡайным, уҡып сыҡҡас та айырым китап итеп халыҡҡа еткерергә кәрәк, тип уйлағайным. Ваҡыт еткереп булманы. Быйыл, ниһайәт, Сипайловола ҙур таш мәсет төҙөгән Хәмзә хәҙрәт Ғәлләмов ярҙамында был юлъяҙманы 500 данала китап итеп баҫтырып сығарҙым. Әнүр уларҙы Ҡунаҡбайҙа ла, Ғәбдрәфиҡтә лә халыҡҡа таратты.

Исемен ауыл йөрөткән Ғәбдрәфиҡ мулланың шәжәрәһен төҙөгәндәр. Уның дүрт улы булған, береһе Мөжип. Уның Фатих менән Латип исемле улдары булған. Латиптың улдары Малик, Рәҡип, Рамаҙан, ҡыҙы Рәҡиә – минең инәйем. Инәйем яғынан әллә дүрт

быуынымды беләм булып сыға. Атайым яғынан ете быуынымды, уның яңы дүрт быуын дауамын Ҡунаҡбайҙағы йыйындағы сығышымда һанап киттем. Яңауылдағы шәжәрә байрамында Ғәбдрәфиҡ муллананан килгән тармаҡтарҙың ғаиләләрендәге балалар (Маликтыҡы, Рәкиәнеке, Рамаҙандыҡы һ.б.) күмәкләп сәхнәгә күтәрелеп үҙҙәре хаҡында һүҙ әйттеләр, йырлаусылар ҙа байтаҡ булды.

Көндәр бик эҫе торҙо, 36 градустан артып китте. Ҡунаҡбайҙа мәсет асыу тантанаһы тышта булды, ҡояшта ҡара яндым. Яңауыл клубында ла осрашыу оҙаҡ барҙы, түҙеп торғоһоҙ эҫе. Күлмәк лыс һыу булғансы тирләтте.

Ике байрам да матур үтте. Уларҙы ойошторoусы Ҡунаҡбайҙан Фәрит Бикбаевҡа, Ғәбдрәфиҡтән Әнүр Вахитовҡа ҙур рәхмәт. Ҡотломбәттән Ғафур Моратов та ихлас ҡатнашты. Йәш хәҙрәттәр халыҡ араһында бик изге эштәр эшләп йөрөйҙәр. Фәрит колхозда ла эшләй, Әнүр көтөү көтә. Көтөүсе хәҙрәт, колхозда эшләп йөрөгән хәҙрәт – былар бит бөтөнләй яңы күренештәр. Икеһе лә хажға барып ҡайтҡан. Көтөү көтөп йөрөгән муллалар, хәҙрәттәр борон булмаған, әлбиттә.

Донъяның күп илдәрендә булһам да, минең өсөн иң ҡәҙерлеһе ошо тыуған ерем, Ҡунаҡбайым менән Яңауылым.

Донъяның төрлө уҡыу йорттарында белем алһам да, академиктар, профессорҙар остазым булһа ла, минең өсөн иң ҡәҙерлеһе Ғәбдрәфиҡ ете йыллыҡ мәктәбе, тәүге уҡытыусыларым Сафия апай Бакаева, Зәкәриә ағай Бикбаев, класс етәксебеҙ Сажиҙа апай Агеева, рус теле уҡытыусыһы Шакира еңгә Вахитова, ошо мәктәпте ете йыллыҡҡа әйләндергән, уның тәүге директоры булған Рәкип бабайым, унан һуң директор булған, яңы бина һалдырған Рамаҙан абзыйым Вахитовтар – Латип ҡартатайымдың балалары, инәйемдең бер туғандары.

Сығышымда ошоларҙы һ.б. хаҡында һөйләнем. Һандар ҙа килтерҙем: миңә килеп еткән мәғлүмәттәр буйынса, Латип ҡартатайым менән Хөсниямал әсәйемдән таралғандарҙың һаны бөгөн – 229, шуларҙың 49-ы юғары белемле. Шуларҙан Маликтыҡылар – 115 кеше, юғары белемлеһе – 5, Рәкиптеке – 45 һәм 20, Рәкиәнеке – 30 һәм 9, Рамаҙандыҡы – 39 һәм 15.

Шәрәфетдин ҡартатайым Бикбаевтан таралғандарҙы ла һанарға тырыштым. Көмөшбикә – 2, Гизетдин – 1, Миңлеғәле – 26, шуның һигеҙе юғары белемле, Төхфәтулланан – 34 һәм 10, бөтәһе – 81 һәм 18.

Һанай башлаһаң, юғары белемлеләр күп килеп сыға бит. Шуларҙың күпселеге, беҙҙең быуын һәм беҙҙең быуынға яҡындарҙың барыһы ла, башҡорт мәктәптәрендә барлыҡ фәндәрҙе башҡортса уҡып белем алған.

Яңауылда мәсет асылды, әммә нисәмә йыл мәктәп юҡ. Мәсетле ауыл – бәхетле ауыл. Әммә мәктәпһеҙ ауыл бәхетле була алмай. Мәсет менән мәҙрәсә бергә йәшәгән. Мәктәп тә, мәсет тә халыҡҡа бергә хеҙмәт иткән, белем һәм иман илткән. Мәсеттәрҙе емергән замандарҙа мәктәптәр асылды, хәҙер мәсеттәр төҙөлгән ваҡытта мәктәптәр ябыла. Тыуған яҡтарымда ҡәләмдәштәрем менән байтаҡ осрашыуҙар үткәрҙем, улар халыҡ менән ихлас осраштылар, бында телдең, рухтың һаҡланыуына һоҡлана торғайнылар. Хәҙер башҡорт ғаиләһендә тәрбиәләнгән балалар русса һөйләшеп йөрөй, башҡортса бөтөнләй тиерлек, аңламай. Хәлдәр былай барһа, 15–20 йылдан был клубта башҡорт яҙыусыһының туған телдә әйтелгән һүҙен аңлаусы кеше ҡалмаясаҡ тиерлек.

Бына ошолар хаҡында ла һөйләнем. Был хаҡта инде был сәхнәнән күпме ҡабат әйткәнем булды, әммә яҡташтарым араһында ассимиляция фажиғәле тиҙлектә үҫә.

Тыуған яҡтарыма ҡайтҡан һайын ошо күңелһеҙ хәлдәрҙең артҡандан артҡанын күреп, бик ауыр кисерештәр менән кире китәм. Ҡанатланып ҡайтам да, ҡанаттарым ҡайырылып китәм. Китап төшөнкөлөккә бирелергә ярамай ти ҙә бит, бирелмәй түҙеп ҡара!

16 июль, 2011 йыл. Шәмбе.

11-дә Ассы санаторийына килдек. Бында элек ҡыш ял иткәйнек. Яңы санаторийҙар (Ассы, Танып) иҫкеләренең яңырыуҙары (Янғантау, Красноусольский), хатта ял йорттарынан санаторийға әйләнгән Ҡарағай, Талҡаҫ – былар барыһы ла Мортаза ағайҙың эшмәкәрлеге, Рәхимов һәйкәлдәре бит. Әммә бындай тарихи яулауҙар, килер быуындарға ҡалыр уңыштар тураһында хәҙер өндәшмәйҙәр. Ләкин бөгөн һыҙып ташлағандарын да тарих барыбер төҙәтә ул.

Юл буйынса ямғыр яуҙы. Әле лә яуып алмаған көнө юҡ.

«Танып»та былтырғы уттай ҡоролоҡта ла һәйбәт ял иткәйнек. Бында ла яҡшы. Донъя йәм-йәшел, һауа һулап туйғыһыҙ. Быуа быуғандар, тик унда әле һыу инә алған юҡ.

Серәкәй юҡ. Бындай урындар бик һирәк. Бөтә тирә-яҡ урман, ә серәкәй юҡ.

Еләк һаталар, ҡайын еләгенең ярты литрлы банкаһы 150 һум, ер еләге (уның исемен тупар тиҙәр), черника (уның башҡортса исемен мин белмәйем, көртмәлегә оҡшаш) 140 һум. Ҡайын еләген алдыҡ, бик тәмле.

Фәризә санаторий янында ер еләге тапты, мәтрүшкә йыйҙыҡ, ул күп үҫә, яҡында ғына.

Санаторийҙа кешеләге көтөү инстикты нығыраҡ күренә, бигерәк тә эркелешеп ашарға барғанда.

Китапханала булдым. Китаптар бер тәртипкә килтерелмәгәс, газеталар буталып, өйөлөшөп ята.

Китаптарҙың күбеһе иҫкеләр, 70–80-се йылдарҙа сыҡҡандар. Үҙҙәренә санаторий тамғаһы һуғылған. Яңы санаторийға был иҫке баҫмалар ҡайҙан килеп эләккәндер, ҡайҙалыр списать ителгәндәрме икән? Шулай ҙа совет осорондағы китаптарҙы ҡарау бик ҡыҙыҡлы булды. Тираждары ниндәй бит! «Школьная библиотека» тигән серияла Бондарев («Горячий снег») 1 млн-дан артыҡ экземпляр, Симонов («Солдатами не рождаются») 2 млн-дан артыҡ. Хәҙерге йәштәргә ундай тираждарҙы күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. «Библиотека башкирского романа» – 50 мең экз.

Пришвиндың алтынсы томын алдым. 90 мең экземплярҙа сыҡҡан. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп нәмә уҡылмаған. Донъя әҙәбиәтендә минең уҡығандарым уҡылмағандарҙың тамсыһы тимәһәм дә, бик кескәй өлөшөләр.

Тәбиғәтте бик нескә тойғанын ҡайһы бер әҫәрҙәре буйынса белә инем. Ә бына көндәлектәре минең өсөн бөтөнләй яңы донъя. Күптәр өсөн дә моғайын, шулайҙыр.

Ғөмүмән, хәҙерге детективтар һ.б. әүрәткестәр заманында Пришвиндарға кем иғтибар итһен инде? Ә бит ниндәй үҙенсәлекле яҙыусы.

Үҙ заманында ла Пришвинға тейешле рәсми баһа, дәүләт кимәлендә иғтибар етмәгән. Әллә кемдәр Сталин премияһы алғанда уға биреүҙе тейешле һанамағандар. Ҡайҙалыр уҡығайным: Пришвин был премияға үҙенсә дәғүә итеп тә ҡараған. Быға ҡарата Фадеев булһа кәрәк әйткән: «Ҡартлас. Рәсми сәйәсәтте аңламай микән ни?»

Көндәлектәр томдың яртыһынан күбеһен – 797 биттең 440 битен алып тора. Ә бит бында 1951–1953 һәм 1954-тең 1–15 ғинуар яҙмалары ингән. 1954 йылдың 16 ғинуарында Пришвин вафат булған. Һуңғы көнөнә тиклем көндәлек алып барған.

Был том 39 табаҡ тиерлек. Тимәк, 20 табаҡтан артығы – көндәлектәр. Бер йылда 7–8 табаҡ. Пришвин 50 йыл буйына көндәлек яҙған. Улар тулыһынса баҫылмағандыр, әлбиттә. Бөтәһе нисә том булыр ине икән?

Мин ҡырҡ йылдан ашыу көндәлектәр яҙам. Баштағы яҙмалар ҡыҫҡа һәм һирәк. Артабан текст ҙурая, теркәлгән көндәр йышая бара. Шуларҙы бергә йыйып ҡарарға уй бар. Әле береһен – ҡалын блокнотты баҫтырып алғайным (Рәйлә Бүләкова баҫты), биш табаҡтан артып киткән, 130-лап бит. Ә бит бындай блокноттар бик күп, 100 табаҡ уҡ булмаһа ла, шул сама йыйылырға мөмкин. Уларҙы халыҡҡа еткерге килә.

Рус яҙыусыларының, сит ил классиктарының ошондай мираҫын барлап ҡарарға кәрәк әле. Пришвиндың был томын унда көндәлектәр булғанға алғайным.

Пришвинда (Собр.соч. в 6 томах, Т.6. – М.: Гос. изд-во худ. литры, 1957. – 368 с.) бик ҡыҙыҡлы фекер уҡыным: «Люди еще молодые, состоящие в плену главной человеческой страсти, обеспечивающей размножение, представляют себе жизнь без этого, как смерть. Они не подозревают, что как раз-то и начинается свободная и большая жизнь, когда они освободятся от этого пристрастия.

Не так ли будет и после нас, не будем ли мы там чувствовать себя освобожденными от жизни, как от пристрастия. Не оттого ли все наши страдания, что мы пристрастны?»

Бәлки шулайҙыр. Моғайын, шулайҙыр. Хәҙистә лә әйтелгән бит:

Ололоҙы өлгө иткән йәштәр яҡшы,

Йәштәр һымаҡ ҡыланыусы ҡарттар шаҡшы.

Икенсе хәҙис:

Ҡиәмәт көндө өс кешегә
Боролоп та баҡмаҫ Аллаһ,
Ғазаплар, тормаҫ ярлыҡап.
Ул ғазап – зинасы ҡартҡа,
Тағы – алдаҡсы батшаға,
Тағы – тәкәббер ярлыға.

Шулайын шулай ҙа ул. Ләкин Пришвин яҙған кисереш – һығымталар кешегә улай еңел генә килмәйҙер, ҡартлыҡ ныҡ баҫҡас, енси ҡомарҙар, бер енестең икенсеһенә тәбиғи ынтылышы бөтөнләй

һүрелгәс, хатта онотор хәлгә еткәс кенә киләлер. Юғиһә Гетеның олоғайғас мауығыуҙарын, өлкәнәйгәс тә ғашиҡ булғандарҙы нисек аңлатырға? Һәр хәлдә, ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда был үҙгәреш, күсеш ҡатмарлыраҡ.

Иртән бер сәғәттән артыҡ йөрөп-һелкенеп керәм. Матур таш һуҡмаҡтар түшәгәндәр. Ҡарағайға ҡул менән таянып, хәрәкәттәр эшләгәндә усҡа сайыры йәбешә. Ысыҡта яланаяҡ йөрөнөм. Бындағы дауаланыуҙың иң төп процедураһы бәлки ошо ваҡыттыр. Арыу ғына көс төшә. Кискә табан арығанлыҡ һиҙелә. Ванна, массаж, кис бассейн – былар үҙенсә нагрузка, әлбиттә.

Бөгөн дә мәтрүшкә, еләк йыйҙыҡ. Бер бәләкәй күнәк ҡайын еләге һатып алдыҡ. Йөйәктән уҡыусы ҡыҙыҡай йыйған.

Далала томандың йәки болоттоң нисек, ниндәй бейеклектә булғанын, хәрәкәтен асыҡ күреүе ҡыйын. Тауҙарҙа быны ентекле күҙәтеп була. Томан йә тауҙың итәгендә, йә түбәһендә, йә биленә урала.

Беҙ бәләкәй саҡта, беҙҙән алдағы замандарҙа бигерәк тә ауыл тормошо, нимә генә тиһәң дә, бер төрлөрәк булған. Шуға бала айырыуса күҙәтеүсән булған, һәр нәмәнең үҙенсәлеген, деталдәрҙе, ҡылыҡтарҙы һ.б. зирәк күргән һәм хәтерләп барған. Шуға ла ауыл кешеһе һәр нәмәгә ҡарата һиҙгерерәк, сосораҡ. Ҡала кешеһе иғтибар итмәгән, күп үҙенсәлектәргә ул иғтибар итмәүсән.

23 июль, 2011 йыл. Шәмбе.

Бына Ассылағы ялдың осона сығып киләбеҙ – иртәгә ҡайтырға. Йәшәү, дауаланыу шарттары һәйбәт булды. 1-се корпус, 302 номер, ике бүлмәле, иркен.

Былтыр «Танып»тағы һымаҡ бында ла бик тәртипле дауаланыуым: көн дә бассейн, массаж, ванная, фитобар. Процедуралар артыҡ күп түгел. Уларҙың иң мөһимдәренән – иртән ете тулмаҫ борон сығып, һигеҙҙе үткәнсе йөрөү, зарядка.

Бер көн Инйәрҙә һыу индек. Йылға матур ҙа, күгәүендәр тынғы бирмәй. Хәтәр эреләр. «Эҙҙәренән» кис йоҡлай алманым. Башҡаса Инйәргә барманыҡ.

Уның ҡарауы, эргәләге яңы быуала иртәнге томанда Фәризә менән һыу индек. Ямғырҙар туҡтап, көндәр һәйбәтләнгәс, иртә һайын индек. Ә иртәләр бында һалҡын, кисә бигерәк һыуыҡ булды. Мин шорты менән футболкала ғына сыҡҡайным, ныҡ һалҡын. Шулай ҙа кейенергә кире кереп торманыҡ, һауа ун градустан саҡ ҡына

артығыраҡ булһа ла, һыу индек. Быуаны өс ҡабат ураным. Барыбер һалҡын тейгән, ауырыҡһынам.

Шиғырҙар бик күп яҙылды. Элек блокнотҡа төртөп барған байтаҡ фекерҙәр шиғырға әйләнде. Ырамлы эшләнем. Былтыр «Танып»та ла һәйбәт кенә яҙышҡайным, әммә быйыл уңыш бигерәк мул булды: 15-ләп шиғыр, 10-дан артыҡ ҡыҫҡа-ҡыҫҡа 2, 4, 8 юллыҡтар. Ҡайтҡас, нығыраҡ ҡарап, аҡҡа күсергәнсе әҙерәк һыуынып торһон.

Бында яңылыҡтарҙан бөтөнләй тиерлек мәхрүмбеҙ. Телевизор йүнләп эшләмәй, БСТ бөтөнләй күрһәтмәй, газеталар килмәй. «Ҡыҙыл таң»да шиғырҙарым баҫылған, уны ла күргән юҡ. Бөгөн «Башҡортостан»да шәлкем сыға, Зөфәр Лариса менән һөйләшкән.

«Ассы»ла барыһы ла һәйбәт, тик китапхана ғына бик меҫкен хәлдә. Санаторий директоры Буранбай Нәсимович Ямаловҡа ошо хаҡта әйттем. Центр досуга буласаҡ бинаның эше бөтөп бара. Китапхана ла шунда күсә икән.

Пушкиндың хаттар, көндәлектәр томдарын ҡараным. Ғүмеренең һуңғы мәлендә шағир күңеле өҙгөләнеп йәшәгән. Хаттарында быны бик үк белгертмәҫкә тырышһа ла, шағирҙы ғәйбәт ҡоршауы көндән-көн нығыраҡ быуған.

Камер-юнкер тигән исем бирелгәс, шағир нығ ғәрләнгән. «Но я могу быть подданным, даже рабом, но холопом и шутом не буду и у царя небесного» – 1834 йылдың 10 майында Пушкин көндәлегенә бына шундай һүҙҙәр яҙған. Был хаҡта мәҡәләләрҙән белә инем, әле үҙен уҡыным.

«Но такова бедность России в государственных людях, что и Кочубея некем заменить!», 2.06.1834, после смерти Кочубея.

Рәсәй борон-борондан кадрҙарға шундай ҡытлыҡ кисергән.

25 июль, 2011 йыл. Йәкшәмбе.

Ҡайтыр ваҡыт етте. Ике сәғәттән Дамир килергә тейеш. Әле шылтыраттым, Зөфәр Вәлитов менән Ҡырмыҫҡалыға еткәндәр.

Бөгөн томан бигерәк ҡуйы. 100 метрҙан да йорттар күренмәй. Бер сәғәттән артыҡ урман ситендәге таш юлдарҙан санаторийҙы урап йөрөнөм, бер сәғәттә лә томан таралманы. Бында йәй көнө, ҡыш ҡаты һыуыҡтарҙа гел шулай, тиҙәр. Уның ҡарауы, былтырғы ҡоролоҡта томан аҙ булһа ла дым биргән.

Иртән оҙаҡ томан, кисен ҡояш тауҙар артына тиҙерәк йәшенә. Шулай итеп, йәйҙең иң оҙон көндәрендә лә ҡояш бында аҙыраҡ күренә, көн ҡыҫҡарған һымаҡ.

Уныһы шулай, әммә бындағы матурлыҡтар ҡояш иң оҙаҡ күренгән яҡтарҙа юҡ. Бабич әйткән «Хоҙай» үҙе ҡыҙығыр тигән йәннәттәй ерҙәр нәҡ бына ошолай булалыр инде.

27 июль, 2011 йыл. Шаршамбы.

24-дә Дамир менән Зөфәр Вәлитов та килде. Бергә төшлөктө ашаныҡ. Зөфәрҙең «Я вижу...» тигән китабы матур булып сыҡҡан. Үҙ аҡсаһына әҙерләне, 20 мең, ахыры.

Бында түҙеп торғоһоҙ эҫе. Дүшәмбе эш яғына барып әйләндем.

Бер ҙә ҡалаға өйрәнеп булмай. Ассылағы кондиционерлы тормоштан һуң бында түҙеп торғоһоҙ эҫе, 35–36 градус.

Былтыр кондиционер алырға мотлаҡ кәрәк тип уйлағайным. Ҡыш онотола. Ҡыш өшөгән сағында «Йәй булһа һөйәктән өй һалыр инем» тигән эт һымаҡ.

Факил Мырҙаҡаевтың беҙҙең төрлө авторҙарҙан йыйған һүҙҙәре даими баҫылып тора, китап булып та сыҡты. Әле «Йәшлек»тең 23.07.11-дәге һанында минең шиғырҙан да өҙөк бар:

Эҙләгән ғүмергә кер эҙләр,
Ғәйбәткә табыныр, суҡыныр.
Бөркөттәр бейектә осҡанда
Әтәстәр тиреҫтә соҡонор.

Ике томымды аҡтарҙым, таба алманым. Ул томдарға ҡайһы бер шиғырҙарҙың инмәй ҡалғанын да тойҙом.

Фәриҙәләр тиҙ генә барып «Автомобилистан» сейә йыйып алып ҡайттылар.

Таптым теге дүрт юллыҡты. 12.12.96 йыл яҙылған. Китапҡа (томдарға) инмәгән. Ҡыҙыл блокноттарҙы яңынан ҡарағанда бер шәлкем шиғырҙың томдарға инмәй ҡалғанын күрҙем.

6 август, 2011 йыл. Шәмбе.

Ул шиғырҙар IV томға ингәне инде, өлгөрмәгәне юҡ. Кисә IV томдың икенсе корректураһын ҡарап сыҡтыҡ. Унда мәҡәләләр, «Беренсе ҡор», «Икенсе ҡор» тигән бүлектәр, элегерәк һәм хәҙер яҙылғандарын айырып бирҙем. V томдың беренсе папкаһын алып барҙым. Унда «Хазина» поэмаһы, шиғырҙар, уҙған быуаттағы мәҡәлә-интервьюлар, съездарҙағы докладтар. IV томда ла ҡайһы бер материалдар русса бирелгәйне. Быныһында (V том) руссалары тағы ла күберәк.

Хәҙер V томға фотолар әҙерләргә кәрәк.

Рәми Ғариповтың альбомына мәҡәлә менән эш бөттө. Кисә һәйбәтләп ҡарап тапшырҙым. Үҙемә оҡшаны.

3 августа Рәхимовта булдым. Мортаза Ғөбәйҙулла улы мине яҡлап сығыш яһамайһығыҙ, тип үпкәләй. Ағайҙың хәлен дә аңларға кәрәк.

Нил Бәхтиәровтың 8 март поселогында мәсет һ.б. дини-мәғрифәт комплексы тураһында әйттем. Нил документтарҙы ағайға тапшырырға тейештәр ине, ти. Әммә Мортаза ағай был хаҡта белмәй. Нил төҙөлөшкә аҡса бүлмәҫтәрме, ти ине, «Урал» фондынан. Ағай хат яҙһындар, тине.

Көндәр һалҡынсараҡ тора. Бик ныҡ эҫеләрҙән һуң иркенерәк булып китте тын алыуҙары. Асҡар менән көн дә тиерлек йөрөйбөҙ. Һөйләшергә өйрәнеп килә.

Былтыр төҙөлөш машәкәттәре менән сабып, отпусканы күрмәй ҙә ҡалғайным. Был эш ваҡытында уҡ төҙөлөштөң осона сығылды, 4-дә егеттәр менән иҫәпләштем. Иҫке баҡсанан әйберҙәрҙе күсерҙек – уныһы бик ныҡ борсоп тора ине, һәйбәт булды.

Быйыл отпусканың ысынлап та оҙон икәнлеген тойҙом. Ассынан ҡайтҡас, бер мәҡәлә яҙҙым – «Аңлатма биреү кәрәк» тип атала. 12 бит, 30–31.07.11. «Ағиҙел»дең быйылғы июнь, июль айҙарындағы һандарында Ноғман Мусиндың «Хәтер шаңдауы» тигән яҙмалары баҫылғайны. Мәҡәләлә төп моменттарға аңлатма бирергә тырыштым. Яҙып бөткәс, иркен булып китте. Был хәтирәләр тураһында бер һүҙ ҙә өндәшмәҫ инем, хәҙерге йәштәргә аңлатып үтергә кәрәк.

Ассыла һәм уға китер алдынан байтаҡ шиғырҙар яҙылды. Шуларҙы яңынан ҡарап сығып, аҡка күсереп ҡуйҙым. Бик уҫалдары бар. Хәҙерге тормошта йәшәүҙең ҡәҙере ҡалмай барамы әллә күңел ҡыйралыштары артҡандан-артамы, тип ҡурҡып ҡуйҙым.

30 июлдә «Культура» каналынан «Обычай этнической группы чин» тигән фильм ҡараныҡ. Бик фәһемле тапшырыу. Бик боронғо йолалары һаҡланып ҡалған был ҡәүемдә бөтә нәмә берҙәмлекте һаҡлау, кешеләрҙе туплау, туғандарса мөнәсәбәттәрҙе нығытыу, ырыуҙың ныҡлығын һаҡлау өсөн эшләнә. Унда ике тонналыҡ ҙур ташты тау аша күмәкләп һөйрәп, әллә күпме көс түккәндән һуң, тейешле урынға еткереү һәм шул эште уңышлы башҡарыу менән изге бер йоланы үтәү – был хәрәкәттәр тәү ҡарашҡа аңлашылмай һымаҡ. Нимәгә шул тиклем көстө бушҡа түгеү, шундай тырышлыҡтар

менән ташты һөйрәп йөрөтөү, ике көн буйы ҡара тир түгеү? Ләкин, төптәнерәк уйлаһаң, ҡәүемдең бөтә ирҙәре ҡатнашҡан был ауыр эш был кешеләрҙе берләштереү, уртаҡ маҡсатҡа ынтылып, көстәрҙе, теләктәрҙе, ынтылыштарҙы бергә туплау өсөн эшләнә бит. Ошонан һуң ныҡ итеп байрам үткәреү, шуға әллә күпме ризыҡтар, эсемлектәр әҙерләү берҙәмлекте нығытыуҙы дауам итә түгелме һуң?

Уларҙың аш табынындағы ғөрөф-ғәҙәттәре лә бик фәһемле бит: чин этник төркөм кешеләре бер-береһен ашаталар, беҙҙең атай-олатайҙар бер-береһенә хөрмәт йөҙөнән ял-ҡалъя һоғондорған һымаҡ. Ләкин уларҙа был йола айырым эпизод ҡына түгел, ныҡлы, эҙмә-эҙлекле ғәҙәткә оҡшаған. Улар тик шул рәүешле, йәғни бер-береһен ашатып туҡланалар һымаҡ. Был йола ла кешеләрҙе үҙ-ара ни тиклем яҡынайта. Башҡа кеше һонған ризыҡты икенсеһе ихлас ҡабул итә, сөнки ул башҡаса йәшәү рәүешен белмәй.

Ә бөгөнгө кеше һиңә ризыҡ һуҙыу, ҡалъя ҡаҙы-ял һоғондороу түгел, һинең хәләл ризығыңды ауыҙыңдан тартып алырға мөмкин.

«Һиңә ауыҙымдан өҙөп бирәм» тигән һүҙҙә ни тиклем ихлас мөнәсәбәт. Ә хәҙерге әҙәм балалары ауыҙынан өҙөп биреү түгел, һинең ауыҙыңдан өҙөп алырға әҙер.

Гольфстрим ағымы – күпме илдәргә йылылыҡ илтеүсе изге бер хикмәт һуңғы йылдарҙа һыуына бара, шуға донъяла климат һалҡыная, тиҙәр. Хәүефле хәл, әлбиттә.

Ләкин кешеләр араһындағы йылы, ихлас мөнәсәбәттәрҙең – үҙенсә рухи Гольфстрим ағымының һуңғы йылдарҙа юғала барыуы тағы ла хәүефлерәк бит. Кеше өҫтәмә йылылыҡ сығанаҡтары табырға ла мөмкин. Ләкин кешеләр араһындағы ихлас мөнәсәбәттәр, рухи ҡиммәттәр юғала икән, уларҙы бер нимә менән алмаштырып булмаясаҡ. Был хәл хәүефле генә түгел, яман ҡурҡыныс.

21 август, 2011 йыл. Йәкшәмбе.

Бына йәйге ял да үтеп бара. 27-дә август кәңәшмәһенең секция ултырышына сығыш әҙерләргә кәрәк. Июнь аҙағында уҡ педагогик темаға ҙур ғына мәҡәлә яҙғайным. «Башҡортостан»ға бирҙем, руссанан тәржемә итерҙәр инде. Рус газетаһына һаман да бирә алмайым. Иртәгә «Истоки»ға илтергә уйлайым.

10 августа ҙур ғына сара үтте. Шунан һуң байтаҡ ваҡыт йүнләп эшләп булманы. Хәйер, ял булғас, аҙыраҡ ял да кәрәктер инде. «Ассы»ла санаторийҙа ялдан күберәк эш менән, шығыр менән үтте. Алда эштәр өйөлөп тора. Иртәгәнән яңы ритм башланасаҡ.

Әҙәм балаларының холҡо ғына түгел, почерктары ла төрлөсә. Беҙҙең быуындың почергы матур булды. Хәҙер күбеһенең сатай-ботай. Сөнки улар күберәк компьютер менән эш итә, ҡулдан яҙыуҙары бик һирәк.

Уҡыусыларҙың почергына уларҙың уҡытыусыларының яҙыу матурлығы ла ныҡ йоғонто яһай.

Кайһы берәүҙәрҙең яҙыуында
Әллә ниндәй ярһыу бар һымаҡ.
Хәрефтәре шундай етеҙ, төҙөк,
Гүйә һуҙылып сапҡан арғымаҡ.

Һуңғы ваҡыттағы уҡшытҡыс яҙмаларҙы уҡығанда кешенең зәғиф хәтере, яуыз ҡарашы тураһында уйлайым да ул авторҙарҙың донъяны күреү мөмкинлектәре шуның менән генә сикләнгәндер инде, яҙмыштары шулай бәхетһеҙҙер, тип ҡуям. Донъяны аҡ һәм ҡара төҫтәрҙә генә күреүсе дальтониктар була бит. Күңеле дальтоник иһә донъяны тик ҡара төҫтә генә күрә. Тимәк, күңеле уның дөм һуҡыр.

ГКЧП-ның 20 йыллығына бәйле ул ваҡиғалар тураһында ТВ-нан аҡыл һатыуҙар. Ул бәләләр тураһындағы дөрөҫлөктө бөгөнгө халыҡ тулыһынса белмәй, әлбиттә. Донъя былай барһа, киләсәктә лә хәҡиҡәтте йәшерергә тырышасаҡтар.

Был ҡыйралыштың килеп сығыуының төп сәбәбе бәлки шундалыр: СССР-ҙағы дәүләт власының көсһөҙлөгө, КПСС-тың эстән серегәнлеге һәм оппозицияның тик емерткес, агрессив, тарҡатҡыс маҡсат менән ойошоуы, етәкселәрҙең күбеһенең көнбайыш ҡулындағы марионеткаларға әйләнеүе. Әгәр ҙә власҡа халыҡ мәнфәғәтен уйлаусы, төҙөү, ижад итеү, туплау, ысын мәғәнәһендә үҫеү өсөн кешесә программаһы булған оппозиция килһә, хәлдәр былай фажиғәле булмаҫ, бөйөк дәүләт юҡҡа сыҡмаҫ ине. Һатлыҡ йәндәрҙең шалтырауыҡ һүҙҙәренә ышанған совет халҡы башы әйләнеп, күҙе томаланып бына шундай мәсхәрә яҙмышҡа, хәйерсе хәленә дусар булды.

28 август, 2011 йыл. Йәкшәмбе.

Бына йәй ҙә, ял да үтеп китте. Иртәгә эшкә. Отпусканың һуңғы көндәре август педсоветтары менән бүленде. 24-дә «Нефтселәр» һарайында башҡала уҡытыусылары кәңәшмәһе. Әҙерләнгәйнем, һөйләргә тура килмәне. Бындай мөһим сараларҙы артыҡ ашыҡтырып

үткәрәләр. Ул йыйылышта күберәк дөйөм һүҙҙәр булды. Мин сығышымда әйтергә уйлаған фекерҙәрҙең (тыуған тел тураһында) ҡайһы берҙәрен үҙенең йомғаҡлау һүҙендә министр Ғаязов әйтте.

Кисәге көн ултырыштар менән үтте. Төшкә тиклем дүрт урында фекер алышыу – дискуссиональные площадки. Беҙ авиация университетында булдыҡ. Тема: «Модернизация профессионального образования – фактор инновационного развития РБ»

Тормоштоң һәр тармағында модаға эйәреү бөтмәй, модалар үҙгәреп тора. Был – кейемдә йәки интерьер һ.б. тышҡы күренештәрҙә генә түгел. Айырым һүҙҙәр, айырым лозунгтар ҙа модаға әйләнә.

Мәғарифтә лә, башҡа тармаҡтарҙа ла хәҙер модернизация менән инновация тигән талаптар үҙәккә ҡуйыла. Гәрсә был күренештәр, уларға ихтыяж һәр дәүер өсөн мотлаҡ булған. Модернизация, йәғни камиллаштырыуҙан башҡа, инновация, йәғни яңы алымдар, яңы ысулдар һ.б. тыш үҫеш бер ваҡытта ла булмаҫ ине. Кешелектең барлыҡ тарихы – шундай камиллашыуҙан, яңырыуҙан тора. Хәҙер модалағы һүҙҙәр менән әйткәндә, модернизация һәм инновацияларҙан тора, тормош шулар нигеҙендә үҫә, алға бара бит. Атамаларҙы, терминдарҙы яңыртыуҙан ғына донъя яңырып китһә лә бит...

Кисә, 27-дә, төштән һуң, Конгресс-холда пленар ултырышта Президент, министр сығыш яһаны. Башҡорт телен уҡытыуҙы ата-әсәләрҙең ихтыярына ҡалдырыу тенденцияһы ныҡ хәүефләндерә. Хәҙер рәсми сығыштарҙа шул фекер үткәрелә башланы. Президент башҡорт телен уҡытыуҙағы ялҡытҡыс стилде тәнҡитләне, яңыса юлдар, уҡытыусыны ҡыҙыҡһындырыу тураһында ҡәтғи һүҙҙәр һөйләне.

Мәскәүҙән Рәсәй педагогия академияһы Президенты Николай Дмитриевич Никандров бик һәйбәт, бик йөкмәткеле һөйләне. Бөгөнгө рухи емерелеү, шуны көсәйтеүсе мәкерле эштәр хаҡында бик фәһемле миҫалдар килтереп, бик актуаль мәсьәләләр күтәреп, үткер, хатта уҫал сығыш яһаны.

Үҙемдең сығыштарҙағы һәм мәҡәләмдәрҙәге фекерҙәр менән ауаздаш урындар байтаҡ булды был телмәрҙә. Аҙаҡ банкет бүлмәһендә ҡулын ҡыҫып рәхмәт әйттем. Мәжлескә ҡалманым.

Һуңғы ваҡытта мәғариф тураһында байтаҡ уҡыным. Бер генә фәндә лә бындағы һымаҡ бөгөн яһалмалыҡ һәм лицемерие юҡтыр ул. Күпме лженаука, яһалма схемалар һәм практик тормошта һис бер кәрәге булмаған тәғлимәттәр. Шуларҙан һуң Никандровтың сығышы

ысын донъяны, ундағы бик актуаль мәсьәләләрҙе күҙ алдына баҫтырҙы. Тексын алырға, табырға ине. Үҙемдең ҡайһы бер мәҡәләләремде лә уға ебәрергә тигән уй бар.

Кисә Фәриҙә ауыҙ асырға ҡатындарҙы йыйҙы. Бер ҡатын доғаны бик матур, бик моңло уҡыны.

Ғәрәп булмаған мосолмандар өсөн доғаның яңғырашы үҙе бер сихри донъя. Һүҙҙәрен аңламайһың, ә аһәңе күңелде арбап ала. Әгәр һүҙҙәрен тулыһынса аңлаһаң, бәлки ул серлелек, ул солғаныш булмаҫ та ине. Әлбиттә, Ҡөрьәнде аңлау, уның мәғәнәһен ғәрәпсә яңғырашында төшөнөү бик ҙур бәхет. Ләкин һүҙҙәрен аңламайынса уның илаһи моңо менән тәьҫирләнеү – үҙе бер мөғжизә.

Мәғәнәһен аңламайым,
Моңо менән арбай доға.
Биҙерәк тә серле шуға.

Президент Мәскәү ғалимының «региональный компонент в социализации граждан» тигәнерәк тезисына айырым туҡталып, уны өйрәнәсәкбеҙ, индерәсәкбеҙ, тине. Милли, ерле үҙенсәлеккә иғтибар итергә кәрәк, әлбиттә.

27-дә иртән күк аяҙ, ай еп хәтле генә булып күренеп тора ине. Бөтөп барған сағы. Яңынан тыуғанын (иртәнән һуңға ай башы) тағы ла күреп булмаясаҡ. Бөгөн көн болотло, ямғыр быҫҡаҡлай. Һәр ваҡыттағыса, ай ҡасып, йәшенеп тыуыр инде.

Матбуғатта, бигерәк тә «Наш современник», «Советская Россия», «Российская Федерация» һымаҡ баҫмаларҙа, бик күп дөрөҫ һүҙҙәр әйтелә, хаҡлы талаптар ҡуйыла.

Ләкин дөрөҫ һүҙҙәр ҡасан дөрөҫ эштәргә, хаҡлы талаптар ҡасан хаҡлы хоҡуҡтарға әйләнер һуң? Быға ирешерлек көстәрҙе лә, сәйәси партияны ла әлегә күрмәйем. КПРФ-тың программаһы илде, кешене хәстәрләүҙе ҡат-ҡат әйтһә лә, уларҙы тормошҡа ашырырға әлеге дәүләт сәйәсәте юл ҡуймаясаҡ.

«Целью моей жизни было уничтожение коммунизма», – был һүҙҙәрҙе ниндәйҙер Даллес түгел, КПСС-тың генсегы Горбачев әйткән. Ни тиклем ике йөҙлөлөк! Ил башында шундай юлбашсылар торғанда, Ватан һәләкәттән нисек ҡотола алһын?

Аксаков музейы тураһында Президент Указы сыҡты. Әҙәбиәт музейы иһә һаман да йортһоҙ, гәрсә уны булдырыу тураһындағы Указ

1996 йылда уҡ донъя күрһә лә. 15 йыл үтте, күпме вариантар хаҡында һүҙ барҙы, беҙ тәҡдим иткән ниндәй матур мөмкинлектәр кире ҡағылды.

Был мәсьәлә хаҡында музей директорын, яҙыусылар союзы етәкселәрен саҡырып, махсус һөйләшергә кәрәк. Мәҙәниәт министрлығы ла булһын.

Күптән таныш йырҙарҙың да мәғәнәһе ҡайһы саҡта яңыса асылып китә. Иртән йырлайҙар:

Алым йәл түгел һиңә,
Гөлөм йәл түгел һиңә.
Алым түгел, гөлөм түгел,
Йәнем йәл түгел һиңә.

Бер ҡараһаң, артыҡ сөсөләнеү һымаҡ. Ләкин быны беҙҙең кеше бик ихлас йырлай, барыһын да йөрәктән кисерә һымаҡ.

Беҙҙең халыҡ, ғөмүмән, хискә нык бирелеүсән, күп йырҙарҙа эмоция көслө. Ләкин кәрәк саҡта ул бик ҡырыҫ, тураһын сатнатып әйтеүсе лә була ала. «Тәфтиләү»ҙе йәки «Абдрахман»ды хәтерләйек.

Элек ҡала йорттарының ишек алдындағы һарай йорттарын каретник ти торғайнылар. Каретаһыҙ, арбаһыҙ каретниктар.

Бәхетһеҙлек һорап-нитеп тормай,
Килеп инә бикле ишектән.
Бәндә өлөшөнә бәхет төшһә,
Уны хатта күҙһеҙҙәр ҙә күрә,
Һаңғырау ҙа уны ишетә.

Бәхет менән бәхетһеҙлек шундай –
Килеп инә бикле ишектән.
Уларҙы бит күҙһеҙҙәр ҙә күрә,
Һаңғырау ҙа хатта ишетә.

9 сентябрь, 2011 йыл. Йома.

1 сентябрҙә БДПУ-ла Аҡмулла һәйкәле ҡуйылған майҙанда беренсе курс студенттарын ҡотлауҙа сығыш яһаным. «Бер һүҙ» шиғыры менән бөтөрҙөм.

Бик һәйбәт ойоштороргандар. Быйыл алынған 1,5 меңдән ашыу студенттың күбеһе ауылдан икән.

Хәҙер йәштәр (Өфөнөкөләр) Мәскәүгә уҡырға китә. Ректор Асадуллин һөйләй: элек Өфөнөкөләр 35 % инә торғайны, быйыл ни бары 3 %, ти. Йыш ҡына Мәскәүгә уҡырға инеүе Өфөнән еңелерәк икән. Беҙҙәге яһалма күтәрелгән ЕГЭ күрһәткестәре буйынса. ЕГЭ юғары булғас, беҙҙә инеү кимәле, талаптар ҙа юғарыраҡ икән.

2-дә Әбйәлилгә барып әйләндем. Хакимиәт башлығы Рим Сыңғыҙовҡа совет ышанмау белдергән. Яңы ултырыш йыйғандар. Президент администрацияһынан В.А. Пчелинцев сығыш яһаны. Элекке ҡараҙҙы бөтөрҙөләр. Оппозиция (башында М.З. Рәжәпов) менән Сынғыҙов ярашҡан булды, йәнәһе. Ләкин был ваҡытлыса килешеү. Оло ваҡиғалар алдынан башлыҡты алмаштырыу ярамай, уныһы аңлашыла. Ләкин халыҡҡа урман һатыу эшендә харамлашыу, тураһын әйткәндә, урлашыу һуңғы ике йылда бик нык йышайған. Бында ауыл хакимиәттәренең дә, район етәксеһенең дә ғәйептәре етерлек. Минлесхоз был мәсьәлә буйынса ҙур тикшеренеү үткәргән. Шуның материалдары буйынса министр Нәбиуллин Толкачевҡа хат яҙған, ул миңә барып ҡайтырға ҡушты. Материалдар менән танышҡанда халыҡтың ни тиклем боҙолғанлығына аптыраным. Мәскәү талай тип яр һалабыҙ, үҙебеҙҙе үҙебеҙ күрмәйбеҙ. Башҡорт еренең байлығын башҡалар йолҡоу етмәгән, ошо әшәке эшкә үҙебеҙҙең башҡорттар ҙа, ояттан йәйәү ҡасып, көндәнкөн нығыраҡ ҡатнаша, ҡомһоҙлоҡтары шашҡандан-шаша бит.

Ниндәй генә район хакимиәтен алма, ҡуйылған көнөнән урлаша башлай, үҙенә хан һарайҙары төҙөргә тотона бит.

Бөгөн Салауат районына барып әйләндем. Бөтә донъя башҡорттары башҡармаһының ултырышы булды. Саҡырыуҙарында Янғантауҙа тиелгәйне. Шунда үтеп киткәнбеҙ. Баҡһаң, РДК-ла икән. Ул хәбәр миңә килмәгәйне. Һөйләшеү төнъяҡ-көнсығыш райондарының үҫеше, шулай уҡ һайлауҙарға әҙерлек мәсьәләләренә арналды. Докладтар һөйләнелде, һәйбәт тәҡдимдәр әйтелде. Ниәттәр изге, тормошҡа ашырға яҙһын.

Һайлау тураһындағы икенсе өлөшкә ҡалманым.

Башҡорттар ҡоролтайында мин ҡатнашҡан өлөштә бер генә башҡортса сығыш та булманы, Л.С. Ғүмәрованың Дәүләт йыйылышының ҡотлауын уҡыуҙан башҡа. Бот сабып көлөрлөк бит, ә үҙебеҙ башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ рәсми сараларҙа ҡулланылырға тейешлеген талап иткән булабыҙ. Сығыш яһаһам, ошо хаҡта әйтермен тигәйнем. Ләкин был форматта ойоштороlған был осрашыуҙа бер ҙә һүҙ әйтке килмәне.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының яңы етәксеһе Марсель Харис улы Йосопов.

Арҡауыл егете, атаҡлы көрәшсе Харис Йосоповтың улы. Ҙур бизнесмен. Киң ҡарашлы, төплө фекерле. Тик башҡорт телен бөтөнләй белмәүе ҙтә лә үкенесле.

12 сентябрь, 2011 йыл. Дүшәмбе.

Салауат районынан ике сәғәттән артығыраҡ ваҡытта баҡсаға ҡайтып еттек. Ямғыр. Аяҙытып тора ла, тағы «килә яуа, килә яуа».

Баҡсала өс кис ҡундыҡ. Шәмбе-йәкшәмбе. Хәсән Назар тураһында мәҡәлә менән ултырҙым. Яҙып бөттөм. Китаптарын яңынан ҡарағанда байтаҡ нәмәләрҙе төртөп барғайным. Шулар ҙа, элекке мәҡәләм дә эште тиҙләтте.

Мә ҡәләм! Яҙ мәҡәлә.

Көнсөллөк, һатлыҡ, алдашыу, урлыҡ, боҙоҡлоҡ, ялҡаулыҡ, тарҡаулыҡ – былар барыһы ла бер дейеүҙең баштары. Береһен бөтөрөүгә икенселәре ағыуын һибә, һаҫыҡ төтөнө сәсәтә.

Хәсән Назар Рәми ағай тураһындағы «Остазым» исемле мәҡәләһендә (иҫтәлектәр китабында) автографтарҙы, көндәлектән өҙөктәр килтерә. Миндә ағайҙың дүрт китабына яҙған автографы – теләк һүҙҙәре бар. Уларҙы берәй мәҡәләмә индереү хаҡында ниңәлер уйланылмаған.

Тағы ла ғәжәп тап килеүҙәр. «Башҡортостан»дың ике һанында Урал Ураҡсиндың иҫтәлеге сыҡты. Уға 50 йәш тулыу уңайынандыр. Ураҡсин ураҡ ваҡытында баҫыуҙа әсәһе ураҡ урғанда тыуған. Кендеген ураҡ менән киҫкәндәр. Тормош бына шулай дауам иткән. Бынығы бер ғәжәп. Икенсеһе – крәҫтиән ҡатынының сыҙамлығы, иң ауыр сағында ла ауыр эштәрҙән айырыла алмауы.

Беҙҙең тиҫтер ҡәләмдәштәр етмешкә етте, етмеште уҙып китте. Әммә улар бик оло булып, нығ ҡартайған кеше булып күренмәй. Беҙ йәш саҡта етмештәге генә түгел, алтмыштағы ағайҙар ҙа бик оло, бик олпат булып күренә торғайны. Хәҙер беҙҙең арттан килгән илле йәштәгеләр ҙә бөтөнләй йәштәр һымаҡ. Ә бөгөнгө йәштәргә улар бик күп йәшәгән оло кешеләр булып ҡына күренә торғандыр. Ғүмерҙең төрлө миҙгелендә кешенең бер төрлө үк хәлдәрҙе баһалауы, ҡарашы төрлөсә.

«Ҡыҙыл таң»да (7.09.11) Назар Нәжмигә арналған хәтер көнөндә бер шәлкем шиғырҙар-бағышлауҙар бирелгән: Р. Миңнуллин, Х. Назар, Ркаил Зәйҙулла, И. Кинйәбулатов, Р. Идиятуллин, М. Закиров.

Бындағы шиғырҙарҙың күбеһе таныш. Ркаилдың шиғыры онотолор ине. Тик уның был һүҙҙәрен оноторға ярамай:

Тау аҫтында ята шағиры
Ҡол ҡәрҙәштәрҙең өйәҙе
Йәйрәп ята үҙәнлектә,
Яҡыная күк көмбәҙе.

Татарҙар Башҡортостанда ҡол хәлендә йәшәй булып сыға инде. Ябай кешеләрҙе зыянлы зыялылар бына шулай ағыулай, милләттәр араһында ыҙғыш тыуҙырырға тырыша. Был кеше Рәсәйҙең үҙәк өлкәләрендәге, Ырымбурҙағы, Себерҙәге һ.б. яҡтарҙағы татарҙарҙың хәлен барып белһен, Башҡортостандағы хәлдәр менән сағыштырһын ине. Ул тарафтарҙағы милләттәштәренең рухи яҙмышын Ркаил беләлер, әлбиттә. Тик өндәшмәй. Башҡортостанда татарҙар ҡол икән, Рәсәй өлкәләрендә милли мәктәпһеҙ, телһеҙ ҡалған татарҙар ниндәй хоҡуҡта була инде? Ҡолдан да түбәнерәге кем була?

14 сентябрь, 2011 йыл. Шаршамбы.

Кисә Президиум ултырышы, «Единая Россия» йыйған түңәрәк өҫтәл. Уныһында ла сығыш яһаным: бөтмәҫ эксперименттар тураһында. Мәскәүҙән Думанан Булаев Николай Иванович. Раил Мирваевич Асадуллин алып барҙы. Мәскәүҙәр беҙгә килеп дөрөҫ һүҙҙәр һөйләйҙәр, киреһен эшләйҙәр. Август конференцияһында академик Никандров Николай Дмитриевич бик һәйбәт һөйләгәйне. Һәйбәт фекерҙәр күп, әммә хәлдәр үҙгәрмәй. Киреһенсә, ҡайһы тармаҡты алма – тарҡалғандан-тарҡала. Дәүләттекен талау, бөтөрөү дауам итә. Нисәмә йылдар дауам итә – һаман да бөтмәй. Эшләгән дә икән совет халҡы! Тупланған мөлкәттең аҙағына сығып киләләр инде.

«Единая Россия – Башҡортостан» (8.09.11.) гәзитендә Өфөнөң элекке мэры Рәүеф Ноғоманов менән интервьюнан өҙөк:

– Недавно один умудренный жизненным опытом хозяйственник, оценивая итоги последних лет республики, с горечью заметил: когда соседи экономикой занимались, мы шэжере изучали.

– Может быть, несколько сурово, но по сути верно. Завалов много. Но мы переломили уже ситуацию.

Әлбиттә, был һөйләшеүҙә хаҡлыҡ күп. Ләкин шәжәрәләрҙе тергеҙеү ҙә, төҙөлөштө үҫтереү ҙә бергә барырға тейеш. Күпме про-

екттар юкҡа сыға, бөгөн бар – иртәгә юк, ә бына шәжәрәнең тамырҙары меңәр йылдарға барып етә, бөгөнгөгә килеп тоташа. Емерелгәнде яңынан төҙөп була, төҙөлгәндең бере hе лә мәңгелек түгел. Ә бына халыҡ хәтере мәңгелек булғанда ғына ул йәшәүен дауам итә. Хәтере юйылдымы – халыҡ та юк.

26 сентябрь, 2011 йыл. Дүшәмбе.

21-дә Дәүләт йыйылышы ултырышы. Эльвира Юнысова Испанияла, миңә дүрт мәсьәлә буйынса ла сығырға тура килде. Бишенсе hе – содоклад.

Кисен Конгресс-холда БСТ-ның 10 йыллығы кисәhе. Президент ҡотланы, hәйбәт концерттың тәүге өлөшөн ҡараным. БСТ-ның эмблема-тамғаһы Салауат hәйкәле ине. Ҡошҡа үҙгәрткәндәр, уңышлы түгел.

Тәнәфестә кейенеп торhам, кемдер арҡанан ҡаға «Абзый менән иҫәнләшәйек әле», тип. Әйләнеп ҡараhам, Рөстәм Зәки улы. Иҫәнләштек. Президент: «Иртәгә Ҡазанға осаһығыҙсы», ти. Мин әйтәм: «Команда булманы».

Ҡайтып йоҡларға ятhам, бер сәғәттән Фәриҙә уята. Уның телефонына Лилиә Салауатовна Ғүмәрова шылтырата икән. Иртәгә туғыҙынсы яртыла аэропортта депутат бүлмәhендә булырға. Президент фарманы.

Тиҙерәк водителгә шылтыраттым. Дамир иртән hигеҙенсе яртыла килеп етте. Махсус ТУ-154 менән Ҡазанға остоҡ. Президент, министрҙар, вице-премьер Рәхмәтуллина, журналистар һ.б. Рәсми делегацияға Ғүмәрованы, Йомабикә Ильясованы, мине Президент өҫтәткән, ул hорағас («Ниңә депутаттар юк, ниңә халыҡ шағиры юҡ?») өҫтәгәндәр инде. Рәсми делегацияла 20 кеше. Шулай итеп, Татарстанда Башҡортостан мәҙәниәте көндәренең асылыуына барып төштөк.

Дәүләт Советынан ҡаршы алдылар, беҙ өсәүҙе оҙатып йөрөнөләр Римма Атласовна Ратникова (рәйес урынбаҫары), Роберт Минуллин, беҙҙең профиль комитеттан.

Ҡазанда бик ҙур төҙөлөштәр бара. Ҡаланың мең йыллығына ҡала ныҡ яңырғайны, Универсиадаға әҙерлек уңайы менән тағы ла күп эштәр эшләнә инде. Татар хәйләкәр шул тип кенә булмай. Үҙең дә хәйләкәр бул, заманы шулай. Етмәhә, хәйлә аҡыл билдәhе, тип тә әйтәләр бит әле.

Опера театры яныңа ике тирмә ҡорғандар, әбйәлилдәр менән борайҙар. Оҫталар эшләгән әйберҙәр ҡуйылған. Фойела беҙҙекеләр китап hатып торалар, «Китап»тан.

Кисә көслө башланды: Флүрә Килдейәрова капелла менән «Буранбай»ҙы йырланы. Шунан һуң ике Президент һөйләне, Хәмитов орден һ.б. ҡотлауҙар тапшырҙы (Фирҙәүес Бәширова, Нинель апай Юлтыева һ.б.)

Шунан һуң барыбыҙ ҙа Татарстан Президенты Р.Н. Миңлехановтың приемына киттек. Етәкселәрҙең асылыу концертын ҡарамауҙары бик үкенесле, әлбиттә. Бигерәк тә сығыш яһаусылар өсөн.

Төнгө 12 тулмаҫ борон өйҙә булдым. Татарстанда беҙҙең байтаҡ театрҙар сығыш яһаясаҡ.

Күршеләрҙә матбуғат беҙҙәгенән ауырыраҡ хәлдә. Роберт Миннуллин да шулай һөйләй, «Азат ҡатын» мөхәррире менән редакцияға барып килгән Йомабикә Ильясованың да тәьҫораттары шулайыраҡ.

23-дә Мазһар Насип улы Иҫәнбаевтың 75 йәшлегенең мәжлесендә Ҡоролтай исеменән Рафаэль Зиннуров менән ҡотланыҡ. Ҡотлауымды: «Төп теләк фамилияңда уҡ әйтелгән: Иҫәнбаев. Иҫән бул, бай бул», – тинем.

Кисәнән һуң баҡсаға киттек. Ҙур эштәр эшләнде: ерҙе ҡаҙҙырҙыҡ, емеш-еләк ағастары ултырттыҡ.

Көндәлектәр менән булам. Тағы дүрт блокнотты (23.07.78–24.08.87) ҡараным. Бер юлы ҡыҫҡартып барырға булдым. Юғиһә, күләм тауҙай булып китәсәк. Бөтөнләй ҡарамайынса ла ҡалдырып булмай. Ҡырҡ йылдан ашыу яҙылған. Яҙғанда иғтибар итмәйбеҙ. Ә асылда – тотош оло хеҙмәт.

5 октябрь, 2011 йыл. Шаршамбы.

Киләһе йылдың бюджетын тикшереү осоро. 3-дә президиум, иртәгә – комитет.

27 сентябрҙә Мәғарифты үҫтереү институтында наблюдательный совет ултырышын алып барҙым. Ректор Н.Ғ. Мәжитов отчет яһаны.

1-дә, шәмбе, Ҡоролтай ултырышынан һуң баҡсаға киттек. Асҡар менән Фәриҙә унда ине. Беҙ Артур, Сабина, Зөфәр барҙыҡ. Гардиналар, пәрҙәләр, картиналар элделәр. Шкаф-купе һ.б. әйберҙәрҙең үлсәмен алды Денис тигән егет.

Рәхмәтуллинаға «Хазина»ның бер ни тиклем ҡыҫҡартылған вариантын биргәйнем. Кисә шылтыратып белештем. «Минкультураға, театрға доработкаға ебәрҙем», – ти. Дәүләтоваға шылтыратҡайным. Ул бер ни ҙә белмәй. Театр менән дә һөйләшергә кәрәк.

Ямғыр ҙа ямғыр. Асҡар ҙа «яуа, яуа» тип ҡабатлай, «Килә яуа, килә яуа» йырын Фәриҙәнән ҡат-ҡат йырлата, үҙе лә һин дә мин эйәрә.

Игенде саҡ-саҡ ҡына йыйып бөтөп өлгөрмәнеләр.

Салауат һәйкәле янында фотографтың тере шоңҡары, аҡ күгәрсендәре. Шоңҡарҙың күҙенә япма ҡапланған.

Кемебеҙ һуҡырыраҡ икән,
Күҙе ябылған шоңҡар?
Беҙ ете ҡат үлсәнгәнсә,
Улар киҫеп бөтөргәндәр.

Башыма етмәк була дошмандар,
Күҙҙе быумаҡ була ҡуштандар.
Хәйлә-мәкер менән ялағайлыҡ
Яманыраҡ бергә ҡушҡандан.

Аңдыһындар кисем, таңымды,
Уяулығым юйылыр сағымды,
Аңралата алмаҫ аңымды,
Ҡайнатырҙар ғына ҡанымды.

Ҡоштар китә.
Һулҡылдашып китә,
Моңһоу сафтар күккә теҙелгән.
Түҙәйексе күңелем,
Ни йәм ҡала
Ошо һағышым да өҙөлһә?

Йома көн – 30 сентябрь – айҙың һуңғы көнө күңелем бигерәк һағышлы булды.

***

Нисәмә-көн туҡтамаҫтан яуа.
Ямғыр тымыр.
Тынмаҫ моң яуа.
Юлға һары япраҡ түшәлгәндә
Һары һағыш һарыла донъяма.

Йәшеллеккә сер йәшергән урман
Һарыларға ҡапыл һабышҡан.
Яҙ бит әле генә ярһытҡайны.,
Көҙ ҙә етте, сорнап һағышҡа.

Һағыштарҙың булма миҙгелдәре,
Яҙғыһы ни уның, көҙгөһө…
Шулайҙыр ҙа…
Бынау көҙгө һағыш
Ниңә шулай бигерәк түҙгеһеҙ?

Ҡанундар, нормативтар, стандарттар менән сорналған йәнемде шиғыр менән дауалайым, шиғриәт мине тотҡонлоҡтан азатлыҡҡа сығара.

Шиғриәт тә бит асылда тотҡон итә, әсирләй. Әммә был әсирлек йәнем өсөн иң ҙур азатлыҡ.

Тәү ҡарашҡа сәйер, әлбиттә. Шиғыр – яныу, тынғыһыҙлыҡ. Әммә тормоштоң ығы-зығыларынан, ваҡлыҡтарынан айыра. Шиғыр тыныслandыра.

«Мохай» – был һүҙ хәҙер ҡулланылмай тиерлек. Бәләкәй саҡта ишетә торғайныҡ: кит, мохай… Бер ҡатлы тигәнерәк мәғәнәлә. «Мохай бабай май ашамай» тигән һүҙ ҙә бар ине. Мохай исемле бабайҙыр тип уйлағаным иҫтә. Ә ул йыуаш тигәнде аңлата икән.

Студент саҡта лекцияла шиғыр яҙған һымаҡ, хәҙер эш күп саҡта ла уны онотоп, шиғырға бирелеп кителә.

18 октябрь, 2011 йыл. Шишәмбе.

Тауҙарҙа йәшәгәндәргә генә түгел, кешегә барыбер мәле еткәс ер ишелә.

Кисә Александр Филипповты ерләнек. Табуты өҫтөнә ҡәбер ҡаҙыусы-күмеүселәр тупраҡ ташлай башлағас, ер гөрҫләп барып төшкәнде ишеткәс, әллә нисек булып китте. Бер нисә минутта Сашаның өҫтөнә ер ишелде лә ҡуйҙы. Ул мәңгелеккә ер аҫтында ҡалды.

Беҙҙең әҙәбиәт донъяһында Александр Филиппов уникаль күренеш булды. Күп яҡлы ижад: шағир, публицист, тәржемәсе, сценарист һ.б. Ул беҙҙең мөхитте үҙенсә берләштереүсе көстәрҙең береһе ине. Республика яҙмышындағы иң ҡатмарлы саҡтарға иң кәрәкле тура һүҙҙе әйтеүсе булды. «Истоки» мөхәррире егерме йылда

әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ өсөн бик күп файҙалы эштәр башҡарҙы. Киләсәктә нәҡ Александр Филиппов етмәйәсәк, был юғалтыуҙың ҙурлығын киләсәктә нығыраҡ тоясаҡбыҙ.

Саша менән 1961 йылда радиола эшләгәндән бирле аралашып, фекерҙәш булып йәшәнек. Байтаҡ мажараларҙы ла бергә үткәрҙек. Уны хәтерләр, уны һағыныр сәбәптәр күп. Һағынып хәтерләр күпме кешеләреңдең булыуы йыуаныс та, һағыш та, бәхет тә.

13-дә Президиумдан һуң эш төркөмө йыйҙыҡ – республиканың дәреслектәр комплекты буйынса. Шуға бүленгән аҡсаны Мәскәү үҙенә алмаҡсы. Был барлыҡ республикаларға ла ҡағыла. Бик ҡырҡыу хәл тыуырға мөмкин. Президенттар милләттәрҙең хоҡуҡтарын ошолай боҙоуҙары тураһында беләләр тип уйламайым. Аптыраҡ, был хәлде нисек үҙгәртергә?

Баҡсала көндәлектәр менән булдым – 1987–1990 йыл башы. Кәрәкле уй-күҙәтеүҙәр, шул осор тураһында информация уларҙа бик күп. Нисек донъяға сығарырға тип баш ватам.

Баҡсала шиғырҙар уҡығы килеп китте лә Фикрет Годжаның «Избранное» (Баку, 2004) тигән китапты уҡып ҡараным. Үҙенсәлекле шағир, тик минең күңелгә ятырлыҡ түгел, рухым, моңом менән ауаздаш түгел. Шулай ҙа бер бәләкәй генә шиғыры бик оҡшаны, тетрәндерҙе тиергә мөмкин. Түҙмәнем, тәржемә итеп ҡараным. Бына ул тәржемә:

Мираҫка ер ҡалғас,
«Минеке!» тип,
Маһайҙы ул, ауыҙы йырылып.
Ә ер әйтте:
– Уйлайһыңмы, иҫәр,
Аҙаҡ кем кемдеке булырын?

Мәғариф системаһында милли мәктәптәрҙе ҡыҫыу көсәйгәндән-көсәйә. Былай барһа, бик ҡырҡыу хәлдәр тыумаҫмы? Тыумаҫ шул, баш күтәреүселәр булмаҫ, баш эйеп йәшәү дауам итер.

Ҡарашыңдың нуры бөтһә,
Күңелеңдең йыры бөтһә,
Дәрт-дармандың ҡуры бөтһә,
(Тик хәтерләү тороп ҡалһа)

Иҫ китерлек киҫкенлектән
Тик иҫтәлек тороп ҡалһа,
Йәшлек ярһыуынан – ҡартлыҡ мыжыуы,
Алмас ҡылыстан – тутыҡ ҡалай,
Йәшәмәк кәрәк ул саҡ ҡалай?
Улай тимә, килгәс ҡартлыҡ,
Ваҡыт ҡәҙере нығыраҡ артыр.

30 октябрь, 2011 йыл. Йәкшәмбе.

26–27-дә Әбйәлилдә. Граждандарҙы ҡабул итеү. Рауил ауылында балалар йорто асыу. Бынан өс йыл элек ошо Рауилда Әхмәт Лотфуллиндың йортонда мәсет асҡанда сығыш яһаған ваҡытта йөрәкте бик ныҡ ҡыҫҡайны. Белгертмәҫкә тырыштым, әммә ҡайтҡас та больницаға һалып ҡуйҙылар – микроинфаркт. Шуға был юлы шомланыбыраҡ барғайным, шөкөр, осрашыу һәйбәт үтте.

Бөйөктәр күтәрә,
Ваҡтар ваҡлай.

Баҡсала ҡыш. Беҙҙең урамға ла таш түшәнеләр.

Быйыл йәй шиғырҙар бик күп яҙылған. Яңынан ҡарап сыҡтым – насар түгел. Матбуғатҡа әҙерләй башларға кәрәк. Тик эштә секретарем башҡортса йүнләп баҫа алмай. Союзда улай булмай торғайны.

Ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә тормошо йәш саҡта бала тәрбиәләүҙән башлана. Фәриҙә әле олоғайғас та бала менән – Асҡарҙан башҡа уға йәм юҡ. Йәш саҡта балаңды күберәк инстинкт буйынса яратаһың. Олоғайғас ҡына сабыйыңдың ҡәҙерен нығыраҡ аңлайһың икән.

7 ноябрь, 2011 йыл. Дүшәмбе.

Дүртенсе көн баҡсалабыҙ. Ҡыш булды. Һыуҙарҙы түктек.

Көндәлектәрҙе уҡыйым, компьютерҙа баҫырға әҙерләйем, әйтерһең дә, мауыҡтырғыс әҫәр. Хәйер, был яҙмаларым, ысынлап та, үҙенсә әҫәр инде. Бер нәмәһе лә уйлап сығарылмаған. Бер яҙмыштың тарихы аша тотош дәүерҙәрҙең, әҙәби донъябыҙҙың тарихы.

Шулай ҙа баҫтырып алырға әҙерләгәндә ҡыҫҡартырға тура килә. Бергә йыйығас, күләм бик ҙур килеп сыға, үҙе бер нисә том булырлыҡ. Уҡыусыларға шул көйө еткергәндә һәйбәт булыр ине лә бит, ундай мөмкинлек юҡ.

Китаптарға инмәй ҡалған шиғырҙар бар, башлап ҡуйып, яҙылып бөтмәгәндәре бар. Был көндәлектәрҙәге яҙылып бөтмәгәндәрен яҙып бөтөрөп, әҙер, әммә баҫылмағандарын бергә йыйып, ҡыҙыҡлы китап туплап булыр ине. Бик үҙенсәлекле йыйынтыҡ килеп сығыр ине.

Беҙҙә өс кешенең дүртәүһе шымсы, ғәйбәтсе.

Егерме йәштә алтмыштағылар бик оло күренә, алтмышҡа еткәс, туҡһан йәш тә артыҡ ҙур һымаҡ түгел.

20 ноябрь, 2011 йыл. Йәкшәмбе.

Ял көндәре баҡсалабыҙ. Ысын ҡыш башланды инде. Килеүгә ҡапҡаға көрт һалған, көскә астыҡ.

9-да Нәжип Асанбаевтың 90 йәшендә, Академтеатрҙа Президенттан һуң миңә һүҙ бирҙеләр. Президент та, башҡа байтаҡ кешеләр ҙә һәйбәт сығыш тинеләр.

Рөстәм Зәкиевичтең яҙыусылар съезынан һуң әҙәби сараларҙа икенсегә булыуы. Башҡортса һүҙ әйтте, орден тапшырҙы.

Нәжип ағайҙың 90 йәштә сәхнәлә ир-егет булып баҫып тороуы, зиһененең, хәтеренең һәйбәтлелеге, һүҙҙе мәғәнәле әйтеүе беҙҙең әҙәбиәттә генә түгел, ғөмүмән, феноменаль күренеш. Ләкин яҙғандарының һәм уның хаҡында яҙылғандарҙы ҡалын-ҡалын томдар итеп һуңғы йылдарҙа ҡат-ҡат баҫтырыуы килешеп етмәй, саманан ашып китә.

11-дә ИИЯЛ-да Фәнүзә Надршинаны 75 йәше менән ҡотлау. Ғилми совет ултырышы булып үтте. Уның хаҡындағы һүҙҙән һәм үҙенең докладынан һуң мин сығыш яһаным. Ундағы телмәремде киңәйтеп бәлки мәҡәлә итеп яҙырмын әле. Утыҙ йыл бергә эшләнек бит. Хеҙмәттәре лә ҙур.

Ботаҡтарға әллә теймәй, әллә тейеп,
Ағастарҙан ағастарға оса тейен.
Эй атлыға, эй һикерә, эй тәгәрләй,
Был тиҙлеккә, етеҙлеккә күҙ эйәрмәй.
Әллә бер ел ярһып йөрөй, әллә кейек.
Тыныр тейен,
Тик мин генә шул бер көйө:
Һине һағынып, тулай күңелем янып-көйөп.

Беҙ йәшәрен йәшәнек,
Хәҙер иң ҡыйыны – йәштәргә.

В России растут гражданские браки, но граждан страны становится с каждым годом все меньше и меньше.

Ғаилә ҡороу брак төҙөү тиҙәр,
Брак була күпме брактар.
Граждан брактары арта бара,
Тик граждандар кәмей, ил артмай.
Иргәйелдән дә көсһөҙөрәк,
Иргәйелдән дә мөсһөҙөрәк бер әзмәүер,
Кәрләнән дә бәләкәйерәк бер Ғифрит.
Верзила мельче карлика,
Детина слабее лилипута.

Беҙҙәге бәғзе бәндәне ошолай нарыҡларға мөмкин.

Берәү: «Мин Исрафиловты еңгән кеше әле!» – тип кәпәренә икән. Исрафилов башҡорт театрынан китергә мәжбүр булғас, Ырымбурға барып, ҡаланың төҫһөҙ генә театрын нисек күтәрҙе! Бинаһын яңыртып, тыштан балҡытып ебәрһә, оҫталыҡ кимәле буйынса Рәсәйҙәге иң атаҡлылар дәрәжәһенә күтәрҙе, донъяға алып сыҡты. Театр ҙа, режиссер Исрафилов та дан-шөһрәт ҡаҙанды. Исрафилов ошо йылдарҙа Ырымбурҙа сәнғәт академияһын ойоштороҙо, ижад мәктәбен булдырҙы.

Ә теге берәү ни эш ҡыйратты? Ниндәй яңы һүҙ әйтте? Төҫһөҙ ине, төҫһөҙ булып ҡалды.

Еңгән, имеш! Нисә йылдар Исрафилов янында ялағайланып йөрөгәнен, йүнһеҙ пьесаһын ҡуймағас, уға йәшерен үс һаҡлап, эсенә үт йыйып йәшәгәнен беләбеҙ бит.

Еңгән, имеш! Оло, рәсми көстәр хәл итмәһә, уның Исрафиловҡа көсө етер ине, йәнәһе. Рифҡәт уны бар тип тә белмәҫ ине, уға «һөжүме» мүскәнең филгә өрөүе хәтле лә булмаҫ ине.

Баҡсалағы йортта үҙемә ыҡсым ғына кабинет булдырҙым, ҙур, матур китап шкафы эшләттем. Бында һәйбәт яҙыла, күп уҡыла. Йорт иркен, йәшәргә уңайлы, рәхәтен оҙағыраҡ күрергә насип итһен.

Союзда йыйылып киткән, байтағы автограф менән бирелгән китаптарҙы ҡараштырам. Элек тырым-тырағай яталар ине, хәҙер тәртипкә килтерҙем.

Тамара Ғәниеваның 2006 йылда сыҡҡан «Мөхәббәткә генә ышанам…» тигән китабын ҡараштырам. Ентекләп уҡырға ваҡыт етмәй. «Ра-

уил ағай! Ҡыпсаҡ моңон ошолай аңлаған булам мин…» тип яҙып бүләк иткән. Бында ҡыпсаҡ моңонан бигерәк тертләп, һыҙланып, моңланып, һоҡланып йәшәгән шәхестең башҡаларҙы ла әсир итерлек кисерештәре мөлдөрәмә тулған. Талантлы шағирә Тамара, бик талантлы. Тик үҙенең тейешле баһаһын, лайыҡлы дәрәжәләрен ала алғаны юҡ. Холҡо менән күптәрҙе үҙенән биҙҙерә. Ни хәл итәһең, һәр кемдең үҙ холҡо.

Ҡайһы саҡта шулай уйлап та ҡуям: әгәр ҙә Тамара ҡайҙалыр төпкөлдә бер кемгә лә күренмәйенсә, Өфөләге «йыртҡыстар» менән аралашмайынса әлеге шиғырҙарын яҙып, әлеге китаптарын сығарып, Өфөнән ситтә ижад итеп йәшәһә, уның абруйы ни тиклем юғары булыр ине. Былай фараз итеүҙәре сәйер, ә бәндә яҙмыштары тағы ла сәйерерәк, ҡатмарлыраҡ.

6 декабрь, 2011 йыл. Шишәмбе.

Кисә кәйефем ныҡ ҡырылып ҡайттым. Бер кем менән һөйләшке килмәй. 7 декабрҙә сираттан тыш съезд булырға тейеш ине. Аҡ йорттан күсерергә тигән фарман булған. Аҡ йорттоң ике яғы менән дә һөйләшеп ҡараным. Әйтерһең дә, элеккесә колхоз председателе һайлау. Һағайыуҙың, перестраховканың һаман да сиге юҡ.

Етәкселәр менән кандидатура тураһында алдан һөйләшергә кәрәк ине, әлбиттә. Яҙыусылар, бигерәк тә райондағылар әҙерләнеп бөткәйне. Күсергәс, күптәр ҡул һелтәп ҡуйырға ла мөмкин.

Азамат Юлдашбаев һәйбәт эшләп йөрөй ине бит. Көнсөллөктән йөҙҙәре ҡара көйгән яуыздар Минюстҡа барып, рәйес һайлауҙың процедураһынан әтнәкә тапҡандар, две трети квалифицированного большинства тейешле, имеш, хәҙерге ҡағиҙәләр буйынса. Беҙ простое большинство менән һайлағайныҡ.

Идара Наил Ғәйетбаевты тәҡдим итә.

Был арала Мостай ағай буйынса ике спектакль ҡараныҡ. Академтеатрҙа «Ай тотолған төндә». Беҙҙең драматургияның иң юғары классик өлгөһө булған был трагедияның бер генә һүҙен дә үҙгәртеү мөмкин түгел тигәнерәк мәғәнәлә элекке докладтарымдың береһендә әйткәйнем. Баҡһаң, мөмкин икән (ярамаһа ла). Спектаклдә аҡһаҡалдар ил инәләренә әйләнгән, әҫәрҙең моңо, фәлсәфи яңғырашы бөтөнләй ҡалмаған. Түштәрен асып сәхнәлә шашып йөрөүсе ҡыҙҙар, М. Кәримдә булмаған шоу, әллә ниндәй ендәр. Ай тотолоу хаҡында дәрүиштең киҫәтеүе, халыҡты ҡурҡытыуы ла юғалған. Ырыҫҡолдоң Тәңкәбикәне ҡыҫҡылауҙары ҡайҙан килеп ингән? Күпте көтөп барғайным, күңел һүрелде. Ағайҙың ҡыҙы Әлфиә лә, башҡалар ҙа

оҡшатманы. Әлфиә менән Алик спектакль аҙағындағы ҡул сабыуҙарға ҡалып та торманы. Режиссеры Айрат Абушахманов.

Йәштәр театрында «Ҡыҙ урлауҙы» ҡаранығ. Ғиләжев ҡуйған. Бынығы һәйбәтерәк. Әммә өҫтәлгән йырҙар нимәгә? Текстары ла текст түгел, үҙешмәкәрлек.

Һәр быуын Мостай Кәрим драматургияһын үҙенсә асырға тейеш. Бынығы бәхәсһеҙ. Ләкин һәр интерпретацияның эстетик нигеҙе һәм авторға тоғролоғо – төп талап.

Режиссер диктаты беҙҙә генә түгел, Мәскәүҙә лә (бәлки уларға эйәрептер) йылдан-йыл көсәйә. Ләкин был хәл аяуһыҙ диктатураға әйләнергә тейеш тигән һүҙ түгел бит.

3 декабрҙә Йәштәр театрында Гөлшат Ғайсинаның ижад кисәһе булды. Шиғыр менән йыр матур үрелеп барҙы. Йышыраҡ булһын ине ошондай кисәләр.

Гөлшат һәм башҡа артистар минең дә байтаҡ шиғырҙарҙы уҡыны.

Йәштәр театры директоры Ринат Ишмуллинға «Хазина»ның тексын һәм диск алып барҙым. Февралдән репетиция башларбыҙ, тине.

«Башҡортостан»ға ун шиғырымды алып барҙым, Нияз Сәлимовтың үҙенә бирҙем. Бөгөн сығырға тейеш.

«Ватандаш»та Әнүр ҡустым Вахитовтың «Хаж сәфәре» сыҡты. Минең йомғаҡлау һүҙе. Өс шиғыр ҙа ҡушҡайным, уларын айырым бирербеҙ, тинеләр.

Телевидениеға Яңы йыл тапшырыуына яҙылдыҡ. «Нур» татар театрында. Егермеләп яҙыусы. Бындай тапшырыу күптән булғаны юҡ ине. Рита Өмөтбаева менән Азамат Юлдашбаев алып барҙы.

Кисә Академияла бүлек йыйылышы булды. Мансур Әюпов алып барҙы. Ғиниәт Ҡунафинды ғилми-секретарь итеп һайланыҡ, бер тауыштан, 20 кеше.

30 ноябрҙә Президенттың мөрәжәғәтнамәһе Дәүләт йыйылышында. Күп эштәр билдәләнгән, тик мәҙәниәт хаҡында юҡ тиерлек, Мәскәүҙә үткән «Мы из Башкирии» тигән концертты телгә алыуҙан башҡа.

Театрҙарға барһаң, иң ныҡ борсоғаны – артистың эш хаҡындағы һүҙҙәр. Байтаҡтары 4-5 меңгә эшләп йөрөй бит. Беҙҙең йәштәр бөтәһе лә тиерлек ауылдан. Фатир алып торһаң, айына 10 мең. Бына шунан һуң уларҙың хәлкәйҙәрен күҙ алдына килтереп ҡара!

Тиҙ арала «Ғилем»гә русса китап әҙерләргә кәрәк. Көндәлектәр менән эш дауам итә. Улар кәмендә бик ҡалын ике том буласаҡ. Ҡайҙан спонсор табырға?

Һайлауҙар заманы.

Юлдарҙы һайлап булһа ла
Йылдарҙы һайлап булмай.

24 декабрь, 2011 йыл. Шәмбе.

Көндәлектәрҙе барлау, ҡыҫҡартыбыраҡ компьютерға баҫырға биреү дауам итә. Күләме бик ҙур буласаҡ. Ул дәүмәлдә матбуғатта (китаптар итеп) бәлки сығарып та булмаҫ. Ләкин бергә туплап ҡуйырға кәрәк.

Мостай Кәрим энциклопедияһына инеш мәҡәләнең эшен бөтөрөп бирҙем. Инде АН РБ-ға, «Ғилем» нәшриәтенә русса китапты әҙерләргә тотонорға кәрәк. Яңы йылға тиклем заявка илтеп тапшырырға.

Тыуған көн мәшәҡәттәре байтаҡ ваҡытты алды. Дәүләт йыйылышында даими эшләүсе депутаттарҙың һәр береһенең тыуған көнөн үткәреү традицияға ингән. Бер уйлаһаң, һәйбәт эш. Икенсе яҡтан, бер үк һүҙҙәр ялҡыта.

9 декабрҙә Нефтекамскиҙа ғилми конференцияла сығыш яһаным.

Һин хас та тулған айһың.
Балҡыйһың. Йылытмайһың.

7 декабрҙә «Башҡортостан»да, «Ағиҙел»дең 12-се һанында шиғырҙарым сыҡты. Гәзиттәге шәлкем менән байтаҡтар ҡотланы. Журнал әле яңы килде.

Тыуған көнөмдә
Аяҙ күгемдә
Яңы тыуған ҡыйырсыҡ ай түгел,
Балҡый мөлдөрәмә тулған ай.

Инде яйлап-яйлап кәмей башлар,
Ҡыйғасланыр ҙа ул

Яңынан тулыр.
Яңынан тыуыр.
Тик береһе
Һуңғы айым булыр.

«Башҡортостан»дағы шәлкемдә тәүге шиғыр – «Имән». Уны әллә ҡасан яҙғайным, тамамлай алмай ҡат-ҡат уҡып ҡараным. Аҙағы табылмай ҙа ҡуя. Уның өсөн Асҡар бүләмдең тыуыуы кәрәк булған икән:

«Сабырлыҡтар бир!» – тип
Һиңә һыйынам.
Асҡар бүләм миңә һыйынған.

Асҡарҙың ғүмере башланғанда «Имән» шиғыры бына шулай осланып ҡуйҙы.

Өфөләге ҙур йыйылышта Путин 1812 йылғы һуғышта француздар Мәскәү кремлен шартлатырға йыйынғанда был хурлыҡлы һәләкәттән тарихи ҡәлғәне башҡорттар ҡотҡарып ҡалған, тигәйне. Ул тексты табырға кәрәк. Үҙе бер бәләкәй генә поэма булырлыҡ бик ҙур ваҡиға бит.

Кремлде башҡорттар ҡотҡарған.
Данлы тарих ҡалған.
Ә бөгөн
Рәсәйҙе һуң нисек ҡотҡарырға?

Икенсе томымдағы тәржемәләр өлөшөнә байтаҡтары инмәй ҡалған: Лермонтов, Пушкин, әрмәндәр, сыуаштар, Бунин. Ғәзимдә лә тәржемә иткәйнем.

Дүртенсе томға инмәгән мөһим генә мәҡәләләр ҙә бар. Яңы шиғырҙар күп кенә йыйыла бара. Быларҙың барыһын да алтынсы том итеп тупларға кәрәк.

Баҡсала бер-ике көндә икенсе кеше булаһың. Донъялар яҡтырып, уйҙар нығыраҡ асылып китә.

Будучи Президентом Российской Федерации, на Госсовете в Уфе В.В. Путин сказал: “Тогда Башкирия поставила под ружье все свое мужское население, способное сесть на коня. И именно башкирская конница в составе отряда Кудашева предотвратила взрыв Кремля”.

Бындай юғары баһа, Рәсәй халҡы өсөн тарихи асыш дәрәжәһендәге фекер әйтер өсөн уны бөтә донъяға ишеттерер өсөн телмәрҙәге һәр һүҙҙе ил етәксеһе үҙе лә, уны әҙерләүсе белгестәр, тарихсылар менән берлектә ҡат-ҡат үлсәгән, тикшергән, әлбиттә.

Кремлде башҡорт яугирҙары ҡотҡарған. Бөгөн мәкерле көстәр Кремлде генә түгел, дәһшәтле СССР-ҙы шартлатты. Хәҙер Рәсәйҙе шартлатыу юлдарын эҙләйҙәр, илде тарҡатыу өсөн төрлө саралар әҙерләйҙәр.

Бөгөнгө Рәсәйҙе ҡотҡарыр көстәр ҡайҙа? Ватаныбыҙға француз ғәскәре ябырылған ул саҡта, хәҙер бөтә донъяның ҡомһоҙҙары берләшеп, илде баҫып алмаҡсылар, уны яңы баҙарға әйләндереп, халҡын ҡол итмәкселәр. Француздар менән һәм башҡалар менән һуғыш асыҡтан-асыҡ барған, кемдең дошман икәне ҡаршыңда күренеп торған. Хәҙер хәлдәр ҙә ҡатмарлы, һөжүм юлдары һәм ысулдары бик нескә. Күп эштәр аҫтыртын эшләнә, оятһыҙ рәүештә емерткес сәйәсәт, ағыулы нәсихәт алып барыусылар ҙа артҡандан-арта.

Илде һәләкәттән ҡотҡарыр көстәр. Элек халыҡ ополчениеһына берләшкән кеүек берләшә алырмы?

2012

12 ғинуар, 2012 йыл. Шаршамбы.

Иҫкесә яңы йылға ла килеп еттек. 31-дә өйҙә Фәриҙә, Лена туғаным Нәҙерғолова өсәүләп ултырҙыҡ. Иҫкесәһен больницала ҡаршы алырмын инде. 9-нан 10-на төндә ҡағыҙҙар менән ултырһам, ҡапыл өшөтөп алып китте, бик ныҡ ҡалтырата башланы. Нимәләр ябынһаң да йылынып булмай. Төрлөсә сәйҙәр ҙә эсеп ҡарайым. Фәриҙә «скорый» саҡырайыҡ, ти. Мин ҡаршы. Дежур врачҡа шылтыратып, уныһы ниндәйҙер дарыуҙы әйткәс, уныһы әлдә өйҙә булды. Шуны эскәс, йылына башланым, аҙаҡ бик ныҡ тирләттe.

Бик ныҡ ҡалтыратҡан саҡта баҫым 255/114, пульс 108 ине. Температура – 38,9. Сәғәт иртәнге алтыларға тиклем барҙы был тирләүҙәр.

Иртән туғыҙынсы яртыла Дамир килде. Эшкә инеп, хәлде аңлатып сыҡтым. Пушкиналағы больницаға шылтыратҡайным, главврачҡа. 301 палатаға һалдылар, бер кешелек. Таныш төйәк. КТ-нан үткәрҙеләр: воспаление легких. Пневмония. Шунан процедуралар башланды, кисә эшкә барып әйләндем. Врач Елена Рафаэловна

Баһаутдинова, бүлек мөдире Гөлнара Тимерхановна Ғарипова урамға сығыуҙы ҡәтғи тыялар. Шулай ҙа бөгөн нәшриәткә барып әйләнергә рөхсәт итәләр. Бишенсе томды тапшырырға кәрәк.

Баҡсала шул томдың корректураһы менән ултырҙым. Планда күләме 35 табаҡ, ныҡ ҡына артып киткән: 906 бит. Бер ни тиклем ҡыҫҡарттым. Тәүге биттәге фотоһын алыштырырға кәрәк.

Баҡсала икеһенән алтыһына тиклем булдыҡ. Артур менән ике тапҡыр шашлык ҡыҙҙырҙыҡ.

Яңы йыл алды осрашыуҙары.

Яңы йыл алдынан «Мицубиси» (полуджип) тигән машина алғайныҡ. Японияла йыйылған. Ҡара төҫтә, бик матур. Хаҡы ла бик матур: 1 млн 350 мең һум. Артур һәйбәт кенә йөрөтә башланы. Эшендә ярҙамы тейһен. Үҙебеҙ ҙә гел дәүләт машинаһында йөрөмәбеҙ бит.

Хәлдәр бына шулай, ниндәй генә ауырыуҙар, ауыр хәлдәр баштан үтмәне, бына бығыһына ла килеп юлыҡтым. Хәйерлегә булһын инде!

Әле блокноттарҙың 2000 йылдың 8 ноябренә килеп еткән дәфтәрҙе ҡарап сыҡтым. 2001 йылға еткерергә лә – етеп торор. Бер рәүешкә килтереп, ошо өлөштөң (1969–2000) дөйөм күләмен күҙ алдына килтерергә, шунан сығып, баҫтырыу мөмкинлектәрен эҙләргә кәрәк. Алда бик ҙур эш тора.

Блокноттарҙа әллә күпме шиғырҙар. Шуларҙың ҡайһы берҙәре менән ултырып алырға ла уй бар.

«Ағиҙел»дең 12-се һанында шиғырҙарым сыҡты. Хәҙер баҫырға тағы ла шәлкемдәр әҙерләйем.

Алла бирһә, бишенсе том сыҡҡас, шуға арнап ижад кисәһе үткәрергә ине. Презентация рәүешендә.

Бишенсе томды 11-дә тапшырҙым.

Яҙыусылар союзында эштәр һаман юлға һалынмай. Съезды һайлауҙарҙан һуң үткәрергә ҡушалар.

Әҙәбиәт, сәнғәт донъяһында ҡаршылыҡтар һәр ваҡыт тик ижади бәхәс рәүешендә булырға тейеш. Тик шулай.

Хәҙер бағзе берәүҙәр оятһыҙлыҡҡа барып, намыҫын юғалтып булһа ла, үҙен күрһәтергә, исемен тарихҡа индерергә тырыша. Геростраттар бөгөн дә бар.

Ләкин бысраҡ бәндәләр әҙәбиәтте бысратам тип, үҙҙәрен тағы ла нығыраҡ бысраталар.

Бер һыйыр көтөүҙе бысрата тигән һүҙ бар. Әммә әҙәбиәт көтөү түгел, уның төп йөҙөн, саф асылын бер нисә бысраҡ яҙыусы бысрата алмай. Улар үҙҙәренең нәжесенә үҙҙәре буяла.

19 ғинуар, 2012 йыл. Кесаҙна.

Больницала бер нисә шиғыр ҙа яҙылды. Ҡала хакимиәтен һайлау конкурсында булдым. Кисә депутаттар И.И. Ялаловты һайланы, «за» – 28, берәү тауыш бирмәгән. Егет йәш, матур, тәжрибәле лә. Ҙур ҡала проблемаларын яҡшы белергә тейеш. Һәйбәт кенә эшләп алып китһен инде.

Кисә эшкә барып әйләндем. Алдағы ике ҙур сара тураһында бүлек менән һөйләшеп алдым: мәктәп дәреслектәре комплекты буйынса Нефтекамскиҙа түңәрәк өҫтәл һәм комендант сәғәте буйынса парламент тыңлауҙары. Бынан тыш мәғариф министрлығы менән йәштәрҙе эш менән тәьмин итеү мәсьәләһе буйынса һөйләшеүҙе ойоштороу тора.

Кисә Яҙыусылар союзында идара ултырышына бара алманым. Съезды үткәреү тураһында һөйләшеү булырға тейеш ине. 16 мартҡа ҡуйғандар. Беҙ рәислеккә Наил Ғәйетбайҙы әҙерләй инек. Ситуация ҡатмарлы.

Яҙыусылар һәм яҙышыусылар. Хәҙер яҙыусылар исемен йөрөткән яҙышыусылар күберәк. Улар ғүмер буйы булған, әммә үҙ кимәлен белгән. Хәҙер дәғүәләр хәтәр. Шыр тилеләр үҙен гений итеп раҫламаҡсы.

Һәйбәт кенә барған каруан ҡапыл кире яҡҡа атлай башлаһа, иң аҙаҡта килгән аҡһаҡ ишәк иң алдағы юлбашсыға әйләнә. Хәҙерге тормошобоҙҙа ундай хәлдәр күп. Ләкин бындай «хәрәкәт» оҙаҡ дауам итһә лә, аҙағы буласаҡ. Шул саҡта донъялар буталмаһын.

Конкурс комиссияһында һөйләргә тура килһә тип бер нисә фекер теркәп ҡуйғайным. Һөйләүҙең кәрәге булманы. Яңы етәксегә барыбер керергә кәрәк.

Башҡорт халҡы күпме милләттәрҙе үҙенең еренә һыйындырған. Әле лә бер ергә йыйып, татыу йәшәйбеҙ. Ләкин башҡорт милләтенең мәсьәләләре уның проблемалары ғына түгел, республикалағы барлыҡ халыҡтың уртаҡ хәстәре булырға тейеш. Шул уҡ тел, шул уҡ мәғариф, ергә хоҡуҡ.

«Кеше эҙләйем!» – тигән боронғо философ.

«Талант эҙләйем!» – ти бөгөнгө әҙәбиәтсе.

«Булған таланттарыбыҙ күп, уларҙы һаҡлайыҡ, ситкә таратмайыҡ!» – тип ҡайғыра халыҡ.

Таланттар Өфөнән Мәскәүгә, Ҡазанға һ.б. ҡалаларға китә, Мәскәүҙәгеләре лә, башҡа яҡтарҙағылар ҙа сит илдәргә тарала.

Быуат башында (егерменсе)
Туҡай әйткән:
Тарта татарҙың йәштәрен
Рәмиевтар алтыны.

Хәҙер былай тиергә була:

Тарта Рәсәйҙең йәштәрен
Америка алтыны.

Ярар, Рәмиевтәр йыйған алтын халыҡ өсөн дә күп файҙалы эштәр эшләгән (матбаға, мәғариф һ.б.)

Ә бит ситтәге бай илдәрҙең алтыны беҙҙең йәштәрҙе тартһа ла, ул алтын Рәсәй өсөн бер яҡшылыҡ та эшләмәй, киреһенсә, беҙҙең байлыҡты үҙенә алыу өсөн бик оҫта һәм мәкерле пландарын тормошҡа ашыра бара. Шуға беҙҙән киткән йәштәребеҙ ҙә үҙ өлөшөн индерә.

Туҡайҙың бөйөкләгән, сәйәси зирәклеге бөгөн тағы ла нығыраҡ асыла бара. Бер быуат элек әйткән һүҙҙәре әле лә ни тиклем актуаль. «Эй Дума, Дума, Дума эшләгән эшең бумы?», йәки «Мәскәүҙәр алһа яҡаң» тигәндәре генә лә бөгөн ни тиклем урынлы!

Эштәгеләргә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен региональ компоненттың «Окружающий мир и мы» тигән дәреслектәрҙең төрлө мәктәптәргә һәм барса кластарға тәғәйенешлеләрен мәғариф министрлығы менән һөйләшеп, йыйып килтерергә ҡуштым.

Бик ентекләп ҡарап сығырға кәрәк: ҡануниәт күҙлегенән дә, яҙыусы ҡарашы менән дә.

Юғиһә, дәреслектәр заманға яраҡлы түгел тип дөйөм һүҙҙәр һөйләйбеҙ, әммә конкрет һәм ентекле анализ юҡ.

Конокрады и казнокрады. Они в России были всегда. Имена некоторых конокрадов (мәҫәлән, Шәкүр ҡараҡ) гремели далеко за пределами Башкортостана и Татарстана. Их били, устраивали самосуд. Сейчас конокрады действуют очень изощренно, их трудно поймать. А не пойманный – не вор.

Зато имена российских казнокрадов известны всему миру. Казнокрадство растет, особенно в кризисные периоды число наших оли-

гархов увеличивается 2-3 раза. Они не подвластны ни суду, ни самосуду. Возможно, когда-то грянет суд божий, но этого мы не увидим. И что останется к этому моменту от матушки – России?

25 ғинуар, 2012 йыл. Шаршамбы.

Кисә компьютер томографияһын үттем. Барыһы ла һәйбәт тип күрһәткән. Бөгөн, Алла бирһә, инде шифахананан сығам. 16-сы көн китте. Үпкәгә һыуыҡ тейгәнме ни – бынығып та күрҙек.

Кисә Союздан Альбина, Фидалия, Вәсилә килеп киттеләр. Мин киткәс, йәм ҡалманы, көлөп һөйләшергә лә ярамай, тиҙәр. Кире ҡайтырға өгөтләйҙәр. Уныһы була торған хәл түгел инде.

Больницала башта яҙышып булмай ине. Аҙаҡ бик һәйбәт эшләп алып киттем. 15-тән артыҡ эреле-ваҡлы шығырҙар яҙҙым. 20 ғинуарҙа ғына – биш шығыр. Ундай көндәр һирәк була. Ким Әхмәтйәнов, Фәнүзә Нәҙершина, Ләлә Биишева тураһында мәҡәләләрҙе лә әҙерләп өлгөрҙөм. Үҙенсә ижад йортона барғандай булды инде.

30 ғинуар, 2012 йыл. Дүшәмбе.

Бына яңы йылдың тәүге айы үтеп тә китте. Йоманан бирле баҡсалабыҙ. Бында Өфөнән күпкә һыуығыраҡ: төндә 30 градсутан артып китә. Бөгөн Шамонинонан тура эшкә.

Көндәлектәр менән булам. Луиза баҫып килтергән өлөштө – 1988–1997 – ҡарап сыҡтым: 280 бит. Һәйбәт баҫҡан. Тик күләм бик ҙурайып китер микән инде?

Фекерҙәр, күҙәтеүҙәр байтаҡ. Халыҡҡа еткереп, һәр хәлдә, баҫма хәлендә һаҡлап ҡалдырғы килә. Ныҡ ҡына икеләнеп тә ҡуям.

Тамара Ғәниеваның «Уйсандар, һеҙгә өндәшәм» (2009) тигән китабын ҡарап сыҡтым. Үҙе яҙып биргәйне. Уҡырға форсат булмаған. Шулай ҡыҙыҡлы ғына китаптарҙы ла күрмәй ҡалабыҙ.

Тамараның тейешле баһа ала алғаны юҡ.

Больницала беҙҙең өсөнсө ҡатта Нәжип Асанбаев менән Суфиян Поварисов дауалана ине.

Нәжип ағай туҡһанды уҙҙы, Суфиян ағай шуға етеп килә, Нәжип ағай юбилей кисәһендә бик һәйбәт ине, әле ныҡ бирешкән.

Ҡартайтмай килһәсе ҡартлығым! Был донъянан һөйрәлмәйсә генә китергә ине!

Быйыл 1932 йылғыларҙың юбилейҙары. Ә улар беҙҙә башҡа тиҫтерҙәр менән сағыштырғанда иң күптәр.

«Ағиҙел»дәге исемлек буйынса бына улар: Сулпан Иманғолов (1.01.1932), Ихсан Әхмәтйәнов, Шакир Бикҡолов, Ким Әхмәтйәнов, Рәми

Ғарипов, Рафаэль Сафин, Илшат Йомағолов, Кәбир Аҡбашев, Мөслим Әбсәләмов, Рәмил Хәкимов, Рәйес Низамов, Фәрит Богданов, Александр Филиппов, Фәнил Мансуров, Йыһат Солтанов, Әнүр Вахитов – 16 әҙип.

«Башҡортостан»ға Ким Әхмәтйәнов тураһында мәҡәлә яҙып бирҙем. ИИЯЛ-да 30 йыл эшләгән ғүмеремдең байтаҡ дәүере уның менән бер бүлмәлә ултырып эшләп үтте.

Ләлә Биишева апай тураһындағы бәләкәй генә мәҡәләмде лә шул ғәзиткә бирҙем. Ләлә апай ҙа Рәми ағайҙың ҡорҙашы ла, класташы ла бит.

Шуныһына иғтибар иттем: 32-се йылғыларҙың бик күптәре менән яҡындан аралашһам да, байтаҡтарына ниңәлер ағай тип өндәшмәгәнмен: Әнүр, Ким, Илшат, Кәбир, Фәрит, Шакир, Ихсан, Мөслим, Саша, Фәнил, Сулпан, Рәмил. Әлбиттә, Рәми Ғарипов менән Рафаэль Сафин мотлаҡ ағайҙар ине.

Был аҙнала үҙемдең томдарҙы алырға, «Заветное слово»ны урынлаштырырға. Эштә дәреслектәрҙе йыйырға тейештәр ине, шуларҙы ҡарай башларға.

Бишенсе том икенсе корректураға китә алмай әле. Мартта өлгөртөргә ине. Презентация үткәрмәксемен, был ваҡиға ундай кисәгә лайыҡлы тип уйлайым. 3 апрелгә «Аҡ тирмә»нең планына индерелде. Кисә шул кисәнең план-схемаһын күҙ алдына килтерергә тырышып, бер биткә һыҙғылап ҡуйҙым. Структураһын томдар буйынса төҙөмәксемен. Бындай кисәнең әле беҙҙә булғаны юҡ һымаҡ.

6 февраль, 2012 йыл. Дүшәмбе.

«Урал батыр» меңәр йылдар буйына йәшәгән, әммә Мөхәмәтша Буранғолов 1910 йылда яҙып алғанға тиклем ниңә ҡағыҙҙарға теркәлмәгән? Был хаҡта, йәғни был эпосын яҙып ҡуйыу тураһында башҡорт бәлки уйлап та ҡарамағандыр. Йыр, әкиәт, эпос халыҡтың телендә көн дә булмаһа ла (ә тотош ил күләмендә алғанда бәлки көн һайындыр) ҡабатлана, уның хәтерендә йәшәй. Хатта шәжәрәһен теркәргә кәрәк икәнлеген дә күптәр онота. Улар быуындан-быуынға телдән, хәтерҙән тапшырылып, мәңге йәшәр, мәңге һаҡланыр һымаҡ тойола.

Әммә бер нәмә лә мәңгелек түгел. Һәм милләттең тарихи яҙмышы, рухи тәғәйенләнеше иң яуаплы мәлдә Буранғолдарҙы үҙе тыуҙыралыр, Кейекбаевтарҙы, Кузеевтарҙы, уларға тиклем Фәхретдиновтарҙы, Өмөтбаевтарҙы, Вәлидиҙәрҙе ғилем донъяһына сығаралыр.

Башҡорт тарихын өйрәнеү, теркәү юлында рус ғалимдары ҙур эштәр эшләгән, ләкин һәр милләт үҙенең тарихын үҙе яҙырға тейеш тигән һүҙҙәрҙең хаҡлылығын тарих үҙе раҫлай. Һәр милләттең рухи хазинаһында ошо милләт кешеһе генә аңларлыҡ һәм ҡәҙерләй белерлек үҙенсәлектәр була.

3-дә йома көн Ләлә Бейешева апайҙың 80 йәшлеге «Нефтяник»тың өсөнсө ҡатында бик ихлас мәжлес булып үтте.

80 йәшендә шулай арымай халыҡ араһында эшләп йөрөү ҙур бәхет инде ул. Бәлки ҙур яуаплылыҡ тойоу ҙа кешегә көс өҫтәйҙер.

Шәмбе, 4-дә, Нефтекамскиға 1-се лицейҙың 20 йыллығына барҙым. Уның директоры Гәрәев Вячеслав Юрьевич беҙҙең депутат, беҙҙең комитет ағзаһы. Тәжрибәле педагог, оҫта ойоштороусы икәнлеге эштәрендә күренә. Шуныһы ла бар: талантлы балалар тәрбиәләргә бындағы система үҙе ҙур мөмкинлектәр бирә. Ҡала мәктәптәренән күпме һәләтле балалар 7 кластан ошо лицейҙа уҡый башлай. Бер ғаиләнән 4 бала, 3 бала МДУ-ны бөтөрөп, төрлө яуаплы эштәрҙә эшләп йөрөүҙәре тураһында ата-әсәләр сәхнәнән үҙҙәре һөйләне.

Ләкин кисә артыҡ оҙонға – 4 сәғәткә һуҙылып китһә лә, унда Башҡортостан телгә лә алынманы тиерлек, минең сығыштағы шиғырҙан башҡа башҡортса бер генә һүҙ ҙә яңғыраманы. Күп уҡыусыларҙың, бәлки күпселегенеңдер башҡа ҡалаларҙағы престижлы юғары уҡыу йорттарынан һуң бында, йәғни Нефтекамскиға әйләнеп ҡайтмауҙары тураһында был кисәлә йыш ҡына әйттеләр. Уларҙа Башҡортостанға һөйөү, уға тоғролоҡ тәрбиәләмәгәс, улар ниңә ҡайтырға тейеш, уларҙы тыуған ер тойғоһо иленә тартып тормай бит.

14 февраль, 2012 йыл. Шишәмбе.

Рәми ағайҙың 80 йыллығына арнап республика буйлап күп кенә саралар бара. Салауат районында беҙҙең яҙыусылар һәйбәт йөрөп ҡайтҡандар. 9-да Башҡорт академия театрында «Февраль. Буран» тигән спектакль булды. Авторы Зөһрә Бураҡаева. Матур эшләгәндәр. Ағайҙы ҡайһы бер эпизодтарҙа артыҡ хәрәкәтсән итеп күрһәтәләр ҙә, шул заман мөхите һәйбәт бирелгән. Бигерәк тә йәштәргә кәрәк.

Түңәрәк өҫтәлдең түре юҡ тиһәләр ҙә, бар шул уның түрҙәре, түрендә ултырыусы түрәләре.

Түңәрәк ер шарының да түрендә ултырыусы түрәләре бар. Түңәрәк ер шарының һаҙлыҡтары бар, үрҙәре бар, түрҙәре бар, гүрҙәре бар.

19 февраль, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

15-дә БАГСУ-ҙа Путиндың һуңғы мәҡәләһе («Строительство справедливости…») буйынса түңәрәк өҫтәлдә сығыш яһаным. Барлыҡ кешелек тарихы – ғәҙел тормош төҙөргә ынтылыу.

Йәмғиәттең ҡаҙаныштарын матди яҡ менән генә («качество жизни – не только материальный достаток, главное – духовность») сикләргә ярамай. Ельциндың «Культура подождет» тигәнен хәҙерге йәштәр белмәй. Ил хужаһының шулай ахмаҡ екергәне хаҡында һөйләһәң, йәштәрҙең байтағы бының менән килешергә лә мөмкин. Сөнки улар өсөн иң мөһиме ниндәй юл менән булһа ла аҡса эшләү. Рухиәт, әхлаҡ тураһында ҡайғыртҡандары аҙыраҡтыр.

Хәҙерге Рәсәйҙә мәҙәниәттең хәйерсе хәлендә булыуы. Театр, филармония, клуб, китапхана һ.б. хеҙмәткәрҙәре әлеге эш хаҡына нисек йәшәргә тейеш?

17-дә Әбйәлил районына барып әйләндек. Иртәнге 7-лә киттек, төнгө 12-се яртыла ҡайттыҡ. Ҡабул итеү үткәрҙем, Азамат Юлдашбаев та ҡатнашып ултырҙы. Ингән кешеләрҙең күбеһенең хәлдәрен тыңлап, тағы ла йөрәк һыҙлай инде. Күбеһенә ярҙам итә алмауың бигерәк тә ҡыйын.

Әлмөхәмәт мәктәбендә Рәмил Ҡолдәүләттең исемендәге конкурс еңеүселәрен ҡотлау. «Йәшлек» үткәрҙе. Артур Дәүләтбәков, Мөнир Ҡунафин булды. Ныҡ балҡыштар бик күренмәне. Морат Солтанов тигән шағирҙың 2001 йылда Яңауылдағы семинарҙа һәйбәт баһа алғандан һуң яңынан күренеүе һәйбәт.

Параллель донъя тураһында төрлөсә фараздар. Аҡылдан яҙған аҡыллы зәғифтәрҙең яҙмышы шундай донъя түгелме ни? Уларҙың бит беҙҙең ҡалыптарға бөтөнләй тап килмәгән үҙ мөхите бар. Улар тере көйө теге донъяға киткән, параллель донъяла йәшәйҙәр. Улар исеменән яҙыусылар төрлөсә көндәлектәр һ.б. яҙһалар ҙа,берәү ҙә улар булып уйлап ҡарай алмай бит.

12 март, 2012 йыл. Дүшәмбе.

27 февралдә Йәштәр театрында минең «Хазина» поэмаһы буйынса спектакль булды. Труппала яңы артистар бар. Тамаша һәйбәт килеп сыҡты. Залда БДУ студенттары ине.

10 мартта был тамашаны БСТ күрһәтте. Минең йомғаҡлау һүҙенең иң кәрәкле өҙөгөн алғандар.

Баҡсала 3 көн булдыҡ. Рәми ағайҙың кисәһенә сығышымды әҙерләнем. Ағайҙың кисәләрендә инде нисәнсе ҡат сығыш яһайым.

Яңы һүҙ табыуы еңел түгел. Шулай ҙа ҡабатламаным, ыҡсым да булған һымаҡ.

Сценарийҙың (2 апрелдәге ижад кисәһенә) һуңғы вариантын эшләп сыҡтым, кисә баҫырға бирҙем. 19-да Рәми Ғариповтың тантанаһы үткәс, үҙемдең кисәгә ныҡлап тотонорға кәрәк.

Бынан байтаҡ йылдар элек «Атай мине атҡа мендермәне» тигән шиғыр яҙғайным. Шуны кисәм өсөн эҙләгәйнем, бер ҡайҙан да таба алманым. Томға инмәгәнме? Яңынан яҙҙым. Элеккеһенең башы менән аҙағы ғына ҡалды.

Һайлауҙарҙан һуң (4.03) Путин менән Медведев халыҡҡа күберәк спорт кейемемдә, саңғыла һ.б. ял-байрам шарттарында күренәләр. Эште бик ҡаты башлайҙар.

23 март, 2012 йыл. Йома.

16 мартта сираттан тыш 16-сы съезд үтте. Идара рәйесе һайлау. Былтыр апрелдә һайланған Азамат Юлдашбаев бик һәйбәт эшләй башлағайны, устав буйынса соҡсоноп йөрөнөләр. Минюстан уведомление килгәс, ноябрҙә принципиаль рәүештә Азамат китте. Ҡәҙим Аралбаев и.о. булып эшләне.

Был съезд – мәкерҙәрҙең һәм һуҡырҙарҙың шашыуы.

Дәүләт йыйылышының кисә илленсе ултырышы үтте. Тағы ла ун самаһы ҡала. Был саҡырылыштың һуңғы йылын башлап ебәрҙек.

Һуңғы ваҡытта төрлө саралар – форумдар, түңәрәк өҫтәлдәр һ.б. бик йышайҙы.

Ижад кисәһенә әҙерләнәм. Киләһе аҙна уртаһына 5-се томды өлгөртмәкселәр.

Хәҙер асыҡлыҡ, үтә күренмәлелек талабын ныҡ ҡуялар (открытость, прозрачность). Сәйәсәттә, ижтимағи мөнәсәбәттәрҙә, дәүләт кимәлендәге һәм көндәлек мәсьәләләрҙә был талаптар, моғайын, урынлылыр. Ләкин сәйәсәт бер ваҡытта ла асыҡ, үтә күренмәле булмай, уны ахмаҡтар алып бармаһа, әлбиттә.

Хәҙерге сәнғәттә (дөрөҫөрәге, сәнғәт исеменә дәғүә итеүсе хаяһыҙҙарҙа) иһә асыҡлыҡ, үтә күренмәлелек саманан ашыу ғына түгел, оятһыҙ шәрәлеккә килтерҙе. Матурлыҡты данлау өсөн уны яланғасландырырға ярамай.

Лампочканы себендәр сыбарлай, ә ул яҡтыртыуын белә! Сөнки уның вазифаһы изге – нур таратыу. Себендәрҙең бар эше – донъяны бысратыу.

Туҡһан туғыҙлылар заманы. Хатта тауарҙарҙағы хаҡтар ҙа шулай бит, теүәл һанға еткермәйенсә, 99-ҙа туҡтаталар. Арзанираҡ, йәнәһе.

Улайға китһә, Аллаһтың изге исемдәре лә 99 бит.

13 апрель, 2012 йыл. Йома.

5-нән больницаламын. Халыҡ күп – диспансеризация заманы. Тәүге тапҡыр күрше менәнмен: Ауырғазы хакимиәте башлығы Марат Ишемғолов. Әҙәбиәтте, сәнғәтте яҡшы белә. Рифмалап һөйләшергә ярата.

2-дә башланырға тейеш ине был дауаланыуҙар. Кисә беҙҙең халыҡ ҡайтып бөттө тиерлек. Минең тағы ла пневмония – киләһе аҙна ятырға тура киләсәк. Воспаление тигәндәре бик бәйләнсек нәмә икән.

Ғинуарҙа ғына ике аҙна ятып сығылғайны. Дауалап бөтөрмәгәндәр, күрәһең.

Шиғри кисәгә әҙерлек бик ҙур көстө һәм ваҡытты алды. Сценарийын үҙем яҙҙым, баштан аҙағына тиклем үҙем алып барҙым. Ижад кисәһе, ысын ижад байрамы булһын тип уйлағайным, нәҡ шулай килеп сыҡты. Һайланмаларымдың биш томда сығыуын билдәләмәү үҙ ижадыңды ла, бөгөнгө әҙәби тормошто ла баһалап еткермәү булыр ине. Китап туйына саҡырғайным, уҡыусыларымдың өмөтөн аҡланым һымаҡ.

Зал («Нефтсе» һарайы, 2.04.12) шығырым тулы булды. Азат Айытҡоловтың, Редик Фәсхетдиновтың, Миңлеәхмәт Ғәйнетдиновтың уйнауҙары, Ришат Вахитов, Фәрит Бикбулатовтың, Рәүилә Мәсәлимованың, Йәмил Әбделмәновтың, Римма Амангилдинаның, Баязит Байназаровтың, Юнир Һағынбаевтың минең һүҙҙәргә йырлауҙары, Гөлшат Гайсина менән Фирғәт Ғариповтың «Мөхәббәт диалогы», минең 15-ләп шиғыр уҡыуым, «Илемдә илемде һағынам» фильмының ҡыҫҡартылған (15 минутлыҡ) вариантын күрһәтеү бер-береһенә матур үрелеп барып, бер тынала үтте. Рәсми төҫ, ниндәйҙер ҡотлауҙар кисәнең яңғырашын, ихласлығын юйыр ине. Шуға баштан уҡ бынан ҡасып бик дөрөҫ эшләгәнмен. Тәүге өлөштә Зәки Әлибаевтың, икенсеһендә Азамат Юлдашбаевтың бик ыҡсым телмәрҙәре шиғри фәлсәфи моң менән ҡушылды.

Бер кем дә ҡотлап һүҙ әйтмәйәсәк, адрес-фәлән тапшырыу булмаясаҡ тигәйнем дә, халыҡты тыйып буламы ни? Байтаҡтары сәхнәгә ябырылды, һүҙ әйтеүселәр ҙә булды. Сибайҙан Хәйҙәр Тапаков менән Хисмәт Юлдашевтың сығыштары ла нәҡ үҙ урынында ине. «Китап»тарҙың ҡотлауы (директор Зөфәр Тимербулатов, баш мөхәррир Зөлфиә Ҡарабаева, барлыҡ биш томымдың һәм тағы ла башҡа китаптарымдың бик хәстәрлекле, һөйкөмлө редакторы Әлфиә Теләмованың) сәхнәгә күтәрелеп, берәм-берәм томдарҙы, Әлфиә

бишенсеһен бүләк итеүе кисәгә йәм өҫтәне. Рәхмәт уларға. Рәхмәт барыһына – сәхнә оҫталарына, эркелешеп килгән уҡыусыларыма һәм, әлбиттә, башҡорт милли-мәҙәни үҙәге «Аҡ тирмә»нең ошо кисәһен миңә бүләк иткән Ләлә апай Биишеваға.

«Башҡортостан»да, «Йәшлек»тә, «Киске Өфө»лә һүрәттәр менән бик матур баһалар баҫылып сыҡты. ПТС яҙҙы, моғайын, TV-нан күрһәтерҙәр.

Төрлө көнсөлдәргә, яһилдарға, боғаҙ ярыусыларға тик шулай ғына яуап биреп була.

Аҙаҡ ҙур булмаған табын ойоштороҙоҡ. Күберәк артистар булды. Унда ла һүҙ ижад, сәнғәт тураһында барҙы.

Был дәфтәргә тотонорға форсат булманы. Пушкин урамындағы был больницала тәүге тапҡыр күрше менән йәшәлде, шуға яҙышып булманы. Бер аҙнанан артыҡ ятам. Былай илһамһыҙ үтмәй торғайны.

19 апрель, 2012 йыл. Кесаҙна.

13 апрелдән – йоманан, бүлмәлә бер яңғыҙым. Ошо дәфтәрҙе уҡып сыҡтым, көндәлектәремдең киләсәге тураһында уйландым. Улар баҫылып бөтөп бара инде. Әҙерҙәре лә бик күп йыйылып китә.

Әлбиттә, нисек тә сығарыу юлын да табып булыр ул. Ләкин бындай баҫма беҙҙә бөтөнләй ғәйре тәбиғи – йәғни, әҙәм күрмәгән хәл тыуҙырасаҡ. Һәм мин Рәми ағайҙан һуң бындай ихлас көндәлектең булғанын да белмәйем. Бәхетһеҙлеккә ҡаршы. Бабичтыҡылар һаҡланмаған. Мостай ағайҙыҡылар ҙа ҡыҙыҡлы, бик фәлсәфә, әммә унда әҙәбиәттең панорамаһы аҙыраҡ. Назар ағайҙың көндәлектәр яҙғанын беләбеҙ, әле лә яҙып барыусылар бар, үҙҙәренән ишеткәнем булды.

Беҙҙә Туҡайҙарҙан башлап иҫтәлектәр баҫыла килде, үҙенсә мемуар әҙәбиәт донъяға тыуҙы. Ләкин уларҙа тормош ваҡиғалары, әҙәби күренештәр күп дәрәжәлә эшкәртелеп, үҙенсә фильтрҙан үткәреп бирелә. Ә мин көндәлектәремдә яҙмышымдағы ваҡиғалар нисек булған, нисек бар – шул көйө бирергә теләйем. Бында уның үҙенсә ҡиммәте буласаҡ.

Был ҡәләм минең һуңғы ҡәләмем,
Был сәләм минең һуңғы сәләмем.

Быйыл яҙ бик етеҙ килде. Ҡапыл 20–25 градусҡа тиклем йылытып ебәрҙе. Үҙенсә аномалия. Шуға бигерәк тә ялан йылғалары,

үҙҙәре ваҡ булһа ла, ҙур ташҡындар, ҙур бәлә-ҡазалар тыуҙырҙы. Күп кенә райондарҙа күп йорттарҙы һыу баҫты, халыҡҡа ҙур ауырлыҡтар килде: йорт йыһаздары зарарланды, мал-тыуар менән ҡыйынлыҡтар тыуҙы һ.б.

Ваҡ йылғалар быйыл ҡапыл ташты,
Донъяларҙы ниндәй аҡтарҙы!
Ваҡ халыҡтар ваҡ йылғалар һымаҡ,
Асыуына теймә ваҡтарҙың!

Тормошта вағы-эреһе юҡ. Һәр береһенең үҙ урыны, һәр береһе үҙ-ара айырылмаҫлыҡ булып бәйләнгән. Берәй вағыраҡ хәлде етди баһалап еткермәү бик ҙур бәләләр тыуҙырырға мөмкин.

22 мартта бүләсәребеҙ тыуҙы. Йомаға ҡаршы тыуҙы. Бәхете булһын, ата-әсәһенең тәрбиәһен күреп үҫһен. Аталары Ассель тип исем ҡуштылар. Тик бер айы ла тулмаҫ борон ауырып китте. Үпкәһенә һыуыҡ тейгеҙеп, әле больницала ята. Шылтыраттырып, айырым палатаға күсерҙем. Әле йүнәлеп килә тип, Сабина рәхмәттәр әйтеп, ҡыуанып шылтырата.

Шаһнамә!

Шаһ кем? Шаһ нимә?

Хакимдәргә кәңәш биргәндәр,

Шаһтарға аҡыл өйрәткәндәр,

Ғәҙел батша тураһында хыялланғандар.

Хакимдәргә аҡыл өйрәтеүҙең файҙаһы юҡ тиерлек.

Башһыҙ башлыҡтарға аҡыл өйрәтеп, күпме ҡыйыуҙар башһыҙ ҡалған.

Минең «Хазина»ны Йәштәр театры репертуарға ҡуйған. БДПУ, лесотехникум менән һөйләштем.

21 февралдә «Хазина» спектаклдәре Нефтекамскиҙа, Бөрөлә һәйбәт үтте. Бөрөгә Зөфәр Вәлит, Хисмәт Юлдашев бергә барҙыҡ.

20 апрель, 2012 йыл. Йома.

Кисә көнө буйы бер специалисты-профессорҙы көттөләр. Килмәне. Көн бушҡа үтте. Сығып китеп булманы.

Баҡсаларҙы ҡыҙырып керҙем. Бер матурлыҡ артҡан. Күлдең боҙо йәмһеҙ ҡап-ҡара булып ярылып ята ине. Ireп бөткән. Байтаҡ балыҡ күрҙем. Ниңәлер ауыҙҙарын һыуҙан сығарып тын алалар. Һауаға һыуһағандармы? Ике өйрәк йөҙөп йөрөй. Бөрөләр асылды.

Көндәр бик йылы. Ҡайһы баҡсаға барма–арбала ятҡан йәки атлай башлаған балалар күп. Донъя йәмләнә.

Был юлы больницала әллә ни эш ҡырып булманы әле. Дауаланыу былай ныҡ барҙы. Хроническая пневмония тип ҡуйҙылар. Даими ҡымыҙ эсә башларға кәрәк. Бәлки Талҡаҫҡа барырға тура килер.

Йәйге ялға ике ай ҡалды. Осона сығаһы эштәр бик күп. Иң мөһимдәрен өлгөрөрмөн тип уйлайым.

Кисә бик ныҡ эс бошто. Халыҡ тулып торған баҡсала бер яңғыҙым һымаҡ йөрөйөм. «Одиночество в толпе» тиһәм, артыҡ шаштырыу булыр, ләкин йөрәкте әллә ниндәй һағыштар ҡыҫып ала.

Ярар, барыһынан тынысланып, яҡындарымдан ситләшеп булһа ла эшкә сумырға кәрәк.

9 май, 2012 йыл. Шаршамбы.

Бөгөн Еңеү байрамы. Кисә баҡсанан ҡайттыҡ. Асҡарҙы ла мунса индерҙек. Аталары Асселде лә сабындырғандар, 40 көнлөк ҡыҙыҡай.

Еңеү көнө барыбер алыҫлаша бара. Элек йырҙарҙы күҙ йәше менән тыңлай, фронтовиктарға күҙ йәше аша ҡарай торғайныҡ. Йылдан-йыл кисереш кәмей. Хәҙерге 15–20 йәштәгеләрҙә ул тойғо бөтөнләй самалылыр инде.

Һуғыш уларҙың шәхси яҙмышына бөтөнләй ҡағылмай тиерлек. Беҙҙекендә лә һыҙланыуҙар-тулҡынланыуҙар кәмегәндән-кәмей. Һуғыштан ҡайтҡан яҡын кешеләребеҙ ҡалмай бара тиерлек. «Әсәләр көтәләр улдарын» – был хәсрәтле хәлдәр хәҙер йырҙарҙа ғына тороп ҡалды. Һуғыш яңы быуындарҙың шәхси яҙмышынан алыҫлаша. Һуңғы тулҡынланып кисереүселәр беҙ һәм беҙҙән һуңғы, беҙгә яҡын заман кешеләре булыр, моғайын. Йәлап-йәлап ул халыҡ хәтерендә беренсе донъя һуғышы, революция, граждандар һуғышы һымаҡ тарих ҡына булып ҡалыр, уның хәҡиҡәтен, бөйөк ваҡиға икәнлеген боҙоп аңлатыуҙар ҙа арта барыр. Ләкин Бөйөк Еңеү илебеҙ тарихында барыбер Ватан һәм донъя яҙмышын хәл иткән ваҡиға булып мәңге ҡаласаҡ.

1812 йылғы Ватан һуғышын да ил онотмай бит, әле хәтерен ил нығыраҡ яңырта.

Больницанан сыҡҡас, Урал аръяғына онотолмаҫлыҡ оло сәфәр. 24-дә Асҡарҙа граждандарҙы ҡабул иттем. Унан һуң Баймаҡ яғына юлландыҡ. Ике район сигендә ғәжәп ихлас ҡаршы алдылар. Луиза Дәүләтшина шул тирәләге ауылдарҙың китапханасыларын йыйған, шишмә буйында бик матур табын әҙерләгәндәр. Ундағы байрам оҙаҡ

барҙы. Шунан Граф күленә киттек. Унда район хакимиәте етәксеһе Илшат Хәмит улы Ситдиков та булды. Дәртләнеп эшләп йөрөй. Уның районды элек етәкләгән сағында ла бер йәй бик матур аралашып ҡалғайныҡ, Ирәндектә Йәнгүзәйҙәргә күтәрелеп йөрөгәйнек. Әле лә ихлас һөйләшеп ултырҙыҡ.

Иртәгеһенә, йәғни 25 апрель, Баймаҡ интернат-мәктәбендә бик йөкмәткеле осрашыу. Мәктәп бындағы рухи үҙәктәрҙең береһе, бай традицияларҙы тупланған.

Шул уҡ көндө Баймаҡтың район мәҙәниәт йортонда бығаса ғүмерҙә күрелмәгән тантана: татыу ҡәйнәләр һәм килендәр байрамы. Ауылдарҙан егерменән артыҡ ҡәйнәне һәм уларҙың уңған, хәстәрлекле килендәрен саҡырғандар. Хөрмәтләп сәхнә түрендә ҡәйнәләр ултыра, яндарында килендәре баҫып тора. Татлы-татлы һүҙҙәр менән ҡотлауҙар, рәхмәттәр әйтеп, бүләктәр тапшырыуҙар. Саҡырылғандар үҙҙәре лә оҫталыҡтарын раҫлап, сәхнәнән төрлө ҡул эштәрен күрһәтте, күптәре бик матур сығыш яһаны, һүҙҙәрен үҙҙәренең шиғыры менән әйтеүселәр ҙә булды.

Аҙаҡ минең хәҙистәрҙе яттан һөйләүселәр араһында конкурс та булып алды. Сәхнә түрендәге ҡатындарҙың барыһына ла китаптарымды, хәҙистәремде бүләк итеп тараттым.

Быуындар бәйләнеше – тормоштағы ышаныслы үҫештең ныҡлы нигеҙе. Ғаилә тәрбиәһе, татыулыҡ тураһында телдән дә, матбуғатта ла һүҙ күп әйтелә. TV-ла быны ҡабатлап тора (Үҙәк TV түгел, әлбиттә). Ә баймаҡтар рухи, ғаилә, ырыу бәйләнештәрен нығытыуҙың ниндәй һәйбәт яңы сараһын тапҡандар. Бындай эштәр, әлбиттә, Луиза Ҡаһарман ҡыҙы Дәүләтшинаның (район үҙәк китапханаһы етәксеһе, райондың ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы рәйесе), шул зирәк ҡатындың хеҙмәттәре. Ул ойошторған башҡа саралар ҙа бик фәһемле, үрнәк булырлыҡ.

Үҙемдең сығышымда был бик кәрәкле тәжрибәне республика буйлап таратырға кәрәклеге тураһында әйттем.

Был сәйәхәт тураһында Зөфәр Вәлит бик матур шиғыр яҙған.

Осрашыуҙарҙы ойоштороуҙа Хәйҙәр Тапаков үҙәктә булды, бик ихлас тырышып йөрөнө.

26-да Йәштәр театрында «Хазина» спектакле үтте. Йәштәр оҫтарғандан-оҫтара бара. Октябрь Вәлитовты саҡырғайным, бик оҡшатты.

Тамаша алдынан театрҙың бер бүлмәһендә Архангель районы Тирәкле ауылынан килгән уҡыусылар һәм уҡытыусылар менән осра-

шыу. «Башҡортостан» гәзитенә килгәндәр, редакция һорағайны. Ихлас тыңланылар, һорауҙар бирҙеләр. Китаптарымды бүләк иттем.

27-дә Мәскәүҙә Башҡортостан көндәре башланды. Чартер рейс менән иртән остоҡ, ҡунаҡханаға («Останкино») йоҡларға ғына ҡайттыҡ.

Ҡоролтайҙан беҙ өсәү булдыҡ: Ҡотлогилдин, Үтәшева, мин. Туп-тура «түңәрәк өҫтәлдәргә» киттек. Наил Закирович – предпринимателдәргә, Римма Үтәшева – һаулыҡ һаҡлау буйынса. Мин «Департамент семейной и молодежной политики города Москвы» тигән ойошмала патриоттар һәм граждандар тәрбиәләү буйынса түңәрәк өҫтәлдә булдым. Фекер алышыуҙа сығыш яһаным. Министр Ғаязов та һөйләне. Билдәле хәрбиҙәр, генералдар булды. Беҙҙең министр Иванюта менән уларҙың бер етәксеһе алып барҙы. Барыбер шул элеккесә самоотчеттан ҡотола алмайҙар. Элек трибунаға менеп лаф ороналар, хәҙер ултырып дөйөм һүҙ йәки һандар теҙмәһе һөйләйҙәр. Исемен «түңәрәк өҫтәл» тип үҙгәрткәндән генә есеме, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙгәрә һалып бармай.

Төп тантаналар Халыҡ-ара музыкаль үҙәк тигән яңы бинала (Светлаков исемендәге) барҙы. Бик заманса төҙөлгән. Алдында Ейәнсуралар менән Күгәрсендәрҙең тирмәһе. Ҡотлогилдин менән икеһендә лә иркенләп ултырып сыҡтыҡ. Бындағы осрашыуҙарға Мәскәүҙәге яҡташтарыбыҙ айырыуса ҡыуанды. Мең кешенән артыҡ тамашасыны һыйҙырыусы залда концерт барҙы. Бөтә халыҡҡа ла фуршет ойоштороҙолар. Бик матур күргәҙмәләр, көнкүреш әйберҙәре менән таныша алдылар. «Останкино» ҡунаҡханаһына йоҡларға ғына барҙыҡ. 28-дә барыбыҙ ҙа кире Өфөгә остоҡ. Тура баҡсаға ҡайттым.

Көндәр тиҙ үтә, бик күптәре бушҡа үтә, ваҡыт әрәм була. Ә бит ваҡыт лимиты йылдан-йыл нығыраҡ ҡыҫа. Көндәлектәр менән эш һаман да һуҙыла. Мотлаҡ сығарып ҡалдырырға кәрәк, әлбиттә. 150–200 данала иң сығымһыҙ баҫмала булһа ла. Ҡайһы саҡта кәрәклегенә шикләнеп тә ҡуям. Ләкин был тиклем мәғлүмәттәрҙе – әҙәбиәттең үҙенсә ҡырҡ йылдан ашыу хроникаһын барыбер һаҡлап ҡалырға, уҡыусыларға еткерергә ине шул.

Беҙҙең БСТ-ла «Пора разобраться» тигән тапшырыуҙар булып тора. Актуаль ғына темалар тураһында бер һөйләшеүҙә барыһын да әйтеп булмай, әлбиттә. Яңыраҡ ҡала башҡорттары тураһында һүҙ барҙы. Алып барыусы Азамат Әлмөхәмәтов ҡала башҡорттары бер ниндәй сәнғәт тыуҙырмай тигән яҡҡа шаҡара. Хатта бөгөн башҡорт яҙыусылары бармы ни ул, тигән һорау ҙа биреп ҡуйҙы.

Ә һуң бер туған Абдразаковтар, Роберт Юлдашевтар, Ғафаровтар һ.б. кемдәр һуң улар? Ҡала башҡорттары түгелме ни? Был хаҡта махсус мәҡәлә яҙғы килә.

Тапшырыуҙың исеме лә шомландырып ҡуя. Ирекһеҙҙән, төрлө төркөмдәрҙең разборкаларын иҫкә төшөрә.

Баҡсала яйлап эштәр бара. Республикала сәсеү бөттө тиерлек. Йәй ике аҙнаға иртә килә. Ҡоролоҡ була тип ҡурҡыталар ине (ҡыш, ысынлап та, бик ҡарһыҙ булды бит), ярай әле ямғырҙар ҙа матур ғына яуып тора. Артабан да шулай булһын инде.

Яҙғы донъям тынып, шымып ҡалған,
Шомло тынлыҡ. Уйсан шыршылар.
Серем менән һиңә һыйынам урман,
Шом бар бында.
Тик юҡ шымсылар.
Алдамаҫтар мәңге был ағастар,
Ҡыуаҡтарым серҙе һатмаҫтар.
Һаҙлыҡтар ҙа осрар.
Тик ғәйбәттең
Һаҙлыҡтары аңдып ятмаҫтар.
Бигерәк моңһоу бөгөн күл өҫтәре,
Бигерәк уйсан бөгөн ҡамыштар.
Юҡ һынмаҫҡа ине юҡһыныуҙан,
Бөтмәҫкә һуң нисек
Һыҙылып-һыҙылып янып һағыштан?

Һағынмаһаң да,
Табынмаһаң да,
Ҡабынмаһаң да,
Ҡағынмаһаң да...

Атай менән инәйемдең 100 йыллығын үткәрергә йыйынабыҙ. Мәшәҡәттәр күп буласаҡ, әммә изге мәшәҡәттәр. Нимәлер яҙғы килә.

Өнһөҙ күкрәү тынмай күкрәгемдә,
Күпме йәшен йәшенеп йәшенләй.
Инде етмеш нисә йәшемдә лә
Мөхәббәттә һаман – йәшенмәк.

(Һөйөүем уйнай һаман йәшенмәк).
Тыйып була ағыр йәшеңде
Тотоп булмай атылыр йәшенде.

19 май, 2012 йыл. Шәмбе.

Кисә Конгресс-холда «Мәрхәмәт» йәмғиәте ойошторған матур, ихлас кисәлә булдыҡ. Ваҡ балалар бик күп. Асҡарҙы алмағаныбыҙға ныҡ үкендек.

Мәрхәмәтле булыу – кешенең иң төп сифаттарынан. Әммә көндән-көн аяуһыҙ заман уны ҡыҫырыҡлай бара. Кеше ҡырыҫлана, нисек тә аҡса йолҡорға тырышыусы бәғерһеҙ бәндәләргә әйләнә бара.

Элек беҙҙең халыҡта балалар йорто, төрлө приюттар, ҡарттар йорттары һ.б. булмаған. Етемдәрҙе туғандары тәрбиәләгән, ҡарауһыҙ ҡалған ҡарттарға ла иғтибар итергә, нисек тә ярҙамлашырға тырышҡандар.

Идиллия тимәйем, әлбиттә. Өйҙән-өйгә, ауылдан ауылға хәйерселәр йөрөгән. Әммә кеше барыбер миһырбанлыраҡ булған. Үҙе фәҡир кеше лә етемгә йәки үкһеҙ ҡарт-ҡороға һуңғы һыныҡын бирep булһа ла ярҙам итергә тырышҡан.

Бөгөн пенсионерҙарҙы алдап, аҡсаларын алып ҡасалар, ветерандарҙың орден-миҙалдарын урлайҙар.

Шуға «Мәрхәмәт» һымаҡ ойошмалар изге эш эшләй, күберәк кешеләр ҡатнашһын ине.

«Ашҡаҙар»ҙан интервьюға һорауҙар ҡалдырып киттеләр. Уларға ентекләп яуап бирә башлаһаң, үҙе бер ғилми хеҙмәт яҙырлыҡ.

Интервью тигән нәмәне бик үк өнәп етмәйем, ҡасырға тырышам.

25 май, 2012 йыл. Йома.

Интервью шулай ҙа бирҙем. 21-дә «Ашҡаҙар» радиоһынан Гөлдәр тигән ҡыҙ килде. Бер сәғәткә яҡын һөйләштек.

22-дә Президиумдан һуң Татарстандың Аҡтаныш районына киттек. Дәүләт Советынан Рәмзил Вәлиев рәислек иткән беҙгә профиль комитеттың күсмә ултырышында беҙ ҙә, йәғни мин, Эльвира Юнысова, Йомабикә Ильясова ҡатнаштыҡ. Аҙаҡ Рафаэль Зиннуров, уның коллегаһы Римма Ратникова килеп етте. Һөйләшеүҙең темаһы – һәләтле балаларҙы тәрбиәләү. Был хаҡта 2011 йылдың ғинуарында беҙҙә Өфөлә округ субъекттары белгестәренең йыйынында – түңәрәк

өçтәлдә һөйләшеү үткәйне. Мин «Ответственность таланта» тигән мәкәлә лә яҙып сыҡҡайным.

Мәсьәлә, әлбиттә, бик мөһим. Һәләтле балалар – милләттең киләсәген иң элек шулар билдәләй.

Ләкин талант бәхет йәки ғорурлыҡ ҡына түгел, ул ғәйәт ҙур яуаплылыҡ та ул. Уны әрәм-шәрәм итергә шәхестең хаҡы юҡ.

Аллаһы тәғәлә үҙенең рухи һәм матди хазинаһын, моғайын, ошо генийҙар аша халыҡҡа еткерә торғандыр. Донъяның бөйөктәре пәйғәмбәрҙәр, әүлиәләр генә түгел бит. Һәләттәр бөйөкләктәре буйынса ла, тәғәйенләнештәре буйынса ла төрлө-төрлө. Ләкин яуаплылыҡ барыһы өсөн дә мотлаҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күпме таланттар кемдәрҙең ғәйебе арҡаһында ғына түгел (ундай хәлдәр ҙә етерлек, әлбиттә), нәҡ үҙенең яуапһыҙлығы, үҙен-үҙе тарҡатыуы, емереүе арҡаһында һәләк була.

Аҡтанышта мин дә сығыш яһаным. Ныҡ ҡына ҡыҫҡартырға тура килде. Улар ултырышты татарса алып баралар. Ә мин русса әҙерләгәйнем. Ике телдә аралаштырып һөйләргә тура килде.

Татарса бик самалы белгән депутаттары булһа ла, татарса алып баралар. Мин башҡортса һөйләгәндә береһе һорай икән: «Откуда он татарский язык так хорошо знает?», – тип. Ике телде айырмай.

Беҙҙең осрашыу уларҙың Дәүләт советы рәисе Фәрит Мөхәмәтшиндың тыуған көнө менән тура килде. Уны «Халыҡтар дуҫлығы» ордены менән бүләкләү тураһында беҙҙең Президент Хәмитовтың Указы баҫылған «Башҡортостан» гәзитен алып барғайным, шуны уҡып, Ратниковаға бирҙем, тапшырыуын, ҡотлауҙарыбыҙҙы еткереүен үтендем. Шулай уҡ Госсоветҡа Башҡортостан тураһында Килмәмәтов сығарған бик матур альбомды бирҙем. Рәзилгә тип Рәми Ғарипов альбомын да алып барғайным. Аҡтанышта һәләтле балалар өсөн бик матур мәктәп асҡандар, улар беҙҙең Рәми Ғарипов гимназияһы менән бәйләнеш булдырған, беҙҙекеләр бында бик һәйбәт концерт та ҡуйып киткән, Аҡтаныш мәктәбендәгеләр һоҡланып һөйләйҙәр. Альбомды шул мәктәпкә бүләк иттем. Рәзил Вәлиевҡа үҙемдең биш томлығымды бирҙем. Барыһы менән дә йәтеш килеп сыҡты һымаҡ.

Район үҙәге Аҡтаныш бик төҙөк. Геройҙар аллеяһы, балалар ижады үҙәге, күренекле артист, яҙыусы һ.б. яҡташтарының барельефтары һ.б., һ.б. – йәш быуындың күңелгә халыҡ рухын һеңдерерлек бик күп эштәр эшләнә. Бигерәк тә балаларҙа, йәштәрҙә татар рухын тәрбиәләү бик көслө. Был Аҡтанышта ғына түгел, бөтә ерҙә шулай,

сәйәсәт Ҡазандан донъяға таратыла. Ә беҙҙә ил, халыҡ, дин тип ауыҙ аса башлаһалар, егеттәрҙе ултыртып ҡуялар.

Аҡтанышта халыҡтың 98 проценты татар тип ғорурланып һөйләйҙәр. Бөтөн йыйылыштар, рәсми йыйылыштар тик татарса алып барыла.

Кисәге башҡорттар татарға бына ниндәй көс булып өҫтәлгән. Ләкин бында күптәр үҙҙәренең башҡорт тамырҙарын онотмағандар. Һөйләштәрендә был ярылып ята. Хатта уҡытыусылар ҙа рәсми булмаған шарттарҙа халыҡсан һөйләшә. «з» өнө урынына гел «ҙ» өнө, Ҡазанды ла Ҡаҙан тиҙәр.

Ерҙәренең күпселеге ҡара тупраҡ. Татарстанда ауыл хужалығы өсөн иң уңайлы райондыр.

Быларҙы Сибайҙың аулаҡ ҡына бер ҡунаҡхана һымаҡ ерендә яҙып ултырам. Биштә торҙом. Кисә Дәүләт йыйылышынан һуң Фәриҙә менән Сибайға киттек. Беҙҙең машинаны яңыртҡайнылар. Унда Аҡтанышҡа тәүге сәфәр, бынығы икенсеһе. Тауҙар араһындағы юлдарҙың байтағын һәйбәтләгәндәр, тик тигеҙләйһе урындар ҙа бар әле.

Бында Мөхәмәтша Буранғоловҡа Сибай институты алдында һәйкәл асыу өсөн Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов үҙе саҡырғайны.

Баҡсала ял көндәрендә «Урал батыр»ҙы яңынан ҡарап сыҡтым, кешелектең донъя яратылғандан алып бөгөнгөгә тиклемге яҙмышы тураһында уйландыра.

Бында башҡортлоҡ юҡ тиерлек, телдән башҡа, образлы фекерләү үҙенсәлектәренән башҡа. Бында дөйөм кешелек фәлсәфәһе.

Элек иғтибар ителмәгән деталь: дейеү батырҙы йота, ул уның яңы башына әйләнә. Борон-борондан дәһшәтле көс башҡаларҙы йотоп көсәйгән.

Был хәлдәр әле лә дауам итә бит. Башҡа халыҡтарҙы, илдәрҙе йотоп, күп башлы дейеүҙәрҙең баштары күбәйә, ғәйрәттәре арта. Көслө көсһеҙҙә йота. «Урал батыр»ҙағы был хәҡиҡәт әлмисаҡтан килә.

«Некоторые народы достигли социализма минуя капитализм», – ти торғайнылар совет заманында ҡайһы бер халыҡтар тураһында. Башҡорт та, капиталистик милләт булып формалашмайынса (дөрөҫөрәге, буржуаз милләт), социализм дәүеренә инде. Был осор уға күпте бирҙе (культурная революция, сикләнгән булһа ла дәүләтселек). Ләкин беҙҙең милләт капитализм шарттарында аяуһыҙ

сынығыу үтеп өлгөрмәне. Буржуаз революция бәлки шул тәжрибәне туплар өсөн мөмкинлектәр бирер ине.

Бөгөн Рәсәйҙә капитализмды ҡырағай рәүештә, йыртҡыстарса реставрациялау барғанда баҙар психологияһына күнекмәгән беҙҙең башҡортҡа айырыуса ҡыйын.

1 июнь, 2012 йыл. Йома.

Йәйҙең тәүге көнө. Ысынында күптән йәй инде ул. Яҙ бик иртә килде.

Ҡоролоҡ була тип ныҡ хәүефләндергәйнеләр, әлегә һәйбәт кенә ямғырҙар булып тора.

Сибайҙа бик һыуыҡ булды. Костюм менән генә барғайныҡ, ныҡ өшөп ҡайттыҡ. Саҡ-саҡ температура күтәрелеп китмәне. Әммә тәьҫораттар бик матур. Сибай институты үҙе бер донъя булып ҡала. Йәштәрҙе уҡытыу ғына түгел, иң мөһиме – тәрбиәләү, әхлаҡлы, халҡына тоғро шәхестәр итеп тәрбиәләү. Бөгөн бындай эш эшләүселәр үтә һирәк һәм айырыуса ҡәҙерле, оло хөрмәткә лайыҡ.

Мөхәмәтша Буранғоловҡа һәйкәл асҡанда мин генә һөйләнем. Уның һәйкәлен үҙе менән сағыштырып ҡарарлыҡ кеше лә мин генә инем. Сөнки уны күреп белгән, аралашҡан башҡа берәү ҙә бында юҡ ине. Һәйкәл һәйбәт, айырыуса ҡарашы уныҡы.

Сибай институтына килгәндә уның алдында ике яҡтан ике шағир – Бабич менән Рәми ҡаршы ала, донъяла башҡаса уҡыу йорто юҡтыр тигәйнем заманында.

Хәҙер уларға Һәҙиә, Зәйнәп апайҙарҙың һәйкәле, Сибай кантон өҫтәлгән. Мөхәмәтша Буранғоловҡа һәйкәл. Был эштәре менән Зиннур Йәрмөхәмәтов үҙенә һәйкәл ҡуя. Хәйҙәр Ғарипов һәйбәт эшләй. Ҡайһы бер бюстары бик үк уңышлы түгел. Быларында шәхесте тере итеп бирә алған. Тик Сибай кантон бюсын яңынан эшләтәбеҙ тиҙәр.

Сибайҙан ҡайтҡас, 26-да, Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы гимназияһының исем туйы Калинин районының һабантуйы кимәлендә үткәрелде. Сибай институтына ла, был гимназияға ла биш томлығымды бүләк иттем.

Ял көндәре баҡсала булдыҡ. Бик эре күҙле ямғыр яуа башланы. Ишекте асып ҡуйып, Асҡарға күрһәттем. Малай иҫе китеп ҡарай. Ямғыр бик көслө яуып үтте.

Рәсәйҙән зыялылар, аҡыллылар китә.
Рәсәйгә наҙандар, ҡырағайҙар тула.

Рәсәйҙән аҫыл байлыҡтар китә,
Көнбайыштың иҫкәһе, зарарлыһы
Беҙгә тула.

Нефтен, газын туҡтауһыҙ сит илгә ҡыуып, Рәсәй, бер көн килеп, ҡанһыраған, хәлһеҙләнгән, үлемгә дусар ителгән баһадирға оҡшап ҡалмаҫмы?

Аҡтанышта һәләтле балаларҙы тәрбиәләү тураһында һөйләшеүгә барғанда юлда Туҡай тураһында уйландым.

Етемлектә табаны боҙға ҡуша туңып, күпме ауырлыҡтар күрһә лә, уны кемгәлер һатмағандар бит, баҙарҙа «Аҫырауға бала бирәм!» тигәндәр. Ул ваҡытта беҙҙең башҡортта, татарҙа балалар йорттары булмаған, етем ҡалғандарҙы туғандары алған, ил нисек тә ҡарарға тырышҡан.

Бөгөн иһә күпме сабыйҙар меңәрләп сит илгә һатыла, хатта туҡмап үлтерәләр. Улар араһында Туҡай һымаҡ һәләттәрҙең дә һәләк булыуы мөмкин бит.

«Аҙмы ҡаҡҡанды вә һуҡҡанды
күтәрҙем мин етем!
Аҙыраҡ үҫтерҙе һыйпап тик
маңлайымдан милләтем», –

Туҡай үҙе бына шулай тигән, халҡына рәхмәт әйткән.

Бөгөнгө халыҡ ҡатламдарын аңлап бөтөрөрлөк түгел. Ғәҙел-һеҙлектәр үҙәкте өҙә. Янғантауҙы ни тиклем күтәргән Рәмил Бәҙретдиновты «Зеленая роща»ға күсерҙеләр, тегендә кисәге Госдума депутаты Энгельс Ҡолмөхәмәтовты ҡуйҙылар, ул үҙе Салауат районынан.

Әле Рәмил янында булғайным. Иларҙай булып ултыра. Янғантауҙы банкрот яһап, әллә 150 млн. һумға һатҡандар. Аҙаҡ 5–6 млрд-ҡа һатып байыҫаҡтар, имеш. Рәмил бюджеттан бер тин алмайынса 2 млрд. һумлыҡ төҙөлөш алып барҙым, ти (корпустар, мәктәп, балалар баҡсаһы, торлаҡ, стадион һ.б.)

Яңыраҡ Өфөлә евразия мәҙәниәте үҙәге төҙөү тураһында Академтеатрҙа йыйылып һөйләштек, Хөрмәт Үтәшевты ошо ойошманың рәисе иттек.

Илде талау, гайкаларҙы яңынан нығыраҡ бороу көсәйгәндә был ойошма нимә генә эшләй алыр, уға кем матди ярҙам күрһәтер икән?

Тиҙҙән тотош Рәсәйҙең үҙен банкрот итмәҫтәрме?

25-дә Сибай яғында йөрөп, академик Фәнил Фәйзуллиндың 70 йәшлек юбилейында була алманым. Бик үкенесле. Фәйзуллин Башҡортостанды яҡлап күп эштәр эшләй. Бына беҙ ҙә ҡарт гвардияға әйләндек.

«Ағиҙел»дең 5-се һаны минең «Үҙем беләм» тип исемләнгән шиғри шәлкем менән асыла. Оҡшатып шылтыратыусылар, әйтеү-селәр байтаҡ.

Дар напрасный, дар случайный,
зачем ты мне дана?
Иль зачем судьбою тайной
Ты на казнь обречена?
...Цели нет передо мною:
Сердце пусто, празден ум,
И томит меня тоскою
Однозвучный жизни шум –

Утыҙ йәше лә тулмаған Пушкин 1828 йылдың 26 майында бына шулай тип яҙған. Ғәжәп бит!

Ә ниңә ғәжәпләнергә? Бынан ете йыл элек Пушкин бына ниҙәр кисергән бит:

Я пережил свои желанья,
Я разлюбил свои мечты;
Остались мне одни страдания,
Плоды сердечной пустоты.

Был юлдарҙы 1821 йылда егерме ике йәшлек Пушкин яҙған.

Шағир нисәмә тапҡырҙар үлә, нисәмә тапҡырҙар терелә, бер ғүмерҙә күпме ғүмерҙәр йәшәй. Шағир яҙмышы туҡтауһыҙ күктәргә олғашыу һәм упҡындарға осоу, туҙыу һәм яңырыу.

Кисә Башҡортостанда сыуаш мәҙәниәте көндәре башланды. Рәсми делегацияла (6 кеше) Валерий Турғай ҙа бар ине. Президенттың ҡул ҡуйыуында Башҡортостан яғынан алты кеше араһында мин дә ҡатнаштым.

Нефтселәр һарайындағы кисәне Хәмитов менән Игнатьев Михаил Васильевич астылар, бер-береһенә елән яптылар, беҙҙеке ҡолаҡсын да кейҙереп ҡуйҙы.

Сыуашстанда Президент урынына Глава республики тип әйтәләр икән. Етәкселәре йәш. Телмәрен бик эмоциональ тамамланы.

«Нарспи» тигән тәүге сыуаш мюзиклы бик ҡыҙыҡлы, яңыса күренә. Беренсе бүлеген генә ҡараным. Телде белмәгәс, ҡыйын. Ярай сюжет таныш.

Турғай Мостай Кәримдең үҙе тәржемә итеп сығарған китабын (60 шиғыр) килтергән. Киске сәйҙә һүҙ әйттек, шул китапты миңә бүләк итте.

Делегация шул уҡ көндө ҡайтып китте.

13 июнь, 2012 йыл. Дүшәмбе.

Бына өс көн ял үтеп тә китте. Кисә йылдағыса бер көндә өс байрам: Рәсәй көнө, Өфө көнө, Салауат көндәре.

Иртүк ҡаланың почетлы гражданҙарын Монумент янына алып киттеләр. Хөкүмәт, ҡала, район башлыҡтары, министрҙар һ.б. етәкселәр йыйылғайны.

Дуҫлыҡ һәйкәленә сәскәләр һалыуҙа Президент Р.З. Хәмитов булды.

Шунан Салауат һәйкәле янына киттек. Барғанда Сынтимер Баязитов әйтә, миңә сығыш яһарға, ти. Алдан бер нәмә тип тә иҫкәртмәгәйнеләр. Тиҙ генә телмәр тураһында уйларға тура килде. Ҡотлап һүҙ әйттем, шиғыр уҡыным – ике телдә («Бер һүҙ» – «Заветное слово»).

М. Кәрим гимназияһынан балалар сығыш яһаны. Ҡурайсылар ансамбле. Фирғәт Ғарипов матур алып барҙы.

Аҙаҡ майҙандағы тирмәлә ҡала етәкселәре беҙгә сәй мәжлесе ойоштороғайны.

7–9 июнь ПФО субъекттарының мәҙәниәт етәкселәре йыйылды. Милли музейҙа 8-дә түңәрәк өҫтәл. Минең дә сығыш. Рәзил Вәлиев килергә тейеш ине. Килә алманы, урынбаҫары ҡатнашты, Анастасия Георгиевна Исаева. Рәзилдең килмәүе бик үкенесле. Матур-матур саралар бар ине: Өфөләге осрашыуҙар, Бөрйән – Шүлгән, Ҡырмыҫҡалы – 200 йыллығҡа (1812) театраль тамаша һ.б.

9-да баҡсала бик ҡаты ямғыр булды. 10-да Альбиналарҙа өй ҡотлау.

Көндәлектәр, ниһайәт, баҫып бөтөлдө. Баҡсала һуңғы өлөштәрен уҡыным.

Күләм хәтәр ҙур булып китте. Байтаҡ урындарын ҡыҫҡартып баҫтырҙым. Шулай ҙа 14.11.1969 – 19.10.2009 – шул осор 1802 бит. Ҡалын-ҡалын өс том булырлыҡ.

Нисек донъяға сығарырға? Мортаза ағайға һаман да инеп булмай. Ул миңә үпкәләгән, әлбиттә. Үҙемә лә әйткәйне, кеше аша ла ишетәм. Мин яңы тәртиптәргә ҡаршы сығып нимә эшләргә тейеш икән һуң?

19 июль, 2012 йыл. Кесаҙна.

Минең иртәнге доға-теләктәрем:

Бисмиллаһи рахмани рәхим!

Ләилаһииллаллаһ! (Тәсбих тартып 33 тапҡыр). Бисмиллаһи рахмани рәхим! Собханалла, собханалла (33 тапҡыр), Бисмиллаһи рахмани рәхим! Ләиллаһиилалаһа! (33 тапҡыр), Мөхәмәҙерассуллаһ, тип тәсбих тартыу тамамлана. Артабан:

Йә раббым, тәңрем, остазым, уҡытыусым! Зинһар, ҡабул ҡыла күр рәхмәттәребеҙҙе, беҙҙең инаныуыбыҙҙы, беҙҙең өмөттеләктәребеҙҙе! Зинһар, донъяларға именлек бир, тормошҡа ҡотбәрәкәт, халыҡтарыңа татыулыҡ, кешеләреңә иман-тәүфиҡ, итәғәтлек, миһырбанлыҡ бир. Зинһар, аралай күр беҙҙе гонаһтарҙан, боҙоҡлоҡтарҙан, яуызлыҡтарҙан, эсеү-тартыуҙан. Зинһар, аралай күр беҙҙе ваҡсыллыҡтан-көнсөллөктән, урлашыуҙан-алдашыуҙан, ыҙғыш-талаштарҙан, ялҡаулыҡтан-тарҡаулыҡтан, хыянаттан-ғәйбәттән.

Йә раббым, йә раббым, йә раббым! Зинһар, бөгөнгө көнөбөҙ матур эштәр менән башланып, матур эштәр менән тамамланһын. Барлыҡ илһамыбыҙҙы, дәртебеҙҙе халҡыбыҙға арнап, иртәнән кискә тиклем эш менән булырға, туғандарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ, диндәштәребеҙ, милләттәштәребеҙ, хеҙмәттәштәребеҙ, фекерҙәштәребеҙ бергә тупланып, ҡыуанып-шатланып йәшәргә, илһамланып-дәртләнеп эшләргә яҙһын, ошо эштәрҙә миңә һәр ваҡыт фекер үткерлеге, зиһен зирәклектәре, илһам сәғәттәре, тел асҡыстары, ныҡлы хәтер насип булһын ине.

Йә раббым, йә раббым, йә раббым! Зинһар, ғәзиз Башҡортостаныбыҙҙа татыулыҡ менән берҙәмлек, зирәклек менән ихласлыҡ, уңғанлыҡ менән уяулыҡ һәр саҡ һаҡланһын ине. Зинһар, илебеҙгә бәлә-ҡазалар килмәһен, халҡыбыҙҙың берҙәмлеге, бәйләнештәре нығынһын ине. Йә раббым, йә раббым, йә раббым. Зинһар, Артур улыбыҙ, Сабина киленебеҙ, Асҡар улыбыҙ, Әсил ҡыҙыбыҙ, Эдик улыбыҙ, Фәриҙә менән мин, барса туғандарыбыҙ алдағы көндәребеҙҙе татыулыҡта, иҫәнлектә ҡаршы алырға, бер-беребеҙгә таяныс, ҡыуаныс-йыуаныс булып йәшәргә яҙһын ине.

Йә раббым, йә раббым, йә раббым! Зинһар, донъялағы барлыҡ зәғифтәр, етемдәр, ауырыуҙар, ҡарауһыҙ ҡалған ҡарт-ҡоролар, йорт-еренән яҙған бисаралар, ут-дәһшәт эсендә, ауыр юлдарҙа яфа сиккәндәр, нахаҡҡа рәнйетелгәндәр, хаталыҡ менән яңылыш юлға баҫҡандар – барсаһы ла һинең ярҙамың, һинең изгелектәрең менән үҙҙәренә һаулыҡ, ризыҡ, тура юл, тәүфиҡ, иман тапһындар ине.

Йә раббым, йә раббым, йә раббым! Зинһар, айырма үҙеңдең мәрхәмәтеңдән, үҙеңдең изгелектәреңдән, үҙеңдең ярҙам-ярлыҡауҙарыңдан. Зинһар, ҡабул ҡыла күр беҙҙең инаныуыбыҙҙы, беҙҙең рәхмәттәребеҙҙе, беҙҙең өмөт-теләктәребеҙҙе.

Рәхмәт, амин.

Минең йоҡлар алдынан әйтелгән теләк-доғаларым:

Башта бисмиллаһи рахман рәхим тип 21 тапҡыр ҡабатлайым.

Шунан һуң:

Йә раббым, йә раббым, йә раббым!

Зинһар, сабырлыҡтар, түҙемлектәр бир беҙгә!

Зинһар, күңелебеҙгә сафлыҡ бир, зиһенебеҙгә асыҡлыҡ, йүнебеҙгә ныҡлыҡ бир, рухыбыҙға ҡанат ҡуй. Зинһар, миңә илһам сәғәттәре, фекер үткерлеге, зиһен зирәклектәре, тел асҡыстары, ныҡлы хәтер насип булһын ине.

Зинһар, ярлыҡай күр минең гонаһтарымды, минең ғәйеп-хаталарымды! (өс тапҡыр ҡабатлана).

Зинһар, ошо гонаһтарҙы, ошо ғәйеп-хаталарҙы булдырмаҫ өсөн миңә күңел сафлығы, рух ныҡлығы бир!

Йә раббым, йә раббым, йә раббым! Бөгөн йәнемде алырға булһаң, зинһар, был яҡты донъяларҙан ғазапһыҙ үтергә, әгәр һинең мәрхәмәтең менән йәшәргә насип булһа, һинең изге юлыңды яҡшы эштәр менән ғүмер кисерергә, һәр көнөмдө һинең исемең менән башлап, һинең исемең менән тамамларға, бөгөнгө төнөмдө тыныс ял итеп, иртәгә эштәремде уңышлы дауам итергә, ҡуйған маҡсаттарыма ирешеп, ҡыуаныстар кисерергә насип булһын ине.

Йә раббым, йә раббым, йә раббым! Зинһар, атайым-әсәйемдең, вафат булған туғандарыбыҙҙың, дуҫтарыбыҙҙың рухтары беҙгә рәнйей күрмәһен, йәндәре йәннәттә, ауыр тупраҡтары еңел, гүрҙәре яҡты булһын ине. Зинһар, кешеләргә асыуым кәмеһен, кешеләрҙең миңә асыуы кәмеһен ине. Зинһар, фекерем тарҡалғанда фекеремде тупларлыҡ көс-ихтыяр тапһам ине. Шатлыҡ-ҡыуаныстар менән маҡсаттарыбыҙҙан тайпылмайынса алға ынтылып, уңыштарға

ирешергә яҙһын ине. Зинһар, ғәзиз Башҡортостаныбыҙҙа татыулыҡ менән берҙәмлек, ихласлыҡ менән зирәклек, уңғанлыҡ менән уяулыҡ һәр ваҡыт наҡланһын, илебеҙгә бәлә-ҡазалар килмәһен, халҡыбыҙҙың берҙәмлеге, бәйләнештәре нығынһын ине. Йә раббым, йә раббым, йә раббым! Зинһар, айырма үҙеңдең мәрхәмәтеңдән, үҙеңдең изгелектәреңдән, үҙеңдең ярҙам-ярлыҡауҙарыңдан. Зинһар, ҡабул ҡыла күр беҙҙең инаныуыбыҙҙы, беҙҙең рәхмәттәребеҙҙе, беҙҙең өмөт – теләктәребеҙҙе.

Рәхмәт, амин.

Дини китаптарҙа яҙылғанса ғына түгел, һәр кемдең тиерлек үҙенең күңелендә тыуған теләк-инаныуҙары, доғалары була. Һәр иртәлә һәм һәр кистә ҡабатлана торған был доғалар минең күңелемдә бынан байтаҡ йылдар элек яралды һәм бер мәл эҙмә-эҙлекле рәүешкә килде. Быға күпме ваҡыт үткәнен атап ҡына әйтә лә алмайым, ике тиҫтәгә яҡын йыл барҙыр. Хәҙер инде улар һәр саҡ хәтеремдә наҡланған һымаҡ.

Әлбиттә, был теләктәремдең тыуыуында мин ишетеп-уҡып белгән дини мотивтарҙың, башҡа сығанаҡтарҙың да йоғонтоһо булғандыр. Яҡтылыҡ, мәрхәмәт, изгелек ҡайһы тарафтан ғына килһә лә, барыбер рухыбыҙҙы байыта бит.

Әле генә – 21–23 июндә, тыуған яҡтарҙа йөрөгәйнек, уға бер ай үтеп тә китеп бара. Ул сәфәр үҙе бер оло тарих булды. Күмәкләп юлға сыҡтыҡ: Фәриҙә, Артур, Сабина, Асҡар, Әсил. Тура юлдан ҡайтабыҙ тип, оло бәләләрҙән саҡ-саҡ ҡотолдоҡ. Федоровка менән Шарлыҡ араһында бер урында юл бик алама. Етмәһә, ҡойоп ямғыр яуа, Артурҙың машина йөрөтөү тәжрибәһе бөтөнләй юҡ тиерлек, бысраҡта руль менән эш итә белмәй. Вездеход иҫәпләнгән «Мицубиси» еңел үтеп китергә тейеш ине лә бит, йөрөтә белмәгәс, шылыша-шылыша, машина кювет янына килеп етте. Шул ерҙә туҡтатырға тура килде. Фәриҙә менән Сабина ҡурҡып, балаларҙы күтәреп, машинанан төштөләр. Мин дә үтеп барған транспорт көтөп юлда торам. Ҡойоп ямғыр яуа. Үтеүселәр юҡ. Ярар «Нива»ла үтеп барған (ҡаршыға) туҡтап, тросығыҙ бармы, тип һорай. Ә трос юҡ. Был егеттең «Жигули»ҙа иптәше килеп етте. Уның тросы бар икән. Саҡ эләктереп, «Нива» беҙҙең «атаҡлы» иномарканы һөйрәп сығарҙы. Рәхмәт әйтеп, аҡса бирәм тиһәм, улар китеп тә барҙылар. Юлыбыҙҙа ошо Хызыр Илъястар булмаһа, беҙ нишләр инек – ҡот осҡос.

Артабан һәйбәт кенә барып еттек Алисовкаға, Зөлхизә менән Рифат кейәүҙәргә рәхмәт, көтөп торғандар. Юл буйынса шылтыраттылар, бик хафаланғандар.

Сәфәребеҙҙең маҡсаты инәйем менән атайымдың 100 йыллығына, Айҙар улыбыҙ рухына (уға ла сентябрҙә 50 йәш тулған булыр ине) ҡорбан салыу, туғандарҙы саҡырып, Ҡунаҡбайҙа йыйын үткәреү ине. Алдан ҙур әҙерлектәр алып барылды. Ҡунаҡбайҙан Фәрит Бикбаев хәҙрәт, Яңауылдан (Ғәбдрәфиҡ) Әнүр ҡустым Вахитов хәҙрәт, Ҡөтлөмбәттән Ғафур Моратов хәҙрәт, Зөлхизә, Люция туғандарым, башҡа яҡташтар был эштәрҙә бик ихлас ҡатнаштылар, бик матур тырышып, еренә еткереп ойоштороҙолар.

Өс кешебеҙ рухына өс ҡорбан салдыҡ, Ҡунаҡбай мәсете янында хәҙрәттәр йома намаҙы үткәрҙе. Мәсет эргәһендә тирмә ҡорғайнылар. Шунда ирҙәр мәжлесе, ошондағы элекке магазин йортонда ҡатын-ҡыҙҙар мәжлесе, дөрөҫөрәге, ҡорбан аштары булды. Бик ҙур ҡазандар аҫҡандар, ит мул, быларҙы Фәрит хәҙрәт үҙе бешергән. Аштарҙы ҡатын-ҡыҙҙар өлтөрәп килтереп тора. Туғандар бик күп йыйылғайны: Ҡунаҡбай, Яңауыл, Ҡөтлөмбәт, Ырымбур, Өфө, Күмертау һ.б. Барлыҡ ауыл халҡы һыйланды. Фәриҙә 100 кешегә хәйер таратты. Хәйер таратыусылар күп булды. Ҡорбан ашынан сыҡҡас, концерт ойоштороҙоҡ. Мин һүҙ әйттем, Ришат, Рифат ҡустымдар (Вахитовтар), тағы байтаҡ туғандар, ауылдаштар сығып йырланылар, Нәфисә Смакова, Суфия Вахитова шиғыр уҡынылар. Ҡурайы ла, бейеүе лә булды. Рифат тиҙ генә программа һымаҡ нәмә төҙөп алғайны. Сығыш яһаусылар беҙ уйлағандан артып китте.

Ҡунаҡбайҙан ҡайтышлай, Яңауыл зыяратында, инәйем ҡәбере янында, Әнүр хәҙрәт доға уҡыны, Фәриҙә хәйер өләште.

Үҙемдең һүҙемдә Переволоцкий районында Соран буйында өс башҡорт ауылы бар (ҡалғандары Новосергиевский районына ҡарай), өсөһөндә лә мәсет бар, һәр мәсеттә хажда булып ҡайтҡан йәш хәҙрәттәр бар, бындай хәлдәр һирәк була, тинем. Өс ауылға бер тирмә икән, уға аптырамағыҙ, тирмә һәр саҡ йәйләүҙән йәйләүгә күсеп йөрөгән, тинем. Атайым, инәйем, апайҙарым тураһында шиғырҙар уҡыным. Фәрит Бикбаевҡа матур аҡ елән менән ҡолаҡсын кейҙерҙем, изге көръәнде ҡуя торған ағастан эшләнгән ҡулланма бирҙем, дини китаптар тараттым.

Был осрашыуҙар тураһында халыҡ һаман һөйләй, телдәрендә шул тип тыуған яҡтан телефондан шылтыратҡанда әйтәләр.

Ошо йыйынды үткәрергә теләгем бик ҙур ине, Аллаға шөкөр, туғандарым, яҡташтарым бергә йыйылып ҡыуаныштыҡ. Йәш үтә, ҡабат былай осраша алабыҙмы-юҡмы, мөмкинлек булғанда ойоштороу һәйбәт. Әлбиттә, киләсәктә лә һис юғында бер тапҡыр ошондай эште эшләй алһам ине.

21 июль, 2012 йыл. Шәмбе.

Инде ике-өс аҙна түҙеп торғоҙоҙ эҫе көндәр булды. Өфөлә 35, республикала 38–39 градусҡа барып етте. Күп райондарҙа ҡоролоҡ, урмандар яна. Ағиҙел ныҡ һайыҡты, йылға флотының хәлдәре ауыр. Пассажир теплоходтары Бөрөгә тиклем генә йөрөй икән. Һыу 2010 йылдағы ҡоролоҡҡа ҡарағанда ла нығыраҡ кәмегән.

2-се июлдән ялға – каникулға таралырға тейеш инек. 12-дә тағы ла госсобрание үткәрҙеләр. Каникул 16-нан ғына башланды. Бына бер аҙнаһы үтеп тә китте. Баҡсалабыҙ.

Артур 10 көн Лондонда командировкала булып ҡайтты. Ҙур делегация булып, Пустовгаров етәкселегендә авиакүргәҙмәгә барҙылар. Тәьҫораттары күп, бик ҡәнәғәт ҡайтҡан.

Көндәлектәр менән ултырам. Беренсе томын компьютерҙа әҙерләп бөтөп барабыҙ. Ҡалған ике томын да баҫылғандан һуң төҙәтеп – йыйнаҡлап, осона сығып киләм һымаҡ. Был тиклем күләмдәге әйберҙе (75 табаҡ самаһы) сығарышырға спонсор табып булмаҫ һымаҡ. Мортаза ағайҙа булғайным, кәйефе юҡ, ниңә сығыш яһамайһығыҙ, тип үпкәләй. Бишенсе томымды бүләк иттем, унда «Беҙҙең президент» тигән мәҡәлә бар. Сығыштарымда ла Рәхимов тураһында һәйбәт-һәйбәт һүҙҙәр күп. Ағай уларҙы уҡымаҫтыр шул.

Спонсорлыҡ тураһында һүҙ ҡуҙғатып торманым.

Быйыл 19 июндә генә беренсе һыу индем. Һирәгерәк тура килә. Шулай ҙа Шамонинонының ике күлендә, Ағиҙелдә, Ҡариҙелдә, Ҡашҡаданда, Асылыкүлдә йөҙҙөм.

Наил ҡустым бик ҡаты ауырый. Шуға алыҫҡа ял итергә китмәнек. Хәлен белеп, һыҙланыуҙарын баҫа торған дарыу алып барып килдек. Әле шылтыратып торабыҙ, өмөт самалы.

Тыуған яҡтарҙа мең км-ға яҡын юл йөрөп ҡайттыҡ. Артурға һәйбәт практика булды.

Еләк кибеп, көйөп бөткән,
Һарғайғандар һуғандар.

Иҫкергәндәр тиҫтерҙәрем,
Ҡартайғандар туғандар.

Беҙҙең быуын, беҙҙән олораҡ туғандар ҡартайыу ғына түгел, йылдан-йыл һирәгәйә. Бер нисә йылдан ҡайтып, аралашып йөрөр кешеләр ҙә ҡалмаҫ микән? Туғандарҙан йәштәр бар, әлбиттә. Ләкин уларҙың үҙ донъяһы, үҙ мөхите, үҙ уйҙары.

Был донъяның бөтмәҫ сүбе-ҡыйы, тойғоһоҙ тойғоно – уйһыҙ мейе, моңһоҙ күңел, һыуһыҙ ҡойоһо.

Арабыҙҙа юҡ дуҫтарҙы юҡһыныу. Хәҙер йышыраҡ болоҡһота. «Рәми шишмәһе» тигән шиғырҙы, «Динистең сәңгелдәге»н һаман яҙа алмайым. Баҡсалағы күршем Булат Рафиҡов тураһында ла шиғыр күңелдә йөрөй. Утты һүндермәй һаҡлау тураһында. Төнө буйы эшләп ултырған Булаттың уты һүнгән саҡта төндә (таңға табан) тороп эшкә тотонорға йөрөгәнемдә минең утым тоҡана торғайны. Минеке һүнгәндә кемдеке тоҡаныр?

Сәңгелдәктәр – төрлө, әҙәми затта – бер. Сәңгелдәктәрҙә ятҡан саҡтарында, әлбиттә.

Тыуым менән үлем сиктәрендә
Бирелгәндер беҙгә был ваҡыт.
Тыуымдарҙы көслә туҡтатһаң да,
Үлемдәрҙе булмай туҡтатып.

Ерҙәр һатыла, урман талана, заводтар яттар ҡулында. Банкрот тип иғлан итеү йыш ҡына бөлмәгәнде көсләп бөлдөрөү. Инде хәҙер санаторийҙарға ла сират етте.

Бөгөн Путин ВТО-ға инеүгә ҡул ҡуйҙы. Йә хоҙай, ҡайҙа бара был донъяларыбыҙ? Беҙ йәшәребеҙҙе йәшәгәнбеҙ ҙә бит, киләсәк быуындар нишләр?

Марат Ямалов «И мысленно благодарю…» тигән китабын яҙып биргәйне. Уның Роберт Минуллинды тәржемә иткәнен белә инем, үҙенекен уҡымағайным. Ҡыҙыҡлы фекерҙәре бар.

«Шоңҡар»ҙа (2012, №6) Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллинаның «Рух юлынан сәфәр ҡылған өсәү» тигән эссеһы баҫылған. Бик үҙенсәлекле донъя, ғәҙәти булмаған яҙмыштар. Һеңлеләренең ижадын белмәйем, Г. Айгизың шиғырҙары менән бер ни тиклем танышмын. Шағирҙың шағирлығын, һүҙенең көсөн, тылсымын

кемдәрҙеңдер баһаламалары аша йәки уны ниндәйҙер исемлектәргә – «бөйөктәр теҙмәһенә» индереүҙәре аша төшөнөү кәрәкмәй. Шағир үҙенең бер нисә шиғыры, хатта бер нисә строфаһы менән күңелде арбап ала. Ә бына Айгины күпме генә бөйөк тип раҫлаһалар ҙа, уның шиғырҙары мине тетрәндермәй, хатта аҙ ғына булһа ла тулҡынландырмай. Шиғырҙа фәлсәфи ҡатламдар, үҙенсә подтекст һ.б. булырға тейеш, әлбиттә. Ләкин шиғриәт бит ул иң элек моң, аһаң, тик һис кенә лә ниндәйҙер башватҡыс ҡоролмалар түгел.

Боронғо япон шиғырҙары ла ирекле формала, әммә ундағы ике-өс юлда ни тиклем мәғәнә, һоҡланыу, һыҙланыу, донъяны минең өсөн яңыса асыу. Шиғырҙы көсләп яратырып булмай бит. Кешене лә көсләп яратырып булмай бит.

Көндәлектәрҙе уҡығанда инәйемдең һөйләгәне яңынан иҫкә төштө. 1912 йылдың йәйендә инәйем биләүҙә көйө ҡартатайымдар уны үҙҙәре менән Мөхәмәтша Буранғоловтың туйына алып барғандар. Кәләше беҙҙең Ғәбдрәфиҡтән, Баҡай байҙарҙың ҡыҙы булған. Ауылдың иң хәлле кешеләренән туйға 13 дуға барған. Бәпес ауылында ҡунып киткәндәр. Мөхәмәтша Буранғолов тураһындағы мәҡәләмдә был юҡ. Томдарҙы әҙерләгәндә лә өҫтәмәгәнмен. Йәл.

Известный историк Василий Ключевский утверждал, что история, возможно, ничему и не учит, но за ее незнание она проучивает.

Һабағыңды уҡытырмын!

Һабаҡ уҡыу – ниндәй изге эш.

Изге эштәреңде онотоп китһәң, тормош үҙенең киҫкен һүҙен әйтмәй ҡалмай – һабағыңды уҡыта.

22 июль, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Өсөнсө көн кис күк күкрәп, матур ямғыр яуҙы. Тын алыуҙары иркенәйҙе. Ләкин ҡоролоҡ көйҙөргән яҡтарҙа хәҙер ямғырҙар килһә лә хәлдәр яҡшырмай инде.

Ҡайһы бер ауыр ҡайғыларҙан һуң кеше лә, әллә ниндәй шатлыҡтар килһә лә, яңынан элекке хәлендә тормошон дауам итә алмай. Һуңлап килгән ямғырҙарҙың баҫыуҙарҙың хәлен төҙәтә алмағаны һымаҡ, һуңлап килгән ҡыуаныстар ҙа ҡыуаныс түгел шул.

«Ағиҙел»дең май һанында Әмир Әминевтең «Йондоҙ сәскә» тигән повесы баҫылды. Үҙенсәлекле әҫәр, символика, подтекст бар. Башҡорт прозаһында яңы күренеш.

Тик шул уҡ һанда Әлфиә Әсәҙуллинаның «Хәтер күпере» тигән поэмаһы. Һүҙҙең күплеге, текстың ҙурлығы ғына шиғриәттә поэма

тыуҙыра тип уйлайҙармы әллә? Ихлас кисереп яҙылған, әммә үҙәге юҡ. Автор нисек килтергән, шул көйө сығып киткән, күрәһең.

Хәйер, быға нимәгә аптырарға? Алтынсы һанда Фәнил Күзбәковтың «Торналар сыңы» донъя күрҙе. «Дастан» тип исемләүе генә ни тора! Ләкин был дастандың күп урындарынан шифриәт йәйәү ҡасҡан һымаҡ. Һәйбәт кенә башлай ҙа аҙаҡҡа табан бөтөнләй хәлдән тая. Бында ла шул күләм аша жанрҙы билдәләргә тырышыу. Үҙенә ҡәтғи талап ҡуя алмаған шағирҙың ҡулынан журналға әҙерләнгән әйберҙәрҙең тейешле кимәлдә эшләнмәйенсә донъя күреүе ғәжәпме ни?

Исмаһам, элекке йылдарҙағы һымаҡ, редколлегияны йыйып, кәңәшләшһендәр, әҫәрҙәрҙе алдан уҡытһындар ине. «Мөхәрририәт» тигәндәре ҡағыҙҙа ғына ҡалды.

Мостай Кәрим көндәлектәрендә лә аҡыл эйәһе: «Молитва. Не дай, Бог, мне всего того, что я прошу у тебя. Дай то, что можешь, что пожелаешь. Ты же мне плохо желать не можешь» (21.06.2003).

Ул кешеләр менән дә, президенттар менән дә бәхәсләшә, Аллаһ алдында ла ҡаушап ҡалмай.

Ләкин ағайҙың юғарылағылар менән бәхәсе, уларҙы тәнҡитләүе күберәк ҡағыҙҙағы көндәлектәрҙә, тик көндәлек тормошта түгел ине шул.

26 июль, 2012 йыл. Кесаҙна.

Өсөнсө көн Асылыкүлдәбеҙ. Пионерҙар лагерының бер корпусында икенсе ҡатта тотош ҡанатта беҙ генә. Бүлмәләр бында биш-алты. Беҙ икәүендәбеҙ. Былтыр ошонда Азамат Юлдашбаев яҙыусыларҙың ялын ойоштороуҙары. Быйыл булмағандар.

Бына ҡайҙа ҡымыҙ санаторийы өсөн ғәжәп урын. Тәбиғәте матур һаҡланған, һауаһы саф, һыуы шифалы. Бәлки санаторий-фәләнһеҙ ошолай һаҡланыуы һәйбәтерәктер.

Башҡортостандың барлыҡ санаторийҙарында булдым, Асылыкүл һымаҡ йомшаҡ тәбиғәтлеһен күргәнем юҡ.

Ҡымыҙ эсәбеҙ, һыу инәбеҙ. Радио ла, телевизор ҙа, гәзит-фәләндә юҡ. Донъянан ваз кисмәһәк тә, уның ығы-зығыһынан айырылып, боронғо тормош рәүешендә йәшәйбеҙ. Әҙерәк шиғырҙар яҙыла башланы. Бәлки ҡузғалып китермен әле.

30 июль, 2012 йыл. Дүшәмбе.

Шиғырҙар яҙыла, тик күңел ҡәнәғәт түгел. Көндәлектәрҙе ҡарайым. Баҫырға әҙерләгәндә 2009 йыл менән тамамлап торорға

уйлайым. Асылда 40 йыл буласаҡ: 1969–2009. 1968 йыл бик аҙ ғына, юҡ тиерлек. Былай йомғаҡлар өсөн әле баҫтырып алғандарға 2009 йылдың ҙур булмаған һуңғы киҫәге өҫтәлә.

Бында килешләй Мәкәшкә һуғылдыҡ. Наилдың хәле насар, ныҡ һыҙлана, эш яҡшыға табан бармай. Йома көн Наил янында булып, Айраттар Асылыкүлгә килделәр. Һыу буйында ултырҙыҡ. Шәмбе Наилдың хәлен белеп, Ришаттар Айраттар менән бында килделәр. Асылыкүлдә һыу инеп, Ришаттың йырҙарын, баянын тыңлап, матур ял иттек.

Асылыкүл тирәһендә тәбиғәт бик матур һаҡланған. Күпме үләндәр, ағастар, ҡыуаҡтар – ниндәй төрҙәре генә юҡ. Бында ла Мәскәү ҡул һуҙмаҡсы, тиҙәр. Ул сағында изге күлебеҙгә беҙҙең халыҡ өсөн юл бикле буласаҡ. Башҡортостан инде нисәнсе ҡат колонизацияланa, башҡорт ерҙәренә, республика байлығына, халыҡтың ҡара тир түгеп туплаған мөлкәтенә неоколонизация ябырыла. Нимәбеҙ генә ҡалды?

1 август, 2012 йыл. Шаршамбы.

Бер-ике көн һыуытып торҙо ла бөгөн тағы йылыта башланы. Асылыкүлдә һыу инеүҙе туҡтатҡан юҡ. Төнъяҡтан һалҡын ел, көслө тулҡындарҙа бәүелеүе рәхәт.

Шиғырҙар байтаҡ яҙылды. Фәриҙә еләк, сейә һ.б. япраҡтар йыя. Әлморон да бар.

Буш ваҡытымды яҙыу өҫтәле артында үткәрәм. Бында китапхана-фәлән юҡ, Фәриҙә уҡырға бер нәмә лә алмаған. Уҡырға журнал булһа ла килтер, тип, мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Рәфискә әйткәйнек. Рәхмәт уға, килгәнебеҙҙә ҡаршы алды. Ҡымыҙҙан өҙмәй, заказ биреп торабыҙ. Хаҡы ла Өфөләгесә түгел. Уҡырға журналдар килтергәйне, күбеһе «Тамаша». Ҡыҙыҡһынып, мин дә ҡараштырам. Биш пьеса уҡыным (Асанбаев, Х. Зарипов, Ф. Ғәлимов һ.б.)

Хәҙер пьесаларҙа кәрәккәнгә лә, кәрәкмәгәнгә лә йыр индерәләр. Ярай инде, уныһы беҙҙең драматургияла күптән килә, фольклор традицияларына барып тоташа. Һуңғы ваҡытта спектаклдәрҙә бейеү артыҡ күбәйҙе. Пьеса тексында улар булмаһа ла, режиссер өҫтәп ебәрә. Тамашасыны шуның менән арбамаҡсы, шаҡ ҡатырмаҡсы була.

Әҙәбиәт – һүҙ сәнғәте. Унда тамашасыға тәьҫир итеү, уға фекереңде еткереүҙең төп сараһы – һүҙ. Геройҙарҙың һөйләшеүенә хәрәкәттәр ҙә, ҡаршылыҡтар ҙа, бәхәс-бәрелештәр ҙә – барыһы ла һалынған. Унда йыр-бейеү менән генә һүҙҙең көсөн арттырып булмай.

Ә ниңә боронғо грек трагедияларында хорҙар бар тигән һорау тыуыуы ла мөмкин. Ул ваҡытта сәнғәт синкретик рәүештә булған, хәҙерге драма, опера, балет, оратория, хор, симфония һ.б. Ул саҡтарҙа барыһы бер тамашала берләшкән. Беҙҙең фольклорҙа ла тел сәнғәте, музыкаль дуэт, үҙенсә йыр-ариялар, сеңләүҙәр, мөнәжәттәр, ҡурай, бейеү, йыр тарихы һ.б. – барыһы бергә ҡушылған бит.

Әҙәбиәттең һәм уның жанрҙарының быуаттар буйына тупланған традицияларының үҙ ҡанундарын һәм талаптарын барлыҡҡа килтергән. Әҙәбиәттең иң элек һүҙ сәнғәте булыуы һәм уҡыусылар менән тел аша бәйләнешкә инеүе уның төп сифатына, булмышына йылдан-йыл нығыраҡ әйләнгән. Балетта берәү ҙә сығып шиғыр уҡырға тотонмай. Йәки симфония башҡарылғанда рәссам үҙенең буяу сәнғәте менән ҡыҫылмай. Шул уҡ хәл драматургияла. Уның классик үрнәктәрен алып ҡарағыҙ. Шекспирҙа йыр-бейеүҙәр күпме? Островскийҙа бер ни тиклем музыкаль мәлдәр булһа ла, улар тик штрихтар кимәлендә. Ә донъяға танылған Чеховтың сәхнәгә бәйле ижады? Башҡорт драматургияһының иң юғары ҡаҙаныштарынан булған «Ай тотолған төндә» әҫәрендә берәй йыр йәки бейеү бармы? Яңы заман классигы Вампиловтың ижады? Розовты байҡап ҡарағыҙ.

Мостай Кәримдең «Ай тотолған төндә»һенә килбәтһеҙ бейеүҙәрҙең режиссер диктаты менән килеп инеүе был әҫәрҙең гармонияһын емермәнеме ни? Әлбиттә, Мостай Кәрим драматургияһында ла «Ҡыҙ урлау» һымаҡ «йырлы» үрнәктәр бар. Йәки «Ғәлиәбаныу»ҙағы йырҙарҙы алып ташлаһаң, был уникаль пьесанан бер ни ҙә ҡалмаясаҡ. Ләкин ундағы йырҙар һәр береһе үҙ урынында. «Ҡыҙ урлау»ға яңы мәғәнәһеҙ йыр текстары өҫтәп, асылда авторҙың образлы системаһына тупаҫ «яңылыҡтар» өҫтәнеләр, дөрөҫөрәге, сәнғәтте емерҙеләр.

Күрәһең, пьесала һүҙ көсһөҙ икән, башта фекер юҡ икән, аяҡҡа йәки тамаҡҡа көс төшә торғандыр.

3 август, 2012 йыл. Йома.

Бына ҡайтыр көн дә етте. Кисә тағы ла Айраттар алып китте. Асылыкүл буйында уха бешергәндәр, карптан. Ҡыҙҙырылған сабаҡ та бар. Алға ауылы янындағы был урында һыу ингес бик матур. Күлдең күренеп ятҡан ҡомло төбөнә тулҡындар үҙенең матур эҙен һала икән, сүлдәге бархандарҙың – тулҡындарҙың ныҡ кесерәйтелгән күсермәһе һымаҡ.

Беҙ иртәнге сәйҙән һуң Асылыкүлдә ике рәт һыу ингәйнек, ике сәғәт рәхәтләнеп ял иткәйнек, ҡызынғайныҡ. Айрат менән барғас

тағы ла һыу индек. Айратты байрам менән ҡотланыҡ – десантниктар көнө. Шунан ул беҙҙе шарлауыҡҡа алып китте. Барышлай бер тау моронона боролоп, донъяға һоҡланып торҙоҡ: бөтә күл күренә. Аҫта яҡында ғына, беҙ ял иткән лагерь. Тирә-яҡта хайран ҡалырлыҡ күренештәр.

Был тау башында беҙҙе таныған кешеләр килеп күреште. Мин белгән кеше лә бар – «Нур» татар театрының директоры Урал.

Шарлауыҡҡа саҡырҙыҡ, теҙелешеп киттек.

Ҙур булмаһа ла, шарлауыҡ бик матур тәбиғәт ҡомартҡыһы икән. Аҫтында ике тапҡыр ҡойондоҡ.

Яҡындағы Буранғол ауылы ҙур ғына, төҙөк күренә. Йәшәгән ерҙәре иҫ киткес. Далаһы ла, урманы ла, шарлауығы ла.

Алға янындағы урынға яңынан барып, тағы ла оҙаҡ итеп һыу индек.

Тағы ла эҫе көндәр башланды, утыҙ градустан да юғары. Ҡояшта ныҡ ҡына яндыҡ, хатта битем әсетеп китте. Китер алдынан көнөбөҙ шулай иҫтәлекле үтте.

Бөгөн биштә тороп, бында яҙылған шиғырҙарҙы яңынан ҡарап сыҡтым. Байтағы элек теркәп, башлап ҡуйған юлдарҙың дауамы, үҫтерелеше, тамамланыуы. Яҙырға форсат булмағанда, көндәлектәргә төшөрә барам. Шунан ошондай аулаҡта уларға яңынан әйләнеп ҡайтам. Был инде байтаҡ йылдарҙан шулай килә, форсат тыуғанда бик уңышлы миҙгел булып ала.

Әле һигеҙ көндә эреле-ваҡлы утыҙлап шиғыр яҙылған. Үҙенсә «Асылыкүл йәйе». Алдан әҙерлек булмаһа, бер нисә көндә ул тиклем шиғыр яҙыу мөмкин түгелдер.

Белмәнем көнөмдө-төнөмдө,
Күңелдә тулышып йөрөгән
Шиғырҙар түгелде, түгелде…

Һәр бер һуҡыр Гомер була алмай, һәр һунарсы Тургеневҡа, һәр балыҡсы Хемингуэйға, һәр врач Чеховҡа әйләнмәй, эсеп кенә Есенин була алмаҫһың, һәр аҡһаҡтан Байрон, Ғафури, Кейекбай тыумай. Һәр илгиҙәр Аҡмулла түгел, һәр тотҡон Салауат, Йәлил түгел…

16 август, 2012 йыл. Кесаҙна.

Наил ҡустымдың вафатынан һуң һаман иҫкә килә алмайым, һаман ышанып булмай. 3 августа Асылыкүлдән ҡайтышлай янында булдыҡ.

Бик ныҡ һыҙлана ине. Нисәмә көндәр шулай ғазапланды. Ашҡаҙан биҙендәге яман ауырыуҙың яманлығын төрлө тынысландырғыс дарыуҙар ҙа баҫа алмай икән. Ә морфийҙы бирмәйҙәр. Шул саҡ ғүмеремдә беренсе тапҡыр улай яфалама инде, ҡустымдың был ауырыуҙы еңеренә өмөт юҡ, ғазаптарҙан ҡотҡар, тиҙерәк ҡотҡар тип, Аллаға ялбарҙым. Наил 7 августа төнгө 12 тулыр алдынан үтеп киткән. 8-дә Мәкәш зыяратында мосолманса кәфенләп ерләнек. Ауыл халҡында һәйбәт йолалар һаҡланған әле: ирҙәр ҡәберҙе ләхет алып ҡаҙғандар, йыуа торған, зыяратҡа алып бара торған һауыттар – табут, ҡалай бар. Ат менән алып барҙыҡ, артынан мин, Рәфис, Искәндәр зыяратҡа тиклем атлап барҙыҡ. Ҡатындар өй янында ҡалды, күрше тирә-яҡ аш-һыу әҙерләүҙә бик ихлас ярҙамлашты.

Йыуғандарын, кәфенгә төргәндәрен тәүге тапҡыр башынан аҙағына тиклем күрҙем.

Наил ғүмере буйы эш менән йәшәне, кешегә яманлыҡ эшләү, алдашыу уйында ла булманы. Йәнең йәннәттә булһын, ҡустым. Был яҡты донъяларҙан ураҙа айында китеп барҙың. Изгеләрҙе генә шулай ала тиҙәр бит. Беҙ беребеҙ ҙә бәлки изге лә түгелбеҙҙер, әммә һин яуыз булманың, был үҙе үк игелек бит.

11-дә Стәрлетамаҡта уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһендә ҡатнаштым. Һәләтле балалар менән эшләү темаһына арналған. 2-се дискуссия майҙанында булдым. Сығыш әҙерләгәйнем, иркенләп һөйләргә ваҡыт ҡалманы. Һуңғы өлөшөн – таланттарҙы кем өсөн әҙерләйбеҙ тигән мәсьәлә хаҡында әйтеп, сәләмләү менән генә сикләнергә тура килде.

Пленар ултырыш ҡаланың мәҙәниәт һарайында үтте. Президент Р.З. Хәмитов ҙур ғына инеш һүҙ әйтеп, алып барҙы. Министр А.С. Ғаязовтың доклады, тағы ла 4–5 сығыш. Ике сәғәттә бөттө. Президент мәғарифҡа 4–5 млрд. һум аҡса маҡсатҡа ярашлы тотонолмай, әрәм-шәрәм була, республика бюджетының өстән бер өлөшө – 45 млрд. һум мәғарифҡа китә, башҡаса арттырыу мөмкинлеге бөтөнләй юҡ, тине. 20 процентҡа ҡыҫҡартығыҙ, юлын табығыҙ тигән талапты ҡуйҙы. Бик ауыр бурыс, әлбиттә. Был ҡыҫҡартыуҙар туған телдәрҙе уҡытыу иҫәбенә булмаһын ине тип ныҡ хафаланам.

Тарихтың ҡоласы киң. Уның хәтерен тарайтырға тырышырға ярамай. Цивилизациялы илдәрҙә һәйкәлдәрҙе емермәйҙәр, ҡомарт-ҡыларҙы һаҡлайҙар. Вәхшилек инстинкты ҡоторғанда ғына кеше барыһын емерә, вата. Был беҙҙең Рәсәй тарихында бигерәк күп.

Ғибәҙәтханаларҙы емереү, боронғо китаптарҙы яндырыу, тарихи атамаларҙы алмаштырыу, изгеләрҙе мәсхәрәләү – былар үҙенсә енәйәт, әммә беҙҙең илдә үҙенсә «традиция».

Беҙ уҡыған тарихи сығанаҡтарҙа совет авторҙары 30-сы йылдарҙа Германияла майҙандарҙа китаптарҙы яндырған нацистарҙы ҡәһәрләне, ә шул уҡ ваҡытта СССР-ҙа күпме ҡиммәтле ҡомартҡылар юҡ ителде. Инквизицияның аутодафеларында айырым кешеләр утта яндырылһа, Варфоломей төнөндә меңдәрсә ҡорбандар юҡ ителһә, социализм төҙөгәндә ғәйепһеҙгә миллион кешеләрҙең ғүмере өҙөлдө, тотош ил буйынса сиркәүҙәр, мәсеттәр емерелде, дини китаптар яндырылды, репрессияға дусар булған яҙыусыларҙың әҫәрҙәре тыйылды һ.б., һ.б.

Тарихтың ҡоласы киң. Унда Минин ҡаршы түгел Ленинға, Ленин ҡаршы түгел Мининға. Тарихтың Распутины ла бар, Путины ла бар. Уға ҡурҡағы ла, ҡыйыуы ла һыя, ҡуяны ла, айыуы ла, Зайцевы ла, Медведевы ла һыя. Тарихтан яҡшыны ла, яманды ла һелкеп ташлап булмай. Һыҙып ташларға тырышыуҙар ваҡытлыса, һәр хаким быны үҙенең файҙаһына эшләмәксе, әммә ғәҙел хаким батшалар юғарылығынан юғарыраҡ, ул илаһи бейеклектә.

Парламент тигән һүҙҙең нигеҙендә һөйләү тигән мәғәнә ята икән. Әлбиттә, бында мәғәнәле фекер алышыу күҙ уңында тотолғандыр. Әммә Рәсәйҙең парламенты ла, республикаларҙағы, өлкәләрҙәге депутаттар йыйындары ла күберәк буш һүҙ һөйләү урынына әйләнеп бөттө түгелме?

19 август, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Аллаға шөкөр, изге ураҙа айы иҫән-һау тамамланды. Бөгөн ғәйет байрамы, баҡсалағы өйөбөҙгә арнап Ҡөрьән ашына туғандарыбыҙҙы йыябыҙ.

Фәриҙә менән күлдә һыу инәбеҙ. Кисә – бишенсе көн – бер үҙем атлап барҙым. Йәй уртаһында был туғайҙан ялан аяҡ үтә торғайныҡ. Көндәр эҫе булһа ла, тирә-яҡ йәм-йәшел, аяҡ аҫты хәтфә һымаҡ ине. Әле үләндәр һарғайышып кипкән, таҡырланған. Анау көндө бындағы мәктәп янындағы майҙансыҡта ла шуны күреп аптырағайным. Әле ямғырҙар яуып алғылай. Улар һуңлап килгән мәрхәмәт һымаҡ булһа ла, ужымдарға, исмаһам, файҙаһы тейер. Әле уны сәсергә икеләнеп торалар. Күпселек райондарҙағы ҡоролоҡ 2010 йылғынан да яманыраҡ тиҙәр.

Хәҙергене йыш әрләһәк тә, бөгөнгө заманда дәүләттең хәстәре өсөн рәхмәттәр әйтергә, шөкөр итергә кәрәк. Башҡортостанда ғына

түгел, күпме өлкәләрҙә үләне лә, игене лә көйгән ерҙәрҙә йәшәүсе крәҫтиәндәр, дәүләт ярҙамы булмаһа, бөгөн һәләкәт уртаһында ҡалырҙар, күпме халыҡ аслыҡтан ҡырылыр ине бит. 1921 йылғы аслыҡтан күпме ауылдар мәйет менән тулған, милләтебеҙ күпме юғалтыуҙарға дусар ителгән бит. Бөгөнгөгә шөкөр итеп, шуларҙы онотмаһаҡ ине.

Салауат Юлаев исемендәге премияға төрлө ойошмаларҙан тәҡдим ителгән һигеҙ (!?) яҙыусы араһында Рәшит Шәкүрҙең «Ылысындар оса бейектә» (2007) тигән китабы ла бар. Үҙенең оло-оло хеҙмәттәре менән, ҡыйыу йәмәғәт эшмәкәрлеге менән Рәшит Шәкүр республикалағы иң юғары премияларға күптән лайыҡ, әлбиттә.

Был китап хаҡында яҙырға тип редакциянан шылтыратып һорағайнылар, ярар тигәйнем. Рәшит үҙе лә шылтыратты. Бик яҙғы килә, яҙырмын да. Байтаҡ уҡып, Шәкүрҙең хеҙмәттәрен байҡап ултырҙым. Ғалим булыу бер нәмә, шиғриәт икенсерәк шул.

Асылыкүлдә шиғырҙар эркелеп килгәйне. Уларға яңынан әйләнеп ҡайтып, яҙғандарымды тағы ла ҡарап сығаһы бар, әлбиттә. Әлегә һыуынһындар, ваҡыт үткәс, улар асығыраҡ күренәсәк. Улар менән тағы ла ныҡ ҡына эшләп алырмын. Әлегә байтаҡ уҡыйым, журналдарҙы ҡарайым. Уҡыған һайын кәйеф нығыраҡ ҡырыла. Әҙәбиәт бер ваҡытта ла тик шедеврҙарҙан ғына тормаған, гәрәбәләре лә, тулҡын килтергән сүп-сарҙары ла булған. Һәр осорҙа ла сүбе, бәлки, күберәк тә булғандыр. Улар онотолған, гәрәбәләр тороп ҡалған. Ләкин ул дәүерҙәр хаҡында шулай фекер йөрөтөү еңел булһа ла, күҙ алдыңда өйөлә барған макулатураны күреүҙәре бик ҡыйын шул. Бигерәк тә тейешле баһа биреүсе тәнҡиттең булмауы, шул арҡала шиғыр әүәләгән һәр кемдең үҙен классик һанап йөрөүҙәре – хәҙерге ижад донъяһындағы иң яман бәләләр бына шул арҡала тыуа.

Иң бәхетле саҡтарымда ла мине ҡапыл ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо быуып ала. Йылдар үткән һайын, был донъяның фанилығын нығыраҡ аңлаған һайын был тойғо көсәйә. Ҡартлыҡ мыжыуы түгел был. Бушҡа үткән ваҡыттарҙы уйлап ҡәнәғәтһеҙлек, дөрөҫ йәшәргә мөмкин булып та, дөрөҫ йәшәлмәгән саҡтар өсөн ҡәнәғәтһеҙлек. Кәйефең ҡырылып, донъяға ҡул һелтәгән саҡтар ҙа була. Гәрсә донъяны ҡул һелтәп кенә үҙгәртеп булмай. Ә һин бына үҙ-үҙеңә ҡул һелтәп ҡара, үҙеңде үҙең хөкөм итеп ҡара! Үҙеңдән үҙең ҡәнәғәт булмау башҡаларға рәнйеүҙән дә ҡыйыныраҡ. Был саҡта бер кемде лә ярҙамға саҡырып булмай.

3 сентябрь, 2012 йыл. Дүшәмбе.

Бөгөн каникулдарҙан һуң тәүге эш көнө. Толкачев йыйып алырға тейеш. Насип булһа, тулыһынса ижадҡа бирелеп йәшәргә лә күп ҡалманы инде. Әллә ярты йыл, әллә бер йыл – һайлауҙар яңы тәртип буйынса киләһе йылдың көҙөндә булырға ла мөмкин.

Магомед Ахмедов «Аҡ торналар» байрамына саҡыра. Төрлөсә уйлап йөрөнөм дә, барырға кәрәк тигән уйға килдем. 2007 йылда был байрамда булғайным инде. Ҡабат-ҡабат ҡатнашырға мөмкин ул тантаналарҙа. Һуңғы көндәрҙә Рәсүл Ғамзатовты яңынан уҡыштырам. Бөтәһе лә таныш, әлбиттә. Тик Рәсүлде уҡыған һайын яңынан асаһың, нығыраҡ хайран ҡалаһың.

Бөйөктәрҙең йәшләй бейеклектәр яулауҙары. Әлегеләй хәтеремдә, 1963 йылда 35 йәшлек Сыңғыҙ Айтматов, 40 йәшлек Рәсүл Ғамзатов Ленин премияһы лауреаттары булғайнылар. Хайран ҡалырлыҡ ваҡиға ине был хәбәр. Беҙ былтыр ғына университет бөтөргән Ғәзим Шафиҡов менән быға ни тиклем хайран ҡалып йөрөгәйнек. Әйтерһең дә башҡорт әҙибенә биргәндәр был иң юғары премияны. Хәйер, Ғамзатов та, Айтматов та беҙгә (һәм беҙгә – башҡорттарға ғына түгел) үҙебеҙҙеке һымаҡ яҡын ине бит. Был даһиҙар күпме милләт йәштәренең остаздарына әйләнде.

Шул йылдарҙы яңынан байҡағанда Рәми Ғариповтың ҡурайға: «Бер осоңдан ниңә ҡан тама?» – тигән һүҙҙәре иҫкә төшә. Милли телдәргә, милли мәктәптәргә күпме һәләкәттәр килтергән алтмышынсы йылдар. Һәм шул уҡ ваҡытта милли әҙәбиәттәрҙең ҡаҙаныштарын ни тиклем юғары баһалаған, күпме тәржемә иткән, үҙәк нәшриәттәрҙә зур-зур тираждар менән баҫтырған алтмышынсы йылдар… 1957 йылда Ленин премияһы булдырылғас, уның тәүге лауреаттары Муса Йәлил, Мөхтәр Ауэзов була.

Ә хәҙерге дәүләт премияларының лауреаттары араһында милли әҙиптәр генә түгел, хатта ысын рус яҙыусылары ла юҡ тиерлек. Юҡ дәрәжәһендә.

Донъяла үҙенең ижад мәктәбен тыуҙырған шағирҙар бар. Әммә үҙенең әҫәре, ижады һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге менән яңы байрам тыуҙырған шағирҙарҙан мин Рәсүл Ғамзатовты ғына беләм. «Аҡ торналар» – донъялағы уникаль күренеш.

22-дә Өфө педагогтарының август кәңәшмәһендә сығыш яһаным. Төп һүҙем таланттарҙың ситкә китеүе тураһында. Төп сәбәптәрҙең береһе – милли ерлектән, халыҡтың рухи принциптарынан ситләшеү, ил

тойғоһо тәрбиәләмәү, көнбайыштың алама өлгөләрендә алып барылған мәғәнәһеҙ эксперименттар, совет педагогикаһының, ватан мәктәбенең ҡаҙаныштарын бөтөнләй инҡар итеү. Балаларҙы кем өсөн үҫтерәбеҙ?

Луиза көндәлектәрҙең беренсе томының эшен бөтөрөп килтерҙе. Әле шуларҙы уҡыуға ла ваҡыт бүлергә тырышам. Материал бик бай, тик бөгөнгө уҡыусыларҙы үҙенә ылыҡтырырмы тигән шикшөбһәләрем дә көслө. Шулай ҙа эштең осона сығып, әҙерләп ҡуяйым әле. Көндәлектәрем блокноттарҙа көйөнсә ятып ҡалһа, үҙем киткәс, улар менән кем генә шөғөлләнһен инде? Рәми ағайҙың архивында ни тиклем ихлас эшләгән беҙҙең һымаҡ инанып йәшәүселәрҙе, тоғро шәкерттәреңде бөгөн табып ҡара!

Быйыл Салауат премияһына күрһәтелгәндәрҙең исемлеге (яҙыусыларҙың) унға етә яҙҙы. Иң лайыҡлыһы Рәшит Шәкүр, әлбиттә. 29-да «Башҡортостан»да мәҡәләм сыҡты – «Шағир бәхете». Комиссияға ла фекеремде яҙып бирҙем. Әлбиттә, исемлектә Талха ағай Ғиниәтуллин да бар. Әммә уға Аксаков премияһын бирҙек, халыҡ яҙыусыһы булды.

Ғәҙеллекте һаҡларға кәрәк.

Инде нисә көн тештәрҙе ремонтлайҙар. Ундай хәлдәр элек тә булғыланы, әммә был тиклем яфаланғаным юҡ.

«Шәһит билбауы»н Кристина Андриановаға тәржемәгә бирҙем. Кавказда кәрәге тейеүе бар.

11 сентябрь, 2012 йыл. Шишәмбе.

Кавказ минән ҡасҡан булып сыҡты.
Күрәлманым тауҙарҙа ысыҡты.
Торһалар ҙа көтөп Аҡ торналар,
Киҫелде шул юлым. Юҡ бер сара.

«Аҡ торналар байрамына» барып булманы. 2-дә, йәкшәмбе көн, бик һыуыҡ ине, көслө ел, ямғыр. Фәризә менән йоҡа ғына кейенеп сыҡҡайныҡ, кире инеп, кейенергә йыбанып, ҡала буйлап йөрөнөк. Өшөнөк. Тамаҡ ауыртып уянғайным, температура ла бар ине. Шулай ҙа эштә йөрөп ҡайттым, 4-дә теш врачтарында булдым. Хәл бөтөп, саҡ йөрөнөм. 5-дә Министрҙар кабинетына Салауат Сәғитовҡа барыр алдынан больницаға инеп, врачтарҙы күреп, юлға фатихаларын алайым тип уйлаһам, улар пневмония табып, больницаға һалып та ҡуйҙылар. Бер сәғәткә һорап, эштәр буйынса йөрөп килдем. Бына

бер аҙна дауаланып ятам. Был хәл бик йышайып китте әле. Быйыл ғына өсөнсө тапҡырға пневмония. Иртән дә, кис тә система ҡуйҙылар. Температура бер-ике көндә төштө.

Көндәлектәрҙең Луиза килтергән өлөшөн бында уҡып бөттөм. Күңелдә һаман да икеләнеү: баҫтырырғамы, юҡмы? Спонсорҙар табып булмаҫ һымаҡ. Үҙемдән һуң был эш менән кемдер булыр тигән өмөт тә юҡ. Үҙем иҫән саҡта сараһын күреп, үҙемдең иҫәпкә икеме, өсмө том итеп баҫтырасаҡмын. Шундай ҡарарға килдем. Хәҙер икеләнеүһеҙ алға, һуҙмайынса нәшриәткә тапшырырға. Шамил Хажиәхмәтовтың «Скиф»ындағы вариант буйынса миллионға яҡын аҡса кәрәк. Бәлки арзаныраҡ юлын табып булыр. Бик ныҡ ҡыҫҡартып, «Ағиҙел» өсөн дә әҙерләйем.

Хисмәт Юлдашев «Себер еле» исемле китабын 31 мартта автограф яҙып биргәйне. Ошоға тиклем уҡырға бик теләһәм дә, һис кенә лә форсат булманы. Әле уҡып сыҡтым. Бик шәп! Бындай китаптар бик һирәк сыға. Әле ошондай шиғырҙар яҙыла икән, шиғриәтебеҙ йәшәй! Хисмәттәр, Рәмилдәр быуынының тәүге баҫылған әйберҙәрен уҡығас та уларға ҙур өмөттәр менән йәшәнем. Ҡулымдан килгәнсә ярҙам итергә тырыштым. Улар хаҡында һикһәненсе йылдар аҙағында ҙур мәҡәлә – ижадтары тураһында үҙенсә тәүге тикшеренеү яҙҙым. Хисмәттең был китабы тураһында ла һүҙ әйтке килә, нисек килеп сығыр.

Анау көндө TV-нан «Слово пастыря» тигән тапшырыуҙы – патриарх Кириллдың сығыш-вәғәзен тыңланым. Кеше шул тиклем дә аҡыллы, дәлилле, тәьҫирле итеп һөйләй алыр икән! Һүҙе теҙелеп, ағылып ҡына тора. Был яҡтан руханиҙарҙан күп нәмәгә өйрәнәһе бар. Дин әһелдәренә был талаптар бик ҡаты ҡуйылған, уларҙың уҡыу йорттарында вәғәз һөйләүгә өйрәтеүҙе сәнғәт юғарылығындағы оҫталыҡҡа еткереү итеп ҡарайҙар, күрәһең. Әлбиттә, ғибәҙәтхана хеҙмәткәре көн дә халыҡ алдына сыға, халыҡҡа һүҙ менән мөрәжәғәт итеүҙә көн дә тәжрибә туплай. Ләкин был эштә оҫталыҡҡа, камиллыҡҡа үҙ-үҙеңә иң ҡаты талаптар ҡуйғанда ғына ирешергә мөмкин.

Мәскәүҙән мәғариф тураһында өсәүҙең фекер алышыуы. Капельница алып ятҡанға исемдәрен, аттарын-заттарын уҡый-белә алманым. Һәр хәлдә, һөйләшкәндәренән әллә ни мәғәнә тапманым. Һүҙ күберәк башланғыс мәктәбенең айырым йәшәргә тейешлеге, үҫмерҙәр мәктәбенең, йәғни төп дөйөм мәктәптең мөһимлеге тураһында барҙы. Былары ла кәрәктер.

Ләкин Мәскәү өсөн мәғариф мәсьәләләренә ҡарағанда реклама мөһимерәктер. Бер-ике минут һөйләшәләр ҙә, һүҙҙе реклама бүлә, тағы ла бүлә, тағы ла бүлә. Ун-ун биш минутта әйтерлек «фекер алышыу» әллә күпмегә һуҙыла. Нимәләр хаҡында һүҙ барғанын аңлар өсөн кеше күпме ваҡытын сүп-сар ҡарап үткәрергә тейеш була. Һөйләшеүҙәге фекер ебе өҙөлә. Әллә мөһим теманы томалар өсөн, ғөмүмән, актуаль мәсьәләләр тураһында уйлана алмаһындар өсөн бик күп тапшырыуҙарҙа шулай эшләнәме?

«Единая Россия – Башкортостан» гәзитендә (6.09.12) Әлим Әхмәҙиев менән Ренат Ғатауллиндың «Школа в тисках экспериментов» тигән мәҡәләһе сыҡҡан. Бында әйтелгәндәрҙе мин үҙемдең сығыштарымда күпме әйткәнмен, мәҡәләләремдә күпме яҙғанмын инде. Ҡабатлаһындар ҙа, ти, әммә был хәлдәрҙән сығыу юлдары ҡайҙа? Хәҙер үҙәк матбуғатта ла дөрөҫ һүҙҙәр күп һөйләнелә, әммә улар тик һүҙ генә шул. Кардиналь үҙгәрештәр юҡ.

Лиана Мөхәмәтдинова (беҙҙең комитеттан) 400 битлек «Мәғариф тураһында Закон»ды өйрәнә. Думала ҡараласаҡ.Мәктәп дәреслектәре тураһында унда махсус һүҙ бармы икән? Сыҡҡас, танышырға кәрәк. Дәреслектәр (федераль) аша бала күңелен емерткес эштәр эшләнә бит.

Дүшәмбе көн идара ултырышы үткән. Миңә шылтыратыусы ла булманы. Киләһендә саҡырмаһалар ҙа барып был хаҡта әйтергә тура килер. Гүйә, мин Союзда 16 йыл эшләмәгәнмен, рәхмәт әйтерлек, әҙәбиәтебеҙҙең тарихында ҡалырлыҡ һәм ҡаласаҡ эштәр булмаған... Оноторорға тырышыусылар уҙғанды нисек тә яманларға маташһалар ҙа, зирәктәрҙең хәтере бөтмәгәндер әле.

14 сентябрь, 2012 йыл. Кесаҙна.

Хәлдәр һәйбәтләнә. Ике-өс көн ҡаршылағы элек шаулап торған, хәҙер бер өлөшө генә һаҡланған паркта йөрөйөм. Кисә төрлө райондарҙан килгән үҙешмәкәр сыуаш төркөмдәре сығыш яһайҙар ине. Байтаҡ көйҙәре-йырҙары беҙҙекенә оҡшаш, кем кемдән алғандыр. Хәйер, һәр милләттең композиторҙары башҡа халыҡтарҙың музыкаһында төрлөсә яңғыраштарҙы хәҙер бик оҫта «үҙләштерә».

Ял көнө Фәриҙә, балалары менән Артурҙар килгәйне. Асҡарға күлдәге ике аҡҡошто, көтөүе менән йөрөгән балыҡтарҙы күрһәттек. Тирға кереп, призға ун патрон аттым: биш тапҡыр унға, өс тапҡыр туғызға, ике рәт етегә тейгеҙгәнмен. Ата алам икән әле. Ҡулым ныҡ тота, тик күҙ насарыраҡ. Ашыҡмайыраҡ атҡанда, күберәк мәрәй ҙә алған булыр инем. Призға Асҡарға бәләкәй генә вертолет алдым.

Университетта хәрби кафедра ойошторған атыштар – подвалдағы тир иçкә төштө. Шунда йөҙҙән туҡһан биш очко йыйып, еңеүсе булғайным. Минең мишенде «Стреляйте, как Бикбаев» тип, вестибюлгә элеп ҡуйғайнылар. Элеккесә булмаһа ла, мәргәнлек ҡалған икән әле.

Хисмәт Юлдашевтың «Себер еле» китабы тураһында яҙғы килә. Уҡығанда һыҙғылап та барғайным, башта электән йөрөгән фекерҙәр ҙә бар. Тик асҡысын таба алмайым.

Көндәлектәрҙәге яҙылып бөтмәгән ҡайһы бер шиғырҙарҙы айырым дәфтәргә теркәй башлағайным. Әммә улары бөтәһенең әлегә кескәй бер өлөшө. Әле күсереп ҡуйғандарымды ҡарап ултырҙым. Ҡайһылары былай ҙа тамамлаған тиерлек, ҡайһыларын яңынан яҙҙым. Улар бик күп йыйылып китмәксе. Үҙе кескәй йыйынтыҡ булырлыҡ.

17 сентябрь, 2012 йыл. Дүшәмбе.

Артур Мәкәшкә Наил ҡустымдың ҡырҡына алып барҙы. Ике хәҙрәт Ҡөрьән уҡыны, утыҙлап кеше булды. Бик күптәр менән беҙ ҙә хәйер өләштек. Ҡайғы уртаҡлашыуҙар баҫылған гәзиттәрҙе йыйып барғайным (Яҙыусылар союзы, Госсобрание, Киностудия – Илгизгә, Дәүләкән хакимиәте). Шуларҙы киленгә бирҙем. Хәҙрәттәргә хәҙистәремде бүләк иттем.

Байтаҡ туғандар килгәйне. Көн бик матур, ҡояшлы, йылы торҙо. Ҡайтышлай зыяратҡа индек.

Иртәгәһенә – йәкшәмбе, 16.09. – мосолман зыяратына Айҙар янына барҙыҡ. Шул көндө Айҙар улыбыҙға 50 йәш тулған булыр ине. Ташы һәйбәт тора, тик киләһе йыл нығытырға, төҙөкләндерергә кәрәк. Үҙем иҫән саҡта мотлаҡ эшләргә.

Айҙарҙан һуң Мостай ағай, Рәми ағай, Әхиәр ағай, Зәйнәп апай, Динис Бүләков янында булдыҡ. Тағы бик күп яҡын кешеләр янынан үттек: Баязит Бикбай, Сәғит Ағиш, Ҡасим Аҙнабаев, Сәләх Кулибай, Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Ибраһимов Абдуллин, Атнабай, генералдар Кусимов, Хәсәнов, юрист Моҡсинов, Радик Гәрәев, Бәхти Ғайсин һ.б. Бик күп һанарға мөмкин.

Һәйбәт кешеләрҙең күмәген бер юлы күрәм тиһәң, зыяратҡа килергә кәрәк икән. Уларҙың барыһы ла минең өсөн әле лә тере һымаҡ бит. Яңынан осраштыҡ кеүек. Кисерештәрем яңырып, күңел нисектер сафланып китте. Һәр береһе яҡтылыҡ бөркә. Тормошта уларҙың мөнәсәбәттәре үҙ-ара төрлөсә булғандыр, әммә хәҙер барыһы

ла бергә тупланғандар, уртаҡ яҡтылыҡҡа әйләнгәндәр. Тормошта яҡшы кешеләр бик үк берләшеп бармай, ә бына алама әҙәмдәр һәйбәттәрҙең башын ашар өсөн бер-береһен бик тиҙ табып алалар, уларҙы көнсөллөк, яһиллыҡ, мәкер һәм үс бергә туплай, емерткес итә. Ундай яуыздар был зыяратта ла аҙ түгелдер, әлбиттә. Әммә улар хәҙер насар ниәттәр менән бергә йыйыла алмай, тырым-тырағай ята, халыҡ хәтерендә улар юҡ. Гәрсә яманлыҡтар ҙа онотолмаҫҡа тейеш.

Ә яҡшы шәхестәрҙең яҡтылығы зыяратта ла балҡып тора, улар бер-береһен нурлыраҡ итә, һымаҡ.

Мосолман дине ҡәбер ташына һүрәттәр төшөрөүҙе тыя. Ләкин кешеләрҙең зыярат ташынан ҡарап торған йөҙҙәрен күреп, матур хәтирәләр яңынан терелгәндә дин ҡағиҙәләренең рәсем яһап боҙолоуы хаҡында уйламайһың, таштарҙа ғәзиз кешеләрҙе йөҙөҡарашы менән һынландырғандарға рәхмәт әйтәһең.

Бынан биш-алты көн таңда ҡараңғыла тышҡа ҡараһам, еп нәҙеклек кенә яңы тыуған ай ҡарай. Бейек кенә күтәрелгән. Яңы тыуған айҙы күрһәм, миндә нимәлер яңынан тыуғандай була.

Һағындырыр, һағындырыр
Уфтаныуҙар, аһтарым.
Минең сығынлаған саҡтар,
Һинең саҡҡан саҡтарың.

Путиндың уҡыусылар өсөн мотлаҡ йөҙ китап тураһындағы һүҙҙәре еңел генә тормошҡа ашмаҫ. Ләкин бик күптәр (бәлки күпселектер) китап уҡыуҙан бөтөнләй ситләшкән заманда ил етәксеһенең ошо хаҡта әйтеүе үҙе үк һәйбәт бит. Хужаларҙың һүҙен һә тигәнсә үтәргә әҙер тороусылар бәлки, әҙерәк булһа ла, ҡыбырлар.

Хисмәт Юлдашевтың «Себер еле» тигән китабын уҡығандан һуң үҙемдең 1992 йылда яҙылған «Заман ағышы, шиғри быуындар яҙмышы» тигән мәҡәләмде – күп өлөшө һикһәненсе йылдарҙа әҙәбиәткә килгән йәш шағирҙарҙың эҙләнеү-табыштарына арналған ентекле байҡауымды – яңынан ҡарап сыҡтым. Бынан егерме йыл элек үк Хисмәт Юлдашев шиғриәтенең төп асылын уның «Көмөш йүгән» (1983), «Убаларҙа – ҡылған» (1989) китаптарындағы шиғырҙары буйынса мин ентекле генә асҡанмын икән. Хәҙер Хисмәт тураһында һүҙ әйтәм тиһәм, был күҙәтеүҙәремде урап үтеп булмаясаҡ. Ошоларға һуңғы йылдарҙағы шиғырҙары тураһында төплө һүҙ өҫтәп, шағирҙың ижади һүрәтен күҙ

алдына килтерергә мөмкин. Себер дәүере уның шифриәтенә бик мөһим яңылыҡтар өҫтәне. Элеккеләре хаҡында әйтелгәндәрҙе яңы осорҙағы шифырҙары тураһындағы һүҙ менән дауам итһәм, шағирҙың үҙенсәлекле яҙмышын, моғайын, тулы ғына күрһәтә алырмын һымаҡ. Был арала был эште бәлки башҡарып та ҡуйырмын.

26 сентябрь, 2012 йыл. Шаршамбы.

Больницанан сыҡтым. 20-да Дәүләт йыйылышы ултырышы булды. Утыҙлап кеше килмәгәйне. Беҙҙең комитеттан ректорҙар юҡ, Ғәбитовтан башҡаһы.

21-дә сәғәт икелә беҙҙе – комитеттарҙың рәйестәрен һәм урынбаҫарҙарын – сәғәт 2-лә Президент йыйып алды. 20-дә Толкачев Дәүләт йыйылышы ултырышынан һуң йыйып һөйләшкәйне. Осрашыуҙа ниндәй мәсьәләләр күтәрелеүе хаҡында һүҙ барҙы. Төрлө фекерҙәр әйтелде. Мин дә, ҡайтҡас, ҡайһы бер уйланыу – тәҡдимдәремде теркәп ҡуйғайным. Һөйләшеүҙең нисек барасағын Президенттың ни тип һүҙ башлауы, үҙенең телмәре билдәләйәсәк тип Толкачев бик дөрөҫ күҙаллаған. Осрашыуҙың тәүге сәғәт ярымында Рөстәм Зәки улы үҙе һөйләне. Бер өйөм документтар тотоп сыҡҡайны. Сәйәси, иҡтисади хәлдәр тураһында һөйләне, мәғариф мәсьәләләренә лә туҡталды. Һорауҙар ҙа булды, күберәк бюджет, һалымдар тураһында.

Хәлдәр, ысынлап та, бик ҡатмарлы. Республика көндән-көн ныҡыраҡ талана. Нефть эшкәртеү һ.б. эштәрҙең аҡсаһы 100 проценты менән Мәскәүгә китә. Исмаһам, 5 процентын (2 млрд-тан артыҡ) үҙебеҙгә ҡалдырыу тураһындағы тәҡдим күтәрелергә тейеш ине, Мәскәү менән, Рәсәй хөкүмәте менән һөйләшкәс, уныһын да көн тәртибенә (ҡоролтай ултырышының) индермәнеләр. Бюджетты йыйыуы бик-бик ауыр, Хәмитовтың бигерәк тә бына ошоларға депутаттарҙың иғтибарын ныҡыраҡ йүнәлткеһе, кәңәшләшкеһе килгәндер.

20-дә Академтеатрҙа Софоклдың «Эдип батша»һы менән сезон асылды. Беҙҙә уҡып киткән, Мәскәүҙә эшләп йөрөүсе Сакаев тигән режиссер ҡуйған. Софоклды бөгөнгө тамашасыға нисегерәк асырҙар, тексты имгәтеп бөтөрмәҫтәрме, тип, бик һағайып барғайным. Мостай ағайҙың «Ай тотолған төндә» трагедияһы менән шул хәл күңелде бик ныҡ ҡырғайны бит инде.

«Эдип батша»ны алдан уҡып сыҡтым. Ни тиклем фажиғәле яҙмыштар: Эдип, уның ҡатыны-әсәһе Иокаста һ.б. Пьесала хәрәкәт тә, диалогтар ҙа ни тиклем көсөргәнешле ҡоролған. Һәр берәүҙең

сәхнәлә әйткәне тик бер һөйләмдән тора, ә үзендә ни тиклем мәкәл тапҡырлығы. Зур ғына монологтар за ялҡытмай.

Был трагедиялағы фекер тәрәнлеген хәҙерге тамашасыға еткереүе, ай-һай, ауыр мәсьәлә. Башҡарыуы бер нәмә, аңлауҙары – икенсе. Аңлауҙары башҡарыуҙарынан да тора, әлбиттә.

Эдипты Хөрмәтулла Үтәшев уйнаны. Иң мөһиме – тексты таламағандар. Юғиһә, хәҙер режиссер диктаты, классиктарҙы ботарлау «оло асыш» һанала. Мәрхүм классиктар үҙҙәрен ошолай мәсхәрәләүҙе бер нисек тә тыя алмай. Ә бөгөнгөләр әҫәрҙәрен режиссерҙар нисек кенә борғолаһалар за ризалар, сәхнәгә сыға ғына күрһен.

Спектаклдә шау-шыу, һәр береһенең таяҡ һелтәп йөрөүе артыҡ күбәйеп китә, әлбиттә. Актер һөйләгәнде шау-шыу күмә. Бигерәк тә үзенең йомағы менән тамашаны башлап ебәреүсе, әллә нисәмә ҡат сәхнәлә артистарға һарылып йөрөүсе Сфинкстың һөйләгәне бөтөнләй тиерлек аңлашылмай. Ә бит уның мәғәнәһен еткереү, теманың ошо һорауҙан башланып китеүе төп асҡыстарҙың береһе. Сфинксты башҡарыусы ҡыҙҙың әйткәненән бигерәк уның ен-пәрей ҡиәфәтендә йөрөүен генә күрә тамашасы. Трагедияла ул момент юҡ, гәрсә «ҡанатлы ҡыҙ» тиеп йөрөтөлгән арыҫлан башлы, ҡатын түшле был имәнес күрәҙәсенең йомағы грек шиғриәтендә һаҡланып ҡалған. Берәү ҙә аңлата алмаған был йомаҡҡа яуапты тик Эдип ҡына таба алған. Шуның менән Фиваны һәләкәттән ҡотҡарып ҡалған. Ә хәҙер ошо Эдип батша Фиваны яңы һәләкәттән ҡотҡарыр өсөн үзе һәләкәт ҡорбанына әйләнергә тейеш.

Ошо йомаҡтың шиғри тексын сәхнә артынан бик асыҡ, ныҡ тәьҫирле итеп яңғыратып башлап ебәрергә кәрәктер бәлки тамашаны? Асҡыс шунда бит. Дүрт аяҡлап хәрәкәт итә башлаған сабый ике аяғы менән ер һелкетеп йөрөгән Эдип батша булып хакимлыҡ итә һәм аяуһыҙ яҙмыш уны таяҡҡа таянған өс аяҡлы ҡартҡа әйләндерә. Ошо йомаҡты тамашасы аңлмаҫлыҡ итеп сфинкстың ҡат-ҡат ҡабатлауы тамашаның мәғәнәһен асыу түгел, уны бутай ғына.

Спектаклдән ҡайтҡас, Хисмәт Юлдашев шылтырата: «Ағай, театрҙа һине күрҙем. Пьесаны ҡараныҡ, тик бер ни ҙә аңламаныҡ», тип, телефондан әйтәләр икән. Аңламаусылар улар ғына түгел, күп булғандыр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Сезон асылыуға театр һөйөүсе, театр менән яҙмыштары бәйле йәки шул даирәгә ылығыусылар за күп

килгәйне. Әммә улар араһында ла, «ҡаранығ, аңламанығ» тимәһәләр ҙә, төшөнөп етмәгәндәр ҙә булғандыр, әлбиттә. Софоклдың трагедияһы башҡа боронғо грек драматургтарының әҫәрҙәре һымаҡ бик ҡатмарлы. Ул бөгөнгө уҡыусыға еңел генә барып етмәҫ. Шулай ҙа эҙләнеүҙәр дауам итһен ине. 1919 йылда рәсми асылған Башҡорт театрының тәүге репертуарын төҙөүселәрҙең нәҡ ошо Софоклдың «Эдип батша»һын индерергә йөрәктәре еткән бит. Ул саҡтағы тамашасыларҙың йөҙ булмаһа ла шуға яҡын проценты был автор, был әҫәр тураһында ишетеп тә белмәгәндер. Бөгөнгө менән сағыштырыуы ла ҡыйын. Әммә элеккеләр ихлас наҙан булһалар, хәҙергеләр дипломлы, амбициоз наҙандар.

ТЮРКСОЙ-ҙың Өфөләге осрашыуҙары, «Туғанлыҡ» фестивале үтеп китте. БДПУ-ла ТюркСой кафедраһы асылды. Улар, әлбиттә, беләләрҙер, әммә был кафедраның эш йүнәлешен, унда эшләрлек белгестәрҙе мин әлегә асыҡ ҡына күҙ алдына килтереп еткерә алмайым.

«Туғанлыҡ» фестиваленә байтаҡ илдәрҙән, республикаларҙан килделәр. Төп өс номинация буйынса (иң яҡшы спектакль, иң шәп режиссер, ирҙәр ролен иң оҫта башҡарыусы актер) Башҡортостандың лауреат булыуы ысынлап та беҙҙең сәнғәттең шул тиклем көслө булыуымы әллә «Кемдең ҡулында, шуның ауыҙында» тигән һымағыраҡмы?

13-дә Мәскәүҙән Фәриҙәнең апаһы Флүрә улы Юра менән килделәр. Сибайға барып әйләнделәр, Балҡанда әсәләре Фирүзә апайҙың зыяратында булғандар. Саҡ эҙләп тапҡандар, беҙ Өфөнән алып барып ултыртҡан таш тора, ти. Шамонинола бер кис ҡундылар.

Улар менән, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ныҡлап аралашып булманы, больница арҡаһында. Былай күңелдәре булып китте. Поезд менән йөрөнөләр. Артур вокзалда ҡаршы алды, 21-дә Дамир оҙатып ҡуйҙы.

Бәләнән баш сыҡмаған саҡ. Больницала һәйбәт дауаланып, пневмонияны бөтөрөп сыҡҡайным. 21-дә Президент менән осрашыуҙан һуң баҡсаға киттек. Унда бил ҡузғалды. Дүшәмбе эшкә саҡ инеп сыҡтым. Кисә укол ҡаҙап киттеләр. Бөгөн хәл һәйбәтерәк.

Ялған дарыу, ялған һүҙ. Ялғанлыҡтары ҡайһы саҡта бик тиҙ беленә, ҡайһы саҡта үҙенең емерткес эштәрен бик мәкерле рәүештә йәшерен алып бара. Ялған дарыу тараткан өсөн хөкөм бар, был яман эште, тулыһынса булмаһа ла, тыйырға мөмкин. Ә ялған һүҙҙе тулыһынса тыйып ҡара! Ҡайһы саҡта ул алдауҙарҙы хатта ил күләмендә махсус тараталар.

Элек амбиция кире мәгәнәлә әйтелә ине, хәҙер амбиция кешене, бигерәк тә йәштәрҙе, алға әйҙәүсе сифат, үҙенсә дәртләндергес көс һанала.

Амбиция ҡылдарында уйнау көсәйҙе, әммә иң мөһиме – уның сифаты бит, бынығы онотола.

Элек, 20–30-сы йылдарҙа, уҡыусыларыбыҙ үҫә, наҙанлыҡ бөтә тип ҡыуанғандар. 60-сы йылдарҙа уҡыусыларыбыҙ үҫеп етте, яңы эстетик зауыҡтарға эйә булды, өлгөрҙө тип ҡыуана торғайныҡ.

Хәҙер байтаҡ уҡыусылар үҙҙәренең интеллектуаль кимәлдәре, зауыҡ талаптары, фәлсәфәүи, ғилми, ижтимағи ҡараштары буйынса байтаҡ әҙиптәрҙе уҙып китте. Улар донъяның бөгөнгө рухи ҡаҙаныштары менән туранан-тура бәйләнештә, бик күп алама эштәр эшләүсе интернет беҙҙең йәштәргә донъяның һәйбәт яҡтарын да аса. Ә әҙиптәребеҙҙең күбеһе тиерлек (бигерәк тә прозаиктар) элекке стереотиптарҙан уҙа алмай, һиҡһәненсе йылдарҙағы ҡараштар һәм талаптар кимәлендә ҡатып ҡалған.

Тәбиғәттең аяуһыҙ закондарын бер кем дә урап үтә алмай. Мәҫәлән, ваҡыт ағышын туҡтатыу йәки ерҙең тартыу көсөн еңеү мөмкин түгел. Тәбиғәттең ҡаты закондары күп һәм кешенең уға буйһонмай хәле юҡ.

Йәмғиәттә лә бик ҡаты һәм ғәҙел закондар бар. Ләкин уларҙы урап үтеү, ҡануниәт талаптарын үтәмәү өсөн йылғырҙар әллә ниндәй юлдарын таба. Йәмғиәт ҡанундары ла, тәбиғәт ҡанундары һымаҡ урап үтмәҫлек йәки боҙмаҫлыҡ хәлдә тайпылышһыҙ булһа икән дә бит!..

«СР»-ҙан Гудковты депутат мандатынан, Госдуманан тартып алдылар. Гудков үҙе быны хөкөм түгел, судилище тип атаны. Ысынлап та, көлкө инде. Тейеш булмаған бизнес менән шөғөлләнгәне өсөн Гудков шундай язаға тарттырылған. Йәнһе, депутат этикаһы буйынса был тыйыла. Әммә Думала ошо этикаға һыйған нисә кеше бар икән? Хәҙер исемлек буйынса бөтә депутаттарҙы ла ентекле тикшереү талабы депутаттарҙың үҙҙәре араһында көсәйә бара.

«Ҡазан уттары»ның быйылғы 7–8 һандарын ҡарап сыҡтым. Шифриәтебеҙ һәйбәт кимәлдә, прозала, публицистикала, ижтимағи фекер үҫешендә арттараҡ барабыҙ. Сағыштырып уҡырға кәрәк. Хатта арабыҙҙан киткән ҡәләмдәштәр тураһында ла белмәй ҡалабыҙ икән. Шулай уҡ яңы быуын тураһында ла беҙҙең мәғлүмәтебеҙ аҙ.

Необходимо определиться с определениями, т.е. с ложными инсинуациями. Тойғон союзда «Бикбай командаһы – бандаһы» тураһында

йыш һөйләй икән. Ул сағында Тойғон үҙе төп икенсе бандит, ә элекке идаранан хәҙергеһенә күскән егермеләп әҙиптәр ҙә бандиттар булып сыға түгелме? Беҙ бит эште һәр саҡ коллегиаль алып барҙыҡ.

7 октябрь, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Ике төрлө ижадсылар, ижадсы уҡ булмаһа ла, шуға ынтылыусылар бар:

1) Яҙғандары үҙенән шәберәк;
2) Яҙғандарынан үҙе шәберәк.

Икеһе лә – яҙғаны ла, үҙе лә шәп булған осраҡтар һирәк шул.

Салауат премияһының яңы лауреаттары араһында ике яҙыусы – Рәшит Шәкүр, Камил Йыһаншин. Бик һәйбәт. Бындай хәл күптән булғаны юҡ ине. Ибраһим Абдуллин менән Ҡәҙим Аралбаевтың икеһен дә бер йылда лауреат итеү өсөн ныҡ тырышҡайныҡ, маҡсатыма ирешкәйнем. Бындай хәлдәр бик һирәк була. Киләсәктә булһа әле...

«Башҡорт энциклопедияһы»ның һуңғы етенсе томын презентациялау Конгресс-Холдың түңәрәк залында үтте. Сығыш яһаным. Төрлө өлкәләрҙән, республикаларҙан килгәйнеләр. «Башҡортостан» тигән ҡыҫҡаса энциклопедияны беҙ милли республикалар араһында беренсе булып сығарғайныҡ, күп томлыҡтың донъя күреүендә лә беҙ – тәүгеһе.

Тормошоң яйлы булһын,
Ҡулың майлы булһын,
Улдарың һыбайлы булһын,
Кыҙҙарың кейәүле булһын.

Айҙың ептәй сағы тик бер көн.

Ай ҙа, ҡояш та офоҡта сағында ҙурыраҡ күренә.

Ҡояшҡа тыуып килгән сағында, байып барғанында ғына ҡарап була. Төшлөктәге ҡояшҡа ҡарап ҡара!

Әҙәм балаһы ла шулай бит. Уға юғарыла сағында, дан-шөһрәтле ваҡытында тура ҡарарлыҡ булмай. Сабый сағында йәки ҡартлығында уның менән аралашыу еңелерәк.

Временное часто становится постоянным. К сожалению, это чаще происходит именно с плохими явлениями.

Шиғырҙарыма серемде сисәм. Әммә улар сер һаҡламаҫ серҙәштәрем. Серҙәремде донъяға еткерә. Серҙәшлектең сиктәре.

«Ҡартлыҡ өсөн йәшлек яуаплы» – мәҡәләнең исеме мәғәнәле («Башҡортостан», 29.09.12.)

Мәғариф тураһында яңы закон проекты Думала ҡараласаҡ. Яман яҡтары күп. Бигерәк тә милли телде дәүләт теле итеп уҡытыу сикләнә. Бюджет урындары ҡыҫҡартыла, ауыл уҡытыусыларының льготалары бөтөрөлә, ПТУ-лар булмай. Ике баҫҡыслы юғары уҡыуға күсеү – һәләкәткә юл. Дәреслектәрҙә анархия, әле улар 2500-гә еткән. Тарих буйынса 140, физкультура буйынса утыҙлап. Улар РАН-да һәм Мәғариф академияһында экспертиза үтәләр имеш. Мәктәп уҡыусыларында әхлаҡһыҙлыҡ тәрбиәләүсе дәреслектәр бар.

Шишмәнән барып алып, баҡсаға алмалар, ҡарағайҙар һ.б. ултырттыҡ. Бер нисә йылдан бындағы йорт тирәләре гөл-баҡсаға әйләнер инде. Тик әле ултыртҡан ағастарҙың күкрәп күтәрелгәнен күрергә беҙгә насип булырмы?

«Әҙип батша»лағы йомаҡ: «Кем иртән дүрт, көндөҙ – ике, кис өс аяҡта йөрөй?» Ошоға дөрөҫ яуап бирмәгәндәрҙе сфинкс ҡатын язалай, донъяға ҡырғын килә. Дөрөҫ яуап тапҡан Эдипты батша итәләр. Ә уға тиклем күпме бәләләр килә. Тимәк, кешеләр был йомаҡты оҙаҡ ҡына сисә алмағандар. Зиһендәре шул тиклем сикләнгән булдымы икән ни?

Ағиҙел ныҡ һайығая, ә унда Бөрө тирәһендә теплоход батҡан.

Президенттың дәүләт телен ирекле өйрәнеү («добровольное изучение») тураһындағы 2010 йылдағы республика кәңәшмәһендә уҡытыусылар алдында тәүге сығышында булғайны. Күптәргә ул һүҙҙәр етә ҡалды. Башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыуға ҡаршылар нығыраҡ ярһый. Был, үҙ сиратында, башҡорттарҙың телде яҡлауҙарын көсәйтә. Парламенттағы беҙҙең комитет бына ошо ике ҡыҫымдың уртаһында.

Әле мәғариф тураһындағы яңы закон проектының төп концепцияһын комитетта ҡабул иттек. Тәҡдимдәр буйынса эш төркөмө йыйылды. Татарстан ҡабул итмәгән, Рәзил Вәлиев шылтыратты. Думала барыбер үткәрәсәктәр, әлбиттә. Мин ҡоролтайҙа эшләй башлағанда милли-региональ компонентты яҡлап, 2008 йылдың майында ҡаты сығыш яһағайным, хатта Конституцион судҡа мөрәжәғәт итергә тип тауыш биргәйнек. Татарстан да шул позицияла тора ине. Бынан һуң күпме кәңәшмәләрҙә (Мәскәү, Ҡазан, Өфө һ.б.) бик принципиаль сығыштар булғайны. Хәлдәр беҙ теләгән яҡҡа барыбер үҙгәрмәне. Васька слушает да ест. Хоҡуҡтарҙы ла, ил, халыҡ мөлкәтендә Башҡортостандандан алып бөттөләр тиерлек.

«Богатство – причина бедности» – бер мәҡәләһен Влад. Войнович шулай тапҡыр атаған. Яңыраҡ уға 80 йәш тулды. Китаптарын ҡарап сығырға ине. Заманында режимды тәнҡитләһә лә, илдән ҡыуылһа ла, Эдвард Радзинский һымаҡ нәфрәтенән шартларҙай булып, төкөрөгөн сәсеп, совет дәүерен ҡәһәрләгәнен күргәнем юҡ. Тормош һынауҙарын үткән төплө кешегә оҡшаған.

Башҡорт теленән, башҡа милли телдәрҙән дәрестәрҙе ҡыҫалар, шундай ҡыҫҡартыуҙар иҫәбенә дин дәрестәрен индерәләр. Бында уйлап еткереү юҡ. Әллә мәкерле рәүештә махсус уйланамы?

Беренсенән, дүртенсе класта бала дин дәрестәрен тейешле кимәлдә ҡабул итә алмаясаҡ.

Икенсенән, алты модуль тәҡдим ителә, дүртehe дүрт дин буйынса. Хәҙер бер кластағы балалар төрлө төркөмдәргә бүленергә тейеш була. Дин тәғлимәттәре сабый өсөн шул тиклем мөһимме ни? Әхлаҡ ҡағиҙәләре күп халыҡтар өсөн уртаҡ бит.

Өсөнсөнән, ҡайҙа ул диндәрҙе уҡытырлыҡ уҡытыусылар, ҡайҙа дәреслектәр? Уларҙы әҙерләү өсөн бюджеттан күпме млн. һумдар тотонолор? Ә күпме уҡытыусылар бөгөн эшһеҙ ҡала.

Балаларҙы былай тарҡатҡансы, юғарыраҡ класта тарих дәреслегенә «Донъяның дини мәҙәниәттәре» тигән бер бүлек индерһәләр, мәсьәлә бик ябай хәл ителер ине бит.

21 октябрь, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Мәғариф тураһындағы закон проектын Дума беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Яңы йылға тиклем тулыһынса ҡабул итәсәктәр, әлбиттә. Беҙ 19-да эш төркөмө йыйылдыҡ. Был һөйләшеүгә алтмыштан артыҡ тәҡдим тупланды, ләкин хатта 2–3 төҙәтмәнең индерелеүе бик икеле.

Был закондан һуң туған телде уҡытыу, бигерәк тә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу ныҡ сикләнәсәк. Яңы стандарттар буйынса башҡорт теле дәүләт теле итеп былтыр беренсе кластарға инмәгәйне, быйыл икенсе класта юҡ. ЕГЭ-ға әҙерлеккә һылтанып, хәҙер 10–11 кластарға ла инмәй. Тимәк, был мәғәнәһеҙ стандарттарҙың артабан да емерткес эштәре дауам итһә, 5–6 йылдан башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыу тарихтағы бер яҡты, матур мәл булып ҡына ҡаласаҡмы?

Ә Татарстанда уҡытыуҙы элеккесә, йәғни, татар теле дәүләт теле итеп өйрәнеүҙе һаҡлап ҡалдыҡ, тиҙәр. Яҡуттарҙа, бүрәттәрҙә лә был мәсьәлә элеккесә дауам итә, тиҙәр. Бәйләнешкә инеп, белешергә кәрәк. Беҙҙең мәғариф министрлығы был мәсьәләне бер ҙә яҡшы

яҡҡа үҙгәртер өсөн инициатива күрһәтмәй. Әлеге эш төркөмөндәге һөйләшеүҙә Ғаязов Ә.С. беренсе булып сығыш яһаны. Һорауҙар булды, мин дә конституция менән стандарттар араһындағы ҡаршылыҡ тураһында әйттем. Ләкин министр икенсе ултырышҡа ашығып китте: эше еңеләйҙе.

Башҡорттарҙың донъя ҡоролтайы рәйесе Аҙнабаев Р.Т. бик принципиаль сығыш яһаны.

Был мәсьәләләрҙең барыһы тураһында матбуғатта мәҡәлә менән сығыш яһарға, радионан да һөйләргә йыйынам.

Көндәлектәремдең беренсе китабы менән эште бөтөрҙөм һымаҡ. Инеш һүҙгә лә төҙәтмәләр өҫтәнем. Был эштәр бик күп ваҡытты алды. Инде икенсе том менән ныҡ ҡына ултырып алырға кәрәк. Луизаның компьютерҙан үткәреп бөткәнен көтәм.

28 октябрь, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Көндәр һыуына. Баҡсалағы һыу һауыттарында йоҡа боҙ туңа.

25-дә, ҡорбан ғәйетендә, Нагаевоға мәсеткә барҙым. Егеттәр алып барҙылар. Бик матур ҙур мәсет һалғандар, спонсорҙар ярҙамында, әлбиттә. Ришат хәҙрәт – шул Ноғай мәсетенең имамы – бик яҡшы эш эшләгән. Был хәтле йортто төҙөп сығыр өсөн ни тиклем уңғанлыҡ, ойоштороу һәләте кәрәк, әлбиттә. Шамониноға ла мәсет кәрәк.

Әллә күпме һарыҡ алып килгәндәр. Берәмләп сығарып торалар, яҡындағы ағаслыҡта һуялар. Быны күреүе ҡыйын. Һәр диндә лә мәжүсилектән ҡалған ғәҙәттәр һаҡланған.

23-дә Дәүләт думаһының мәғариф комитеты рәйесе А.Н. Дегтярев менән осрашыу. Коммунистарҙың мәғариф тураһындағы закон проектын кире ҡағыуҙы еңел генә аңлата: аҡса юҡ. Күп мәсьәләләрҙең ҡатмарлы урындарын урап үтә белә. 8-дә парламент тыңлауҙарына саҡыра. Ғүмәрова Л.С. барырға тейеш ине, ул вице-премьер булып китте. Миңә ҡатнашырға тура килмәгәйе. Күпме генә иҫбатлаһаң да, мәсьәләләр әле ҡабул ителгән проекттағыса ҡаласаҡ инде. Быны Туҡай күптән әйткән бит: «Ах Дума, Дума, дума, эшләгән эшең бумы?»

Дөрөҫөн әйтә аят,
Тормай ул һыйпап, аяп.

Һин тыуғанда барыһы ҡыуанды,
Һин үлгәндә барыһы ҡайғырһын.

Аҡыллы үҙен аҡыллы тимәҫ,
Иҫәр үҙен иҫәрмен тимәҫ.

11 ноябрь, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә ҡар яуғайны. Көндөҙ ireп бөттө. Ямғыр һибәләне. Бөгөн төндә тағы яуған. Әле сыҡҡаным юҡ. Кисә мунса индек. Һыуҙарҙы ағыҙырға кәрәктер.

8-дәге думаның мәғариф комитетында парламент тыңлауҙарына министр Ғаязов киткән. Нисек үткәндер? Әммә һынылыш шикле. Гәрсә Мәскәүҙә һ.б. ҡалаларҙа уҡытыусылар был закон проектына ҡаршы митингтар ойоштoралар. Ә беҙҙә – һиллек. Был мәсьәләне ҡуйыртмаҫҡа, хатта интервью бирмәҫкә, тиҙәр.

Көндәлектәрҙең ике китабы менән дә эш бөттө. 1626 бит булды, баҫмала күпме табаҡ булалыр. Ул көндәлектәрҙәге байтаҡ шиғри эскиздарҙы дәфтәргә күсереп ҡуйҙым. Әҙер тиерлектәре бар.

30–31-дә Асҡарға командировка: һайлауҙарҙан һуң Советтың тәүге ултырышы, конкурс комиссияһы. 1 ноябрҙә Салауат драма театрында минең ижад кисәһе. Гөлсәсәк Шәрипова йырланы. Ришат Вахитов та сығыш яһаны. Күберәк уҡытыусылар йыйылған. Милли мәктәптәрҙең яҙмышы тураһында бик үткер һорауҙар бирәләр.

2 ноябрҙә университетта студенттар менән аудиторияла осрашыу. Үҙенсә мастер-класс инде. Күбеһе шоңҡарсылар. Гел ҡыҙҙар, 1–2 генә егет булды.

Университетта башҡорт филологияһын уҡытыу буйынса хәлдәр бик ауыр, хафалы икән. Студенттар һаны ныҡ кәмей. Сит тел факультетын (инглиз) тамамлаған декан нимә теләһә, шуны эшләй, башҡорт филолгияһы буйынса белгес булмаған үҙ кешеләрен йыя икән. Роберт Баимов бар сағында уның һүҙен тыңлайҙар ине, тиҙәр. Тарҡалыш ошолай барһа, хәлдәр ныҡ ауырлашасаҡ. Ректор менән осрашырға, ниндәйҙер саралар күрергә кәрәк.

«Ғилем» өсөн юбилейыма русса китап әҙерләргә тотонам. Материалдар етерлек, тәртипкә килтерәһе, яңынан туплап, компьютерҙан үткәреп алаһы бар. Күбеһенең дискеттары бар: заявка, аннотация биргәйнем, ниңәлер белмәйҙәр.

Александр Филипповтың 80 йыллығына (7.11.) «Истоки» газетаһы күп материал биргән. Минең мәҡәлә лә бар. Хәҙер ауылында кисәһен үткәрергә кәрәк.

20 ноябрь, 2012 йыл. Шишәмбе.

Яҡтыкүл санаторийында. Төнгө өстән һуң йоҡлап булманы. Был арала бында икенсе тапҡыр. Ун көндән тағы килергә. Хакимиәт башлығын һайлау буйынса конкурс комиссияһының эше 30-да бөтә. Биш претендент булып киткән.

Өфөлә ҡар 16–17 ноябрҙә ныҡ ҡына яуғайны. Әбйәлил районында бөтөнләй тиерлек юҡ. Юлдар ап-асыҡ.

Һыу айырғыс тауҙар (һырттар) булған һымаҡ,
Яҙмыш айырғыс бар ваҡиғалар.

Торатауҙар яҙмышы һаман да хәүефле.
Үҙебеҙҙе лә йоторҙармы,
Йотҡан кеүек тауҙарыбыҙҙы?

Сократ не скрыт, но Сократ не раскрыт.

Бюджет тикшергәндә «умеренно оптимистический» вариант ҡабул ителә ғәҙәттә. Һүҙен дә тапҡандар бит. Умеренно ғына түгел, уверенно оптимистический булһын ине.

Хәрәкәттә бәрәкәт кенә түгел, хәрәкәттә һәләкәт тә бар. Бигерәк тә рухиәттән, халыҡсан ерлектән айырылған, бөгөнгө шашынған хәрәкәттәрҙә.

Эттән тыуғанһың, тип әрләү бар. Маймылдан тыуғанһың тип ышандырырға тырыштылар. Әммә әҙәм балаһын Аллаһ яралтҡанын оноторға ярамай. Яратыр-яраттырыр өсөн яралтылған был донъяға кеше.

16-да театрҙа «Бирнәһеҙ ҡыҙ» спектакле. Олег Хановтың академтеатрға ҡайтҡас тәүге режиссерлыҡ эше. Һәйбәт эшләнгән, йәш артистар күп. Классикаға һаҡсыл мөнәсәбәт. Хәҙергесә хәрәкәттәр, кеймдәр ҙә әҫәрҙең үҙ заманына хас рухын боҙмай.

17-дә филармонияла Роза Сәхәүетдинованың 75 йәшлек ижад кисәһе. Дәүләт йыйылышы исеменән мин беренсе булып сығыш яһаным, Толкачевтың ҡотлау хатын, Ҡоролтайҙың сәғәтен бирҙем.

Роза үҙе сәхнәлә эй кинәнде инде: дирижерлыҡ та итә, бейеп тә китә, һәр артисҡа сәскә бирә. Бер ҙә 75 йәш тимәҫһең.

Роза Сәхәүетдинова ысын талант, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан тәүге профессиональ композитор. Тик тейешле баһалау – ҡәҙерләү

юҡ. Ошо кисәлә уға Салауат ордены тапшырып булмаҫ инеме ни? Үпкәләүе дөрөҫ.

Насар шиғыр яҙыу – гонаһ. Насар йыр яҙыу – икеләтә гонаһ, сөнки ҡағыҙҙы ғына түгел, һауаларҙы ла бысрата. Радио, телевидение аша зауыҡһыҙ йырҙар күңелдәрҙе тиҙерәк ағыулай.

Артурға әйткәйнем, Буниндың «Окаянные дни», Горькийҙың «Несвоевременные мысли» китаптарын килтерҙе. Уларҙағы күпме һүҙҙәр бөгөнгө ҡыйралыштарға ҡарата әйтелгән тиерһең.

Заман тегеләй, заман былай тип зарланыуҙар, бәлки, урынһыҙҙыр, бындай хәлдәр тормошта ҡабатланып тора, тип уйлап ҡуйҙым. Соломондың балдағына нимә тип яҙылған булған бит: «И это пройдет». Ләкин үҙеңде шулай тип тынысландырырға тырышһаң да, кеше борсолоп йәшәр өсөн яратылған шул.

Партократия тип совет заманын әрләүселәр аҙ түгел. Ләкин партократия диктатураһы әле лә дауам итмәйме ни? Ниндәй генә «кратиялар» заманында ла мин һаман да шул хыялый идеалист – идеократ булып ҡалдым.

Мәғарифтә Болон системаһын индереү. Бер заман болоний плащтар бик модалы булып алғайны. Беҙҙекеләр әллә кем булып кейеп йөрөгән ул нәмәләр сит илдәрҙә бысраҡ эштәрҙә кейә торған эш спецовкаһы ғына икән. Беҙҙең мәғарифҡа ситтән килтерелгән күпме «яңылыҡтар» унда сүплеккә ырғытылған.

Яңыраҡ Яҙыусылар союзында идара ултырышы үтте. Съездан һуң тәүге тапҡыр барҙым. Прохоровтың милли республикаларҙы бөтөрөргә тигән сығыштарына ҡарата белдереү эшләргә тип эш төркөмө төҙөнөләр. «После пожара» һымаҡ иҫтәренә төшкән. Туй үткәс дөмбөр. Коллектив белдереүҙәр генә түгел, һәр әҙиптең үҙ һүҙе, үҙенең гражданлыҡ позицияһы, үткер сығышы булырға тейеш. Бик ҡырҡыу мәлдәрҙә милли меҫкенлек еңә.

Бөгөнгө хәлдәр тураһында (мәғариф тураһында яңы закон проекты, дәреслектәр, мәктәптә дин уҡытыу, унитар дәүләт төҙөргә саҡырыуҙар һ.б.) мәҡәлә яҙам. Байтаҡ өлөшө яҙылды, тик бүленмәй генә ултырып булмай. Ҡышҡы юл йөрөүҙәр йышайҙы. Алда Ырымбур сәфәре тора. Уға тиклем тағы ла Асҡарға барыу.

25 ноябрь, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Мәҡәләне яҙып бөттөм. 17 бит. Электронка менән «Башҡортостан»ға ебәрҙем. Руссаһын әҙерләйем.

Көндәлектәрҙең беренсе китабы баҫыла башланы. 20-дә, санаторийға китер алдынан, корректураһын алырмын, шунда уҡырмын, тим.

Әле баҡсала йәй яҙылған (Асылыкүлдә) шиғырҙарҙы күсереп ултырҙым. Былтырғы һымаҡ быйыл да шиғырҙар байтаҡ яҙылған. Элекке совет заманындағыса кескәй бер китап булырлыҡ. Элек ошондай йыйынтыҡтар автор ижадында ғына түгел, тотош әҙәбиәттә йыш ҡына ваҡиға була торғайны. Мостай Кәримдең «Йылғалар төнөн һөйләшә», Рәми Ғариповтың «Һабантурғай йырҙары», Рәшит Назаровтың һ.б. хәҙерге күҙлектән йоҡа ғына китаптары ҙур ваҡиға ине бит. Ә хәҙер шиғырҙар ҡалын-ҡалын китап, хатта томдар булып баҫылһа ла, ундай тәьҫир юҡ. Хәҙер нәшер итеүселәр ҙә йоҡа китаптар яҡлы түгел. Күргәҙмәләргә ҡуйырлыҡ олпат булһын, йәнәһе.

Бөгөнгө уҡыу йорттарын баһалаусылар беҙҙең аграр университетты эффектлы булмағандар иҫәбенә индергәндәр. Сәбәптәре: сит ил студенттарының аҙ уҡыуы, майҙандың етерлек булмауы, ғилми тикшеренеүҙәргә аҡсаның аҙ бүленеүе һ.б. Сәйер талаптар. Аграр уҡыу йорто беҙҙә африкандарҙы уҡытырға, сит илдәрҙең ауыл хужалығы өсөн белгестәр әҙерләргә тейеш буламы? Башҡа талаптары ла нигеҙһеҙ. Барыһын да техник вуздарҙың мөмкинлегенән генә сығып баһаларға ярамай. Һәр береһенең маҡсаты ла, финанстары ла үҙенсә. Ижади вуздарҙы ябыу тураһында ла мәғәнәһеҙ тәкдимдәр булып алды.

Асып инәһе ишектәргә «Үҙеңдән», «Үҙеңә» тип яҙылған. Йәшәү ишектәре лә төрлөсә асыла бит. Кеше «Үҙеңдән» тигәнгә ҡарағанда «Үҙеңә» тигәнде яҡыныраҡ күрә. Башҡаларға нимәлер илтеү, үҙеңдән биреү тураһында түгел, нисек тә үҙенә алыу хаҡында нығыраҡ уйлай. Йорттарҙың ишектәре әйҙә төрлөсә асылһын, тормош ишектәренең «Үҙеңдән» тигәне күберәк булһын ине.

22-дә Өфө полиграф комбинатының 90 йыллығында Дәүләт йыйылышынан ҡотлау хаты, директоры Шамил Биҡҡоловҡа почет грамотаһы тапшырҙым.

1 декабрь, 2012 йыл. Шәмбе.

Был арала Әбйәлилгә өсөнсө сәфәр. Кесаҙна Дәүләт йыйылышы ултырышында Президенттың йыллыҡ юлламаһын тыңлағандан һуң юлға сыҡтыҡ. Сәғәт биштә конкурс комиссияһының һуңғы ултырышында кандидаттарҙың сығыш-программаларын тыңланыҡ. Ике кеше советҡа сығарылды: Сыңғыҙов һәм Илһамов. Фекер алышыуҙа тәүге сығыш яһаусы Сыңғыҙовҡа ҡарата бик ҡаты һүҙҙәр әйтте,

раçламаçҡа, кире ҡағырға тәҡдим итте. Унан һуң сығыш яһаған Дамир Аллаяров, Рәсүл Шөғөров һ.б. төрлө һүҙ әйтеп, Сыңғыҙовты яҡлап сыҡтылар. 17 тауыш менән (1 ҡаршы) Сыңғыҙов үтте. Аҙаҡ ҡотлап мин, Афзалов Раил Шәрифйән улы (ауыл хужалығы министры урынбаçары) телмәр әйттек. Раил Афзалов Әбйәлил кешеһе, был район өсөн ныҡ тырышҡаны күренеп тора.

Әбйәлил районына ситтән килеп, унда икенсе тапҡыр хакимиәт етәксеһе булып һайланыу зур еңеү ул. Табында ошо хаҡта ла әйттеләр.

Совет йома көн үтте. Шамониоға яҡты күҙҙә ҡайтып еттек. Бөгөн буранлай. Әле Сыңғыҙов менән һөйләштем. Унда ҡар юҡ ине, әле һәйбәт яуа тип ҡыуандырҙы.

Дәүләт йыйылышына үҙенең традицион посланиеһын Рөстәм Зәки улы Хәмитов традицион булмағанса башланы: тәүге өлөштә мәҙәниәт мәсьәләләренә туҡталды. Уға тиклем аҡыллы йәмғиәт төҙөү (умное общество) тураһында әйтте. Мәҙәниәткә был тиклем иғтибар, ундағы проблемалар (материаль база, түбән эш хаҡы һ.б.) тураһында ошолай ентекле һүҙ юлламаларҙа быға тиклем булғаны юҡ ине әле. Әҙәбиәт иһә бөтөнләй телгә лә алынмай ине, әле әҙәбиәт тә аталды. Эш хаҡы 2018 йылға ике тапҡыр арта тине. Тик ул осорҙа кем бар ҙа кем юҡ. 2013–2014 йылдарҙа нисек һуң?

Киләһе йыл тәбиғәтте һаҡлау йылы буласаҡ. Торатау хаҡында һүҙҙәр, халыҡ талабы бөгөн айырыуса йыш ҡабатлана. Әммә шихандарҙың яҙмышы күптән хәл ителгән, улар өсөн көрәшеү файҙаһыҙ инде тигән иçкәртеүҙәр бик ныҡ шомландыра. Былтыр «Тауҙар» тигән шәлкем яҙғайным (Ирәмәл, Торатау, Ҡарауыл тауы). Унда Торатауҙы яҡлап бик уçал һүҙҙәр әйтелгән. Әммә ошоға тиклем баçтырмағанмын. Дүшәмбе «Киске Өфө»гә ебәрәм. «Глас вопиющего в пустыне» булһа ла, халыҡ барыбер ишетергә тейеш. Посланиела Торатау хаҡында ләм-мим.

28-дә (шаршамбы) «Башҡортостан»да «Ышаныстар һәм хафалар» тигән мәҡәләмде матур итеп биргәндәр. Тәүге биттә һүрәт менән тәүге абзацтар, икенсе бит – тулыһынса. Һәйбәт отзывтар бар, тик үҙебеҙҙең башҡорт гәзитен башҡорт етәкселәре лә уҡымай. Шуныһы бигерәк кәйефте ҡыра.

Сорнай моңо сорнай.

Олоһо ла олоһон.

Юлдарҙа боҙ түгел,
Юлдарҙа хәҙер тоҙ.
Һыуыкта ла иретеп ята.

«Нефтяник»та Рәмил Сураҡолдоң кисәһе үтте. Дәүләт йыйылышының Почет грамотаһын тапшырҙым. Зал тулы. Рәмилдең йырҙары бик күп. Халыҡтың күңеленә үтеп инде. Бер генә йырын (шиғырын) йырлаһалар ҙа, шағир бәхетле. Сураҡол әрһеҙерәк тә күренергә мөмкин, ләкин ул кемделер һатып, ғәйбәт таратып ярмай бит үҙенә юлды.

Кисә бер сәғәткә яҡын барғандан һуң ғына ҡотлауҙар башланды. Мин тәүге булып һүҙ әйттем. Кисәне бик тырышып әҙерләгәндәр. Әммә алып барыусыларҙың һүҙҙәрендә, шаярыуҙарында зауыҡ түбәнәйеп китә.

Юбилей тантанаһы ун икенән һуң ғына бөткән.

2 декабрь, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Ҡар матур ғына ятҡайны. Әле ямғыр һибәләй. Ҡапыл туңдырып ебәрһә – бәлә. Иртән ҡараңғыла күшегеп керҙем.

Бөгөн Асҡарға өс йәш тула. Иртәгә ҡотларбыҙ инде. Кискә театрға барабыҙ, Салауаттар гастролдә.

Шкафтан «Туған тел» (1994) (4 класс уҡыусылары өсөн уның уҡыу китабы) тигән әсбапты алып ҡарап ултырҙым. Матур төҙөгәндәр, авторҙары Аслаев менән Атнағолова. Минең 11 шиғыр ингән. Бишәүе китаптарымда юҡ. Төхвәт ағай бик ныҡышып яҙҙырып алғайны. Хәҙер ҡарайым да арыу ғына һымаҡ. Балалар өсөн исмаһам бер йыйынтыҡлыҡ шиғырҙар яҙырға ине. Асҡарға уҡырлыҡ нәмә булһын ине.

Ҡалын ғына ике ҡулъяҙма уҡыным. Салауаттағы минең ижад кисәһендә Фәниә Сатучина тигән ҡатын сәхнәгә сығып һүҙ әйткәйне, миңә ла арнағайны. Шул ҡустыһы аша шиғырҙарын ебәргән, ҡалын тупланма. Ғүмер буйы шәфҡәт туташы булып эшләгән, әле пенсия йәшендә. Әгәр баштан уҡ ныҡлап тотонһа, шиғри һәләте асылыр ине. Хәҙер инде ниндәйҙер үҫеш көтөүе ҡыйын. Матбуғатҡа бирерҙәй шиғырҙарын һайлап алдым.

Икенсеһе Морат Солтанов, «Төн йырсыһы». Исеме үк үҙенсәлекле. Донъяға мөнәсәбәте лә ғәҙәти түгел. Әлбиттә, һәр шағир ғәҙәти булмаҫҡа тейеш. Ләкин Морат Солтановтың үҙенсәлеге бөтөнләй башҡаса.

Моратты БДПУ-ла мин аҙыраҡ уҡытҡайным. 2001 йылда Нефтекамскиҙағы күсмә семинарҙа шиғырҙарын тикшергәйнек. Береһе һаман да иҫтә: донъя йәмле, ҡоштар һайрайҙар, ошо ваҡытта бер кеше аҫылынып тора ҡараңғы һалҡын һарайҙа. (әле шиғырҙары янымда түгел, әммә шиғырҙың башланышы шулайыраҡ). Был шиғыр тураһында әлеге семинарҙа ла байтаҡ һүҙ булғайны. Миңә килтергән ҡалын ҡулъяҙмаһы ла шуның менән асылып китә.

Морат, әлбиттә, шағир. Оригиналь фекерләй, быға тиклемге шиғри фекерләү өсөн ят булған көслө образдар, тапҡыр деталдәр бар. Әммә донъяһы ҙтә ҡараңғы, бер үк тема, мотив ныҡ ялҡыта. Йыйынтыҡтың исеме иғтибарҙы үҙенә тарта: “Төн йырсыһы”. Ләкин төн йырсыһы үлем, зыярат йырсыһына әйләнергә тейеш түгел.

Мин Мораттан күберәкте көткәйнем, китабын нәшриәткә тәҡдим итеп булыр тигәйнем. Был көйө бармай.

Йәштәр серияһына өлгөрмәҫ инде, киләһе йыл миңә 35 йәш тула, тигәйне Морат. Китап булһа, сығарырға нисек тә юлын табырға тырышыр инек. Морат Октябрскиҙа уҡыта. Саҡырырға кәрәк. Һөйләшеү ҡыйын буласаҡ, әммә башҡаса сара юҡ.

Бөгөнгө тормош мәсьәләләре төрлө сферала төрлөсә күҙ алдыма килә. Әҙәбиәт, шиғриәт менән генә йәшәгән саҡта, йәғни ижад мөхитендә ижад ҡыуаныстары һәм борсолоуҙары төп кисерештәргә әйләнә, реаль тормоштоң үткер мәсьәләләренән нисектер айырылып тораһың.

Әммә ижади эштәреңде, шиғырҙарыңды ситкә ҡуйып, көндәлек ваҡиғаларға инеп китһәң, сәйәси мәсьәләләр алдыңа килеп баҫһа, Башҡортостаныбыҙҙың, милләтебеҙҙең киләсәге, Рәсәйҙең иртәгәһе яҙмышы өсөн хафалар артҡандан-арта, ышаныс көндән-көн нығыраҡ ҡаҡшай бара. Нимәгә килтерер был болғаныштар, ҡыйралыштар, алдашыуҙар, урлашыуҙар? Нығыраҡ ҡутара башлаһалар, һәр ерҙә ҡот осорлоҡ коррупция асыла. Асылғанынан асылмағаны йөҙ ҡабат күберәк, әлбиттә. Былай барһа, Рәсәйҙе һәләкәт, тарҡалыу көтә.

Дәүләт Думаһы рәйесе Сергей Нарышкин килеп китте. БДУ-лағы һәм Дәүләт йыйылышындағы осрашыуҙа булдым. Билдәлене ҡабатлауҙан уҙмай. Уның вазифаһында башҡаса һөйләп тә булмайҙыр.

Әбйәлилдә хакимиәт башлығы булырға биш кандидат дәғүә итте. Шуларҙың береһе 30-40 йылдан башҡорттарҙың үҙ-үҙен идентификациялауы, йәғни үҙен башҡорт тип һанауы бөтәсәк, тик россияндар ғына ҡаласаҡ, тип һөйләп тора. Урындағы власть шундайҙар

ҡулына күсһә, рәсәй милләтен булдырыу, бар милләттәрҙе рәсәйлеләр тип кенә атау тураһында хыялланыусылар өсөн мөмкинлектәр артасаҡ.

Әле 1964 йылда уҡ Рәми Ғарипов «Табыныу»ҙа «Балтаһынан бигерәк урманды кем белмәй һуң һабы ҡырғанды», тигәйне. Бөгөн милләттең бөтөүен бик етди юрап тороусылар тамырыбыҙҙы сабырға торған балтаның һабы түгелме ни?

7 декабрь, 2012 йыл. Йома.

Һаман да ҡыш була алмай, ноль тирәһендә сайҡала. Хатта һауа торошонда ла ноль оҙаҡҡа китһә, һәйбәт түгел. Ноль дә ноль – бушлыҡ. Был донъяның йылыһы ғына түгел, һыуығы ла шулай һағындыра шул ул.

Бөгөн – Ырымбур яҡтарына. Ошо сәфәрҙән иҫән-һау йөрөп ҡайтһаҡ, алла бирһә, тормош тынысыраҡ китер ине.

4-дә Йомабикә Ильясованың кисәһе «Нефтяник»та бик матур үтте. Тәнәфесһеҙ теүәл ике сәғәт барҙы, һәйбәт йөкмәткеле үтте, шау-шыуһыҙ, буш һүҙҙәрҙе сурытыуһыҙ. Ялҡытҡыс ҡотлауҙар булманы.

Ҡотлауҙарҙан беренсе булып һүҙ әйттем, Дәүләт йыйылышы исеменән сәләмләү хаты, Ҡоролтайҙың миҙалын, матур сәғәт, сәскәләр бүләк иттем. Иң һуңынан «Өс йөҙ ҙә өс» хәҙисемде бирҙем. Унда шундай дүрт юллыҡ яҙҙым:

Эй, шиғриәт! Ғүмерең буйы тағатһаң да,
Сере бөтмәҫ тылсымлы бер йомғаҡ икән.
Һүҙең моңло, күҙең моңло, Йомабикә,
Затлы бикә, Йомабикә – Йомаҡбикә!

Йомабикә Ильясованың шиғриәтендә моңһоу сабырлыҡ, яҡты өмөт – ышаныс. Ул тауышын күтәрмәй генә һөйләшә. Шиғриәтендә лә шулай. Тауышын күтәрмәйенсә, уйсан шиғырҙары менән башҡаларҙы уйландыра, шиғри дәрәжәһен күтәрә.

Мәғәнәһеҙ һүҙҙе, тамаҡ ярып ҡысҡырһаң да, халыҡ ишетмәй бит ул. Һәм ишетмәйәсәк тә. Бындай буш боғаҙҙар, үҙенең тауышынан үҙе ярылырҙай буш ҡыуыҡтар беҙҙә етерлек.

Йомабикәнең аҡыллы, ихлас өндәшеүе, шыбырлап әйтһә лә, алыҫҡа ишетелә, йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәктәргә барып етә.

«Нисек бармын, шулай бер бөтөн», – ти шағирә. Нисек барһың, шулай булыуың ижадта иң ҡыйыны бит. Иң яманы – яһалмалыҡ.

Йомабикә үҙ-үҙенә һорау бирә лә яуабын да үҙе әйтә:

Ғүмеремдең ҡайһы сигендә мин?
Үҙ йәшемдә, бары үҙ йәшемдә.

Һин, Йомабикә, үҙ йәшеңдә – шағир йәшендә. Шағир бит ул ғүмере буйы йәш, ғүмере буйы оло. Шағир сабый һымаҡ бер ҡатлы ла, өлкәндәрсә аҡыллы ла, шат та, бойоҡ та, илгәҙәк тә, һынсыл да. Ҡанаттарын ҡайырһалар ҙа, рухы ҡанатлы булып ҡала. Ике йөҙлөләнмәй, үҙ йөҙөн һаҡлай, үҙ һүҙен яҡлай.

Һәр саҡ үҙ йәшеңдә булып ҡал, Йомабикә, һәр саҡ шағир йәшендә булып ҡал!

Кисәнең һуңғы өлөшөндә Йомабикә байтаҡ шиғырҙарын яттан уҡыны. Бик кисереп, тәьҫирләнеп уҡый, тауышында илау ауаздары ишетелеп ҡала. Йөрәге һыҙланып, иңрәп уҡый.

«Башҡортостан»да (28.11.12.) сыҡҡан мәҡәләмде «Единая Россия – Башҡортостан» гәзитенә алып барҙым. Редакцияларын саҡ эҙләп таптым. Хатта тышта яҙыуҙары ла юҡ. «Большевиктар һымаҡ подпольеға киткәнһегеҙ», – тип шаярттым. Айрат Еникеев алып ҡалды. Кисә шылтырата, аҙыраҡ ҡыҫҡартырға кәрәк бит әле, ти. Боҙоп ҡуймаһындар ине тип ҡурҡам. Бөгөн тағы һөйләшеп алайым әле.

АН РБ-ның «Ғилем» нәшриәтенә бирергә «На что способна литература?» тигән йыйынтыҡ әҙерләйем. Материалым тупланған, тик дискеттары етмәй. Бишенсе томға съездағы докладтарым инмәй ҡалғайны, флешкаһын юғалтҡайнылар. Тағы ла ҡайһы бер мәҡәләләр менән дә шул уҡ хәл. Ошолар ҡулды бәйләп тора.

Рәсәй министрлыҡтарындағы коррупциялар тураһында уҡыһаң, ҡот осҡос урлашыуҙар! Сәстәрең үрә торорлоҡ! Ҡайҙа ғына соҡоп ҡараһалар ҙа, шул урлашыуҙарҙыр инде. Юғарынан бер ни ҙә күренмәй микән ни? Илде талау нисәмә йылдар бара, ә мәғарифты, мәҙәниәтте ҡыҫалар. Мәктәптәрҙе ябып, экономия яһарға уйлайҙар. Быныһы инде бөтөнләй һуҡырлыҡ. Юҡ, улай түгел, былар барыһы ла бик мәкерле маҡсаттар менән эшләнә.

Дәүләт теле ғаилә теле булырға, шунан башланырға тейеш. Был хаҡта бик дөрөҫ һүҙҙәр әйтәбеҙ. Әммә дәүләт теле дәүләт учреждениеларында дәүләт теленә әйләнгәнме һуң? Юҡ дәрәжәһендә. Хатта Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында ла күбеһе русса сығыш яһай. Хатта иң күп башҡорттар йәшәгән (халыҡтың һикһән процеттан

артығы) Әбйәлил районында ла йыйылыштар, ундағы сығыштар тик рус телендә бара. Татар конгресында, Госсоветта йәки Татарстандың Аҡтаныш районында бер ҙә улай түгел бит. Дәүләт ойошмаларында башҡорт теле дәүләт теле булмағас, күпме ғаиләләрҙә ғаилә теле булмағас, туған телебеҙҙең ҡулланыу сфераһы, йәшәр мөхите булып мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре, башҡортса матбуғат, театр, TV-радио ғына ҡаламы ни?

Башҡортостанда иғлан ителгән «Бәхетле балалыҡ һәм ғаилә ҡиммәттәре» йылы тамамлана. Ғаилә ҡиммәттәре телһеҙ тулы буламы? Ғаиләһендә әсәһенең сәңгелдәк йырын, өләсәһенең әкиәттәрен туған телендә тыңлай алмай үҫкән бала бәхетле була аламы?

Хәҙерге кешенең донъя менән бәйләнешендә көндән-көн күберәк мөмкинлектәр асыла. Бала ниндәй телдә булһа ла тормошҡа үтеп инәсәк, яңы информацион технологиялар уның өсөн атай-олатайҙарының төшөнә лә инмәгән мөмкинлектәр асасаҡ. Ләкин алдында иң заманса ноутбуктар булып та, өйөндә башҡортса китап булмаған башҡорт балаһын мин бик бәхетле тип, камил рухи тормошта йәшәй тип әйтә алмаҫ инем. Мобиль телефонды бала ҡолағынан алмай, әммә уның ҡолағы өсөн дә, күңеле өсөн дә ата-бабалар моңо ят, ҡолағын был ғәзиз ауаздар иркәләмәйәсәк. Бөгөн күпме милләттәрҙең яҙмышында ошондай аяныслы хәлдәр.

Хәҙер байтаҡ ата-әсәләр балаларына туған телде өйрәтер ине лә, улар үҙҙәре белмәй, үҙенең халҡының телендә уҡымай үҫкәндәр. Уларҙы хәҙер яңынан уҡытып булмай шул. Матди яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан бәхетһеҙ ғаиләләр, бәхетһеҙ балалар күп. Матди хәлде нисек тә бөгөн булмаһа иртәгә төҙәтергә мөмкин. Имгәнгән рухты төҙәтеүе ай-һай ауыр, ҡайһы саҡта мөмкин дә түгел.

Яңыраҡ радионан һөйләйҙәр: Көнбайыш илдәрендә, мәҫәлән, Норвегияла атай һәм әсәй тигән һүҙҙәрҙе ҡулланыу тыйыла, родитель тигән генә һүҙ ҡалырға тейеш, имеш. Башҡортса эквивалентын тапманым. Ни тиклем мәғәнәһеҙлек, сабыйҙы иң изге һүҙҙәрҙән мәхрүм итеү. Демократия тип ҡысҡырыусылар шундай кешеһеҙлеккә нисек барып етә?

Өфөнөң Ленин, Цюрупа урамдарын яҡтырҡандар, биҙәгәндәр. Күҙҙең яуын алырлыҡ. Саҡ ҡына ситкә китһәң, мәмерйә ҡараңғылығы күпме урында! Ыштаһыҙға ҡайыш бау тигәндәр бындай осраҡтарҙа.

Вадим Богданов шиғырҙарымды тәржемә итеп ебәргән. Лариса Абдуллина подстрочниктар эшләнем тигәйне. Тәржемәләр минең

ҡарашҡа һәйбәт, тик ҡайһы бер урындарын яңынан төҙәтергә ине. Осрашып һөйләшергә кәрәк.

28-дә «Башҡортостан»да сыҡҡан мәҡәләм тураһында мәғариф министрлығынан шылтыратырҙар, фекерҙәрен әйтерҙәр тип көткәйнем. Өндәшеүсе юҡ. Гәзит уҡымайҙар, күрәһең.

16 декабрь, 2012 йыл. Йәкшәмбе.

Йома көн мәғариф министры Ғаязовҡа үҙем шылтыраттым. Мәҡәләне уҡыған. Мин яҙғандар менән риза булмағанлығы тойола. «Ундай дәреслектәрҙән уҡымайҙар бит ул», – ти. Мәктәптәр менән аҙ ғына булһа ла аралашһын ине.

12.12.12. – гел генә бер төрлө һандарҙан торған көн дә үтеп китте. Ҡабат яңы быуат башына, хатта яңы мең йылыҡҡа тиклем бер кемдең дә тыуған көнөндә ундай тап килеү булмаясаҡ. Етәкселек исеменән Р.Н. Зиннуров ҡотланы. Ҡоролтайҙа эшләүсе депутаттар менән минең кабинетта ултырҙыҡ. Өҫтәл матур булды, өйҙән тейәнеп килгәйнек.

13-дә Дәүләкәндән һуғымды – ярты тайҙы алып ҡайттылар. Быйыл ныҡ һимеҙ булған. Бына күпме ваҡыттар (15 йыллап ҡына барҙыр) йыл әйләнәһенә өҫтәлдән йылҡы ите өҙөлмәй. Ҡымыҙҙы ла шулай гел генә эсергә ине лә, даими килеп сыҡмай.

7–8 декабрҙә Ырымбур яҡтарына сәфәр. Рифат кейәүҙең ҡырҡында байтаҡ туғандарҙы күрҙем. Переволоцкий аша урап йөрөнөк, бер яғы ғына 505 км. Юлда боҙлауыҡ урындар бар.

Туғандар менән осрашып ҡыуанһам да, тыуған яҡтарымда кәйефем ныҡ ҡырылды. Ҡотломбәт мәктәбе уртанан туғыҙ йыллыҡҡа ҡалған. Уның да киләсәге өмөтһөҙ – әле ни бары 29 бала уҡый.

Халыҡҡа күңелем рәнйеп ҡайттым. Башҡорт теле кәрәкмәй тип, байтаҡ ата-әсәләр, балаларын Ҡотлөмбәттә уҡытмайынса, туранан-тура Степановкаға бирәләр икән. Райондағы Зубочи, Чесноковка һымаҡ ҙур-ҙур татар ауылдарында ла шул уҡ аяныслы хәл икән: татар телен хатта факультатив уҡытыуҙан да халыҡ баш тартҡан. Башҡортостанда татарса уҡырға мөмкинлек юҡ тип зарланыусы ҡайһы бер Ҡазан эшмәкәрҙәре төрлө өлкәләрҙәге татар мәктәптәренең хәлдәре менән танышһындар, хәлдәрҙе яҡшыртыу юлдарын эҙләһендәр ине.

Башҡортостанда ла мәктәптәрҙең киләсәге бик хәүефле. Әммә башҡа өлкәләрҙәге башҡорт балаларының, тимәк, милләттең киләсәк яҙмышын уйлаһаң, республикала күп яҡтан әле шөкөр итерлек. Тыуған

яҡтарымда эштәр шулай барһа, бер 15–20 йылдан унда ҡайтып, башҡортса шиғыр уҡыуҙың да кәрәге ҡалмаясаҡ, сөнки унда башҡортса уҡыусы ғына түгел, башҡорт һүҙен аңлаған кешеләр аҙ ҡаласаҡ. 1987 йылда Силәбеләге осрашыуҙар ваҡытында ҡайһы бер ауылдарҙа башҡотса шиғырҙы аңламағандарына, үҫеп еткән йәштәрҙең дә башҡортса һәйләшә белмәгәненә ныҡ аптырап, беҙҙең Туҡсоран яҡтарында халыҡ ассимиляцияға бик тиҙ бирелеп бармай тип уйлағайным. Хәҙер был бәләләр минең тыуған яҡтарыма ла барып еткән.

10 декабрҙә Фәйзи Ғәскәров ансамбле залында Динистең Төркиәлә сыҡҡан китаптарының презентацияһы булды. Сығыш яһаусыларҙан тәүге булып мин һүҙ әйттем.

Башта Динискә арналған шиғырымды уҡыным. Унда «Тертләп китәм, үткән саҡта ҡапыл берәйһенә, Динис, тиһәләр» тигән юлдар бар. Динистең тауышы туҡтағаны юҡ, һүҙе ишетелеп тора: музейы, мәктәбе, китаптары, кисәләре... Рәйләнең изге эшмәкәрлеге.

Динистең һүҙе бына Төркиәнән килеп етте. Оло ваҡиға. Рәхмәт Төркиәгә – төркиҙәрҙе берләштереүсе илгә. Унда 10 сәфәрем, 3 юлъяҙмам.

«ДА» журналы редколлегия ултырыштары, әҙәби осрашыуҙар. Береһе Франция, Страсбургта.

Төркиәлә башҡорт әҙәбиәтенең ике телдә сыҡҡан баҫмалары: ике томлыҡ антология, Салауаттың, Аҡмулланың китаптары.

Әммә бер юлы бер яҙыусының төрөксә бер үк ваҡытта бер үк нәшриәттә ике романы ике китап булып баҫылып сығыуы – әлегә булмаған хәл. Бәлки бөтә төрки донъяһында юҡтыр. Бәлки ҡабат булмаҫ та.

Динис Бүләковтың «Килмешәк», «Ғүмер бер генә» романдары бик матур китаптар булып баҫылған. Уның хаҡында әйтелгән һүҙҙәр (Б. Рафиков, Р. Байымов, минеке) килтерелгән, тышлыҡтың һуңғы битендә лә бирелгән.

Рәхмәт ошоно ойошторған ТЮРКСОЙ-ға (уның исеме менән баҫылған). Рәхмәт ошо китаптарҙы тәржемә итеп, докторлыҡ диссертацияһы яҡлаған йәш, мөләйем төрөк ҡатыны Ниғар Ҡалҡанға. Рәхмәт ошоларҙы ойошторған Әхәт Сәлиховҡа. Күп иптәштәргә рәхмәттәр: Тюрксой етәксеһе Дюсен Касеиновҡа, Анкара мэрияһынан килгән Санат Алаттинға һ.б.

Тәржемәселәр – халыҡтар, илдәр араһында бәйләнештәрҙе үҫтереүсе элемтәселәр. Элемтә тормоштоң бер генә тармағында ла

өҙөлмәҫкә тейеш. Яңы ҡитғаларҙы бөйөк сәйәхәтселәр генә түгел, талмастар ҙа асҡан.

Кеше күп ҡаршылыҡтарҙы еңгән. Мәҫәлән, сверхзвуковая скорость. Ләкин тел барьеры ҡалған. Ҡаласаҡ, мәңге ҡалһын. Кешелек төрлө телдәрҙә һөйләшһен, әммә уртаҡ уйҙар менән йәшәһен. Төрлө телдә һөйләшеп тә, уртаҡ тел табып була. Бер телдәге, бер диндәге туғандар, мәҫәлән, ғәрәптәр, бөгөн үҙ-ара һуғыша, ҡан ҡойоша.

Динис Бүләков тәржемә өсөн бик дөрөҫ һайланған. Уның һүҙе һәр саҡ заман хаҡында булды. Һикһәненсе йылдар аҙағында рус әҙәбиәтендә элек тыйылып килгән әҫәрҙәр баҫылып бөткәс, элек тираждары млн. экземплярҙан артып киткән атаҡлы үҙәк журналдар бик мөшкөл хәлдә ҡалды, бәғзеләре хатта ябылды. Ошо уҡ осорҙа башҡорт әҙәбиәтендә заман тураһында әҫәрҙәр ижад ителде. Шулар араһында Динис Бүләков ижадын айырым атарға кәрәк. Ул ваҡыт дистанцияһын көтмәне. Рәми Ғарипов әйтмешләй, «Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙен инде һуңлаһа?» Заман хаҡындағы һүҙҙе Динис Бүләков ваҡиғалар әле эҫе ваҡытта, ҡайнап торған сағында әйтте. Яҙыусы булараҡ та, төрлө яуаплы эштәрҙә етәксе, журналист, депутат булараҡ та Башҡортостан тормошо менән һәр ваҡыт тығыҙ бәйләнештә йәшәне.

Кисә бик ихлас, йылы булды. Бер сәғәткә күп нәмә һыйҙы. Рәйләнең тәржемәсе ҡатын Ҡалҡанға дебет шәл, Ғәлим Хисамовтың Анкара ҡунағына башҡорт еләнен ябындырыуы, Рәйләнең бер ейәнсәренең йырлауы, икенсеһенең шиғыр уҡыуы бик матур, бик урынлы килеп сыҡты. Кисәнән күңелебеҙ сафланып, ҡәҙерле иҫтәлектәрҙе яңыртып ҡайттыҡ. Иртәгеһенә ҡунаҡтар менән Салауатҡа, Ишембай районына Вәлиди музейына, Мәләүез районына Динистең музейына барҙылар. Тәржемәсе Ниғар Ҡалҡан башҡортса матур ғына һөйләшә, йәнле аралашыу етмәй, ти. Был сәфәр уның өсөн дә һәйбәт булғандыр. Рәйләнең ауырыу көйөнә Мәләүезгә барып ҡайтыуы – ҡаһарманлыҡ.

28 декабрь, 2012 йыл. Йома.

20-дә Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтайҙың быйылғы һуңғы ултырышы. Унан һуң минең кабинетта комитет ағзалары йыйылдыҡ – А.Н. Антонов матур өҫтәл ойоштороҙо, яңы йыл ҡотлауы. Аҙыраҡ булдым да аҫҡа ашханаға төштөм. Унда К.Б. Толкачев ҡотланы. Мәжлестә оҙаҡ ултырманым – өҫкә күтәрелһәм, миндәге халыҡ таралып бөткән тиерлек.

21-дә Йоматауға киттек. Шул уҡ көндө «Башҡортостанда» минең «Килер шатлыҡтар килмәй ҡалмаһын» тигән мәҡәләм – моңһоу байрам алдынан (иҫке йылды оҙатыу – яңыһын ҡаршылау) уйланыуҙарым баҫылған. Элекке мәҡәләмә («Өмөттәр һәм борсолоуҙар», 28.11.12.) ике һанда откликтар сыҡты (Санъяров, Бураҡаева һ.б.).

Санаторийҙа баш күтәрмәйенсә көндәлектәрҙең беренсе томының корректураһы менән ултырҙым. Китап бик ҙур – 800 биткә яҡын. Күҙ арыны. Әллә күп уҡыуҙан, әллә бассейнда каскад аҫтында тороуҙан уң күҙем шешеп, ҡыҙарып сыҡты. Шеше һаман ҡайтмай.

Был юлы ла, бар эште ташлап, ял итеп булманы. Шулай ҙа бассейн, массаж, һауала йөрөү һәйбәт. Халыҡ бик күп түгел, күбеһе социаль путевка менән килгән өлкән йәштәгеләр.

Китапханаларында ниндәй генә ялтыр тышлы журналдар теҙелеп тора. Әммә «Ағизел», «Шоңҡар», «Ватандаш», «Бельские просторы», «Йәшлек», «Истоки», һ.б. – быларҙың береһе лә юҡ. Элек улай булмай торғайны бит. Редакторҙар үҙҙәре лә аҙыраҡ булһа ла ҡыбырларға тейештер бит.

Ахырызаман етә тип халыҡты шомландырған көндө – 21-се декабрҙе лә иҫән-һау үтеп киттек. Хәҙер әҙәм балаһын нимәләр менән генә ҡурҡытмайҙар. Иманһыҙ донъя ҡиәмәт көнөн иманһыҙ ҡылыҡтары менән үҙе яҡынайта.

Ауыр саҡтарҙа «эт күрмәгәнде күрҙем», «эт көнөндә йәшәй бит», тиҙәр. Ләкин бөгөн ябай кешегә байҙарҙың эттәре күргәндәрҙе күреү ҡайҙа ул! Ул эттәрҙең айырым торлаҡтары, хеҙмәтселәре, уларҙы өйләндереп, туй музыкалары менән туйҙар үткәреү... Шуларҙы телевизорҙан күрһәтәләр, һеҙ беҙҙең эттән дә кәмһегеҙ тип, халыҡтың битенә төкөрәләр. ТВ-лағы аллаһыҙ Аллаларҙың һ.б. шашыныуҙары осон осҡа ялғай алмаған намыҫлы кешеләрҙе кәмһетеү, уларҙан көлөү бит ул.

1917 йылғы тетрәнеүҙәрҙән һуң Россияның таланған байҙары бер тинһеҙ ҡалып, сит илгә ҡасҡан, затлы дворяндар йән аҫрап өсөн ниндәй генә эштәрҙә эшләмәгән.

80–90-сы йылдарҙағы илде талау дәүерендә харам олигархтар Рәсәйҙән сит илгә ҡасты. Әммә унда меҫкен килмешәк булманы, замоктар, караптар, утрауҙар һатып алды, футбол командаларының һ.б. хужаһына әйләнде. Сит илгә байлыҡ һуңғы егерме йылда даръя булып аҡты, әле һаман да аға.

1917 йылғы ваҡиғаларҙан һуң, граждандар һуғышы, 1921 йылғы аслыҡ һ.б. һәләкәттәрҙән һуң 20 йыл эсендә СССР донъялағы иң ҡеүәтле илдәрҙең береһенә әйләнде.

Горбачевтар, Ельциндар һәм уларҙың тирәһендәге ҡараҡтар дәһшәтле мәмләкәтте егерме йылда меҫкен хәйерсе хәленә еткерҙеләр. Айырма шунда ғына.

24 ғинуар, 2012 йыл. Кесаҙна.

Яңы йыл алдынан, 30 декабрҙә, Чесноковкала Зөлфиә менән Ғайсаларҙа ҡунаҡта, 5-дә Рәфис Вахитов ҡустымдың 60 йәшенә Черниковкала йыйылдыҡ. Бик күп туғандарҙы күрҙем. Ял 30-нан башлап ун көнгә һуҙылды.

9-да эштә Зөфәр Сафин, Эльвира Юнысова, Римма Үтәшеваларҙы, 17-дә үҙебеҙҙең комитетта Лиана менән Илмираларҙы тыуған көндәре менән ҡотлау.

14 ғинуарҙан больницала диспансеризация үтәмен. Бөгөн ун беренсе көн, аҙ ғына булһа ла алдан сығырға ине. Баҡсаны ҡар күмеп бөткәндер инде. Күптән булғаныбыҙ юҡ. Бер генә тапҡыр ҡар көрәгәйнек.

Больницала бер үҙем йәшәнем. Йоматауҙа көндәлектәрҙең беренсе томы менән баш күтәрмәй ултырһам, бында икенсе томдың корректураһы менән булдым. Санаторийҙағы һымаҡ бында ла күҙ арыны. Шулай ҙа был эшемдең осона сыҡтым. Ярай әле яңы йыл алдынан да, әле лә форсат тыуҙы. Эш араһында ғына тау тиклем был корректураларҙы (ике том бергә 1500 биттән артыҡ) уҡып-төҙәтеп сыға алмаҫ инем. Бөгөн полиграфкомбинатҡа алып барам. Тикшеренеүҙәрҙе беренсе булып үтеп бөттөм.

Рафаэль Зиннуров менән күршеләрбеҙ, мин – 522, ул – 521. Рафаэль да ижад менән булды. Төндәрен ултыра икән. Мин өстә-дүрттә торам, ул шул ваҡытта ғына йоҡларға ята. Ҡайһы бер көндәрҙе (бигерәк тә шәмбе-йәкшәмбе) тотош этажда икәү генә ҡалабыҙ. Әле өс тулмаҫ борон яҙышып ултырам. Тотош бүлектә мин бер үҙем. Халыҡ килеп-ҡайтып йөрөй.

Көндәлектәр китабына төрлөсә исем уйлап ҡаранym, береһе лә оҡшамай. «Көндәлектәр» тип алғайным, шул көйө ҡалһын. Көндәлектәр китабының беҙҙә әле булғаны юҡ бит. Жанр ҙа үҙенсә яңылыҡ. Быға тиклем Рәми ағайҙың, Мостай ағайҙың көндәлектәре баҫылғайны. Ә минеке, Аллаһ бирһә, өс том буласаҡ. Әҙәбиәтебеҙгә яңы күренеш килтерер тип өмөтләнәм.

Көндәлектәрҙең корректураһын бер уҡый башлаһаң, үҙенән ебәрмәй. Бөтөнләй яңыса йәшәп алдым.

Көндәлектәрҙәге ҡайһы бер фекерҙәргә әйләнеп ҡайтырға кәрәк. Мәҫәлән, закондар тураһындағы уйланыуҙар. Йәки белем алмаһы хаҡында әҫәр яҙыу хыялы. Ғәжәп фәлсәфи проблема бит.

Көндәлектәргә һибелгән шиғри юлдар, һыҙмалар, образдар, деталдәр – былары үҙе бер донъя. Ҡайһы берҙәрен айырым дәфтәргә күсереп тә ҡуйғайным, ваҡыт бүлә алмайым.

Ҡайһы бер юлдар йыр булырға тора:

Балҡып китә яҡты йөҙөң,
Һағыш бөркә моңһоу күҙең,
Өҙөлөп кенә әйткән һүҙең,
Бөттө түҙем, эй, Гөлйөҙөм.

Ғөмүмән, йырҙар менән махсус булаһы бар. Күптән инде айырып алып ҡуйған текстарым да шул көйө ята, композиторҙарға күрһәткәнем юҡ. Күптәр бит көй сығарыусыларҙы бәйләнеп ялҡытып, әрһеҙләнеп йөрөп йыр «тыуҙыра».

Берәүҙәргә иң изгеһе ғибәҙәттер,
Икенсегә ғәйбәт сәйнәү төп ғәҙәттер.

Кисә телевизорҙан Тәнзилә Үҙәнбаеваның концертын бирҙеләр. Күбеһе йәшерәк саҡтарҙағы, иң матур саҡтарҙағы яҙмалар. Бына шуларға ҡарап, үкенестәр арта, ғүмерҙең үтеүҙәре нығыраҡ һағышландыра.

Бөгөнгө почтальондарҙың хәйерсе хәлендә йәшәүе, эш хаҡтары юҡ тиерлек. Матбуғаттың аҙ таралыуында ошо ғәҙелһеҙлек бөгөн бик мөһим сәбәптәрҙең береһе. Ә бит заманында Муса Йәлил «Хат ташыусы» тигән поэма яҙған. Бер фильмда почтальон велосипедта йырлап китеп бара торғайны. Әле ҡасан ғына беҙҙең радионан «Почтальон, почтальон...» тип бик йыш йырлай торғайнылар. Әҙәбиәттә, музыкала ул яҡтылыҡ илтеүсе, араларҙы яҡынайтыусы образ ине. Ә хәҙер?..

Алдағы көндәргә эштәремде асыҡлап, сараларҙың исемлеген төҙөп ултырҙым. Исемлек бик оҙон килеп сыға. Дәүләт йыйылышындағы хеҙмәттең осона ла сығып киләбеҙ. Иҫән-һау

матур итеп йомғаҡларға кәрәк. Тормошомдоң, яҙмышымдың бик ҙур өлөшө бит.

Ғәләм өсөн юҡ бөйөклөк,
Ғәләм өсөн юҡ ваҡлыҡ.
Ғәләм өсөн ҡайғылар юҡ,
Ғәләм өсөн юҡ шатлыҡ.
Ғәләм өсөн ай юҡ, йыл юҡ,
Ғәләм өсөн юҡ ваҡыт.

Ошо донъяны күреүем! –
Бәхетме, бәләме һин?
Мине тере иткән йәнем,
Мәңгелекме, мәлме һин?

Төпсөнһәң, төпһөҙ был йыһан,
Мәңгелек тә, мәл дә юҡ.
Барыһын белер хәл дә юҡ,
Әлдә юҡ шул, әлдә юҡ...

«Бүрәнә аша бүре күрә» – элек һүҙҙәр ирония менән әйтелгән. Хәҙер бүрәнә аша бүре күреү генә түгел, әллә нимәләр аша әллә нимәләрҙе күрәләр.

2013

28 ғинуар, 2013 йыл. Дүшәмбе.

Кесаҙна – шәмбе баҡсала. 24-дә көндәлектәрҙең беренсе китабы менән эштәрҙе бөтөргән һымаҡ булдым. Тышлыҡ тураһында ла һөйләштек. Киләһе аҙна бәлки производствоға китер.

Баҡсала рәхәтләнеп ҡар көрәнем.

Шәмбе көн Динистың ейәне, Ләйсән менән Николайҙың ҡыҙы Ританың никах туйында. Нурмөхәмәт хәҙрәт үҙе алып барҙы. Йәштәргә, мөфтөйгә, Рәйләгә, Сафуандарға, Фәрит менән Флүрә Ноғомановтарға һәр ҡайһыһына берәр хәҙис һайлап яҙып, «303 хәҙис»те бүләк иттем. Мәжлес бик ихлас барҙы. Тик хәҙрәт бик артыҡ оҙонға һуҙҙы һымаҡ.

Хәҙистәрҙе минең шиғыр тиеүселәр ҙә бар. Яңыраҡ билдәле уҡытыусы Гөлкәй Хужинаның «Башҡортостан»да ҡыҫҡа ғына матур

һүҙе булды. Шунда ул «Мин аҡһаҡты бар яһаным» тигән хәҙисте минең шиғырҙан өҙөк тип килтерә. Ишетеүе-уҡыуы күңелле булһа ла, барыбер уңайһыҙ.

21 ғинуарҙа «Башҡортостан» гәзитендә 2012 йылғы лауреаттарҙы бүләкләү булды. Унан һуң «Коллектив менән – Башҡортостанға» акцияһының еңеүселәрен билдәләү өсөн лауреаттар йәрәбә тартты. Миңә башларға тинеләр, «БДУ-ның Сибай институты» тигән ҡағыҙҙы тартып сығарҙым. 25-дә йома көн ошоноң фоторәсемен биргәндәр. Ошо уҡ һанда Ләлә апай Биишеваның минең «Ышаныстар һәм борсолоуҙар» тигән мәҡәләмә «Хәрәкәт бәрәкәтле булһын ине» тигән һүҙе баҫылған. Быға тиклем дә яҙғайнылар, Ләлә апайҙың мәҡәләһе иң ҙур ғына түгел, иң ентеклеһе, төпләһә.

Яҙыусылар союзында берәй районға сыҡтылармы – тиҙерәк фото бирep, яҙып сығалар. Бик ҡыҙыу эшләйҙәр, йәнәһе. Беҙ эшләгәндә, көн һайын үткәрелгән саралар тураһында (ҡайһы саҡта көнөнә бер нисәү) яҙған булһаҡ, гәзиттәрҙең һәр һанында яҙыусылар тураһында фотолы хәбәрҙәр баҫылыр ине.

Отечество, отчество... Если человек не достоин своего отчества, не верен памяти своего отца, что может ждать от него Отечество?

Путин һәр мәктәп уҡыусыһы мотлаҡ уҡырға тейешле 100 китап исемлеге тураһында бик дөрөҫ һүҙ ҡузғатҡайны ла, был мәсьәлә бик тиҙ онотолдо. Хәҙер бик һирәктәр генә уны иҫкә төшөрә. Һөйләгәндә лә тик хәҙерге рус әҙәбиәтендәге исемдәр телгә алына. Милли әҙәбиәттәрҙән һирәк-һаяҡ Сыңғыҙ Айтматов атала. Ә сит ил классикаһы бөтөнләй юҡ.

Хәйер, эш шунда ғына ла түгел. Мәктәп дәреслектәренән бөйөк рус әҙиптәрен алып ташлайҙар, уның урынына сүп-сар тултыралар. Исмаһам, мәктәптә рус әҙәбиәтен һәйбәтләп уҡытырға ине. Хәҙер рус теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен бергә ҡушалар. Шундай шарттарҙа рухиәт тәрбиәләү тураһында ниндәй һүҙ алып барырға мөмкин?

Ҡайһы бер ғалимдар, мәҫәлән, академик Пивоваров, революцияны әҙерләүҙә рус яҙыусыларын, хатта Толстойҙы ғәйепләй.

Айым тотолдо, телем тотлоҡто.
Ай тотолор ҙа ҡотолор,
Мин тотолһам, нишләрмен?

«Ватандаш» «Урал батыр»ҙың тулы тексын баҫа башланы. Әхмәт Сөләймәнов бик ҙур эш эшләй. Әммә эпостың изге тексы изге көйө һаҡланырға тейеш. Уға үҙеңдән нимәлер өҫтәргә ярамай, гонаһ була.

Башҡорттарым йыйылыр баш ҡорға.
Ярһыу даръя булып ташырға,
Яҡты һауаларға ашырға,
Тупланырға, нығыраҡ артырға...

Тәүге һүҙ әйтеүселәргә, кеше психологияһын, күңел диалектикаһын асыусы, әҙиптәргә, әлбиттә, ҡыйын булған. Кеше тәбиғәтенең күп яҡтары тураһында уларға тиклем яҙмағандар.

Ләкин хәҙерге яҙыусыларға, шағирҙарға ла еңел түгел. Серҙәр асылып бөткән тиерлек. Ирекһеҙҙән ҡабатлауҙар башлана.

4 февраль, 2013 йыл. Дүшәмбе.

Баҡсала йорт төҙөйбөҙ тип ике йыл буйы, ике йәй буйы ике шофер менән ике машинала алмаш-тилмәш сапһам да, бында нисәмә машина йөк бушатылып, бер-бер артлы ике бригада оҫталар эшләп, күпме аҡсалар китһә лә, Шамонинолағы был йорт барыбер миңә, Фәриҙә менән икебеҙгә, Аллаһытәғәләнең бүләге ул. Киләсәктә, бәлки, балалар ҙа эйәләшеп китер.

Бындағы саф һауа, бындағы тынлыҡ, ап-аҡ ҡарҙар үҙҙәре шифа, шифаханаларыңа биргеһеҙ.

Баҡсала китаптың структураһын төҙөп бөттөм. АН РБ-ның «Ғилем» нәшриәтенә әҙерләйем. Мәҡәләләр, докладтар, сығыштар. Исеме – «На что способна литература?».

Йыл аҙағында алып барырға тейеш инем, был айҙа эшен бөтөрөргә кәрәк. Бәлки юбилейға өлгөртөп булыр.

30-да Шамил Хазиәхмәтовтың ҡырҡында, профсоюздар йортонда. Һәйбәт иптәш, һәйбәт яҙыусы булды. Үҙенең нәшриәтен булдырҙы. Шулай дәртләнеп йәшәгәндә шулай ҡапыл китеү...

Газета-журналдарҙы уҡып өлгөрөп булмай. Матбуғат күмә, ваҡытты ала. Әммә башҡаса йәшәп тә булмай.

Грипп ҡотора. Илдәге иң күп ауырыусылар беҙҙә – Башҡортостанда тиҙәр. Мин бер көн сәсрәп ауырыным да үткәрҙем һымаҡ.

8 март, 2013 йыл. Йома.

Ай эсендә байтаҡ ваҡиғалар булды: Сәйетбабала Әнүр Вахитовтың 80 йыллығы, «Нефтяник»та Зәйнәб Биишеваның 105 йыллығы. Яҡташтары матур ойоштороған Милли китапханала Амантайҙың 105 йыллығын ейәне Рафаэль Амантаев тырышып йөрөп үткәрҙе. Өс кисәлә лә сығыш яһанym.

1-дә Толкачевтың 60 йәшлек табыны. 4-дә Зөфәр Еникеевтың тыуған көнөндә 5 томлығымды бүләк иттем. 6-да ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡотланыҡ. Арнап һәр береһенә берәр строфа шиғыр яҙҙым.

6 марттан баҡсалабыҙ. Ике көн Асҡар булды.

Быйыл донъяны ҡар баҫты. Кисә төнө буйы буран ҡоторҙо. Ҡар ҡойма менән тигеҙләнгән тиерлек. Икенсе тапҡыр юлға бик ныҡ һала. Ҡапҡаны саҡ асып керҙек. Юлды икенсе тапҡыр көрәйбеҙ.

Көндәлектәрҙең ике томы ла производствола. 30 экземпляры 15 мартҡа әҙер буласаҡ. Өҫтән тау төшкәндәй. Матур ғына килеп сыҡмаҡсы. Тик хәреф хаталары күп булмаһын тип ҡурҡам.

Тағы ла бер ҙур эштең осона сығып киләм: «Ғилем» нәшриәтенә китабымды туплап бөттөм. Баҡсаға алып килгәйнем, яңынан барлап сығырмын тип. Тик тотоноп булмай. Был китаптар менән ныҡ арытҡан.

26-да Аграр университетта йәштәр менән осрашыу. Ректор Ғәбитов уҡыу йорто менән таныштырып йөрөнө. Үҙе тотош бер ҡаласыҡ икән.

Ҡайһы бер көндәр өлгөрөп булмай. Мәҫәлән, 26 февралдә Госсобрание ултырышы, Мәҙәниәт министрлығының коллегияһы, Аграр университет, Зәйнәб Биишева кисәһе. Барыһы ла бер көндә. Өсәүһендә сығыш яһанym.

Мәскәү башҡаларҙан ғәйеп эҙләй, тик үҙен генә күрмәй, үҙен белмәй.

Әммә күпме урлашыуҙар асыла. Йөҙәр миллиардтар юғала. Донъяла, тарихта бындай ҡараҡтар иленең булғаны бармы икән?

Год русского языка, год российской истории – исем-атамалары изге лә бит, тик йөкмәткеле эштәре, һынылыш яһарлыҡ программаһы юҡ. Бөйөк рус теле мәсхәрәләнә, хәҙерге йәштәргә ил тарихы боҙоп, кәмһетеп күрһәтелә.

12 март, 2013 йыл. Шишәмбе.

6 мартта Ҡоролтай ашханаһындағы беҙҙең залда ойоштороlған табында ҡатын-ҡыҙ депутаттарыбыҙҙы ҡотлап уҡылған арнауҙар:

Венера Шәрәфетдиновағa
Венера ла, Зөһрә лә ул, Сулпан да ул,
Исемдәре береһенән береһе матур.
Ниндәй генә исем менән өндәшһәң дә,
Яҡты йөҙө йондоҙ булып нурлы балҡыр.

Эльвира Юнысоваға
Сәхнәнең дә, сәхрәнең дә
Күрке бит һин, Эльвира.
Бер йылмайып ҡарауҙарың
Донъяларға йәм бирә.

Елена Родинаға
Родина ул беҙҙең Ватаныбыҙ,
Ни тиңләшер тыуған илеңә?
Ошо илебеҙҙең бер сәскәһе
Гүзәлдәрҙән гүзәл Елена.

Альбина Буранғоловаға
Альбинаҡай һәр саҡ ихлас,
һәр саҡ алсаҡ
Эш тип яна, эш тип йүгерә,
эш тип йәшәй.
Нишләр ине Альбинаһыҙ
был Ҡоролтай?
Нишләр ине Альбинаһыҙ
«Берҙәм Рәсәй»?

Римма Үтәшеваға
Әллә күпме кешеләрҙең
Рәхмәтенә сорнала ул.
Депутат та, табип та ул,
Римма ла ул, прима ла ул.

Милана Скоробогатоваға
Башҡортостан балаларын
Хәстәрләүсе Әсә-Ана,
Һине күреп, ил ҡыуана
Беҙҙең мөләйем Милана.

24 март, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

15-дә көндәлектәремде ике ҡалын том рәүешендә ҡулға алып бик ныҡ шатландым. Ҡағыҙы ла һәйбәт, тышлығы ла матур. Әҙип көндәлектәренең ошолай донъя күреүе беҙҙең әҙәби мөхиттә оло ваҡиға, бығаса булмаған яңылыҡ, әлбиттә. Һырттарын ҡабартыусы, йәмһеҙ мыяулаусы бесәйҙәр ҙә булыр, әммә был китаптарҙа бер нәмә лә уйлап сығарылмаған, юҡтан бар яһалмаған. Бесәйҙәр мыяулау ғына түгел, хатта тырнашырға ла тырышыр. Тик дөрөҫлөк барыбер дөрөҫлөк булып ҡаласаҡ.

Көндәлектәремдең бер өлөшөн «Китап»тың магазинына, «Знание»ға урынлаштырҙым. Тиражы ҙур түгел – 250, уның да егермеһен тейешле исемлек менән (Китап палатаһы, Милли китапхана, Мәскәү һ.б.) таратҡандар. Үҙем түләп сығарғас, тиражын күп итеп булмай. Таратыуы ла үҙенсә проблема.

Яҙыусылар союзында әҙәби кесаҙнала презентация үткәрергә уйлайым.

12 мартта БДУ-ның тарихсылар түңәрәгендә осрашыу. Нурислам Ҡалмантаев саҡырғайны. Фекерле йәштәр бар. Башҡа факультеттарҙан да йөрөйҙәр икән.

Башҡорт академтеатрында «Аҡ пароход» буйынса спектаклде ҡараныҡ. Бик ҡараңғы, бик ауыр. Байтаҡ йылдар элек беҙҙең ҡурсаҡ театрында «Аҡ пароход»ты күргәйнек, бик яҡты тәьҫораттар иҫтә ҡалған. Был юлы яҡтылыҡ бик аҙ.

Хөкүмәттең 2012 йылдағы эштәре буйынса отчеттары: башта Министрҙар кабинетында, 21-дә Ҡоролтайҙа. Бында Президент үҙе һөйләне. Ике осрашыуҙа ла Дәүләт йыйылышының эшенән ҡәнәғәт булмауын әйтте. «Аргументы недели» гәзитендә (14.03.13.) «Президент против парламента?» тигән материал баҫылды. Дөрөҫ булмаған һандар килтерелә. Президентҡа ялған мәғлүмәттәр бирәләрме?

13 апрель, 2013 йыл. Шәмбе.

3 апрелдә Яҙыусылар союзында яңы шиғырҙар уҡыным, китап туйы – «Көндәлектәр»ҙең презентацияһы үтте. Халыҡ залға һыйманы: яҙыусылар, уҡытыусылар, студент йәштәр. Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина Учалынан Рәүеф Шаһиевтың хатын уҡыуҙан башланы. Унан һуң Хәсән Назар ныҡлап әҙерләнеп килгән ентекле тексы менән сығыш яһаны. Унан һуң Ирек Кинйәбулатов һөйләне. Трибунаға Гөлфиә Юнысова, Факиһа Туғыҙбаева, БИРО-нан уҡытыусы ҡатын, Камил Зиганшин, Зөфәр Вәлит, Ғайса Хөсәйенов,

Ҡәҙим Аралбай, Ринат Камал һ.б. сыҡтылар. Спартаҡ Ильясов урындан тороп фекерен әйтте. Дәүләт йыйылышынан Зиннуров Рафаэль килгәйне, ул да һөйләне. Һөйләшеү бик ихлас барҙы, баһалар бик юғары булды. Хатта тыңлап ултырыуы уңайһыҙыраҡ ине. Аҙаҡ табын үткәрмәм тигәйнем, тик унһыҙ барыбер килеп сыҡмай шул. Сәхнәлә бер ҡосаҡ сәскәләр бирҙеләр.

10 апрелдә Хәсән Назарҙың «Шағирҙың күңел көҙгөһө» тигән мәҡәләһе «Башҡортостан»да бик оператив килеп сыҡты.

Презентацияла «Көндәлектәр»ҙең ике томы һатылды. Байтаҡ алдылар.

29 мартта полиграфкомбинатта китабымды сығарыуҙа ҡатнашҡан хеҙмәткәрҙәр менән ултырып алдыҡ.

30 мартта Академтеатрҙа иң өлкән яҙыусыбыҙ Нәжип Асанбаевты оҙаттыҡ. Президент үҙенең һүҙен баштан аҙағына тиклем башҡортса һөйләне. Унан һуң миңә һүҙ бирҙеләр. Русса уйлап барғайным, башҡортса әйттем. Лилиә Салауат ҡыҙы Ғүмәрова алып барҙы. Татарстандан Роберт Миңнуллин сығыш яһаны. Нәжип ағай менән уның һуңғы көнөнә тиклем аралашҡан Наилә Сәфәрғәлина-Байкова (Салауат театры) ағайҙың мәктәптәрҙе һаҡларға тигән васыят һүҙҙәрен бик урынлы килтерҙе.

Нәжип Асанбаев башҡорт сәхнәһен 50–60-сы йылдарҙа шаулатҡан драматургтарҙан һуңғы могикан булып, шул дәүерҙе йомғаҡлап ҡуйҙы инде. Улар көслө, зур төркөм ине (М. Кәрим, И. Абдуллин, Н. Нәжми, Ә. Мирзаһитов, Ә. Атнабаев, З. Биишева, һуңыраҡ Р. Сафин, Ф. Богданов, Х. Зарипов һ.б.). Хәҙер көстәр, ҡызғанысҡа ҡаршы, һирәгерәк.

23-дә «Нефтселәр» һарайында «Ҡыҙыл таң»ды 95 йыллығы менән Толкачев исеменән ҡотланым. 24-дә Науруз байрамына Асҡарҙы ла алып барҙыҡ.

24-дә театрҙар буйынса закон әҙерләүгә арналған парламент тыңлауҙары. Сәнғәт халҡы ҡәнәғәт булды.

Хәҙер «Смарт общество», йәғни «аҡыллы йәмғиәт» тураһында һүҙҙәр йыш ҡабатлана. Аҡыллы булыу һәйбәт, әммә кешеләр иң элек намыҫлы булырға тейеш. Намыҫ юғалһа, аҡыл яуыз көскә әйләнә. Бабичтың «Ғазазил»ында был турала күптән әйтелгән һәм бик дөрөҫ әйтелгән.

Нанотехнологиялар үҙәгенә әйләнергә тейешле Сколково тураһында күпме лаф орҙолар. Ә хәҙер ундағы млрд һумдарҙың АҠШ

университетына китеүе тураһында һөйләйҙәр. Күпме көс бушҡа түгелә. Без нравственности Сколково превратится в склоки, «смарт общество» – в смрадное скопление людей без чести и совести.

Знание без нравственности может превратиться в зло, служить не созиданию, а развращающему дьяволу, сатане.

14 апрель, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

Тағы ла 3 апрелдә Яҙыусылар союзында минең үҙенсә ижади иҫәп-хисап биргәнемде уйлап ултырам. Ҡыҙыҡ ҡына тап килеү: былтыр 2012 йылдың 2 апрелендә Нефтселәр һарайының халыҡ менән шығрым тулған Өфөләге иң ҙур залында минең биш томлыҡтың баҫылып бөтөүенең презентацияһы булғайны. Нәҡ бер йыл да бер көндән һуң яңы китап – «Көндәлектәр» һәм яңы шиғырҙар байрамы. Былар минең 75 йәшем алдынан уҡыусыларым һәм ҡәләмдәштәрем менән осрашып, үҙенсә ижади иҫәп-хисап биреүем.

Ярты быуаттан артыҡ ғүмерем Яҙыусылар союзы менән бергә үтһә лә, унда шиғырҙар уҡыуым бик үк йыш та булмаған икән. Әлбиттә, бик йыш мөмкин дә түгелдер. Тәүге уҡыуым – 1961 йылдың көҙөндә ул ваҡыттағы рәис Назар Нәжмиҙең кабинетында «Вокзал» поэмаһын уҡыуым. Әле бишенсе курста ғына булһам да, шуға йөрәгем еткән. Ғайса Хөсәйеновтың юғары баһа биргәне хәтерҙә. Аҙаҡ ғәжәп үткер күҙле Хәким Ғиләжевтың аҡыллы һәм талапсан кәңәштәре буйынса ҡат-ҡат эшләнем. Һуңғы вариантын ағайҙың өйөндә тыңланылар. Поэма 1962 йылдың апрелендә «Ағиҙел» журналында баҫылды, радио аша ишетелде, һәйбәт баһалар алды.

Икенсеһе – 1962 йылдың алтын көҙө, йәштәрҙең республика конференцияһы. Унда минең шиғырҙар тураһында ла фекер алышыу булды. Рәшит Назаровтың – 18 йәшлек егеттең шиғырҙары сенсацияға әйләнде. Уның ижады менән танышыу миңә оло ағайҙарҙың кәңәштәренән дә нығыраҡ тәьҫир итте.

Өсөнсөһө – 1988 йылдың февралендә Ә. Мирзаһитовтың кабинетында «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» тигән поэмамды бер сәғәт уҡыным. 40-лап кеше булды. Төплө фекер алышыу.

Дүртенсеһе – 1996 йылдың ғинуарында «Әҙәби кесаҙна»ла «Барокамера», «Башһыҙ һыбайлы» тигән кескәй поэмаларымды, яңы шиғырҙарымды уҡыным.

Бишенсеһе – 2009 йылдың ноябрендә «Хазина» поэмаһы менән сығыш яһаным. Халыҡ залға һыйманы.

Алтынсыһы – 2013 йылдың 3 апрелендә яңы шиғырҙар уҡыу, «Көндәлектәр» тураһында фекер алышыу.

Илле йылға яҡын ваҡыт өсөн бик йыш та түгел һымаҡ. Ләкин һис кенә лә аҙ түгел. Был шиғри сығыштар, ҡәләмдәштәрҙең һәм уҡыусыларҙың һүҙҙәрен ишетеү минең ижади яҙмышымда оло ваҡиғалар тип уйлайым.

Беҙҙә көндәлектәр традициялары, хат яҙышыуҙар рус һәм сит ил әҙәбиәттәре менән сағыштырғанда ҙтә лә аҙ, әлбиттә. Бабичтың егерменән артыҡ көндәлек дәфтәрҙәренең береһе генә һаҡланған. С. Агиш, М. Кәрим, Р. Ғарипов көндәлектәре. Әлегә донъя күргәндәре шулар. Башҡа әҙиптәр ҙә көндәлек алып барғанын беләм. Улар баҫылғас, әҙәби мөхитебеҙгә яңылыҡ өҫтәлер.

Документаль әҙәбиәт һәр ваҡыт ҡыҙыҡһынып уҡыла. Бигерәк тә беҙҙең заманда. Ҡайһы бер яҙыусыларҙың романдары йәки повестары ваҡыт үтеү менән әллә ни уҡылмаҫҡа ла мөмкин. Ә иҫтәлектәре, көндәлектәре әле лә бик ҡыҙыҡһынып уҡыла, уҡыласаҡ. Мәҫәлән, Герцендың «Былое и думы» тигән хәтирәләре уның прозаһына ҡарағанда бөгөн дә популярыраҡ. Йәки Горькийҙың атаҡлы «Мать» романын бөгөн кем ҡулға ала икән? Ә бына уның «Несвоевременные мысли» тигән мәҡәлә – сығыштары әле лә бик актуаль.

Йылдар буйы алып барылған көндәлектәргә нигеҙләнеп, иҫтәлектәр яҙылырға ла мөмкин. Ләкин мин көндәлектәрҙе ҡайһы ваҡытта нисек яҙылған – шул көйө уҡыусыларға еткереүҙе уңышлыраҡ күрәм. Улар үҙенсә документ, яҙылғанды үҙгәртеп булмай. Ә иҫтәлектәр яҙғанда ошо замандың үҙенсәлектәре, яңыса фекерләүҙәр, бөгөнгө сәйәси ҡаршылыҡтар йоғонто яһарға мөмкин. Мөмкин генә түгел, уларҙан ҡасырға тырышһаң да, тулыһынса ҡотолоп булмаясаҡ. Көндәлектәрҙе иһә яңынан яҙып булмай.

Көндәлектәр, хаттар... Был жанр элекке рәүешендә беҙҙең заман менән тамамланыр инде. Хәҙер ҙә блогерҙар һ.б. күп. Әммә былар бөтөнләй башҡа жанр. Классик хат яҙышыуҙар булмаясаҡ.

Для многих современных политических деятелей главное – игра, а не результат.

Асҡар бүләм, Асил бүләсәрем –
Олоғайғас беҙгә насип булған
Аллаһы тәғәләнең бүләге.

Айҙар балабыҙ тыуғанда беҙ үҙебеҙ ҙә бала инек әле. Шуға баланың ҡәҙерен аңлап та бөтмәгәнбеҙҙер. Етем ҡалған ейәндәребеҙ менән бәйләнештәрҙе өҙмәҫкә тырышһаҡ та, улар беҙҙән ситтә үҫтеләр. Ә бына Асҡар бүләбеҙ менән Әсил бүләсәребеҙҙең һәр көнө күҙ алдыбыҙҙа. Улар күңелгә бигерәк яҡын. Уларға ғына түгел, урамдағы яңы атлап килгән йәки арбаһында ятҡан һәр сабыйға хәҙер бығаса булмағанса һоҡланып үтәм. Хәҙер минең өсөн тормоштоң яңы матурлығы асыла бара.

22 апрель 2013 йыл. Дүшәмбе.

Ленин бабайҙың тыуған көнө лә ғәҙәти көнгә әйләнде. Хәҙерге йәштәр был турала бөтөнләй тиерлек белмәй. Күпме байрамдар ваҡытлыса: бөгөн бар, иртәгә – юҡ. Шул уҡ Октябрь байрамы. Уны донъяны дер һелкеткән, аҫтын өҫкә килтергән тарихи тетрәүҙәр тыуҙырған бит. Әммә шундай дәһшәтле ваҡиғаларҙың да дауылы тына, тормошҡа йоғонтоһо кәмей-кәмей юҡҡа сығып бара.

Мәңгелек байрам – яңы йыл. Уны төрлө халыҡ төрлө ваҡытта ҡаршылай, әммә мотлаҡ ҡаршылай. Әле кешелек йәшәй икән, уның йылдар хисабы ла туҡтамаясаҡ.

Кешенең булмышын, яҙмышын билдәләүсе ваҡиғалар – тыуым менән үлем. Уйлап ҡараһаң, кешенең барлыҡ тормош юлы тыуым һаны менән үлем һаны араһындағы һыҙыҡ хәтле генә бит.

19 апрелдә Сәнғәт академияһында Таңсулпан Бабичева ҡуйған «Көн һәм быуат» тигән спектаклен ҡараныҡ. Исемен Амантайҙың 100 йыллығына мин әҙерләп сығарған китаптан алғандар. Студенттарҙың уйнауы бик ныҡ тәьҫир итте, тетрәндерҙе тиһәм дә дөрөҫ булыр. Сығарылыш студенттары уйнай, минең «Хазина»ла ҡатнашҡан егеттәр ҙә бар. Амантайҙар, Һәҙиә апайҙар, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Мәкәрим Мәһәҙиевтәр... Дауыт Юлтыйҙы ла алғандар, тик уйнарлыҡ егет ҡалмаған. Сценарий һәйбәт.

Аҙаҡ фекер алышыуҙа тәүге һүҙҙе бирҙеләр. 1938 йылдың 10 июнендә 43 кешене атҡандар. «Тереләрҙең ҡәҙерен бел, үлгәндәрҙең ҡәберен бел!» – бик изге һүҙҙәр. Ләкин беҙ уларҙың ҡәберҙәрен дә белмәйбеҙ. Ҡайҙалыр Черниковка янында атҡандар, тип һөйләйҙәр.

Нисек кенә булһа ла һәйкәл кәрәк. Улар атылған көндө хәтер көнөнә әйләндерегә кәрәк.

21-дә аграр университеттың Йәштәр һарайында (элекке Юбилейный) минең «Хазина» поэмаһы буйынса шиғри спектакль һуңғы ҡабат ҡуйылды. Эйе, ҡабат труппаны туплауы икеле, сөнки егеттәр

быйыл академияны тамамлай, төрлөһө төрлө яҡҡа тараласаҡ. Элекке телеяҙма булырға тейеш, шуны интернетҡа ҡуйырға кәрәк.

Тамашанан һуң шағирҙар сығыш яһаны: А. Игебаев, И. Кинйәбулатов, Т. Искәндәриә, Хисмәт, С. Әбүзәр, Г. Ситдикова, Зөфәр Вәлит, Лариса Абдуллина.

Был эште уйлап дөрөҫ эшләгәндәр. Йәштәр төрлө уҡыу йорттарынан күп йыйылғайны. Шағирҙарҙың үҙҙәрен күрҙеләр, тыңланылар, һәйбәт булды.

Тамашалар ихлас үтте. Аҙаҡ бер эшҡыуар егет ҡытай ресторанына саҡырҙы. Йәштәр – Азамат, Мөнир матур һөйләшеп ултырҙыҡ. Фәриҙә лә булды.

Көндәр ҡапыл йылынды: егерме градустан артыҡ. Костюмда йөрөйбөҙ. Тик баҡсаға барырға ваҡыт етмәй.

Элек депутаттарҙы «слуга народа» ти торғайнылар. Ә һуғыштан һуңғы йылдарҙа (һуғыш ваҡытында бигерәк тә) совет халҡының күпселеге, бигерәк тә ауылдарҙа, колхоздарҙа кешеләр хеҙмәтсе, хоҡуҡһыҙ меҫкен, ҡол ине бит. Тимәк, депутат – «слуга у слуги» булып сыға инде. Хужаның ҡоло түгел, ҡолдоң ҡоло, хеҙмәтсенең хеҙмәтсеһе. Ә ҡол илдең ниндәй мәсьәләһен хәл итә алһын?

23 апрель, 2013 йыл. Шишәмбе.

Алтын, байлыҡ бөгөн – пәйғәмбәр,
Шуға тәүфиҡ хәҙер бөйөк сифат.
Тик барыбер байлыҡ бер айлыҡ ул,
Ә тәүфиҡте һаҡлап була һәр саҡ.

Шуға иғтибар иттем: беҙ намыҫ, выждан һүҙҙәрен йыш ҡына әйтәбеҙ, ә тәүфиҡ тигән бик матур һүҙ ниңәлер һирәк ишетелә. Ә халыҡ күберәк «бигерәк тәүфиҡле» йәки «ай-һай тәүфиҡһеҙ» тип, берәй кешегә ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен шулай асыҡ белдерә бит «намыҫһыҙ» тигәнгә ҡарағанда «тәүфиҡһеҙ» тип әйтеү күберәк.

Бабич әйткән:

Мәғлүмәт тәүфиҡ менән берләшмәгәс,

Выжданы аҡылы менән серләшмәгәс –

Иблистең мәләктәр имамынан иманһыҙ Ғазазилға әйләнеп, ожмахтан һөрөлөүенең төп сәбәбен шағир бына нимәлә күргән. Ә бөгөн ошо Иблискә табынып, намыҫһыҙ ендәргә әүерелеүселәр артҡан-арта.

Ағиҙел таша. Ярында теләктәр теләнем, ҡайғы-хәсрәттәрҙе, ауырыу-сырхауҙарыбыҙҙы үҙең менән алып кит, ташҡыныңда аҡҡан сүп һымаҡ аҡһындар, тинем. Диңгеҙҙәргә илтеп тарат, тик улар башҡаларға ҡағыла күрмәһен. Минең ҡайғым менән китеп, башҡаларға йоғола күрмәһен. Миңә ундай бәхет кәрәкмәй.

Берәү ғүмере буйы бейеклеккә ынтыла. Күпме көс түгеп, күпме тырышып, шул юғарылыҡҡа артылғас, аптырабыраҡ ҡала:

– Бейеклектә лә әллә нимә юҡ икән дә баһа!

26 апрель, 2013 йыл. Йома.

Командировкала йөрөп ҡайттым. Белоретҡа тиклем юлдар еме-рек. Бер мәрәкә иҫкә төшә. Рәсәйҙең ниндәйҙер өлкәһенә килгән немецтәр әйтәләр, имеш:

– Һеҙ һуғыштан һуң юлдарығыҙҙы ремонтламанығызмы әллә?

Юлдың ҡайһы бер урындары ысынлап та тупҡа тотҡан шикелле. Ә Белоретта – ҡала урамдарында! – йөрөрлөк түгел, шул уҡ ҡыйралыш.

Республикала туризмды үҫтереү идеялары йыш ҡабатлана. Бын-дай юлдарҙан үтергә ниндәй туристарҙы саҡыраһың? Бер үтһәләр, мәңгегә биҙәсәктәр.

Ҡапыл йәй булғайны, һыуытты. Асҡарҙа, Белоретта ямғыр һибәләй.

Ямғырға төрлөсә мөнәсәбәт. Әбйәлилдәр – игенселәр: «Ямғыр килтерҙегеҙ», – тип рәхмәт әйтә. Белореттарға ул ҡаланың саңын, бысрағын йыуыу өсөн кәрәк икән.

Әбйәлил районы башланғас, йырлап бараһың: юлдар матур, төҙөк. Ошо юлдарҙы төҙөткән Рәхимовҡа рәхмәт, шуларҙы ҡарап, һаҡлап торған райондың юл эштәре етәксеһе Рәжәпов Мирхәт Зиннәт улына рәхмәт.

Йылғалар ташып ята. Һыйырҙар рәхәтләнеп асыҡ ерҙәрҙә йөрөй. Ҡар тауҙарҙа, ҡайһы бер урман араларында ғына ҡалған.

Яҡтыкүл санаторийында ҡундыҡ. Күл боҙҙан асылмаған әле.

Асҡарҙағы китап магазинын киңәйтергә мин дә ярҙам иткәйнем. Уға ингән һайын ҡыуанып сығам. Бындай китап һатыр урын хәҙер бик-бик һирәк райондарҙа бар.

В.И. Матвиенко Өфөлә булды. 23-дә Ҡоролтайҙың ҙур залында осрашыу. Сығышында башта уҡ беҙҙең комитет әҙерләгән театрҙар тураһындағы закон проектын маҡтап телгә алды. Киләһе йыл

мәҙәниәт йылы тип үтәсәк икән. Исмаһам, был хәйерсе тармаҡҡа аҙ булһа ла иғтибар артыр.

Сеңләй, сыңлай. Тәүгеһе – илай, икенсеһе – йырлай.

Асҡарҙа ла, Белоретта ла граждандарҙы ҡабул итеү. Икеһендә лә 6 кеше яҙылғайны, икеһендә лә ундан артып китте. Яҙылмағандар ҙа килеп өҫтәлә.

Шуға иғтибар иттем: Әбйәлилдә күберәк көнкүреш мәсьәләләре менән киләләр, Белоретта күбеһе эшкә, уҡытыуға һ.б. бәйле һорауҙар.

Был ҡабул итеүҙәрҙән һуң йөрәк оҙаҡ һыҙлап йөрөй ине. Әбйәлилдә күпме ҡатындар үҙҙәренең, балаларының хәлдәрен илап һөйләй.

Алтмыш тирәһендәге бер ҡатын күҙ йәшен тыя алмай. Ҡыҙы беренсе группа инвалид, диабет яфалай икән, инсулин менән генә йәшәй. Әсәһе пенсиям шул дарыуҙарға китә, ти. Ҡыҙының кейәүе лә беренсе группа инвалид, эпилептик. Бер балалары булған да үлгән. Әле икенсеһе булырға тора. Йәшәр ерҙәре юҡ, аҡса юҡ. Шундай яҙмыштарҙы уйлаһаң, тормошҡа зарланыуыбыҙ оят.

Граждандарҙы ҡабул итеүҙәрем –
Тамуҡ ғазаптарын үтеүҙәрем.

Күҙ йәштәрен түгеп, миңә ҡарай
Гонаһһыҙ йән, изге бисаралар.
Еңеләйтергә ауыр хәлкәйҙәрен
Ни сара бар, раббым, ни сара бар?

Күҙ йәштәре, ҡайғы, зар-аһтары...
Юҡ бит тамсы ғәйеп-гонаһтары.
Ғәйеһеҙгә тамуҡ ғазаптары.

Әйләндерә яҙмыш йәмде ғәмгә,
Йәннәт кенә ерҙе йәһәннәмгә.

Бәхеттәрҙе ялмауыҙҙар ялмай,
Иң ҡыйыны – ярҙам итә алмау.

Һеҙҙең ҡайғы өтә йөҙҙәремде,
Күҙ йәшегеҙ тула күҙҙәремә.

Ошолар хаҡында шиғырмы, берәй бәләкәй генә поэмамы яҙылыр һымаҡ. «Граждандарҙы ҡабул итеү» тигәнерәк пьеса яҙғанда ла бик шәп булыр ине лә бит, уныһы минең ҡулдан килмәй.

6 май, 2013 йыл. Дүшәмбе.

Биш көн байрам булды. Баҡсала алты кис ҡундыҡ. 2-дә Артурҙар, Виктор бажаның Мәскәүҙән ике ейәнсәре килде, ҡыҙҙары менән Фәриҙә балдыҙ булдылар. 12 кеше йыйылып киттек. Артур шашлыҡ ҡурҙы. Күңелле ултырҙыҡ. Көндәр ҙә һәйбәт торҙо.

Бәләкәй генә поэмамды бәлки яҙып та бөтөрмөн тигәйнем. Байрам үҙенекен итә. Шулай ҙа төп өлөшө яҙылды һымаҡ.

«Депутат яҙмалары» һымаҡ бер нәмә депутатлыҡ осоронда тупланып килә ине. Ҙур түгел, бер табаҡ самаһы булыр. «Граждандарҙы ҡабул итеү көнө» тигән шиғырҙы башҡорт һәм рус телдәрендә, шулай уҡ депутат яҙмаларын ҡушып, бер ыҡсым ғына китап итеп әҙерләргә, һуңғы сессияла депутаттарға таратырға тигән уй бар. Минең үҙемсә отчетым һымаҡ. Шағир йәки яҙыусы депутаттар илдә күп булды, әммә бындай баҫманың донъя күргәне юҡ әле, минең белеүемсә.

Кисә алтынан етегә тиклем «Ашҡаҙар»ҙа бик матур тапшырыу: дин тураһында һүҙ, мөнәжәттәр («Манара» тигәне бик оҡшаны), элекке композиторҙарҙың моңло йырҙары – рәхәтләнеп ял иттем.

Хәҙер идеология юҡ тип зарланалар. Дөрөҫ, эҙмә-эҙлекле идеология юҡ, әммә шуға ынтылыш бар. Шул уҡ дини традицияларға ҡайтыу, шул уҡ рухи тамырҙарҙы барлау, тарихи шәхестәргә иғтибарҙың артыуы. Бер көн «Тарихи мөхит» («Историческая среда») программаһының тапшырыуҙарын кинәнеп ҡараным, үҙем өсөн яңы нәмәләр астым. Шәжәрә байрамдары, «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» тигән йыйындар ҙа бик халыҡсан идеология бит.

10 май, 2013 йыл. Йома.

Кисә Еңеү байрамында Мәскәүҙәге хәрби парадты ҡараным. Бик ныҡ әҙерләнгәндәр. Был тиклем теүәллекте тыуҙырыр өсөн күп көс һалынған, әлбиттә. Дәртле ритмда атлап үткән тип-тигеҙ сафтарҙы, матур, йәш, таҙа егеттәрҙе ҡарайым да дәһшәтле һуғыш ошо гармонияны ҡот осҡос мәхшәргә әйләндерә ала бит тип хафаланып уйлайым.

Ҡыҙыл майҙанда ер һелкетеп үткән сафтар ҙа, заманса хәрби техника ла, һауа ярып осҡан күпме самолеттар ҙа – былар барыһы ныҡ тәьҫир итә. Ләкин ысынбарлыҡта хәлдәр нисегерәк һуң? Тотош армияның көс-ҡеүәте, ундағы тәртиптең торошо ошо байрамса күренештәргә бәрәбәрме? Илдәге иң яуаплы урын – армия ҡараҡтар

ояһына әйләнгәндә, шул бурҙарҙың атамандары һаман да иректә йөрөгәндә, тейешле ҡаты яза-хөкөмгә дусар ителәсәктәре бик шикле булғанда, йөрәктә һуғыш йылдарынан килгән һағыштан да нығыраҡ бөгөнгө хәлдәр өсөн һыҙланыу арта. Ни тиклем ғәрлек, ни тиклем мәсхәрә! Күпме ҡорбандарҙың, еңеү килтергән яугирҙәрҙең намыҫына төкөрөү бит был! Парад, һис шикһеҙ, кәрәк. Бигерәк тә яңы быуындар тарихи дөрөҫлөктө белһен. Ләкин бөгөн байтаҡ байрамдарыбыҙ – «пир во время чумы».

Поэманы тамамланым һымаҡ. Апрель аҙағында, май башында бер нисә көндә яҙылды. Кисә ныҡ ултырҙым.

7 майҙа Конгресс-холда тантаналы кисә булды. Башҡортостандың Еңеү килтереүгә ни тиклем ҙур өлөш индереүе тураһында Президент ентекле генә һөйләне. Һуғыш йылдарында һәр өсөнсө танктың, һәр өсөнсө самолеттың Башҡортостан бензинына, кәрәсиненә эшләүе, Башҡортостан атлы дивизияһының Советтар Союзы Геройҙары буйынса – 76 яугир – совет армияһында тиңдәше булмауы хаҡындағы киң билдәле хәлдәрҙе лә әйтеп үтте. Әммә һуғыш осорондағы әҙәбиәт, мәҙәниәт тураһында бер генә һүҙ ҙә булманы.

Көйләнерме донъя?
Туғыҙынсы май ғына Еңеү көнө.
Калғандары еңелеү көндәренә
Әйләнмәҫме?

Хәҡиҡәтте байраҡ ит, Парламент!
Граждандарҙың яҙмыштарын барлап үт!
Йөрәктәрҙә күпме әрнеү, яра бит.
Былай булһа, ил тарҡалып бара бит.

Эш хәйерһеҙ, халыҡ ҡала ерһеҙ.

Үсле үлсәп тормаҫ, үсленең үлсәүе башҡа.

Йүнселдәрҙе быуа һалым,
Ебәреп булмай ҡыуа һалып.

Ғәрлеге, ерлеге, ирлеге.
Төн сыҡтым – тонсоҡтом.

Күберәк эсһәң хәмер,
Арта бит талаш-йәбер,
Ҡалмай бит хөрмәт-кәзер,
Тиҙерәк тарта ҡәбер.

18 май, 2013 йыл. Шәмбе.

Үткән аҙна матур башланды: дүшәмбе сәғәт 11-ҙә Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовта булдым. Төрлө ойошмаларға, кешеләргә бик күп ярҙам итәләр икән. Ағайға оҙон ғүмер насип итһен. Унан һуң был Фонд менән нимә булыр? Нимә генә тиһәң дә, Беренсе президентҡа киләһе йыл 80 йәш тула бит.

Рәхимов матур альбом бүләк итте. Йөкмәткеһе бай: президенттың сығыштары, мәҡәләләре, интервьюлары һ.б. хронология тәртибендә. 20 йыллыҡ оло тарих үҙенсәлекле сағылған. Бик иҫтәлекле фотолар. Бер нисәһендә мин дә бар. Альбом Мортаза ағайҙың Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайындағы телмәренең ҡыҫҡартылған варианты менән тамамлана. Бушлай тараталар, тик Ҡоролтай депутаттарының һәр береһенә еткерергә мөмкинлек юҡ икән, юл бирмәйҙәр.

Бындай күләмдәге альбомды күргәнем юҡ ине. 13 майҙа, беҙҙең Фәриҙә менән яҙылышҡан көндә, ағай үҙе лә белмәҫтән бик матур бүләк эшләне. Алла бирһә, буш ваҡытым артҡас, был альбомдағы материалдар менән ентекләп танышырмын әле.

Һәр ваҡыттағыса, Рәхимовтың теле әсе. Өфө йүкәләрен ҡырҡалар, ҡайын ултырталар. Миндек һатырға уйлай микән, ти.

14-дә Ғүмәровала булдым. Депутат эштәре буйынса ике үтенес хаты менән таныштырҙым. Минең алдағы кисәләр тураһында ла һүҙ булды.

15-дә Яҙыусылар союзында идара ултырышы. Юҡтан ҡоҙағый яһарға тырышыуҙар, һәр осрашыуҙы ғәләмәт эш итеп күрһәтергә маташыу.

М. Буранғолов, М. Гәрәев исемендәге конкурс-премиялар. Кәрәк эштәр, әммә әлеге хәлдә – «пир во время чумы». Ярты йыл да үтмәгән, Союздың 300 мең аҡсаһы ҡалған. Халыҡты түләүһеҙ отпускаға таратмаҡсылар.

Региональ ойошмалар самоликвидация эшләргә тейеш икән. Уларҙы бөтөрөү була инде. Тарҡалыш был темп менән барһа, союздың үҙенең самоликвидацияһына ла оҙаҡ ҡалмаҫтыр, моғайын.

Бер көләмәс иҫкә төштө. Һуғыш башланған тәүге осорҙа немецтәрҙең бик тиҙ беҙҙең әллә күпме ерҙәрҙе баҫып алғанында

берәү өйөнә хат яҙа икән: «Бик тиҙ сигенәбеҙ. Ошолай шәп сигенһәк, берәй айҙан өйҙә булыуыбыҙ ҙа мөмкин».

Союздағы әлеге хәлдәр һымаҡ инде.

Айгиз Баймөхәмәтовты бер тауыштан Бабич премияһына күрһәттек.

Уҡып ҡына ҡалма, әйтеп ҡал, яҙып ҡал!

Июль, августағы ял ваҡыттарына бер ай ҡалып бара. Биш йыл ярымға һуҙылған «хәрби режим»дың осона сығып киләм. Тулыһынса азат йәшәүҙе, үҙ ваҡытыма үҙем хужа булыр саҡты бик ныҡ көтәм һәм ул ирекле режимда нисек йәшәремде асыҡ ҡына күҙ алдына ла килтереп еткерә алмайым.

Аҫылынып торған ҡылыс алыҫлаша барған һымаҡ. Шуныһы ҡыуандыра.

Яңы яҙылған шиғырҙарымды элек-электән айырым ҡалын дәфтәргә теркәп барырға ғәҙәтләнгәнмен. Улар хәҙер байтаҡ тупланған. Әле тағы ла бер дәфтәр тулды: 2004–2012 йылдар. Хәҙер яңыһын башлаясаҡмын. Быныһы ла яңы шиғырҙар менән тулырмы икән тигән уй башыма килде. Элек ундай уйланыу-шикләнеү бер ҙә булмай торғайны. Йомғаҡлар саҡтарҙың етеп килеүеме бындай уйҙарҙың тыуыуы? Хәҙер берәй кейем йәки әйбер алғанда ла шундай кисерештәр була.

Һоҡланыу һәм һаҡланыу. Элек шиғриәт тураһында яҙғанда мин был хаҡта әйткәйнем. Р. Сафиндың «Һоҡланыу» тигән китабы бар. Һоҡланып йәшәй алыу – үҙе бәхет. Ләкин һоҡланып ҡына булмай. Р. Ғарипов «Һоҡланам мин, ләкин һаҡланам», тигәйне. Хәҙер һаҡланыу, уяулыҡ, һиҙгерлек мөһимерәк. Беҙ яңы Башҡортостан тормошонда 1990–2010 йылдарҙа күп һоҡландыҡ. Рәхимов дәүерендә һоҡланырлыҡ ҡаҙаныштар күп булды: суверенитет, бөйөк төҙөлөштәр, тарихта тыйылған темаларға һәм шәхестәргә юлдарҙың асылыуы, башҡорт теленең дәүләт теле тип иғлан ителеүе, милли һәм рухи күтәренкелек, иң мөһиме, Башҡортостан республикаһы дәүләтселегенең яңы кимәле. Ләкин һоҡланыу эйфорияһында һаҡланыу онотолоп китте. Милләттең хәлле ҡатламын үҫтереү, республикалағы дәүләт мөлкәтен, бигерәк тә нефтте, урманды ситтәрҙән һаҡлау, етәкселектә күсәгилеште булдырыр өсөн көслө кадрҙарҙы әҙерләү – бына ошондай хәл иткес хәлдәргә иғтибарҙың етмәүе ауырлыҡтарҙы арттырҙы. Һаҡланыу етмәү арҡаһында һоҡланыр мәлдәр һирәгәйгәндән-һирәгәйә бара.

Инәйем тураһында әҫәр яҙа алмауым (проза, әлбиттә), өлгөрмәй ҡалыуым бик үкенесле. Йылдан-йыл нығыраҡ үкендерә.

9 майҙа кәкүк саҡырғанын (баҡсала), 12-дә өй янындағы скверҙа һандуғас һайрағанын ишеттем.

БДУ-ла ректор һайлау үтте. Мостафин һәйбәт эшләп алып китер тип өмөтләнгәйнем. Ниңәлер бик тиҙ алдылар, сәбәбен асыҡ ҡына итеп әйтмәйҙәр. Имеш-мимеш.

Бер көндө Азамат Юлдашбаев, Мөнир Ҡунафин беҙҙең эштәге ашханалағы төшлөктән һуң Туҡай урамы буйлап оҙаҡ ҡына йөрөнөк. Йәйәүлеләр урамына төрлө вариантлар һайлайҙар. Ошо Туҡай урамынан да уңайлырағы бармы икән? Шул хаҡта һөйләштек.

Кисә Салауат һәйкәле янында «Минең Рәми» тигән шиғри марафон үтте. Мин башта сығыш яһаным. Бик һәйбәт эш башлағандар «Замандаш», «Шоңҡар», «Киске Өфө» редакциялары, Башҡорт радиоһы, Киров районы администрацияһы. Өфөлә генә түгел, республиканың байтаҡ ҡалаларында һәм райондарында, хатта Мәскәүҙә, Петербургта бер үк ваҡытта Рәми Ғарипов шиғырҙарын яттан уҡыйҙар. Әлегә тәүге тапҡыр. Киләсәктә ныҡлы традицияға әйләнһен ине халҡыбыҙҙың рухи тормошондағы был өр-яңы ваҡиға.

Бернард Шоу әйткән: «Урлаған бур түгел, тотолған бур».

Урлағандар ҡараҡ түгел,
Тотолғандары ҡараҡ.
Әммә хөкөм сығаралар
Аҡсаларына ҡарап.

Шыҡырлатып ултырталар:
Урлаған, имеш, һарыҡ.
Миллиардты урлаһа ла,
Иректә – олигарх.

19 май, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

Тыуым да – мәл.
Үлем дә – мәл.
Тик тапмаҫ шул кеше әмәл:
Иҫләмәҫ ул тыуған мәлен,

Алдан белмәҫ китер мәлен.
Араһында шул икенең
Үтә ғүмер.
Нишләтһә лә,
Был йәшәүҙәр иҫ китмәле.
Етмәҫ тимә бәхетең мәле.
Өтәләнмә. Сеү, көт әле.
Көтөп торма, дәрт ит әле.
Иң шәп мәлең – әлеге мәлең.

Күп кенә китаптарҙы пенсияға сыҡҡас тынысыраҡ ваҡыттарҙа уҡырмын тип алып ҡуяһың. Олоғайғас яңынан ҡарармын тип «Ағиҙел» журналын 1964 йылдан алып туплап килдем. Киләһе йыл ярты быуат була!

Пенсиянан һуң 15 йыл эшләп йөрөйөм. Ул китаптарға, ул журналдарға тотоноу түгел, әле сыҡҡандарын ҡарарға ла ваҡытты еткереп булмай.

«Ағиҙел»дең тупланмаһын берәй уҡыу йортона, бәлки Сибай институтына бирергә кәрәк. Йүнләп уҡылмаған китаптар менән көҙгә сентябрҙә депутатлыҡ эштәренән бушағас иркенләп ултырырмын тигән өмөт бар әле. Иң элек, әлбиттә, архивымды, китапхананы тәртипкә килтерергә кәрәк. Артыҡ ҡағыҙҙар, китаптар, төрлө журналдар бик күп йыйылған, артыҡ йөк булып, юлды ла, ҡулды ла быуып торған һымаҡ.

25 май, 2013 йыл. Шәмбе.

21–23 майҙа оло сәйәхәт: Медногорский ҡалаһына юлландыҡ, Фәриҙә менән. Юл буйынса ямғыр, Өфөнән Ырымбур өлкәһенең сигенә тиклем. Күпме юл йөрөлдө, әммә ошолай туҡтамай яуғанын, ҡайһы саҡта көслө ҡойғанын күргән юҡ ине. Мораптaлдан Түлгәнгә боролдоҡ, унда ла беҙ барыр алдынан яуа башлаған.

Нәҡҡәр апайым бер үҙе һәйбәт кенә донъя көтә. Өйө иркен, йыйнаҡ. Әл дә заманында апайыма ошо квартираны беҙ барлыҡ аҡсаны йыйып һатып алғанбыҙ. Бер сәғәт самаһы ғына булырға тура килде. Бынан Иҫәнғолға алыҫ түгел икән. Госсобрание (Президиум) ултырышынан һуң сәғәт дүрттә сыҡҡайныҡ, кис унынсы яртыла Иҫәнғолда Рәшит Изрисов ағайҙарҙа булдыҡ.

Рәшит ағайҙар бында икенсе йыл йәшәйҙәр. Ҡарабәрҙенән атаһының йортон күсереп һалып бик һәйбәт эшләгән. Киңәйткәндер, әлбиттә. Залдары, бүлмәләре ҙур. Мунсаһы йүкәнән, ап-аҡ.

Рәшит ағай әйтә, ғүмеремде ошо атай йортонда йомғаҡлайым, ти. Петровскийҙа оҙаҡ йылдар мәктәп директоры булды. Ялда булһа ла, ил яҙмышын ҡайғыртып йәшәй. Бындағы ҡоролтай етәксеһе. Яңыраҡ «Башҡортостан»да бик үткер мәҡәләһе сыҡты: ил, тел, милләт яҙмышы тураһында борсолоу, уяулыҡҡа, зирәклеккә саҡырыу.

Иртәгәһенә Медногорскийға ҡуҙғалдыҡ. Рәшит Изрисов та беҙҙең менән. Абзан, Ҡыуандыҡ аша барҙыҡ. Медногорскийҙа «Юбилейный» мәҙәниәт йортонда минең ижад буйынса осрашыу әҙерләгәндәр, шуға саҡырғайнылар. Ситтә лә шулай тырышалар икән, баш тартыу уңайһыҙ булды. Дөрөҫ эшләгәнмен. Бик ихлас осрашыу үтте. Төп ойоштороусыһы ошо дворецта эшләүсе Дилбәр тигән йәш ҡатын. Стәрленең мәҙәни-ағартыу техникумын бөтөргән, ошонда кейәүгә сыҡҡан.

Ҡурай моңо ла ишетелде, минең шиғырҙарҙы уҡынылар, йырланылар, бейенеләр.

Медногорскийҙы баҡыр-көкөрт комбинаты тотоп тора икән. Элекке ҡеүәте юҡ, әлбиттә. Бөтә Рәсәйҙәгесә инде. Элек 10 меңләп кеше эшләһә, хәҙер 2 мең самаһы тинеләр. Был ҡалаға яҡындағы биш башҡорт ауылы ла инә икән. Өсөнсөһөндә мәктәп юҡ, береһендә туғыҙ йыллыҡ, икенсеһендә ун бер йыллыҡ мәктәп һаҡланған. Ләкин уларҙа башҡорт теле бөтөнләй уҡытылмай. Хатта факультатив индерергә булғас, ата-әсәләр кәрәкмәй, тип, үҙҙәре баш тартҡандар. Шунан һуң беҙҙең милләттәштәребеҙҙең милли үҙаңын күҙ алдына килтер инде! Ундайҙар һирәк кенә осраһа бер хәл дә бит, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, арта баралар шул ундай маңҡорт башҡорттар.

Шулай ҙа тырышлыҡ бушҡа китмәй. Башҡортса уҡымаһалар ҙа, рус акценты менән булһа ла, шиғыр һөйләйҙәр. Элек башҡорт русса һөйләгәндә акцент була торғайны, хәҙер башҡорт башҡортса акцент менән һөйләй. Бына ниндәй аяныслы хәлдәргә акцент яһарға кәрәк.

Бик күп китаптарымды бүләк иттем. Бында өлкәнән китапханасылар семинары уҙғарылған. Шуға килгәндәр ҙә осрашыуҙа булды. Әйҙә беҙҙең китаптарҙы ла күрһәндәр. Русса китаптарымды ла бирҙем. Өфөлә, Мәскәүҙә беҙ әҙерләп сығарған русса башҡорт шиғриәте антологияларын бүләк иттем.

Мәҙәниәт һарайы янында тирмә ҡорғандар, етәкселәр бүләк иткән. Барғас ҡымыҙ, сәксәк, йыр менән ҡаршы алдылар. Тирмәлә оҫта ҡулдар бәйләгән шәл һ.б. күргәҙмәһе. Осрашыу бөтөүгә тирмәлә

табын әҙерләгәйнеләр, башҡорттар ҙа, рустар ҙа тирмә тултырып ултырҙыҡ.

Ямғырлы ла, ҡояшлы ла сәфәр. Медногорскийҙа көн ҡояшлы булды. Ҡайтышлай Рәшит ағай ай-вайына ҡарамай өйөнә алып инде. Мораҡта район хакимиәте башлығы Фәрит Мусин көтөп торған. Мораҙым ҡаялары янындағы турбазаға алып китте. Шунда ҡундыҡ. Иҫәнғолда ла, бында ла мунсала сабынып сыҡтым.

Мораҙыма ҡалғанда бер аҙым,
Арыһам, көс бирер Мораҙым.

Мораҙыма ҡалды тик бер аҙым.
Арыным.
Көс бирсе, Мораҙым!

Мораҙым ҡаялары,
Ҡаяла үҫкән ҡайын.

Диуар һымаҡ текә ҡаяның ярығында үҫкән ҡайын. Кеше ҡулы уға теймәйәсәк. Уны иркәләгем килһә лә, мөмкин булмаясаҡ. Алыҫтан ғына һоҡланаһың. Ҡаяла үҫкән ҡайын һымаҡ һылыуҙар.

Күңелемдә һаҡланған әллә күпме матур ерҙәр тураһында «Башҡортостан балҡыштары» тигәнерәк шәлкем яҙғы килә. Башлап-башлап ҡуйғандары ла бар.

Көнгәк, көнгәк, айлап түгел, көнләп. Тиңләп, күрмәк, килмәк.

Нисә йыл элек Асҡында ҡайһы бер тәьҫораттарҙы теркәп ҡуйған ҡағыҙ киҫәге килеп сыҡты.

Яҙ башы ине. Яҙ һүҙе: Ҡубияҙ, Урмияҙ.

Һөйәнтүҙ. Ҡуҙ булған күҙ.
Яна ҡыҙ. Йәнем, түҙ.

Тәфтиләү – йәнде телә – тетелә.

Тәфтиләүҙең яуызлыҡтары тураһында халыҡтан да тапҡырыраҡ, ҡәһәрлерәк итеп әйтеп буламы икән?

«Башҡорт еркәйҙәрен утҡа тотҡас,
Алтынланды уның яурыны».

«Ташҡайҙарға соҡоп, яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта».

Күңелең ихлас, йөҙөң асыҡ, Асҡын,
Донъяларың тыныс, күк аяҙ.
Ҡайҙа барма, һинән яҙ бөркөлә –
Урмияҙ ҙа бында Ҡубияҙ.

Асҡын – боронғо башҡорт төйәге. Һуңғы дәүерҙә – яңырыу осоронда тарихи хәтере иң ныҡ яңырған төбәктәрҙән.

Булмаған башҡортто аяу:
Яу ҙа яу шул, яу ҙа яу.

Яр аҫтынан яу ҡупҡандай;
Үҙеңдеке үҙеңә яу.. Яу бүләк,
Яугилде, Яубаҫар, Йәмәлкә
Яуы, яугир, яулап алыу,
Яу урыны...

Медногорскийҙың мәсетенә инеп сыҡтыҡ. Ирҙәр яғы иркен. Ҡатындар яғы шаршау менән бүленгән. Имам-хатип Хәсәнгә «101 хәҙис»тең икенсе китабын байтаҡ биргәйнем, осрашыуҙа уҡ халыҡҡа таратып бөтөргән. Бында ла мәсет бар, башҡорт мәктәбе юҡ.

Башҡорт илен туфан баҫып бара. Уның байтаҡ өлөшө былай ҙа утрау-утрау булып ҡалған. Хәҙер уларҙы ла туфан йотмаҡсы. Бабичтың «Утрау» шиғырын яңынан уҡып сыҡтым, тулыраҡ аңлаған һымаҡ булдым. Уны уҡығанда, бер һорау тыуҙы. Шиғыр 1917 йылдың июнендә «Ирек» газетаһында баҫылған. Ошо юлдарға нығыраҡ иғтибар иттем:

Йорт вә һипләнгән вә ипләнгән,
яңырған һәр яғы,
Һелкенә хуш ел менән
зәңгәр, йәшел, аҡ байрағы.

Был бит Башҡорт хөкүмәтенең, башҡорт ғәскәренең өс төҫтәге байрағы! Тимәк, был идея 1917 йылдың яҙында уҡ булған. Быны махсус тикшерәһе бар.

Туҡһанынсы йылдарҙа Башҡортостан республикаһының яңыса дәүләтселеге был байраҡты яңынан терелтте.

Тыуған яҡтарға ҡайтыуҙың хәҙер шатлыҡтарынан борсоулы яҡтары күберәк. Шул уҡ мәктәптәр, туған телдән ситләшеүсе яңы быуындар, көндән-көн көсәйә барған ассимиляция...

Был юлы ла йөрәкте һыҙландырыр мәлдәр күп булды. 1997 йылдың яҙында яҙылған шиғри юлдарым хәтергә килде:

Күрерме ил ысын азатлыҡты,
Азаматтар ғафил булғанда.
Онотмаһын Өфө:
Донъяла бар
Арғаяштар, Ғәйнә, Сорандар.

Онотмайыҡ, күпме үкенестәр
Килде ғәмһеҙлектәр һуңынан.
Ауыр хәлдәрендә
Кешенең дә
Аяҡ-ҡулы башта һыуына.

Бер-ике быуындан һуң Башҡортостандан ситтәге башҡорт ауылдарында башҡортса һөйләшеүсе башҡорттар ҡалмаҫмы икән ни?

Республиканан ситтә генәме ни бындай хәлдәр? Был тарихи трагедия Башҡортостандың үҙенә лә ябырылып килә бит.

Рәшит Иҙрисовҡа биш томлығымды, ике том «Көндәлектәр»емде, Фәрит Мусинға көндәлектәремде бүләк иттем. Рәшит ағай иманына, инаныуына тоғро һуңғы могикандарҙан. Фәрит Мусин уңған етәксе, һәйбәт ойоштороусы. Күгәрсен ерендә һәйбәт традициялар электән килә. Уларҙы дауам итеүе, үҫтереүе еңел түгел. Был яҡтан Фәрит булдыҡлы егет булып сыҡты. «Байыҡ» конкурсы ошонда үтә. Мораҙымдағы турбазала Фәрит сәхнәһен күрһәтте.

Беҙ булыр алдынан бында «Йәштәр һәм дин» тигән бик актуаль темаға республика семинары үткән. Президент, мөфтөйҙәр ҡатнашҡан.

Һәр быуын үҙен алданған быуын ти.
Бармы ерҙә алданмаған быуын?

Утҡа төшмә, бешмә, һыуын!
Эс йотлоғоп шишмә һыуын.

Беҙҙең өйләнешкәнгә 52 йыл!

Илле ожмахтарҙа йөрөттөм дә,
Илле тамуҡтарҙа яндырҙым.

Рәсми осрашыуҙарҙа мотлаҡ галстук. Ул кисерештәрҙе нисектер тыйып, йүгәнләп торғандай. Галстукһыҙ, тимәк, иркенерәк, йүгәнһеҙ, теҙгенһеҙ һымағыраҡ. Һуңғы ваҡытта галстук кеймәҫкә тырышалар. Ябайлыҡҡа, тәбиғилеккә ынтылыумы?

7 июнь, 2012 йыл. Йома.

«Мәғариф тураһында Башҡортостан республикаһы Законы» проекты тирәһендә күпме шау-шыу, изге ынтылыштар һәм емерелгән хыялдар, селпәрәмә килгән өмөттәр... Мин дә телебеҙ өсөн нисәмә йылдар – ғүмерем буйына иң ныҡ янған кешеләрҙең береһе. Ләкин ҡануниәт сығарыу даирәһендә эшләп, шуны әйтәм: беҙгә иң кәрәкле ҡанундарҙы барлыҡҡа килтереү мөмкинлектәре сикләнгән генә түгел, юҡ тиерлек. Теләк-өмөттәр аҡланмағас, ҡануниәт эшендә ултырған һин ғәйепле буласаҡһың.

Күпме тырыштыҡ, эш төркөмө күпме эшләне, әммә был закон башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыу юлында бик күп мөмкинлектәрҙе юҡҡа сығарасаҡ. Иң изге ынтылыштарҙы мәғарифтың федераль стандарттары, мәғариф тураһындағы федераль закон бығаулап ҡуя.

Был ниндәй аяныс тап килеү?! Дәүләт йыйылышында эшләй башлағас, минең ундағы тәүге ҙур сығышым федераль мәғариф системаһынан милли – региональ компонентты юҡҡа сығарыусы 309 законға (1.12.2007 йыл) ҡаршы сығыу, Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтайҙың ошо законға ҡаршы протест белдереүе булды. Эшем бына шул мөһим саранан башланды.

Һәм бына Ҡоролтайҙағы эшемде йомғаҡлар ваҡытында тағы ла мәғариф мәсьәләләре – яңы закон проекты тикшерелә. Тәү ҡарашҡа ул бер ҙә ҡабул итмәҫлек түгел. Башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыу мөмкинлеге лә әйтелә. Ләкин ул мөмкинлектәр мәктәп компоненты буйынса тормошҡа ашырыла ала. Ул компонент инһә учредитель, мәғариф ойошмаһы етәксеһе һәм ата-әсәләр ҡулында. Улар

риза икән, сәғәттәрҙе мәктәп компонентынан башҡорт телен дәүләт теле итеп файҙаланып була, юҡ икән, башҡорт теленең дәүләт теле хоҡуғы ҡағыҙҙа ғына ҡала.

Был проект Дәүләт йыйылышының сайтына ҡуйылды. Төрлө исемдәр менән бер үк кешеләр яһый-яһый башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың ирекле булырға тейешлеген талап итә. Бындай сығыштар Ҡоролтай сайтында закон проекты тураһында йәмәғәт фекер алышыуы түгел, сайтты сүплеккә, битһеҙ әрләшеү майҙанына әйләндереү.

Кисә был проект тураһында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетында һәйләшеүгә йыйылдылар. Буранбай Күсәбаев доклад һөйләне. 20 пункттан торған тәҡдимдәр әҙерләгәндәр. Теләктәр изге лә бит, федераль закон ҡыҫалары быны сикләй.

Осрашыу сәғәт өстә башланғайны, мин сәғәт дүрттә Хөкүмәттең Президиумы ултырышына саҡырылғайным. Докладтан һуң 20 тәҡдимдәре тураһында ҡыҫҡа ғына һүҙ әйтеп, бер нисә һорауға яуап бирep, китергә тура килде. Аҙаҡ мине тәнҡитләүселәр ҙә булған. Улары әле алда ла буласаҡ. Ни хәл итәһең, ашаған белмәй, тураған белә. Туҡай әйтмешләй, «Мәскәүҙәр алһа яҡаң», әллә ни эшләп булмай шул. Ә Үҙәк көндән-көн яҡанан нығыраҡ ала, нығыраҡ быуа.

8 июнь, 2013 йыл. Шәмбе.

Көндәр һыуытып тора. Аҙыраҡ ямғырҙар ҙа яуып ала. Кисә баҡсаға килдек, помидор ултырттыҡ.

Дәүләт йыйылышында Силәбе өлкәһенең Законодательное Собрание делегацияһы менән осрашыу, Парламенттар араһындағы Килешеүгә ҡул ҡуйыу. Комитетта һөйләшеүҙә Журавлев Александр Леонидовичҡа (урынбаҫар) милли мәктәптәрҙең яҙмышы тураһында һорау бирҙем. Яуаптары бик шыма, дуҫлыҡ, милләт өсөн телдең әһәмиәте һ.б. Башҡорт телен уҡытыуҙы факультатив кимәленә ҡалдырғандар. Әле яңыраҡ Медногорский яҡтарында ла шул хаҡта ишетеү күңелгә бик ауыр булғайны.

Ҡунаҡтар менән төшкө ашҡа ҡалып булманы, Фәндәр Академияһының 2012 йылдың йомғаҡтары буйынса дөйөм йыйылышына ашыҡтым.

Берәүҙәр милли матбуғатыбыҙҙы халыҡҡа таратырға тырыша, икенселәр уны нисек тә тарҡатырға маташа. Маташа тик кенә әйтеү аҙ, әлбиттә.

Пропагандируется общество потребителей. Потребителей становится больше во всех сферах, включая и семью. Главная причина демографического спада в том, что муж и жена, их взаимоотношения – потребительские. Раньше главным было воспроизводство, теперь – потребительское: удовлетворение половых потребностей.

Баҡсалағы йортта ишектәрҙе алмаштырабыҙ. Яҙмыш ишектәре. Теләгән ваҡытыңда асып – ябып, яңыға алмаштырып булмай шул.

9 июнь, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

Заводтарҙа машиналар эшләй торған, шахтала күмер сығара торған, ер һөрә, урман йыға торған таҙа ир-егеттәр хәҙер банктарҙа, төрлө шәхси офистарҙа һ.б. ерҙә ҡарауылсы-охранник эшендә йәки алыш-биреш, сауҙа юлында, ярты ил һаҡсы-охранник, ә илде һаҡларлыҡ, халыҡты яҡларлыҡ ир-азаматтар юҡ, булһа ла бик аҙ.

Совет заманында балалар һатыу тигән вәхшилек бөтөнләй юҡ ине. Ә хәҙер сит илгә сабыйҙарҙы һатыу бизнесҡа, бысраҡ шөғөлгә әйләнде. Әлбиттә, башҡорт тарихында ла, башҡа халыҡтарҙың тормошонда ла, үҙе ҡарай алмағас, асҡа үлмәһен тип, баланы башҡа ғаиләгә биреү, хатта һатыу фажиғәләре лә булған. Ләкин бөгөнгө хәлдәр бөтөнләй башҡа, иманһыҙлыҡ, хатта енәйәт бит.

Еребеҙ йөҙөнән йылдан-йыл күберәк юҡ була барған ауылдар урынында ташландыҡ ҡоҙоҡтар ҡалыр, әгәр емермәһәләр, ялан уртыһында һуғышта һәләк булған яугирҙәргә – ауылдаштарға обелискалар ҡалыр.

Бабайҙарҙан ҡалған балбалдарға,
Ташҡындарҙы иҫләр таш һындарға,
Килер һуҡмаҡ һынған һынташтарға
Ҡоҙғон ғына ҡуныр.
Таҙа һыуын күмеп, ваҡыт сүбе
Ҡоҙоҡтарға тулыр.

Киләсәктән хаттар алам,
Тик яуабым әле етмәй.
Узғандарға хаттар яҙам,
Тик яуап юҡ. Тылсым көтмә.

Көн дә яҙам халҡыма хат,
Кисә яҙҙым. Бөгөн яҙам.

Яҙам тултырып аҡ ҡағыҙҙы,
Серҙәш итеп аҡ ҡағыҙҙы.
Хаттарыма яуап һирәк,
Тик йышая кешеләрҙә
Яңғыҙлыҡ һәм яуанһыҙлыҡ.

Тағыр сәғәттәрем күбәйә лә,
Йәшәр сәғәттәрем аҙая шул.

Бүләк итеп була ҡарар сәғәтте,
Бүләк итеп булмай йәшәр сәғәтте.

Мәсет янында йыш ҡына булам. Бер үк ҡатындар хәйер көтөп ҡулын һона. Уҡытыусылары менән бер төркөм балалар сығып бара. Бында килгәс, мосолман балаларылыр. Барыһы ла русса һөйләшә.

Хәҙер ҡатын-ҡыҙ бик оҙон күлдәк кейә. Кәкре аяҡлылар өсөн бәхет инде.

Яңы өйләнешкән йәштәр ҙә мәсеткә килә. Араларында ҡорһаҡлы кәләш күрҙем. Уныһын инде бер ниндәй күлдәк менән дә йәшереп-ҡаплап булмай.

Туйҙан һуң бер бала ла үҫтермәй тарҡалған гражданлыҡ брагы тыуҙырған брак «ғаиләләргә» ҡарағанда туйға тиклем үк ҡорһаҡлы булған кәләш, моғайын, инсафлыраҡтыр.

Тәбиғи байлығы юҡ дәрәжәһендәге илдәр нимәлер көтөп ятмай. Яҡшы тормош булдырыр өсөн төрлө юлдар эҙләй. Мәҫәлән, япондар. Тәбиғи байлыҡтары бихисап булған ил-халыҡтар шул байлыҡ иҫәбенә ғәмһеҙ йәшәргә өйрәнә. Ул байлыҡтар намыҫһыҙ, йылғыр бәндәләрҙең ҡулына эләгә, тирен түгеп йәшәгәндәр өлөшһөҙ ҡала.

Беҙҙең Рәсәй бына шундай бай һәм хәйерсе илдәрҙең иң зурыһы һәм иң киләсәкһеҙе.

Әле генә донъям – йәннәт!
Йән рәхәттәре! Хана!
Тик юҡ була шифахана,
Мин – хәс тә хәстәхана.

Етмәй һуларлыҡ һауа,
Файҙаһыҙ барлыҡ дауа,

Хисте быуа хәстәхана,
Һауыға алмай ауам.

30 июнь, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

Нисәмә көндәр Рәсәй буйлап 30 градустан артыҡ эҫе. Әллә 2010 йылдағы ҡоролоҡ ҡабатланамы? Европаны һыу баҫа, беҙҙе эҫе көйҙөрә.

25-дә икенсе тапҡыр – комитет. 13-дә кворум бар тигәйнек тә, регламент буйынса яҙма ризалыҡ дөрөҫ булмай сыҡты. Шаулатырға әҙер тороусылар табыла. Шуға яңынан үткәрҙек.

27-дә Госсобраниеның һуңғы 64-се ултырышы. Төп мәсьәлә мәғариф буйынса Башҡортостан законы. Башта хөкүмәт индерергә тейеш ине, һағаялар. Беҙҙең комитетҡа йөкмәттеләр. Был закондағы төп статья – 6-сы һы, «Мәғариф теле». Хоҡуҡтар сикләнгәндән сикләнә. Башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыу республика конституцияһында ла яҙылған, «Мәғариф тураһында»ғы Рәсәй Законында ла (14-се статья), беҙ ҡабул иткәнендә лә быға хоҡуҡ бирелә. Әммә бик мәкерле ситуацияға ҡоролған: закон ярай ти, ә ФГОС (федеральные государственные образовательные стандарты) быға юл ҡуймай. Был эште учредителдәр, уҡыу йорто етәкселәре, ата-әсәләр комитеты ҡарамағына ҡалдыра. Ә уларҙың мөнәсәбәте күпселектә кире. Был «таш ҡалып»ҡа бикләүсе стандарттарҙы үҙгәртерлек мөмкинлек юҡ.

Беҙҙе ҡәһәрләүселәр, беҙгә таш атыусылар булыр әле. Ғүмерем буйы тел тип яндым, ә бына Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтайҙа эшләүемдең һуңғы көндәре иң ауыры булды. Нимәләр кисергәнемде, намыҫымдың нисек ғазапланғанын үҙем генә беләм.

6 июль, 2013 йыл. Шәмбе.

28-дә Нефтекамскиҙа БДУ филиалында диплом тапшырыуҙа сығыш яһаным. Ике поток: төшкә тиклем, төштән һуң. Яңы ректор Морозкин Николай Данилович менән сығыш яһаныҡ, бергә ҡайттыҡ. Юлда ныҡ ҡына ҡунаҡ булынған.

26-да «Истоки»ҙа «Путь утверждения добра» тигән минең депутат яҙмаларым сыҡты.

Донъяларға хужа булып булмаҫ,
Үҙ-үҙемә хужа булһам икән.
Ғүмерем сәғәттәрен күңелем һөйгән
Ғәзиз эшкә генә бүлһәм икән.

Ялға сығыр алдынан (1 июлдән) көнөнә 2–3 кәңәшмә булып китте.

Ҡыҫыр көндәр, ҡыҫыр сәғәттәр.
Таланған, урланған ваҡыттар.
Ләкин зарланма, был режимға
Берәү ҙә һине көслəп индермәй бит.

Касан ғына килеп етерһегеҙ,
Тик ижадҡа бирелер көндәрем?

Сәйәсәт, бигерәк тә ҡануниәт теле минең өсөн түгел. Б. Бикбай тураһында кино әҙерләйҙәр. Эшкә килеп, мине төшөрҙөләр. Б. Бикбай тураһындағы мәҡәләмде яңынан уҡып сыҡтым. Бер ҙә насар яҙылмаған икән.

Бынығы – минең стихиям.

Ҡәҙер ҙә, ҡәһәр ҙә,
Дан да, яманат та,
Хаҡ та, нахаҡ та.

Өй эйәһе, тау эйәһе, аҡыл эйәһе. Бер ҙә хужа тимәйҙәр. «Шундай белемдәргә, һөнәргә эйә булды» тиҙәр. Хужа булды тимәйҙәр. Сөнки хужа булыу ваҡытлыса, бөгөн хужаһың, иртәгә – юҡ. Эйә булыу һинең мәңгелек, дөрөҫөрәге, ғүмерлек сифатың.

Дәүләт йыйылышында төп сығышым мәғариф тураһындағы законға (1.12.07.) бәйле хөкүмәт сәғәтендә (май, 2008) башланғайны. Ул саҡта милли республикаларҙың президенттары ла, депутаттар ҙа, йәмәғәтселек тә ныҡ ҡаршы сыға, милли-региональ компонентты яҡлай ине. Бына яңы закон ҡабул иттек. Элек – һөжүм, тәнҡит. Хәҙер күбеһе һағая, шым.

Һаҡланыу, һаҡ, һағайыу.

10 июль, 2013 йыл. Шаршамбы.

Өсөнсө көн «Яҡты күл»дәбеҙ. «Уралҡайҙың аҫты алтын, өҫтө шиғыр, үҙе нур. Киләсәктә был ергә хоҙай үҙе ҡыҙығыр» тигән юлдарҙы Шәйехзада Бабич Башҡортостаныбыҙҙың нәҡ ошондай хозурлыҡтары тураһында яҙғандыр инде. Аллаһы тәғәлә халыҡтарға һәр береһенә Ватаны итеп ер бүлгәнен бик ашығып бармаған башҡорттар ер бүленеп бөткәс кенә ишеткәнен, Аллаһы тәғәләнән

бик үтенеп һорағас, Хоҙай уларға: «Ярар инде, үҙемә тип бер ер ҡалдырғайным, шуны һеҙгә бирәм» тигән риүәйәтте элекке бер сығышымда килтергәйнем.

Бабич заманында ул ҡисса, моғайын, булмағандыр. Әммә әлеге шиғри юлдар менән был сюжет ни тиклем ауаздаш! Бындай уйҙар беҙҙеке һымаҡ аҫыл ерҙәрҙә генә тыуа торғандыр.

Башҡортостандың атаҡлы санаторийҙарының барыһында ла ял иттек, ә бына «Яҡты күл»лә булған юҡ ине. Хатта Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтайҙа биш йылдан артыҡ Әбйәлилдән депутат булһам да.

Ғүмер булһа, был йәннәттәй ял итеү урынына йышыраҡ килергә кәрәк.

Өсөнсө көн һыу инәбеҙ, икенсе көн дауаланабыҙ. Күл дә, һауа ла, тәбиғәт күренештәре лә ғәжәп. Халыҡ та Янғантау, Красноусольский санаторийҙарындағы һымаҡ ҡайнап тормай, иң күп сағында 200-ләп.

Һәйбәт урынлаштыҡ, ике бүлмә. Эшләп ултырырлыҡ мөмкинлектәр ҙә булмаҡсы. Әле нисек тә ваҡыт табып эш ритмына инергә тырышам, уй-ниәттәр бихисап. Шиғырҙар байтаҡ яҙылмаҡсы.

Рәмил Йәнбәк «Ағиҙел»дең август һанында сығып килгән «Граждандарҙы ҡабул итеү көнөм» тигән поэмаға бәйле белешмә өсөн тыуған районымды һорап шылтырата. «Хәҙер ул Покровский районы юҡ, ауылымды әйтһәгеҙ еткән», – тинем.

Бында китер алдынан «Ағиҙел»дең алтынсы һанындағы Рәмил Йәнбәктең, Зөфәр Вәлиттең, Ҡаһим Әүхәтовтың һәйбәт шиғри шәлкемдәрен уҡып сыҡҡайным. Рәмилдең дә, Зөфәрҙең дә уйланыуҙары һәлмәкләнгән, фәлсәфә артҡан. Ҡаһим ағай ҙа ер кешеһенең кисерештәренә тоғро ҡала. Һәйбәт шиғри күңелле кеше ул. Һикһәнде үткәндә лә ошолай ижад менән йәшәүе күңелле, әлбиттә.

11 июль, 2013 йыл. Кесаҙна.

Ҡаһим Әүхәтовтың шиғырҙарын уҡығас, бер мәрәкә хәл иҫкә төштө.

1966–1976 йылдарҙа беҙ Черниковкала күршеләр менән йәшәнек. Күршебеҙ Наталья Ивановна (ҡыҙы Надя ла бар ине) менән бик татыу булдыҡ, һәйбәт апай ярҙамсыл, ихлас кеше ине.

Етмешенсе йылдарҙың баштары булғандыр, мин Яҙыусылар союзында шиғриәт секцияһы рәйесемен. Йыш ҡына ҡулъяҙмалар тикшерәбеҙ. Ҡаһим ағай ҙа китабын әҙерләгән. Ул ваҡытта телефонфәләнюҡ. Әүхәтов минең Черниковкалағы йортомдо эҙләп тапҡан.

Уға күршебеҙ Наталья Ивановна ишек асҡан. Ағай менән һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул Әнғәм Атнабаевтың ауылдашы, Күрҙемдән ине. Уларға төшкән булғандыр. Беҙҙә булғандан һуң һөйләй икән Атнабайға: «Вәт Бикбай йәшәй, аҫырауы (домработница, йәнәһе) килеп ишек асты!»

Күптән инде фән кандидаты, Ғ. Сәләм премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың нисәмә йылдар әллә ҡайҙағы Черниковкала күршеләр менән йәшәгәнен белһә! Ул хаҡта ағай уйлап та ҡарамағандыр инде. Ул саҡтарҙа шағирҙарҙың бahahы юғары бит: күршеһе лә аҫырау булып күренгән.

Был көндәлектәр дәфтәрен яңынан ҡарап сыҡтым. Эшләнәһе эштәр нығыраҡ асыҡланды. Байтаҡ шиғри эскиздар теркәлгән. Уларға бында нығытып әйләнеп ҡайтмаҡсымын.

Киләһе йыл Динистың 70 йыллығы. Уның хаҡында мәҡәләиҫтәлек күҙ алдына килде. Бәлки элекке шиғри арнауға яңыһы өҫтәлер. Һәр хәлдә, быйыл мотлаҡ яҙырға тейешмен, Аллаһ бирһә.

Бында килеүебеҙ изге рамаҙан айының башланыуына тура килде. Ураҙа тотҡандарға түҙем бирһен! Донъя көйә! Нисәмә көндәр – яҙҙан бирле – ҡоро, утыҙ градустан артыҡ эҫе. Башҡортостан илдә ҡоролоҡтан яфа сигеүсе региондар иҫәбенә инде. Һуңғы ике көндә яуғылап алды. Өфөлә ҡойма ямғыр булған, урамдарҙа һыуҙар ташып ағып ятҡан.

Бында төшкә тиклем ваҡыт дауаланыуҙар менән йүгереп һәм көтөп үтә. Иртән алты тулмаҫ борон күл буйында йөрөйөм, һыу инәм. Шулай сәғәт етене үтеп китә. Аҙаҡ процедуралар башлана.

Былтыр Асылыкүл буйында һис бер радио – телевизорһыҙ, гәзит-китапһыҙ үҙебеҙгә үҙебеҙ хужа булып йәшәгәйнек. Ижадымда Асылыкүл миҙгеле булып алғайны. Быйыл да уйланған уйҙар күп, әммә режим бөтөнләй башҡа. Килгәс-килгәс, дауаланмай ҙа булмай.

Сентябрҙән, насип итһә, иркен тормошҡа күсәсәкмен.

14 июль, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

Яҡтыкүлдәге ялдың бөгөн яртыһы үтеп бара. Бөгөн дауаланыу юҡ. Тик иркенләп ял итергә, ҡыҙынырға көнө юҡ. Кискә бик көслө ямғырҙан саҡ-саҡ йәшенеп өлгөрҙөк. Мин йәйге кафеның өҫтәге асыҡ террасаһына күтәрелдем. Ямғыр бында ла етә яҙа, еле яман. Ярты сәғәтләп кенә яуғандыр. Төшөп килһәм, аҫтағы бүлмәлә халыҡ тулы, Фәриҙә лә шунда. Ямғырҙан ҡасҡанда мин ул ишекте күрмәй үткәнмен. Ҡайтҡас, эҫе һыу менән ҡойондом. Бөгөн иртән шулай ҙа

һыу инеп сыҡтым. Бында килгәне бирле Яҡтыкүлдә һыу инмәй ҡалған көн юҡ. Төп «дауалау факторы» шул түгел микән?

Яйлап шиғырҙар яҙыла. Марат Минһажетдинов тураһында күңелдә 40 йыл йөрөгән шиғырға әйләнеп ҡайтып, яҙып ҡуйҙым.

Ҡояшта ҡыҙынам,
Ямғырҙа ҡойонам.
Көс бир тип, көс бир тип,
Еремә һыйынам.

Яҡтыкүлдә яҡты таңдар аттырҙым,
Яҡтыкүлдә донъяларым яҡтырҙы.
Яҡты көнгә ышаныҫты арттырҙы,
Һорауҙарға ҡаты яуап таптырҙы.

Дәүләкәндә Асылыкүлдә бөтөнләй тиерлек уҡымай, радио тыңламай, TV ҡарамай йәшәлгәйне. Дауаланыу-фәләндәр ҙә юҡ ине. Шуға күп яҙылды, ижад менән илһамланып йәшәлде.

Бында байтаҡ уҡыйым, китаптар ныҡ һағындырған. Иркенләп уҡырға бер ҙә форсат булманы бит нисә йылдар буйына.

Ни тиклем аҙ беләбеҙ шул. Бөгөнгө информацион сүп ташҡынында кешеләрҙең күпселеге, бигерәк тә йәштәр, етди әҙәбиәттән бөтөнләй ситләшә. Мин дә элекке йылдарым, бигерәк тә 30 йыл буйына институтта эшләгән дәүер менән сағыштырғанда һуңғы ваҡытта бик күпкә аҙыраҡ уҡыным. Хәҙер күптән ҡулға алырға хыялланған китаптарымды уҡып өлгөрөргә кәрәк.

Бында китапхана арыу ғына. Совет осорондағы баҫмалар байтаҡ. Вера Инберҙың өс томлығының 1958 йылда «Художественная литература»ла сыҡҡан (ул саҡтағы иң олпат баҫма, унда сығыу автор өсөн иң юғары мәртәбә ине) өсөнсө томын алдым. Очерктары, әҙәбиәт тураһындағы мәҡәләләре үҙенсә, әммә был томдың үҙәге – «Почти три года» (Ленинградский дневник). Бында 1941 йылдың 27 августынан 1944 йылдың 7 июненә тиклемге арала Вера Инберҙың Ленинградтағы күргәндәре-кисергәндәре, ижади һәм ижтимағи эшмәкәрлеге, ҡот осҡос ваҡиғалар, фажиғәле яҙмыштар теркәлгән. Был көндәлектәр Ленинград блокадаһы тураһында тарихи тикшеренеүҙәргә, аҙаҡ яҙылған әҙәби әҫәрҙәргә ҡарағанда бик күпкә дәлиллерәк мәғлүмәт бирә. Сөнки бында бер

нәмә лә уйлап сығарылмаған. Нисек булған, шул көйө документаль теркәлгән.

Ҡалала йөҙәр меңләп кешеләр аслыҡтан ҡырылғанда ла бында В. Инбер, В. Кетлинская, Н. Тихонов, О. Берггольц һ.б. радио, матбуғат аша халыҡ күңеленә өмөт өҫтәргә, донъяға Ленинград һүҙен еткерергә тырышҡан. Бында Яҙыусылар союзы, филармония, вуздар эшләгән, Шостаковичтың яңы симфонияһы башҡарылған һ.б. В. Инбер бында «Пулковский меридиан» тигән поэмаһының бүлектәренең нисек яҙылыуы, «Правда»ла баҫыла барыуы тураһында һөйләй.

Әҫәргә уҡыусыларҙың баһаһы ҡайһы саҡта бик мәҙәк килеп сыға. Ике ейәне булған бер өләсәй «Пулковский меридиан» поэмаһын маҡтай: «И главное – не длинно. Понимаете?

– Конечно, понимаю, – ответила я польщенно.

– Вот я вам расскажу... Читала я, не отрываясь. И только дочитала и вышла на кухню, как в комнате над креслом, где я сидела, обрушилась штукатурка. Дом старый, неремонтированный. Еще бы длиннее вы написали, и меня уже не было бы в живых. Понимаете?

– Понимаю, конечно, – упавшим голосом согласилась я». (т.3, с. 560).

Маргарита Алигерҙың «Встречи и разлуки» (М., «Известия», 1989) тигән китабына Чили юлъяҙмаһы, ҙур ғына хикәйәһе ингән.

Һуңғы бүлек – «Тропинка во ржи. Портреты и воспоминания» – китаптың яртыһын тиерлек алып тора. Иң мөһиме, минеңсә, ошо иҫтәлектәр. А.Ахматова, К. Чуковский, Б. Пастернак, Н. Заболоцкий, А. Твардовский һ.б. тураһындағы иҫтәлектәрҙе бик ҡыҙыҡһынып уҡыным, үҙем өсөн байтаҡ яңылыҡтар астым.

Бигерәк аҙ беләбеҙ, ғүмеребеҙ буйы әҙәбиәт тип йәшәһәк тә, уға етерлек иғтибар бирмәйбеҙ, уға гел генә тоғро булып ҡалмайбыҙ шул.

М. Алигер һөйләгән ижади мөхит, әҙиптәрҙең аралашыуҙары, һөйләгән һүҙҙәре, уртаҡлашҡан фекерҙәре ни тиклем йөкмәткеле, юғары рухлы. Уларҙың тормошонда ваҡлыҡтарға урын ҡалмай һымаҡ.

Беҙҙәге аралашыуҙарҙағы ығы-зығыны, осрашҡанда күберәк ғәйбәт менән, кемделер сәйнәү менән булыуҙарҙы М. Алигерҙың иҫтәлектәрендәге ысын ижади бәйләнештәр менән сағыштырырлыҡмы ни? Ундағы шәхестәрҙе, русса әйткәндә, одержимые тиергә

мөмкин. Иң ауыр саҡтарҙа ла улар ваҡлыҡтарҙан өҫтөн, «быт»ҡа батмай, улар өсөн иң мөһиме – бытие.

Йәһүдтәрҙең совет әҙәбиәтенә, киңерәк алғанда, дөйөм рус һүҙ хазинаһына, сәнғәттең төрлө тармаҡтарына индергән өлөштәре, тарихи хеҙмәттәре тураһында оҙаҡ уйланып йөрөйөм. Донъя мәҙәниәтен, төрлө телдәрҙе белгән был шәхестәрҙең «уртасылыҡтан» бик юғары интеллектуаль, рухи донъяһы, бер-береһенә тоғролоҡ, ярҙамсыллыҡ, берҙәмлек традициялары барлыҡҡа килгән.

Беҙҙең оло быуын яҙыусылары Б. Бикбайҙар, Р. Ниғмәтиҙәр, Ғ. Сәләмдәр, М. Хәйҙәр, Мостай Кәримдәр, Ж. Кейекбаевтар, шулай уҡ Һәҙиә Дәүләтшиналар ошондай бай рухлы, ихлас мөнәсәбәттәрҙәге ижади мөхиттә йәшәгәндәр бит.

Әлбиттә, нахаҡ һүҙҙәр, утыҙ етенсе йылдарҙағы яла яғыуҙар ҙа етерлек булған, әммә оло быуын әҙиптәренең әҙәбиәткә иң тоғролары ижади маҡсаттарҙы, халыҡтың рухи яҙмышы хаҡындағы хәстәрлекте шәхси мөнәсәбәттәрҙәге ығы-зығыларҙан юғарыраҡ ҡуйған.

Үҙен ижадҡа фиҙаҡәр арнаған шәхестәрҙең төрлө ғәйбәттәр менән булырға, башҡаларҙың тормошонда соҡсонорға теләге лә булмай, ваҡыты ла ҡалмай.

15 июль, 2013 йыл. Дүшәмбе.

Кисә лә, бөгөн дә зарядканан һуң һыу индем. Һыу йылы, төнъяҡтан һыуыҡ ел. Көн һалҡынайҙы. Ҡояш күренә лә юғала. Ел һаман да төнъяҡтан. Төштән һуң кисә һыу инмәгәйнек. Бөгөн дә бик үк барғы килмәй. Ҡыҙынмағас, күлдә һыу инмәгәс, бындағы көндәрҙең йәме ныҡ кәмей.

Үҙған юлдарҙы байҡайыҡ,
Ваҡыттыр бит туҡтарға.
Туҡтарға ваҡыт ҡалманы,
Тик алға, алға, алға!

Йомғаҡ һүтелеп бөтөп бара,
Йомғаҡлар ваҡыт етә.

Ғүмер йомғағы таратылып, ижад булып йомарлана. Ул йомғаҡтың эсе тулы йомаҡ.

Әле дәүләт булып йәшәгән, Рәсәй Федерацияһында республикалы булып йәшәгән милләттәрҙе ниндәй һәләкәттәр көтә?

Карабыбыҙ батасаҡ. Иң кәрәкле байлығыбыҙҙы ярға ташып, рухи хазиналарыбыҙҙы ташҡа баҫып ҡалайыҡ.

Лирика – яҙмыш, фәлсәфә – уйланмыш. Лирика – яҙмыштағы мәл, фәлсәфә – тормоштоң мәңгелеге.

Ғүмер үтеү менән ижадта фәлсәфә арта, сөнки яҙмыш нигеҙҙә билдәләнгән, булыры булған. Хәрәкәткә, тынғыһыҙ ярһыуҙарға ҡарағанда тәрәндән уйланыуҙар арта.

Туғандарыңды, дуҫтарыңды юғалтыу – тәбиғи. Кешенең йәшәйеше, тормоштоң ағышы шулай. Ә бына ижад кешеһенә уҡыусыларыңды юғалтыу, уларҙың йылдан-йыл кәмей барыуы – оло фажиғә. Быға әҫәрҙәрең ғәйепле булһа – бер хәл. Ләкин һуңғы йылдарҙа замандың уҡымауы, интернет менән генә йәшәүе ошондай юғалтыуҙарға килтерә.

Әлбиттә, заман технологияларын, сайттарҙы, электрон китаптарҙы файҙаланырға кәрәк. Әммә күпме уҡыусыларыбыҙ ғына түгел, күпме авторҙар үҙҙәре быға әҙер түгел.

17 июль, 2013 йыл. Шаршамбы.

Көндәр һалҡынайтты. Шулай ҙа иртәнге етелә һыу инәм, бер сәғәт йөрөгәндән һуң. Төштән һуң бик үк инге килмәй. Былай ҙа һыу инеүсе бында мин генә.

Яҡтыкүлдән 45 км алыҫлыҡтағы умарталыҡҡа барҙыҡ. Бик ҙур шәхси хужалыҡ, Силәбе өлкәһендә. Хужаһы Сергей бал ҡорттарының тормошо хаҡында бик ҡыҙыҡлы итеп һөйләй. Өс вуз бөтөргән.

Бал ҡорттарының тормошонда һәр береһе үҙ урынында, үҙ эше өсөн яуаплы. Эшселәре лә, һаҡсылары ла, батшабикәләре лә – һәммәһе үҙ вазифаһы өсөн яуаплы.

Беҙҙең ҡан менән бал ҡортоноң балы төҙөлөш үҙенсәлектәре буйынса бөтөнләй тиерлек оҡшаш икән. Кеше клеткалары 21 көндә яңыра. Бал ҡорто тыуғандан алып үлгәнгә тиклем ял итмәй. 12 көн осоп бал йыя, ҡалған 7 көнөн оя эсендә эш менән үткәрә. «Пенсия йәшенә етә», – ти умартасы Сергей.

Төрлө кәрәҙҙәрҙе күрһәтте. Ҡайһы берҙәрендә иероглифтар һымаҡ һыҙат-тамғалар бар, ти. Бал ҡорттары беҙгә нимәлер хәбәр итә, беҙ әлегә уҡый белмәйбеҙ, ти.

Ҡорьәндә «Бал ҡорто» сүрәһе бар. Ҡайтҡас, яңынан ҡарарға кәрәк.

Урыҫтарҙың «Медовый месяц» тигәндәренең мәғәнәһен аңлатты. Яңы өйләнешкәндәр һау, таҙа бала тыуһын өсөн бер ай буйы бал ашарға, бал балы эсергә тейеш булғандар икән.

Бындағы медовуханы беҙ ҙә саҡ ҡына ауыҙ иттек. Баллап сәй эсерҙеләр. Был һатып алдыҡ.

Балдың бик күп шифалы яҡтары тураһында күп мәғлүмәттәр килтерҙе. Бөтә балдар ҙа 90 проценты менән бер төрлө, барыһы ла файҙалы, тик 10 проценты ғына төрлө сәскәләрҙең үҙенсәлегенә бәйле, ти.

Тағы ла Маргарита Алигерҙың китабын ҡараштырҙым. Чили юлъяҙмаһынан: «Мы вылетели в понедельник тринадцатого июля, пренебрегая этим роковым совпадением дня и числа. (Впрочем, иные суеверные люди полагают, будто бы, как в математике, минус на минус дают плюс, совпадение тяжелого дня и рокового числа взаимно учитываются)».

Беҙ Фәриҙә менән майҙың 13-дә өйләнештек. «Кто женится в мае, всю жизнь будет маяться.» Бында ла ике минус бер плюс бирҙеме икән?

21 июль, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

Һуңғы көндәр бик ҡаты күк күкрәп, йәшенләп, ямғырҙар яуып үтте. Шулай ҙа һыу инеүҙе туҡтатманым. Кисә аҙыраҡ ауырып алдым. Бөгөн һыу инеп булмаҫ.

Бик йыш шулай була: рамы бик затлы, матур, ҡиммәтле, ә рәсеме төҫһөҙ шаблон, һәләтһеҙ трафарет. Ҡайһы бер кешеләргә ҡарап, шулай аптырап уйлап ҡуяһың бит: тирә-яғында, ғаиләһендә ниндәй һәйбәт кешеләр, ә үҙе ниңә ошолай ҡотһоҙ, күңеле ваҡ, булмышы нурһыҙ, һоро? Һәләтһеҙ рәсемгә аҫыл рам әрәм булған кеүек, бындай һоро бәндә янында бындай матур мөхит булырға тейеш түгел һымаҡ!

Ҡояшлы, яҡты кешеләр була. Ләкин донъяла һәр нәмәнең самаһы һаҡланырға тейеш.

Артыҡ ҡояшлы кешенең башҡаларҙы көйҙөрөүе лә бар.

Идара ултырышы була тип шылтыратала ине. Халыҡты йыя алмағандар. Бындай ваҡытта йыйылыш үткәреп буламы ни?

Роберт Миңнуллинға Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен биреү мәсьәләһе тураһында әйткәндәр. Улайға китһә, Туфан Миңнуллинға был дәрәжә ниңә бирелмәне? Уның әҫәрҙәре беҙҙең сәхнәләрҙә туҡтауһыҙ бара, барҙы, Башҡортостандың рухи тормошонда ваҡиға булды бит.

Назар Нәжми татар яҙмышы өсөн янып йәшәне, байтаҡ татар шағирҙары хаҡында яҙҙы бит. Суфиян Поварисов Ғәлимйән Ибраһимов тураһында трилогия яҙҙы, ғүмере буйы университетта

татар телен уҡытты, уға тиклем татар гәзитендә эшләне бит. Шуға ҡарап ҡына Назар Нәжмигә Татарстандың халыҡ шағиры, Суфиян Поварисовҡа Татарстандың халыҡ яҙыусыһы тигән исемде биреү был юғары дәрәжәнең асылын аңламау булыр ине.

Әлбиттә, артистарға төрлө республикаларҙа исемдәр биреү бар. Әммә әҙип артист түгел бит, бәхеткә ҡаршы. Артист бөгөн бында, иртәгә тегендә. Ғабдулла Шамуҡовты, Рөстәм Маликовты иҫкә төшөрәйек. Башҡорт сәхнәһендә лә хеҙмәт иттеләр, хөрмәт-дәрәжәләре лә булды. Ләкин артист ысынлап та бөгөн бында, иртәгә – тегендә. Әҙип иһә әҙәбиәттән әҙәбиәткә күсеп йөрөй алмай.

Ярай әле шағирҙарҙы, спортсылар һымаҡ, һатыу ғәҙәте юҡ.

Улайға китһә, Салауат Юлаев тураһында роман яҙған, уның исемен донъяға яңғыратҡан Степан Злобин Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы булмаҫлыҡ инеме ни?

Мостай Кәрим бер заман (Шәймиевтан туранан-турамы, унысын белмәйем) әйҙә һиңә Татарстан халыҡ шағиры тигән исем бирәйек тигәйнеләр, баш тарттым, тип һөйләй торғайны. Мин ғүмерем буйы башҡорт әҙәбиәтенә хеҙмәт иттем, тигәйне.

Шағир милләтенең ғәзиз балаһы. Аҡыллы быҙау ике һыйырҙы имә тиһәләр ҙә, бер юлы ике әсәнең бер туған балаһы булып булмай.

Нисәмә тапҡырҙар кәкүк саҡырғанын тыңлағанда, ниңә улай йылдарҙы самаһыҙ күп һанайһың, йәки ниңә бер-ике генә өндәшәһең дә туҡтайһың, тип аптырағаным булды.

Теле булһа, кәкүк әйтер ине:

– Минең тауышты һин генә тыңламайһың бит. Уны сабый ҙа ишетә, йөҙ йәшәгән ҡарт та ишетә. Бәлки мин шуларға атап өндәшәмдер. Был донъяла йәшәүсе һин генә түгелһең бит.

Зиннур Нурғәлин еңгә менән бында ял итә. Уның тыуған ауылы Ташбулат күл аръяғында күренеп тора. Йыл да Яҡтыкүлгә киләләр икән.

Зиннур ағай «Башҡорт теле. Дәүләт теленән әҙәби телгә» («Ғилем», 2013) тигән китабын бүләк итте. Ағай тел тураһында төплө һәм актуаль мәсьәләләрҙе йыш яҙҙы. Ләкин был китапты төҙөгәндә, минеңсә, талапсанлыҡ етмәгән. Бер үк исемдәр, факттар мәҡәләнән мәҡәләгә күсеп йөрөй, ҡабатлауҙар бик күп. Редакторы Ф. Тикеев талапсаныраҡ ҡарай алыр ине.

118 биттәге: «Башҡортостанда бөгөн власть органдары ике телдә иркен эш итергә һәләтле. Ошо йәһәттән дәүләт аппараты

хеҙмәткәрҙәренә ҡасандағылыр һымаҡ махсус рәүештә урындағы телде өйрәнеү ихтыяжы үҙенең әһәмиәтен юғалтты», – тигән раҫлауҙар менән нисек килешергә мөмкин? Шул уҡ ваҡытта: «Ул хатта башҡорт телен рус телле мәктәптәрҙә уҡытыу функцияһына ҡарағанда ла актуалләшә төшә һәм мөһимерәк була бара... Шуға күрә башҡорт әҙәби телен башҡорт мәктәптәрендә уҡытыуға булған иғтибар, беҙҙеңсә, бөгөн көн үҙәгендә торған бурыс сифатында ҡаралырға хаҡлылыр», – (120–121 биттәр) тигән талапты һис бер «лыр»һыҙ бик киҫкен ҡуйырға кәрәк.

Башҡорт теленә яңынан дәүләт теле статусын биреү ҙур ҡаҙаныш, 20-се йылдарҙағы принциптарҙы яңыртыу. Ләкин һәр замандың үҙенсәлектәренән сығып эш итергә кәрәк. 20-се йылдарҙа 99 процент башҡорт балалары башҡортса белһә, хәҙер башҡортса белмәгән башҡорттар артҡандан-арта.

Рус һәм башҡа милләт балаларына ла Башҡортостандың тарихы һәм бөгөнгөһө, башҡорт теле, башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте тураһында, һис шикһеҙ, мәғлүмәттәр бирергә кәрәк.

Ләкин иң мөһиме – мөмкин тиклем күберәк башҡорт балаларының башҡорт телле булыуҙарына ирешеү, шуға тырышыу.

Экология йылы. Йылғаларҙы таҙартып була, күңелдәрҙе сафландырыу, һүнгән өмөттө терелтеү, юғалған һүҙҙе йәки моңдо яңынан табыу күпкә ҡатмарлыраҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йыш ҡына мөмкин дә түгел.

Башҡорт теленә дәүләт теле статусы бирелеү күпселектә ҡағыҙҙа ғына. Биш йылдан артыҡ Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтайҙа эшләнем. Бында даими эшләүселәр араһында башҡорттар байтаҡ, әммә улар башҡортса сығыш яһау түгел, хатта үҙ-ара ла туған телдә аралашмай тиерлек.

Ә Зиннур Нурғәлин, «Башҡортостанда бөгөн власть органдары ике телдә иркен эш итергә һәләтле», – тип яҙа. Тәжрибәле ғалим күрәләтә юҡты бар ти.

29 июнь, 2013 йыл. Дүшәмбе.

Яҡтыкүлдән ҡайтҡанға бер аҙна үтеп тә китте. Юл буйынса тиерлек ямғыр яуҙы. Сермән тирәһендә еләк, сейә, ҡара көртмәле һатып алдыҡ, бәләкәстәргә күстәнәскә.

25-дә отпуск бөттө. Эшкә барҙым, бүлектәгеләр ялда. Шул уҡ көндө баҡсаға киттек, Шамониноға ҡойоп яуған ямғыр алып килдек. Бында күптән яумаған.

Баҡсаны сүп баҫҡан. Бөгөн сабып бөтөрәм. Утап тормаһаң, тормошто ла сүп баҫырға ғына әҙер.

Хаиндар аҙым һайын.
Зиләләрҙең зилзиләләре.

25-дә Зәйнәп Биишева фонды йыйылып алдыҡ. Апайға һәйкәл вариантын һайлаған һымаҡ булдыҡ. Баҫырға әҙерләнгән китаптарын ҡараныҡ. Йәш шағирҙарҙың дөйөм йыйынтығын сығарыу тураһында һөйләштек. Ул эште үҙ өҫтөмә алдым.

Был йыйынтыҡ тураһында Лариса Абдуллинаға шылтыраттым. Үҙемсә исемлек төҙөгәйнем. Тик хәҙерге иң йәштәрҙе генә алһаң, шыйығыраҡ килеп сыға. Шуға исемлекте киңәйттем, иллеләп автор буласаҡ. Нәҡ бөгөнгө шиғриәттең иң көслө үрнәктәрен туплап, бик йөкмәткеле китап төҙөгө килә: бер генә йомшаҡ шиғыр булмаһын. Рәйестәрҙән, Хисмәттәрҙән башларға кәрәк. Был өлкәлә иң мәғлүмәтлеһе – Лариса Абдуллина.

Ул төҙөүсе булыр, биографик белешмәләр яҙыр, тип һөйләштек. Мин инеш мәҡәлә тураһында уйлайым. 1992 йылда яҙылған «Тормош ағышы, шиғри быуындар яҙмышы» тигән ҙур мәҡәләмдә ул саҡтағы иң йәш шағирҙар тураһында ентекле һүҙ әйткәйнем. Әле уйланылған инеш шуның үҙенсә дауамы буласаҡ.

Шәмбе көн Шмидт ауылын үтеп, «Клювое место» тип яҙып ҡуйылған күлгә барып, һыу инеп ҡайттыҡ. Күл аулаҡ, тыныс, уны бысратырлыҡ тирә-яғында бер генә төҙөлөш тә юҡ. Тик Шамонинонан йәйәү йөрөргә алыҫ, машина менән генә барырлыҡ.

Төҙөлөш башлар алдынан баҡсаға ер, тиреҫ килтергәйнек. Бәлки кәрәкмәгәндер. Шул ер, тиреҫ менән килтерелгән сүп баҫа. Сабып тоторға кәрәк. Ер килтермәгәндәрҙә матур булып ҡаҙ үләне үҫә.

Барлай башлаһаң, тамырҙаш һүҙҙәрҙең ҡыҙыҡлы сылбыры хасил була. Төркисә яҙылған иң боронғо әҫәрҙәрҙең береһе – «Ҡотадғу билик». Ҡот, ҡотлау, ҡотайыу, ҡотҡарыу, ҡот һалыу, ҡотон алыу, ҡотһоҙ, ҡотороу (ҡотҡа ороу, йәғни, бәхеткә һуғыу)

Йәки тор, торлаҡ, тормош, тороу һ.б.

Бер ағайҙың етмешенсе йылдарҙа һөйләгәне. Һуғыш ваҡытында көнбайыш өлкәләрҙән Өфөгә күп заводтар күсерелгән. Унан килгәндәр беҙҙең халыҡтан көлөп, беҙ килгәндә һеҙ сабатала йөрөй инегеҙ бит, тиҙәр икән. Ауылдарҙан сабатала килеп, эшсе булып

киткән Башҡортостан кешеләре лә булғандыр. Әммә беҙҙекеләрҙең яуабы бик тапҡыр: «Да, мы может быть ходили в лаптях, а вы то пришли босиком».

«Перевод автора» – матбуғатта (беҙҙә лә, үҙәктә лә) баҫылған шиғри әҫәрҙең аҙағында ошо һүҙҙәрҙе уҡыу хәҙер ғәҙәти хәл. Элек былар бик һирәк, хатта ғәжәп һымаҡ ине. Был ике теллектең – билингвизмдың бөгөн көндән-көн нығыраҡ таралыуын күрһәтә. Бында әле ике теллелек, йәғни рус теле менән бергә туған телде лә белеү, ике телдә яҙыу тураһында һөйләргә мөмкин. Ә инде рус булмаған кешеләрҙең бөгөн рус телендә ижад итеүе артҡандан-арта. Бында инде ике теллелек бөтә, туған тел юғала.

Ике теллелек шундай яҙмыш кисерә: башта тик туған тел, шунан һуң билингвизм, йәғни туған тел менән рус, инглиз һ.б. телдәрҙең бергә йәшәүе, шунан һуң туған телдән кеше ситләшә, туған телен юғалта. Был прогресмы әллә регресмы? Һәр тел – донъялағы иң ҙур хазина икән, шул хазинаны юғалтыу кешелектең рухи донъяһын барыбер ярлыландыра түгелме? Тимәк, һәр үҙгәреш, һәр хәрәкәт алға китеү, үҫеш түгел. Тағы ла шул һүҙҙәрҙе ҡабатлайым: хәрәкәттә бәрәкәт, әммә һәләкәткә илтеүсе хәрәкәт тә бар, шуныһы бик аяныслы.

Әгәр ҙә ендәр, дейеүҙәр, өй эйәләре һ.б. юҡ икән, ниңә уларҙың исемдәре һәр халыҡтың телендә бар: дейеү – дракон, ендәр – черти һ.б. хатта был атамаларҙың телдән-телгә күсеүе: убыр-упырь, енджин.

3 август, 2013 йыл. Шәмбе.

Үҙәк TV-нан ҡайһы ғына каналдан ҡарама, хәбәрҙәр, яңылыҡтар тапшырыуҙарында торғаны негатив: үтерештәр, юлдарҙағы ҡыйралыштар, криминалдар, фажиғәләр, тәбиғәт һәләкәттәре һ.б, һ.б.

Тормошта улары ла, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көн дә булып тора, әлбиттә. Ләкин йәшәйеш бөтмәҫ ҡайғылы хәлдәр генә түгел бит. Һәйбәт ваҡиғалар ҙа бик күп. Не только разрушения, но и созидание, не только горе и зло, но и добро и радость.

Ләкин былар хаҡында әйтелмәй тиерлек. Бәлки был шулай махсус эшләнә торғандыр. Йәнәһе, бына күпме ауырлыҡтар, бәләләр һәм ҡурҡыныстар. Йәнәһе, ил етәкселегенә бына нәмәләр менән көрәшергә, ниндәй ҡатмарлы шарттарҙа көнө-төнө эшләргә тура килә. Уларҙың хәлен аңлағыҙ, йәнәһе...

Башҡортостан TV-һы ла шуға күсеп бара. Нормаль тормош ҡайҙа? Бәләләр, проблемалар, һис шикһеҙ, күп. Ләкин нормаль тормош ҡайҙа? Һәйбәт яңылыҡтар ҙа бар бит. Бер кешегә мең бәлә генә түгел, мең кешегә бер бәләләр, бәлки. Әммә ҡаралыҡты тағы ла нығыраҡ ҡуйыртып күрһәтәләр. Ниндәй ҡатмарлы шарттарҙа ил етәкселәренә эшләргә тура килә, йәнәһе. Тәртип урынлаштыралар, йәнәһе.

Ә бурҙар иректә. Супербурҙар. Төрмәләгеләренә лә амнистия иғлан итмәкселәр.

Питание и воспитание – ни тиклем ауаздаш һүҙҙәр. Баланың иң элек тамағын хәстәрләргә кәрәк. Ләкин тәрбиә, әхлаҡ онотолһа, тамағы туҡ иманһыҙҙар үҫәсәк бит.

Илдә бөгөн балалар яҙмышында тетрәндергес хәлдәр: 700 мең үкһеҙ етем, 2 млн-ға яҡын үҫмерҙәр наҙан, 6 млн-ы камил булмаған (неблагополучные) ғаиләлә йәшәй. Продолжается ликвидация грамотности. Закрываются сельские школы. Иң ауыр һуғыштар ваҡытында (граждандар, Бөйөк Ватан) ла, унан һуң да был тиклем бәхетһеҙ, ҡарауһыҙ балалар булмаған бит.

Был хаҡта Яҡутияның элекке президенты М. Николаев бик әсенеп яҙа (Беспризорное детство – величайший позор наших дней. «РФ сегодня», май, 2013).

Олоғайған һайын байтаҡ кешеләрҙең көнсөлләгә нығыраҡ олой. Ололарҙың шулай олоуы бүреләрҙең олоуы ише генә түгел.

Ҡағыҙҙарҙы, папкаларҙы аҡтарып, бер йыйынтығымдың компьютерҙан үткәрелгән ҡулъяҙмамды эҙләнем. 2008 йылда Ҡазанда мөхәббәт шиғырҙарым Роберт Миңнуллиндың инеш һүҙе менән «Онытырлыҡ булдымы ни?» тигән китап булып сыҡҡайны. Шуның башҡортса бер экземплярын дискеты менән алып ҡуйғайным. Күпме эҙләй торғас, саҡ эҙләп таптым. Унан һуң яҙылған унлап мөхәббәт шиғырҙарын өҫтәп, полиграф комбинатта сығармаҡсымын.

Шуны эҙләгәндә, архивты барланым. Ҡулъяҙмаларҙы, тотош китапханамдытәртипкәкилтереү, кәрәкһеҙҙәренән, ҡабатланғандарынан ҡотолоу буйынса бик ҙур, бик мәшәҡәтле эш тора. Дәүләт йыйылышына һайлауҙарҙан һуң депутатлыҡтан бушағас та иркенләп шуға тотонмаҡсымын.

Архивты ҡарағанда боронғо төрки яҙмалары, Ғүмәр Хайямдың трактаттары, Науруз тарихы буйынса айырым папкаға туплап барған бик ҡыҙыҡлы материалдарға юлыҡтым. Ваҡыт иркенәйгәс, уларға яңынан әйләнеп ҡайтасаҡмын.

Борон һәр тармаҡта – фәлсәфә, уйланыу, ғәжәп ҡатмарлы фекерҙәр, әҙәпле һәм төплө бәхәс. Хәҙер – прагматизм.

Был сығанаҡтарға яңынан юлыҡтырып, Аллаһ иçкәртте һымаҡ: тамырҙарыңды онотма, бөгөнгөнө генә уйлап, артыҡ мауығып китмә.

Совет заманында берәй мәсьәләне хәл итергә тейеш булғанда: «Юғарыла, йәғни Обкомда нимә әйтерҙәр?» – тигән һорау күпме тапҡырҙар килеп тыуа торғайны. Күпселек бына шул ҡурҡыу менән йәшәне.

«Юғарыла нимә әйтерҙәр?» – был һорауҙы кеше көн дә ҡабатларға тейеш. Иң юғары көс, иң юғары, иң ҡаты хөкөм, иң ғәҙел баһа – Аллаһы тәғәләнең хөкөмө, баһаһы. Бына шул хаҡта онотмаçҡа тейешбеҙ.

Яҡтыкүлдә байтаҡ шиғырҙар тыуҙы. Шуларҙы яңынан ҡарайым, яңылары өçтәлә. Кисә «Етегән һаман да Етегән» тигән шиғыр яҙҙым.

Беҙ бәләкәй саҡтарҙа тын алмайынса: «Етегән йондоҙ тип ете ҡат әйтһәң, һауап була», – тип ете ҡат ҡабатлай торғайныҡ, айҙы күрһәк, теләк теләй торғайныҡ. Ул ғәҙәтем әле лә дауам итә. Тик айға ҡарап әйтелгән һүҙҙәрҙе: «Ай күрҙем аман менән, күңелем тулы инан менән, был айҙарҙа вафат булһам, хәтерләгеҙ иман менән», – тип, тулыландырып ҡабатлайым.

30 август, 2013 йыл. Йома.

Бына йәй ҙә үтеп бара. Көндәр һалҡынайтты. Шулай ҙа иртән ялан аяҡ ысыҡта йөрөп алам. Кисә баҡсаға килдек. Ҡоролтайҙа байтаҡ эштәр эшләп алдым: Аксаков, Евразийство тураһындағы материалдар. Президент администрацияһына инеп сыҡтым, хәҙистәрҙе шиғыр арнап Альбина Воробьеваға бүләк итергә күптән әҙерләп ҡуйғайным, шуны тапшырҙым. Дәүләт йыйылышының яңы саҡырылыштағы тәүге ултырышы 4 октябргә планлаштырылған икән. Әгәр үзгәреш булмаһа, тағы ла бер ай эшләйһе бар әле.

22 августа Әбйәлил яҡтарында булып ҡайттым. Унда һәләкәтле ташҡындар бик ҙур зыян килтергән: 21 күпер, бесәндәр, буралар ағып киткән, картуф баҡсалары эштән сыҡҡан һ.б. Халыҡтың берҙәмлеге, хакимиәттең эште һәйбәт ойоштороуы күп бәләләрҙән ҡотҡарып ҡалған. Бигерәк тә Яҡтыкүлдә хәлдәр бик хәүефле булған.

Үҙәк китапханала халыҡ менән осраштым, бик күп китаптарымды бүләк иттем, хәҙистәремде тараттым. Биш балалы Ишморатовтарға, өс балалы Мәхмүтоваға, сәсәниә Хәнифә Әбүбәкероваға һәр береһенә 30-ар мең аҡса бирҙем. Ҡулымдан килгәнсә ярҙамым булһын.

Халыҡтың рухы ныҡ. Бер йыл картуфһыҙ ҙа йәшәрбеҙ, тиҙәр. Хәнифә бик матур шиғырын уҡыны. Элекке уҡытыусы Зөһрә, КПРФ-тан депутатлыҡҡа дәғүә итеүсе Рәсүл Шөғөров һ.б. һәйбәт сығыш яһанылар.

Емерелгән күперҙәр тергеҙелер, берҙәмлегебеҙ емерелмәһен, рухи бәйләнештәребеҙ өҙөлмәһен. Эйе, бурҙан ҡала, уттан ҡалмай, тиҙәр. Дөрөҫ, әлбиттә. Әммә бәгзе бурҙар, бигерәк тә еребеҙҙе баҫып алыусылар, ил мөлкәтен урлаусылар хатта ут йәки һыу килтергән һәләкәттәрҙән дә яманыраҡ. Стихия бәләләренән һуң төҙәлеп була, ерең китһә, ил байлығы таланһа, уларҙы кире ҡайтарыуы йәки яңынан туплауы, ай-һай, бик ауыр, хатта йыш ҡына мөмкин дә түгел.

Мөхәммәт Ғәлләм. Әхлаҡ гүзәллектәре.

Шунан алынған өҙөктәр, Өфө, 2008:

Йәннәт әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтындалыр.

Өй һатып алғансы, күршеңдең ниндәй буласағын өйрән, юлға сыҡҡансы, юлдаш дуҫыңды өйрән.

Күршегә хеҙмәт итеү әсәгә хөрмәт итеү кеүек тейешлелер.

Өс төрлө күршелек хаҡы бар:

Беҙҙең диндә булмағандың бер хаҡы:

Күршелек хаҡы;

Мосолман күршенең ике хаҡы:

Ислам, күрше.

Ҡәрҙәш туған булған күршенең өс хаҡы: Ислам, күрше, нәҫел хаҡы бар.

Йөрәгендә бөртөк ҡәҙәр генә тәккәберлек булған йәннәткә кермәйәсәктер.

Әҙәм улы үлгәс, өс нәмәнән башҡа һәр хисабы киҫелер:

– Сауабы дауамлы саҙаҡалар ҡалдырыу;
– Донъяға һәм әхирәткә ярашлы ғилем ҡандырыу;
– Үҙҙәре өсөн доғалы һәм диндар балалар ҡалдырыу.

Ғилем ғибәҙәттән хәйерлерәктер.

Ике кешегә дәрәжәләр бирелер: берене – Аллаһтың биргән малдарын хаҡ юлда, тоғро юлда исраф иткән бай кешегә; икенсене – Аллаһ биргән ғилемен башҡаларға өйрәткән һәм араларында ғилми хөкөмдәр булған ғалимға.

Өммәтемдең ғалимдарын хөрмәт итегеҙ: улар Ер йөҙөнөң йондоҙҙарылыр.

Йә ғалим, йә уҡыусы, йә уларҙы тыңлаусы бул. Был өсәүҙән булмаһаң, һәләк булырһың.

Донъя әхирәттең майҙанылыр. Ул майҙанға ни сәсһәң, әхирәттә шуны урырһың.

Ғилеме булған – ғилеменән, малы булған – малынан саҙаҡа бирһендәр.

Берәү үлһә, фәрештәләр: "Нимә алып килде?" – тиерҙәр. Кешеләр: "Нимә ҡалдырҙы?" – тип һорарҙар.

21-дә ҡала уҡытыусыларының педсоветы Рус драма театрында үтте. Бөрөләге республика кәңәшмәһенә бара алмағайным, бынһында ҡатнашыуым һәйбәт булды.

5-дә Мәскәүҙән Фәриҙәнең апаһы Флүрә килде. 7-дә Наилдың йыллығына Мәкәштә йыйылдыҡ, Нәккәр апайым, Зөлхизә, Илфат менән Юлия килен, Рәфистәр, Искәндәрҙәр, Лена менән Илдар, Роза һ.б. булды. Дәүләкәндә Айрат кейәүҙән һарыҡ әҙерләткәйнем, шуның ҡорбан итен туғандарыма өләштем. 23-дә Нәккәр апайым менән Флүрә Ырымбурға китте. Унда ҡунаҡ булдылар, ауылға Зөлхизә саҡырып алды. Бөгөн Түлгәнгә киләләр.

28-дә Хөкүмәт ултырышы, ярты йылдағы эштәр тураһында һөйләшеү. Нисектер артыҡ һил, дөрөҫөрәге, көсөргәнешле һымаҡ. Шылт иткән дә тауыш юҡ, һис бер һорау биреүсе лә юҡ. Барыһы ла шып-шыма. Ике сәғәттән артыҡ барҙы, берәйһе йүткерһә-сөскөрһәсе! Тып-тын. Ғәҙәттәгесә йүткерә башламаһам ярар ине тип, тыйылып ултырҙым. Кадрҙар мәсьәләһе.

Ғәйбәт – радиоактив хәбәр.

Сирияла хәлдәр бик ҡатмарлы. Америка Асад хөкүмәтенә яла яғып, илгә һөжүм итмәксе. Бөгөн иртән ул һөжүм хаҡында бәлки әйтерҙәр ҙә. АҠШ хәҙер бөтөнләй бәйһеҙләнде.

Сталин һаман да беҙҙең илде наҡлай. Әгәр уның талабы буйынса атом бомбаһы – ядро ҡоралы эшләнмәгән булһа. Әгәр беҙҙә шул ҡурҡыныс көс булмаһа, Рәсәйҙе күптән тапап-изеп үтерҙәр ине.

Спартак Ильясов кейәүе Ханнанов менән килде. Унан һуң Ләлә апай Биишева булды. Кем менән генә һөйләшмә, һәр береһендә әллә күпме проблемалар. Кисен «Ант» төркөмөнән шылтыраталар: улар БДУ-ла урынлашҡан булғандар, әле ҡыуалар икән. Күпме мәсьәләләр утлы йомғаҡ булып төйнәлгән, сырмалып бөткән. Уларҙы тағатырлыҡ көс ҡайҙа?

Роберт Миңнуллиндың 65 йәше Илештә бик ҙур программа менән үтте. Республиканың «Халыҡтар дуҫлығы» орденын бирҙеләр, Дәүләт йыйылышынан Рафаэль Зиннуров ҡотланы, бүләкләне. Әле Роберттың яңы китабын презентациялайҙар икән. Уны Ҡоролтайҙың знагы менән бүләкләү тураһында ходатайство хатын һалғандар, беҙҙең комитет исеменән мин юлларға тейеш булам. Ә Татарстанда Робертҡа бер ниндәй орден да, знак та бирелмәгән. Уның үҙенең уңайһыҙ хәлдә ҡалыуы бар. Уйлап ҡараһаң, 65 йәш ниндәй юбилей булһын инде ул?!

2 сентябрь, 2013 йыл. Дүшәмбе.

Бишенсе көн тигәндә баҡсанан ҡайттыҡ. Яңы шиғырҙарҙы күсереүгә бик матур яңы дәфтәр башлайым. Шиғырҙарҙың теркәп ҡуйырлыҡ итеп эшләнеп бөткәндәре байтаҡ.

Шәмбе көн Дәүләкәндән Айраттар һуғылып китте. Ҡыҙҙарын уҡырға килтергәндәр, ятаҡҡа урынлаштырғандар.

Килешләй Чесноковка янындағы Загорскийҙан бер ящик ҡымыҙ алғайныҡ. Азамат Юлдашбаевты, Мөнир Ҡунафинды ҡатындары менән ҡымыҙ эсергә саҡырҙыҡ.

Фәриҙә ауырып алды. Вирус йөрөй. Бөгөн минең дә температура. Әммә иртәгә эшкә мотлаҡ барырға кәрәк.

Нәркәс Хөбөтдинованың авторефератын ҡарап ултырҙым. Докторлыҡ яҡлауында оппонент булырға тейешмен. Фольклор менән әҙәбиәт бәйләнештәре – был хаҡта үҙәктәге һәм республикаларҙағы ғалимдар ҙа, беҙҙекеләр ҙә бик күп яҙҙы. Нәркәс уларҙы ҡабатламай, үҙ ҡарашы, үҙенсәлекле күҙәтеүҙәре, һөҙөмтәләре бар. Баҫылған хеҙмәттәре лә тос.

Тема, әлбиттә, бик мөһим. Әҙәбиәт фольклор менән бәйләнештән башлана, әммә бөгөн халыҡ ижадындағы хазинаны файҙаланыу яңы фәлсәфәүи тәрәнлекте, ҡараш киңлеген, юғарылығын талап итә.

Мин белгән яҙыусыларҙан бөгөн иң бөйөк үрнәк – Сыңғыҙ Айтматов. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөйөк фольклорыбыҙ булһа ла, шунан илһамланып, шулар аша фекереңде нығыраҡ балҡытып яҙылған бөйөк әҫәрҙәр башҡорт әҙәбиәтендә бөгөнгә тиклем донъяға килмәгән. Ғөмүмән, был проблеманы тикшереүҙә уҙған осорҙар менән генә сикләнергә ярамай, бөгөнгө материалдан сығып өйрәнергә кәрәк. Беҙҙең ғалимдар алдында торған бик актуаль мәсьәлә был.

Йәшерәк саҡтарымда боронғо быуаттарҙа халҡыбыҙ нисегерәк йәшәне, шул тиклем һүҙ хазиналарын нисек ижад итте икән, тип баш

вата торғайным. Хәҙер киләсәк нығыраҡ хафаға һала, был байлыҡтар нисек һаҡланыр, тигән уй ныҡ борсой.

Радионан «бер алманы бишкә бүләйек» тип йырлайҙар. Ә мин уйлап ултырам: элек кеше ни тиклем ихлас, йомарт булған, был сифаттар йырҙа ғына һаҡланып ҡалған. Хәҙерге кеше былайыраҡ йырлаһа дөрөҫлөккә нығыраҡ тап килер һымаҡ:

Биш алма ла булһын минеке!
Уйлаған юҡ әле һинекен.

Быйыл юбилейға байтаҡ китаптар сыҡмаҡсы. Ике том көндәлектәрем ҡалын-ҡалын китаптар итеп бик матур баҫылды. «Ғилем»дә «На что способна литература?» тигән ҙур йыйынтыҡ буйынса эш бара. «Оноторлоҡ булдымы ни?» тигән исем менән Ҡазанда 2009 йылда донъя күргән китабымды шул уҡ форматта, биҙәлештә башҡортса әҙерләнем. Яңы шиғырҙар ҙа өҫтәлде. Әле «Ағиҙел»дең август һанында минең «Граждандарҙы ҡабул итеү көнөм» тигән поэмамды бирҙеләр. Вадим Богданов менән руссаһын да эшләнек. «Заметки депутата»ны ҡушып, бәләкәй генә брошюра итеп әҙерләнем. Иртәгә эшкә әлегә үҙем белмәгән нәшриәттән килергә тейештәр. Шуларға тапшырам. Ҡоролтайҙан киткәнсе депутаттарға тараткы килә.

Һин тыуғанда барыһы ҡыуанды,
Һин үлгәндә барыһы илап ҡалһын.

Һыуһындарың, беләм, һис тә ҡанмаҫ,
Башҡаларҙың ҡандыр һыуһынын.

Ел тик беҙҙә шулай наҙлап үҫә,
Гөл тик беҙҙә шулай балҡып үҫә,
Беҙҙең еләк шулай тулышып бешә,
Тик тыуған ер шулай иҫкә төшә.

Ҡала тынған.
Йорттарҙа ут һүнгән,
Ҡалмағандай донъя ҡоттары.
Янмай хатта урам уттары,

Осрай бары урам эттәре.
Кайҙа ғына барып һуғылайым?
Яңғыҙлыҡтан кемдәр ҡотҡарыр?

Тырышып-тырмашып йәшәмәне, тырнашып йәшәне.

5 сентябрь, 2013 йыл. Кесаҙна.

Артур бер айға Голландияға командировкаға китте. Һәйбәт барып еткән. Фәриҙәнең апаһы Флүрәне Нәккәр апайым Ырымбурға алып киткәйне. Һәйбәт ҡунаҡ булған, ауылға Зөлхизә янына ла барып килгәндәр. Шишәмбе Фәриҙә ҡаршы алды. Сәйәхәттән бик ҡәнәғәт ҡайтҡан.

Аксаков көндәрендәге сығыштарымды «Слово об Аксакове» тип туплап, «Ғилем»дә әҙерләнгән китабыма индергәйнем. Шуны Айҙар Хөсәйенов менән һөйләшеп, «Истоки»ға ебәрҙем. Аксаков көндәрендә донъя күреүе урынлы булыр, тип уйлайым.

Депутат яҙмаларын, «Граждандарҙы ҡабул итеү көнө» поэмаһын (ике телдә) бергә туплап, бәләкәй генә китап итеп баҫырға әҙерләгәйнем. Шуны кисә Азамат Юлдашбаевҡа бирҙем. Ул бер нәшриәт менән һөйләшкән.

«Бонус»та Мортаза Рәхимовтың интервьюһы сыҡҡан. Әлеге власҡа бик ҡаты һүҙҙәр әйтә. 2010 йылда яңы етәксегә 38 миллиард һум ирекле аҡса ҡалдырҙыҡ, әле «Урал» фондының хәйриә ярҙамы йыл һайын 5 млрд һум, ти. Был һандар бик зур көстәр тураһында һөйләй, әлбиттә. Тик ярҙам итергә рөхсәт юҡ, урындағы етәкселәр ҙә ярҙамды алырға ҡурҡалар, ти. Ике йыл һорағандан һуң ғына был фондҡа төп собор мәсетен төҙөп бөтөрөргә рөхсәт иткәндәр. Уныһы ла хөкүмәттең үҙенең хәле мөшкөллөктән, был эште үҙе аҙағына тиклем алып барып сығара алмаясағынан инде.

Алмашҡа килергә тейешле минең кандидатурам башҡа ине, Медведев менән дүрт сәғәт бәхәсләштек, ти. Бындай мәсьәләләр дүрт сәғәттә генә хәл ителмәй, уға кәмендә дүрт йыл әҙерләнергә кәрәк шул.

Күп мәсьәләләр буйынса Татарстандан артта ҡалыуыбыҙ хаҡында әйтә. Милеккә, күсәгилешлеккә бәйле тарихи мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса күршеләр юғарылығында була алмау элекке етәкселек заманынан килде бит.

«Башҡортостан»дың ике һанында Тамара Ғәниеваның «Система» тигән уйланыуҙары баҫылды. Публицистик мәҡәлә тиһәм, был

сығыш ул ҡалыпҡа һыймай һымаҡ. Ә бәлки публицистика нәҡ шулай булырға тейештер. Шағирәнең уйланыуҙары уйландыра. Шылтыратып ҡотларға кәрәк. Холҡо нисек кенә булһа ла, Тамара фекерле шәхес. Тәтәй һүҙ һөйләмәй, һыҙлана, уйлана. Ундайҙар беҙҙә бик аҙ.

19 сентябрь, 2013 йыл. Шаршамбы.

12-дә университетта Әхмәт Сөләймәновтың ҡыҙы Нәркәс Хөбөтдинованың әҙәбиәт һәм фольклор тураһындағы докторлыҡ диссертацияһын яҡлауҙа беренсе оппонент булдым. Тикшеренеү етди, баҫылған хеҙмәттәре лә бик тос. Һүҙ XIII–XIX быуаттарҙағы әҫәрҙәр тураһында бара. Әммә был өлкәлә эштәрҙе дауам итергә кәрәк. Бөгөнгө әҙәбиәттә материал бик күп. Бәйләнеш нескәрәк – төп иғтибар образдарҙың фәлсәфи тәрәнлегенә. Әлбиттә, беҙҙә «Урал батыр»ға тиң әҫәрҙәрҙе атауы ҡыйын. Гәрсә беҙҙең ғәжәп бай фольклорҙа яҙыусының әҫәрҙәренә бик тәрән, сағыу фәлсәфә өҫтәрлек образдар аҙмы ни? Әҙәбиәтебеҙ фольклорыбыҙға бәрәбәрме?

Бөгөнгө әҙәбиәттә әҙиптең фольклор образдарын, мотивтарын оҫта һәм зирәк балҡытыуҙың үрнәге – Сынғыҙ Айтматовтың бөйөк ижады. Уның әҫәрҙәре – XX быуаттың «Манас»ы тиергә мөмкин.

Һәр фольклор әҫәренең, әлбиттә, авторы, тәүге башланғысы булған. Эпосты һ.б. үрнәктәрҙе күмәкләп ултырып ижад итмәгәндәр бит. Исемдәре билдәһеҙ генийҙар, һүҙ сәнғәтенең титандары.

Сәсән – автор, сәсәндәр әйтеше – шағирҙар ярышы.

Хаин хандар хыянаты,
Мәкерҙәрҙең ыу-керҙәре.

Яумал – трофей.

3 октябрҙә бишенсе саҡырылыш Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтайҙың тәүге ултырышын 3 октябрҙә үткәреү тураһында Президент Указы сыҡты. Уға тиклем «Берҙәм Рәсәй» фракцияһында Толкачевты парламент рәисе итеп тәҡдим индергәйнеләр. Аҙна-ун көндән мин вольный казак! Был хаҡта күпме хыялландым. Тик яңы ритмға күсер алдынан нисектер сәйер кисерештәр менән йәшәйем. Иркенгә сыҡтым тип теҙгенде артыҡ бушатып ебәрмәмме?

Ваҡыттың хаҡы артҡандан-арта. Тик һаман да ҡәҙерен белеп еткермәйем.

Яңыса йәшәй башларға әле һуң түгел. Минеңсә, бер ҡасан да һуң түгел.

22 сентябрь, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

Юбилейға ваҡыт аҙ ҡалып килә, тик әлегә бер эш тә башлаған юҡ. Бик үткәрге килеп тә тормай. Шулай ҙа ниндәйҙер формала билдәләмәй булмаҫ. Башта ойоштороу комитеты төҙөргә кәрәк. 70 йәшкә әҙерләгәндәге һымаҡ спонсорҙар табыуы еңел булмаҫ, хатта мөмкин дә түгелдер, әлбиттә. Ул ваҡыттағы һымаҡ алыҫтарҙан ҡунаҡтар саҡырып булмаҫ.

Ҡөрьәнде яңынан уҡый башлағайным. Көндәрем-төндәрем дә, күңел дә бик тыныс ине. Был изге эш туҡтап ҡалды. Дауам итергә кәрәк.

Быуатҡа быуат өҫтәлә барған һайын ижадсыға ауырыраҡ. Йорт һалыу традицияһына нимәләрҙер өҫтәүе, уны яңыса үҙгәртеүе мөмкин дә түгел тиерлек. Бөйөк Пушкин рус шиғриәтенең аҫыл бинаһын һалған, бураһын да күтәргән, түбәһен дә япҡан, ишектәрен дә ҡуйған, тәҙрәләрен дә уйған. Әлбиттә, һәр ижадсы әҙәбиәттә, сәнғәттә һ.б. үҙ йортон төҙөй. Бер йорт икенсеһен ҡабатламай. Ләкин төп формалар бер төрлө бит, өр-яңыны өҫтәп ҡара! Бөйөктәрҙән һуң бөйөк булыуҙары, шул тиклем хазиналарға нимәлер өҫтәүе яңы быуын ижадсылары өсөн бик ҡатмарлы мәсьәлә.

Унан һуң яҙышыусылар (ижадсылар, яҙыусылар тимәйем) элек бөгөнгө һымаҡ күп булмаған бит. Хәҙер һан бик юғары, сифат түбән. Үҙнәшер менән күпме китап баҫыла. Бик һәйбәттәре аҙ, күпселеге урта ҡул. Ниндәйҙер дөйөм кимәл хасил булды: ысын оҫталыҡтың түгел, шымалыҡтың һөҙөмтәһе. Был хәл тәжрибәһеҙ уҡыусының башын бутай, тейешле зауыҡ тәрбиәләнмәй.

Яҙыусылар күп тә ул,
Ысын яҙыусылар аҙ.

Һан бар ҙа ул, сифат юҡ.

«Идея евразийства и башкирская литература» тигән мәҡәләмде яңынан ҡараным, тулыландырҙым. 27-дә беҙҙә Рәсәй яҙыусыларының күсмә ултырышы (пленум тип ебәрәләр, секретариат кимәлендә инде) була, унда сығыш яһарға тура килһә, ҡыҫҡартып һөйләрмен.

Ошо ығы-зығылар үткәс, шығырҙарҙы күсерәм, Динис тураһындағы мәҡәләгә тотонам. 2 октябрҙә беҙҙең депутат вазифалары тамамлана. Шунан һуң күберәк баҡсала йәшәргә тигән ниәт.

6 октябрь, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

2 октябрҙә һуңғы тапҡыр эштә булдым, Дәүләт йыйылышында. Сәғәт 11-ҙә БИРО-ла Зәйнәп Биишева фонды буйынса йыйылдыҡ. Һәйкәл ҡойғандар, алып ҡайтҡандар. Ул ҡуйыласаҡ парктың проекты бик матур. Тик мин үҙ өҫтөмә алған шифри китап буйынса эштәр дәррәү генә ҡуҙғалып китә алмай. Тик йәштәр генә булһа, шыйыҡ килеп сығасаҡ. Мин Хисмәттәрҙән, Рәйестәрҙән, Ҡол-Дәүләттәрҙән башлау яғындамын. Венир Ғәлимйән улы Аҙнағоловты күндерҙем, Лариса Абдуллина исемлекте лә төҙөгән. Тик Искәндәровтар договор төҙөргә ашыҡмай. Унһыҙ кешенең эше бушҡа китергә мөмкин. Шулай ҙа быйыл әҙерләп өҫтәлгә һалырға, киләһе йыл сығарырға кәрәк. Бәлки апайҙың тыуған көнөнә арналған осрашыуҙарға өлгөртөп булыр.

27-дә Рәсәй яҙыусылары союзы күсмә пленумында «Идеи евразийства и башкирская литература» тигән темаға сығыш яһаным. Яҙылған мәҡәләм бар ине, шуны ҡыҫҡартып һөйләнем. Һинең һүҙең берҙән-бер йүнле сығыш, тигән булалар. Әмир Әминев «Ағиҙел»гә һорап алды.

Күсмә пленум тип тамаҡ ярғандары күсмә секретариат кимәлендә лә булманы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Һүҙемде 55 йыл элек Өфөлә үткән оло ваҡиға – 1958 йылдың яҙында (мартта булһа кәрәк) яңы ойоштороло башлаған Рәсәй Яҙыусылар союзының ойоштороу пленумын, унда төрлө тарафтарҙан ниндәй оло яҙыусылар ҡатнашҡанлығын, беренсе курс студенты булараҡ миңә лә ошо осрашыуҙа ҡатнашырға насип иткәнен һөйләп башланым. Был пленумда Мостай Кәримдең «Күтәрелгән ҡояшҡа ҡарап» исемле атаҡлы доклады менән сығыш яһағаны, беҙҙең башҡа яҙыусыларҙың да төрлө жанрҙар буйынса телмәрҙәре тарихи ваҡиға ине, әлбиттә. Тимәк, Рәсәй яҙыусылар союзының ойоша башлауы беҙҙең Башҡортостанға килеп тоташа. Тарихсы булараҡ тарихҡа иғтибарлы булһа, Валерий Ганичев үҙенең үтә дөйөм инеш һүҙендә иң элек ошо хаҡта әйтергә тейеш ине.

Пленумға килгән ыбыр-сыбыр яҙыусылар араһында (уларҙы егермеләп тинеләр) Альберт Лихановтан башҡаларын (ул Аксаков премияһы лауреаты булды) халыҡ белмәй, исемдәрен телгә алыуҙың да мәғәнәһе юҡ.

Йоманан баҡсалабыҙ, шуға комитеттарҙың матбуғатта сыҡҡан исемлектәре менән таныша алмай ултырам.

Йома көн Артур ейәнем менән Комсомол урамы 122б йорттағы СМУК – Пресс типографияһынан «Путь утверждения добра» тигән 40 битлек брошюрамды (560 дана) барып алдыҡ. Унда русса депутат яҙмалары, «Граждандарҙы ҡабул итеү көнө» тигән поэмам ике телдә инде. Вадим Богданов тәржемә итте. Хаҡы 28 меңгә төштө, һәр данаһы 56 һум була, арзан түгел.

Ярар, иң мөһиме – биш йыл ярым депутат булыуымды ошондай үҙенсә хисап биреү менән йомғаҡланым. Халыҡҡа бүләк итеп таратасаҡмын.

Венир Ғәлимйән улы менән минең юбилейға спонсорҙар исемлеге төҙөгәйнек. Хәҙер ҡулда транспорт юҡ. Артур эштә. Йөрөп сығыуҙары еңел булмаясаҡ.

Артур бер ай Голландияла уҡыуҙа булды, бик ҡәнәғәт ҡайтҡан. Бельгияла, Францияла, Люксембургта ла булған. Машина биреп ҡуйғандар, Европаның иҫ киткес юлдары буйлап 2,5 мең км үттем, ти.

Среди башкир, как у других народов, были конокрады. Но конокрады не казнокрады, грехи конокрадов мизерны по сравнению с умонепостижимостью, умопомрачительным конокрадством самых высших государственных чиновников современной «цивилизованной» России.

Ат урлау егетлек һаналған, ҡыйыу ир-егет тураһында: «Уның менән ат урлап була», тигәндәр.

12 октябрь, 2013 йыл. Шәмбе.

Мостай ағай әйтмешләй, «Ямғыр ҙа ямғыр... Һары көҙ. Һағыш...» Мостай Кәримгә һәйкәл асҡан көндө лә шулай булды. 10 октябрҙә Профсоюздар йорто яныndағы майҙанда тантана үтте. Урыны һәйбәт, һәйкәл мөһабәт. Геройҙары, шиғри юлдары менән тотош композиция. Мостай Кәрим урамында Мостай Кәрим һәйкәле. Алыҫ түгел Мостай Кәрим исемендәге йәштәр театры. Өфөлә Мостай Кәрим исемендәге башҡорт гимназияһы...

Былар барыһы ла бер-береһе менән символик бәйләнештә бит. Мостай Кәрим урамы башҡорт әҙәбиәтендәге төп урамдарҙың береһе. Мостай Кәрим театры бер тамаша йортона ғына һыймай, ул ил, хатта аңлай-ҡәҙерләй белһәләр, донъя күләмендәге күренеш. Мостай Кәрим мәктәбе лә бер уҡыу йорто менән генә сикләнә алмай,

был ижад мәктәбен нисәмә быуын башҡорт шағирҙары, яҙыусылары, драматургтары, әҙәбиәт белгестәре үтте, үтә һәм үтәсәк.

Уйлап ҡараһаң, был оло яҙмыш, тәрән фекерҙәр һәм кисерештәр донъяһы күпме кешеләр өсөн тормош мәктәбе, рухи сынығыу һәм сафланыу иле бит.

Башҡортостандың халыҡ шағиры – ошо исемдә өс бөйөк мәғәнә бергә ҡушылған. Шағир һәләте булып та, Башҡортостаны булмаһа, яҙмышы халыҡ яҙмышы менән ҡушылмаһа, был юғары исемдең камиллығы емерелә. Шул уҡ талаптар Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы тигән дәрәжәгә ҡарата ла ҡуйылырға тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай принципиаль һәм ғәҙел талаптарға яуап бирмәгән яҙмалары менән ошо юғары исемде лайыҡһыҙ йөрөтөүселәр ҙә бар бит.

Мостай Кәримдең күп жанрлы ижады, фәлсәфи аҡылы ошо өс бөйөк сифаттарҙың иң аҫыл гармонияһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исемде иң хаҡлы яулаған шәхестәрҙең береһе ул.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә һәйкәл асыу байрамында Татарстандың халыҡ шағирҙары Ренат Харис менән Роберт Миңнуллин, Сыуашстандың халыҡ шағиры Валерий Турғай сығыш яһаны. Әммә Башҡортостандың халыҡ шағирҙарынан берәүгә лә һүҙ бирелмәне. Мәсхәрә! Ойоштороусыларҙың ахмаҡлығымы, етәкселәрҙең мәкерлегеме был? Мәкер тураһында нығыраҡ уйландыра.

Ҡунаҡтар илһамланып, һәйбәт һөйләнеләр. Шиғыр яҙып, алдан ныҡ әҙерләнеп килгәндәр. Тимәк, уларға күптән әйтеп ҡуйылған.

Башҡорт шағирҙары ла тейешле һүҙ әйтә алырҙар ине бит. Тик уларға был хаҡта бер нәмә лә әйтмәнеләр. Әйтерһең дә, башҡорт әҙәбиәте донъяла юҡ. Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәисе булып йөрөгән Тойғон да был эштә үҙенең принципиаль һүҙен республика етәкселегенә алдан уҡ еткерергә тейеш ине. Улар әллә бөтөнләй быҙау, әллә махсус рәүештә шулай эшләнеләр. Ғәрләнеп тағы ла ҡабатлайым: мәсхәрә!

Әйтәйек, Рәсүл Ғамзатовҡа һәйкәл асыу тантанаһында бер генә Дағстан шағиры ла шиғыр уҡымаһын ти – бындай хәл бер ваҡытта ла булмаясаҡ, әлбиттә. Йәки Сыңғыҙ Айтматов илендә, Ҡайсын Кулиев ерендә һ.б. кем бындай мәсхәрә эшкә, ошондай мәғәнәһеҙлеккә юл ҡуйыр ине? Юл ҡуйылһа, ундағы әҙиптәр ҡутарылып күтәрелер ине.

Башҡорт әҙәбиәте байрамы булманы был көн. Биткә төкөрҙөләр, шатлыҡҡа рәнйеү ҡушылды. Мостай ағай ҙа ҡәберендә, моғайын,

рәнйеп ятҡандыр, үҙенең тоғро шәкерттәрен ошо тантаналы көндә бөтөнләй һанға һуҡмауҙарына рухы хурланғандыр.

Быҫҡаҡ ямғыр. Сыҡмай яҙышып ҡына ултыр.
Ямғыр илай. Һибелә тәҙрәмә.
Битем буйлап йәшем тәгәрләй.

Гәрәй Рәхим биш томлығын бүләк итеп ҡалдырған. Уға тиклем Рауил Фәйзуллин алты томлығын, Роберт Миңнуллин ете томлығын бүләк иткәйне. Уларҙан һуң үҙенең ыҡсым ғына өс томын Рәдиф Ғаташ матур һүҙҙәр яҙып биргәйне. Күпме татар шағирҙары, әҙиптәре бөгөн уҡыусылары менән ошондай бәйләнештә йәшәй, ижадтарын ни тиклем тулы күрһәтә. Шуныһы бигерәк ғәжәп: ошо күп томлыҡтар, хатта Роберттың ете томлығы Татарстан китап нәшриәтендә бер йылда баҫылып сыҡҡан! Әлбиттә, авторҙарға бер юлы ошондай томдарҙы әҙерләү өсөн бик күп көс һалырға тура килгәнен китап менән булған ижадсылар ғына тулыһынса аңлай торғандыр. Ләкин иң ныҡ хайран иткәне – шағирҙың ете томы бер юлы бер йылда бер үк нәшриәттә баҫылып сыҡһын әле! Бындай ҡыуаныстарҙы беҙҙең нәшриәттә, беҙҙең әҙиптәр яҙмышында күҙ алдына ла килтерерлек түгел бит! Ғаташтыҡы һымаҡ ыҡсым ғына өс томдың донъя күреүе лә беҙҙә мөмкин түгел. Булһа ла, беҙҙең әҙәбиәтебеҙ тарихында бер генә тапҡыр булды. Мостай Кәримдең «Озон юл», «Долгая дорога», «Мгновения жизни» тигән өс матур йыйынтығы 2001 йылда шағирҙың 85 йәшенә бер юлы баҫылып сыҡты.

Уйлап ҡараһаң, пенсияға сыҡҡас та, дөрөҫөрәге, пенсионер йәшенә еткәс тә 15 йыл эшләйем. Ижад өсөн ваҡыт ҡыҫылды, әлбиттә. Ләкин яҙышыр өсөн йәшәү шарттары ла был йылдарҙа насар булманы бит. 1994 йылдан алып йәшәгән урыным Өфөнөң иң тыныс урындарынан. Ысынлап та, «Тәҙрәмде асһам, кәкүк саҡыра, тупһамдан сыҡһам, һандуғас һайрай». Эргәлә генә матур сквер, йөрөй торған юлдары таҙа санаторий, юл аша ғына мәктәп янында ғына майҙан – рәхәтләнеп атла, һелкен, балалар менән уйна. Подъезда ла тыныс, күршеләр һәйбәт.

15 йыл буйына транспорт проблемаһы булманы, бер заман хатта ике шофер, ике машинистка эшләне. Яҙғаныңды баҫтырып алдырыр өсөн компьютерҙар әҙер. Һөйләшәм тиһәң, ҡала телефоны ла, хөкүмәт номеры ла әҙер. Республика һәм район-ҡала етәкселәре менән бәйләнеш яҡшы, күбеһен яҡындан белдем. Ике эшемдән дә

етәксе буларағ байтағ сит илдәрҙә йөрөнөм, рәсми делегацияларҙа ҡатнаштым. Дәүләт йыйылышында эшләгәндә финанс яҡтарым да һәйбәтләнде. Уға тиклем ғилми институтта ла, Яҙыусылар союзында ла 43 йыл буйына меҫкен эш хаҡына хеҙмәт ителде бит!..

Яңы ритмдағы тормошҡа күсер алдынан бына шулар хаҡында уйланып ултырҙым әле. Әлегә яңы, тынысыраҡ ритмға күсеп китеп булмай. Юбилейға әҙерлек мәсьәләләре көсөргәнешлек тыуҙыра. Тейешле кимәлдә үткәрер өсөн ҙур сығымдар талап ителәсәк. Шул мәшәҡәттәр бер ҙә тынғы бирмәй.

Эштән киткәндән һуң артҡан бер хәстәр – шәхси транспорттың булмауы. Өлгөрөүе ҡыйын. Мин йәйәү йөрөргә яратам, нисәмә йылдар – егерме йыл самаһы – Новостройканан проспектта цирк туҡталышындағы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына йәйәү барҙым, йәйәү ҡайттым. Ғүмер буйһа, был ғәҙәтемде ташламам, юбилей үткәс, шулай йәшәй башлармын. Тик әлегә төрлө ойошмаларға йәйәү генә барып етеп булмай. Ярар әле редакцияларҙан егеттәр ярҙам итә, йыш ҡына Артур эште еңеләйтә.

Күҙгә күренеп, Ағиҙел тарая,
Күҙгә күренмәһә лә, күңел тарая.
Күңел ҡарая.

Ризыҡтарың, ерем, миңә яҙҙы,
Һуңғы һулышымды һуларға ла
Ошо ерҙә яҙһын яҙмышыма.
Ошо ерҙә күҙем асылған,
Ошо ерҙә телем асылған,
Ошо ерҙә күҙем йомолһон,
Телдән яҙырға ла яҙһын бында.
Ошо ерҙә тәүге аҙымым булған,
Һуңғы аҙымын булһын
Ошо ерҙә.

20 октябрь, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

18-дә Ҡазанға осоп барып, Рауил Фәйзуллиндың 70 йәшлек юбилей кисәһендә булып, кисә әйләнеп ҡайттым. Аэропорттан Артур баҡсаға килтерҙе. Фәриҙә менән Асҡар ҙа бар ине.

Кисәне дүрт артист бер-бер артлы шиғырҙарҙан өҙөктәр уҡыу менән башлап ебәрҙе. Күтәренке рухлы, көрәшкә саҡырыусы һүҙҙәр. Туҡай әйтмешләй, «әйҙә халыҡҡа хеҙмәткә, хеҙмәт эсендә йөҙмәккә» яңғырашындағы саҡырыуҙар, киҫәтеү-иҫкәртеүҙәр һ.б. Минеңсә, ошондай шиғри орандар менән башлап ебәреү урынлы булды, кисәнең дөйөм тональносын билдәләне.

Тәүге һүҙҙе Миңтимер Шәриф улы Шәймиев әйтте. Әҙәбиәтте яҡшы тойғаны, белгәне, юғары баһалағаны күренеп тора. Фәйзуллиндың ҡайһы бер шиғырҙарын күсереп алған, уҡып ишеттерҙе. Президент һауанан төшмәй, гел юлда, шуға килә алманы, тине. Президент менән кәңәшләшеп, юбилярға машина бүләк итергә булғандар. Сәхнәлә шуны раҫланы.

Татарстандың яңырыуында, яңы үҫеш бейеклегенә күтәрелеүендә Шәймиевтың тарихи хеҙмәттәре, юғары ҡаһарманлығы тураһында кисә алдынан Кремлдә экскурсияла йөрөгәндә ҡат-ҡат уйландым. Был яңырыу дәүерендә татар әҙиптәренең дә һүҙе тос һәм үтемле булды.

Ҡазан нығ матурланған. Кремлгә яҡын ғына ауыл хужалығы министрлығының бинаһын төҙөп ҡуйғандар. Ниндәйҙер таш коробка түгел, сәнғәт үрнәге. Бындай йорттар күп төҙөлгән.

Юбилей кисәһе опера һәм балет театрында барҙы. Театр тулы. Тамашасылар араһында бик олпат, абруйлы кешеләр күп күренә.

Тәнәфестә Шәймиев ҡабул итте. «303 хәҙис»емде бүләк иттем. Сығышым өсөн рәхмәт әйтте.

Беҙ сәхнәгә биш кеше бергә сыҡтыҡ: рәистәре Рәфис Ҡорбанов, төрөк әҙәбиәт белгесе Мостафа (татарса бик таҙа һөйләшә), мин, балҡар шағиры Моталип Беппаев, Мәскәүҙән Рауль Мирхәйҙәров. Сығышымды оҙаҡ уйлап йөрөгәйнем, элек Рауил Фәйзуллин тураһында мәҡәлә лә яҙғайным. Һәйбәт килеп сыҡҡандай булды, байтаҡ кешеләр аҙаҡ ҡулымды ҡыҫып ҡотланылар.

Рауил Фәйзуллиндың ижадын тәүге шиғырҙарынан уҡ белһәм дә, күрешеп танышыуыбыҙ ҡыҙыҡ ҡына килеп сыҡты. 1968 йылда Софияла үткән Бөтә донъя йәштәре һәм студенттары фестивалендә бер мәктәптә йәшәгәйнек, шунда танышҡайныҡ. Уға 25, миңә 30 йәш булған. Был осрашыуҙан һуң 45 йыл ғүмер үтеп киткән. Ҡайһы бер кешеләр 45 йылда ғына түгел, 45 көндә үҙенән биҙҙерә, күңелең һүрелә.

Был 45 йыл эсендә мин Рауил Фәйзуллиндың байтаҡ китаптарын уҡыным, былай ҙа йыш ҡына осраштыҡ. Уны нығыраҡ аңланым, хөрмәтем арта барҙы.

Һуңғы көндәрҙә мин ғәжәп бер донъяла сәйәхәт иттем – Рауил Фәйзуллиндың алты томын ҡараным. Башҡорттар татар китаптарын, татарҙар башҡорт китаптарын тәржемәсеһеҙ уҡый алыуҙары менән бәхетле. Аҙашымдың алты томлығында мин төшөнмәгән һүҙ ҙә осраманы. Һәр һүҙе аңлашыла, әммә уның ижад донъяһы минең өсөн тылсымлы бер сер булып ҡала.

Әҙәбиәт хаҡында һөйләгәндә йыш ҡына үҫеш ҡанундары – закономерности развития тураһында әйтәләр. Ҡанундарҙан бигерәк бәлки парадокстар тураһында нығыраҡ уйланырға кәрәктер. Һәр талант көтөлмәгәнсә, һәр талант үҙенсә парадокс. Бына ошондай парадокстарҙан, башта сәйер күренгән әҫәрҙәрҙән яңы ҡанундар тыуа, из парадоксов создается новая закономерность.

Рауил Фәйзуллин татар шиғриәтенә матбуғаттағы тәүге шиғырҙары менән парадокс булып килеп инде. 60–70-се йылдарҙа яңы көстәр тупланды. Туҡайҙар, Таҡташтар заманында булмаған яңырыу башланды һәм был үҙгәрештәрҙә үҙ быуыны менән бергә Рауил Фәйзуллин иң алдан барҙы.

Рауил Фәйзуллин үҙе һайлаған юғары маҡсаттарға ғүмере буйына – мәктәп йылдарынан уҡ тоғро шәхес. Ул бер генә сәғәтен дә бушҡа үткәрмәй, ижад юлынан бер генә аҙым да ситкә тайпылмай. Спорт менән шөғөлләнеүсе булараҡ тәне менән дә, ижадсы булараҡ йәне менән лә ул һәр саҡ формала. Буш менән булмай, ваҡытты әрәмгә үткәрмәй. Шуға уның ижады олпат, һүҙе лә, үҙе лә абруйлы. Ҡәләмдәштәренә лә, уҡыусыларына ла тәьсире көслө, әҙәбиәттең үҫешенә индергән өлөшө ҙур.

Тағы ла парадокстар тураһында. Рауил Фәйзуллин күнегелгән ҡалыптарҙы йыш емерҙе. Әммә бынан һуң харабалар барлыҡҡа килмәне, яңы камиллыҡ, яңы гармония тыуҙы. Башта ғәйре тәбиғи күренгән аҙаҡ тәбиғигә әйләнде, ҡануниәт боҙолманы, яңы ҡанундар өҫтәлде.

Рауил Фәйзуллин ижады тураһында һөйләгәндә уның яҙғандарының байтағын аҡ шиғыр тип нарыҡлайҙар. Әммә ниндәй матур һүҙҙәр – аҡ шиғыр, ирекле шиғыр! Шиғыр тик аҡ, тик яҡты булырға тейеш, уның ҡара булырға хоҡуғы юҡ. Шиғыр тик ирекле булырға тейеш, иреклеҙ шиғыр нисек ҡоласын йәйһен дә нисек бейеклектәр яулай алһын, киләсәккә нисек осһон?!

Аҡ шиғырҙың йөҙөнә ҡара яғырға күпме тырыштылар. Рауил Фәйзуллин аҡ шиғырҙың йөҙөн ағартты, ирекле шиғырға әҙәбиәттә

ул ирекле хоҡуҡ бирҙе. Ул аҡыл шағиры ғына түгел, тойғоларын теҙгенләп тота белеүсе аҡыллы шағир. Уның хистәре түгелеп-сәселеп китмәй, һүҙҙәр теҙмәһенә әйләнмәй, шағир иң ғашиҡ, иң кисерешле сағында ла башын юғалтмай. Аҡыллы хистәр, эмоциональ рационаллек.

Рауил Фәйзуллин уларҙың, йәғни Татарстандың, тәбиғәтендә тауҙар юҡлығына, ҡаялар юҡлығына көрһөнөп ҡуйғайны. Татар әҙәбиәтенең Туҡай һымаҡ тауҙары бар. Рауил Фәйзуллин бейеклеге бар. Тәбиғәттәге тауҙар үҫмәй. Эльбрус ниндәй бейеклектә булһа, шул көйө. Ирәмәлебеҙ шул көйө. Ә бына ижад бейеклеге ижадсыһы тере саҡта бейегәйгәндән-бейегәйә барырға мөмкин. Рауил Фәйзуллин бейеклеге шундайҙарҙан.

Элек шиғырҙарҙы ташҡа уйып яҙғандар. Башҡорт ауылдарын яндырған, кешеләрен ҡырған-киҫкән Тәфтиләү тураһында халҡыбыҙ «Ташҡайҙарға соҡоп, яҙҙым ҡарғыш, ейәндәрем уҡыр бер саҡта» тип йырлаған.

Ташҡа яҙыу традицияһы яңынан ҡайтһа, һыу буйы юлдар яҙылмаҫ ине, күпме ҡыҫҡа шиғырҙар авторы Рауил Фәйзуллингә еңелерәк булыр ине.

Беҙҙәге тарҡаулыҡ һәм көнсөллөк, татар шағирҙарының тупланып йәшәүе тураһында әсенеп уйландым. Кисәнең сценарийын Илфак Ибраһимов төҙөгән. Уңышлы Бишәү тураһындағы өлөш ныҡ иҫтә ҡалды. Сәхнәлә фоторәсем: Сибғәт Хәким менән бергә Рауил Фәйзуллин, Ренат Харис, Рәдиф Ғаташ, Гәрәй Рәхим, Рөстәм Миңлеғәлимов. Әле бик йәш сағтары. Рөстәм күптән ауырый, йөрөй алмай икән. Дүрт шағир әлеге рәсем фонында бик матур һөйләнеләр. Рауил Фәйзуллин көстәрҙең был бишәү менән генә сикләнмәүе тураһында әйтте, байтаҡ шағирҙарҙың исемдәрен атаны.

Рауил Фәйзуллин сәхнәлә ултырманы, өс-дүрт тапҡыр ғына күтәрелде. Шиғыр уҡыманы тиерлек. Йомғаҡлау һүҙен шиғыр менән бөтөрҙө.

Юбиляр һүҙҙәренә яҙылған бер нисә (3–4 микән?) йыр ҙа йырланды. Тик моң аҙыраҡ һымаҡ.

Бүлмәләге өҫтәлемдә (ҡунаҡханала) бер папка эсендә өс китап ята ине: русса шиғырҙар, мәҡәләләр-уйланыуҙар, 17 октябрҙә үткән ғилми конференция материалдары. Бына шулай алдан уйлап эшләргә кәрәк: кисәнән бер көн алда фәнии сара үтә, ә материалдар әҙерләп китап итеп баҫып сығарылған. Әллә күпме әҙиптәр, ғалимдар,

уҡыусылар, студенттар һ.б. Тимәк, был сараға әҙерлек әллә ҡасан башланған. Беҙҙә хатта Мостай Кәримдең юбилейҙарына арнап бындай эштәрҙең эшләнгәне булманы. Татар аҡылы төштән һуң тиҙәр. Башҡорт аҡылы эштән һуң, йәғни, эш үтеп киткәс...

Самолеттың Ҡазан менән Өфө араһында оса башлауы ниндәй һәйбәт: йома көн остом, шәмбе көн ҡайттым. Элеккесә нисәмә сәғәттәр буйына машинала һелкенәһе түгел.

Юбилейым яҡынайғандан – яҡыная, әммә кисә буйынса конкрет эшкә һаман тотона алмайым. Сценарийҙы гел үҙем төҙөйөм, әлегә схемаһы ла юҡ. Кисәләр бер-береһен ҡабатламаҫҡа тейеш. Бындай саралар күпме үткәрелде, хәҙер нығыраҡ ҡыйынлаша бара.

Иртәгәнән тотона башларға кәрәк. Ваҡыт әптән ҡыҫҡа.

30 октябрь, 2013 йыл. Шаршамбы.

26–27 октябрь тыуған яҡтарға барып әйләндек: Илгиз, Наташа, Фәриҙә, мин. Ырымбурҙа Юлайҙарға һуғылдыҡ, Нәккәр апайым да унда ине. Юлай ҡустымдың донъялары матур. Үҙенең ҡулы оҫта, Лена килен дә уңған.

Алисовала Рифат кейәүҙең йыллығын үткәрҙек. Зөлхизә бик күп туғандарҙы йыйған, илле кешенән артҡандыр. Ғафур (Ҡотломбәт), Әнүр (Ғәбдрәфиҡ), Фәрит Бикбаев (Претория, Ҡунаҡбай) хәҙрәттәр бер-бер артлы доға уҡынылар. Бик күптәр хәйер өләште.

Барғанда Переволоцк аша (500 км артыҡ), ҡайтҡанда Федоровка аша тураға үттек. 100 км-ҙан ашыу ҡыҫҡараҡ.

Тыуған яҡтарға ҡайтып, туғандар, яҡташтар менән осрашыу күңелле булһа ла, күңелһеҙләнер хәлдәр йылдан-йыл арта. Бергә үҫкән кешеләр, аралашҡан туғандар ҡартая. Йәштәр ҙә булды, әммә уларҙың донъяһы барыбер ятыраҡ, уртаҡ кисерештәр аҙ. Әммә уныһына түҙерлек тә бит, милли рухтың, туған телдең бөтә барыуына нисек ҡайғырмайһың. Башҡорт балалары ауылда русса һөйләшеп йөрөй, русса аралаша бит. Переволоцкий районында ни бары өс башҡорт ауылы, өсөһөндә лә мәсет асылды, мәсеттәрҙә йәш хәҙрәттәр, хажға барғандар, миңә туғандар. Мәсеттәрҙең асылыуы ҙур ҡыуаныс, әлбиттә. Рухи тормошобоҙҙағы матур үҙгәреш. Мәсеттәр асыла, әммә мәктәптәр ябыла. Минең тыуған, үҫкән ауылдарым Ҡунаҡбай менән Яңауылда (Ғәбдрәфиҡ) мәсет бар, мәктәп юҡ. Ҡотломбәттә мәсет бар, әммә һәйбәт эшләп килгән урта мәктәп һигеҙ йыллыҡҡа ҡалған, уныһының да киләсәге хәүефле. Балаларын ата-әсәләр беренсе кластан Степановкалағы рус мәктәбенә йөрөтөп уҡыта.

Мәктәп менән мәсет йәки сиркәү һ.б. – халыҡтың ике ҡанаты. Ғилем йорто һәм ғибәҙәтхана икеһе ике яҡтан кешенең зиһенен, күңелен, рухын яҡтырта. Беренсе белем бирә, икенсеһе – иман. Иманһыҙ белем, белемһеҙ инаныу – былар камиллыҡтың емерелеүе. Әлбиттә, ауылда мәктәп бөтһә лә, балалар күрше ауылда булһа ла белем аласаҡ. Ләкин күп осраҡта туған тел, милли рух юғаласаҡ. Меңәр йылдар буйы тупланған тел-моң хазинаһы юғала икән, уны дин менән генә тултырып булмаясаҡ. Рус телендә доғалар уҡыусы, теләктәр теләүсе башҡортто йәки татарҙы һ.б. мосолман халыҡтарын мин күҙ алдыма килтерә алмайым.

Яңы йәш быуындарҙың милли ерлектән, туған телдән ситләшеүе минең тыуған яҡтарымда ошо тиҙлектә барһа, беҙ үҫкән ауылдарҙа 20–30 йылдан башҡортса шиғри кисәләр үткәреп булмаясаҡ, театр тамашаларын ҡарай алмаясаҡтар. Өйҙәрҙә бәлки башҡорт китаптары (элеккеләр, әлбиттә) һаҡланып ҡалыр, ләкин ошо өйҙәрҙә йәшәүселәр уларҙы уҡый белмәйәсәк.

Табындың аҙағында ошолар хаҡында әсенеп һөйләнем. Үҙ дәүләтселегем бар тип йәшәгән Башҡортостанда был мәсьәләләрҙе хәл итеү йылдан-йыл ауырлаша барғанда республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәрем нимә генә эшләй алһын инде?!

Беҙ уҡытыу һәм тел мәсьәләләрендәге ауырлыҡтарҙа дәүләтте, хөкүмәтте, ҡанундар яҙыусыларҙы ғәйепләйбеҙ һәм һәр ваҡыт тиерлек дөрөҫ ғәйепләйбеҙ. Ләкин тел дәүләт теле кимәленә күтәрелә алһын өсөн ул иң элек ғаилә теле булырға тейеш.

Мәктәптәр ябылмаһын өсөн ауылдарҙа мәктәпте тултырырлыҡ балалар тыуырға тейеш. Эш эҙләп, йәштәр ситкә киткәндә балалар нисек артһын һуң? Бына шундай шайтан ҡуласаһында ҡамалып ҡалғанбыҙ.

Бөгөн Лилиә Ғүмәровала булдым. Юбилей тураһында уйлаштыҡ. Ҡазан тәьҫораттары, бер йылда Рауил Фәйзуллиндың алты томы, Роберт Миңнуллиндың ете томы, Туфан Миңнуллиндың ун томы сығыуы һ.б. тураһында һөйләнем. Мостай Кәрим янындағы мәсхәрә сценарийҙы хатта уның да үҙгәртә алмауын аңланым.

Кисә Пустовгаровта булғайным. Мөлкәт республика ҡулынан китеп бөткән тиерлек. Ниндәй ҡеүәтле Башҡортостан хәйерсе хәлендәге дотацион субъектҡа әйләнһен әле! Страм!

31 октябрь, 2013 йыл. Кесаҙна.

Башинформсвяздең генеральный директоры Сафеев Рөстәм Рузбәк улы ихлас ҡабул итте. «303 хәҙис»те, буклетымды бүләк ит-

тем. Буклеттағы фотоларҙы бергә ҡарап сыҡтыҡ. Хатты ҡалдырҙым. Минең юбилейҙы үткәреүгә мотлаҡ ярҙам итәсәкбеҙ, ти. Ғүмер булып, алдағы түңәрәк датаға барып етергә насип итһә, бындай хаттар менән йөрөмәйәсәкмен. Был юбилейҙы ла үткәрмәҫкә ине лә, дөрөҫ аңламаҫтар, тинеләр.

У землянки поспела земляника.

Услышав стон сегодняшней державы,
Перевернулся, наверно, в гробу Державин.

Ярлы ямана ла ҡыуана, ти торғайны инәйем беҙ бәләкәй саҡта кейем ямағанда. Бөгөн ярлылыҡҡа дусар ителгән, таланған, бөлгән ил бер ерен ямаһа, икенсе урында йыртылып сыға.

Тик һин эшләгән ерҙә төп эштәр эшләнә, ҡалғандары ваҡ һымаҡ тойола. Яҙыусылар союзында эшләгәндә донъяның үҙәге шул һымаҡ ине. Дәүләт йыйылышына күскәс, донъяның тотҡаһы шунда күскәндәй тойолдо, хатта ижад, әҙәбиәт мәсьәләләре лә ситкәрәк китте һымаҡ. Ниһайәт, әҙәбиәт донъяһына яңынан тулыһынса ҡайта башланым. Ошо донъяла, яҙмышымдың төп асылына әйләнгән ошо мөхиттә оҙағыраҡ йәшәп, күберәк эшләп ҡалырға ине.

Балалар өсөн шиғырҙар яҙғы килә. Ижад донъяһына аяҡ баҫҡанда улар яҙыла торғайны бит. Ниңә онотолдо? Әйләнеп ҡайтырға кәрәктер.

75 йәшемә еткәнемдә йәштәргә мин бик ҡарт тойоламындыр. Инде фронтовик шағирҙар беҙҙең өсөн ни тиклем оло, был донъянан ныҡ өлкәнәйеп киткән һымаҡтар ине бит. Хәҙер уйлап ҡараһаң, һис тә улай түгел икән. Ғилемдар Рамазанов 70 йәшендә, Шәриф Биҡҡол – 72, Хәким Ғиләжев – 74, Әхиәр Хәкимов 74 йәшендә вафат булған. Беҙ был ағайҙарҙан оҙағыраҡ йәшәгән булып сығабыҙ.

Ҡала транспортында йөрөйөм, ҡаланың күп яҡтарын үҙем өсөн яңынан асам. Ниндәй йорттар, ниндәй массивтар ҡалҡҡанын, элекке бер ҡатлы урамдарҙың Өфөнөң үҙәгендә бөтөнләй тиерлек ҡалмағанлығын машинала елдереп йөрөп абайлап та өлгөрмәгәнмен.

«Ағиҙел» журналының һандарын 1964 йылдан – ярты быуатҡа яҡын туплағанмын. Ялға сыҡҡас, эштәрҙән бушағас, тарихты байҡап, иҫтәлектәргә сумып ултырырмын тигән өмөт тә бар ине. Ул журналдарҙың һәр һаны ғүмерҙең бер өлөшө бит, күңелгә яҡын бит.

Яңынан барларға форсат ҡайҙа инде! Әле килгән яңы журналдарҙы уҡырға ла ваҡыт еткереп булмай!

Шулай ҙа «Ағизел»гә – төп журналыбыҙға бәйле бер уй тынғы бирмәй. Уның хәҙер 90 йыллыҡ тарихы бар. Меңдән ашыу һаны баҫылған. Шуларҙың йөкмәткеләрен теркәп, журналдың махсус һанын йәки айырым китап итеп сығарғанда, ни тиклем ҡиммәтле библиографик баҫма булыр ине! Редколлегия ултырышында был хаҡта мин бынан бер нисә йыл элек әйткәйнем. Ҡыҙыҡ тинеләр, әммә эш һүҙҙән уҙманы.

Был бик кәрәкле ҡулланманы әҙерләү өсөн айырым кешенең махсус ултырыуы кәрәкмәй, БДУ-ның, БДПУ-ның студенттарының курс һәм диплом эштәрендә лә бик уңышлы башҡарып була бит.

1 ноябрь, 2013 йыл. Йома.

Сәғәт төнгө берҙә уяндым. Йоҡо туйған һымаҡ. Кисәгә, ғилми советҡа видеоряд өсөн фотолар ҡараным. Етерлек. Фильмдан да кадрҙар һайларға, 70 йәшемдәге кисәне ҡарап сығырға кәрәк.

Көндәр һаман да йонсоу. Ҡояш һағындырҙы. Урманда япраҡ киҫеп йөрөр саҡ та бит, улар күпереп ятмай шул, ергә һылашҡан.

Өсөнсө көн санаторийҙың төрлө урындарында «Шоңҡар»ҙан Шамил тигән егет фотоға төшөрҙө, шифыр уҡығанымды яҙып алды. Көн болотло булды.

Азамат Юлдашбаев менән Мөнир Ҡунафин минең ижад буйынса интернетҡа нимәлер әҙерләй. Шуға кадрҙар кәрәк. Саҡырыу билетына ла рәсми портрет булмаған үҙенсәлекле фото бирергә ине.

Ҡапҡанан сығыуға TV көтөп тора. Мөнир Ҡунафин тураһында тапшырыу әҙерләйҙәр. Бик кәрәк, бик үҙенсәлекле, һәләтле прозаик булып, әҫәренән ныҡыраҡ асыла бара. Оло маҡсаттар менән ижад итһә, оло әҙип, күренеш булмаҡсы. Әҙерлекһеҙ булһа ла, һүҙ әйттем.

Хаин хандар, башҡорт илен
Ботарлаған заманда
Илбаҫарҙар ил-ырыуҙың
Алҡымынан алғанда,

Уңдан мәкер аңдығанда,
Һулдан бәлә бөргәндә,
Арттан баҫҡаҡ баҫтырғанда,
Алда өрәк өргәндә,

Тупланырға, ҡот табырға
Юлдар бикле булғанда,
Оңҡот-йоттар башҡорт йортон
Йотам тиеп торғанда,

Ил ҡиблаһын кем күрһәтер
Был ете юл сатында?
Оран һалып ил хаҡында,
Ярһып сапҡан сапҡындар.

Зирәк заттар – азаматтар
Йылдар аша күргәндәр.
Аҡ батшаға килгәндәр,
Урыҫҡа ҡул биргәндәр.

Олатайҙар вәғәҙә бирешеп, солох төҙөп, урыҫҡа ҡул һуҙған. Әммә урыҫ батшаһы күпме тапҡырҙар һүҙендә тормаған, солохто боҙған.

Батшаларҙа ниндәй холоҡ?
Боҙолған тағы солох.
Баш күтәргән башҡорт иле,
Гүйә, ярһыған солоҡ...

Руслашыу көндән-көн көсәйә. Рәсәйҙәге рус булмаған милләттәрҙең яңы быуынын нығыраҡ йота. Ни тиклем генә уҫал булһа ла, Кавказ да урыҫлаша. Беҙҙең быуындың әҙәбиәткә килгәненә ярты быуат. Ошо осорҙа әҙәбиәтебеҙ ни тиклем үҫте, уҡыусыларыбыҙ ҙа яңы рухи бейеклеккә күтәрелде, милли аңы үҫте. Әммә туған телдә уҡыусыларыбыҙ кәмегәндән-кәмей.

Ләкин рус милләтенең дә хәле бик мөшкөл, үҙ асылын һаҡлау мөмкинлектәре ҡыҫыла бара. Сит ил һүҙҙәре менән бөйөк рус теле сыбарлана. Урамдарҙан үтһәң, сит илдә барған һымаҡһың: русса яҙыуҙар юҡ тиерлек. Рус йыры, рус әҙибе TV-ла юҡ. Уҡытыуҙа көнбайыш ҡанундары баҫып алды, мәктәптәр емерелә. Илгә миллиондарса мигранттар ябырыла. Былай барһа, рус халҡы үҙенең милли асылын, рухын юғалтасаҡ. Тел бик ныҡ имгәнер, әммә һаҡланыр. Ошо зәғиф телдә һөйләшеүсе төрлө халыҡтарҙан уҡмашҡан бер

йәмғиәт барлыҡҡа килер, исеме лә бәлки Рәсәй булыр, әммә ул көнбайыштың меҫкен бер провинцияһына, сырье сығанағына әйләнер, халҡы ялсы-ҡол булыр. Глобализация тигән исем менән шундай донъя күләмендәге ғәҙелһеҙлектәр, ниндәй енәйәттәр эшләнер. Йә Хоҙай!

26 ноябрь, 2013 йыл. Шишәмбе.

Бисмиллаһи рахман рахим! Хәйерле булһын, был дәфтәрҙе иртәнге дүрттә башлап ебәрәм. Иҫән-һау тамамларға яҙһын.

Тулыһынса ялға сыҡҡас, ирекле казак булып йөрөрмөн тигәйнем дә, әлегә бер ҙә барып сыҡмай. Киреһенсә, эш элеккенән дә күберәк. Юбилей мәшәкәттәре менән сабам. Ысынлап та, йүгереп бик үк булмаһа ла, күп атлап йөрөргә тура килә: хәҙер ҡулда машина юҡ. Өлгөрөүе ҡыйын. Етмәһә, уң аяҡ ауырта башланы, элекке авария үҙен белгертә, ахыры. Ярай, йыш ҡына иртән Артурға ултырып барам.

Сценарийҙы үҙем яҙғайным, режиссер Салауат Итбаев менән яңынан ҡарайһы бар. Минең кисә буйынса мәҙәниәт министры урынбаҫары Ранис Алтынбаевта һөйләшеү булды. Бындай кимәлдә иғтибар эште еңеләйтер һымаҡ. Лилиә Ғүмәрова (вице-премьер) үҙенең һүҙен әйткәндер. Юғиһә, былай ғына ҡуҙғалып бармаҫтар ине. Филармония директоры Рәсүл Ҡарабулатов та был эштәргә ихлас ярҙам итә.

Юбилей килеп етмәҫ үк осрашыуҙар башланды ла инде. 13–15 ноябрь Азамат Юлдашбаев, Мөнир Кунафин, Фәриҙә Сибайҙа, Баймаҡта, Асҡарҙа йөрөп ҡайттыҡ. Бик матур осрашыуҙар үтте. Барған көндө Сибай институтында, педколледжда, театрҙа бик матур әҙәби-музыкаль кисәләр уҙҙы. Юлға иртәнге 6-ла сығырға тура килде.

Сибай хакимиәте башлығы Хәлит Хәмзә улы Сөләймәновҡа, урынбаҫары Илгиз Рәхимйән улы Хәйруллинға, мәҙәниәт етәксеһе Гөлназ Аҡназароваға ошо эштәрҙең уртаһында ҡайнап йөрөгән, уның төп инициаторы булған Хәйҙәр Тапаковҡа рәхмәт һүҙҙәрен әйтеп бөтөрлөк түгел. Баймаҡ етәксеһе Илшат Хәмит улы Ситдиков та, район китапханаһы мөдире Луиза Ҡаһарман ҡыҙы Дәүләтшина ла һәр ваҡыттағыса бик матур ойошторғандар.

Әбйәлил хакиме Сыңғызов Рим Һатыбал улы була алманы, ауыл хужалығы министры Исаев, килгән тинеләр. Шулай ҙа осрашыуҙы һәйбәт әҙерләгәндәр. Хакимиәттән Рәйлә ханымға рәхмәт.

Өс главаға ла рәхмәт хаттары ебәрҙем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлегә тиклем үҙҙәре менән һөйләшә алғаным юҡ.

12 ноябрҙә Миңлеғәли Нәҙерғоловтың 60 йәшенә арналған ғилми совет Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында бик ихлас үтте. Бик күп ҡотлауҙар. Аҙаҡ мәжлес. Икенсендә лә һүҙ әйттем. Халыҡ үҙенең тарихын тәрәнерәк өйрәнгән һайын үҙе лә юғарыраҡ күтәрелә, тинем. Миңлеғәли Нәҙерғолов нәҡ бына шундай изге эштәрҙе эшләүсе ғалимдарыбыҙҙың береһе. Ауыр саҡтарҙа ла башын эймәй, әммә баш күтәрмәйенсә эшләй.

Бер айҙан һуң, йәғни 12 декабрҙә, минең тыуған көнөмдә институтта минең ижад буйынса ғилми совет булырға тейеш. Бөгөн ошо хаҡта директор Ф.Ғ. Хисаметдинова менән һөйләшергә барам.

Урал аръяғындағы осрашыуҙарҙа Бабичтың:

Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур.
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр –

тигән һүҙҙәрен йыш ҡабатлайым. Сибай был яҡтарҙың үҙенсә берләштереүсе баш ҡалаһы, мәҙәни үҙәге. Бындай яуаплы бурысты үтәүе еңел түгел. Үҙенең институты, театры, филармонияһы, яҙыусылар ойошмаһы, махсус уҡыу йорттары һәм иң мөһиме – бик матур рухи традициялары бар был ҡаланың. Һуңғы йылдарҙа Сибай менән бәйләнештәрем күп булды. 70 йәшемдән һуң тәүге ижад кисәм ошонда үтте. Дәүләт йыйылышынан беҙҙең комитеттың күсмә ултырышын ошонда уҙғарҙыҡ. Аҙаҡ хужалар Арҡайымға алып барҙылар, тирмә ҡороп, һарыҡ һуйып, бишбармаҡ, ҡымыҙ менән ҡунаҡ иттеләр. Шул уҡ йәйҙә бындағы театрҙа минең «Хазина» спектаклен алҡышлап ҡараныларҙар. Бындай осрашыуҙар гел генә булып тормай, ғүмергә иҫтә ҡала.

Сибайҙағы сығышымда карьерҙы хәтерләнем, таусылар эшен шағирҙар, ижадсылар эше менән сағыштырҙым. Тәрәнерәк төшкән һайын хеҙмәт ҡатмарлыраҡ, тапҡандарың ҡиммәтерәк.

Сибайҙа таусылар тау байыҡтыралар, шағирҙар һүҙ байыҡтыралар. Таусылар мәғдәнде төрлө ҡатнашмаларҙан айыра, кәрәк металды туплап, байыҡтыра.

Шағир ҙа, башҡа ижадсылар ҙа һүҙҙәр араһынан иң кәрәклеләрен һайлап, уларҙы байыҡтыра, яңыса балҡыта.

Сибай институты бик боронғо юғары уҡыу йорттары менән сағыштырғанда күпкә йәш, хатта сабый ҡоронда тиергә мөмкин. Әммә ҡыҫҡа ғына арала күпме матур традициялар бында тыуып, нығынып өлгөргән. Бер генә уҡыу йорто алдында был тиклем һәйкәлдәр ҡаршы алмай. Ә бинаның эсе үҙе бер сәнғәт музейы, тарихи ҡомартҡылар һәм матурлыҡтар донъяһы. Быларҙың барыһы ла Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың эшмәкәрлегенән килә. Бер шәхес беҙҙең тормошобоҙға бына ни тиклем байлыҡ өҫтәй ала.

Сибай, Баймаҡ, Бикбай, Юлдашбай – юлыбыҙҙа байығандан байый барабыҙ.

Ҡаруанһарайҙағы атаҡлы уҡыу йортоноң төп өлөшө Темәскә күскән. Педтехникум – педучилище – педколледж. Исемдәре үҙгәрһә лә, изге вазифалары юғалмай.

Әбйәлилдәр мине биш йылға депутат итеп һайланы, ә мин ошо ергә ғүмерлеккә тамырландым. Әбйәлил биргән илһам һуңғы ике поэмамды тыуҙырҙы: «Хазина», «Граждандарҙы ҡабул итеү көнө», «Ҡарауылтау» шиғыры һ.б. Ике Асҡарым: ауыл һәм бүләм (правнугым).

Илде һаҡлар тик батырлыҡ,
Илде һаҡлар тик хаҡлыҡ.
Ҡырҡ ырыуҙың ҡырҡ быуынын
Ҡырҡка ҡырҡыр ҡуркаҡлыҡ,
Һатлыҡ менән ҡуркаҡлыҡ.

Юбилейҙар үткәс баҡсала яңы ритмға күсергә насип итһен ине.

Алтындар киткән, алтындар бөткән
Тик халҡым ҡалһын,
Халҡым бөтмәһен.

Һәр башҡорттоң шәжәрәһе Урал батырҙан башланырға тейеш.

Донъяның, шулай уҡ Башҡортостандың ете һ.б. мөғжизәләрен һанайҙар, иң күп тауыш йыйғанын билдәләйҙәр. Минең өсөн Башҡортостандың иң зур, иң төп, иң беренсе мөғжизәһе – башҡорт теле. Ошо мөғжизә бөтһә, ҡалғандары барыһы ла минең өсөн юҡҡа сыға.

Ирәндек битләүҙәрендә һерәйеп сығып торған таштар батырҙар зыяраты һымаҡ.

Һыҙланыу, болоҡһоу һ.б. – бындай мәлдәрҙең килеүенә кеше ғәҙәттә зарлана. Әммә улар тәбиғи кисерештәр бит. Бәхетһеҙлек булмаһа, бәхеттең ҡәҙерен белмәҫ инең. Тик был тормошто бәхетһеҙлек баҫып китмәһен.

Яңы, дөрөҫөрәге, баҫылмаған шиғырҙар бик күп йыйылған. Журналдарға тараттым, гәзиттәргә әҙерләйем. «Ашҡаҙар» радиоһы өс киҫәк яҙҙырҙы. 24-дә береһен бирҙеләр. Был тиклем шиғырҙар элеккесә үҙе бер йыйынтыҡ булыр ине, ләкин ундай китаптар хәҙер юҡ тиерлек. Улар аша шағирҙарҙың уңыштары һәм юғалтыуҙары нығыраҡ күренә торғайны.

Ҡыҙыулыҡтарын беҙ күҙ алдына ла килтерә алмаҫлыҡ күпме йондоҙ барыбер йыһанды йылыта алмай. Йондоҙ һымаҡ күпме даһи шәхестәр ҙә донъяны рухландырып, сафландырып бөтөрә алмай бит.

Уҡмашырҙай булып янған күпме йондоҙ иләүен ҡояш бер яңғыҙы балҡыны ла таң елдәрен өрҙөрөп һүндерҙе лә ҡуйҙы.

Аллаһыҙҙар заманы тиҙәр. Юҡ шул, кеше бөтөнләй инанмай йәшәй алмай. Заманында Ленинды алла урынына күргәндәр. Үҙенсә иман, ялған булһа ла, барыбер табыныу.

Бөгөн күптәр өсөн Аллаһ та юҡ, Ленин да юҡ. Күптәр бөтөнләй иманһыҙ һымаҡ. Әммә уларҙың иманы – нисек булһа ла – байыу. Уларҙың табынғаны – алтын. Борондан килгән «Золотой телец» бөгөн кеше күңелендәге күпме изгелекте һөҙөп сығара. Донъяға хужа булып алған.

Ҡыш малайы булып тыуғанмын. Ҡыш бабайына әйләндем.

Ҡатын-ҡыҙ йырлаған ил бәхетле, тиҙәр. Ә ҡатын-ҡыҙҙары шиғыр яҙған ил ниндәй? Ҡатын-ҡыҙ шиғырға тотонған икән, тимәк, халыҡтың яҙмышы тағы ла ҡатмарлыраҡ. Хәҙер ундай ижадсыларҙың исемдәре билдәле, элеккеләренең ҡайһы берҙәре легенда булып ҡына йәшәй, күпселеген бөтөнләй белмәйбеҙ.

Ирҙәр әйтеп бөтөрә алмағанды ҡатындар әйтә.

Бөйөк асыштар. Ҡайһы берҙәрен тик төштә күрәләр. Ләкин бөйөк төштәр Менделеев һымаҡ бөйөктәргә генә керә. Алма бик күптәрҙең башына өҙөлөп төшкәндер. Әммә бөйөк шәхес кенә башына алма төшкәндә бөйөк асыш яһай. Мин Ньютон һымаҡтарҙы әйтәм.

Нияз Мәжитовтың 80 йәшлек киҫәһенә бара алманым, үкенесле булды. Ғалимдың бәхете – асыштарҙа. Нияз Мәжитов ҡала аҫтында ҡала аҫҡан археолог. Төшөндә түгел, ҡара тирен түгеп.

Күп төрлөлөк. Хаҡлы кеше һин генә түгелһең. Тормош асылына тик бер генә юлдан килмәйҙәр.

30-сы йылдарҙағы культура революцияһы, наҙанлыҡты бөтөрөү. Хәҙерге яңы технологиялар, Интернет, компьютер һ.б. заманында күпселек халыҡ, бигерәк тә оло быуын наҙан. Бөгөн дә яңы ликбездар, яңы мәғариф революцияһы кәрәк.

Бабич яҙып алған йырҙар тарихынан «Шаһибәрәк». Халыҡтың рухи көсө, йыр-моңға мөкиббәнлеге ни тиклем тулы сағылған.

29 ноябрь, 2013 йыл. Йома.

Баҡсала бер айға яҡын булғаныбыҙ юҡ ине. Кисә Шамониноға Мөнир Ҡунафин алып ҡайтты. Стәрлетамаҡ театрында уның «Тыңлайыҡ ваҡыт аҡканын» («Раб божий предполагает») тигән пьесаһы буйынса премьера булды. Өфөнән күмәк барҙыҡ. Мөнирҙең интернат буйынса класташы Марат Замановтың машинаһында уның ҡатыны Лариса, Фәриҙә менән мин. Редакциялар машиналарында Ғиниәт Ҡунафин, Азамат Юлдашбаев, Артур Дәүләтбәков, Салауат Әбүзәров һ.б. Театрҙар йәмғиәте етәксеһе Әхтәм Абушахманов та килгәйне.

Пьеса бик етди. Төрлө ығы-зығыға, зауыҡһыҙ юморға, тамашасыны ҡытыҡлап көлдөрөргә маташыусы бөгөнгө сәхнә әҫәрҙәре араһында Мөнирҙең пьесаһы өр-яңы күренеш. Мөнирҙең интернат буйынса класташы режиссер Рөстәм Хәкимовтың табыштары ла спектаклде юғары кимәлгә күтәрҙе. Залда халыҡ күп ине, аяғүрә баҫып, бик оҙаҡ алҡышланылар.

Театр бинаһында иркен ресторан бар икән, шунда матур табын ҡорғандар. 20-ләп кеше ихлас һөйләшеп ултырҙыҡ, Мөнирҙе ҙур уңышы менән ҡотланыҡ.

Шул мәжлестәге һүҙемдә Маҡсүд Сөндөклө ағайҙы иҫкә төшөрҙөм. Ул Ҡазанда ҡунаҡта саҡта ҡалала Башҡорт академия театрының гастроле бара икән. Хужалар бер спектаклгә ҡунаҡты ла алып барғандар. Тамашанан һуң Маҡсүд Сөндөклө әйтә була: «Беҙҙең Өфөлә лә бик һәйбәт театр бар икән!»

Беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙәге байлыҡты белмәйбеҙ. Стәрлетамаҡ театрын был спектаклдән һуң үҙем өсөн яңыса астым: талантлы коллектив, талантлы етәкселәр. Художество етәксеһе Азат Йыһаншин театрға яңы ижади рух алып килгән. Директор булып Йәштәр театрының элекке директоры Ринат Ишмуллин эшләй башлаған.

Театр менән филармонияны ҡушыуҙары хәҙерге пессимистик оптимизацияның бер миҫалылыр бәлки. Әммә ижади традициялары, үҫеш потенциалы булған коллективтар бындай ҡушыуҙан юғалып ҡалмаҫ, тип уйлайым.

Ресторанға ингәс, сәғәткә ҡараһам, туғыҙ ҙа тулмаған. Баҡһаң, тамаша сәғәт ярым самаһы ғына барған икән. Ә миңә бик оҙаҡ ваҡыт үткән һымаҡ тойолғайны, сөнки тәнәфесеҙ ошо ҡыҫҡа ғына спектаклгә күпме тормошсан мәсьәләләр, уйланыуҙар һыйған. Пьеса фекерле, тығыҙ яҙылған. Режиссер ҙа уны бик динамикалы иткән.

Мөнир Ҡунафинды студент сағындағы шиғырҙарынан уҡ беләм. Һуңғы бер нисә йыл эсендә уның прозаик һәләте асылғандан-асыла бара. Беҙҙең прозаның үҫеш перспективаларын билдәләйәсәк автор.

Кисә Мөнир Ҡунафиндың драматург булараҡ тыуған көнөн күрҙек.

Талантһыҙҙы ҡат-ҡат асмайһың бит. Уның һәләтһеҙлеге бер танышыуҙан күренә, унан ҡабат йүнле нәмә көтәһе юҡ.

Ә бына талантты ҡат-ҡат асаһың, халыҡҡа ул яңынан-яңы фекер, кисерештәр ғәйрәте менән күренә. Талант быға тиклем билдәле булмаған утрауҙар һ.б. һымаҡ бер тапҡыр ғына асылмай. Уның тәрәнлеге һәм ҡоласы әҫәрҙән әҫәргә яңыса балҡый.

Табындағы һөйләшеүҙә тағы ла бер ваҡиғаны иҫкә төшөрҙөм. Туҡһанынсы йылдар башында халыҡ депутаттары съезында һүҙ мәҙәниәт тураһында бара икән. Культураға бик аҙ аҡса бүленә, кеше башына ун ете тин самаһы ғына тура килә, тиҙәр. Бер оратор сыға ла был турала һөйләү ҙә кәрәкмәй, беҙҙең мөһимерәк эштәребеҙ бар, ти. Бынан һуң Кугультинов һүҙ һорай, Горбачев уны трибунаға саҡыра. Давид Кугультинов зал буйлап ашыҡмай ғына атлай, трибунаға етә лә: «Бына күрәһегеҙме, ҡайһы берәүгә был ун ете тин дә барып етмәгән», – ти ҙә башҡа бер һүҙ әйтмәйенсә ғорур атлап ашыҡмай ғына урынына барып ултыра.

Даһиҙар шағирҙарҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалһалар икән дә бит! Ул сағында Ельцин да «Культура подождет!» тигән ахмаҡ һүҙҙәрен, бәлки, әйтмәҫ ине.

30 ноябрь, 2013 йыл. Шәмбе.

Ҡыш һуңлап килә. Кисә баҡсала тәүге ҡат ҡар көрәнем. Әле йылы менән һыуыҡ араһында. Иремәй генә ятһа ярар ине был ҡарҙар.

Көн ныҡ ҡыҫҡарҙы. Ҡараңғы төшкәнсе ҡар көрәнем дә урамға сыҡтым. Ундағы ел ишек алдында бик үк беленмәй икән. Көнъяҡтан иҫкән ел бик үк көслө түгел. Уны тыуған яҡтарымдың бер сәләме,

үҙенсә һулышы һымаҡ тойоп, битемде ҡуйып торҙом. Был ел бәлки минең Ырымбур далаларынан уҡ иҫәлер.

Тыуған яҡтарымдан елдәр иҫә,
Таңда юлға сыҡҡандыр ҙа
Әле төндә килеп еткәндер.

Көнъяҡтарҙан иҫкән бынау елдәр
Тыуған яҡтарымды үткәндер.
Иртә таңда юлға сыҡҡандыр ҙа
Әле төндә килеп еткәндер.

Елдәр туҡтап ял да итә алмай,
Туҡтанымы – елдәр юҡ була.
Елдәр туҡтай,
Ваҡыт туҡтай алмай,
Мәлде мәңгелеккә мәңге үрә,
Тик кешенең генә юлы тына.

Уйлап ҡараһаң, донъяларҙы иңләп ел үҙе ниндәй ғәләмәт даръя бит! Ҡоласы ни тиклем киң, сиктәрен билдәләүе лә ҡыйын.

Милли идея тураһында һүҙ ил күләмендә әленән-әле күтәрелеп тора. Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, булырбыҙ тигән ышаныс менән йәшәү, ереңә хужа булып, дәүләт булып берләшеү, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк, артыу кәрәк, артыу кәрәк тигән ынтылыш менән тормош ҡороу – беҙҙең өсөн бына ошолар милли идея түгелме ни?

Шаршамбы көн балалар менән фотосалонда булдыҡ, бик матур рәсемдәр килеп сыҡты. Асҡар менән Асель бер ҙә тик тормаған һымаҡ ине, фотоларҙа нур һибеп, балҡып ултыралар.

Азамат Юлдашбаевҡа рәхмәт, афишаға һәйбәт фото һайлаған. «Ватандаш»тың тышында (минең 70 йәшкә түгелме икән?) сыҡҡан был һүрәтте мин ниңәлер онотҡайным. Шул рәсем менән компьютерҙа һәр тигәнсә яҡшы афиша килеп сыҡты. Үҙе бик арзан. 60 дана эшләп бирҙеләр. Әлегә бәләкәй вариантта, ятаҡтар, ойошмалар өсөн бик тамам. Хәҙер бер унауҙы ҙур итеп эшләтеү юлын табырға кәрәк.

Кесаҙна көн газеталарға шиғри шәлкемдәр илттем, Әҙәби музейға күп итеп фотолар алып барҙым. Альмира менән ҡырҡтан артығын һайлап алдыҡ. Йәй көнө улар беҙҙең яҡтарҙа булғандар. Директор Моратова Гөлдәр Сабитовна шунда төшөрөп алған фотоларҙы

компьютерҙан күрһәтте: Буранғол, Юлтыйҙарҙың ауылдары, минең тыуған йорттоң урыны... Халыҡтың күңелен асып, йырлашып, бейешеп, матур осрашыуҙар үткәреп, бик изге сәфәрҙә йөрөп ҡайтҡандар. Рәхмәт был музей кешеләренә!

Улар өсөн күңелде һыҙландырған күренештәр ҙә күп булған, әлбиттә. Емерелеп бөтөп барған саман өйҙәр, Буранғол исемен йөрөткән, бинаһы һәйбәт булһа ла, ябылырға тейешле мәктәп. Күрше рус ауылында ла 17 уҡыусы икән, был башҡорт мәктәбендә лә 17 бала. Тик мотлаҡ рус ауылына күсерәләр мәктәпте.

Бына шул саҡтарҙа Башҡортостандың ҡәҙерен нығыраҡ аңлайһың. Республика тыуып үҫкәндәр, ошонда уҡығандар, ошонда йәшәгәндәр үҙ дәүләтеңдең булыуын бик үк баһалап етмәй. Минең «Илемдә илемде һағынам» тип яҙыуымдың бик һыҙландырғыс сәбәптәре тәрәндәрҙән килә бит.

Хәйер, Башҡортостаныбыҙ ҙа хәҙер республиканан ғәҙәти өлкәгә әйләнеп бара инде. Уны дәүләт итеп һаҡларлыҡ бер мөлкәт тә ҡалманы тиерлек. Бөтәһе лә приватизация һ.б. алдашыу юлдары менән үҙәк мөлкәтенә әйләнеп бөттө. Инде килеп милләтебеҙҙең яҙмыш – хәлдәрен дә шул көнгә ҡалдырмаҡсылар.

«ЛГ»ла (20–26.11.13) индустриализация тураһында бик фәһемле, үткер мәҡәлә. Алыпһатарҙарҙы, ҡырҡ тартмасыларҙы, кибетсе – лавочниктарҙы үрсетеп кенә Рәсәйҙең бөйөк держава тигән дәрәжәһен һаҡлап булмаясаҡ.

Баҙар экономикаһы идеялары Рәсәйҙең һ.б. илдәрҙең производство ҡеүәтен бөтөрөп, уны тарҡатыуға йүнәлтелгән. Глобализм берләштереүҙән дә бигерәк тарҡатыу, күпме илдәрҙең хеҙмәтен Америка хакимлегенә, уның ҡеүәтен үҫтереүгә ҡороу ул.

TV каналдарында яңылыҡтарҙы ғына ҡарайым, ҡалғанына ваҡыт та, теләк тә юҡ. Хәбәрҙәр бәрәкәттәр тураһында түгел, һәләкәттәр тураһындағы һүҙҙәрҙән башлана. Йәнәһе, именлек өсөн, халыҡты яҡлау өсөн көрәшәләр. Видимость работы, заботы о народе...

Хәҙер БСТ-ла ла иң ҡарар саҡта төрлө криминаль фильмдар бара, төнгө сәғәт өстә башҡорт спектаклдәрен күрһәтәләр. Ниңә уларҙың программалағы ваҡыттарын, урындарын алмаштыраҫҡа?

Түбәндәгерәк, вағыраҡ етәкселәрҙең өҫтә нимә әйтерҙәр тигән принцип менән, үҙен страховкалап йәшәүе. Страх порождает перестраховку. Юғарылағылар нимә әйтер тип ҡурҡалар. Иң юғарылағынан – Алланан ҡурҡыу юҡ, уны уйлау юҡ.

Хәсән Назар минең ижад тураһында «Халҡыбыҙ хаҡына» тигән бик йөкмәткеле, фекерле мәҡәлә яҙған, «Башҡортостан»ға биргән. Унда 12-дә бәлки разворот сығыр. Хәсән Назар тотонһа булдыра инде ул. Дамир Шәрәфетдинов менән һөйләштем. Был ялда руссаға тәржемә итермен, тине. Үҙем өлгөрә алмайым.

Бары менән байрам тип, ҡәнәғәт булып ҡына йәшәмәйек, әммә шөкөр итә лә беләйек. Булғанды ҡәҙерләйек, һаҡлайыҡ.

Күңелем бушап ҡалды, тиҙәр. Улай ғына түгел, минеңсә. Күңел төрлө ығы-зығынан, ваҡлыҡтарҙан арынған сағында бушап ҡалмай ул, яҡшылыҡ, яҡтылыҡ, матурлыҡ менән нығыраҡ тулыша.

Беҙҙә таланттарҙы ҡыҫҡартыу, рухты ҡыҫыу тураһында әйтмәйҙәр. Әммә мәктәптәрҙе ҡыҫҡартыу, донъяла абруй ҡазанған мәғариф системаһын емереү, ваҡыт һынауын үткән дәреслектәр урынына балаларҙың зиһенен имгәтеүгә йүнәлтелгән дәреслектәр индереү һ.б. – былар таланттарҙы ҡыҫҡартыу, илдең киләсәген билдәләйәсәк күпме һәләттәрҙе үлтереү түгелме ни?

Ҡағыҙҙарымды аҡтарғанда Учалынан 1999 йылда Хәтимә Әхмәҙуллина яҙған хаты килеп сыҡты. «Ҡояш улы, айҙың серҙәше» тип атала ул. Ниндәй аҡыллы уҡыусыларыбыҙ бар. Мин был һүҙҙәрҙе хат яҙыусының минең ижадым тураһында һоҡланып һөйләгәне өсөн генә әйтмәйем, әлбиттә. Ни тиклем киң ҡараш, юғары рух! Ошондай кешеләрҙең ҡәҙерен белергә, табып осрашырға, һөйләшергә, рәхмәттәр әйтергә тейешбеҙ ҙә бит, әллә ниндәй ҙур эштәр ҡырған кешеләй булып, быға ваҡыт тапмайбыҙ.

Рауль Мирхәйҙәров шылтырата. Ҡазанда Рауил Фәйзуллиндың 70 йәшендә осрашҡайныҡ, шунда банкеттан ҡунаҡханаға ҡайтышлай Мостай ағайҙарға, Ғамзаттарға бәйле ҡыҙыҡ хәлдәр тураһында һөйләгәйнем. Шуларҙы яҙып ебәр инде, иҫтәлектәр китабы әҙерләйем, шуға индерәм, ти. Дөрөҫөн әйткәндә, әллә ни яҙғы килмәй. Телдән һөйләп йөрөүе бер нәмә, ә китапҡа индереүе бик етди эш бит. Ундай китаптар ҙа бар.

Төҙөүсе – инженер Рауль Мирхәйҙәров ҡырҡ йәшендә профессиональ яҙыусылыҡ эшенә күсә. Шул осорҙан, йәғни 70–80 йылдарҙан китаптары баҫыла, ҡайһы берҙәре 15–20 тапҡыр. 5 мәртәбә төрлө нәшриәттәрҙә һайланма әҫәрҙәре баҫыла. Һуңғыһы биш томда Ҡазанда. Китаптарының дөйөм тиражы 5 млн. дананан артыҡ. Бына шулай маҡсатҡа ынтылып йәшәүселәр бар.

15 декабрь, 2013 йыл. Йәкшәмбе.

Сибайға барып әйләндек. Кисә иртән киткәйнек, бөгөн төшкә ҡайтып еттек. Юлға хәүефләнеп сығылғайны: шторм киҫәтеүе булһа ла, көн һәйбәт торҙо, юлда ауырлыҡтар тыуманы. Машина ла, шофер ҙа һәйбәт, Илшат Азамат улы Тажетдинов биргәйне.

Йылы, айы, көнө менән ҡорҙаштың булыуы бик һирәктәр өлөшөнә төшә. Баймаҡтан Азамат Әғзәм улы Тажетдинов минең нәҡ шундай ҡорҙаш. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ваҡытында үҙе килеп танышҡайны, паспортын күрһәтеп. Шунан бирле аралашабыҙ, әле 75 йәшлек байрамында булдыҡ. Бик ҙур тантанаға әйләнде байрам мәжлесе. Күп кеше саҡырылғайны, кәмендә 120 ҡунаҡ. Туғандары, яҡташтары, хеҙмәттәштәре, Өфөнән арҙаҡлы яҡтарштары. Сибай драма театры артисы Вәкил Йосопов етеҙ темпта дәртле алып барҙы. Миңә тәүгеләрҙән һүҙ бирҙеләр. Биш томымды бүләк иттем. Беҙ көнө, айы, йылы тура килгән ҡорҙаштар ғына түгел, беҙ фекерҙәштәр, уйҙаштар, юлдаштар тинем.

Баймаҡ ере башҡорт рухы иң нығ һаҡланып ҡалған төйәк. «Урал батыр» эпосы ерле юҡтан ғына ошонда яҙып алынмаған. Хәҙер бик һәйбәт эш – шәжәрәләрҙе барлау яҡшы традицияға әйләнде. Тамырҙар тураһында етеклерәк уйлаһаң, һәр башҡорттоң шәжәрәһе Урал батырҙан башлана.

Ҡасандыр барлыҡ башҡорт ерендә Баймаҡтағы һымаҡ милли рухлы, милли үҙаңлы, башҡорт телле милләттәштәрем йәшәгән бит. Шундай рухи потенциал булмаһа, ул тиклем һүҙ байлығы нисек тупланһын, гениаль эпостар меңәр йылдар элек тыуһын да беҙҙең көндәргә тиклем нисек һаҡланһын?

Азамат Тажетдинов бик абруйлы шәхес. Балалар бик яратҡан педагог булғанлығын уҡытыусылары бик һағынып хәтерләне. Журналист, тыуған яҡ тарихы, шәхестәре тураһында 8 китап яҙған. Яңы сыҡҡан туғызынсыһын яңы портфелгә һалып миңә бүләк итте. Улдары республикаға танылған кешеләр: Илшат премьер-министр урынбаҫары, Нур төҙөлөштә ҙур етәксе, Дәүләт йыйылышына һайланды. Рәис Түләк әйтмешләй, «Был – Баймаҡ йөмһүриәте, был – Баймаҡ ҡағанаты».

Юлдар йәшәтә, юлдар йәшәртә. Халыҡтың ололау, юғары баһалау һүҙҙәрен ишетеп, бурыстар тураһында нығыраҡ уйланаһың. Бер табында күпме сығыш яһаусыларҙы тыңлап, халҡымды тағы ла нығыраҡ аңлаған һымаҡ булдым. Нәҡ бер ай элек Сибайҙағы өс

осрашыуҙан һуң, Баймаҡтағы, Әбйәлилдәге берәр осрашыуҙан һуң был сәфәр тағы ла нығыраҡ ҡанатландырҙы.

12 декабрҙә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми советта, аҙаҡ шундағы ашханала әйтелгән һүҙҙәр, оло баһалар шулай уҡ ныҡ уйландырҙы.

Тыуған көнөн үҙе утыҙ йыл эшләгән институттың ғилми советында үткәргән башҡа ғалим беҙҙә, моғайын, юҡтыр ҙа әле.

Ике китабым сыҡты был юбилейым көндәрендә. «Оноторлоҡ булдымы ни»ҙең тиражы тулыһынса баҫылған. «Ғилем»дәге «Дастан о Башкортостане» тигән бик ҡалын йыйынтығымдың (600 биттән артыҡ) йоҡа тышлы ике данаһын һорап алдым. Рассылка өсөн ошолай йоҡа тышлы итеп баҫҡандар. Тираж ҡаты тышлы буласаҡ. Былар да ҡаты тышлы итеп баҫа алырҙар, баҫырға тейештәр ине, сөнки 30 меңдән ашыу өҫтәмә аҡса түләнде. Үҙҙәренең сметаһында был китапҡа 34 мең бүленгән. Тышлығына өҫтәлмә аҡса ла шул сама. «Самаларҙан ашҡан самалар».

Исемен «На что способна литература» тип ҡуйғайным, шулай уңышлыраҡ ине, уҡыусының иғтибарын исеме менән үк үҙенә йәлеп иттерер ине. Һағайҙылар, ахыры. Китапты асып ебәргән «Дастан о Башкортостане» тигән мәҡәләнең атамаһын тәкдим иттеләр. Минеңсә, былай атау ҙа һәйбәт һымаҡ. Ризалаштым.

Китаптың тиражы бик аҙ, 150 дана. Ә бына «Оноторлоҡ булдымы ни» 2 мең данала. Әле бер төргәген – 48 дана алып ҡайттым.

Нисек кенә булмаһын, юбилей йылында ике бик ҡалын том көндәлектәремдең, шулай уҡ йоҡа ғына йыйынтыҡ булып депутат яҙмаларының донъя күреүе, шуларға әле генә тағы ла ике китаптың өҫтәлеүе – былар әҙәбиәткә барлыҡ ғүмерен биргән кешенең дә яҙмышында хатта булмаҫтай бик һирәк хәлдәр. Ошондай ҡыуанысты етмеш йәшемә еткәндә лә кисергәйнем. Әммә 1964 йылда «Дала офоҡтары» тигән ус аяһындай ғына тәүге йыйынтығымды алғанда нығыраҡ шатланғайным шикелле. Ғүмер узған һайын бик ҙур бәхеттәр ҙә кесерәйеберәк күренгән һымаҡ. Ваҡиға булырлыҡ хәлдәр ҙә ғәҙәти һымаҡ.

9 декабрҙә Президентта булдым, кисәмә саҡырҙым. Ярҙамсыһы саҡырыуығыҙҙы канцелярия аша ғына еткерегеҙ тигәйне, улай килешмәйәсәк, тип, ышандырҙым, ахыры. Йәкшәмбе шылтырата, 12-лә көтәбеҙ, ти. Көтөп ултыра инем, 12 тулмаҫ борон саҡырҙылар. Рөстәм Зәки улы менән ярты сәғәтләп бик ихлас һөйләшеп ултырҙыҡ. Минең кисә үтәсәк көндө – 20 декабрҙә Баймаҡтың да 75 йыллығы икән.

Президент мотлаҡ ҡайтып етергә тырышырмын, тине. Уның ҡатнашыуы кисәмдең дәрәжәһен ныҡ күтәрер ине.

«Йәншишмә»лә Краснокама районы Яңы Бөртөк мәктәбенең VIII класс уҡыусыһы Айнур Ғәлиндең миңә асыҡ хаты баҫылған. Экология тураһында бик боролоп яҙа. Шундай шәхестәрҙең үҫеүе ҡыуандыра.

Ғәлиндең хатына, шулай уҡ Рәми Ғарипов исемендәге гимназия уҡыусыларының һорауҙарына яуаптар яҙҙым. Ҙур ғына булып китте, үҙе бер мәҡәлә – интервью. Фотолар менән бирмәкселәр. 7–8 декабрҙә яҙылды.

Юбилейыма бик фекерле мәҡәләләр сыға. «Башҡортостан»да Хәсән Назарҙың мәҡәләһен маҡтап уҡыу үҙенә лә, миңә лә бик күптәр шылтырата. «Истоки»ҙа Октябрь Валитовтың уйланыуҙары хаҡында ла юғары баһаларҙы уның үҙенә лә, миңә лә еткереүселәр байтаҡ. Тик исемен уйлап еткермәгән, бынан байтаҡ йылдар элек Алла Докучаева алған «Поднимаешься в горы, чтобы видеть дальше» тигән интервьюһының исемен үҙгәртмәй тиерлек алған.

«Йәшлек»тә Зәки Әлибаевтың мәҡәләһе баҫылды, «Ағизел»дә юбилейымды яңыса яҡтыртмаҡсы.

Әле беҙҙең әҙәбиәт секторында унлап танылған ир-егет ғалим эшләһә, хәҙер Миңлеғәли Нәҙерғолов бер үҙе тиерлек ҡалған.

Ирҙәргә тыныс, рәхәт,
Донъяны тота матриархат!

1 декабрҙә таңда йондоҙ иләүе балҡый ине.
Әле генә баҙлай ине йондоҙ иләүе,
Ни арала болот ҡаплап алған?
Күк белә тик ҡар иләүен.

Самодурҙың сама ҙур.

Барыһына түҙҙем, түҙҙем,
Иләк менән һыу һөҙҙөм.

2014

5 ғинуар, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Өсөнсө көн кис мәктәп янында һаya һулап йөрөйөм. Матур аяҙ кис. Күккә ҡарап, хайран ҡалдым: еп нәҙеклек кенә яңы тыуған ай.

Туҡтап-туҡтап, тағы ла ҡарап-ҡарап алам. Был матурлыҡты күптән күргәнем юҡ ине. Беҙҙән көнъяҡтағы бейек йорттар өҫтөндә тора. Өйҙәр артына йәшенмәһен тип, ҡайта һалып, йәш айҙы Фәриҙә менән Зөлхизәгә күрһәттем.

Мин үҙем дә әле ошо еп нәҙеклек кенә ай һымаҡ яңынан тыуған кеүекмен. Дәүләт йыйылышынан эштән киткәс тә иркен тормош башланыр тигәйнем дә, юбилей мәшәҡәттәре менән күп сабылды. Хәҙер быларын да үттем. Ысынлап та, үҙ-үҙемә хужа булып йәшәй башлармын һымаҡ. Кисәле-бөгөнлө генә ошо тойғоно кисереп кинәнәм. Юбилей, ҡунаҡтар, кисәләр, унан һуң яңы йылды ҡаршылауҙар – былар яуаплы ла, көсөргәнешле ритмдан сығармай тотоусан да. Улары ла артта ҡалды һымаҡ. Аллаға шөкөр, йырып сыҡтым.

«Башҡортостан бында башлана» тигән юбилей кисәм филармонияның ҙур залында 20 декабрҙә үтте, ҙур тантанаға әйләнде. Минең ижад өсөн генә түгел, барлыҡ әҙәбиәтебеҙ, рухиәтебеҙ өсөн үҙенсә ваҡиға, тантана тиһәм, моғайын, маһайыу булмаҫ һымаҡ. Миңә генә түгел, әҙәбиәткә баһа.

Республика етәкселеге исеменән Ғүмәрова Лилиә Салауат ҡыҙы (вице-премьер) ҡотланы, Президенттың сәләмләү хатын уҡыны, «Физаҡәр хеҙмәт өсөн» билдәһен тапшырҙы.

Дәүләт йыйылышынан элек мин эшләгән комитет етәксеһе Эльвира Ринат ҡыҙы Айытҡолова Толкачевтың ҡотлауы менән Ҡоролтайҙың миҙалын бирҙе. Өфө етәксеһе Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов, Дәүләкән хакиме Закир Гизелхаҡ улы Бикбулатов, Сибай хакимиәте урынбаҫары Илгиз Рәхимйән улы Хәйруллиндар бик ихлас теләктәр әйттеләр.

Мәскәүҙән Рәсәй Яҙыусылары союзынан Геннадий Ивановтың миңә Лермонтов исемендәге алтын миҙал биреүе, Дағстандан Магомед Ахмедовтың, Татарстандан Рауил Фәйзуллиндың ялҡынлы ла, аҡыллы сығыштары кисәмдең бәҙен бик ныҡ күтәрҙе.

Башҡортостан фәндәр академияһынан Мансур Әюпов, Ғиниәт Ҡунафин, академиктар Фәнил Фәйзуллин, Нияз Мәжитов, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтынан Айбулат Псәнчин, Миңлеғәли Нәҙерғолов ҡотланы. Нияз минең уға арналған «Өфө – 1, Өфө – 2» тигән шиғырымды уҡып ишеттерҙе.

Ҡәләмдәштәремдән Ҡәҙим Аралбаев, Ирек Кинйәбулатов, Хәсән Назар, Марсель Сәлимов, Салауат Әбүзәр, Зөфәр Вәлит, Азамат Юлдашбаев, Лариса Абдуллина мине ҡотлап шиғыр уҡынылар.

Яҡташтарымдың сығыштары үҙе бер кисә булырлыҡ. Ҡустыларым Ришат Вахитов «Әсәй, мине таңда уят әле», Рифат Вахитов «Өфө – Ырымбур юлдары» тигән йырҙарҙы йырланы, һеңлем Нәфисә Смакова шиғыр уҡыны. Ырымбур филармонияһында эшләүсе ауылдашым, Муса ағайҙың улы Кәрим Нартайлаков «Уралым»ды яңғыратты. Минең тыуған ауылым Ҡунаҡбайҙан сыҡҡан оло шәхес, шағир һәм ғалим Ғабдулла Амантайҙың ейәне, Башҡортостандың халыҡ артисы Рафаэль Амантаев башҡорт казактары бейеүен бик дәртле, оҫта башҡарып, үҙе үргән ҡамсыһын миңә бүләк итте. «Күрҙегеҙме бына нисек була Ырымбур башҡорттары!» тип, залға өндәшеп, яҡташтарыма рәхмәт әйттем.

Кисәлә хор капеллаһы, Вәхит Хызыров, Миңлеәхмәт Ғәйнетдинов, Рушан Биктимеров сығыш яһаны. Израилдән ҡайтып төшкән Фәрит Бикбулатовтың минең һүҙҙәргә үҙе яҙған йырҙы, бигерәк тә Рәсүл Ғамзатовтың «Торналар»ын йырлауы, Рәүилә Мәсәлимованың минең һүҙҙәргә Әминә Бикташева яҙған «Саҡ-Суҡ», «Иртән тороуҙарыма» тигән йырҙарын һәр ваҡыттағыса моңло тауышы менән халыҡты моңландырыуы, Өфө сәнғәт училищеһенең ҡурайсылар ансамбле, Рәми Ғарипов исемендәге гимназия уҡыусыларының бейеүҙәре – һанай башлаһаң, кисәне биҙәгән бындай мәлдәр күп булды һәм был таланттарҙың барыһына ла, рәхмәттәр әйтеп, баш эйәм. Режиссеры Салауат Итбаевҡа айырыуса ҙур рәхмәт.

Кисәлә бөгөнгө көндөң өр-яңы күренеше – минең ижад буйынса интернет аша үткәрелгән конкурста ҡатнашып еңеүселәрҙең ҡайһы берҙәренең сығыштары. Беренсе урынды алған Алина, өс игеҙәк ҡыҙ, экскаваторсы Юлдашбаев шиғыр уҡынылар. Был эшкә – хәҙерге әҙәбиәт һөйөүселәр менән өр-яңы бәйләнештә үҫтереүгә көс һалыусы Азамат Юлдашбаев менән Мөнир Ҡунафинға ҙур рәхмәт. Бындай бәйләнеш киләсәктә ныҡлы, матур традицияға әйләнергә тейеш тип уйлайым.

Бындай байрам ижадсы өсөн оло һынау, юбилярға ҙур имтихан ул. Уҡыусылар алдында эшләнгән эштәреңә үҙенсә хисап биреү, халыҡ менән бәйләнешеңде, үҙгәныңды, бөгөнгөңдө, киләсәк перспектива өсөн көсөңдө барлау ул. 75 йәшкә еткән кешегә ниндәй перспективалар тураһында һөйләргә тиеүҙәре лә бар. Ләкин йәшкә ҡарап ҡына ижад туҡтап ҡалырға тейеш түгелдер.

21 декабрҙә беҙҙең яндағы «Урал» ресторанында туғандарҙы, дуҫтарҙы йыйҙыҡ, алтмышлап кешелек мәжлес.

Юбилейҙа ҡунаҡтарым күп булды. Мин Ҡунаҡбайҙың ҡунаҡсыл Бикбайылыр, күрәһең.

Матбуғатта минең ижад тураһында байтаҡ яҙҙылар. Ҡайһы бер гәзиттәрҙе әйткәйнем. «Ағиҙел» материалдарҙы бик үҙенсәлекле ойоштороҙо. «Ватандаш» мәҡәләмде лә, шиғырҙарымды ла бирҙе. «Шоңҡар», «Башҡортостан ҡыҙы» шәлкемдәремде баҫты. «Йәншишмә»лә миңә яҙылған хатҡа һәм бирелгән һорауҙарға яуаптар үҙенсә ҙур ғына интервьюға әйләнеп китте. Әле яңынан уҡып сыҡтым: фекерле, актуаль. Балалар менән һөйләшеүем һәйбәт.

Юбилей алдынан Конституцияның 20 йыллығына арналған ғилми конференцияла (Дәүләт йыйылышы үткәрҙе, Президент сығыш яһаны) ҡатнаштым, һүҙ әйттем. Күптәр һәйбәт телмәр тоттоң тип ҡотланы.

Иртәнге «Сәләм» тапшырыуында ҡатнаштым. Телефон аша һорауҙар бирҙеләр. Нисек барыһына ла өлгөрәһегеҙ тигән һорауға яратҡан эшкә ваҡытты еткереп була, мин ғүмерем буйы яратҡан эшем – ижад, әҙәбиәт менән булдым, тинем. Ысынлап та, шулай бит. Һине үҙенә тартып торған эшкә көс тә, ваҡыт та етә.

Мин тыуған көнөмдө, бигерәк тә юбилейҙың еткәнен һуңғы сирек быуатта хафаланып көтәм. Сәбәптәре лә бик етди бит:

– 50 йәшем алдынан Әрмәнстанда ер тетрәп, бөтә илде шаңғытты. Бындай фажиғәнең илгә килгәне юҡ ине;

– 60 йәшем алдынан дефолт тигән бәлә халыҡты ҡыра һуҡты;

– 70 йәшем алдынан донъя кризисы илдәрҙе дер ҡалтыратты.

Етмеш биш йәшемдә нимәләр булыр? Аллаға шөкөр, иҫән-аман килеп еттем. Дуҫтарым, туғандарым янымда. Асҡар бүләм менән Әсил бүләсәрем йүгереп йөрөй. Юбилейға биш китабым сыҡты. Байтаҡ ойошмалар спонсор ярҙамы күрһәтте. Хеҙмәтемде республика етәкселеге лә, йәмәғәтселек тә юғары баһаланы. Төрлө тарафтарҙан ҡунаҡтарым йыйылды. Ғилми совет та, юбилей кисәһе лә, ҙур-ҙур табындар ҙа һыйлы-йырлы булды. Былар барыһы ла бәхет түгелме ни? Йәшерәк саҡтарҙа быларҙың ҡәҙерен бик үк белеп тә еткермәйһең. Бөгөнгө йәшемдә былар барыһы ла бик ҡәҙерле. Тик элек айырым-айырым булған ҡыйынлыҡтар хәҙер барыһы ла бергә килеп сейәләнә һымаҡ.

19 ғинуар, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Юбилей тантаналарынан һәм ығы-зығылы мәшәҡәттәренән һуң бына бер ай ваҡыт та үтеп бара. Оҙайлы каникулдар барыбер эш рит-

мынан сығара. Миңә хәҙер эш ритмы тураһында һөйләүе, бәлки, урынһыҙзыр. Ләкин пенсияға сыҡтым тип, бөтөнләй туғарылып булмаясаҡ. Ул саҡта тормош ваҡланасаҡ, оло маҡсатһыҙ йәшәү башланасаҡ. Ундай һүлпәнлек минең өсөн түгел. Шулай ҙа әле минең иң азат сағым һымаҡ. Студент сағымдағы һымаҡ уҡ булмаһа ла...

«Ғилем» нәшриәтенән Артур менән «Дастан о Башҡортостане» тигән китабымды барып алдыҡ. Бик олпат килеп сыҡты, 620 бит, 34 табаҡҡа яҡын. Тик тиражы бәләкәй – 150 экземпляр. Уның да 30 дананан артығы рассылкаға. Йоҡа тышта сығарыу ҡаралғайны, өҫтәмә 30 меңдән артыҡ түләп, ҡаты тышлы иттем. Хәҙер капитальный баҫма.

Азамат Юлдашбаев менән Мөнир Ҡунафин ҡатындары менән иҫкесә яңы йылды ҡаршы алырға Шамониоға килделәр. Дастанға тәүге автографтарымды уларға яҙзым.

«Оноторлоҡ булдымы ни?»зең полиграф комбинатта 2000 экземпляр тиражы әҙер. «Китап»тың директоры Илһам Миңлеғәли улы менән һөйләшеп, 10 төргәген (480 дана) шундағы магазинға һатыуға тапшырҙым. Хаҡы 50 һум, шуның 15 һумы магазинға. Таралыр тип уйлайым. Инде Ленин урамындағы китап магазины менән дә һөйләшәм.

Ҡоролтайҙа эш артынан сабып, үҙебеҙҙә сыҡҡан байтаҡ нәмә уҡылмай ҡалған. Шуларҙы яйлап булһа ла ҡарайым. Ғәбит Садиҡов ағайҙың башҡортса «Аҡыл ынйылары» (2009), русса «Афоризмы» (2008) китаптарын диагональ буйынса булһа ла уҡыным. Бындай тапҡыр телле аҡыл эйәһе башҡорт әҙәбиәтендә бик уникаль, тиңдәше булмаған күренеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тейешенсә баһаланманы. Мин Ғәбит ағайҙың афоризмдарын тәүге баҫмаларын уҡ юғары баһалаһам да, үҙ һүҙемде матбуғатта авторы иҫән саҡта әйтеп өлгөрмәнем. Уның ижад донъяһына бер байҡау яһарға ине.

Ғайса Хөсәйеновтың «Литература и наука» (1998), уның 75 йәшенә арналған «Башкироведение» (2004) тигән мәҡәләләр йыйынтығын ҡарап сыҡтым. Икеһендә лә минең баш һүҙ. Беҙҙә яһалма академиктар ҙа бар. Ғайса Хөсәйенов үҙ мәктәбен булдырған ысын ғалим. Шәкерттәре Башҡортостандағы күпме юғары уҡыу йорттарында эшләй. Миңә уның тәүге аспиранты булырға насип итте. Ул ваҡытта миңә 24, ә остазыма ни бары 34 йәш булған.

Әгәр беҙҙәге уҡытыу системаһы башҡасараҡ ҡоролһа, ағай сит телдәрҙе лә төплө белһә, уның фәнни офоҡтары күпкә киңерәк булыр ине, әлбиттә.

«Башкироведение»ла ҡыҙыҡлы материалдар бар. Хатта Д. Тикеевтың Рауил Бикбаев шиғриәтендә төҫтәр балҡышы һәм биҙәктәр сағылышы» тигән мәҡәләһен күреп, ғәжәпләнеп тә ҡуйҙым. Уны быға тиклем журналда күргәнем бар ине, әле етди ғилми йыйынтыҡҡа ингән. Тик быларҙы ентекләп яҙған Данис бик иртә китеп барҙы.

Ошо китапҡа ингән «Башҡорт һәм һинд мифологияларындағы уртаҡ мотивтарға ҡарата» тигән төплө мәҡәләнең авторы, Фәриҙәнең мәктәптә уҡытҡан уҡыусыһы, бик талантлы ғалим Рөстәм Рәжәпов яңыраҡ 42 йәшендә генә вафат булған. Үҙен-үҙе һаҡламаны шул, ҙур ғалим булырға тейеш ине.

Ҡайһы саҡта үҙеңдең элек яҙғандарыңды уҡыуы ла ҡыҙыҡ була. Уйландыра.

Лариса Абдуллинаның «Йөрәк аҡылы» (2011) тигән автограф яҙып биргән китабын да ентекләп уҡый алмағайным. Бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙә, сәнғәттә, ғилемдә бик үҙенсәлекле шәхестәр тураһында мәғлүмәттәргә бай был китап. Күптәрен яҡшы белгән кеүек булһам да, уларҙың күп яҡтарын үҙем өсөн яңыса астым. Ларисаның был китабы шулай уҡ тейешенсә баһаланманы. Булғанды күрә, ҡәҙерләй белмәйбеҙ.

Азат Йыһаншин тураһындағы мәҡәләлә: «һәр ваҡыт әйтәбеҙ: сәхнә залдан өҫтәрәк тора!» Бик урынлы һүҙҙәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, сәхнә гел генә залдан өҫтәрәк тормай, тамашасыны юғарылыҡҡа, яңы яҡтылыҡҡа әйҙәмәй шул. Киреһенсә, бик күп әҫәрҙәр тамашасының ҡарашын тормош ығы-зығыһы менән томалай, түбәнгә, батҡаҡҡа, наҙлыҡҡа, ваҡсылыҡҡа, зауыҡһыҙлыҡҡа һөйрәй.

20 ғинуар, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Лариса Абдуллинаның «Йөрәк аҡылы» тигән китабын уҡығанда быға тиклем белгән шәхестәрҙе үҙем өсөн тулыраҡ күрҙем, ҡайһы берҙәрен тәүге тапҡыр астым тиергә була. Автор бик һәйбәт эш башҡарған. Уның Башҡортостан тураһында бик үҙенсәлекле китап яҙырлыҡ ижади һәләте бар тип уйлап ҡуйҙым. Безгә Рәсүл Ғамзатовтың «Мой Дагестан»ы һымағыраҡ әҫәр кәрәк.

Был китапты уҡығас тыуған тағы ла бер фекер: ниңә уларҙы бер серия итеп «Бельские просторы» журналында баҫмаҫҡа?

Уны руссаға Лариса үҙе тәржемә итә алыр, аҙаҡ Светлана Чураева ярҙам итер ине. Юғиһә был журналда – Башҡортостанда Хөкүмәтебеҙ аҡсаһына сыҡҡан баҫмала башҡорт рухы бөтөнләй тойолмай бит.

Был турала һөйләшергә кәрәк.

Тромбы шартлап, 8 ғинуарҙа Тойғон вафат булған. Уның рәис булыуына ике йыл да үтмәне – Яҙыусылар союзы бик ауыр хәлгә килеп терәлде. Ижад мәсьәләләре онотолдо, ойошма турагентствоға әйләнде тиерлек. Союздың былай ҙа аҙ бюджеты сәфәрҙәргә исраф ителде, ойошма муйындан бурыҫҡа батты.

Хәҙер рәис урынына ынтылыусылар сыр-сыу килә. Әммә лайыҡлы ғына кешеһен табыуы ҡыйын. Мине лә өгөтләүселәр күп, әммә бер ҙә аяғым тартмай. Ижад эше менән генә ултырғым килә.

27 ғинуар, 2014 йыл. Дүшәмбе.

25-дә академтеатрҙа Салауат Әбүҙәрҙең «Хыялый»ын ҡараныҡ. Күптән йыйына инек, ниһайәт барҙыҡ. Салауаттың яңы сифатта асылыуына ҡыуандым. Тамашасыларҙың зал тултырып килеүенә ҡыуандым. Пьесаны халыҡ яратып ҡараясаҡ. Режиссерҙың да (Йәнбәков) һәләте күренеп тора. Уның бик иртә вафат булыуы бик ҡыҙғаныс.

Дәүләт йыйылышында минең кабинеттағы шкафтарҙа ете төргәк хәҙистәрем тороп ҡалған. Алия шылтыратып әйткәйне, бик шатлыҡлы хәбәр булды. Хәҙистәр бөтә инде тип бик самалап ҡына тарата инем. Хәҙер бер нисә төргәген һатыуға сығарырға кәрәк, әйҙә халыҡҡа таралһын. Яратып уҡыйҙар.

Бөгөн Артур менән инеп алдыҡ.

БДУ-ның хоҡуҡ институтында Альбиналарҙың ҡыҙы Алина ситтән тороп уҡый. Әле имтихан ваҡытында уҡытыусылары 25 мең һум (һәр береһенән!) күҙен дә йоммай, турана-тура һорай икән. Хоҡуҡ белгестәре әҙерләнгән уҡыу йортонда! Етәкселәре был хаҡта белмәйме икән ни? Студенттар үҙҙәре ниңә өндәшмәй?

Права и правила. Кешеләрҙең бер-береһенә биргән мөмкинлектәре һәм ҡуйған талаптары. Правосудие Бога.

Бер-беребеҙҙе юкһынайыҡ,
Бер-беребеҙҙән бүкмәйек.

Ирек Кинйәбулатов тере саҡта үлгәндәр бәхетле. Ул, исмаһам, арнап шиғыр яҙа.

Юлдарҙа боҙ ине,
Офоҡтар – ҡараңғы.

Яҡтырттың донъямды,
Яңырттың ярамды.

Юғарылыҡҡа ынтылыу һәйбәт. Әммә юғарыға ынтылыу, унда күтәрелгәндә лә, унда артыҡ оҙаҡ ҡалырға ярамай.

Артыҡ бейектә һәм артыҡ түбәндә.

Салауат Әбүзәр үҙенең «Хыялый»ын лирик комедия тип ҡуйған. Мин «моңһоу комедия» тип атар инем. Шулай дөрөҫөрәк һымаҡ.

Яңы китапҡамы, әллә алтынсы томғамы материал яйлап туплана: байтаҡ шиғырҙар, һуңғы ваҡыттағы ҡайһы бер мәҡәлә, интервью һ.б. Кисәләремдең сценарийҙарын да үҙем яҙҙым. Пьесам да ята. Улары шул көйө архивымда ҡалыр инде.

Тойғон үлгән көнөндә үк тиерлек власть бүлешә башлағандар. Теләүселәр күп. Эшләйҙәрҙәрен барлай башлаһаң – аптыраҡ. 21 ғинуарҙа идара ултырышында Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаны врио итеп раҫланыҡ. Февраль аҙағында йыйылышта яңы рәисте һайлау буласаҡ. Мине ҡоҙалаусылар һаман да туҡтамай. Тик мин үҙемдең кандидатурамды үҙем күрһәтмәйәсәкмен.

Нәшриәттә «Дуҫлыҡ китабы» әҙерләгәндәр. Дуҫлыҡ йортонда ойошмалар тураһында. Шуларҙың һәр етәксеһенең мәҡәләһе. Башта Президент Хәмитов менән Әминә Шафиҡованың сәләмләүҙәрен ҡуйғандар. Әммә президент администрацияһында был мәсьәләне хәл итмәй һуҙғандар. Шуға күрә китап Рәхимов менән асылып киткән. Хәҙер ҡайһы бер перестраховщиктар, үҙ күләгәһенән үҙҙәре ҡурҡып, китаптың тиражын бикләү (изъять) тураһында һүҙ күтәрмәксе. Мәсхәрә!

Яуызлыҡтың, яһиллыҡтың, кешеләге йыртҡыс инстинкттарының әле өҫкә ҡалҡҡан, дөрөҫөрәге, бүҫелеп, йыртылып сыҡҡан сағы. Бөгөн Украинала ниндәй ҡыйралыш-емереүҙәр бара. Күҙе аларынған, ярһыуҙан аҡылын юйған халыҡты туҡтата алмайҙар. Әле ҡасан ғына ғәрәп илдәренең аҫты өҫкә әйләнгәйне. Бәрелештәр әле лә туҡтағаны юҡ. Бындай анархия Рәсәйгә килеп етһә, бөт донъя масштабындағы һәләкәттәр күпме ғүмерҙәрҙе өҙәсәк, күпме байлыҡтарҙы, рухи хазиналарҙы юҡ итәсәк. Рәсәй һиңә ниндәйҙер ғәрәп эмираты түгел. Юҡҡамы ни Пушкин мәғәнәһеҙ рус бунтынан аллам һаҡлаһын, тигән. Ябай халыҡ та ауырлыҡтарға сыҙай, «Һуғыш ҡына сыға күрмәһен!» тигән теләкте йыш ҡабатлай.

Бәндәләрҙең аҙған сағы, нәфсенең ҡыҙған сағы. Ижад донъяһында ла шулай.

Ҡайһы юл дөрөҫөрәк? Тик ижад менән йәшәргәме? Йәмәғәт эштәренән дә ситләшмәҫкәме? Һуңғы ваҡытта ошо һорауҙар миңә тынғы бирмәй. Йәш тә бара, ваҡыт лимиты ҡыҫыла. Яҙаһыларҙы күберәк яҙырға яҙһын ине.

Һәйбәт кешеләрҙе Аллаһы тәғәлә теге донъяны ла йәмләһендәр тип ала, насар бәндәләрҙе, яуыздарҙы Аллаһы тәғәлә был донъяны йәмһеҙләп йөрөмәһендәр тип ала.

Илдәр буйлап террористарҙы эҙләйҙәр. Уларҙы юҡ итеүҙе иң беренсе бурыҫҡа әйләндерәләр. Ә террорист №1 – ағыулы СМИ. Уларҙы бер кем дә тыймай, киреһенсә, емерткес мәкерле маҡсаттарҙа файҙалана. Һөзгәртә, ярһыта.

XXI быуатта үҙенең тәбиғи үлеме менән вафат булыусыларға ҡарағанда үҙен-үҙе үлтереүселәр күберәк икәнлеге хаҡында уҡып, тертләп киттем. Һандар, бәлки, улай ҙа түгелдер, ләкин суицид эпидемияға әйләнеп бара.

Илдәге тәртип, илдәге иман һинең йортоңдағы тәртиптән, имандан башлана. Ил һинән башлана. Һәр кем шулай уйлаһа, һәр кем шундай яуаплылыҡ тойһа, донъяла ниндәй тәртип булыр ине!

25-дә «Юлдаш» радиоһынан Әбүстең шиғырҙарын уҡынылар. Бик күп ғәҙәлһеҙлектәр күргән, шулай ҙа ижадты ташламаған кеше. Әҫәрҙәрен, яҙмышын ентекләп өйрәнеп, уның тураһында мәҡәлә яҙғы килә.

Юбилей алдынан кисәләр өсөн дә, матбуғат өсөн дә бик күп фотоларҙы аҡтарырға тура килде. Фотоархивым былай бай ғына. Әммә шуныһы сәйер: яҡын дуҫтарым Рәми Ғарипов, Әнүр Вахитов, Ким Әхмәтйәнов һ.б. менән төшкән фотолар юҡ тиерлек.

31 ғинуар, 2014 йыл. Йома.

Бик ҡаты һыуыҡтар. Өфөлә – 35 градус, Шамонинола ҡырҡҡа етәлер.

29-да мәҙәниәт министрлығына барғайным. Шафиҡованы күрҙем, «Оноторлоҡ булдымы ни?» тигән китабымды, шулай уҡ «День приема граждан» тигән брошюрамды бүләк иттем. Әҙәбиәт музейына бина юллау тураһында әйттем. 9 декабрҙә Президентта булғанда уға был хаҡта һөйләгәйнем. Шафиҡоваға ҡушҡан, күрәһең. Ялаловҡа хат та яҙҙым, һөйләштем дә, ти. Миңә лә инеп сығырға кәңәш бирә. Әле Ялалов и.о. Һайлау үткәс, мотлаҡ барырға кәрәк.

Министрлыҡтан сыҡҡас, трамвай көтәм. Бик ҡаты һыуыҡ. Янда ғына таксиҙар ҙа тора. 5-се трамвай ике рәт үтеп китте, унан күсеп

ултырыуы ла бик тиҙ ине. Ә мин принципиаль рәүештә 16-сы маршрутҡа ултырырға тейешмен. Ахмаҡ үҙһүзлелек. Үҙ һүзле, үгеҙ күҙле, тиҙәр бит. 45 минут көттөм, ныҡ өшөнөм. Трамвайҙан төшкәс, ашығып ҡайтып, эҫе ваннаға яттым. Шунда саҡ йылындым. Һыуыҡ тейгәне һиҙелмәй.

Төштән һуң лимонарийҙа Шәүрә Ғилманова тураһындағы фильмға мине яҙҙылар. Эргәһендә генә 20 йыл йәшәп, ошо атаҡлы лимонарийға барып сығырға һис кенә лә форсат табылманы. Ғәжәп әкиәт донъяһы икән. Хужалары Фәриҙәне электән аралашып белә инем. Бында ни бары 7 кешене ҡалдырғандар, ошо бәләкәй генә коллектив ни тиклем ҙур эштәр башҡара, күпме матурлыҡты тыуҙыра һәм һаҡлай.

Ниндәйҙер ҡомһоҙ крутойҙар ошо сихри донъяны емереп, ерҙәрен баҫып алмаҡсы. Фәриҙә Президент Хәмитовта булған. Ҙур пландар менән йәшәй. Былтыр көҙ үҙҙәренә котельный төҙөгәндәр.

Кисә Азамат Юлдашбаев, Мөнир Ҡунафин Красноусольскиға барып ҡайттыҡ. Өфөлә – 35 градус ине, унда 43. Машинанан сығып, бинаға ингәнсе һыуыҡ өтөп ала. Главала булдыҡ. Бохаров Рәмил Зәкәриә улы. Үтәктеке икән. Фәриҙәнең туғандары Әнүәрҙе, Эрнсты белә. Заманса фекерләгән булдыҡлы етәксе күренә.

Башҡорт гимназияһында осрашыу бик матур үтте. Биш йөҙҙән артыҡ уҡыусы уҡый икән, яртыһы поселоктыҡы. Залға һыйманылар, баҫып тороусылар булды. Программалары бай. Минең шиғырҙар буйынса уҡыусылар төшөргән һүрәттәрҙең ике урында күргәҙмәһен ҡуйғандар. Ҡурайсылар төркөмө уйнап ҡаршы алды. Директорҙары Дәриғәт Рәхимов беҙҙең Сабир Шәриповтың ике туған ҡустыһы. Бик уңған, инициативалы хужа.

Интернет-конкурста ошо Ғафури районынан иң күп уҡыусылар ҡатнашҡайны. Айырыуса ошо гимназиянан. Еңеүселәргә Мөнир Ҡунафин менән дипломдар, уҡытыусыларына рәхмәт хаттары тапшырҙыҡ. Һәр береһенә мин китабымды бирҙем. Гимназия китапханаһына ла байтағын бүләк иттем. Барыһы илленән ашыу китап тараттанмындыр.

Һәр район үҙәгендә ошондай гимназия (ятағы менән, әлбиттә) – йәштәрҙе тәрбиәләрлек белем усағы ғына түгел, рухиәт үҙәге булһын ине. Каруанһарайҙа Ырымбур башҡорт гимназияһы асыу хаҡындағы уйҙарым хыял ғына булып ҡалыр микән?

Нисек кенә заман менән бәйләнештә йәшәргә тырышһаң да, беҙҙә барыбер башҡа менталитет, башҡаса аң, башҡа ҡараштар

икәнлеген йәштәр менән яҡынданыраҡ аралашҡанда нығыраҡ аңлайһың. Хәҙерге яңы быуындың донъя менән дә, үҙ-ара ла аралашыуы күпкә еңелерәк, ябайыраҡ, бәйләнештәренең технологиялары бик етеҙ. Әллә ҡайҙағы фекерҙәше йәки бөтөнләй таныш булмаған кешеләр менән бик тиҙ бәйләнешкә инә. Беҙҙең күп яҡтарыбыҙ уларға сәйер күренәлер, хатта бөтөнләй яттыр. Беҙҙең өсөн бик күп изге төшөнсәләргә улар битараф. Ләкин уртаҡ ҡиммәттәр ҙә, илде ил, халыҡты халыҡ итеп тотоусы уртаҡ сифаттар ҙа булырға тейештер бит.

Яҡын серҙәштәрем, дөрөҫөрәге сер һаҡламаҫ серҙәштәрем – шиғырҙарым.

Тоғро фекерҙәштәрем, аҡыллы кәңәшселәрем – нисәмә быуаттар кешеләр араһында тере ҡалып йәшәүсе китаптар.

Интернет күбеһенсә мәғлүмәт, бөгөн бар, иртәгә юҡ хәлдәр, ысын хәбәрҙең нахаҡ һүҙҙәр, бысраҡ ғәйбәттәр менән буталып бөтөүе.

Донъя менән бәйләнешебеҙ хәҙергеләрҙеке менән сағыштырғанда ныҡ сикләнгән булһа ла, беҙ барыбер ерҙә нығыраҡ баҫып торғанбыҙ, ысынбарлыҡ беҙҙе нығыраҡ сыныҡтырған. Бөгөнгө йәштәр күберәк виртуаль донъяла йәшәй, уларҙың тормош һынауҙарында нығынған ҡараштары, рухи принциптары, юғары зауыҡтары төҙөк система булып ойошоп етмәгән һымаҡ.

Институтта әллә ҡасандан китаптар тороп ҡалған. Мирфатих Зәкиевтең – бик зирәк татар телсеһенең Жәлил Кейекбаев тураһындағы 1974 йылдағы «Дәртле йыр» исемле китабын сыҡҡас та бик кинәнеп уҡып сыҡҡайным, хатта рецензия ла яҙып баҫтырғайным. 1998 йылда беҙҙең Академияла уның «Дәртле жыр» тигән тулыландырылған икенсе баҫмаһын алғанмын да уҡырға өлгөрмәгәнмен. Әле ҡараштырҙым, ҡыҙыҡлы. Ентекләп уҡып сығырға кәрәк.

Фәнүзә Нәҙершинаның «Рухи хазиналар» (Асылыкүл, Дим, Өршәк буйы башҡорттарының фольклоры) тигән китабы (1992), Мирза Муллағоловтың «Лесные промыслы башкир» (1994) институтта ятҡан, ярай Миңлеғәли Нәҙерғолов һаҡлаған. Икеһен дә авторҙар миңә автограф яҙып бүләк иткән.

Фәнүзәнең китабын башынан аҙағына тиклем ҡарап сыҡтым. Етмеш нисә битлек кенә баҫма, ә унда күпме байлыҡ! Халҡыбыҙ ижад иткән бөйөк хазинаның кескәй генә бер өлөшө булһа ла, был

йыйынтыҡ ни тиклем күп хәл-ваҡиғаларҙы күҙ алдына баҫтыра, башҡортомдың һүҙ сәнғәте, тапҡыр теле, үткер аҡылы тағы ла нығыраҡ һоҡландыра. Бына сеңләүҙәрҙән дүрт юл:

Атаҡайым түрендә
Ултырғаным бер таҡта.
Шул таҡталарын ҡыҙғанып,
Бireп ебәрҙе ятҡа.

Ошо дүрт юлда ҡыҙ баланың аяныслы яҙмышы ни тиклем тетрәткес итеп әйтелгән: тыуған йортоңда бер таҡта тиклем дә урын ҡалмай. Һөйгәненә оҙатһалар ҙа, ул таҡта тураһында ҡыҙ уйлап та ҡарамаҫ ине. Ятҡа бireп ебәргәндәрендә өйөндөң таҡтаһы ла ғәзиз шул.

Инде күптән белгән-күнегелгән «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың быҫаса иғтибар итмәгән яңы яҡтары уйландырҙы.

Һыу аҫты батшалығы параллель донъя түгелме? Һыуҙан эйәреп сыҡҡан йылҡы һ.б. нәҫелле малдар, әйләнеп ҡарамаҫҡа ҡушыу, ҡарағас, һыуҙан сығып килгәндәренең юҡҡа сығыуы һ.б. – былар, моғайын, хыялда ғына тыумағандыр. Яңыраҡ Бөрйән яҡтарында тауҙа кешеләргә ниндәйҙер ҡала, ундағы мәсет, осоп килеп төшөүсе самолеттар күренде бит. Был мираж ғынамы? Сүлдә сарсап килгән юлсыларҙы үҙенә саҡырып йәйрәп ятҡан һыуҙың барып етһәләр юҡ булыуы ла, бәлки, беҙгә параллель донъяның бер сағылышылыр?

«Шарлы урман» йыры. Шар–һыулы, наҙлы урын. Беҙҙең яҡтағы Шар төйәге. Район үҙәге Шарлыҡ.

Ҡара ла ғына урман ҡая бите,
Шаулайҙыр ҙа кисен, ел саҡта.
Ташҡайҙарға соҡоп, яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта –

«Тәфтиләү» йырындағы был юлдарҙың тәбиғәттең ни тиклем хәүефле мәлендә ни тиклем һағыш-ҡарғыш тыуҙырыуы хаҡында мин элек яҙғайным инде. Әле шул юлдарҙағы ауыр кисерештәр тағы ла йөрәгемде өтөп алды. “Тәфтиләү” классик йырҙарыбыҙҙың иң аҫылдарынан. Гений ижад иткән әҫәр.

8 февраль, 2014 йыл. Шәмбе.

Кисә Мортаза ағай Рәхимовтың 80 йәшлек юбилейы булды. Өсөнсө көн телеграмма бирҙем: «Уважаемый Муртаза Губайдуллович! От души поздравляю Вас с замечательным юбилеем. Не каждый человек становится личностью. Вы являетесь исторической личностью, выдающимся государственным деятелем нашего народа. Благодаря Вашему мудрому руководству Республика Башкортостан прошла небывалый путь развития. Я горжусь тем, что судьба дала мне счастье быть вашим современником, вашим сторонником. Всегда благодарен Вам за заботу о нашей литературе. Желаю здоровья, успехов в работе во благо Башкортостана.

С уважением Равиль Бикбаев».

Кисә газеталарҙа Президент Хәмитовтың Мортаза Рәхимовты ҡотлауы, уның хаҡында материалдар (мәҫәлән, М. Хужин) сыҡҡан. Үҙенсә һынылыш. Мәскәүҙең ҡыҫымы барҙыр.

Кисә Башҡортостан Фәндәр Академияһында Хәмитов оҙаҡ ҡына сығыш яһаны, йәш ғалимдарға гранттар тапшырҙы (30 кешегә).

Бик ҡаты һыуыҡтар һаман да туҡталмай. Ҡайһы бер райондарҙа ҡырҡ градусҡа яҡын, Өфөлә утыҙҙан ашыу.

Ебәк шаршауҙар ҡоролған йомшаҡ сымылдыҡтағы һөйөү мәлдәрен туҙҙырып; төрмәнең тимер шаршауы бикләгән таш изәненә ҡанға туҙҙырып туҡмап ырғытыуҙар. Илдә ундай хәлдәр аҙ булғанмы ни? Улар ҡабатланмаҫ тип кем гарантия бирә ала? Юрғанды һыҙырып алған, битте һыҙырып алған.

Ишектәрҙе изге теләктәр менән ас.
Әле асҡаның бәлки һуңғыһылыр.

Интервенция Интернета.
Интернат, Интернационал.

Ер тетрәүҙәренең хатта иң ямандарына ҡарағанда тарихи тетрәүҙәр бик күпкә ҙурыраҡ һәләкәттәр алып килә.

Ер тетрәүе ҡыҫҡа ғына мәл була ла үтә. Тарихтың тетрәүе килтергән фажиғәләр йылдар буйына һуҙылырға мөмкин.

«Не оспаривай глупца» – Пушкиндың ошо аҡыллы кәңәшен иҫтә тотһалар, күпме буш бәхәстәр, мәғәнәһеҙ тартыштар булмаҫ ине. Ләкин бөгөн аҡылһыҙҙар шашҡанда, иманһыҙҙар ҡоторғанда

аҡыллылар улар менән бәхәскә инмәйенсә тыныс ҡына ҡарап торорға тейешме ни? Бәхәс кенә түгел, бөгөн көрәш кәрәк.

Күпме матурлыҡтар күрелмәй ҡаласаҡ, күпме һылыуҙар һөйөлмәй ҡаласаҡ, күпме китаптар уҡылмай ҡаласаҡ. Иң үкенеслеһе, бәлки, һуңғыһылыр.

Ситтән, ситән. Иккән, икән. Бүккән, бүкән.

Динистың 70 йылына мәҡәләмде яҙып бөтөрҙөм. Шуныһы ҡыҙыҡ: машинканан сыҡҡан ҡағыҙҙың аҡ яғына яҙам. Ул биттәр Рәми ағай тураһындағы монографиянан булып сыҡты. Шулай итеп, Рәми Ғарипов менән Динис Бүләков күңелемдә яңынан осрашты. Ҡағыҙҙың бер яғында Рәми ағай тураһындағы һүҙҙәрем машинкала баҫылған, икенсе аҡ яғында Динис тураһында яҙам. Бик мәғәнәле тап килеү.

Мәҡәлә ҙур ғына булмаҡсы. 50 йәшенә яҙғанымды ла индермәксемен. Әҙип үҙе тере сағында уның хаҡында нимә әйтелгән, ул осорҙағы әҙәбиәттә һәм тормошта ниндәй хәлдәр булған – былар бөгөнгө уҡыусыға ҡыҙыҡ булыр тип уйлайым.

Йылдар үткән һайын Динистың нығыраҡ һағышлана барыуы. Ғәҙәттә яҡты ҡарашлы, күтәренке кәйефле, хөр күңелле Динистың аҙаҡҡа табан бойоҡ һүрәттәре. Сәбәптәрен аңлатырға тырыштым.

Рамазан Ҡотошов ағай шылтырата. Теге заманда «Комсомольская правда в Уфе» газетаһында минең хаҡтағы әшәке мәҡәләне имеш ул яҙған да шуға мин уны Союзға алмағанмын, йәнәһе. Минең хаҡта нимә генә уйлап сығармайҙар!

Бер көн килеп (ул көн килеп етә һымаҡ): «Һау бул, Президент!» тип, кешенең үҙе менән түгел, Президент тигән исем-дәрәжә менән хушлашырбыҙ микән? Был һүҙҙе региондарҙан алып ташларға уйлайҙар. Суверенитеттың һуңғы ярсыҡтары ла шулай бөтөр инде.

«Словно внутри у него жили еще несколько человек»

(Лилия Григорьева, Жизнь в скоростном режиме). О Равиле Бухараеве. – «ЛГ», 29.01–4.02.14.

16 февраль, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Шәүрә Ғилманова тураһында «Шағирә йәнле Шәүрә» тигән мәҡәлә яҙҙым. Уның һәйбәт шиғырҙары бар икәнен беләм. Минең мәҡәлә менән уның шәлкемен дә бирергә кәрәк.

14-дә филармонияла Марат Аҙнабаевтың 75 йәшенә халыҡ зал тултырып йыйылды. Шәкерттәре бик күп. Бер төркөмө сәхнәгә сығып ҡотланы. Һәр береһенең клиникаһы бар, ти. Өфө илдә офтальмология үҙәгенә әйләнгән. Донъяға танылған.

Ҡотлап һүҙ әйттем. «Күҙ нуры» тигән шиғырымды уҡыным.

Һинең байрамың ғашиҡтар көнө менән тура килде. Һин – үҙең дә ғүмерең буйы ғашиҡ булып йәшәнең. Иленә ғашиҡ, халҡыңа ғашиҡ, дуҫтарыңа ғашиҡ, матурлыҡҡа ғашиҡ. Һәр саҡ шулай ғашиҡ булып йәшә, тинем.

75 йылың йылҡы йылында үтә. Ҡанатлы аҡбуҙат халҡыбыҙ өсөн изге символ. Һин һәр саҡ эйәрҙә, һәр саҡ алға ынтылып йәшәйһең.

Әҙәм балалары кеше булып тыуа. Ләкин һәр кеше шәхес юғарылығына күтәрелә алмай. Һин халҡыбыҙҙың оло шәхесе, арҙаҡлы ир-азаматы. Шулайыраҡ ҡотланым. Бер хәҙисемде (14-се хәҙис) уҡып, «303 хәҙис» китабын бүләк иттем.

Кисәнең аҙағына тиклем булып булманы

Быларҙы Шамонинола яҙып ултырам. Кисә Артур килтерҙе. Инде өсөнсөгә юлыбыҙҙы (өйгә) ҡар баҫып китә. Артур ҡар көрәне. Мин дә һелкенеп алдым.

Маяковский «Что такое хорошо и что такое плохо?» тип яҙған. Донъялар хәҙер насар яҡҡа ныҡ ауышты. Ҡасан ғына тигеҙләнер? Тигеҙләнерме? Рәсәйҙе АҠШ ботарлап ташламаҫмы? Башта Украинаны тарҡатыу, шунан – Рәсәйҙе. Рәсәй бөтһә, Башҡортостанға көн ҡалмаясаҡ. XVI быуатта олатайҙар ни тиклем зирәк күргән.

Күпме ирҙәр ойоп ята,
Донъя көтәм тип сапмай.
Кәләш ҡосаҡлар егеттәр
Йоҡлай шешә ҡосаҡлап.

Ғаиләне Ғәлиәләр һөйрәй,
Ир – арбала, бисә – ат.
Ир – атҡа, бәлки рәхәттер,
Килде бит матриархат!

Ҡайҙа хәлле кулак булыу!
Бөлгәнсе, хәлдән тайғансы
Ҡунаҡ булыу, ҡунаҡ булыу...

Эш тип арымай аяҡ-ҡул,
Ҡыбырлатмай бәндә ҡыл.
Ун көн буйына каникул,
Йыл буйына каникул!

Шәүрә Ғилманова тураһында мәҡәлә яҙғанда күпме шәхестәребеҙ тураһында үҙҙәрен күрһәткән бер генә кино йәки телекадр булмауы тураһында ла яҙҙым. Рәми ағай тураһында һүҙ әйтер алдынан үҙемдең «Рәми» тигән китабымдан шағирҙың юлын бикләгән һәләкәтле телетапшырыуға туҡталған урындарҙы ҡараным. Был хәл 12 февралдә – ағайҙың тыуған көнөндә булған икән. Шул саҡтарҙағы ихлас янып-көйөүҙәрҙән хәҙер ни тиклем ситләшкәнбеҙ! Хәҙер ҡәләмдәштәрҙең аралашыуында әҙәбиәттең үҙе хаҡында һүҙ бөтөнләй тиерлек юҡ, әҙәбиәт тирәһендәге ығы-зығы, көнсөлдәрҙең ғәйбәт сәйнәүе... Кешеләр ни тиклем ваҡланды.

«Шоңҡар»ҙың быйылғы беренсе һанында Зөлфиә Ханнанованың шиғырҙарын уҡыным. Һәләтле шағирә ул Зөлфиә. Салауаттар рухы менән йәшәй: «Яндырылған ауылдарҙың көлдәре беҙ». Ошо шәлкемдә «Их, яулыҡһыҙ йөрөйбөҙ шул ҡыҙҙар» тигәнерәк юлдар ҙа бар. Бөгөн бөтәһенә лә яулыҡ бөркәндереп ҡуйыу кәрәкме икән? Башҡорттарҙа дини фанатизм булмаған, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡайһы бер мосолман халыҡтарындағы һымаҡ ҡаты сикләүҙәр ҡыҫмаған.

Эш яулыҡ ябыныуҙа ғынамы ни?! Ҡатындары пәрәнжә йөрөткән боронғо мосолман илдәрендә лә бөгөн күпме ҡан ҡойош бара, ислам динендә йәшәүселәр меңәрләп бер-береһен үлтерә.

Инаныу, әхлаҡ баш яулығында түгел, күңелдә булһын.

«Война – дело молодое». Яугирҙең күбеһе, әлбиттә, йәш була. Бер яҡтан дөрөҫ яҙғандар. Әммә һуғыш йәштәрҙе күберәк ҡырһа ла, бөтә илде, һәр ғаиләне ҡайғыға һала. Война – всенародное дело, всенародное горе.

Ҡатыны менән тупланды мал, тик ир барыһын бөттө талап.

Бөткәс талап, ҡаты талап:

Ҡысҡыра ир:

– Талаҡ! Талаҡ!

Яңы йылдан һуң күргән төшөмдә йөҙөп барған эт сәсәй-сәсәй батты. Шомланыуым юҡҡа булмаған: Тойғон ҡапыл китеп барҙы.

«Башҡортостан»да Лариса Абдуллинаның «Алдар батыр» тигән шиғыры сыҡты. Әллә ниндәй поэма геройы булырлыҡ был образға шағирҙар әллә ниңә иғтибар итмәй.

Рус һәм төрөк ғәскәрҙәре ҡарап торғанда ике батыр – башҡорт менән черкес үлемесле алышҡа сыға. Башҡорт еңә. Уйлап ҡараһаң, кеше һәр көн Алдар хәлендә бит. Тормош менән алышта йәки һин еңәһең, йәки һине талап иҙеп үтәләр. Икеһенең береһе.

«Шоңкар»ҙа (2014, №1) Нияз Алсынбаевтың Вьетнамға сәйәхәте бик ҡыҙыҡһынып уҡыла. Күҙе үткер, бәйәне мауыҡтырғыс. Тик һирәк күренә.

«Ағиҙел»дә (2014, №1) детектив кимәлендәге «Елмерҙәк тотҡоно» баҫылған. Белореттан Гөлсөм Мостафина яҙған. «Мажаралы бәйән» тиелгән. Ҡасҡылар тураһында беҙ бәләкәй саҡтарҙа ла күп һөйләй торғайнылар. Бик күп атаҡлы йырҙарыбыҙ («Буранбай», «Бейеш» һ.б.) шул хаҡта бит. Ә бына яҙма әҙәбиәттә был темаға бөтөнләй тиерлек иғтибар булманы. Был әҫәрҙе тәүге һүҙ тиергә мөмкин. Аҙағында «Руссанан Мансур Һиҙиәтовтың авторлаштырылған тәржемәһе» тиелгән. Тәржемәнең теле бик һәйбәт.

Ошо уҡ һанда Сабит Фазлыевтың «Ҡара этап» тигән роман – хроника тип ҡуйылған әҫәренең башы бирелгән. Уҡып сыҡтым. Шулай уҡ өр-яңы тормош материалы, әҙиптәр әлегә үтеп инмәгән ҡатламдар. Ләкин ваҡиғалар күп булһа ла, романға тартмай. Хроника тип атау ҙа етер ине һымаҡ. Аянысҡлы яҙмыштар күп, әммә улар көслө, үҙенсәлекле образдар, характерҙар дәрәжәһенә күтәрелмәгән. Һөйләү күп, һүрәтләү аҙыраҡ.

Бөгөнгө прозала Хәйҙәр Тапаҡов һәйбәт эшләй. Ырамлы ижад ритмында. Яңыраҡ «Офоҡтағы йондоҙ яҡтыһы» (2013) тигән китабын бүләк иткәйне. «Шоңкар»ҙа (2014, №1) «Тиле яҙмалары» сыҡҡан. Афған, чечен һуғыштары һымаҡ кеше күңелен һындырыусы һәләкәттәр тураһында аҙ яҙыла. Хәйҙәр Тапаҡов хәҙерге байтаҡ ваҡиғалар тураһында башлап һүҙ әйтә. Ләкин ашығыбыраҡ китә, үҙен-үҙе ҡабатлай башлай. «Тиле яҙмалары»ндағы яҙмыштар менән «Офоҡтағы йондоҙ яҡтыһы» тигән хикәйәләге, бигерәк тә ике ирҙең дә йөҙҙәрен һүрәтләүҙе сағыштыр.

18 февраль, 2014 йыл. Шишәмбе.

Бер-беребеҙҙе ғәйепләргә ашыҡмағыҙ! Беҙ былай ҙа ҡыйырһытылғанбыҙ. Был яҡты донъяларға тыуыу Алланың иҫ киткес бүләге. Шул уҡ ваҡытта тетрәндергес фажиғә лә ул: донъя ни тиклем фани, йәшәүе ни тиклем бәхет һәм ниндәй аяныс!

Беҙгә был ергә бер заманда тыуырға һәм бергә-бергә йәшәргә насип иткән. Бер-беребеҙгә, зинһар, мәрхәмәтле булайыҡ. Аралашыр башҡа замандаштарыбыҙ, таныр-кәңәшләшер кешеләребеҙ башҡаса булмаясаҡ. Бер-беребеҙгә, зинһар, мәрхәмәтле булайыҡ. Олоно ололоҡлай, хаталанғанды кисерә беләйек.

23 февраль, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

21-дә йома көн поликлиникала йөрөп, бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡармаһы ултырышына бара алманым. Бик ғауғалы үткән. Йәштәр Румиль Аҙнабаевты эшенән бушатырға тигән талап менән пикет ойоштороғандар. Ҡолшәрипов менән Шәкүр ҙә тәнҡитләп сыҡҡан. Йәшерен тауыш менән үткәрергә тигән тәҡдимгә ҡаршы сығыусылар күберәк булған. Йәшерен тауыш биреү булһа, хәл ныҡ ҡатмарланыр ине, әлбиттә. Байтаҡ ағзалар йыйынды ташлап сығып киткән.

Әлбиттә, Ҡоролтай ныҡ һүлпәнәйҙе. Сит өлкәләрҙең, мәҫәлән, Ырымбур башҡорттарының мәсьәләләрен хәл итер өсөн етерлек эштәр эшләнмәй. Румиль Аҙнабаевҡа ике урында яуаплы эш алып барыуы уңышҡа килтермәйәсәк. Ҡоролтай етәксеһенә ҡайһы бер мәсьәләләрҙә власть менән бәхәскә инергә тура киләсәк, ә депутат вазифаһы был мөмкинлекте ныҡ сикләйәсәк, хатта юҡҡа сығарасаҡ. Ярай, Аҙнабаев эшенән китте ти, ә уның урынына кемерлек йәш етәксе, үҙенең командаһын тупларлыҡ шәхес ҡайҙа? Ундай шәхестәр яңы быуын араһында барҙыр, әммә ул мәсьәлә ныҡлап әҙерләнмәгән бит. Әммә ҡуш йөрәкле, гений зиһенле етәксе булһа ла, команда туплай алһа ла, төп мәсьәлә барыбер финансҡа һәм эш алып барырлыҡ йорт-урындың булыуына бәйле бит. Тулыр-тулмаҫ өс млн. һум аҡса менән ни эш ҡыра алаһың? Бер урындан икенсе урынға туп һымаҡ тибелеп йөрөп, халыҡты нисек туплай алаһың?

Хөкүмәттән аҡса теләнселәргә түгел, эш эшләргә кәрәк, тип тамаҡ ярыусылар бар. Әммә улар Ҡоролтайҙың масштабын әле лә аңлап еткермәй, әллә махсус иғтибарҙы ситкә бороргә теләй. Ана Ҡазандар ниндәй бинала ултыра ла ниндәй ҙур күләмдә финанслана (әйтеүҙәренә ҡарағанда, йыллыҡ сметалары 30 млн., тағы әллә күпме спонсорҙары барҙыр әле.) Йәштәрҙе ылыҡтырыр өсөн лайыҡлы эш хаҡы булдырырға кәрәк, мәҫәлән, кәмендә министр урынбаҫары күләмендә. Шул саҡта ғына етәксе бөтә көсөн Ҡоролтайға бирә аласаҡ, башҡа өҫтәмә эшкә бүленмәйәсәк. Башҡа ижтимағи ойошмаларҙа, бигерәк тә күпме һәйбәт эштәр башҡарған һәм бөгөн дә шуны яңы ҡолас менән дауам итергә тейешле Яҙыусылар союзында шул уҡ проблемалар!

Компьютерға өйрәнә башланым. Сибайҙар ноутбук бүләк иткәйнеләр. Бик уңайлы икән. Тик ваҡытты күп алмаҡсы был «эшмәкәрлек». Бер тотонғас, осона сығырға кәрәк.

Аллаға шөкөр, хәҙер көн дә эшкә йөрөйһө түгел. Юбилейға әҙерлек бик күп ваҡытты алғайны. Әле лә ваҡытты бүлеүсе сәбәптәр табылып тора. Тик барыбер хәҙер үҙемә үҙем хужа була башланым. Үҙемдең ваҡытыма үҙем хужа – был бик ҙур байлыҡ икән. Ҡайһы саҡта үҙемде ғүмерҙә аҡса күрмәйенсә, көтмәгәндә ҡулына ҙур аҡсалар килеп төшкән, уларҙы нимәгә тотонорға белмәй ултырған кеше кеүек тоям.

Әллә ваҡыт аҙ булһа, күберәк яҙыламы, ул саҡта ваҡыттың ҡәҙерен нығыраҡ беләһең, һәр көнөңдө ҡыҫыбыраҡ, уға күберәк эш һыйҙырырға тырышып йәшәйһеңме тип тә уйлап ҡуям.

Ваҡыт күп тип, ритмды һүлпәнәйтеүең бар.

Һуңғы ваҡытта уҡыуға бик күп ваҡыт китә. Ваҡытлы матбуғатты ла күп алдырабыҙ. Эшләгән саҡта уҡылмаған китаптар ҙа йыйылған. Уларҙың барыһын да ҡарап сығып булмаҫ, тик бөтөнләй таныш булмау ҙа ярамай.

Ысын яҙыусылар әҙәбиәтебеҙгә һирәк килһә лә, яҙышыусылар артҡандан-арта. Хәҙер байтаҡтар, төрлө юлдарын табып, тота ла китап сығара.

Баҫмалар күп, асыштар ғына үтә һирәк. Ҡәләм тирбәтеүселәр күп, йөрәктәрҙе тетрәтеүселәр бик аҙ.

«Ватандаш»тың беренсе һанында Баязит Бикбайҙың 105 йыллығына бик бай материал бирелгән: иҫтәлектәр, шиғырҙар. Тамара Ғәниева әҙерләгән. Ағай тураһында минең мәҡәлә бар, уға арналған шиғыр ҙа бар. Уларға урын етмәгән. Ярар, эш унда түгел. Быны яҙа башлауымдың сәбәбе башҡа.

Баязит ағайҙың вафатына 45 йыл үтеп китте. Әҙиптең үлемһеҙлеге уның үҙенең үлеменән һуң башлана тиҙәр. Әммә был яҙмышты бик ҙур ижадсылар ғына кисерә. Ваҡыт тигәнең әҫәрҙәрҙе иләктән бик ныҡ, ҡат-ҡат үткәрә.

Баязит Бикбай тураһында замандаштары оло ихтирам менән һөйләй һәм бик хаҡлы әйтә. Уның шәхесенә минең дә хөрмәтем ҙур. Әммә шиғырҙарын хәҙер уҡыуы бик ҡыйын. Бик күптәре араһынан (Азамат Юлдашбаев әйтеүенсә, бик ныҡ таралып бирелгән был шәлкем) бер шиғыр хәтеремдә ҡалды. Күперҙәге айырылышыу кисерештәре – был бәләкәй генә шиғырҙы мин мәҡәләмдә килтергәйнем.

Классиктар һаналып йөрөгән байтаҡтарҙың әҫәрҙәре әҙәбиәтебеҙҙең хәҙерге үҫешенән ныҡ түбән. Әммә үҫеш юлында был

осорҙо ла үтергә кәрәк булғандыр, шулай яҙғандыр. Башҡа милли әҙәбиәттәрҙә лә хәлдәр шулайыраҡ бит.

Бата-сума батҡаҡ юлдарға
Ҡастылар ауылдан ҡайтмаҫҡа.
Йырлай-йырлай тағыр юлдарҙан
Ҡайтһындар ауылдан китмәҫкә.

Дәфтәрҙәремдә әлегә шиғырға әйләнмәй ҡалған әллә күпме яҙмалар теркәлгән. Шулар буйынса ныҡлап махсус эшләп ултырһаң, үҙҙәре бер китап булырлыҡ шиғырҙар тупланырға мөмкин.

Елкендерә-үкендерә – гел күндерә – йәшкә төрә.

Ултыра алйот алйып...
Нуриманда нур ҙа иман,
Игелек кенә Иглиндә.

Һәләк кенә булды Ҡарайғырым,
Дошмандарҙың йөҙө ҡарайғыры.

Бағырым – бәғерем.
Бағрыларҙың күҙгә бағырын...
Бәрҙеләрҙе ташҡа бәрҙеләр...

Һағындырҙы – һындырманы.
Тамсыһын да ҡалдырманы,
Ярһытты – ҡандырманы.

Шулдыр хәҙер табыштар;
Һығып ала һағыштар.

Дөйөм йыйылышты Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина күсерә лә күсерә. Былай барһа, көҙгә ҡалмаҫ тимә. И.о. булһа ла, оҙағыраҡ ҡалғыһы киләме? Интригалар ҡуйыра.

26 февралдә БИРО-ла уҡытыусылар менән осрашыу. Минең юбилей алдынан ижадым буйынса асыҡ дәрестәр үткәргәндәр. Бындай профессионалдар менән ошондай кимәлдә осрашҡаным юҡ әле.

Аҫабалар – аҫыл бабалар.
Аҫабаларҙы аҫалар.

Элек илде дер һелкеткән
Башҡорт боланы.
Донъяларҙы яулай хәҙер
Башҡорт балы.
Ни хәлдәрҙә йәшәй бөгөн
Башҡорт баланы?

Яттар ялмай аҫабалар ерен,
Халҡыбыҙ артмай,
Килмешәктән дә кәмерәк
Аҫаба башҡорт ире.

Күпме шатлыҡтар эркелде,
Күп йырланыҡ, бейенек, көлдөк.
Яҡкан усаҡтар һүнделәр,
Тороп ҡалды бары көлө.
Тормош һүнде.
Ҡалды көлдөк.

Таҙы һуға ҡырауҙары,
Шаңғыта һорауҙары,
Тап килә юрауҙары...
Яуапһыҙ һорауҙары...

Минең көндәлектәрҙә яҙылып бөтмәгән күпме шиғырҙар һибелеп ята. Яңынан эшләп сыҡһа, улар, ысынлап та, бер китап булырлыҡ. Бына шундай эскиздарҙың береһе:

Һулдан балҡып ҡояш ҡалҡа,
Уңдан ҡарай тулған ай.

Икеһе лә бер кимәлдә,
Тип-тигеҙ биҙмән һымаҡ.
Тигеҙлеккә сарсауымды
Ай-ҡояш белгән һымаҡ.

Һәр мәлдең ҡәҙерен бел тип,
Ошо мәл килгән һымаҡ.

Шул уҡ биттә:

Тәм табалмай йәндәрем.,
Йәм таба алмай йәндәрем.
Таңдарым шәфәҡтәй моңһоу,
Төндәй шомло көндәрем.

Былар 1998 йылдың 13 майында яҙылған. Күпме эскиздар һыҙмалар хәлендә ятып ҡаласаҡ.

Ҡотоп та ла ҡот табыр.

Барлай башлаһаң, байтаҡ нәмәләр асыҡлана. «Хазина» поэмаһының ҡарамаларын ҡараным.

Тауҙа йәйрәп ятҡан баш ҡалаға

Ҡайтҡан һайын китә иҫтәре – тигән юлдарҙан һуң ҙур ғына бер өлөш төшөп ҡалған. Шул киҫәкте бында теркәп ҡуям:

Арбай Өфө. Йәнде елкендерә
Салауаттың ғорур әйҙәүе.
Өфөләргә килгән һәр юлсыны
Хайран итә һәйкәл тәүҙә үк.

Белһә икән улар
Был ҡалала
Салауат та менән Юлайҙың
Кисергәнен ниндәй ғазаптарҙы,
Уйлағанда хәтер һыҙланыр.

Аяҡ-ҡул бығаулы.
Нисәнсе ҡат
Язалайҙар,
Йөрөтөп ил буйлап.
Ҡанһыратып, Өфөгә ҡайтаралар,
Тағы йота үҙенә таш зиндан.

Тәндәр тотош яра.
Тик йән генә

Азатлыҡҡа һаман талпына.
Бында батыр нисек әмәл тапҡан
Хаттар таратырға халҡына?

Илде моңландырыр күпме йырҙың
Ҡанаттарын ҡатил ҡайырҙы.
Тик тере ҡуҙ булды гел хәтерендә
Ҡобайыры яугир шағирҙың.

Ярһыу атта ярһып ҡайтты шағир,
Түгел инде уға ҡала ят.
Быуаттарҙан быуаттарға әйҙәй
Өфө ҡаяһында Салауат.

Был юлдар поэманы сәхнәгә әҙерләгәндә ҡыҫҡартылғайны. Баҫмаға әҙерләгәндә лә инмәй ҡалған. III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына сығарылған (2010) китапта был әҫәр тулы бирелмәне. Бик мөһим урын – «Әбйәлил әкиәте» төшөп ҡалған. Ярар «Һайланма әҫәрҙәр»ҙең 5-се томында был әкиәт тә бар.

Тағы ла элекке уй ҡабатлана: юлаусыларға юл доғаһы булырлыҡ шиғыр яҙғы килә.

Париж шиғырҙарына һаман әйләнеп ҡайта алмайым (март, 2008, 274–280 биттәр).

Мораҙым шәлкеме, Баймаҡ шәлкеме, Төркиә шиғырҙары, Бабич тураһында башлап ҡуйған бер әйбер һ.б., һ.б. – нисәмә йылдар буйы көтөп ятҡан эштәр күп инде ул.

25 февраль – әллә финалмы?

6 март, 2014 йыл. Кесаҙна.

27 февралдән Янғантауҙабыҙ. Бындағы директор Энгельс Варисович Ҡолмөхәмәтов юбилейыма 10 көнгә сертификат биргәйне. Фәриҙәгә бында түләнек. Президент корпусына (корпус №6) урынлаштыҡ.

БИРО ректоры Рәмил Ғиниәт улы Мәжитовҡа ҙур рәхмәт, уның водителе Юлай килтерҙе. БИРО етәкселегенә тағы ла бик ҙур рәхмәтем: 26 февралдә бында уҡытыусылар менән бик матур осрашыу үтте. Минең 75 йәшемә арнап дәрестәр үткәргән уҡытыусылар йыйылғайны. Башҡорт әҙәбиәтен шул дәрәжәлә аңлаған, башҡорт теленең киләсәк яҙмышын хәстәрләп йәшәгән педагогтарҙан торған

бындай фекерле, оло маҡсатлы аудитория менән осрашҡаным юҡ ине. Институтта «Шағир һүҙе – шағир намыҫы» тигән бик бай йыйынтыҡ әҙерләгәндәр. Күләме 30 табаҡтан артыҡ был ҙур форматтағы китапҡа бик күп райондарҙың, ҡалаларҙың мәктәптәренән 150-ләп уҡытыусының минең ижад буйынса дәрес материалдары тупланған. Ниндәй генә темаларға арналмаған ул дәрестәр! Бик күптәренең темаһы «Башҡортостан бында башлана», «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!», «Салауат ҡылысы». Айырым шиғырҙар буйынса, мәҫәлән, «Уралыма» үткәрелгәндәре лә бар. Хатта «Яңғыҙлыҡ» буйынса бер нисә дәрес бар.

Минең ижад буйынса байтаҡ яҙҙылар, Ғайса Хөсәйеновтың китабы ла сыҡты. Ләкин 150-ләп уҡытыусының дәрестәре өлгөләренән тупланған «Шағир һүҙе – шағир намыҫы» тигән китап минең ижад өсөн генә түгел, барлыҡ әҙәбиәтебеҙҙә мөһим яңылыҡ, бығаса күрелмәгән хәл.

Осрашыуҙа Хәсән Назарҙың, Зөфәр Вәлиттең, Салауат Әбүзәрҙең, Азамат Юлдашбаевтың, Лариса Абдуллинаның, Мөнир Ҡунафиндың сығыш яһауҙары бик һәйбәт булды.

«303 хәҙис»те, «Оноторлоҡ булдымы ни?»ҙе берәр төргәк, «Граждандарҙы ҡабул итеү көнө»н 30-лап дана алып барғайным, йөҙҙән ашыу китап бик тиҙ таралып бөттө, күптәргә етмәй ҡалды. Күберәк килтерергә кәрәк булған. Шулай ҡырылышып алырҙар тип көтмәгәйнем. Китаптарға шулай ябырылыуҙары бик ҡыуандырҙы.

Янғантауҙа бер нисә тапҡыр булғайныҡ, Президент корпусында ла йәшәп киткәйнек. Байтаҡтан килмәгәс, матур үҙгәрештәр ҙә күп икән. Яңы төҙөлөштәр артҡан, ял итеү программаһы киңәйгән. Ике музей эшләй. Ихлас хеҙмәтләндерәләр, тамаҡ һыйлы, тәбиғәт матур, һауа саф, һауа һулап, ял итеп йөрөрлөк мөмкинлектәр күп. Ике музей эшләй икән, уларын ҡарап булманы. Кисә санаторий директоры Энгельс Варис улына рәхмәттәр әйтеп сығайым тип барғайным, урынында булманы. Өфөгә киткән икән.

Секретары Лилиәгә визиткамды бирҙем, рәхмәттәремде еткереүен үтендем.

Минең килгәнде белгәндәр ҙә, Янғантау урта мәктәбенә осрашыуға саҡырҙылар. Кисә осрашыуҙа булдым. Мәктәп иркен, яҡты, йылы. Элек ике сменала уҡығандар. 2010 йылда санаторийҙың элекке директоры Рәмил Рафаэль улы Бәҙретдиновтың ярҙамы менән мәктәп киңәйтелгән. 200-ҙән ашыу бала хәҙер бер сменала уҡый. 30 уҡытыусы.

Балалар минең шиғырҙарҙы һөйләнеләр, һорауҙар бирҙеләр. Ваҡыт ҡыҫҡа ла, осрашыу бер сәғәткә яҡын барҙы. Директоры Фирғәт Факил улы үҙе БДПУ-ның башҡорт бүлеген бөткән, башҡорт теле уҡытыусыһы Алия. Уларға, шулай уҡ мәктәп китапханаһына китаптарымды бүләк иттем.

Янғантауҙа мин күрмәгән мөһабәт бер бина – яңы мәсет. Ямал мәсете. Бөгөн барып эсен дә ҡарарға ине. Тыштан бик матур, иркен, бейек.

Мәктәптәге осрашыуҙа һүҙемде ошо мәсеттән башланым. Элек мәсеттәр ҡыйратылды, мәктәптәр асылды. Хәҙер мәсеттәр күп төҙөлә, әммә байтаҡ ауылдарҙа мәктәптәр ябыла. Мәктәп менән мәсет – ауылдың ике ҡанаты. Уларҙың береһе лә ҡайырылмаһын ине.

7 март, 2014 йыл. Йома.

Янғантауҙағы 9 көнөбөҙ бына үтеп тә бара. Аллаһы бирһә, бөгөн төштән һуң юлға ҡуҙғалмаҡсыбыҙ. Район хакимиәте етәксеһе Хәйретдинов Ғәли Ғәләүетдин улы менән машина тураһында һөйләштем.

Кисә мәсеттә булдым. Ике манаралы «Ямал» мәсете тыштан бик мөһәбәт булып күренеп ултырһа, эстән дә бик матур, иркен, яҡты. Байтаҡ китаптар күренә, матур келәмдәр түшәлгән. Разия исемле ҡатын ғына ултыра ине. Мәсеткә хәйер бирҙем, әрүахтарға арнап, Разия доға уҡыны. Мәҡамы бик көйлө, тауышы моңло, һөйләү оҫталығы күренеп тора. Халыҡ йөрөймө тип һорағас, һәйбәт йөрөй, никах уҡыталар, исем ҡушыу йолаһын үткәрәләр, йәштәр ҙә килә, тине. Юныс хәҙрәт үҙе Ҡорғаҙаҡта эшләй икән. Беҙҙең ауыл муллаларына иғәнә аҡсаһына ғына йәшәүе мөмкин түгел шул. Ярар әле был ҙур мәсеткә утҡа, йылылыҡҡа санаторий түләй икән. Бөтә ауылдарҙағы мәсеттәрҙә был мәсьәләләрҙе хәл итеү бик ауыр бит.

Янғантауҙа академик Паллас булып киткән. Хатта Юлай Аҙналиндың ғаиләһен, үҫмер Салауатты ла күргән шикелле. Был Янғантауға ул ғалим килерҙән алдараҡ ут тоҡанған булған, йәшен атҡандан һуң, тиҙәр. Бындай тауҙарҙың яныуы 300 йыллап дауам итә ала икән. Янғантауҙың әле 30–35 йыллап запасы булырға тейеш, тинеләр.

Шағир ҙа халыҡтың янартауы бит. Уны илаһи көс ижад ялҡыны менән көйҙөрөп ала ла, шағир яна ла яна. Шағир бер көн һүнә, яҡты донъяларҙан китә. Әммә ул ҡалдырып киткән яҡтылыҡ халыҡ күңелен нурландырып йәшәй, оҙаҡ йәшәй. Янартауҙың янасаҡ

ғүмерен фараз итеп иҫәпләп булһа ла, шағир ҡалдырған нурҙың халыҡ рухында күпме йәшәйәсәген, уның киләсәген фараз итеп булмай. Һәр хәлдә, милли шағирының һүҙен милләт хәтере һәр саҡ ҡәҙерләп һаҡлай. Шағирҙарының һүҙе тере икән, милләт үҙе лә тере, милләте тере икән, шағир һүҙе лә йәшәйәсәк.

Рәми Ғәриповтың тыуған яҡтарында бына ошо изге рухи бәйләнештәр тураһында уйланым. Ләкин ҙур булмаған милләттәрҙе глобализм берәм-берәм йотҡанда, тиҙҙән юғаласаҡ телдәр араһында ҡайһы бер ғалимдар башҡорт телен дә атағанда, киләсәгебеҙ тураһында уйлауы ла ауыр.

Рәсәй империяһының милли сәйәсәте халыҡтарҙы сәкәштереү, «разделяй и властвуй» принцибына ҡоролғайны, тип уҡыта торғайнылар. Ул сәйәсәт милләттәргә күпме генә бәләләр алып килгәнен тарих белә. Ә бына бөгөнгө АҠШ алып барған дәһшәтле емерткес эштәр бер ил эсендә генә бармай, бөтә донъяны дер һелкетә бит.

Бөгөн Украинала ниндәй ҡыйралыштар бара. АҠШ-тың һәм Көнбайыштың мәкерле етәкселегендә Украина тигән оло ил ҡыйратыла, ҙур милләт тарҡатыла. Уға тиклем ғәрәп илдәре буйлап ниндәй ғәрәсәттәр үтте, диндәштәр, ислам балалары бер-береһенең ғүмерен ҡыймаҫҡа тейешле мосолман донъяһында, шәреғ илдәрендә күпме ҡан ҡойолдо, әле лә үлтерештәр тынмаған. Уға тиклем Югославияны тарҡаттылар, беҙгә туғандаш илде мәсхәрәләгәндә Рәсәйҙең башһыҙ башлыҡтары уны яҡлап ҡыл да ҡыбырлатманы. Америка ярһығандай ярһый, ҡомһоҙлоғоноң сиге юҡ. Уны ғәйепләүе еңел, ә уға ҡаршы торорлоҡ көстәр юҡмы ни? Ундай көстәр бергә туплана алмай икән, был енәйәттәре өсөн Американы Аллаһы тәғәлә барыбер язаһыҙ ҡалдырмаҫ. Халыҡ әйтмешләй, харам төртә ул.

Һуңғы йылдарҙағы донъя хәлдәрен уйлайым-уйлайым да, кеше тәбиғәтендәге яуызлыҡтар бөгөн тышҡа бәреп сыҡты, яҡшылыҡты яманлыҡ еңә тип көндән-көн нығыраҡ хафаланам. Ерҙә бөгөн шайтаниәт, Ғазазил, Сатана өҫтөнлөк итә, кеше рухына бик ҡаты һынау үткәрелә һымаҡ. Сатана барыбер ҡыйралыр, Иблис еңелер, әммә ул ҡыйралғансы күпме кешеләр, күпме илдәр – милләттәр ҡыйралыр.

Иблистәр хәҙерге заманда камил тормошто туҙҙыра, үҙенең бик күп сихырлы әүрәтке стәре менән кеше рухын ағыулай, эстән ҡаҡшата, ахыр сиктә емерә, рухты шартлата. Әле донъялағы иң дәһшәтле террорисит №1 ул АҠШ алып барған сәйәсәт, йәшерен

түгел, асыҡтан-асыҡ алып барылған сәйәсәт, барлыҡ халыҡтарҙы Америка ҡалыптарына ҡыуып индерергә, шунда ҡол итеп бикләргә тырышыусы глобализм. Глобализм ул берләштереү түгел, емерткес агрессия.

Тел тигән бөйөк мөғжизәне, меңәр-меңәр берәмектәрҙән торған һүҙ иләүен мин әле ҡырмыҫҡалар иләүе менән сағыштырып ҡараным.

Ҡырмыҫҡа иләүендәге һәр ҡырмыҫҡаның үҙ вазифаһы, үҙ тәғәйенләнеше бар. Әммә улар күмәкләшеп ошо иләү тормошон һаҡлай, һәр береһе тик төҙөү хәстәре менән йәшәй.

Әгәр өндәр, хәрефтәр телдең атомдары икән, тотош тел меңәрсә һүҙҙәрҙән торған ҡатмарлы бер иләү бит. Был иләүҙә һәр һүҙҙең үҙ вазифаһы, үҙ тәғәйенләнеше. Әммә уларҙың барыһына ла тик йәшәйеште яҡларға, тик яҡшылыҡты һаҡларға, тик изгелекте раҫларға ҡушылған. Аллаһы тәғәлә һүҙҙәрҙе шуның өсөн яралтҡан, шул маҡсаттарҙы башҡарыр өсөн кешеләргә һүҙ, милләттәргә тел бүләк ителгән. Әммә әҙәм балалары ошо изге көстәрҙе эшкә ҡушып, тик яҡшылыҡтар ғына ижад итер урынға күпме енәйәттәр, иман алдында хыянаттар ҡыла. Күпме насарлыҡтар эшләй һүҙҙәр иләүе. Ҡырмыҫҡа иләүе менән кеше идара итә алмай. Уларҙы тыңлатып ҡара! Ярай әле кеше уларға бойороҡ бирә алмай. Әгәр бойора алһа, ул гонаһһыҙ йән эйәләрен, бәлки, насарлыҡтар эшләргә лә ҡушыр ине, уларҙы гонаһтарға батырыр ине.

Һүҙҙәр менән, һүҙҙәр иләүе менән кеше идара итә ала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уға бирелгән ошо бөйөк көстө кеше йыш ҡына насар ниәттәргә йүнәлтә, яман эштәргә саҡырыусыға әйләндерә, гонаһһыҙ һүҙҙәрҙән гонаһлы фармандар яҙа. Тел, һүҙ тигән изгелек кеше ни ҡушһа, шуны эшләй. Һүҙҙәрҙе гонаһлы эштәрҙә ҡатнаштырыу кешенең иң ҙур гонаһы.

Янғантауҙа көндәр матур үтте. Әммә күңелде ҡырғаны – бында көнө-төнө мәғәнәһеҙ музыканың яңғырап тороуы, ҡолаҡты тондороуы. Тәҙрәне асыу менән бүлмәгә килеп инә. Бер генә башҡорт музыкаһы ла юҡ, рус халыҡ моңо ла юҡ. Торғаны әҙәм аңламаҫлыҡ, күңел ҡабул итмәҫлек шаҡы-шоҡо, тик сит музыка. Интернетты донъя күләмендәге үрмәксе ауы – всемирная паутина тиҙәр. Ошо селтәргә эләгеп, кеше себен һымаҡ ҡорбанға әйләнә. Был ауҙың иң ныҡ эләктерә торғаны – СМИ, TV, мәғәнәһеҙ музыка, матбуғат.

Ау ҡоролған һиңә, миңә,
Беҙ – мәкер ауында.

Килеп элəктем шул ауға
Бөркөт тауында...

Янғантауҙың боронғо исеме Бөркөт тауы булған. Дөрөҫөрәге, Ҡарағош тауы.

17 март, 2014 йыл. Дүшəмбе.

Янғантауҙан 7-дə Шамониноға ҡайттыҡ. Автодорҙан Ғамир тигəн егет килтерҙе. Район хакимитəте башлығы Ғəли Ғəләүетдин улы Хəйретдиновҡа рəхмəт, транспортты ул ойоштороҙо. Китер алдынан санаторий директоры Энгельс Варис улы Ҡолмөхəмəтов менəн һөйләшеп ултырҙыҡ.

Ҡайтҡаны бирле 10 көн мəғəнəһеҙерəк үтте. Хəҙер ваҡытты айырыуса ҡəҙерләргə кəрəк, лимит ҡыҫыла.

Ерле булһа ғына тел тере. Теле барҙың иле бар, тибеҙ. Теле һəм ере барҙың ғына иле бар. Йəһүдтəр донъя буйлап һибелеп, төрлө телле халыҡҡа əйләнə.

Ерле, Израиллы булғас, боронғо уртаҡ телдəрен терелткəндəр.

Теле юҡтың иле юҡ,
Ере юҡтың иле юҡ.

«Киң донъяға һыймай ваҡ кешеләр,
Киң күңелгə һыймай ваҡ тойғолар» –

əллə ҡасан яҙылған ошо һүҙҙəрем хəҙер йыш хəтергə килə. Бөйөк хəҡиҡəттəр онотола. «Айырылғанды айыу ашар...» Өҫкə ташланырға торған айыуҙар ҙа, бүреләр ҙə артҡандан-арта. Йыртҡыстар заманына килеп еттекме? Күҙе аларынған, зиһене томаланған халыҡ Украинала донъяны нисек ҡыйрата!

В начале было слово и слово было Бог. Если народ потеряет родное слово, потеряет себя. Дела, закрепленные словом, увековеченные памятью, остаются в истории.

Көслөләргə көнсөллөк ят нəмə.

Оло хеҙмəт ваҡыт-төйəккə урын ҡалдырмай. Халыҡ бик белеп əйткəн:

Эше булған кешенең
Кешелə ни эше бар?

Эше булмаған кешенең
Кешелә күп эше бар.

Тағы билде бештән быуып
Эш күлдәген кейгәнең,
Өтәлгән, көйгәнең.

Аҙыраҡ ҡына ял итһенсе
Усыңдағы сөйәлең.
Аҡ донъяға бер ҡарап тор
Аҡ ҡайынға һөйәлеп.
Көтәлер бәлки һөйгәнең.

Саф булып атлап барған һалдаттарға ҡарап торғаным бар. Күп аяҡлы ҙур ҡарышлауыҡ һымаҡ бер бөтөндәр. Ҡайһы саҡта миңә барлыҡ кешелек тә шулай күренә.

Добровольно-принудительное присвоение (йәки вхождение) Башкирии к России (Русскому государству, дөрөҫөрәге). Был һүҙҙәр күп ҡабатлана.

Уйлап ҡараһаң, һәр ирекле эштә мәжбүрилек бар бит. Мәҫәлән, намыҫың, әхлаҡ талаптарының, йәшәү принциптарының һине яҡшы эштәр эшләргә ҡуша, хатта ҡайһы саҡта көсләп ҡуша, мәжбүр итә. Салауаттың, Вәлидиҙең, Бабичтың, Матросовтың, Рәмиҙең яҙмыштары.

Пушкиндың, Лермонтовтың дуэлдәре. Есениндың, Маяковскийҙың үлеме һ.б.

Шул уҡ намаҙ, ураҙа, мәсет, хаж, хәйер биреү һ.б. мотлаҡ, тейеш.

Дауыл да ел, көн дә дуэль,
Донъя менән йөҙгә йөҙ.
Түшеңә бысаҡ терәлгән,
Өйөңә мылтыҡ төҙәлгән...
Тик ебемә. Бул төҙ. Түҙ!

Булған йоҡоларға талған тау,
Битләүҙәрен томан алған тау,
Йәшен атып, иткән Янғантау,
Тәбиғәттән тылсым-көҙрәт алған тау,

Ҡойма ямғырҙарҙа ҡалғанда ла
Ил хәстәрен иңенә һалған тау,
Һаман эстән көйрәп янған тау.
Яныр ғына көнөм быҫҡып үтә,
Йәшен көтәм.

23 март, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Ун бер тулмаҫ борон ятҡайным, дүрт тулмаҫ борон уяндым. Йоҡо туйған, зиһен саф. Ошо дәфтәргә тотондом.

Тағы ла таныш төштәр ҡабатлана. Оҡшаш ситуациялар: ҡайҙалыр юлға йыйынам, тик әйберҙәремде табып, йыйып бөтөрә алмайым. Әле бынығы етмәй, әле тегенеһе етмәй. Был юлы Ҡазанда йөрөп ятам, имеш. Машинаға ултырырға ваҡыт, ә мин һаман йыйынам да йыйынам. Ҡунаҡхананан әллә ниндәй ят сумка тотоп сыҡҡанмын. Етмәһә, үҙе буп-буш. Хәйерлегә булһын.

Китаптарҙы тәртипкә килтерәм. Әллә күпме кәрәкмәгәндәре йыйылған, сығарып ташларға тура килер. Йәлке лә бит, ни эшләтәһең, күбеһе китапханаларға йәки уҡыу йорттарына бирерлек сифатта, кимәлдә, йөкмәткелә түгел. Иптәштәргә таратырлыҡтарын айырып ҡуйҙым. Был буталсыҡ төштәр әллә шул китаптар менән айҡашыуҙың ғәләмәте?..

Байтаҡ ҡағыҙҙарҙы аҡтарам, папкаларҙы барлайым. Бик ҡыҙыҡлылары килеп сыға. Юбилейым алдынан күпме фотоларҙы ҡараным. Бер ҡалын папкаға йыйылған бик күп фотоларҙы иҫкә төшөрмәгәнмен. Инәйем менән, Айҙар улым менән, ҡартатайым-әсәйем менән, әллә күпме туғандарым менән осрашҡан һымаҡ булдым. Әллә күпме осрашыуҙар, сәйәхәттәр яңырҙы. Әллә юғарылағы көс махсус шулай эшләй, үткәндәреңде онотма, ваҡытыңды ҡәҙерлә, хәтереңде яңыртып тор, тип иҫкәртә инде. Нәҡ шулай һымаҡ.

Яҡташым, ауылдашым, нәҫелдәшем Бикбаев Ҡужәхмәт бабайҙың, Нәҡҡәр апайымдың ҡайныһы Ғәйзулла ҡоҙа, сәсән Агишеевтың миңә ебәргән яҙмаларын яңынан бик ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтым. Ғәрәп яҙмаһынан Миңлеғәли Нәҙерғолов күсереп биргәйне.

Алтмышынсы йылдар аҙағындағы хаттар. Эй йәшлектәге иҫһеҙлек, вайымһыҙлыҡ. Шул ағайҙарҙан күпме материал яҙып алып булыр ине. Ҡужәхмәт бабай беҙҙең шәжәрә буйынса бик күпте белгәндер, әммә мин иғтибарһыҙ булғанмын. Бик үкендерә!

Кисә Әсил бүләсәребеҙҙең ике йәшенә йыйылдыҡ. Бик матур табын ойоштороңдар. Ҡаты эсемлектең булмауы бигерәк тә һәйбәт. Бына ғүмер нисек үтә: әле генә шыуышып йөрөгән ҡыҙыҡай йүгереп йөрөй, ә беҙҙең аҙымдар әкренәйә, ауырая бара.

Юлдарҙың тайғаҡ сағы. Алла бирһә, тиҙҙән ергә ышаныслы баҫып йөрөй башларбыҙ инде.

Ҡағыҙҙарҙы аҡтарғанда әллә ни тиклем яҙмаларға юлыҡтым. Айырым ҡағыҙ киҫәктәренә теркәлеп барған. Ҡалған эшкә ҡар яуа шул. Күкрәп күтәреләһе уйҙар күмелеп ҡалған.

Балам ут! – ти,
Балам мут! – ти,
Ә башҡалар әйтә:
Балаһы баламут! – ти.

Бүре һарыҡты елкәһенә һалып йөрөтә, тип яҙғайным. Батшалар ҙа бит ҡәҙерле кешеләрен алтын-көмөштән дә нығыраҡ һаҡлай. Төрмәлә һаҡлай.

Ят ерҙәр буйлап үткем килә, ят ҡалаларҙың ят урамдарын ҡыҙырғым, ят кешеләрҙең ҡараштарын күргем килә. Ят урмандарға кереп һыҙғырғым килә.

«Ҡараһана, Сәлимә, һай, күҙемә» – ни тиклем наҙлап, яғымлы өндәшеү.

Ноталарҙы күсереп яҙыусы. Һөнәре шул. Скрипкасы булырға хыялланған, консерваторияла уҡығанда ҡулы имгәнгән. Күпме моңдо күсереп яҙып бирә, тик үҙе уйнай алмай. Ярай әле шиғырҙарҙы күсереп яҙыусы һөнәре юҡ. Әммә шуны кәсеп итеүселәр юҡмы ни?

Үткер уйҙар үтмәй хәҙер,
Үтмәҫ уйҙар ғына үтә.
Таланттар талана,
Ҡыйыуҙарҙың башы ҡыйыла,
Тыйнаҡлыҡ тыйыла.

Үлемһеҙлек тураһында хыялланыусы көйгән үлән күрһә, әжәл иҫенә төшә, тауҙан таш тәгәрләһә, әжәл иҫенә төшә, ҡороған ағас күрһә, әжәл иҫенә төшә.

Төштәрендә лә һаташа: алда уны ҡәбер көтә, артта уны ҡәһәр көтә. Уңда ла үлем, һулда ла үлем.

Бындай ғазаптар менән йәшәргә яҙмаһын.

Бер уйлаһаң, үлем күпме ғазаптарҙан ҡотолоу бит. Юҡҡамы ни мариҙар бала тыуғанда илай, кеше үлгәндә уйнай-көлә, байрам итә, тиҙәр. Ысын булһа, бик үҙенсәлекле фәлсәфә бит.

1983 йылдың 25 сентябрендәге бер күренеш. Дим туғайындағы барлыҡ тополдәр ҙә яп-аланғас. Яр ситендә ике тополь генә ялҡын кеүек янып, алтын кеүек балҡып ултыра. Был ике тирәкте яҙмыш нисек йәлләгән?

Бәндәләрҙең генә түгел, ағастарҙың да яҙмыштары тигеҙ түгел. Береһе кәкре, береһе туры. Береһе йәшел, береһе ҡорой.

Дим ярындағы алтын ағастарҙың йылғалағы алтын шәүләһе. Әкиәттәрҙәге һыу аҫтындағы алтын һарайҙарың ары торһоң!

Юҡҡа булды ашҡыныуың –
Рәте юҡ аш-һыуыныңың.

Ҡуштан – аҫыртын дошман.
Ҡуштан – йылмайыусы йылғыр дошман.

Юғалтырым тип ҡурҡма һин –
Юҡты булмай юғалтып.

Ҡулдан яҙма, ҡулъяҙмам!
Ҡәҙерләмәй фәрештәһең, нехт ферштейн!
Бирәм, бирәм, сабыр ит, ас бирән!

Киләсәктә тағы ла ҙурыраҡ рәхәтлектәр килтерер рәхәтлектәр өсөн генә көрәш!

Ауыҙ тултырып икмәк ашаған саҡтарыңды астар алдында ауыҙ тултырып һөйләмә!

Иван Хөббөтдинович Сарымсакский.

Нахаҡҡа һуҡраныу

Тышта ямғыр яуа. Икәү һөйләшә.

– Был синоптик тигәндәрен әйтер инем инде. Кисә генә иртәгә яуым-төшөм булмаясаҡ, тигәйнеләр. Шулай тип вәғәҙә бирәләр ине, бөгөн күнәкләп яуа.

– Ниңә һуҡранаһың әле?

– Ҡулдарынан килмәгәс, күрәҙәлек итмәһендәр. Һүҙҙәрен ташҡа үлсәйем!

– Әйт әле, бына һин бөгөн бисәңдең һине ниндәй кәйеф менән ҡаршы алырын беләһеңме?

– При чем бында минең бисә?

– Юҡ, юҡ, һин миңә әйт әле, бисәң бөгөн йылмайып ҡаршы аласаҡмы әллә ыржайыпмы?

– Мин эш хаҡын уға туп-тулы, теп-теүәл көйө алып ҡайтып биргән көнөмдә генә ниндәй кәйефтә булырын точно әйтә алам.

– Шул-шул бына, туған! Һин егерме йыл бергә йәшәгән ҡатыныңдың бөгөн кискә нисек ҡаршы алырын белмәйһең. Ә үҙең синоптиктарҙың иртәгәһе көндөң ниндәй булырын һис бер хатаһыҙ әйтеүҙәрен таптыраһың. Күктәге хәлдәр һинең өйөңдәге хәлдәр ише генә түгел бит.

Ишегенән керә ише генә.

Тормошто, осорҙо, тарихты, кешеләрҙе, үҙ яҙмышыңды төрлө яҡлап, хәрәкәттә аңлау, байҡау тәжрибә менән генә килә. Башта – донъя һәр саҡ бер төрлө, һин һәр саҡ йәш булырһың кеүек.

Булмаҫ тимә

Ирен бисәһе бикләп китә. Ир баш төҙәтә алмай. Күршеһенә шылтыратып, бау менән аҡса төшөрә, бау менән араҡы күтәрелә. Күршегә лә өлөш сыҡмай ҡалмай. Телефон аша сәкәштереп эсәләр.

Шартлау

Урал тауҙары аша юл һалыу. Ауылдағы үҙгәрештәр. Аҡһаҡал. Йәштәрҙең ситкә таралыуы. Шартлау ваҡытында ер ҡатламдары ғына түгел, кеше характерҙары ла асыла.

Шартлау ваҡытында имгәнеп, больницаға эләккән егет. Унан баш тартыусы ҡыҙ.

Был сюжет күптән күңелдә яралғайны. Тик үҫтереп алып китеп булманы. Шул эскиз көйө генә ҡалыр һымаҡ. Драмаға әйләнергә тейеш ине.

24 март, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Совет заманындағы күренештәрҙән: ҡалала йәшәгән улдары квартираларын ҙурайтырға тип ата-әсәләрен ауылдан килтермәйенсә генә үҙҙәренә прописать итәләр.

Былары фатирҙарын ҙурайтҡас, башҡа ҡалалағы, балалары үҙҙәренә яҙҙыралар. Уларҙан һуң башҡалары һ.б.

«Сәйәхәттәге» ҡарт менән ҡарсыҡ аптырап һөйләшә:

– Беҙ әле ҡайһы ҡалала йәшәйбеҙ әле?

Һаҡал ҡырыу

Улдары ҡаланан һаҡал үҫтереп ҡайта. Әсәһе быны бер ҙә оҡшатмай. Иртән башы ауыртҡан атай кеше ҡатыныныңҺаҡал тураһындағы борсолоуын көсәйтеп ебәрә. Әйҙә, һаҡалыңды ҡырып ташлаһаң, бер литр ултыртам тип әйт, тип ҡатынын ҡоторта. Әсәйең шулай тип әйтһә, риза бул, тип улын да өгөтләй. Шулай итеп, егеттең һаҡалы ҡырыла. Был эштә барыһынан да нығыраҡ, әлбиттә, атай кеше ота.

Үҙенең исеменән башҡа бер кемде лә хәтерләмәгән һуғыш йылдарының етем балаһы. Аҙаҡ ул һәр кешелә үҙенең ата-әсәһен таный кеүек.

«Ял йортонда яңы йыл». Ошо исемдәге комедия йәки моңһоу драма. Ваҡиғаларҙы ошо тантаналы сәғәткә килтереп төйнәргә. Төрлө быуындар, ҡараштар, яҙмыштар ҡаршылығы.

Ир менән ҡатындың бар белгәне байлыҡ йыйыу. Көнө буйы машиналарын йыуалар, келәмдәр, затлы тиреләр ҡағалар. Улар ишек алдындағы ҡоролмаға эленгән. Был икәү шулар араһында йөрөп һөйләшә. Береһе икенсеһе артынан ҡалмай йүгергеләй.

Даһиҙың тәьҫир көсө. Сталин һуғыш ваҡытында Татарстандың төнгө дежурҙағы идеология секретарына шылтырата. Фамилияһын һорай. Теге секретарь аҙаҡ һөйләй икән: «Фамилиямды ҡапыл онотом да ҡуйҙым. Әле генә тел осомда тора ине».

В. Беловтың бер романы «Все впереди» тип атала торғайны. Мин дә шул рухта шиғырҙар яҙғайным. Беҙҙә шундай психология тәрбиәләнде. Беҙҙең быуын гел иртәгә, иртәгә тип өмөтләнеп йәшәне.

О. Берггольцтың «Никто не забыт и ничто не забыто» тигән һүҙҙәре ташҡа ғына түгел, күелдәргә лә уйып яҙылғайны. Ташта улар бәлки һаҡланғандыр, тик күпме күңелдәрҙән юйылған. Хәҙер «Все забыты, все забыто».

Кеше хәтере ниңә шулай сәйер ҡоролған? Һуңғы ваҡытта бигерәк тә яҡшылыҡ онотола, яманлыҡтар, яуызлыҡтар еңә. Кешеләге яһиллыҡты, әлбиттә, бик мәкерле сәйәсәт ярһыта. Ғәрәп илдәрендә ил етәкселәрен язаланылар, әле Украинала ниндәй хәлдәр бара! Ниңә әҙәм балалары яман ҡотҡоға шулай бик тиҙ бирелә? Әхлаҡ нигеҙҙәре ниңә шулай тиҙ ҡыйрала? Ә кешелектең бөйөк китаптары (Библия, Ҡөрьән) меңәр йылдар буйы кешеләрҙә яҡшылыҡ тәрбиәләргә тыры-

ша. Тик күпме тырышлыҡтары һаман да бушҡа китә. Яманлыҡ кешегә бик тиҙ һәм бик ныҡ йәбешә. Сүп үләндәре лә шулай бик тиҙ ҡотороп үҫә, һин тәрбиәләргә тырышҡаныңды баҫып китә бит.

Драманың күпселек күренештәрендә эпизодик булһа ла баштан аҙаҡҡа тиклем ҡатнашырға тейешле коляскалағы инвалид.

Ул хәрәкәт итә алмай, кемдеңдер хаҡлылығын йәки ғәйебен эш менән раҫлай алмай.

Ул күҙәтә, барыһын да күрә, туҡтауһыҙ уйлана, һәр нәмәгә үҙенең ҡыҫҡа, әммә тапҡыр баһаһын бирә.

Заманында осоусы булған был кеше үҙе хаҡында ирония менән һөйләй. Уның үҙ толпары – арбаһы, үҙ сәхрәһе – өйҙәге бүлмәләр, үҙ ҡаяһы – балкон, үҙ даръяһы – крандағы йәки ванналағы һыу һ.б.

25 март, 2014 йыл. Шишәмбе.

Һаман китаптарҙы тәртипкә килтерәм. Немецтарға сәйәхәттәрҙә бүләк ителгән альбомдарҙы һ.б. матур баҫмаларҙы БДУ-ның сит илдәр факультетына бирергә тим. Сәнғәт буйынса бик матур альбомдар һ.б. баҫмалар бар. Уларҙы туплап бөтөргәс, Рәми ағайҙың улы Азамат Ғариповҡа бирермен тим. Ул бит рәссам, уҡытыусы, эшендә файҙаһы тейер.

Сыуашстан буйынса байтаҡ баҫмалар бар, уларҙы сыуаш мәктәбенә бирергә уйлайым. Байтаҡ китаптарҙы Зөфәр Вәлитов ала. Татарстанға бәйләләрен татар гимназияһына тапшырыр.

Тағы ла бер тупланма йыйыла, уларын берәй ҡәләмдәшкә бүләк итермен.

Уларҙың барыһы ла ҡәҙерле хәтирә, күңелгә яҡын. Әммә ваҡытында тейешле ойошмаларға, кешеләргә тапшырып ҡалайым. Аҙаҡ әрәм булып бөтәмһендәр.

Китаптар араһынан «Три поэмы о В.И. Ленине» (1982) тигән бәләкәй генә, матур ғына йыйынтыҡҡа ингән үҙемдең «Поющие скалы» тигән поэмамды ҡарап сыҡтым. 1970 йылда Лениндың 100 йыллығына яҙғайным. Был китапҡа Дим Даминов тәржемә иткәйне. Яңынан уҡыным, һәйбәт эшләнгән. Бәлки бер аҙ ҡыҫҡартып, баҫырға әҙерләргә кәрәктер.

1978 йылда Мәскәүҙә «Современник» нәшриәтендә Василий Казанцев тәржемәһендә минең «Поющие скалы» тигән шиғри йыйынтығым баҫылып сыҡҡайны. Китапҡа исеме бирелһә лә, «Йырлы ҡаялар» поэмаһы унда юҡ. Ниңәлер русса бер китабыма ла индермәгәнмен.

«Три поэмы о В.И. Ленине» китабына Р. Ниғмәтиҙең «Большевик» (В. Луговской тәржемәһе), М. Ғәлиҙең «Песня Агидели» (перевод А. Зайца и В. Фирсова) ингән. Иң ҡыҫҡаһы – минең «Йырлы ҡаялар».

Аҡмулла. Уның хаҡында шәлкем йәки шиғри драмалыр – был уй миндә күптән йәшәй. Ун туғыҙынсы быуат менән хушлашыу, Аҡмулланың «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» тигән ораны менән егерменсе быуатты ҡаршылау. Халыҡҡа хеҙмәт итеү уйы менән яныу. Шәхси фажиғә һәм халыҡ фажиғәһе.

Ике Аҡмулла. Рухи үҙгәреш, шағир яҙмышы.

Ике Аҡмулла. Ғүмерен мәғрифәткә, халыҡҡа арнап, мөхәббәтте, шәхси бәхетте инҡар итеүсе йәш Аҡмулла.

Ғүмеренең һуңында наҙға, йылы ҡарашҡа һыуһаған, мөхәббәтен эҙләүсе Аҡмулла.

Шағир һәм ата. Шағир һәм әсә. Аҡмулланың бәләкәстән әсәһеҙ ҡалыуы, ярым етем үҫеүе. Ошоларҙың холоҡ-ҡылығына йоғонтоһо. Кешеләргә мөнәсәбәт. Дыуамаллыҡ, уғрылыҡ осраҡтары.

Ғүмере буйы күҙ алдында торған әсә образы.

Аҡмулланың төрмәләге уйҙары. Үҙегеҙҙең ғүмерегеҙҙе оҙайтырға, тарихта ҡалырға теләһәгеҙ, минең ғүмеремде оҙайтығыҙ, тип яуыздарға өндәшеү. Төрмәләге ҡәрҙәш-серҙәштәре (тәҙрәләге ҡошсоҡ, тәҙрәгә бәргән ямғыр, сыҫҡан) менән һөйләшеү.

Аҡмулла һәм уны ғүмере буйы уйлаусы ҡыҙ образы. Ҡыбай саба, ҡыуып етә алмай. Туҡтап көтөп ултыра, көтөп ала алмай. Ҡыуып етеп килгәнен күрһә, үҙе ҡаса.

Аҡмулла үлгәс тә, «Аҡмулла» булып йөрөүсе (1912 йылдарға тиклем) шағир тураһында риүәйәттәр. Бәлки ике Аҡмулланы осраштырырға кәрәктер.

«Шәл бәйләнем, шәл бәйләнем...» Ғаиләнән ситтә үҫкән етем ҡыҙ шәл бәйләргә өйрәнә алмай ҡала. Ә уның тыуған яғында шәл бәйләй белмәүсе ҡыҙҙың ҡәҙере юҡ.

31 март, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Яҙ ҡуҙғалып китә алмай. Ҡар быйыл бик күп, ташҡын баҫыу ҡурҡынысы бар.

27-дә БДПУ-ла студенттар менән осрашыу. Ҙур аудитория шығрым тулған, төрлө курстар, төрлө группалар. Бабич тураһында лекция, тип иғлан иттеләр. Ентекле генә һүҙ әйттем, шығырҙар уҡыным, һорауҙарға яуап бирҙем. 28-дә Бабичтың һәләк булыуына

95 йыл. Осрашыу шуға арналды. Был тарихи фажиға ҡайғыһын башҡа берәй ерҙә билдәләнеләр микән?

Һәйбәт әҙерләнгәндәр. Бабичҡа арнап, конкурс үткәргәндәр, еңеүселәрҙе бүләкләнеләр.

Осрашыуҙы асып ебәргәндә тәүҙә бер ҡыҙ Бабичтың «Матур һындар», бер егет минең «Архивариус» шиғырын уҡыны. Шунан һуң минең тағы ла бер шиғыр, шунан – Бабичтыҡы. Уның шиғырҙары менән минекеләрҙе бергә уҡыуҙары нисектер күңелле лә, уңайһыҙ ҙа булып китте.

1975 йылда яҙылған «Архивариус» шиғырын үҙем дә онотоп бөткәнмен. Был кисәгә бик йәтеш, бик аңлап әҙерләнгәндәр. Бабич тураһында, уның дәүере хаҡында материалдар йыйғанда Өфөлә, Ырымбурҙа, Ҡазанда архивтарҙа байтаҡ ултырғайным. Был шиғыр ҙа шуларға бәйле тыуғайны.

28-дә ИРО РБ-ла Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияла ҡатнаштым. Пленар ултырышта ҡотлап асып ебәреү өсөн тәүге һүҙҙе миңә бирҙеләр. Шунан мәғариф министры урынбаҫары Аристархов доклад һөйләне, Мәскәүҙән Горский сығыш яһаны. Шунан һуң мин ҡайтып киттем.

БДПУ-ға барғанда ла, ҡайтҡанда ла ауыр күтәрергә тура килгәйне. Әллә шуға микән, аритмия башланды. Дарыу менән бөтөргәйнем, кисә тағы ла ҡузғалды. Туҡтата алмайым. Был хәлдәр нишләптер йышайып бара әле.

27-дә иртән сыҡҡанда еп һымаҡ ҡына һыҙылып бөтөп барған айҙы күреп ҡыуанғайным, «Ай күрҙем, аман менән, күңелем тулы инан менән, был айҙарҙа вафат булһам, хәтерләгеҙ иман менән», – тип уҡынғайным. Айҙы ҡасан ғына күрһәм дә, мин шул һүҙҙәрҙе ҡабатлайым.

Икенсе иртәлә яңы тыуған айҙы күрермен тип өмөтләнгәйнем, күрә алманым. Ул торорға тейешле урынды шекәрә болоттар ҡаплаған. Ғүмерем буйы әле генә тыуған айҙы күрермен тип эҙләйем, тик таба алғаным юҡ. Нәҡ шул ваҡытта көн боҙола.

Ҡот, ҡотһоҙ, ҡото осоу. Ҡотлау – тимәк, бәхет, бәрәкәт биреү, шуларҙы теләү. Русса ла шулай бит: благо – дарить!

Иртән урманда йөрөйөм. Көнсығыштан ҡарағанда ағас баштары ҡырауланып торған һымаҡ. Яҡтылыҡ әлегә уларға ғына төшә.

Бөтһә лә барыһы алданып,
Алдап булмай Алланы.

Ташланһа һиңә яуызлыҡ,
Тормаҫ аяп-йәлләп тә.
Яҡынайтма яһил йәндәрҙе
Рухыңдағы йәннәткә.

Һеҙгә аҡыл өйрәтмәйем,
Үҙемә үҙем әйтәм.

Күк йөҙөн уй менән байҡайһың, ер йөҙө тураһында ла күп кенә беләһең. Улар менән сағыштырғанда бик тә, бик тә бәләкәй генә булһа ла, кеше йөҙөн аңлап ҡара! Был йөҙҙәрҙән минең өсөн иң яҡыны, иң серлеһе, иң ҡәҙерлеһе – кеше йөҙө.

Аҙаҡ ваҡыт табып уҡырмын тип, китаптар, журналдар йыяһың. Ә бит ваҡыт барыбер булмаясаҡ!

Башҡаларҙан яҙған күпме китаптарҙы уҡыу түгел, үҙемдең яҙғандарымды, ҡулъяҙмаларымды, архивымды тәртипкә килтерергә лә ваҡыт еткерә алмайым әле.

Күҙ бәйләнә башлаған. Стройҙа атлап барған кешеләр ғәйәт ҙур бер ҡарышлауыҡтың шыуышып барғаны һымаҡ.

Уйлап ҡараһаң, донъяла бөтәһе лә бер-береһенә бәйләнгән бер бөтөн, барлыҡ йыһан бер организм бит.

Дим буйындағы һөйләштә «йыуанып ултырабыҙ» тигән мәғәнәне «йыбанып ултырабыҙ» тип әйткәндәрен ишеткән бар.

Йыуанһаң да йыбанма.

Твардовскийҙың ике Теркины. Был донъялағыһы теге донъялағыһынан күпкә бәхетлерәк.

7 апрель, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Апрелдең бер аҙнаһы үтеп тә китте, тик яҙ һаман да юҡ. Көн төрлөсә. Әллә шуғамы, һуңғы ваҡытта аритмия йышайҙы. Бөгөн йоҡоноң бөтөнләй рәте булманы.

Мәсеткә кергәндә муллаға табынма, аллаға табын.

Беҙҙең яҡта әйтә торғайнылар: «Аллаға шөкөр, муллаға төкөр, абыстайына – кишер!». Быны башлап әйткән кеше бик уҫал шаярған, сая булған.

Иң мөһиме – бөгөнгө проблемалар бит ул. Уҙғандарҙы хәтерләргә, һағынырға, йомғаҡтар яһарға мөмкин, киләсәк тураһында хыялланырға йәки конкрет пландар ҡороpға, перспективаларҙы асыҡларға мөмкин. Ә бөгөнгө – тик билдәле бер эш,

проблемаларҙы хәл итеү. Хәҙерге аралашыуҙарың, ҡылыҡ-ҡыланыштарың, бөгөнгө эш күрһәтеүҙәрең йәки эшкә булдыҡһыҙлыҡтарың яҙмышыңды билдәләй. Бөгөнгөнө тик бөгөн булдыра алаһың, башҡаса ваҡытың юҡ.

Компьютерҙы әлегә үҙем белгән кимәлдә ҡараштырған булам. Белергә лә кәрәктер, әммә күпме бысраҡлыҡ. Интервенция Интернета.

Элек Интернационал әүрәтте,
Бөгөн тик әүрәтеп кенә ҡалмай,
Ағыулай Интернет.
Донъя былай барһа,
Инсафлығың бөтөр,
Иманың китер бит.

Уҡыта Интернет иманыбыҙҙы!
Аң аңғыраланды, иман туҙҙы.

Әмир Абдразаҡов тураһында мәҡәләне башларға һаман тулыша алмайым. Уның тураһында иҫтәлектәрҙе уҡыным, «Дала бөркөтө» альбомы тос йөкмәткеле, тик минең шиғырҙың һуңғы строфалары төшөп ҡалған, мәғәнәһе бөтөнләй асылмай.

Көндәлектәремде ҡарайым. Байтаҡ тезистар яҙылды.

25 мартта «Ҡыҙыл таң»да Роберт Миңнуллиндың һуңғы битте тултырып тиерлек шиғри арнауҙары баҫылды. «Көндәлектәреңде уҡыйым. Башҡортостанның халыҡ шағыйре Равил Бикбаевҡа» тип башлап ебәргән. Минең көндәлектәр тураһында ихлас һүҙҙәр, төплө фекер. Рәхмәт әйтеп шылтыраттым. Башҡа бағышлауҙар Роберттың Шәммәттәге байрамында (65 йәш) ҡатнашыусыларға.

Төштә элекке үҙеңде күреү, һөйләшеү. Сәйер хәл.

4-дә педуниверситеттың актовый залында Әхмәт Сөләймәновты 75 йәше менән ҡотлау.

Ректор Асадуллин асып ебәрҙе. Яҙыусылар союзына сират еткәс, Фәрзәнә менән мине лә саҡырҙылар. Алдан бер нәмә лә әйтмәгәйнеләр. Кисә бик матур барҙы, юбиляр иң ҙур баһалауҙарға лайыҡ. Тик, ғәҙәттәгесә, тантана кәрәкле урынында ғына тамамлана алманы, ныҡ һуҙылып китте.

Ғәжәп талантлы йәштәр бар. Илештән килгән бер студентка «Урал батыр»ҙан өҙөктө (үҙәктә Һомай менән Аҡбуҙат) иң оҫта

артистарыңдан да оҫтараҡ һөйләне. Беренсе курстан бер егет башҡорт рекруттары бейеүен профессиональ кимәлдә бейене.

Урман төпкөлөндә йәшенгән
сәскә менән шишмә.
Был шишмәнең тәмен
берәү ҙә татымаған,
Был сәскәнең йәмен
берәү ҙә күрмәгән.
Сөнки уларҙың барлығын
берәү ҙә белмәгән.
Аяныслы зая матурлыҡтар,
Үкенеп уйлап,
илап ятырлыҡтар.

Башҡортса календарҙан: «1 кг бал йыйыр өсөн бал ҡортона 300 мең км осорға кәрәк, шул саҡта улар 19 млн. сәскәгә ҡунырға тейеш». Ә бал ҡорто ни бары 30–35 көн йәшәй, бер көндә 6,5 км тиҙлек менән осоп, яҡынса 7 мең сәскәгә ҡуна икән. Башҡа һыймаҫлыҡ, кеше ғүмерҙә булдыра алмаҫлыҡ егәрлелек! Шуға ла бит Ҡорьәндә «Бал ҡорттары» тигән сүрә бар.

Өйләнергәме, өйләнмәҫкәме тип һораған кешегә Сократ: «Теләһәң нимә эшлә, барыбер үкенерһең», – тигән.

Икенсе бер аҡыл эйәһе әйткән: «Өйләнеү – ул үҙеңдең хоҡуҡтарыңды ике тапҡыр кәметеү һәм бурыстарыңды ике тапҡыр арттырыу». Былары Шопенгауэр һүҙҙәре.

Ырымбур башҡорттарынан унлап кеше йыйылып, яҡташтар ойошмаһын тергеҙеү тураһында һөйләшеп алдыҡ. Был эште йәштәр менән генә эшләп буласаҡ.

Ауылда тик русса аралашыусы балалар. Йөрәк һыҙлатырлыҡ был хәлдәр беҙҙең яҡтарға ла барып етте. Кем уйлаған!

Шиғыр яҙыусыларҙың осрашыуы тураһында «Истоки» (2.04.14.) бына ниндәй һүҙҙәр менән яҙа: «Полуфинал поэтического бокса в этом сезоне», «В полуфинале принимали участие сразу две пары соревнующихся», «Потом последовал удар, и еще удар, и еще, и закончился раунд», «неоднозначный финал», «поединок»... Шиғриәт тураһында бына ниндәй телдә һөйләйҙәр. «Дуэль» тураһында ла ишеткән бар. Сәсәндәр әйтеше элек тә булған, әммә бит йыртышыу, бер-береңде туҡмау түгел.

12 апрель, 2014 йыл. Шәмбе.

Байрам көткән һымаҡ
Йыйылышты
Көтә торғайнылар шағирҙар.
Йыйылалар хәҙер хафаланып:
Кемгә тағы бысраҡ яғырҙар?

Кисә филармонияның кесе залында Яҙыусылар союзының дөйөм йыйылышы үтте. Әҙәбиәт тураһында йыллыҡ һөйләшеү 2013 йылда булғайны, һаман да һуҙылып килгәйне. Идара рәистең вафатынан һуң йыйылыш съезд кимәлендә, йәғни яңы рәис һайлау булып үтергә тейеш булып сыҡты. Күсерелеп килә торғас, кисә, ниһайәт, был эш башҡарылды.

Халыҡ һәйбәт йыйылды: 230-лап яҙыусынан 169 ағза килгән, шуларҙың 155 тауыш биреүҙә ҡатнашҡан икән, бөгөнгө тарҡау заман өсөн бер ҙә насар түгел.

Рәислеккә кандидат булып өсәү сыҡты: Наил Ғәйетбаев, Рәлиф Кинйәбаев, Игорь Фролов. Береһе лә өстән ике тауыш йыя алмаҫ, яңы турҙар булыр тип уйлағайным. 110-лап тауыш менән рәис булып Наил Ғәйетбаев һайланды. Уҙғандағы һайлауҙа ситуация ҡапыл үҙгәреү арҡаһында бик аҙ тауыш йыйған Рәлиф Кинйәбаев был юлы ҡатнашмаһа ла булыр ине, барыбер башын бутанылар. Аҙ тауыш бирҙеләр.

Көн тәртибенә яңы составта идара һайлауҙы ла өҫтәгәйнеләр. Гәрсә устав буйынса дөрөҫ түгел, сөнки 2011 йылдағы съезда идара биш йылға һайланғайны. Ул 2016 йылда ғына яңыртылырға тейеш. Был хаҡта мин аңлатып әйттем. Был эш съезға тиклем күсерелде. Йыһат Солтанов, Әсхәл Әхмәтҡужин минең хаҡта аҡырып-баҡырып торҙолар. Был кешеләргә минең ни зыяным тейгәндер, күпме ваҡыт миңә ни өсөн ҡанығаларҙыр, барыбер аңлай алмайым. Уларҙың юлын бер ҙә киҫкәнем, уларҙы нимәгәлер тәнҡитләгәнем юҡ. Ҡара көнсөллөк, тар күңеллеклектән башҡа сәбәбен таба алмайым. Мин эшләгән осорҙа Йыһат ике рәт фатир, Әсхәл Рәсәй званиеһын, орден алды.

Һайлауға тиклем идара отчеты, ижади секциялар етәкселәре сығыштары идарала билдәләнгән регламенттан ике тапҡырға артып китте. Идара рәисен башҡарыусы Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаның телмәрендә ижад мәсьәләләре бөтөнләй күтәрелмәне. Тотош сәйәхәттәр,

әйтерһең дә, СП ул турагентство. Улары ла бюджет иҫәбенә, сметала билдәләнгән аҡсаға эшләнмәгән, үҙҙәре тапҡандар, имеш. Ул ваҡытта Яҙыусылар союзы ниңә бер йылда 600 мең бурысҡа батҡан?

Йыйылышҡа ҡалын белешмә сығарылған. Элек информацион-аналитик була торғайны. Әле тик информация ғына. 2012–2013 йылдарҙа сыҡҡан китаптарҙың исемлеге бирелгән. «Китап» нәшриәте планына инмәйенсә юбилейыма минең 5 китабым 2013 йылда сыҡты. Береһе – «Ғилем» нәшриәтендә, ҡалғандары – үҙемдең иҫәптән. Минең юбилейға Союз бүлгән 50 мең дә шунда инде, ҡалғандары тик үҙемдең сығымдар. «Ғилем»дә сыҡҡан «Дастан о Башкортостане» китабын йоҡа тыш менән сығармаҡсылар ине, үҙем өҫтәмә түләп, ҡаты тышлы иттем. Мин өҫтәп түләгән Фәндәр академияһы был китапты сығарыуға түләгән аҡсанан күберәк булып сыҡты.

Яҙыусылар союзы әҙерләгән белешмәләге исемлектә минең был китаптарымдың береһе лә юҡ. Гәрсә «Көндәлектәр»ҙең ике томының презентацияһы Яҙыусылар йортонда ҙур ваҡиға булып үтте. Бына шундай хәлдәр!

Һәр кандидаттың үҙ программаһы менән сығышы. Шундағы вәғәҙәләрҙең яртыы ғына үтәлһә лә, Союздың эштәре ни тиклем алға китер, хәлдәре ни тиклем һәйбәтләнер ине.

Фролов беҙҙең ойошма структураһында тел буйынса төркөмдәрҙе «автономизациялау» талабын ҡуйҙы. Тарҡатыу түгел, берҙәмлекте нығытырға кәрәк.

Эйе, элекке замандарҙа съездарға байрамдарға йыйылған һымаҡ йыйыла торғайныҡ, ижад тураһында һөйләшә, ихлас аралаша, фекер алыша инек. Ә хәҙер? Ниндәй ыҙғыш-талаштар булыр, кемгә бысраҡ өйөрҙәр тип хафаланып киләһең ҙур йыйындарға, съездарға.

Ә бит ғауғаны бер үк тамаҡ ярыусылар күтәрә. Беҙҙең бөтә ойошмабыҙ шулай икән тип уйларға ярамай, әлбиттә. Халыҡ әйтмешләй, бер бысраҡ һыйыр бөтөн көтөүҙе бысрата. Ләкин яҙыусылар һыйыр көтөүе булмаһа ла, айырым яҙыусыларҙың бысраҡ һыйырҙан нимәһе артыҡ?

Беренсе башҡорт романы, беренсе башҡорт драмаһы, тәүге эпопеябыҙ тыуған саҡтар булған. Улар – милләтебеҙҙең художество-лы-эстетик үҫеш этаптары, яңы рухи бейеклектәр.

Тәүге башҡорт вузы, башҡорт операһының, балетының тыуыуы, беренсе профессиональ рәссам, композитор, фән докторҙары һ.б. – былар барыһы ла тарихи ҡаҙаныштар бит.

Бөгөн дә «тәүгеләр» юҡ түгел. Һуңғы йылдарҙа беренсе башҡортса пасквиль тыуҙы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беренсеһе булһа ла, һуңғыһы булманы.

Әлбиттә, бит йыртыу, бәйҙән ысҡыныу, яла яғыуҙар хәҙер беҙҙең илдә генә түгел, донъя күләмендәге йәмһеҙ, әхлаҡһыҙ күренештәр. Диндең изге ҡануны буйынса, мосолман мосолманға атырға тейеш түгел, ул бик ҙур гонаһ. Әммә ғәрәп илдәрендә ниндәй ҡыйралыштар, иманынан яҙған айырым кешеләр генә түгел, тотош төркөмдәр. Ә һуң Украинала бөгөн нимәләр бара! Фашистҡа әйләнгән бер өйөр тотош дәүләтте, дәүләтселекте ҡырата. Тотош донъяла психоз.

Ләкин яҙыусыларға милләттең зиһене, намыҫы, уны яңы рухи бейеклеккә әйҙәүсе, кешеләрҙе тәрбиәләүсе булыу бурысы йөкмәтелгән бит.

Һүҙ террору күпкә ҡурҡынысыраҡ. Кеше рухын емереүсе һатлыҡ СМИ. «Расщепление душ страшнее расщепления ядра» тип яҙғайным бынан байтаҡ йылдар элек. Ул саҡтарҙа ундай осраҡтар күберәк хәүеф кенә булһа, хәҙер яман ысынбарлыҡ, массовый террор. Массированная атака СМИ ведет к массовым потерям, глобальному духовному кризису.

Матур үҫеүе һәм матур ҡартайыуы иң ҡыйыны тип көндәлегемдә яҙғайным. Иҫерек кеше үҙенең нисек булырға тейешлеген йыш ҡына контролдә тота алмай. Ҡартайыуҙың тәртибен, әҙәбен кеше үҙе көйләй, әхлаҡи талаптарҙы үҙе ҡуя ала. Шулай эшләргә тейеш.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, минең быуындан байтаҡ ҡәләмдәштәрем матур ҡартая белмәй. Эсмәҫкә, эскән хәлдә лә иҫермәҫкә мөмкин. Ә бына ҡартаймау мөмкин түгел.

Йәшлегебеҙгә кире ҡайта алмаһаҡ та, йәшлектәге ихлас аралашыуҙарыбыҙҙы, эскерһеҙ мөнәсәбәттәребеҙҙе, бер-беребеҙгә тоғролоғобоҙҙо, юғары, уртаҡ маҡсаттарға берҙәм ынтылыуҙарыбыҙҙы йышыраҡ иҫкә төшөрәйек, ошондай яҡты хәтирәләрҙә күңелебеҙҙе сафландырайыҡ.

Тоғролоғобоҙҙо ҡороғоро боҙҙо. Боҙҙай төн, уттай сүллек – туҙғытыу ил-йортто. Китһә иман, килер яман. Бөтһә оят, әҙәп, донъя ҡалыр аҙап, зар илатыр ғазап.

Егерме йәше яңы тулған Шәйехзада Бабич үҙенең сатирик экциклопедияһы «Китабеннас»та 200-ҙән артыҡ замандашына ике юл шиғыр менән ни тиклем тапҡыр характеристика биргән, әммә бер генә кешенең дә битен йыртмаған, уны кәмһетмәгән. Бөгөн етмеште

уҙған аҡһаҡалдарыбыҙ төрлө интригалар менән була, мәкер ҡора, тырнаҡ аҫтынан кер эҙләй.

Сфера влияния. Был күренеш тормоштоң һәр тармағында бар. Һәр кеше үҙенсә йоғонто яһарға тырыша. Ләкин һуңғы ваҡытта бәҙге яҙыусылар, бигерәк тә өлкән быуындыҡылар, Яҙыусылар союзы эсендә үҙ сфераһын, үҙ биләмәһен киңәйтергә тырыша.

Расширение сферы влияния писателя может происходить только среди читателей. Чем больше читателей у писателя, тем шире его сфера влияния. Как члены Союза писателей мы все равны, в нашей организации нельзя претендовать на какие-то привилегии, на роль ведущего и др. Степень писателя определяет читатель по его произведениям. Иерархию писателей также строят читатели. Они дают самую объективную оценку.

Могут быть творческие споры, дискуссии. Но они не должны вести к выяснению отношений между писателями. Главное для писателя – отношение читателя, его оценка, его принятие или неприятие. Взаимопонимание с читателями.

Бик матур һүҙҙәрҙе лә йәмһеҙ ҡылыҡтар тәмһеҙләй, һәйбәт мәғәнәһен боҙа.

«Майҙан тотоу» – ниндәй оло дәрәжә. Һабантуйҙа майҙан тотоу, көрәшеп еңеү, тормоштоң үҙәгендә йәшәү, яҡшы эштәрең менән үҙеңде раҫлау.

«Майдан» – төркиҙән күскән был һүҙ украин телендә лә һаҡланған. Ләкин һуңғы ваҡиғалар был һүҙҙе мәсхәрәләне. Майданда ҡоторонған бер төркөм вандалдар, неофашистар Украинаның дәүләтселеген ҡыйратырлыҡ киҫкенлек тыуҙырҙы. «Майдановцы» яман һүҙгә әйләнде.

Өсөнсө көн Фәндәр академияһындағы бер ултырыштан ҡайтып килгәндә Киров урамында бер ҡатын иҫәнләшеп, оҙаҡ ҡына һөйләшеп торҙоҡ. Шиғырҙар ярата икән, мине бик маҡтай. «Оноторлоҡ булдымы ни» тигән китабымды алған, әле шуны уҡыйым, ти. Минең хаҡта бер генә һүҙ әйтмәһә лә, уның шиғыр яратҡанын белеү генә лә ни тиклем ҡыуаныс булыр ине.

Мәктәпкә яҡын йәшәйбеҙ. Иртән шул тирәлә йөрөйөм. Балалар мәктәпкә бара. Ҡалала шунан да шатлыҡлыраҡ күренеште белмәйем.

Ҡоролтайҙан киткәнгә ярты йыл булды. Башта иркен тормошҡа өйрәнә алмай инем. Эшләгән саҡта аҙна һайын ҡоролтайҙа ултырыш, төрлө осрашыуҙар, кисәләр, сәфәрҙәр һ.б. Нисәмә йылдар ошондай

тығыҙ ритмда йәшәлде. Шунан һуң иркенлеккә сыҡҡас, ниндәйҙер бушлыҡ тыуҙы һымаҡ. Ярай, башта юбилей мәшәкәттәре күмде. Улары үткәс тә төрлө мәшәкәттәр, төрлө саралар табылып торҙо, әлбиттә. Хәҙер яңы шарттарға, ғәҙәти тормошҡа яйлап өйрәнәм. Уйлап ҡараһаң, кешенең тормошо ғәҙәти, даими эштәрҙән тора, тантаналар йылына бер-ике генә була бит. Элекке ваҡиғалар ташҡынынан ябай тормошҡа күсәм.

12 апрель – космонавтика көнө. 1961 йылдың 12 апреле Өфөлә ниндәй матур көн ине, егеттәр менән Ленин урамында костюмда йөрөгәнебеҙ иҫтә. Гагарин йыһанда осоп төшкәнен ишетеп, кешеләр ни тиклем ғорурланғайны, халыҡ ҡанатланғайны.

Бөгөн әле һаман ҡыш. Төндә ҡайһы бер урындарҙа 15 градус һыуыҡ. Беҙ Шамониоға килдек кисә. Бында ла 10 градус самаһы. Көндөҙ ҙә иретә алмай. Донъялар ҙа бик болғансыҡ, Бабич әйтмешләй, болғауыр. Ул «Хәлебеҙҙән бер күренеш» тигән шиғырында тотош дәүерҙәге төрлө таптарға хәтәр һүҙҙәр сәпәгән бит:

Ҡыҙҙар – иркә,
Ирҙәр – күркә,
Ҡатындар – ҡурсаҡ!
Аңҡый шәхсиәт,
Ялтырай тәрилкә,
Матбуғат – уйынсыҡ!
Күҙҙәр – йыландай,
Телдәр йыумалай.
Малайҙар үрмәләй,
Танауҙар – Һималай!

Егерме бер йәшлек Шәйхзаданың зирәк ҡарашы донъяны бына нисек үтәнән-үтә күргән. Ә беҙҙең бөгөнгө бәғзе етмеш йәштәге ололарыбыҙ йәш саҡтарында ла йүнләп күрә-ишетә алманы. Бөгөн бигерәк тә һуҡыр, һаңғырау.

17 апрель, 2014 йыл. Кесаҙна.

15-дә Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге музыкаль гимназияла минең ижад буйынса кисә бик матур үтте. Ныҡ әҙерләнгәндәр. Башта оркестр менән гимнды йырланылар. Малайҙар уҡ атыш уйнаны, араларында Рауил да бар. Миңә оҡшағанды һайларға тырышҡандар. Бер егет шиғыр уҡып, уйланып ҡалған. Уныһын да миңә «яҡынайтҡандар».

Шиғырҙар күп уҡылды, йырҙар булды. Егет менән ҡыҙ мөхәббәт шиғырҙарын ҡара-ҡаршы бик хисләнеп уҡығанда үҙем онотоп бөткәндәрен дә иҫкә төшөрҙөләр. Шиғырҙарҙы Гөлбүләк һайлаған. Режиссеры йәштәр театрынан Илнур Лоҡманов. Кисәнең сценарийын һорап алырға кәрәк. Дәрес итеп, матбуғатҡа ла бирерлек.

Бөгөн Шамонинолағы мәктәптә осрашыу үтте. Өфө районы мәктәптәренең башҡорт теле уҡытыусылары ла йыйылғайны. Башта йыр, шиғыр, малайҙарҙың бейеүе. Шунан минең сығыш. Күпме ауылдар бөткәндә яңы бик ҙур ауылдың тыуыуы, күпме мәктәптәр ябылғанда бынамын тигән яңы мәктәптең асылыуы тураһында әйттем. Шиғырҙар уҡыным. «Илемдә илемде һағынам» фильмының ҡыҫҡартылған вариантын күрһәттеләр. Бер уҡытыусы минең «Әсәй, мине таңда уят әле» тигән йырҙы матур итеп йырланы. Балалар тағы ла шиғырҙар уҡырға, һорауҙар бирергә тейештәр ине, уларын ҡыҫҡарттылар. Музыкаль гимназияға ла, бындағы мәктәпкә лә бик күп китаптар бүләк иттем. Шамонино мәктәбенә көҙгә шағирҙар менән бер төркөм булып килергә кәрәк. Традицияға әйләндерергә.

Башҡа берәү тураһында «Мин уны аңламайым», тиҙәр. Йыш ҡына кеше үҙен-үҙе аңламай, башҡа кеше уны нисек аңлаһын. «Аңларға тырышып ҡарайым» тиеү дөрөҫөрәктер.

Чем больше гражданских браков, тем слабее гражданское общество. Прочность любого общества, народа определяет прочность семьи.

Таҡ – йоп, ҡап – йот.

Бөгөн Путиндың 4 сәғәт буйы һорауҙарға яуап биреүен ҡараныҡ. Президенттың халыҡ менән ошолай аралашыуы кәрәк, әлбиттә. Төп һүҙ Украина тураһында барҙы. Һөйләшеүҙең аҙағында Рәсәй менталитетына, көнбайыш психологияһы менән сағыштырып, оҙон ғына туҡталып китте. Беҙҙә күберәк рухиәтте уйлау, Көнбайышта шәхсиәт нығыраҡ өҫтөнлөк итә, Рәсәй кешеһе үҙен башҡалар өсөн, ил өсөн ҡорбан итергә әҙер, ә уларҙа – иң элек үҙ мәнфәғәттәреңде ҡайғыртыу һ.б. Был сағыштырыуҙарҙа дөрөҫлөк булһа ла, ул фекер яңылыҡ түгел. Был хаҡта элек тә күп һөйләнелгән, әле лә йыш әйтелә.

Ләкин хәҙерге йәштәрҙә шәхсиәт бик ныҡ алға сыға, иң элек үҙ мәнфәғәттәрең менән йәшәргә тырышыу көсәйә бит. Улар өсөн рухиәт алыҫая бара.

Рәсәй йәмғиәтен бөтәһен үҙенә йыйыусы пылесос (саң һурҙырғыс) менән сағыштырыу нисектер сәйер ишетелде. Әлбиттә, Рәсәй донъяһы үҙендә төрлө менталитеттарҙың йоғонтоһон ныҡ

кисергән, төрлө милләттәрҙе бергә йыйған. Ләкин саң һурҙырғыстың төп бурысы таҙартыу булһа ла, ул сүп йыя бит.

26 апрель, 2014 йыл. Шәмбе.

Кисә дөйөм йыйылыштың дауамы – идара ағзалары һайлау Актерҙар йортонда үтте. Элекке утыҙҙан ашыу яҙыусы ингән идара бик ҙур ине, әлбиттә. Был юлы ныҡ ҡыҫҡартылды. Быға тиклем съезда ла, идарала ла ҡаралмаған бер пунктты Уставҡа индергәндәр: ике юлы рәттән идараға һайланырға тейеш түгелдәр. Шул талап буйынса бер нисә кеше яңы исемлектә күрһәтелмәне. Секция етәкселәрен автоматик рәүештә индергәндәр. Гәрсә улар съезд йәки йыйылыштан һуң яңынан һайланырға тейеш. Мин дә был талапҡа яуап бирмәйем бит, ниңә исемлеккә индерҙегеҙ, мин бик күп йылдар эшләнем тигәйнем, һеҙ бер нисә тапҡыр рәис буларағ идараға ингәйнегеҙ тип, исемлектә ҡалдырҙылар. Һайланым да ҡайтып киттем. Идараға үтеүем менән шылтыратып ҡотланылар. Риф Мифтахов, Барый Ноғоманов, Рәиф Әмиров һ.б. тауыш йыя алмаған. Гүзәл Ситдиҡованың үтмәй ҡалыуы сәйер һәм үкенесле. Шулай уҡ Камил Йыһаншин да идарала булырға тейешле әҙип.

Һуңғы ваҡытта баш күтәрмәй эшләнем. Үткән йәкшәмбе «Осрашыуҙарҙан һуң уйланыуҙар» тигән ҙур мәҡәләмде яҙып бөтөрөп, 21-дә (дүшәмбе) «Башҡортостан»ға алып барҙым. Салауат Әбүзәров менән редакторҙа булдыҡ. Йоманың ҡалын номерын (иң ҙур тиражлы) эшләп бөтөргәндәр, шуға шәмбегә тинеләр. Бөгөн «Замандаштарыбыҙға нимә булды?» (осрашыуҙан һуң уйланыуҙар) тигән исем менән бер полоса булып сыҡҡан. Кисәге йыйылышҡа өлгөрһә бигерәк шәп булыр ине лә бит, яҙып бөтөрә алманым.

Мәсьәләне яҙғанда шиғыр яҙыу теләге лә тыуғайны, ҡайһы бер юлдары ла, дөйөм рухы ла күҙ алдына килгәйне. 21–24 апрелдә «Йыйылыш» тигән бер әйбер яҙҙым.

Кисәге йыйылышта шуны тәнәфес алдынан халыҡҡа уҡып ишеттерҙем. Ҡул саптылар, аҙаҡ байтаҡтар ҡотланы.

Бөгөн Әмир Абдразаҡов тураһында мәҡәләгә тотоноп ҡараным, ныҡлап ҡуҙғалып китеп булмай. Тезистарым байтаҡ, яҙа башлаһам, оҙаҡҡа һуҙылмаҫ тип уйлайым.

Бөтөнләй яҙ булып, ер асылып бөткәйне. Кесаҙна кис ябалаҡлап ҡар яуа башлағайны, донъя тиҙ генә ап-аҡ булды. Яңынан ҡыш әйләнеп ҡайтты. Бөгөн дә ҡар ята, туңдырған.

Тулҡында тулған ай тулғана.

Ихлас бүлешеүҙе «ауыҙынан өҙөп бирҙе», «ауыҙымдан өҙөп бирәм» тиҙәр. Балаһына бүре ауыҙынан өҙөп кенә түгел, үҙәгенән өҙөп бирә, яңы ғына йотҡанынан, ашҡазанына ашыҡ-бошоҡ тултырғанынан көсөктәренә лә өлөш сығара.

2015 ғинуарында Бабичтың 120 йыллығы. Дәүләт (хөкүмәт) ҡарары кәрәк.

8 май, 2014 йыл. Кесаҙна.

Әмир Абдразаҡовтың 80 йыллығы Актерҙар йортонда һәйбәт үтте, йыйнаҡ булды – 2 сәғәт. Улдары Асҡар менән Илдар ҙа ҡайтҡайны. Ҡатыны Тәскирә таяҡҡа таянып килгән. Башта халыҡ шыйығыраҡ һымаҡ ине, аҙаҡ зал тулды. Күберәге шул беҙҙең өлкән быуын интеллигенция. Хөрмәт Үтәшев алып барҙы. Ҡыҫҡа ғына инеш әйтеп асты ла тәүге һүҙҙе миңә бирҙе. Әмиргә арналған шиғырымды уҡып тамамланым.

Программала күбеһе иҫтәлектәр менән уртаҡлашыу. Әмирҙәрҙең ГИТИС-ты бөтөрөп ҡайтҡан ҙур төркөмөнән бик аҙ ҡалғандар. Гөлли Мөбәрәкова менән Муллаян Сөйәрғолов сәхнәгә сыҡты. Кинокадрҙар, бер-ике музыкаль сығыш. Күберәк һүҙ һөйләү булһа ла, ялҡытманы. Беҙҙең әҙиптәргә кисәне бына шулай һуҙмайынса үткәрергә өйрәнергә кәрәк.

Әмир Абдразаҡов тураһындағы мәҡәләмде кисәһе алдынан яҙып бөтөрөп, «Ватандаш»ҡа бирҙем. Етенсе һанға планлаштыралар һымаҡ. Әле Динис Бүләков тураһында мәҡәләм ингән май һанын көтәм.

Кисә Марат Минһажетдинов тураһында бәләкәй генә мәҡәләмде яҙып бөтөрөп, Союзға Луизаға баҫырға бирҙем.

Беҙ бәләкәй саҡта ҡартатайымдың гел генә ағас эше менән булғаны, колхоздың бөтә «техникаһын» төҙәтергә уға килтергәндәре хәтерҙә.

Кәкре ҡаҙауҙарҙы төҙәтергә ултыртып ҡуя торғайны. Бала сағымда кәкре ҡаҙауҙарҙы күп төҙәттем. Кәкре һүҙҙәрҙе нисек турайтырға?

50-се йылдарҙа яҙма телдә рус һүҙҙәре, терминдары йыш ҡулланыла торғайны: государство, промышленность, поэзия һ.б. Ундайҙар боронғо һүҙҙәр менән алмаштырылды. Әммә хәҙер башҡорттоң көндәлек һөйләү-аралашыу телендә башҡортса әйтәһе урынға рус һүҙҙәрен ҡулланыу артҡандан-арта бара.

Таушалмаған һүҙҙәр һирәк,
Таушалмаған йөҙҙәр һирәк.

Таушала донъя,
Тышала донъя.

«Ашҡаҙар»ҙан минең исем менән «Яуҙа һынала ирҙәр» тигән поэманы биргәндәр. Шундай әҫәрең бармы ни, тип, Хәсән Назар шылтырата. Көлөргә лә, иларға ла белмәҫһең – унда нимә ҡарап ултыраларҙыр. Үҙем тыңлай алманым. 1966 йылда яҙып алынған, Мөбәрәков менән бер артистка ярһып-ярһып уҡыған. Әҫәр Ш. Биҡҡолдоҡо түгелме икән, тип уйлайым. Майҙың 28-дә уның 90 йыллығы.

29 апрелдә балалар менән Салауат һәйкәле янында. Асҡар менән Әсил самокатта рәхәтләнде.

Һәләтеңде (призваниеңды) аңлау бәхете. Әмир Абдразаҡовтың бик килешле артист булһа ла, театрҙан китеүе, ғүмерен киноға биреүе – шуның матур миҫалы.

Ниңә ай, ҡояш оҙаҡ йәшәй, әлмисаҡтан йондоҙҙар үҙ урынында яна. Сөнки барыһы ла ритмға ҡоролған. Ритм боҙолһа – һәләкәт.

«Тайну свято сохрани» – арыш баҫыуындағы ярһыу һөйөү мәле тураһында ни тиклем әҙәпле итеп әйткәндәр. Хәҙер ундай хәлдәр тураһында донъяға ҡысҡырырға, йөрәктән түгел, аҡырып йырларға әҙерҙәр. Әҙерҙәр генә түгел, шулай эшләйҙәр.

Бишенсе майҙа һыуыҡ иртәлә һандуғас һайрауын ишеттем. Илһам көн йылынғанын көтөп тормай шул.

Һин тәүге ишетһәң дә, яңы һайрай башлаған тимә. Һиңә тиклем дә ишеткән кеше барҙыр.

Кешенең милли йөҙө һаҡланһа ла, милли көйө көйһөҙләнә бара.

Милли көйҙө ҡыйын таныуы,
Милли көйҙө ҡыйын табыуы.

Шартлағайны туйға ҡойған балыбыҙ,
Шатландырҙы яңы тыуған балабыҙ.
Кем уйлаған уның яҙмышы ла
Шулай шартлар, селпәрәмә килер тип?

Баҡсала Мостай Кәримдең дүрт томлығынан (1987, минең баш һүҙ менән) шиғырҙар китабын, мәҡәләләр томын ҡараным. Байтаҡ нәмәләр хәҙер иҫкергән, шул замандың штамптарын уҡыуы ҡыйын, әлбиттә. Ләкин ағай барыбер ниндәй талант, мәҡәләләрендә

күпме фекер! Шундай аҡыл эйәләренең бөгөн булмауы ниндәй бушлыҡҡа килтерә, шул бушлыҡҡа сүп-сар, янъял, аҡыш-баҡыш тула.

Шуға иғтибар иттем: «Европа–Азия» циклында ҡырмыҫҡа йөгөн Азиянан Европаға алып сығып бара икән! Бер ҙә киреһенсә түгел. Бөтә донъя байлығы Европаға ағылғанда, меҫкен ҡырмыҫҡа нисек шулай эшләмәһен!?

Бөгөнгө йәштәр беҙҙе аңлап бөтөрмәй тибеҙ. Нисек аңлаһындар, донъялары бөтөнләй башҡаса бит. Бына минең Латип ҡартатайым (инәйемдең атаһы) Буденный менән бер йылда тыуған, бер йылда үлде. Беҙҙең йәш араһы – 55 йәш. Улар бөтөнләй икенсе дәүер – допотопный, йәғни үҙебеҙсә әйткәндә, туфан ҡалҡҡанға тиклем йәшәгән кешеләр һымаҡ күренә торғайнылар бит. Беҙҙең дә күп эш-ҡылыҡтарыбыҙ йәштәргә нәҡ шулай күренәлер. «Лер» түгел, һис шикһеҙ.

Донъяла бөтәһенән дә олоһо – Аллаһы тәғәлә. Ләкин ул бер ҡасан да иҫкермәйәсәк бит. Уның хәкиҡәтен аңлап бөтөрә алмай йәки аңларға теләмәй күпме быуындар иҫкерһә лә, юҡҡа сыҡһа ла.

Аяҡ – атлар өсөн,
Аҡыл – аңлар өсөн.
Күҙ – юлдан яҙмаҫ өсөн,
Әҙәп – әҙәм аҙмаҫ өсөн.
Ҡул – яҡшылыҡ ҡылыр өсөн,
Күңел – сафлыҡҡа тулыр өсөн...

Башҡортостан Фәндәр академияһы 75 йәшемә «История башкирского народа» тигән ете томлыҡты бүләк иткәйне. Элекке тарихтарҙан айырыла, әлбиттә. Әле ентекеле ҡарай алғаным юҡ, шулай ҙа ҡайһы бер томдар айырым авторҙарҙың мәҡәләләренән тупланған һымаҡ. Элек тә шулай эшләнә торғайны, әммә һәр автор һерәйеп күренеп тормай, бары аңлатмала ғына атала торғайны.

Бер кеше яҙған тарих барыбер нығыраҡ иҫтә ҡалалыр: Карамзин, Соловьев, Татищев һ.б. Аҡыл туплау, коллектив хеҙмәт – һәйбәт. Әммә аҡыл да, мөхәббәт тә коллектив була алмай.

Кешенең хәтер үҙенсәлеге. Шәхси көндәлектәр иң элек үҙең өсөн яҙыла, әлбиттә. Әммә улар күп нәмәне башҡаларҙың да хәтеренә төшөрә.

Нәфисә һеңлем менән (Ырымбур) телефондан һөйләшеп торабыҙ. Беҙ бында, йәғни республиканан киттә йәшәгән башҡорттар, урыҫ араһында күп нәмәнән үҙебеҙҙе кәм һанап, комплекслы булып үҫкәнбеҙ, ти. Ысынлап та шулай, быны үҙемдә лә тоям. Башҡортостанда тыуғандар үҙҙәрен был ергә хужа тип тәрбиәләгәндәр, шуға комплексланмайҙар. Ә революцияға тиклем башҡорт ҡайҙа йәшәһә лә, ниндәй губернияла булһа ла, үҙен башҡа яҡтарҙағы милләттәштәренән кәм итеп, айырылып ҡалған өлөш итеп тоймаған. Туҡсоран башҡорттарының яҙмышы Силәбе йәки Һамар яҡтарындағы башҡорттарҙың яҙмышынан ҡырҡа айырылмаған. Улар ҡайҙа ла үҙҙәрен башҡорт итеп һанаған, комплекс сиренән азат булған. Юҡҡамы ни 1917 йылда милли хәрәкәт башланғас, уның иң алғы сафында нәҡ шулар – әле республиканан киттә ҡалғандар барған. Хәҙер башҡорт донъяһы сит-ситенән кителә бара.

Әмир Абдразаҡовтың кисәһендә уҡыған шиғырымда «Ә һин бына башҡорт булып ҡара тыуып киттә Башҡортостандан» тигән юлдарым бар. Әхтәм Абушахманов үҙенең сығышында «Башҡортостанда йәшәүсе башҡорттарға ла еңел түгел» тигәнерәк һүҙҙәр әйтте. Әлбиттә, Башҡортостанда ла башҡортто ҡыҫыуҙар күп. 80–90% халҡы башҡорт булған Әбйәлилдәге ауылдарҙың хәлен Ырымбур өлкәһендә ҡайһы бер райондарҙа икәү-өсәү булған башҡорт ауылындағы шарттар менән сағыштырырлыҡмы ни? Быны тулыһынса аңлаһа, республиканан киттә йәшәгән (барып ҡына түгел, ғүмере буйы, быуаттар буйы) башҡорт ҡанын аңларға мөмкин.

Әле иртән урманда аҙ ғына кәкүк тауышын ишетеп ҡалдым. Беренсе ҡат ишеттем быйыл. Кәкүк саҡырһа, көн йылына тиҙәр.

Кәкүк саҡыра.
Йылыны саҡыра,
Кояшты саҡыра.
Тиҙерәк сыҡ ҡырға.
Ер һыуһай нурға,
Йылыға, йырға...

Баҡсаға 2–3 йыл элек үлән сәскәйнем. Бер өлөшө тигеҙ генә булып, матур үҫте. Тик байтаҡ ерҙе һаҙлыҡтағы һымаҡ түңгәктәр баҫып алды. Уҙған аҙна шуны һөрҙөрҙөм. Бик мәшәкәтле эш, түмгәккә етһә, мотоблок һикереп китә. Был түңгәктәр яңынан ҡалҡмаһа ярар ине.

17 май, 2014 йыл. Шәмбе.

Кисә Шамониноға килгәндә аритмия, хәл шәп түгел ине. Төндә аҙ ғына йоҡлаһам да, бөгөн кәйеф һәйбәт. Һыу менән булдым, мунсаға ташыным, тыштағы ваннаға тултырҙым. Өфөлә атлап-һелкенеп ала торған иртәнге бер сәғәтте бында ишек алдындағы төрлө эштәр менән үткәрергә тырышам.

Байтаҡ уҡып, яҙғылап, уйланып ултырҙым. 20-дә Мәләүезгә Динис Бүләковтың 70 йыллығына, 21-дә БДУ-ла осрашыу. Шуларға әҙерләнергә кәрәк.

Элек йыйылған байтаҡ китаптарҙы ҡарарға форсат теймәгән. 2005 йылда Ҡазанда М.Йәлилдең 100 йыллыҡ кисәһендә ҡатнашҡанда шағирҙың матур баҫмаһын бүләк иткәйнеләр. Бер тартмала кескәй өс китап. «Моабит дәфтәре»нең татарсаһы, руссаһы һәм факсимилеһе. Һуңғыһы тетрәндерҙе. Ҡазандағы сығышымда «Моабит дәфтәре» – мөхәббәт дәфтәре ул тигәйнем. Был мөхәббәт ниндәй ғазаплы шарттарҙа тыуған. Баш осоңда тиҙҙән башыңды киҫәсәк балта эленеп торғанда быларҙы яҙыр өсөн ни тиклем көслө ихтыяр, тоғролоҡ, киләсәккә ышаныс кәрәк булған! Шиғырҙарҙы ҡараламала яҙырға мөмкинлектәр булмағандыр, улар шағир күңелендә камиллыҡҡа еткерелеп, аҡ ҡағыҙға ҡойолған.

Айырыла алмай уҡыу һәм айырыла алмай һөйөү.

Беҙ уҡығанда ҡабатлау таблицаһын йәдүәл ти торғайны уҡытыусы.

Бигерәк йәл,

Онотолдо йәдүәл,

Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл.

Ауырыу сквер. Ҡайындар ауған. Был тиклем булғаны юҡ ине, күрәһең, ауырыйҙарҙыр. Ҡараусы юҡ. Сквер чувствует себя скверно. Элегерәк оскверненный сквер тип яҙғайным. Ныҡ сүпләйҙәр ине, хәҙер ҡайындар үҙҙәре ауа.

Әбүстең китабын ҡыҙы яҙып бүләк иткәйне. Ныҡлап уҡымағанмын. Ентекләп ҡарай башлағайным, әле туҡтап ҡалдым. Махсус ултырырға уйлайым. Быйыл декабрҙә Әбүстең 100 йыллығы икән. Бәлки мәҡәлә яҙылыр. «Яһил» поэмаһын яңынан баҫтырырға ине.

Әбүс тураһында Баязит Бикбайҙан яҙа-йоҙа ишеткәнем бар ине, зыяратта эшләй, тигәйне. 1968 йылдың көҙөндә Баязит ағайҙы күмгәндә Әбүс унда булдымы икән? Бик уйландырырлыҡ. Каруанһарайҙа уҡығанда улар бик дуҫ булғандар бит.

Кешенең, шағирҙың холҡо һәм уның ижади яҙмышы. Әбүс холҡо менән дә, ҡайһы бер шиғырҙары менән дә үҙенә-үҙе приговор сығарған шағир. Әмир Чаныш шундайыраҡ ине. Әлбиттә, бында үлсәм күпкә бәләкәйерәк. Был ике шәхестең тәүгеһе бөтөнләй ҙур дәүмәлдә.

Ныҡ үҫешкән әҙәбиәттәр үҫеш юлында ресурстар ныҡ аҙайған осорға килеп етмәйме икән? Нефть һ.б. байлыҡтар алынып бөткән кеүек. Шунан башлана инде төрлө һүҙ фокустары, стаканда дауыл тыуҙырырға маташыу, аптыраған өйрәктең арты менән сумыуҙары һ.б. Күрәһең, үҫеш туҡтауһыҙ булмай. Ижтимағи революциялар, техник революциялар булған һымаҡ әҙәбиәттә һәм ижадтың башҡа тармаҡтарында революция, һүҙҙең, образлы фекерләүҙең өр-яңы мөмкинлектәрен асыу талап ителәләр. Шунһыҙ яһалмалылыҡ, псевдоноваторлыҡ, штамп һ.б. артҡандан артасаҡ. «быть или казаться» – хәҙер икенсеһе күберәк.

Оҙаҡ уҡығанда йоҡлап киткеләйем. Әҙәбиәт һәм, ғөмүмән матбуғат ялҡытҡыс, ойотҡос була барамы әллә үҙем ҡартаяммы?

Шамонинола көтмәгәндә Ҡаушанбей Мизиев тап булды. Элек Төркиәлә Башҡортостан республикаһының вәкәләтлеге етәксеһе ине. Балҡар, минең шиғырҙарҙы ла тәржемә иткәйне балҡарсаға. Уның урынына башҡа кешене ҡуйғандар. Хәҙер вәкәләтлекте лә бөтөргәндәр. Бындай мәсьәләләр, әлбиттә, Мәскәүһеҙ хәл ителмәй. Бик күп файҙалы эштәр эшләгән ойошманы бөтөрөүҙән кемгә файҙа?

14-дә иртәнге һигеҙҙә юлға сығып, кис туғыҙынсы яртыла әйләнеп ҡайттыҡ. Бикестә Ишемғолов Зиннур ағайҙарҙа булдыҡ. Ағай инде 22 йыл күрмәй икән. Үҙе агроном, ә күңеле тулы – шиғыр. Минең юбилей алдынан үткәрелгән интернет-конкурста Гран-при бирелгәйне. Шуның дипломын тапшырырға Азамат Юлдашбаев, Мөнир Ҡунафин барҙыҡ. Күлдәк бүләк иттем, күстәнәс бирҙем.

Үҙе ҡараңғылыҡта йәшәһә лә, Зиннур ағайҙың донъяһы бик яҡты. Күҙле көйө ҡараңғылыҡта йәшәгән рухи һуҡырҙар бар. Ишемғоловтарҙың йорто тулы шифриәт, ихласлыҡ, миһырбанлыҡ. Ҡыҙҙары башҡорт теле уҡытыусылары. Был ғаилә башҡорт әҙәбиәте рухы менән тулған, шуға мөхәббәт менән йәшәй.

Күҙле көйө ҡараңғылыҡта,
Һуҡыр көйө яҡтылыҡта.

Тәүәкәндә уҡыусылар, уҡытыусылар менән осрашыу. Конкурста еңгән 5 уҡытыусыны, 2 уҡыусыны бүләкләү. Бында 2004 йылда булғанмын, шул саҡта автограф яҙған китабым.

Эҫе 30 градус булһа ла, ул тиклем тойолмай. Донъя нығытып йылынып, эҫереп китә алмай.

«Урал батыр»ҙы республика буйлап яттан уҡыу көнө уҙғарылды – 15.05. БДПУ-ла Аҡмулла һәйкәле торған майҙанда студенттар, балалар. Лариса Абдуллина менән Зәки Алибаев алып барҙы. Төн йоҡламай, төшкә тиклем ҡобайыр яҙҙым – «Минең шәжәрәм». Шуны уҡыным, Өфөлә Урал батыр майҙанын булдырыу, уға һәйкәл ҡуйыу, яҙып алып, бөйөк эпосты һаҡлап ҡалған Мөхәмәтша Буранғоловты, Ғәбит сәсән менән Хәмит сәсәнде шул майҙанда һынландырыу тураһында әйттем. Был хаҡта мин дүрт йыл элек – «Урал батыр»ҙы яҙып алыуға 100 йыл тулыуға арналған ғилми конференциялағы сығышымда әйткәйнем. Әле ҡабатланым. Был мәсьәлә буйынса халыҡ фекерен ҡуҙғатырға кәрәк.

Тәүәкәндә бик күп китаптар бүләк иттем. Шулай уҡ 70 йәшемә, башҡа ваҡиғаларға бәйле сығарылған газета-журналдарҙың ҙур бәйләмен ҡалдырҙым.

18 май, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

«Когда говорят о деидеологизации, речь идет о том, чтобы расчистить поле для СВОЕЙ, для выгодной себе идеологии. Собственно, именно так и происходило в России в процессе и после перестройки.

Нашим геополитическим противникам (как и любому противнику) выгодно ослабление нашего народа. Лучшим средством для этого является воспитание презрения к собственной стране, ее истории, ее деятелям – всего того, что прежде составляло источник силы народа. Надо признать что сделано это было успешно».

«...запрет государственной идеологии, о чем написано в Конституции» (Татьяна Воеводина, Свободное поле идеологии. – «ЛГ», 7.05.14)

Вера и безверие. Иман һәм иманһыҙлыҡ. Иманһыҙ тип юҡҡа әрләмәгәндәр. Кеше ышанып, маҡсат менән йәшәргә тейеш. Совет идеологияһы ла үҙенсә иман, ышаныу, инаныу бит.

Ошолар тураһында уйланып, мәҡәлә яҙырға кәрәк. Был мәсьәлә һәр саҡ, бөгөн бигерәк тә актуаль. Милләт бәләкәйерәк булған һайын уның үҙен һаҡларға тырышыуы нығыраҡ, иманы, йәғни идеологияһы көслөрәк булырға тейеш.

23 май, 2014 йыл. Йома.

20-дә Смаҡта Динис Бүләковтың 70 йыллығында. Башта һәйкәле янында, унан һуң Динис Бүләков исемендәге Арыҫлан урта мәктәбендә. Һәйкәлдең авторы Динисте аңлаған тиерлек. Яҙыусының асылын бик һирәк скульптор күрһәтә ала. Һәйкәл янында тәүге һүҙҙе миңә бирҙеләр. «Тәбиғәттең теле асылған саҡ» тигән шиғырымды һөйләп башланым. Тәбиғәттең яңырған, саф сағы. Был шиғырҙы Динис тере саҡта уның тыуған көнөндә – 18 майҙа уларҙа уҡый торғайным. Динис үҙе лә яҙ һымаҡ алсаҡ кеше ине.

Музейында булдыҡ. Шунан мәҙәнит йортонда халыҡ менән осрашыу. Зал шығрым тулы. Оҙаҡ барһа ла, ялҡытманы. Бик матур әҙерләнгәндәр. Көрәшселәре күп икән, уҡыусылар. Миҙалдары менән призерҙар сәхнәне тултырҙылар. Мәктәптә 80 уҡыусы, күрше ауылдарҙан да йөрөйҙәрҙер, интернаттары бар. Уҡыусылар бик күп булмаһа ла, һәләтлеләр, концертта ныҡ ҡатнаштылар. Динистең ҡыҙҙары, кейәүҙәре, ейән-ейәнсәрҙәре, туғандары сәхнәгә сыҡты, саф башҡортса һөйләүҙәре бигерәк тә ҡыуандырҙы. Беҙҙең яҙыусылар мөхитендә бындай хәлдәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик күп түгел.

Музейҙа ла, кисәлә лә һүҙ әйттем. Ҡыҙыҡ тап килеү: мәҙәниәт йортондағы һүҙемде «Ватандаш»тың 5-се һанын башлап ебәргән мәҡәләмдең һуңғы абзацын – Динистең сәңгелдәге тураһындағы юлдарҙы уҡып тамамланым. Ә музейҙа шул сәңгелдәктә үҫкән бер ир-егет ошо хаҡта һөйләгәйне.

Мәләүездә «Тамаша»ның баш мөхәррире Сөләймән Латиповтың машинаһында йөрөп ҡайттыҡ. Журналдың ике һанын биргәйне, ҡайтҡас, ҡарап сыҡтым. Йөкмәткеһе лә, биҙәлеше лә яҡшы яҡҡа үҙгәргән. Сөләймәндең үҙенең инеш һүҙҙәре лә һәйбәт.

Яҙыусылар союзының автобусында Наил Ғәйетбаев, Сабир Шәрипов, Ғәлим Хисамов, Зөһрә Ҡотлогилдина, Айгиз Баймөхәмәтов барҙылар.

21-дә Башҡорт дәүләт университетының актовый залында осрашыу. Апрелдә үтергә тейеш ине, ректор үҙе булам тигәс, тура килтерә алмай күсереп килделәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Николай Данилович Морозкин барыбер була алманы: ШОС – БРИКС илдәренән килгән ректорҙар кәңәшмәһендә ҡатнашты.

Осрашыу теүәл ике сәғәт барҙы. Яңы декан Риф Барый улы Әхмәҙиев бик төплө инеш һүҙ әйтте. Азамат Юлдашбаев, Лариса Абдуллина, Мөнир Ҡунафин ҡатнашты. Рауилә Мәсәлимова, Юнир

Һағынбаев йырланы, Миңлеәхмәт Ғәйнетдинов баянда уйнаны. «Шоңҡар» түңәрәгенән өс ҡыҙ шиғырҙарын уҡыны. Студенттарҙың бейеүе, йыры, ҡурай ансамбле һ.б. – программа матур төҙөлгәйне. Алып барыуҙар ҙа, сығыштар ҙа ике телдә, күберәген башҡортса барҙы.

Мәләүездә лә, БДУ-ла ла (китапханаға, кафедраға) бик күп китаптар бүләк иттем: биш томлығым, ике том көндәлектәр, «Дастан о Башкортостане» һ.б. Һүҙемдең тәүге өлөшөндә университетта яҙылған «Дала офоҡтары» тигән китапты асып ебәргән «Уралыма» шиғырын, шул йыйынтыҡты күрһәтеп уҡыным һәм һуңғы китабым «Оноторлоҡ булдымы ни» тигән сувенир баҫманан бер шиғыр килтерҙем, шул ике китап араһындағы эшмәкәрлегем хаҡында үҙенсә хисап бирҙем.

Ябалаҡ тик ҡараңғыла күрә. Тәбиғәт уны шулай яратҡан.

Кеше яҡтылыҡ өсөн яратылған. Әммә тик ҡараңғылыҡ тураһында һөйләүселәр, тормоштағы яҡтылыҡты күрмәүселәр аҙмы ни? Ябалаҡ кешеләр, асыҡ күҙле, әммә йомоҡ күңелле кешеләр.

Тау! Нисә йәштәһең, исемең кем? Тау әйтә: мин бит ҡарт инде исемемде лә хәтерләмәйем. Ул исемде тәүге ҡат әйткәндәр, иҫемә төшөрөп торғандар теле хәҙер юҡ инде. Улар телһеҙ ҡалды, мин дә телһеҙмен.

Туған телендә теле асылып, һуңғы һүҙен дә туған телендә әйткән кешене генә туған телендә һөйләшеп йәшәне тип була. Туған телендә теле асылып та, аҙаҡ башҡа телгә күскәндәр аҙмы ни?

Был хаҡта кемдеңдер шиғыры бар һымаҡ.

Аҙаҡ – гимн. Сиркәү ҡыңғырауҙарының һуғыуы – куранттар.

Олоғая килә, яҙыусыларҙың ҡартлыҡтарында әйткән һүҙҙәре, шул осорҙағы тураһында күберәк уҡырға тырышыу. Үҙем дә һиҙмәҫтән, мин дә шулайыраҡ була барам түгелме?

«Заманым тип тамаҡ ярмаһам да, заман ярып үтте йөрәкте» – Рәми Ғариповтың был һүҙҙәрен уның үҙе генә түгел, башҡа күп шиғырҙар ҙа ҡабатлай алыр ине. Ғөмүмән, шағирҙарҙың Аллаһы тәғәлә биргән тәҡдирҙәре шулдыр. Туранан-тура йөрәктәрен ярмаһа ла, тормош уларҙың яҙмыштарын ярып үтә. «Ер шары сатнаһа, ул сатнау шағир йөрәге аша үтә» тигән Гейнены аяуһыҙ яҙмыш ниндәй хәлдә ҡалдыра. Поэты обречены на страдания. Шағир тәбиғәтенең булмышы шулай. Миҫалдар бихисап.

Спартаҡ Ильясовтың «Шоңҡар»ҙағы баласаҡ тәьҫораттарын, «Ватандаш»тағы бөркөт тураһындағы әҫәрен уҡып сыҡтым.

Сәңгелдәктән тиерлек шул тиклемге иçләү иç китерлек хәл. Ундайҙы әлегә тиклем уҡығаным юҡ. Яңыраҡ Толстойҙың «Воспоминания» тигән ҡыçҡа яҙмаһын уҡығайным. Ул да сәңгелдәктән тиерлек эпизодтарҙы иçләй, әммә ул тиклем түгел. «Детство», «Отрочество», «Юность» тигән трилогияһын да ун йәштәрҙәге сағынан башлай бит.

Әллә Спартаҡ ҡайһы бер эпизодтарға үҙенән олораҡтарҙың һөйләгәндәрен дә ҡушып ебәрәме? Һөйләшермен әле.

Бөркөт тураһында мәғлүмәттәр бик ҡыҙыҡ. Беҙҙең әҙәбиәттә булғаны юҡ. Тик бөркөт тик бөркөт булып ҡалһын, уға кешенең баһалары, комментарийҙары ҡушылмаһын ине.

15 июнь, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Нисәмә көндәр Әбүс менән булдым. Уҡыу, әҙерлек эштәре байтаҡ ваҡытты алды. Башта башлап алып китеүе ҡыйын булғайны, яҙа башлағас, Әбүс үҙенән ебәрмәй ҙә ҡуя. Әҙәбиәтебеҙ тарихында ҙур урын алырға тейеш шағир. Әммә яраҡлаша белмәгән, дөрөç һүҙе менән үҙенә-үҙе хөкөм сығарған. Мәҡәләм ҙур булды. «Ҡайтты. Ҡайтып етә алманы» тип атаным. 100 йыллығына кәрәкле баçма булыр.

Йыйылыш алдынан яҙылған мәҡәләм сараның үҙенә сыға алманы, киләһе аҙнаһына баçылды. Резонанс бик һәйбәт. Руссаһының осона сыға алмайым.

11-дә «Энциклопедия»ла Мостай Кәрим буйынса һөйләшеү. Бында эшләгәндәр, ҡайһы бер авторҙар, НРС ағзалары – кеше байтаҡ булды. Йыйылып һөйләшеү бик кәрәк ине. Директор Уйылдан Сәйетов асты, мин алып барҙым. Эштәр әле бик күп буласаҡ. Иң ҡыйыны – авторҙар табыу. Әлеге ялҡаулыҡ. Энциклопедияға мәҡәлә яҙыу ғәҙәти мәҡәләнән күпкә ҡатмарлыраҡ. Бында ҡабул ителгән ҡалыптан сығып булмай. Күптәрҙе шул ҡурҡыта. Гонорары ла юҡ тиерлек.

Яҙмыш ҡәләмдәре ҡулда булһа,
Былай яҙмаç инек тәкдирҙе.

Шағирҙың яҙмыш ҡәләме үҙенең ҡулында. Ысын шағир тик ысынын яҙа. Шуның менән үҙенә-үҙе хөкөм сығара, үҙен язаға дусар итә. Әбүс шундай шағир. Әбүс беҙҙең иң рәйетелгән шағир түгелме?

12-дә Салауат һәйкәле янында шиғыр байрамы. Барышлай күрҙем: Салауат проспектында төҙөлөп ятҡан мөһабәт мәсеттең ике

манараһына ай күтәргәндәр. Сығышымда шул хаҡта әйттем, «Йыйылабыҙ йыл да Салауатҡа» тигән шиғырымды уҡыным. Майҙанда халыҡ күп булһа ла, беҙҙең сәхнә янында бик туҡтап бармайҙар.

Асҡар пониҙа һыбай йөрөнө. Бүләмде атҡа ултырттым. Тик аты бәләкәй генә. Донъя шулай ваҡланамы?

Донъяла ике ғәжәп һүҙ: кешенең тәүге һүҙе һәм һуңғыһы. Телең ниндәй телдә асылһа, һуңғы һүҙең дә шул телдә булһын ине.

Берәү шулай тиергә лә мөмкин:

– Уның менән ожмахта түгел, тамуҡта ла бергә булырға яҙмаһын.

Ҡайһы саҡта ҡалалағы йортта ла, баҡсала ла тик ваҡытлыса йәшәйем һымаҡ. Уйлап ҡараһаң, ысынлап та шулай бит: барыһы ла тик ваҡытлы ғына шул!

Һөйөү һүҙен улар ишетмәйҙәр,
Наҙ-иркәне тоймай һәйкәлдәр.
Күҙгә-күҙ булмай шул ҡарашып,
Ҡараштарын
Мәңгелеккә төбәй һәйкәлдәр.

Май аҙағында – июнь башында ун көн һыу инеп ҡалдым. Күлгә бер сәғәт атлап барам, бер сәғәт атлап ҡайтам. Әле көндәр ямғырлы, һыуыҡ.

«Күл кәпәсте систерә...» Бының мәғәнәһе шунда: ел баштан еңелсә фуражканы осора яҙа. Күл янынан ҡулыңа тотоп үтәһең. Һыуға барып төшһә, йөҙөп алғы килмәй бит.

Алдаһа, кәкүк алдаһын,
Алдамаһын ҡалғаны.

Ташландыҡ өй һәр ваҡыт һағышлы уйҙар уята. Бигерәк тә ҡалала ташландыҡ йәки емерек өйҙәр янында яңы бейек йорттар ҡалҡып сыҡҡанда.

Арта бара бит тәре,
Булмағастың биттәре!
Емерелгәнгә бикәре...

Йырлауҙары! Йырлау зары!
Ҡоралдары! Ҡорал – дары!

Безразличие – битарафлыҡ, барыберлек.

Йылдарың артта ҡалмаһын,
Киләсәккә күсә барһын.
Уҙғаның киләсәгеңә әйләнһен.

Тарихты улар тыуҙырған,
Киләсәкте – беҙгә.

Ҡайһы бәләҙурыраҡ: насар шағирмы, насар уҡытыусымы? Иң яманы: шағирҙың да, уҡытыусының да булмауы...

25 июнь, 2014 йыл. Шаршамбы.

Өфө йүкәләре – башҡалабыҙҙың төп матурлыҡтарының береһе. Әле күкрәп сәскә ата. Ҡайһы ботаҡтарҙа япраҡты сәскә ҡаплаған. Был матурлыҡ япраҡтары менән биткә һарылып, үҙе күҙгә кереп бара бит. Ә шуны йөҙәрләгән шағирҙар араһынан Назар Нәжмиҙән башҡаһы күрмәгән! Ғәжәп бит! Күрәһең, шағирҙар йөҙәр түгелдер, ҡараштары Назар ағайҙыҡы һымаҡ үткер, күңелдәре һиҙгер түгелдер.

Минең бер шиғырым бар: «Йүкәләрҙән һығылып бал тама, йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда ҡулың барыр нисек балтаға?» Ләкин бында һүҙ башҡа хәлдәр тураһындараҡ.

Ят йылғаға ҡушылып аҡмайыҡ,
Яттарҙың бесәнен сапмайыҡ,
Яттарҙың утынын яҡмайыҡ,
Йолабыҙҙы башҡаға яҡмайыҡ,
Яттар ҡыуған юлдан сапмайыҡ,
Асылмаған ҡапҡаны ҡаҡмайыҡ,
Башҡаларҙың күңелен ватмайыҡ,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлайыҡ...
Сит юрғанды өҫкә япмайыҡ,
Ғәйепһеҙҙән ғәйеп тапмайыҡ,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ яҡлайыҡ,
Йөҙөбөҙҙө үҙебеҙ аҡлайыҡ,
(Көн һауалағансы ятмайыҡ)

Алға атлайық, йоқлап ятмайық.

Липкая липа. Балы ҡулға йәбешә.

Үҙе йыйнаҡ,
Үҙе тыйнаҡ.

Быйыл баҡсала еләк шул тиклем уңған – балалар ҙа, үҙебеҙ ҙә кинәндек. Түтәлдән – өҫтәлгә.

Юрий Андрианов тураһында Әмир Әминев иҫтәлектәр китабы әҙерләй. Баҡсала мәҡәлә яҙҙым. Юра һәйбәт егет, ышаныслы иптәш ине.

Журналды етәкләргә әҙерлекле килде, ҙур эштәрҙе уға тиклем дә байтаҡ эшләгәйне (нәшриәт, тәржемә). Журналға килгәс, яңы ҡолас, яңы мөмкинлектәр менән дауам итте.

Февраль уртаһында иртән йөрөгәндә ҡараңғыла йығылып яурынымды (һул ҡулбаш) бик ныҡ бәргәйнем. Һаман һыҙлай.

Андреевка ауылына (сыуаштар) быуын ултыртыусыға барҙым. Ире сыуаш, үҙе мордва ҡатыны икән. Тотоп ҡарау менән, ҡулбаштың бер һөйәге сыҡҡан тине – «головка полетела». Төрлөсә ҡыҫҡылап, ултырттым тине. Бик ауыртһа ла түҙҙем. Әле лә һыҙлап тора. Ауыртыр әле тигәйне, оҙаҡҡа барырмы?

Яҙыусы тигәндәренең дә күптәре ялыусы икән.

Кисә Яҙыусылар союзында булдым. Әле генә 15 ағза алғайнылар. Улары һәйбәт булды – һәләтле йәштәр күбеһе. Бөгөн идарала тағы ла ундан ашыу кешене раҫларға тейештәр. Көҙгә – тағы ла бер төркөм. Сама бөтөнләй онотолдо. Наилға ла, Әмиргә лә әйттем.

Идараға барманым.

Пенсионер ритмына күсеп булмай. Минең өсөн ундай ритм бәлки мөмкин дә түгелдер. Ырымбур яҡтарына йыйынабыҙ. Юбилейҙы тыуған яҡтарҙа йомғаҡлап ҡуйырға кәрәк.

Салауат йыйыны һүрелгәндән һүрелә бара. Хәҙер Халыҡ ижады йорто район күләмендә үткәрә. Салауатты төрлөсә хурларға тырышыусы шовинистар өсөн бик һәйбәт бүләк эшләй республика етәкселеге. Аңһыҙ рәүештә түгелдер бит инде.

20 июндә Ә. Харисовтың 100 йыллығына арналған ғилми конференцияла (ИИЯЛ) сығыш яһаным. Бөгөн «Башҡортостан»да мәҡәләмдең яртыһы сыҡҡан.

Улың үçһә, ҡулдан салғы төшөр тиҙәр. Мин ҡулымдан салғы төшөр саҡта ҡулыма электросалғы алдым. Ике йәй һәйбәт кенә саптым. Әле барғанымда боҙолоп ҡуйҙы.

Элек салғыһыҙ ир ауылда булмағандыр. Хәҙер салғы ла ҡалмай бара, ауылда ирҙәр ҙә ҡалмай бара.

Харисов конференцияһында Муса Мортазиндың китабын алғайным. «Ағиҙел»дә башҡортса сыҡҡанында уҡығайным. Беҙ, Аҡбулаҡта уҡып йөрөгән үçмерҙәр, бында Муса Мортазин яугирҙәренең, хәтәр һуғыштарҙа ҡатнашҡанлығын ҡайҙан беләйек? Был далаларға башҡорт ҡаны ла һеңгән. Аҡбулаҡта беҙ торған квартира хужаһы ағайҙың бында башҡорт ғәскәре һуғышҡанлығы тураһында һөйләгәнен яҙа-йоҙа ишеткәйнем.

6 июль, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

27–29 июндә тыуған яҡтарымда булып ҡайттыҡ: Спартак Ильясов, Хисмәт менән Тамара Юлдашевтар, Зөфәр Вәлит, артистар Рауилә Мәсәлимова, Илшат Ишморатов, баянсы Рим Гәрәев, бейеүсе Регина Баракова, Фәриҙә менән мин. Тәүге көндә Ҡаранда. Был ауылда бәләкәстән бирле булғаным юҡ ине. Клубтары иçке, әммә иркен генә. Ҡырҡ йорттан да кәмерәк ауыл өсөн ярарлыҡ.

Шофер менән ун кеше Алисоваға Зөлхизәләргә барып йоҡланыҡ. Туғаным бик ныҡ әҙерләнгән. 28-дә Ғәбдрәфиҡ – Яңауылда клубта бик матур осрашыу. Артистар менән туғандарҙың, яҡташтарҙың сығыштары аралашып барҙы. Вахитовтар йырланы. Хатта Красногвардейский районынан ишетеп килеп еткәндәр. Ҡаранда ла, кисен Зөлхизәлә лә – Көрьән ашы. Өс хәҙрәт. Ҡөрьән һүҙе менән шағир һүҙе, доға моңо менән ҡурай моңо ҡушылды. Ырымбурҙа 29-да, Каруанһарайҙа, Урал ярында, китапханала осрашыу. Ҡайтышлай Көйөргәҙе районы етәксеһе Әхәт Йәүҙәт улы Ҡотлоәхмәтов ҡурайсылар, бейеүселәр менән ҡаршы алды. Баязит Бикбай шишмәһе янында халыҡ алдында сығыш.

Тәьçораттарыбыҙ, Алла бирһә, киләһе аҙнала «Башҡортостан»да сығасаҡ. «Ағиҙел» өсөн киңәйтеп махсус яҙасаҡмын. «Утыҙ йылдан һуң» тип аталасаҡ, 30 йылда нимәләр булған да 30 йылдан һуң ниҙәр күберәк? Шатлыҡтарҙан борсолоуҙар күберәк.

Тыуған яҡтар тураһындағы уйланыуҙарымды йомғаҡлау һымағыраҡ булыр, бәлки, был мәҡәлә.

Быумәле мине, быумалы быуат!

Ниңә ҡояш оҙаҡ йәшәй?

Ниңә ай оҙаҡ йәшәй? Сөнки улар сәбәләнмәйҙәр, ҡабаланмайҙар ҙа, артыҡ яйламайҙар ҙа. Уларҙың төп көсө, таянысы – ритм.

Килде – китте. Килделе – киттеле. «Ле» генә өҫтәлә, ә мәғәнәһе бөтөнләй үҙгәрә.

Ниңә хәтеребеҙ ҡыҫҡа? Ниңә баштар бутала. Украиналағы ҡанлы ваҡиғалар. элекке заман булһа, был хаҡта шағирҙар күптән шиғыр яҙыр ине. Әлегә күренмәй. Сәйәсәттән арынылармы?

Юлдашбаевтарҙың ҡыҙы Зөлфиә менән Хәйбулла егете Фидандың эскеһеҙ туйында булдыҡ. Ныҡлы йолаға башланғыс. Аҙағына тиклем булманыҡ, көнөнә әйләндек. Тәьҫораттар һоҡланғыс. Йөҙҙән артыҡ кеше. саф башҡортса аралашыу. Ошо туйҙың сценарийын өлгө итеп таратырға кәрәк.

Был йоланы берәү ҙә ситтән килтермәгән. Боронғоно тергеҙеү.

Төнгө өҫтә Сафуан Әлибай үткән. Өйөндә булдыҡ. Әлдә Салауат районының главаһының сотовыйы миндә булған. Транспорт һ.б. тураһында һөйләштек. Иртәгә сәғәт унда филармониянан оҙатыу. Тыуған ауылы Тирмәнгә алып китәләр.

17 июль, 2014 йыл. Кесаҙна.

Ырымбур сәйәхәте «Башҡортостан»да бер бит итеп матур сығарҙылар, фотолар менән. Минең мәҡәлә, Спартак Ильясовтың, Зөфәр Вәлиттең, Хисмәт менән Тамара Юлдашевтарҙың уй-тойғолары.

Бер аҙна баҡсала булдыҡ (9–15.07). «Тамырың башҡорт икән – башҡорт бул!» тигән мәҡәлә яҙылды. Ырымбур сәфәре уға сәбәп кенә, күҙәтеүҙәр, уйланыуҙар күпкә киңерәк. Яҡташтарыма төбәп әйткән һүҙҙәрем байтаҡ. Башҡа улай өндәшеп булмаҫ – әйтеп ҡалайым.

Әбүс тураһындағы мәҡәләне Луиза баҫҡандан һуң уҡып сыҡтым. Ҡыҙыҡлы материал килеп сыҡҡан. Күләме лә байтаҡ, 36 бит.

Ырымбур тәьҫораттары ла шул сама булыр. Луизаға бирҙем. «Ағизел»дең 8-се август һанына өлгөртөргә кәрәк.

Бөгөн шиғырҙар килә башланы. Илһамлы миҙгел булыр һымаҡ.

Милләттәштәр. Миләштәр.

Һәр бер һүҙгә, һәр хәрефкә
Тулышҡан күпме хәүефтәр.

Ҡыйыуҙың һүҙен тыйҙы,
Ҡыйыуҙың йәнен ҡыйҙы.

Һине күреп, сүптәр сәскә ата,
Йыуашайып ҡала йыртҡыстар.

Аллаға ышанам ти. Кешегә ышанмай. Кеше Аллаһтың ерҙәге варисы түгелме ни?

Аллаһҡа һин, тиҙәр. Ул берәү генә. Һеҙ тиергә ул ике йөҙлө түгел бит.

Трамвай тулы әбей-бабай.

Йөрөмәй йәштәр трамвайҙа. Бөгөн трамвайҙа береһенән икенсеһенә күсеп байтаҡ йөрөнөм. Ысынлап та, элек йәштәре лә, балаларға ла ишегенә аҫылынып барған трамвай бөгөн ҡарттар транспортына әйләнгән икән. Троллейбус та шулайыраҡ бит.

Яҡташтар менән осрашыу бик ҡыуаныслы. Тик хафаларым да артты. Башҡорт ауылында балалар русса һөйләшә. Киләсәктә нимәләр күрербеҙ? Әлеге яҙмаларымдың бер бүлеген «Утыҙ йыл үткәс» тип атаным. Утыҙ йыл элек хәлдәр нисек булған да утыҙ йылдан һуң милләтебеҙ нисегерәк булыр? Ибн-Фаҙландың башҡорттар менән осрашыуына тиҙҙән 1100 йыл тула. Мең йыл буйы күпме ҡыйралыштарҙан һуң да башҡорт донъяһы, милләтебеҙ тарҡалмаған. Ә һуңғы 100 йыл меңәр йылдар һаҡланған нигеҙҙәрҙе ни тиклем ныҡ ҡаҡшатты.

Туҡсораным минән һораны:
– Илме ҡуштан,
Эшләй нимә ҡушһаң,
Ирҙәр ҡул ҡаушырып торамы,
Ишетелмәй илдең ораны!

Яҡынайһын алыҫ аралар,
Алыҫаймаһын яҡын аралар.

Хәҙерге мәғлүмәт технологиялары, компьютерҙар Вәлидиҙәр заманында булһа, уларҙың хеҙмәт даирәһе ни тиклем киңәйер ине бит.

Каруанһарайҙың 150 йыллығына арнап сығарылған китапҡа минең «Каруанһарай беҙгә ҡарай» тигән мәҡәләм ингәйне. Каруанһарай һаман да беҙгә ҡарай. Тик үҙгәреш юҡ. Мәҡәләм насар

яҙылмаған. Тик бер томымда ла юҡ. Алтынсы томды төҙөгәндә онотмаҫҡа ине.

Дала башҡорттарының байтағы бөгөн ҡала башҡорттары. Уларҙың вариҫтары бер нисә тиҫтә йылдан кем булыр? Тик үҙ мәнфәғәтен уйлап, милләтен үҙгәртҡәндәргә «ҡағыҙ башҡорт» тигән мөһөр һуғылғайны. Телен белмәгән башҡортто кем тип атарға?

Украиналағы хәлдәр башҡа һыймаҫлыҡ. Ошо ил өсөн күпме башҡорт ҡаны ҡойолған. Шаймуратов дивизияһы. Һәләк булған башҡорт әҙиптәре. Р. Ниғмәти – батькивщина. Өфө үҙенә һыйындырған. Украина менән Башҡортостан тураһындағы ике милләт шағирҙарының шиғырҙарынан антология төҙөрлөк.

27 июнь, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Йәй уртаһындағы көҙ.

Баҡсаға килдек. Өй һыуыҡ, көн һыуыҡ. Көҙгә оҡшаш әллә ниндәй йәй.

Ырымбур мәҡәләһе 30 бит булған «Ағиҙел»дең һигеҙенсе һанында китте. Әбүсте «Ватандаш»ҡа бирәм. Декабрҙә 110 йыллығы.

Ырымбурҙан ҡайтҡас, Хәсән Назар шылтырата ине, поэма яҙҙым тип. Осрашырға ваҡыт булманы, журналға мәҡәләне өлгөртөргә кәрәк ине. «Башҡортостан»да сыҡты, «Мөхит» тип атаған. Ике ҡабат уҡып сыҡтым, ентекләп уҡыным. Барыбер фекерҙе эҙмә-эҙлекле тотоуы ҡыйын. Төп фекер асыҡланып етмәгән. Төп фекерҙе бүлектән-бүлеккә үҫтерә барырға кәрәк һымаҡ. Сюжетҡа ҡоролһа, бәлки бүлгеләмәгәндә лә уҡып булыр ине. Монолог та ялҡытҡысҡа әйләнә.

Хәсән менән осраштыҡ, фекерҙәремде әйттем. Исеме хаҡында ла уйларға кәрәктер. «Мөхит» китапсараҡ, халыҡҡа үтеп етмәҫ. Ныҡлап ултыраһы бар әле.

Зәйнәп апай, Назар ағай, Рәми ағай минең хаҡта һәйбәт һүҙҙәр әйттеләр тип Хәсән быға тиклем дә яҙғайны бит инде. Ҡабатлау килешмәй.

Рәмиҙең шәкерттәрен эҙәрлекләргә тотондолар тигән һүҙ менән дә килешмәйем. Рәмиҙең абруйына һыйынып «великомученик» ҡиәфәтенә инмәйек. Тағы ла фекерҙәрем бар ине, гәзитте бирҙем. Унда байтаҡ урындарҙы һыҙып уҡығайным. Хәҙер һүҙ әйтеүе ҡыйын, бик тиҙ үпкәләйҙәр. Әйткәндәремде Хәсән аңлар тип уйлайым.

Яңы мәсеттең дүрт манараһына ла манара ҡуйҙылар. Ҡояшлы көндә балҡып тора. Был изге бина бик хозур булмаҡсы.

Дүрт тарафҡа нур тарата
Дүрт манаралы мәсет.
Дүрт яҡлы ҡибла итерҙәй
Дүрт манаралы мәсет.

Һандуғас йырын отам тип, һайыҫҡан үҙ йырын онотҡан. Халыҡтың мөхитенә бик тап килә.

Задушили душу. У бога я убогая (Россия).

Ыҡсым ғына яңы китабым тураһында уйлайым. Бер бүлеге – яңы шиғырҙар. Ҡыҫҡа шиғырҙарҙы (2, 4, 8 юллыҡтар) айырым бүлеккә йыям. Структураһы шулайыраҡ. Исемен әлегә «Аптыраҡ!» тип уйлағаным. Бөгөнгө көн бөтмәҫ аптыраҡтан тора бит.

Иҫерек туйҙар, иҫерек байрамдарҙың
Остарына нисек сығырға.
Алйытҡыстан йолҡоп, был донъяны (бар донъяһын)
Айнытҡыҫҡа илтеп тығырға!..

Башҡортостан менән танышыуым Побоище тигән яҡтарға ағаҫҡа килеүҙән башланғайны. Уйлап ҡараһаң, Башҡортостан ере быуаттар буйына тынмаған побоище бит!

Бутала бит хәләл менән харам,
Нахаҡ кейә хаҡлыҡ кейемен.

Милләт диндән юғары – бынығы йәһүдтәр. Йәһүд ҡайҙа ғына йәшәһә лә, ниндәй генә телдә һөйләшһә лә, ниндәй диндә булһа ла, барыбер йәһүд булып ҡала. Урта Азия, Кавказ йәһүде менән христиан-православ йәһүд йәки иудаист йәһүд араһында бер милләт булып берләшер өсөн дини кәртә юҡ.

Дин милләттән юғары – бынығы бигерәк тә мосолмандарға хас. Бер милләт дин буйынса мөслимгә һәм кафырға тарҡалырға мөмкин. Хәйер, хәҙер мосолмандың да бер дин эсендә бүленеше, тарҡалышы көсәйгәндән-көсәйә.

Әсә – төрмә, әсә – ҡатил, әсә – дар ағасы. Тыуыр баланы тыуҙырмаусы, йәғни аборт яһатҡан әсәләр тыуыр йәнде азатлыҡҡа сығармаусы, төрмәлә һуйыусы, дарҙа тонсоҡороусы, быуыусы палач.

Тағы ла «Манас»ты ҡараным. Тағы ла Семетей менән һәмәтәй, Сейтек менән Һәйтәк яңғырашы.

Беҙҙең яндағы мәктәп ерендә сәскә түтәлдәрен бик тәрбиәле тоталар. Иртән сыҡҡан һайын һоҡланып ҡарап үтәм. Һәр ишек алдында ошондай тәртип, ошондай матурлыҡ булһа, бөтә Өфө генә түгел, тотош илебеҙ, тотош донъя гөл-баҡсаға, ожмахҡа әйләнер ине. Уйлап ҡараһаң, быныҡ өсөн төрлө серле ҡоралдарға киткән аҡсаларҙың кескәй генә өлөшө лә етерлек бит.

Бабичты яңынан ҡарайым. Әллә ҡасан поэмаға инеш башлап ҡуйғайным, шунан ары китә алмайым. Уның хаҡында ҙәем төҙөгән иҫтәлектәр китабын уҡыйым. Ваҡытында бик кәрәкле китап эшләнгән. Тотонмаған булһам, был китап булмаҫ ине. Аҙаҡ, бигерәк тә хәҙер ул эште эшләй алмаҫ инем.

29 июль, 2014 йыл. Шишәмбе.

Ураҙа ғәйете лә үтеп бара. Ураҙа тотҡандарға һәйбәт булды, көндәр һалҡынса. һыу инеп булмай.

Рәми ағайҙың альбомын яңынан ҡарайым. Был серия мин төҙөгән Бабич альбомынан башланғайны. Ул ваҡытта мөмкинлектәр сикләнгәйне. Беренсе тәжрибә полиграфик яҡтан аҡ һәм ҡара төҫтәр менән (күпселектә) сикләнһә лә, ул альбомдың йөкмәткеһе бай. Аҙаҡ матур традициялар барлыҡҡа килде: З. Биишева, М. Кәрим, Н. Нәжми. Һ. Дәүләтшина һ.б. Композитор, артист, рәссам, дәүләт эшмәкәре һ.б. Улар хәҙер бик күп. Күптәре китап магазиндарында өйөлөп ята. Улар араһында Рәми Ғариповтың альбомы бик оригиналь килеп сыҡты. Есеме исеменә тап килерлек.

Көндәлектәренән бер мәғлүмәт: «Ырымбур өлкәһенең 8 районында (Һарыҡташ, Ҡыуандыҡ, Гай, Түлгән, Переволоцкий, Красногвардейский, Александровский һәм Новосергеевскийҙә) 1 класҡа 2204 башҡорт балаһы уҡырға бара...»

Был хаҡта белә инем, тик әле генә Ырымбур мәкәләһен яҙғанда иҫемә төшмәгән. Бик үкенесле, ошо өҙөктө килтерһәм, бик һәйбәт булыр ине бит.

Был мәғлүмәтте Ырымбурҙарға мотлаҡ еткерергә кәрәк, йылын асыҡларға. Һәр хәлдә был 2204 башҡорт балаһының күпселеге (бәлки бөтәһеләләр) башҡортса уҡытҡан мәктәпкә барғандыр бит. Быйыл Ырымбур өлкәһендә нисә башҡорт балаһы беренсе кластан башҡортса уҡый башлаясаҡ икән? Рәми ағай килтергән һандың яртыһы ғына түгел, моғайын, дүрттән бере лә юҡтыр.

Дингә ышаныу, аллаһҡа һыйыныу көсһөҙҙәр эше тип һанаусылар. Атеист Мостай Кәрим шуларҙың береһе ине. Аллаға ышанмау, йәғни атеизм, киреһенсә, тәкәберлек билдәһе түгелме? Гордыня. Быны һәр дин инҡар итә. Үҙеңде барыһынан да аҡыллыраҡ, юғарыраҡ һанау. Тарих төпкөлөнән килгән һәм мәңге дауам итәсәк бәхәс. Кемдең хаҡлы икәнлеген өҙөп әйтеп ҡара! Берәү ҙә инҡар иткеһеҙ итеп иҫбатлай алмай бит. Хәҡиҡәтте һис бер шик ҡалдырмайынса раҫлай алмау күпме боҙоуҙарға юл аса.

Ял көндәре, изге көндәр: мосолманға йома, йәһүдкә шәмбе, христианға – йәкшәмбе. Бер нәмәгә лә инанмағандар өсөн дә ял көнө бар, әммә изге көн юҡ. Иманың булмағас, иманды нығытырлыҡ изге көн ҡайҙан булһын? Ыҙғыш ерле юҡтан, диңгеҙ тубыҡтан. Һуҡыр табыныу ҙа насар, бөтөнләй табынмау ҙа насар.

10 август, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Һыуыҡҡа зарлана инек, ике көн эҫегә түҙеп булмай. Кисә күлдә һыу индем. Асҡар менән барғайныҡ, уға һыуығыраҡ.

Союздың 80 йыллығына йыйынтыҡ сығармаҡсылар. Шуға бер мәҡәлә яҙып ҡуйҙым әле. Бер-ике бит кенә булыр тиһәм, һуҙылыбыраҡ китте. Матбуғатта һүҙ барыбер кәрәк булыр. Ни генә тиһәң дә, 16 йылым Союзда үтте бит. Эшләгән эштәрҙе һөйләй башлаһаң, үҙе бер китап булырлыҡ.

«Страна проживания, т.е. родина». Горюхиндың бер мәҡәләһендә шундай һүҙҙәрҙе уҡып, аптырап киттем. Кемдеңдер һүҙен ирония менән килтермәй, үҙе бик етди әйтә бит!

Йөрәктең киңәйеүе – расширение сердца үҙенсә ауырыу. Ә күңелдең киңәйеүе? Күңел киңәйһә киңәйһен, тик тарая күрмәһен.

Донъяның бөйөк асыштары бер бит ҡағыҙға һыя. Мәҫәлән, Менделеев таблицаһы. Йәки бөйөк шиғырҙың тексы, бөйөк көйҙөң нотаһы.

Бөгөнгөнө киләсәкте ҡорбан итеп һатып алмағыҙ. Бөгөнгө өсөн киләсәктең хаҡы менән түләмәгеҙ. Киләсәк быуындарҙың бәхетен урлап, бөгөн бәхетле булыусылар – ҡәбәхәттәр. Килер быуындарҙың ҡарғыш-ҡәһәре әлеге күп кенә «бәхетлеләргә» төшәсәк.

Күңеленә кергәндән күңелендән сыҡҡан мөһимерәк. Мәҫәлән, тупланған ғилемеңде таратырға тейешһең. Китап йөкмәгән ишәккә оҡшап ҡалма.

Элек шәһит шиғырҙар яҙыла ине, янған кисерештәр, тынғыһыҙ уйҙар. Хәҙер шаһит шиғырҙар күберәк тыуа: үрһәләнмәй уйланыу, тормоштоң асылын күҙәтеү. Шағирлыҡта фәлсәфилек арта.

Әгәр гонаһлы бәндә мәңге тамуҡ утында яна икән, уның тәне бик тиҙ янып бөтөргә тейеш бит. Йәне генә һаман ғазапланыр. (Улай түгел икән. Тәнен яңыртып тора икән).

Бөйөк диндәр ожмахты гөл баҡсаһы, матурлыҡ донъяһы, ти. Кешеләрҙең дә яратҡаны – сәскә, табынғаны – матурлыҡ. Һәр дин өйрәткәнсә генә һуғышһыҙ йәшәһә, был еребеҙ күптән инде үҙе ожмах булыр ине.

Сүп үләндәренә тәрбиә кәрәкмәй. Тәрбиәһеҙ кеше шул сүп үләне һымаҡ. Көн уларға ҡалһа, донъя сүплеккә әйләнәсәк.

Беҙҙең быуынды һәм күпселек совет кешеләрен ике ҡат стандарт (двойной стандарт) менән йәшәүҙә ғәйепләйҙәр. Ярар әле ул икенсе стандарт булған. Кеше уйһыҙ буйһоноп йәшәүсе роботҡа әйләнмәгән.

Әгәр бер стандартлы ғына булһа, аңының төптәге ҡатламында халыҡ рухы, халыҡ фәлсәфәһе һаҡланмаһа, үҙе йәшәгән тормошто, рәсми ҡануниәтте, идеологик ҡағиҙәләрҙе һис бер икеләнеүһеҙ ҡабул итһә, бәлки рухи юғалтыуҙар тағы ла нығыраҡ үкендерер ине.

Тиҙ ышанып барыусы кешегә: «Һин бигерәк бер ҡатлыһың инде!» – тиҙәр. Ләкин ғәйепләп түгел, хатта нисектер яратыбыраҡ әйтәләр.

Әҙәм балаһы асылда ҡатлы-ҡатлы бит ул. Уны тулыһынса асып бөтөрлөк тә, аңларлыҡ та түгел. Кеше үҙен-үҙе аңлап бөтөрә алмағанды, башҡа кеше уның донъяһына, күңел ҡатламдарына нисек кенә үтеп инә алһын?

Тормош кимәле түбән булғанда ла тормош сифаты, рухи сафлыҡ юғары булырға мөмкин. Тормош кимәле бик юғары булып та тормош сифаты бик түбән икән, рухи аҙғынлыҡ донъяны баҫып ала икән, был дисгармония күпкә ҡурҡынысыраҡ.

Ҡайһы саҡта бер Асҡар беҙҙең өсөн донъяны алыштыра, уның төп мәғәнәһенә әйләнә.

Мысыр ҡоллоғонан ҡотолғас, Моисей етәкселегендәге йәһүдтәр 40 йыл сүллектә йөрөгән, үҙҙәренән ҡол ғәҙәте сығып бөткәнсе. Моисей үлгәс кенә ватандарына (земля обетованная) ҡайтҡандар.

Беҙҙең халыҡ ниндәй гонаһтары өсөн һуңғы 30 йыл сүллектә ҡаңғыра? Халыҡтың холҡо яҡшырыу түгел, киреһенсә, ҡырағайлана, сүл бүреһенә әйләнә бара.

Тамуҡ – геенна, шакал – гиена.
Таҙа тәртип – гигиена.

14 август, 2014 йыл. Кесаҙна.

Фәризәнең юбилейына әҙерләнәбеҙ. Бөгөн туғандар килә башлай.

Сәғәт бергә Сафуан Әлибайҙы хәтерләүгә барам. Фәризә ҡунаҡтарҙы ҡаршылай.

Тәүге китаптар (Библия) тынысыраҡ, кәңәш бирә, аҡыл өйрәтә. Уларҙан һуң килгән Ҡөрьән ҡәтғи, ныҡ аптырау һәм киҫәтеү рәүешендә. Аллаһы тәғәлә кәңәш бирә-бирә һаман да камил итә алмаған кеше менән уҫалыраҡ һөйләшә. Тәүге бөйөк китаптарҙа кәңәш күберәк, Ҡөрьән дәһшәтлерәк. Ҡабат ундай иҫкәртеү булмаясаҡ, Мөхәммәт ғәләиссәләм һуңғы пәйғәмбәр.

Бөтә байлыҡ – ауыҙға,
Бөтә яуызлыҡ – ауыҙҙан.

Эй, хоҙайым, ниңә уны
Яралттың, яратманың.

Ҡиәмәт көнөндә кире терелеү. Буддизмдағы кешенең күп тапҡырҙар төрлө рәүешкә инеп ҡат-ҡат йәшәүе хаҡындағы тәғлимәте менән ауаздаш түгелме?

Тел биҫтәһе тел оҫтаһы була алмай. Телгә бөткән, йәғни говорливый кеше оратор тигән һүҙ түгел.

Салауат Әсфәтуллиндың («Салават. Единство трех религий», Калуга, 2006) китабын уҡып сыҡтым. Ныҡ уйландырҙы. Уның бик мәғлүмәтле кеше икәнлеген белә инем. Бик уйланыусан, аҡыллы икән.

Был китапты Союзда 2006 йылда уҡ бүләк иткәйне. Уҡырмын тип һаҡлап килә инем. Нихайәт, форсат тыуҙы. Байтаҡ уртаҡ фекерҙәр таптым. «Раб божий» тигәнгә ҡаршы сыға. Әлбиттә, алла ҡоло тигән һүҙ, Аллағоловтар бар. Ләкин Аллабирҙиндәр, Хоҙайбирҙиндәр күберәк түгелме? Кешегә таралған билдәләмә – Әҙәм балаһы, Әҙәм балалары.

Шулай ҙа мин донъялағы кеше йәшәйешен юғары көстөң бөйөк тәжрибәһе түгелме икән тип уйлайым. Ниңә кешенең үҙен-үҙе үлтереүе һәр диндә лә гонаһ һанала? Сөнки бөйөк тәжрибә өҙөлә, уны кеше өҙә.

Иисус – сын Божий. Кеше лә Аллаһ улы. Иисус кешеләргә үрнәк итеп ебәрелгән: улың нисек булырға тейеш.

Ҡөрьән уға тиклемге китаптарҙы ла, Мөхәммәт ғәлиәссәләмгә тиклемге пәйғәмбәрҙәрҙе лә инҡар итмәҫкә ҡуша.

Әҙәм балаһының һуңғы һулышы. Енәйәтсе ҡабат енәйәт ҡыла алмаясаҡ, яуыз ҡабат яуызлыҡтар эшләй алмаясаҡ. Бигерәк һәйбәт! Яҡшылыҡтар килтергән яҡшы кеше башҡаса яҡшылыҡтар бирә алмаясаҡ. Ниндәй үкенесле, ни тиклем юғалтыу!

«Мостай Кәрим» энциклопедияһына ваҡ-ваҡ ҡына 10 мәҡәлә яҙырға тейешмен. Бәләкәй булһалар ҙа, күп төпсөнөргә кәрәк. Байтаҡ китаптарға яңынан әйләнеп ҡайттым, китапханамды яңынан аҡтарҙым. Күпме күңелемә яҡын, ғәзиз китаптар бар кәштәләрҙә – уҡылғандары, уҡылмағандары... Уларҙың күбеһенә бик-бик теләһәң дә әйләнеп ҡайтып булмаясаҡ, үҙемдең китапханамда булмаған күпме бөйөк китаптар минең тарафтан уҡылмай ҡаласаҡ!

Ошо ваҡытта үлемесле яраланған Пушкиндың кабинетындағы китаптарға ҡарап: «Прощайте, друзья!» тигән һүҙҙәрендәге һыҙланыуҙы тағы ла нығыраҡ аңланым. Был тойғоларҙы мин Пушкиндың Петербургтағы квартираһында булғанда ла кисергәйнем. Иң тоғро дуҫтары, иң аҡыллы кәңәшселәре китаптар булғандыр. Ысынлап та, кеше китә, ул уҡыған китаптар ҡала, тоғро булып ҡала. Ваҡыт елдәренә ҡарап ҡына улар үҙгәрмәй.

Ваҡыт елдәре,
Ваҡыт тиндәре,
Ваҡыт ендәре.

Ләкин дуҫтарың ғына түгел, элекке яратҡан китаптарың да ситкә сәселә. Элек хайран ҡалып уҡыған китаптарға ҡарашың үҙгәрә.

Мостай Кәримдең китаптарын ҡарағанда уның хаҡында уйландым. Ҡараштарым да хәҙер башҡасараҡ. Дөйөм алғанда, Мостай Кәрим һис шикһеҙ бөйөк. Әммә айырым мәлдәрендә улай түгел. Элек ғәжәп әҫәр булып күренгән «Европа-Азия» циклы, ысынлап та, шығриәтебеҙ үҫешендә ҙур ваҡиға. Әммә ундағы ихлас инаныуҙарҙың ҡайһы бер урындары һуҡыр табыныу булманымы икән? Әлбиттә, Мостай Кәрим һуҡыр табыныуҙарҙан юғары фекерләүсе аҡыл эйәһе. Ләкин унда ла заманға яраҡлашыу, рәсми сәйәсәткә артыҡ буйһоноу мәлдәре байтаҡ икән шул.

«ЛГ»лағы бер мәҡәләлә Вик. Ерофеевтың бик фәһемле һүҙҙәрен уҡыным:

«У нас есть писатели, но нет литературы»

Яҙышыусылар күп, яҙыусылар аҙ. Әҙәбиәт асылда бер нисә яҙыусынан тора.

Ошо уҡ «ЛГ»ла (6–12.08.14) бер бик ҡыҙыҡлы хәбәр: Донецкиға ополченецтар постаменттағы танкты (ИС) яғынан эшләтәләр ҙә, шуның менән һуғышҡа инеп китәләр. Танк ҡына түгел, һәйкәлдәр ҙә терелмәҫ тимә.

Бөйөк диндәр идолдарға – поттарға табыныуға ҡаршы. Уйлап ҡараһаң, һәйкәлдәр ҙә шул уҡ идол-поттар бит. Ләкин бөтәһен дә шулай һанап, ҡырырға-емерергә ярамайҙыр. Һәйкәл тигәнең ҡаҙаҡса бик мәғәнәле: искерткеш, йәғни кисәтеүсе, хәтерҙә һаҡлатыусы. Ниңә беҙ Салауат һәйкәленә баш эймәҫкә тейешбеҙ? Йәки Пушкиндың Мәскәүҙәге атаҡлы һәйкәленә? Йәки ата-бабаларҙың ҡәбер таштарына? Туҡайҙың әсәһенең ҡәбер ташы тураһындағы һүҙҙәрен хәтерлә. Боронғо һынташтар-балбалдар ҙа киләсәктең хәтерендә иҫкәртеү түгелме ни?

Бар күңелдәрҙән йылы,
Йомшаҡ һинең ҡәберең ташы –
Шунда тамһын күҙ йәшемдең
Иң әсе һәм татлыһы!
(Ғабдулла Туҡай)

Әсәһенең ҡәбере бик иртә етем ҡалған Туҡай өсөн бар күңелдәрҙән йылы. «Йылы күңелдәрҙән дә йылы» тимәгән бит. Сөнки йылы күңелдәрҙе күреү Ғабдуллаға бик һирәк насип булған.

24 август, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә Бөтә донъя ҡоролтайы машинаһында (шоферы Наил тигән егет, Салауатта үҫкән, Ғафури районы егете, русса һөйләшә) Нурислам Ҡалмантаев, Хисмәт Юлдашев көнөнә Ырымбурға барып әйләндек.

25 август, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Кисә баҡсаға килдек. Асҡар ҙа беҙҙең менән. Көнөнә Ырымбурға барып әйләнеү барғанда-ҡайтҡанда һиҙелмәһә лә, ныҡ ҡына арытҡан икән. Тыуған яҡтарға ҡайтыу һәр ваҡыт ҡыуаныслы инде ул. Тик һуңғы ваҡытта бындай сәфәрҙәрҙә борсолоуҙар нығыраҡ арта. Каруанһарайҙа нисәмә замандарҙан һуң башҡорттарҙың яңынан аяҡ баҫыуына, шунда йыйылып, ҙур һөйләшеү үткәреүебеҙгә, күпме

ваҡыт тынып торғандан һуң был тарихи бинаның залында яңынан башҡортса һөйләшеү, башҡорт моңо ишетелеүгә 25 йыл тулған икән!

Оло ваҡиға. Бынан һуң күп яңылыҡтар ҡыуандырҙы. «Каруан-һарай» гәзите, өлкә ҡоролтайы ойошторолдо, педучилищела, пединститутта башҡорт бүлеге асылды, 1991 йылдың аҙағында Өфөлә Ырымбур башҡорттарының ҙур кисәһе үтте. Ул саҡта халыҡ ныҡ ҡына күтәрелеп, рухланып алғайны.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер хәлдәр башҡаса, эштәр шәптән түгел. Мәктәптәр ябыла, гәзиттең киләһе йыл сығыуы икеле, башҡорт бүлектәре эшләмәй.

Башҡорт байрамы үткәрҙеләр, уныһы һәйбәт. Губернатор килде, тирмәлә булды, сәхнәнән ҡотланы. Быныһы ла, һайлау алды пиары булһа ла, барыбер иғтибар итеү. Халыҡ күреп тора бит. Көйөргәҙеләр ҙә, бындағылар ҙа һәйбәт әҙерләнгәндәр, йыр-бейеү, һый-хөрмәт...

Тик 25 йыллыҡ был ваҡиға уңайынан байрам ғына түгел, етди һөйләшеү ойоштороу кәрәк ине. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан рәис Аҙнабаев та, урынбаҫары Ишморатов та ял итәләр икән. Был сараның уртаһында булырға тейеш кешеләр бит. Бер көн ваҡыт табып булмаймы ни?

Яҡшы кеше тураһында урыҫта «соль земли» тигән һүҙ бар. Әммә тоҙ булып ҡына, ер булмаһа, унан ни мәғәнә? Иң кәрәген, иң мөһимен «ҡаймағы» тиҙәр. Ҡаймаҡ булһын өсөн, һөт кәрәк. Донъябыҙ ерһеҙ ҡалып килә, һөтһөҙ ҡалып килә.

Олоғайған һайын кеше яңғыҙлыҡҡа нығыраҡ инә бара. Тиҫтерҙәре, фекерҙәштәре кәмегәндән-кәмей. Инәйемдең 95 йәшендәге хәлен хәҙер нығыраҡ аңлайым. Ярай балалары иҫән булды.

Фәндәр академияһында «Проблемы востоковедения» журналынан Радик Вахитовтың мәҡәләһен биргәйнеләр. Кузеевтың, Мәжитовтың концепцияларын тәнҡит итә. Этногенездың нигеҙендә матди тормош ятыуын яҡлай. Филологик аңлатма менән генә сикләнеүгә ҡаршы. Ышандырғыс фекерҙәр әйтә. Тик үҙ концепцияһы эҙмә-эҙлекле асылмай. Үҙенең концепцияһын да сатнатып әйтһен ине.

«Мостай Кәрим» энциклопедияһы на ваҡ-ваҡ ун мәҡәләмде алып барҙым. Күләме бәләкәй булһа ла, бик мәшәҡәтле эш: сығанаҡтар, тәүге баҫмалар, китаптар һ.б. Шуға теләүселәр аҙ, күптәр баш тарта. Ләкин энциклопедиялар булдырыу бөтәбеҙҙең

уртаҡ эшебеҙ, милләттең бурысы, уның үҫеш кимәлен билдәләүсе күренеш бит. Бында уртаҡ бурыс шәхси мәнфәғәттән юғарыраҡ булырға тейештер ул.

Бер илдә тыуып, икенсе илдә үлеү фажиғәһе. Сит илдә вафат булһаң, бер хәл. Аяныслы хәл, әлбиттә. Әммә үҙ илеңдә уның сит илгә, бөтөнләй ят донъяға әйләнгәнен күреп үлеү тағы ла аяныслыраҡ. Беҙҙе бына шул яҙмыш көтмәйме?

Назар ағай үҙенән алда киткәндәргә «Һеҙ киттегеҙ ҙә ҡотолдоғоҙ» тигәнерәк һүҙ әйткәйне. Ағай үҙе киткәндән һуң илдәге хәлдәр көндән-көн ҡатмарлана, Ватан башҡаға, халыҡ башҡаға әйләнә бара бит. Әле йәшәп ятыусы беҙҙәр алдынан киткәндәргә, шул иҫәптән Назар Нәжмигә лә «Һеҙ киттегеҙ ҙә ҡотолдоғоҙ» тип әйтергә хаҡлылыр.

Фәриҙәнең юбилейын яҙырға онотҡанмын. Санаторийҙа «Охотничий зал»да 45 кеше йыйҙыҡ. Бик һәйбәт булды. Һыйҙы яҡшы әҙерләгәндәр. Иртәгәһе ете урынлыҡ автобусҡа 12 кеше тейәлешеп баҡсаға киттек. Уның иртәгәһенә ҡунаҡтарға Өфө буйлап, дөрөҫөрәге, Салауат һәйкәленә экскурсия ойоштороҙом. Бик ҡәнәғәт киттеләр.

Минең туй теләктәрем:

– Шатланып йәшәгеҙ, шатландырып йәшәгеҙ;
– Бәхетле йәшәгеҙ, бәхетле итеп йәшәгеҙ;
– Һеҙ хәҙер ике тапҡырға көслөрәкһегеҙ;
– Ҡылған яҡшылыҡтарығыҙ үҙегеҙгә шатлыҡ булып ҡайтһын;
– Бер шатлыҡ бәлки ун шатлыҡҡа әйләнмәҫ, әммә бер ҡайғының ун ҡайғы килтереүе бик мөмкин;
– Илде байытып байығыҙ;
– Шатланығыҙ, көлөгөҙ, тик кеше көлдөрмәгеҙ;
– Һеҙ йырлағанда ил дә йырлаһын;
– Ил өсөн ҡайғырығыҙ, тик илде ҡайғыртмағыҙ.

29 август, 2014 йыл. Йома.

Йәйҙең күп көндәре көҙгә тартым. Кисә яумай ғына торҙо, Асҡар менән Әсилде Ҡашҡаданға алып барҙыҡ. Пониҙа йөрөнөләр һыбай. Педаль менән эшләгән машинаға ултыртып, ярты сәғәт «елдерҙек». Балалар 2-дә Мәскәүгә, унан Америкаға осалар.

Ҡайһы бер кешеләр минең тормошта, яҙмышта күренеп ҡалалар ҙа юҡ булалар. Антимирҙан осраҡлы килеп юлыҡҡан йән эйәләре тиерһең.

«Ағиҙел»дең һигеҙенсе һанында минең Ырымбур яҙмалары сыҡҡан. Хуплап шылтыратыусылар бар. Нурислам Ҡалмантаев брошюра итеп сығарырға, халыҡҡа таратырға кәрәк, ти. Бәлки кәрәтер, һәр хәлдә, техник яғы ҡыйын булмаясаҡ.

Өсөнсө көн Фәриҙә менән «Родина» кинотеатрында ҡыҫҡа ғына башҡортса фильмдарҙы ҡарауҙа булдыҡ. Илгиз килеп алды, килтереп ҡуйҙы. Фильмдар тетрәндермәне. Шуныһы һәйбәт: халыҡ күп булды. Йәштәр килгән. Урын етмәй, баҫып торҙолар.

Йәшәр йүне ҡалмаған, аслыҡтан ҡаҡланып урман төпкөлөндә ятҡан бахырҙы йыртҡыстар (мәҫәлән, бүреләр) тәрбиәләп аяҡҡа баҫтыра. Ас көйө ул ҡоро һөйәк бит, аҙаҡ рәхәтләнеп ашар өсөн ул меҫкенде ныҡ һимертәләр.

Был башта ниндәй генә уйҙар тыумай ҙа ниндәй әкәмәт хәлдәр күҙ алдына килмәй!.. ә төптән уйлап ҡараһаң, был булмаҫтай ваҡиғаларҙың тормошсан ерлеге бар бит: аҙаҡ йотор өсөн кешеләрҙе лә, завод һ.б. производстволарҙы ла аяҡҡа баҫтыралар.

Махачкаланан яҙыусылар рәйесе Магомед Ахмедов Аҡ торналар байрамына, Союздың 80 йыллығына саҡырып шылтыратҡайны. Үҙе Өфөлә өс тапҡыр булды: (2009, февраль, минең юбилей саралары; 2009, октябрь СП РБ – 75; М.К. – 90, 2013 – минең юбилей). Бик ихлас ҡатнашҡайны. Саҡырыуы өсөн рәхмәт. Тик һаман да «Барырғамы, бармаҫҡамы?» тигән икеләнеү бөтмәй. Элек улай булмай ине бит. Ҡартайыу ғәләмәтелер. Әммә барырға кәрәк. Әлегә аяҡ йөрөгәндә, күҙ күргәндә, тел һөйләгәндә, зиһен эшләгәндә барырға кәрәк.

Ғәйнан Әмири Мостай Кәримгә һуғыш ваҡытында шиғырҙарына һоҡланып: «Тере сағыңда уҡ һинең юбилейыңды үткәрәсәктәр» тип яҙған тиҙәр. Ул замандарҙа тереләрҙең юбилейын үткәреү ғәҙәте булмаған. Дөрөҫ, 20-се йылдарҙа уҡ Мәжит Ғафуриҙың ижади эшмәкәрлеге башланыуына 20 йыл тулыу айҡанлы уға халыҡ шағиры исемен биргәндәр.

Хәҙер һәр яҙышыусы яҙыусы исеменә дәғүә иткәндә, хатта шул исемде йөрөтөүселәр эт тубығынан булғанда, юбилейҙар үткәреүҙәр һәр кемдең тыуған көнөн билдәләү һымаҡ ғәҙәти хәлгә әйләнде. Юбилейы бар, үҙенсә баһалап һүҙ әйтерлек ижады юҡ.

15 сентябрь, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Беҙҙең ғаиләлә сәфәрҙәр осоро булып алды. 2-дә Фәриҙә, балалар менән Сабинаны Америкаға оҙатып, Мәскәүгә остолар, Флүрәлә йәшәнеләр.

7 сентябрҙә мин таң менән Дағстанға юлға сыҡтым. Был юлы ла Каспий диңгеҙе ситендәге ҡунаҡхнаға урынлаштырҙылар. Диңгеҙҙә дүрт тапҡыр рәхәтләнеп һыу инеп ҡалдым.

Махачкалаға барып төшкәндә Магомед Ахмедов та унда ине. Ул Мәскәүҙәрҙе көтөп ҡалды, мине Баһауетдин Гаджиев алып китте. Ҡунаҡханаға урынлашҡас, атаһы Әнүәр Гаджиевтың йорт-музейын алып барып күрһәтте. Хөкүмәт ныҡ ярҙам иткән, әммә Баһауетдин үҙе ойошторо йөрөмәһә, был музей булмаҫ ине, әлбиттә. Һирәк яҙыусыға үҙенең улы шулай тоғро хеҙмәт итә.

Атаһының, үҙенең китаптарын бүләк итте. Әнүәр Гаджиевтың китабының мин асҡан биттәге бер дүрт юллығын һис бер үҙгәрешһеҙ башҡортсаға әйләндереп уҡып ишеттерҙем. Ҡумыҡ теле беҙгә бик яҡын.

«Приморье» ҡунаҡханаһы, №408. Көндәр эҫе, ярай әле кондиционер бар.

Махачкалала гел таш биналар. Беҙҙәге ағас йорттар оҙаҡ һаҡланмай шул.

Көн зыяратта Рәсүл Ғамзатовҡа баш эйеүҙән башланды. Унан һуң шағирҙың йортонда төшкө аш. Яҙыусылар Союзында түңәрәк өҫтәлдә фекер алышыу. Һөйләгәндә «Салауат Юлаев» энциклопедияһын бүләк иттем. Һүҙемде «Я – россиянин» китабын тапшырып, шуның һуңғы битендәге Мостай ағайҙың шиғырын уҡып бөтөрҙөм. Осрашыуҙан һуң милли аштар менән сәй эсеү. Ҡаҡлаған иттәре тәмле.

Кисен «Россия» тигән комплекста (Каспийск ҡалаһы) «Расул Гамзатов. Исповедь» тигән нәфис-документаль фильмдың презентацияһы. Зыяратта ла, Ғамзатовтың йортондағы табында ла, фильмды күрһәткәндә лә, унан һуңғы мәжлестә лә республика етәксеһе Абдулатипов Рамазан Гаджиморат улы булды. Фильмды күрһәтер алдынан бик оҙон һүҙ әйтте. Сценарий авторҙары Рамазан Абдулатипов менән азербайжан Рөстәм Ибрагимбеков икән. Ҡатнашҡан режиссерҙарҙы, артистарҙы һ.б. бүләкләне. Яҙыусылар союзына «Тойота»ның асҡысын бүләк итте.

Һәйкәл янында (һалдат менән әсә) традицион шиғыр байрамы. 9-да Ғамзатовтың тыуған еренә сәйәхәт. Цада ауылында шағирҙың тыуған йортонда. «Аҡ торналар»ға ҡуйылған бик бейек обелиск янында сығыш яһаныҡ. Һәйкәлдең аҫтында музей һымаҡ ҙур зал. «Торналар» шиғырының төрлө телдәргә тәржемәләре ҡуйылған. Минең тәржемәлә башҡортса текст та эленгән.

Дағстан асылда Ташстан. Әллә күпме яланғас таш тауҙар теҙелеп китә. Бик ҡырыҫ тормош шарттары. Табында төп һыйҙары – һарыҡ ите, шулай уҡ хинкал. Ҡырыҫ тормош, һәр саҡ тревогалы йәшәү төрлө нәзәкәтле тәм-томдар әҙерләп ултырырға мөмкинлек бирмәгән.

Йөҙөмдәре, персиктары бик тәмле.

Тау юлдары ныҡ иҫтә ҡала. Упҡын ситенән үтә. Далала үҙең теләгән яҡҡа боролоп китә алаһың, бында хәтәрерәк. Ләкин далала ла кешенең тормош юлын упҡындар һағалап тора бит.

Ошо хаҡта шиғыр тыумаҡсы.

Гунибта үткән килгәнемдә булдым. Әле – Цадала. Дербенд маршруты ҡалды. Кем белә, бәлки уныһынан да үтергә насип булыр.

Бер нисә Койсу йылғалары, беҙҙеңсә Ҡой һыу инде. Ағып ятҡан һыу тип аңлаттылар. Бәлки йылға тигән һүҙ шулай аталалыр.

Рәсүл Ғамзатов культы. Иң төп китабы «Мой Дагестан» тиҙәр. Күберәк кешеләргә барып етерлек яҙылыуы, шулай уҡ үткер фекерҙәре, «Минең Дағстаным» тип донъяға белдереүе яғынан бәлки шулайҙар.

Гениальное произведение поэта. Душа Р. Гамзатова золотой осенью улетела вместе с журавлями. «Ауһам ине шул саҡ бәйгеләрҙә йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ» тигән Мостай Кәрим донъянан йөрәге ярылып китте.

Журавли – тотем у башкир.

Великая малая Родина. Большая Родина стала намного меньше. Малая родина всегда останется большой и священной.

Нәҡ ваҡытында тыуған таланттар. Р. Ғамзатов, С. Айтматов, М. Кәрим һ.б. Им повезло.

Нужен ли Союз писателей? Именно благодаря его организационной, издательской деятельности, благодаря его учебно-образовательной, воспитательной системе (Литинститут, работа с молодыми, творческие семинары, конференции и др) таланты многих национальностей вышли в широкий мир.

Переводческая деятельность. Лучшая в мире совесткая переводческая школа. Без этого не засияло бы созвездие ярких талантов из разных республик.

Дома творчества, где были созданы произведения, ставшие гордостью национальных литератур.

Были перегибы, несправедливые обвинения и страшные репрессии. После таких потерь благодаря работе Союза писателей, его заботе о новой творческой смене вновь окрепли литературы.

Конечно, количество не всегда переходит в качество. В последние годы увлеклись числом.

Не каждый пишущий является писателем.

Ерҙә иң ныҡ баҫып торғаны – сабый. Уның тап-топ атлап йөрөүе.

Балҡарҙар Эльбрусты Менгетау ти икән. Беҙҙә лә эйәр – тауҙар бар.

Әгәр бөтә серҙәр сиселеп бөтһә,
Барыһы ла булһа ап-асыҡ,
Үтә күренеп торған был донъянан
Ялҡып, китер инем мин ҡасып.

Уйсан ҡая һымаҡ тып-тын торам,
Уйҙарымды кем һуң беләсәк?
Асҡар һорауына яуабым юҡ,
Ниҙер һөйләй Әсил бүләсәм.

Асҡар һаман һорау менән күмә,
Һүҙен аңлап булмай Әсилдең.

Сәселде лә тағы сәнселде.

Аңлайҙыр бит шишмә тауҙың уйын,
Тау беләлер шишмә серҙәрен.

Яҡшылыҡҡа ярышығыҙ,
Яманлыҡҡа ҡарышығыҙ.

Ҡыйыр – ҡыймаҫ,
Тыйыр – тыймаҫ.
Ҡуйыр – куймаҫ,
Туйыр – туймаҫ.
Һыйыр – һыймаҫ...

Күк ситенән сығыр-сыҡмаҫ ҡояш
Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡалды оҙатып.
Бер кем дә юҡ өйҙә.
Бушлыҡ ҡына
Тороп ҡалды йөрәк һыҙлатып.

Тынлыҡ тороп ҡалды.
Хушлаштыҡ беҙ
Бер-беребеҙгә шып-шым баш эйеп.
Өнһөҙ тороп ҡалды буп-буш өйөм,
Ҡаршы алыр микән буш өйөм?

Далала юлдар иркен, күп,
Туранан һуҡтыра бир.
Туранан юлды ярам.

Тау юлында бер аҙым да
Ситкә баҫыу ярамай.

Внуковонан Махачкалаға осҡанда ла, ҡайтҡанда ла янымда бәләкәй балалы ҡатын. Хәҙер ваҡ балалар, хатта бәпестәр менән осоусылар күп. Элекке ваҡыттарҙа улай булмай торғайны. Артурҙар бәләкәйҙәр менән әллә ҡайҙарҙа йөрөп ҡайттылар.

Хәҙер Өфө аэропорты башҡа. Мәскәүҙекеләрҙе әйтеп тә тормайым. Сит илдәрҙә элек булғанымда балаларҙың аэропорт изәнендә шыуышып йөрөгәненә аптырай инем. Үҙебеҙҙең аэропорт изәне улай ялтырап ятмай торғайны бит. Хәҙер Өфөлә лә изәндәр ялтырап ята.

20 сентябрь, 2014 йыл. Шәмбе.

Дағстанда йөрөп ҡайтҡандан һуң күптән эшләнергә тейешле эштәр менән ултырҙым. БДПУ-ла 24–25 октябрҙә М. Кәримдең 95 йыллығына ғилми конференцияға русса текст әҙерләп ҡалдырҙым. Башҡортсаһын «Башҡортостан» гәзитенә бирҙем. Шунда уҡ Ғәзим Шафиҡовтың 75 йыллығына мәҡәлә ҡалдырҙым. Кисә шул эштәрҙең осона сыҡтым. Мостай тураһындағы мәҡәләнең руссаһын «Истоки»ға бирермен.

16-да зыяратта Айҙар янында булдыҡ. Артурға киләһе йыл ғына утыҙ йәш тула. Скайп аша улар менән һөйләшеп торабыҙ. Әле Мичиган штатында уҡып йөрөй. Ҡатынын, балаларын янына алды. Кисә һөйләшкәндә бәхетегеҙҙең ҡәҙерен белегеҙ тинем. Был йәшендә Айҙарҙың иң болоҡһоған саҡтары ине.

Ҡәберенең өҫтөн һәйбәт кенә эшләгәйнек, хәҙер яңыртырға, нығытырға кәрәк. Һаман һуҙылып килә.

«Ағиҙел»гә, нәшриәткә барышлай китап магазинына ингәйнем. Ғ. Сәләм менән М. Хәйҙең бергә сыҡҡан йыйынтығы миндә юҡ

ине. 100 йыллығына сыҡҡайны, икеһендә лә минең бәләкәй генә инеш һүҙ.

Мәктәптә ятлап үҫкән был шағирҙарҙы яңынан уҡыным. Сәләм – сағыу, Хәй – уйсаныраҡ. «Шоңҡар» поэмаһы заманы өсөн ваҡиға, әлбиттә. Әммә Сәләмдең шиғырҙарын уҡып булмай, бигерәк синфилыҡ рухы. Хәй башҡасараҡ, әммә фәлсәфәгә ынтылыуы артыҡ рациональ.

Айһылыу Ғарифуллинаның 2007 йылда уҡ сыҡҡан «Алауғырт – бөләңгерт» тигән бәләкәй генә китабын алғайным. Ҡыуанып уҡып сыҡтым. Бик үҙенсәлекле, тәбиғәт менән бер йән булып йәшәүсе шиғри донъя. Һәйбәт шағирә икәнен электән дә белә инем, күргәндә уҡып барҙым. Әле китабы буйынса нығыраҡ күрҙем: бик һәйбәт шиғри юлдары бар. Әгәр заманында уҡ күрһәм, был китап хаҡында бәлки яҙған да булыр инем. Унан һуңғы шиғырҙары нисек икән? Сағыштырып ҡарарға ине.

80–90-сы йылдарҙағы публицистикамды ҡараным, «Шағир һүҙе – шағир намыҫы» китабында баштағы бүлек. 5-се томға «Өмөттәр һәм хафалар» бүлеге булып ингән. Заман өсөн бик актуаль фекерҙәр әйтелгән. Күп яҡтан улар әле лә бик актуаль. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

Халыҡ ике юл менән генә урыҫ кешеһенең төҫөн-килбәтен бик тапҡыр күҙ алдына баҫтыра:

Эй ызнакум, ызнакум,
Оҙон аяҡ, ҡыҫҡа тун.

Рус кешеһе өсөн бик типик был рәсем башҡортҡа тура килмәй.

Дағстандан алып ҡайтҡан китаптарҙы ентекле генә ҡарап ултырҙым. Ҡумыҡса, ноғайса шиғырҙар бөтөнләй тиерлек аңлашыла. Фольклор стихияһында йәшәүҙәре көслө икән. Ҡумыҡ Гаджиевта бигерәк тә. Ноғай Колонсаҡовала лирика нығыраҡ күренә. Беҙҙең ағайҙар кириллицаға күскәндә алфавитты барыбер уңышлыраҡ, зирәгерәк эшләгәндәр.

Мәҫәлән, ҡумыҡта, ноғайҙа къ, гъ, о, у тип яҙалар. Ә беҙҙә ниндәй йыйнаҡ: ҡ, ғ, ө, ү, ң.

Хәрефтә әҙ генә үҙгәреш, кескәй боролош, уңайлы ла, камиллыраҡ та. Ирекһеҙҙән Мөхәмәтша Буранғоловтың «башҡорттоң «ҡ»-һы» тураһындағы мәргән һүҙҙәре иҫкә төшә.

Талантыңды аңлай бел, ҡәҙерлә, һаҡла! Аллаһы тәғәлә уны һинең өсөн генә түгел, халҡың өсөн биргән бит. Ижадсы өсөн бик ҡәтғи һәм бик дөрөҫ талап.

Ҡара һыуыҡ булып торҙо. Бөгөн алтын көҙгә тартым. Урамға сығып, мәктәп тирәһендә йөрөгәндә, балалар сыр-сыу килеп уйнай. Шул саҡта Асҡар менән Әсил бигерәк һағындыра.

Ҡауын ашап ҡыуан,
Йыуа ашап йыуан.
Йыуа ашап ҡына йыуанаймаҫһың.

Батырһың һин, халҡым!
Батырһың!
Тик һуң батыр йоҡоһо менән
Күпме йоҡлап ятырһың?

Батыр йоҡоһо ҡаты тиҙәр.
Батыр йоҡоһонан
Уянмайса күпме ятырһың?
Ҡалмаҫһыңмы хәленә бахырҙың?

Торғонлоҡ тип ҡәһәрле мөһөр һуғылған йылдарҙың, тәртип, әхлаҡ һаҡланған саҡтарҙың күп яҡтары бөгөнгө аҙғынлыҡ, уғрылыҡ шашҡанда һағындыра, әлбиттә.

Шағир өсөн:

– Телдән яҙыу – бөтәһенән яҙыу.
– Һүҙһеҙ ҡалыу – бер нәмәһеҙ ҡалыу.

Башҡорт балы – Башҡортостандың символдарының береһе. Хәҙергесә бренд (ҡайһы бер бренд бредҡа әйләнә).

Башҡорт балын хәстәрләргә тырышалар. Башҡорттоң үҙен хәстәрләү етмәй. Шул уҡ хәл: башҡорт ҡымыҙы, башҡорт йылҡыһы һ.б. Исем сифатҡа әйләнһен, әммә исем булып һаҡланһын, есеме менән һаҡланһын.

Ир-егеттең үлгәне –
Илгә һыртын борғаны.
Ҡатын-ҡыҙҙың үлгәне –
Ят йыныҫҡа барғаны.

Шағирҙарҙың үлгәне –
Һыҙланмай һүҙ әйткәне.
Йырсыларҙың үлгәне –
Моңға хыянат иткәне.

Илде яҡлар тик батырлыҡ,
Илде һаҡлар тик хаҡлыҡ.
Ҡырҡ ырыуҙың ҡырҡ быуынын
Ҡыркка ҡыркыр ҡурҡаҡлыҡ.

6 октябрь, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Ғәйеттең өсөнсө көнө. Ял. Кисә ҡорбан ашына ағай-энене саҡырып алдыҡ. Мәкәштә ҡорбан салдырғайныҡ. Наилә килен килтереп китте. Кисә йәш хәҙрәтебеҙ Морат хажи Лоҡманов доғалар уҡыны. Ҡөрьәндең юл өсөн эшләнгән бәләкәй генә уңайлы баҫмаһын, «303 хәҙис», «Хазина» исемле китаптарымды бүләк иттем. «Башҡортостан»дың йома һанында Ғәзим Шафиҡов тураһында минең мәҡәләм баҫылғайны. Шул һанда Морат хажиҙың да материалы сыҡҡан. Шул ғәзитте бирҙем.

27-дә күршеләребеҙ Киреевтарҙың ҡыҙы Алинаның туйында. Алты ай һаҡланған режим боҙолоп алды.

Самат Ғәбиҙуллиндың 75-нә бәләкәй генә мәҡәлә яҙып, «Башҡортостан»ға бирҙем. Сөләймән ағай Муллабаевтың 90 йыллығына саҡырып шылтыратҡайнылар. Ҡайтырмын тип әйткәйнем дә, ҡайтып булмаҫ. Мәскәүгә юлланырға торабыҙ. «Йәншишмә»гә мәҡәлә ҡалдырҙым. Мостай ағай тураһында ла һорайҙар. Бер-ике бит булһа ла бөгөн ултырып яҙырға кәрәк.

Яңы китабымды әҙерләй башланым. Исемен «Аптыраҡ!» тип ҡуйғайным. Нәшриәттә Зөлфиә менән Әлфиә оҡшатманылар. Үҙемдең дә күңелемә бик үк ятмай ине. «Беренсе мөғжизә» тип атамаҡсымын. Кисә-бөгөн шул исемдәге шиғыр яҙҙым. Минең өсөн донъяның беренсе мөғжизәһе – туған телем. Шунһыҙ башҡа мөғжизәләр юҡ.

9 октябрь, 2014 йыл. Кесаҙна.

Өс көн ял булғайны. 7-дә нәшриәттә, «Ватандаш»та, «Истоки»ҙа, Яҙыусылар союзында булдым. Төшкә хәтле барыһын да йөрөп сыҡтым. Төштән һуң баҡсаға киттек. Ваҡ-төйәк эш менән булдыҡ. Мөгәрәпкә кишер төшөрҙөк. Сәскәләрҙе саптым. Фәризә

розаларҙы ҡапланы. Көндәр матур түгел. Етмәһә әле ут юҡ, өй һыуына. Күңелһеҙ. Төнгө өсөнсө яртыла тороп, байтаҡ гәзиттәрҙе ҡараным. «ЛГ» элекке абруйлы кимәленә күтәрелде. Поляков һәйбәт алып бара. Ошо кимәл күпме һаҡланыр? «ЛР» үткер фекерле булып күренергә тырышып, ғәйбәтсе баҫмаға әйләнде. Фашлау, ҡыйыу тәнҡитләү – быға ынтылырға кәрәк, әммә ғәйбәт юлы менән түгел.

Яңы китабыма исем уйлағанда төрлө варианттарҙы ҡарағанда байтаҡ шиғри юлдар ҙа тыуҙы. Улар менән ныҡ ҡына ултырып алырға кәрәк әле.

Эй сәскәләрҙең балҡыған сағы,
Эй япраҡтарҙың талпынған сағы,
Сәскә-нур булып, япраҡ-йыр булып,
Арбап ҡалманың,
Ялманың сағып.

***

Өфө – Ырымбур араһы
Күпме булған, шул көйө.
Йәштән ниндәй йыр башлаһам,
Картайғас та шул көйөм.

Ҡышым да шул, яҙым да шул,
Йәйем дә шул, көҙөм дә шул.
Һүҙем дә шул, үҙем дә шул,
Үҙемдең түҙем дә шул.
Йондоҙҙарым һаман шул уҡ...

***

Көтөр мәлдәрем үтә,
Китер мәлдәрем етә.

***

Һыуыҡтың да йылырағы бар,
Ямандың да яҡшырағы бар,
Караның да ағырағы бар,
Ҙурҙарҙың да вағырағы бар,

Оҙондоң да ҡыҫҡарағы бар,
Оҫтаның да оҫтарағы бар.

Бикбайҙың да төрлө сағы бар,
Барыһын сабып өҙөр тәҡдир – салғы бар.

***

Көҙгө уйсанлыҡ. Һуңғы усағым.
Ҡал дөрләп янып!

Хушлашмайыҡ әле!
Усаҡ яғам.
Ултырайыҡ усаҡ ураты̆п.

Һүрелһә лә һуңғы ҡуҙым,
Бөтһәм дә һүгелеп, туҙып,
Донъялар һаман ҡыҙыҡ!

Хушлашыр алдынан.

***

Урамдарҙа шаулы уйындарҙы
Башлап йөрөмәнем һис ҡасан.
Бәләкәстән уйсан бала булдым,
Булдым йомоҡ, булдым оялсан.

Мин белмәнем урам менән әүрәп,
Китаптарҙы ситкә ҡуйыуҙы.
Тыңламаны хыял сик-тыйыуҙы,
Тик тормошта инем ҡыйыуһыҙ.

Ҡыйыуҙарға һәр саҡ һоҡландым мин –
Ҡайҙан ул көс ҡанат ҡағырлыҡ?
Кирелер ҙә генә ҡанатыма
Таштай тағылды шул ауырлыҡ.

Сабырлығым еңде ауырлыҡты,
Булғанда ла эшем тау хәтле,

Иртәләрем балҡып иркәләне,
Шәфәктәрем булды шәфкәтле.

Ҡабул булды таңғы теләктәрем,
Хуш килделәр киске доғалар,
Талғын ғына иҫкән эңер еле
Убаларға китеп юғала.

***

Эй, еркәйем,
Һинең киңлектәрҙе
Арҡылы ла, буй ҙа күп гиҙҙем.
Ғүмер үткән һайын ҡәҙерлерәк,
Ғәзизерәк икән һәр миҙгел.

***

Ут та тыйылырға тейеш,
Һыу ҙа белһен самаһын.
Капҡаларҙы шар асһаң да,
Бер аҫҡас, бар ябаһы.
Тоҡанмаҫ саҡта тоҡанам,
Тоҡанғас, бар янаһы,
янып , көлгә ҡалаһы.

***

Көҙ. Моңһоу сағым,
Һағышлы сағым.
Тын ғына һүнә
Һуңғы усағым.
Кисәге гөлдәр
Әйләнә көлгә.
Усаҡ яҡтым убала.
Көндәр төнгә убыла.

Аҙашып йөрөмәй яҙмыш,
Килә туп-тура – түтә.
Оҙон юлдар ҙа ҡыҫҡара,
Ашығыр сағым үтә.

Күп нәмәләрҙән айыра,
Айырмай тик өмөттән.
Өмөттән башлана көнөм,
Төнөмдө өмөт өтә.
Хәҙер һирәк ҡаршылайым,
Хәҙер күберәк көтәм.

10 октябрь, 2014 йыл. Йома.

Тағы ла интервью тураһында уйлайым. Ҡайһы бер фекерҙәр мәҡәләгә ҡарағанда ошо жанрҙа уңайлыраҡ әйтелә. Унан һуң интервьюла бер тема менән генә сикләнмәйһең. Мөмкинлектәр киңерәк. Был форма уҡымлыраҡ та һымаҡ.

Ауыл алйотһоҙ булмаҫ, иҫәүәнһеҙ ил булмаҫ.

Разве бывает деревня без собаки. Лай собаки – непременный атрибут сельской жизни. И в каждой деревне – свой юродивый.

Даже в самом мудром обществе есть люди с определенными отклонениями. Не нелепые, а злые, завистливые, клеветники. Но люди выводы делают не на основе всякой клеветы, а исходя из обоснованных правильных рассуждений. Но... К сожалению, не всегда так. Наивность некоторых, излишняя доверчивость. Злорадство других...

О народных поэтах. До 1997 года было 8, за 75 лет. За 1997–2011 – 10 новых народных поэтов и писателей. За 14 лет. Темпы «роста».

О лауреатах премии им. С. Аксакова. Единственный башкирский писатель – Т. Гиниатуллин – стал лауреатом.

«Московский комсомолец в Уфе» (18–23.11.2005 г.) «Мы, поэты – динозавры» тигән интервьюм сыҡҡан икән. Ниңә 5-се томыма индермәгәнем? 6-сы томда бирергә кәрәк. Ғөмүмән, архивты ентекләп ҡарап сығаһы бар.

18 октябрь, 2014 йыл. Шәмбе.

Баҡсалабыҙ. Күңелһеҙ көҙ. Ямғырлы көндәр. Туҡтай ҙа тағы һибәләй. Нәҡ яҙышып, уҡып ултырыр саҡ инде. Кисә Шамониоға килмәгәндә лә булғандыр. Тик ҡышҡылыҡҡа әҙерләнергә, һыуҙарҙы ҡарарға кәрәк.

12-дә таң менән Мәскәүгә остоҡ, 15-нән 16-на төнгө дүрттә өйҙә булдыҡ. 14-дә АҠШ коньсуллығында. Тышта сиратта торҙоҡ. Кергәс, беҙҙе бер тәҙрәнән икесеһенә йөрөтөп, бик тиҙ үткәрҙеләр. Башҡалар зал тулып көтөп ултыра. Беҙгә ниңә айырым мөнәсәбәт булғандыр – аңламаным.

Кисә минең паспортты визаһы менән курьер килтереп тә еткерҙе. Фәризәнеке лә килеп етер. Артур билеттар алып, Майамиҙа отелгә бронь эшләп тә ҡуйған, ун көнгә. Уңған, төгәл егет, күҙ теймәһен.

Мәскәү хәҙер таҙа, кешеләре лә асығыраҡ күренә. 90-сы йылдар башында бында килеүе имәнес ине.

Зоопаркта булдыҡ. Күп ерҙә ремонт. Ял итеп йөрөнөк. Ошондай урын беҙҙә лә бик кәрәк, тик Өфөлә һәр метр ер өсөн һуғыш бара. Хайуандар ғына түгел, кешеләр тураһында ла уйлаусы юҡ.

Флүрә яңы урында. Метронан («Белорусская») килгәндә автобус туҡталышына атлап барҙыҡ. Уларҙың элекке торған ерҙәрендә. Күп нәмәләр иҫкә төштө, бик моңһоу булды.

Флүрәнең әле торған бер бүлмәле фатиры һәйбәт. Урыны ла яҡшы. Яндарындағы бик зур паркта йөрөнөк. Иркен, таҙа. Тирә-яҡта төҙөлөш тә төҙөлөш. Тәбиғәттең әлегә һаҡланған был мөйөшөнә лә һөжүм башланыр тип ҡурҡам. Флүрәләрҙең 15-се ҡатынан ҡарайым – шул тиклем төҙөлөш мотлаҡ кәрәкме икән ни?

Сәскәләр баҡсанан өйгә күсә. Берәүҙәре өйҙә балҡып һулый, икенселәре үҙ тамырында туңасаҡ. Ҡайһы яҙмыштың аянысы күберәк? Ерҙәгеләрҙең ҡайһы берҙәренең яҙға яңынан сығыуы бар.

11-дә «Юлдаш»та Динис Бүләков тураһында тапшырыу. Кешелек сифаттары хаҡында. Мин дә һөйләнем, Фәризә лә әйтте. Динистең үҙенең тауышы ла ишетелде. Бөтәһе лә бик ихлас булды. Тыңлаған халыҡ рәхмәттәр әйтә.

Флүрәнең күҙе насарая. Уҡый алмай. Ейәнсәрҙәре менән дә аралашмай тиерлек. Иң ҡыйыны – яңғыҙлыҡ.

Ике төрлө яңғыҙлыҡ бар. Беренсеһе – һин кешеләрҙән биҙеп бөтәһең, донъянан төңөләһең. Икенсеһе – кешеләр һинән биҙеп бөтә. Икеһе лә күңелһеҙ, ауыр хәл.

Ләкин тағы ла бер яңғыҙлыҡ бар, уныһы тағы ла ауырыраҡ. Һин болоҡһойһоң, фекерҙәш эҙләйһең, тапҡан кеүек тә булаһың, ләкин алданаһың. Тағы ла бер үҙең ҡалаһың.

«Одиночество в толпе» тигән һүҙ сығыу юлдарын интернет аша эҙләйҙәр. Бәйләнешкә инеү өсөн яңы мөмкинлектәр ысынлап та арта. Хатта «В контакте» («Бәйләнештә») тигән махсус программа бар. Ләкин интернетта хәҙер яҡшылыҡтан яманлыҡ күберәк. Ул йыш ҡына бәйләнештәрҙе нығытмай, киреһенсә, тарҡата. Берләштерә торған ҡиммәттәрҙе емерә, күпме рухи хазиналарҙы юҡҡа сығара. Элек ауылда ғәйбәт ҡойо янында йәки магазинда, ҡалала

баҙарҙа йәки мунсала таратылһа, хәҙер ғәйбәтселәр интернет яныһа туплана.

Ләкин яҡшы маҡсаттар менән бергә тупланырлыҡ мөмкинлектәр ҙә арта. Уларҙың нигеҙе – рухиәт. Бөгөнгө яңы информацион мөмкинлектәр, яңы технологиялар рухиәт талаптарынан, әҙәп һәм намыҫтан айырылһа, улар бәләгә, гонаһҡа, камил үҫештең дошманына әйләнә.

Хәҙерге башҡорт йәштәре араһында «В контакте» һ.б. саралар аша халыҡтың киләсәге, тел яҙмышы хаҡында борсолоу, фекер алышыу, оло уртаҡ маҡсаттар аша тупланырға тырышыу арта. Бик һәйбәт йүнәлеш, һүҙҙән эшкә күсергә тейешле ынтылыш.

Бында буш һүҙҙәр, ығы-зығы, ваҡ мауығыуҙар ҙа етерлек. Былары күп ваҡытта була торған күбек, ә иң мөһиме – тәрән ағым. Әле ағым уҡ булмаһа ла, ағымға әйләнергә тейешле хәрәкәт бит.

Донъя менән тик интернет аша аралашыусы блогерҙар, туҡтауһыҙ бәйләнешкә сығыусылар бар. Уларҙың яҙғандарын туплаһаң, томдар йыйылыр ине. Тик уларҙың нисә бите сәйәси, фәлсәфи йәки әҙәби фекер хазинаһына инә алыр ине? Бик һирәктәре, әлбиттә. Бик-бик аҙы ғына. уларҙың бит күбеһе үҙешмәкәр кимәлендә. Фекерлерәк, үҙенсәлеклерәк булғандары ла ҡаралама хәлендә. Яҙылды һәм йәһәт кенә интернетҡа ҡуйыла һалды. Төҙәтеүҙәр, юғары талаптарҙан сығып ҡат-ҡат эшләүҙәр юҡ дәрәжәһендә. Һан ҙур, юғары, тик сифат түбән, бик түбән.

Был «бәйләнештәрҙе» хәҙерге заман фольклоры һымаҡ тиер инең, уларҙың авторҙары бар. Уларҙың һүҙҙәре быуындан-быуынға күсеп ҡабатланмай, халыҡтың хәтеренә һеңмәй. Йәғни, бөгөн – бар, иртәгә – юҡ.

«Йәншишмә»лә Сөләймән Муллабаевтың 90 йыллығына арналған мәҡәләм сығырға тейеш ине, 1 октябрҙә. Үҙем күрмәнем әле. Һорағайнылар, «Мостай Кәрим мәктәбе» тигән мәҡәлә яҙып бирҙем.

3 ноябрь 2014 йыл. Дүшәмбе.

Бер аҙнала ике тапҡыр театрға барғаныбыҙ юҡ ине. Йома – Рәлиф Кинйәбаевтың «Әбейүшкә» – «замана комедия»һы. Йәкшәмбе – Рәлифтең Талха Ғиниәтуллин әҫәрҙәре буйынса эшләнгән «Ер менән күк араһында» исемле инсценировкаһы. Ике кистә ике төрлө кәйеф, ҡапма-ҡаршы тәьҫораттар.

Беҙ бәләкәй саҡта ауылға профессиональ театр бик һирәк килә торғайны. Ырымбурҙағы татар театрының спектаклен бер-ике генә

күрҙем. Уның ҡарауы киноны йыш ҡуйҙылар. Уларҙы баһалауҙа халыҡтың төп критерийы: ҡыҙыҡмы, ҡыҙғанысмы? Башҡаса баһалау юҡ. Тик ике төрлө генә.

Рәлиф Кинйәбаев буйынса ҡуйылған спектаклдең тәүгеһе ҡыҙыҡ, икенсеһе ҡыҙғаныс булды. Режиссерҙар Илнур Муллабаевтың да, Гөлдәр Илъясованың да табыштары күп.

Сәхнәләге тамашаларҙа һүҙ тапҡырлығы төп талаптарҙан. Грибоедовтың «Горе от ума»һынан һуң күпме һөйләмдәр ҡанатлы һүҙҙәргә әйләнә бит. Хәҙер шул етмәй.

Рәлифтең тырышып эшләүе ҡыуандыра.

30 октябрҙә университетта «Шоңҡар»ҙың 80 йыллыҡ байрамында сығыш яһаным, студент саҡта яҙылған, «Дала офоҡтары» тигән беренсе китабыма ингән ике шиғырымды уҡыным.

Башҡорт әҙәбиәтен 20-се быуаттың 30-сы йылдарынан алып «шоңҡарсылар» ижад иткән инде. Бына бит тарих. Музейын ойошторорға кәрәк тигән тәҡдим бик урынлы булды.

Кисәгә ныҡ әҙерләнгәндәр. Йыйынтыҡ сығарғандар. Тик бик ныҡ һуҙылып китте, 3,5 сәғәт барҙы.

Юбилейҙарҙан һуң уйланыуҙарым ике мәҡәләгә әйләнде. Мостай Кәрим тураһында «Үҙегеҙ хәстәрләгеҙ бүтәнен», Азамат Юлдашбаев тураһында «Барыһы ла булды яңыса». Бындай әйберҙәр яҙғаным юҡ ине. Был саралар күп нәмә тураһында уйландырҙы, йыйылып киткән мәсьәләләр яҙырға мәжбүр итте. Руссаһын да эшләргә ине.

Азамат менән бәхәсләшәһе урындар ҙа бар ине. Бигерәк тә «Йәшлек»тәге (10.10.14.) интервьюһы буйынса. Ул әйтә: «Мин үткәндәрһеҙ йәшәйем... Әгәр ҙә ниндәйҙер үткән һағыштарымды, рәнйеүҙәремде алып киләсәккә ынтылһам, мин киләсәк ишегенә һыймаясаҡмын...»

Азаматтың шиғырҙары үҙҙәре үк был ҡарашты юҡҡа сығара. Бөгөнгө менән генә йәшәргә кәрәклек тураһында Мәскәү әһелдәре лә әйткеләй. Тормош ағышы, үҫештең, һәр хәлдә ваҡыт ағышының асылы һис кенә лә улай түгел бит. Бөтөнләй киреһенсә. Пижон булыу кәрәкмәй.

Мостай Кәримдең һүҙгә һиҙгерлеге, халыҡсан теле, тел зирәклеге. Бик башҡортса, тик башҡортса. Ижадсының милли һыҙаттарын билдәләгәндә был мөһим яҡ онотола.

Быйыл һәйбәт барҙы эштәрем. Шиғырҙар яҙылды. Ш. Бабич, М. Кәрим, Ғәзим Шафиҡов, С. Ғәбиҙуллин, Әбүс, Р. Назаров, С. Мул-

лабаев, Д. Бүләков, Ш. Ғилманова, Ырымбур сәйәхәте, ижади мөхитебеҙҙәге хәлдәр тураһында мәҡәләләрем «Ағиҙел»дә, «Ватандаш»та, «Шоңҡар»ҙа, «Проблемы востоковедения»ла, «Весник АН РБ»ла, «Башҡортостан»да, «Истоки»ҙа, «Йәншишмә»лә баҫылды һәм баҫыла. Бөтәһе ун бишләп булыр.

Америкаға киткәнсе китапты төҙөп өлгөрөргә кәрәк.

Питание и воспитание – икеһе лә бер тамырҙан, икеһе лә мөһим. Ләкин йыш ҡына питание алғы планға сыға, воспитание онотола.

Ҡәләм мәңгелек. Ут өҙөлдөмө – компьютер үлек, күпме системалар хәрәкәтһеҙ. Ләкин ижадсы йөрәгендә ут һүнһә, фекере, әйтер һүҙе ҡалмаһа, ҡәләм дә үлек.

Йәй көнө Хәсән Назарҙың «Был мөхиттә» тигән поэмаһының ҡулъяҙмаһын уҡып сыҡҡайным. Байтаҡ кәңәштәр әйткәйнем. Башҡаның һүҙен тыңлау-тыңламау авторҙың хоҡуғы. Поэма шул көйө донъя күрҙе. «Башҡортостан»да (7.10.14) Рим Исхаҡовтың «Был мөхиттә ни хәлдәр?» тигән мәҡәләһе баҫылып сыҡты. Яңы әҫәр тураһында һүҙ алып барыуы бик һәйбәт. Беҙҙең тәнҡиттә бындай хәлдәр хәҙер, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һирәк. Тик күптән әйтелгәнде бөгөнгө уңыш тип, уҡыусының башын бутарға ярамай.

Поэмалағы «Бар уҡ-һаҙаҡлы егеттәр ҙә, шиңгән ҡуҙаҡтай бар ебектәр ҙә» тигән юлдарҙы килтереп, тәнҡитсе «егеттәр ҙә, ебектәр ҙә тип рифмалаштырыу бик тә килешле» тип маҡтай. Алтмышынсы йылдарҙа уҡ Мөхәмәт Илбаев яҙғайны бит инде: «Ун алтыла ебектәр була, алтмыш йәшлек егеттәр була» (хәтерҙән килтерәм). Быны мәҡәләне яҙған кеше белмәһә, поэманың авторы белергә тейештер бит. Хатта редакциялағы егеттәр белмәгән хәлдә лә.

Ололарҙың олоғая барған һайын көнсөллөктән нығыраҡ олоуы бүре олоуы ише генә түгел.

24 ноябрь, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Шәмбе Дәүләкәнгә барып әйләндек. Һуғым һәйбәт булды. Ғайсаның машинаһында йөрөнөк. Илгиз бара алманы, киностудияла фестивалгә әҙерләнә. Ҡыш була алмай әле.

Америкаға юлға сығырға өс көн ҡалып килә. Ҡан баҫымының бер ҙә рәте юҡ. Иҫән-һау ғына йөрөп ҡайтырға булһын инде.

1997 йылдан Вашингтонда булғандағы юлъяҙмамды ҡарап сыҡтым. Һәйбәт яҙылған, уйланыуҙар, күҙәтеүҙәр күп. Был юлы улай эҙмә-эҙлекле теркәп барып булмаҫ.

Яңы китаптың эшен киткәнсе бөтөрөп булманы инде. Материалдарҙы ҡарап сыҡтым, тупланған тиерлек. Ҡайтҡас, бер ныҡлап ултыраһы, төҙөп бөтөрәһе бар.

Яҙам да яҙам инде.
Мәңгелек язам инде.

Элегерәк шулай тигәйнем. Уға тиклем былай яҙғайным:

Шиғыр яҙыр заманмы ни?
Аҡылдан яҙыр заман.

Ләкин, нишләһәң дә, шул яҙмышҡа дусар ителгәнбеҙ – обречены. Отлучение, облучение – барыһы ла бергә ҡушылған. Әҙәмсә, һәүетемсә йәшәргә яҙмаған. Ә кем һәүетемсә генә йәшәү әҙәмсә йәшәү була тигән әле?

Ҡанатланып оса һүҙҙәр,
Осто һүҙҙәр – ҡанатлылар!
Йөрәгемдән осҡандарын
Оҙатып ҡалам гел аптырап.

Ҡанатһыҙҙар тороп ҡалды,
Улар ҙа сыҡмаҡ өскәрәк.
Шуларҙы киләм өҫтөрәп.

Кайһылары ҡанатланыр?
Һүҙҙәргә ҡанат үҫтерәм.

Ҡала хәлдәре
Эй был ҡала!
Калай итә –
Кеше башынан йөрөтә.
Кат-ҡат йорттар. Таш ҡалыпта
Ҡанат ҡағынам. Талпынам.
Күккә ашам.
Тейә башым
Өҫтәгенең табанына.

Аçта кемдер ҡанатлана.
Күккә ашмаҡ,
Тик түбәһе
Тейә минең табаныма.
Шул уҡ хәлдәр минән өçтә,
Шул уҡ хәлдәр минән аçта.
Йөрөйбөҙ кеше башынан –
Табан аçтарында баштар.

Ҡул һелтәп бар сәйәсәткә,
Китәм әле сәйәхәткә!

Етмешенсе йылдар аҙағы – һикһәненсе йылдар башы. Торғонлоҡ тип нарыҡланған был осор беҙҙең әҙәбиәт өсөн ҡырғынлыҡ менән бөттө. Рәми Ғариповтан һуң Рәис Низамов, Вафа, Әнүр, Миәссәр, Шакир Биҡҡолов, Ким Әхмәтйәнов, Фәрит Иçәнғолов, Әхмәт Ғайсин, Зөлфәр Хисмәтуллин, Әхнәф Харисов, Геннадий Молодцов һ.б. теҙелешеп оҫкан ҡоштар һымаҡ ҡайтмаç яҡтарға киттеләр. Ҡыçҡа ғына арала күпме юғалтыу.

Быйыл 2014 йыл минең бик емешле йылым булған икән. Йыйынтыҡтарҙа, вестниктарҙа, журналдарҙа 9 мәҡәләм баçылған. Гәзиттәрҙә бишләп. Матбуғатта был тиклем йыш күренгән йылымды хәтерләмәйем. Шиғырҙар ҙа байтаҡ яҙылды.

Тик әҙәбиәт йылына арналған мәҡәләмде яҙып бөтөрә алманым, буласаҡ сәфәр арҡаһында. Улай яҙып бөтөрә алмай ҡалғаным юҡ һымаҡ ине. Бүленгән саҡтар булды, тик улары ҙур мәҡәләләр ине. Бынығы оҙон булмаçҡа тейеш ине, тиҙ генә яҙырмын тигәйнем.

29 ноябрь, 2014 йыл. Шәмбе.

Беҙҙеңсә әле көндөҙгө дүртенсе ярты, бындағыса Артурҙар йәшәгән East Lansingта (Мичиган штаты) иртәнге алтынсы ярты. Шулай уҡ 29 ноябрь.

Кисә тәүлегебеҙ 14 сәғәткә артты. Көнө буйы ҡояш яҡтыһында остоҡ: Өфө–Мәскәү–Париж–Детройт. Өфөлә ҡараңғы – 6.45 сәғәт, Мәскәүҙә яҡтырғайны. Унда ике сәғәт көттөк, Парижға 3,5 сәғәт остоҡ, унда өс сәғәт көттөк, унан һуң Детройтҡа туғыҙ сәғәт остоҡ, Атлантик океаны өçтөнән. Артурҙар ҡаршы алды, тотош ғаилә менән килгәндәр. Бер бәләкәй сумаҙаныбыҙ багажда тороп ҡалған, шуның

мәшәкәте менән ығы-зығы килеп сыҡты. Ярар Наташа тигән рус ҡыҙы тап булды. Бындағы аэропортта эшләй икән, үҙе Нижний Новгородтан. Шул тиклем ихлас ярҙам итте, Артурҙарҙы үҙе сығып эҙләп тапты. Сумканы иртәгә килтерергә тейештәр, тине.

Артурҙарға 150 км самаһы барҙыҡ. Улар беҙҙе ҡаршыларға килгәндә күҙ асҡыһыҙ буран булған, юлда машиналар осҡан. Беҙ ҡайтҡанда ҡар иреп бөткәйне. Юлдары бик яҡшы, һәр яҡтан дүрт рәтле.

Бында килгәс, ниһайәт, ҡараңғы төштө, шуға тирә-яҡты ныҡлап ҡарап булманы.

Һауала 15 сәғәтләп остоҡ. Гел яҡты, шуға йүнләп йоҡлап булманы. Артурҙарҙың квартираһы матур. Күрешеү шатлыҡтары: беҙҙеке, балаларҙыҡы. Икеһе лә күп, ҙур, сағыштырып үлсәп булмайҙыр. Асҡар бүләбеҙ менән Әсил бүләсәбеҙ ҙурайып киткән һымаҡ. Әсил хәҙер һин дә мин һөйләшә.

Тәм-томдар менән бик матур итеп ҙур күркә әҙерләгәндәр. Был илдә күркә ите милли аш тиерлек. Аллаға шөкөр, Артур тартмай ҙа, эсмәй ҙә. Ниһайәт, йоҡлап алдыҡ. Әле тороп ултырҙым.

Китер алдынан Маяковскийҙың «Мое открытие Америки»-һынан өҙөктәр, Есениндың «Железный Миргород»ын уҡып алдым. Горькийҙы өлгөрмәнем. Маяковскийҙың яҙыуындағы АҠШ-тың асылы уның заманынан бөгөнгөгә тиклем үҙгәрмәгән: донъяны баҫып алыу.

1997 йылда Вашингтонға килер алдынан уларҙы яңынан уҡыу башыма ла инмәгәйне. Һәм кәрәге лә булмаған. Унан ҡайтҡас тыуған юлъяҙмаларымда ижади, фәлсәфи уйланыуҙар, күҙәтеүҙәр.

Был сәфәрҙән һуң нимәлер яҙһам, Маяковскийҙарға һылтанып, бәлки, кәрәк тә булыр. Бөгөн заман ваҡиғалары башҡасараҡ.

Детройтҡа килеп төшкәс, паспорт тикшереүҙән үткәндә полицейский һорай:

– Эсәһеңме, тартаһыңмы, наркотиктар ҡулланмайһыңмы?

Хатта ҡулымдағы татуировкаға ла иғтибар итте. Улар күҙ алдына килтергәндәгесә рус, Рәсәй стандартына тура килеп торамдыр, күрәһең.

Көнө буйы болоттар өҫтөнән остоҡ. Мәскәүгә осҡанда аҫта болоттар ҡар яланы һымаҡ. Шул яланда бер урында әйтерһең дә юл ярылып ята. Беҙҙең Аҡбулаҡтан ҡышҡы каникулға ике көн буйы станциянан ауылға санала ҡайтҡандарҙағы һымаҡ.

Ул юлдарым күптән иреп аҡҡан,
Һауаларҙа ғына ҡалған эҙҙәр.

Юлда байтаҡ уҡылды: самолеттағы ҡалын йылтыр журнал, гәзиттәр, Яҙыусылар союзының 80 йыллығына Зөфәр Вәлит менән Лариса Абдуллина әҙерләп сығарған брошюра. Хаталар байтаҡ. Һәйбәт әҙерләнгән, әммә баҫылған материалдарҙа һүҙ күберәк элекке үткәндәр тураһында, хәҙерге әҙәби процесс әйтерһең дә юҡ. Тарихтағы билдәле факттарҙы теҙеүгә ҡарағанда хәҙерге күренештәр тураһында фекер йөрөтөүе күпкә ауырыраҡ шул. «Ағиҙел» тураһындағы мәҡәләлә Хәким Ғиләжев, Булат Рафиҡов һымаҡ иң талантлы, ҙур эштәр ойошторған баш мөхәррирҙәрҙе лә хөрмәт менән телгә алырға кәрәк ине. Тарих тураһында яҙғанда башҡаларҙың хеҙмәтен тейешенсә баһаларға кәрәк бит.

Кешенең иң ҙур байлыҡтарының береһе – уның хәтере. Иң ҙур хыянаттарҙың береһе – хәтереңә хыянат итеү. Хәтереңде юғалтыу – уныһы тәбиғәттән килгән фажиғә. Ә бына хәтерең камил була тороп та иҫеңдә тоторға тейеште онотоу – быныһын ниндәй һүҙ менән аңлатырға?

Самолетта «Истоки» гәзитен ҡарап киләм (26.11.14.). Шунда Нина Ягодинцеваның (Силәбе) «Перевод: Мосты и скрепы» тигән мәҡәләһе. Был исемде Лариса Абдуллинаның һөйләүе буйынса белә инем. Лариса тураһында берәй нәмә әйтер был тип (һүҙ тәржемә тураһында бара бит), уҡый башланым.

Һәм уҡыйым: «Одно из совещаний АсПУр познакомило нас с молодой башкирской поэтессой Ларисой Абдуллиной. Она тогда перевела на башкирский наши стихи, уфимская газета выделила им целый разворот. И я вслед за Светланой Чураевой начала переводить стихи Ларисы. А потом случилось большое маленькое чудо. Решая свой труднейший жилищный вопрос (семья с маленькими сыновьями ютилась в комнатке общежития), Лариса отправила письмо – просьбу и приложила книгу переводов своих стихов на русский. И поскольку башкирскую поэтессу оценили в России, ей выделили двухкомнатную квартиру, куда она переехала с двумя детьми, сейчас растит уже третьего сына».

Яҙыусылар союзының 75 йыллығы алдынан ҡала башлығы Качкаевҡа кереп, уның менән ошо ваҡиға айҡанлы беҙҙең ойошмаға квартира биреү тураһында һөйләшеп, шуға күндергәйнем. Баҡһаң,

беҙ тырышып йөрөмәгәнбеҙ, барыһын да Ягодинцеваларҙың тәржемәләре хәл иткән икән. Кешенең үҙ хәтеренә хыянат итеүеме был хәл, әллә башҡаса баһаланырға тейешме икән? Уныһы минең эш түгел, ошоно уйлап сығарғандар, хатта ошо хаҡта матбуғат аша халыҡҡа еткергәндәр әйҙә үҙҙәре хәл итһен.

30 ноябрь, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Бына икенсе төндө Америкала үткәрергә тырышам. Үткәреүе ҡыйын, адаптация тигәндәренә ошондай саҡтарҙа нығыраҡ төшөнәһең. Әле уларса төнгө өстә тороп ултырҙым, был беҙҙеңсә киске биштәр була инде.

Ара һәм ваҡыт тигән мәңгелек төшөнсәләр. Элекке замандарҙа уларҙы бер-береһенән айырып булмаған. Араһына ҡарап, араһына бәйле тейешле ваҡыты. Элекке тиҙлектәрҙә һин йәшәгән ерҙең ваҡыты (мәҫәлән, көн) һин барған ерҙең төнөнә ҡапыл ғына әйләнә алмаған, ундай тиҙлектәр булмаған. Элек халыҡтар күсенһә, йылдар буйы яйлап күсенгән, шуға ваҡыт та улар өсөн яйлап үҙгәргән, дөрөҫөрәге, яңы урындағы үлсәүҙәргә күскән. Хәҙерге тиҙлектәр заманында хәлдәр бөтөнләй башҡаса. Ара менән ваҡыт араһындағы гармония ғәләмәт тиҙлектәр арҡаһында бик тиҙ емерелә. Әлеге донъялағы дисгармонияларҙың артыуында бәлки ошоларҙың да йоғонтоһо барҙыр?

Мичиган, Юҡатан, ацтек, ирокез, Ниагара, Майами – был һүҙҙәрҙә ниндәйҙер төркисә яңғыраш бар. Эҙләй башлаһаң, улар бик күптер инде ул. Беринг аша боронғо, бик-бик боронғо – 20–30 мең йылдар элек төркиҙәрҙең бында күскәнлеге, шуларҙан индеецтәр тыуғанлығы тураһындағы гипотезаларҙа ныҡлы ерлек бар һымаҡ. Ҡыҙыҡлы тема.

Асҡар аҙнаһына дүрт тапҡыр мәктәпкә йөрөй. Зирәк бала күренә, күп нәмәне хәтеренә теңдергән. Бер-ике инглиз һүҙе әйткәйнем, һин быны ҡайҙан беләһең тип аптыраны. Шунан тағы ла байтаҡ һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һораштым. Аҙаҡ үҙе мине тикшерә башланы. Бына бит ул мөхит һәм ата-әсәйең үрнәге. Әгәр беҙҙең илдә һәр милләт балалары ошондай үрнәктәрҙә тәрбиәләнһә, бөтә милләт балалары ла, моғайын, үҙҙәренең туған телен белер ине. Бында тормоштағы мәнфәғәт күп нәмәне хәл итә. Рәсәйҙә төрлө милләттәрҙең туған теле баланың артабанғы үҫешендә, уларҙың шәхес булараҡ үрләүендә ниндәй бик мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә ала? Дәүләт даирәһендә, хеҙмәт мөнәсәбәттәрендә принципиаль әһәмиәте нисек? Асылда юҡ

дәрәжәлә бит. Әгәр уларҙың йоғонтоһо бик ҙур булһа, ата-әсәләрҙең дә, шуға ҡарап балаларҙың да туған телгә мөнәсәбәте бөтөнләй башҡаса, бик талапсан, бик ҡәҙерле, тормоштоң киләсәген хәл иткес булыр ине. Инглиз телендә бөгөн бөтөн халыҡ-ара аралашыу, яңы мәғлүмәт технологиялары һ.б. Шуға ла ул донъяны нығыраҡ яулағандан-яулай, хатта халыҡ-ара бөйөк телдәрҙе лә (мәҫәлән, француз, немец, рус һ.б.) ҡыҫырыҡлай. Париждағы де Голль исемендәге аэропортта Детройт рейсына ултырырға тейешле урынды эҙләп бер осонан икенсе осона байтаҡ саптыҡ. Фәриҙә инглизсә өндәшеп ҡарай, француздар бик үк һөйләшеп бармайҙар. Етмәһә, кәрәк урынды дөрөҫ күрһәтмәгәндәр. Теләһә-теләмәһә лә бындай алыҫ сәфәрҙәрҙә хәҙерге кешегә шул инглиз теле аша аралашырға тырышырға тура килә инде.

Артурҙар йәшәгән урын бик ыҡсым, бер-береһенә игеҙ һымаҡ оҡшаған йорттарҙан – ике ҡатлы биналарҙан тора. Һәр береһендә унлап фатирҙыр. Элек хәрбиҙәр йәшәгән. Унан Мичиган университетына биргәндәр. Бик тыныс, таҙа урын. Мөһабәт ағастар, аяҡ аҫтында йомшаҡ үлән. Әллә сәскәндәр, һәр хәлдә, бик тәрбиәле. Кисә иртән сыҡҡанда бер тейен йүгереп үтте. Бында боландар ҙа күренә икән. Ағастарҙан бик мыҡты ҡарағайҙарҙы ғына таныным. Башҡалары үҙҙәренсә. Япраҡ ҡойғандар, тик япраҡтары беҙҙәге ағастарҙыҡына оҡшамаған. Таныштарҙан саған ғына осраны, япраҡтары ерҙә ята ине.

Артур килгәс тә тотонолған «Тойота» алғайны. Беҙ ярҙам иткәйнек. Хаҡы ла бик ҙур түгел, беҙҙә ул аҡсаға емерелеп бөткәнде генә алып була. Шул машинала ҡаршы алды. Өр-яңы һымаҡ. Бында машинаһыҙ йәшәүе бик ҡыйын, хатта мөмкин түгел тиерлек. Артурҙың уҡыған ере бик үк алыҫ түгел тинеләр, тик Асҡарҙың мәктәбе алыҫ ҡына икән.

Кисә барыбыҙ ҙа күмәкләшеп бик ҙур супермаркетҡа барҙыҡ, бер багажник тейәп, азыҡ-түлек алып ҡайттыҡ. Тәбиғи ашамлыҡтар һайланыҡ. Әлбиттә, хаҡтары беҙҙекенән ҡыйбатыраҡ. Аҙна һайын баралар икән Артурҙар. Машинаһыҙ уларҙы нисек ташыйһың? Беҙҙәге һымаҡ эргәлә генә ваҡ магазиндар юҡ.

1 декабрь, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Кисә иртән ике сәғәт тәбиғәттә йөрөнөм. Бик алыҫ түгел балалар майҙансығы, баскетбол, волейбол уйнай торған урындар бар. Аҙ ғына ла сүп-сар күренмәй.

Фәриҙә менән Сабина билмән эшләне. Мин балаларҙы алып баяғы майҙансыҡта бер сәғәт йөрөнөм. Рәттән сынйырлы дүрт бәүелсәк эшләнгән. Асҡар менән Әсилде оҙаҡ бәүеттем.

Балалар билмәнде бик ныҡ һағынған, сей көйө ашарға әҙерҙәр. Бында билмән бөтөнләй юҡ икән. Беҙ төшкө аштан тороуға әлеге юғалған сумаҙанды ла килтереп еткерҙеләр. Сәбәләнеп эҙләп йөрөүҙең кәрәге булманы. Сумаҙан һауала беҙҙән бер тәүлеккә артҡа ҡалып осто, айырма шул ғына.

Ҡараңғы төшә башлағанда Артур уҡыған Мичиган университетының биләмәләрен ҡарарға киттек. Ике сәғәткә яҡын йөрөгәнбеҙҙер. Уҡыу йорто бик зур, йорто түгел, йорттары, уҡыу ҡалаһы тип әйтеү дөрөҫөрәк булыр. 48 мең студент уҡый, был университет 10 мең кешегә эш урыны бирә икән. Үҙенсә ҡаланы тотоп тороусы, йәғни «градообразующее предприятие» инде. Ял көнө булһа ла, бик мөһабәт китапхананың уттары балҡып тора. Беренсе ҡаты аша үттек, бик иркен, яҡты.

«Аҡ имән» тигән зур ағас янында туҡтап торҙоҡ. Яҙыулы тамғаһы бар. Беҙҙең имәндәргә оҡшамаған. Бында ағастарҙың тышы шымараҡ, ботаҡтарын бик киң йәйеп үҫкәндәр, улар олондан вертикаль килеп сыҡҡан һымаҡ.

Ҡыҙыл кедр тигән йылға аша һалынған йәйәүлеләр күперенән атлап үттек. Кедр тигәндәрен ныҡлап күргәнем юҡ, мин күргән бик мыҡты ҡарағайҙар, бәлки, шуларҙың туғанылыр. Йылғаның ике яғында ла бик тәпәш яр. Аҡҡаны ла һиҙелмәй, канал һымаҡ. Тик бер урында шаулап аҡҡан шарламаны күреп, был йылғаның көсҡеүәтен аңлайһың. Был шарлама яһалма түгелме икән тип уйлап ҡуйҙым.

Беҙҙең Соранда ла Ҡунаҡбай менән Яңауыл (Ғәбдрәфиҡ) араһында шарлама була торғайны. Дала ере ташлы түгел, шуға был шарлама үҙенен ашай-ашай йылғаның үренә табан күсә барҙы ла Яңауыл тирмәненә етәрәк юҡҡа сыҡты.

Таулы урындарҙағы шарламаларҙы, бигерәк тә Ниагара һымаҡ бөйөктәрен, ҡаты таштар һаҡлай, әлбиттә. Ләкин таштар ҙа мәңгелек түгел, был бөйөк шарламалар ҙа мәңге шауламаҫ. Тик бер кем дә уларҙың үҙгәргәнен үҙ күҙҙәре менән күрмәҫ, сөнки был үҙгәрештәр янында кеше ғүмере үтә лә сикләнгән.

Мичиган университетының спонсорҙары бик күп икән. Тәүгеләренән үк исемдәрен һаҡлағандар. Бер урында йыуан таш

бағана – стелалар теҙелеп киткән, шунда спонсорҙар, күрһәткән ярҙамдарының күләме, йылы-вағыты яҙылған. Исемлек бик ҙур.

Мичиган университеты дәүләт уҡыу йорто иҫәпләнһә лә, хөкүмәт бүлгән аҡса бик күп түгел. Төп сығанаҡ – ошо спонсорҙар һәм уҡыу өсөн ҙур түләүҙәр икән. Сит илдән килгәндәр өсөн уҡыу хаҡы айырыуса ҙур тип һөйләне Артур.

Уның әйтеүе буйынса, Гарвард университетының бюджеты Рәсәйҙәге берәй республика бюджетынан күп тапҡырға ҙурыраҡ, имеш. Аҙаҡ бик бай булып киткәндәрҙең күптәре ошонда уҡыған. Улар даими ярҙам итеп торғас, Гарвард университеты үҙенең байлығы буйынса башҡаларҙан ныҡ айырылып тора икән.

Мичиган университетында башҡорт китаптары бар тип яҙғайнылар беҙҙең Союздың 80 йыллығына арналған брошюрала. Ниндәй китаптар икән, асыҡла әле тигәйнем Артурға. Ул минекеләрҙе эҙләүҙән башланы, бындағы күп университеттарҙа, шулай уҡ Германияла, Англияла, Канадала, Польшала минең бик күп китаптарымдың булғанлығын (әле таралған ерҙәре асыҡлағаны утыҙҙан артыҡ) белеп, аптырап киттек. Мәскәүҙә сыҡҡандары ғына түгел, Өфөлә башҡортса, Ҡазанда татарса сыҡҡандары ла бар. Ә беҙ был хаҡта бер ни белмәйбеҙ. Был мәсьәләне берәй йәш белгес махсус өйрәнһен ине. Әлегә был хаҡта мәғлүмәт бөтөнләй аҙ, тик дөйөм һүҙ генә.

Иртә ваҡыттар, иркә ваҡыттар.

Үҙәк урамдан байтаҡ атлап барҙыҡ. Тротуар ситендә бер генә машина ла тормай. Беҙҙә бит урамға ҡуйылған машиналар араһынан үтерлек түгел. Бында күп ҡатлы түләүле парковкалар төҙөлгән. Хаҡтары ла аҙ түгел икән.

Ҡыҙыл Кедр йылғаһы янында ағастар күп кенә. Әммә араларында беҙҙәгесә ваҡ ҡыуаҡтар юҡ, барыһы ла тап-таҙа. Шундайҙы Германияла ла күргәйнем. Мин быларҙы уларҙа һәр ерҙә тәртип, беҙҙе сүп-сар баҫып бөттө тип әйтер өсөн яҙмайым. Нисек кенә булһа ла, үҙеңдеке үҙеңдеке инде. Үҙебеҙҙе хурлап, башҡаларҙы маҡтарға теләмәйем. Бары күргәндәремде генә дәфтәремә теркәйем.

Фәриҙә Асҡарға Михаил Пляцковскийҙың «Большая пиратская книга»һын уҡый. Ҡыҫҡа ғына ваҡиғалар. Һәр береһе «История» тип аталған. Шуларҙың береһен Асҡар ҡат-ҡат уҡыттыра. Үҙе рәхәтләнеп көлә. Был «тарих»тың мәғәнәһе шулайыраҡ: Бер пират ҡытайса беләм тип маҡтана. Бәлки белгәндер ҙә, әммә тикшерерлек кеше караптарында юҡ. Бер портта уларға бер ҡытай сәүҙәгәре килә. Ҡытайса

беләм тигән пират быға бик ҡыуана: хәҙер белгәнен күрһәтәсәк! Ҡытайға «Мин-цынь-фань, щупь-фипь-мань» тип өндәшә. Әммә күҙлекле ҡарт ҡытай уға аптырап ҡарай һәм тиҙерәк китер яғын самалай. «Бер нәмә лә аңламайым» – тигән һымаҡ башын ғына сайҡай.

Иптәштәре пираттан: «Һин алдаҡсы!» тип хахылдашып көләләр.

Боцман был ҡытайҙы ҡыуып етә лә инглизсә һорай, беҙҙең алдаҡсы ҡытайса һөйләмәнеме әллә, ти. Теге саф инглиз телендә яуап бирә: – Мин ҡытайса белмәйем, мин бит Лондонда тыуҙым.

Балалар өсөн яҙылған был мәҙәкте ишетеп, мин уйланып ултырҙым.

Берәй заман берәй сит ил кешеһе башҡортҡа башҡортса өндәшһә, ул бәлки яуап бирә алмаҫ. Лондонда тыумаһа ла, Башҡортостанда, әйтәйек, Өфөлә тыуып үҫһә лә, бәлки яуап бирә алмаҫ, сөнки уларҙың байтағы башҡортса белмәйәсәк.

Асҡар көлә-көлә тыңлаған был хикәйә мине бына нимәләр хаҡында уйландырҙы.

2 декабрь, 2014 йыл. Шишәмбе.

Бөгөн Асҡарҙың тыуған көнө – биш йәше тула. Әле ҡасан ғына уның тыуғанына ҡыуанып йөрөй инек, бына биш йыл ғүмер үтеп тә киткән. Барыбыҙ өсөн дә матур үткән. Асҡар тыуғанда Артурҙарҙың фатиры ла юҡ ине. Хәҙер беҙҙең янда ғына һәйбәт йортта йәшәйҙәр. Артур был арала әллә күпме илдәрҙә булды. Әле лә уҡыуын Америкала дауам итә. Әсилгә киләһе йыл өс йәш тула. Ғаиләләре менән күп сит илдәрҙә ял иттеләр. Бына Асҡарҙың биш йәшен Америкала Мичиган штатында улар йәшәгән өс бүлмәле квартирала ҡаршылайбыҙ. Фәриҙә менән мин 75 йәшебеҙҙе тултырҙыҡ. Барыбыҙ за иҫән-һаубыҙ. Ошолар бәхет түгелме ни? Аллаға шөкөр. Күҙ теймәһен.

Бөгөн төндә арыу ғына йоҡланым. Яңыса ваҡытҡа өйрәнеп килгән һымаҡмын.

Кисә иртәнге алты тулыр алдынан сығып киткәйнем, ике сәғәт буйы йөрөнөм. Көн ныҡ һыуытҡан, әсе ел. Перчатка ла алмағайным, еңел кейенгәйнем. Ныҡ ҡына өшөттөрҙө.

Кисә штаттың үҙәгендә булдыҡ, күп тарихи урындарҙа рәсемгә төштөк. АҠШ-та һәр штаттың башҡалаһында Вашингтондыҡына оҡшатып төҙөлгән Капитолий бар икән. Вашингтондағының янында элек булғайным, фото ла бар. Бындағының эсен бөтә дүрт ҡатын яйлап йөрөп ҡарап сыҡтыҡ. Капитолий бик капиталь төҙөлгән, классик стилдә. Депутаттарҙың ике ултырыш залы, губернаторҙарҙың ҙур

рәсемдәре, йорттоң архитектураһы – барыһы ла бик зауыҡлы һәм тантаналы. Дәүләт хеҙмәткәрҙәре лә ошонда ултыра икән. Капитолий янында депутаттарҙың исем-шәрифтәре яҙылып, парковка урыны билдәләнгән – һәр береһенеке.

Халыҡ был йортҡа иркен инеп йөрөй. Бик ихлас ҡаршы алып торалар. Полицейскийҙар балаларға һүрәттәрен буяй торған китаптар бүләк иттеләр.

Күпме хәбәр ишетеп, был илдән
Күңелебеҙ күптән өшөгән.
Күрмәҫтән үк күңел өшөгән.
Бирелмәйсә һис бер шик-шомға,
Ишектәрен аса Мичиган.

Китер алдынан китапханамды аҡтарғанда Лосевтың «Дерзание духа» тигән китабы ҡулға килеп эләккәйне. Әллә ҡасан алғанмын, авторҙың үлгән йылында (1893–1988) сыҡҡан. Уҡырға форсат булманы. Әле ҡараштырып алам. Был ғалимдың уҡымышлылығы, күп телдәрҙе, боронғо грек телен хатта диалекттары менән белеүе иҫ киткес инде. Уның фекерләү тәрәнлегенә еңел генә етерлек түгел. Шулай ҙа мәғлүмәттең күплеге, артыҡ академизм, әллә күпме терминдар ғалимдың фекерләүен аңлауҙы ауырлаштыра, ғилмилек ялҡыта башлай. «История античной философии» (в 6 т., 1963–1980, СССР-ҙың Дәүләт премияһы – 1986) кеүек хеҙмәттәрҙәге ғилмилек бик урынлы, әлбиттә. Әммә был китап Политиздатта баҫылған һәм киң уҡыусыларға тәғәйенләнгән. Иң бөйөк фәйләсүфтәр ҙә халыҡҡа аңлайышлы телдә фекерҙәрен әйтә белгән бит.

3 декабрь, 2014 йыл. Шаршамбы.

Асҡарҙың тыуған көнөндә боулингҡа барҙыҡ. Халыҡ кемуҙарҙан шар тәгәрләтә. Фәриҙә менән беҙ ҙә ҡатнаштыҡ. Балалар кинәнделәр.

Телевизорҙан күрһәм дә, был уйындың барған ерендә булғаным юҡ ине. Бик элиталы һаналған уйындарҙы беҙ – ауыл балалары һуғыштан һуңғы ауыр замандарҙа ла уйнап үҫкәнбеҙ икән. Беҙ уйнаған «Соҡор туп» нимәһе менән хәҙерге гольфтан кәм? Айырмаһы шул ғына: тупты һыйыр йөнөнән үҙебеҙ эшләнек, соҡорҙо тигеҙ ерҙә үҙебеҙ соҡоноҡ. Әммә уйын ҡағиҙәләре бер. Бәләкәйҙән шундай уйындар уйнағанбыҙ. Соран быуаһында боҙ туңғас сәкән һуғыуҙар ҙа үҙенсә хоккей бит. Беҙҙең шүмән (шыуман) шыуыбыҙ ҙа әле ялтыр

боҙҙа санаға ятып ярышыу һымаҡ ярһытҡыс дәртле булмағанмы ни? Хәҙерге балалар күргән күп рәхәтлектәр безгә насип булмаһа ла, ярышып уйнаған уйындарыбыҙҙы оноторлоҡ түгел.

Иртән ҡараңғыла сығып китәм. Кисә бик шәп атлап йөрөп, аҙашып киткәнмен. Аҙашҡанымды бер сәғәт үткәс кенә аңланым. Артурҙарҙыҡына оҡшаған әллә күпме биналарға барып сығам, уларҙыҡы түгел. Бындай йорттар бик күп икән. Номерҙарын да белмәйем (хәҙер онотмам инде: Спартан, №1571, Д). Ике сәғәт ҡыҙырғас, балалар менән уйнаған майҙансыҡҡа килеп сыҡтым. Шунан үҙем белгән ориентирҙы – өс мыҡты ағасты күрҙем. Әсилдең ишек төбөндә торған ҡыҙыл арбаһын шатлығымдан ҡосаҡлап алырҙай булдым.

Нисәнсе иртә йөрөп керәм, бер генә эт тә, бесәй ҙә осрамай. Ә кешеләрҙе көндөҙ ҙә бик тап килтерməçһең. Урамда йәйәү йөрөүселәр юҡ тиерлек.

Почта, үҙәк тип йөрөткән урындары бар. Һәр квартираның һаны яҙылған кескәй генә аралыҡ асҡыс менән асыла. Артурға ике хат бар ине. Ошонда һауыттарға һыу тултырып алдыҡ. Асҡар кнопкаларға баҫып үҙе тултырып тора. Төрлө саралар үткәрер өсөн дә, спорт өсөн дә үҙәктә залдар бар. Эсергә алған һыуҙары таҙартылған. Бындағы «Шишмәгә һыу юлы» ошо була инде.

Тороп ҡалды бөйөк Рәсәй,
Алда бөйөк Америка.
Оҙатып ҡалған кешеләрем
Иҫән ҡаршы алыр микән?

«Ватандаш»тың 11-се һанын үҙем менән алғайным. Закирйән Әминевтың мифология тураһындағы мәҡәләһенең дауамы (аҙағы) ҡыҙыҡлы. Тәүге өлөшө 9-сы һанда сыҡҡан. Уҡый алмағайным, ҡайтҡас ҡарарға кәрәк. Материал бай, күҙәтеүҙәр үҙенсәлекле. Ысынлап та, кеше өсөн яҙмыш иң серле мәсьәлә һәм уның бар ғүмерен хәл итеүсе көсмө, маңлайға һуғылған тамғамы – һүҙен табыуы ла ҡыйын. Ниңәлер йырҙағы ошо һүҙҙәрҙе килтермәгән:

«Яҙмыш ҡәләмдәре ҡулда булһа,
Былай яҙмаҫ инек тәҡдирҙе…»

Яҙмыш ҡәләме тәңре ҡулында шул. «Булһа» тигән шарт ҡылым аша кеше хыяллана ғына ала.

Исемдең яҙмышты билдәләүе тураһындағы күҙәтеүҙәре ҡыҙыҡлы. Ләкин уларҙы үҙебеҙҙең тормоштағы миҫалдар менән дәтулыландырырға, байытырға мөмкин булыр ине. Мәҫәлән, ир менән ҡатын бер-береһенә исемдәре менән өндәшмәгән, исемен атап, бәлә килтереүҙән ҡурҡҡан: «Һин», «Әй» һ.б. Ире хаҡында һөйләгәндә фәләндең ағаһы тип әйтеү. Айыуҙы «тайыш аяҡ» тиеү һ.б. исем алыштырыуҙар, балаға «Тимербулат», «Үлмәҫбикә» һ.б. исемдәр ҡушыу ҙа исем аша яҙмышҡа, тормош ваҡиғаларына йоғонто яһарға тырышыу түгелме ни?

4 декабрь, 2014 йыл. Кесаҙна.

Кисә Асҡар икенсе балалар майҙансығына Әсил менән мине алып барҙы. Киң йәйелеп үҫкән, бик күп тармаҡлы ағастар, аҙыраҡ ҡамышҡа оҡшаған, әммә беҙҙә булмаған үҫемлек. Бик үҙенсәлекле күренеш, бөгөн барып фотоға төшөргә кәрәк.

Майҙансыҡҡа тимер юлы бик яҡын. Бында ла Артурҙарҙыҡы һымаҡ ике ҡатлы йорттар. Составтар ер һелкетеп үтеп тора. Бында йәшәгәндәргә түҙем бирһен.

Күрше Лансинг тигән ҡалалағы (Мичиган штатының үҙәге, яҡын ғына) бик ҙур сауҙа үҙәгенә барҙыҡ. Унда балалар майҙансығы бар, матур эшләнгән. Артур шунда Асҡар, Әсил менән ҡалды. Балалар кинәнеп уйнанылар. Беҙ Фәриҙә, Сабина менән ошондағы бүлектәрҙе ҡыҙырҙыҡ. Оҙаҡ йөрөнөк, арығансы. Бөтә бүлектәрҙе лә ҡарап сығыр өсөн тотош көн кәрәктер. Әйберҙәр ҡыйбат, бигерәк тә доллар 52 һумға менгәс. Шорты, кеды алдыҡ миңә, иҫтәлек булыр.

Бына бер аҙна инде донъянан айырылып йәшәйбеҙ. Матбуғат уҡымайбыҙ, TV ҡарамайбыҙ, радио тыңламайбыҙ. Донъя хәлдәрен белгән дә, ҡыуанған да, борсолған да юҡ. Балалар интернет аша бәйләнештә йәшәйҙәр. Кисә Артур Грозныйҙағы балалар тураһында хәбәр уҡыған.

Ҡайҙа бер-береңә һыйынып йәшәү!?
Донъяларҙы ялмап алыр кеүек
Тағы яңы донъя һуғышы.
Ҡайҙа бер-береңә һыйынып йәшәү!?
Йәшәһендәр илдәр һис юғында
Береһе береһе менән һыйышып.
Береһе береһе менән тынышып.

Халыҡ менән халыҡ һуғышмай, шул халыҡтың яҙмышын ҡулдарында тотҡан ил башлыҡтары һуғыша.

Бер кеше алданырға мөмкин, мең кеше алданырға мөмкин, ә бына нисәмә миллион кеше нисек бер юлы алданырға мөмкин икән? Бер кешенең психик ауырыуын башҡалар ауыр кисерә, ә бына тотош халыҡтың психозын халыҡ үҙе аңлай ҙа, уға һыҙлана ла алмай, сөнки быны баһалай алыуҙан уҙған ул, аҡылы зәғифләнгән, хәтере яңылышҡан, рухы боҙолған. Әлеге Украиналағы хәлдәр шулай түгелме ни?

5 декабрь, 2014 йыл. Йома.

1997 йылда килгәндә Вашингтондағы тәьҫораттарымды айырым дәфтәргә теркәп барғайным. Уларҙың бер өлөшө юлъяҙмаларыма инде, әммә көндәлектәремдән ситтә ҡалды. Башҡортостан буйлап йөрөгән ҡайһы бер сәфәрҙәрем дә айырым блокноттарҙа һаҡлана, шул көйө ята. Улар хаҡында матбуғатта ла яҙманым, улар көндәлектәремдә лә юҡ. Шуға күрә сәйәхәтемде көндөкөн-көнөнә көндәлектәремдә яҙып барырға булдым. Ҡайтҡас юлъяҙма әллә була, әллә юҡ, күргән-кисергәндәрем, исмаһам, ошонда теркәлеп ҡалһын.

Америка Ҡушма Штаттары – халыҡтарҙы ҡушҡан штаттар. Кисә Артурҙар уҡыған Мичиган университетының аграр факультеты (департамент тиҙәр) ойоштороп раштыуа байрамында булдыҡ. Уны Яңы йыл шыршылары байрамы тиергә мөмкин. Уларҙың ниндәйҙәре генә юҡ. Ингәс тә иң бейеге ҡаршы ала. Баҡһаң, ул әллә күпме сәскәле көршәктәрҙән йыйылып эшләнгән икән. Сәскәләр ҡыҙғылт төҫтә, шуға бында ингән һәр кемде ҙур ҡыҙыл шыршы ҡаршы ала. Артабан төрлөсә биҙәлгән әллә күпме ҙур булмаған шыршылар, һүрәттәр күргәҙмәләре һ.б. тамашалар. Бер мөйөштә музыка, трио уйнап ултыра. Берәй өлөшө тамамланыу менән ҡул сабалар. Икенсе урында эсемлек ҡойоп бирәләр, балаларға пакетҡа һалып печенье һымаҡ нәмә өләшәләр.

Ысынлап та, халыҡтарҙы ҡушҡан штаттар икән был ил. Был байрамда кемдәр генә юҡ, барыһы ла балалар менән килгән. Ҡара төҫтәгеләрҙе элеккесә атарға ярамай, штраф түләтеүҙәре, хатта ултыртып ҡуйыуҙары бар. Улар, йәғни хәҙергесә афроамерикандар күп, кореец йәки ҡытайға оҡшағандар бик күп, аҡ американдарҙан аҙ түгелдер. Бөтәһе лә тиерлек инглиз телендә һөйләшә. Барыһы ла ошо илдең граждандары, АҠШ-тың дәүләт флагын хөрмәт итеүсе ил патриоттары. Бөтәһе лә булмаһа ла, күпселеге. Төрлө ил халыҡтарын,

әллә ҡайһы тарафтарҙан бында яҙмыш килтергән, күптәре ҡол рәүешендә килтерелгән кешеләрҙе бергә ҡушып, уҡмаштырып барлыҡҡа килгән яңы дәүләт, яңы милләт – американлылар.

Рәсәйҙәге милләттәрҙе лә шулай бергә уҡмаштырып, рәсәй халҡын булдырырға ынтылыусылар үҙебеҙҙә лә, ситтә лә аҙ түгел. Ләкин беҙҙәге хәлдәр бөтөнләй башҡаса бит. Рәсәй тигән һүҙ әле бөтөнләй булмаған саҡта уҡ беҙ ошо тыуған еребеҙҙә халыҡ булып ойошоп йәшәгәнбеҙ. Тарихи ватаныбыҙға тамырланғанбыҙ. Рус булмаған ундай милләттәр Рәсәйҙә бик күп. Уларҙы ассимиляциялау, әлбиттә, ныҡ бара. Ләкин уларҙан, рәсәйлеләр булһалар ҙа, көслә бер рәсәй милләтен барлыҡҡа килтереү килеп сыҡмаясаҡ. Рус халҡына хәҙер башҡа милләттәрҙе йотоу түгел, үҙен-үҙе һаҡлау тураһында нығыраҡ уйларға, нығыраҡ борсолорға кәрәк. Рустарҙың үҙҙәренә бөгөн яйлап-яйлап йотолоу ҡурҡынысы янамаймы ни? Себер рустары ҡытайҙар менән, Алыҫ Көнсығыштағылар япондар менән йылдан-йыл нығыраҡ аралашып, үҙҙәренең телен, милли асылын юғалтмаҫ тип кем гарантия бирә ала?

Ҡытай карталарында Себерҙе ҡытай биләмәләре итеп күрһәтәләр икән, улар сәйәсәтенең ҡайһы тарафҡа тоҫҡалғанлығы асыҡ күренә.

Бик мөләйем, олпат Ҡыш бабай, быларса Санта-Клаус, санала ултыра. Һаҡалы ла көлтә түгел, йәбештерелмәгән, бик ыҡсым ғына, үҙенеке. Тауышы ла тау ярып сыҡмай, сабыйҙарҙы янына ултыртып,ихлас һөйләшә. Уның менән балаларҙы рәсемгә төшөрөргә оҙон сират. Беҙ ҙә баҫтыҡ. Балалар ҙа, беҙ ҙә һүрәткә төштөк. Ҡыш бабай һәр балаға дуғалап эшләнгән берәр кәнфит бирә, тегеләре бик шат.

Балаларҙы бик күп килтергәндәр. Бер афроамерикан пары ете малай, ҡыҙ менән килгән. Бик бәләкәйҙәре, ҙурыраҡтары бар. Ҡайһы берҙәре бәлки туғандарыныҡылыр. Әммә үҙ-ара бик ихлас аралашалар. Ҡара ир-егет ысын әзмәүер. Үҙемдекеләргә әйтәм, ҡарағыҙ әле, хәҙер янына баҫам, яурынына етерменме икән тим. Ипләп кенә эргәһенә килдем. Яурынынан аҙыраҡ ҡалҡыуыраҡ булдың тинеләр. Ә ул кеше ауыл өйөнөң түбәһенә тейер ине.

Былай ҙа ҡара был ғифрит өҫтәүенә һаҡаллы, битен йөн ҡаплаған. Кейгән джинсыһының төбөнә беҙҙең бер әкиәттәге һымаҡ бер тоҡ ҡыяр һыйырлыҡ. Мода шулай икән. Миңә ул шулай сәйер күренә, ә үҙе дәрәжәһен белеп, бик тыныс, ғорур баҫып тора. Донъяға өҫтән генә ҡарай.

Кешеләр бер-береһе менән бик йылы, яғымлы аралаша. Һәр кем йылмайып йөрөй. Хеҙмәтләндереп йөрөүсе ҡарттар байтаҡ. Бындағы мөхит нисектер нурлы, үҙенсә балҡып тора.

Тик беҙҙең халыҡ Башҡортостанда ла, Рәсәйҙең башҡа тарафтарында ла барыбер матурыраҡ. Улар ҙа бындағы кешеләр һымаҡ бер-береһенә йылмайып, балҡып йөрөһә, тағы ла матурыраҡ булырҙар ине. Тик беҙҙә кешеләрҙең йөҙөндә борсолоу күберәк, хатта асыу бөркөлөп тора шул. Беҙҙең тормош кешеләрҙе бик йылмайтып бармай.

Был әкиәт донъяһында беҙ бер сәғәт самаһы булғанбыҙҙыр, ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә күпме матурлыҡ, ихласлыҡ, күпме сабыйҙарҙың шатланғанын күреп, үҙебеҙ ҙә шатланып ҡайттыҡ.

Тағы ла «Ватандаш»ҡа (2014, №11) әйләнеп ҡайтам. Быйыл августа Венгрияла үткән Бишенсе төрки ҡоролтайы тураһындағы мәҡәләләрҙе бик ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтым. Венгрҙар ниндәй ҙур тарихи эштәр башҡара. Рәхмәттән башҡа нимә әйтәһең, венгрҙарҙы уйлап, уларға көнләшәһең.

Тарихта ғәжәп хәлдәр була. Йырҙа йырлана бит: «Кешеләрҙән кеше, һай, кәм түгел, тик бәхеткәйҙәре тиң түгел». Кешеләрҙең генә түгел, халыҡтарҙың да хәлдәре шулай. Беҙҙең яҡтарҙа йәшәгән ике халыҡ беренсе мең йыллыҡтың аҙаҡтарында алыҫ Европала үҙҙәренә яңы Ватан таба, яңы ергә тамырлана. Был ике халыҡ болгарҙар менән венгрҙар. Икеһе лә яңы дәүләт төҙөй, Болгария һәм Венгрия булып донъяға таныла. Ләкин болгарҙың элекке исеме генә ҡала, асылы юғала. Улар төрки халҡынан славянға әйләнә. Уның Кирилл һәм Мефодий тигән бөйөк шәхестәре славян алфавитын – кириллицаны тыуҙыра.

Яңы Ватан тапҡан венгрҙар ҙа сит халыҡтар уртаһында башҡаса телдәр солғанышында тороп ҡала. Ләкин үҙенең телен, һүҙен, моңон, милли асылын һаҡлай. Бик ауыр һынауҙар, рәхимһеҙ көрәш юлы үтә, әммә башҡа халыҡтарҙың көслө тәьҫирендә ireп юғалмай. Әгәр үҙенең туған телен һаҡламаһа, бөгөн венгр тигән милләт тә булмаҫ ине. Бәхеткә күрә, ул бар, буласаҡ, әлеге һымаҡ киләсәктә лә гөрләп донъя көтәсәк.

Интернет аша Артур миңә ошо мәғлүмәттәрҙе бирҙе. Болгарияның ере 111 мең кв. км., халҡы 7,9 млн. Венгрияның ере бәләкәйерәк – 93 мең. кв. км., ләкин халҡы күберәк – 9,9 млн. кеше. Халыҡтың хәле лә төрлөсә. Болгарияла кеше башына 16,5 мең доллар, Венгрияла 20,5 мең доллар.

Беҙҙең Башҡортостандың халҡы аҙыраҡ булһа ла, майҙаны киңерәк, ер байлыҡтары ла күберәк, тәбиғәте лә күптәрҙе көнләштererлек. Ләкин әлеге йырҙы үҙгәртеберәк әйтһәк: «Халыҡтарҙан халыҡ, һай, кәм түгел, тик бәхеткәйҙәре тиң түгел».

Бер аҙнанан артыҡ йәшәйбеҙ. Был яҡтың ямғырын да, ҡарын да күргән юҡ. Тик һыуыҡ еле генә иҫеп ала. Бөгөн иртән сәғәт етенсе яртыла сығып киттем. Сәғәт һигеҙҙе үткәнсе йөрөнөм, һелкендем. Ел юҡ, аяҙ, хатта эҫе булып китте.

Мичиган штатының майҙаны 250 мең кв.км., халҡы 10 млн. Заманында АҠШ-тың халҡы СССР-ҙыҡынан күпкә кәмерәк ине бит. Хәҙер Рәсәйҙекенән 2 тапҡырҙан да артығыраҡ. Тиҙҙән 3 мәртәбәгә күберәк булыуы ла бик мөмкин.

Американың йылмайған йөҙө. Әлегә башҡасаһын күрмәнем. Бәлки күреп өлгөрмәм дә. Ҡайғылы йөҙҙәр ҙә бында бик күптер бит.

Килгәне бирле яңы тәьҫораттар көн һайын яңыра. Көн дә бер тамаша. Тамаша көн аша булһа ла, бер ай эсендә күп йыйыласаҡ. Бөгөн мәсетте ҡарарға бармаҡсыбыҙ.

6 декабрь, 2014 йыл. Шәмбе.

Башта көн дә тамаша, яйлап көн аша тамаша. Кисәге көн алдағылары һымаҡ тәьҫораттарға ул тиклем бай булманы. Бындағы мәсеткә, ундағы яҙыуҙа әйтелгәнсә, Ислам үҙәгенә барып килдек. Йома көн булһа ла, халыҡ бик күренмәй. Өйлә намаҙы етмәгәйне әле, бәлки шуғалыр. Бында уҡыу урыны ла бар икән, беҙҙеңсә әйтһәк, мәҙрәсә була инде. Класс һымаҡ иркен бер бүлмәлә балалар сыр-сыу килеп шаяра. Күбеһе малайҙар, ике-өс ҡыҙыҡай ҙа бар.

Намаҙ өсөн урындарҙа намаҙлыҡтар түшәлгән. Ҡатын-ҡыҙҙарға айырым урын. Традицион матур манара юҡ, шуға ишара ҡоролма.

Артурҙар йәшәгән урын East Lansing (Көнсығыш Лансинг) ҡалаһының бер өлөшө – Спартан ауылы – Spartan village тип атала. Бындағы ике ҡатлы йорттарҙың бөтәһендә 1000 квартира – элекке казармаларҙың барыһында ла АҠШ-ҡа килгән халыҡ йәшәй, Мичиган университетында төрлөсә уҡыйҙар. Артур грант отоп килде.

Спартандың үҙәк тип аталған административ йортона (почта, спорт зал һ.б.) шәмбе һайын балаларҙы мультфильмдар ҡарарға алып баралар икән. Асҡар, Әсил менән Сабина ла китте. Унда һыуға барғанда (таҙартылған һыуҙы кран-автоматтан һәр ваҡыт алып була) Фәризә менән кинозалдың ишеген асып ҡараныҡ: балаларын алып килгән халыҡ тулған. Аҙнаһына бер генә ҡарауҙары һәйбәт, әлбиттә.

Көнө-төнө телевизорға тексәйеп ултырмайҙар. Уның ҡарауы Асҡар менән Әсил компьютер-планшеттан айырылмай.

Хәҙерге йәш ғаиләләрҙең барыһы тураһында ла әйтмәйем. Әммә Артурҙар был мәсьәләгә иғтибар бирep еткермәйҙәр һымаҡ. Планшет менән ултырған балаларҙың тамағы асмы-туҡмы – быны ҡаты тәртиптә тотоу, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ныҡ етмәй. Ләкин русса әйткәндә, иң мөһиме питание түгел, воспитание бит.

Күп ваҡытым һауала үтә. Кисә көн бигерәк матур булды. Иртән оҙаҡ ҡына йөрөйөм, иртәнге сәйҙән һуң балалар менән майҙансыҡтарҙа булам. Башҡортса йырлайбыҙ, Асҡар элек йырлаған йырҙарҙы иҫкә төшөрә. Бында бала-саға күп, әммә майҙансыҡтарҙа беҙҙән башҡа кеше юҡ. Гел бер үҙебеҙ.

7 декабрь, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Бында әллә ниндәй байрамдар, балаларға ҙур иғтибар. Кисә Асҡарҙы полиция ойошторған ҙур сараға алып барҙылар. Башта иғлан иткәндәр: элек ҡатнашмаған 5 йәштән 12 йәшкә тиклем 100 бала ҡатнаша ала тип. Шул иғланға Артурҙар яуап биргән, Асҡар ҙа саҡырылған. Ул, моғайын, иң бәләкәйе булғандыр, дүрт көн генә элегерәк биш йәше тулғайны.

100 баланың һәр береһенә берәр полицейский, берәр машина беркетелгән. Сигналдар менән шуларҙың (йөҙ машинаның) парады, һәр бала менән Санта-Клаус һәм янындағы бер ҡатын, шулай уҡ оҙатып йөрөгән полицейский менән фотоға төшөү (Асҡар бик матур сыҡҡан). Һәр балаға 100 долларлыҡ бүләктәр һайлап алырға мөмкин. Артурҙар әллә күпме нәмә күтәреп ҡайттылар (2 самокат, куртка,сумка, ҡурсаҡтар һ.б.) Асҡар Әсилгә лә бүләк һайлаған. Был тамашаға – беҙҙә бөтөнләй булмаған байрамға – юҡҡа бармай ҡалыуыбыҙға үкендек.

Былар янындағы ике магазинға Фәриҙә менән барып әйләндек. Береһе әллә ҡытайҙыҡы, әллә кореяныҡы. Корея тураһында ҙур яҙыу тора. Күбеһенсә үҙҙәренсә ризыҡтар. Кеше күренмәй. Бында улар халҡы бик күп, киләләрҙер. Юҡһа тотмаҫтар ине.

Көндәр матур тора. Кис Асҡарҙы яҡындағы майҙансыҡҡа алып барҙыҡ. Тулған ай ҡалҡҡайны. Шуға йондоҙҙарҙы күреүе ҡыйыныраҡ.

Байтаҡ яҙышып ултырҙым. Шиғырҙар килә башланы. Ваҡыт булмағанда элек төртөп барғандарына яңынан әйләнеп ҡайтам. Әлегә ҙур тетрәнеүҙәр юҡ. ЫҒы-зыҒыларҙан айырылып, донъя менән бер яңҒызым Ғына ҡалыу етмәй. Бабич тураһында поэма һымаҡ бер

әйбер күңелдә йөрөй, тик ҡуҙғала алмай. «Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән» тигәнде «поэма икән» тип әйтерлек булһын ине. Яҙып бөтмәгән мәҡәләмде алып килмәгәнмен. Шуға үкенәм.

Яҡында ғына кер йыуыу йорто бар. Йыйнаҡ, таҙа. Кер йыуғыс машиналарҙың эшләп торғандары ла бар. Әммә бер кеше лә күренмәне. Сабина керҙәрен алды. Аҡса ваҡлаусы автомат та ҡуйғандар.

Төнгө берҙәр тирәһендә торам да өстәргә-дүрттәргә тиклем ултырып алам. Бөгөн шундай идея тыуҙы әле: индеецтарҙың резервацияһын күрергә ине. Артур торғас, уның менән һөйләшергә кәрәк: белешһен.

Резервация – сәйер акция. Ҡыҙыл китапҡа ингән халыҡтар, телдәр. Үҙеңдең тыуған ереңә үҙеңде бикләйҙәр. Ниндәйҙер ғәйебең өсөн түгел, килмешәктәр килтергән фажиғә өсөн. Индеецтар һәм бизондар яҙмышы. Бизондар үлән ашап ҡына йәшәһә лә, йыртҡыстарса ҡырылған. Уҡ менән атҡан индеецтарға, йыш ҡына улар атмаҫ борон уҡ, туп менән атҡандар.

Ирокездар, ацтектар... Үҙҙәре лә, эҙҙәре лә, һүҙҙәре лә хәҙерге йәштәренең күбеһе өсөн ят, онотолған. Тик ерҙең хәтерендә.

Тарихи тамырҙар. Азиянан Беринг аша килгән төркиҙәр тигән гипотеза. Сиу телендә, мәҫәлән, төркисә һүҙҙәр. Абрар Кәримуллинды һ.б. яңынан ҡарарға. Төҫ-ҡиәфәттә, бер ҡатлы ышаныуҙа, мәкер белмәүҙә оҡшашлыҡтар. Образлы исем ҡушыу (Ҡарсыға күҙе, Бөркөт ҡанаты һ.б.) беҙҙең төркиҙәрҙә булғанмы, һаҡланғанмы?

Һирәк ҡалған йән эйәләре, үҫемлектәр исемлегендә ҡалған этностар.Ҡыҙыл китапҡа инергә торған халыҡтар. Ҡайһы бер баҫмаларҙа улар араһына башҡорттарҙы ла индәрәләр.

Һеҙ Берингтар аша меңәр йылдар буйына килгәнһегеҙ, мин бер көндә осоп килеп еттем. Ләкин һеҙҙе күрә алманым.

Майами һүҙендә майя тамыры юҡмы? Ацтек, иштәк, остяк. Яңғыраш ҡынамы?

Ҡарағасҡа оҡшаш ағастар. Йыуан олонло, ҙур ботаҡлы, оҙон энәле. Улар араһында бик оҙаҡ йәшәгәндәре барҙыр, бик күп ваҡиғаларҙы хәтерләйҙәрҙер. «Аҡ имән» тигән яҙыулы ағас күргәйнек, уға нисә йәш икән? Ҡыҙыл кедр йылғаһы. Тимер юл янындағы балалар майҙансығы булған ерҙә бик эре, беҙҙәгесә бик булмағанса тармаҡланып үҫкән бик ҙур ағастар, өйәнкегә тартым. Ботаҡтарынан толом-толом нәҙек кенә тармаҡтар аҫылынып тора (ива плакучая). Беҙ йәшәгән ерҙә өс мөһабәт ылыҫлы ағас, шулай уҡ

ҡабығы һыҙырылған һымаҡ ап-аҡ булып ҡалған ағастар. Ағас үҙе ҙур, ваҡ ҡына емештәре лә бар. Былар йыш осрай.

8 декабрь, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Кисә балалар өсөн тағы ла байрам үткәрҙеләр. Төрлөһө төрлө ашамлыҡ китергән. Фәризә күп итеп ваҡ бәлеш бешергәйне. Сабина менән шуны алып барҙылар. Балаларға былай ҙа һый-күстәнәс булған. Асҡарға бәләкәй генә биш машинанан торған янғын һүндереүсе комплект, Әсилгә ҡурсаҡ бүләк иткәндәр. Ҡыш бабайҙары ҡара кеше икән, беҙҙең балалар уға сәйерһенеп ҡараған.

Быларҙа Снегурочка тигән персонаж юҡ. Беҙҙең яңы йыл парын ҡайҙалыр күргәс, Санта-Клаустың ҡатыны ҡайһылай йәш тип аптырағандар. Беҙҙәге һымаҡ донъяны ҡар күмеп китмәгәс, Ҡарһылыу тигән матур образ ҡайҙан тыуһын?

Бында ун көн йәшәнек, бөртөк ҡар күргәнебеҙ юҡ. Өфөлә ҡар күп, ҡаты ғына һыуыҡ икән. Сабина әсәһе менән һөйләшеп тора.

Кисә айҙың ныҡ тулған сағы. Аяҙ төн, ҡырау төшкән. Ай яҡтыһы.

Бында барыһы сәйер, ят,
Таныш бары тулған ай.
Ситтә тулған айҙы күреп,
Тулған күңелем тулғана.

Сәғәт һигеҙгә тиклем йөрөнөм. Ҡояш сыға башланы. Ошо ваҡытта ай ҙа байыны. Тик уның батҡаны күренмәне, офоҡтағы монарҙа юғалды.

Көн дә тиерлек Асҡар менән Әсилде яҡындағы ике майҙансыҡтың әле береһенә, әле икенсеһенә алып барам. Кисә Фәризә лә сыҡты. Тулған ай бик матур булып күтәрелеп килә ине.

Ҡояш бата, ай ҡалҡа тип,
Ҡояш сыға, ай бата тип,
Тағы әйтеп торғандай,
Таңымда тулған ай бата,
Кисен ҡалҡа тулған ай.

Бына шулай тулған ай тураһында шиғыр тыуғандай.

Бындағы ике ҡатлы йорттарҙа бик күп ҡытайҙар, кореецтар, пакистандар һ.б. йәшәй. Бик һирәк булһа ла, беҙҙең Рәсәйҙән дә бар. Һәр

хәлдә, беҙҙең балалар бер бәләкәй генә рус ҡыҙыҡайын таный, алыҫтан күреү менән «Соня!» тип ҡысҡыра башлайҙар. Мин башта Әсилдең әйткәнен аңламайынса, «Ниндәй пони икән?» тип аптыраным.

Спартандағы йорттарҙағы 1000 ғаилә ай һайын 900 доллар торлаҡ хаҡы түләй. Айына 900 мең, йылына 10 млн долларҙан артыҡ. Хәҙерге курс менән 500-600 млн. һум, йәғни, кәмендә ярты миллиард һум. Уйлап ҡараһаң, бәләкәй һан түгел бит. Бындағы һәйбәт йәшәү шарттары, яҡшы юлдар, һәр ерҙәге тәртип, таҙалыҡ шул аҡсаларға ғына торалыр.

9 декабрь, 2014 йыл. Шишмәбе.

Төнгө беренсе яртыла Чикагоның «Конгресс-холл» тигән ҡунаҡханаһында 957-се бүлмәлә яҙышып ултырам. Дөрөҫөрәге, ике ҙур бүлмә, йорт элекке, классик стилдә бик иркен итеп төҙөлгән. Ҡаланың нәҡ үҙәгендә. Кисә көндөҙ сәғәт өстәрҙә килеп урынлаштыҡ. Бында ваҡыт Мичиган штатынан бер сәғәткә арттараҡ.

Артурҙың каникулдары башланды, шуға ил буйлап сәйәхәт итергә мөмкинселек бар.

Чикаго Ист-Лансингтан 400 км самаһы. Сәғәт унынсы яртыларҙа ҡуҙғалдыҡ. Килешләй индеецтар резервацияһына инеп сыҡтыҡ, яртылыҡ юлда. Үҙәк биналарында дежурный һымаҡ ултырған бер ҡатын менән һөйләштек, индеецтар нәҫеленән булһа кәрәк. Алдан килешелмәгәс, бик оҙаҡ һөйләшеп булмай. Шуныһын белдек: уҡытыу дөйөм мәктәптә, йәғни инглизсә, ғаиләлә аралашыу инглизсә, быларҙың телендә матбуғат юҡ. Ҡыҫҡаһы, резервацияның үҙ хөкүмәте, идараһы һ.б. булһа ла, бында милли йөкмәткене хатта декларатив тип тә булмай торғандыр. Бина алдында ырыуҙарҙың байраҡтары эленгән, ҡатын ултырған урында бындағы индеецтарҙың юлбашсыһының рәсеме ҡуйылған. Коридорҙа ике яҡлап төрлө сувенирҙар быяла аҫтына теҙелгән. Мәҙәни саралар буйынса үҙенсә эш алып баралар. Көтһәгеҙ, бөгөн төштән һуң милли тамаша була тинеләр. Ләкин беҙҙең көтөргә ваҡыт юҡ.

«Ҡул һелтәп бар сәйәсәткә, сығып китәм сәйәхәткә» тиһәм дә, юлыбыҙ барыбер сәйәсәтте урап үтә алмай. Резервация – сәйер акция, ялтырауыҡ йөҙлөк. Идеологияға ҡыҫылмайым, әммә бындай «Милли биләмәләр» ойоштороу милли сәйәсәттәге йөкмәткеһеҙ сара, бары тик пропаганда. Был индеецтар резервацияһы 194-се тип билдәләнгән. Тимәк, улар АҠШ-та күп тигән һүҙ. Беҙ йөрөгән тирәлә берәү генә, әммә төнъяҡтарак дакота һ.б. билдәле ҡәбиләләр йәшәгән

яҡта күп икән. Уларҙа бәлки милли һыҙаттар яҡшыраҡ һаҡланғандыр, әммә барып етергә беҙҙең мөмкинлек юҡ.

Хәҙер башҡорт та үҙенең урмандарына инә алмай, ғәзиз Уралыбыҙҙың хазиналары ҡулдан китә. Резервация моңһоу уйҙар тыуҙырҙы.

Резервацияның үҙәгендә һөйләшкәндә Артур ейәнем тәржемәсе булып, инглизсә иркен һөйләшә, этелеп-төртөлөп һүҙ эҙләп тормай.

Юл буйынса, йәғни беҙ үткән 400 км һуҙымында тип-тигеҙ ерҙәр. Бейек булмаған ағастар, ҡыуаҡлыҡтар. Был тиклем тигеҙ киңлектәрҙе күргәнем юҡ. Башҡортостанда ла бар, әммә был тиклем иркен, бындай ҡоласта түгел.

Ҙур булмаған баҫыуҙар йыйып алынған. Бер генә күбә һалам да, һөрөлгән ерҙәр ҙә юҡ. Көтөүҙәр осраманы, техника йыйылған урындарҙы ла күрмәнек. Резервацияла ғына һыйырҙар йөрөй ине.

Ауылдар беҙҙәгесә уҡмашып ултырмаған, йорттар бында һибелгән, күбеһе айырым-айырым. Бик төҙөктәр, беҙ күреп өйрәнгән ҡаралты-фәләп юҡ. Ауылдарҙың төҙөлөшөндә лә беҙҙәге община, ырыу психологияһы, бындағы шәхсилек, индивидуализм сифаттары сағыла бит.

Юлдар һәйбәт, ике йүнәлеш араһында киң ер ҡалдырылған. Түләүле өлөштәр ҙә бар, килеп еткәнсе 7 долларға яҡын түләнек. Ҡунаҡхана янында парковка ҡыйбат–тәүлегенә 40 доллар. Бер номерға урынлаштыҡ. Артурҙар балалар менән төпкө бүлмәлә, беҙ алдағыһында. Шулай миңә тороп йөрөргә, эшләп ултырырға ла уңайлыраҡ.

Беҙ йәшәгән «Конгресс-холл» Чикагоның иң үҙәгендә – небоскребтар районында. Мичиган күлен барып ҡараныҡ, томанлыраҡ булғанға киң офоҡтар күренмәне. Яҡында парктар. Миллениум-парк, йәғни Быуат баҡсаһы бик заманса. Ҙур йомро көҙгөлә килгән бер кеше күренә. Ап-аҡ катокта боҙҙа шыуалар. Бик оҫталары һирәк, күбеһе тәнтерәкләп тигәндәй йөрөй. Йығылып ятҡан берәүҙе саҡ торғоҙҙолар. Барыһын да йәйәү ҡарап йөрөнөк. Ҡунаҡханаға байтаҡ ара атлап ҡайттыҡ, Артурҙар артабан китте. Мин йоҡлағанда балаларын Фәриҙәгә ҡалдырып, тағы ла ҡалаға сығып олаҡҡандар.

Ҡайтҡанда беҙ үткән урамда аҙым һайын кафе. Шуныһы, береһе лә буш ҡына тормай. Беҙҙәгесә гастроном һымаҡ урындар юҡ.

Ҡунаҡханаларҙа, ғәҙәттә, иртән буш ашаталар, бында менюһын ғына һалғандар. Ундағы буйынса алһаң, 30 доллар самаһы. Йәшәү

өсөн тәүлегенә бөтәбеҙгә 200 доллар, налог – ҡырҡ, парковка – ҡырҡ. Алты кешегә ярарлыҡ. Өфөлә ҡунаҡхана тәүлегенә өс-дүрт мең һум.

Браслет алырға тигәйнем, булманы. Сәғәттәре ҡыйбат түгел. Ҡытайҙыҡы.

Чикаго бик ҙур ҡала, үҙенсәлекле. Күп яҡтары менән донъяға танылған. Миңә бында иң ныҡ тәьҫир иткәне – небоскребтар. Элекке килгәнемдә уларҙы бөтөнләй күрмәгәйнем, Вашингтонда улар юҡтар. Бында – тотош ҡала. Донъяла небоскребтар Нью-Йорк менән Чикагола төҙөлә башлаған. Уларға хайран ҡалып ҡарап йөрөнөм. Элек төҙөлгәндәре бар, яңылары ла күп. Тәүгеләре инде йөҙ йыл самаһы тора бит, бындай ғәләмәт ҡоролма өсөн аҙ ваҡыт түгел. Шул заманда уҡ ошондай йөҙәр ҡатлы йорттарҙы барлыҡҡа килтерә алғас, ниндәй төҙөлөш технологиялары булған тигән һүҙ. Уларҙы төҙөү генә түгел, хеҙмәтләндереүе, ҡарауы, тейешле сифатта һаҡлауы ла бик ҡатмарлы бит.

Донъяның кеше ҡулы, кеше һәләте ижад иткән ете мөғжизәһен атар булғандар. Был небоскребтар шундай мөғжизәләрҙең яңы заман кешеләренең күҙ алдында тыуғандарынан. Ниндәйҙер легендалар түгел, хәҙерге ысынбарлыҡ.

Беренсе яртынан һуң эшләп ултырғас, өстәрҙә яңынан ятҡайным, йүнләп йоҡо булманы. Рәхәтләнеп зарядка эшләнем. Бүлмә иркен, бейеклеге 4 метр барҙыр.

Ишек аҫтынан ҡағыҙ тығыҙ киткәндәр. Йәшәү хаҡы йәмғебеҙгә 242 доллар. Алдан түләнелгән. Парковка – 40 доллар.

10 декабрь, 2014 йыл. Шаршамбы.

Теүәл дүрт сәғәттә Чикагонан кисә ҡайтып еттек. Ҡайтҡанда ла түләүле юлдар бар. Барғанда 7 доллар, ҡайтҡанда ла шул уҡ. Ә машиналар туҡтауһыҙ үтеп тора бит, насар бизнес түгелдер.

Кисәге тәьҫораттарымды яҙыуҙы дауам итәм. Чикагоса иртәнге алты тулмаҫ борон ҡала буйлап сәғәттән артыҡ йөрөнөм. Хәрәкәт ҡыҙа башлаған, автобустар ҙа йөрөй. Урамда үткән кешеләрҙең күбеһе ҡара халыҡ. Уларҙы дискриминациялау тураһында күп уҡый торғайныҡ. Әле күргәндәрем бер ҙә улай рәнйетелгән кешеләргә оҡшамаған. Үҙҙәрен тиң, хатта дәрәжәле тоталар.

Милли мөнәсәбәттәргә бында даими иғтибар тойола. Һәр милләт кешеһен алға сығарырға тырышҡан һымаҡтар. Беҙҙең «Конгресс-холл» ҡунаҡханаһы Мичиган авенюла, шунда Рузвельт университеты, Колумбия колледжы бар. Колледждың витринаһына йәштәрҙең

ҙур рәсемдәре ҡуйылған, бында азиат типтары ла, африкандар ҙа, латин американлыларға оҡшағандар ҙа балҡып ҡарап тора, типик европа расаһынан бер-икәү генә. Бында ла милли тойғола уйнайҙар һымаҡ.

Ҡунаҡхананан яҡында ғына ер өҫтө метроһы поездары туҡтауһыҙ үтеп тора. Тауыштары ныҡ ишетелә. Дүртәр йәки алтышар, һирәк кенә һигеҙәр вагон. Уларҙың йөрөгәнен бәләкәйҙәр менән тәҙрәнән ҡарап торҙоҡ.

Артур менән Сабина иртән сәй эскәс тағы ла ҡала буйлап сығып киттеләр. Небоскребҡа күтәрелгәндәр. Америкалағы иң бейек йорт – 500 метрҙан артығыраҡ тинеләр – Чикагола икән. Шунда тиҙ йөрөшлө лифт алып менә. Тик Артурҙар быяла ҡарау урынынан әллә ни күрмәгәндәр, томан ине. Шулай ҙа тәьҫораттары бик көслө.

Беҙ торған ҡунаҡхана 1890 йылдарҙа ойоштороллған. Бында байтаҡ президенттар булған, «Президент отель» тип йөрөтөлгән. Төп төҙөлөш егерменсе быуат башында бөткән, аҙаҡ та нимәләрҙер өҫтәгәндәр. Ҡаланың төп ҡунаҡханаһы булғандыр, хәҙер яҡында ғына метро поездары гөүләп үтеп торғанда абруйы төшкәндер, әлбиттә.

Урамдар ныҡ тарайып ҡалған, был тиклем машиналар күбәйер тип уйламағандарҙыр инде. Ҡайтҡанда тотош небоскребтар кварталдарын үттек. Улар теҙелешкән урамдар үҙенсә бик тәрән ҡурҡыныс тарлауыҡ – ущелье һымаҡ.

Барғанда резервациянан һуң юл буйынса ямғыр яуғайны. Чикагола булманы. Ҡайтҡанда ла бер ни тиклем арала эләктереп алды. Йыуа алмай йөрөй инем, машина йыуылды, ти Артур. Машиналар былай ҙа таҙа, ялтырашып йөрөйҙәр, сөнки юлдар таҙа. Бик ҙур йөк фуралары бар. Күпселек юлдар бетон, шуға поездағы һымаҡ тыҡтыҡ бараһың.

Был илдең мин белгән тиклеме йылмайыусан Америка булып иҫемдә ҡалыр. Кешеләр һиңә йылмайып үткәндә уға нисек йылмайма тиһең?

Чикаго урамдарында ят кешеләрҙең дә ҡайһы берҙәре иҫәнләшеп үтә.

Беҙ булған резервациялағы административ үҙәк Покагон общинаһыныҡы. (4990 кеше). Ҡәбиләһе Потаватоми (28 мең кеше). Дакота – 20460 кеше. Ирокездар – 125 мең, АҠШ-та 80 мең, Канадала 45 мең. Майялар иң күп һаҡланғаны, Мексиканың көнъяғында, Үҙәк Американың төнъяғында йәшәйҙәр. Ацтектар халыҡ булараҡ

юҡ тиерлек. Данлы, шанлы исемдәре тарихта ғына ҡалған. Бәлки иң саяларынан булғанға ҡырылып бөткәндәрҙер. Төнъяҡ һәм Көнъяҡ Америкала 35–50 млн. самаһы индеецтар бар тип яҙалар төрлө сығанаҡтарҙа.

Виғвамдарҙа атҡан таңдар.
Виғвамдарға һыймай аһ-зарҙар.

Утлы уҡтар, утлы туптар.

Тәүге конкистадорҙар – испандар. Кортес, һыбайлылар. Индеецтар дошман күрмәй, тыныс ҡаршылай.

Латин Америкаһындағы халыҡтарҙың (испан һәм португал телле) тышҡы ҡиәфәтендә индеец һыҙаттары күп. Улар асылда ҡатнаш – мулат халыҡтар. Был яҙма әҙәбиәттә лә, бигерәк тә шифриәттә ныҡ күренә. Был хаҡта миндә махсус бер китап һаҡланырға тейеш.

Бунин тәржемә иткән Лонгфеллоның «Гайавата йыры» эпосы хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе ҡайтҡас яңыртырға кәрәк.

Бер-береһенән бик алыҫтарҙа йәшәһәләр ҙә, халыҡтарҙың тарихи яҙмыштарында ҡайһы саҡта ҙур оҡшашлыҡтар була. Мәҫәлән, Рафаил Зинуров «Башкирские восстания и индейские войны – феномен в мировой истории» (2001) тигән бай сығанаҡтарға нигеҙләнеп яҙған тикшеренеүендә бик ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр яһағайны, ғәжәп параллелдәр үткәргәйне.

11 декабрь, 2014 йыл. Кесаҙна.

10-да Яҙыусылар союзының 80 йыллығы үткәндер инде. Үкенесле, булып булманы. 70, 75 йыллыҡтарын элекке СССР-ҙа иң беренселәр булып уҙғарғайныҡ. 75 йыллыҡҡа Яҙыусылар йортона капиталь ремонт яһап, шуның презентацияһын ойоштороҙоҡ, ошо айҡанлы беҙҙең тарихта булмаған китап – союзыбыҙ тураһында тотош ғилми хеҙмәт сығарҙыҡ һәм яҙыусыларға бүләк иттек. Күпме республикаларҙан, өлкәләрҙән, Мәскәүҙән ҡунаҡтар саҡырҙыҡ – Рәсәй Яҙыусылар союзының күсмә секретариаты үтте. Мостай Кәримдең 90 йыллығы ошо сараларға ялғанды: опера театрында уның кисәһе, Келәшкә ҡунаҡтар менән барыу. Союздың юбилей кисәһе Конгресс-холл да үтте, аҙаҡ барлыҡ ҡәләмдәштәргә фуршет эшләнек. Яҙыусылар союзының ошондай байрамдарының тағы ла булыуы икеле генә түгел, булмаясаҡ. Йөҙ йыллығын ниндәй

шарттарҙа ҡаршыларҙар? Ғөмүмән, дәүләт кимәлендә ҡаршылаһалар ярар әле...

Кисә кис йөрөп ҡайтҡанда ҡырҡа һыуытҡайны, битте өтөп ала. Шыуғалаҡ боҙланған, Әсил менән Асҡар шыуғанда ялт итеп килеп төшәләр. Асҡар уға элек йырлаған башҡортса йырҙарҙы йырлата («Салауат», «Шайморатов генерал», «Тышта ҡар яуа», «Сәңгелдәк йырҙары» һ.б., үҙе лә ҡат-ҡат ҡабатлай. Һағынғандыр. Әсил дә ҡушылып йырлай.

Балалар сит телгә тиҙ өйрәнә. Туп өсөн тартҡылашҡанда «бол» тиҙәр, тулған айҙы күргәндә Әсиленә тиклем «мун»тигән була.

Кисә көнөбөҙ ҙур сараларһыҙ, ҡалаға сәфәрһеҙ генә үтте. Шиғырҙар менән ултырып алдым. Чикагонан инглиз телендәге бер ҡосаҡ гәзит, реклама баҫмалар алып ҡайтҡайныҡ. Путин тураһындағы бер мәҡәләгә тап булдым. Ҡырҡ биш йыл балаларға инглиз телен өйрәткән Фәриҙә шуны тәржемә итеп уҡыны. Грозныйҙағы хәлдәрҙе бик ныҡ кисергәне хаҡында яҙалар. Рәсәй хаҡында башҡа хәбәрҙәр күренмәне. Гәзиттәр араһында хатта «Нью-Йорк Таймс» та бар. Шулай уҡ «Чикаго Трибюн» һ.б.

Кисә көн болотло булды. Тулған айҙы көн дә күреп өйрәнгәс, балалар «Ул ҡайҙа?» тип аптырайҙар.

15 декабрь, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Тыуған көнөм Америкала үтеп китте. Әҙәм балаһын яҙмыш ҡайҙарға ғына илтмәй. 77-се йәшемә ер сигендә аяҡ баҫырмын тигән уй башҡа ла һыймаҫ ине. Ә тормошта бына шулай килеп сыҡты.

Магазиндарҙа йөрөнөк. Бында алған әйберҙәр байтаҡ йыйылып килә: шорты, джинсы, кеды, ветровка, юл сумкаһы һ.б.

Кисен «Азия-буфет» тигән туҡланыу урынына барҙыҡ. Ололарға 12-шәр, балаларҙың икеһенә 3 доллар түләп индек. Халыҡ бик күп, әммә урындар етерлек. Нимә теләйһең, шуны алаһың, күпме теләйһең, шуныңса ултыраһың. Балыҡ, ит аштары, төрлө туңдырмалар һ.б. Бик тәмле әҙерләйҙәр тип әйтмәҫ инем.

13 декабрҙә алыҫ юлға сыҡтыҡ. 1250 км-ҙан артыҡ ер үтеп, Атланта ҡалаһына «Микротел»гә килеп ҡундыҡ. Артурҙарға бер бүлмәле номер, безгә ике бүлмәле. Иң арзан ҡунаҡхана булһа ла, шарттар һәйбәт. Беҙ йәшәгәне беҙҙә кәмендә полулюкс булыр ине. Иртәнге тамаҡ ялғау ҙа ингән, уныһы бик самалы. Торған номерыбыҙ 223-сө.

Иртәнге етелә сыҡҡайныҡ, 13,5 сәғәт килдек. Биш штатты үттек. Машинала бер көндә был тиклем юлды ғүмерҙә үткәнем юҡ ине.

Башта тигеҙлек, унан һуң тауҙар башланды. Ташлы ер. Тауҙы стена һымаҡ итеп киҫкәндәр. Биш полосалы юл. Бик күп көс түккәндәрҙер.

Ҡаршы юлдан һис бер хәүеф юҡ, ҡайһы саҡта ул бөтөнләй ситтә үтә. Бер яҡтан ике полосалы урындар ҙа бар.

Ниндәй генә төр машиналар юҡ. Юлдар бик таҙа, шуға машиналар йылтырап тора.

Заправкаларҙа магазин, туалет. Сәй, кофе эсергә мөмкин.

Мичиган, Огайо, Кентукки, Майами – беҙ үткән урындарҙа индеецтарҙан ҡалған атамалар күп. Хәйер, Төнъяҡ һәм Көнъяҡ Америкалағы илдәрҙең бөтә топонимикаһы индеецтарҙан килә.

Иртәгәһенә – 14 декабрҙә, иртәнге һигеҙҙә юлыбыҙҙы дауам иттек. Тағы ла 1000 километрҙан артыҡ юл үтеп, киске алтыны үтеүгә Майамиға килеп еттек. Бик ныҡ арытты, бөгөн төндә ауырып уяндым, саҡ торҙом. Фәриҙә сәй ҡайнатып эсергәс, дүрттән бишкә тиклем йоҡлағанмын. Хәлем, аллаға шөкөр, һәйбәтерәк. Һуңғы төндәр йоҡоһоҙ.

Көн оҙоная барған һымаҡ, сөнки экваторға яҡынаябыҙ. Ист-Лансендә һыуыҡ ине, Атлантта 10 градус самаһы, Майамиҙа йылылыҡ егерме градустан да артыҡ.

Көн бер сәғәткә оҙоная һымаҡ. Сыҡҡанда болотло ине, тауҙарҙа ҡояш. Шулай булһа ла йылылыҡ 5 градус самаһынан артманы.

Юл буйынса ылыҫлы урмандар йәки ултыртылған полосалар. Майамиға яҡыная бара пальмалар йышайҙы. Ауҙар ҙа кәмене.

Был тиклем алыҫ юлды үтеү беҙгә лә, йәштәргә лә, бигерәк тә бәләкәстәргә ҙур һынау булды. Йәштәр яңы шарттарға тиҙ өйрәнә. Сабыйҙар планшет ҡарай, музыка тыңлай. Улары ла инглизсә һупаларға тырыша.

2009 йылдың августында Дәүләт Йыйылышындағы водитель Дамир менән Баймаҡ һәм Хәйбулла райондары сигендәге республиканың август педкәңәшмәһенә барып, мин шунда сығыш яһап, көнөнә әйләнеп ҡайтҡайныҡ. Көн бик эҫе ине, етмәһә, мин яңы ғына йөрәккә операция үткәргәнмен. Бик ауыр булды, ләкин әлеге Америка сәфәре менән сағыштырырлыҡ түгел. Ниндәй ҙур илде иң төнъяғынан иң көнъяғына тиклем үтеп ҡара әле, етмәһә сит ерҙә!

Артур өсөн ныҡ хафаланғайным. Молодец, егет һынатманы. Сәғәтенә етмеш миль самаһы, йәғни беҙҙеңсә 110–115 км. Яғыулыҡ беҙҙәгенән арзанираҡ. Юлдар киң, шуға йөрөтөүсегә еңелерәктер.

Әммә нисек кенә булмаһын, ныҡ арытты. Етмәһә Артур ауырып тора ине, Атлантала ҡунаҡхана һыуыҡ булды. Бындағы беҙ йәшәгән ҡунаҡхана «Нью-Йоркер»ҙа ла бик йылы түгел.

Әл дә юлға ашамлыҡтар алғанбыҙ: ит, ваҡ бәлеш, сөсикмәк, һыу, алма, банан, мандарин. Ярар машинаны Ист-Лансингта Артур кистән тултырып ҡуйғайны. Багажник саҡ ябылды. Атлантала асып та торманыҡ. Салонда ла төйөнсөктәр күп ине, яйлап бушай барҙы, Майамиға еткәндә бушап бөттө. Ҡышҡы кейемдәрҙе дөрөҫ алмаштырғанбыҙ. Юғиһә, машинала тағы ла тығыҙыраҡ булыр ине.

Артур эште теүәл эшләй, Сабинаһы ла уға ышаныслы штурман. Интернеттан мәғлүмәт биреп бара, юлдағы яҙыуҙарҙы сос күрә.

Әле сағыштырып ултырам да, беҙҙең биш штат аша ике көндә үткән юлыбыҙ Силәбенән Мәскәүгә тиклем аранан бик күпкә (400 км булыр) оҙонораҡ. Ләкин бындағы юлдарҙы беҙҙекеләр менән сағыштырырлыҡ түгел.

Юлда хәтәр эре, хатта ике ҡатлы виадуктар күп. Шулай уҡ хәҙерге элемтәләр өсөн антенна-бағаналар йыш осрай. Ҡайһы бер урындарҙа йорттар өҙөлмәйенсә теҙелеп китә. Бер ҡалып буйынса төҙөлгәндәре бар.

Атлантала иртәнге тамаҡ ялғау урынында (иртәнге аш тип әйтергә самалыраҡ) ҡунаҡханала йәшәүселәр үҙҙәре вафельницала – табала ҡоймаҡ һымаҡ һырлы нәмә әҙерләйҙәр. Ҡатыҡ-фәләп тип, ике ҡағыҙ стаканға ҡойһам, ул шыйыҡ ҡамыр икән. Артур әйтмәһә, ашап ҡарағаны булыр инем бит! Сит ерҙә бына ниндәй хәлдәргә ҡалаһың!

Беҙҙең халыҡта «ашаған табағыңа төкөрмә» тигән һүҙ бар. Үҙебеҙҙәге ғәҙәт буйынса һауыттарҙы бер бүлмәгә алып барһаҡ, уныһы ла бындағыса булмай сыҡты. Бында табаҡҡа төкөрөп тә тормайҙар, бер тапҡыр ашайҙар ҙа шундағы сүплек һауытына ырғыталар.

Хеҙмәтләндереүселәрҙең күбеһе ҡара халыҡ. Ҡолдарҙың тулы хоҡуҡлы граждандарға әйләнгән вариҫтары. Беҙ ҡоллоҡ айырыуса көслө булған көнъяҡҡа килдек.

Навигатор булмаһа, был тиклем юлды үткәндә беҙ белмәгән ҡалаға барып етеүе, бигерәк тә беҙ йәшәйәсәк ҡунаҡхананы табыуы бик ҡыйын, хатта мөмкин дә булмаҫ ине. Ни тиклем кешелекле технология, водителдең өҫтәмә күҙе, ҡолағы һымаҡ.

Сит илдәргә барып ғибрәт ал тигәндәр. Мәсхәрә хәлде «Ғибрәт!» тиҙәр бит. Ғибрәт, ысынлап та, мыҫҡыллы һүҙ. Ләкин «ғибрәт ал!»

тигәнгә нимәгәлер өйрән, аҡылыңды, тәжрибәңде арттырып ҡайт тигән кәңәш тә һалынған бит.

Америка Ҡушма Штаттарының ғибрәт яҡтары ла күп, әлбиттә, тик беҙ ҙә, башҡалар ҙа үрнәк итерлек яҡтары ла етерлек.

Бындағы тормош-көнкүрештең иң ныҡ иҫтә ҡалғаны – кешеләр араһындағы тәбиғилек, ябайлыҡ. Бик ябай кейенәләр, яһалма түгелдәр. Һис бер ҡуҡырайыу юҡ. Кеше менән кеше һәр береһе нисек бар, шулай аралаша. Шулай уҡ бындағы тәртип, таҙалыҡ.

Америкалағы техник ҡаҙаныштарҙың байтағы беҙҙә лә барҙыр. Ләкин минең был эштәге наҙанлылығым арҡаһында уларҙы белмәйем.

Интернетҡа Артур минең хаҡта байтаҡ мәғлүмәттәр өҫтәне. Резервацияла, Чикагола төшкән ҡайһы бер фотоларҙы ҡуйҙы. Мине тыуған көнөм менән ҡотлаусылар күп булған, шуларға рәхмәт һүҙҙәре яҙҙыҡ.

Ҡар һағындырҙы, үҙебеҙҙәге ҡыш, һыуыҡтар һағындырҙы. Ҡарҙа шығырлатып атлап йөрөгө килә!

Бабич «Тәҡлид беҙгә уйламаҫҡа, төпсөнмәҫкә әмер итә, иҫке донъя бар сағында нимәгә ул Америка?» тип, фекерләүҙәге тарлыҡ тураһында бик тапҡыр әйткән. Хәҙер тәҡлидтән бигерәк, Америка үҙе әмер итә, донъяны тапап килә. Башҡаларҙы индеецтар һымаҡ күрә. Халыҡтарҙы юҡ итеү тәжрибәһе ҙур уның. Донъяны резервацияға ҡыуып индермәксе. Әммә бының өсөн илдең халҡын ғәйепләп булмай. Халыҡ ҡайҙа ла халыҡ. Мәкерле дәүләт сәйәсәте, шундағы йыртҡыс традициялар.

Китер алдынан Маяковскийҙы, Есенинды ҡараным. Горькийҙың Америка тураһындағы яҙғандарын иҫкә төшөрөргә. Егерменсе быуат башындағы хәлдәр менән егерме беренсе быуат башындағы бәрелештәр араһындағы уртаҡлыҡтар күп шул.

16 декабрь, 2014 йыл. Шишәмбе.

Майамиҙа бына икенсе көн башлана. Әлегә ҡаланың үҙәген күргәнебеҙ юҡ. Кисә Артур ғаиләһен беҙҙә ҡалдырҙы ла үҙе уҡырға, бында ойоштороlған семинарға китте. Биштәрҙә генә ҡайтты. Бөгөн дә шунда буласаҡ. Ҡала менән ныҡлап танышыу иртәгә башланыр инде.

Ҡунаҡханала иртәнге сәй эсеү йәшәү хаҡына ингән. Ашамлыҡтар байтаҡ, һәр хәлдә һәйбәтләп сәй эсеп алырлыҡ.

Ҡунаҡхананың ишек алдында бассейн бар. Башта тирә-яҡ менән танышып килдек. Океандың ҡултығы яҡын ғына. Тик һыу

инә торған урын юҡ, эре-эре таштар, аяғыңды һындырырлыҡ. Шулай ҙа ярында океанға ҡарап ултырҙыҡ – бынығы ла ғүмерҙә һирәк ваҡиға бит. Һыу тыныс, караптар тора. Алыҫтағы ярҙа бейек-бейек йорттар.

Океан ситенә бик матур, аулаҡ парк аша килдек. Әллә ниндәй экзотик ағастар бар. Бик йыуандар, тамырҙары өҫкә сығып, уҡмашып үҫкән һымаҡ. Берәүҙәренең ботаҡтарынан оҙон-оҙон булып сүс аҫылынып торған кеүек, япраҡтары шулай үҙенсәлекле икән.

Тейендәр бик күп. Ист-Лансингта улар бик эре, ҡупшылар ине, бында ваҡтар, әммә күптәр.

Балалар майҙансығында балалар уйнай, тауҙан шыуып, йүгерешеп кинәнделәр. Телдәре төрлө булһа ла, бындағы балалар менән бергә уйнайҙар, тиҙ аралашалар. Спорт майҙансығында ла туҡтаныҡ, төрлө ҡоролмаларҙы эшләтеп ҡараныҡ.

Барғанда Фәриҙә матур эшләпә алды. Мичиганда уға еңел генә аяҡ кейеме алғайныҡ. Американан баштан-аяҡ кейенеп ҡайтаһың инде, тинем.

Ҡунаҡхананың бассейнындағы урындыҡтарҙа ҡыҙындыҡ. Көн бик матур, минең йөҙҙө шул арала ҡояш йәйге төҫкә индерҙе. Бәлки ҡояшта ҡарайып та ҡайтырмын әле.

Асҡар менән Әсил бассейн уратып йүгерешә. Ҡурсаҡтарын һыуға тығалар. Үҙҙәрен дә аҙыраҡ сумырып алдым. Фәриҙә менән һыу индек. Һыу һыуыҡ ҡына, нимә генә тиһәң дә, ҡыш бит, бик оҙаҡ йөҙөп йөрөп булмай. Шулай ҙа бик һәйбәт ял булды. Балалар бик асыҡҡан, һәйбәт ашанылар. Барыбыҙ ҙа йоҡлап алдыҡ.

Америкала беҙ булған урындарҙа күп кешеләр, бигерәк тә йәштәр, рюкзак аҫып йөрөйҙәр. Бөтә илдә лә, моғайын, шулайҙыр. Хәйер, был мода беҙҙә лә бар: хатта бәләкәй балалар ҙа рюкзаклы. Крәҫтиәндең быуаттар буйына биштәре, тоҡсайы, русса әйткәндә, котомкаһы, яңысараҡ әйткәндә, вещмешогы булған бит. Кәрәк-ярағыңды үҙең менән шулай йөрөтөү ысулын крәҫтиәндең практик аҡылы күптән уйлап тапҡан. Уның өсөн зарураттан тыуған биштәр хәҙер модаға, дөрөҫөрәге, хәҙерге меркантиль заман өсөн үҙенсә уңайлылыҡҡа әйләнгән. Бөгөнгө заман кешеһе боронғо крәҫтиәндән әллә ни алыҫ китмәгән булып сыға түгелме һуң?

Бында ҡара халыҡ бик күп. Үҙҙәренсә диалектта һөйләшәләр икән. Классик инглиз телен белгән кешегә ҡапыл ғына аңлауы ла ҡыйыныраҡ тинеләр.

Килгән кистә беҙҙең ҡунаҡхана янындағы магазинға ваҡ-төйәк алырға тип ингәйнек. Тик унда һөт аҙыҡтары ла, хатта фруктылар ҙа булмай сыҡты. Уның ҡарауы, иҫерек кешеләр бар, ағы ла, ҡараһы ла. Башҡа урында ундайҙарҙы осратманыҡ.

Юлда ике көндә ике мең ярым километр ара үтеп, ике көн буйы бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем машинала хәрәкәтһеҙ ултырғас, бик арытҡайны. Кисә ял ителде, бөгөн төн йоҡо ла ҡәҙимге булды. Хәл һәйбәтләнә башланы.

Ист-Лансингта нисек тә мөмкинлек табып, эшләп ултырырға тырыштым. Йыш ҡына йоҡо иҫәбенә, әлбиттә. Әле барлап ултырҙым да, эреле-ваҡлы байтаҡ шифыр яҙылған. Күпселеге элек төртөп барған, яҙа башлап ҡуйған тәҫсораттар. Өҫтәүенә көндәлектәрҙе лә ентекле генә яҙып барырға тырыштым – үҙҙәре кескәй генә китап булырлыҡ.

Майамиҙа эштәр нисегерәк булыр? Һәр хәлдә, көндәлектәрҙе дауам итермен. Шифырҙарҙы планлаштырып булмай.

Нисек кенә булһа ла, ял сәйәхәтендә эштәр насар барманы. Өйҙә гәзит-журналдар күп йыйылғандыр. Ҡайтҡас, яңы йыл алдынан, яңы йылдан һуңғы оҙайлы ял көндәрендә шуларҙы уҡып ҡына үткәрергә хаҡым барҙыр тип уйлайым.

Әсәй – Рәсәй,
Булма үгәй әсәй.
Ил сәсәй,
Ҡан сәсрәй.
Беҙҙең тарҡаулыҡтан
Донъя көләсәк.

Ниңә көләсәк тим әле? Былай ҙа бот сабып көлә бит инде. Бөйөк ил бөлә бит инде.

17 декабрь, 2014 йыл. Шаршамбы.

Балалар менән Сабина бөгөн дә беҙҙә булды. Янда матур парктың булыуы ниндәй һәйбәт. Тик бөгөн тейендәр күренмәне, эт менән йөрөүсе кешеләр бар. «Ярамай!» тигән яҙыу торһа ла, тыйыуҙарҙы беҙҙәге һымаҡ бында ла бик тыңлап бармайҙар, күрәһең.

Көн башта болотлораҡ ине, аҙаҡ таралып китте. Бассейнда һыу индек. Фәриҙәнен йөҙгәненә ҡарап, Әсил «Беҙҙең әсәй крутая», ти.

Әллә артыҡ ҡыҙынғанмын, әллә бассейндағы һыуыҡ һыу – кискә табан баш ауыртты. Бал ҡорто саҡҡайны, аяҡтағы шул ере шеште, атлауы ҡыйыныраҡ. Әле бына йоҡлап торғас, хәл еңелерәк.

Паркта биш спортсмен күнекмәләр үткәрә. Аяҡтарын бик юғары сөйөп, киҫкен хәрәкәттәр менән бер сәғәттән артыҡ шөғөлләнгәндәрҙер. Береһе – бәләкәйерәге, тренер. Бик ҙур нагрузка. Хәҙерге яңыса спорт төрҙәренең береһелер. Күргәнем юҡ ине, етеҙлектәренә, түҙемлелектәренә ҡыҙыҡһынып ҡарап торҙом.

Кисә Артурҙың ике көнлөк уҡыуы бөттө. Балалар йоҡлағанда паркҡа Сабина менән барып килгәндәр, Артур оҡшатҡан.

Кискә табан Артур үҙҙәре йәшәгән урынға алып китте. Улар айырым йортҡа урынлашҡайны. Юлда испан теллеләр йөрөгән магазинға алып инде. Мин ундай ерҙә йөрөргә яратмайым, аҙыраҡ йөрөнөм дә сығып киттем. Бөтәһе лә испан теллеләр икән, бер кассиршалары инглизсә бер һүҙ ҙә белмәй, тип көлөшәләр.

Барғансы байтаҡ урамдарҙы үттек. Ҡалала бер ҡатлы йорттар күп икән. Нимәһе менәндер Ырымбурҙы хәтерләтеп ҡуйҙы. Небоскребтар ҙа бар, ҡайтҡанда ҡараңғыла улар нығыраҡ күренә – уттары янып тора.

Артурҙар бик һәйбәт урынлашҡан: айырым йорттоң бер яғы, үҙенсә залы, йоҡо бүлмәһе, бәләкәй кухняһы, душ-туалет бар. Ишек алды уратып алынған, ҙур сатыр аҫтында өҫтәл. Шунда киске ашты ашаныҡ. Һурпа һағындырған. Папая тигән ҡауын һымаҡ бер ризыҡты ауыҙ иттек. Тәмле генә, тик артыҡ иҫ китерлек түгел. Бал алғандар, әскелт, көйгән тәме итә. Хуш еҫе лә беҙҙең балдыҡы менән сағыштырырлыҡ түгел.

Ҡунаҡханала ишек алдын ниндәйҙер гудрон һымаҡ ҡара нәмә менән буяйҙар. Асфальтҡа үҙенсә профилактикамы икән?

18 декабрь, 2014 йыл. Кесаҙна.

Кисәге көн ғүмеребеҙҙәге оло ваҡиғаларҙың береһе: Атлантик океанда һыу индек. Атаҡлы Майами-Бич пляжы. Һыу башта һыуығыраҡ күренде, аҙаҡ сыҡҡы килмәй. Ҡунаҡхананың ишек алдындағы бассейн һыуынан күпкә йылыраҡ. Асҡар рәхәтләнеп һыуҙа йүгерә, ята, Әсил ҡурҡынҡырай. Ҡомо бик йомшаҡ, ваҡ, аҡ төҫтә. Бындайҙы күргәнем юҡ.

Күп ҡатлы парковка океанға алыҫ түгел. Сәғәтенә 1 доллар, беҙ 2,5 сәғәт булғанбыҙ, өс доллар алдылар.

Ҡыҙыныусы, һыу инеүсе кеше күп түгел. Күбеһе ситтән килгәнгә оҡшай. Бындағы ҡалалағы халыҡ ҡыш көнө һыу инергә әллә ни ашҡынып тормайҙыр.

Испанса һөйләшеүселәр күп.

Төшкөлөктә Артурҙарҙа булдыҡ. Фәриҙә менән Сабина борщ бешергәйнеләр, балалар ҙа ҡыҙыл ашты яратып ашаны. Оҙаҡ ҡына ял итеп, сәй эстек, ҡунаҡханаға Артурға ултырып ҡайттыҡ.

«Ҡанат йәйеп оса ҙур ҡоштар,
Әллә бөркөт, әллә аҡҡоштар».

Беҙҙең ҡунаҡхана өҫтөндә ҙур ҡоштар түңәрәк яһап оҙаҡ ҡына осоп йөрөнө. Аҡҡош тиһәң, ҡара төҫтәләр.

Серле бер моң һымаҡ ишетелә
Аңламаған телде тыңлауы.
Телһеҙ аңлашылған мәғәнәләр бар.

АҠШ Куба менән дипломатик мөнәсәбәттәр урынлаштырған. Илселек тә асмаҡсы икән. Ҡырымға үҙенсә яуапмы, Обаманың беҙҙән алдараҡ Кубаны ҡармап ҡалырға тырышыуымы?

Динис Бүләковтың ҡыҙы Миләүшә Сабина менән аралаша. Ул Сабинаға Рәйлә Бүләкованың вафат булғанын хәбәр иткән. Ҡайғыларын уртаҡлашып, Сабина беҙҙең исемдән дә яуап яҙған. Китер алдынан ярар күрешеп ҡалдыҡ, һуңғы осрашыу булырын һиҙгәндәй, ҡат-ҡат саҡырғайны. Бында килгәс 3 декабрҙә яҙған дүрт юллығым иҫкә төштө. «Оҙатып ҡалған кешеләрем иҫән ҡаршы алыр микән?» тигәйнем. Рәйләгә беҙҙе иҫән ҡаршы алырға яҙмаған икән.

Кисә-бөгөн Майамиҙа Рәйләгә арнап бер шиғыр тыуғандай булды.

Күперҙәр күп. Ситтәрендә матур итеп пальмалар ултыртҡандар. Үҙенсәлекле океан панорамаһы. Рейдта торған караптар күренә.

Өсөнсө көн бассейндағы гамакта ултырған бер ҡара ҡатын йырлап ебәрҙе. Йыр радионан киләме тип торабыҙ. Фәриҙәнән ҡамасауламайыммы, тип һорай. Кисә иртәнге сәй эскәндә лә әллә беҙҙе күргәнгәме йырлап ебәрҙе. Һис бер уңайһыҙланыу ғәләмәте юҡ. Дини доғаларҙы йырлай икән. Ҡунаҡханала телефон янында инглиз телендә Библия ята. Фәриҙә ҡараштырып алды. Нығыраҡ өйрән, әлеге ҡара ҡатын менән икәүләп дуэт менән йырларһығыҙ, тип шаяртам.

Беҙҙең яндағы аулаҡ ҡына паркка ҡабат барып булмаҫтыр. Ҡалған көндәребеҙ океан буйында үтер. Бындай мөмкинлекте әрәм итергә ярамай.

19 декабрь, 2014 йыл. Йома.

Тағы ла бер көнөбөҙҙөң ике сәғәте океанда һыу инеп, йомшаҡ ҡомонда йөрөп, көнъяҡ ҡояшында ҡыҙынып үтте. Беҙгә, төнъяҡ кешеләренә, уныһы ла аҙ түгел. Океан ситендә һыу инеп кенә океанды күрҙем тип әйтеүе, бәлки, бик үк килешеп тә бөтмәйҙер. Уның киңлектәрендә, уның тәрәнлектәрендә беҙ әле остоғон да тиерлек белмәгән, әлегә асылмаған, бәлки кеше бер ваҡытта ла үтеп инә алмаҫлыҡ ғәжәйеп донъялар! Ләкин океан уртаһында һыу инмәйҙәр, һыу инәләр уның ситендә. Тәрәнлектәренә сумып булмай, тик ситендә генә йөҙәһең.

Океандарҙа һирәктәребеҙ йөҙһә лә, барыбыҙ ҙа башҡа бөйөк океан – тормош океанында йәшәйбеҙ икән. Уның ситендә ҡыҙынып ятып ҡына булмай, был океан әле тыныс ҡына, әле ярһыу. Тулҡындары өҫтөңә ташлана, тәрәнлектәре үҙенә тартып ала. Ләкин һыу океаны менән тормош океаны араһында шундай оҡшашлыҡ бар. Ҙур караптарға һай урындарға яҡынайыуы ҡурҡыныс булған һымаҡ, оло шәхестәр ҙә тормоштоң һай ерҙәрендә йәшәй алмай. Уларға кәрәк киңлек, кәрәк тәрәнлек. Ваҡлыҡ, ығы-зығы, көнсөллөк, хыянат һ.б. аламалыҡтар мөхитенә эләгеп (ә ундай хәлдәргә һәр кем тарый), шуларҙы йырып, еңеп сыға алмаһа, ысын кеше, ысын шәхес төбө ҡомға тейгән ҡарап һымаҡ булырға мөмкин. Карапты ҡомдан тартып сығара алалар, ә кәмәһе ҡомға төртөлгән кешегә бындай ауырлыҡты еңеү өсөн башҡаларҙың ярҙамы ғына етмәй, иң элек үҙенең ихтыяр көсө кәрәк. Был хаҡта бәлки шиғыр яҙылыр.

Кисә Артурҙар йәшәгән ерҙән алыҫ түгел Бәләкәй Гавана тип йөрөтөлгән бер төбәккә барҙыҡ. Үҙҙәре парк тип йөрөтә икән. Ләкин беҙҙәге парктарға бөтөнләй оҡшамаған. Ҡаланың үҙенсәлекле бер өлөшө. Башҡалар тирә-яҡты ҡарап килгәнсе, мин ултырып торҙом. Ят ҡаланы йөрөп ҡарағансы бер ерҙә ултырып ҡарау ҡайһы саҡта күпкә ҡыҙығыраҡ. Янда беҙҙәге йәйге кафе һымаҡ өҫтө ябылған бер урын. Ундағы өҫтәлдәрҙә шаҡ та шоҡ домино һуғалар, сатраш-шашка уйнайҙар. Яндарында көйәрмәндәре лә бар, бик темпераментлы халыҡ. Ҡыуанышып ҡысҡырып ебәрәләр, көлөшәләр, шаулашалар. Янымдан әллә күпме бик колоритлы кешеләр үтте. Күңелләнеп алғандары ла бар. Ҡулдарын болғап, бик ярһып,

башҡаларға ташланырҙай булып тиҙ-тиҙ нимәлер һөйләгән ике кешене (һәр береһе айырым-айырым) күрҙем. Бер ҙур аҡ һаҡаллы, эшләпәле, оло йәштәрҙәге ир велосипедта урап-урап йөрөп ятты. Үҙе сәйер йылмая. Берәү гоночный һымаҡ дүрт тәгәрмәсле нәмәлә ҡат-ҡат әйләнеп үтте, кескәй генә байрағы ла бар. Билдәренә әллә нәмәләр аҫып алған ирҙәр күренә. Бер төркөм ҡыҙҙар асфальтта ултыра ине, тороп киттеләр. Тойғоларын бындағы халыҡ тыйып тормай, ҡысҡырып белдерә. Ҡыҙыуҙар, ҡызмасалары ла күренә, әммә тәртип боҙоусылар юҡ.

Бындағы халыҡтың күпселеге бер-береһен белгәнгә, даими аралашҡанға оҡшай. Ихлас кисереш менән хушлашалар. Йәштәр бөтөнләй тиерлек күренмәй. Һәр хәлдә, домино һуғыусы, сатраш уйнаусылар араһында йәш кешеләр юҡ тиерлек. Был Майамиҙың Бәләкәй Гавана тип йөрөтөлгән урынында Кубанан китеп, ошонда олоғайған йәки ошонда тыуған оло быуын кешеләре, уларҙың балалары йәшәйҙер. Атлап килгәндә, өҫтөндә ут янып торған, «Куба» тип яҙылған обелиск күрҙек. Әйҙә фотоға төшәйек тиһәләр ҙә, был минең Кубам түгел тип, төшмәнем. Ниңә, тиһәләр ҙә, йәштәргә нимә тип әйтәһең инде, барыбер аңламаясаҡтар.

Куба туңдырмаһы. Был ризыҡ бында бик популяр икән. Беҙҙекеләр сират тороп алғандар, алтыбыҙға 24 доллар түләгәндәр. Алдан хаҡын һорамаһаң, шулай була ул. Тәме беҙҙәгенән артыҡ түгел. Был хаҡҡа Өфөлә 2–3 күнәк туңдырма алып булыр ине.

Был Бәләкәй Гаваналағы халыҡ барыбер тулыһынса американдарға әйләнмәгән, Кубалы булып ҡалған һымаҡ. Һәр минуты иҫәпле американ оло йәшендә лә домино һуғырға ваҡыт еткерә алмаҫ ине. Бындағы күренештәр элек беҙҙең ҡала йорттарының ишек алдарында шаҡ та шоҡ домино уйнаусыларҙы хәтерләтте. Хатта былар урамдарындағы асфальтҡа домино шаҡмаҡтарын теҙеп яҙып ҡуйғандар.

20 декабрь, 2014 йыл. Шәмбе.

Кесаҙнанан йомаға ҡарай төндә океанда тулҡындар көслө булған. Бөгөнгө тулҡындар туҡтаған урындан байтаҡ өҫтәрәк ылымыҡтарҙан буйҙан-буйға бер һыҙыҡ үтәсәк.

Йөҙөргә төшһәк, медузалар күп күренә. Уларҙы әле лә бик үк тыныслана алмаған тулҡындар ҡомға сығарып ырғыта. Улары шунда ҡуҙғала алмай ята. Байтағын ҡотҡарырға тырышабыҙ, кире океанға төшөрөп ебәрәбеҙ.

Берәүҙәр медузалар кесерткән һымаҡ саға тиҙәр. Икенселәре улар һис бер зыянһыҙ, ти. Нисек кенә булһа ла, йөҙөп йөрөгәндә уларҙы күреү сиркәнес. Шуғалыр һыу инеүселәр һирәк булды. Медузаларҙан ҡурҡып, Асҡар һыуға бөтөнләй инмәне.

Урамдарҙа ла, пляжда ла йәштәр күп. Парлылары ла байтаҡ. Тыйнаҡ һымаҡтар, итәғәтлеләр, бер-береһенә атлығып бармайҙар. Килгәндәре байтаҡ, улар сит ерҙә бәлки тартыналыр. Ә бына йәш американдарҙың да халыҡ алдында ҡосаҡлашып-үбешеп торғанын, беҙҙәгесә хатта ҡыҙҙарҙың тәмәке борҡотоп барғанын, эсеп-һүгенеп йөрөгәндәрен бында булған урындарҙа күрмәнем. Беҙҙең йәштәргә сит илдең насар йоғонтоһо тураһында һөйләйбеҙ. Ә бына сит илдә егерме көндән артыҡ йөрөйбөҙ, беҙҙәге йәмһеҙ ҡыланыштарҙы осратмайбыҙ. Сит илдең насар йоғонтоһонан бигерәк үҙәк TV-ның, башҡа каналдарҙың, үҙебеҙҙәге пропаганда системаһының емерткес эшмәкәрлегенән эҙләргә кәрәк йәштәребеҙ араһында көндән-көн нығыраҡ тарала барған аламалыҡтарҙың сәбәптәрен.

Артурҙарҙың йәшәгән урындарындағы урамдарҙы аҙыраҡ ҡарап йөрөнөм. Күбеһе бер ҡатлы йорттар, өй алдындағы бәләкәй генә баҡсала тигеҙ йәшеллек тә пальма һ.б. Мин танымаған ағастар. Ишектәре урамға сыға, ҡайһы берҙәре асыҡ тора. Тышта өҫтәл, ултырғыстар. Беҙҙәге һымаҡ икешәр-өсәр метрлы таш ҡоймалар, ҡалай менән уратылған «һаҡланғыс» саралар юҡ. Кешеләр сәләм биреп үтә, бындағы, йәғни Майамиҙың Бәләкәй Гавана тип йөрөтөлгән төбәгендә йәшәгәндәр, мине үҙҙәренең кешеһе тип уйлайҙыр. Испан телендә һөйләшеп үтеүсе йәштәр ҙә бар. Урамдары таҙа, бетон тротуарҙар. Велосипедта йөрөүселәр күп. Ғөмүмән, уларға АҠШ-та иғтибар ҙур, бәйләп ҡуйыр өсөн һәр ерҙә тимер бағаналар йәки башҡа төр ҡоролмалар бар.

Өйҙәр урамдан тәпәшәк кенә тимер селтәр менән бүленгән, бәләкәй генә уңайлы ҡапҡалары бар. Һәр йортта сүп һауыттары, тәгәрмәсле, ҙур ғына. Тулғас та уларҙы урамға сығарып ҡуялар икән. Шуларҙы йыйып йөрөүсе машинаның үткәнен күрҙем.

Бындағы практик тәбиғәтле халыҡ беҙҙәге һымаҡ тәҙрәләргә төрлө-төрлө пәрҙәләр элеп мәшәкәтләнмәй, жалюзиҙар ҡуялар. Ябай ҙа, уңайлы ла, йыуып-ҡарап тораһы ла юҡ.

Артур бик уңайлы ҡоролмала барбекюла ит ҡыҙҙырҙы. Ҡоролма тигәнем беҙҙәге мангал һымаҡ дүрт тояҡлы, икеһе тәгәрмәсле, әммә бында пропан газының бәләкәй генә баллоны, ике горилкаһы бар.

Утын, күмер яғып мәшәкәтләнәһе юҡ. Бешереп бөткәс, ябып ҡуя торған ҡапҡасын да эшләгәндәр. Интернеттан иң арзанының хаҡын ҡарағайныҡ, беҙҙәгесә 12 мең һум самаһы.

21 декабрь, 2014 йыл. Йәкшәмбе.

Ял ялҡытты...

Ысынлап та, ял ялҡыта башланы. Үҙебеҙҙең донъя менән бәйләнешһеҙ йәшәүе ҡыйын. Ысын мәғәнәһендә ял да иткән юҡ, бер нисә сәғәт эшләп ултырырға тырышам. Шиғырҙар ҙа яҙыла. Майамиҙа миңә тиклем башҡортса шиғыр яҙған кеше булдымы икән? Еңел генә була күрһен инде ҡул артым.

Ләкин бөгөнгө ваҡиғалар тураһында мәғлүмәтебеҙ бөтөнләй юҡ тиерлек. Ярты ай буйы Мичиганда гәзитһеҙ, радио-TV-һыҙ йәшәнек. Ярар Артур аҙыраҡ белешмә биреп тора. Ләкин уның тормош менән бәйләнеше башҡаса: уға кәрәк күп нәмә миңә кәрәкмәй, миңә кәрәк күп ваҡиғалар уны ҡыҙыҡһындырмай.

Майамиҙағы TV-ны ҡараштырабыҙ. Күп каналдар испан телендә. Инглизсәләрен һайлайбыҙ. Шуныһы ғәжәп: беҙгә ҡаршы ныҡ информацион һөжүм һиҙелмәй. Украина хәлдәрен дә артыҡ йыш һөйләп бармайҙар. Беҙ бит киреһенсә аңлап күнеккәнбеҙ: беҙҙәге хәлдәрҙе бында боҙоп күрһәтәләр тип ҡабатлап торалар. Улай тойолмай, ғөмүмән, беҙҙең хаҡта һүҙ аҙ. Был да, бәлки, үҙенсә мөнәсәбәтте белдерәлер.

Бер-ике аҙнала (Мичиганда телевизор булманы) күп нәмәне белеп тә бөтмәйһеңдер. Әммә төп үҙенсәлектәрҙе күрергә мөмкиндер. Тапшырыуҙарҙың йөкмәткеһен Фәриҙә тәржемә итеп һөйләргә тырыша.

Әле раштуа алды көндәре. Пасторҙарҙың һөйләгәнен йыш күрһәтәләр. Бик хисле, ярһып сығыш яһайҙар, бер урында ғына тормайҙар. Хәрәкәт, мимика, киҫкен ишаралар – рухани вәғәзселәрҙең бындай ҡылыҡтарын беҙ бик үк күреп өйрәнмәгәнбеҙ. Беҙҙә тышҡы тәьҫораттан бигерәк фекер тәрәнлегенә, һалмаҡ, әммә мәғәнәле телмәргә ынтылыу, бәлки, дөрөҫөрәктер.

Шуныһы ҡыҙыҡ: кисә мосолман әһелдәренең сығыштарын оҙаҡ күрһәттеләр. Көрәктәй ҡара һаҡаллы берәүһе бик күп халыҡ йыйылған мәсеттә ғәрәпсә вәғәз һөйләне. Бик оҫта ораторға оҡшай. Әммә мәғәнәһен аңламағас, фекерлеү һәләтен баһалап булмай. Бик оҙаҡ телмәр тотто. Ләкин пасторҙарҙың да, мосолман руханиҙарының да шул тиклем оҙаҡ һөйләгәнен күреп, берәй төплө фекер әйтер өсөн һүҙҙәрҙе ул тиклем тылҡырға кәрәкме икән, тип тә уйлап ҡуяһың.

Билдәле генә бер эшмәкәргә оҡшаған мосолман кешеһе инглиз телендә оҙаҡ вәғәз тотто. Шулай уҡ бик күп халыҡ алдында. Уҫал һөйләй, тағы ла унлап йылдан штаттарҙың ярты халҡы мосолманға әйләнәсәк тип ебәрә. Шул уҡ ваҡытта донъяны тетрәндергән ваҡиғаны – ике башняны шартлатҡанды ла күрһәтеп алырға онотмайҙар. Мосолман ораторы һөйләгәндә шул кадрҙарҙа күрһәтеү бының кем эше икәнлеген һүҙһеҙ генә аңлатыу бит.

Испан телле бер тапшырыуҙа Обаманы бик ҡаты һүккән ике ҡатынды күрһәттеләр, күп халыҡ фонында, хәрәкәттә.

Беҙҙең Үҙәк TV-лағы байтаҡ тапшырыуҙарҙың ошонан күскәнен күрәһең. Бында ла «Если хочешь стать миллионером» тигән һорау-яуап тапшырыуы бар. Айырма шунда ғына: беҙҙәге был уйындағы барлыҡ баҫҡыстарҙы бик һирәк булһа ла үтеп сыҡҡан кеше һумдар миллионерына әйләнә, АҠШ-та – доллар миллионерына. Был айырма, йәғни һум менән доллар араһындағы нисбәт көндән-көн нығыраҡ арта бара бит.

30 мең доллар тирәһе отҡан бер ҡатын һикерә-һикерә ҡыуанды. Шундай хәлдә беҙҙең кеше ул тиклем шатланмаҫ ине. Беҙҙәге 30 мең һумды хәҙерге курс менән долларға әйләндерһәң, хатта ярты мең доллар ҙа булмай бит. Бик түбән, әллә ни һикерерлек түгел. Әммә американдар йөҙ доллар өсөн дә яғалашырға әҙер тинеләр бында. Үҙең күрмәгәс, раҫлап әйтеүе ҡыйын.

Кисә беҙҙең ҡунаҡханаға яҡын парк алдында фермерҙар күргәҙмәһе булды. Беҙҙә Өфөлә төрлө райондарҙан килгән йәрминкәләр һымаҡ. Ләкин беҙҙәгеләр күпкә байыраҡ, хаҡтары ла кешесә. Бындағы күргәҙмәлә иһә күберәк йәшелсә, фруктылар, кокос, хатта үҙҙәре эшләгән төрлө һабын, шулай уҡ кейем-һалым ҡуйылған. Хаҡтары бик юғары, беҙҙәге менән сағыштырырлыҡ түгел. Бәлки шуғалыр алырға, һис юғында ҡарарға килгән кеше лә артыҡ күренмәне.

Юлдарға бында иғтибар бик ҙур. Майамиҙа юл айырғыстар күп, ҡайһы берҙәре йорттарҙан да юғарыраҡ үтә. Ике ҡатлылары бар. Тығылышҡан машиналарҙы күрмәнем.

Был ҡалала тағы ла шуныһына иғтибар иттем: небоскребтар күп төҙөлгән, шул уҡ ваҡытта янда ғына бер ҡатлы йорттарҙан торған аулаҡ урамдар. Ундағы өйҙәр күркәм, беҙҙәге ҡайһы бер урындарҙағы һымаҡ емерелергә тормайҙар.

Урамда түштәренә ҡағыҙ тотоп, хәйер һораусыларҙы бында ла күрҙем.

Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: тыныс урамдарҙағы өйҙәр алдында сәскәле ҡыуаҡтар үҫә, тик сәскәләре хуш еҫ бөркмәй. Ә бына беҙҙәгесә өй янындағы ерҙә түтәлдә сәскә үҫтереү бында бөтөнләй юҡ һымаҡ.

Сәләм, океан, океј, океан!

Океандың теләнсе аҡсарлаҡтары. Ял итеүселәр янында аҙыҡ күрһәләр, көтөүе менән ябырылалар.

Ҡайһы бер һүҙҙәр бер тамырҙан булмаһа ла, яңғыраштарында мәғәнәүи бәйләнеш бар. Мәҫәлән: Һыйыр булһын быуаҙ. Тыуып торһон быҙау.

Күп нәмә онотола. Яңылышмаһам, бөгөн Сталиндың тыуған көнө – 135 йыллығы. Быны күпме генә кеше аныҡ хәтерләй икән?

22 декабрь, 2014 йыл. Дүшәмбе.

Ай араһы етте.

Беҙҙәгесә

Көн боҙола икән бында ла.

Көн боҙолоп, ямғыр яуып тормаһа ла, болотло булды. Ҡайһы саҡта ҡояш ныҡ ҡына ҡыҙҙырып та алды. Иртән ҡунаҡхананың бассейн янында аҙыраҡ ултырҙым. Кисә болотлораҡ булды. Ҡыҙынырға ҡояш барыбер юҡ тип, океанда бик оҙаҡ йөҙгәйнем, өшөп-ҡалтырап уяндым. Бында һис кенә лә ауырырға ярамай. Ҡайтҡас, күҙ күрер. Кисә Асҡар ҙа тулҡын тотам тип атаһы янында оҙаҡ булды. Өшөп сыҡҡайны, ауырымаһа ярар.

Кисә яңы шиғыр яҙҙым, «Бер генә тотонорлоҡ». Бындағы тәьҫораттарҙан.

Бер урында ҡатлы-ҡатлы биналар бейеклек бик ҙур океан лайнерҙары тора, улар, ысынлап та, күп ҡатлы йорт дәүмәлендә. Кисә шуларҙың береһенең ҡултыҡҡа инеп барғанын аптырап ҡарап торҙом. Тимәк, унда океан карабы үтерлек тәрәнлек. Беҙ һыу ингән урын бик алыҫҡа тиклем һап-һай көйө. Кисә лә тулҡындар көслө булды, шуға һыу инеүсе бик үк юҡ.

20-дә иртән ай нәҙек кенә ҡалғайны, мөгөҙҙәре өҫкә ҡарап тора ине. Айҙың һуңғы көнө булғандыр. Кисә ул нисегерәк тыуҙы икән, яңыһы ниндәйерәк һуң тип эҙләп ҡараным, таба алманым. Күк асыла ла ябыла. Ай ҙа һәр ваҡыттағыса ҡайҙалыр ҡасып, йәшеренеп тыуа, сер һаҡлай. Күпме йылдар шуны күргем килә, күрә алмайым. Йыл буйына тиерлек аяҙ илдәрҙә бәлки башҡа-сараҡтыр.

Көн боҙола ай араһында,
Көй боҙола илдәр араһында.

Ишәктән юрға итермен тигәндәр. Хәҙер юрғанан ишәк яһайҙар. Мәкәлдәр ҙә, хәлдәр ҙә үҙгәрә шул.

Донъя бик күп төрлө. Төрлө ерҙәрҙәге тормоштоң үҙенсәлектәре беҙҙең теләктән йәки талаптан ғына тормай. Беҙҙеңсә генә түгел. Башҡа илдәрҙәге шул төрлөлөктө аңларға тырышырға һәм ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк.

Тулған ай ҙа хоҙайҙан,
Тыуған ай ҙа хоҙайҙан.

23 декабрь, 2014 йыл. Шишәмбе.

Майамиҙа (ҡалала) халыҡтың 72% европалылар (аҡ тәнлеләр), 19% ҡаралар – элеккесә әйткәндә, негрҙар, хәҙергесә афроамерикандар. Ҡалғандары азиатлылар һ.б. Бындағы европалыларҙың 60% испан телендә һөйләшә. Башҡаларҙы ла ҡушһаң, испан теллеләр – 72%. Штатта 20 млн. кеше, Майамиҙа биҫтәләре менән 5 млн. Беҙгә еткән мәғлүмәттәр дөрөҫ булһа.

TV-ның күп программалары инглиз телендә бара, әммә испансаһы ла аҙ түгел. Кисә алыҫтағы бик ҙур маркетҡа барҙыҡ. Нимәлер һорашып өндәшһәң, инглизсә белмәйбеҙ тигән кешеләр бар. Испан теле урындағы рәсми тел иҫәпләнә тинеләр. Магазинда испан телендәге гәзит ҡуйылған, бушҡа. Штатта индеецтар 0,3%.

АҠШ-та милли мәсьәлә беҙҙәгенә ҡарағанда ябайыраҡ. Ҡабатлап әйтһәм, был илдең атамаһындағы ҡушма тигән һүҙ уның асылына бик тап килә. Американлылар милләте бик күп этностарҙағы кешеләрҙең ҡушылыуынан, уҡмашыуынан барлыҡҡа килгән. Ысынлап та, Америка Ҡушма Штаттары. Күпселеге, әлбиттә, инглиздәрҙән килә, бындағы ерҙәр. Британияның колонияһы булған. Майами хатта Испанияға ҡараған, Кубаға алмашҡандар, тинеләр. Мексиканың байтаҡ ерҙәрен төрлө юлдар менән үҙҙәренә ҡушҡандар.

Был ил, был милләт ойошҡанда һинең ҡайһы этностан булыуыңдан бигерәк һинең булдыҡлылығың, үткерлегең мөһимерәк һаналған. Европаның күп мажаралы кешеләре, енәйәтселәре, башкиҫәрҙәре һ.б. төрлө яҙмышлы теүәккәл кешеләр, сая халыҡ бында килеп тамырланған. Милләт булып тупланыу илдә, минеңсә, әле лә

дауам итә. Заманында ҡол булғандар тулы хоҡуҡлы граждандарға әйләнгән. Негр һүҙен әйтеү хәҙер енәйәткә әйләнеп, афроамериканлы тигән атама тыуған тигәйнем. Американың хәҙерге Президенты Обама үҙе шулар нәҫеленән. TV тапшырыуҙарында аҡ тәнлеләр менән бергә ҡаралар ҙа ҡатнаша. Улар хатта күберәк тә һымаҡ. Уларҙың тиң хоҡуҡлы граждандар булыуын шулай төрлө юлдар менән ҡат-ҡат раҫларға тырыша рәсми дәүләт сәйәсәте. Бая әйткәнемсә, телевидениела мосолмандар өсөн хатта махсус канал бар.

Бында раштуаны бик ололайҙар. Йорттарҙы, урамдарҙы балҡып торған шыршы һындары, утлы биҙәктәр менән матурлайҙар. TV-нан төрлө пасторҙарҙың вәғәздәре йыш күрһәтелә. Күберәк бүләк бирешергә, етемдәргә, фәкирҙәргә мәрхәмәтлек күрһәтергә тырышалар. Гәрсә раштуаны байрам итеү 2–3 көн генә тинеләр, ҡалғандары эш ваҡыты. Беҙҙәге һымаҡ оҙайлы ял көндәре, эшһеҙ ятыуҙар юҡ икән.

23 декабрҙә Президент паркында АҠШ-тың иң төп байрам шыршыһы янындағы тантананы телевизорҙан ҡараныҡ. Обаманы күрһәттеләр. Халыҡты ҡотланы, улар менән бейеп тә алды. Ҡатыны, ҡыҙы менән килгән.

Кисә кис кондиционерҙар эшләп торған маркеттан сыҡҡас һауа бик тынсыу ине. Юҡҡа булмаған, таңға табан ямғыр яуып үткән. Иртән еләҫ була торғайны. Бүлмәлә һалҡынса, тышта эҫе, тынсыу.

Серегән капитализмды уҡып үҫтек. Иң алама донъя тип, ҡәһәрләп өйрәттеләр. Бына шул донъяны бер ай буйы күреп йөрөнөк. Уның да иң ҡеүәтлеһен. Сереп байыған тигән һүҙ бар. Беҙ серек капитализм тигәндәренең әле мин күргәне нәҡ шул сереп байыған ил икән. Йәки байып серегән. Фәкирлектән ҡаҡланып, хәлһеҙгә әйләнгән донъя түгел.

Отпрыски – отбросы. Быуындар бәйләнеше хәҙер күп яҡтан шулайыраҡ.

24 декабрь, 2014 йыл. Шаршамбы.

Кисә диңгеҙҙә тулҡын көслө булды. Башҡа көндәрҙе улай уҡ түгел ине. Халыҡ та күп килгәйне.

Океанда быға тиклем һыу инмәгәнгәме, океан урынына ҡайһы саҡта диңгеҙ тип яҙам. Хәйер, әллә ни күп диңгеҙҙәрҙә лә һыу инмәнем. Ни бары Балтик, Ҡара, Урта, Эгей, Каспий диңгеҙҙәре. Кисә Атлантик океанда һуңғы ҡабат һыу индек. Фәриҙә тәңкә ташламаныҡ бит, ти. Бында кире килер өсөн һыуға металл аҡса ырғытыу ғәҙәте бар. Шулай эшләргә онотҡанбыҙ. Тик океанға пираттарҙың алтын тулы

һандығын ырғытһаҡ та, яңынан бында әйләнеп ҡайта алмабыҙ, тинем. Был килеүебеҙ ҙә яҙмыштың матур бүләге инде ул.

Шулай ҙа был бүләктең барлыҡҡа килеүенә үҙебеҙ ҙә күп яҡтан сәбәпсе булдыҡ бит. АҠШ-ҡа бер йыллыҡ уҡыу грантын Артур үҙенең тырышлығы менән яулап алды, үҙе еңеп сыҡты. Был хаҡта беҙ аҙаҡтан ғына белдек. Инглиз телен тырышып өйрәнде, студент сағынан экономика буйынса сит телдәге баҫмаларҙы уҡырға тырышты, башҡа ҡалаларҙағы төрлө уҡыуҙарға йөрөп һынауҙар бирҙе, сертификаттар алды.

Ләкин беҙ ҡулдан килгәнсә уға, ғаиләһенә ярҙам итмәһәк, Артурҙың АҠШ-та уҡыуы мөмкин булмаҫ ине.

Барыһы ла үҙ-ара бәйләнгән. Артур бында уҡымаһа, беҙ ҙә Америкаға килеп, илде буйҙан-буйға үтеп, АҠШ-тың иң төнъяғынан иң көнъяғына тиклем сәйәхәт итеп, ул йөрөткән «Тойота»ла төрлө штаттар аша шул тиклем юлда булып, әллә ни саҡлы тәьҫораттар менән бер айға яҡын илдең иң төнъяғында ла, иң көнъяғында ла йәшәй алмаҫ инек. Киләсәктә лә ошолай бер-беребеҙҙе ҡыуандырып йәшәргә яҙһын ине.

Бәләкәстәр океанға көндән-көн нығыраҡ өйрәнде. Ҡояшта матур булып яндылар. Һыуға ла ҡыйыуыраҡ инәләр, тулҡынға ла һикерәләр (һыу ситендә, әлбиттә). Уларҙың бында әле ике аҙнанан артыҡ ял итәһеләре бар. Ҡап-ҡара булып янырҙар. Бәлки минең һымаҡ уҡ ҡарайырҙар. Мин бик ныҡ яндым, бындағы халыҡҡа оҡшап барам. Өфөлә күреп аптыраҙар инде. Ҡояшта был тиклем ныҡ янғаным булмағандыр, хатта үҙебеҙҙең Тоҙтүбәлә лә. Ғәҙәттә башта артыҡ ҡыҙынып, тире һыҙырыла торғайны. Бында һис бер һыҙланыуфәләнһеҙ генә ҡара яндым.

Кисә океанға килешләй мексикандар кафеһенә инеп, төшкөлөккә ашап сыҡтыҡ. Ҡамырға төрөлгән аштар, беҙҙәге ҡыҫтыбый һымағыраҡ. Тәме бик үткер. Береһе бурита тип атала. Бүре ите тип хәтерҙә ҡалдырҙыҡ. Ҡайтҡас, бәлки, бешереп ҡарарбыҙ. Халыҡ бик күп түгел. Хаҡтары ла түҙерлек. Менюлары ҡағыҙҙа түгел, һатыусының башы өҫтөндә һүрәттәрҙә күрһәтелгән, шуға ҡарап, үҙең һайлайһың. Сәйҙәре эҫеһе лә, һыуығы ла, шәкәрлеһе һәм шәкәрһеҙе бар. Бәләкәстәргә пицца алдыҡ.

Океанда һуңғы тапҡыр һыу индек. Тулҡынланып ятҡан рәүешендә хәтерҙә ҡалыр. Бында бер ни тиклем шиғырҙар яҙылды, башлап ҡуйғандары ла бар.

Пляж янында төрлө реклама таҡҡан самолеттар көн дә яй ғына үтеп тора. Кисә береһенә рус хәрефтәре менән «Билан. Собчак. Верка Сердючка», тағы ла ниндәйҙер ансамблдең исеме, «Выступать будем здесь 31 декабря» тигән хәбәр яҙылған.

Майамиҙа Рәсәйҙең күп кенә эстрада байҙарының виллалары бар икән.

Ярар, бур аҡсаларына байыған ул кәмиттәр бында ҡалһын, беҙ бөгөн кискә юлға сығабыҙ. Иҫән-һау ҡайтып етергә, үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа яңы йылды иҫән-һау ҡаршыларға яҙһын!

Иҫән-һау ҡалһын беҙ булған ерҙәр,
Иҫән ҡаршы алһын беҙ ҡайтаһы тыуған ерҙәребеҙ.

26 декабрь, 2014 йыл. Йома.

Майамиҙан 24-дә кис остоҡ. Парижға барып төшкәнсе туғыҙ сәғәтләп һауала булғанбыҙҙыр. Унан һуң Париж–Мәскәү–Өфө, 26-да – бөгөн таңда, өйҙә булдыҡ. Ярар Мәскәүҙән ваҡытында осоп киткәнбеҙ. Шереметьево аэропортында шул төндә байтаҡ рейстар нығ һуңлаған.

Изге йома көндө алыҫ сәфәргә сығҡайныҡ, изге йома көндө Өфөгә килеп төштөк.

Бына шулай тамамланды Америка Ҡушма Штаттарындағы бер айлыҡ сәфәребеҙ. Шулай тамамланды Фәриҙә менән беҙҙең 2014 йылыбыҙ.

Аллаға шөкөр, дүрт аҙна буйына балаларыбыҙ менән йәшәп, Америкалағы тормоштоң байтаҡ яҡтарын, төрлө урындарын күреп, илдең Канадаға яҡын иң төнъяғындағы Мичигандан алып Кубаға йөҙ илле саҡрымлап ҡына ара ҡалған иң көнъяғындағы Майамиға тиклем бик оҙон юлдар үтеп, ғәзиз Башҡортостаныбыҙға, Өфөбөҙгә иҫән-һау әйләнеп ҡайттыҡ.

2015

14 ғинуар, 2015 йыл. Шаршамбы.

Американан ҡайтҡанға өс аҙна ваҡыт үтеп тә китте. Яңы йылды баҡсала ҡаршыланыҡ, башта Альбиналарҙа, унан һуң икенсе көнөнә беҙҙә. Баҡсала 10 көн булдыҡ. Ҡар күп.

Көндәлектәрҙе ҡарап, инеш һүҙ яҙып, копьютерға бирҙем. АҠШ-ҡа тәүге сәйәхәтемдән һуң юлъяҙмалар уйланыуҙар рәүешендә яҙылды. Был юлы көндәлектәр итеп баҫтырғы килә.

Киләһе аҙнанан шиғырҙар менән ултырмаҡсымын. Был аҙнала мөмкинлек булмаясаҡ. 16-да Дүртөйлөгә Бабичтың 120 йыллығына барырға. Нәккәр апайым Нәсимә менән килергә тейеш.

Бабичты күптән ҡарағаным юҡ ине. Әле уның хаҡында үҙем төҙөгән иҫтәлектәр китабын уҡыштырҙым. Баш һүҙ тығыҙ яҙылған. Тупланған хәтирәләр ҙә бай һәм төрлө. Был китап бик ваҡытында әҙерләнгән һәм донъя күргән. Хәҙер, бәлки, был эшкә көсөм дә етмәҫ ине. Уйлағаныңды үҙ ваҡытында эшләргә кәрәк. Шул заманда Бабич буйынса ҙур-ҙур хеҙмәттәр башҡарылған икән: әҫәрҙәре китабы, альбом, уның хаҡында монографияны русса әҙе:рләү, һуңғы өлөштәрен яңынан яҙыу, иҫтәлектәр китабы... Бөгөн быларҙың барыһын да йырып сыға алыр инемме? Шул ваҡытта Бабич тураһында ЖЗЛ тибындараҡ китап яҙғы килгәйне, теүәкәлләп тотонманым. Әле лә уй юҡ түгел, тик һуң инде. Башҡа эштәрем күп.

Бабичтарҙың тамырҙары Тартыш ауылында. Башҡорттоң бар яҙмышы тартыш та көрәш бит.

Ҡаты һыуыҡтар булып алды. Әле бик матур, йылы көндәр. Тыштан инге килмәй. Эргәләге скверҙа йөрөнөм. Күптән булғаным юҡ ине. Көҙөн ҡайындарҙы киҫә башлағайнылар. Бер ҡайынлыҡта бер генә ҡайын да ҡалдырмағандар. Ағастар ауырыған хәлдә лә шулай ҡырырға тейештәрме икән ни?

Бер ай өйҙә булмағанда матбуғат күп йыйылған. Шуларҙы уҡып күп ваҡыт үтә. Тик барыбер ваҡыт еткереп булмай. Фекерле әйберҙәр һирәк, шуға уҡыуы күңелһеҙ ҙә булып китә.

Урманда донъя ап-аҡ. Бөтә сүп-сарҙы ҡар ҡаплаған. Донъяны һылап-һыйпап ҡуйһаң да, ундағы кеше ҡылған килбәтһеҙлектәр яҙын барыбер асыласаҡ.

Әҙәбиәт йылы тураһында мәҡәлә башлағайным, алыҫ юлға алмағаныма үкенеп тә ҡуйғайным. Яңынан ҡарап сыҡтым, барырлыҡ. Йомғаҡлап ҡуяһы ғына ҡалған. Әҙәбиәт йылын үткәреү бик әһәмиәтле сара, әммә минең өсөн сәйерерәк ишетелә. Минең һәр көнөм, айым, йылым, бар ғүмерем – барыһы ла әҙәбиәттеке.

11-дә йәкшәмбе көн Юлай еҙнә менән Фәнүзә апайымдарҙа булдыҡ. Саҡырһалар ҙа, күптән күрешкәнебеҙ юҡ ине. Олоғаялар. Күптән күрмәгән кешегә беҙ ҙә шулайҙыр инде. Нимә генә тиһәң дә, һигеҙеҙсе тиҫтәгә яҡынлайбыҙ бит. Ошо йәштә әллә ҡайҙағы Америкаға сәфәргә сығып кит инде! Уйлап ҡараһаң, тәүәкәллек кенә түгел, дыуамаллыҡ та бит.

Хәҙерге халыҡ араһында китап уҡыусылар йылдан-йыл һирәгәйә, матбуғаттың тиражы кәмегәндән-кәмей. Күп кеше сайттар аша мәғлүмәт ала, электрон китап бик заманса, уңайлы мөмкинлек тиҙәр. Ләкин улар менән файҙаланыусылар ҙа күп түгел бит. Интернеттағы контактта күпме сүп-сар, уны үҙ-үҙен рекламалау өсөн йыш ҡына эшкә егәләр. Етди фекер алышыуҙар һирәк, ах-ух, ай-һай кимәлендә аралашыу күберәк.

15 ғинуар, 2015 йыл. Кесаҙна.

Кисә иҫкесә яңы йылдың беренсе көнөндә Азамат Юлдашбаев, Мөнир Ҡунафин ҡатындары менән төшлөктә беҙҙә булдылар. Ҡымыҙ табыны, һуғым ашы, ихлас һөйләшеү. Америка тәьҫораттары.

«Ағиҙел»дә (2014, №12) Тимер Йосоповтың шиғырҙары сыҡты. Һаулығының әлеге хәлендә уларҙың баҫылыуы бик һәйбәт. Телефондан ҡотланым.

Бер шиғырында йырҙағы «Күҙ алмаҡайҙарым ирейҙер» тигән һүҙҙәр туранан-тура тиерлек ҡабатлана. Шул юлдарҙы, йәғни «Йөрөмә лә йәнем күҙ алдымда, күҙ алмаҡайҙарым ирейҙер» тигән һүҙҙәрҙе шиғырына эпиграф итеп алһа, барыһы ла үҙ урынында булыр ине. Был бер Тимергә генә түгел, бөтәһенә ҡағыла. Кемделер ҡабатлайһың икән, уға һылтан, уның һүҙҙәрен килтер. Бөйөктәр шулай эшләгән бит. Пушкиндың «Памятник» («Я памятник себе воздвиг нерукотворный») шиғырын иҫкә төшөр.

«Однажды сдавал Рациту экзамен Расул Гамзатов. Он отвечал на вопрос об Илиаде Гомера. Когда Расул запнулся, Рацит задал дополнительный вопрос:

– Скажите, а что было нарисовано на щите у Ахилла?

– Ай, профессор, не знаю, я читал, но забыл.

Рацит расплакался. Ему стало жалко человека, который не знает такой красоты. Ведь там изображены были сцены времен года.

Расул стал утешать Рацита: “Профессор, не плачьте, пожалуйста, я прочитаю, я выучу, я обязательно буду знать”». («Зов журавлей Расула Гамзатова». Махачкала, 2013, с. 56–57).

Илап ебәрерлек хәлдәр беҙҙә лә артҡандан-арта бит. Әҙәбиәттә таланттарыбыҙ өҫтәлә, әммә шул уҡ ваҡытта яңы исемдәрҙе генә түгел, Аҡмуллаларҙың, Бабичтарҙың, Рәмиҙәрҙең, Мостайҙарҙың әҫәрҙәрен белмәгән йәштәребеҙ арта. Яңы йәш быуындар милли китаптарыбыҙҙан, матбуғаттарыбыҙҙан, халыҡсан тамырҙан ситләшә. Ултырып иларлыҡ, тик ул саҡта: – Ағай, зинһар, илама,

мин уҡырмын, мин мотлаҡ беләсәкмен! – тип йыуатыусы йәштәр булырмы?

22 ғинуар, 2015 йыл. Кесаҙна.

16-да Әсәндә, Дүртөйлөлә Бабичтың 120 йыллығына арналған кисәләр (Наил Ғәйетбай, Ирек Кинйәбулатов, Фәниә Ғабидуллина, Лариса Абдуллина, Дүртөйлө шағирҙары, үҙешмәкәр артистар һ.б.). Көнөнә әйләнеп ҡайттыҡ, тик ҡайтып етә алманыҡ.

Бабич – бағыш.

Әҙәбиәт – тарих та ул. Мәҫәлән, «Война и мир», «Тихий Дон», «Василий Теркин» һ.б. Шул осорҙарҙы улар тарихи тикшеренеүҙәрҙән тулыраҡ сағылдырғандыр.

Шау-шыуҙар, ҡауышыуҙар.

Сорнаны сорнай моңо. Сораным сорнаны.

Кешенең телдән яҙыуы. Донъя менән бәйләнештең бөтөнләй өҙөлөүе.

Донъяны ла бәлки аңлап булыр,
Үҙ-үҙемде башта аңлаһам.

Халыҡ һуңғы ризығын да
Ауыҙынан өҙөп бирә.
Һаман туймай ҡомһоҙ түрә,
Был ас бирән!

Гел ғәйепкә бөкмәйек.
Бер-беребеҙҙе юҡһынайыҡ,
Бер-беребеҙҙән бүкмәйек.

Тәмдәр табалмай тәнем,
Йәмдәр табалмай йәнем,
Таңдарым шәфәктәй моңһоу,
Төн һымаҡ шомло көнөм.

Юлымды боҙ ҡаплағайны,
Офоҡтарым – ҡараңғы.
Яҡтырттың ҡапыл донъямды,
Донъяларҙы яҡтырттың да,
Яңырттың шул ярамды.

Елеп үткән көндәребеҙ
Килде-китте генә түгел,
Килделе-киттеле шул.

Америкала байтаҡ шиғырҙар яҙылған. Кисә, бөгөн шуларҙы дәфтәргә күсереп ултырҙым.

Был яҙмалар шунан ҡалған ярсыҡтар. Яҙып бөтөрәһе шиғырҙар ҙа бар. Әлегә форсат юҡ.

24 ғинуар, 2015 йыл. Шәмбе.

Рафаэль Аҙнағолов вафат булған. Яңы ғына Флорид Бүләков китеп барҙы. Бик зур драматургты юғалттыҡ. Бөгөнгөләрҙең иң талантлыһы, иң ныҡ танылғаны ине.

Рафаэль Аҙнағолов менән бәхилләшеү бөгөн университетта була. Телебеҙ яҙмышы өсөн генә ныҡ һыҙланып йәшәгән, иң борсолоп яҙған ғалимдарыбыҙҙың береһе ине. Халыҡ сит өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙ араһында йыш булды. Ундағы ауылдарҙа башҡортса һөйләшә белмәгән, үҙ-ара тик русса аңлашҡан балаларҙы күреп, туған телде уҡытыу мәсьәләләрен күтәрҙе. Ләкин дәүләт кимәлендә саралар барыбер күрелмәй, яңы быуын милләттәштәребеҙҙең туған телдән ситләшеүе һаман көсәйгәндән-көсәйә.

28 ғинуар, 2015 йыл. Шаршамбы.

Әҙәбиәт йылына арналған осрашыуҙар йыш үткәрелмәксе. Кисә Сипайловалағы 26-сы модель китапханала булдым. 136 гимназияның уҡыусыларын килтергәндәр. Мөдир Гөлнара халыҡ йөрөй, өйгә китаптарҙы күп ала, тиҙ генә уҡып, кире килтерә тип һөйләп торҙо. Ҡыуандыра, әлбиттә. Тик күберәге оло быуын кешеләре.

Бөгөн «Башҡортостан» редакцияһында коридорҙа әҙәбиәт йылына арналған фотокүргәҙмәне асыуҙа ҡатнаштым. Был гәзиттең тәүге редакторы Сәғит Мрәсов бабайым (өләсәйемдең ағаһы), унан һуңғы редакторҙар Дауыл Юлтый, Кәрим Иҙелғужин, 30-сы йылдарҙағы репрессия осоронда Ҡасим Аҙнабаев – барыһы ла Туҡсоран егеттәре булыуы тураһында әйттем.

Луиза Америка көндәлектәрен баҫып бөткән, 55 бит булған. Ул тиклем күләмде көтмәгәйнем. Әлегә текст ҡулда юҡ, шиғырҙарҙы баҫып бөткәс, бер юлы сығарыр. Ҡайҙа бирергә әлегә хәл итмәгәнмен.

Яңы йылда юғалтыуҙар йышайып китте: Флорид Бүләков, Рафаэль Аҙнағолов. Кисә беҙҙән аҫта йәшәгән Арыҫлановтың (элекке

финанс министры урынбаçары) ҡатынын оҙатыҡ. Дәүләкәндән Айрат кейәү бик ауыр хәлдә 21-се больницала ята. Реанимациянан сығарғайнылар, яңынан индергәндәр.

16-да Нәккәр апайым Нәсимә менән килгәйнеләр. Нәсимә бер аҙна буйы уборка менән булды.

25-дә Рәйлә Бүләкованың ҡырҡында булғайныҡ. Нурмөхәмәт хәҙрәт үҙе килде. Уның доғаларынан һуң бик күп кешеләр һүҙ әйтте, иҫтәлектәр һөйләне. Мин Майамиҙа яҙған шиғырымды уҡып, ҡыҙҙарына бүләк иттем. Фәнил Күзбәков та шиғыр яҙған икән.

Нурмөхәмәт хәҙрәт «К истокам духовного наследия мусульманской культуры» (Уфа, 2013) тигән китап бүләк иткәйне. Шунда Әхмәт әл-Фаруҡи әл Сирхиндиҙың хаттарында шундай бик мәғәнәле һүҙҙәр уҡыным:

Не может нанести вреда светилу в полдень невидение его со стороны слепца...

Әлбиттә, һуҡырҙарҙың күрмәүенән ҡояштың нуры кәмемәй. Бәғзе күҙле һуҡырҙарҙың танымауынан ғына бөйөк тәғлимәттәр үҙ ҡиммәтен юғалтмай. Хаҡ тәғәлә һүҙе мәңгелек.

Әҙәбиәт тә халыҡҡа яҡтылыҡ илтеүсе. Күңеле һуҡырҙарға уның нуры барып етмәй. Ләкин хәл бында башҡасараҡ. Һуҡырҙарҙың һуҡырлығы күпселектә ғүмерлек бәхетһеҙлек. Ә бына күңеле һуҡырҙарҙың аңын асырға мөмкин. Ә бындай һуҡырҙар күбәйгән һайын әҙәбиәттең яҡтылыҡ таратыу мөмкинлеге хәүефлерәк, һәйбәт йоғонтоһо кәмерәк, тарыраҡ була бара. Һуҡырҙар күрмәгәндән ҡояш һүрелмәй. Уҡыусылары кәмеһә, әҙәбиәттең киләсәге ышаныслы түгел.

Ҡайғылар, ауырлыҡтар кешене бәлки әсе дарыу һымаҡ һауыҡтыралыр, һынауҙар сыныҡтыралыр.

Хәҙис: ярлылар ожмахҡа 500 йыл алданыраҡ инер.

Шөкөр итә белмәйбеҙ. Сөнки кешеләр хәтерһеҙ була бара.

«Есть запреты, затрагивающие (наши) обязательства перед Всевышним Аллахом, и есть запреты затрагивающие взаимные обязательства рабов (божьих). Строгое соблюдение последних имеет приоритет над первыми. Это связано с тем, что ал Хакк – Всевышний не испытывает абсолютно никакой нуждаемости, и, при этом, является милосерднейшим из всех, проявляющих милосердие. Рабы же (божьи) – в постоянной нужде и зависимости, (часто) скупы и низки по натуре.» (Из письма 76. Указ. книга, стр. 14)

1 февраль, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

29 ғинуарҙа элекке «Нефтяник»та, бәләкәй залда Әҙәбиәт йылының республикала башланыу кисәһе. Шағирҙарҙан Светлана Чураева менән мин сығыш яһанығ. Әҙәбиәт йылы өсөн аҙ, әлбиттә. Рәис булараҡ Наил Ғәйетбайҙың да һүҙ әйтмәүе сәйер. Салауат Сәғитов асты, русса ла, башҡортса ла һәйбәт һөйләне. Бәләкәй залда үткәрелеүе бик үк аңлашылмай.

30 ғинуарҙа Ҡала мәҙәниәт һарайында Өфөлә әҙәбиәт йылының башланыуына арналған тантана.

Бик ҙур зал (мең урындан артыҡ) халыҡ менән тулған. Сценарий үҙенсәлекле ҡоролған: Пушкин, Гоголь, Толстой, А. Ахматова, Маяковский. Араларында Аҡмулла ла бар (Хөрмәт Үтәшев), уныһы ла русса һөйләп йөрөй. Ярай аҙаҡ башҡортса шиғыр уҡыны. Мостайҙың шиғырҙарын өс артист уҡыны. Хатта Олег Ханов та Мостайҙың русса тәржемәһен һөйләп тора.

Беҙ өс быуын сыҡтыҡ: мин, Лариса Абдуллина, БДПУ-нан Динис Ғилманов тигән егет, Бабичҡа оҡшаған. Башҡортса уҡыныҡ, халыҡ бик оҡшатты. Был блокты ярар Зөлфиә Ханнанова тырышатырыша индергән. Юғиһә, бөтөнләй тере башҡорт шағиры күренмәҫ ине. Сынтимер Баязитов та тик русса һөйләп тора.

Ел – көтөүсе, болоттарҙы көтә.

Америкала башлап ҡуйған шиғырҙар менән ултырҙым. Ике шиғыр яҙҙым. Ғинуар шуның менән тамамланды.

Былтырғы мәҙәниәт йылы нимә бирҙе? Бик тантаналы башланған әҙәбиәт йылы ла шулай булмаҫмы? Һис юғында, әҙәбиәт музейына бина бирһендәр ине.

8 февраль, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

Яҙыусылар союзында 5 февралдә «Әҙәби кесаҙна»ла Америкаға сәйәхәт тураһында һөйләнем. Унда яҙылған ҡайһы бер шиғырҙар менән аралаштырып алып барҙым. Аҙаҡ яңыларын байтаҡ уҡыным.

Осрашыу бер сәғәттән артығыраҡ барҙы. Халыҡ һәйбәт йыйылғайны, хатта урын етмәгәс, ҡайтып китеүселәр булған. «Оноторлоҡ булдымы ни?» китабын Альбина һатты.

6-да, йома, Мәғарифты үҫтереү институтында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары менән осрашыуҙа Хәсән Назар, Ирек Кинйәбулатов, Ҡәҙим Аралбай булдыҡ. 200 уҡытыусының методик эшмәкәрлегенән төҙөлгән, Мостай Кәримдең 95 йыллығына арнап

сығарылған «Күкрәгемдән ҡоштар осорам» тигән бик ҙур китаптың исем туйы булып үтте был осрашыу. Ағайҙың ҡыҙы Әлфиә лә килгәйне.

Элек был китап Зәйнәп Биишева ижады буйынса сығҡайны. Минең 75 йәшемә баҫылған «Шағир һүҙе – шағир яҙмышы» тигән йыйынтыҡтың презентацияһын былтыр ҡәләмдәштәрем һәм уҡытыусылар менән бик матур итеп үткәргәйнек.

Әле минең китаптарҙы һатыуҙы ойоштороҙоҡ. Һәр орашыуҙа шуны эшләргә кәрәк.

Кисә беҙҙең яндағы скверҙа минең туралағы фильмға кадрҙар төшөрҙөк. «Иңдремә елбәҙәк ҡар яуа» тигән шиғырымды уҡыным (әгәр яҙылған булһа). Шиғырға көн бик матур килеп торҙо: йомшаҡ ҡына ҡар яуа ине.

«Америка көндәлеге»н Азамат Юлдашбаев уҡып сығҡайны, ҡәләм төрткән урындары бар ине. Яңынан бик ентекләп ҡарап сығтым. Иртәгә Луизанан алам, «Ағиҙел»гә алып бармаҡсымын.

«Ватандаш» өсөн әҙәбиәт йылы буйынса Америкаға тиклем мәҡәлә яҙа башлағайным. Кисә бөтөрөп ҡуйҙым. Бәлки февраль һанына өлгөрөр.

Айрат кейәү инсульттан вафат булып ҡуйҙы. Алтмыш йәшенә саҡ ҡына етә алманы. 4-дә Илгизгә ултырып Дәүләкәнгә барып ерләп ҡайттыҡ. Халыҡ күп йыйылды. Бик һәйбәт егет әрәм булды.

Әҙәбиәт йылынан нимә көтәһең, ниндәй яҡшылыҡтарға өмөт итәһең, тиһәләр, хәлдәребеҙ бөгөнгөнән дә насарыраҡ булмаһын тип теләйек, тиер инем. Бөгөнгөсә булһа, йәшәрлек. Тик киләһе көндәр бигерәк хәүефле бит.

Кисә Артурҙар менән һөйләшеп алдыҡ. Иҫән-һауҙар, кәйефтәре һәйбәт күренә. «Наш современник»та (2015, №1) экономика буйынса «Русское чудо против западных санкций» тигән һәйбәт мәҡәлә уҡығайным (аҙағы буласаҡ). Интернеттан тиҙ генә тапты. Танышһын, уға файҙаһы буласаҡ, юғиһә, уның ниндәй программа, ниндәй проблемалар буйынса эшләгәнен аңлап еткермәйем.

«Хазина» тигән бәләкәй генә китабымды ҡарап ултырғанда шуға иғтибар иттем: бер заман йыл һайын поэма яҙғанмын. 1989 – «Халҡыма хат», 1990 – «Система», 1991 – «Баҙар балтаһы». Ә 1995 йылда хатта икәү: «Барокамера», «Башһыҙ һыбайлы». Икеһе лә больницала (Кардиоцентрҙа) бер-бер артлы бик тиҙ яҙылды. Иң оҙаҡ яҙылған поэмаларым «Каруанһарай» менән «Хазина».

Көндәлек булғас, төндәлек тә була алалыр. Минекеләрҙе бәлки «таңдалыҡ» тип атау дөрөҫөрәк булыр ине, сөнки төп эш сәғәттәрем төндөң аҙағы һәм таң ваҡыттары.

22 февраль, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

Әҙәбиәт йылы Бабич менән башланды. 16 ғинуарҙа Әсәндә, Дүртөйлөлә (Ирек, Хәсән, Лариса, Фәниә). Матур осрашыуҙар. Һәйкәлен музейы янына күсергәндәр. Минеңсә, был урын һәйбәтерәк.

Был арала ауырыуҙан баш сыҡмай. БИРО-нан һуң аритмия башланғайны. Бөтмәй ҙә бөтмәй. 10-да врачҡа барһам, һалып ҡуйҙылар. 13-дә йома өйгә ҡайтҡайным, бөттө. 18-дә бик үтенеп һорағас, ҡайтарҙылар. Тик өйҙә ул аритмия яңынан башланды. Әле һаман бөтмәй. Врач ғүмерлеккә ҡалыр тигәнерәк һүҙ ҙә әйткәйне. Шулайға оҡшаған.

Шулай ҙа 27 февралдә буласаҡ Бабич конференцияһына сығыш яҙып ташланым. Һәйбәт һымаҡ.

Больницала 1–2 шиғыр ҙа яҙған булдым. «Рәми шишмәһе» күңелдә күптән – 1991 йылдан бирле йөрөй ине.

Үлемгә хөкөм ителгән енәйәтселәр. Уйлап ҡараһаң, беҙ барыбыҙ ҙа үлемгә хөкөм ителгәнбеҙ. Берәүҙәр өсөн ул ҡарар бик иртә, икенселәргә туҡһан йәшен үткәс тормошҡа ашырыла. Мы все приговоренные к смерти.

«Ялын елберҙәтеп елә ялҡындай янып саптар, донъянан күҙем сағыла: зәп-зәңгәр күк, ап-аҡ ҡар» – шулай тип башланған бер шиғырым бар ине. Китаптарымдан да, дәфтәрҙәремдән дә таба алманым. Сәлимә һеңлем минең турала кино әҙерләп йөрөй. 7 февралдә беҙҙең яндағы скверҙа съемкалар эшләнек. «Иңдәремә елбәҙәк ҡар яуа» тип башланған яңы йыл шиғырымды уҡыным. Ҡар ҙа яуап тора ине. Аяҙ көндө баяғы шиғыр кәрәк буласаҡ. Әллә яңынан яҙырғамы?

Ул шиғырҙы таба алманым, әммә дәфтәрҙәремде аҡтарғанда китаптарыма инмәгәндәре килеп сыҡты. Бәлки яңы йыйынтығыма өҫтәргәлер? Былай ятып ҡалһалар, йәл бит.

Элек больницала шиғырҙар, поэмалар яҙылды: «Система», «Барокамера», «Башһыҙ һыбайлы». Шунда «Хазина»ны бөтөрҙөм. Һәр саҡ яңғыҙым ята торғайным. Был юлы кеше менән булғас, яҙылманы тиерлек. Хәҙерге йәштә дөйөм палатала ятыуы бик ҡыйын. Үҙ режимың, ғәҙәттәрең.

Машиналар кешеләрҙән күберәк булып бара. Элек кеше машинаның хужаһы ине, хәҙер – ҡоло.

Больницала күбеһе беҙҙең быуын. Элек һуғышта ҡатнашҡан ағайҙар күп була торғайны. Хәҙер – һуғыш балалары, һуғыш дәүере малайҙары.

Кеше үҙенең иҫерек сағын күрә алһын ине, бәлки эсмәҫ ине.

Ғәзим Шафиҡовтың «Крючья под ребро» тигән китабын яңынан ҡарап сыҡтым. Элек ҡайһы бер фактик хаталарын күреп, күңелем һүрелгәйне. Әле Бабичҡа ҡағылған урындарын яңынан уҡыным. Ғөмүмән, Ғәзим ҙур эш эшләгән. Ваҡытында һүҙ әйтмәгәнемә хәҙер үкенәм.

1 март, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

Баҡсала ике айға яҡын булмағайныҡ, кисә килдек. Өфөлә иретә, йылғалар ағып ята Иҫке Өфөнән Ҡариҙелгә төшкән юлда. Бында ҡыш, яҙҙың әҫәре лә юҡ.

Өс көн (21, 22, 23.02) ялдан һуң байтаҡ сараларҙа ҡатнаштым. 24-дә нәшриәттә улар әҙерләгән клипҡа төштөк. 25-дә БДПУ-ла һуғыш балалары быуыны менән осрашыу (Ирек Кинйәбулатов, Спартак Илъясов, Фәнзил Санъяров). Матур үтте. Бында БДУ-ның «Шоңҡар»ы һымаҡ түңәрәк эшләмәһә лә, уҡытыусылар тырыштар (Сәмситова Луиза, Ғәлина Ғәлимә). Зәки Әлибай ҙа бында эшләй. Студенттар ҙа ихлас иҫәнләшеп торалар, йөҙҙәрендә нур бар. Был уҡыу йорто менән бәйләнеште нығытырға кәрәк.

Хәйер, айырым инициативаларҙан башҡа быны бөгөн системалы рәүештә кем эшләһен инде? Яҙыусылар Союзы аппаратында быны эшләрлек кешеләр бөтөнләй юҡ. 27-дә кесаҙна ундағы залда БДУ тарихсылары менән берлектә Шәйехзада Бабичтың 120 йыллығына арналған ғилми-ғәмәли конференцияға сығыш әҙерләп барғайным. Халыҡҡа бөтөнләй еткермәгәндәр, дүрт-биш яҙыусы ла бер нисә студент, БДУ-нан бер нисә ғалим. Зал буш булды тиерлек. Ә бит ниндәй матур программа, махсус китап сығарғандар. Был конференцияны ҙур ваҡиғаға әйләндереп булыр ине. Ләкин уның өсөн союздың етәкселәренең янып йөрөүе кәрәк. Өйөрө менән яңы ағзалар алалар, улар ниңә һис юғында ошондай сараларҙа ҡатнашмай? Сығышым алдынан был хаҡта әйттем, Бабич рухы бөгөн беҙгә рәхмәт тә әйтәлер, күптәрҙең битарафлығына рәнйейҙер ҙә, тинем. Был хаҡта Ирек Кинйәбулатов та әйтте. Лариса Абдуллина ла аптырап һөйләгән. Ләкин уны тыңлай алманым, тәнәфестән һуң китергә тура килде.

Таңсулпан Бабичеваның Бабич буйынса әҙерләп алып килгән концерты бик һәйбәт булған. Ниндәй әҙерлекле сара әрәм! Ғиниәт Ҡунафин май айында Бабич буйынса ҙур симпозиум хаҡында әйтте. Ул сараға йәмәғәтселекте нык ылыҡтырырға кәрәк.

Наил Ғәйетбаев «Бабичҡа быйыл һәйкәл асыласаҡ» тигән һүҙҙе нисәмә осрашыуға тантаналы әйтә. Бабич көндәре йыл да үтәсәк, ти. Әлегә тиклем конкурс та иғлан ителмәгәс, быйыл ниндәй һәйкәл булһын?

Эргәләге скверҙа йөрөйөм. Бер сауҡалыҡты бөтөнләй ҡырҡып ташланылар. Ниндәй матур ҡайындар ине, хәҙер буш урынды күреүе бик ҡыйын.

Урманда эт йөрөтөүселәр күп. Бала тәрбиәһәләр йәки берәй етемдәр йортона ярҙам итһәләр, ни тиклем кешелекле эш булыр ине. Әле ап-аҡ ҡарҙы бысратып йөрөйҙәр.

Эттең танауы күҙенән үткерерәк күрә.

Аритмия йышайҙы. Бөтә донъяла ритм боҙолғанда, йөрәк нисек тыныс ҡына типһен?

Немцовты атып үлтереп киткәндәр. Был мәкерле енәйәттең эҙенә төшөп, ғәйеплеләрҙе табыуҙарына шикләнәм.

Йәшерәк саҡта кешенең көҙгөгә ҡарағыһы килеп тора. Ҡартая бара үҙен көҙгөлә бик үк күрәһе килмәй. Йәшәй-йәшәй донъяға ғына түгел, хатта көҙгөгә лә кешенең мөнәсәбәте үҙгәрә.

Ҡар яуғанынан кеше ямғыр яуыуын нығыраҡ хәтерләй, сөнки ямғыр кешегә нығыраҡ тейә, кеше унан ҡасырға тырыша. Етмәһә, йыш ҡына күк нисек күкрәй ҙә ниндәй йәшендәр ялтлай! Ул дәһшәт-ғәйрәт йәшлеккә оҡшаш, ә ҡар – өшөгән, туңған ямғыр.

3 март, 2015 йыл. Шишәмбе.

Көн дә дүрттә тороп ултырам. Хәҙер ваҡыт күберәк булһа ла, ғүмер юлы оҙонайған һайын ваҡыт та, йоҡо сәғәттәре лә ҡыҫҡара. Һаман да яңы ритмға күнегә алмайым. Мине һәр ваҡыт ниндәйҙер уйҙар, бурыстар, эшләнәһе эштәр алға елкендереп торорға тейеш. Шунһыҙ тормош һүрелә башлай.

Һуңғы ваҡытта аритмия йышыраҡ килә башланы. Бөтә донъяны аритмия ҡалтыратҡанда шағирҙың йөрәге нисек кенә көйлө ритмда типһен инде?

Аллаһы тәҡәләне көлдөргөң килһә, уға үҙеңдең пландарыңды һөйлә, тиҙәр. Урыҫтың «Человек предполагает, бог располагает» тигән һүҙҙәре лә бар. Әҙәм балаһының эштәре грандиоз, әммә барыбер ни тиклем сикләнгән!

Тыуым ғына туҡтай белмәй,
Үлем генә үлемһеҙ!

Бүләсәремә, бүләмә
Йөрәгемдә бүләм.
Улар көлһә, көләм,
Улар юкта бөләм,
Улар юкта үләм.

Бәләкәстәр ныҡ һағындыра.

Бабич конференцияһына арнап университет сығарған йыйынтыҡты уҡыйым. Миңә таныш булмаған нәмәләр аҙ, әммә бар. Яңы йәш ғалимдарҙың Бабичҡа ылығыуы ҡыуандыра.

«Әҙәби нағыш» тигән марафон буйынса райондарҙан ҙур-ҙур шиғри шәлкемдәр баҫалар. Ләкин сағыу нағыш булдырырлыҡ балҡыштар, йөрәкте көйҙөрөп алырлыҡ уй-һағыштар юҡ. Йәштәргә иғтибар итеү һәйбәт, әлбиттә. Әммә таланттарҙы план буйынса ғына табып булмай, Рәшит Назаров һымаҡ йондоҙҙар үҙҙәре балҡып тоҡана. Йондоҙҙарҙы ут төртөп яндырып булмай, улар үҙҙрәе яндыралар.

Синоптиктар иртәгәһе көндөң нисек булырын әйтәләр. Прогноздары йыш ҡына дөрөҫ була. Шағирҙың ғына иртәгәһе көнөн фараз итеп булмай. Шиғыр – яҙмыш. Яҙмышының иртәгә нисек булырын кем белә?

10 март, 2015 йыл. Шишәмбе.

Өс көн ял, байрам. Унда-бында сабырға түгел, эшкә күмелеп ултырҙым. Һуңғы ваҡытта ат ене ҡағылды. Ул ен беҙгә малай сағыбыҙҙан уҡ ҡағылғайны инде. Атайһыҙ үҫтек, әммә атһыҙ үҫмәнек. Аттар тураһында беҙҙең бала саҡтағы легендалар. Бөйөк кешеләр генә түгел, бөйөк аттар ҙа булған. Түрәләргә, батшаларға табыныуҙар – ваҡытлыса, алмашынып торған. Атҡа табыныу – ғүмерлек, быуындан быуынға күскән.

Йырҙарҙағы, эпостарҙағы һ.б. атҡа бәйле шиғри юлдарҙы берәй ыҡсым ғына китап итеп йыйырға күптән йыйына инем. Бер ҙә форсат булманы. Әле шуларҙы тупланым, бөгөн компьютерға алып барып бирәм. Инеш мәҡәлә яҙып өлгөрмәнем, тик фекерҙәрем бар, теркәлгән. Бүленмәй ныҡлап ултыраһы бар. Әммә бер нисә көн кино эштәре, сценарий менән булырға кәрәк. Рамаҙан абзыйымдың ейәне Сәлимә Батисова кино әҙерләй. Һорауҙарын да ебәргәйне. Сценарийҙың төп өлөшөн үҙемә әҙерләргә кәрәк буласаҡ. Күп нәмә күҙ ал-

дына килде, тик аттар үҙҙәренә тарта. Аттарҙан бүленеп, киноға ҡайтмай булмаясаҡ.

Эйәрме, түшәкме?
Ҡалҡанмы, талҡанмы?
Яныңмы, йәнеңме?
Ай балтамы, май ҙа балдамы?

Ир-егет алдында ошондай һорауҙар йыш тыуған. Ир-азаматтар был икәүҙең тәүгеһен һайлаған, әлбиттә.

Атайһыҙ үҫтек, атһыҙ үҫмәнек.

Етеш тормош, йүнде бирмәһә лә, ҡулыбыҙға көрәкте, йүгәнде бирҙе.

Атлы башҡорт булған ҡанатлы.

Зарлана берәү: – Эй, тәңрем,
Яралттың, яратманың.
Һуҡтың, һүктең, ситкә ҡаҡтың,
Берәй булһа ла арҡамдан
Һөйөп, наҙлап ҡаҡманың.
Бөтмәҫ ғазабым, аһым,
Ни ғәйеп, ни гонаһым?

Фольклор томдарын аҡтарғанда сәсәндәр ижадына ла юлыҡтым. Яҙыусылар союзында Мөхәмәтша Буранғоловтың 75 йәшенә арнап 1964 йылдың мартында үткәрелгән бәләкәй генә йыйылышта сәсән «Рәхмәт хаты»н уҡый. Ул ҡобайырҙа юл һайын партияға рәхмәт, дан. Ленинды ла рәхмәт әйтеп телгә ала. Шул режимда күргән күпме ғәҙелһеҙлектәрҙән һуң да юлбашсыларға түбәнселек менән баш эйеү. Буранғоловтың кейәүе Әхмәт Лотфуллин яҙған рәсемдәге ғорур сәсәндән шундай һүҙҙәрҙе ишетеү сәйер һымаҡ. Әммә заман шундай көслө шәхестәр яҙмышында ла шундай сәйер хәлдәр тыуҙырған.

Өфөнөң Затондағы иң ситтәге өйҙә йәшәгәндә (мәктәптең ул өйө әле лә иң ситтә тора) Мөхәмәтша бабайҙы Фатима әбей менән (ҡатыны үлгәс алған балдыҙы) ҡунаҡҡа саҡырғайныҡ, август айында. «Ағиҙел»дең «Рәхмәт хаты» баҫылған 1964 йылдың 7-се һаны шул ваҡытта яңы килгәйне. Сәсәнде ҡотлап, был шиғри рәхмәтте

ҡунаҡтарға уҡып, журналды сәсәнгә биргәйнем, уны ҡыуандырғаным хәтерҙә. Ҡыуандыра алғаныма хәҙер үҙем ҡыуанам.

16 март, 2015 йыл. Дүшәмбе.

«Атлы башҡорт» тигән китаптың осона нигәйәт сыҡтым. Алты бүлектән тора: эпостарҙан өҙөктәр, ҡобайырҙарҙан, исемле оҙон йырҙарҙан, оҙон йырҙар, ҡыҫҡа йырҙар менән таҡмаҡтар, йола йырҙары (күбеһе сеңләүҙәр). Шәмбе-йәкшәмбе баш күтәрмәйенсә инеш мәҡәләне («Атлы азамат») яҙып ултырҙым. Алдан әҙерләнгән тезистарым бар ине, ентекле генә тикшеренеү килеп сыҡты. Күптән уйлаған уйым тормошҡа ашып килә. Үҙ аҡсама сығармаҡсымын. Полиграфкомбинат директоры Шамил Биҡҡолов менән һөйләшеп ҡарайым.

Нәшриәткә бирәһе китабым да эшләнеп бөттө тиерлек. Компьютерҙан һуң яңынан ҡарап сығам. Бөгөн тотонормон.

Сәлимә һеңлем минең туралағы фильмдең сценарийын үҙенсә ҡормаҡсы. Миңә оҡшап етмәй. Әмир Абдразаков менән эшләгән киноны («Илемдә илемде һағынам») яңынан ҡарап сыҡтым. Унда күп нәмә әйтелгән. Тағы ла кәрәкме икән?

Башҡорт аты ер ҙә һөргән. Ләкин баҫыуға, бураҙнаға ҡарағанда яу юлында күберәк булған.

Малай саҡта беҙ яратҡан Тупый тигән ат була торғайны, әҙерәк аҡһаһа ла, бик аҡыллы, сабыр ине. «Аҡһаҡ ҡола»ны уҡығанда шул Тупый иҫкә төшә.

Яҙышҡанда ҡайһы бер китаптарҙы яңынан ҡарарға тура килә. Уларҙы эҙләгәндә әле йүнләп уҡылмаған йәки яңынан бик тә уҡығым килгән китаптарға юлығам. Күпме байлыҡҡа барып етеп булмай. Уҡылмай ҡалған китаптар күрә алмай ҡалған ерҙәр, илдәр һымаҡ. Ул илдәргә барып етеүе еңел түгел, улар бик алыҫта булырға мөмкин. Ә китаптар эргәлә генә бит. Яныңда булмағандарын хәҙер интернет аша табалар.

Ҡанды һурҙы, тамуҡта ҡурҙы, емерҙе-ҡырҙы, ерҙе аҡтарҙы-йырҙы, ҡайғылы итте йырҙы.

Һағыштан һарыларға һабышҡан. Сеңләүҙәрҙе уҡығанда.

«Атлы ҡазаҡ» тигән һүҙ була торғайны. Үҙҙәре атлы башҡорт була тороп, ниңәлер шулай әйткәндәр.

Бисәне ҡайһы саҡта кәмһетеү һымағыраҡ әйтәләр. Мин бының менән килешә алманым, бисә һүҙе бей һүҙе менән бәйле булырға тейеш тип фараз иттем. Ҡарасәй – балҡарҙарҙың фольклор томын

Нальчикта бүләк иткәйнеләр. Шуны ҡарағанда әлеге фаразым раҫлана һымаҡ. Уларҙа Байрам-бийче, Умай-бийче (201-202 биттәр). Уларҙа ла Һомайҙы изгеләштереү көслө.

Орғосона эҙләй орғасы.

Аусы, яусы, яугир. Ҡара яр аҫтынан яу ҡупмаһын, яусы ғына үҙенең яуы менән килһен.

29 март, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

Һау ғынамы, яҙыу өҫтәлем!
Һиңә ҡулым тейһә, әйтерһең мин
Намаҙлыҡҡа баҫҡан мосолман.

Был һүҙҙәрҙе мин күптән яҙғайным, алтмышынсы йылдар аҙағы микән. Яҙышыуҙан оҙағыраҡ айырылып торһам, шул юлдар иҫкә төшә.

20-дә Рамаҙан абзыймдың ейәне Юлияның туйы булды. Телевидениела Рита Өмөтбаева менән эшләй, «Байыҡ» һ.б. тапшырыуҙар. 21-дә шәмбе баҡсаға киттек, бер аҙна булдыҡ. Дамир алып барҙы, кисә алып ҡайтты. Күберәк уҡыу менән булдым. Рауил Фәйзуллин юбилейына барғанда «Илбағар уйҙар» тигән китабын бүләк иткәйне: уйланыуҙар, ҡәләмдәштәре тураһында мәҡәләләр, интервьюлар һ.б. Ҡыҙыҡлы йөкмәткеле, фекерле китап. Әле уҡып бөтөрә алманым. Ҡайһы бер урындары электән таныш ине. Бергә йыйып уҡығас, башҡасараҡ. Шағирлығын һәйбәт баһалаһам да, аҙаштың был яғын бик үк белеп еткермәгәнмен икән. Ҡәләмдәштәре, тиҫтерҙәре тураһында бик иғтибар менән, ихтирам менән яҙа. Ололар тураһында ла уйланыуҙары һәйбәт. Беҙҙең шағирҙар араһында, ғөмүмән, әҙәбиәт әһелдәре араһында бындай уйланыуҙар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юҡ дәрәжәһендә шул. Р.Ф.-ң шиғырҙары күбеһе ыҡсым, ҡыҫҡа, ә интервьюлары үтә оҙон. Үҙе алғандары ла.

Әҙәбиәт йылында райондар буйлап марафон бара. Бик кәрәкле эш. Халыҡты, бигерәк тә йәштәрҙе, китапҡа ылыҡтырырға тырышыу һәйбәт. Тик йөрөп ҡайтҡас «Башҡортостан»да баҫтырған шиғри шәлкемдәре бик йомшаҡ. Әҙәбиәт йылы әҙәбиәттән биҙҙереү йылына әйләнеп ҡуймаһын. Шул баҫмаларҙағы сүп-сарҙы уҡып, йәштәрҙең «шиғыр шулай була икән дә», тип, зауыҡтары боҙолмаһын. Үҙешмәкәр сәнғәт бар, уныһы ла кәрәк. Ләкин әҙәби ижад тик профессиональ кимәлдә генә була ала. Башҡаса түгел.

Атлы башҡорт булған ҡанатлы.

«Атлы азамат»ты полиграф комбинатҡа ҡалдырғайным. Ҡарарға, хаҡын билдәләргә тейештәр ине. Иртәгә барып белешәм. Союздан Луизанан «Иң беренсе мөғжизә» тигән шиғри йыйынтығымды ла барып алам. Уны ла «Китап»ҡа тапшырырға кәрәк. Баҡсала оҙаҡ ҡына булырға ине лә, килеп сыҡмай. Хәҙер теш мәшәкәттәре, теш ғазаптары башланасаҡ.

Ир-егет үҙ ғүмерендә өс нәмәне эшләргә тейеш тиҙәр: өй һалырға, ағас ултыртырға, ул үҫтерергә. Хәҙер кешегә талап башҡасараҡ: һис юғында өйҙө емермәһен, ағасты ҡырҡмаһын, баланы харап итмәһен.

Мортаза ағай Рәхимов тураһында китап әҙерләйҙәр. Ике телдә була тигәс, мәҡәләмде башҡортса биргәйнем. Русса ғына сыға икән. Яңынан эшләргә тура килде.

30 март, 2015 йыл. Дүшәмбе.

Яҙ иртә килмәксе ине, тик ҡыш бик бирешеп бармай әле. Төндә һыуыҡ 20 градусҡа еткән урындар бар. Ҡар барыбер яйлап ирей, ташҡын көслө булмаҫ.

«Ағиҙел»дең өсөнсө һанында минең «Америка көндәлектәре» сыҡты. Өс фотоһы ла бар. Һәр хәлдә, беҙҙең уҡыусылар бындай яҙмаларҙы ла уҡырға тейештер. Америкаға беҙҙең яҙыусыларҙың сәйәхәте үтә һирәк була бит. Рәхмәт егеттәргә, оперативно сығарҙылар.

Ваҡыт араһы менән ваҡыт араһы бер-береһенән ни тиклем айырыла. Мәҫәлән, 1917–1937 һәм 1985–2015. Икеһендә лә утыҙар йыл. Йәки 1945–1975. Тәүгеһендә ҡыйралған илдән ҡеүәтле дәүләткә әйләнеү, фашистарҙы еңерлек көс туплау. 1945–1975 – ярты ғасыр эсендә донъяла үҙ һүҙен, үҙ позицияһын яҡлаған ҡарашлыҡ юғарылыҡҡа күтәрелеүе. Һуңғы утыҙ йылда илде емереү, һатлыҡ юлбашсылар арҡаһында күпме быуындың хәләл хеҙмәте менән тупланған мөлкәттең таланыуы-урланыуы, күпме байлыҡтың сит илдәргә күсеүе. Олигархтар власы һаман да дауам итә. Уларҙы еңмәйенсә, илдә тәртип булмаясаҡ. Хәҙер коррупцияла ғәйепләп, губернаторҙарҙы ултырта башланылар. Властың коррупция менән көрәшен халыҡ күрһен һәм баһалаһын, имеш. Ә байлыҡ һаман да ситкә аға. Былтыр 140 млрд. долларлыҡ сумма илдән киткән. Сердюковтар, Васильевалар һаман да иректә. Күрәһең, күпте беләләрҙер, юғарылағыларҙы фашлауҙарынан ҡурҡа-

ларҙыр. «Роснефть» етәксеһе Сечиндың көндәлек эш хаҡы 4,5 млн. һум. Бындай хәлдәрҙә ил нисек нығына алһын?

Элек туғандарҙы ҡыуанышып күргә бара инек, хәҙер ҡайғырышып күмергә барабыҙ.

Бер ҡатлы ауыл өйҙәрендә үҫтек, үҙебеҙ ҙә бер ҡатлы булдыҡ. Хәҙер ҡалаларҙа күп ҡатлы йорттарҙа йәшәйбеҙ, тик һаман да күп мәсьәләлә бер ҡатлыбыҙ.

Яҙғанда һәр һүҙгә талапсан булырға тырышаһың. Бигерәк тә шиғырҙа һәр һүҙҙе тейешле урынына ҡуйыу еңел түгел. Әллә шул сәбәпле һүҙ ҡәҙерен белгәнгә, һүҙҙең бәҫен төшөрмәҫкә тырышҡанға хәҙер оҙон һүҙ һөйләге килмәй. Телмәр тоторға мин ғөмүмән яратмайым.

Баҡсала Белинскийҙың тулы баҫмаһы бар. Һәр томы бик ҡалын. Шуның өсөнсөһөн ҡарап ултырҙым. Уҡый башлаһаң, фекер йөрөтөүенә, аҡылына, эрудицияһына иҫең китерлек. Рус әҙәбиәтенең үҙ заманындағы хәлдәрен рус әҙәбиәтенең үҫеш тарихы панорамаһында, шулай уҡ Европа әҙәбиәттәренең шул замандағы һәм боронғо күренештәре менән тығыҙ бәйләнештә ҡарай, ни тиклем ҡыҙыҡлы параллелдәр, тәрән күҙәтеүҙәр... Ундай титандар менән сағыштырһаң, бөгөнгө тәнҡитсе йәки фәйләсүф исемен йөрөткәндәрҙең күпселеге пигмейҙәр, бәһлеүән янындағы кәкре кәрләләр. Ә бит был ҡалын өсөнсө томға ингән хеҙмәттәрен Белинский ни бары бер йыл (!) эсендә яҙған. Ысынлап та, замандаштары әйтмешләй, «неистовый Виссарион»! Хәҙергеләрҙең ижад йөгө тау янындағы уба һымаҡ инде.

3 апрель, 2015 йыл. Йома.

Ижад йорттары һағындырып иҫкә төшә. Ысынлап та, тик ижад менән йәшәү. Бер бүлмәлә бер яңғыҙың. Хатта радио ла юҡ. Телевизор корпусҡа берәү. Уныһы ла коттеждарҙа булманы. Газеталарҙан да айырылып йәшәйһең. Ҡайһы саҡта китапханаға инеп ултыра торғайным. Унда журналдар күп, төрлө йылдарҙа сыҡҡан ҡыҙыҡлы китаптарҙы уҡып, үҙең менән бүлмәңә лә алып була. Переделкино китапханаһында мин хатта Рәми Ғарипов яҙып биргән китапҡа (яңылышмаһам, башҡортса-русса ҙур һүҙлек) юлыҡҡайным.

Ял итергә йөрөргә сыҡһаң да, кешеләр араһында һөйләшеү күберәк ижад тураһында була торғайны. Хәҙер ундай рухи мөхиттe ҡайҙан табаһың, һағынып хәтерләргә генә ҡала. Хәҙер ике әҙип осрашһа, биш ғәйбәтсенән күберәк боҙоҡ һүҙ, яла яғыусы хәбәр

һөйләй. Һүҙ ижад тураһында түгел, ижад тирәһендәге ығы-зығы тураһында.

Бөтөн эштәрҙән азат булып, тик ижад менән булыу тураһында күпме хыялландым. Ниһайәт, ул мөмкинлек тыуҙы. Шуның ҡәҙерен белергә тырышам. Ләкин төрлө осрашыуҙар, тормош мәшәҡәттәре яҙыу өҫтәленән айыра, кәрәк ритмдан сығара.

Алтмышынсы йылдарҙа Рафаэль Сафин «Салбар кейгән ҡыҙҙар эштән ҡайта» тигән шиғыр яҙғайны. Салауат ҡалаһының йәштәре тураһында ине. Ул саҡтарҙа салбар кейгән ҡыҙҙар һирәк ине, күберәге эшселәр араһында. Хәҙер салбар кеймәгән ҡыҙҙар (хатта әбейҙәр) һирәк күренеш. Күлдәк кейеп йөрөгәндәре йөҙгә берәүҙер.

Баҙарҙың төп принцибы, маҡсат-уңышы: һәйбәт һатыла! Хәҙер был ғәҙәт әхлаҡ донъяһына ла күсеп бара: һәйбәт һата, һәйбәт һатыла!

Ҡабаланма, юҡҡа өтәләнмә, әҙәм балаһы! Әжәленде барыбер уҙа алмаҫһың. Ул һине күптән алда көтөп тора.

Мөнәсәбәттәрҙәге иң кәрәкле һүҙ: зинһар! Был хаҡта балалар өсөн рус хикәйәһе лә бар һымаҡ.

1 апрелдә Вәлиди премияһы буйынса конкурс комиссияһы ултырышы үтте. Унлап кеше ине исемлектә. Иң лайыҡлыһы Әхмәт Сөләймәнов тигән ҡарарға килдек. Бик дөрөҫ ҡарар. Бигерәк тә төрөк телендә сыҡҡан башҡорт әҙәбиәте антологиялары бик мөһим баҫмалар.

Аҡмулланы өс халыҡ, Бабичты ике халыҡ үҙенеке һанай. Ҙурҙы ғына шулай тартҡылайҙар, ваҡ-төйәкте, ыбыр-сыбырҙы бүлгеләп булмай. Уларҙан, киреһенсә ҡасырға, ҡотолорға тырышалар.

Бабичтың нигеҙ ташы ла ҡалманы, ҡәбер ташы ла юҡ. Туғандар ҡәберлегендә ята. Ләкин ундай ҡәберлектәрҙә йыш ҡына туғандар менән дошмандар ҙа буталған булып сыға бит.

Илдең нигеҙенең ҡаҡшауы халыҡтағы өмөт-ышаныстың, имандың ҡаҡшауынан башлана.

Зәйнәб апай Биишеваның «Йәнле хәрефтәр»ен бала сағымда мейес яҡтыһында уҡыуым тураһында яҙғайным. З. Биишева фонды «Урал» фонды ярҙамында шул китапты яңынан сығарған. Бүләк иттеләр. Бында һәр хәрефкә ике юл һәм һүрәт. Тәүгеһе «Алма беште татланып, Ашай Марат шатланып». Мин «Аҡбуҙатҡа атланып, Айҙар сапты шатланып» тип, Айҙар улыма үҙгәртеп һөйләнемме икән, шулай иҫтә ҡалған. Китапты яңынан уҡый башлағас, аптырап ҡуйҙым.

6 апрель, 2015 йыл. Дүшәмбе.

«Наш современник»тың ике һанында Александр Прохановтың «Убийство городов» тигән романы. Әле тамамланырға ла уйламаған, ҡайнап торған ваҡиғалар: Украиналағы хәлдәр, Донбастағы һуғыш, Президент менән осрашыу һ.б. Проханов һәр ваҡыт бөгөнгө тормош тураһында яҙа, яу яланының һүнмәгән ҡуҙҙарына баҫып атлай. Беҙҙә бындай яугир әҙиптәр юҡ. Даирәбеҙ тар, ҡыйыулыҡ, уяулыҡ етмәй.

Бөйөктәр ҡайһылай ябай башлаған: Тургенев, «Һунарсы яҙмалары»; Толстой, «Севастополь хикәйәләре». Уйлап сығарылмаған ваҡиғалар, барыһы ла тормошса. Уларҙың тәүге балҡыштары асылда очерктар һымаҡ. Хәҙер ҙә бар ундай хәлдәр: Владимир Солоухин. Ләкин улар ҙа тарихҡа күсте.

Донбаста пьедесталдан танкты төшөрөп, һуғышҡа индергәндәр. Бик символик яңылыҡ бит

Һәйкәлдәрҙәге бөйөктәр! Һәйкәлдәрҙәге шағирҙар, әҙиптәр! Һеҙ ҙә яңынан сафҡа баҫһағыҙ икән! Һеҙ ҙә яңынан ҡыйыу яугирҙәргә әйләнһәгеҙ икән! Шиғыр яҙылды.

Корова у родного порога.

Иртүк тәҙрәнән ҡарағанда ғәжәп матур күренеш ине, ағастар бәҫ селтәр ябынғайны. Күҙ асып йомғансы был матурлыҡ юҡ булды, ҡарлы ямғыр башланды, әкиәт донъяһын бик тиҙ йыуып төшөрҙө. Донъяның күпме йәмдәре бик тиҙ юҡ була. Күреп өлгөрөп ҡал!

7 апрель, 2015 йыл. Шишәмбе.

4-дә элекке «Нефтяник»тың (хәҙер Государственный концертный зал «Башҡортостан») бәләкәй залында Йыл уҡытыусыһын ҡотлауҙа ҡатнаштым. Төрлө номинациялар. Мин башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларынан Йыл уҡытыусыһы исемен алған биш мөғәллимде ҡотланым, «Оноторлоҡ булдымы ни?» тигән китабымды икешәрҙән бүләк иттем: беренсе үҙенә, икенсене – мәктәбенә. Беҙҙә байтаҡ һәйбәт традициялар барлыҡҡа килде. Йыл уҡытыусыһы ярышы – шуларҙың беренсе.

«Аргументы недели» гәзитендә сыҡҡан (19.03.15.) Наил Ғәйетбайҙан алынған интервьюны уҡығандан һуң тыуған ауыр тойғо һаман күңелдән китмәй. Журналистар сенсация эҙләй инде ул: имеш, Яҙыусылар союзы башҡорт телле яҙыусылар өсөн генәме? Имеш, тарихи романдар (Ғ. Ибраһимов, Б. Рафиҡов, Аҫылғужа) милләт-ара ыҙғыш тыуҙыра. Имеш, Совет осоронда тыйылып килгән әҫәрҙәр

Р. Байымовтың, Ғ. Хисамовтың романдары (гәрсә улар совет иле тарҡалғас яҙылды һәм һис бер тотҡарлыҡһыҙ килеп сыҡты) һ.б. яла яғыусы һүҙҙәр. Интервью биргән кешенең материалдары матбуғатҡа сығыр алдынан ҡарап сығыуы – ғәҙәти журналистика этикаһы. Нисек инде Наил Ғәйетбай ошондай мәкерле, провокацион интервьюның донъя күреүенә юл ҡуйған? Уны ғына аңларлыҡ тәжрибәһе бар ҙа инде. Авторҙары кланлыҡҡа ҡаршы сыға һымаҡ, ә был баҫма, киреһенсә, шуға саҡыра.

Эдвард ейәнебеҙҙән хат килде. Хатта курьер үҙе килтереп тапшырҙы. Майҙа Калифорния университетында магистратура бөтөрә, шуға саҡырған. Кисә скайптан һөйләштек. Рәхмәт әйттек, ҡотланыҡ. Бара алмабыҙ, тинек. Бик теләһәк тә, булдырырлыҡ эш түгел. Бикбаев Калифорния университетын тамамлаусы һирәк башҡорттарҙың береһелер, бәлки, тәүгеһелер. Яңы ғына Америкала йөрөп ҡайтмаһаҡ, бәлки уйлар ҙа инек.

Минең «Америка көндәлеге» «Ағиҙел»дең өсөнсө һанында сыҡты. Бик ихлас, яҡты күңел менән яҙылған, үҙебеҙ ҙә йөрөп ҡайтҡандай булдыҡ тиеүселәр байтаҡ. Әле «Бельские просторы»ға әҙерләйем.

Ауылда кеше бер-береһен нығыраҡ белә, шуға һәйбәтерәк аңлай, ҡайһы бер сәйер яҡтарын да әрләп бармай. Ни хәл итәһең, уның холҡо шулай бит, ти. Хәленә керә, кисерә белә. Ауылда мөнәсәбәттәр ихласыраҡ, хатта хәҙер көнсөлләк ныҡ артһа ла. Ҡалала кешеләр бер-береһенә тейә яҙып йөрөһәләр ҙә, күңелдәре бер-береһенән алыҫта, күптәре яттар, сит кешеләр һымаҡ.

Беҙҙең янда – туҡталышта, Тәүәкәндең магазинын астылар. Бәләкәй генә, әммә аҙыҡ-түлеге һәйбәт. Хатта ҡорот та, ҡыҙыл эремсек тә һаталар. Фәриҙә шунда барып ала.

Ишек алдындағы ҙур йортта «Бәхет» тигән магазин эшләй башланы. Әле барып күргәнем юҡ. Хәҙер кешеләрҙең магазиндарҙа бәхетле булғандары бик һирәктер. Хаҡтар ныҡ арта.

11 апрель, 2015 йыл. Шәмбе.

Бала сағымда түбәндә генә аҡҡан болоттарға ҡарап, нисек улар ағас башына йәбешмәйҙәр икән тип һорағанымды Ләйлә еңгәм Сәлимә ейәнсәренә һөйләгән. Болоттарға ҡарап, ишек алдындағы үләндә оҙаҡ ҡарап ята торғайным. Болоттар әллә ниндәй ҡиәфәттәргә кереп ағыла торғайны. Әле дөйә, әле самолет, әле аҡ һаҡаллы бабай һ.б., һ.б. Улар әле лә мине хайран итә.

8-дә ипподром янындағы урманда һыбай ҙа, аттың башын һыйпап та киноға, фотоға төштөм. «Атлы азамат» китабына һәм киноға кәрәк буласаҡ.

9-да «Китеп барған кадрҙар»ҙы – аҡҡан боҙҙарҙы эҙләп Охлебиненоға барҙыҡ. Өфө янында боҙ киткән. Охлебиненола күгәреп ята. Саҡ төшөп еттек. Боҙҙар янында шиғыр уҡырға кәрәк тигәс, барғанда элекке бәләкәй генә шиғырымды иҫкә төшөрҙөм: «Кисә төндә Ағиҙелдең боҙҙары аҡтарылды». Ярай әле иҫкә төштө.

Публицистикаһы, хаттары, көндәлектәре һ.б. аша яҙыусыны яҡынданыраҡ беләһең. Әҙәби әҫәрҙәре аша ул серлерәк, алыҫыраҡ, классик дәрәжәһендә изгеләштерелгән, кешенән юғарыраҡ торған һымаҡ. Хаттарында, көндәлектәрендә һ.б. ул классиктар беҙгә ныҡ яҡына. Пушкин менән дә, Толстой менән дә, Горький менән дә шул уҡ хәл. Беҙҙә Мостай, Рәми көндәлектәре. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, киләсәктә ундай мираҫ бик ҡк булмаҫ һымаҡ. Хәҙер кем хат яҙыша? Хатта мәҡәләләр ҙә һирәк. Күптәрҙең илһамы интернеттағы, бәйләнештәге һ.б. ашыҡ-бошоҡ яҙмаларҙа таралып бөтә. Ундай «ижадтарҙа» талапсанлыҡ тураһында һүҙ алып барыуы ҡыйын. Уларҙың күбеһе – ҡараламалар. Талапсан шағир йәки яҙыусы ҡараламаһын түгел, үҙе камиллыҡ кимәлендә тип һанағанды ғына уҡыусыларға еткерә бит. Ә хәҙер...

Яҙыусылар союзында, бигерәк тә Дәүләт йыйылышында эшләгән йылдарҙа, уҡырға ваҡыт аҙ ҡала торғайны. Документтар, рәсми ҡағыҙҙар һ.б. ташҡынында ҡәләмдәштәрҙе даими уҡып барырға мөмкинлек сикләнде. Был иһә мине әҙәби мөхиттән нисектер алыҫлаштырҙы. Ярар әле үҙемдең ижадҡа ваҡыт бүлә алдым. Шиғырҙар, мәҡәләләр, докладтар, сығыштар күп яҙылды. Хәҙер бөгөнгө әҙәби мөхит менән нығыраҡ бәйләнештәмен. Үҙебеҙҙекеләрҙе лә, Мәскәү яҙыусыларын да уҡып барырға тырышам.

«ЛГ», «ЛР», «Наш современник» һ.б. хәҙерге хәлдәр, ельцинизмдан ҡотолоу тураһында туранан-тура яҙа башланы. Минең өсөн былар бер ҙә яңылыҡ түгел. Мин ул «тарихи үҙгәрештәрҙе» бер ҡасан да хупламаным, уларҙы тәнҡитләп күп яҙҙым. «Баҙар балтаһы», «Башһыҙ һыбайлы», «Система», «Барокамера», «Хазина» тигән поэмаларым, күпме шиғырҙарым, публицистикам нәҡ шул тәнҡит рухында бит. Шуға күрә хәҙерге бик объектив, принципиаль тәнҡиттәр минең өсөн күптән үтелгән кисерештәр. Дөйөм фекерҙең шуға килерен, күптәрҙең күҙе асыла башларын мин күптән һиҙә, тойомлай инем.

Спартак Ильясовтың «Биғылый» романын уҡып бөтөрҙөм. Бик бай материал. Автор күп белә, кешене, тәбиғәтте ныҡ аңлай. Тик яңынан ҡарап сыҡһын ине. Ҡайһы бер урындар артыҡ натуралистик һымаҡ. Һөйләү ҙә артыҡ оҙонға һуҙылып китә. Үҙе менән һөйләшермен, һорашырмын әле.

«Ағиҙел»дең өсөнсө һанында Гүзәл Ситдиҡованың шиғырҙары һәйбәт. Тормошсан, кешесә. Үҙенә шылтыратырға кәрәк.

Радик Килмәмәтов минең хаҡтағы киноның режиссеры ла, операторы ла. Сценарийҙы Сәлимә һеңлем яҙа. Ветеран, яугир ҡәләмдәштәр менән кадрҙар кәрәк, ти Радик. Быны мотлаҡ эшләргә кәрәк. Тик яугир ҡәләмдәш ағайҙар өсәү генә ҡалды, ахыры. Элек байрам табынына йыйһаҡ, табында урын еткереүе ҡыйын була торғайны. Һуғыш малайҙары беҙ ҙә бөгөн бабайҙарға, әҙәбиәтебеҙҙең аҡһаҡалдарына әйләнгәс, яугир ағайҙарҙың һирәк ҡалыуы ғәжәп хәл түгел. Бөйөк Еңеүҙән һуң 70 йыл йәшәү – кешенең тотош оҙон ғүмере! – фронтовиктарҙың һуғыштан иҫән ҡайтыуы һымаҡ бик ҙур бәхет бит.

Былай түгел инек кисә:
Ир – ҡамғаҡ, бисә – билсән.

15 апрель, 2015 йыл. Шишәмбе.

Кисә көнөм шатлыҡлы булды. Иртәнге туғыҙҙан рентгендан тештең һүрәтен алдырып сыҡһам, Дәүләт йыйылышынан беҙҙең комитеттың секретары Алия шылтырата. Унда ремонт бара икән, хәҙерге комитет рәисе Эльвира Айытҡолованың бүлмәһенән әйберҙәрҙе күсергәндә алты төргәк «Хәҙистәр» («303 хадиса») килеп сыҡҡан. Инеп сыҡтым, күрҙем. «303 хәҙис» китабым бөтөп бара ине, шуға хафаланғайным. Уларҙың табылыуы бик һәйбәт, Аллаһы тәғәлә үҙе бүләк иткәндәй.

Унан сығып, автобусҡа ултырыуым булды, Радик Килмәмәтов шылтырата, Ағиҙелдә боҙ аға тип. Тәүге туҡталышта уҡ – Дуҫлыҡ монументында төшөп ҡалдым. Радик күп кадрҙар эшләне. Китеп барған күренештәрҙе ярай әле тотоп ҡалдыҡ.

Төштән һуң теш врачына киттем. Уның эше бик күп буласаҡ, шулай ҙа ныҡлап башланыуы мөһим.

Ике төрлө теләк тыуҙы. Беренсенән, малай сағымдан бөгөнгө бабай сағыма ҡарарға. Икенсенән, бабай ҡарашым менән бәләкәй генә

ҡара малай сағымды күргә. Атайһыҙ ҡалған малай бәхетлерәк булыр ине, алда тотош ғүмер, йәшәләсәк күпме йылдар бит! Әммә ошо йәшкә иҫән-һау килеп еткәс, бабай ҙа бик үк бәхетһеҙ түгел бит. Аллаға шөкөр.

«Натворить и сотворить», көнөнә ике тапҡыр ваҡытты дөрөҫ күрһәтеүсе сәғәт («ЛГ» – лағы мәҡәләләрҙән ҡыҙыҡ деталдәр).

Больницала врачҡа инергә көткәндә йәштәргә ҡыҙыҡһынып ҡарап ултырам, әллә нисек үҙҙәренсә сәйер кейенәләр һымаҡ. Беҙгә генә шулай күренә бит ул. Йәштәр башҡаларҙы бик үк күреп тә бармай, тиҫтерҙәрен күрә. Уларса булһа, уларҙан ҡалышмаһа, шул еткән. Йәш кеше өсөн төп талап бына шул.

Хәйер, һәр быуын ошо талап менән йәшәй бит.

Хоҡуҡ һәм бурыс тураһындағы бәхәстәр. Минеңсә, бурыс мөһимерәк, ул алданыраҡ барлыҡҡа килгән. Тәүтормош йәмғиәтендә иң элек ауыр эш – аҙыҡ табыу, һунарға йөрөү, ашарлыҡ үҫемлектәр йыйыу бурысы торған. Аҙыҡһыҙ кешенең үлергә генә хоҡуғы бар. Хеҙмәткә хоҡуҡ булып та, хеҙмәтең үҙе юҡ икән, унан ни мәғәнә? Хәҙерге күпме кешеләр эшләмәйенсә генә хоҡуҡтар даулай. Шул уҡ ваҡытта эшләргә теләһәләр ҙә, күпме кеше эшһеҙ.

Совет заманында эшһеҙлек булманы, тунеядец хөкөм ителде. Аҙ түләүле булһа ла, һәр кем эш менән тәьмин ителде. Хәҙер тир түкмәйенсә байырға хыялланыусы әрәм тамаҡтар заманы.

3 май, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

18 апрелдә Күгәрсен районының Күгәрсен ауылында Мәжит ағай Рафиҡовтың 90 йыллығына арналған хәтер кисәһендә булдыҡ: Зөфәр Вәлит, Рәмил Йәнбәк, Лариса Абдуллина. Венер Фәттәхов үҙенең машинаһында алып барҙы. Шул ауылдан сыҡҡан Айҙар Маннапов та ҡайтҡайны, китабын бүләк итте. Кисә юғары кимәлдә үтте, район хакимиәте башлығы Фәрит Мусин үҙе ҡатнашты. Күгәрсен районында күп булһам да, был ауылда тәүге тапҡырмын.

Бер яҡтылыҡ йылы үткәс, яҡтылыҡ тиҙлегендә был яҡты донъяларға бәлки әйләнеп ҡайтырбыҙ әле.

«Америка көндәлеге»н «Ватандаш»та русса эшләтеп алғайным. Азамат та ҡарап сыҡҡайны. Ашығыс эшләнгән. Фәриҙә менән яңынан бик ентекләп ҡараныҡ, төҙәтмәләр күп булды. «Бельские просторы»ға ашығыбыраҡ биргәнмен. Горюхинға яңы редакцияланған вариантын алып барырмын тип шылтыраттым.

«Атлы азамат» менән дә эш туҡтабыраҡ тора. Хаталары бар, байрамдан һуң комбинатта төҙәтербеҙ.

Бишенсе көн баҡсалабыҙ. Бында бер ваҡытта ла эш бөтмәй. Кисә Ырымбурҙан Зөлхизә һеңлем килде. Фәриҙәгә ныҡ ярҙам итә. Мин дә аҙ-маҙ ҡыбырлаған булам.

Килгән булам әле атлап,
Көндәрем тора ҡаранан-аҡтан,
Аҡыллынан – ахмаҡтан,
Хаҡтан – нахаҡтан.

Арытҡан. Уҡығы ла, яҙғы ла килмәй. Алыҫ китеп булмай арыҡ атта. Нимә көтәһең һикһәнгә етеп килгән ҡарттан? Йылдар һөйрәлеп килә арттан.

10 май, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

Еңеүҙең 70 йыллығы бығаса булмаған тантана, киң ҡолас менән үтте. Өфөлә бындай парадты күргәнем юҡ ине, булғаны ла юҡ ине. «Үлемһеҙ полк» акцияһы бик һәйбәт уйланылған. Йәштәрҙе тәрбиәләү тураһында, ниһәйәт, хәстәрләй башланылар. Ныҡлы традицияға әйләнһен ине.

Парадта ҡатнашыусы хәрбиҙәр бик ныҡ әҙерләнгән. Атай-олатайҙарының рәсемдәрен тотоп 15 мең кеше үтте. Кемгә нисектер, миңә был тантаналар бик ныҡ тәьҫир итте. Күҙгә йәш килде, тамаҡты быуып алды. Ниндәй матур сафтар, һуғыш уты тоҡана ҡалһа, улар барыһы ла ҡыйрала, һәләк була бит.

Байрамға беҙҙә лә, Мәскәүҙә лә бик ныҡ әҙерләнгәндәр. Өфөлә иртәнән үк ямғыр яуа башланы. Ямғырҙан һаҡланыр өсөн япмалар, аҫҡа һалып ултырырға әҙерләнгән әйбер тараттылар. Беҙ ярар ҡапланып ултырҙыҡ, ә һалдаттар күпме ваҡыт ҡымшанмай ямғыр аҫтында торҙо бит. Бигерәк тә еңел кейенгән барабансы ҡыҙҙар ныҡ өшөгәндер.

7-дә Милли музейҙа фотокүргәҙмәне асыуҙа ҡатнаштым, интервью бирҙем. 8-дә Матросов һәйкәле янында шиғыр байрамы булырға тейеш ине. Ямғырҙа замыкание булғас, унан микрофонды алғандар. Аҫтараҡ фонтан янында матур сәхнә эшләнгән, унда концерт бара. Тик ямғыр яуа, халыҡ юҡ. Беҙҙең шағирҙарҙан 20-нән артыҡ кеше килгән. Алып барыусылар Лариса Абдуллина менән Айгиз Баймөхәмәтов хәрби кейемдә, килешеп тора.

БДПУ-нан йәштәр килгәйне. Шулар алдында ямғырҙан һаҡланырға ҡаролған япма аҫтына йыйылып ҡыҫҡаса булһа ла шиғри осрашыу үткәрҙек. Бик нык әҙерләнгәйнеләр Киров районы етәкселәре. Ямғыр матур сараларҙы әрәм итте.

7-дә лә, 8-дә лә Радик Килмәмәтов байтаҡ кадрҙар эшләне. Хатта беҙҙең яндағы скверҙа ла байтаҡ күренеш – кадрҙар төшөрҙө. Шулай ҙа был фильм тураһында нык борсолам, бигерәк тә тыуған яҡтарға ҡайтыу нисегерәк булыр? Унда аралашыр, һөйләшер, фильмға индереҙәй кешеләр хәҙер юҡ тиерлек.

Ямғыр яуғандағы шиғри сығыштар фронт шарттарында блиндаждағы һымаҡ булды.

Правнуки победы. Шундай хәрәкәт нығынып килгәндәй. Ә бына беҙҙең быуын – һуғыш балалары.

Хәтер һәм хыял – кешенең ике ҡанаты. Икеһенең береһе булмаһа, осоп булмай. Илдә ошоларҙың нығына барыуы ҡыуандыра. Тик туҡтап ҡалмаһын ине.

Беҙҙең Ғәбдрәфиҡтә һуғыш ветерандарынан Зөфәр Аюҡасов ағай бер үҙе ҡалғайны. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына ике-өс көн генә ҡалғас, ул да вафат булып ҡуйған.

«Ауылымдың һуңғы яугиры» – бәлки ошондайыраҡ шиғыр яҙылыр.

11 май, 2015 йыл. Дүшәмбе.

Ял дауам итә. Бөгөн өсөнсө көн. Һаман һыуыҡ, ҡайһы бер урындарҙа төндә минусҡа төшөп китә. Силәбе яҡтарында буранлап ҡар яуған.

Кисә баҡсаға килгәндә өй нык һыуынғайны, газды күберәк ҡуйып, саҡ йылыттыҡ. Был һалҡында мунсаға ла барғы килмәне. Бөгөн тағы ла яғабыҙ.

Иртән һибәләп торһа ла, мәктәп янында бер сәғәтләп йөрөп ингәйнем. Баҡсаға килгәс, яуманы. Әле һауала ярым ай балҡып тора.

Ямғырҙа ҡойоноп, парад үткәргәндә Мостай ағайҙың фронтта яҙылған, «Яуһын әйҙә!» тип бөткән шиғыры иҫтә төштө. Байрамдарға ҡамасаулаһа ла, был ямғырҙар яуһын әйҙә! Баҫыуҙарҙа эштәр тотҡарлана, әлбиттә. Уның ҡарауы, ер дымға туйына, һыуыҡтар бөжәктәрҙе лә бөтөрәлер. Байрамдар ҙа кәрәк, әммә иң мөһиме – йыл бәрәкәтле килһен.

Өфө Еңеү өсөн бик күп биргән. Күпме заводтар бында күсеп килгән. Дивизиялар ойоштороlған. Башҡортостандан һуғышҡа

киткән 700 меңдән артыҡ кешенең яртыһы кире ҡайтмаған. Батырлыҡ символына әйләнгән Александр Матросовтың Өфөнән һуғышҡа китеүе, асылда Учалы ерендә тыуған башҡорт Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов булыуы, үҙе үк беҙҙең өсөн ниндәй ғорурлыҡ! Ул әле лә Өфөлә ғорур баҫып тора. Ике һәйкәлдә һынланған.

Бөйөк Еңеүгә килтергән яу ҡаһарманлығы, тылдағы хеҙмәт ҡаһарманлығы. Былар, әлбиттә, төп көстәр, төп таяныстар. Ләкин ижад ҡаһарманлығын да оноторға ярамай. «Вставай, страна огромная!», «Катюша», «Землянка» һымаҡ йырҙар, «Жди меня» һымаҡ шиғырҙар, яҙыусыларҙың публицистик һүҙҙәре булмаһа, Еңеүгә килеүе лә ҡатмарлыраҡ булыр ине.

Рәшит Ниғмәтиҙең поэмаларын 112-се Башҡорт атлылар дивизияһында Зәйтүнә Бикбулатова уҡығанда яугирҙәрҙә ҡаһарманлыҡ рухының нисек нығыраҡ ҡанатланып киткәне хаҡында замандаштары үҙҙәре әйтеп ҡалдырған бит. Матросовтарҙың, Зоя Космодемьянская, йәш гвардеецтар һ.б. барыһы ла һүҙ аша халыҡҡа еткерелгән, тоғролоҡ, батырлыҡ үрнәгенә әйләнгән.

Ғөмүмән, матди ҡеүәткә рухиәт өҫтәлмәһә, Еңеү мөмкин дә булмаҫ ине. Совет мәктәбе 20–30-сы йылдарҙа тәрбиәләгән илһөйәрҙәр, ысын патриоттар еңеүселәргә әйләнгән бит. Бына шундай көслө тәрбиә һәм белем системаһы беҙҙең күҙ алдында емерелһен әле! Илдең матди байлығы, хәрби ҡеүәте генә түгел, рухи хазиналары урланылды. Иң фажиғәлеһе бына шул юғалтыу. Матди көс тергеҙелгәндә лә рухи ныҡлыҡты ҡайтарыуы бик күпкә ҡатмарлыраҡ. Илде тарҡатыу күңелдәрҙе тарҡатыуҙан башланды.

Бөйөк Ватан һуғышы бөтә илебеҙ өсөн, һәр совет кешеһе өсөн бик ҙур һынау булды. Беҙҙең рухи ныҡлыҡҡа, әхлаҡи көсөбөҙгә, берҙәмлеккә һынау булды. Ул һынау һаман да дауам итә. Әгәр Еңеүҙең 70 йыллығында халыҡ ошолай берҙәм туплана ала икән, тимәк, таянырлыҡ нигеҙебеҙ бар. Һәйбәт традицияларҙы яңыртырға, нығытырға кәрәк.

Еңеү көнөндә ҡаланың почетлы граждандары йыйылыр алдынан беҙҙең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙерләнгән «История Уфы» китабын ҡарап ултырҙым. Бик күп иҫтәлектәр яңынан терелде. Беҙ хәҙерге Өфөнө барлыҡҡа килтереүселәр ҙә бит. Хаҡлы ғорурлана алабыҙ.

«Истоки»ҙа «Брось мышку! Возьми книжку!» тигән һүҙҙәр уҡыным. Бик дөрөҫ кәңәш. Әммә кәңәш менән генә үҙгәртеп булмай,

һүҙ эшкә әйләнһен ине. Әле бына районда буйлап шиғри марафон бара. Халыҡты китапҡа ылыҡтырыу буйынса уның да файҙаһы булыр. Ләкин марафон еңеү билдәһе бит. Һәләк булып йығылғанда ла еңеү хәбәрен килтереп йығылырға ине!

Ниңә һуң мин зарланырға тейеш?
Ниңә һуң мин ярлы булайым ти?
Зарланырға түгел,
Ғорурланырға тейешмен.
Исемем дә Бикбай!
Есемем дә бик бай!
Туғайҙарым бар, турғайҙарым бар,
Карҙарым бар, ҡарғаларым бар,
Коштарым бар, ҡыштарым бар.
Йәйҙәрем бар, йәйрәп ятҡан
Йәйләр йәйләүҙәрем бар.
Һыуҙарым бар,
Һыуырҙарым бар, һуйырҙарым бар.
Күктәрем бар, кәкүктәрем бар,
Кырҙарым бар, йырҙарым бар,
Ниңә һуң мин ярлы булайым ти,
Куштандарым бар, дошмандарым бар,
Сөйәлле устарым бар,
Тоғро дуҫтарым бар.

18 май, 2015 йыл. Дүшәмбе.

Атаҡлы Ебәк юлы. Ебәк менән генә түшәлмәгән. Күпме ҡорбандар, фажиғәләр, кеше һөйәктәре менән һалынған.

11 майҙа баҡсала урамдарҙы урап сыҡтым. Яҡында кәкүк саҡыра. 5–6 тапҡыр ғына өндәшә. Шуныңсаға ла рәхмәт, шуларын ҡыуанып йәшәргә булһын.

Ямғыр ҙа ямғыр, сәсергә бирмәй. Ил игенһеҙ ҡалмаһын.

Был ял баҡсаға барманыҡ. Ул яҡта бигерәк нык яуа.

9 майҙа – Еңеү көнөндә Мәскәү күгендә самолеттарҙан атып болоттарҙы тарҡатҡайнылар. Әллә Аллаһы тәғәлә киҫәтәме: «Мин ебәргән бөтә болоттарҙы ла тарҡатып ҡарағыҙ әле!»

Театрға йөрөп алдыҡ. Зөлхизә туғаныма театр күрһәтәбеҙ тип, үҙебеҙ ҙә күреп ҡалдыҡ. «Ҡара юрға», «Ҡара йөҙҙәр» – һәр береһендә

үҙенсә табыштар бар. Режиссерҙар ныҡ эшләгән. «Ҡара юрға» – тәүге мюзикл, тик ҡатнашыусылар артыҡ күп, байтағы нагрузкаһыҙ. Автор Таңсулпан Ғарипова ла килгәйне. Ложала бергә ҡараныҡ. Әҙәби яҡтан әллә ни асыш булмаған әҫәрҙе лә режиссер ныҡ көсәйтә ала, сәхнәләге асышҡа әйләндерә. Был ике спектаклде ҡарағанда шулар хаҡында нығыраҡ уйландырҙы.

Туй толпарын егер саҡтар үткән,
Катафалка көтөр саҡтар еткән,
Шул арбала китер саҡтар еткән...

Фильмға индерергә шиғырҙар һайлайым. Күп булып китә. Руссаға әйләндереп алаһылары ла бар.

14-дә БДУ-ла әҙәби саралар. Исеме, әлбиттә, бик олпат: «“Культура народов Башкортостана в контексте евразийской цивилизации: история, современность, перспективы”. Международная научно-практическая конференция, посвященная 25-летию факультета башкирской филологии и журналистики БГУ и 70-летию Победы в ВОВ, году Литературы». Ҡолас бик киң йәйелгән, әммә һөҙөмтә ул тиклем үк түгел.

Төшкә тиклем пленар ултырыш, төштән һуң симпозиум тип ҡуйылған. Программала ике өлөштә лә минең сығыш ҡуйылһа ла, Бабичҡа арналған икенсе бүлегендә генә булдым. Доклад һөйләнем. Халыҡ-ара тиелгәс, русса ла әҙерләнгәйнем. Башҡортса һөйләнем. Бөйөк башҡорт шағиры Бабич тураһында һөйләшергә йыйылғанбыҙ бит.

Симпозиумда егермеләп доклад ҡуйылһа ла, Таңсулпан Бабичева, Марат Ҡолшәрипов, мин сығыш яһаныҡ, Ҡәҙим Аралбай шиғыр уҡыны. Дүрт секция ҡуйылған, улары ла программа ҡағыҙында ғына, секциялар бөтөнләй эшләмәне. Зал да шыйыҡ булды.

Әлбиттә, студенттар өсөн дә, уҡытыусылар өсөн дә бик тығыҙ ваҡыт. Ентекләп һөйләшер өсөн бик үк уңайлы ваҡыт түгел, ШОС арҡаһында һынауҙарҙы алға күсергәндәр.

Конференция материалдарын туплап, бик тос йыйынтыҡ сығарғандар, шуныһы һәйбәт. Был китап хәҙерге әҙәбиәт ғилеменә, бигерәк тә Бабич ижадын өйрәнеү өсөн әһәмиәтле буласаҡ.

Таңсулпан Бабичева беҙҙең сәхнә йондоҙо ғына түгел, сәнғәт академияһы профессоры булараҡ та ҙур эштәр алып бара. Шиғри

театрҙың беҙҙә булғаны юҡ ине, әле Бабичева уны үҫтерә башланы. Әле Бабич буйынса бик матур спектакль әҙерләп килтергән, үҙенең студенттары һәләтле йәштәр икән. «Ғазазил»ды – бик ҡатмарлы әҫәрҙе тағы ла тәрәнерәк аңлатҡан. Әле башҡорт зыялыларын тулыһынса тиерлек ҡырып бөтөргән 1937 йылғы сәйәси террор хаҡында 6–7 сериянан торған (һәр береһе 50-шәр минут) фильм уйы менән йәшәйҙәр, шуның аннотацияһы рәүешендә эшләнгән ролик күрһәттеләр. Грантҡа күрһәтеп ҡарағандар, әлегә үтмәгән. Конференция тәҡдимдәренә индерергә кәрәклеген бер тауыштан яҡланылар. Таңсулпан әҙерләгән шиғри спектакль, йәштәрҙең уйыны миңә ныҡ тәьҫир итте. Минең монографиянан байтаҡ өлөштәр был тамашаның тексына инеп киткән икән, бик һәйбәт. Тимәк, бушҡа тырышмағанмын.

Ниһайәт, «Атлы азамат»ҡа баҫырға ҡул ҡуйылды. Ярар корректорға – Рәмзиәгә уҡырға биргәндәр – байтаҡ хаталар киткән. Үҙем ентекле генә ҡараған һымаҡ инем, тик профессионалдың күҙе башҡасараҡ күрә шул.

2 июндә тыуған яҡтарға юлға сығабыҙ. Тәүге көн Көйөргәҙелә: Ҡалта, Кинйә, Яҡшымбәт. Шунан Ғәбдрәфиҡ, Ҡунаҡбай, Аҡбулаҡ, Ырымбур. 6-да Пушкин көнө, 7-дә Ҡарғалыла Рәсәй һабантуйы.

Хәтер һиҙгерләнә бара. Нимә генә уйлай башлаһаң да, уй тиҙ генә өркә, онотола ла ҡуя. Шуны хәтер насарайыуы тигән булабыҙ. Бәлки хәтер хәтерләп туйғандыр. Ҡолаҡтың ҡатыуы, күҙең насарыраҡ күрә барыуы бәлки ишетеп, күреп туйыуҙандыр. Ҡайһы саҡта үҙеңде шулай ҙа йыуатып ҡуяһың. Әҙәм балаһы гел генә яҡшыны ишетеп, күреп, тик матурлыҡтарҙы хәтерләп йәшәһә, бәлки улай ҙа булмаҫ ине.

Гөлшат Әхмәтҡужинаның «Башҡортостан»да «Ер кешеһе яҡлауға мохтаж» тигән һәйбәт мәҡәләһе сыҡты. Бик белеп, кисереп яҙа. Шылтыратырға кәрәк. «Ағиҙел»дең өсөнсө һанында Гүзәл Ситдиҡованың матур шиғырҙары баҫылғайны. Һаман үҙе менән һөйләшә алмайым. Яҡшы һүҙҙе яҡшы кешегә ваҡытында әйтеп өлгөрөргә кәрәк. Был яҡтан беҙ йыш ҡына вайымһыҙ, хатта ғәмһеҙ булабыҙ.

Эргәләге скверҙа ҡайындарҙы йыҡҡандар, киҫеп, өйөм-өйөм һалып ҡуйғандар. Ауырыйҙар икән. Бик күңелһеҙ ҡарауы. Ағастарҙың да яҙмыштары төрлө. Бындағы бик матур ҡайынлыҡта бөтөнләй бер ағас та ҡалманы, киҫеп бөттөләр. Ул ҡайынлыҡтар икәү ине. Береһе – юҡ, икенсеһе менән нимә булыр? Ошо скверҙы булдырған Рутто

тигән кешенең исеме ошондағы йыуан бағанаға яҙып ҡуйылған. Унда төрлө хайуандар һырып эшләнгән. Кеше ижад иткән ошо матурлыҡ һәләк булырмы ни?

19 май, 2015 йыл. Шишәмбе.

Шәмбе көн ике туғаным Лена Ҡөрьән ашына йыйып алды. Туғандар менән осрашыу күңелдә күп нәмәләрҙе яңырта, ышаныс-өмөт арта. Шул уҡ ваҡытта күмәкләп ҡартая барыуыбыҙ йөрәкте һыҙлата.

Ҡөрьән аштары, ҡорбан аштары...
Күпме байрам үткәргәндәр,
Ҡорбан итеп кеше баштарын.

Йөрәгемдән йырауҙарҙы
Алдың һурып.
Хәҙер инде йәшәүҙәрем
Урыҡ-һурыҡ.

Быуындар алмашыныуы. Күсәгилешлекте һаҡлау һәр саҡ ҡатмарлы. Ҡыйралыштар, өҙөклөктәр. Бигерәк тә ижад донъяһында.

21 май, 2015 йыл. Кесаҙна.

Арыу ғына йәшәгәндә
Килде талсығыу, арыу.
Ихлас хәстәр, ихлас хистәр –
Барыһы иҫкергән дарыу.

Айрат кейәү вафат булғандан һуң Рәмилә һеңле лә, микроинфаркт булып, 21-се дауаханала ята. Бер төндө телефонында «Айрат. Папа.» тигән СМС яҙыуын күреп аптыраған. Уның телефоны янында Айраттың телефоны ята икән.

Уныһы әле ярар, берәй мәкерле бәндә ундай яҙыуҙы ебәрергә лә мөмкин, ти. Ә бына икенсе хәл бигерәк серле. Ҡыҙҙары Эльвираның төшөнә Айрат ингән, күкрәгемде нимәлер бик ҡыҫа тип әйткән. Ул: «Әгәр үлһәм, ҡәберемә бер ниндәй ҙә сәскә һалмағыҙ, ысынын да, ҡағыҙын да» тип әйтеп ҡалдырған. Элекке ҡатыны ҡайтҡан, ул сәскә һалманымы икән тип уйлап, зыяратҡа барһалар, Айраттың ҡәбере өҫтөндә ике ысын, ике ҡағыҙ сәскә ята икән. Мөғжизә.

Был арала мистикаға йыш юлығам әле. «Аргументы недели» гәзитендә «Легенда о машине времени» тигән мәҡәлә баҫылған. Жюль Верн да, Герберт Уэллс та киләсәк дәүерҙә булып ҡайтҡандар, имеш. Шуға ла улар яҙғанда фантастика булып күренгән бик күп хәлдәр (хатта атом бомбаһы, компьютер һ.б.) ваҡыт үтеү менән ысынбарлыҡҡа әйләнгән. Бындай тап килеүҙәр юҡтан ғына булмай. Ирекһеҙҙән ниндәйҙер бик серле бәйләнештәрҙең барлығына ышанырға тура килә.

27 май, 2015 йыл. Шаршамбы.

23-дә шәмбе Мәләүез яҡтарына барып әйләндек, Динис Бүләковтың иҫтәлегенә арналған сараларҙа ҡатнаштыҡ: һәйкәле янында сығыш, һәләк булған яугирҙәргә ҡуйылған стела янында «Почтальон малай»ҙы уҡыным. Мәктәптә Динис әҫәрҙәре буйынса балалар эшләгән бик матур рәсемдәрҙең күргәҙмәһе, музейҙа булыу, шунан һуң мәҙәниәт йортонда халыҡ менән осрашыу. Яҙыусыларҙан Ғәлим Хисамов, Мәрйәм Кусмаева, мин, Динистең ҡыҙҙары, Мәләүез ҡоролтайы етәксеһе Юнир Аҙнағолов һ.б. Балалар бик һәйбәт сығыш яһаны, һәләтлеләр. Төшкө аштан һуң ҡуҙғалдыҡ, Ғәлим Хисамов алып ҡайтты. Баҡсаға алып барҙы. Төндә ҡотороп яуҙы.

Көн йылынғас, тиҙ киптерә. Йәкшәмбе, дүшәмбе электросалғым менән үлән саптым, баҡсаның «еткән сәсен» алдым. Матурайып китте. Гел бында йәшәһәм, бик күп эш эшләнер ине.

Иртән иртүк салт аяҙ, зәңгәр күккә ҡараһам, ул киҫелгән быяла һымаҡ. Аҡ эҙ ҡалдырып, самолет осоп үткән. Рәми ағайҙың шифғыры иҫкә төштө.

Кисә яңы китабымды ҡулға алып ҡыуандым. «Атлы азамат» бына килеп тә сыҡты. Иртәгә тиражын барып алмаҡсымын. Ун ҡумта.

Һандарҙы радионан дөрөҫ һөйләмәйҙәр, берәрешәр, унарышар түгел, берәр, унар. Әлбиттә, икешәр, алтышар, етешәр һ.б. Һүҙ тартынҡыға бөтһә «әр» өҫтәлә, һуҙынҡыға – шәр. Һәр хәлдә, мин шулай тип беләм.

Шифырҙарҙан ҡасыбыраҡ торам. Хәйер, форсат та юҡ. Булһа ла, һыуынып алырға кәрәк.

Аҫылғужа тураһында әҙерләнгән радиотапшырыуға телефондан һүҙҙәремде яҙып алғайнылар. Мин тыңлай алманым, ҡатыны Миңниса рәхмәт әйтеп шылтырата. Аҫылғужа асылып бөтә алманы. Вафат булды, күпме эштәре ҡалды, тиҙәр. Ҡайһы саҡта хөрмәт йөҙөнән әйтәләр.

Гәрсә эш ҡыйратырлыҡ булмаһа ла. Ә бына Аҫылғужа Баһумановтың ысынлап та, күпме эштәре эшләнмәй ҡалды.

Ни тиклем ауыр болоттарҙың (миллиондар тонналап һыу) ергә ҡапыл аумайынса күктә күсеп йөрөүенә ғәжәпләнеп шиғыр яҙғаным да бар. Көслө ямғырҙарҙа әле лә ғәжәпләнәм. Үткән аҙнала борсаҡ яуҙы, беҙҙең тирәлә ап-аҡ итеп түшәп һалды. Ҡала үҙгенә барһам, унда ҡоп-ҡоро.

Болот көйө ауҙармай,
Тамсылап ҡына һибә.
Донъя харап булыр ине.
Ҡолап төшһә күктән болот.
Боҙ киҫәге булып төшмәй,
Яуа ҡар бөртөгө булып.

Инде нисәнсе ай теш табибына – Альберт Аҙнағоловҡа йөрөйөм. Кисә дүрт сәғәт (!) булдым. Тыныс ҡына эшләргә лә телефоны йә башҡаһы ҡамасаулай.

Йәне осоп киткәс, кешенән йәшәгән йорто, уны йөрөткән тәне ҡала. Был йортта һәйбәт кеше йәшәне тип әйтерлек булһын, был тәндә һәйбәт йән йәшәне тип әйтерлек булһын. Өй ҙә йәтим ҡала, йәндең ваҡытлыса өйө тән дә йәтим ҡала.

«Башҡортостан» редакцияһында бөгөн түңәрәк өҫтәл була. Улар Силәбе өлкәһенә китаптар йыялар. Үҙемдекеләрҙе, башҡаларҙы бер ҡумтаға йыйҙым. Бик ауыр күтәрерлек түгел.

Китапханамды барлай башлаһам, күпме иҫтәлектәр, яңынан ҡарайһы китаптар... Архивымды тәртипкә килтерер өсөн дә ваҡыт күп кәрәк буласаҡ. Быйыл йәй эшләрмен, алла бирһә.

28 май, 2015 йыл. Кесаҙна.

Яңыраҡ Ғилман Ишкининдың «Мин, бәлки, урап та килмәҫмен» тигән шиғырҙар китабын уҡыным. Әле лә ҡулға алғылайым. Был китапты төҙөп сығарып, Азамат Юлдашбаев бик изге эш эшләгән. Ғилмандың иң тулы асылғаны ошо китап түгелме икән? Үҙенсәлекле шағир, ҙур шағир. Уның хаҡында, ғөмүмән, шул йүнәлештәге шиғриәт тураһында ныҡлы ғына өйрәнеп яҙғы ла килә. Әйтер һүҙем дә бар, мөнәсәбәтем дә үҙемсә. Ләкин хәҙер башҡаларҙың кисерештәренән дә бигерәк үҙемдең кисерештәрем, үҙ яҙмышым тураһында яҙып өлгөрөп булмай.

Мин ҡайһы саҡта үҙемде хоккейҙағы йәки футболдағы вратарға – ҡапҡасыға оҡшатам. Күп ваҡиғалар минән ситтә бара, тик голдар барыбер минең ҡапҡаға килеп инә.

Уйын бара. Уяу ҡарап торам.
Һаҡсы һымаҡ. Ҡатнашмайым әммә.
Тик һөжүмдең тимер шайбалары
Йөрәгемә голдай килеп бәрә.

Кеше маймылдан сыҡҡан тип раҫлаусы дарвинизмға ҡаршы мин антидарвинизмды раҫлайым: кеше маймылға әйләнә. Аллаһы тарафынан тыуҙырылған мөғжизә кеше – мәсхәрәгә әйләнә. Күпме кешеләр бөгөн маймыл булып йәшәй.

Йәшәү өсөн тәбиғи көрәш емерелә, йәшәү өсөн һуйыш-талаш өҫтөнлөк итә. Яйлап үҙгәрмәй, күп нәмә ҡапыл емерелә. Эволюция артта ҡала, революциялар кешенең кешелеген юҡҡа сығара. «Антидарвинизм» тигән шифыр.

Йәшәү өсөн көрәш, көслө көсһөҙҙө талай, йота һ.б. Хәҙер таланырлыҡтар ҙа ҡалмай башланы, барыһы ла таралып бөтөп бара.

Бөтә донъяны тип әйтә алмам, әммә Рәсәйҙе ҡараҡтар һәм ҡасаҡтар баҫып алды. Мәктәптәр кәмей, пропорциональ рәүештә енәйәт арта, наҙанлыҡ арта. Бер губернатор урлаған миллиард һумдар шул өлкәләге ябылған бәләкәй мәктәптәрҙең барыһын да йәшәтергә етер ине. Урланған аҡсаларҙың күләме шаҡ ҡатырлыҡ. Ярар, былары билдәле, ти. Әгәр асылмаған шундай енәйәттәрҙе ил буйынса күҙ алдына килтерергә тырышһаң, аҡыл етмәҫлек! Илде талаусылар (олигархтары, губернаторҙары, нигеҙҙәрҙе емереүсе дошман ватандаштарыбыҙ) барыһы ла Рәсәйҙе упҡынға осормаҡсы. Эштәр былай барһа, маҡсаттарына ирешмәҫтәр тимә. Граждандар һуғышы осоронда асыҡтан-асыҡ блокадала алған һәләкәттән кәм түгел бөгөнгө хәлдәребеҙ!

Караҡтар һәм ҡасаҡтар
Алҡымдан аласаҡтар.
Был донъяны кем һаҡлар,
Иҙелгәнде кем яҡлар?

«Башҡортостан» гәзитендә быйылғы әҙәбиәт йылы буйынса түңәрәк өҫтәл үтте. Наил Ғәйетбаевтың «Аргументы недели»

гәзитендәге бик насар интервьюһы тураһында һүҙ сыҡҡайны, башта ул бер ни ҙә белмәмеш булды, гәзитте Лариса Абдуллина алдына килтереп һалғас, һүҙҙе икенсегә борҙо. Был йәмһеҙ баҫма тураһында барыбер идарала һөйләшергә кәрәк.

Баш мөхәррир Нияз Сәлимов менән Лариса алып барҙылар. Мин дә байтаҡ һүҙҙәр әйттем. Ике мәсьәлә әҙәбиәт йылында беҙҙең өсөн үҙәктә булырға тейеш тинем: әҙәбиәт музейын биналы итеү һәм китап магазиндары асыу. Һүҙ һөйләү күп буласаҡ, Әҙәбиәт йылында, исмаһам, ошо ике проблема хәл ителһен ине. Конкрет эш эшләнергә тейеш, ләкин ошо ике мәсьәлә (һис юғында!) хәл ителер тигәнгә ышанысым самалы, өмөтөм ҙур булһа ла...

1 июнь, 2015 йыл. Дүшәмбе.

Түҙеп торғоһоҙ эҫе көндәр. Баҡсала булдыҡ. 30–31 май быйыл тәүге тапҡыр һыу индем, Шамонинолағы күлдә. Һыуыҡ көндәрҙән һуң һыу йылынып та өлгөргән.

Ҡыҙыҡлы сағыштырыуҙарҙы тормош үҙе тыуҙыра. «Ағиҙел»дең 4-се һанында Талха Ғиниәтуллиндың «Могикан» исемле хикәйәһе һәм Советтар Союзы Геройы Ҡотдос Латиповтың «Йәшлегем һауаларҙа йәшнәне» тигән хәтирәләре баҫылған. Икеһенә лә 90 йәш, икеһе лә һуғыш ветераны. Талха ағай ул дәһшәтте ерҙә атлап-шыуышып үткән, Ҡотдос ағай – һауала һуғышып. Уртаҡ дәүер, уртаҡ һынауҙар, әммә яҙмыштары бөтөнләй башҡаса. Талха Ғиниәтуллин ергә нығыраҡ тамырлана барған, Ҡотдос Латипов һаман да һауаларҙан төшмәгән. Беренсеһе күберәк пессимист, икенсеһе оло йәшендә лә оптимист.

Әлбиттә, әҙиптең тормошҡа һағышлы ҡарауы, ваҡиғалар тураһында моңһоу уйланыуы, ижадында ҡатмарлы яҙмыштарға нығыраҡ иғтибар итеүе тәбиғи. Тормошҡа ошолай төрлөсә мөнәсәбәттәрҙә булыуҙарында шәхестәрҙең холҡо-психологияһы ла йоғонтоһоҙ түгел. Әммә әҙип һуғыш дәүеренән бөгөнгә тиклемге замандарҙың кеше күңелен ҡыйратыусы ҡырыҫ дөрөҫлөгөнә барыбер тоғораҡ.

Тик барыбер гел мыжыма,
Яҡтылыҡты таба бел,
Яҡшылыҡты күрә бел,
Күрә бел, баһалай бел!

Һалып ҡарайым үлсәмгә –
Насар яғы нығыраҡ баҫа.
Уң яҡҡа нығыраҡ өйәбеҙме?
Яҡшыны күрмәй, үткәреп ебәрәбеҙме?

Тормошта табыу ҙа аҙ түгелдер, әммә фажиғәләр, юғалтыуҙар нығыраҡ күренә. Тормош күберәк фажиғә түгелме ни? Кеше йәшәүенең тәүге мәленән үк үлемгә табан атлай, шуға яҡыная бара.

20 быуаттың икенсе яртыһында рус әҙәбиәтендә «ауыл прозаһы» («деревенская проза», «деревенщики») үҙе бер дәүер, үҙе бер донъя. Уларҙың әҫәрҙәрендә аяуһыҙ тормош дөрөҫлөгө, ауыр яҙмыштар. Был яҡтан улар ижады тотош әҙәбиәттә ҙур һынылыш булды, ысын реализм.

Ләкин улар күберәк киләсәкһеҙ тормош, тупикка килеп терәлеү тураһында һөйләй. Алда яҡтылыҡ юҡ тиерлек. В. Белов халыҡ рухының нығлығы тураһында ла яҙҙы («Лад»), алға әйҙәргә лә тырышты («Все впереди»). Ләкин өмөтһөҙлөк күберәк, В. Распутиндың һуңғы сығыштарында рус рухы, рус теленең яҙмышы тураһында. Тәнҡитле ҡараш, ризаһыҙлыҡ хатта асыуға, нәфрәткә әйләнә (В. Астафьев, «Прокляты и убиты»).

Рус әҙәбиәтендә Тургеневтың «Записки охотника» һымаҡ ғәжәп яҡты әҫәрҙәр ҙә бар. Ләкин Буниндың һ.б. төшөнкөлөгө лә бар.

Әле лә ҡайһы бер әҙиптәр халыҡты ҡанатландырырға тырыша, ләкин ундайҙар һирәк шул.

12 июнь, 2015 йыл. Йома.

Бөгөн йылдағыса беҙҙең башҡалабыҙ Өфөлә бер юлы өс байрам: Рәсәй көнө, ҡала көнө, Салауат көнө. Бер уйлаһаң, барыһы ла бик шартлы, әлбиттә. Рәсәйҙең суверенитеты нимә була, ул үҙенән үҙе бәйһеҙлек иғлан итәме? Бөйөк СССР-ҙың тарҡалыуын ошо акт тиҙләтмәнеме?

Нәҡ ошо көн Өфө көнө тигәне лә уйлап сығарылған. Салауат һабантуйҙар ваҡытында тыуған тигән хәбәрҙәр һаҡланһа ла, ул нәҡ 12 июндә тыуған тип кем раҫлай ала?

Был өс байрамдың бергә тура килеүен рәсми ҡарарҙар нигеҙләгән. Был тап килеү бик шартлы, әммә барыбер ҡыуаныслы.

Халыҡ байрамһыҙ йәшәргә тейеш түгел. Эшләй ҙә белһен, байрамдарҙа төрлө яҡлап көсө, таланты ла асылһын.

Бөгөн республиканың бик күп районларында һабантуйҙар үтә. 5 июндә лә шулай булды. Һабантуйҙар үткәрер өсөн башта һабан һөрөргә кәрәк, ҡара тиреңде түгеп ер һөргәндән, тырмаған-сәскәндән һуң ғына күңел асып була тип тағы ла ҡабатлайым. Һабан һөрөү, иген сәсеү ваҡытын тәбиғәт үҙе билдәләй, ул мәлде зирәк тоя белергә кәрәк. Ә бына ҡасан һабантуй үткәрергә – быныһын кеше үҙе һайлай.

Был июнь айы бик матур башланды. Икеһендә шишәмбе көн тыуған яҡтарға юлландыҡ. «Башҡортостан» киностудияһы минең хаҡта фильм әҙерләй. Әмир Абдразаҡов менән фильм булды бит инде, күп нәмә шунда әйтелгән бит инде тиһәм дә, барыбер күндерҙеләр. Сценарийҙы Рамазан абзыйымдың ейәнсәре Сәлимә яҙа, Разифаның ҡыҙы. Уның теләгенә ҡаршы килә алманым. Сәлимә Батисова сценарийы буйынса эшләнгән Арыҫлан Мөбәрәков тураһындағы фильмды кисә ҡарап сыҡтыҡ. Йөкмәткеле, күп кешеләрҙең фекерҙәре. Бөйөк шәхестең 100 йыллығына арналған. Бындай документаль әҫәрҙең маҡсаты асыҡ: эшмәкәрлеген, ҡаҙаныштарын, тормош һәм хеҙмәт юлын төрлө яҡлап байҡау. Әмир менән эшләгәндә лә маҡсат асыҡ ине: «Илемдә илемде һағынам» – исемендә үк төп фекер әйтелгән. Ә был юлы хәл бөтөнләй башҡаса. Шулай ҙа үҙәктә тел мәсьәләһе торорға тейеш тип уйлайым. Милләтебеҙ өсөн иң мөһиме бөгөн тел мәсьәләһе. Башҡорт өсөн генә түгел, бик күп милләттәр өсөн дә туған тел яҙмышы бик ҙур хәүеф тыуҙыра.

Тыуған яҡтарҙа бик матур йөрөп ҡайттыҡ. Юлдаштарым да һәйбәт булды: оператор, режиссер Радик Килмәмәтов, сценарист Сәлимә Батисова, администратор Мәрйәм Закирйәнова, Фәриҙә, тағы ла Рональд исемле яҡтыртыусы (осветитель). Тик хас былтырғы сәйәхәттәге һымаҡ шоферҙан уңманыҡ. Ул тиҫкәре бәндәнең исемен дә яҙып тормайым.

Киноға инеп китерлек байтаҡ кадрҙар төшөрөлдө: Яңауылда, Ҡунаҡбайҙа ҡаршы алыуҙар, яҡташтар менән осрашыуҙар, Әүлиә зыяраты, ҡылған, әкиәтсе ҡатын һәм уны тыңлап ултырған балалар, Ырымбурҙа Каруанһарай, Пушкин һәйкәле янында, шулай уҡ яҡташтарҙың, туғандарҙың һөйләүе, Аҡбулаҡта элек беҙ уҡығандағы педучилище бинаһы янында, Переволоцкий, Ырымбур, Аҡбулаҡ станциялары, вокзалдары, өйөбөҙ торған урын һ.б. Былар үҙе бер кино булырлыҡ, әммә уларҙы теҙеп сығыу кәрәкмәй, шуларҙы тупларлыҡ асҡысты табырға кәрәк.

Туғандар, яҡташтар бик ихлас ҡаршы алдылар, ҡунаҡ иттеләр. Ғәбдрәфиҡтә Альберт кейәү менән Вазифаларҙа ике кис ҡундыҡ. Өфөнән Азат менән Айрат улдары ла ҡайтҡайны. Альберт сәсеүҙе тамамлап тора ине, әммә фермерҙың эше бөтмәй, һөрөүгә төштөләр.

Мәсет янында Әнүр хәҙрәт менән Әсләм ҡустыларым тирмә ҡорғандар. Ҡунаҡбайҙа Фәрит хәҙрәт Бикбаев бик тырышып ойошторғандар: барлыҡ ауыл тиерлек йыйылды, элекке магазин йортон мәсеткә биргәндәр, шунда йүгереп йөрөп һыйланылар. Асия апайым менән Мәғәлим езнәмдәрҙә лә булдыҡ.

Ырымбурҙа ике көн Зөлхизәләрҙә, Юлай, Лена, Нәккәр апайымдарҙа. Беҙ эш сәфәре менән йөрөйбөҙ, артыҡ мәшәҡәтләнмәгеҙ тип алдан әйтеп ҡуйһам да, йыр-бейеү менән, икмәк-тоҙ менән ҡаршы алдылар. Ырымбурға инер алдынан да шулай булды.

Барышлай бер көн Көйөргәҙе районында туҡтаныҡ. Ҡалтала Базит Бикбай шишмәһе, Кинйәабыҙҙа Кинйә Арыҫланов музейы. Һәр ерҙә асыҡ йөҙ менән ҡаршылайҙар, район етәксеһе Әхәт Ҡотлоәхмәтов тә, уның ярҙамсылары ла, ауылдарҙың уңған эшмәкәрҙәренә – һәммәһе ярҙамсыл һәм ҡунаҡсыл. Кис Яҡшәмбәттә Рәмилә туғаным (Рамаҙан ағайымдың иң бәләкәй ҡыҙы) менән Фәнит кейәүҙәрҙә булдыҡ, уларҙа ҡундыҡ. Ҡайтышлай федераль һабантуйҙа булдыҡ (Татар Ҡарғалыһы).

Был бик күңелле сәфәрҙә күңелде иң нык ҡырғаны – ауылдарҙа мәктәптәрҙең ябылыуы, бәләкәй балаларҙың тик русса һөйләшеүе – аралашыуы. Ун биш-егерме йылдан тыуған яҡтарымда башҡортса уҡыусы, башҡортса шиғыр тыңларлыҡ кешеләр ҡалмаҫмы? Шуларҙы уйлаһаң, бөтә ғүмерем буйына эшләгән эштәремдең бөтөнләй мәғәнәһе булмаған булып сығамы?

Босиком по росе,
Босяком по Руси.

Ҡыпсаҡтар төрлөсә, араларында бошман-ҡыпсаҡтар. Кинйә Арыҫлановты шуларҙан тиҙәр. Бошман бошамандың ҡыҫҡартылған яңғырашы түгелме? Юламан, уҙаман һ.б. Бошаман, тимәк, ил өсөн бошоноп, илде хәстәрләп йәшәүсе ҡыпсаҡтар.

Ағас ҡыуышына һалынған бәпесте Ҡыпсаҡ (боронғоса ҡыу ағас) тип атайҙар. Шул тарлыҡтан сыҡҡан Ҡыпсаҡ ниндәй киңлектәрҙе яулай, Ҡыпсаҡ иле – Дәшти Ҡыпсаҡ булып тарихҡа инә.

Салауат һабантуйҙар ваҡытында тыуған, әммә яҙмышы ниндәй оло яуҙарҙа килеп тоташҡан.

Күңелле, тимәк, күңеле бар. Күңелһеҙ, тимәк, күңеле юҡ. Күңел – рухтың тантанаһы, яҡшы эштәргә дәртләндереүсе. Күңел биреп эшләй йәки, киреһенсә, күңеле ятмай. Күңелсәк, күңелләнеп алыу, күңелде күтәреү һ.б. Кеше рухының дәртле мәлдәре.

Ырымбур яҡтарынан ҡайтып, әйберҙәрҙе барлағанда, әллә ҡайҙан тишек табып, салбарым балағына инеп ҡалған кескәй генә ташты табып алдым. Күпме араларҙы бергә үтеп, юлдаш булып, Өфөгә килеп еткән тыуған ерҙең бер киҫәге. Үҙе бер шиғыр. Ләкин бәкегә ҡыҫылған юл туҙаны тураһында Блок күптән яҙған. Уны яңынан уҡырға кәрәк әле. Бәлки эпиграф итермен.

21 июнь, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

14-дә йәкшәмбе Артурҙар Вашингтондан ҡайтты. Беҙ барғанда ла АҠШ-тың иң төнъяғынан иң көнъяғына тиклем 2,5 мең км юл үткәйнек. Беҙ киткәс тә сәйәхәттәре туҡтамаған, бөтә илде тиерлек йөрөп сыҡҡандар. Алған «Тойота»һын һәйбәт хаҡҡа һатып ебәргән. Бик күп донъя күреп, күп кешеләр менән осрашып йөрөнөләр, тик эшенә файҙаһы нисегерәк булыр? Әлегә етдилек етмәй һымағыраҡ.

17 июндә Баймаҡ районына көнөнә барып әйләндек.

Көнө, айы, йылы буйынса ҡорҙашым Азамат Әғзәм улы Тажетдиновты ерләүҙә булдыҡ. Халыҡ бик күп йыйылғайны, ауыл ерендә ул тиклемде күргән юҡ. Баймаҡ, Сибай, Әбйәлил, Хәйбулла хакимиәт башлыҡтары ла килгәйне. Вице-премьер Илшат Тажетдинов, ағаһы Нур (Ҡоролтай депутаты) аталарын бик тәрбиәләп ҡуйҙылар. Икенсе Этҡолда бик ҙур бина төҙөлөп бөтөп бара. Мәктәп тә, медпункт, китапхана һ.б. шул йортта буласаҡ.

Хөкүмәттең һәйбәт машиналарында йөрөһәк тә, ныҡ арытты.

18-дә ике киносъемка эшләнек. БДПУ-ның башҡорт факультетында диплом яҡлап сыҡҡан Ырымбур егете, рус кешеһе Вячеслав Чернев менән әңгәмә. Унан һуң берҙән-бер иҫән ҡалған мәктәп уҡытыусым Сажиҙа апай Агеева (Бикбаева) менән һөйләшеү. Уҡытыусым бик төплө фекерҙәр әйтте.

19-да тағы ла теш врачында. Музейҙа ултырышты күсергәндәр. Баҡсаға киттек. Көндәр бик эҫе. Асҡар менән Әсил бәләкәй генә бассейнда уйнаған булалар. Мунсаға һыу ташыштылар. Улар менән әллә ни эш ҡыйратып булмай.

Нисә ручканың берәһе лә йүнләп яҙмай. Яңылышмаһам, Толстой микән, яратҡан ручкаһы булмаһа, бөтөнләй яҙа алмаған. Тейешле һүҙҙәрҙе тейешле ҡәләм яҙһа, эш һәйбәтерәк бара, әлбиттә.

Баймаҡта, 2-се Этҡолда Байым ишандың бик бай шәжәрәһен төҙөгәндәр. Йорттоң бер стенаһын тултырып, элек ҡуйғандар.

Ғәрәп – эҫелек, Англия – еүеш, һалҡын, томанлы. Ғәрәп мәҙәниәте, дине күпме илдәргә таралған. Инглиз донъяһы хәҙер донъяны яулап алды. Тәүгәһе – ҡайнар, ярһыу. Икенсәһендә халҡын аҡыл, айыҡ иҫәп. Климат та фекерләүгә йоғонто яһай.

Мине күп бәләләрҙән әсәйемдең доғалары ҡотҡарғандыр. Башҡаларҙы ла шул – әсә доғаһы һаҡлайҙыр. Ләкин әсәләр теге донъяла ла беҙҙе доғаларынан ҡалдырмайҙыр. Ундағы изге теләктәре бәлки көслөрәктер ҙә әле.

Ҡайһы саҡта һүҙҙең нескәлектәренә иғтибар биреп еткермәйбеҙ. Мәҫәлән, өҙөлөп һөйә, уның өсөн өҙөлөп тора, күңелем өҙөлдө һ.б. Өҙөлөү бит ул, һыҙланыу ғына түгел.

Ул булғанда, һеҙ булырһығыҙ,
Һеҙ булғанда, ул булыр.

27 июнь, 2015 йыл. Шәмбе.

Мәжит Ғафури музейында Әҙәбиәт музейына бина юллау буйынса кәңәшмә үтте. Был мәсьәлә быйыл да хәл ителмәһә, уның осона сығыу бик шикле.

Түҙеп торғоһоҙ эҫе көндәр. 33 градустан төшмәй тиерлек.

Кисә Артур тимер каркаслы беседка ҡорҙо, өҫтәл-эскәмйәне йыйҙы. Ҡоролма алты ҡанатлы башҡорт тирмәһе һымаҡ. Хәҙер уға плиталарҙан изән эшләргә кәрәк.

Көйҙөргөс эҫелә лә шундай уй килер икән: «Үҙе шундай һыуыҡ, үҙе буран, кәфен ураймы ни тәнемде».

Фильмдың осона сығып булмай әле. Үтеп барған йәй күренешен, шунан алтын көҙҙө төшөрөп ҡалырға кәрәк. Бөтә кадрҙарҙы берләштереүсе үҙәк етмәй.

Мобиль китапханалар булдыралар, тик китап таратыу, уны һатыу буйынса мобиллек, тырышлыҡ бөтөнләй юҡ.

Әҙәбиәт йылында шиғри марафондар бара. 1 июлдә Көйөргәҙегә етергә тейешбеҙ. Ебәргән ҡулъяҙмаларында шиғри балҡыштар юҡ тиерлек.

Ысын әҙәбиәтсе өсөн әҙәбиәт йылы була алмай, беҙҙең бөтә ғүмеребеҙ шуға арналған. Әҙәбиәт өсөн фиҙа булған яҙмыш.

Кемдер үҙен ижад өсөн
Фиҙа итергә уйламай,
Файҙа итергә уйлай.
Ниңә үҙеңде ҡорбан итергә,
Әйҙә башҡалар булһын ҡорбан –
Уйын ул шуға ҡорған.

4 июль, 2015 йыл. Шәмбе.

Бик етеҙ һәм ҡыҙыҡлы рейдта йөрөп ҡайттыҡ. 1 июлдә иртәнге һигеҙҙә ҡуҙғалып киттек, ун берҙә Көйөргәҙе ерендә – Ермолаевкаға боролошта, ҡаршы алдылар: район етәксеһе Әхәт Йәүҙәт улы Ҡотлоәхмәтов, ҡурайсылар, икмәк, ҡымыҙ...

Шиғри марафон буйынса ҡулъяҙмалар тураһында һөйләшеү Мораптalда булды. Башта Ғәзиз Әлмөхәмәтов музейында булдыҡ. Уның Бабич менән төшкән рәсеме, бәйләнештәре тураһында мәғлүмәттәр юҡ, шул хаҡта музей хеҙмәткәренә әйттем. Бында экскурсияны башҡортса алып барырға кәрәктер.

Баязит Бикбай исемен йөрөткән Мораптал урта мәктәбендә булдыҡ. Мәктәп музейы бай ғына. Алдында Б.Б.-ң бюсы. Өлфәт Ҡобағошов һәйбәт эшләгән.

Делегацияла Тимерғәле Килмөхәмәтов, Хисмәт менән Тамара Юлдашевтар, Мөнир Ҡунафин, Лариса Абдуллина, Светлана Гафурова. 15-ләп ҡулъяҙма тураһында фекер алыштыҡ. Авторҙарҙы ла, уҡытыусыларҙы ла йыйғайнылар. Яҙышыусылар күбеһе мәктәп уҡыусылары. Мәктәп уҡытыусыһы, студентка, биш бала әсәһе лә бар. Улары етдиерәк, тосораҡ. Уҡыусыларҙың күбеһенсә һоҡланыу. Бер үк темалар ҡабатлана: Башҡортостан, Республика флагы, Мостай Кәрим, яугир олатайҙар һәм, әлбиттә, әсәйҙәр тураһында. Фекер алышҡанда Светлана әйтә, һәр бер райондан берәй һәләтле авторҙы тапһаҡ ине, ти. Русса әйткәндә, мечтать не вредно. Бына был шиғри марафон райондан районға күсеп ярты йыл бара, әммә бер генә хайран итерлек асыш та юҡ бит әле. Талант бит ул тәбиғәтте ҡыҙырып эҙләп йөрөй торған емеш-еләк йәки бәшмәк түгел. Уның мул үҫкән урыны булмай. Бар икән бар, юҡ икән юҡ. Таланттың емеше ҡышын ҡар өҫтөндә лә һутланып бешергә мөмкин.

Район һайын түгел, хатта тотош республика буйлап йыл һайын яңы талант асылмай. Шулай ҙа әҙәбиәт йылында шиғри марафондарҙың файҙаһы булыр һымаҡ. Етәкселәрҙең дә, халыҡтың да әҙәбиәткә, матбуғатҡа, китапҡа иғтибары аҙ ғына булһа ла артыр бәлки. Әммә ҙур үҙгәреш, яҡшы яҡҡа һынылыш яһауы ҡыйын, йыш ҡына мөмкин дә түгел. Заман йүнәлешен, яңы осор кешеһенең ихтыяждарына ҡаршы барыуы, тейешле яҡҡа бороуы бик ауыр.

Сәғәт алтынсыларҙа Мораптала эште бөтөргәс, сәй эсеп алдыҡ та Туҡ буйына ҡуҙғалдыҡ. Йөҙәй, Александровка аша Иҫәнгилдегә туғыҙ тулмаҫ борон барып еттек. Мәктәптә көтөп торғандар. Ваҡытты әрәм итмәй, барғас та, эшкә тотондоҡ. Сәй эскәндә Нәфисә Смаковаными шиғырҙарын тикшерҙек. Төп фекер шағирәнең үҙенсәлекле шиғырҙарын хуплау, матбуғатҡа тәҡдим итеү, Союзға алыу тураһында ла әйттем. 45-ләп шиғырын һайлап, исемлек төҙөгәйнем, шуны Нәфисәгә бирҙем. Ҡулъяҙманы яңынан ныҡ ҡарарға, тарарға кәрәк. Әлегә бөтәһе бергә өйөлгән.

Фекер алышҡанда район етәксеһе Писарев Александр Петрович та килеп инде. Ярҙамсыһы менән тыңлап ултырҙылар. Мәсьәләнең асылын уларға аңлатып бирҙем. Шиғриәт секцияһының күсмә ултырыштары республиканың төрлө район-ҡалаларында булып тора. Ә Башҡортостандан ситтә әлеге һымаҡ үткәрелгәне юҡ ине, тинем.

Мәктәптә Сәғит Агишҡа иҫтәлек таҡтаһы астыҡ. Глава башлап ебәрҙе. Сығышымда мәктәпкә Сәғит Агиш исемен бирергә кәрәк тигән тәҡдимемде алҡышлап ҡаршы алдылар. Осона сығырҙар, яҙыусы исемен йөрөткән мәктәпкә мөнәсәбәт тә башҡасараҡ булыр.

Сәғит Агиштың 110 йыллығына арнап бик матур кисә әҙерләгәндәр. Ҡәйнәләр менән килендәрҙең таҡмаҡ әйтешеүҙәре бик тапҡыр. Таҡмаҡ сығарыу традицияһы һәйбәт наҡланмаһа, оҙаҡ ҡына барған был тамаша мөмкин булмаҫ ине.

Ошо уҡ клубта, ошо уҡ сәхнәлә 1984 йылдың йәйендә Ғайса Хөсәйенов, Шәриф Биҡҡол, Тимер Йосопов, Кәтибә Кинйәбулатова сығыш яһағайны. Ишмулла Дилмөхәмәтов Урал ҡаяһы һымаҡ ғорур баҫып торғайны. Ул ваҡытта бында, ғөмүмән, был яҡтарҙа ҡурайсы ла, ҡумыҙсы ла юҡ ине. Әле сәхнә тултырып йәштәр килеп сыҡты. Егеттәр ҡурай тартты, ҡыҙҙар ҡумыҙ сиртте. Бейеүҙәр, йырҙар, шиғри һүҙ... Бик һәйбәт әҙерләнгәндәр. Кейемдәре матур, бейеүҙәре килешле, профессиональ кимәлгә тартымлы.

Сәхнәгә һигеҙ ҡыҙ сығып баҫты, мәктәп уҡыусылары. Һәр береһе үҙен бик тапҡыр әйтеп, йырлап-бейеп алалар. Баҡһаң, улар бер ғаиләнән икән. Береһе генә шул ғаиләнең үҙ балаһы, ҡалған ете ҡыҙ тәрбиәгә алынған рус балалары. Саф башҡортса һөйләйҙәр, йырлайҙар, бейейҙәр. Икмәк, ҡымыҙ менән ҡаршы алғанда ла шуларҙың икәүһе бик матур сәләмләне.

Концерт оҙаҡ барҙы, әммә бер ҙә ялҡытманы. Беҙ барыбыҙ ҙа сығыш яһаныҡ. Биш томымды, «Рәми» китабын, көндәлектәремде һ.б. мәктәпкә бүләк иттем. Мораптал мәктәбенә лә шундай уҡ бүләк тапшырғайным.

Сәфәрҙән ҡыуанып ҡайттым. Миңнулла Ғәбитов, Марат Сарбаев һымаҡ егеттәр күберәк булһын ине. Ҡунып торманыҡ, төнгө өсөнсө яртыла ҡайтып киттек. Эштәребеҙ бик оператив барҙы. Иртәнге етене үтеүгә Өфөлә булдыҡ. «Ике таңда, бер төндә» – шул исемдәге мәҡәлә яҙғы килә. Әйтер һүҙҙәр етерлек.

Кисә Сафуан Әлибайҙың йыллығында булдыҡ. Әхмәт Сөләймәнов, Уйылдан Сәйетов, Мирсәйет Юнысов, Дүртөйлөнән Салауат менән Резеда һ.б. Сафуан тураһындағы мәҡәләм күҙ алдына килде. Әммә башта Зиннур Ураҡсинды яҙырға кәрәк. Ноябрҙә 80 йыллығы. Иҫтәлектәр китабына яҙып өлгөрмәнем. Мәҡәләнең төп өлөшө уйланылған тиерлек.

Беҙҙең Туҡсоран Башҡортостан Республикаһында үҙаллы район булып йәшәһә, уның яңынан-яңы таланттары ниндәй сағыу балҡыр ине, яҡташтарым элекке халыҡсан традицияларҙы ни тиклем гөрләтеп дауам итер ине.

10 июль, 2015 йыл. Йома.

6–9 июлдә Көйөргәҙе, Туҡ буйы юлъяҙмаһы менән ултырҙым. Кисә бөтөрҙөм, Миңнулла Ғәбитовҡа шылтыратып, ҡайһы бер нәмәләрҙе асыҡланым. Иҫкә төшөп тора – ҡулъяҙманың ситенә өҫтәп торам. Оҙон ғына килеп сыҡты, егерме биттән дә кәм булмаҫ. Бөгөн-иртән Мөнир Ҡунафинға биреп ебәрҙем. «Ағиҙел»гә Дамир Шәрәфетдинов менән дә һөйләшкәйнем. Ҡарарбыҙ әле, компьютерҙан үтә тороһон.

Бөгөн сәғәт 11-ҙә баҡсаға киттек. Артур тирмәне бетон плиталарға шөрөптәр менән нығытып ҡуйҙы. Шашлык әҙерләп килтергәйнеләр. Ара-тирә ямғыр һибәләһә лә, барыбер бешерҙек, төшкөлөк тәүге ҡат яңы тирмәлә булды.

Ана һөтө менән кермәгәнде, тана һөтө менән кермәй. Шулай тип яҙһаң, бәгзе берәүҙәр «ана» башҡортса түгел, тиҙәр. Улайһа «әсә һөтө

менән инмәгәнде, кәзә һөтө менән инмәй» тип үҙгәртәйемме ни? Ҡайһы берәүҙәр башҡортса тик «инеү» була тип ныҡышалар бит. Ниңә күрәләтә сикләргә, телде ярлыландырырға?

Юлъяҙмалар менән булғанда Баязит Бикбайҙың «Тере шишмәләр» тигән китабын эҙләп таптым, Бикбай, Агиш хаҡындағы иҫтәлектәр китаптарын ҡарап сыҡтым. Дөрөҫөрәге, ҡараштырҙым, айырым урындарын ғына уҡыным. Китапханамда яңынан уҡығым килгән, һағындырған күпме китаптар бар. Ләкин ваҡыт еткереп булмай. Уны хәҙер тапмаһаң, ҡасан табырһың? Ваҡыт бөтөнләй аҙ ҡалып бара бит.

Үҙебеҙ менән ямғырҙар йөрөттөк. Июнь башында ла, июль башында ла шулай булды. Ямғыр килтерҙегеҙ тип ҡыуаналар, рәхмәт әйтәләр. Беҙ йөрөгән ерҙә баҫыуҙар ғына түгел, күңелдәр ҙә һуғарылған ине. Заманында «Орошение души» тигән мәҡәлә яҙғайным.

Өфөлә ШОС, БРИКС ултырыштарына күп илдәрҙең иң юғары етәкселәре килде. Яңы алты-ете ҡунаҡхана төҙөлдө, Заһир Исмәғилев һәйкәле янында «Ете ҡыҙ» тигән иң ҙур һәйкәл асылды. Ҡала ныҡ төҙөкләнде. Өфөнө хәҙер донъя нығыраҡ беләсәк. Минеңсә, киләсәк өсөн иң мөһиме шул.

Суверенитет тигән һүҙ хәҙер әйтелмәй, сәйәсәт шулай. Суверен республикалар хәҙер сувенирға әйләнеп бара. Иҫтәлекле тышҡы биҙәге әлегә бар, әммә үҙ яҙмышын хәл итерлек хоҡуҡтары ҡыҫылғандан ҡыҫыла.

Йәшенәм йәшендәрҙән.

Аҡҡоштарҙың ҡанат ҡағып алҡышлауы,
Алҡымдан алмыштары.
Алда сатлама ҡыштарың,
Һарыласаҡ һағыштарың.
Танымаҫтар таныштарың.

Кешенең хәтере ниңә шулай бик ваҡытлыса? Бәләкәй саҡта күпме әкиәт, йомаҡ белә инек, таҡмаҡтарҙың иҫәбе юҡ ине. Улар һаман да күңелде йылыта, тик хәтерҙә ҡалмағандар.

23 июль, 2015 йыл. Кесаҙна.

Машинисткаларҙың хаталары ҡайһы саҡта «дөрөҫ» килеп сыға, уларҙы төҙәтмәү тексты хатта һәйбәтләберәк ебәрә.

Студент саҡта яҙған бер шиғырымдағы «Әллә ниңә оҙаҡ ҡарап торҙом елдәр туҙан йыйып уҙғанға» тигән юлдарҙа «йыйып» урынына «йотоп» тип баҫҡайнылар. Төҙәтеп торманым, һүҙҙе көсәйтеүсе «дөрөҫ хата». Студент йылдарындағы шиғырҙарым тупланған «Дала офоҡтары» тигән тәүге китабыма «Елдәр туҙан йотоп уҙғанға» булып инде. Елдәрҙең туҙан йотоуы ҡыҙығыраҡ бит.

Әле Көйөргәҙе, Туҡ буйы яҡтарындағы сәйәхәттән һуң яҙылған «Ике иртә араһында» тигән юлъяҙмамда «Шиғри нағыш» «шиғри һағыш» булып киткән. Тағы ла «дөрөҫ хата», шиғри һағыш һәйбәтерәк, әлбиттә. Тик был юлы төҙәтергә тура килде, сөнки һүҙ «Әҙәби нағыш» тигән конкрет саралар тураһында бара. Гәрсә был сараларҙа тикшерелгән ҡулъяҙмаларҙа тышҡы биҙәк – нағыштар осраһа ла, һағыш, моң, фекер аҙ, күпселектә бөтөнләй юҡ. 25-дә Күгәрсенгә китәбеҙ, әле мин уҡыған шиғырҙарҙа шул уҡ хәл.

Асҡар менән Әсил баҡсала булғанда Фәриҙәгә лә, миңә лә эш менән булырға ныҡ ҡамасаулайҙар. Шулай ҙа был сабыйҙарҙы яныбыҙҙа күберәк тоторға, йышыраҡ аралашырға кәрәк. Юғиһә, халыҡсан тәрбиә хәҙерге балаларға бик аҙ тейә бит. Интернет донъяһында йәшәйҙәр.

Интернетҡа йышыраҡ инәм. Бөгөнгө донъя хәлдәре тураһында белешмә алыу өсөн бик уңайлы. Ундағы информацияның байтағы рәсми матбуғатта сыҡмай.

Ләкин ундағы сүп-сарҙың күплеге! Шиғырға дәғүә итеүсе күпме строфаларға теҙелгән төҫһөҙ, зауыҡһыҙ, мәғәнәһеҙ һүҙҙәр ташҡыны. Ни тиклем самореклама! Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, етди генә ҡәләмдәштәребеҙ ҙә шул саморекламанан азат түгел.

Ҡатын-ҡыҙ аҙ ғына ауырлы була алмай тигән һүҙ (нельзя быть чуть-чуть беременной). Шуның һымаҡ «саҡ-саҡ ҡына» эсергә өйрәнеүе ҡыйын. Бөтөнләй ауырға ҡалаһың, дөрөҫөрәге, үҙең уйлап сығарған ауырлыҡтарға дусар булаһың да ҡуяһың. Тотош Рәсәй өсөн уртаҡ бәлә инде.

Көслө ел кәпәсеңде систерә, үҙенең көсөн, бәҫен белә. Хәҙерге ҙур козыреклы баш кеймемен сисеп, ҡулыңа тотоп алмаһаң, ел уны башыңдан йолҡоп алып, машиналар елгән юлға осороп алып китергә лә мөмкин.

«Литературная газета»ның һәр һанында яңы китаптар тураһында күпме мәғлүмәт бирелә. Авторҙары, исемдәре атала, ҙур булмаған аннотация һымаҡ баһалама баҫыла. Яңы китаптарға

халыҡтың иғтибарын йәлеп итеү өсөн бик урынлы, бик кәрәкле эш бит.

Ә беҙҙең «Ағиҙел», «Истоки», «Бельские просторы» һымаҡ әҙәби баҫмаларыбыҙ, башҡа гәзит-журналдарыбыҙ был хаҡта ләммим. Халыҡ китап уҡымай тип зарланыу күп, әммә ул китаптарҙың иң мөһимдәре хаҡында кешеләргә белешмә лә еткерергә кәрәк бит. Элегерәк ундай эш бер ни тиклем алып барыла ине, хәҙер был традиция бөтөнләй тиерлек онотолдо.

Быйылғы ямғырлы йәй. Ҡояшты һирәк күрәбеҙ, ә йәй үтеп тә бара.

Елле-дауыллы ямғырҙар,
Донъяның төҫө ҡасҡан.
Өйҙәрҙең ҡобараһы оҫкан.
Күктә болоттар йыртыла,
Ерҙе-күкте йәшендәр һелкетә,
Ерҙән йолҡоноҙай булып,
Болоҡһой, сайҡала ағастар.

Ярар тирмәне тимер шөрөптәр менән таш плиталарға Артур беркетеп ҡуйҙы. Юғиһә уны дауыл осороп алып китерлек. Бындай саҡтарҙа боронғо кейеҙ тирмәләр нисек түҙҙе икән, уларҙы нимәләр менән ерҙән ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп беркетеп ҡуйҙылар икән?

Атлай-атлай
Исемен ҡабатлай.

Таш бәрһәң йәки таяҡ менән һуҡһаң, алмағастан алма төшә. Шағирға тормош шулай ҡаты бәрелгәндә, ниндәйҙер хәл-ваҡиғалар, хайран йәки вайран итерлек осрашыуҙар уны тетрәндергәндә яңы уй-кисерештәр, яңы шиғырҙар тыуа.

Фильм буйынса эштәр әкрен бара. Әлегә исеме «Яҙмыш менән һөйләшеү». Яҙмышымды яңынан барлайым.

Эшләнмәй ҡалған эштәр нығыраҡ үкендерә. Вайымһыҙлыҡтар ғәрләндерә. Уй-хыялдар һаман арта, тик көс кәмей.

«Писатели земли башкирской» – был бик кәрәкле, эш буйынса мин йыш ҡулыма алған китапты яныңан сығармаҡсылар. Ҡуш ҡуллап яҡлайым. Тик үҙемдең өлөштө, Бабич тураһындағы

белешмәләрҙе уҡығас, аптырап ҡалдым. Хаталар күп, Бабич һымаҡ бөйөктәр тураһында бик аҙ. Әгәр шул көйө сығарһалар, нәшриәткә лә, төҙөүсегә лә оят булмаһын. Редакцияға шул хаҡта әйттем.

27 июль, 2015 йыл. Дүшәмбе.

25-дә шәмбе һигеҙенсе яртыла Күгәрсен районына юлландыҡ. Ун беренсе яртыла – нәҡ һөйләшелгән ваҡытта Хоҙайбирҙегә барып еттек. Хакимиәт башлығы Фәрит Мырҙагилде улы Мусин, урынбаҫары Харис Әбдрәхимов, йыр-моң, бейеү менән, икмәк, ҡымыҙ менән ҡаршы алдылар. Ғәҙәттәгесә «Юлдаш» кафеһендәге табындан һуң Шәһит Хоҙайбирҙин музейын ҡараныҡ. «Дастан о Башкортостане» тигән китабымды бүләк иттем, унда Шәһит Хоҙайбирҙиндың 100 йыллығына арналған опера һәм балет театрындағы тантаналы кисәлә һөйләгән докладым нигеҙендә эшләнгән «Имя, перешагнувшее время» тигән мәҡәләм ингән. Шул кисәнән һуң был ауылда ла булғайныҡ. Митингта һөйләп торған фоторәсемемде күрһәттеләр.

Мораҡта крайҙы өйрәнеү музейын ҡараныҡ. Ҙур булмаған райондан 8 Советтар Союзы Геройы сыҡҡан икән. Бынығын белмәй инем, ныҡ ғорурланырлыҡ ваҡиға бит.

Шиғри марафон Күгәрсенгә лә килеп етте. Һөйләшеүҙе хакимиәт башлығы урынбаҫары Харис Әбдрәхимов башлап ебәрҙе. Мин ҙур ғына инеш һүҙ әйттем.

Дүрт ҡулъяҙма ҡуйылғайны. Башта Хәким Алсынбаев шиғырҙары хаҡында фекер алыштыҡ. Унан һуң Лариса Абдуллина ентекле һөйләне. Унан һуң Рәмил Йәнбәк, Сәрүәр Сурина, Зөфәр Вәлит әйтте. Мин йомғаҡлап ҡуйҙым.

Хәким үҙенсәлекле тормош юлы үткән, төрлө ерҙә эшләгән. Әле үҙенең һөнәре буйынса яңынан уҡытыусы. 4 улы, 1 ҡыҙы бар. Шиғырҙарында һыҙланып уйланыуҙар, үҙенсә саялыҡ. Әле 40 йәштә, етди эшләһә, һәйбәт шағир булмаҡсы.

Хәким Алсынбаевтың шиғырҙарын автобуста барышлай ғына уҡый алһам, Айгөл Айытҡолова-Арыҫлановаңың ҡулъяҙмаһы менән Өфөлә үк танышҡайным. Тәбиғәт балаһы, йылдың һәр миҙгелен яҡын күрә. Шиғри күңел. Үҙенсә аһәң бар. Һәйбәттәрен алып киттем.

Шиғырҙар шыма, техника һәйбәт. Был яҡтан барыһы ла үҙ урынында булып етмәһә лә, дөйөм алғанда сифат насар түгел. Тик тетрәнеүҙәр аҙ, төрлөлөк етмәй. 25 шиғырҙың алтыһында тәүге юл бөтә строфалар буйлап рефрен булып килә. Күп булып китә.

Хәким менән Айгөлдөң шиғырҙары һәйбәт баһаланды. Альбина Григорьева менән Фәнүзә Әбсәләмова килмәгәйне. Уларға туҡталып торманыҡ.

Фекер алышыу Мораҡ башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлмәһендә үтте. Урын иркен, күп кенә халыҡ йыйылған: уҡытыусылар, китапханасылар, журналистар һ.б. Бик ихлас аудитория. Әҙәбиәтте ихлас яратҡандары, белгәндәре күренеп тора. Уларҙан да һүҙ әйтеүселәр булды. Ошондай мөнәсәбәттең, ошондай уҡыусыларҙың ҡәҙерен белегеҙ, сит өлкәләрҙәге башҡорттарҙың («Ә һин бына Башҡортостандан киттә башҡорт булып ҡара!») төшөнә лә инмәй тип әйттем йәш авторҙарға.

Класс бүлмәһендә халыҡ шағирҙарының рәсемдәре ҡуйылғайны. Беҙҙең фекер алышыуҙы улар ҙа тыңлап тора, ҡаты һынау үткәрә тип әйтергә кәрәк булған. Ул хаҡта әле ошоларҙы яҙғанда ғына уйланым.

Халыҡ хәҙер китап, бигерәк тә шиғыр уҡымай тип зарланабыҙ. Дөйөм алғанда дөрөҫ, әммә ғәжәп уҡыусылар ҙа осрап ҡуя. Осрашыуҙан һуң өлкән генә берәү (юристар ойошмаһын етәкләйем тине) минең бер шиғырымды иҫкә алып, классика тип, Мостайҙың «Йәшәйһе бар...» тигәне менән сағыштырып, рәхмәттәр әйтеп торҙо. Һүҙмә һүҙ булмаһа ла, ул шиғыр иҫемдә ине, әлбиттә. Ҡайтҡас, саҡ эҙләп таптым: II том, 308 бит, «Был һуң ниндәй ҡояшһыҙ ҡыш булды...», 2000 йылда яҙылған.

Аҫыл тәбиғәтебеҙ генә түгел, аҫыл уҡыусыларыбыҙ бар. Ҡәҙерҙәрен беләйек.

Йәштәрҙең байтаҡ ҡулъяҙмаларын уҡығандан һуң ысын шиғырҙарҙы нығыраҡ ҡәҙерләйһең. Был да үҙенсә мәктәп. Үрнәктәр генә түгел, ғибрәттәр ҙә үҙенсә өйрәтә, һабаҡ бирә.

Һуңғы ваҡытта байтаҡ аралар үтелде. Ауылдарыбыҙ барыбер төҙөк беҙҙең, юлдарыбыҙ һәйбәтләнә. Шуға ҡыуанып йөрөп ҡайтам.

Беҙ барғанда Мораҙымда етенсе тапҡыр үткәрелгән «Байыҡ»ҡа бик саҡырғайнылар. Башҡортостанға әллә ҡайҙарҙан килгәндәр. 500 кеше ҡатнашҡан тамашаны ҡарап булманы. Үкенесле. Ҡалғыһы бик килгән юлдаштарым да бар ине. Ни хәл итәһең, ваҡыт еткереп булмай. Хатта пенсионер булһам да.

Ҡашыҡҡа һал да йот, булмаһаң алйот!
Иҫәрлек – иҫләрлек.
Өҫтөндә – өс төндә.

Күгәрсенгә китер алдынан Конгресс-холдан түбәндәрәк майҙандарҙың береһендә этноауылда шифыр байрамы. Бында бик ҙур төҙөлөштәр ҡуйылған. Майҙандар, юлдар, баҫҡыстар, ҡунаҡхана, Ағиҙел ситендәге матур үҙгәрештәр һ.б. Башҡорт йәйләүендәге һымаҡ теҙелешеп ултырған ете тирмә. Һәр береһе үҙенсә йөкмәткеле.

Тәүге сығыш минеке булды. Рәсәйҙә лә, Башҡортостанда ла йыл һайын күпме ауылдар юҡҡа сыҡҡанда ҡала эсендә (!) яңы ауыл барлыҡҡа килде тинем.

Бөтәбеҙ ҙә машина менән йәтеш кенә килеп туҡтаныҡ. Асҡар менән Әсил рәхәтләнеп уйнанылар. Тик был грандиоз төҙөлөштә бер нәмә уйлап еткерелмәгән: пенсионерҙар, зәғифтәр, балалы арба менән ҡатындар бында нисек төшәсәк тә нисек күтәреләсәк? Эстакадалар кәрәк. Ләкин төп эштәр бөткәс, улар төҙөлөрмө?

Шифыр байрамы бер сәғәт барҙы. Аҙаҡҡа табан ямғыр яуа башланы. Халыҡ таралманы. Хатта зонтһыҙҙары ла тыңлап торҙо. Шуныһы ҡыуандырҙы.

Ҡайтышлай «Ете ҡыҙ» фонтанына һуғылдыҡ. Быны ла күргәнебеҙ юҡ ине. Һәйбәт табыш, төрлө илдәрҙән килгән ҡунаҡтарға ҡаланың кинәнеп күрһәтерлек донъя кимәлендәге биҙәге буласаҡ. Иң мөһиме – башҡор тарихына, уның рухи хазиналарына иғтибарҙы ла, ихтирамды ла арттырыу.

Ләкин киләсәк быуындар был ҡомартҡыларҙы лайыҡлы һаҡлай алырмы? Һәр яҡшы эштең дауамын күрге килә. 1979 йылда яҙылған «Ете ҡыҙ» исемле шифырым иҫкә төштө. Ҡайтҡас, табып уҡыным, беренсе томымда. Тәьҫораттарым бер мәҡәләгә әйләнде. «Ете ҡыҙ» шифырын да индерҙем. Һәр яҡшы эштең дауамы, бар иткәндәребеҙҙең һаҡлау хәстәре булырға тейеш. Мәҡәләмде «Һоҡланайыҡ, әммә һаҡлайыҡ» тип атаным.

28 июль, 2015 йыл. Шишәмбе.

Йәкшәмбе көн баҡсаға килгәйнек. Электросалғым бик уңайлы ине. Тик ниңәлер эшләмәҫ булды. Ремонтҡа алмайҙар, ундайҙарҙы сығармайҙар ҙа икән. Гел бензиндә эшләй торғандар. Шундайҙы алырға тура килде. Артур ҡыҙҙырып эшләтеп ҡараны, байтаҡ сапты. Мин дә эшләнем. Салғы ватылғас, донъяны сүп баҫҡайны. Ярар Ғайса тыштан ҡойма буйын сапты. Уға Рәшит тә килеп ҡушылды. Ғайса салғы ҡалдырып китте. Кисә сабып ҡараным, эш күпкә ырамлыраҡ.

Мәҡәләмде «Киске Өфө»гә Зөлфиәгә бирep ебәрҙем...

Балаларҙы үҙҙәре менән алып ҡайтып киткәйнеләр. Улар булмағанда күп эш эшләп була. Балалар баҡсаһына 15 августан йөрөй башлаһалар, баҡсаға былай ҙа бик килә алмаҫтар әле.

Көсө юҡта батыр алышмаҫ. Уның өсөн ғәйрәт, әҙерлек, ышаныс, үҙенсә күнекмәләр кәрәк. Илһамһыҙ саҡта шағир ҙа шулай, көрәшә алмаҫлыҡ батыр хәлендә. Ләкин ижадта күнекмәләр яһап ҡына эш ҡыйратып булмай. Илһамды улай ғына килтерерлек түгел, хәлдән тайған сағыңда ла ҡанат үҫтереп ебәрергә мөмкин. Ләкин нисек кенә булмаһын, ижад эшенә ҡолас ташлап тотонор өсөн барыбер күңел тыныслығы, уның сафлығы кәрәк.

Киноға индерә ҡалһам тип, Кристина Андриановаға бер нисә шиғырымды биргәйнем. Йома көн ҡалдырып китте. Һәйбәт кенә эшләй торғайны, был юлы замечаниеларым байтаҡ. Күгәрсендән ҡайтҡас шылтыратҡайным, яуап бирмәне. Бөгөн кискә Өфөлә булабыҙ, бәлки һөйләшә алырмын.

Бәләкәй генә дүрткел ҡағыҙҙар ҡапыл ғына берәй фекереңде йәки кәрәкле мәғлүмәтте теркәп ҡуйыу өсөн уңайлы. Шуларҙың береһе килеп сыҡты. «Треть населения России не читает книги» тип яҙып ҡуйғанмын. Хәҙер киреһенсәлер, бәлки Рәсәй халҡының өстән бере генә китап уҡыйҙыр. Хатта бынан да кәмерәктер тип уйлайым. Донъя күләмендәге бик хәүефле күренеш.

6 август, 2016 йыл. Кесаҙна.

Алла бирһә, был юлы баҡсала оҙаҡ буласаҡбыҙ. Шәмбе килгәйнек, йәкшәмбе ҡайтабыҙ – 9 көн. Былай оҙаҡ булғаныбыҙ быйыл юҡ ине. Бәләкәйҙәр ике кис ҡундылар. Улар булһа, эшләп булмай, булмаһалар, һағындыра.

Бик күп сүптәрҙе тырманым, күбә-күбә яндырҙым. Баҡса матурайып ҡалды.

Зиннур Ураҡсин тураһында мәҡәләне тиҙ яҙҙым. 30 йыл бергә эшләнек, уға тиклем бергә уҡыныҡ. Барыһы ла күҙ алдында.

Магомед Ахмедовтың 50 йәшенә яҙмаҡсымын. Әлегә байтаҡ уҡыным, тәржемәләр эшләнем. Дағстан әҙәбиәттәре буйынса хәҙер ярайһы ғына хәбәрдармын. Әҙерлек бар, Өфөгә ҡайтҡас, яҙырмын.

Сафуан Әлибаев тураһында ла уйлап йөрөйөм. Әлегә өлгөрөрлөк ваҡыт бар.

Отрезок времени, огрызок времени.

Ғүмер кәмей, хәүеф арта.

«Ваҡыт – аҡса» тип йыш әйтәләр. Улай түгел шул, ваҡыт ҡәҙерлерәк. Аҡсаны йыйып йәки банкта һаҡлап, балаңа мираҫ итеп була. Ваҡыт менән хәл бөтөнләй башҡаса. Уны һаҡлап булмай, барыбер үтә. Берәү бай, икенсе кеше ярлы булырға мөмкин, аҡсалары йә бик күп, йәки бөтөнләй юҡ. Ә ваҡыт һәр кемгә тигеҙ бирелә. Башҡа кешенең ваҡытын аҡса һымаҡ талап йәки урлап булмай. Ваҡытты ришүәт итеп тә булмай. Ваҡыт үтескә бирелмәй.

Әҙәм балаһы тик яҙмыш ҡушҡанса билдәле ваҡыт ҡына йәшәй ала. Ваҡыттың бөтөүе аҡсаның бөтөүе һымаҡ ҡына түгел.

Тура килгәндә үләндә йөрөп алам, ялан аяҡ. Мәктәп янында һыналған урыным бар. Антей, Ахилл тураһында уйлайым.

«Одиночество в толпе» нигеҙҙә кире мәғәнәлә әйтелә. Ләкин яңғыҙ ҡалып уйланыу кеше өсөн бик мөһим. Мөхәмәт ғәлиәссәләм дә ҡайһы саҡта уйланырға аулаҡҡа – тау ҡыуышына киткән. Зәйнулла ишан ураҙаның һуңғы 10 көнөн мәсеттә яңғыҙ ҡалып уҡынған. Затворничество.

Бабич тураһында яңы китап яҙғы килә. Тик бөтөрә алмам тип ҡурҡам. «Рәми»ҙе яҙғандағы көс түгеүҙәр иҫкә төшһә, ҡурҡыта шул. Ярар заманында ул эш эшләнеп ҡалды. Хәҙер антологияны төҙөүгә лә бәлки тотона алмаҫ инем, ҡыйыу булынған.

Магомед Ахмедов – хажи шағир. «Арафат» поэмаһы. Суфыйсылыҡ традициялары уларҙа нисегерәк икән? Хажға барған башҡорттар йыш ҡына Дағстанда туҡталыр булғандар.

Часто не хватает комплектующих, зато в избытке комплексующие.

Благодарил – бог одарил.

Осел осел.

Хәҙер һатыу күбәйҙе. Барыһы ла сәүҙәгә ынтыла, үҙ эшен асырға тырыша. Машиналар ҙа күп һатыла. Намыҫ, иман һатыла. Тәбиғәттең йәме, ҡатын-ҡыҙҙың тәне, ир-егеттең ғәме һатыла. Сәме һатыла. Ризыҡтың тәме ҡалмай.

Бабич тураһында уйлағанда 50 йәшемә сыҡҡан «Яҙмышым» тигән китабымды ҡарап алдым. Йыйнаҡ та, тос та. Биш томлығымды уның менән сағыштырырлыҡ түгел. «Дастан о Башкортостане», «Рәми», ике томлыҡ көндәлектәрем дә ҙур күләмле булды. Ләкин улар башҡаса була алмай ине. Шуларға Бабич тураһында яңы ҡалын китап ҡушылһа икән дә бит... Хыял булып ҡына ҡалмағайы...

20 август, 2015 йыл. Кесаҙна.

Тағы ла баҡсалабыҙ. Уҙған шәмбелә Фәризәнең тыуған көнөндә килгәйнек. Артур шашлыҡ бешерҙе, өҫтәл әҙерләнеләр. Ишек алдындағы тирмәбеҙҙә ултырҙыҡ.

Был юлы 10 көн булмаҡсыбыҙ. Көндәр йонсоу. Ямғыр ҙа яуып ала. Йәй быйыл күңелһеҙ, уның ҡарауы, эшләп ултырырға яҡшы. Һуңғы арала күп яҙылды. Июль аҙағынан август аҙағына тиклем «Һоҡланайыҡ, әммә һаҡланайыҡ» тигән мәҡәлә, Зиннур Ураҡсин, Магомед Ахмедов тураһында уйланыуҙарым, бөгөн Сафуан Әлибаев тураһында яҙып бөтөрҙөм. «Ҡыҙыл таң»дан Ләйсән Кәшфи интервьюға һорауҙар биргәйне. Бәлки уны ла яҙып бөтөрөрмөн. Бер ай өсөн бик күп килеп сыға түгелме һуң?

1967 йылдың йәйендә Баймаҡ яғында һыбай йөрөгәйнек. Минең атта төшкән фотом һаҡланған. Сафуандың да һыбай фотоһы бар икән. Ул рәсемдең икенсе яғына мин ошолай тип яҙып ҡуйғанмын:

Халҡың барҙа батыр тыуыр тиеп,
Үҙ-үҙеңде, күңел, йыуатма.
Салауат та, уның толпары ла
Ҡайһылай йонсоп,
Килеп керҙе беҙҙең быуатҡа.
Батыршалар әгәр тере булһа,
Менер инеме ни был атҡа?..

18.08.1967.

Ошо тексты мәҡәләмә өҫтәп ҡуйҙым. Әле телефон аша Фәрҙиәнән күсереп алдым.

22 август, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә «Ҡыҙыл таң»ға интервьюны яҙып бөтөргәйнем. Бөгөн ҡарап сыҡтым, ҡайһы бер өҫтәлмәләр индерҙем. Иртәгә уны редакцияға алып барам, мәҡәләләремде машинистка Алинаға (БДПУ) алып барам, уның менән һөйләштем.

Кисә көн сыуаҡ, йылы булды. Валера тигән егет трактор арбаһы менән утын килтерҙе, түңәрәк көйө. Егеттәре бында ярҙылар, ташыныпылар. Һарайға һыйҙырып булманы, тышҡа ла өйҙөк.

Рәйлә һеңлем ҡыҙы Роза менән килде.

2008 йылдың майында Ҡоролтайҙа әле эшләй башлаған сағымда пленар ултырышта милли-региональ компонентты яҡлап һөйләгән сығышым китаптарыма инмәгән – ғәжәп! Табырға кәрәк.

Магомед Ахмедов тураһындағы мәҡәләмде «Молитва поэта» тип атаным. Ысынлап та, әҙәбиәт – милләттең доғаһы. Был турала «Ҡыҙыл таң» өсөн яҙылған интервьюла ла әйттем.

Булгаков ҡулъяҙмалар янмай тигән. Ҡулъяҙмалар ғына түгел, тотош китапханалар яндырылып юҡҡа сыҡҡан. Гитлерҙың китаптарҙы яҡҡан усаҡтары, беҙҙә дини әҙәбиәтте юҡ итеүҙәр... Бәхеткә күрә, Булгаковтың романының ҡулъяҙмаһы һаҡланып ҡалған. Ләкин күпмеләрҙең мираҫтары юҡҡа сыҡҡан.

Әлбиттә, эшләнгән эш күп осраҡта ятып ҡалмай. Үҙемдең яҙмышымдан беләм. Бабич тураһындағы хеҙмәтем барыбер донъя күрҙе. Көндәлектәрем ике ҡалын том булып баҫылды. Алла бирһә, өсөнсөһөн әҙерләйем, донъя күрер тип өмөтләнәм. Хәҙистәрем сыҡты. Бабичтың, Рәми Ғариповтың баҫыла алмаған күпме әҫәрҙәрен уҡыусыларға еткерер өсөн байтаҡ көс түгеүем дә бушҡа булманы. Былары – ҡулъяҙмаларҙың янмауы, Аллаһ ҡөҙрәте, мәрхәмәте менән һаҡланып ҡалыуы.

Одиночество в толпе. Поэты толпами не ходят. Все равно поэт полностью одиноким никогда не бывает. Поэт всегда с народом.

Гайдарҙарҙың, Чубайстарҙың емерткес эштәре күренеп тора. Уларҙы халыҡ дошмандары, һәр хәлдә Рәсәйҙең дошмандары тиергә мөмкин. Ә бына беҙҙең мәғариф системаһын бик аҫтыртын емереүселәр шул уҡ ил дошмандары бит. Шул уҡ Фурсенко. Әммә күбеһенең исемен белмәйбеҙ.

Ләкин аталғандары ла, атаҡлылары ла, халыҡ өсөн әлегә билдәһеҙ ҡалғандары ла был мәкерле эштәрҙе үҙ белдеге менән генә эшләмәй. Улар барыһы ла йәшерен король ҡулындағы пешкалар. Илебеҙҙе ул пешкаларҙан да бигерәк шуларҙы хәрәкәт иттереүсе яуыз королдән араларға кәрәк.

Республикаларҙың суверенитетының төп мәғәнәһен бөтөрҙөләр. Бары тышҡы биҙәк – сувениритет ҡалды.

Бала саҡта йөҙәрләп белгән таҡмаҡтар, әкиәттәр, йомаҡтар хәтеремдән юйылып төшөп, тормош юлымда һибелеп ҡалғандар, әрәм булғандар.

Диуананың диуаны, хыялыйҙың хыялдары.

Зиһене зыянланған кешене хыялый тиҙәр. Тимәк, артыҡ хыялланыу ҙа зарарлы. Ә һуң ул хыялыйҙың ниндәй хыялдар менән хыялланғанын кем генә белә икән? Уларҙың үҙ донъяһы. Ул хыялыйҙарға беҙ бәлки алйоттар булып күренәбеҙҙер.

Үҙ алдына һөйләнгән һымаҡ Аллаһҡа өндәшеп йөрөгән философтарҙы да диуана тигәндәр.

«Беҙ ҡаҙы-ял ашап үҫкән аҫаба башҡортбыҙ» – өләсәре шулай һөйләгәндә Фәриҙә менән апаһы Флүрә көлөр булғандар бәләкәй саҡтарында. Үҙҙәренең башҡортлоғон бөтөнләй тиерлек белмәгән, ҡаҙы-ялды ғүмерҙә күрмәгән ул балаларҙы аңларға мөмкин. Улар ҙа хәҙер аңланы, Аллаға шөкөр.

Два плюса дают минус, ике плюсты ҡушһаң минус була. Ике минус плюс бирә. Яңылышмаһам, математикала шулай. Ҡызғанысҡа ҡаршы, тормошта ла шулай, уныһын беләбеҙ. Ике һәйбәт кешенең ҡушылыуынан насар бала үҫә. Ике насарҙың һәйбәт балаһы үҫергә мөмкин.

Погряз в грязи.

Бошман ҡыпсаҡ бәлки бошаман, йәғни ил тип бошоноусы булғандыр, бошаман ҡыпсаҡ дөрөҫөрәктер?

Магомед тураһында мәҡәлә яҙғанда уйлап ҡуйҙым: дунгур – дангарчу беҙҙәге дөңгөргә, дөңгөрсөгә тура килмәйме?

Һауаплы яҡшы эштәрҙе мәсеткә йөрөмәйенсә лә эшләп була. Мәсеткә йөрөгәндәр араһында ла аламалыҡ ҡылғандар бар. Аҙ түгел.

Ауыл кешеһе ергә лә, күккә лә яҡыныраҡ. Тамырҙарын нығыраҡ белә, ер эше менән күберәк була. Күккә яҡын, сөнки күңеле бөтөнләй туңып, хыялы үлеп, ҡанаты һынып бөтмәгән.

Кешене лә ауылдыҡылар нығыраҡ һынай, үҙен дә даими һынағандарын белә. Шуға артығын һөйләмәҫкә, килешмәгәнде эшләмәҫкә тырыша. Сөнки уны бөтә ауыл күреп тора.

Шағирҙар барыбер ваҡытында үлә һымаҡ. Лермонтовты, Есенинды, Туҡайҙы, Бабичты бабай итеп күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Рәшит Назаров өлкән йәшкә етте, ләкин барыбер гениаль үҫмер, гениаль егет булып ҡалды. Әллә юғары көс әҙәм балалары менән эксперимент үткәрәме тип уйлағаным бар. Ниңә кешенең үҙ-үҙен үлтереүе диндәр тарафынан хупланмай. Әллә эксперимент боҙоламы? Әллә юғарынан билдәләгәнсә кеше йәшләй генә зиһендең иң юғары бейеклектәренә күтәреләлер ҙә был балҡыш һүнмәҫ борон юҡ ителәлер.

Банк, банкомат, банкнот, банкир, банкрот – барыһы ла шомло мөхит. Мин азат кеше тип күкрәк һуғыусы ла был шомло көстәрҙән азат түгел.

«Трудно быть трезвым в этом пьяном мире» (Шахтаманов)

Ҡартатайымдар өйөндә бәләкәй генә шкаф була торғайны. Шунда бер элекролампочка бар ине. Шуның яҡтылыҡ биреп янғанын белә инек. Шуны күрһәң икән тип хыяллана инек. Хәҙерге сабыйҙар мәктәпкә барғанса үк күпте беләләр. Балаларға хыялланырға сәбәп аҙая бара. Сер кәмей.

Мостай Кәрим, Ҡайсын Кулиев – философтар. Бигерәк тә мәҡәләләрендә уйланыуҙар фәлсәфи, фекерҙәре тәрән. Берәй мәҡәлә яҙыр алдынан уларҙы һәм башҡаларҙы уҡып алам.

Ниндәйҙер шағир тураһында һөйләгәндә Мостай ағайҙар, дөйөм фәлсәфәгә бирелеп, төп теманан ситләшкән дә һымаҡ. Ләкин уйланыуҙарын уҡыуы барыбер ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә. Минең өсөн улар фекерләү көсөнөң, һүҙгә талапсанлыҡтың юғары өлгөһө. Рәсүл Ғамзатовтың ундай мәҡәләләрен уҡып хайран ҡалғаным юҡ, гәрсә шиғырҙары мине ошо атаҡлы дуҫтарының шиғриәтенә ҡарағанда нығыраҡ тетрәндерҙе. Рәсүл Ғамзатов ҡойоп ҡуйған шиғырҙар яҙған талант, Мостай Кәрим – аҡыл эйәһе.

31 август, 2015 йыл. Дүшәмбе.

Бына календар йәй үтеп тә китте. Ғәҙәттәгесә, йәй быйыл булманы ла инде. Башта эҫеләр булып алғайны, артабан ямғыр ҙа ямғыр. Һыуыҡ. Иң ҡыйыны – игенселәргә. Уңышты йыйып алырлыҡ көн юҡ.

Быйыл йәй һәйбәт эшләнелде. Ырымбур сәйәхәте, Сафуан Әлибай, Зиннур Ураҡсин, Магомед Ахмедов тураһында мәҡәләләр, «Ҡыҙыл таң»ға ҙур интервью яҙылды. Этноауылдағы шиғриәт байрамы тәьҫирендә яҙылған мәҡәләм «Киске Өфө»лә «Беҙҙең Өфөнән балаларҙыҡы матурыраҡ» исеме менән сыҡҡан. «Вечерняя Уфа»ла ла баҫылған, тик әлегә үҙем күргәнем юҡ. Ниңәлер нәҡ шул һан өйгә килмәне.

Дағстан шиғриәтенән байтаҡ тәржемәләр эшләнем. Былар барыһы ла бер йәй өсөн аҙ түгел.

Сәйәхәттәр ҙә байтаҡ булған икән. Баймаҡ, Күгәрсен (2) сәфәрҙәре. 29–30 августа Ырымбурҙа йөрөп ҡайттыҡ. Бынығы тыуған яҡтарға быйыл йәй өсөнсө ҡайтыуым: июнь башында, июль башында, август аҙағында.

Был юлы Наил ҡустымдың улы Илгиз алып барҙы. Фәриҙә, Наилә килен, Наташа һәйбәт йөрөп ҡайттыҡ. Барғанда ла, ҡайтҡанда ла ямғыр, урыны менән ҡойоп яуа.

Зөлхизәнең етмеш йәшен туғандар йыйылып уның өйөндә бик матур үткәрҙек. Рәмилә баянын алып килгәйне. Бик матур йырланы-

лар. «Ауыл көйө» йәш сәктарҙағы ауылға алып ҡайтҡан һымаҡ булды. Кафе-фәләндә былай иркенләп йырлашып ултыра алмаҫ инек.

Һый өҫтәлгә һыймай. Германиянан Зөлхизәнең улы Рөстәм дә ҡайтҡайны.

Сафуан тураһындағы мәкәләмдең аҙағында уның «Салғы сыңы» поэмаһынан һуңғы строфаны килтерҙем:

Яҙмыш тигән аҡланымда
Эй килә сабып ҡалғы.
Шуға ғына эсем боша –
Йоҡара бара салғым.

Мәкәләмде «Сабып йоҡарған салғы» тип атарға ла уйлап ҡуйғайным. «Нурлы, йырлы ижад» тип исемләнеп. Трафаретыраҡ булды инде.

Динистең ҡәйнеше Әкрәмдең улы Урал душты яңынан эшләгәйне. Әле ингәнебеҙ юҡ. Келәш янындағы баҡсала Динистең ҡыҙҙарында Ҡөрьән ашында булдыҡ. Элек күпме ҡәләмдәштәребеҙ гөрләп йәшәгән сәктарҙы хәтерләү моңһоу. Хәҙер яҙыусыларҙан бында Факиһа Туғыҙбаева ғына.

25-дә Яҙыусылар союзында Рәсимә Ураҡсина менән бәхилләштек. Халыҡ бик күп булды. Башҡорт театрында хушлашырға кәрәк булған. Ойошторoусы юҡ.

Туғаным, һағынғаным.

Ҡалмағайны, ҡамағайны.

Һуңғы үкенесем. Һуңғы үтенесем.

27 августа «Родина» кинотеатрында башҡорт киноһы фестивалендә булдыҡ. Киностудияның 25 йыллығына арнап байтаҡ фильм күрһәтелде.

1982 йылда Зөлхизәгә арнап «Атайымдың үлгән көнөнән алып...» тигән шиғыр яҙғайным. Әле юбилейына барыр алдынан «Утыҙ өс йыл ғүмер үтеп киткән...» тигән шиғырым тыуҙы. Күңел тулышҡан, илһамлы шиғри осор башланыр һымаҡ.

Быуындар алмашынһын – тәбиғи үҫеш.
Зиһендең алмашыныуы – ҡыйралыш.

Зөлхизәгә шиғыр яҙғанда уйлап ҡуйҙым, хәтерләнем Мостай Кәримдең туғандарына арнауҙарын: инәһенә, Илгизгә, Әлфиәгә... Күп түгел.

1 сентябрь, 2015 йыл. Шишәмбе.

Сәғәт 4-тә тороп, был дәфтәрҙе төшкә тиклем тулыһынса уҡып сыҡтым. Моронлағанда төртөп ҡуйған шиғырҙар байтаҡ. Шуларға яңынан тотонорға уйлайым. Мәҡәләләр осоро үтте, шиғырҙар ябырылырға тора. Ул саҡта был дәфтәргә тиҙ генә ҡул теймәҫ.

22 сентябрь, 2015 йыл. Шишәмбе.

Көн ныҡ ҡына ҡыҫҡарҙы. Кисә көн менән төндөң тигеҙ ваҡыты ла үтеп китте. Ҡараңғы кистәр башланасаҡ.

Быйылғы ямғырлы йәйҙән һуң аҙыраҡ аяҙытып, әбейҙәр сыуағына оҡшап тора. Кисә Фәриҙә, Артур, Сабина зыяратта булды, Айҙарҙың тимер рәшәткәһен буяны. Ҡәберенең өҫтөн нығлап яңынан эшләткәйнек. 7 сентябрҙә.

Ҡайһы саҡта көндәр атта елгән һымаҡ үтә, ҡайһы саҡта ҡуҙғатып та булмай. Һуңғы ун көн атлап түгел, саҡ ҡуҙғалып йөрөйөм. 10 сентябрҙә йығылып билде ныҡ ауырттырҙым. 14–19 сентябрҙә 18-се больницала дауаландым.

Серен күберәк асҡан һайын
Донъя нығыраҡ серлерәк.

Башҡортто Уралға килтергән мифик бүре тураһында риүәйәттәр. Изге бүрегә инанһаҡ та, үҙебеҙ бүрегә әйләнмәйек.

Өйләнешкәндәр – өйһөҙҙәр.
Телдәре бар – һүҙһеҙҙәр.
Күрһәләр ҙә – күҙһеҙҙәр.
Көндәре бар – көнһөҙҙәр.
Яһарырғамы яҙмышҡа?
Үҙҙәреме йүнһеҙҙәр?
Йүнһеҙҙәр – йүгәнһеҙҙәр.

«Ҡазан уттары»ның баш мөхәррире Илфаҡ Ибраһимов журналдың быйылғы 8-се һанын ебәргәйне. Тулыһынса Туфан Миңнуллинға арналған. Бик йөкмәткеле. Бик ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтым больница-ла. Туфан ҙур драматург, көслө шәхес. Уның бөйөклөгөн халыҡ нығыраҡ белһен өсөн шулай аңлатып торорға кәрәк.

Хәҙерге кеше бигерәк зависимый. Ҙур авария булып, ут һүнһен – ҡалала тормош юҡ. Компьютерҙар эшләмәй. Бөгөнгө кешеләрҙең күбеһе компьютерһыҙ – ноль.

Тәбиғәт балалары меңәр йылдар буйы тәбиғәттән көс алып йәшәгән.

Тоцкий лагерында атом бомбаһын 1954 йылда 14 сентябрҙә шартлатҡандар. Беҙ Аҡбулаҡта уҡый инек, һалам өйөп йөрөгән инәйемдәр яҡтыһын күргән. Туҡ буйындағы иң ныҡ тетрәнеү.

Тәнҡитләр урында тәбрикләй,
Тәбрикләр урында тәнҡитләй.

Ҡаланың көҙгө сәскәләре бигерәк сағыу. Уларҙың иң тулы асылған сағы. Гәрсә донъя яҙын сәскә ата тиһәләр ҙә. Сәскә байрамы ла Өфөлә яҙ түгел, көҙ үткәрелә бит. Себеште көҙ һанайҙар, сәскәне көҙ баһалайҙар.

АҠШ-та Эдик Калифорния университетында магистратураны бөтөрөп ҡайтты. Ике ейәнем дә Америкала уҡып ҡайттылар, Артур – Мичиганда. Быға һөйөнөргәме, көйөнөргәме?

Мосолман дине һүрәт кемдеңдер йәнен һорай тип, кеше һүрәтен төшөрөүҙе тыя. Асылда һәр ижади эш ижадсының бөтә рухи көсөн һорай, йәнен ала бит. Әммә мәңгелек итә.

Хәҙер күп йәштәр, шул иҫәптән минең ейәндәр ҙә, туған тел практик тормошта кәрәкмәй тиҙәр. Улайһа атайың-әсәйеңдән дә файҙа ғына көтөргәме? Улар артыҡ йөк түгелме? Һинең практик тормошоңда кәрәктәрме? Меркантиль күҙлектән...

Беҙ дарвинизм тәғлимәтендә тәрбиәләндек. Хәҙер антидарвинизм көсәйә.

Киноға көҙгө кадрҙарҙы төшөрҙөк. Әле бөтмәнек. Көҙ тураһында шиғырҙарым аҙыраҡ икән, кинола уҡыр өсөн эҙләгәндә белдем быны.

9 октябрь 2015 йыл. Йома.

6-да Пушкин урамындағы больницаға индем. Неврология бүлеге, 403-се палата. Үтенеп һорағайным, бер үҙемде урынлаштырҙылар. Һәйбәт булды әле. Алда өс көн ял. Бәлки эшләп ултырып булыр.

Кисә Академтеатр бинаһында Шәрҡиәтселәрҙең Х Бөтәрәсәй съезды булды. Пленар ултырышта булдым, төштән һуң ИИЯЛ-ға секция ултырышына бара алманым, үкенесле. Унда беренсе булып сығыш яһарға тейеш инем. Текст яҙмаһам да, фекерҙәремде туплағайным. Барып булманы шул.

Шәреғ менән Мәғриб бәйләнеше көнсығыш илдәргә бәйле мәсьәләләр бөгөн бик үткер тора. Исламофобия көсәйә. Илдәрен

утҡа тотоу арҡаһында күпме халыҡ урынынан ҡуҙғалды, Европаға ябырыла. Элекке халыҡтар күсенеүе ваҡытында ҡылыс менән юл ярғандар. Хәҙер хәлдәр күпкә ҡатмарлыраҡ.

Евразиялыҡ башҡорт өсөн бик борондан таныш. Тамырҙарыбыҙ шәреҡтә, әммә ваҡыт үтеү менән милләтебеҙ көнбайышҡа йышыраҡ, нығыраҡ ҡарай барған. Салауаттың ҡобайыры, Аҡмулланың һүҙҙәре, XX быуат башында Мәжит Ғафуриҙең «Аурупа–Азия»һы, илленсе йылдарҙа Мостай Кәримдең «Европа–Азия»һы – көнсығыш менән көнбайыш бәйләнешенә миҫалдар етерлек. Сөнки йәшәгән еребеҙ, тарихи яҙмышыбыҙ шулай.

Пленар ултырышта Р.З. Хәмитов тәүге һүҙҙе әйтте. Республика башлығы тигән һүҙҙе сәхнәнән тәүге тапҡыр ишеттем.

Ҡазағстандан килгән Ҡыҫыр-али Дархан Ҡуяндыҡ улы телмәрен тик башҡортса уҡыны. Хатта акцент юҡ тиерлек. Беҙҙәге ҙур-ҙур етәкселәр өсөн бик һәйбәт һабаҡ бирҙе, әгәр аңлаһалар, бигерәк тә аңларға теләһәләр.

Йәш кеше, Астанала Халыҡ-ара төркиакадемияһының президенты, тарих фәндәре докторы, профессор икән. Рәхмәт әйтеп ҡулын ҡыҫырға ине, форсат булманы.

Пленар ултырышта Иҫәнбикә Тоған да сығыш яһаны. Субедей менән килгәндәр. Улар менән бер нисә тапҡыр осрашырға, Иҫәнбикәнең өйөндә, Субедейҙең эшләгән урынында булғайным. Бик күрешкем килгәйне, насип булманы. Тағы ла үкенес, ҙур үкенес.

Съезд Вәлидиҙең 125 йыллығына арналды. Рәсәй шәрҡиәтселәренең рәсми ойошмаға берләшеүенә лә 115 йыл икән. 3 секция, 4 симпозиум эшләне. Төрлөсә аталыуҙарының мәғәнәһе нимәләлер – аңлап еткермәйем.

Бер симпозиумдың Бабичтың 120 йыллығына арналыуы бигерәк тә ҡыуаныслы. Өс тапҡыр үлтерелгән Бабич буйынса быйыл өс тапҡыр ҙур фекер алышыу үтте: Яҙыусылар союзында, унан университетта, әле шәрҡиәтселәр съезында.

Быйылғы әҙәбиәт йылындағы иң ҙур ваҡиға шул булманымы икән? Әгәр һәйкәл ҡуйыу менән тамамланһа, хатта таман булыр ине. Әлегә бюст тураһында һөйләйҙәр, әммә Бабич бюҫка ғына һыйырлыҡ шәхес түгел.

Бабичтың 120 йыллығы Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы менән тура килде. Башҡорт тарихында шағирлек һәм яугирлек яҙмышының ҡушылыуы тураһында уйланһам, күпме ҡаһарман шәхестәр араһында

Шәйехзада Бабичҡа еткәне юҡ тип уйлайым. Ул бит яңы Башҡортостан өсөн утлы көрәштең, башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәтенең, тарихи күтәрелештең шиғри байрағы булған. Уның ҡанатлы һүҙҙәрен, хитап-оранын халыҡ ҡабатлаған, уның шиғриәте ышаныс һәм ҡыйыулыҡ өҫтәгән.

Нәккәр апайымдың ҡайныһы Ғәйзулла ҡоҙа Агишев шул ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан. Асҡарға Вәлидиҙең туйына ҡылыстарҙы ялтыратып, оҙатып барҙыҡ, тип һөйләй торғайны. Тарихты яҡшы ғына белә ине. Ватан һуғышында Будапешт яҡтарындағы ваҡиғаларҙы бәйет итеп көйләп һөйләй торғайны. Иң кесе улына Бабич исеме ҡушҡан, уның менән беҙҙең мәктәптә аҙыраҡ бергә уҡып алдыҡ, ул ваҡытта ҡоҙалар булырбыҙ тип кем уйлаған. Ғәйзулла Агишевтың (Сәғит Агиш менән ауылдаш) иң ҙур улы Түрәйән, унан һуң еҙнәм Салауат. Ҡоҙаның һәр һөйләгәнен яҙып алынмаған, йәш, иҫәр саҡ. Үҙе яҙған бер дәфтәр һаҡлана.

Кеше ғүмере йәндең мәңгелек юлдағы бер туҡталышы, ергә һоҡланып, шатланып, ҡайғырып, еңеп, еңелеп киткән бер мәле генә һымаҡ. Мәңгелек тураһында, иланһи көс тураһында йәшәгән һайын ныҡыраҡ уйландыра. Динде лә тәжрибәле, аҡыллы оло кешеләр нигеҙләгәндер, фәлсәфә – был тормоштан, фанилыҡтан туйыу, мәңгелекте эҙләү.

Бәхетте эҙләү үҙе бәхет. Уны көтөү, өмөтләнеү тормошто айырыуса мәғәнәле итә. Бәхеткә барып етеү шатлығы еткәндә барыбер кәмей бара. Уны ҡәҙерләй ҙә белмәйбеҙ. Һуңлап үкенәбеҙ.

Хәрәкәттә бәрәкәт тә, һәләкәт тә. Бигерәк тә кешелектең бөгөнгө хәрәкәтендә. Катастрофа.

Аҙ белгәнем бәлә ине,
Күп белеүем күберәк бәлә.

Бәхетле күрешеүҙәр дауам итһен,
Бәхетле ҡауышыу бер генә булһын.

Апаҡай, аппаҡҡай.

Юлъяҙмаларҙы байтаҡ яҙҙым. Юлдан яҙғандарым да яҙылманы түгел. Һис юғында бер аҙна донъянан айырылып, бикләнеп йәшәп, шул хаҡта яҙырға ине. Путевые и непутевые заметки.

Көҙгө сәскәләрҙең балҡышын
Һүрелдерә лә шул, һүндерә шул
Көҙгө ямғырҙарҙың һағышы,
Төңөлдөргөс һалҡын һулышы.

Йылы яҡҡа оскан ҡоштарҙың,
Ҡыштан ҡасып, ҡанат ҡағышы.

Ҡайҙа яҙғы йылы ямғырҙар?
Тәүге сәскә – умырзаялар,
Йәшелләнеп килгән киң ҡырҙар?

Кеше – йондоҙ, халыҡ – йыһан.
Йыһан йыһан булып ҡалыр.
Кеше кеше булып ҡалһын ине.
Кешене аңларға ине.

Берәй йүнле генә эш эшләнһә, рустар «Это тебе не фунт изюму» тигәндәр. Бер ҡаҙаҡ йөҙөм бер нимәгә лә һаналмаған. Беҙ йөҙөмдөң бер ҡаҙағын түгел, бер бөртөгөн дә күрмәй үҫтек. Күптәр әле лә бер ҡаҙаҡ йөҙөм ала алмай.

Һәр күренештеке һымаҡ һуғыштың да аҙағы була. Тыныслыҡ та өҙөлә, тормоштоң, йәшәйештең дә бер ваҡыт аҙағы булыр. Әммә беҙгә әллә ҡайҙарҙағы, әллә ҡасан киләсәк замандарҙағы түгел, кисәге, бөгөнгө, иртәгәһе борсой, төп уйыбыҙ шулар хаҡында.

Әҙәм балаһы ла бит ата-әсәһен, үҙенең ғаиләһен, ейәндәрен, бүләрҙәрен нығыраҡ уйлай. Ә бына һинең шәжәрәң ун быуындан һуң нисек булыр, шул саҡтарҙағы һинең туранан-тура дауам итер алыҫ балаларың нисек йәшәрҙәр – ул хаҡта бик үк уйланмайбыҙ. Сөнки ул саҡта буласаҡ тормошто күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Бынан ун быуын боронораҡ йәшәгән олатайым да минең, беҙҙең нисек йәшәребеҙ тураһында бәлки уйламағандыр ҙа. Сөнки уның үҙенең хәстәрҙәре башынан ашҡан.

Шашынып байлыҡ йыйыусы, халыҡты талаусы олигархтарға аптырайым. Маҡсаттары нимәлә?

Алдағы дүрт-биш быуыны заманында донъяның аҫты өҫкә әйләнмәҫ, урлап тупланған аҡсаларың көл булып осмаҫ тип кем әйтә

ала? Бигерәк тә беҙҙең Рәсәйҙә. Рокфеллерҙар сит илдәрҙә, бәлки, һаҡланыр, беҙҙәгеләр кисә – бар, бөгөн – юҡ.

Беҙҙең ҡатта ғына түгел, тотош хәстәханала дауаланыусы иң оло кеше Кузеев Жәүәт Ғүмәр улы. Әле ҡарт теремек, кисә генә Конгресс-холда байрам тантанаһында булдым, ти. 96-сы йәше менән бара.

Бер көн таяғымды юғалттым тип йөрөй. Тапҡан. Таяғыңды юғалтып китерлек ҡарт булыу насар түгел инде ул. Мостай Кәримдең шиғыры иҫкә төштө.

Аксаков баҡсаһындағы күлдә бер пар аҡҡоштарҙы күреп ҡалдым. Кисә юҡтар. Өйрәктәр күл өҫтөндә матур эҙ һалып, йөҙөп йөрөйҙәр. Егермеләп барҙыр. Күл өҫтөндәге биҙәк кеүек эҙҙәре шунда уҡ юйыла. Әҙәм балаһының ер өҫтөндәге эҙҙәре тураһында уйландым. Ҡапыл юғалмаһа ла, бик күптәре барыбер юҡҡа сыға бит.

Был өйрәктәр тауыш бирep ала. Нимә тураһында һөйләшәләр, көнъяҡҡа осоп китергә ваҡыт етте тип нисек аңлашалар, юл башлап барыусы ҡаруан башлығын нисек билдәләйҙәр икән? Уйламаһаң да уйландыра, уйлаһаң, баш етмәй.

Хәҙерге шиғриәттә образлылыҡты тема ҡыҫырыҡламаймы, политика поэтиканың гармонияһын боҙмаймы? Сәнғәт менән сәнәғәтте бутамаҫҡа.

Массажға йөрөй башланым. Бөгөн онотҡанмын. Күпме массажистарҙа булдым, һәр берһе үҙенсә. Һәр кемдең үҙ хәрәкәте, ҡулының үҙенсә ҡабатланмаҫ һылауы-һыйпауы.

Һәр кемдең үҙ тауышы була бит. Улар ҡабатланмай, уларҙы бутап булмай.

Ә ниңә беҙҙең шиғриәттә улай түгел? Күптәр массажист тиклем дә була алмай. Башҡаларҙы ҡабатлай, үҙенеке генә булған тауышы юҡ. Шәхес юҡ.

Аксаков көндәре иҫкә төштө. Туҡай урамындағы Софья аллеяһында башынан аҙағына тиклем өҫтәлдәр теҙелгән, әллә күпме оҫталарҙың әйберҙәре ҡуйылған, үҙҙәре лә шунда. Ҡала ғына түгел, райондар ҙа килгән. Ҡапҡа алдында (Салауат баҡсаһының) Ҡырмыҫҡалы районы үҙешмәкәрҙәре, башлыҡ та шунда.

Программала шиғыр өләшә, шағирҙар сығышы ла бар ине. Иң ситтәге беседканы билдәләгәндәр, бында халыҡ юҡ. Үҙебеҙгә үҙебеҙ шиғыр уҡыныҡ. Аҙаҡ Р.З. Хәмитов та килде, бер аҙ тыңлап ултырҙы.

Уны оҙатып йөрөүселәр ҙә байтаҡ ине. Алдан планлаштырып, шул саҡта башларға кәрәк булған. Мәсхәрә, алдан уйлау, ойоштороу бөтөнләй юҡ! Республика башлығының шағирҙар янына килеүе беренсе тапҡыр бит. Союзда эшләүселәр быға яуаплы булырға тейеш ине бит. Президент булырын белгәс, ниңә ныҡлап әҙерләнмәҫкә? Мәсхәрә инде, мәсхәрә! Башҡаса нимә тиһең?

Ошо шиғри осрашыуға әҙерләнгәндә Аксаковтың «Послание в деревню» тигән шиғыры иҫкә төштө. Шуны илһамланып тәржемә иттем. Тәүге һүҙҙе миңә бирҙеләр, башта шул тәржемәмде, унан һуң шиғырҙың оригиналын уҡыным. Шаҡ ҡаттылар, үҙеңдән өҫтәгәнһеңдер, бигерәк заманса бит тиҙәр. Сергей Аксаков башҡорт тәбиғәтенә һоҡланып ҡына йәшәмәгән, уның киләсәк яҙмышын уйлап, һыҙланған. Данлаған да, борсолған да.

Аксаков ижадының Башҡортостан тормошона төрлө яҡлап бәйләнеше хаҡында ентекләп яҙғы килә. Әлегә ҡул етмәй.

Аксаковтың әлеге шиғырын Денисов Владимир ҙа һөйләргә әҙерләнеп килгән икән. Шул хаҡта әйтте, уҡып торманы.

Элек ҡыҙҙарға ҡаҙай инек, хәҙер улар ҡаҙай. Клизма, укол менән.

«Одесса. Море. Пляж “Аркадия”». Пожилые люди сидят под зонтиком, а муж все время смотрит на молоденьких девушек.

– Аркаша, прикрой глаза и подбери слюни, этот десерт уже не для тебя.

– Раечка! Если я на диете, дай мне хоть посмотреть меню...

(«ЛГ», 30.09–6.10.2015)

Кисә оҙаҡ ҡына йөрөнөм. Күл моңһоу, кисәге өйрәктәр осоп киткән. Мәсеттә булдым, хәйер һалдым. Мәсет тирәһен матурлағандар, яңы бина төҙөлгән, тағы ла береһен һалалар.

Ҡотланып йыйылышайыҡ,
Тупланып таралышайыҡ.

13 октябрь, 2015 йыл. Шишәмбе.

Больницаға ингәнгә бер аҙна булды. Республика көнө үтеп китте. Өс көн ял булды. Тантаналы кисәгә саҡырмайҙар, гимндың һүҙҙәрен кем яҙғанын онотҡандар, күрәһең. Ғөмүмән, ул тантанала хәҙер яҙыусылар күренмәй тиерлек. Әйтерһең дә улар яңы Башҡортостан республикаһы өсөн һүҙ әйтмәгән, тырышып йөрөмәгән.

11-дә Ишмөхәмәт Ғәләүетдиновтың вафатын ишетеп шаңғып ҡалдым. Шиғыр яҙҙым. 12-дә – ул 10 йыл ректор булған сәнғәт академияһынан оҙаттыҡ. Бәхилләшеү һүҙе әйттем, шиғыр уҡыным.

Шул ҙур юғалтыу артынан тағы ла ҙур юғалтыу: академик Нияз Мәжитов китеп барған. Ҡайғы артынан ҡайғы. Бөгөн Фәндәр академияһында (Киров урамы) бәхилләшеү.

Хәҙер үҙең генә түгел, уй-фекерең дә, хис-кисерештәрең дә ҡапыл ғына йүгереп китә алмай. Матәм йыйынына йыйылған заман-даштарыма ҡарайым: ныҡ олоғаябыҙ, ҡартаябыҙ. Хәҙер мин дә төн уртаһында һикереп тороп яҙышырға ултыра һалып бармайым. Көс кәмеүҙән дә бигерәк өмөт-ышаныс кәмей. Элек хыялдар алға әйҙәй ине, хәҙер моңһоу хәтерләүҙәр артҡа һөйрәй. Тормоштоң мәғәнәһен, дөрөҫөрәге, мәғәнәһеҙлектәрен йәшәй-йәшәй нығыраҡ аңлайһың.

Хәҙер шиғыр яҙыусылар күп.
Булһын әйҙә! Күп булһын!
Сәхнәнән йырлаусылар күп.
Әйҙә күберәк булһын!
Улар бит ялыу яҙмайҙар,
Кешегә аҡырмайҙар.
Шиғырлы, йырлы ил –
Бәхетле, нурлы ил.

Йәшәй-йәшәй тормоштан төңөлөргә тейешмен һымаҡ. Ә донъя минең өсөн көндән-көн нығыраҡ яңыра. Анау көндө башлап ҡар яуа – беренсе күргән һымаҡ һоҡланам. Сабыйҙар үтә – тәү ҡат күргәндәй ҡыуанам. Хатта өйрәктәрҙең күл өҫтөн биҙәп йөҙөп йөрөүҙәре лә минең өсөн үҙенсә байрам. Донъяға һоҡланам да, уны аңлай алмай аптырайым да.

Мин һәр ваҡыт әллә нимә көтәм,
Ниҙер көтәм. Булмай төшөнөп.
Әле көнөм гөлтләп һүнер һымаҡ,
Әле уңыр кеүек ишелеп.

18 октябрь, 2015 йыл. Йәкшәмбе.

Йәштәр араһында ла боронғоно барлаусылар бар, шуныһы ҡыуандыра, өмөт, ышаныс арта. Сәнғәт академияһынан доцент

Гөлсәсәк Саламатованы элек репрессия ҡорбандары тураһындағы спектакль ҡарағандан белә инем. Сценарийҙың авторы ул ине.

Бабич тураһында Таңсулпан Бабичева менән әҙерләгән спектаклде Йылайырҙа ла күрһәткәс, Ильяс Таҡалов уға Гөлсәсәк ғүмерҙә ишетмәгән Зәбих Исҡужин тураһында әйткән. Гөлсәсәк Ырымбур архивында Бабич тураһында мин белмәгән ҡыҙыҡлы мәғлүмәткә (Бабич – драматург) тап булған. Ҡазан архивында эшләүе бигерәк тә табышлы. Йыш ҡына бер нәмәне эҙләйһең, уны тапмаһаң да, икенсе бик кәрәкле табышҡа юлығаһың. Әле ғалимә Зәбих Исҡужин тигән бик үҙенсәлекле шәхестең архивын Башҡортостандан беренсе булып ҡулына алған. Етмешенсе йылдарҙа мин дә Зәбих Исҡужин мираҫын Ҡазанда өйрәнергә тырышып ҡарағайным, килеп сыҡманы. Архивҡа үткәрмәнеләр. Гөлсәсәк ентекләп танышҡан, ошо сәфәрҙәре тураһында мәҡәлә яҙған. Минән инеш һүҙ һорағайны, әҙерләнем. Әле «Йәшлек»тә сығырға тейеш. «Ағизел»дә лә баҫтырырға кәрәк.

Зәбих Исҡужин тураһында ул китап яҙырға тейеш – яҙмыш Гөлсәсәкте был хазинаға юҡҡа юлыҡтырмаған.

Өләсәйемдең ағаһы Сәғит Мрәсов материалдарын йыйыуын һораным. Китап итеп әҙерләр инек. Гөлсәсәк Саламатова боронғо ҡулъяҙмалар буйынса белгес, Ишмөхәмәт Ғәләүетдиновтың шәкерте, Ғәйнислам Ибраһимовтың бер туған һеңлеһе.

Бер-бер артлы ҙур юғалтыуҙар. Ишмөхәмәтте оҙатҡас, бер көндән һуң Нияз Мәжитов менән бәхилләштек. Уға ла шиғыр яҙҙым. Бәләкәй генә һүҙ әҙерләп, уларҙың ҡырҡында баҫтырырға кәрәк. 11-дә Ишмөхәмәтте, 13-дә Нияз ағайҙы оҙатыу.

Таҡташтың да, уның ижадын өйрәнгән Зәбих Исҡужиндың да ғүмерҙәре бик иртә өҙөлә.

Серле үлемдәр.

Сығыр. Элекке генә түгел, хәҙерге тормошта ла үҙенсәлекле деталь. Ҡойолағы сығыр, балаларҙың арбаһын да сығыр тиҙәр ине. Тик ниңә сығыр тураһында юҡ шиғыр?

Ленин урамында кисә йөрөп килдем. Ике китап магазинына индем. Береһенән береһе матурыраҡ баҫмалар. Ҡыуандым да, хурландым да. Ошо байлыҡҡа ҡарап ҡыуандым. Шуларҙың бик күптәрен ошоға тиклем уҡый алмағаныма хурландым. Уларҙы уҡырлыҡ ваҡыт хәҙер ҡалманы инде. Беҙҙең китапханала урын алырға тейешле китаптар заманында бик ныҡ дефицит ине бит. Уҡыусылар күп ине, беҙ эҙләгән китаптар бик аҙ, ҡайһылары хатта юҡ ине. Хәҙер шуның

киреһе. Китаптарҙың ниндәйе генә юҡ – йәнен теләгәнен һайлап ал! Тик китаптар күп тә бит, уҡыусылар аҙ. Хаҡтары ла һәр кеше алырлыҡ түгел.

Бында телевизор ҡараштырам. Кеше ҡарай торған иң матур ваҡытта БСТ төрлө йүнһеҙ кинолар күрһәтә. Ҡазанды ҡуйһам, бик халыҡсан, матур тапшырыуҙар.

Бирәсәккә йәшәп булмай,
Ваҡытты көтәсәккә бирмәйҙәр.

Тирмә, тирмән. Икеһе лә ырыҫ билдәһе. Тирмән тарта, тимәк, етеш йәшәй. Мәҡәл иҫкә төштө: «Братлыҡҡа бырат, әммә тирмән тартҡаныңа не рад, көтөү көткәнеңә рад».

Аҫылғужаның 21-дә кисәһе. Ҡатыны Миңниса шылтыратты. Уның хаҡындағы телетапшырыуға яҙғайнылар, ҡарай алманым. Антологияға ингән шиғырынан ошо юлдарҙы килтерҙем:

Мин йөрөрмөн сикһеҙ киңлектәрҙә,
Барын алмай, тапмай юҡтарын.
Тамуҡ күреп ожмах баҡсаларын,
Ожмах күреп тамуҡ уттарын.

Иң талапсан антологияларға инерлек юлдар. Аҫылғужа тураһында яҙғанда уның саялығы, тура һүҙлелеге һ.б. тураһында әйтәләр. Уның уйсан саҡтарын да күрҙем, уйсан шиғырҙары ла аҙ түгел. Аҫылғужаның тәүге йыйынтығын тикшергәнде хәтерләйем. «Усаҡ тирәләй ултырған терпе сәс малайҙарҙы» һымаҡ юлдар һаман да иҫтә.

Баҡсалағы күлдән өйрәктәр китмәгән икән, бер барғанымда юғалып ҡына торғандар. Кисә икмәк алып, ҡоштарға бүлгеләп ашаттым. Балалы бер ҡатын рәхмәт әйтте, беҙҙе лә, ҡоштарҙы ла ҡыуандырҙығыҙ, тине.

2 ноябрь, 2015 йыл. Дүшәмбе.

20-дә больницанан сыҡтым. Үҙенсә ижад йорто һымаҡ бер ара булып алды. Яҙышып ултырҙым. Һаулыҡты ла нығытҡанмындыр тип өмөтләнәм.

21-дә Актерҙар йортонда Аҫылғужа Баһумановтың кисәһе – 70 йыллығы үтте. Ул йортҡа ингәс тә әллә күпме иҫтәлектәр уянды.

Заманында гөрләп торған ер ине бит. Беҙҙең иң ҙур әҙәби саралар, юбилей кисәләре һ.б. шунда үтә торғайны. Аҫылғужаның тәүге ҡулъяҙмаһын йәш ижадсыларҙың республика конференцияһында ошонда тикшергәйнек, һәйбәт баһалағайныҡ. Сығыш яһаусыларҙан иң элек миңә һүҙ бирҙеләр. Ошо хаҡта ла хәтерләп киттем. Миңнисаға Аҫылғужаның яңы китабын әҙерләгәне, кисәне матур ойоштороғаны өсөн рәхмәт әйттем. Шағир ҡатынының ҡатмарлы яҙмышы, уның мираҫын халыҡҡа еткереү тураһында һөйләнем, Надя еңгә, Рәйлә Бүләкова, Фәрҙиә Әлибаеваны хөрмәтләп һөйләнем.

Кисә матур үтте. Вәлиди китапханаһынан Айгөл менән сәнғәт академияһынан Земфира Хөсәйенова һәйбәт алып барҙылар. БДПУ студенттарын килтереүҙәре бик яҡшы.

Сәйенә ҡала алманыҡ. Артур алып ҡайтты.

29-да Гөлфиә Юнысованың ижад кисәһе, Академтеатрҙа. Беҙҙең зыялылар һәйбәт йыйылғайны. Күп көс һалғандар, һәләтле артистар ҡатнашты, ололары ла, йәштәре лә. Гөлфиә телефондан шылтыратып күптән саҡырғайны. Кисәһен бик кинәнеп ҡараным. Бик матур йомғаҡлаған һымаҡтар ине. Баҡһаң, тәүге өлөшө генә булған икән. Тәнәфес иғлан иттеләр. Бер аҙ өҫтәп, ошонда бер бүлек менән генә бөтөрһәләр, минеңсә, бик таман, ваҡытында тамам булыр ине. Икенсе бүлеккә ҡалманыҡ, Азамат Юлдашбаев алып ҡайтты.

31-дә таң менән Ырымбурға башҡорттарҙың өлкә ҡоролтайына юлландыҡ. Рөстәм Ғәбитовтың машинаһында (водителе Фәнис) Нурислам Ҡалмантаев, Илнур Мәмбәтов барҙыҡ. 12-лә башланырға тейеш ине, алдан килеп еттек. Йыйындың ҡоласы элеккенән түбәнерәк булһа ла, элеккесә вице-губернатор кимәлендә хөкүмәт ҡатнашмаһа ла (хөкүмәттең исем өсөн булһа ла бер вәкиле лә килмәне), делегаттар күпкә аҙыраҡ – иллеләп кенә кеше булһа ла, был йыйындың үтеүе бик кәрәкле сара. Өлкә ҡоролтайы рәисе Марат Сарбаев һәйбәт доклад һөйләне. Тартыш-бәхәс алдан ныҡ һиҙелә ине. Элекке рәис Рөстәм Ғәбитов һәйбәт алып барҙы. Миңә лә һүҙ бирҙеләр. Башта уҡ һөйләтмәксе инеләр, аҙаҡ һөйләүем урынлы булды. Хәҙерге иң ҙур дефицит – берҙәмлектең етмәүе, бигерәк тә беҙҙең яҡташтарҙың тарҡаулығы тураһында әйттем, Ушинскийҙың туған тел тураһындағы һүҙҙәрен уҡыным, Әмир Абдразаковҡа арналған шиғырымды уҡыным. «Ә һин бына башҡорт булып ҡара йәшәп ситтә Башҡортостандан!» – был һүҙҙәр нәҡ ошо йыйын өсөн яҙылған һымаҡ.

Нурислам менән мине делегат итеп һайланылар. Көнөнә әйләнеп ҡайттыҡ, киске унынсыла. 9–10 сәғәт ваҡыт юлда үтелһә лә, бик ялҡытманы. Нурислам менән күп нәмәләр тураһында һөйләшеп ҡайттыҡ. Үҙем өсөн байтаҡ мөһим яңылыҡтарҙы белдем.

Ҡайтышлай Иманғол ауылында мәктәпкә инеп сыҡтыҡ. Каникул ваҡыты, балалар юҡ. Шулай ҙа хакимиәт башлығы, мәктәп директоры, бер-ике уҡытыусы, бер нисә бала, оло кешеләр менән осрашып, һөйләшеп киттек. Алдан һөйләшелгәс, көтөп торғандар. Сығыш яһаныҡ, ике шиғыр уҡып («Күрше», «Балтырған»), китаптарымды мәктәпкә лә, ҡатнашҡан кешеләргә лә бүләк иттем.

Мәктәптәре иркен, матур. Әлегә туғыҙ йыллыҡ. Артабан Татар Иманғолоның урта мәктәбенә баралар икән.

Ниндәй бөйөк тарихи шәхестәрҙе – Бәхтегәрәй Шәфиевте, Вәли Мортазин-Иманскийҙы, Иҫәнсуринды биргән ауыл. Мин бында студент сағымда – илленсе йылдар аҙағында, Өфөгә барышлай ҡунып киткәйнем. Саф башҡорт ауылы ине. Ни арала ғына татарға әйләнгән дә ҡуйған. Сөнки мәктәпкә татар уҡытыусылары килеп тулған. Әле аҙнаһына ике сәғәт башҡортса уҡыталар. Ләкин уның менән генә хәлде үҙгәртеүе ҡыйын. Бәхтегәрәй Шәфиевтең туғаны булған бер апай ҙа бар ине. Элекке уҡытыусы икән, әле саф башҡортса һөйләшә лә татарсаға күсә лә китә.

Мәктәптә музей кәрәк, урын етмәй, тиҙәр. Иркен күренә, урын табырлыҡ. Теләк кәрәк.

Әле Ырымбурға барып әйләнеүебеҙ быйыл йәйге-көҙлө тыуған яҡтарыма дүртенсе ҡайтыуым булды. Башҡа йылдарҙа ла күрмәй ҡалманым, тик быйылғыһы үҙенсә рекорд.

Өфө-Ырымбур юлында бер урында элекке бәләкәй колесный тракторҙы һәйкәл итеп күтәреп ҡуйғайнылар. Хәҙер уның урынына һыйыр тора. Минеңсә, дөрөҫ алмаштырғандар. Иң ауыр саҡтарҙа ауыл кешеһен ошо мал ҡотҡарған. Юҡҡамы ни, берәй ауырлыҡ килһә, «ниңә ул тиклем ҡайғыраһың, һыйырың үлмәгән дә инде», ти торғайнылар. Урыҫтың да «не проиграл же корову!» тигән һүҙе бар бит.

Кисә илдә матәм көнө үтте. 200-ҙән ашыу кеше самолет ҡолап һәләк булды. Ҡара ящиктар табылған.

Беҙгә килде күпме фажиғәләр,
Илем күпме ҡабат яндырылды,

Күпме ауылдарҙан тик көл ҡалды,
Тик һуң ҡайҙа ҡара ҡумталары?

Халҡыбыҙҙың тарихи йырҙары, эпостары һ.б. милләтебеҙгә килгән һәләкәттәрҙе теркәп ҡалдырған ҡара ҡумталар түгелме?

16 ноябрь, 2015 йыл. Дүшәмбе.

Парижда атыш-шартлауҙар, ҙур фажиғәләр. Ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителгән. Бындай үлтерештәр һәр илгә, һәр кемгә барып етергә мөмкин. Бөтә донъя күләмендә ғәҙәттән тыш хәл бит. Шундай заманда йәшәйбеҙ.

Йорт йораты.

Пророки и пороки. В наше время чем больше пророков, тем больше пороков.

Телә генә – теләгемә.

Минута молчания, час молчания, годы молчания, век молчания.

Бирән–тиран. Диктатор – тотор ҙа аҫыр, тотор ҙа атыр. Үҫеште туҡтатыр.

Ни ҡар, ни ямғыр,
Булмай туҡтатып.
Бысраҡҡа ҡушып,
Тапала ваҡыт.

Һөйрәлә ваҡыт, тайып, һөрлөгөп китә.

3 ноябрҙә Азамат Юлдашбаевта яңы кабинетында тәүге ҡабат булғайным, Дағстан тәржемәләрен, ике ғалимыбыҙҙың ҡырҡына (Нияз, Ишмөхәмәт) арналған һүҙ, ике шиғыр алып барғайным. Бына тап килеү: «Тауҙар тауышы» тигән тәржемәләр нәҡ Магомед Ахмедовтың тыуған көнөндә, 13-дә йомалағы ҡалын һанда ҡәләмдәштәр бергә төшкән фото менән матур килеп сыҡҡан. Магомед 20 ноябргә саҡырғайны ла, байрамына барып булмай, 21-дә дүртенсе бөтә донъя ҡоролтайы. Өсөнсө тапҡыр Дағстанда булһам, Дербентҡа барып етермен тигәйнем. Үкенесле, килеп сыҡмай.

14-дә Дәүләкәнгә көнөнә барып әйләндек. Кисә һуғымды килтерҙеләр.

Дәрдмәнд тураһында мәҡәләмде яңынан ҡарап сыҡтым. Нисә көндә яҙғанымды хәтерләмәйем, әммә бик тырышып, илһамланып эшләгәйнем. Һәйбәт килеп сыҡҡан. Уны ла, Зөлфәт тураһындағы инеш һүҙемде лә «Ҡазан уттары»нда баҫтырырға кәрәктер.

4-дәге байрамды байрам итеп тойоп өйрәнеп булмай. 7 ноябрҙе бер ҡасан да онота алмам.

«Бельские просторы» (2015, №10) журналында «Американский дневник» баҫылған. 11-се һанда Магомед Ахмедов тураһындағы мәҡәләне көтәм.

АН-ға 2015 йылдың отчетын төҙөп ултырҙым. 10 мәҡәләм баҫылған. Институтта эшләгән саҡта ла улай булмай торғайны. Ул тиклем яҙылманы ла. Яҙһаң да, хәҙерге һымаҡ баҫтырыр урындар күп түгел ине.

Әлегә 10 мәҡәләнең өсәүһе генә элекке баҫмаларҙа сыҡҡан («Башҡортостан», «Ҡыҙыл таң», «Ағизел»). Ҡалған бишәүе яңы баҫмаларҙа («Бельские просторы», «Ватандаш», «Истоки», «Киске Өфө», «Проблемы востоковедения»). Үҙебеҙ хәҙер өйрәнеп бөткәнбеҙ, әммә ижад өсөн шарттар яҡшы яҡҡа ныҡ үҙгәргән, мөмкинлектәр артҡан. Был хаҡта берәй мәҡәләмдә әйтергә кәрәк.

«Энциклопедия»ла Уйылданда булдым. «Мостай Кәрим» энциклопедияһы буйынса эштәрҙең осона сығып булмай. Мин уның баш мөхәррире. Авторҙарға түләргә аҡсалары юҡ, ә бушҡа эшләргә талпынып тормайҙар. Үҙем тағы ла өс мәҡәлә яҙып алып барҙым, тағы ла яҙырға уйлайым.

«Башҡорт энциклопедия»һының барлыҡҡа килеүе – үҙе үк тарихи ваҡиға бит. Ҡәҙерен белһәң...

Мәмерйәләге боронғо һүрәттәр – кешенең мейеһендәге яңы һырҙар.

Ҡайһы бер әҙиптәрҙең яҙыу сәғәттәре уйлау сәғәттәренән, уйланыу ваҡыттарынан күберәк. Киреһенсә булырға тейеш.

Хәйер насарайған һайын хәтерләүҙәр күберәк. Улар нығыраҡ һыҙландыра, алыҫайған һайын яҡыныраҡтар, йышыраҡ иҫкә төшәләр. Хәтер һәләте кәмей, һағыныуҙар арта.

Салауат, Бабич, Рәшит Назаров – милләтебеҙҙең өс тантанаһы, өс фажиғәһе. «Егерме лә ике йәшендә...» – Салауат тураһында халҡыбыҙ шулай йырлай. Бабич йәшләй үлтерелә, Салауатты йәшләй тыуған еренән көсләп айыралар, Рәшиттең зиһене йәшләй ҡараңғылыҡҡа бикләнә. Ошолар хаҡында уйланып, «Өс яҙмыш» тигән мәҡәлә яҙғы килә.

«Көндәлектәр»ҙең 2-се томында 649-сы биттә 31 март 2009 йыл Башҡортостандың яҙмышында ҡара шишәмбе булмаҫмы тип яҙғанмын. Башҡорт нефтен юғалтыу. Ғүмер үткән һайын ул

юғалтыуҙың ни тиклем ҙур булғанлығын, тарихтағы киләсәк быуындарҙы рәнйетерлек хата икәнлеген нығыраҡ тоябыҙ.

Алданыр көндәр алда.

Үҙемә үҙем әйтәм ҡайсаҡ:

– Булған бәхет китмәһен.

Өмөт бөтмәһен.

Тик алда

Әллә ниҙәр көтмә һин!

3 декабрь, 2015 йыл. Кесаҙна.

21 ноябрҙә Конгресс-холда IV Бөтә донъя башҡорттарының ҡоролтайы үтте. Республика башлығы Р.З. Хәмитов сығыш яһаны. Румиль Аҙнабаевтың докладында байтаҡ үткер мәсьәләләр ҡуйылды. Бик күп китаптар бүләк иткәйнеләр, шунда доклад та бар. Ҡарап сыҡтым, бик төплө эшләнгән, тотош ғилми хеҙмәт. «Ватандаш»та баҫтырырға кәрәк.

Ҡоролтайҙың ҡоласы бәлки элеккеләрҙән тарыраҡ булғандыр. Делегаттар ҙа ике тапҡырға кәмерәк, 400-ҙән ашыу. Эш бер көндә тамамланды: ике сәғәт пленар ултырыш, унан һуң секциялар, шунан йомғаҡлау йыйылышы. Етәксе итеп Әмир Ишемғолов һайланды.

4-се ҡоролтайҙа ҡатнаштым. Был юлы йәштәр секцияһына барҙым. Пленар ултырыштағы ла, ҡалған секцияларҙағы (мәғариф, эшҡыуарлыҡ, дәүләт төҙөлөшө, ер һ.б.) мәсьәләләрҙе хәл итеү асылда йәштәрҙең эшмәкәрлегенә килеп тоташа бит. Исеме үк шул маҡсатты билдәләй: «Йәштәр – башҡорт халҡының стратегик ресурсы». Бөгөн йәштәребеҙ нисек – иртәгә милләтебеҙҙең хәле шулай буласаҡ. Уйланыусы, тырыш, инициативалы йәштәр бар, тупланырға тырышалар. шуға ҡыуанып ҡайттым. Аҙаҡ һүҙ әйттем, «Тик еңеү өсөн» тигән шиғырымды уҡыным. «Йәшлек»тә (27.11.) фото менән биргәндәр.

Ситтән килгән йәштәр етәкселәре булды. Мәскәүҙән Азат Баҙранов һөйләне. Күмертауҙан Марат Ғилманов. Ҡоролтайҙың йәштәр советы рәйесе Рәмзил Байназаров алып барҙы.

Ҡоролтай бөткәс, Ырымбур делегацияһы менән ҡунаҡханала ултырып алдыҡ.

Донъя хәлдәре бик киҫкен тора. Төркиә беҙҙең самолетты бәреп төшөргәндән һуң хәлдәр бик ҡырҡыу. Кисә Асҡарҙың алты йәшен үткәрҙек, матур ултырҙыҡ. Киләсәктең именлеге тураһында борсолоп уйландым.

Кисә Актерҙар йортонда ҡала ветерандары менән осрашыуҙа сығыш яһаным. Башта һүҙ бирҙеләр. Шиғырҙар уҡыным, һүҙ әйттем дә бөгөн алты йәшлек Асҡар бүләмдең тыуған көнө, байрамдың аҙағына тиклем була алмайым, тип халыҡҡа аңлатып, китергә тура килде.

«Йәшлек»тә Америкалағы башҡорт ҡыҙы тураһында ҡыҙыҡһынып уҡыным. Стәрлетамаҡтан Лилиә исемле ҡыҙ. БДПУ-ның башҡорт бүлеген тамамлағас, АҠШ-ҡа киткән. Алты йыл йәшәй, уҡыуын дауам итә. Башҡорт театрын, концерттарын һағына. Хәҙер беҙҙең башҡорт йәштәре әллә ҡайҙарҙа тормош сығырыуы үтә. Нығынып, ҡараштары киңәйеп, Башҡортостанға күберәк әйләнеп ҡайтһындар ине лә бит. Әммә...

Черчилдең әсәһе ирокездар ҡәбиләһенән булған икән.

Ханты-Манси округында 40 меңдән ашыу башҡорт! Элек башҡорттар ундай яҡтарға һөрөлөп кенә киткәндәр. 40 мең – тотош халыҡ бит. Демография бына нисек үҙгәрә, милләтебеҙҙең иң эшләрлек кешеләре донъя буйлап ситкә һибелә.

Мудрый һүҙен башҡортса бер һүҙ менән әйтеүе ҡыйын. Аҡыл эйәһе була торғандыр. Ә мудрость нимә? Тәрән аҡылмы? Ә һай аҡыл буламы? Һай булғас, ул аҡылмы?

Ангел – хранитель. Фәрештәләрҙең һаҡлап ҡанат ҡағып тороуы. Ундай хикмәтле саҡтарым аҙ булманы. Минең ҡанат ҡағыуым менән фәрештәләрҙең ҡанат ҡағыуының тап килеүе.

Интернет әҙәбиәт барыбер күберәк бәләкәй, урыҡ-һурыҡ, өҙөк-йыртыҡ әҫәрҙәрҙән торор һымаҡ. Хатта бик аҡыллы фекерҙәр булғанда ла. Ҡыҫҡа яҙмалар рәүешендә. Романдарҙы, зур мемуар әҫәрҙәре, фундаменталь ғилми хеҙмәттәрҙе барыбер китаптарҙан, журналдарҙан уҡырҙар. Гәрсә уларҙы уҡыусылар көндән-көн кәмей барһа ла...

Ике аҙна беҙҙә Зөлхизә һеңлем. Бөгөн Ырымбурға ҡайтып китә. 20-дә «Урал» ресторанында Илгиздең 50 йәшендә булдыҡ. Ҡоролтай көндө Фәриҙә ҡатындарҙы саҡырып алды. Миңә тун алғанда Фәриҙә менән Зөлхизәгә лә бушлай матур курткалар бирҙеләр.

Февралдә Нәккәр апайымдың 80 йәше. Алла бирһә, иҫән булһаҡ, йәйгә үткәрербеҙ.

Магомед Ахмедовтың 60 йәшлек юбилейы 20 ноябрҙә үтте. Ҡоролтайға ҡайтып өлгөрә алмаҫ инем, шуға барманым. «Ағиҙел»дең, «Бельские просторы»ның 11-се һанында «Шағир доғалары» – «Молитвы поэта» тигән мәҡәләм сыҡты. «Башҡортостан»дағы тәржемәләр менән ебәрергә кәрәк.

Был арала матбуғатта минең баҫмалар байтаҡ булды. Элекке гонорарҙар заманы булһа, байтаҡ төшөм килер ине.

28 декабрь, 2015 йыл. Дүшәмбе.

Әҙәбиәт йылының аҙаҡҡы айында төрлө саралар йышайҙы. Рәми Ғарипов гимназияһында, Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге сәнғәт гимназияһында минең ижад кисәләрем һәйбәт үтте. Балалар бик һәйбәт. Уҡытыусылары ла (башҡорт теленән) тырыштар. Яңы етәкселәр. Был бик әһәмиәтле уҡыу йорттарында ҡатын-ҡыҙҙың етәксе булғанын күргәнем юҡ ине.

11 декабрҙә Фәндәр Академияһында дөйөм йыйылыш. Р.З. Хәмитов сығыш яһаны. Ә.С. Ғаязов президент итеп һайланды. 100 кешенән артыҡ һайлаусынан 2–3-әүе генә ҡаршы.

Шул уҡ көндө Башакадемтеатрында шиғри дуэль тип аталған бик үҙенсәлекле кисә үтте. Жюриҙа Олег Ханов, Наилә Ғәләүетдинова, мин. Шиғри бәйге ике сәғәттән артыҡ барҙы, бер ҙә ялҡытманы. Бик үҙенсәлекле ижади алыш – осрашыу. Киләсәктә ҡабатланыр, үҙенсә традицияға әйләнер һымаҡ. Хатта дәүләт эшмәкәрҙәре (Салауат Сәғитов, Зөһрә Рәхмәтуллина), йәштәр ҡатнашты. Финалда Азамат Юлдашбаев менән Эвита Гайнет тигән йәш шағирә (рус телендә яҙа) сығыш яһаны. Азаматтың әйткән һүҙе бик йөкмәткеле булһа ла, ҡыҙыҡай бик ихлас уҡый, шиғырҙары ла һәйбәт. Шиғри дуэлдә еңеүсе шпагаһын уға биреп, дөрөҫ эшләгәнбеҙҙер тип уйлайым. Мин тапшырҙым, О. Ханов һүҙ әйтте. Поединоктар күп булған, ҡатын-ҡыҙҙың еңгәне тәүге тапҡыр тинем.

Еңеүсе йәш шағирә Инйәрҙән Айһылыу Ғәйнетдинова тигән башҡорт ҡыҙы булып сыҡты.

16-да БДУ-ла Мирас Иҙелбаевтың 70 йәшлек кисәһе.

Ғәҙәттәгесә артыҡ һуҙылыбыраҡ китте. Банкетына ҡалмаҫҡа ине лә, иптәштәрҙән айырылғы килмәне. 18-дә таң менән Мәскәүгә осоуы еңелдән булманы.

Мәскәүҙә башҡорттарҙың Федераль мәҙәни-милли автономияһын ойоштороуҙа ҡатнаштыҡ. Беҙ Илшат Сабитов, Сәлмән Ярмуллин, Миндеғафур Зәйнетдинов бергә барҙыҡ. Ҡайтҡанда самолетҡа һуңлап, 19-да кис менән генә өйгә ҡайтып еттек. Көнөнә әйләнергә тейеш инек.

Башҡорттарҙың бындай автономияһы Силәбелә, Свердлов өлкәһендә, Татарстанда бар. Ырымбурҙа ла ойошторорға кәрәк. Мәскәүҙәге ойошманың етәксеһе Лилиә Ғүмәрова, урынбаҫарҙары Морис Йосопов менән БДУ проректоры Юлай Янбаев.

23-дә БДУ-ла Әҙәбиәт йылының аҙағына арналған кисә 12-лә башланды. Ҡәләмдәштәр байтаҡ ине. Уларға һүҙ биргәнсе бындағы етәкселәр һөйләне, концерт барҙы.

Мин университетта саҡта яҙылған, «Дала офоҡтары» тигән тәүге китабыма ингән бер нисә шиғырымды яттан һөйләнем. Гимназияларҙа ла ҡағыҙһыҙ ғына сығыш яһағайным. Хәтерең шәп икән тип аптырайҙар.

Сығыш яһағас, радиоға киттем, яңы йыл ҡотлауын яҙҙылар. Шиғри шәлкем дә яҙҙырмаҡсылар ине, уларын бер өс блок итеп аҙаҡ эшләргә булдыҡ. Союзға инеп, Луизаға яңы китабымдың ҡулъяҙмаһының ҡыҫҡартылған вариантын ҡалдырҙым. Бер китабымды ла былай ҡат-ҡат эшләгәнем юҡ ине.

Радионан Артур килеп алды, Союзға һуғылдыҡ. Атлауы ҡыйын, аяҡтар, бил ауырта. Саҡ ҡайтып йығылдым.

Кисә Фәриҙә менән Тимер Йосоповтарға барҙыҡ. Ирек Кинйәбулатов менән дә һөйләшкәйнек, ул да тап булды. Тимерҙең хәлен барып белеүебеҙ һәйбәт булды. Тик кәйеф ныҡ ҡырылды. Тимерҙең хәле һәйбәттән түгел. Хәтере ҡалмаған тиерлек. «Хәтере ҡалды» тигән һүҙ кешенең ауыр кисерештәренә ҡарата әйтелә. Ә бына хәтерҙең бөтөнләй тиерлек ҡалмауы тағы ла ауырыраҡ икән.

Торатау. Тора тау. Торасаҡ тау.

Оятҡа ҡала күрмә.
Иң ҙур оятҡа ҡалыу – үҙ милләтеңдән оялыу.
Кешегә иң мәсхәрәһе – булған оятҡа ҡалыу.
Башҡорт өсөн иң ҙур оят – башҡортлоҡтан оялыу.

Оялмаған, аямаған, яман, ямаҡ.

Көндәлектәр менән булам. Луизала ике дәфтәр. Тағы ла береһен ҡарап сыҡтым.

Хәҙистәрҙе дауам итергә ине. Яңыларын табыуы ҡыйын. Бик ҡалын китаптарға тупланғандары бар. Тик миңә бик ҡыҫҡа, тапҡыр, фәлсәфи йөкмәткелеләре кәрәк. Ундайҙары һирәк.

Мәскәүҙә Сергей Соколкин миңә шылтыратҡандан һуң Лариса менән мин әҙерләгән «Дастан о Башкортостане» тигән китап матур булып сыҡҡан. 15 шағирҙың шиғырҙары. Тик һатыуҙа булмаясаҡ, Мәскәүҙә бәләкәй генә тираж таралып бөткән. Беҙгә 30 экземпляры килеп етте. Һәйбәт кенә эш тә шулай күңелде ҡырып ҡуя.

Балҡарҙарҙың «Менги тау» (мәңгелек тау йәки эйәр тау) журналы башҡорт әҙәбиәтенә арналған. Минең Ҡайсын Кулиевҡа арналған «Йәннәттә шағир йәне» тигән ҙур шиғырым, уның тураһындағы мәҡәләм ингән. Журналдың тиражи 1800 экземпляр.

Мәскәүгә Силәбе башҡорттарының гәзите «Уралым»ды баш мөхәррире Нурия Иксанова алып килгәйне. 8 биттә матур булып сыға икән, айына бер тапҡыр. Тираж 8000 дана, ҙур һан бит. Йосоповтар бушлай ҙа таратыу ойошторалар ҙыр тип уйлайым.

Бөтә материалдар ҙа русса. Тик Сәләм тураһындағыһы – башҡортса.

Телефондарҙы яҙған блокнотым иҫкерҙе лә, ҡапыл яҙып, буталған урындары ла байтаҡ. Йәтеш кенә бәләкәй блокнот алдым. Үҙе кескәй булһа ла, хаҡы ҙур.

Шуға алфавит буйынса блокноттарҙы күсереп ултырам. Хәҙер моңайтыр сәбәптәр арта. Был телефондар исемлегендәге күпме кешеләр мәрхүм булған. Яңы исемдәр ҙә өҫтәлгән, тик киткәндәр юҡһындыра.

Баҡсала йоҡа ғына ҡарҙы көрәгәндә таш плиталар ситендәге ҡара ер асылып китә. Шунда турғайҙар күмәкләшеп килеп төшә: ем эҙләйҙәр. Улар өсөн ерҙең ҡәҙере ҡыш көнө бына шулай арта. Ерҙән айырылғас ҡына кеше лә уның ҡәҙерен нығыраҡ белә шул.

Мәрйәм Бураҡаеваның пьесаһы халыҡ-ара ябыҡ (авторҙың исеме күрһәтелмәгән) конкурста еңеп сыҡҡан, йөҙҙән ашыу әҫәрҙәр араһында. Уны тамашасыларға тиҙерәк еткерһендәр ине.

Ҡайһы берәүҙәр, имеш, китаптар юҡ тип зарлана. Китаптар өйөлөп ята, алыусылары аҙ. Уҡыусылар һаны тираждарҙан тиҙерәк кәмей.

Һаман ныҡлап ҡыш була алмай. Мәскәүҙә ҡар бутҡаһы йырып йөрөнөк. Өфөлә һыу кисәбеҙ. Әле һыуыта башланы, ҡар яуа.

Ҡыш башлана ла тәүге ҡар
Йыш бөтә иреп.
Бер ағарғас, ҡараймай шул
Сал сәсе ирҙең.

2016

6 ғинуар, 2016 йыл. Шаршамбы.

Дүртенсе көн баҡсалабыҙ. Килгәндә өй һыуыҡ ҡына ине, 16 градус. Әл дә балаларҙы алып килмәгәнбеҙ. Хәҙер йылынды. Ҡыш

ҡышҡа оҡшай башланы. Кисә сатлама һыуыҡ булды. Кисә ҡар көрәнек, бөгөн бөтөрөп ҡуйырға кәрәк.

Ике бүлмәләге яҙыу өҫтәлдәрен тәртипкә килтерҙем. Компьютерҙы кабинеттан үҙемдең йоҡо бүлмәһенә күсерҙем. Журналдарҙы аҡтарҙым. Күп нәмәне уҡып өлгөрөп булмай.

Яңы йылда ла, унан алда ла ҡунаҡтар күп булды. Ныҡ ҡына арытҡан. Әлегә ҡулға эш бармай. Уҡыйым.

11 ғинуар, 2016 йыл. Дүшәмбе.

Кисә баҡсанан ҡайттыҡ. Артур балалар менән килеп алды. Төшкө ашты бергә ашаныҡ – Фәриҙә билмән эшләгәйне. Бик ҡаты һыуыҡтарҙан һуң (Шамонинола 38 градусҡа етте) көн тағы ла ныҡ йылынды, урыны менән плюс. Ҡалала ҡар юлда бутҡа булып ята.

Күп уҡыған аҙ яҙыр.
Күп белгән аҙ һөйләр.

Кеше донъяға башы менән килә, үлгәс, өйҙән аяғы менән алып сығалар.

Үҙенең ҡәберенә кеше атлап барып етә алмай. Гәрсә атлатып алып барып, ҡәбергә атып йыҡҡан кеше үлтереүселәр ҙә булған, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле лә бар. Хатта үҙҙәренең ҡәберен үҙҙәренә ҡаҙҙырған хәлдәр…

Халыҡтарҙың бер-береһенә моң, йыр йоғонтоһо. Музыкаль фольклорҙа был мәсьәлә етерлек тикшерелмәгән. Башҡортостандың марштары, әлбиттә, халыҡтың йәшәү рәүешенән, хәрби тормошонан, ғәскәри яҙмышынан тыуған. Ләкин уларҙа рустар менән бергә яу юлдары үтеү, шул мөхиттәге ритмдарҙың да йоғонтоһо бар, әлбиттә. Йәки башҡорттоң оҙон көйҙәре лә рус йырҙарына үҙенсә тәьҫир иткән бит. Рустың «Степь да степь кругом» йырын:

Дала ла дала, ҡарап күҙ тала,
Бер ир туңа бит ошо далала –

тип, башҡортса йырлап ҡара, моң, яңғыраш, мелодика ни тиклем оҡшаш. Быны, минеңсә, башҡорт далаһында башҡорттар араһында йәшәгән йәки үҙе башҡорт тамырлы, күңелендә башҡорт гены булған рус кешеһе ижад иткән.

12 ғинуар, 2016 йыл. Шишәмбе.

Кисә нәшриәттә, «Ағиҙел»дә булдым. 2-се һанда Сафуандың 75 йыллығына мәҡәләм сыға. Шығырҙарҙы ла алғандар, алла бирһә, яҙға табан сығыр, «Шоңҡар»ҙа Мөнир Ҡунафин минең шығырҙарҙы беренсе һанға биргән. «Башҡортостан»да Лариса Абдуллина ниңәлер белмәй, Луиза ебәргәйне, хәҙер Ларисаның үҙенә һалам тине.

Баҡсанан ҡайтыуға, гәзиттәр йыйылған. «Йәшлек»те ҡараһам, унда минең шығырҙарым ат менән төшкән һүрәтем менән матур итеп баҫылған. Артур Дәүләтбәковҡа (баш мөхәррир) рәхмәт әйтеп шылтыраттым.

Бөгөн кардиоүҙәккә барам. Аритмия бөтмәй. Бәлки ятырға тура килер.

Хәҙерге йәштәр фәҡирлекте үҙҙәре көҫәп йөрөгән һымаҡ. Махсус тишек-тошоҡ тетелгән джинсы, терһәгенә ямау һалынған пинжәк һ.б. Беҙ сараһыҙҙан ямаулы кейем кейеп үҫтек, ауыр замандарҙың ни икәнен беләбеҙ. Хәҙергеләрҙең башынан үткән булһа, былай ҡыланмаҫтар ине.

Быйыл маймыл йылы. Уны яҡшыға юрауҙары һәйбәт. Тик нисек кенә маҡтаһаң да, маймылланыу маймылланыу инде ул. Халыҡтың быға мөнәсәбәте асыҡ.

Маймыл беҙҙә юҡ, ә «маймылланма» тип әйтәләр. Тимәк, ҡасандыр был йәнлектәрҙе күреп йәшәгәндәр.

Һыуыҡ бөтмәҫ борон йылыраҡ кейенеп йөрөһәң, ниңә көндө безләтәһең, ти торғайнылар беҙҙә. Биҙҙереү мәғәнәһендә микән?

Депутат хеҙмәтендә йөрөгән биш йыл ярым ваҡытта уҡырға йыш ҡына мөмкинлек сикләнгәйне. Баҡсала булған көндәрҙе уҡыу менән булдым. Күп йыйылып киткән икән. Үҙем төҙөгән Амантайҙың китабын, «Ватандаш»та сыҡҡан ҡыҙы Роленаның иҫтәлектәрен яңынан ҡараным. Фәнис Яруллин тураһында электән белһәм дә, «Ҡазан уттары»нда (2013) уның хаҡындағы мәҡәләнән уның тетрәндергес яҙмышын үҙем өсөн яңынан астым, ихтыяр көсөнә һоҡландым.

Был әйберҙәрҙе Фәриҙә лә илай-илай уҡыны.

«Оло Урал» хаҡындағы бәхәс. Бик боронғо классик эпосыбыҙ тулыландырыуға мохтаж түгел, әлбиттә. Әхмәт Сөләймәновтың эпосҡа өҫтәлмәләрен, минеңсә, үҙ ижады итеп тупларға кәрәк. Мәҫәлән, Тарауыл ҡарттың Әхмәт үҙе яҙған телмәре үҙе бер шәхсән ижад бит. Уны атаҡлы Тарауылдың бөгөнгөгә өндәшкәне рәүешендәге шиғри мөрәжәғәт һымаҡ биреп булыр ине.

30 ғинуар, 2016 йыл. Шәмбе.

Больницала дауаланыу йышайып китте әле. Көҙ травматологияла (18-се больница) ятҡайным. Яңы йылымдың 15 көнө кардиодиспансерҙа үтте. Кисә Артур алып ҡайтты.

Яңы йылдан һуң аритмия нығ яфалағайны. Үтмәй яфалағас, кардиоүҙәккә ятырға тура килде. Тажетдинов Илшат Азамат улы шылтыратып ҡуйғайны, яҡшы ҡаршы алдылар, ике урынлыҡ – ике бүлмәле палатала бер үҙем яттым. Үҙенсә ике операция үттем. Башта кароногрaфия. Бер шунт ҡапланған булған, унда стент ҡуйҙылар. Шунан ЭКС-стимулятор ҡуйҙылар. Дүшәмбе көн бер аҙна була, перевязкаға барам.

Табиптарға рәхмәт, иғтибарлы булдылар. Баш табибә Ирина Евгеньевна Николаева, бүлек мөдире Наталья Георгиевна Хомякова, стимулятор ҡуйған Илдус Шәкүр улы Сәғитов – барыһы ла ихлас ярҙам итергә тырыштылар. 2009 йылда миңә 3 шунт ҡуйған Рәмил Илдус улы Ижбулдинға ла индем. Һөйләшеп ултырҙыҡ. Ауырлыҡты кәметергә ҡуша.

Барыһына ла китаптарымды бүләк иттем («303 хадиса», «День приема граждан»).

Кардиоүҙәккә ҙур өмөттәр менән ингәйнем дә ул, тик хәлдәрем һәйбәттән түгел. Ингән саҡтағынан әлеге хәлем ауырыраҡ. Аритмия бөтмәгән, тын ҡыҫыла, һауа етмәй. Ярар, артыҡ зарланмайыҡ әле. Төҙәлеүгә өмөт итәйек.

Һаулыҡ әлегә ҡыуандырмай. Уның ҡарауы больницала бик һәйбәт эшләп ултырҙым. Байтаҡ шиғырҙар яҙылды, компьютерҙан һуң көндәлектәремдең 200 битен уҡып сыҡтым. Союздан Альбина, Луиза, Фидалия килгәйнеләр. Был уҡылған көндәлектәремде хәҙер аҡҡа баҫырға мөмкин. Тағы ла ике ҡалын дәфтәремде алып барам. Көндәлектәрҙең өсөнсө томын әҙерләп ҡуяйым.

Һәр хәлдә, ижад йортондағы һымаҡ эшләнде. Аҙаҡ больница ла ялҡытты, эш тә туҡтаны. Арыттырҙы.

Фәризә башта көн дә йөрөгәйне, аҙаҡ үҙе грипп менән бик ҡаты ауырып китте, әле лә төҙәлеп бөтмәй.

Донъяла сусҡа грибы ҡотора. Үлгәндәр бар. Өфөлә бөтә мәктәптәр ҙә карантинға ябылды.

Зөфәр, Наил Ғәйетбаев, Лена килен хәлемде белеп килеп киттеләр. Бында булғанымды кешеләргә белгертмәҫкә тырыштым.

Ҡыш малайы булып тыуғанмын,
Булдым инде хәҙер Ҡыш бабай.

«Уҡы атайыңа оҡшап шәп булма.» Ошо һүҙҙәр араһындағы бер өтөр барыһын да үҙгәртә: 1) Уҡы атайыңа оҡшап;) Атайыңа оҡшап шәп булма. Русса ошоға оҡшаш миҫалды әйтә торғайнылар: «Казнить нельзя помиловать». Бына бит: өтөрҙөң өтөрө генә кеше яҙмышын нисек хәл итергә мөмкин.

19.01.16. – кардиография яһанылар;

25.01.16. – стимулятор тектеләр.

Больницала һаулыҡҡа сират торалар. Әжәл килеп, сиратты боҙа.

Мин реанимацияла ятҡанда күршемде әжәлдән саҡ ҡотҡарып ҡалдылар.

Ашығыс ярҙам, кардиодиспансер һымаҡ ойошмалар медицинаның үҙенсә МЧС-ы инде.

Кредиттар – хәҙерге заман бәләһе.

Бигерәк тә йәштәрҙе ныҡ быуа.

Күптәрҙе төп башына ултырта,

Бөлдөрөп урамда ҡалдыра.

Сит илдәрҙә кредит күптәнге традиция. Әммә унда эш хаҡы ла беҙҙәге һымаҡ хәйерсенекесә түгел бит.

Больницала үҙебеҙҙең БСТ тапшырыуҙарын күҙәтеп барырға тырыштым. Яңы яҡтарын да күрҙем. Ләкин TV-ны бик һирәк ҡарап (хәбәрҙәр генә тиерлек), мин әллә ни күпте юғалтмайым икән.

Радик Гәрәевте ҡараным. Бигерәк йәшләй әрәм булды. Моң һәм матурлыҡ гармонияһы.

Азат Айытҡолов менән Роберт Юлдашев. Тәүгәһе – ҡурайҙағы классик, дөрөҫөрәге, классика, халыҡсан ҡурай оҫтаһы. Роберт иһә яңы юлдар эҙләй һәм был юлда уның заманса ҡаҙаныштары, үҙенсә новаторлығы боронғо уйын ҡоралын яңырта, яңы мөмкинлектәр аса.

Кешегә һоҡланыу больницала булғанда ныҡ кәмей. Йәлләү күберәк. Ауырыуҙарҙың күбәһе ололар, йәмһеҙҙәр. Бында кәүҙәләрен төҙ һаҡлағандар һирәк. Һимеҙлек.

Ауырыуҙар араһында серҙәштәрем булмаһа ла, сирҙәштәрем күп.

Яңы жанрҙарға, темаларға, ритмдарға күсеү талабы күңелемдә көсәйә. Яңы формаларҙа асылғы килә. Ләкин был теләктәрҙе теләр саҡтарым үткән шул. Теләһәң дә, тормошҡа ашырыу мөмкинлектәре бөтә.

Хәҙер шиғырҙарҙы уҡыуы ҡыйын, сөнки күбеһе бер төрлө. Журналдарҙа бик ҙур шәлкемдәр баҫыла, әммә талапсанлыҡ, ҡаты редактор ҡулы, автор менән эшләү етмәй. Элек талаптар юғарыраҡ ине бит. Бигерәк тә таланттың үҙ-үҙенә талапсанлығы кәмегәндән-кәмей. Баҫмаларға нимәләр килтерәләр – шуларҙы баҫалар. Редакция портфелдәрендә нимәләр бар – шулар менән ентекләберәк танышырға ине.

31 ғинуар, 2016 йыл. Йәкшәмбе.

Көнө буйы балалар менән булдыҡ. Яңы газеталарҙы уҡыным. «ЛГ»-ны быйыл күргән юҡ. «Наш современник» менән «ЛГ» почта арҡаһында марттан ғына килә башлаясаҡ. Беҙ ваҡытында яҙылдыҡ, почталағылар аҡсаны һуңлап күсергәндәр, үҙҙәре тотоноп торған, күрәһең.

Шиғырҙар барыбер килеп сыға. Людмила Щипакина тигән шағирәне күптән беләм, дөйөм планда. Элек уҡыштырғылаһам да, конкрет шиғри асыш-образдары иҫтә ҡалмаған. Әле «Наш современник»та (2015, №12) шиғырҙарында ҡайһы бер юлдары хәтерҙә ныҡ ҡаласаҡ. Мәҫәлән, «Россия – безутешная вдова погибшего Советского Союза» («Вдова») йәки «Тебя весь мир подлунный помнит, Иван, не помнящий родства» («Иван, не помнящий родства»). Һуңғыһында, әлбиттә, имперские перехлесты, рустың әллә күпме донъяны «яулап» алыуы. Ләкин иле өсөн һыҙланған шағир был хаҡта әйтмәй ҡалмай бит.

Рус шағирҙарының яңы көслө шағирҙарын уҡығанда миндә шундай кисереш була: иң яҡшыларын тәржемә итке килә. Ул кисереш Рәми ағайҙа көслө ине. Дудиндың яңы китабынан бик күп шиғырҙарҙы, башҡаларҙы тәржемә иткәне хәтерҙә. Элек был эш беҙҙең һ.б. милли әҙәбиәттәр өсөн актуаль ине. Хәҙер руссаға әҙәби мираҫыбыҙҙы күберәк тәржемә итеп ҡалыу мөһимерәк.

Һуңғы ваҡытта Новелла Матвеева хәҙерге Рәсәйҙең әсе яҙмышы хаҡында бик уҫал шиғырҙар яҙа. Беҙҙең шағирәләрҙә бөгөн шәхси яҙмыш тураһында күп, Башҡортостан хаҡында хафа аҙыраҡ. Был яҡтан Зөлфиә Ханнанова, Лариса Абдуллина ныҡ борсола. Бындай борсолоуҙар уларҙа эҙмә-эҙлекле бара.

Донъялағы 3,5 млрд. кешеләрҙең булған мөлкәтенең (байлығы тип яҙыуы ҡыйын. Ул меҫкендәрҙең ниндәй байлығы булһын?) яртыһы бөгөн 62 кеше ҡулында. Бер автобуслыҡ кеше. Бынан биш йыл элек планеталағы байлыҡтың яртыһы 388 кешелә булған («Йәшлек», 22.01.2016). Ер шарында халыҡ арта бара, ә иң байҙарҙың

һаны бик тиҙ кәмей. Ә киләһе биш йылдан һуң нимә булыр? Яҡын һәм алыҫ киләсәктә ниндәй ситуация тыуыр? Бөтә байлыҡ бер нисә кешенең ҡулына күсерме? Бындай енәйәттәргә Аллаһы тәғәләнең ҡаза-язаһы етмәҫме икән ни?

9 февраль, 2016 йыл. Шишәмбе.

Больницаға һаман да бәйлемен. Иртәгә – анализ, 11-дә врачҡа. Йүнләнеп китеп булмай. Больницанан сыҡҡанға ҡарағанда ингәндә хәлем һәйбәтерәк ине. Тын ҡыҫыла, арыта. Хатта 2009 йылдың йәйендә, күкрәкте асып, операция (шунтирование) яһағандан һуң да тиҙерәк аяҡҡа баҫҡайным. Әле башҡасараҡ.

Кисә ҡағыҙҙарға, иҫке гәзиттәргә, ҡыҫҡаһы, архивҡа сумдым. Тиҙ генә сығып булмаҫ. Әле алда китапхананы ҡарайһы бар, артыҡ китаптар, бигерәк тә ҡалын-ҡалын альбомдар күп. Был эшкә бары-бер сумаһы бар ине.

Артурҙарҙың ғаиләһе артырға тора. Шуға уларҙың фатирына беҙ күсмәксебеҙ. Ҙур ғаиләләренә беҙҙә иркенерәк булыр. Шуға артыҡ нәмәләрҙән ҡотолорға кәрәк. Әйберҙәр ҙә ҡатмарлы мәсьәлә, ә бына ҡағыҙҙар – улары күпкә ҡыйыныраҡ буласаҡ.

Уҙғандар донъяһына сумдым. Йәшәлгән йылдарҙың мәғәнәһе, алда насиптарының ҡәҙере, яуаплылығы нығыраҡ күренә.

Миңә яҙылған хаттар ҙа байтаҡ икән. Хат жанры беҙҙең быуында өҙөлөр инде ул. Гәрсә төрлөсә ялыуҙар, интернет аша бер-береңә бысраҡ өйөүҙәр арта бара.

Табаҡ та ғына табаҡ булмаһа ла,
Дуҫтарымдың яҙған хаттары,
Шул хаттарҙы уҡып, күңелемдең
Иләҫ-миләҫ ҡалған саҡтары.
Әл дә яҙылғандар ошо хаттар,
Өҙөлөп ҡалған инде ул саҡтар.
Өҙөлөп ҡалған ялғанмаҫҡа ҡабат,
Әл дә яҙылғандар был хаттар.
Күпме кисергәнде хат һаҡлар.

Һүҙҙәр үлгәндәр, сәскәләр һымаҡ. Бер быуындың телендә шаулап, тулҡынланып балҡый ҙа улар телендә ҡабат бер ҡасан да ишетелмәҫлек булып һүнә. Яҙ терелгән һымаҡ, икенсе быуындың телендә яңынан терелә.

Һүҙҙәр үләндәр шикелле, шифалылары, ағыулылары бар. Ләкин әҙәм балаһы дауа һүҙҙәргә ҡарағанда дауа үләндәр тураһында нығыраҡ ҡайғыртмаймы?

Уҡыуға ла ваҡыт бүләм. «Ағизел»дә Мөнир Ҡунафиндың «Йөҙөп барған ти аттар диңгеҙҙә» тигән повесын уҡыным. Мөнир эҙләнә, үҙенсә таба. Бик һәйбәт. Тик бында һәйбәт кешегә ярҙам итеү өсөн бөтә ауыл менән аҡса табырға тырышыуҙары Валентин Распутиндың «Деньги для Марии» тигән әҫәрен ныҡ хәтерләтә. Рәшит Солтангәрәевтең «Кешеләр» повесы Распутиндың «Пожар»ын иҫкә төшөргәйне бит. Әлбиттә, һәр әҙиптә башҡа ерлек, башҡа заман, башҡаса яҙмыш-холоҡтар. Ә шулай ҙа…

«Ватандаш»та (2016, №1) Нияз Алсынбаевтың «Юғалған самолет» «мистик повес»ы сыҡты. Хәсән Мохтарҙың «Юғалған чертеждар»ынан «юғалған самолет»ҡа – бында ла башҡорт әҙәбиәтенең үҙенсә үҫеш юлы күренә. Әҙәбиәт үҙенең юлында үҫештә, ә уҡыусы ниндәй халәттә? Беҙҙең быуын Хәсән Мохтарҙың әҫәрен йотлоғоп уҡыған һымаҡ хәҙерге уҡыусылар был «мистик повест»ы айырыла алмай уҡырмы һуң?

Шәмбе – шамбы. Кәгеү – ҡағыу. Һәлмәк – һалмаҡ. Сеңләй – сыңлай. Көнсөл – ҡонсол.

23 февраль, 2016 йыл. Шишәмбе.

11-дә кардиологҡа килгәйнем. Башта ЭКГ үтәһең. 10-да анализдар биргәйнем. Күренеп кенә сығырмын тигәйнем. ЭКГ күрһәткәнде оҡшатманы, яңынан ебәрҙе. Уныһы ла һәйбәт булмағандыр. Дауаланырға ятаһың тип бик ҡаты әйтте. Ҡарышып та, бер үҙем ятырлыҡ палата ла һорап ҡараным, юғиһә ҡалмайым, тип, ныҡ бәхәсләштем. Барыбер һалып ҡуйҙылар. Ярар мин ингән палатала Камил Йыһаншин менән элекке вице-министр Фәтхелислам Тоҡомбәтов ята ине. Һәйбәт егеттәр. Улар ҙа байтаҡтан ята икән, йома көн сығып киттеләр. Дүртенсе көн бер үҙем. Бәлки шулай ҡалыр.

Кардиоүҙәктә башланған шығырҙар яҙыу дауам итте. Бик һәйбәт эшләнем. Туҡайҙың башҡортса китабына инеш һүҙ һорағайнылар. Кисә хатта шуны әҙерләп ҡуйҙым. Оҙонораҡ һымаҡ, үҙҙәре ҡарар. Шулай ҙа больницалар ныҡ ялҡытты, йышайып та китте.

Бөгөн Артур балаларҙы, Фәриҙәне алып килде. Күл ситендәге ярҙан рәхәтләнеп шыуҙылар, майҙансыҡта уйнанылар. Уларҙың да, минең дә күңел булды. Көн дә һыуыҡ түгел ине.

Яңыраҡ TV-нан Ватанды яҡлаусылар көнөнә арналған кисәлә Ирек Кинйәбулатов интервью бирә. Диңгеҙ хәрби кейеме килешеп тора.

Әхтәм Абушахманов артистар тураһындағы китабын ҡалдырып китте. Әкәмәттәрен уҡыу ҡыҙыҡлы. Мин уйланыуҙар көткәйнем. Фәлсәфи күҙәтеүҙәр өсөн бик үҙенсәлекле мөхит бит.

Иртән бер сәғәт йәйәү йөрөүҙәр бик яҡшы.

Тамамланмаған эштәрҙе бөтөрөп өлгөрөргә ине: архив, китапхана, мираҫ ҡағыҙҙары һ.б. Шулар иҫәбендә VI том, русса яңы шиғырҙарҙан китап.

Бында ла ҡағыҙҙарҙағы төрлө яҙмаларҙы алып килгәйнем. Араларында бик кәрәкле фекерҙәр бар. Ләкин уларҙы сүпләп бергә туплау – үҙе бер ҙур эш.

Кисә бер программа (TV) тотошлайы менән йыһан һәләкәттәренә арналғайны. Уларҙы ҡараһаң, беҙҙең был тормош, ғөмүмән, кешелек тарихы бик шартлы, ваҡытлы, сикләнгән нәмә. Күҙ асып йомғансы ерҙәге йәшәү һәләк булырға мөмкин. Юғары көстөң булыуы ла ныҡ шикләндерә.

Элек иң киҫкен саҡтарҙа ергә пәйғәмбәрҙәр ебәрелгән. Мөхәммәт ғәлиәссәләм уның һуңғыһы, тиелә. Бөгөнгө аңһыҙлыҡ, һәләкәттәр заманында яңы пәйғәмбәр бигерәк тә кәрәк бит.

Тимер Йосопов 22-се больницала реанимацияла тип Дамира өсөнсө көн ике мәртәбә шылтыратты. Ярҙам итеп булмай, үҙем больницала.

Аҡназаровтың беренсе замы булып эшләгән Абрар ағай Сазретдинов 31-се йыл стимулятор йөрөтә икән. Уға арнап шиғыр яҙылды.

«Урал батыр» Башҡортостандың иң ҙур символы булырға тейеш. Ошо эпос кешелек цивилизацияһына башҡорттоң индергән иң зур өлөшө. Өфөлә уға һәйкәл булырға тейеш, янындағы сәсәндәрҙең һындары менән бергә.

Донъя ҡоролтайына Муса Мортазиндың 125 йыллығына арналған түңәрәк өҫтәлгә, гимназияла Рәми Ғарипов премияһын тапшырыуға саҡырғайнылар. Сығып йөрөй алманым. Октябрь айында ятҡанда улай түгел ине. Ишмөхәмәт менән хушлашыуға шиғыр яҙғайным, матәм йыйынында уҡығайным. Нияз Мәжитов менән бәхилләшеүҙә лә булғайным. Был юлы ундай сараларға бара алманым. Хәлдәремде шунан ғына ла белеп була.

Ҡайһы бер арҙаҡлы шәхестәргә кешеләр әүлиәгә ҡараған һымаҡ ҡарайҙар, уға бик етди һорауҙар бирәләр. Йәнәһе, ул бөтәһен дә белә. Ундай һорауҙарға мин яуап таба алмайым, уларҙың ихласлығына аптырап ҡалам.

Больница тәҙрәһенән ҡарағанда Цюрупа урамы буйлап машиналар балыҡ өйөрө һымаҡ эркелешеп үтәләр ҙә ағым туҡталып тора. Ул хәрәкәтте светофор көйләй. Ә балыҡтар көтөүенең хәрәкәтен кем көйләй?

Ватанды һаҡлаусылар көнөндә Шукшиндың «Ике Федор»ын ҡараным. Бала саҡтан күңелгә яҡын күренештәр.

Байрамдарҙан һуң уйланыуҙар. Байрамдар яуаплылыҡты арттыра. Шәхес эшмәкәрлегенең юғарылығы халыҡты күтәрә. Аҡмулланан, Вәлидиҙән, Бабичтан түбән булырға ярамай. Тарихи шәхестәрҙең яуаплы эшмәкәрлеге тотош милләттең яуаплылығын арттыра. Талап юғарылығы ныҡ күтәрелә.

Туйҙарҙа уйҙар тыуа. Йыйын йыйырға, тупларға тейеш. Тарихи тантаналар яңы бурыстар ҡуя. Хайран ҡалыу ғына түгел, вайран булғанды тергеҙеү тураһында хәстәр.

Тарихи шәхес үрнәк булайым тип йәшәмәй. Намыҫлы хеҙмәт, тоғролоҡ, ҡаһарманлыҡ һ.б. матур сифаттар уның йәшәү рәүеше. Шулар шәхесте үрнәккә әйләндерә.

Шәхес халыҡтан оло була алмай тибеҙ. Ләкин милләт үҙе лә үҙенең бөйөктәренән түбән булырға тейеш түгел. Шуларға тиңләшергә.

Стамбулда туҡтауһыҙ Ҡөрьән уҡыу урыны Аманатхана 1517 йылдан бирле эшләй. Тиҙҙән 500 йыл була. Иң бөйөк юбилейҙарҙың береһе шул түгелме? Барлыҡ кешелек тарихы Аманатхана булһын ине.

Главное национальное достояние – родной язык. Самое первое чудо из всех чудес – родной язык.

Судьба исторических памятников за пределами РБ. «Караван-сарай». Памятник «Башкирка» в Самарской области.

Кем яратҡан уҡытыусың? Уҡыусы яратмаған уҡытыусы булмаҫҡа тейеш. Шул уҡ хәл яҙыусы менән. Әгәр ул ысын һүҙ оҫтаһы, аҡыл эйәһе икән, яратмайым тип нисек әйтәһең?

«Һаумыһығыҙ!» тип башлана көн, «Һау булығыҙ!» тип бөтә. Гел генә улай түгел шул. Ҡәһәрҙән башланып, ҡәһәр менән бөткән көндәр.

Барлау. Иҫәпкә бар, һанға юҡ. Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл.

Телде һаҡлаусылар көнө юҡ, гәрсә хәҙер «День родного языка» бар. Телде һаҡлау илде һаҡлау бит. «День защиты языка» кәрәк. «День родного языка», имеш. Каждый день начинается с родного языка.

Сәңгелдәк йырын, бишек моңон ишетмәй үҫкән хәҙерге балалар. Күпселеге шулай.

Тарихи хәтер, милли уҙаң – бөйөк көстәр. Энергетиканы әллә ҡайҙан эҙләргә кәрәкмәй. Сәм һәм ғорурлыҡ.

Бәхет өсөн берәү генә етмәй
Бәхет өсөн мотлаҡ икәү кәрәк.

Шағир ғына яңғыҙлыҡта бәхетле. Ләкин халҡы менән бәйләнеше өҙөлмәһә.

Иң оло байлыҡ – ваҡыт. Иң ҙур юғалтыу – ваҡыт. Башҡаларға хужа булма, ваҡтыңа хужа була бел! Шул сағында һин иң көслөһөһөң!

Ләкин ғүмерҙең мәғәнәһе йылдар менән, йәғни ваҡыт менән түгел, эштәр менән үлсәнә, баһалана.

Тормош һабаҡ ала белгәндәрҙе генә нимәгәлер өйрәтә.

Великое слово «юлдаш». Не просто спутник. Идущие, стремящиеся к единой цели. Не просто спутники, а соратники. Соратник – от слова рать, сражаться…

Үҙ заманыңда йәшәргә кәрәк. Киләсәк өсөн үҙеңде әҙерләргәме? Киләсәгеңде бөгөнгөң билдәләй бит.

Үҙ көсөңә ышаныу бик ҙур көс.

Гөнаһлы бул, тик гөнаһлы итмә!

Бәхетте ихлас ышаныс – өмөт менән көткән ҡайһы бер бәхеттең ҡәҙерен белмәүсенән бәхетлерәк.

28 февраль, 2016 йыл. Йәкшәмбе.

Йүнәлеп киләм, ахыры. Тын бик үк ҡыҫылмай башланы. Йоҡо ла һәйбәтерәк. Аҙыраҡ яҙыштырам.

Кисә Фәриҙә менән урманда таяҡтар менән скандинавса йөрөнөк. Шамил тап булды. Уның һәр ваҡыт үҙенсә асыш-табыштары бар. Был юлы атаҡлы дауалаусы Сытин Георгий Николаевич тураһында һөйләй. Өйөнә ҡайтып, китабын да алып килде. Кешене ышандырып, үҙ көсөңә үҙен инандырып (самовнушение) дауалай икән: «Мин һауығам, мин йәшәрәм, көсөм арта, мин һаумым, көслөмөн» һ.б.

Кеше шулай үҙен-үҙе ышандырып дауалай, бер үк теләктәрҙе бер аҙ үҙгәртеп йәки һүҙмә-һүҙ доға һымаҡ ҡат-ҡат ҡабатлай.

Шағир ғүмер буйы хәүефләнә, шикләнә, йәшәүҙең фанилығы тураһында уйлана һ.б. һәр хәлдә, күңеле тыныс түгел, гел тиерлек борсолоу. Шуға ла бындай дауалау уның йәшәү рәүешенә бик үк тап килмәй. Ләкин һынап ҡарарға булалыр. Әле мин шул хаҡта ла уйланым. Сытин һәр ауырыуға айырым бүлек арнаған. Самовнушениелар уларҙа бер-береһенә оҡшаш. Ә ниңә шуларҙы берләштереп ҡарамаҫҡа? Һәр ағзаны һауыҡтырыу буйынса бер-бер артлы теләктәр теләмәҫкә? Һәр береһе буйынса һауығырыңа үҙ-үҙеңдә инандырыу бик күп ваҡытты аласаҡ бит. Улай эффект көслөрәктер, әлбиттә. Бергә ҡушып ҡарайым әле.

Шамил йүгереп барып өйөнән Сытиндың ҙур булмаған бер китабын алып килде: «Реальное продление жизни. Живоговорящая сила. Книга 2. Помоги себе сам. Георгий Сытин. СПб: изд. “Весь”, 2012, Доп. тираж 2000».

Кисә кис буйы шуны ҡараштырҙым.

Алыҫлашҡан һайын яҡыныраҡ,
Ҡәҙерлерәк миңә бала саҡ.
Ниндәй замандарға тап килһә лә,
Тик бәхетле булып ҡаласаҡ.
Хәтерләһәң уны, ауырлыҡтар
Бөгөн еңеләйеп ҡаласаҡ…

22-се больницала Тимер Йосопов нисәмә көн комала, йәғни иҫһеҙ. Яһалма тын алышта. РКБ-2-лә Рауилә Хажиева ла һөйләп торҙо: 22-лә Роберт Заһретдинов та шул уҡ хәлдә ята икән.

Рауиләне башта таныманым. Аҙаҡ ҡына төҫмөрләнем. Нажиә Аллаярова һөйләй. Рауилә әйтә икән: унда ирҙәр араһында Рауил Бикбаев та һөйләшеп тора. Һинең помадаң юҡмы, һәйбәтләп барып күрешер инем.

Ҡатын-ҡыҙ ҡайҙа ла үҙе булып ҡала.

Сафуан Әлибай тураһындағы мәҡәләмде («Ағиҙел», 2016, №2) уҡып сыҡтым. 11 мартта филармонияла 75 йыллығы була. Был мәҡәләне уҡығанда кисәлә нимә һөйләремде күҙ алдына килтергәндәй булдым. Фәриҙә илай-илай уҡыным, ти. Һағындырыр саҡтар булған шул.

Республика китапханаһында Рәшит Солтангәрәевтең хәтер кисәһе үткән. Бара алманым, бик үкендерә.

«Башҡортостан» гәзитендә С. Әбүзәрҙең Н. Мусин менән «Күңелендә – урман шауы» тигән интервьюһы сыҡҡан. Яҙыусының яңы романын баҫыуҙан йәки 50 йәшлек юбилейын үткәреүҙә берәй ҡаршылыҡ йәки ауырлыҡ тора икән, Н. Мусин барыһын да Таһир Ахунйәновҡа шылтыратып ҡына бик еңел хәл итә алған икән. Уның хаҡында «Егет кеше ине ул» тип нисек әйтмәһен инде Ноғман ағай. Ә ул кешегә Рәми ағай Ғарипов китабын сығарыу йәки эшкә урынлаштырыу буйынса күпме генә мөрәжәғәт итһә лә, мәсьәлә барыбер хәл ителмәгән бит. Был хаҡта мин «Рәми» тигән китабымда ентекләп яҙғайным инде. Башҡа арҙаҡлы шәхестәребеҙгә ҡарата ла (Юлдашбаев, Муса Мортазин, Вәлиди, Бабич, мединститут эше һ.б.) Ахунйәновтың, уға тиклем Сайрановтың ҡылған ҡылыҡтары ҡайһы берәүҙәрҙең хәтерендә, йәнәһе, ҡалмаһа ла, тарих биттәренән уларҙың бындай «егетлектәрен» һыҙып ташлап булмаясаҡ.

7 март, 2016 йыл. Дүшәмбе.

3 мартта Яҙыусылар союзында ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡотланыҡ. Зал тулғайны. «Оноторлоҡ булдымы ни?» китабымды 24 дана тараттым. Ҡултамғамды ғына ҡуйғайным, ҡайһы берәүҙәр автограф яҙдырып алды. Аҙаҡҡа тиклем булманым.

Тамара Ғәниева яңы китабын бүләк итте. Уныһы өйҙә ҡалды. Әле бындағыһын уҡыным, «Мөхәббәткә генә ышанам» (2006). Әле шуны ҡараштырҙым. Мостай ағай унан интервью алған икән, бер ҙә ишеткән юҡ ине. Китап шул һөйләшеү менән асыла. Тамара тураһында күптән яҙырға йыйынам, күптән инде Факиһа менән икеһе тураһында бер мәкәлә башлап та ҡуйғайным. Факиһа тураһында булды, Тамараға һаман юҡ. Бәлки был юлы эшләнер.

Әле Башҡортостан тураһында шиғырҙар яҙыла, Баймаҡ, Күгәрсен, Мораптал булды. Тағы уйлағандары бар. Үҙенсә бер шәлкем булмаҡсы.

5-дә баҡсаға килдек, балалар менән. Улар көн дә рәхәтләнеп уйнайҙар. 4-дә Хисмәт менән йөрөп алғайныҡ. Шуға ике көн ҡыйыныраҡ булды. Күберәген уҡыным, балалар менән булдым.

21 март, 2016 йыл. Дүшәмбе.

Артурҙың ғаиләһе артырға тора. Шуға квартирҙы киңәйтеү мәсьәләһе тора. Беҙ уларға, улар беҙгә күсенергә тигәйнек тә, мәшәҡәте бигерәк ҙур буласаҡ. Әле уларға яҡын йорт төҙөлә,

шуның төҙөүсе ойошмаһына барҙыҡ, 4 бүлмәле тураһында хәстәрләйбеҙ. Үҙҙәренекен һатһалар, бәлки хәл итеп булыр. Тик теләгән хаҡҡа һатҡанда ғына. Әле халыҡтың аҡсаһы юҡ, ауыр заман.

Әле уларға 2 миллион һум бирҙек, тәүге взнос индерҙеләр. Урал Ураҡсин менән барып төҙөлөш етәкселе Мансуров Валерий Адгамович менән һөйләшкәйнек, иң минималь хаҡ ҡуйҙы. Уныһы 1 млн. һум самаһы арзаныраҡ килеп сығасаҡ. Шулай итеп, был мәсьәләлә ышаныс нығынған һымаҡ. Быны эшләй алһаҡ, Артурҙар өсөн киләсәк тормоштарында бик мөһим мәсьәләнең осона сығыр инек.

11 мартта филармонияның бәләкәй залында Сафуан Әлибаевтың 75 йыллыҡ кисәһе бик ихлас үтте. Бәләкәй зал тиһәң дә, элек тотош филармония шунда ине бит. Әлеге ҙур зал Рус драма театры була торғайны.

Халыҡ бик матур йыйылды. Үҙебеҙҙең зыялылар килгән, йәштәр күп. Рәми Ғарипов гимназияһы уҡыусылары сығыш яһаны. Яңы китабы матур сыҡҡан. Минең баш һүҙ, «Ағиҙел»дең 2-се һанында минең шул мәҡәлә. Яҡташтары ла килгәйне. Аҙаҡ Яҙыусылар союзында мәжлес ҡороп алдыҡ. Фәрҙиә бик тырышып йөрөнө. Китабын да ул әҙерләне.

16-да 22-се хәстәханала Тимер Йосопов вафат булды. Оҙаҡ ҡына комала ятты, иҫенә килә алмай китеп барҙы. 18-дә Башакадемтеатрҙа оҙаттыҡ. Мәҙәниәт министры Шафикова Ә.И. һөйләне, урынбаҫары алып барҙы. Мин «Бер ҡатлылар» тигән шиғырымды уҡыным. Ирек Кинйәбулатов та яҙған, уныҡы «Башҡортостан»да сыҡты. Затон зыяратында ерләнек.

Поминкаһын Матбуғат йорто ашханаһында эсемлекһеҙ генә эшләгәндәр, егеттәр менән йыйылыштыҡ. Йолаһын бөтөнләй үтәмәй булмай бит.

Төрлө фажиғәләр булып тора. Ростовта самолет ҡолап, 62 кеше һәләк булды. Стәрлетамаҡта 12 кеше янып үлде. Эскеселәрҙе дауалау йортонан сығара алмағандар: тәҙрәләр рәшәткәле, тимер ишек йоҙаҡлы булған.

Хәйбулла, Баймаҡ яҡтарында бик көслө бурандар. Ике кеше туңып үлгән. Тау-тау ҡарҙар юлдарҙы күмгән.

Был март айы шиғырҙар менән башланғайны. Артабан илкеһалҡы йәшәлде. Бөгөн 21 март. Сәғәт өстән тороп ултырҙым. Эштәр өйөлөп ята.

«Башҡортостан»да, «Йәшлек»тә шиғырҙарым сыҡты, атта һыбай төшкән фотоларым менән, «Шоңҡар»ҙа ла шәлкемем сыҡты. «Ағиҙел»дә әҙерләнә.

Егермеләп йылда поэмалар байтаҡ яҙылған икән: «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» (1987–1988), «Халҡыма хат» (1989), «Система» (1990), «Баҙар балтаһы» (1991), «Барокамера» (1995), «Башһыҙ һыбайлы» (1995) һәм аҙаҡ «Хазина» (2009).

Башкиры у Гете. Всемирная литература. На стыке Европы и Азии. Урал не разделяет, а объединяет Восток и Запад. Судьбой предназначено нам евразийство. «Аурупа–Азия» М. Гафури, «Европа – Азия» Мустая Карима. Неплюевский кадетский корпус в Оренбурге и «Галия» в Уфе.

Первый перевод «Бахчисарайского фонтана» в тюркском мире (М. Уметбаев).

Выражение «Я – россиянин» родилось в башкирской литературе. Нельзя стыдиться эих слов.

Башкир Мухамедьянов Шакирьян Юнусович стал Александром Матросовым.

Ратный, трудовой, духовный подвиг советского народа, «Катюша» боевая и песенная. Советская школа, литература.

70-летие Победы совпало с Годом Литературы.

Правнуки победы. Бессмертный полк.

Мы – дети войны. Война – самое большое горе, Победа – самая большая радость нашего детства. Легенды и надежды нашего детства. Наши первые учителя.

Судьба закаляла нас с детства. Малайҙарҙан – бабайҙарға. Мальчики стали аксакалами.

25 март, 2016 йыл. Йома.

Баязит Бикбайҙың «Тере шишмәләр»ен яңынан уҡып сыҡтым. Элек ашыҡ-бошоҡ ҡаралған икән. Үҙем өсөн яңы донъя астым. Баязит ағай бик күҙәтеүсән, хәтерле, фекерле. Бөгөнгө тормош тәжрибәм дә ул әҫәрҙәге күп нәмәләрҙе яңыса күрергә мөмкинлек бирәлер.

1964 йылдың көҙөндә Баязит ағай менән Ырымбурға барғайныҡ, архивта ултырғайныҡ. Уның ошо «Тере шишмәләр»ҙе яҙған сағы булған икән. Икенсе өлөшө Ырымбур дәүере, Ҡаруанһарайҙағы уҡыу осоро тураһында тип уйланылған. Ағай Ырымбурҙа булып, тәьҫораттарын, хәтерен яңыртырға ла теләгәндер. Ошо икенсе өлөштөң яҙылмай ҡалыуы ни тиклем үкенесле!

Был китапты уҡығанда Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесын уйланым. Был ике әҫәрҙә оҡшаш аһаңлектәр байтаҡ. Бәлки Баязит Бикбайҙың «Тере шишмәләр»е Мостай Кәримдең повесы яҙылыуға үҙенсә этәргес булғандыр. Ауыл кешеләре, крәҫтиән хеҙмәте һ.б. Уртаҡ яңғыраштар байтаҡ.

Бындай хәлгә ҡалғаным юҡ ине. Баш әйләнә, ҡан баҫымы түбән. Нисек тә нығынырға кәрәк.

«Башҡортостан» тураһындағы шәлкемгә шиғырҙар өҫтәлә бара. Арғаяш, Ырғыҙ һ.б. тәьҫораттарынан яҙылғандарын да ошонда индерергә мөмкин.

«Ватандаш»та (2016, №3) шиғырҙарым сыҡты. Күберәк бирергә кәрәк булған. Улар күп йыйылып китте бит (матбуғатта сыҡмағандары).

28 март, 2016 йыл. Дүшәмбе.

Йома кис барып, кисә кис баҡсанан ҡайттыҡ. Ямғыр яуғылап ала, ҡар йоҡара. Көндәр күңелһеҙ. Ярар бәләкәстәрҙе алып бара алманыҡ, тыуған көндәрҙә ҡунаҡтарҙа булдылар. Баҡсала уларға уйнарлыҡ түгел.

Һаулыҡ шәптән булмаһа ла, эшләп ултырҙым. Ике шиғыр яҙҙым, күп кенә уҡыным. «Наш современник»та (2016, №3) һатлыҡ Горбачев, ҡарт даһиҙарҙы «атаҡлы» Чазовтың ҡулы менән берәм-берәм сүпләү тураһында уҡығас, элекке шик-шөбһәләрем раҫланғас, хәҙер кемгә ышанырға ла белмәҫһең.

2015 йылғы «Башҡортса дини календар»ҙе уҡыштырҙым. Файҙалы фекерҙәр, аҡыллы һүҙҙәр күп. Иҫтә ҡалырлыҡ хәҙистәр ҙә һирәк-һаяҡ осрап ҡуя. Хәҙистәрҙе шиғырға һалыу буйынса эштәрҙе барыбер дауам итергә кәрәк.

Беҙҙә «Батшаға баҡмаған» тип, кешене кире яҡтан баһалау бар. Дин дә әмирҙәрҙе тыңларға, хакимдарҙың һүҙенә ҡаршы бармаҫҡа ҡуша.

«Әмирҙәрҙең әмеренә буйһон!»

Фатих Кәримдең ошо шиғри юлдарын уҡып элек тә аптырағаным бар ине:

Юлбаҫарҙар тапай еребеҙҙе,
Ватан һуғышына мин китәм.
Бына – балам. Һин – әсәһе уның,
Балабыҙҙы тотоп ант итәм.

Һинең өсөн. Ошо балам өсөн,
Нәҫелем өсөн, тыуған ил өсөн,
Мылтыҡ тотоп баҫҡан еремдән
Бер аҙым да артҡа сигенмәм.

«Дини башҡортса календар»ҙә (136 бит) уҡып, тағы ла хайран ҡалдым: Мостай Кәримдең «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» шиғыры менән ни тиклем рухи уртаҡлыҡ, аһаң-яңғыраш, бер үк ярһыу һәм тоғролоҡҡа инаныу. Ике Кәрим дә бер-береһен уҡымайынса, шулай яҙғандарҙыр. Бынығына шикләнмәйем. Шулай ҙа ни тиклем тап килеү!

Әҙәм балаһы әҙәм балаһына сафаһын да, яфаһын да бирә. Яфаһын йылдан-йыл күберәк бирә.

Бәхетле, иманлы булайым тиһәң, телеңде, күҙеңде, ҡолағыңды, ҡулыңды яман эштәрҙән һаҡла. Уларға ҡағылма, уларҙан ситтә бул... Бер уйлаһаң, был талаптар әллә ни ҡатмарлы ла, ауыр ҙа түгел һымаҡ. Ләкин быларға ирешеүе ни тиклем ҡыйын!

Баҡсала урам-тығрыҡтарҙа скандинав йөрөүе менән ике көндә лә йөрөп килдек. Өфөлә скверҙа йөрөүе уңайлы, бында бик үк килешеп тә етмәгән һымаҡ. Ләкин иң мөһиме: саф һауала һаулыҡ һулайбыҙ.

Хәләл аҡсаң бөтһә бөтһөн,
Тик хаҡ һүҙең бөтмәһен.

Мәл һәм мәңгелек. Бик абстракт төшөнсәләр булып күренһә лә, уйлап ҡараһаң, улар бик конкрет икән. Кешенең, халыҡтың уҙғанын мәңге үҙгәртеп булмай, киләсәге мәңге серле булып ҡаласаҡ. Ә бына бөгөнгөһө – мәл, хәҙер үтеп китәсәк. Ләкин ошо мәлдең йөкмәткеһе, булмышы киләсәкте билдәләй, тарихтың баһаһын асыҡлай. Бөгөнгөң ныҡ икән, киләсәгең дә өмөтлө, тарихың да ҡәҙерле, баһалы. Иң изге бәйләнештәр.

Кешене Аллаһтың ерҙәге урынбаҫары тиҙәр.
Урынбаҫарыңдан уңдыңмы, тәңрем?!
Уны башҡа менән алмаштырып булмай шул.

Оҙағыраҡ йәшәү күберәк яҡшылыҡтар эшләүсе өсөн генә хәйерле, ул башҡаларға күберәк файҙа килтерә. Насар кешенең оҙаҡ йәшәүе башҡалар өсөн бәхетһеҙлек, фажиғә, сөнки ундай алама бәндә оҙағыраҡ йәшәгән һайын күберәк насарлыҡ эшләй.

Һыу, һауа ғына түгел, рухи экология ла таҙа булырға тейеш. Иман, әҙәп, изге доға дауалай. Улар булмағанда рух ағыулана.

Ваҡытында сафтан сыға белеү, әле көсө булғандарға тағылып, һөйрәлеп йөрөмәү – быны һәр кем эшләй алмай.

Барыһы ла минән, һинән башлана,
Барыһына ла мин ғәйепле, һин ғәйепле,
Иң элек мин яуаплы, һин яуаплы.

Халыҡ бер юлы гонаһлы була алмай, гонаһтың башы айырым бәндәлә. Кешеһе ниндәй, халҡы шундай. Ләкин халыҡтың аҙыуы кешеләрҙе, бигерәк тә йәштәрҙе тиҙерәк аҙҙыра.

Янғын осҡондан башлана,
Ташҡын тамсыларҙан туплана.
Халыҡ бер юлы бысранмай ул,
Башта айырым кеше таплана.

Мин иҙеләм, ул иҙелә, ил иҙелә.

Яман елдәрҙең берләшеүе дауыл тыуҙыра. Уныһы ҡтә торған бәлә. Ендәрҙең берләшеүе ҡурҡынысыраҡ.

Килер шатлыҡтар ҙа, ҡыйратҡыс шартлар туптар ҙа зиһендә ҡорола.

29 март, 2016 йыл. Шишәмбе.

«Казактар» повесында Лев Толстой былай тип яҙа: «Как всегда бывает в дальней дороге, на первых двух-трех станциях воображение остается в том месте, откуда едешь, и потом вдруг, с первым утром, встреченным в дороге, переносится к цели путешествия и там уже строит замки будущего. Так случилось и с Олениным».

Яҙыусының был һүҙҙәре сәфәрҙәрҙә йыш иҫемә төшкәне бар. Ысынлап та шулай була. Әле мин был һүҙҙәр тураһында барлыҡ тормош юлына бәйле уйланам. Алыҫ тормош юлына сыҡҡанда бала саҡ тәьҫораттары айырыуса ҡәҙерле, ситкә китһәң, сабый саҡтағы төйәк ныҡ һағындыра. Ләкин йәшлек хыялдары тулыһынса тиерлек киләсәк тураһында. Былары тәбиғи. Ләкин олоғая барған һайын барып етер һуңғы урының тураһында йышыраҡ уйланаһың, унда киткән (бәлки көткән) ҡәҙерле кешеләрең менән аралағы юл ҡыҫҡарғандан ҡыҫҡара. Барып етәһе ерең нығыраҡ уйландыра.

Халыҡ үҙенең шағирҙарының һүҙенә ҡолаҡ һалһа икән дә бит... Тормош тәртиптәре башҡасараҡ булыр ине. Аҡмулланың үҙендә генә лә күпме аҡыллы кәңәштәр!

Наҙан ғалим китап тейәгән ишәк. Шәрәктең аҡыл эйәләре ошо хаҡта йыш әйтә. Ундай ишәктәр артҡандан-арта.

Игенсе Ҡабил ҡустыһы малсы Һабилды үлтерә. Игенсенең малсыны еңеүе осраҡлы ғынамы?

Бер күргәнде кире күреп булмай,
Кисергәнде – ҡабат кисереп.
Ашыҡмай яҙ ғәмәл дәфтәрҙәрен,
Яҙып булмай яңынан күсереп.

31 март, 2016 йыл. Кесаҙна.

Башҡорт балы космонавттар менән йыһанға осасаҡ тигән хәбәр ишеткәйнем. Бөгөн төн уртаһында тороп, шиғыр яҙҙым. Бик тиҙ яҙылды. Башҡортостан тураһындағы шәлкемгә индерәсәкмен.

Инде ҙеп, тормош ергә
Нығыраҡ эйә бара,
Йондоҙҙар һүрелә бара,
Яңғыҙлыҡ өйөлә бара.
Алға барам. Тик уҙғанға
Йышыраҡ алам ҡарап.

Сафуандың китабы минең баш һүҙем менән сыҡҡайны. Нәшриәттә шуның ҡағыҙҙарына ҡул ҡуйҙым. Туҡайҙың китабының корректураһын да күрһәттеләр. Унда минең инеш мәҡәлә бар. Уны гәзиткә бирергә кәрәк.

Яҙыусылар союзының тарҡалыуы тураһында интернетта һүҙ йышайҙы. Бинаһыҙ ҙа ҡалыуыбыҙ бар. Гәрсә мин Рәхимов ағай менән һөйләшеп, 25 йылға түләүһеҙ аренда тураһында документ әҙерләп ҡуйғайным. Хәҙер уға бик ҡарап та тормаҫтар. Был мәсьәләләр буйынса етди саралар күрергә кәрәк. Ҡул ҡаушырып, ҡарап торорға һис тә ярамай. Бөгөн Союзға барам.

Толстойҙың «Казактар» повесын ҡарайым тип, шул баҫылған томды алғайным. Том «Из записок князя Д. Нехлюдова» тип асыла. «Люцерн» тигән хикәйә, дөрөҫөрәге, күҙәтеү, уйланыу. Бөгөн

яҙылған һымаҡ – тот та әле баҫтыр. Шул тиклем актуаль. Хайран ҡалдым, элек йүнләп уҡымағанмын икән.

Олоғая бара фекерләшер дуҫтар аҙая бара тип яңғыҙлыҡҡа зарланабыҙ. Шулай, әлбиттә. Ләкин өйөң тулы күпме аҡыллы кешеләр – күпме аҡыллы китаптар йыйылған. Шулар менән йышыраҡ аралаш, уҡы, уйлан, кәңәшләш. Ләкин тормош ығы-зығыһы был хаҡта оноттора.

Шуныһына иғтибар иттем.

«Люцерн»дың башына «8 июля» тип ҡуйылған. Аҙағында «18 июля 1857 г.» тиелгән. Тимәк, ун көндә яҙылған.

Донъяның күпме аҫыл ерҙәрен әҙәм балаһы күреп өлгөрмәй. Күпме аҫыл китаптар уҡылмай ҡала – быныһы бигерәк тә үкенесле.

Пульс бик күтәрелеп китә, баҫым төшә. Бөгөн хәлем һәйбәт, төнгө икелә тороп, рәхәтләнеп яҙышып ултырам.

10 апрель, 2016 йыл. Йәкшәмбе.

Шаршамбы килгәйнек, бишенсе көн баҡсалабыҙ. Күптән былай оҙаҡ булған юҡ ине. Әсил дә беҙҙең менән. Кисә мунса яҡтыҡ, әле икенсе тапҡыр. Баҡсала ҡар ireп бөттө.

Компьютерҙан һуң көндәлектәремде уҡыным: 16.07–2012 – 1.11.2013, 136 бит. Луизаның тағы ла бер дәфтәрҙе баҫып бөтәһе бар. Шунан һуң 14.01.2015 башлаған ошо дәфтәр ҡала. Матбуғатҡа – «Ағиҙел»гә бирә башларға ине. Китап итеп (3-се том) бәлки «Ғилем»дә сығарып булыр.

Көндәлектәрҙе уҡығандан һуң ике шиғыр яҙылды. «Атлы азамат»ҡа инеш һүҙемде «Проблемы востоковедение»ға мәҡәлә итеп әҙерләнем. Унда Ҡөрьәнгә һылтаныу бар ине, Шидфар тәржемәһендәге комментарийҙар бүлегенән. Шуны ҡарағанда, китапханамдағы иң ҙур күләмле «Ҡөрьән»гә юлыҡтым. Питерҙа сыҡҡан, унда Дәүләт йыйылышы делегацияһы менән булғанда татар йәмғиәте исеменән бүләк иткәйнеләр: Поэтическое изложение Корана. Поэтический перевод с арабского Теодора Шумовского. – СПб, 2009. – 599 с.» Бик ҙур китап. Һуңынан тәржемәсенең мәҡәләһе бирелгән, бик йөкмәткеле, ҡыҙыҡлы.

Шумовский бик күпте кисергән шәхес. Ике тапҡыр ултырып сыҡҡан, әммә маҡсатынан ситкә тайпылмаған. Яҙмышы тотош китап яҙырлыҡ. Сәйәси тотҡондар күп булған. Урман йыҡҡанда бер-береһен уҡытҡандар, ғәжәп университет. Анна Ахматованы ла күргән, уның улы Лев Гумилев менән бергә ултырғандар, дуҫ

булғандар. Ҡөрьәнде шиғри тәржемә итергә 80 йәшендә тайып йығылып имгәнгәндән һуң тотонған һәм 95–96 йәштәрендә тамамланған. Ғәжәп ҡаһарманлыҡ. Порохованың шиғри тәржемәһе менән сағыштырып уҡырлыҡ ваҡытым да, әҙерлегем дә юҡ. Гәрсә бер-бер артлы ике шиғри тәржемәнең барлығҡа килеүе бик фәһемле, исламға һуңғы ваҡытта иғтибарҙың артыуын күрһәтә.

Ниндәй кешеләр булған, ни тиклем ауыр лагерь шарттарында ла һынмағандар, ниндәй рух, юғары маҡсаттар менән йәшәгәндәр!

Тәржемәсенең мәҡәләһен уҡыған Ҡасим ағай Аҙнабаевтың һөйләгәндәре лә иҫкә төштө. Ул да нәҡ Шумовский ваҡытындағы һымаҡ ике тапҡыр ултырып сыҡҡан. Бик уҡымышлы кешеләр булды тип хәтерләй торғайны. Бер ҡыҙыҡ хәлде һөйләгәйне. Тотҡондарҙы төрлө эш ҡоралдары ҡуйылған ергә алып баралар. Ҡасим ағай һәнәкте һайлап алдым, сөнки уның менән бик ауыр эштәр эшләнмәй тигәйне. Бер профессор нимәне һайларға белмәй аптырап тора икән. Унан: «Һин нимә менән көн күрә инең?» – тип һорайҙар. Ул әйтә: «Ҡәләм менән». «Бына һиңә ҡәләм!» – тип, бисараға ауыр лом тотторалар. Артабанғы хәлдәр һүҙһеҙ ҙә аңлашыла.

7 апрелдә Р.З. Хәмитов TV-нан ике сәғәт һорауҙарға яуап бирҙе. 14-дә Путин ошондай осрашыу үткәрәсәк.

Яҙыусылар союзының, ул ултырған бинаның яҙмышы көндәнкөн нығыраҡ борсой. Йортто юғалтмаҫ өсөн унда «Ағиҙел» редакцияһын индереү дөрөҫ булыр ине. Эшҡыуарҙар һымаҡтар өйҙәш булһа, яҙыусыларҙы төртөп сығарасаҡтар. Башҡорт әкиәтендәге һымаҡ.

Крематорий. Мәйетте яндырыу. Әҙәм балаһы ерҙә үк тамуҡты үтә. Тамуҡты үҙе уйлап сығара, үҙе ҡора, әҙерләй.

20 апрель, 2016 йыл. Шаршамбы.

Артурҙар Шамониноға күсенә башланылар. Асҡар уҡырға барғанса шунда йәшәрҙәр, унан һуң ҡалала беҙҙең квартирала тороҙар. Ә беҙ баҡсала йәшәрбеҙ. Шунһыҙ булмай, аҡса һанаулы.

12 апрелдә – космонавттар көнөндә Ғәлим янында булдыҡ (Наил Ғәйетбаев, Әмир Әминев, Фәнил Күзбәков). Күңелле генә һөйләште. Уға арнап 1996 йылда яҙылған шиғырымды уҡыным. Күҙенән йәш тәгәрләне тинеләр. Ярар 80 йәше менән ҡотлап өлгөрҙөк. Һин дә мин һөйләшеп ятты. 15-дә вафат булған. 16-да Яҙыусылар Союзынан оҙаттыҡ. Мәләүезгә, Һәргәйгә алып киттеләр. Ҡатыны Әминәгә бик ҙур рәхмәт. Ете йыл түшәктә ятҡан Ғәлим Дәүләдиҙе ҡараны.

«Башҡортостан»да (19.04) Ирек Кинйәбулатов менән минең шиғыр, ҡәләмдәштәре исеменән бәхилләшеү һүҙе сыҡҡан.

Кеше үҙенең йәшәрен белә, үлерен белә.
Кеше үҙенең тыуғанын белмәй, үлгәнен белмәй.

Фәндәр Академияһының (РБ) йыйылышы булды. Социологтар менән гуманитар бүлекте ҡуштылар. Морат Кейекбаев академ-секретарь булды. «Вестник АН РБ», «Проблемы востоковедения» журналдарын алып ҡайттым. Баҫылған мәҡәләләрҙе ҡарайым, күбеһендә таныш фекерҙәр ҡабатлана. Ике журналға ла мәҡәлә бирҙем.

Йә үтә шағир, йә мөтәшағир. Урталыҡ һирәк. Бәлки булмай ҙа торғандыр.

Өйҙө өрлөк тота, тәҙрәләр яҡтырта.
Илде ирлек тота, ҡатын илдең ҡото.

Инанған иманға юл ҡуймаҫ яманға,
Инанған иманға һылтанмаҫ заманға.

Һәр кемгә үҙ дуғаһы,
Һәр кемгә үҙ доғаһы.

Дуғаһыҙ ат егелмәй,
Доғаһыҙ бәхет килмәй.

Үҙ таҡмағын яңғырата,
Үҙ тамағын ҡайғырта.

Һин дә, мин дә – шул саҡта икеһе лә имен. Асылда емерткес килешеү.

Һин – һин, мин – мин, йә һин, йә мин – бынығы ла емерткес, әммә шунһыҙ булмай. Йә даһи еңә, йә яһил еңә. Йә яҡшылыҡ итә тантана, йә упҡынға илтә Ҡәһҡәһә.

«Балаларың һинең яныңда, ситтәгеһе мине онотма!» тип ыңғырашып йырлай Фидан Ғафаров. Икенсе бер йырҙа улы Азамат әсәгә шулай ялбара. Һис тә ирҙәрсә түгел. Ситтә йөрөп, әсәйеңә зарланыу, унан йәлләтергә тырышыу хатта ҡатын-ҡыҙға ла килешмәй.

Сәхәбәләрҙән Әбү Һөрәйрә тағы ла уның (Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең – Р.Б.): «Үҙенең мәрхәмәт-шәфҡәтен Аллаһ йөҙ өлөшкә бүлә лә, шуның туҡһан туғыҙ өлөшөн үҙендә ҡалдырып, береһен Ер йөҙөнә төшөрә... Үҙеңә ҡалған туҡһан туғыҙ өлөшөн Ҡиәмәт көнөнә тиклем һаҡлап тота», – тигән ул. (Башҡортса дини календарь, 2015, 217-се бит).

Кеше мейеһенең бер нисә проценты ғына хеҙмәт итә тиҙәр бит ғалимдар. Бәлки әҙәм балаһы әлегә шуға ғына һәләтлелер. Юғары көс тағы ла өҫтәмә мәғлүмәттәрҙе ебәреп, кеше уларҙы ҡабул итерлек түгелдер.

218-се биттә бер ҙә гонаһ ҡылмаусылар тураһында ҡыҙыҡлы һүҙҙәр.

«Йәшлек»тә (15.04.16) Айгөл Ишемғужина-Иҙелбаеваның «Виртуаль өрәк» шиғыры ошолай башлана:

Интернеттың «ҡапҡаһына»
Төнгә бик һалыр кәрәк.
Яҡындарға арнар мәлде,
Йота виртуаль өрәк!
Күпме сабый тыумай ҡала...
Көлкө түгел, реаль факт!
Ултыр әле «лайк»тар һанап,
Тотоп алғансы инфаркт.

Ниһайәт, йәшерәк быуындар ҙа интернет, компьютер килтерәсәк бәләләрҙе аңлай башланы. Күберәк һиҙенһендәр ине.

21 апрель, 2016 йыл. Кесаҙна.

Салауат – Аҡмулла – Бабич – Мостай Кәрим – Рәми Ғарипов – Рәшит Назаров... Улар төрлө ваҡытта донъяға килгәндәр, төрлө заман кешеләре. Ә хәҙер улар бергә, бер рухи мөхиттә йәшәйҙәр, улар бер үк маҡсаттарға хеҙмәт итәләр, хәҡиҡәтте бергә яҡлайҙар. Милләт яҙмышын бергә хәстәрләйҙәр. Һәр береһенең үҙенсә донъяһы, ләкин уларҙы уртаҡ яҙмыш берләштерә.

Быйыл Башҡортостан райондары буйлап шиғри марафон үтте. Күп яҡтан формаль рәүештә, ашыҡ-бошоҡ.

Шиғри марафон быуаттар буйына бара, күптәр шул бәйләнештә һәләк була (Пушкин, Лермонтов, Салауат, Бабич һ.б.) Ләкин уртаҡ юл дауам итә, рухи күсәгилешлек туҡтамай.

12 май, 2016 йыл. Кесаҙна.

21 апрелдә Нуриман районында Павловкала Зөһрә менән Сәйет-тәрҙә булдыҡ. Мәктәптә уҡыусылар менән осрашыу бик матур үтте. Зөһрә балалар менән ныҡ эшләгән. Хәлисә Мөҙәрисова ла килгәйне. Район етәкселәре лә булды. Зөһрә аҙаҡ кафела мәжлес ойошторған. Ике кис ҡунып, матур йөрөп ҡайттыҡ. Әҙәбиәтте уҡыусыларға еткереүсе шундай уҡытыусыларҙың булыуы бик һәйбәт бит. Изге эштәр эшләйҙәр.

Һаулығым насарайып, 3-дә баҡсанан ҡайттыҡ. Кардиоүҙәккә һуғылғайныҡ, минең врач отпускала. Өйҙән «скорый» саҡырттылар, мин бик ҡаршы булһам да. 2-се дауаханаға алып барып һалдылар. Етеһендә сыҡтым. Биш көндә һәйбәтләндем.

Төнгө йоҡоһоҙ сәғәттәр. Рухи сафланыу. Уҡыуҙар, уйланыуҙар.

Көткөм дә килмәй, күргем дә килмәй.
Һүткем дә килмәй, үргем дә килмәй.

Ирлән һымаҡ ирҙәр ил баҫыуынан урлай.

Ерем, төҫөңә кил. Халҡым, иҫеңә кил!
Һинһеҙ илдең иҫе теүәл түгел бит.

Үлемдән ҡурҡыр йәштә түгелбеҙ.
Тик һәр минутты ҡәҙерләргә.

Созидатели и потребители... Был һүҙҙәрҙең башҡортсаһы нисек? Хәҙерге диспропорция. Киләсәктә көсәймәксе. Бик хәүефле.

Быйылғы хәстәханалар. Бик йышайып бара түгелме? Ярты йыл да үтмәгән – өс тапҡыр!..

28 май, 2016 йыл. Шәмбе.

Бер көндө мәктәп янындағы спорт майҙансығында йөрөгәндә бер башҡорт иҫәнләшеп таныша. Көнө, айы, йылы тура килгән тағы ла бер ҡорҙашым табылды: Шәмсетдин Үҙәнбаев. Баймаҡ районы Түбәлә тыуған. Шундай уҡ ҡорҙашым Азамат Тажетдинов менән бер көндә, айҙа, йылда тыуғанбыҙҙы ла белә. Уның менән ҡоҙалар икән. Бына ниндәй ҡыҙыҡ осрашыуҙар була.

Кисәнән баҡсалабыҙ. Көндәр эҫе, 30 градус. Быйылғы йәй бөтөнләй минеке түгел: хатта Өфөлә лә серәкәй ҡотора. Минең иң яман дошмандарым улар.

20-дә «Ағиҙел»дең яңы баш мөхәррире Рәлиф Кинйәбаев йыйып алды. 15-ләп кеше булғандыр. Журналдың, ғөмүмән, милли матбуғаттың киләсәге тураһында һәйбәт кенә һөйләшеү барҙы. Наил Ғәйетбаев та бар ине. Союзда ул хәҙер бер үҙе ҡалды тиерлек. Аппаратта эшләүселәр таралып бөттө. «Йыйылырға мөмкинлек юҡ, исмаһам, бөгөн Яҙыусылар ойошмаһының киләсәге тураһында һөйләшәйек» тигәйнем. Береһе бер өндәшмәне. Ә былай һәр береһе «Нишләйбеҙ?» тип баш ватҡан була, фекер уртаҡлашырға тырыша. Мәсьәлә конкрет ҡуйылғанда – ләм-мим.

Таный, тана. Таныны, танды. Таныны бит таңды.

Цицерондың ҡартлыҡ тураһындағы уйланыуҙарын уҡыйым. Янда ғына ниндәй фекерле китаптар тора-барып етеп булмай.

24-дә ил һаҡсыһы, Дауыт Юлтый нәҫеле Юлай Һөйөндөков еҙнәне оҙаттыҡ. Ғүмерен хәрби хеҙмәттә үткәрҙе. Училище белеме менән подполковник дәрәжәһенә етте. Элек офицерҙар: «Честь имею!» тип өндәшкәндәр. Юлай еҙнә һәр саҡ «Честь имею!» тип әйтерлек ине. Тоғро булып, яуаплылыҡ тойоп йәшәне. Ул, әлбиттә, ғүмер буйы хәрби уставтарҙы үтәп йәшәне. Ләкин уның өсөн иң мөһиме намыҫ ҡағиҙәләре булды.

25-дә Мәләүез районы Динис Бүләков исемендәге Смаҡ мәктәбенә һуңғы ҡыңғырау тантанаһына барып ҡайттыҡ. Динистең өс ҡыҙы. Бик матур ойошторғандар. Динистең тыуған көнө лә яңыраҡ үткәйне. 11-се класс юҡ. Туғыҙҙы ете егет бөтөргән, бер ҡыҙ ҙа юҡ. Араларында милли көрәш буйынса Рәсәй чемпиондары бар. Төрлө олимпиадаларҙа еңеүселәр бар. Әммә был уҡыусыларҙың береһе лә унынсы класҡа бармай, тинеләр. Яҙыусы исемен йөрөткән билдәле мәктәптең киләсәк яҙмышы бик хәүефле, тип ҡайғыралар.

Анализдар, табиптар, быйыл ғына өс тапҡыр больницала ятып сығыу... Тик хәл бик шәптән түгел. Баҫым төшөп китә. 2009 йылда ауыр операция шунтированиенан һуң еңеллек килгәйне, быйыл – киреһенсә.

Үҙемдең ныҡ олоғайыуыма ғына түгел, яҡындарымдың ҡартайыуына, ҡылыҡтары үҙгәреүенә күнегә, өйрәнә алмайым.

Ризыҡ ризалыҡ һорап килмәй.

Ҡағыҙҙар, ҡулъяҙмалар баҫып алды. Күмеп бара, буталып китәм. Ҡағыҙҙарҙан ҡурҡа башланым. Ҡыҙҙарҙан түгел шул…

30 май, 2016 йыл. Дүшәмбе.

Һабантуйҙар осоро башланды. Шәмбе Клевое место тигән ергә барып һыу индем. Артур менән Асҡар төшмәне. Күл, ысынлап та,

бик үк йәмле түгел, Артур әйтмешләй, «большая лужа». Асҡар ҙа шул һүҙҙәрҙе ҡабатлай. Уҙған бер йылда килгәндә матур күренгәйне.

Шунда барышлай халыҡ Шамониноның һабантуйына бара ине. Байтаҡ машиналар йыйылғайны. Кисә, йәкшәмбе, Нагаевола Әбйәлилдәрҙең һабантуйы, тинеләр. Һабантуйҙарға бик үк йөрөп булмаҫ, артыҡ саҡырыусылар ҙа юҡ.

Уныһы бик үкендермәй. Конгресс-холл янындағы амфитеатрҙа бик матур саралар үтте: симфоник музыка төнө, кино төнө. Кисә төрлө милләттәрҙең (милли республикаларҙан килгән) сәнғәт оҫталарының сығыштарын бирәләр ине. Был осрашыуҙарға 20 меңдән ашыу кешеләр йыйыла, тинеләр. Һәйбәт традицияға әйләнергә тейешле бик матур эш. Шуларға бара алмау үкендерә. Урын да, ваҡыт та бик матур һайланған, молодцы!

Баҡсала 2015 йылғы көндәлектәр тексын ҡарап сыҡтым, компьютерҙан һуң. Баҫылмаған шиғырҙарҙы ла ҡушып (улар күп йыйылған), яңынан баҫырға, тип, Альбина аша Луизаға бирep ебәрҙем. Өсөнсө том көндәлектәремде әҙерләйем. Ярар ул эштәр менән булдым. Балалар янда уйнап йөрөгәндә шиғыр менән булырлыҡ түгел. Операциянан һуң йоҡо һаман да рәтләнмәй, шуға баш илһамланып эшләрлек тә түгел. Йоҡо проблемаға әйләнде, бөгөн анализ бирергә поликлиникаға һуғылам, невропатологҡа яҙылырға кәрәк.

Көнгәк. Айлап түгел, көнләп.
Көнгә ҡарай, шуға Көнгәк.
Тиңләп, иңләп, күрмәк, килмәк.

Тарихи Көнгәк тауына арнап, шиғыр яҙғы килә. Унда булғайныҡ элек, шунан бирле.

Икмәктең етмәгәнен сабый саҡтарҙан күп күрҙек. Аҡса етмәгән ваҡыттар ҙа аҙ булманы, бигерәк тә студент йылдарында, шулай уҡ өйләнеп донъя көтә башлаған замандарҙа. Кем менән уй бүлешерҙәй, серләшерҙәй, ныҡлы ышанып таянырҙай кешеләр йыш ҡына етмәне.

«Йән серҙәшкә ҡайсаҡ шундай асмын, антеннаға ҡунған һандуғасмын», тип, тоғро дуҫтарға зарығып яҙғайным. Кейемдең етмәүе лә, һыуыҡта йылының, эҫе селләлә һалҡындың етмәүе лә бәләкәстән таныш. Етмәгән нәмәләр күп инде ул.

Ә бына һауаның етмәүен быға тиклем тойғаным юҡ ине. Ярай әле һауа һәм тел, һүҙ берәүҙең дә ҡулында түгел, үҙе генә хужа

булып, монополист булып, өҫтөнлөк итеүсе юҡ: һауаны теләгәнеңсә һула, телгә лә һәр кем хоҡуҡлы.

Ләкин һауаның етмәгән саҡтары ла була икән һәм бик ҡыйын икән. Һуңғы ваҡытта шунан яфаланам, йоҡлап китеп булмай, һауа етмәй, күкрәк ҡыҫыла. Ярҙам һорап та булмай, үҙеңә етмәгән һауаны башҡанан һорап ала алмайһың, һауалар сикһеҙ булһа ла, нулар һауаң сикләнеп ҡала икән.

3 июнь, 2016 йыл. Йома.

Йәкшәмбе көн Асҡар менән юлдағы күлгә барҙыҡ. Быйыл икенсе ҡабат һыу индем. 31-дә Яҙыусылар союзында Тимер Йосоповтың 78 йыллығына йыйылып, уның исемен мәңгеләштереү буйынса алдағы эштәр, иҫтәлектәр китабы һ.б. тураһында һөйләшеп ултырҙыҡ. Уны һуҙмаҫҡа кәрәк.

1 июндә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында «Урал – Алтай: быуаттар аша киләсәккә» тигән VII Бөтә Рәсәй төркиәт конференцияһында булдым. Симпозиумда ла, секцияла ла сығыш яһаным. Бик ҡалын китап сығарғандар, 300 һумға һаталар. Минең ике докладым да ингән: «История зовет в будущее», «Башҡорт халыҡ ижадында йылҡы малын изгеләштереү». Симпозиум Ф. Нәҙершина менән Р. Сөләймәновтың 80 йәшенә арналды. 2-дә пленар ултырышта ҡатнаша алманым.

2-дә кардиоүҙәктә табипта булдыҡ. Киседә Ҡәҙим Аралбаев шылтыратa, ауыр хәбәр: Ирек Кинйәбулатов вафат булған. Наил Ғәйетбаевты таба алмайҙар. Төнөн йоҡламаным тиерлек. Иреккә, Тимергә арнап «Өс таған» тигән шиғыр яҙҙым, некролог әҙерләп ҡуйҙым. Союзда уны ла яҙмаясаҡтар, унда Наилдың үҙенән башҡа бер кем ҡалманы. Литфондтың да хәҙер исеме генә бар.

Бөгөн сәғәт етенән Йомабикә Ильясоваға, Рашит Сабитовҡа һ.б. шылтыраттым. Сәғәт унда Ирек Кинйәбулатовтың өйөндә йыйылып һөйләштек. Иртәгә сәғәт ун берҙә филармониянан оҙатасаҡбыҙ тыуған ауылына, Абдуллаға.

6 июнь 2016 йыл. Дүшәмбе.

Ирек Кинйәбулатов менән филармониянан хушлашырға халыҡ күп йыйылды. Ауылына Ҡәҙим Аралбаев, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Әхмәт Сөләймәнов, Ринат Камал, Айгиз Баймөхәмәтов оҙатып киттеләр. Әле Ҡәҙим менән һөйләшеп алдым, бөтә ауыл йыйылған. Морское собраниенан да бишәү барған (филармонияла булған ирҙәр). Яҙыусылар союзы рәйесе Наил Ғәйетбаевтың бармай ҡалыуы сәйер, әлбиттә. Алыҫ ара ла түгел бит.

Иректең 80 йыллығына китап әҙерләргә кәрәк. Ҡәҙим заявка индерергә тейеш. Китаптың яртыһы иҫтәлектәр булһын ине, тинем. Фотолар менән. Аҙаҡ махсус хәтирәләр йыйынтығы сығарыу проблема буласаҡ.

Хушлашыуҙа яҡташы Барый Ноғоманов булманы. Әллә мин күрмәй ҡалдыммы?

Табуты янында һүҙ әйттем, шиғыр («Өс таған») уҡыным. Интервью бирергә яратмайым, шулай ҙа ризалаттылар. Телевизорҙан бер-ике һөйләм менән күренеп ҡалдым. Шунда үҙемде күреп фекерем нығынды:

Ҡыш малайы булып тыуғанмын,
Оҙон-оҙон юлдар ҡыуғанмын,
Ысын бер Ҡыш бабай булғанмын.

«Урал-Алтай» төркиәт конференцияһына бик ҡалын йыйынтыҡ сығарғандар – әллә күпме секцияларҙағы, симпозиумдарҙағы сығыштар. Минең дә ике доклад ингән.

Материалдарҙы баҡсала бик ҡыҙыҡһынып ҡарап ултырҙым. Бөтәһе менән дә тиерлек танышып сыҡтым, күҙ йөрөтөп булһа ла. һуңғы битенә ҡайһы бер фекерҙәремде яҙып та ҡуйҙым.

Фән донъяһында, һәр хәлдә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында хеҙмәттәштәренең эштәренә һаҡсыл, ихтирамлы мөнәсәбәт, ихлас баһа (Бейешев, Бикбулатов, Йосопов, Усманов, Пшеничнюк, Нәҙершина, Р. Сөләймәнов һ.б.), булғанды күрә һәм баһалай белеү ҡыуандыра. Беҙҙең әҙәби ижад мөхитендә ошо ихласлыҡ бик тә, бик тә етмәй. Күптәрҙең ҡарашын көнсөллөк томалай.

Тейешенсә баһаланып бөтмәгән шәхестәрҙең иң талантлыларынан, иң ҙуры, сағыуҙарынан береһе Әкрәм Бейешев. Күп яҡлы мираҫ, ҡаһарман хеҙмәттәре. Ғилми һәм әҙәби ижадын туплап, уның 100 йыллығын күп томлы китаптары менән ҡаршыларға кәрәк. Уларҙы «Ғилем» нәшриәте баҫып сығара ала. Һуҙмайынса һеңлеһе Ләлә апай Бейешева менән һөйләшергә, институтта мираҫ буйынса комиссия төҙөргә кәрәк. Бик мөһим эштәр.

17 июнь, 2016 йыл. Йома.

Өс көн байрам, шуға дүшәмбе лә ял булғанға, аҙна ҡыҫҡарҙы, бик тиҙ үткән һымаҡ. «Ете ҡыҙ» һәйкәле янында шиғыр байрамын Наил Ғәйетбаев асып, тәүге һүҙҙе миңә бирҙе. Шунан Лариса Абдуллина менән Янаки алып киттеләр. Аҙағына тиклем була алманыҡ. Иртән

Салауат һәйкәленә Өфөнөң почетлы граждандары сәскә һалғайныҡ, шунда һүҙ әйтеп, шиғыр ҙа уҡығайным. Майҙан тирәләре бик матурайған. Этноауылда былау бешереүселәр ярышы. Аҙағын көтә алманыҡ, почетлы граждандарҙы ҡала ситендә күл янындағы ресторанға ялға алып киттеләр, беҙҙе «Ете ҡыҙ» янында ҡалдырҙылар.

Бында шиғыр байрамы үткәреү – өр-яңы традиция. Әле тәүге ҡат. Салауат янында ла ҡасандыр тәүге ҡат ине бит. Уның һымаҡ бынығы ла традиция булып нығынһын ине. Һуңғы йылдарҙағы яңы байрамдар: Салауат йыйыны, Шәжәрә байрамы, «Һаумығығыҙ, ауылдаштар!», «Байыҡ», ҡурайсылар бәйгеһе, йырсыларҙың төрлөсә ярыштары һ.б. Әйҙә ундай тантаналар арта барһын. Башҡорттар йырлай ҙа бейей генә түгел. Хеҙмәт тә итә белһен, эштәге уңыштары ла, байрам тантаналары ла артһын. Һабантуйҙар үткәрер өсөн башта һабан һөрөргә кәрәк тип әйткәнем бар. «Хеҙмәттә тирлә, байрамда йырла! Байрамһыҙ тормош буламы ни?»

Хеҙмәттә көйөн,
Хеҙмәттә тирлә.
Байрамда бейе,
Байрамда йырла!

15-дә опера театрында Миләүшә Мортазинаның 90 йәшенә арналған бик матур кисә. Бер кеше күпме таланттар тәрбиәләй ала! Хайран ҡалырлыҡ. Башҡорт йыр сәнғәтендәге бөгөнгө уңыштарыбыҙҙың бик ҙур өлөшө Миләүшә Ғәли ҡыҙының оҙаҡ йылдар алып барған хеҙмәтенең, ижады талантының емеше бит. Был яҡтан ул бөйөк шәхестәр сафында. Асҡар менән Илдар Абдразаковтар ҡайтҡайны, кисәне уларҙың сығыштары йомғаҡланы. Бик күптәрҙең сығыштары бик ныҡ алҡышланды. Ысын сәнғәт байрамы.

Бер мәҡәлә менән булам һуңғы көндәрҙә. Бик ауыр бара, йырып китә алмайым. Уй-фекерҙәрем бер мәҡәлә өсөн әллә артып киттеме? Ҡалдырғы килмәй.

28 июнь, 2016 йыл. Шишәмбе.

Кисә Дәүләкәнгә Рәмлиә туғандарыма ҡыҙҙары Эльвира менән Гүзәл алып килде. Эльвира атаһы Айрат кейәүҙең машинаһын бик матур йөрөтә. Өфөлә бик ҡаты яуҙы. Юл буйынса ла оҙатып барҙы. Эльвира нефтянойҙың бакалавриатын бөтөрҙө, Гүзәл БДУ-ның тарих факультетының беренсе курсын. Эльвира магистратураға инмәксе.

24-дә Алина бүләсәребеҙҙе больницанан беҙгә алып ҡайттыҡ. Сәй мәжлесе, Фәриҙә гөбәҙиә бешерҙе. Ҡоҙағыйҙар булды. Артур менән Сабина ла бына өс балалы атай-әсәй булдылар.

Дәүләкәндә беренсе кис Айрат кейәүҙең бүлмәһендә йоҡланым. Йәйҙең иң ҡыҫҡа төндәре үтеп бара. 11-ҙә ятҡайным, икелә йоҡлап туйып уяндым. Бабичтың архивы, үлеме тураһында әллә ниндәй сәйер төштәр. Уны уйлап та ятмағайным, ниңә ваҡиғалар ул тиклем эркелеп килеп ингәндер? Һәләк булыуына бәйле бик күп документтар, шаһиттарҙың әйткән-һөйләгәндәре һаҡланған, имеш. Бик күп кешеләр менән осраштым. Бабич тураһында бик күп яңы нәмәләр тыңланым. Осрашыуҙар күберәк Баймаҡ, Темәс, Йылайыр яҡтарындағы музей һымаҡ урындарҙа булды. Ғәжәп ҡыҙыҡлы деталдәр, күптәрҙең фашланыуы. Был төштәр әллә «вещий сонмы»? Беҙгә килеп етә алмай ятҡан документтар, раҫлау-фашлауҙар бәлки ысынлап та барҙыр?

Әхиәр ағай Хәкимовтың музейына барып әйләнергә кәрәк булыр тип кистән уйлап ҡуйғайным. Әллә шуға музей төштәре бик сағыу булып, бик күп ваҡиғалар, факттар булып килеп ингәндер?

22-дә идара ултырышы үтте. Күп мәсьәләлрҙе күтәреп – дөрөҫөрәге, Яҙыусылар союзының эшләмәүе тураһында һүҙ әйтергә тура килде. Салауат премияһына кандидат булып Наил Ғәйетбай үтте, әммә ҡағиҙә боҙолдо. Дәүләт комиссияһының ҡабул итеүе икеле. 2–3 тауышты йыя алманы.

Мәҡәләмә Рәшит Назаровтың «Таңды ҡаршылау» (1965) китабы тураһында өлөш өҫтәнем. Беҙҙең әҙәбиәт тарихында шунда уҡ классикаға әйләнгән шул тиклем шиғырҙарҙы туплаған берәүҙең дә ундай беренсе китабы юҡ. Хатта Бабичтың «Йәш Башҡортостан»ы ла уға тиңләшә алмайҙыр. Ундағы сәйәси шиғырҙар, әлбиттә, тарихи күренеш. Ләкин уларҙа Рәшит Назаровтағы шиғри фәлсәфәһе юҡ.

Әйткәндәй, Рәшит Назаров бер генә китабын да үҙе төҙөмәгән. Тәүгеһен Назар ағай, унан һуң Әсхәл, Риф Мифтахов. Ләкин ике томына тупланған әҫәрҙәрҙе урынлаштырыу бик буталсыҡ: бик көслөләре өйрәнсектәре араһында юғалмаһа ла, тәжрибәһеҙ уҡыусыла улар дөрөҫ тәьҫир тыуҙырмаясаҡ.

Рәшит Назаровтың китабын төҙөгө килеп китте әле. Мәҡәләм бар, уны ҡарап сығырға, бәлки, тулыландырырға кәрәктер.

Эш ҡағыҙҙарыма, дәфтәрҙәремә оялыбыраҡ әйләнеп ҡайтам. Илке-һалҡы үткән ваҡыттар байтаҡ. Оло маҡсаттар, эшләнәһе ҙур эштәр алдындағы ғәйептәр оялта.

Ижадының бик аҙ өлөшө генә бик йоҡа китап булып сыҡҡанын күргән Лермонтов, Бабич. Мәлих Харис китабын бөтөнләй күрмәгән. Хатта Рәми Ғариповтың үҙе иҫән саҡта бер нисә китабы сыҡһа ла, тулы танылыуы, тулы баҫылыуы – үҙе үлгәндән һуң. Беҙҙең – шәкерттәренең тырышлығы арҡаһында.

24 июль, 2016 йыл. Йәкшәмбе. Баҡсала.

Көндәр әллә нисек буталсыҡ үтә. Мәҡәләмде һаман бөтөрә алмайым. Был тиклем һуҙылғаны юҡ ине.

«Патриотизм этнический и гражданский». Шул турала уҡыным. Ҡыҙыҡлы фекер. Әммә улар бер-береһенә ҡаршы килергә тейешме әллә шуларҙың ҡушылыуы иң юғары патриотизм буламы? Этническийһыҙ гражданский була аламы?

Баҡсалабыҙ. Быйыл еләк-емеш ныҡ уңды. Дәүләкәндә ялан еләге лә күп йыйылды. Унда һыу инеп ҡалдыҡ.

Жуковоға яҡын Голубое озеро тигән бик шәп күл бар икән. Һыуы таҙа, төбө лә һәйбәт. Халыҡ күп.

Фәриҙә балдыҙ менән Рифат бажаларҙың баҡсаһында ла, өйҙәрендә лә идеаль тәртип. Жуковола ауылда юлдар һәйбәт, юғиһә, бер заман батҡаҡ тип яҙалар ине.

Был донъяның мәңге бөтмәҫ сере,
Һорауҙары мейене суҡырҙар:
Нисек ҡауыша икән ҡабырсаҡтар,
Ғашиҡ булыша нисек һуҡырҙар?

Нисек арттан ҡалмай йәбешә шәүлә?
Ергә нисек аумай болоттар?
Һорауҙарға яуап табылып бөтмәҫ,
Хатта даһи башлы булып та.

Серен эҙләп кеше был тормоштоң,
Ҡатламдарын күпме аҡтармай,
Ысынлап та донъя ҡатмарлымы?
Әллә кеше үҙе ҡатмарлай?

Туйҙар туйҙырҙы. Митингҡа оҡшаш.
Генийҙарҙы профсоюз тәрбиәләмәй,
Әммә юл асышырға мөмкин.

Бөйөк асыштар өсөн юғары көс кәрәк кешеһен һайлайҙыр. Ньютондың башына төшкән алма. Менделеевтың төшө. Моғайын, осраҡлы түгелдәрҙер.

Көндөҙ талашһа ла төн яраштырыр.

Сосательное наклонение. Сослагательное онотола бара, бынығы нығыраҡ тарала.

Ниһәйәт «Айырмаһын китаптарҙан – иң-иң тоғро дуҫтарҙан» тигән мәҡәләмде бөгөн, 24-нән 25-нә, төнгө берҙә тороп (бер сәғәт йоҡлағас), иртәнгә хәтле яҙып бөтөрҙөм. Тотош трактат килеп сыҡты, ахыры. Ике табаҡ ҡына булыр. Ҡулдан 39 бит, ситтәрендә өҫтәлмәләр бик күп.

Ярай, бер ҙур эштең осона сыҡтым. Бөгөн Луизаға шылтыратам, компьютерҙан үткәрергә.

Дин һәм шифриәт. Ҡөрьән. Хәҙистәр. Мөхәмәтғәлиәссәләм. Был хаҡта уйланыуҙар бер мәҡәлә булырлыҡ. Ғәрәп телен белмәү ҡулды, бигерәк тә телде бәйләй. Ә ул хазинаһыҙ мөмкин түгел.

Тағы ла бер мәҡәлә әлегә схема булып күҙ алдына килә:

– Әҙиптәрҙең исемдәрен мәңгеләштереү.

Өфө буйынса ла материал күп.

29 июль, 2016 йыл. Йома.

Бигерәк матур төш күреп уяндым да өстән һуң ҡабат ятманым. Салауат ерендә Салауат байрамында ҡунаҡ булып йөрөп ятам икән. Салауатҡа арнап, матур китап сығарғандар. Район хакимиәте башлығы, бер матур башҡорт ир-егете, исеме Мөхәмәт һымаҡ иҫтә ҡалған, әллә Мөхәмәт улымы, һәр хәлдә Мөхәмәт исеме бар, шул китаптың тәүге шиғырын йыш ҡабатлай. Башҡалар ҙа уҡый. Унда берәр һүҙ бағана итеп теҙелгән, гел «э» хәрефенә башлана. Иҫтә ҡалғандары «эш», «элекке», «элемтә»... Матур йырсы егет йырлай, уға Салауат кешеһе Радик ағай Зарипов ҡушыла. Уның менән ҡосаҡлашып күрешәбеҙ. Йәмле йәй, матур тәбиғәт, хайран ҡалып уяндым. Ныҡ уйландым, дәртләндем. Ниндәйҙер иҫкәрткес төш һымаҡ: ваҡланма, оло маҡсаттарыңды онотма, ваҡыттың, тормоштоң ҡәҙерен бел!

Кисә ҡағыҙҙар, шиғырҙар менән булғайным, әллә шуның тәьҫораттарымы? Тимер менән Иреккә арналған «Өс таған»ды күсереп тә ҡуйғайным. Уҙған йылдың көҙөнән алып, йәғни ярты йылдан ашыуыраҡ ваҡытта бик күп шиғырҙар – тотош бер китап яҙылған икән. Совет заманында сыҡҡан бер шиғри йыйынтыҡ булырлыҡ. Ҡыуанып та, уйланып та ҡарап ултырғайным. Күбеһен

Луизанан баҫтырып алғайным, егермеһе инмәй ҡалған икән. Ҡалын дәфтәремдә дөрөҫ күрһәтмәгәнмендер. Әле ул дәфтәр Азаматта, Азамат ялда, тауҙарҙа йөрөй, шундай сәфәрҙәрҙә хәҙер йыш була. Дүшәмбе эшкә сыға, барып алырға кәрәк.

Кисә интернеттан күреп ҡалдым: Лариса Абдуллинаның тыуған көнө икән. Телефондан ҡотланым, уны ҡайҙан беләһең, ағай, тип аптырап китте.

Зөфәр Вәлиткә лә ҡотла тип шылтыратһам, ул бер ҡосаҡ розалар алып барып бүләк иттем, ти. Молодец! Бөгөн Зөфәр автобус менән Ҡазанға туристик сәфәргә сыға.

Һуңғы көндәрҙә Өфөлә смог – һоро томан. Имеш, Себерҙәге янғындарҙың төтөнө килеп етә, тиҙәр. Кисә берәү радионан экология менән аңлата. Бәлки таралыр ҙа ине, ел бөтөнләй юҡ. Япраҡ та ҡымшанмай. Көндәр эҫе, тағы ла эҫерә тиҙәр. Яңыраҡ туҡтауһыҙ ел дә ел ине. Ел булһа, смог та бәлки тиҙерәк таралыр ине.

Китаптар тураһындағы мәҡәләмде кисә яңынан нығлап ҡарап сығып, кис Луизаның ире Айратҡа биреп ебәрҙем. Күләме ныҡ ҙурайып китте, ике табаҡтан да кәм булмаҫ. «Ватандаш»ҡа бирергә тим. «Көндәлектәр»емдең өсөнсө томы әҙер. Рәлиф Кинйәбаев менән «АҒиҙел»дә баҫтырырға һөйләшмәксемен. Китап итеп, бәлки, «Ғилем»дә сығарып булыр. Пландар Наполеонса! Ә матбуғатта баҫтыраһы шиғырҙар күпме!..

Донъяны яулаусы башҡорт йәштәре арта. Чемпион егеттәребеҙ, конкурстарҙа еңеүсе һылыу ҡыҙҙарыбыҙ бар. Ситтә белемен арттырыусылар ҙа, эшҡыуарҙар ҙа аҙ түгел. Автостоп менән илдәрҙе гиҙергә лә һәләт кәрәк. Сәнғәтебеҙ инде күптән донъяны урай. Ләкин әҙип, шағир һүҙе, башҡорт әҙәбиәтенең тауышы донъя күләмендә генә түгел, Башҡортостандан ситтә тотош Рәсәйҙә лә бик ишетелеп бармай.

Ҡәләм менән илдәрҙе яулау донъяны аяҡ менән йөрөп сығыуға ҡарағанда күпкә ауырыраҡ шул!

Мәҡәләмдә Любавскийҙың башҡорттарҙың азатлыҡ көрәше тураһындағы фекерен һүҙмә-һүҙ килтерергә тигәйнем дә, үҙемдең китапханамда таба алманым, артабан эҙләргә ваҡыт юҡ. Мәғәнәһен генә әйтеп киттем.

Көлдөктә көл тибә тауыҡ,
Һыуҙа ҡойона аҡҡош.

Үҙ төйәге үҙенә ғәзиз –
Ике ҡошҡа ла алҡыш!

Бала саҡтағы көлдөк тауыҡтары иҫкә төштө. Дәүләкәндә иғтибар иттем: тауыҡтар үҙҙәренсә көйләргә тырыша. «Тауыҡтары йырлай тиҙәр», тип, Туҡай юҡҡа әйтмәгән икән.

Дәүләкәндә Рәмиләләрҙә ураҙа ғәйетендә аш мәжлесендә Миҙхәт тә (Розаның ағаһы) булды. Минән 11 йәшкә оло, ике ҡултыҡ таяғы менән йөрөй. Ә күңеле күтәренке, оптимист. Ә беҙ һаулыҡтың ҡәҙерен белмәйбеҙ.

Рәмиләләрҙең күршеһе Розаның өс игеҙәк ейәнсәрҙәре бар. Уларҙы – игеҙәктәрҙе, ғәҙәттә, бер-береһенән айырып булмай бит. Ә былар улай түгел, һәр береһе үҙенсә. Көн дә килеп китәләр был бәләкәйҙәр. Алма өҙәләр, быҙауҙы, тауыҡтарҙы ҡарайҙар.

Шприцтарын ҡаҙап ҡанды ала,
Хәстәхана хас та ҡандала.
Шул ҡандала ҡанды алған өсөн
Күпме ауырыу ҡотолоп һау ҡала.
Бигерәк уңған, тилбер ҡуҙғала
Ҡан алыусы һылыу ҡыҙ бала!

Асҡар шахмат буйынса үҙ тиҫтерҙәре араһында республика ярышында өсөнсө урынды алды. Миҙалын муйынынан алмай. Кубок та биргәндәр. Тотоп ҡарарға итһәм: «Ҡартатай, ҡулыңды йыу», – ти.

Шағирҙың, әҙиптең белем даирәһе, ғилем кимәле. Бөйөк шағир Гетенең ғалимлығы тураһында бер ни тиклем белһәм дә, уның юл төҙөлөшөндәге эшмәкәрлеге, эште фәнни нигеҙгә ҡороуы һәм уңыштарға ирешеүе тураһында бик ҡыҙыҡһынып уҡыным. Бөтә эштә лә һәләтле булыуына иҫем китте («Вестник АН РБ»).

2 август, 2016 йыл. Шишәмбе.

Көндәр бик эҫе. Русса әйткәндә, изнуряющая жара, йәғни хәлде бөтөргөс ҡыҙыу. 35 градусҡа етә. Ҡояшта ҡырҡтан артыҡтыр. Беҙ бында әлһерәйбеҙ, яланда эшләгәндәргә түҙем бирһен! Ысын селлә.

Радиоға яҙылып ҡайттым. Зөһрә Бүләкова ҡаршы алып, ойоштороп йөрөнө. Шиғырҙар күп йыйылған, дүрт блок – тапшырыу итеп яҙылдым: 1) Америка дәфтәре; 2) Берләм юлым илтә оло юлға

(Башҡортостан шәлкеме); 3) Дуҫтарымды һағынам – арнауҙар: М. Минһажетдинов, Б. Рафиков, Р. Ғарипов, Д. Бүләков, Т. Йосопов, И. Кинйәбулатов һ.б. шиғырҙар; 4) Ҡанатланып оса һүҙҙәр. Гонорарлы заман булһа, кеҫә ҡалынайып ҡалыр ине. Хәҙер энтузиазм, халыҡҡа хеҙмәт итеү. Киләсәк ихлас баһалаһа ярар ҙа...

Илһөйәр Ғәзитдиноваға шиғыр яҙҙым. Зөһрә тапшырырға тейеш.

Киткән иптәштәр күберәк,
Донъям буп-буш кеүегерәк,
Ҡалғандар – таянырлыҡмы?
Тереләре – күбегерәк.

Тондора. Һоғондора. Тоғон – һора. Буйын һындыра – буйһондора.

Әле аттар бәйле ине,
Онотто донъя бәйҙе –
Башланды бәйге!
Был изге йола – йәйге,
Килә ҡоласты йәйге!

Шамонинола Артурҙар әл дә ҙур бассейн алдылар. Асҡар менән Әсил рәхәтләнә. Был эҫе көндәрҙә нишләрҙәр ине?

Был донъя әле эй йомарт,
Әле эй йыртҡыс, ҡомһоҙ.
Көндәрем аҡлы-ҡаралы,
Төнөм йоҡоло-йоҡоһоҙ.

Туғандар.
Татыу йәшәр өсөн тыуғандар.

Ҡасҡан сағта батыр алыҫ һөргөндән,
Уйлағанмы ҡалыр тип ил был көнгә:
Баҫыуҙарҙы сүп баҫа, ер һөрөлмәй,
Сараһыҙҙан китә ирҙәр
Үҙе теләп Себерҙәргә һөргөнгә.

Әҫәргә исем: «Мине, зинһар, ғәфү итегеҙ!»

Прощаю, т.е. отодвигаю, выбрасываю в прошлое. Простил – прошло. Башҡортса: «Ауыр һүҙҙәр ишетһәгеҙ, үткәреп ебәрегеҙ!» Йәғни, ғәфү итегеҙ, асыу һаҡламағыҙ. Бик боронғо инаныу һәм бөйөк сифат.

Уҡығас та яҙғайным. Бында күсереп ҡуям:

«Ил ағаһы булыу өсөн һаҡал кәрәкмәй, аҡыл кәрәк». Бөрйән районы хакимиәте башлығы Рөстәм Динислам улы Шәрипов менән әңгәмә («Киске Өфө», 30.04. – 6.05.2016).

Республикала иң йәш район етәксеһе икән, 33 йәштә (Христос йәшендә). Уйланыусан, фекерле шәхес икәнлеген тойҙом. Милли үҙенсәлектәр тураһындағы һүҙҙәре ҡызыҡлы. Бөрйәндәрҙең донъяны ҡабул итеү фәлсәфәһе. Күп сифаттар бында ғына һаҡланған.

«Бөрйән кешеһе ул ҡулындағыһын тоттороп ебәрһә ебәрә, тартып алмай. Үҙендә булмаһа ла һорамай, теләнселәмәй, талап та итмәй».

Милләтебеҙгә хас боронғо, матур сифаттар. Ләкин ундай кешеләргә хәҙерге йыртҡыс заманда йәшәүе бик ҡатмарлы.

Бөрйән районы эшһеҙлек буйынса бөгөн беренсе урында икән.

Марс Нуриевтың «Быуат ҡанатында» «Бала саҡ бәйәне» тип исемләнгән яҙмаларын ҡызыҡһынып уҡыным. Хәтере һәйбәт. Тик шикләндергән урындары ла бар: ике йәшендә булғандарҙы кеше шул тиклем иҫләй аламы икән ни?

Был бәйәнде артыҡ ҡыҫҡартманылармы икән тип тә уйлап ҡуйҙым.

10 август, 2016 йыл. Шаршамбы.

6–7 августа Ырымбур яҡтарына барып әйләндек. Иртәнге һигеҙҙә Рәфис алып китте. Бик шәп барҙыҡ, хатта Ашҡаҙарҙа һыу инеп тә торманыҡ. 12-лә Ҡарғалыға Рәмләләргә барып та еттек. Күмертауҙан Рифат унда ине. Машиналарҙы ҡалдырып, Ырымбурға киттек. Рәмләнең улы Рөстәм менән уның улы Салауат ике машинала алып барҙы. Нәккәр апайымдың 80 йәшен Юлайҙарҙың ишек алдында үткәрҙек. Үҙенсә күләгә эшләгәндәр, тик барыбер бик эҫе, өтөп алып бара. Ишек алдындағы душта ҡойоноп сыҡтым.

Нәккәр апайымдар бик ныҡ әҙерләнгәндәр. Төп көс улы Юлай менән Лена киленгә төшкән инде. Өҫтәлдәрҙә аш-һый ҡуйырға урын етмәй. Иттәр, емештәр һ.б. өйөлөп тора. Хатта йәйен балығын ҡурғандар. Халыҡ шуға ябырылды. Бик күп сәй эстек. Ҡоротло һурпа менән йомғаҡлап ҡуйҙыҡ. Араҡы эсеүсе (ағын) юҡ тиерлек.

Ҡоро шарап байтаҡ китте. Миңә ҡойолған ҡоро шарап шул көйө тороп ҡалды.

Бик матур һөйләшеп, йырлашып ултырҙыҡ. Рифат алып барҙы, Рәмлә баянын да алып килгәйне. Ул икәүгә айырым рәхмәт. Күп йырланылар. Рәҡип, Рәҡиә, Рамазандың – өс бер туғандың, байтаҡ балалары килгәйне. Ауылдағы тормоштар, йәш саҡтар иҫкә төштө, күңел тулды, хәтирәләр яңырҙы. Былай саф башҡортса, ауылса аралашып, туғандар ҡунаҡ булып ултырыуҙар бер нисә йылдан, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөтөр инде ул. Яңы быуын туғандар ҙа аралашыр, тик беҙ йырлаған йырҙар ишетелмәҫ, тик русса һөйләшерҙәр. Әле үк эштәр шуға бара бит. Шуға бөгөнгө йыйыла алыуыбыҙҙың ҡәҙерен беләйек. Ҡотлау һүҙемдә ошолар хаҡында ла әйттем.

Мәжлесте йомғаҡлап, Ҡарғалыға Рәмләләргә ҡайттыҡ. Һаҡмарҙа һыу индек. Бик ағын. Аяҡҡа көс төшә. Йөҙә башлаһаң, әллә ҡайҙа ағыҙып алып китер ине. Шуға билгә тиклем генә ерҙә йөрөнөк, шуға аяҡ арыны.

Рәмлә менән Ленис кейәүҙең уртансы улы Рөстәм менән Розалия киленгә, бәләкәйе Илшат менән Рима киленгә рәхмәт. Һәйбәт ҡаршы алдылар. Рөстәмдәр мунса яғып ҡуйған. Иртән ҡойоноп сыҡтыҡ.

Етеһендә Мәҡсүттә Ибраһим менән Зөлхизәләрҙә туҡтаныҡ. Ришат менән Рәис тә килгәйне. Клубта матур осрашыу үткәрҙек. Килгән халыҡ бик ҡыуанып ҡалды. Элекке заман булһа, клубҡа һыймаҫтар ине.

Юшатырҙа һыу индек. Бер урында матур ятыуы бар. Һыуы шул тиклем таҙа. Киске унда өйҙә булдыҡ. Ашҡаҙарҙы һыу инмәй үтеп киткәнбеҙ.

Дүшәмбе Луиза мәҡәләмде алып килде. Мин уйлағанса, нәҡ ике табаҡ булған, хатта 49-сы биткә сығып киткән. Бер өлөш шиғырҙарым баҫылмай ҡалған, шуны Луизаға бирҙем.

Китер алдынан Йомабикә Ильясова менән Флүр Ғәлимов тураһында мәҡәлә башлап ҡуйғайным. Төндә тороп, шуны яҙып бөтөрҙөм. Икеһен дә Салауат премияһына тәҡдим иттем. Икешәрләп биреү элек тә булған. 1967 йылда тәүге тапҡыр бирелгәндә Һәҙиә Дәүләтшина менән Мостай Кәрим лайыҡ булған. Шунан һуң тағы ла дүрт тапҡыр икешәр яҙыусы – лауреат. Шуларҙы ла атап киттем.

Мәҡәләне баҫҡандан һуң ҡарап сыҡтым. Төҙәтмәләр күп түгел. Иртән Азамат Юлдашбаевҡа ултырып, редакцияға барҙым. Салауат Әбүзәргә мәҡәләмде ҡалдырҙым. Уның менән флешканан шиғыр-

ҙарҙы күсереп сыҡтыҡ. Унан һуң редакция машинаһында Вәлиди китапханаһына киттек. Луиза унда ине, шиғырҙар әҙер. Тиҙ генә ҡарап сыҡтым. Луиза бында эшкә урынлашырға йөрөй. Директор Айгөл Динислам ҡыҙында ине, бик хуплап, маҡтап сыҡтым. Минең китаптар буйынса эш башламаҡсы Венера ханым янында булдым. Шунан Союзға барып, мәҡәләне лә, шиғырҙарҙы ла сығарып алдыҡ. Мәҡәлә электрон почта менән Лариса Абдуллинаға китте.

Көнөм бына шулай бик файҙалы үтте. Әллә күпме эш эшләнде. Һаман да бик эҫе, 35 градус.

Төнгө икелә тороп, ошоларҙы яҙып ултырған булам.

13 август, 2016 йыл. Шәмбе.

Эҫе көндәр һаман да дауам итә. Ике аҙнанан артып киткәндер. 38 градусҡа еткән урындар бар ти синоптиктар. Һәр кем уныһы беҙҙәлер инде, тип уйлай. Сөнки ҡайҙа ла түҙеп торғоһоҙ.

Кисә таңда бик ҡаты күкрәп – йәшенләп үткәйне лә ямғыр. Тик оҙаҡ яуманы, төшкә табан тағы ла ҡыҙҙырып алып китте. Бөгөн төн уртаһында тороп, аҙыраҡ ултырҙым. Тәҙрәләр асыҡ, тик һауа хәрәкәт итмәй бөтөнләй.

Кисә «Ағиҙел»гә көндәлектәрҙе алып барырмын тигәйнем. Рәлиф Кинйәбаев шофер эшкә сыҡманы тип шылтырата. Дүшәмбе Мөнир Ҡунафин эшкә сыға, уның менән барырға һөйләштем. Был ҡыҙыуҙа башҡаса йөрөрлөк түгел.

Артурҙар Асылыкүлгә барып ҡайттылар. Рәмләләр һәйбәт ҡаршы алған. Димдә лә һыу ингәндәр. Балалар мал-тыуарҙы ҡыуанып ҡарап йөрөгән. Бик ҡәнәғәттәр был сәйәхәттән.

Бындай эҫелек (ил буйлап) беҙҙә 80 йыл булмаған икән.

Кисә Рәми Ғарипов гимназияһында Мәскәү, Питер, Силәбенән килгән башҡорт йәштәре менән осрашыуға барырға тейеш инем. Ғауға сығып ҡуймаһын тип, үткәрмәҫкә юғарынан ҡушҡандар. Сара булманы. Йәштәргә ризаһыҙлыҡ белдерер өсөн үҙе бер сәбәп.

«Башҡортостан»да (12.08.16) Лариса Абдуллинаның Салауат Хәмиҙуллин менән бик һәйбәт интервьюһы баҫылған. Дөрөҫ, Лариса: һәр замандың үҙ Салауаты тыуа. Һәр хәлдә, тыуырға тейеш! Шунһыҙ үҫеш мөмкин түгел. Лариса һәр ваҡыттағыса уңған да, фекерле лә.

Һуңғы ваҡытта ғына түгел, совет иле ҡыйралғандан һуң – бына 30 йыллап яҙыусылар хәйерсе хәлендә, ижади союздарға дәүләт ярҙамы илдә бөтөнләй юҡ. Был яҡтан Башҡортостанда һәм тағы ла

бер нисә республикала хөкүмәттең иғтибары өсөн зур рәхмәт әйтергә кәрәк.

Ошондай шарттарҙа профессиональ яҙыусылыҡ эше менән хәҙер йәшәү мөмкин түгел, әҙәби ижад энтузиастар эшенә, үҙешмәкәрлеккә әйләнәсәк тигән һүҙҙәр һуңғы ваҡытта йыш ишетелә башланы. Һис тә ерле юҡтан түгел. Ысынлап та, әҙиптәргә бөгөн бик ауыр. Был хеҙмәт бер ваҡытта ла еңел булмаған, һәр саҡ ҡаһарманлыҡ талап иткән. Әммә хеҙмәтенә күрә хөрмәте лә булған. Әгәр был эш үҙ-үҙеңде ҡорбан итергә генә ҡорола икән, тотош рухиәт ҡорбанға әйләнеп һәләк булырға мөмкин бит. Бик ҡурҡыныс тенденция.

Хәҙер барыһы ла түләүле. Элек физкультура халыҡ хәрәкәте ине, хәҙер фитнес-клубтарға һәр кем инә алмай. Ә ялланған хоккейсы, футболсыларҙың эш хаҡы бер көтөү асарбаҡты аҫрарлыҡ. Шуға ла элек донъяны дер һелкеткән совет спорты менән сағыштырғанда бөгөнгө Рәсәй спорты йыш ҡына донъя алдында мәсхәрәгә ҡала.

Беҙҙә бик булмаһа ла, эре байҙар башҡа милләттәрҙә әле лә бар. Тик Рәмиевтәр юҡ. Эре байҙар хәҙер ниңә шулай артыҡ эреләр, халыҡты уйламайҙар икән? Рәмиевтәр һымаҡ милләт йәнле түгелдәр?

28 август, 2016 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә Артур баҡсаға килеп алды. Шәмбегә ҡарата төнгө икелә тороп, Рәйлә Бүләкованың 70 йыллығына ыҡсым ғына мәҡәлә яҙҙым әле. Ике шиғырымды килтерҙем. Береһе – 2001 йылдың аҙағында яҙыусы ҡатындары тураһында яҙғаны һәм союздағы табында уҡылғаны. Икенсеһе – Америкала Рәйләнең хәбәрен ишетеп яҙылғаны.

Бындай йөкмәткеле мәҡәлә ғүмерҙә яҙғаным юҡ. Рәйлә Бүләкова уға ысынлап та лайыҡлы. Беҙҙә ундай әҙип ҡатыны булғаны ла юҡ, булыуы ла икеле. Достоевскийҙың ҡатынын да атап үттем.

«Башҡортостан»ға бирмәксемен. Унда материалдарым йыйылып китте әле: шиғырҙарым бер бит итеп әҙерләнә. Ҡәҙим тураһында һүҙем бар. Салауат премияһына Флүр менән Йомабикәнең икеһен дә тәҡдим итеп яҙҙым. Руссаһын «Вечерка»ға ла бирҙем. Иң ғәҙел ҡарар, минеңсә, шул булыр ине. Юғиһә Наилды бик шапыртып яҙалар.

Һуңғы ваҡыттағы иң зур эшем – «Ватандаш»ҡа биргән ике табаҡлыҡ мәҡәләм.

«Ашҡаҙар»ҙан Башҡортостан тураһындағы шиғырымды бирҙеләр. Ҡотлап шылтыратыусылар бар.

Тик кенә ултырған да юҡ һымаҡ. Әммә ҙур тетрәнеүҙәр етмәй, тойғолар өтөп-көйҙөрөп алмай. Һәүетемсә йәшәү. Олоғайыу ғәләмәтеме?

Ә төндәр барыбер йоҡоһоҙ. Әле бына төнгө берҙә тороп ултырҙым. Кисә төнгө икелә. Күктәргә күтәрелеп осор ҡош инем, ә хәҙер әллә төнгө ябалаҡҡа әйләнәмме?

29 август, 2016 йыл. Дүшәмбе.

Битлек ябынған умартасының һүрәтен гәзиттә күреп, скафандрлы космонавтты умартасыға оҡшатып ҡуйҙым.

Ниһайәт, көн һыуынды. Белмәйем. Оҙаҡҡамылыр? Иртән йылыраҡ кейенеп йөрөп индем.

Аҕиҙелкәй, ерҙе йәмләп
Белә тыныс аҕыуын.
Тик саф һыуына өҫтәй шул
Заман үҙенең аҕыуын.
Аҡ быуына ҡуша аҡ ыуын.

Һаман Милли китапханаға бара алмайым. Китаптарҙы заманса цифровать итергә, бер юлы тулы библиографияға ла тотоноп булмай. Йырып сыҡҡанда, бик ҙур эш, бик кәрәкле библиография буласаҡ, әлбиттә.

Килгән матбуғатты уҡып өлгөрөп булмай. Күп алдырабыҙ. «Ватандаш»тың алтынсы һанында (2015) Әхмәт Сөләймәнов әҙерләгән «Яугир сәсән мираҫынан» тигән яҙмаларҙы уҡып сыҡтым. «Дон далаларында» тигән бәйетте, авторы Яҡупов икәнен дә белә инек. Ә ул Стәрлебаш районының Ибраҡай ауылынан булған икән. Бында сәсән-шағир, уның мираҫын һаҡлаусылар тураһында тулыраҡ яҙып булыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, эш аҙағына еткерелмәгән.

2 сентябрь, 2016 йыл. Йома.

Кисә Асҡар бүләбеҙ эргәләге 16-сы гимназияға уҡырға барҙы. Был хәл Фәриҙә менән минең өсөн бик ҡыуаныслы ваҡиға, бүләндең беренсе класҡа барыуын күреү һәр кемгә эләкмәй, һәр кем өсөн оло байрам. Мәктәп янындағы майҙанда матур тантана ойошторҙолар. Директор ихлас ҡотланы, беренсе кластыҡылар ҙа сығыш яһаны. Ике малай башҡортса шиғыр уҡыны. Беренсе класҡа 214 бала бара, ете параллель класс. Асҡар һуңғы «Е» класында. Күмәкләп фотоға төштөк. Дәүләт йыйылышында бергә эшләгән юрист Альберт

Ҡурмановтың да балаһы Асҡар менән бер класта икән. Беҙ был класты уҡытыусылары буйынса һайланыҡ, бергә эшләгәс, Фәризә ул педагогты белә, маҡтай.

Ҡыуанысымдан хатта шиғыр яҙҙым. Нәҡ етмеш йыл элек – 1946 йылда мин беренсе класҡа барғанмын икән. Шуны ла иҫкә төшөрөп яҙҙым, Асҡар менән бергә парта артына ултырғым килеп китте. Донъялағы иң ышаныслы, өмөтлө моң-мәктәп ҡыңғырауы тынмаһын!

Беҙ уҡырға барғанда һигеҙ йәштән алғандар икән. Фәризә 1947 йылда барған.

Хайран ҡалырлыҡ бит – етмеш йыл үткән!

Кисә Фәниә апай Чанышеваны 90, Ҡәҙим Аралбайҙы 75 йәше менән ҡотланым.

5 сентябрь, 2016 йыл. Дүшәмбе.

3-дә Президент-отелдә Лариса Абдуллина менән «Уфа-форум»да башҡорт йәштәре менән осрашыуҙа сығыш яһаным. Ул августа Рәми Ғарипов гимназияһында үтергә тейеш ине. Үҙ күләгәһенән үҙе ҡурҡҡан ниндәйҙер етәкселәр был эште бер көн ҡалғас тыйғайнылар, Р.З. Хәмитов бик ныҡ асыуланған. Әле бына үткәреп ҡуйҙылар. Мәскәүҙән, Питерҙан, Силәбе өлкәһенән башҡорт йәштәре була тигәс, бик дәртләнеп барғайным. Тик төрлө залдарға бүлгеләп бөтөргәндәр, темалар күберәк бизнес һәм хәҙерге технологиялар тураһында. Былары ла бик кәрәк. Әммә бөтә ҡатнашыусылар өсөн рухиәткә бәйле мәсьәләләр тураһында ла дөйөм һөйләшеү ойошторорға ла кәрәк ине. Мотлаҡ. Сөнки күп Башҡорт йәштәренең Башҡортостанға әйләнеп ҡайтмауы нәҡ шул рухһыҙлыҡтан, тыуған ергә тартып тороусы рухи тамырҙарҙың булмауынан килә бит.

Һуңғы ваҡытта мәҡәләләрем байтаҡ сыҡты. Тотош бит шиғырҙар. Салауат премияһына Йомабикә менән Флүрҙе яҡлап яҙған мәҡәләм «Вечерняя Уфа»ла һәм «Башҡортостан»да. Шунда уҡ 2 сентябрҙә Ҡәҙим Аралбаев тураһында һүҙ.

Тиҙ арала юбилейҙарына арнап яҙылырға тейешлеләре Салауат Әбүзәр (50), Хисмәт Юлдашев (60), Мәүлит Ямалетдинов (70 йәше) тураһында. Салауаттыҡын был аҙнала яҙырмын тим.

Библиографияны мотлаҡ эшләргә кәрәк. Шуның буйынса ултырам, материал күп йыйыла. Иртәгә Милли китапханаға барам.

Тимерҙең тауышы ла, ихлас ҡарашы ла, Ирек Кинйәбулатовтың ирониһы ла һағындыра. Бөтәһе лә кәрәк икән. Ҡәҙерләй белмәйбеҙ.

1962 йылдың апрелендә Мостай ағайҙан автограф алғайныҡ Фәриҙә менән. «Лунная дорога», 1958, Детгиз. Шул ҡулға килеп эләкте. Ағайҙар иртә өлгөргән. Баш һүҙен уҡыным, 39 йәшендә яҙған. Ошонда уҡ Р. Ғамзатовтың, А. Кешоковтың китаптары сығыуы тураһында реклама. Милли әҙәбиәттәрҙең ниндәй йондоҙҙары тоҡана башлаған осор.

Дини китаптарҙы ҡараштырам. Шәректе остазыңды, шәйехте ололау ни тиклем көслө булған. Ауыҙына ҡарап торған шәкерттәре, остаздың хуплауынан тыш бер нәмә эшләнмәгән. Көнбайышта лә мәктәптәр, даһиҙар булған, әммә был тиклем ихтирам юҡ. Беҙҙә лә ҡалмай бара.

Китаптарҙы, ҡулъяҙмаларҙы тәртипкә килтерергә тырышам. Тик шуны ла уйлап ҡуям: ҡырҡ йәшеңдә эшләр эштәргә һикһәнеңә етеп килгәндә тотоноу һуңыраҡ та, ауырыраҡ та түгелме?

18 сентябрь, 2016 йыл. Йәкшәмбе.

Салауат Әбүзәр тураһындағы мәҡәләмде баҫтырып алдым, 9 бит. 16-да көнө буйы ярты Өфөнө йәйәү йөрөп сыҡтым. Иртәнге сәғәт һигеҙҙе үтеү менән Артур алып китте. Туғыҙға тиклем ваҡыт булғас, Салауат баҡсаһында төшөп ҡалдым. Көн яумай ғына торҙо. Ниғмәтигә барып баш эйҙем. Ундағы хәтәр имәнгә (ҡапҡанан ингәс тә) һуғылдым. Атлап Вәлиди китапханаһына киттем. Мәҡәләне уҡып сыҡтым, хаталары күп түгел. Тексын алдым, Луиза флешкаға һалды.

Мәүлит Ямалетдиновтың китаптарын ҡарап сыҡтым. 70 йәшенә бәлки берәй нәмә яҙырмын. Тәүге китабы «Ирәмәл»гә (1978) «Ағиҙел»дә (1979, №6) мәҡәләм сыҡҡайны. Табырға кәрәк. Тәүге китабы һуң ғына донъя күргән, сәбәбе?

Хисмәт Юлдашевҡа 60 йәш тула. Уның хаҡында элекке мәҡәләмдә (ижади быуындар тураһында, 1992) байтаҡ яҙғайным. Махсус мәҡәлә тураһында күптән уйлайым. Шул иҫкеләрен ҡушып, бер нәмә яҙмаҡсымын. Уның да яҙғандары күп түгел, 4 китабы сыҡҡан. Күп шиғырҙары китаптан китапҡа күскән. Ләкин эш күләмдә түгел. Хисмәт бик үҙенсәлекле шағир, бөтөнләй башҡаса. Уның тураһында тәүге мәҡәләм – «Дала киңлеген юлдаш итеп» – «Совет. Башҡортостаны»нда, (24.06.1979) баҫылды.

Мәүлиттең «С.Б.»-да сыҡҡан тәүге шәлкемен яҡшы хәтерләйем. Ундайҙар йыш булмай торғайны.

Китапхананан һуң Мостай Кәрим һәйкәле янына атлап киттем. Унда 158-се гимназия һәм тағы ла ике мәктәп уҡыусылары менән

матур осрашыу булды. И.И. Ялалов, мин, Тамара Искәндәриә сығыш яһаныҡ. Йыр, музыка. Ҙур ғына төркөм балалар төрлө телдәрҙә Мостай ағайҙың шиғырҙарын һөйләне.

Осрашыу бөткәс, яңынан китапханаға. Портфелемде алып, хөкүмәткә киттем. И.А. Тажетдиновта булдым. Яңынан Совет майҙанына барып, автобус менән ҡайтып киттем. Көн шулай үтеп тә китте.

Кисә лә кешеләр бер-бер артлы килеп, эшләргә форсат булманы. Ваҡыт былай ҙа бик тығыҙ.

Салауат Әбүзәр тураһында мәҡәлә яҙырға әҙерләнгәндә 1959 йылда Ғафури яҡтарында фольклор йыйып йөрөгәндәге студент блокнотымды табып алдым. Унда беҙ булған ауылдарҙың маршруты теркәлгән. Уҡлыҡая янындағы Ташаҫты ла бар – Салауаттың тыуған ауылы. Мәҡәләне шул экспедициянан башланым.

«Мин таянған яурыныңа яттарҙы таяндырма» – йырҙағы шул һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрҙөм дә хәҙерге хәлдәрҙе уйланым. Хәҙер яурынға таяндырыу ғына нимә ул, әҙәм балаһы йәштән үк ниндәй хайуанлыҡтарға етә!

Ғәзиттә «ҡара көнгә» тигән һүҙҙәрҙе уҡыным да мәктәптә уҡытыусының уның мәғәнәһен тырыша-тырыша беҙгә аңлатыуын, ә беҙҙең уны ҡыйын аңлауыбыҙҙы хәтерләнем. Нисек инде ул «ҡара көнгә», йәғни ауыр саҡтарыңа аҡса һаҡлау? Ауыл кешеләре бөтөнләй аҡсаһыҙ ине бит. Тормошобоҙ тик ауырлыҡтарҙан торған, көндәребеҙ ҡара булған инде.

Әҙәм менән Һауа ғына
Йәшәп ҡалған ожмахта.
Хыял, әкиәт булып ҡына
Тороп ҡалған ул саҡтар.
Тик ерҙә тыуырға яҙған
Әҙәм балаларына...
Ожмах хаҡында һөйләйбеҙ
Бары хыялда ғына...

80 йәшемә һүрәтле альбом сығарыу тураһында уйлайым. Материал етерлек. Бәлки Мортаза ағайға мөрәжәғәт итергәлер? Ә нәшриәткә ыҡсым ғына русса китабымды әҙерләр инем.

һуҙмай ғына уйлашырға кәрәк.

Мостай Кәрим һәйкәленең нигеҙе буйлап «Мостай Кәримгә башҡорт халҡынан», «Мустаю Кариму – народ Башкортостана» (әллә «от народа»мы?) тигәнерәк һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙып ҡуйғандар. Кәрәкле һүҙҙәр. Ә мин башҡасараҡ яҙыуҙы ла күҙ алдыма килтерҙем: «Мустай Карим – народу Башҡортостана». Шағир өсөн бынығы, моғайын, мөһимерәктер: милләтен ул нимә менән байытҡан, күңеленә, рухиәтенә ниндәй байлыҡ өҫтәгән?

Халыҡтың үҙ талантына хөрмәт күрһәтеүе, һәйкәл ҡуйыуы һәйбәт, ләкин таланттың милләт хазинаһына өҫтәгәндәре тағы ла мөһимерәк. Был хәҡиҡәт һәр ижадсыға ғына түгел, һәр әҙәмсә шәхескә ҡағыла.

22 октябрь, 2016 йыл. Йәкшәмбе.

Бер айҙан артығыраҡ был дәфтәрҙе ҡулға алған юҡ, ә теркәрлек ваҡиғалар күп. 20 сентябрҙән 7 октябргә тиклем Пушкин урамындағы хөкүмәт больницаһында. 419-сы палатала, неврология бүлегендә. Табиб Римма Шакирйән ҡыҙы Хәсәнова бик иғтибарлы. Фәриҙәнең аяғы бик ныҡ ауырта ине, һәйбәтләнгәндәй булды.

Минең өсөн көндәр ижад йортондағы һымаҡ үтте. Баш күтәрмәй эшләнем. Салауат Әбүзәр тураһындағы мәҡәләмә инеш өлөш өҫтәнем. Хисмәт, Мәүлит тураһындағы мәҡәләләремде яҙҙым. Бөтәһе бергә 50 биттән ашып китте. Иртәгәһе һуңға – дүшәмбе, «Ағиҙел»гә алып барам.

5-дә опера театрына Республика көнөнә арналған тантаналы кисәлә булдым. Ноғман Мусиндан башҡа яҙыусы күренмәне.

«Ватандаш»тың 10-сы һанында «Айырмаһын китаптарҙан – иң-иң тоғро дуҫтарҙан» тигән мәҡәләм сыҡты. Күләмле генә, ике табаҡтан артығыраҡ. Күптәр бик хуплап шылтыраталар.

Өфө ҡала башлығын һайлау буйынса конкурс комиссияһына индергәйнеләр. 17-дә һуңғы ултырышта кандидаттарҙы тыңланыҡ. Ялалов һөйләгәндән һуң мин дә һүҙ әйттем. Өфө – сәйәси, административ, промышленность үҙәге генә түгел, Башҡортостандың мәҙәни, әҙәби, рухани баш ҡалаһы. Бында уҡыу йорттары, музейҙар, театрҙар, иң ҙур китапханалар һ.б. тупланған. Бөтә ижади союздар бында эшләй, матбуғат һ.б. 14 октябрҙә Октябрь проспекты башланған ерҙә Зәйнәп Биишева исемендәге нәшриәт янында Беренсе башҡорт халыҡ яҙыусыһына һәйкәл астыҡ. Хәҙер баш ҡалабыҙҙың төҫө үҙгәрә, һәйкәлдәр арта: Аҡмулла, М. Кәрим, Нестеров,

З. Исмәғилев, А. Мөбәрәков... Ә «Ете ҡыҙ» һәйкәле донъяла берҙәнберҙер. Бик мәғәнәле, шиғри, зифа. Урал батырға һәйкәл кәрәк, әҙәбиәт музейы бинаһыҙ. Киләсәктә был мәсьәләләр ҙә хәл ителер тип өмөтләнәйек. 25 октябрҙә ҡала советы үҙ ҡарарын сығарасаҡ.

Себерҙәрҙә ирҙәр,
Көтә тыуған ерҙәр,
Себерҙәрҙә үтә ғүмерҙәр...

Себер тураһында Ломоносов: «Россия будет прирастать Сибирью». Ә хәҙер хафа арта: Себер Рәсәйҙең башына етмәҫме? Илдең тарҡалыуы шунан башланмаҫмы?

Яҙабыҙ, яҙабыҙ, ә яҙғаныбыҙ бер ҙә күп түгел. Белинский утыҙ нисә йәшендә ниндәй ҡалын-ҡалын һигеҙ том ҡалдырған! Ә боронғо шәреҡ шағирҙарының ижади мираҫы нисәмә мең шиғри юлдар менән иҫәпләнә! Үҙҙәре музыкант, музыка белгесе, әҙәбиәт ҡанундары буйынса хеҙмәттәре, ғалимдар, фәйләсүфтар, сәйәсмәндәр. Батшаларға аҡыл өйрәткәндәр, камил хаким сифаттары. Тик хакимдар тыңламаған шул...

24 сентябрҙә тәбиғәт балҡып хушлашты, ысын алтын көҙ. Күл буйҙары, китапхана... Ырымбурға Каруанһарай байрамына киттеләр. Ҡыҙғаныс, барып булманы. Ярай әле ҡыҙҙар Ырымбурға китте, ә беҙгә, исмаһам, әбейҙәр сыуағы булып алды.

Хәрби егет Илдар Бикбаев Госдумаға үтте. Бик һәйбәт.

90-сы йылдарҙа яңы ҡояштар ҡалҡҡан, Муса ҡайтҡан, Зәки ҡайтҡан! Ниндәй хазиналар асылған! Хәҙер генә ҡәҙерҙәрен белмәйбеҙ, һәйбәткә лә күнегә барабыҙ. Ғәҙәтигә әйләнә бөйөк эштәр.

Түрәне хәйерле ситтән күргәнең.

Көҙөн сәскәләр бигерәк матур. Шул балҡыш ҡар аҫтында ҡаласаҡ, бигерәк йәл. «Көҙгө сәскәләр» тигән шиғыр яҙырға ине.

Һүҙҙе яңыса асыу: һыйыр – һый – йыр (Хисмәт Юлдашев), атаймын – аттай – мын (Салауат Әбүзәр). Йәки көтөүсе (Азамат Юлдашбаев) – кеше олоғая килә көтөүсегә әйләнә: исемдәр көтөүсе, дан билдәләре көтөүсе һ.б.

Аҫабаларҙы аҫҡандар, батырҙарҙы батырғандар...

Беҙ доға ҡылыр өсөн генә теҙләнәсәкбеҙ. Башыбыҙ шишмәгә генә эйеләсәк.

«Бер тигәс тә ни яман?» Ҡобайырҙар шулай башлана. Яманлыҡты фашлау, ҡурҡыныс хәлдәр тураһында иҫкәртеү. Ә ниңә «Бер тигәс тә

ни яҡшы?» йәки «Бер тигәс тә ни матур?» тип һ.б.-са башланмай икән? Шулай яҙып ҡарарға ине.

24 октябрь, 2016 йыл. Дүшәмбе.

21-дә Фәндәр академияһында һайлауҙар. Унан һуң Актерҙар йортонда Ҡәҙим Аралбайҙың 75 йәшлек кисәһе. Был йортта күптән әҙәби саралар үткәне юҡ ине. Ә бит заманында ижади үҙәк булған бина. Күпме съездар, йыйылыштар. Минең дә тәүге юбилейым, ижад кисәләрем ошонда үтте бит. Иҫтәлектәр күп.

Ҡәҙимдең кисәһендә халыҡ һәйбәт йыйылғайны. Үҙебеҙҙең боронғо зыялылар ҙа, йәштәр ҙә байтаҡ. Кисәһендә лә, мәжлесендә лә башлап һүҙ әйттем. Бик йәтеш килеп сыҡты ҡотлауҙарым. Кисә тәнәфесһеҙ булды. Ҡәҙимдең балалары, ейәндәре матур сығыш яһанылар.

Ҡәҙим байрамына «Йыр йылыһы» тигән китап сығарған. Бөгөн төндә тороп, шуны ҡарап ултырҙым. Бик ҙур өлөшөн 5 поэма алып тора. Күбеһе тарихи планда. Яңы китап өсөн күберәк. Арнауҙар ҙа байтаҡ, миңә лә бар. Шиғырҙарҙың күбеһе актуаль, тик тема өҫтөнлөк итеп китә һымаҡ. Мәл өҫтөнлөк итә, мәңгелек, фәлсәфә етмәй.

Ауылһыҙ ҡалдыҡ шул, дуҫтарым.
Халҡыбыҙ ауылһыҙ ҡалмаһын.
Рухи тамырҙар, нигеҙҙәр ҡаҡшай.
Таңатарһыҙ ҙа атыр таңһыҙ булмаҫ,
Әбсәләмдәр ҙә әсәһеҙ ҡалмаҫ.

Тик Нөгөш диңгеҙе аҫтындағы нигеҙҙәрҙе уйлап һәргәйҙәр һарғайыр. Ерһеҙ түгел, ләкин боронғо һәргәйһеҙ.

Минең «Әсәй, мине таңда уят әле...» тигән һүҙҙәрҙе эпиграф итеп алып, Ҡәҙим «Уят әле!..» тигән шиғыр яҙған.

Рауил дуҫҡай!
Күпме һорамаҡ та
Уятмаҫтар беҙҙе әсәйҙәр, – тип башлана.
Яңы шиғыр тыуа башлағандай:
Уятмаҫтар беҙҙе әсәйҙәр,
Таңдарым былай ҙа йоҡоһоҙ ата.
Мин – йоҡоһоҙ,
Донъя йоҡлап ята.

Ғәфләт йоҡоһонан уян, Ватан!
Һыҙылып ата
Йәнде һыҙлата таң,
Уян, Ватан!

20-дә Яҙыусылар союзында идара үтте. Интернетта Наил Ғәйетбаев тураһында бик йәмһеҙ мәғлүммәттәр, Ганичев исеменән мәҡәлә баҫтырыу һ.б.

Мәүлит Ямалетдин тураһындағы мәҡәләмдә Көрьәндең тәүге «Фатиха» сүрәһен өс вариантта сағыштырып ҡараным. Төп эш иң беренсе баҫмала эшләнгән, әлбиттә. Рухи тормошобоҙҙа ла, халыҡ-ара күләмдә лә тарихи ваҡиға, әлбиттә. Ҡалғандары бик әһәмиәтле булһа ла, барыбер шул нигеҙҙә.

Кисә көн ҡояшлы, матур булды. Бәләкәстәр менән йөрөнөк. Шәмбе көн Ҡөрьән ашына йыйҙыҡ, Алинаға Әминә тип, Әнүр ҡустым Вахитов исем ҡушты. Бында мосолман университетында уҡып ята. Элекке «Ғалиә» мәҙрәсәһе бинаһында.

4 ноябрь, 2016 йыл. Йома.

Был байрамға күңел һис күнегә алмай. Өс көн ял буласаҡ – халыҡ өсөн байрамдан бигерәк шуныһы ҡыуаныслыраҡ. Ә 7 ноябрь эш көнө буласаҡ. Ләкин ул моң күңелдә барыбер байрам булып ҡалыр.

Нисәмә йөҙ йыл элек поляктарҙан азат итеүҙе Дәүләт байрамы итеп билдәләү лә поляктарҙан дуҫлыҡ көт, имеш. Поляктар был мәсьәләлә бик хис-тойғоло, тарихи хәтерле бит.

Ҡыш бер аҙнаға алдан килде тинеләр. Ҡайһы бер яҡтарҙа ҡар ныҡ яуған. Күгәрсендә, мәҫәлән, ярты метр.

Яҙыусыларҙың дөйөм йыйылышы 18 ноябргә ҡуйылғайны, 25-нә күсергәндәр. Һуңғы күсереү булһа...

Кисә Фәндәр Академияһында һайлауҙар булды. Фирҙәүес Хисаметдинова бүлектә икенсе һайлауҙан һуң ғына үтте. Көнсөлләк.

26–28 октябрҙә «Көмөш Аҡбуҙат» тигән милли һәм этнофестиваль үтте. Мине жюриға индергәйнеләр. Был өлкәлә мәғлүмәтем аҙ булһа ла, үҙем өсөн өр-яңы донъя астым. Төп нәмә, ә бәлки фильмдың нигеҙелер, сценарийҙан тора. Беҙҙә был мәсьәлә эшләнмәй тиерлек. Яҙыусыларыбыҙ бөтөнләй ҡатнашмай. Йүнлерәк йәш сценарист булһа, тиҙерәк Мәскәүгә һыпырта. Ә бит беҙҙә ике бөйөк фильм мотлаҡ тыуырға тейеш: Урал батыр һәм Салауат Юлаев. Уны донъя кимәленә күтәрерлек сценарисыбыҙ ҡайҙа?

О правах и обязанностях. Хоҡуҡтарҙы дәғүәләшеү күп, ә яуаплылыҡтар, бурыстар тураһында уйланыу юҡ дәрәжәһендә. Был яғы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, арта бара.

Алдап көйләнә бизмән –
Ғәҙел бүленмәй билмән.

Республикалағы ҙур-ҙур сараларҙың күплеге арҡаһында уларҙың әһәмиәтен халыҡ баһалай алмай ҡала.

Рәлиф Кинйәбаевтың юбилейына мәҡәлә яҙғы килә. Тик драматургия тураһында махсус уйланғаным юҡ. Хәҙерге режиссерлыҡ диктатын ҡабул итә алмайым. Тереләрҙе ярар уларҙың ризалығы менән тунайҙар. Ә классиктарҙы улай ботарларға кемдең хаҡы бар? Улар ҡаршылаша, өндәшә алмай, әлбиттә. Кинола ла шул уҡ баш-баштаҡлыҡ микән?

Мостай ағай пьесаһында бер һүҙҙе лә үҙгәртмәй торғайнылар бит.

Драматургтарҙың яҙмышында башҡа жанрҙарҙа эшләүселәргә теймәҫ бер үҙенсәлек бар: уларҙың тантаналары ла, ҡыйралыштары ла үҙҙәренең күҙ алдында, спектакль барышында. Тамашаның йомғағы йәки уңыш, хатта дан, йәғни бөлөү, мәсхәрә.

Беҙҙә «атай», «әсәй» тип һөйләмәйҙәр, ундай битарафлыҡ юҡ. Мотлаҡ «Атайым ҡайҙа?», «Әсәйем ҡайттымы?» һ.б. «Фәләнән ағай» тип әйтеү бар, әммә яҡының ағай бары «ағайым», күп ерҙә «абзыйым». Рәлифтең пьесаларын уҡығас, уға шул хаҡта әйттем. «Атай китте» тип битараф һөйләүсе яҡтар ҙа бар, әлбиттә. Әммә бындай мөғәләмә миңә сабый саҡтан һеңмәгән, шуға ят, сәйер.

«Пушкин унес тайну» тигән Достоевский шағир һәйкәлен асҡандағы атаҡлы телмәрендә. Бөйөк Пушкин ғына түгел, һәр беребеҙ, һәр даһи һәм һәр бахыр, меҫкен әллә күпме серҙәрҙе үҙе менән гүргә алып китә инде ул.

«ЛГ»ла «Многоязычная лира России» даими сығып килә. Бурят һаны булғайны, әле Карачево-Черкесия, Кабардино-Балкария. Элек тә был тематикалағы бер боролош башҡорт әҙәбиәтенән башланғайны. Түләүлеме икән? Хәҙер башҡорт әҙибенең һүҙе «ЛГ»ла бөтөнләй юҡ. Кем ойошторһон?

Шиғыр фекер йәки хис кенә түгел, образлы сара, шиғри тел, эстетик ысул, һүҙҙең яңыса балҡыуы, һүҙ уйнатыу һ.б. Һүҙ оҫталығы – күптәргә бына нимә етмәй, был сифаттар айырыуса мөһим. Беҙҙә актуаллекҡә һуҡтырыу күберәк.

8 ноябрь, 2016 йыл. Шишәмбе.

4-дәге байрам йораты арҡаһында өс көн ял булды. Рәлиф Кинйәбаев тураһында мәҡәлә яҙып ултырҙым. Кисә таңда тороп, бөтөрөп ҡуйҙым. Театр донъяһы минең өсөн ятыраҡ, әлбиттә. Үҙенсәлектәрен аңлап та бөтөрмәйемдер. Шулай ҙа үҙем ҡуйған маҡсатыма ирешкәндәй булдым.

Һуңғы ваҡытта мәҡәләләр байтаҡ яҙылды. Шиғырҙарға күсермен һымаҡ. «Ағиҙел»дең унынсы һанында ҙур шәлкемем, «Ватандаш»тың унынсыһында китаптар тураһында ҙур мәҡәләм сыҡты.

Ҙурыраҡ әйбергә тотонғо бик килә лә бит, көс тә, ваҡыт та етмәҫ тип ҡурҡам. Улай булғаны юҡ ине. Рәми тураһында яҙған һымаҡ Бабич хаҡында ла китап яҙғы килә. Аң етһә лә, дыуамаллыҡ, көс етмәҫ һымаҡ. Рәмиҙе бик ярһып, илһамланып яҙғайным бит. Хәҙер улай ҡанатланып булмаҫ.

Яҡут театры 110 йыллыҡ юбилейына арнап, евразия гастроленә сыҡҡан: Бишкек, Алматы, Астана, Ҡазан, Өфө, Мәскәү... Хатта Минскиға, Вильнюсҡа ла барып етмәкселәр икән. Бының өсөн тәүәкәллек кенә етмәй, ныҡлы финанс нигеҙ кәрәк. Тимәк, республика етәкселәре театрға һәйбәт мөнәсәбәттә.

Хөкүмәттән шылтыраталар, Яҡут театрынан Николай Лугинов эҙләй, бөгөн спектакле тиҙәр, алтыһында. Барһам, Николай юҡ, Башакадемда уның әйберен ҡуялар. Шул юл менән Камил Зиганшинды, Марсель Сәлимовты ла килтергәндәр. Театрҙың баш режиссеры Андрей Борисов ҡаршы алды. Тәлғәт Сәғитов та килгәйне. Заманында мәҙәниәт министрҙары саҡтарында коллегалар булғандар. Дуҫтарса аралашып йәшәгәнгә оҡшағандар.

Николай Лугиновты (Яҡутстандың халыҡ яҙыусыһы) 80-се йылдар башында Ғәзим Шафиҡов, Наил Ғәйетбаев менән Мәскәүҙә ВЛК-ла уҡып йөрөгән сағынан беләм. Яҡутскиҙағы пленумда, хатта Алматала Тюрксой кәңәшмәһендә осрашҡайныҡ.

Үҙе булмаһа ла, һундар (хунны) тураһындағы тамашаһын ҡараныҡ. «Ҡара йөҙҙәр»ҙәге һымаҡ сәхнәлә күрһәттеләр. Театрҙа рух көслө, уйнауҙары тәьҫир итә. Йөкмәткелә, образдарҙа әллә нимә булмаһа ла, ҡеүәт, темперамент бар.

Ғөмүмән, яҡуттарҙа милли сифаттар беҙҙәгенән нығыраҡ һаҡланған һымаҡ. Беҙҙә быуаттар буйына рус, татар йоғонтоһонда милли асылыбыҙҙағы күп сифаттар юғалған һымаҡ.

Аҙаҡ сәй-мәй эсеп, һөйләшеп ултырҙыҡ. Баш режиссерҙары Андрей Борисов ауыл башҡорто һымаҡ асыҡ, бер аҙ һауалыраҡ кеше.

Нәккәр апайым менән телефондан һөйләшеп алдым. Грипп менән бик ҡаты ауырыған, саҡ ҡалдым, ти. Ул ҡыҙыҡ ҡына итеп әйтеп ҡуя. Бер ҡыҙ үҙе бик ҡаты ауырығанда әсәйем дә (инәйем дә) үлгәндә был тиклем ауырымағандыр тигән, имеш.

11 ноябрь, 2016 йыл. Йома.

Кисә Артур бөтә ғаиләһе менән беҙҙә булды. Мин Алина менән ике сәғәт урманда йөрөнөм. Ул арбала йоҡлай, мин бер ҡарағай янында үҙемсә ҡыбырлаған булам.

Асҡар менән Әсил икәү беҙҙә ҡалһалар, тыйып алып булмай. Шул тиклем шаяралар, сәкәләшеп тә китәләр. Тыйырлыҡ түгел. Кисә шулай булды.

Сабина килен ата-әсәләр йыйылышына барып килде.

Шишәмбе – 8-дә, Өфө етәксеһе Ирек Ялалов ҡабул итте. Тағы ла ҡотланым, ҡайһы бер китаптарымды бирҙем. Ярай русса минең «Рами» (книга о поэте)» бар ине. Шуны башта биргәндә «Хочу поставить памятник этому человеку» тигән һүҙҙәре менән бик шатландырҙы. Сынтимер Баязитовты саҡырҙы, урын һайлау тураһында әйтте. Ирек Ишмөхәмәт улы менән сәй эсеп һәйбәт һөйләшеп ултырҙыҡ. Тамырҙары Салауат районынан, Ишембай ауылынан. Ата-әсәһе иҫән икән, 85 һәм 83 йәштәләр, тине.

Рәми ағайҙың улы Азаматҡа шылтыратҡайным, юҡ. Гөлнара менән һөйләштем, ҡыуанысымды әйттем. Азаматтан хәбәр юҡ әле.

Бөгөн Рәми Ғарипов гимназияһында Фәнзил Саньяров минең буйынса асыҡ дәрес үткәрә. Шуға барам. Бүләк итеп таратырға китаптар ҙа әҙерләп ҡуйҙым. 12 дана «Атлы азамат», 12 дана «Оноторлоҡ булдымы ни?»

Туған телде уҡытыусылар изге эштәр эшләүсе педагогтар араһында иң ҙур изгелектәр эшләүселәр. Ҡулдан килһә, уларға эш хаҡын арттырыбыраҡ түләр инем.

Булғаны менән, именлек менән, алдыңдағы икмәк, башҡа ризыҡ, йылы торлағың менән мөрхәтһенеп йәшәй белмәйбеҙ. Нәфсе аҙа. Ләкин «бары менән байрам» тип кенә йәшәү ҙә кешене кире мәмерйә тормошона алып ҡайтмаҫмы?

АҠШ-та Трамп президент булды, 45-се тинеләр. Ярар әле уларҙың йәшәйеше Клинтон тигән бер бисәгә күсмәне.

Мәшәкәттәр бөтмәй. Теш врачы күп ваҡытты аласаҡ. Иң азат булған урын – ижад йорттары, бик һағындыра.

Күңелгә нимәлер етмәй. Даими юҡһыныу. Йәшәүҙең асылын аңларға теләү. Ләкин конкретно нимәне? Донъяның күп яғын һиҙемләргә генә мөмкин, аңлап булмаясаҡ. Трансценденталь күренештәр. За пределами человеческого познания.

12 ноябрь, 2016 йыл. Шәмбе.

Рәми Ғарипов гимназияһында минең ижадҡа арналған асыҡ дәрес һәйбәт үтте. Фәнзил Санъяров бик тәжрибәле педагог, оҫта ойоштороған. Класс өс төркөмгә бүленгән, һәр береһе айырым рәт: әҙәбиәтселәр, журналистар, телселәр. Ике төркөм үҙенсәлекле анализ әҙерләгәнсә (әҙәби, тел яғынан), журналистар блиц-интервью ойоштороҙо. Уға тиклем «Башҡортостан бында башлана» тигән шиғырымды уҡыным. Томды әҙерләп ҡуйғайнылар, тик мин яттан һөйләнем. Һорауҙар ҡыҙыҡ ҡына: ижадтың башы, кем булырға хыялланыу һ.б. Анализдар ҙа һигеҙенсе класс өсөн йөкмәткеле, етди.

Шиғырымды уҡыр алдынан аҙыраҡ һүҙ әйттем. Былар быйыл ғына ауылдан килгәндәр. Нәҡ минең яҙмышымдағы һымаҡ: ауылда етене бөтөргәс, Аҡбулаҡта уҡый башлағайным. Бәйләнешем өҙөлмәһә лә, ауылдан сығып киткәйнем инде. Рәми Ғарипов исемендәге гимназия республикалағы иң милли, иң башҡорт рухлы уҡыу йорто түгелме икән әле? Бында уҡый алыуығыҙҙың ҡәҙерен белегеҙ, тинем.

Мин дә Рәми Ғарипов мәктәбе уҡыусыһымын, тинем. Остаз һәм шәкерт.

Китаптар алып барғайным. 12 дана «Оноторлоҡ булдымы ни?»ҙе уҡыусыларға, 12 дана «Атлы азамат»ты уҡытыусыларға тапшырҙым. Улар төрлө яҡтан асыҡ дәрескә күп килгәйне, иллеләп булғандыр. Дәрес бөтөп, балалар таралғас, уҡытыусылар менән осрашыу булды. Аҙаҡ күмәкләп төшкө ашҡа төштөк.

Осрашыуҙарҙа күп булдым. Бындайы – дәрес рәүешендәгеһе, тәүге тапҡыр.

Мостай Кәримдең яңы алтынсы томын уҡыйым. Байтағы олоғайғас яҙылған. Һикһәндән һуңғы әйберҙәре бик үк юҡ ахыры. «Ғүмер миҙгелдәре» ҡыҙыҡлы, ваҡиғалар, шәхестәр. Ғүмерҙең һәр миҙгеленең – үҙ жанры, үҙ темаһы, үҙенсә уй-кисерештәре.

Мостай Кәрим менән БАССР – ҡорҙаштар. Осраҡлы тап килеү түгелдер.

Рәислеккә тәҡдим итерлек кандидатты йәштәрҙән дә, ололарҙан да табыуы ҡыйын. Бына ниндәй хәлдә ҡалдыҡ? Заман хакимдәре

әҙәбиәтте ҡыйырһыта. Илдәге әҙәбиәт йылы әҙәби тормошҡа нимә бирҙе?

Түҙемһеҙ – түҙерһеҙ, сабырһың.
Түҙмәҫһеҙ – йүгерер-сабырһың.

Янырын янырһың, таныуын танырһың, алырын алырһың, ҡалырын ҡалырһың.

Мәүлит Ямалетдинов тураһындағы мәҡәләмдә «Фатиха» сүрәһенең башҡортса өс вариантын сағыштырып ҡараным. Яңылары тәүге баҫманан әллә ни алыҫ китмәгәндәр. Уйлап ҡараһаң, шиғри тәржемә (йәки аңлатма) кәрәкме? Ҡөрьән һүҙен үҙгәртергә ярамай бит.

21 ноябрь, 2016 йыл. Дүшәмбе.

Көндәр ноябргә хас булмағанса бик ҡаты һыуыҡ тора. Бер кис ямғыр яуып, иртәгәһенә бик яман боҙлауыҡ булды, бөтә ер каток, атларлыҡ түгел. Урманда ла һуҡмаҡ ялтырап ята, янындағы йомшаҡ ҡарҙан ғына барып була.

Артур машинаһы менән авария яһап алған, әле күргәнем юҡ.

«Бер шағир – берәр шиғыр» тигән миниантология төҙөп ултырам. Был уй күптән йөрөй ине. Әле тотондом. Иң-иң мини, 20–25 шағирҙан артмаҫ. Һәр шиғырға бер-бер ярым битлек минең аңлатма һәм шул уҡ күләмдәге инеш мәҡәлә бирәм. Ҡыҙыҡ ҡына йыйынтыҡ булмаҡсы. Текстар ҙа, комментарийҙар ҙа башҡортса һәм русса буласаҡ. Әле текстарҙың төп өлөшөн йыйҙым. Хәҙер мәҡәләләргә тотонорға. Ҡыҙыҡ һәм иң мөһиме – кәрәкле китап булмаҡсы. Минобр аша сығарырға ине.

Үткәндәргә ҡайтып алыу кәрәк. Иҫке баҫмаларҙы – Марцинкявичюстың поэмалар китабын, Белла Ахмадуллинаның шиғырҙар йыйынтығын ҡарап ултырҙым. Башта сәйер кисерештәр. Хатта Огневтың поэмаларға яҙған инеш һүҙенә инеп китеүе лә ҡыйыныраҡ. Аҙаҡ элекке уй-кисерештәр яңырған, хатта йәшәргән һымаҡһың.

Йылдар үткән, нығыраҡ олоғайған һайын ваҡыт менән минең ара яҡыная бара һымаҡ. Йәш саҡта мәңге йәшәрһең һымаҡ. Ваҡыт һиңә теймәй, ул әллә ҡайҙарҙа шикелле. Хәҙер уның тынын йылдан-йыл нығыраҡ тояһың. Русса әйткәндә, «все сильнее чувствуешь, как время дышит в спину». Ваҡыттың һуңғы тыны булмағайы, туҡтап ҡуймағайы. Ул көн дә алыҫ түгелдер…

Ғүмер үтә. Юл ҡыҫҡара.
Ваҡыт менән минең ара
Яҡыная бара.
Дикҡәт менән ҡара! Сәғәтеңә…

Уҙғандарға ҡайтып алыу кәрәк. Рәмзилә Хисаметдинованың тәүге китаптарын уҡып бик хисләнеп алдым. Ул бәлки иң шәп шағирәбеҙҙер. Тағы ла шул хаҡта уйлайым: шиғри ижад барыбер артыҡ ҙур булмаҫҡа тейеш. Ҡиммәтле аҫыл таштар күп булмай.

Егерменсе быуат башында уҡ башҡорт йәштәре араһында үҙенсәлекле фекер үҫеше барған. Дауыт Юлтыйҙың һуғышта саҡта Закир Юлтыев менән хатлашыуына Бабичты яҙғанда уҡ иғтибар иткәйнем. Индерәһе булған икән.

Юлтыйҙың шиғри томын барлап, шуны нығыраҡ күрҙем: лирик булып башлаған, риторика арта барған. Башта бик тормошсан: «Башҡорт хәле», артабан «Шинель», «Сумка», «Ҡан баҙары». Аҙаҡ – һүҙ сурытыуҙар.

Риторика хатта Рәшит Назаровта ла байтаҡ. Поэмалары үтә йомшаҡ, башҡа кеше яҙған тиерһең.

Рәшит Назаров зиһене ауырыған сағында ҡапыл элекке хәленә ҡайтып, асылып китеп, бөйөк һүҙҙәрен әйтеп ҡалдыралған, «Ер аҫтынан һеҙгә хаттар яҙам» тигән фажиғәле уй-кисерештәр шәлкемен яҙа алған бөйөк шағир бит. Донъя әҙәбиәтендә был берҙән-бер осраҡ түгелме икән? Барлап ҡарайым да, әлегә аналогын таба алмайым.

27 ноябрь, 2016 йыл. Йәкшәмбе.

Кисә «Апшерон» ресторанында Уйылдан Сәйетовтың 65 йәшендә булдыҡ. Тәүге һүҙҙе миңә бирҙеләр. Улай өйрәнмәгәс, ҡыйыныраҡ булды. Мәжлес күркәм, зал да матур эшләнгән. Күбеһе хәйбуллалар, үҙенсәлекле, рухлы халыҡ. Алһыу Бәхтиева алып барҙы. Беҙҙең өҫтәлдә Марат Илһамов, Тәлғәт Сәғитов, Риф Ҡаҙаҡбаев, Миҙхәт Мәмбәтов, Марат Аҙнабаев ҡатындары менән. Беҙҙең өҫтәлдәгеләр генә бер сәғәттән артыҡ тост әйттеләр. Ни хәл итәһең, һәр кемдең ихлас теләктәр теләгеһе килә.

Ир-егеттәрҙең башҡорт бейеүе бик көслө булды. Рәүеф Сиражетдинов (тамыры Хәйбулла, Бөрйәндә үҫкән) бик матур башланы. Миҙхәт Мәмбәтов ҡушылды. Уйылдан Сәйетов та төшөп китте. Өсөһө лә бик оҫта, профессиональ кимәлдә. «Башҡорт бейеүе» тигән шиғыр яҙырлыҡ.

23-дә идара ултырышы, 24-дә университетта Ғиниәт Ҡунафиндың 70 йәше, 25-дә Актерҙар йортонда яҙыусыларҙың дөйөм йыйылышы. Наил Ғәйетбаев докладын эшләне лә йәтеш кенә шылды. Хәҙер 262 ағза. Яртыһынан күбеһе булды.

Башҡорт драма театрынан Әхмәт Сөләймәновты Бөрйәнгә оҙатып ҡалдыҡ. Һәр үлем көтөлмәгән хәл. Бынығы бигерәк тә. Зарядкалар эшләп, иртә һайын йүгереп йөрөгән кешене инсульт йығҡын инде, хәрәкәтһеҙ итеп… Бик ҙур ғалимыбыҙҙы юғалттыҡ.

Бөгөн шул уҡ театрҙа Фәрит Бикбулатов менән бәхилләшеү. Юғалтыуҙар быйыл бик йышайып китте. Күбеһе беҙҙең быуын тирәһендә.

Әхмәт Сөләймәновтың табуты торған театрҙағы уйланыуҙарымдан:

– Рәхмәт һиңә, Әхмәт!

Рәхмәт һеҙгә, Әхмәт Мөхәмәтвәли улы! Былай тип һиңә өндәшеүселәр бик күп булғандыр, киләсәктә лә күп булыр. Мин дә һиңә бәхилләшкәндә шулай тип әйтәм: рәхмәт һиңә, Әхмәт дуҫ! Рәхмәт бөйөк хеҙмәттәрең өсөн. Рәхмәт милләтебеҙ тормошонда бар булғаның өсөн. Рәхмәт халҡыбыҙҙың рухи хазиналарын туплағаның өсөн, уларҙы том-том китаптар итеп баҫтырып мәңгеләштергәнең өсөн. Халҡыбыҙҙың данын Башҡортостандан алыҫ-алыҫтарға, уҙғандан бөгөнгөгә, бөгөнгөнән киләсәккә еткерә алғаның өсөн. Рәхмәт башҡорттоң тауҙай хазинаһына үҙеңдең хазинаңды – тау-тау хеҙмәтеңде өҫтәй алғаның өсөн.

Һинең шәкерттәрең күп булды, уҡыусыларың күп булды. Һин ғүмерең буйы уҡытыусы, мөғәллим генә түгел, рухи остаз булдың. Шәкерттәрең остаз юлын дауам итә, һин ғаиләлә тәрбиәләгән балаларың атай юлын дауам итә. Һин бәхетле кешеһең, Әхмәт!

1995 йылда беҙ Ҡырғыҙстанда бөйөк Манастың мең йыллығ юбилейында бергә булғайныҡ. Ниндәй мәшһүр шәхестәр юлдаштарым булғанлығын йылдар үткән һайын мин нығыраҡ аңлайым. Милләтебеҙҙең юлбашсылары атаҡлы башҡорт археологы Нияз Мәжитов, бөйөк фольклорсыбыҙ Әхмәт Сөләймәнов менән бергә сәфәрҙә йөрөп ҡайтыу бәхете тейгән бит миңә! Һин ғүмерең буйы аҡыллы кәңәштәреңде миңә әйтә килдең. Әле лә хәстәрлекле һүҙҙәреңде ишеткән кеүек булам. Бөгөн дә бәхилләшкәндә бөтә булмышың менән әйтәһең һымаҡ:

– Бер-берегеҙҙең ҡәҙерен белегеҙ! Берҙәм булығыҙ, ваҡланмағыҙ! Оло маҡсаттарыбыҙға тоғро ҡалығыҙ! Күңелегеҙ күтәренке, рухығыҙ һәр саҡ ҡанатлы булһын!

Ошо һүҙҙәреңә тоғро булып йәшәргә тырышырбыҙ, ҡәҙерле дуҫыбыҙ, милләтебеҙҙең һөйөклө, бөйөк улы!

28 ноябрь, 2016 йыл. Дүшәмбе.

Кисә тағы ла Академтеатрҙа матәм йыйыны. Фәрит Бикбулатовты көнъяҡ зыяратҡа оҙаттыҡ. Мине Артур алып барҙы, башланғайны. Хәләф Ишморатов һөйләп тора ине. Һүҙе төплө булды. Уға тиклем Шафиҡова, Мелкоедов, Баязитов һөйләгән. Гөлли Мөбәрәкова, Йылайырҙың хәҙерге һәм элекке етәкселәре һүҙ әйтте. Фәнил Ҡоҙаҡаев алып барҙы.

Бындай оҙатыуҙар бик йышайып китте, әллә ниндәй йыл…

Рәшит Назаровтың икенсе томын яңынан ҡарап сыҡтым, шиғырҙарын һайланым. 75 йыллығына ысынлап та китабын төҙөргә кәрәк. «Ер аҫтынан һеҙгә хаттар яҙам», – был шәлкем тетрәндерә, тулыһынса алырға кәрәк.

Рәшит Назаровтың психдауаханала зиһене асылып, тотош шәлкем шиғырҙар яҙыуы донъя әҙәбиәтендә берҙән-бер осраҡ түгелме икән? Был бит Гоголдең «Записки сумасшедшего» түгел. Бөйөк талантың ауырыу саҡта уйланыр хәлгә килеп ни тиклем ғазаптар кисереүе. Был яҡтан да Рәшит Назаров уникаль шағир.

Мәүлит Ямалетдинов Муҡағәленең шиғырҙарын тәржемә итеп, «Толпарҙар менән бергәмен» тигән үҙнәшер китабын сығарған. Йыйылышта миңә бүләк итте. Әгәр ҡаҙаҡ дуҫтарҙың һөйләүенсә, Муҡағәле Маҡатаев хәҙерге иң ҙур шағирҙары икән, шиғриәттәренең дөйөм кимәле бик уйландыра бит. Муҡағәле тураһында элек тә ишеткән бар ине, үҙенсә легендаға әйләнгән. Шулай ҙа шиғырҙарынан күберәкте көткәйнем. Тәржемәлә, әлбиттә, күп байлыҡ юғала. Тик шулай ҙа…

Муҡағәленең яҙмышы Рәми Ғариповтыҡына бик оҡшаш, тыуған йылдары ла бер тиерлек, 1931, 1932. Үлеүҙәре лә 45 йәштә. Рәми ағайҙыҡы барыбер фажиғәлерәктер. Муҡағәле милләтселектә ғәйепләндеме икән? Ундай юҡ бәлә уға тағылғанмы?

Ҡолоң да булдым, ҡолоноң да булдым.

Үҙем төгөҙән ике телдәге иң миниантология эше әлегә бик бармай, туҡтап ҡалды.

22 декабрь, 2016 йыл. Кесаҙна.

Әлеге антологиянан ысынлап та айырылып торам. Яңы йылдан һуң ялдар оҙон, шунда ныҡ ҡына ултырып алырмын тигән өмөт. Минобр планы аша сығарырға ине.

«Көндәлектәр»ҙең өсөнсө томы, Алла бирһә, киләһе йыл «Ағизәл»дә сығырға тейеш. «Ғилем»гә 80 йәшемә тиҙерәк әҙерләп бирергә кәрәк.

20-дә телевидениела өс шағир буйынса яҙылдым: Х. Назар – 75, Салауат Әбүзәр – 50 йәшенә. Ғәзим Шафиҡов буйынса «Башҡортостандың 100 исеме» серияһына. Һорауҙары уңайһыҙ ғына булды. «Нимә хаҡында бәхәсләшә инегеҙ?», «Ниндәй әкәмәт хәлдәр (какие байки) иҫтә?» тип һорай Кристина Андрианова. Ундай бәхәстәр булманы, сөнки фекерҙәштәр инек, тинем. Студияла бигерәк ҡатырып ултыртып ҡуялар. Рәйсә Абдуллина кабинетта яҙҙы, уныһы ябайыраҡ, әҙәмсәрәк булды.

Бик ҡаты һыуыҡтар. Шамонинола Артур хатта машинаһын ҡыҙҙыра алмаған. Кисә килмәнеләр, был һыуыҡта Асҡар мәктәпкә бармаһа ла була.

Тыуған көнөм дә үтеп китте. Йылдың иң ҡыҫҡа көнө лә кисә үтеп китте. Кисә Тимерғәле Килмөхәмәтовтың 75 йәшенә бара алманым, үкенесле булды.

«Литературная газета»ла башҡорт бите сыҡҡан. Шул уҡ һанда сыуаштар. Минең интервьюны, Шуралев әйтеүенсә, оҡшатҡандар, тик ныҡ ҡына ҡыҫҡартҡандар. Төп мәғәнәһе, ярай, һаҡланған. Г. Юнысова, Р. Назар, Й. Ильясова, З. Ханнанова, Вл. Денисов, А. Шуралев, минең шиғырҙар, С. Шәрипов. Ю. Горюхиндың хикәйәләре. Материал байтаҡ, тик ят уҡыусыға тәьҫорат нисектер? Тик минең «Туҙан»да А. Филиппов тәржемәһендә хата киткән.

Дүшәмбе көн урманда йөрөнөм, бындай әкиәти матурлыҡты күргәнем юҡ ине. Йомшаҡ ҡына ҡар яуып ҡуйғайны йәкшәмбе төндә. Шул ҡар ботаҡтарға өйөлөшөп ятҡан. Был тиклем аҡ һоҡланғыс күренеште ошо йәшемә етеп күргәнем юҡ ине. Күреп ҡал, тип, Фәриҙәне лә сығарып ебәрҙем. Ул да хайран ҡалып ҡайтты.

Урмандан ситтә ағастар яланғас. Ул матурлыҡты ел һыпырып төшөргән.

Урманда ботаҡтарҙы һелкетеп был юлы тейендәр ҙә уйнаманы. Матурлыҡты боҙорға ҡурҡалармы? Бәлки беҙ ҙә үҙебеҙҙең «шаянлыҡтар» менән тәбиғәттең йәмен ебәрәбеҙҙер тип уйлап ҡуйҙым.

Яңы шиғырҙар китабым «Иң беренсе мөғжизә» матур ғына сыҡты. Шатлыҡлы ваҡиға, тик тәүге китапты ҡулға алыу ҡыуанысына етмәй шул.

Ғәзим Шафиҡов буйынса әҙерләнгәндә булған китаптарын яңынан ҡараным. Барыбер бер-беребеҙҙе йылдар буйы аралашһаҡ та етерлек белмәйбеҙ шул. «Старик в ночи» тигән китабын яҙып биргәйне, ығы-зығы менән булып, бөтөнләй уҡылмай ҡалған. Унда Ғәзимдең һыҙланыуҙары күп.

Бик күп уҡыйһы мәсьәләләр буйынса кәрәкле хеҙмәттәрҙе уҡып өлгөрөп булмай: фәлсәфә, фольклор, психология, сәйәсәт һ.б. Әле өҫтәлемдә бик ҡыҙыҡлы китаптар көтөп ята. Нисек өлгөрөргә? Уларға бай витриналарға ҡараған бер малай һымаҡ ҡарап тораһың.

«Донъяға һыймай йөрөй!» тиҙәр бәғзе бер ҡупырҙар тураһында. «Киң донъяға һыймай ваҡ кешеләр» тип күптән, 70-се йылдарҙа уҡ, әйткәйнем инде. Эшләгән ҙур эштәрең, ҡылған һәйбәт ҡылыҡтарының ғәҙәти үлсәмдәргә һыймаһын! Донъяға шулай һыймай йөрө! Һис юғында…

30 декабрь, 2016 йыл. Йома.

Һуңғы бер нисә көн грипп менән ауырыйым. Бындай хәлдән бер төн тирләгәндән һуң сыға торғайным. Ҡул менән һыпырып алған һымаҡ үтеп китә ине. Был юлы улай ғына ҡотолоп булманы. Температура утыҙ етенән төшмәй, бөтә тән ауырта. Оҙаҡҡа китте әле был сырхау. Врач та килеп китте, бөгөн ҡан алырға киләләр.

22-дә иртән хәҙер мәктәптәрҙә тарих уҡытыуға ҡараш, талаптар тураһында Россия радиоһынан тапшырыу бара. Андрей Медведев тигән сәйәси күҙәтеүсе Зәки Вәлидиҙе күтәреүҙе бик яманланы. 1975 йылғы журналист икән. «Коренизацция, т.е. укрепление национальных окраин в 20–30 гг.», «скелеты в шкафу» һ.б. был йылдар Вәлидиҙең иң ҡәһәрләнгән сағы, меңәрләгән кешеләрҙең шул исем менән язаланған ваҡыты бит.

Рус тарихына яңыса ҡараш бик һағайта. Был Медведев Украина – Рәсәй мөнәсәбәттәре тураһында ла яҙа икән. Төп фашлауҙарын күҙ алдыма килтерәм һымаҡ. Хатта бөйөк рус тарихсыһы Карамзинды ла «ЛГ» халыҡ тарихын түгел, дәүләт тарихын һөйләүе, дөрөҫ позицияла булмауында ғәйепләп яҙҙы. Бындай сығыштар хәүефле тенденцияға әйләнеп бара.

Доғаһыҙ кеше дағаһыҙ ат ише.
Ышаныслы баҫып атлай алмай.

Кәфендең кеҫәһе юҡ. Нәфсенең тоғо тишек.

Хәҙер әхлаҡ онотола, хаҡ эштәр нахаҡ тарафынан отола.

Мостай Кәримдең 7-се томын алдым, ҡарап сыҡтым. Элекке һайланмаларына инмәгән мәҡәләләре, сығыштары байтаҡ. Күпселеге таныш булһа ла, бергә йыйып уҡыҫас, фекер үҙгәрмәй ҡалмай икән. Мостайға ла башҡасараҡ ҡарайһың, заман нескәлектәрен, ҡаршылыҡтарын яҡшыраҡ күрәһең.

Һәр талантҡа үҙенең заманы үҙ бурыстарын йөкмәтә. Һәр талант үҙ милләтенә нәҡ шул саҡтағы иң кәрәкле һүҙҙәрҙе әйттерә.

Һуңыраҡ тыуһа, Аҡмулла Аҡмулла була алмаҫ ине. Иң изге ынтылыштарҙан тыуған мәғрифәтселек идеяларын, халыҡсан әхлаҡты яҡлаған һүҙҙәрҙе халыҡ Аҡмуллаға ҡушылып ҡабатлай алмаҫ ине. Ниндәй үткер социаль мәсьәләләр күтәргән Ғафури «Сикһеҙ ватансы мин совет иле булыу шарты менән ул ватан» тип, атаһы менән атышырға әҙер торғанда, «Ленинизм – минең маяғым» тигән инаныуҙарға күскәндән һуң үҙенең ниндәй аҫыл сифаттарын юғалта. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте Уралды дер һелкеткәндә Бабичтың майҙанға сығыуы ла осраҡлы хәл түгел. Яһалма рәсми талаптар, советса сәйәси ҡалыптар Мостай Кәримгә аҙ йоғонтоһоҙ ҡалмай. Ләкин шул ҡалыптарҙың ҡыҫаһында яҙылған мәҡәләләренең һәм ҡайһы бер шиғырҙарҙың һайланмаларға авторҙың индермәүе үҙенсә һынылыш, ижадҡа яңыса ҡараш түгелме ни?

Башҡорт әҙәбиәтенең XX быуат урталарындағы үҫеш кимәле уның донъя әҙәбиәте менән бәйләнешкә инеү мәсьәләһен үҙәккә ҡуя. Мәсьәләнең етдилеге шуны башҡарып сығарырлыҡ масштаблы таланттың булыу талабын ҡуя. Һәм был тарихи бурысты үтәүҙе яҙмыш Мостай Кәримгә йөкмәтә. Аварҙа Рәсүл Ғамзатов, ҡырғыҙҙа Сыңғыҙ Айтматов шул яуаплы миссияны башҡарҙы. Әҙәбиәт ныҡ үҫешкән хәлдә лә шундай тарихи күренеш дәрәжәһендәге талантлы шәхестәр, донъя әҙәбиәтендә ошондай ижадсы шәхестәр булмаһа, мәсьәлә барыбер тейешенсә үтәлмәҫ ине. Развитие литературы определяется не только закономерностями, но и своими странностями, случайностями, парадоксами. Выход на мировой уровень – закономерность, но появление выдающегося мастера – во многом случайность, подарок судьбы, парадокс.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

2010.....3
2011.....95
2012.....157
2013.....224
2014.....297
2015.....427
2016.....500

Литературно-художественное издание

Бикбаев Равиль Тухватович

ДНЕВНИКИ

Книга третья

Редактор *Р.А. Сиражитдинов*
Компьютерная верстка *Е. Т. Хомяковой*

Әҙәби-художестволы баҫма

Бикбаев Рауил Төхфәт улы

КӨНДӘЛЕКТӘР

Өсөнсө китап

Мөхәррире *Р.А. Сиражитдинов*
Компьютерҙа версткалаусы *Е. Т. Хомякова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 29.10.2018. Форматы 60×84 $^{1}/_{16}$. «Снегурочка» офис ҡағыҙы.
«TimesNewRoman» гарнитураһы. Ризографта баҫылды.
Шартлы баҫма таб. 32,55. Иҫәп-баҫма таб. 29,33.
Тиражы 50 дана. Заказ №

ДАФУ «Башҡорт энциклопедияһы».
450006, Өфө ҡ., Революцион ур., 55. Тел.: (347) 250-06-72.
http://www.bashenc.ru
E-mail: gilem@bashenc.ru

Башҡортостан Республикаһының «Матбуғат донъяһы»
нәшриәте ҡаҙна предприятиеһында баҫылды.
450076, Өфө ҡалаһы, Аксаков урамы, 45
Телефон: 8 (347) 251-72-95